Зигат Султанов
Йыһат Солтанов

СОЧИНЕНИЯ
В ПЯТНАДЦАТИ ТОМАХ

ӘҪӘРҘӘР
УН БИШ ТОМДА

ТОМ
VIII

ВРЕМЯ И СОВРЕМЕННИКИ
ЗАМАН ҺӘМ ЗАМАНДАШТАР

Публицистика

Редакторы

Йыһат Солтанов.
Әҫәрҙәр ун биш томда, VIII том. Заман һәм замандаштар. — Өфө: Башҡортостан “Китап” нәшриәте, 2004. 518 бит, 38 табаҡ.

Был китапҡа авторҙың төрлө осорҙа яҙылған иҫтәлектәре, сәйәхәтнамәләре, әҙәби тәнҡит мәҡәләләре һәм тарихыбыҙға бәйле ҡайһы бер ҡиссалары тупланған.

Уҡыусыларыбыҙ әҙиптең көсөргәнешле рухи донъяһы, ул йәшәгән заман һәм замандаштары хаҡындағы мауыҡтырғыс мәғлүмәттәргә эйә буласаҡ.

Ҡайһы бер географик атамалар (мәҫәлән, Эстәрлетамаҡ, Усалы, Балтас, Йәнсура, Самар һ.б.) һәм һүҙҙәр (мәҫәлән, гәзит, этрәт, әрмис, әртис, йәсле һ.б.) автор ҡулланышындағы борондан килгән халыҡ һөйләшендәгесә бирелде.

1.ЕРҘӘШТӘРЕМ

****

Тыуған илем — Башҡортостан

География картаһына ҡараһаң, тыуған илем Башҡортостан бәһлеүән боксер-көрәшсенең алыштағы еңеүенән һуң юғары сөйөп йомарланған тос йоҙроғон хәтерләтә. Башҡорт халҡы үҙенең ғәзиз Башҡортостанын был донъяла мәңге-мәңге ҡурсалап йәшәтергә, һис бер илбаҫар дошманға бирешмәҫкә, үҙ аллы һәм азат дәүләт итеп уны һаҡларға һәр саҡ әҙер икәнлеген күрһәткәндәй ул. Шуға күрә лә милләтебеҙҙең гимны булырҙай “Урал” йырында ла ошолай әйтелә бит:

Яҡшы атҡа менеп, ҡулына алып
Уҡ-һаҙаҡҡай тигән ҡоралын,
Аямаған йәнен, түккән ҡанын,
Һис бирмәгән башҡорт Уралын...

Башҡорт халҡы ысынлап табыуаттар буйына азатлыҡ өсөн көрәште, аҙаҡ килеп, үҙебеҙ йәшәгән ошо гүзәл Башҡортостан Республикаһын төҙөнө. Башҡортостанда көн күреүсе күпләгән башҡа милләттәр ҙә ҡатнашты ил ҡорошоуҙа. Шуға күрә лә беҙ уны күп милләтле Башҡортостаныбыҙ тибеҙ, һәммәбеҙ тиң, татыу йәшәргә теләй беҙ.

Башҡортостан — иркен ил, бөгөнгө көндә биләгән ере 143 мең 600 квадрат километр тәшкил итә. Әгәр уны, баяғылай, йоҙроҡ һымаҡ итеп түгел, ә дүрткел өҫтәл рәүешендә күҙ аллаһаҡ, 380-ешәр километр булыр ине ул өҫтәлдең һәр яғы. Шундай ҙа киң майҙанлы ул тыуған Башҡортостаныбыҙ! Илебеҙҙең сиктәре ут күршеләребеҙ Пермь, Екатерин бург, Силәбе, Ырымбур өлкәләре һәм Татарстан, Удмуртия ерҙәренә тоташҡан. Ошо әйтелгән уткүрше өлкәләрҙә һәм республикаларҙа ла донъя көтә башҡорттар. Башҡортостан Республикаһы үҙе 54 районға бүленә, бик күп ауылдарыбыҙ һәм 15 ҡалабыҙ бар. Башҡортостан Республикаһының баш ҡалаһы — Өфө, бер миллиондан артыҡ халыҡ йәшәй унда. Баш ҡалабыҙ гүзәл Ағиҙел менән Ҡариҙел йылғаларының күркәм-бейек ярында — изге Ҡоба тау менән изге Тора тау түбәләренә урынлашҡан. Бик боронғо замандарҙан уҡ бындабашҡорттарҙың изге ҡалаһы булған, бабаларыбыҙ шунда Хоҙайға табынған. Башҡортостан Республикаһының үҙ Конституцияһы (Төп Законы), дәүләт флагы, гербы һәм гимны бар. Баш ҡалабыҙ менән райондарҙы, ауылдарҙы, ҡалаларҙы тимер юл, таш юл, һыу һәм һауа юлдары бәйләй — поездар, автобустар, кәмәләр һәм осҡостар йөрөп тора өҙлөкһөҙ. Башҡортостан халҡы бөтәһе дүрт миллиондан артыҡ, егәрле халыҡ улар.

Башҡортостан — таулы ил, урманлы ла далалы ил. Мәғрур Урал тауҙары ил уртаһынан алтын умыртҡа теҙемеләй тартылған. Ер йөҙөндәге

иң боронғо тауҙар ул Урал тауҙары. Донъя яратылғандан уҡ башҡорт халҡы бабалары ошо ерҙә йәшәгән, изге Тәүтөйөгебеҙ ул Күк Урал. Бөрйән районындағы сал Шүлгәнташ мәмерйәһендә бынан ун биш — егерме мең йылдар элек бабаларыбыҙ ҡая таш битенә ҡандай ҡыҙыл буяу менән һүрәтләп ҡалдырған йылҡы, мөгөҙморон, мамонт һындары бар. Ә дала яҡтараҡ Дәүләкән районындағы изге асылыкүл буйында лабабаларыбыҙҙың бынан күп мең йылдар элек ҡаяларға соҡоп яҙылған ядкәрҙәре табылды. Шүлгәнташ яғындабашҡорттоң бөйөк “Урал батыр” эпосы, ә асылыкүл яғында иһә “Аҡ буҙат”, “Заятүләк менән Һыуһылыу” эпостары ижад ителгән. Урал тауҙарын бабаларыбыҙ Хоҙайҙар төйәкләнгән изге тауҙар итеп һанаған, күҙ ҡараһындай ҡурсалап ҡәҙерләгән. Беҙ ҙә тыуған еребеҙҙе һаҡлайыҡ — ҡайһындай ҙа бай тарихлы, күркәм ул! Автобусҡа ултырып Өфөнән Эстәрлетамаҡҡа барған ыңғайы һул яҡлап Ағиҙел буйына үркәс-үркәс теҙелеп киткән мөһәбәт тауҙар күренә — изгеләрҙән изге Йөрәк тау, Ҡуш тау, Шәке тау, Тора тау улар. Тора тауҙы халҡыбыҙ Ер Терәге йәғни Күк көмбәҙен терәп торған бағана итеп һанаған.

Күгәрепкәй ятҡан Урал тауы —
Атай-олатайҙарҙың төйәге.
Ерен-һыуын һаҡлап ҡорбан булған —
Шунда ята батырҙар һөйәге, —

тип йырлаған ата-бабаларыбыҙ. Уралыбыҙ беҙҙең өсөн дә изге, ул бит Башҡортостаныбыҙҙың алтын умыртҡаһы.

Урал менән унан урғылған Яйыҡ (Урал) йылғаһы ҡитғабыҙҙы ҡапуртаға бүлә: Яйыҡ һыуының уң яры — Европа, һул яры иһә Азия. Йәнә шул Урал тауҙарының артын — Көнсығыш Башҡортостан, ә алдын Көнбайыш Башҡортостан тиҙәр. Башҡортостандың тағы көньяғын һәм төньяғын да билдәләйҙәр. Тимәк, бөтәһе дүрт яҡ була. Шул дүрт яҡты Башҡортостандың дүрт юлы тип йөрөткән, ти, боронғо бабаларыбыҙ. Һауа шарттары ла бында төрлө-төрлө: ҡыуан далалы көньяҡта һәм көнбайышта — йылыраҡ, ә урманлы төньяҡта һәм Урал тауҙары ҡалҡыуында һалҡыныраҡ. Шуға күрә яҙ ҙа төрлөсә килә, уны ҡара ҡарғаларҙың йылы яҡтан осоп килеп етеүенә ҡарап та белеп була. Мәҫәлән, Көнбайыш Башҡортостандың көньяғындағы Йәнсура, Күгәрсен райондарына ҡара ҡарға 15 мартта уҡ килеп етһә, төньяғындағы Яңауыл районында ул 26 мартта ғына күренә. Хәйбулла, Баймаҡ, Әбйәлил, Усалы райондары урынлашҡан Көнсығыш Башҡортостанда иһә — 23 мартта, Уралтау тәңгәлендә — 26 мартта, ә төньяҡтағы Дыуан, Мәсетле, Балаҡатай райондарында тик 28 мартта ғына ҡара ер асыла башлауын ҡарҡылдап хәбәр ҡыла ҡанатлы яҙ хәбәрселәребеҙ. Кәкүк саҡырыу, муйыл сәскә атыу, арыш бешеү миҙгелдәре лә тап ошолай төрлөсә. Шуға күрә яҙғы иген сәсеү, малдарҙы көтөүлектәргә сығарыу эштәре лә төрлө ерҙә төрлө ваҡытта башлана... Башҡортостан тупрағында йылыны нығ яратыусы дөгөнән башҡа бөтә игендәр ҙә үҫеп өлгөрә, дөйә менән ишәктән

һәм яктан башҡа бөтә малдар ҙа күпләп аҫырала. Башҡортостан бал ҡорто, башҡорт йүкә балы бөтә донъяға билдәле. Быларҙан тыш, бик күп төрлө ҡырағай януарҙар, ҡош-ҡорттар, балыҡтар һәм бөжәктәр үрсей мыжғып ер-һыуҙарыбыҙҙа — тәбиғәт ҡосағында. Урмандарыбыҙҙа, болондарыбыҙҙа, ҡырҙарыбыҙҙа меңәрләгән төрлө үләндәр, ағастар үҫә күкрәп, йөҙәрләгән емештәр бешә алланып табалланып. Шифалы бал бирә торған донъялағы иң ҙур майҙанлы йүкә урманы ла үҫә Башҡортостаныбыҙҙа. Ҡарурмандарыбыҙ төҙөлөшкә кәрәкле аҫыл ағас — бүрәнә һәм таҡта менән ҡотайта тирә яҡты. Төҙөлөшкә яраҡлы һәр төрлө балсыҡ, ҡом-ҡырсын, эзбиз таш, гранит, мәрмәр, йәшмә кеүек хазиналарыбыҙ ята аяҡ аҫтында. Ер ҡуйыныбыҙ ҙа лыҡама тулы хазина: алтын-көмөш һәм баҡырҙан алып тимер, күмер, тоҙға тиклем донъялағы йәнеңә кәрәкле ҡаҙылмабайлыҡтарҙың бөтәһе лә тип әйтерлек табыла. Шулар араһында алтындай ҡиммәтлеһе — “ҡара алтын”, Башҡортостан нефте. Хәҙерге ваҡытта һәр йыл һайын 25 — 30 миллион тонна нефть һурҙыртып сығарабыҙ тәрән ер ҡуйынынан, ә был иһә Башҡортостан халҡының һәр бер йән башына етешәр тоннанан тура килә. Уйлап ҡына ҡарағыҙ: һәр кешегә — 7 тонна нефть! Шул нефтте сит илдәргә һатып ҡына ла мул тормошта йәшәй алыр ине Башҡортостан халҡы... Кувейт тигән ғәрәп иленең халҡы ла тап беҙ сығарған күләмдә нефть сығарып, донъя баҙарында һатып, ер йөҙөндәге иң бай ил булып йәшәй бирә. Ә Башҡортостандың нефттән башҡа ла байлыҡтары бик күп уның. Үҙебеҙҙең файҙаға ҡуллана белергә кәрәк уларҙы. Шуға күрә һәр беребеҙ егәрле, белемле булырға тейеш: көрәшкәндә беләге йыуан — берҙе йығыр, белеме йыуан — меңде йығыр, ти бит халыҡ мәҡәле. Тыуған илебеҙҙең ысын хужалары булайыҡ, үҙ аллы Башҡортостаныбыҙ үҙебеҙҙең ысын бәхет төйәгенә әйләнһен.

27.02.1992.

Башҡорт урмандары

1

Башҡорт урмандары!..

Башҡорт йылғалары!..

Мин инде күптән-күптән, бала сағымдың зәңгәр таңдарынан уҡ һеҙҙең хаҡта хыялланып йәшәнем. Әкиәти илдәргә һәм батырлыҡтарға сарсап янған сабый күңелемдә һеҙҙең гүзәл образды ла һаҡлап йөрөтә инем. Күргәнем, гиҙгәнем булмаһа ла, һеҙҙе белә, һеҙҙе һөйә инем мин. Сөнки йәнемә яҡын бөтә нәмә миңә һеҙҙең хаҡта һоҡланғыс гүзәл әкиәттәр еткерҙе.

Ер ҡайҙа башлана ла ҡайҙа ослана икәнен дә белмәй инем әле мин һәм кистәрен Ҡояш инеп йәшенмәле бейек тау артында нимәләр барлығын да шәйләмәй инем. Көмөш ҡылғанлы ялан ергә зәңгәр күк көм

бәҙе тоташҡан түңәрәк һыҙыҡтан артабан ниҙәр эшләнеүе лә билдәһеҙ ине. Аҙым һайын тылсымлы сер, һорауҙар һағалай ине.

Шул алыҫ замандарҙан уҡ инде мин башҡорт урманы тураһында ҡыҙыҡтырғыс хикәйәттәр тыңланым. Ҡарурмандың ҡара шырлыҡтарын йырып, икһеҙ-сикһеҙ төпкөлдәрендә ҡыҙырғаным булмаһа ла, мин уны шулай белдем, теләнем. Сүлдәге күренмәҫ һыулауға каруан нисек ашҡынғандай, ҡырыҫ тәбиғәт ҡосағында шытып үҫкән мин бахыр ҙа әллә ҡайҙағы көр һулышлы башҡорт ҡарурманын һағындым хыялыйланып.

Йыл һайын, беҙҙең кескәй туғайҙағы тирәк япраҡтары алтын төҫләнеп һарғайғас һәм баҫыуҙарҙа гәрәбә бойҙайҙар урылып бөткәс, һағыҙҙай ҡара сыйырсыҡтар беҙ яһаған таҡта ояларҙы ҡалдырып, йылы яҡҡа осорға тип зәңгәр күктә өйөрөлөп күстәргә тупланабашлағас, көҙгө киске тынлыҡта, Билән тауыбыҙ арҡылы ауылға төшкән юлдан күсәр шығырҙауҙары, баҡыр бутыл ҡыңғылдауы һәм ир-аттың баҫынҡы һөйләшеүе ишетелә торғайны. Һәм беҙ, малайҙар, уйындарыбыҙҙы ташлап, серле ауаздар яғына йүгерешәбеҙ, сөнки киске юлаусыларҙың алыҫ-алыҫ яҡтарҙағы шиғриәтле урмандар, зифа ярлы йылғалар иленән килеүҙәрен беләбеҙ. Билән юлында уҡ ҡәҙерле ҡунаҡтарҙы ҡаршылап, арбаларына ултырып, ауылға еткәнсе аттарын ҡыуышабыҙ һәм: “Ағай, беҙгә төш! Ағай, беҙгә төш!” — тип, еңдәренә аҫылынып фатирға саҡырабыҙ.

Ҡапҡалар шығырҙап асыла, талсыҡҡан, саңланған юлсыларҙы үҙенең ҡунаҡсыл тынлығына үткәрә. Аттар, туғарып, һолоға ҡушыла, арба тәгәрмәстәре, үткер еҫле ҡайын дегетенә майланып, иртәнге сәфәргә көйләнә. Шунан һуң ғына ағайҙар сәй эсергә инеп китә. Ә беҙ иһә арбала ултырып ҡалып, байраыбыҙ башланыуын көтәбеҙ түҙемһеҙләнеп. Ниһәйәт, солан ишеге сыйылдап киң асыла, ҡайнар сәйҙән яңаҡтары алһыуланған ағайҙарыбыҙ эркелә ихатаға.

— Китмәнегеҙме ни әле? — ти улар, тәмәке тоҡандырып.

Береһе, аптырағанға һалышып, юлдаштарына өндәшә:

— Ни күреп йоҡламай былар? Нимә кәрәк икән уларға, белһәң ине!

Әммә беҙҙе алдаштырыу еңел түгел шул улай. Беҙгә нимә кәрәклеген белеп тора ағайым, быны беҙ уның шуҡ-көләс күҙҙәренән, ҡыланышынан “уҡыйбыҙ”.

— Ағай, ҡурай тарт, ҡурай тарт! — тип сәбәләнәбеҙ тирәһендә.

— Их, эттәгенәһе! Онотоп ҡалдырғанмын бит әле шуны! — тигән була ул, хәйләле күҙ ҡыҫыуын беҙҙән йәшерергә тырышып.

— Алдама! Ҡурай бар, ҡурай бар! — тип, сиңерткәләрҙәй сырылдашып һикерешәбеҙ.

— Кит унан. Бармы икән ни?

— Бар, бар, бар!

— Һем... Юҡ кеүек инесе, минеңсә. Йомабай, ҡара әле — тоҡта ятмаймы икән шул?

Йомабай, оҙон еҙ ҡурайын тотоп, килеп етә янымыҙға. Ярым түңәрәк яһап, үләнгә сүгәләйбеҙ. Ҡурайсы өй нигеҙенә һөйәнеп ултыра ла, тау һыртында быҫҡыған шаян нәжәғәйгә уйсан ҡарашын төбәп, өнһөҙ

ҡала бер талай. Тиҙҙән уның күҙҙәрендә лә билдәһеҙ уттар тоҡана, ул, тәрән көрһөнөп, ирендәренә килтереп терәй ҡурайын. Һәм ағыла, ағыла төнгө урамдарҙың һауаһын тирбәлдертеп, ҡарурманлы тауҙар араһында һыҙылып тыуған моңҡай:

Ҡара ла ғына урман, ҡараңғы төн,
Ярһыу аттар кәрәк уҙырға...

Беҙ, ҡымшанырға ла баҙмай, тыныбыҙҙы ҡыҫып тыңлайбыҙ; себен осҡандай ҙа ят тауыш юҡ, тик хайран ҡалғыс ғәжәп тылсымлы ауаздарбайрамы ғына биләй керһеҙ сабый күңелдәрҙе. Үҙемдең ҡайҙа ултырғанымды онотам, шөңгөр ҡоштарын һайраҡкан, ботаҡтары ботаҡҡа сырмалышып үҫкән ҡуйы ҡарурман килеп баҫа алдыма. Әллә ниндәй серле тауыштар салына ҡолағыма...

Ана шулай, тауҙар-һыуҙар кисеп йәмле Уралҡайҙан беҙҙең ялан яҡ мөйөшкәсә ирешкән моңло һәм дәртле, һағышлы һәм шатлыҡлы, һары һандуғастар сазына алмаштырғыһыҙ үҙенсәлекле нескә, нәфис көйлө үлемһеҙ халыҡ йырҙарында тоя инем мин башҡорт ҡарурмандарының ҡөҙрәтле саф һулышын.

Ә ҡыш етеп сана юлы нығыныуға, ауылыбыҙҙың мыҡты ирҙәре яҡшы аттар егә лә алыҫ башҡорт урманына ағас етештереү эшенә китә. Бер саҡ улар ауылға әскелт-тәмле һары сайыр еҫе аңҡытҡан йәш шыршы алып ҡайттылар. Ҡайһындай ҙа ҙур асыш һәм тәрән кисереш килтерҙе миңә был яңы ағас! Үҙ ғүмеремдә беренсе тапҡыр, ҡарлы бурандарҙа ла саф йәшеллеген һалмаусы, һоҡландырҡыс зифа буйлы үҫемлекте күрҙем мин һәм шунан һуң: "Әкиәттәрҙең бөтәһе лә ысындыр, йәки башҡорт урманы үҙе матур әкиәттер!" — тип уйлай башланым. Шул йәмле яҡтарға олағып сығып китеү теләге һулымаҫлыҡ тамыр йәйҙе күңелемә. Урман киҫә барған ағайҙар инде хәҙер аттарына тыныс ҡына ултырып китә алмайҙар: илап, талашып мин уларҙан үҙемде алып барыуҙарын талап итәм һәм ошо бер ниәтемде үтәү өсөн ҡорған хәйләләрем менән ҡатырамын баштарын. Әммә мине һанға һуғыусы юҡ ине ул ваҡытта, бәйһеҙ тойғоларым менән яңғыҙ үҙем янырға, тилерергә тейеш инем...

2

Ҡайҙа мин, ҡайҙа мин?! Әлеге йыр, әлеге моң:

Ҡара ла ғына урман, ҡараңғы төн,
Яҡшы аттар кәрәк уҙырға...

— Дың, дың, дың!
Ниндәй дың, нимәнән дың?

Дуға башына эленгән бутыл дыңылдай. Өс көн буйы, өс төн буйы ҡарурман эсендә баҡыр бутыл юл буйлай. Өс көн буйы, өс төн буйы ярһыу аттар ҡара тиргә батып саба ла саба. Өс көн буйы, өс төн буйы ағастар шаулай туҡтауһыҙ.

— Ах Аллаҡайғынам, осо-ҡырыйы булырмы был ҡарурмандың? Тығыҙ ылыҫтар араһынан күк киҫәге көҫәп киҫелгән күҙҙәребеҙ Ҡояш нурын күреп ҡасан ҡыуанып?

Сиге бармы икән һуң был ҡарурмандың?!. Әллә бөтә ер йөҙө, барлыҡ донъя ғаләме ошо ҡарурмандан ғына ғибәрәтме?..

— Дың, дың, дың!

— Дың, дың, дың!

Аттар саба ла саба, баҡыр бутыл боларып тулай ҙа тулай, ҡарурман шаулай ҙа шаулай...

Эйе, иге-сиге юҡтыр был ҡарурмандың...

Ә шулай ҙа мин уны барып күрергә, араһына керергә тейеш!

Һәм бына бынауы йыр:

Ағиҙелкәйҙәрҙе, ай, кискәндә
Бер йырланым ишкәк ишкәндә.
Бер йырланым, дуҫтар, бер иланым
Туғандарым иҫкә төшкәндә...

...Йылға. Ялан кеүек киң йылға. Быуаттарҙай уйсан йылға...

Һарғайып таң ата йылға өҫтөнән. Һыу битендә тирбәлеүсе бакендар һүнә быҫҡып. Аҡ томан күтәрелә. Аҡ томанды алһыу ҡанға мансылдыртып шанлаҡ уйнай Ағиҙел күкрәгендә.

Ниңә өндәшмәйһең, йылға, ниңә шаулатмайһың тулҡындарыңды? Аҡ күбектәреңде ҡайнатып-төкөрөп, ярҙар текәһенә ҡолас ташламайһың? Ниңә зифа талдарыңдың ҡуҫҡыл-бөҙрә толомдарын һалҡын һулышыңды өрөп сылатмайһың? Үлдеңме әллә, ҡарт йылға, шанлы үткәндәреңде онотттоңмо, данлы йылға?

— Юҡ, онотманым мин уны. Көтәм мин. Йөрәккәйен һағыш баҫҡан улымды көтәм.

Һыу ишелә, ишкәк тауыштары ишетелә. Алһыуланған томан артынан ослайып кәмә сыға, ишкәк тауыштары ишетелә.

— Бына ул минең улым. Күңел моңдарын түгелдерергә килгән улым.

Кәмә йөҙә, кәмәгә ултырып һағыш йөҙә. Һағыш тойғоларына мансылып иркен күкрәктән ағылмалы моң гиҙә:

Ҡариҙелкәй буйы, ай, ҡарурман,
Ағастарын ҡыра баҫырман...
Ауған ағас һайын йәш ағыҙып,
Буҫлығып та илай ҡарурман...

Ишкәктәрен ебәрә лә егет башҡайын һәлендерә. Күҙҙәрен йома һәм хәсрәтле уйға сума: “Былай ҡырҡып исрафлаһаҡ, ерҙең йәшел еләненән ни ҡалыр?..”

— Башыңды күтәр, улым, ҡайғырма. Ҡыҫып тот та ишкәктәреңде, елгә ҡаршы ҡайырып-ҡайырып иш. Күк тулҡындар һыртын ярып һаман алға, алға бар. Барыһы ла үҙ ҡулыңда, егетем! Ҡырыҫ елдәр ҡаршылығын еңергә, туҡталмаҫтан алға ғына барырға етһә рухың, ирешерһең изге теләктәреңә. Сөнки тормош йәме даими көрәштә, даими ел-дауылдар ярып үтеүҙә. Ишкәктәреңде ҡайырып һал, улым!

Егет ишкәктәрен ала ла елгә ҡаршы ҡайырып-ҡайырып ишә. Ҡараңғы көс уның кәмәһен үткер тулҡын һырттары менән түбәләй. Ажғырып, һеләгәйен сәсрәтеп, кәмә өҫтөнә ырғый. Ләкин егет туҡтамай ишә лә ишә. Дауыл аръяғында уны бәхет йондоҙо көтә...

Шулай ишетә инем мин ташҡын һыулы, ҡарурманлы еремдең ҡөҙрәтле-көр һулышын.

3

Үтте баллы бала саҡ, үтте йәшлегем яҙы...

Ер шары Ҡояш әйләнәһенән әллә нисәмә тапҡырҙар уҙҙы йүгереп. Күп тапҡыр яҙ, күп тапҡыр ҡыш булды. Миллиондар тыуҙылар, миллиондар үлделәр. Мин Балтиҡ хәрби диңгеҙ флотына алынып, мина тралсыһы тигән хәтәр карапта дүрт йылымды үткәрҙем, немец фашистары ҡороп киткән үлемесле миналарҙан диңгеҙ юлдарын арсалап, Салауат батыр башын һалған гәрәбәле ярҙар артында оҙон-оҙайлы хеҙмәтемде тултырҙым.

Тыуыуыма ла быуаттар үтте кеүек ине...

Әммә бер нәмә һаман да үҙгәрмәне, әлеге көйөнсә һаҡланып ҡалды күңелемдең түрендә. Был — башҡорт ҡарурманын, башҡорт йылғаларын өҙөлөп һағыныу ине.

Йылдар һынауын кисергәндә лә мин ошо изге тойғомдо — башҡорт еренә ҡайтыу хаҡын бирәсәк күптәнге шул тойғомдо сирләтмәнем. Мең яфалар сиккәндә лә, бәхеткә тейенгәндә лә юғалтмай-сарыф итмәйенсә йөкмәп йөрөттөм мин уны. Йөрәгемә йылы биреп, мәңге-мәңге ялҡынланһын был тойғо!

...Рельстәр геүләй, ҡорос тәгәрмәстәр туҡылдай. Ҡара бушлат, таҫмалы бескозырка кейгән уйсан егет ҡайтып бара хыялдарының иленә. Уйсан башҡорт ҡарурманы, башҡорт йылғалары саҡыра уны. Рельстәр геүләй, ҡорос тәгәрмәстәр туҡылдай...

Ур-ра! — Мин йәнә палубала! Ағиҙел пароходствоһының һары кәпәй ҡорһаҡлы, 11-енсе һанлы буксир-теплоходының ҡорос палубаһында.

Мине йәнә һалҡын елдәр йолҡколай, ҡурғаш тулҡындар ҡамсылай. Мин йәнә төндәр буйы керпек ҡаҡмай вахтала торам. Ләкин тыуған илдең

шифалы елдәре, туған йылғаның шаян тулҡындары был. Көтөп алынған яғымлы тыныс хеҙмәт вахтаһы был. Сал Ҡариҙел йылғаһы үренә төрлө кәрәк-яраҡтар тейәлгән олпат баржаларҙы һөйрәлтә илтеп, һыу түбәненә Өфөгәсә урмандарҙың балауыҙ шәмдәй төҙ бүрәнәләре ҡыҫып бәйләнгән һалдарҙы тартып төшәм. Ниһайәт, ирештем бит күптәнге теләгемә — үтеп керҙем башҡорт ҡарурманына. Көнө-төнө йылға буйлап осһоҙ-ҡырыйһыҙ урман эсенән барам — Ҡариҙелдең ике яғы ла өҫкә ауырҙай шаулап торған ҡарурман. Һушым китеп, сал Уралымдың бай тәбиғәтен күҙәтәм. Күкрәгемде ҡабартып, ҡабартып алам һулышымды — үҙе саф та, тәмле лә шул был яҡтарҙың һауаһы! Был яҡта тауҙар Салауат күпереләй ҡалҡыу, ҡаялары манара һымаҡ туры. Ул ҡаяларға сал бөркөттәр оялап бала сығара. Ул ҡаяларға тотоношоп һылыу шыршылар үҫә. Шырт шыршылар араһында йөнтәҫ айыуҙар ҡыҙырына. Эрбет ағас баштарында етеҙ тейендәр йылтылдап һикерешә, моңло ҡоштар һайраша. Ағас аҫтарында иһә... көнө-төнө ҡомһоҙ балталар туҡылдай, үткер бысҡылар сыжылдай... Йөҙ йәшлек ҡарағайҙар, имәндәр ауа гөрһөлдәп. Йылға өҫтөндә күпсеп оҙон һалдар аға (дәртле хеҙмәт туҡтауһыҙ ҡайнай бында). Буксирым артына оҙон ҡойроҡтай тағылған шул һалдарҙы мин Өфөгә алып төшәм, йәнә менәм, йәнә төшәм. Башҡорт урманы ыңғырашуын тыңлап уҙа ғүмерем...

Нисә быуат үҫә икән был урман? Нисә быуат киҫелә икән был урман? Нисә быуат йәшәр икән был урман?..

Ә бысҡылар сыжлайҙар, балталар туҡылдайҙар. Ҡарағай, имәндәр ауалар, һалдар күпсеп ағалар. Ҡарурманым үҙ тәне менән бөтәйтеп ята илде. Көнө-төнө ағас киҫелә, ағас аға. Алтын шишмәләй иҫәпһеҙ һәм мул ағыла ҡарурман. Ә кешеләр ҡәҙерен белеп бөткәнме был алтындың? Тиреҫ итеп яҭкырып серетмәйме? Аяҡ аҫтына сүп итеп ташламаймы? Көлөн күккә осормаймы?

Һыу таштымы, Ҡариҙел, Сим өҫтәренән сыйҙымдай һыҙып "хужаһыҙ" бүрәнә аға. Тик уның тотоусыһы, йыйыусыһы ғына юҡ — күктәге болоттай хисапһыҙ, йәлләүсеһеҙ. Кем киҫтерткән, аҡса түләп, уларҙы? Хөкүмәтебеҙ киҫтерткән. Ниңә йәлләргә, ти, хөкүмәт аҡсаһын — ағыла бирһен, әйҙә! Бына ниңә Ҡариҙел ярҙары буйынан-буйына "эйәһеҙ" бүрәнәләрҙән көпләнеп ята, ә һыу өҫтөн сыбарлап һаман "эйәһеҙ" бүрәнәләр аға ла аға. Тик пристандәр тирәһендә даими суҡандаған шикле бәндәләр генә, кәмәләренә ултырып, ҡараңғыла "ауға" сыға ла "буштан" килгән ҡиммәтле малды тиҫтәләрсә тотоп алып, ҡарабаҙарҙарҙа һатыулыҡ итә.

Һыу ҡайтып, йылғалар кире үҙәндәренә төшкәс тә һис туҡталмай ҡарурман ыңғырауы. Бик йыш ҡабатланыусан һал аварияլары яр буйы ҡомдарына һәм утрауҙарға тауҙар өйә бүрәнәнән. Был ағас ҡыш буйы ла ята шунда. Яҙғы ташҡындар ғына уны, боҙ менән ҡуша ҡуптарып, билгеһеҙлек ҡосағына ағыҙып алып китә.

Мин, йөрәгем янып, тәлгәш ҡайындарҙың сезон һайын әллә нисәмә йөҙ, мең гектарлап утынға ҡырҡылыуын күрәм дә (ул иһә Әстерханғаса барып етә!): "Еребеҙҙә хазиналанып ятҡан, бейек тимер торбалар осонда

көнө-төнө күк йылытып ялҡынланған янар газдарыбыҙ ниңә файҙалы ҡулланылмай, мейестәргә барып кереп, утынды алмаштырмай?!” — тип көйәләнәм.

Ағиҙелгә Ҡариҙел ҡойған ерҙә, мәҫәлән, Өфө бар, Өфөлә Нижгородка бар. Нижгородка биҫтәһендә ағас бысыу заводы бар. Ағас бысыу заводы контораһында аҡыллы начальниктәр бар. Шул аҡыллы начальниктәр һүҙ беркеткән, буғай, үҙҙәренә бөйөк һәйкәл һалырға. Аҡыллы начальниктәр ҡарар ҡылған бысҡы ононан пирамидалар өйөргә... Ярай йыл да һыу таша, юғиһә Нижгородкабыҙ ҙа, ҡом баҫкан боронғо ҡалаларҙай, бысҡы оно аҫтында ҡалыр ине. Ярай, тимен, ҡотороп Ағиҙел таша...

Ниңә файҙалы эшкә ҡулланмайҙар бысҡы онтағын? Балыҡтарҙы тонсоҡторорға ағыҙалар йыл һайын?

Башҡорт ҡышы һыуыҡ, мейестә шартлап ҡайын яна — өйҙө йылытырға кәрәк.

Башҡорт ҡышы һыуыҡ, баш ҡаланың Крекингзавод торбалары осонда өҙлөкһөҙ газ факеллана — күкте йылытырға кәрәк. Ни өсөн шул газ янмай мейестәрҙә? Ни өсөн?!

Күпер һалһаң — бағана, өй бураһаң бүрәнә кәрәк.

Тал-сыбыҡтан ғына ситән өй үрһәң, биш-ун йылдан сереп ауа.

Балсыҡ-лайҙан өй һуҡһаң, егерме-утыҙ йылдан һуң ишелеп ҡолай.

Таштан өй һалһаң, быуаттарға ла етә.

Ағастан өй бураһаң, унарлаған йылдар бирешмәй ултыра.

Әммә ялан яҡтарҙа ағас үҫмәй, ҡарурман юҡ ялан яҡтарҙа. Тәртәлек ҡайынды ла илле саҡрымдан барып алалар. Бағаналыҡ ағасты йөҙ саҡрымдан килтерәләр. Башҡортостанда мейескә яҡҡан ағас әгәр унда булһа, хан һарайҙары һалыныр ине унан. Башҡортостанда утынға киткән ағастан да ҡала торғоҙолор ине. Ниңә йәлләмәйҙәр икән ағасты?

Көнө-төнө бысҡы сыжлай, балталар туҡылдай.

Ағастар ауа, һалдар аға.

Ҡайын ҡайғырып илай, ҡарағай ҡалғып моңлана, имән интегеп шаулай — һыу ситтәрендә файҙаһыҙ ятып серергә теләмәй шул улар. Ағастарға ҡушылып мин илайым:

— Ағайҙар, туғандар! Йәшел дуҫтарыбыҙҙың ҡәҙерен беләйек! Һәләк итмәйексе башҡорт урманын!

Ҡарурманыбыҙ үҫкән ерҙә ҡолас киреп әҙәм илтифатһыҙлығы гиҙә. Һис кем иғтибар итмәй быға, нәфрәтләнеп ҡаршылыҡ тауышы күтәрмәй — күнегеп бөткәндәр инде. Ҡарурмандың бөтмәҫ-төкәнмәҫ алтын йылға булып көн-төн ағылыуы “йомартлыҡ”ҡа өйрәткән кешеләрҙе...

Ләкин һуңы-аҙағы булыр бит бының?!.

1956. Ҡариҙел йылғаһы, буксир-теплоход N11.

МӘҢГЕЛЕК ҠУРАЙЫБЫҘ

Миңә ҡалһа ысын ҡурай, Уралыбыҙҙа ғына үҫә торған ***еҙекәй*** үләндең кипкән көпшәһе (ҡурайы) һәм уны үҙәк өҙҙөрөп тартыусылары башҡа тараф ҡәүемдәрендә бик һирәк йә һис тә юҡ, шуға күрә “башҡорт ҡурайы” тигәндә тап шул еҙекәй ҡурайҙы, шул еҙекәйҙән моң тартыусыны күҙ уңында тотабыҙҙыр. Ошо ғәзиз ҡурай үләненең исемен башҡортобоҙ үҙенең ғәзиз уландарына ла ҡушҡан: Алтын Урҙа империяһы дәүерендә Башҡортостанының үҙ аллылығын даулап ҡанлы яуҙарға сапҡан башҡорт батыры Еҙекәйҙе (урыҫ йылъяҙмаларындағы Едигейҙы) иҫебеҙгә алайыҡ...

Эйе, еҙекәй ҡурайыбыҙ һәр яҡлап та берҙән-бер һәм ул шулай уҡ берҙән-бер халыҡтыҡы, башҡорттоҡо. Ҡыйыҡ башлы сыбыҙғынан (ул да башҡорт көй тартҡысы, ләкин ысын ҡурай түгел) башҡаны белмәгән күрше-күлән ҡәүемдәрҙең ҡайһы бер йылғырҙары ерле-юҡтан ҡурайыбыҙға ҡул һуҙып, уны үҙенеке итергә -- үҙләштерергә яҫҡына, хатта бәғзе бер талымһыҙыраҡ ҡурайсыбыҙҙы йылы мөйөшөнә саҡырып килтереп, һабаҡ алып маташа, әммә барлыҡ көҫәнеүҙәре елгә оса ла ҡуя. Башҡортһоҙ ерҙә ысын еҙекәй үләне үҫмәгәндәй, ысын башҡорт рухы тиртмәгән бәндәнән ысын ҡурайсы ла сыҡмай (күпме генә көсәнеп ҡараһа ла). Сүбек сәйнәп май сыҡмағандай, һыбыҙғысыны ҡурайсы тип атауҙары ла мәғәнәһеҙ.

Дөрөҫ, ят яҡтарҙың үтә моңло йәндәре лә ҡулдарына эләккән, ҡурай килбәтенә килгән еҙ, алюмин, ағас, синтетика көпшәнән, хатта Һаҡмар, Һүрән буйҙарынан ҡырҡып алып ҡайтҡан ысын ҡурай – еҙекәй үләне көпшәһенән күркәм тауыш сығарырға – көйҙәр тартырға өйрәнеүҙәре бик ихтимал (сыйырсыҡ-ҡош һандуғас булып һайраған кеүек). Ләкин ысын ҡурайсы булыуҙары, ай-һай... Сөнки сихри башҡорт моңон биш тишекле сихри еҙекәй көпшәнән башҡорт рухы тип аталмыш тылсым ғына тартып сығара ала.

Башҡортостанда тыуып үҫкән һәм ҡурай моңон бала сағынан уҡ йәненә һеңдергән татар әҙибе Әмирхан Еники “Ҡурай” тигән хикәйәһендә яҙа:

“Беҙҙең күршелә генә Миңлегәрәй исемле башҡорт тора ине... өйөнөң тәҙрәләре киңенсә асыҡ... Бына шул асыҡ тәҙрәләрҙән инде бер ваҡыт, абзыҡайым, ҡурай менән йыр ағыла башлай!.. Һәм мин шуны ишетеүгә, барған еремдән ҡапҡанға эләккәндәй, шып-туҡталып ҡала инем. Һис ысҡына алмай инем мин ул татлы әсирлектән... Бөтөн доньямды онотоп, ләззәтенән, һыҙландырыуынан иларға етешеп тыңлайым да тыңлайым... Күҙ алдымда үҙенең яҡты киңлектәре, тын түбәләре, утлауҙа йөрөгән йылҡылары менән ҡылғанлы дала әкрен генә йәйелә лә йәйелә... Бик бейектә бөркөт һалмаҡ ҡына йөҙә. Йыраҡта яңғыҙ яйҙаҡ шәүләһе күренеп ҡала, әллә ҡайҙа ғына ирлән һыҙғырыуы ишетелгән кеүек була... Һәм иң ғәжәбе, шул далала аҡ тастарлы еңгәнең муйынына ҡороҡ һалған бейәне һауып ултырғанын бик асыҡ итеп күрә торған инем. Был шул тиклем асыҡ-йәнле булып күҙ алдына килә, мин хатта еңгәнең ике теҙ араһына янтайтыбыраҡ ҡыҫтырған ағас силәген дә, шул силәккә бейәнең ике имсәгенән алмаш-тилмәш бәреп төшкән нескә генә һөттө лә

күргәндәй була инем... Әнә шулай әллә ҡайҙарға алып китә, хыялый итә ине мине был башҡорт ҡурайы, башҡорт йыры!.."

Ғүмере буйына шул тылсымлы ҡурай моңон һағынып-һыҡтап йәшәгән яҡташыбыҙ Ҡазан радиоһында алюмин көпшәнән көй тартыусы – "шәһәрҙә берҙән-бер ҡурайсы" менән таныша, әммә ҡурайы һис кенә лә күңеленә ятмағас: "Ни өсөн тәбиғи ҡурай беҙҙә юҡ, ни өсөн ул, әйтәйек, башҡорттарҙа һаҡланған да, беҙҙә һаҡланмаған?.." – тип эстән өҙәләнә. Һәм ысын ҡурай моңон үлерҙәй танһыҡлаған автор Башҡортостандың йәмле Һаҡмар буйҙарына – Үҫәргәндәр төйәгенә сәйәхәт ҡылып, ете дана "тәбиғи ҡурай" көпшәһе алып ҡайта, Ҡазандың шул берҙән-бер "татар ҡурайсыһы"на тапшыра.

"Әммә ни ҡыҙғаныс, Исмәғил абзыйҙың ялан ҡурайында уйнағанын миңә ишетергә тура килмәне... "Белмәйем шул" тигән ине ул, ҡурайҙарҙы минән алып киткән сағында... – тип үкенеп хикәйәтләй яҙыусы.. – Бары күптән түгел генә ишетеп белдем: баяғы барлыҡ ҡурайҙар ҙа Тел, әҙәбиәт институтының музыка кабинетында һаҡлана икән... Исмәғил абзый һәр ҡайһыһына өҫтән – дүрт, аҫтан бер тишек яһаған (нәҡ башҡорт ҡурайы төҫлө итеп), ҡулыңа ал да һыҙҙырып-һуҙып ебәр!.. Әммә улар өнһөҙҙәр, һыҙҙырып-һуҙып ебәрерлек кешеһе юҡ – кешеһен, кешеһен ҡайҙан табырға?!."

Бына шулай ул хәлдәр, әхүәлдәр...

Билдәле булыуынса, ҡурайыбыҙ Ҡазанда ла, Алматыла ла (һәм башҡаларында ла) музей ҡомартҡыһы рәүешендә күҙгә салына, тик унда уларҙан моң тартыусыһы ғына юҡ, сөнки башҡорт күкрәгендә ҡайнаған рух башҡаларҙың күкрәгенә һыйғыһыҙ, рухты музей кәштәләренә лә һалып булмай – фәҡәт беҙҙең тәбиғи һәм айырылғыһыҙ айышыбыҙ ул...

Егерменсе быуаттың бөйөк башҡорто Әхмәтзәки Вәлиди Туған Башҡортостанынан мәңгелеккә һөрөлөп, диңгеҙ аръяғы Төркиәлә хатта башҡортса һүҙ ҡатырлыҡ форсаты ҡалмағанда ла ҡурайынан яҙмаған, алыҫтағы тыуған иле, халҡы менән ҡурай моңдарын ағылдырып һөйләшкән...

Шундай уҡ хәл ун өсөнсө быуат бөйөгө Сыңғыҙ-хан бабабыҙ менән дә булған, тиһәк, бәғзеләр шаңҡып ҡалыр: "Ҡурайҙың унда ни ҡыҫылышы бар – татар-монгол Тэмучжин бит ул!" – тип тәкәббер яр һалыр. Әммә донъя тәкәбберҙәрҙән генә тормай, төплө һүҙгә ҡолаҡ ҡуйған, фәһем алғандар ҙа ишле, сөнки башҡорт Темәсйәндең ырыу шәжәрәһе Үҫәргән батшалар шәжәрәһенән үркәнләп, атаһы – бөрйән башҡорто, әсәһе лә үҫәргәндән икәнлеген, уны ҡаған-император итеп аҫаба башҡорт аҫылдары Муйтән-бей менән Майҡы-бейҙәр күтәргәнлеген, заманының ғәййәр башҡорт сардарҙары (полководецтары) уға ярты донъяны яулап алышып биргәнлеген һуңғы йылдарҙа матбуғаттан уҡыштырып торабыҙ. Ә тәғәйен ҡурай менән йыһангирҙең бәйлелеге ышаныслы сығанаҡта – Сыңғыҙ-хандың төпсөк улы Тулайҙың тура тоҡомо Лубсан Данзан (XVII быуат) тарафынан үҙенең бабаһы Сыңғыҙ-хан дәүере сығанаҡтарына таянып яҙылған тәүәрихнамәлә сағыла (Лубсан Данзан. Алтан тобчи – "золотое сказание". М., 1973).

Баҡтиһәң, донъяның дәһшәтле илбаҫары Сыңғыҙ-хан да мауығып ҡурай (ҡур) тартҡан, ҡурайһыҙ йәшәй алмаған, ҡурайҙы үҙенең алтын бәхет асҡысы итеп һанаған. Тәүәрихтә был ҡурай, ап-асыҡ рәүештә, Сыңғыҙ-ханға тығыҙ бәйләп: ***"Һинең*** ***торки ҡурайың",*** ***"Һинең алтын (бәхет) ҡурайың"*** тип әйтелә. "Төрки" тигәне – дөйөмләштерелмеш башҡорт тигән һүҙ, әлбиттә; ә "алтын ҡурайың" тигәне, уның алтын көпшәнән яһалыуын белдереүҙән дә бигерәк, бәхет символы икәнлеген аңлата, сөнки һарай әһелдәре араһында ҡаған ҡурай тартҡан саҡта илгә ҡот ҡуна, бәхет килә тигән ырым йәшәгән.

Сыңғыҙ-хан һарайында уның министр дәрәжәһендәге ***ҡурайсы (ҡурчи)*** вазифаһы ла булған, уны атаҡлы Ирхәсән-ҡурайсы[1] (Аргасун-ҡурчи) башҡарған. Һәм был инсан ҡәҙимге башҡорт сәсәндәренә хас тура һүҙле, ҡыйыу – ил зарын һәм асы хаҡиҡәтте ҡағандың күҙенә төртөп әйтмәле икән:

Бөйөк халҡың ни рәүешле көн күргәнен белмәйһең!
Ауыҙын йыртып ни тапһа шуны – ҡатҡан тире, ҡайыры кимерә ул.
Бөтөн халҡың ни рәүешле көн күргәнен белмәйһең!
Сарсаған ауыҙы менән ҡарлы һыу һемерә ул.
Мәңгел халҡың ни рәүешле көн күргәнен белмәйһең!

Был уҙаман, мәшһүр ҡурайсы булыуы менән бергә, ҡағандың баяғы "төрки ҡурайы"н – бәхет асҡысын күҙ ҡараһындай күреп һаҡлаусыһы ла имеш, бына уның, Ирхәсәндең, үҙенең ҡағанға әйткән һүҙҙәре:

Егерме йәшемдән һинең төрки ҡурайыңды һаҡланым,
Һинең аҡыллы һабаҡтарыңды алдым,
Һәм һис ниндәй ҙә насарлыҡ ҡылманым.
Дөрөҫ, бер саҡ хаталанып эстем аҡ-араҡыһын,
Араҡынан алйып алдым шул төрки ҡурайыңды,
Әммә яман ниәт менән алманым!

Ә эш шунда: Корея иленә яу йөрөп ҡайтмыш Сыңғыҙ-ханды һарайында күңелһеҙлек көтөп торған – тоғро ҡурайсыһы Ирхәсән, өҫтәге шиғри юлда әйтелгәнсә, араҡы эсеп иҫергән дә ҡағандың йәндәй күргән һәм ул һарайҙан тышҡа сығармаҫҡа бойорған бәхет асҡысын – "төрки ҡурайын" алып, ҡайҙалыр төнгө уйында ҡурай тартырға сығып киткән...

"Бөйөк ҡаған Майҡыға (Бағурчиға) һәм Муйтәнгә (Мухулиға) бойорҙо: "Эҙләгеҙ!" һәм ошолай һеңдереп юлландырҙы: "Ирхәсән-ҡурайсыны һис ни белдертмәйенсә саҡырып алығыҙ ҙа юҡ итегеҙ!"

...Ләкин был ике *түшимәле*[2] үлтермәне уны, хакимға баш эйеп ғәфү үтенергә кәңәш итте".

[1] "Күсәк-бей" тигән эпосыбыҙҙың геройы Ир-Бабсаҡ исеме менән сағыштырығыҙ.

[2] Түшимәле – бер түштән имеүселәр, имсәктәштәр. Тимәк, Майҡы-бей менән Муйтән-бей бер әсә балалары – бер туғандар.

Һәм Ирхәсән баяғы шиғыр юлдары менән ғәфү үтенгәс, ҡағандың асыуы һүрелә:

> Ғүмереңде һин, Ирхәсәнем, бик яҡшы ҡурсаланың,
> Шуҡлығыңды шәп аҡланың, ҡурайсым!

Ирхәсән-ҡурайсынан һуңдыр, моғайын, Сыңғыҙ-хандың “төрки ҡурайы”н Жәбә-башҡорт (Жэбэ-бесут) тигән кеше һаҡлаған һәм уның туранан-тура нәҫел вәкиле Ҡуширҙай-ҡурайсының Лубсан Данзан менән бер осорҙа – XVII быуатта Ордоста (Ҡытай) йәшәгәнлеге билдәле.

1227 йылда Сыңғыҙ-хан вафат булғас, мәйетен ныҡ йәшерен рәүештә оҙон сәфәргә йыйнап, юл буйына сеңләй-сеңләй, тыуып үҫкән яғына оҙаталар:

> *Көрүлән* далаһындағы һин хан булып күтәрелгән *Арал* –
> Шундалар бит!

“Көрүлән” тигәндәре – тарихи Башҡортостан тупрағындағы Ҡараған йылғаһы (Яйыҡҡа ҡоя) һуғарған иркен дала, боронғо Туҡан (Арҡайым) ҡалаһы төбәге ул. “Арал” – Урал тауҙары.

> *Бураған-Туҡан* – һинең тыуған ер-һыуың,
> *Бағырсы* һәм *Мухули,* һинең һөйөклө дуҫтарың, --
> Шундалар бит!

Был “Бураған-Туҡан” – боронғо Арҡайым (Туҡан) ҡалаһы урыны. Темәсйән башлап үҙенең хан дәрәжәһен шул төбәктә сағында алғанлыҡтандыр, Үҫәргән батшалар шәжәрәһенә ул “Туҡан-хан” тип теркәлгән. “Бағырсы” – Майҡы-бей, “Мухули” – Муйтән-бей.

Һәм шул Аралда (Уралда) ғына үҫкән, Сыңғыҙ-хан үҙенең йәнеләй күргән еҙекәй үләненең ысын ҡурайы ла телгә алына, әлбиттә:

> Һинең ҡурайҙарың һәм һыбыҙғыларың,
> Һәм йырҙарың – шундалар бит!..

Боронғо башҡорт сеңләүе был, һәм ундағы һүҙҙәр менән килешмәү мөмкин түгел: бөтәһе лә шунда шул – бында шул!..
26.04.2007.

P.S. Тексҡа ҡул тығып үҙгәртергә, йәки ҡыҫҡартырға рөхсәт итмәйем.

Торналар төйәгендә

Баймаҡ өсөн ғәҙәти булған аҙ ямғырлы, ярым ҡоролоҡло 1977 йылдың көҙө...

Баймаҡ совхозының Комсомол бүлексәһенә кисләтеп барып төштөм. Район үҙәгенән мине ултыртып елдергән йөк машинаһының бейек кабинаһынан дала буйлап тауҙан-тауға үрмәләүсе осһоҙ-ҡырыйһыҙ ҡырсын юлдың яҫы арҡаһы сыбарланып күренә, шоссе ситенә итәктәрен йәйеп сүкәйешеп ултырған эреле-ваҡлы тәпәш тау һырттары ел-ҡояштан көйөп һорола624н ята. Күп урында тау биттәрендә даланың аҡ ҡылған еләне иҙерәп туҙған, унда хәлһеҙ күк үләндең ямаулығы һалынған, күп урындар, хатта ерҙең яралы ҡара тәнен дә ҡаплата алмай, шәрә-яланғас ҡалған. Ундай тәңгәлдәрҙә даланың мал тояғынан йәнселгән һәм киҫелгән тере тәне буй-буй ялланып һуҡмаҡлана, шул бирсәләр бер ҡараштан уҡ тәбиғәттең яҙмышҡайы хаҡында уйҙарға һала. Был тойғоно фәҡәт бер ҙур ҡыуаныс — уйһыуҙарҙа юлдың ике яғын ябып йәйерәгән, туңға һөрөлгән баҫыуҙарҙың майланып йылтыраған дегет ҡара тупрағы, ер-әсәнең ҡышҡа ҡарай ошо көр һулышы ғына бер аҙ еңеләйтә. Урылмаған урындарҙа ҡыуан елдәр һулышынан көйрәп сөрөшкән башаҡтар тоҡос һабаҡтарҙа ергә бөгөлөп, көйөлдө-ҡош суҡышылай кәкрәйеп ултыра. Ә инде урып йыйылған, ләкин һөрөп өлгөрмәгән шырт ҡамыллы киңлектәрҙә, офоҡ ситен сыбарлап, ергә төшкән ваҡ-ваҡ ҡабарынҡы болоттарҙай төйөрөмләнеп һәм туңҡаңлап, ниндәйҙер тере түмәләстәр ҡыҙыра.

— Нимә улар? — тим мин ике бите дала еленә шырауланып ҡуңырланған шоферға, төйөрөм “болоттар” яғына төртөп күрһәтеп, үҙемдең дөрөҫ тоҫмаллауымды барлап ҡарарға итеп. Һаран һүҙле егетем далалай ҡырыҫ сырайын йыйыра, йөҙөм емешен булканан тирә торғандарҙан түгелме икән был, тигәндәйерәк, төбәлеп ҡарап ҡуя.

— Һарыҡ бит, күрмәйһегеҙме ни? — Һәм, ҡатыраҡ һуҡтырҙым, ахырыһы, тигәндәй, йомшаҡ ҡына өҫтәй. — Алтай тоҡомло һарыҡтар!..

Менеп барған һыртыбыҙ, йылтылдап, тәгәрмәс аҫтында ҡала, алдыбыҙҙа ҡуйы ҡамыллы икенсе һырт асыла. Һәм ул һырттың офоҡҡа барып төкәлгән ҡалҡыу ситендә, сәйер! — баяғылай төйөрөм-төйөрөм, йоморо-йоморо ҡара-һоро “болот”тарҙан торған икенсе бер көтөү буҙырай.

— Ә был ҡара һарыҡтар ниндәй тоҡомдан?

Шофер йәнә миңә әйләнеп ҡарай ҙа кинәнә:

— Йылтыр ҡунысл итек кейгән оҙон сираҡтарын күрмәйһеңме ни? Тап импортный инглиз итекле ҡала ҡыҙҙарыныҡы бит! Ҡара әле, ҡайһылай ҡайсылаталар. Оҙон сираҡлы, ҡанатлы тоҡомдан былар, ха-ха-ха!

Һарыҡ та ҡанатлымы икән ни был Баймаҡ яҡтарында, тип уйларға ла өлгөрмәйем, уғаса ла булмай, елеп барған был һыртыбыҙ ҙа кабина ҡырыйынан артҡа табан ағылып үтеп ҡаплана, әммә оҙон сираҡ менән һоро ерҙе ҡайсылатыусы сәйер ҡара-һоро “болот”тар күҙ төбөмдә мөһөрләнеп-тоташып ҡала, ҡанатлы ла, серле лә уйҙарға һала...

Был яҡтарҙа йәй буйына ҡыурау ҡоролоҡ торғандан һуң, көтмәгәндә август ахырында өс көн ҡойма ямғыр ябырылып, район аэродромын шыйыҡ тары бутҡаһылай бәлйеткән — Өфөнән осҡан самолеттарҙы Магнитогорск бетонына ҡыуғайны. Иң ҡыҙыу мәленә еткән ураҡ эштәрен дә туҡтатты: урылған игендәр — ҡамылында, урылмағандары һабаҡта килеш ҡалды. Йәй буйына ҡыуан өткән баҫыуҙарҙың иген башағы былай ҙа көр булмағанлыҡтан, ураҡҡа төшкән ер кешеһенең йөрәгенә оло хәүеф кереп ятты: оҙаҡҡа һуҙылмағайы, бар ашлыҡты бураға илтеп еткерә алһаҡ ине... Әммә шул ҡыҫҡа ваҡытлы ямғырҙан тәбиғәт — тау-дала иркен һуланы, айҙар буйы ҡойонланып осҡан һоро саң-туҙандан тутыҡ таба һымаҡ ҡыҙған күктең йөҙө таң һыуына ҡойонғандай зәңгәрләнеп асылды, ҡарттар әйтмешләй, тоҙ ашамай үҫкән зирәктәргә хатта көндөҙ үк бейектәге аҡ йондоҙҙар баҙрап күренә башланы.

Комсомол ауылының ямғырҙан һуң техника тапап таҡталатҡан, майлы ҡара дегет төҫлө йылтырап ятҡан тупраҡ урамынан тыпыр-тыпыр ауыл көтөүе ҡайта. Ер иңенә ярты биленән батып барған ҡыҙыл тирмәләй ҙур Ҡояштың һалҡын-ҡыурау нурҙары был һәүкәштәрҙең ниһайәт тә ҡойма ямғырға йыуылып таҙарған һырт-арҡаларын шымартылған ҡоростай йылтырата. Дала өҫтөнән прожекторҙай тура бәргән шәфәҡ йылғаһын ем-ем итеп тыныс ҡына йырып барыусы мөгөҙ остары ниңәлер миңә сал эпостарыбыҙҙағы сал-боронғоно — офоҡ аҫтынан күкте умырып ҡалҡыныусы осһоҙ-ҡырыйһыҙ сиреүҙе, яу иңенән тырпайышҡан һөңгөләрҙе хәтерләтә...

Шул фантастик картинаны тәҙрә үтәләй күҙ ҡырыйынан кисереп, совхоз бүлексәһенең управляющийе Аткин Тәлғәт һәм бүлексә бухгалтеры, бер үк ваҡытта партбюро секретаре Кәримов Уйылдан уҙамандар менән контораның тар ғына бер бүлмәһендә гәпләшеп ултырабыҙ. Әңгәмәләштәрем икеһе лә тамам ир ҡорона кергән, халыҡ әйтмешләй, самай янып эшләй торған ғүмер быуынындағы кешеләр; ҡалалағы эшен ташлап, бәлки, уларҙың да эшен бүлдереп, көтөлмәгән ямғыр арбаһында килеп төшкән мин бахырға ҡыҙыҡһынып ҡарайҙар. Ленин ордены кавалеры, районның атаҡлы һарыҡ көтөүсеһе Райманов Миңлеғәли Әбүбәкер улы бына-бына килеп етергә тейеш. Шуғаса дөйөм хәлдәр, ошо ерҙең тарихы менән танышам. Оҙаҡ йылдар дауам иткән күркәм күренеш — Баймаҡ — Илеш туғанлығы һәм ярышы, Баймаҡ һәм Илеш атамаларының үҙҙәренең килеп сығышы тураһында һүҙ ҡуба. Эйе, был тылсымлы ике исем йәнәшә йөрөй шул һәр саҡ. Бөгөнгө Башҡортостан хаҡында образлы һөйләгәндә лә, ғәҙәттә, халҡыбыҙ йөҙөнөң бер бите Баймаҡ булһа, икенсеһе — Илеш, тиҙәр. Тимәк, улар икеһе лә сал, икеһе лә бер туған. Бына шул сал “Баймаҡ” тигән йомаҡты төрлө кеше төрлөсә сисә икән. Мин дә сәмләнеп китеп, фәндәге һуңғы йылдар емеше булған тоҫмаллауҙы килтереп һалам уртаға, бәхәсләшеп тә алам. Боронғо Кесе Азияның Рим ҡалаһын нигеҙләүсе Рәм һәм Рәмил (йәки Рем, Ромул) тоҡомдарының Бүре-Әсә, Бүре-Хоҙайға табынғанын һәм, имеш, Рәм һәм Рәмилде имеҙеп үҫтергән шул Бүре-Әсә (йәғни Бөрө-Баҡ)

өммәтенә ҡойолған бронза һәйкәлдең ошо көнгәсә Рим майҙанында тороуын; Ә беҙҙең баймаҡтарҙың баш бабаһы Һүнмә (Гуньмо) тигән инсанды ла, имеш, Бүре-Әсә (йәғни шул уҡ Бөрө-Баҡ) тәрбиәләп үҫтереп, шуның өммәтенә яһалған һәйкәл-һүрәттең ошо йылдарҙа ғына боронғо бабалар төбәге Урта Азияла харабалар араһында табылыуын һеҙ, әлбиттә, матбуғаттан уҡып беләһегеҙҙер. тим мин. Әнә шул "Бөрө-Баҡ" (Бүре-Бог йәғни бағыусы Бүре-Хоҙай) тигән исемдең үҙгәрешенән килеп сыҡҡандай түгелме бөгөнгө "Баймаҡ" һүҙе: "Бөрө-Баҡ"тан — Бөйө-маҡ, "Бөйө-маҡ"тан — Байамаҡ//Баймаҡ...

— Ярай, был ҡыҙыҡлы, бәхәсле һүҙ ғалимдарыбыҙға ҡалһын, — тип көлә партбюро секретаре. — Инде бәхәсһеҙерәк булған, үҙебеҙ үк күреп белгән тарихҡа күсәйек...

— Беҙ белгәндә әле был ерҙәр олатайымдың һаҡалы шикелле көмөштәй аҡ ҡылған, ҡола ялан ине, — ти Тәлғәт. — Хәҙерге совхозыбыҙ 1954 йылда, шул сал сирәм ерҙәрҙе асҡанда төҙөлдө.

— Ә уға тиклем?

— Уға тиклем, — һүҙҙе өлкәнерәк йәштәге Уйылдан дауам итә, — йылғыр тояҡлы йылҡы малдары үрсеттек, элеккесә әйткәндә, Эшсе-Крәҫтиән Ҡыҙыл армияһын кавалерия аттары менән тәьмин иттек. 46-нсы конезавод булды бында. Ватан һуғышынан һуң, үҙегеҙ беләһегеҙ, хәрби хеҙмәттә йылҡы отставкаға сыҡты, армиябыҙ башкөлләйгә техникаға ултырҙы... Ә сирәмдең асылыуы беҙгә ауыл хужалығының бер ыңғай төрлө тармаҡтарын үҫтерергә форсат бирҙе.

— Юлда килгәндә, туңға һөрөлгән баҫыуҙарға иғтибар иткәнһегеҙҙер, — тине управляющий, — донъя яратылғандан биреле һимергән ҡара тупраҡ, хатта, уҫка һалып, майын һығып яларлыҡ. Тик шуныһы: ямғырҙарҙың кәрәкле саҡта һәм етерлек яумауы тейә теңкәгә, ошоноң арҡаһында уңыш башаҡта уҡ бүҫкәрә. Үҙегеҙ беләһегеҙ, ҡоролоҡло зона. Кемдер әйтмешләй, илештәрҙең түбәһе өҫтөндә күк төбө шабырлап ишелгәндә лә Баймаҡтарҙың ялтасын Ҡояш өтә... Әгәр Урал артын дымға ҡандырыу яйын уйлап тапҡанда, ысын ожмах баҡсаһына әүерелер ине был ерҙәр.

— Эйе, игенсенең дә, малсының да йәй буйы ике күҙе ерҙә, тупраҡта, ә дүрт күҙе күктәге болоттарҙа, — тине партбюро секретаре. — Күктән тамған тамсы менән шул урында ҡыйылып сыҡҡан йәшел ҡыяҡ беҙҙең бөтә түккән күкрәк көстәребеҙҙе, пландарыбыҙҙы, хыялдарыбыҙҙы хәл итә. Иген ҡыяғымы ул, әллә үләнме — барыбер. Яҙ башынан уҡ кеше уның яҙмышы өсөн борсола: ҡуҫҡылланып күкрәп үҫеп китерме, әллә ҡыуан ел һулышынан ҡурылып бөгәрләнерме? Бер уйлаһаң, дала тупрағында түгел, ә беҙҙең йөрәктәребеҙҙең нескә түрендә татлы һыҙлатып шыта һәм әсеттереп ҡыуара бит ул ҡыяҡ...

— Әммә кеше бирешмәй! — Управляющийҙың күмерҙәй көйрәү күҙ ҡараларында дөрләп батып барған дәү Ҡояштың һуңғы утлы саткыһы ялтыраны. — Хәтерегеҙҙәме, бынан ун — ун биш йылдар элек кенә ошондай уҡ ҡоролоҡло шарттарҙа гектарынан күпме ала инек? Ике, өс центнер! Ә быйыл, үҙегеҙ беләһегеҙ, беҙҙең Урал артының ямғырһыҙлыҡ

әптән үҙәгенә үткән күрше Хәйбулла районы ла гектарынан дөйөм алтыны һуға. Ҡырыҫ тәбиғәт шарттарын егәрле эше, ергә хәстәрле ҡарашы, хужалыҡ итеүҙең юғары культураһы менән еңә хәҙер кеше.

— Юлдың ике яғындағы ҡыр-баҫыуҙарҙы ус төбөндәгеләй күреп килдем, — тинем. — Ерҙәр өҫтәл өҫтөләй тигеҙ һөрөлгән, һалам бейек эҫкерттәргә өйөлгән. Һәр ҡайҙа хәстәрлекле аҡыл, егәрле ҡул эш иткәне һиҙелә. Ысынлап та, юғары культура менән һалына киләсәк уңыштың нигеҙе. Әммә, үҙегеҙ беләһегеҙ, мине барыбер шайтан ҡотҡоһо өйкәй: ерҙәге ҙур агрономияға күктеке лә ҡушылһа, йәғни ямғырҙы үҙ ваҡытында яуҙырһа, башаҡтарҙан ерҙең биле һығылыр ине, тип уйлап килдем.

— Ундай "һығылыу", һеҙҙең кеүек ҡәләм эйәләрен, моғайын, уғата нығыраҡ ергә, беҙҙең хәстәрлектәргә сумырға, яңы геройҙар табырға тартыр ине! — Шулай тел сарлашып, көлөшөп алдыҡ.

Уйылдан Муллаәхмәт улының ҡытыршы ҡулында "Совет Башҡортостаны" гәзитенең һуңғы бер һаны ҡыштырланы.

— Уйынлы ғына һөйләшһәк тә, уйыбыҙҙа шул уҡ бер нәмә ята, — тине ул, беренсе биттәге "Урып йыйыу барышы" тигән мәғлүмәткә төртөп күрһәтеп. — Бына республиканың географик урынлашыуҙары буйынса ҡапма-ҡаршы яҡтағы, йәғни ике остағы ике район, ҡапма-ҡаршы һауа шарттары... Ошо көндә Илештә һәр гектар 22,6 центнер иген бирә, ә Баймаҡта шул уҡ гектарҙан 10,8 центнер ғына алына. (Йәйәләр эсендә бер йыл алғараҡ йүгереп, 1978 ямғырлы йылдың уңыштарын да сағыштырайыҡ: Илештә — 30 центнерҙан ашыу, ә Баймаҡта 20 центнер тирәһе. — Й.С.). Әлбиттә, мин, илештәр ямғыр арҡаһында ғына өлгәшә юғары уңышҡа, тип әйтергә, Илеш игенсеһенең борон-борондан килгән уңғанлығын, егәрлелеген, зирәклеген һис кенә лә кәметергә теләмәйем, юҡ. Ыңғай һауа шарттары менән бергә, шул һауа шарттарын үҙ файҙаһына егә белгән бөйөк баҫыу оҫталығы күтәрә ул районды. Ләкин Урал артына ла йәй үҙәгендә бер генә тапҡыр "лимит"тан тыш берәй быуаҙ болот ебәреп ҡолонлатыу сараһына өлгәшкәндә лә, их, беләһегеҙме, был ерҙәр үҙен ҡайһылай күрһәтер ине! Дым кәрәк ҡоролоҡло далаға — ҙур быуалар, диңгеҙҙәй һыу яткылыҡтары кәрәк!

Тәлғәт Тажитдин улы ла парторг әйткән был изге теләкте эйәк ҡаға-ҡаға ихлас хупланы, шул уҡ ваҡытта, моғайын, бүлексә управляющийе булараҡ үҙенең эсен бошороп йөрөгән хәүефте лә бушатырға самаланы:

— Бүлексәләрҙә мал һаны йылдан-йыл арта, һарыҡ көтөүҙәре ерҙе болдоттай яба... Әлбиттә, йөн кәрәк, ит кәрәк һәм, бер шағирыбыҙ әйтмешләй, күп кәрәк. Бөгөн шул бурысты намыҫлы үтәрлек кадрҙарыбыҙ — Райманов Миңлеғәли кеүек һарыҡсылыҡ эшендә "күҙе сыҡҡан" оҫталарыбыҙ ҙа, әлеге әйтмешләй, ерҙе ябып йөрөгән меңәрләгән баш һарыҡ көтөүҙәребеҙ ҙә бар. Продукцияны ла улар йыл һайын күберәк бирә. Өҫтән генә ҡараһаң, бөтәһе лә ал да гөл бара һымаҡ. Әммә шул борсой мине: ер-әсәнең тыуҙырыу ҡеүәһе аҡрын һәм аҙ арта бит. Баҫыуҙарҙан уңышты үҙебеҙ теләгәнсә һәм заман ҡушҡанса ҡуш ҡуллап көрәп ала алмайбыҙ, үҙәндәрҙә һыу ҡорой, көтөүлектәрҙә үлән бөтә. Быйыл үҫкән йәш ҡыяҡ киләһе йыл шытмаҫтан ер ҡыҫыр ҡалыу, киләһе

йыл тыуған бәрәс йәшел ҡыяҡ урынына саң йотоу ҡурҡынысы бар. Әгәр был ерҙе быуаҙытып быҙаулатыу сараһын алдан уҡ күрмәһәк, ҡыҫыр һыйыр елененән һөт һауыусы тинтәк көнөнә ҡалып ҡуймайыҡсы, тим...

— Ҡалмабыҙ! — тине партбюро секретаре, әммә күҙҙәрендә шул уҡ хужаларса ғәмле хәүеф томаны йөҙә ине. — Ҡалмабыҙ, сөнки тәбиғәтте ҡурсалап һаҡлау — бөтә халыҡ, дөйөм дәүләт эше, закон эше бөгөн.

Ҡырыҫ тәбиғәт шарттарында тыуған ерҙең киләсәген ҡайғыртыусы кешеләрҙең, ысынлап та ер ҡыяғын йөрәк эсендә шыттырыусыларҙың, хәстәрлекле көйәләнеүе ине был, шуның үҙәгендә заман, ил хәстәре тамыр тиртеп ята ине. Тәбиғәтте һаҡлау проблемаһы хәҙер бөтә ил буйынса дәүләт күләмендәге оло һөйләшеүгә, тормош ҡанунына әйләнде. Тик былдай тел ҡағыуҙарыбыҙ, тимен, ошондай ил әһәмиәтендәге йөкмәткеһен, хәүефлелеген юғалтып, ғәҙәти тел сарлауға, модаға ғына әйләнеп китмәһен ине...

Серҙәштәремдең дала еле шыраулатҡан ҡырыҫ йөҙҙәренә ҡарайым, бая шәфәҡ утын һурған күҙ ҡараларында таулы Баймаҡ далаһының ҡоро һәм уйсан ҡырыҫлығын абайлап, шулай ҙа еңел һулайым. Юҡ, былдай кешеләр мода ҡоло була алмай, улар көллөһөн дә ысын йөрәктән кисереп, тормош хаҡиҡәте менән берегеп йәшәй. Был кешеләр ер менән ҡуша тын ала, ерҙең хәлен уйлап көйөнә икән, тимәк, ысынлап та ул шулай: хәҙерҙән үк ер хәстәрлек һорай беҙҙән. Эйе, беҙҙән — ошо бөгөн һәм ошо ерҙә йәшәгән кешеләрҙән!.. Урал артына артылған, дала бауырына баҡҡан ерсән йөрәкле һәр кемде лә ҡыуан елдәй ҡырыҫ һулышлы ошо тормош хаҡиҡәте ҡаршылай...

Болдорҙан ауыр баҡырҙай баҙыҡ аяҡ тауыштары ишетелде, хужаларҙың икеһе лә ҡапыл баштарын ҡалҡытты:

— Әнә киләләр үҙе!

Эйе, үҙе. Мин уны тәүге һәм һуңғы тапҡыр яңыраҡ — яҡынлашып килгән бөйөк Октябрь Байрамы айҡанлы Өфөлә республика күләмендәге тантаналы уҙғарылған Баймаҡ районы аҙналығында зәңгәр экрандан күргәйнем. Киң күкрәген Юғары дәүләт бүләктәре биҙәгән мөһәбәт кәүҙәле, аҡыллы-алсаҡ сырайлы уҙаман ниңәлер күңелде үҙенә тарта, зәңгәр экран артында уның күҙгә күренмәй ҡалған, кешеләрсә тәрән һәм киң донъяһын барлап белеү дәртен уята ине. Бына инде ошо мәл тыуҙы, буғай: араны һалҡын экран һымаҡ ҡаплап торған ишек асылып китте лә мин күрергә теләгән ир-уҙаман үҙе туптай тығыҙ кәүҙәһе менән килеп баҫты алдыбыҙға, хужаларса тамаҡ ҡырып, ҡаты ҡул ҡыҫып күреште.

— Күрәһеңме, Миңлеғәли ағай, үҙеңде Уралдың теге яғынан эҙләп килеп еткәндәр! — тине управляющий, күҙҙәренең күмер-ҡараһында шаян ҡуҙҙар баҙырлатып. — Дәәә, ҡунаҡтарың ишәйә! Эштәрең былай гөрләп барһа, оҙаҡламай Ҡуңыр-Буға юлы буйлап Уралдың ике яғынан да мосафирҙар ағыласаҡ, ҡапҡаны киң асырға, табынды ҙур ҡорорға кәрәк буласаҡ. Әлбиттә, алты мөйөшлө иҫке нигеҙең быны күтәрә алмай, заманса киңлек һорай. Яңы йортоңдоң семәрле ишеген ҡасан асабыҙ әле?

Миңлеғәли ағайҙың яҫы маңлайлы, уйсан күҙ ҡарашлы йөҙө Ирәндектең таңғы Ҡояш нуры балҡытҡан дәү сағылылай яҡтырҙы, тигеҙ булып теҙелгән баҙыҡ аҡ тештәрен йымылдатып йылмайҙы:

— Күп ҡалманы инде. Иҫән булһаҡ, мине белгән, яҡын күргән бөтәгеҙ ҙә бөйөк Октябрь Байрамына нигеҙ туйын туйларға рәхим итегеҙ! — тине.

— Ай-һай, яңы йортоң ҙур ҙа ул, ләкин һыйҙыра алырмы бөтәбеҙҙе лә? — тине, көлөп, партбюро секретаре. — Ни эшләрһең, әгәр ҙә ки үҙеңде, Быҙаулыҡ йылғаһынан башлап Яйыҡҡаса, Яйыҡ ҡойған Каспийғаса белгән булып сыҡһалар?!.

— Күңел киң булһа, өйҙөң буралары ла киңәйә ул, — тине райондың атаҡлы көтөүсеһе. Уйын һүҙҙең тамамланыуын белдереп, ирендәре ҡыҫылды, ҡарашы етдиләнде. — Беҙҙең Быҙаулыҡтан Яйыҡҡаса белеүселәр барлығына ышанам, ә Каспийғаса ирешеү өсөн күп эшләргә кәрәк әле миңә, — тине.

— Һаранланмасы, ағай! Беҙҙең Баймаҡ яҡтарында ошо көнгәсә һинән башҡа кем һуң һәр йөҙ баш һарыҡтан 132 баш бәрәс алып үҫтергән дә һәр һарыҡтан алты килограмм йөн ҡырҡыуға өлгәшкән? Кем "райондың чемпионы" тигән ҡотло дәрәжәне йылдан-йыл ҡулдан ыскындырмай килә? Биш йыллыҡта кемдең күкрәген Ленин ордены нурланы?!

— Ғәйеплемен, — тине, ҡырыҫ сырайы яҙылып китеп, йөҙөнөң һәр йыйырсығы Ҡояш нуры һымаҡ төптән мөлдөрәгән уҙаман. Ул, күренеүенсә, ауыр хеҙмәтендәге һәр ҡаҙанышҡа, уңышҡа сабыйҙарса эскерһеҙ ҡыуана ла белә ине.

— Шулайғас, — тинеләр уға бүлексә етәкселәре, — яҙыусы иптәште үҙ арбаңа ултыртып алаһың да барлыҡ булған һәм буласаҡ гонаһтарыңды сисәһең. Шунан, бәлки, ҡәләм эйәһе үҙенә кәрәген дә, кәрәкмәгәнен дә элеп алыр.

— Киттек, улайһа, — тине атаҡлы көтөүсе.

Бая ғына күҙ алдыбыҙҙа ер йөҙөнә һыҙылып һүрелгән Ҡояш юлаҡтары эҙенән ауылдың көнсығышына күтәреләбеҙ. Далаға ҡарай ҙур бейәләй бармағылай тарбайған ауыл урамының тупаҡ осо офоҡ ситенә төкәлә, донъяны күмгән эңер-меңер ҡараңғылығы һыҙатында аҡһылт офоҡ дуғаһы ерҙең сиге һымаҡ күренә. Урамдың бер яғын аҫтаныраҡ буйлатып уҙған тар үҙәндән урам һымаҡ уҡ ҡыҫҡа буйлы, ләкин йор һыулы Түләш инеше аға, ул, ауылды йомарт һуғарып үткәндән һуң, күп тә бармай, Һаҡмар һыуына ҡоя. Инеш башы ошо уҡ урам осонда — бөҙрә талдар ҡуйырып үҫкән төбәктә — әйтерһең дә, офоҡтоң үҙенән урғыла. Урам буйының инешкә төшкән кәртә аҫтары — ҡуҫҡыл-йәшел баҡсалыҡ, һәр йорт ихатаһын йор үҙәнгә тоташтырған йәшелсә түтәлдәре.

— Түләш — иң түҙемле йылға ул, — тип ҙурлап һөйләп бара Миңлеғәли ағай, минең шул яҡҡа күҙ уҡталдырыуымды абайлап. — Ҡоролоҡло ҡыуан йылдарҙа бының ише үҙәндәр ҡороп бөтә, төптәре сатнап ярыла, хатта Һаҡмар-һыу ҙа һайығып, хәлһеҙләнеп кенә аға. Ә был

бәрәкәтле шишмә, ғүмере оҙон булғыры, йәйен-ҡышын бер көйө, тулы көйө — мөлдөр-мөлдөр тәгәрләп кенә ята.

— Түләш тигән исемендә үк мәғәнә бар шул, — тип ҡушылам мин дә, үҙем тәүгә генә күргән, донъялағы күптәргә билдәһеҙ инеш өсөн ҡыуанып. — Түл биреүсе, башҡа йылғаларҙы йәшәтеүсе тигән һүҙ бит ул.

— Ошо һыуҡайҙың матурлығына ҡыҙығып, ярының башына мин беренсе булып нигеҙ һалғанда был тирә ҡола ялан ине. Бер-ике йыл әнә шулай Хәбирә еңгәң менән ауылдан ситтә, ялан уртаһында яңғыҙаҡ ҡышланым. Хәтерҙә, бурандарҙа тау аҫтына ауылға эшкә йөрөгәндә аҙашып уҡ маташҡан саҡтар ҙа булды. Өшөп ҡайтып йығылаһың да төнө буйына ел олоуын тыңлайһың, ғүмер-баҡый ут күршеһеҙ йәшәргә тура килмәгәйе, тип шомланаһың. Өҫтәүенә, еңгәң ҡолаҡ итен ашай: аҡылы бар кеше, ышыҡ үҙәнде ташлап, тау башына нигеҙ ҡорамы, йәнәһе... “Уның ҡарауы һәр яңы көн беҙҙән башлана: тәүге Ҡояш нурҙарын да, тәүге Түләш урғылдарын да үҙебеҙ аша үткәрәбеҙ!” — тип ҡупайтам еңгәңде... — Миңлеғәли ағай, ике яҡлап рәт-рәт теҙелгән, баштары шифер ҙа ҡалай менән ябылған күркәм йорттарға, тәҙрәләрҙә балҡыған сағыу электр йондоҙҙарына, нисектер, ихлас кинәнеп ҡарап, еңел итеп көрһөндө. — Әммә күп тә үтмәне, ауылдың яңы нигеҙ ҡороусы йәш ғаиләләре, комсомолдар, минең арттан тау үренә үрләне...

Эйе, Ҡояшҡа һәм йылға башына! Был символлы һүҙҙәрҙе әллә ул әйтте, әллә үҙем уның шулай икәнлегенә эсемдән тәрән инанғанлыҡтан уйланым. Һәр хәлдә, үҙе башлап нигеҙ һалған туған урамдан, тыуған ерҙән миңә юл башлап, тәрән һулыш алып атлап барыусы ҡырҡ ете йәшлек замандашым, илдәшем, ерҙәшем, ул ғына ла түгел, көрәштәшем һәм партиялашымдың ошоғаса барлыҡ ғүмере, тын алышы үҙенән-үҙе ошо ерҙең кешеләрен һәр аҙымда бәхет тауы башына, шишмә һәм Ҡояш сығанағына табан башлап барыусы изге ҡорҙоң изге сифаттарына һуғарылғайны.

1930 йылғы, Ислам ауылында тыуған. Йомаш ауылына Һаҡмар аша яланаяҡ алты саҡрым йәйү йөрөп уҡыған. Бөйөк Ватан һуғышы башланғас, атаһы Әбүбәкер ағай һуңғы Еңеү залпынаса фронтта була. Өлкән апай — ФЗО-ла фронтҡа ҡорал ҡоя, әсәй ҡулында имсәк бала. Атай урынына ҡалған өлкән улан Миңлеғәлигә, билде биштән быуып, башкөлләй эшкә егелергә тура килә. Хәйер, малай былай ҙа эшһөйәр, бигерәк мал күңелле булып сыға: әсәһе Мөслимә еңгәй менән көнө-төнө колхоз һарыҡтары араһында сыуала. Тиҫтерҙәре ҡоронда башлап атҡа атланыусы, колхоздың өс быуынлы көтөүсе сыбыртҡыһын ҡулына алыусы ла ул була. Етенсене бөтөр-бөтмәҫтән, һарыҡсылыҡ фермаһына ныҡлап егелеп, йөрәге менән мал-тыуарға эҫенә.

Ғәрәсәт йылдарында ел-ямғырға бирешмәгән ҡауырһындары ҡатып, бауыр аҫтынан байтаҡ ҡына елдәр үткәреп сыныҡҡас, 1948 йылда ул, беренсе башлап, тыуған ауылының баҫыу ҡапҡаһынан тышҡа артыла — сал ҡылғанлы дала буйлап Ҡояш сығышына ҡарай юл тота: хыялдарының һәм татлы төштәренең яҡты төбәгенә, үҙенең ғүмергә төпләнәсәк, ғаилә ҡороп, тәрән тамырҙар ебәрәсәк *торналар төйәгенә*... Юлында уҡ тап иткән,

дала ябып елгән йылҡы өйөрөнә юлығып, йылҡы көтөүселәре менән төн сыҡҡансы дуҫлашып, ҡыҙыл Ҡояштың тәүге нурҙарын Ҡояш һымаҡ ҡыҙыл-тура айғыр өҫтөндә ҡаршыларға өлгөрә. Йәйәүле юлға сыҡкан егет сал далалағы 46-нсы йылҡы заводы үҙәгенә атка атланып килеп керә, уны бында йылҡы затына ата-баба ҡанынан тирткән ярһыткыс көс килтерә.

Дала елдәре менән ярышып, ярһыу аттарҙа сабышып ҡына йәшлек тә үтеп китә. Ҡарағаттай ҡара күҙле, ҡаран йылғалай оҙон толомло тормош юлдашы Хәбирә менән Ҡояшлы һәм йор инешле тау башына ҡотло ояларын ҡороп, тора-бара, береһенән береһе матур өс һандуғас балалары ла яҡты донъяға килә: Хәлиҙә, Диләрә, Гөлнара...

Сал даланы иңләп елгән ярһыу йылҡы өйөрҙәре юҡ инде: фәнни-техник революция ат ҡеүәтен, ат тиҙлеген ярһыу моторҙарға илтеп күсерҙе. Дала үҙе лә күптән инде йәшәрҙе: көмөш ҡылғандар урынын ҡусҡыл бойҙайҙар, сәсеп үҫтермәле һутлы үләндәр, егелгән ат дуғаһын ҡапларлыҡ кукуруздар биләне. Миңлеғәли иһә 1953 йылда уҡ йылҡысылыҡ һөнәрен алмаштырып, Баймаҡ далаларының ата-бабаларҙан ҡалған икенсе бер ырыҫын — һарыҡ көтә башлағайны. Был башлауы ла ифрат үҙ ваҡытында булды: 1954 йылда йылҡы заводы бөтөрөлөп, сирәм ерҙәр асылып, бөгөнгө Баймаҡ совхозы төҙөлдө, ер башкөлләй башаҡтар һәм һарыҡ баштары аҫтында күмелеп ҡалды...

Был кешене ана шулай ғүмерлеккә башлап йөрөүселәр ҡоронан иткән изге тынғыһыҙлыҡ, яңыға уҡталыу 1956 йылда уны, һарыҡсылыҡ ғилеменә тамам тейенеү өсөн, Алтай далаларына алып барҙы, шунда бөгөн ошо ерҙең Урал итәктәрен аҡ болоттай ябасаҡ көмөш төҫлө нәҙек йөнлө һарыҡтарын танытты.

Районда ул, тәүгеләрҙән булып, ҡиммәтле тоҡом һарыҡтарҙы көтә, үрсетә башланы. Беренсе башлап ата-бабаның онотолоп бөткән ысулын — көтөүҙәрҙе ҡар ҡатҡанса ҡышын тибендә йөрөтөүҙе, йәйҙәрен көнө-төнө ҡырҙа — кәртәгә бикләмәй тотоуҙы, бәрәстәрҙе әсәләренән башҡа — саҡманда айырым үҫтереүҙе ҡулланды. Районда тәү башлап һарыҡтарҙы яһалма ысул менән ҡасырыуҙы яйға һалды, колхоз-совхоз фермаларында элек бер ҙә йәлсетмәгән һарыҡсылыҡтан беренсе башлап һәр йыл һайын юғары табыштар алды. Совхозда ул коммунистик хеҙмәт өсөн көрәшеүселәр хәрәкәтен башланы, беренсе булып үҙе ошо юғары исемде яуланы, йәш көтөүселәр оҫталығын арттырыусы һиҙгер остаз да үҙе. Күпме булды уның тынғыһыҙ хеҙмәт юлында һәр төрлө башланғыстар!.. Уның ҡул аҫтында эшләгән, тәрбиәләнгән йәш көтөүселәрҙең күбеһе, үҙ аллы юлға баҫып, өлкән көтөүселәр булып киттеләр, үҙҙәре юл башланылар. Шуларҙың береһе — Рәфҡәт Йәндәүләтов — 1974, 1975 йылдарҙа С. Чекмарев исемендәге республика призын яуланы, хәҙер ул үҙе абруйлы өлкән көтөүсе.

Һарыҡсылыҡтың беренсе класлы оҫтаһы булып танылған М.Ә. Райманов ошо яҡшы эштәре өсөн 1973 йылда үҙенең тәүге юғары дәүләт бүләген — Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ орденын алды, шул йылда уҡ, социалистик ярышта еңеп сығып, исеме республика гәзиттәренең Хөрмәт таҡтаһына яҙылды. Уның йөрәкһеүле егәрле хеҙмәте 1973, 1974, 1975

йылдарҙа “Социалистик ярышта еңеүсе” билдәләре менән тамғаланды өҙләкһеҙ. Был уҙаман Баймаҡ ерендә һәр йөҙ һарыҡтан иң күп бәрәс алып үҫтереүсе рәүешендә дан ҡаҙанды. Ә ышаныслы цифрҙар теленә күскәндә, бына унық баҫкыстан-баҫкыска ҡалҡыныуының объектив күрһәткестәре: 1971 йылда — 98, 1972 йылда — 118, 1973 йылда — 119, 1974 йылда 132 бәрәс. Һуңғыһы — хәҙергәсә был яҡтарҙа иң бейек тау, ҡалҡыныш, ҡәҙимге телдә әйтһәк, маяҡ. Районның һарыҡ көтөүселәре бөгөн ошо маяҡка күҙ төбәп бара, шул түбәне алыу өсөн көрәшә.

— Тәүге һанға иғтибар иткәнһегеҙҙер, — ти Миңлеғәли ағай, күпте күргән ҡуйын дәфтәренең баяғы, 1971 йылғы, цифрҙар яҙылған битен аҡтарып, — йөҙ баштан йөҙ баш та түгел, ә 98 бәрәс. Быныӊ үҙ сәбәбе бар. Тәүге тапҡыр бәрәсләүсе бәрән һарыҡтар ине минеӊ ул көтөүем. Ә йәш һарыҡтар, һәр кемгә лә билдәле, бик аҙ игеҙ бәрәсләй. Унан килеп, улар әле йүнләп имеҙә лә белмәй, хатта йыш ҡына үҙ бәрәсен үгәйһетеп типкеләй. Шундай төрлө сәбәптәрҙән, әлбиттә, тыуҙырып алынған, күҙгә күренгән бәрәстәрҙе лә юғалтыуға юл асыла. Ә ул ҡаза юлын ҡаплау, кәртәләп ҡалдырыу тулыһынса көтөүселәрҙең, бәрәс бағыусыларҙың оҫталығына, йөрәк йылыһына бәйле. Эйе, йөрәк йылыһына. Сөнки бит туң йөрәк менән хатта ҡоросто ла күҙ асып йомғансы үле тимергә әйләндерергә мөмкин, ә бында һүҙ үҙебеҙ кеүек үк тере йәндәр хаҡында бара...

Кеҫәл һымаҡ ҡуйы көҙгө һалҡынлығы плащ салғыйҙарына яғылып һаман-һаман йәйелә барған урам иҥенән офоҡҡа табан тау үренә атлайбыҙ ҙа атлайбыҙ, әйтерһеӊ, етди йөҙлө юлдашымдың киртләс-киртләс тормош юлы буйлап үргә менәбеҙ. Урам осон көмбәҙләгән офоҡ дуғаһы уғата бейекләнә, серле йөрәкһетеп тарта. Офоҡ артында — дала, Миңлеғәли көн дә иртүк тороп сығып китә торған тулҡын-тулҡын таулы, елкендерткес бейек үрле дала... Юлдашымдың әле әйткән ябай һүҙҙәре ни өсөндөр йөрәк башын татлы һыҙлатып ала, офоҡ артындағы өнһөҙ дала төбө кинәт кенә йылынып, йәнләнеп, һәммәбеҙгә өмөт менән баҡкан донъяның бәғерле күҙ ҡарашылай тойола. Эйе, донъя — тере! Әгәр беҙ кеше икән, донъяның һәр таш валсығы, тупраҡ бөртөгө, үлән ҡыяғы ла тере; ни итһәк тә, ҡылһаҡ та беҙҙең һүҙ тере еребеҙ, үҙебеҙ кеүек үк тере йәндәр хаҡында бара һәм барасаҡ!

— Ул 98 һаны артында, әлбиттә, шул йылдағы беҙҙең чабан бригадаһының ҡайбер етешһеҙлектәре, нимәнелер алдан күрә белмәүе йәки эшләп еткермәүе лә көҙгөләгеләй сағылалыр... — Миңлеғәли ҡуйын дәфтәренә текләп уйланды. — Һәр хәлдә, һуңғы һөҙөмтәләр шуны күрһәтте... 1971 йылдағы кеүек үк, быйыл да мин 900 баш бәрән һарыҡтар ҡарайым (ә элекке көтөүемде, “ҡартайтып”, ит комбинатына оҙаттыҡ). Былтыр улар бәрәсләмәй торған йыл ине, һәр һарыҡтан 4 кило ла 900 грамм йөн ҡырҡып алдыҡ. Ә быйылғы йөкләмәм 4 кило ла 500 грамм йөн һәм йөҙ һарыҡтан йөҙ бәрәс ине (ауыҙы бешкән — өрөп эскән, тиҙәр бит!). Шул йөҙ бәрәсте алып, иҫән-һау үҫтереп биреүҙә ине ниәт. Ләкин былтыр беҙҙең йортҡа оло ҡыуаныс килде: малсылыҡтағы күп йыллыҡ хеҙмәтем һәм уңыштарым өсөн дәүләтебеҙ мине тағы ла бик ҙурлап бүләкләне. Был

мине яңы уйҙарға һалды. КПСС-тың Үҙәк Комитеты һәм СССР Верховный Советы Президиумы ағзаһы Миҙхәт Закир улы Шакиров иптәш үҙ ҡулы менән күкрәгемә Ленин орденын беркеткәндә үҙемдең бөтә уҙған тормош юлым, халҡымдың көрәш юлы, хыялдарым кисте күҙ алдымдан. Коммунислыҡ бурысым йөрәкһетте. Быға тиклем үк бригадабыҙҙың мөмкинлектәрен барлап, иптәштәрем менән кәңәшләшеп, киләһе йыл өсөн үҙебеҙ һалған нигеҙҙәрҙе, эске резервтарҙы иҫәпләп ҡуйғайным инде мин. Шуға күрә орден алған тантаналы йыйылышта уҡ йөкләмәләремде яңыртырға кәрәклеген белдерҙем, күтәренке яңы йөкләмә алдым: һәр һарыҡтан 4 кило ла 800 грамм йөн ҡырҡырға, һәр йөҙ баш бәрән һарыҡтан 110 бәрәс үҫтереп тапшырырға. Был, әлбиттә, беҙҙең әлеге шарттарҙа һәм тәүге тапҡыр бәрәсләйәсәк көтөү өсөн ауыр һәм яуаплы ине...

Юлдашымдың эске тәрән тулҡынланыуы тауышынан һирпелде, ялҡыны миңә лә ҡапты.

— Йә, нисек булды һуң?!

Миңлеғәли ағайҙың уйсан ҡарашлы йөҙөн бәхетле йылмайыу айбарланы:

— Ышанаһыңмы, ҡустым, Партия алдында биргән Намыҫ һүҙемде аҡлағаныма ҡыуанып бөтә алмайым! 1977 йылда һәр һарыҡтан алты кило йөн ҡырҡтыҡ, һәр йөҙ һарыҡтан ысынлап та 110 бәрәс алдыҡ. Ә был иһә йөн буйынса дөйөм совхоз ҡаҙанышынан 1 кило ла 500 грамға, райондыҡынан ике килоға, республиканыҡынан өс килонан ашыуға, ә бәрәс буйынса дөйөм совхоздыҡынан туғыҙ башҡа, райондыҡынан өс башҡа артыҡ, тигән һүҙ ул. Шуны иҫтән сығармайыҡ: был продукцияны биргән беҙҙең көтөү теге, 1971 йылдағы кеүек үк, тәүге бәрәсләүсе бәрәндәр бит әле! Тимәк, бригадабыҙ көрәш тауының яңы үренә менгән. Беҙҙең мөмкинлектәребеҙ ҙә, белемдәребеҙ ҙә, эш алымдарыбыҙ ҙа яңы ҡаҙаныштарға лайыҡлы үҙгәргән, бер һүҙ менән әйткәндә, беҙ, үҙебеҙ ҙә һиҙмәҫтән, бөтөнләй яңырғанбыҙ, тәгәрмәстәр яңы артылыш үренә тәгәрләгән.

Артылыштар! Түбәләрен әгәр Ҡояш нурламаһа, беҙҙең өсөн улар фәҡәт юл аҙабы ғына булып ҡалыр ине. Артылыштар артында беҙ уға үрләгән юлсының бөйөклөгөн күрәбеҙ, беҙҙең артылыр үрҙәребеҙҙе партияның аҡыл Ҡояшы яҡтырта. Шул Ҡояшлы артылышҡа менгән алмас рухлы кеше дүрт ҡиблаға гәүһәрләнеп саткылана. Был һүҙҙәрҙең ҡоро һүҙ түгеллеген иҫбатлар өсөн, шул уҡ Миңлеғәли Раймановтың хәҙер инде билдәле булған һуңғы — 1978 йылғы эш күрһәткестәренә мөрәжәғәт итәйек. Йәй буйына һауа шарттары малсылыҡ өсөн ифрат ауыр килгән ошо йылда ла ул һис кенә лә һыр бирмәне, ә тағы ла бер баҫҡысҡа юғарыраҡ күтәрелде: һәр йөҙ баш һарыҡтан 121 бәрәс, һәр һарыҡтан 5 кило ла 220 грамм йөн алды. Ә совхоз буйынса шундай уҡ һәр йөҙ баш һарыҡтан 99 бәрәс, һәр һарыҡтан 4 кило ла 400 грамм йөн, район буйынса 96 бәрәс, 3 кило ла 800 грамм йөн алынған. Коммунистың ышаныслы аҙымдар менән бер туҡтауһыҙ артылыштарға барыуының баҡтырғыс дәлиле был!

Замананың теләгән бер йөк машинаһы елдереп инерлек шаңғырҙауыҡ таҡта ҡапҡалы, өр-яңынан һалынған дәү йорт алдында бороллдоҡ, иркен ихатаға үттек. Ҡасандыр ауыл һыртындағы дала ситенә йәш Райманов ҡорған иҫке нигеҙ, башҡаларҙы алғараҡ, тау үренәрәк үткәреп, үҙе иһә яңы йорттар теҙеменең уртаһында тороп ҡалған, таштарына ҡартлыҡ мүге ҡундырған. Кеше ғүмере лә тап ошоноң кеүек: бөгөн алда маяҡ булып тауға күтәрелеп барған һарыҡсылыҡ оҫтаһы Райманов та үҙенән һуңғы башҡаларҙың алғараҡ китеше хаҡына текә үргә ҡарай юл яра...

— Бына ошо инде минең баяғы түрәләр әйткән, туйлауҙы көткән нигеҙ. — Иҫке өйҙө йәнәшәһендә ергә сүктертеп ҡалдырған яңы бураһына төртөп күрһәтә.

Метр бейеклек таш ҡаҙнаға шәмдәй таҙа ҡарағай бүрәнәләрҙән буралған, түбәһе ҡалын ҡалай менән ябылған, яңылыҡтан шыңғырҙап торған өй эсенә инәбеҙ. Буйы ун бер, арҡырыһы ун метр, йәмғеһе йөҙ ҙә ун квадрат. Былдай йорт, тим, әләкһә, чабандың ғына түгел, башҡаларҙың да һис эсен тишмәҫ ине!..

— Бына бында зал, бында кухня, бында балалар өсөн айырым бүлмә, ә быныһы йоҡо төйәге... — тип, иҫе китмәй генә аңлатып бара өйҙөң хужаһы.

— Ә айына күпме эш хаҡы алаһығыҙ? — тим мин, һаман үҙ уйымда булып.

— Уртаса 160 — 170 һум.

— Премиялар ҙа тейәме?

— Йылды уңышлы тамамлаһаҡ, ике мең һум тирәһе "ун өсөнсө эш хаҡы" эләгә, йәнә өҫтәлмә түләүгә бригадаға 20 — 25 баш бәрән һарыҡ.

Юҡ, һис тә ҡыҫанҡы түгел ауыл тормошо!..

Минең төпкөл уйҙарымды бүлгәндәй, Миңлеғәли ағай ҡырт киҫеп ҡуйҙы:

— Кеҫә ҡалынайтыу яғына киткәндә, баҙар ҡоҙғоно булып та байый бәндә. Ләкин мәсьәлә эштең ауырын еңеләйтеп күтәреүҙә, шуға ҡыуанып йәшәүҙә. Тормошҡа минең төп ҡараш шундай, ҡусты. Еңел эҙләп елпенеүселәрҙе үҙ итмәй Баймаҡ ере.

Ата-баба йолаһы буйынса тышта уҡ ҡулдарҙы сайып, бағана сатаһына элеп ҡуйылған оҙон һөлгөгә һөртөп, сираҡ бүрәнәнән бурап эшләнгән, башы аҡ шифер менән ябылған аласыҡҡа инәбеҙ. Аласыҡ тигәнебеҙ — башҡорттоң ғүмер-баҡый ҡулланған йәйге усаҡ-кухняһы инде һәм ҡышҡы быҙау, бәрәс өшәләге. Ғәҙәттә ул өй алдына һалына һәм шунлыҡтан "ал усаҡ" (аласыҡ) тип йөрөтөлә, урыҫтың "лачуг" һүҙе лә шунан килә. Игелекле ошо ҡоролма, берҙән, төп нигеҙҙе ут-күҙҙән ҡурсалаһа, икенсенән, ниндәйҙер бәлә-ҡаза менән башҡорт кешеһе үҙенең йортонан яҙған, йәки бура яңырткан саҡтарҙа уның ғаиләһен йылы ҡуйынына ала, яҡшы көндәргәсә уның торлағына әйләнә.

Аласыҡ эсе, әлбиттә, квадраттар һәм кубатуралар йәһәтенән ҡыҫынҡы, әммә үҙенең эскерһеҙ ябайлығы, йылылығы, киң күңеллелеге менән иркен ине йөрәккә. Алсаҡ йөҙлө хужабикәнең өлтөрәп йөрөп

иҙәнгә табын әҙерләүе, бәләкәс кенә дүрткел урындыҡтағы “Әлифба” ҡосаҡлап ултырған төпсөк ҡыҙҙары Гөлнараның әсәһенекенә оҡшаш сөмҡара күҙҙәренең ниндәйҙербайрамса ҡыуаныслы ялтырауы, ә хужаның олатайҙарса һәлмәк хәрәкәтләнеп табын түренә таянсыҡ мендәр ташлауы, тәҙрә ҡашағаһы янында келтелдәгән кәкүкле сәғәт — былар барыһы миңә баҫалҡы шатлыҡ, тәрән туғанлыҡ йылыһын һирпеп бөркөлдө. Йөрәктәрҙә тулышып торған ошо изге тойғоно ҡеүәтләп ебәргәндәй, бәләкәс Гөлнараның сәскә бәбәгеләй ирендәре ҡыймылданы, “Әлифба”ның хәрефтәрен терелтеп, һәммәбеҙгә ишеттереп көйләне: “Беҙ — ирекле кешеләр! Ирекле кешеләр беҙ!”

Алтынсыла уҡып йөрөгән Диләрә, унынсыны тамамлаусы Хәлиҙәләре был сәғәттә өйҙә юҡ ине, йомош менән ҡайҙалыр йөрөйҙәр, буғай, әммә миңә бүрәнә үтә лә уларҙың да йылы нур бөркөүсе ҡараҡай күҙҙәре күренеп ҡалғандай булды, ғаиләнең дөйөм йылылығында уларҙың да ҡайнар өлөшө бар ине. Эйе, Миңлеғәли ағай хаҡлы: әгәр ҙә күңелең киң булһа, тар өйгә лә ил һыя, тип белмәй әйтмәгән халыҡ. Ҡалын башҡорт балаҫына табын тирәләй уратылып ултырышҡанда ҡала кешеһенә ҡарата әйтелә торған ғәҙәти шуҡ һүҙҙәр ҙә булып алды:

— Беҙҙең ни... аласыҡта оло өҫтәл ҡуйыр әмәл булмағас, боронғоса ултырырға тура килде. Аяҡтарығыҙ ауыртмаһа ярар ине. — Хужабикә әйтте быны.

— Мендәргә арҡа терәгеҙ ҙә тәртәләрегеҙҙе бына был яҡҡараҡ — далаға һуҙып ебәрегеҙ! — Хужа ихлас йылмайҙы.

— Зыян юҡ, мин ауылда санаға баш ҡарама бөгөп, тәртә шаҡарып үҫкән! — тинем, тубыҡтарҙы бала саҡтан күнегелгән ҡәҙимге рәүешкә килтереп. Ошо хәтәр мәлдә, әлбиттә, ҡала салбарының балағы үҙ хоҡуғын белдереп шытырҙаны, уның ҡарауы аяҡтарым хайран уңай урынлашып, көллө тәнем ерҙең яҡынлығын тойоп кинәнде, әйтерһең, ҡабат үҙ хәлемә ҡайтып, ер менән туғанлашып, донъяның тәбиғи өлөшөнә әйләндем. Мине аҫтыртын ғына күҙәткән хужаларҙың да йөҙөндә ҡәнәғәтлек нуры уйнаны.

— Их! — тинем, үҙебеҙҙең алыҫ-алыҫта гүзәл Һаҡмар-һыу буйындағы оҙон буй урындыҡлы дүрткел өйҙә, табынды әйләндереп аяҡ бөкләп ултырып, Совет хакимиәтен нисек яулап алыуҙары тураһында хикәйәт һөйләгән ҡыҙыл партизан олатайҙарымды хәтерләнем. — Шулай ҙа ҡанға һеңешкән икән ата-бабалар ғәҙәте! — тигән булдым.

Һуңғараҡ килмәнегеҙ бит, үҙегеҙҙе яңы өйҙә, буй өҫтәлдең түрендә ултыртып һыйлар инек, — тине хужабикә.

Миңлеғәли ағай башын аҫка эйеп бер аҙ уйланып алды:

— Күҙ алдымдан әл дә китмәй һуғыштың ғәрәсәте... Ҡыш, ҡытлыҡ, ашарға ла, өҫкә кейергә лә юҡ. Ыжғыр буранда мөрйәбеҙгә ут ҡабып, янып китте өйөбөҙ. Бер ҡат кейем менән генә көрт өҫтөндә ултырып ҡалдыҡ... Шул саҡ ауыл Советы рәйесе, гүр тупрағы еңел булғыры, көрт араһынан беҙҙе үҙе килеп алды, йылы өйөндә йылы аш менән һыйланы. “Ҡайғырмағыҙ, Совет власы үҙебеҙҙеке, бер хәстәрлеген күрербеҙ!” — тине. Ысынлап та, күп тә үтмәне, һуғыш алдынан ғына һалына башлаған мәктәп бинаһының бер буш бүлмәһен йылыта һалып бирҙеләр, кәрәк-

яраҡ менән тәьмин иттеләр. Яҙға сыҡҡас бөтә ауыл йыйылды, атай нигеҙен торомбаштарҙан таҙартып, өмә менән беҙгә йорт һалып бирҙеләр. Ә был хәл, беләһегеҙме, ҡасан булды? Бөтә донъя ут эсендә дөрләгән, ил яҙмышы ҡыл осонда торған, Сталинградта йәшәү менән үлем алышҡан мәл ине...

Дөрөҫ әйтә ағайыбыҙ: халыҡ үҙе яулап алған һәм төҙөгән Сове хакимиәте барыбыҙҙы ла ут эсенән, көрт өҫтөнән күтәреп алды!..

— Ә был яңы йортоғоҙҙоң бураһын ҡайһылай күтәрҙегеҙ?

— Баяғыса инде, өмә менән. Әлбиттә, совхоз ссуда ла бирҙе, үҙемдең дә йыйып-яҫҡынған арыу уҡ мал бар ине. Тик барыбер, үҙең беләһең, ҡустым, бындай бураны яңғыҙ елкәгә һалып күтәреү ауыр. Эйе, ата-бабалар ғәҙәтенсә, бүрәнәләрҙе, хаҡын түләтмәй, халыҡ ҡулы күтәреп өйҙө — изге өмә йолабыҙ ярҙамға килде.

— Беҙҙә борон-борондан шулай, — тине Хәбирә еңгә, тышта мөһәбәт ҡалҡынған яңы өйгә тәҙрә үтә тиҙ генә һирпелеп ҡарап, — ауылдағы һәр өйҙө өмә өйә. Башҡорт ғүмергә өмә менән ил ҡороп йәшәп килә.

— Өмә... Дөрөҫ әйтәһең, еңгәй. — Уйсанланып, үҙ алдыма һөйләндем. — Өмә... Ғәжәйеп тә тере һүҙ, серле һүҙ.

— Өмә, тигәндән, бына шул ғәрәсәт йылда ҡоролған өйҙөң имән ниргәләрен һалғандан һуң, бура эсендә ултырып, әсәйем килтергән нигеҙ бутҡаһын ашарға етешкәс, аҡ һаҡаллы олатайым өмәнең нимә икәнлеген, ул һүҙҙең ҡайҙан килгәнлеген беҙгә иренмәй тирҙе — йәш быуынға һеңдерҙе. Олатайҙың алтын һүҙе ерҙә ятып ҡалмаһын өсөн, мин дә уны һеҙҙәргә тиреп бирәйем әле, ҡустым... "Өмә" тигән һүҙебеҙҙең әсәһе — Уба, — тине ул. — "Уба" һүҙенең "б" өнө "м»-ға әйләнеп, тәүҙә "ума", ә унан "өмә" хасил булған. Шул уҡ "Уба"нан өүә — өйә — өй килеп сыҡҡан... Ата-бабаларҙың ошо сал далалағы изге уба-ҡорғандарын күҙ алдына килтерегеҙ: ниндәй бейек һәм мөһәбәт улар! — тип өҫтәне. — Бына шуларға тупраҡты алыҫтан тимер кәпәс менән ташып өйөү өсөн бөтә ғәскәр, ил йыйыла торған булған. "Ил төкөрһә — күл булыр, кәпәс һалһа — тау булыр", тигәндәй, һәр кем һалған бер кәпәс тупраҡтан түбәһе күккә тейерҙәй уба-тау өйөлгән. Илдең халыҡ иҫәбе, көс-ҡеүәте шундай убалар дәүмәлендә самалап билдәләнгән, шуны күреп дошмандарҙың ҡото осҡан, теҙ-быуындары дер-ҡалтыраған, дуҫтарҙың иҫе киткән, ә уба ултырған ер халыҡтың бәхәслекһеҙ Ватаны, изге ата-баба төйәге һаналған... Ошолайыраҡ аңлатҡайны олатайым.

— Ә бит был ысынлап та шулай! — тинем мин, телсе-филолог икәнлегемде белдереп.

— Һәр нәмәнең төбөнә, төпсөнөп, туҙ ҡуя торған ҡыҙыҡ кеше ине минең олатай! Беҙ шап та шоп һоғаланып нигеҙ бутҡаһы һоғонғанда, үҙе белгән ғилем һабағын яйлап ҡына һеңдерҙе баштарыбыҙға. "Оҙон һүҙҙең ҡыҫҡаһы шул, — тип йомғаҡланы ул телмәрен, — мин һеҙгә, йәш быуындарға, "өмә" тигән ябай һүҙҙең мәғәнәһен еткерҙем, ә һеҙ шуны үҙегеҙҙең уландарға, ейәндәргә түкмәй-сәсмәй илтегеҙ". Бына шулай тине лә олатайым, ҡамсыға ос таҡҡандай, алтын һүҙҙең аҙағын гәүһәр

ҡобайырлап осланы, ул минең йәш күңелемдә мәңге һүрелмәҫлек утлы ҡуҙҙай баҙырлап ҡалды:

Ишет быны ҡартыңдан,
Һүҙ булмаһын артымдан;
Белгәнемде әйтмәһәм,
Йортҡа әшкәр итмәһәм,
Илдең күңеле ҡалыр, тим,
Илдең хәтере ҡалыр, тим.

Әйт, тиһәгеҙ, әйтәйем,
Әйт, тиһәгеҙ, әйтәйем,
Тыңлағыҙ һеҙ, йәмәғәт,
Боронғоларҙан аманат;
Уға итһәгеҙ хыянат,
Һеҙгә булыр яманат.

— Бөгөнгөнөң майһыҙ тары бутҡаһын һоғонаһығыҙмы, йә иһә иртәгәнең майлы манный бутҡаһын тәмләп кинәнәһегеҙме, бер нәмәне иҫегеҙҙә тотоғоҙ: өйҙөң күккә ашҡан иң юғары өҫкө ҡаты ла нигеҙҙә — аҫҡы ниргәлә ултыра. Юғарыраҡ менгән һайын, түбәнгә, артығыҙға әйләнеп ҡараяҫаҡһығыҙ, таяныс аласаҡһығыҙ, — тип осланы алтын һүҙҙәрҙән ҡоролған бураһын аҡ һаҡаллы олатайым.

— Афарин! Бөйөк сәсән булған икән ул ҡартлас! — Хистәремдең еште ярып тышҡа сыҡҡанын үҙем дә һиҙмәй ҡалдым.

— Беҙгә лә шулай булырға яҙһын Хоҙай!

Бөтәбеҙҙең күҙҙәр тәҙрәгә төбәлде: киске шәфәҡ-алһыулыҡтың төнгә болғанып-ҡушылыуынан болйорап торған күктә, быяланы телгән яҡты алмас киҫәгеләй ағарып, беҙ белмәгән ниндәйҙер сәйер йондоҙ һыҙылып бара.

— Бәй, әллә Сулпан да ҡалҡҡан инде!.. — Тәҙрәне асып ебәреп, күҙен күктән алмай һөйләнде Хәбирә еңгә. Тышта тәҙрә төбөндә бәләкәс Гөлнараның шат ауазы яңғыраны:

— Гагарин осоп килә, Гагарин! Ерҙең яһалма юлдашы!

— Эй балаҡайым, килде ниндәй замана! Йондоҙҙарын да, айҙарын да әҙәм балаһы үҙе яһап осора...

Келт-келт итеп стенала кәкүкле сәғәт тулай, сихри маятник ҡалағы, әйтерһең, был ерҙәге ошондай серле убалар, ябай аласыҡтар аша туҡтауһыҙ ағылып-тулап үткән сал быуаттарҙы һанай. Секунд һайын — бер быуат, тимер кәкүк күкрәгенә тизып тултырылған дәүер-дәүер быуаттар... Буяулы тимер ишеге асылып китер ҙә тимер кәкүк килеп сығыр, быуаттарҙың үртле теле менән саҡырыр. Тарих төбөндә үрт-ялҡында көл булған изге убаларҙың да, өй һәм аласыҡтарҙың да әсе һөрөмдәре күҙгә ҡаҙалыр...

Аласыҡта "Ильич лампаһы" — электр балҡып яна, эмалләнеп йылтыраған аҡ плитәлә зәңгәрләнеп газ яна, аш артынан һемерергә

Һиндостан сәйе бешерелә. Ихатала, электр нурында ҡойоноп, Октябрь байрамын ырыҫлаясаҡ ҡотло өй — яңы замандың йорто балҡып ултыра, унда балта оҫтаһының һуңғы таҡталарҙы ҡағып туҡылдауы ишетелә. Шул баҫалҡы туҡылдау — илдең гигант төҙөлөштәренең дөйөм йөрәк ҡағышына, айырым нигеҙҙәрҙең тарихы — дөйөм Ватан тарихына ялғана, шунан дөйөм бәрәкәт, илдең ҡеүәте арта. Тынмай туҡылда, оҫта, ата-баба нигеҙенә ҡот өҫтә!

Аш һеңдереп һауа һуларға сихри төнгә сыҡҡаныбыҙҙа ваҡыт таңға ауышҡан — донъя йөҙө күҙ ҡамаштырырлыҡ ҡуйы аҡ нур менән лыс-мансылғайны. Түләш башынан күккә тәгәрләп менеп килгән тәгәрмәс дәүмәлле йоморо Ай әсәйемдең яңы яҙып таныҫҡалаған ҙур йомарлаҡ майы һымаҡ тулыш-яғымлы күренде, ул, әйтерһең, көллө йыһанға майлы көлөп, көбөләге ап-аҡ айран эсендә күлкеп йөҙә ине.

— Һәүкәшкәйҙең өйө лә Насар булмаясаҡ! — тинем, кәртә артындараҡ төҙөлгән аҙбарҙың шыңғырҙап торған бүрәнәләрен сирткеләп.

Миңлеғәли ағай көлдө:

— Заман талабы, ҡустым. Малдарҙың ишәйеүе, көтөүлектәрҙең тарайыуы һәр урында ла мөмкинлектәрҙе бәрәкәтле тотонорға бойора. Йылы аҙбарҙа һыйырға бесән дә аҙ китә, һөтө лә ҡуйы була. Шулай, ҡустым.

Миңлеғәли ағай был һүҙҙәрҙе һәр кемгә лә билдәле булған хаҡиҡәт, аксиома һымағыраҡ ыҫҡындырҙы, әммә шуның менән бөгөнгө ауыл, ерекмән холҡоноң ҡайһындай юғары кимәлгәсә үҫеш кисергәнен ярҙы ла һалды. Был кимәлдәге ерекмән инде әүәлгеләй орҙоло-бәрҙеле хужалыҡ итә алмай, үҙ эшенә ғилми ҡараш уның ҡанына һеңгән, көндәлек ихтыяжға әүерелгән. Йортондағы үҙ һыйырын, үҙ түтәлен ғилми нигеҙҙә баҡмайынса булдыра алмаған әҙәм инде совхоз фермаһында ла, совхоз баҫыуында ла башҡаса эшләй алмай. Етмәһә, йортондағы шул кескәй хужалыҡта шул үҙенең өлгөһөндә балаларын да тәпәй баҫҡандан уҡ тәрбиәләй, ерекмәнлектең бәрәкәтле сифаттары сабыйҙарға ата ҡанынан, әсә һөтөнән үк инә. Ә был иһә, шикләнмәй әйтергә мөмкин, беҙҙең килер быуындарға мая итеп ҡалдырасаҡ иң оло табыштарыбыҙҙың береһе.

Ошо хаҡта уйлай-уйлай ауыл осона сығып, дала буйлап китеп барыуыбыҙҙы абайламай ҙа ҡалдым. Баҫыу ситенән тау итәгенә мәскәүләнеп һуҙылған һуҡмаҡ ҡапыл уңға ҡайырылды ла түбәнгә тәгәрләне. Унда, суҡ тәлгәштәр аҫтында, киртләс ярға ялын ҡағып һылыу йылға шалтырай.

— Һаҡмар-һыу! Үҙебеҙҙең әсәкәй, Һаҡмарҡай була был, ҡустым. — Миңлеғәли ағай терегөмөштәй тәгәрләгән һыу ситенә сүкәйеп ултырып һөйләнде. — Их, үтә лә һуң ғүмерҙәр! Ҡасан ғына яҙғы ташҡындарҙа ошо йылғабыҙға бата-сума күрше ауылға мәктәпкә йүгерә инем. Аслы-туҡлы, алты саҡрымды йәйәүләп йөрөп уҡыныҡ, зарланманыҡ. Ә хәҙерге ҡайбер йәштәр, хан һыйында йәшәп тә, илке-һалҡы белем ала, уҡыуҙың ҡәҙерен белмәйҙәр...

— Заманалар башҡа шул... — тинем, ошо үҙемдең дә туған йылғам шалтырауынан моңайып-сихырланып, һыуҙың йүгерек-уйсан йөҙөнә

текләгән килеш, ағай янына тубыҡланып ултырып. Һаҡмар-һыуҙың Оло Эйекте үҙенә алыр алдындағы киртләс ярына аҫылташтай береккән ауылымды, байрамдарҙа суҡайына урақ-сүкешле ҡыҙыл флаг эленгән аҡ көмөш айлы мәсет манараһын, яланаяҡ йүгерә-йүгерә күрше ауылға йөрөп уҡыу йылдарын берәм-берәм күҙ алдымдан кисерҙем.

— Дөрөҫ, заманалар үҙгәрҙе... — тип килеште серҙәшем. — Бер саҡ шулай, баш балам беренсе синыфҡа барғанда, үҙебеҙҙең яңы ғына һалынған урта мәктәпкә тәү аяҡ баҫтым. Аҡ кирбестән буралған, ҡатлы-ҡатлы — тыштан ҡарағанда Әбей батшаның Петербурҙағы зиннәтле һарайы, тиреһең. Ә эсенә ингәс, ундағы сафлыҡ, аҡлыҡ, матурлыҡ күҙҙәрҙең яуын алды — әкиәт илеме ни! Баламдың сынаяҡ кеүек ялтыр буяулы партаға ултырыуын күрҙем дә шул оло ҡыуаныстан, үҙемдең билғауыр бала сағым өсөн үкенестән болоҡһоп илап ебәрҙем — шатлыҡ йәше көрмәне күҙҙәремде...

Аңғартмаҫтан алыҫтан, баш осонан, тымыҡ күкте тирбәлдергән көмөш борғо иңрәүе һыҙылып китте, сихри күк көбө ергә тоташҡан тәңгәлдәрәк кисә көндөҙ мин күргән, ер ҡыртышында оҙон ҡара тояҡтарын ҡайсылатҡан иҫәпһеҙ күп йоморо-тере “болот”тар күҙгә салынғандай булды, бала саҡтың ниндәйҙер сағыу иҫтәлеген күңелдә йәнләндерҙе.

— Ниндәй борғо тауышы был?

Миңлеғәли ағай ҡыҫҡырып көлдө:

— Шуны ла белмәйһеңме? Һәй башҡорт балаһы!.. Былайғас, юрый әйтмәйем, шул борғоно иртәгә үҙең күреп танығанса, йомаҡ итеп һаҡлайым.

— Нимәлер иҫкә төшә...

— Их ҡустым, Һаҡмарыңды онотҡанһың икән шул! — Ул, эйелеп, битен ебәк һыуға йыуып алды ла, ҡапыл етдиләнеп, уйсанланып, шалтырап аҡҡан һыу моңон бүлдертмәй генә, йөрәк төпкөлөнән иңрәп һыҙылдырҙы:

Иртәнсәккәй тороп битем йыуҙым
Шалтырап та аҡҡан шишмәгә.
Йәш ғүмерҙең уҙып барыуҙарын
Тотоп ҡалыу өсөн нишләргә?..

Беҙ әйләнеп ҡайтыуға Хәбирә еңгәйҙең самауыры борҡоп ҡайнаған, балта оҫтаһы яңы өйҙөң таңын ҡотлап туҡылдарға керешкән, ә ишек алдында, әрһеҙ көтөүсе арбаһы эргәһендә, беҙҙе көтөп, тулышып бешкән сейә емеше төҫлө “Жигули” машинаһы тора ине. Миңлеғәли ағай, күрәһең, бөгөн эшкә ҡорос атында юлланырға ниәтләнгән. Йомшаҡ креслола тирбәлә-тирбәлә ауылдан ярайһы ғына артылғас, ҡорос аттың башын тотоусы юлдашым уйҙарымдың теҙген осон һәрмәне:

— Һарыҡсылыҡ эше тынғыһыҙ — өлкән көтөүсегә тәүлек әйләнәһенә киҙеүләргә тура килә. Бер-бер артлы ашығыс йомоштар моронлап ҡына тора. Тиҙ генә үҙең “тиҙ ярҙам»ға әүерелеп, сирле

һарыҡты ветдауаханаға елдерәһең, ваҡытты отоу арҡаһында ҡотҡараһың мал ғүмерен. Унан килеп, төрлө йәмәғәт эштәре, райком пленумдары ла бюролары, сессиялар... Ни тиһәң дә, хәҙерге заманда өлкән көтөүсегә үҙенең еңел машинаһы булыу ифрат ҡулайлы. Бөтәһенә ат-арба менән генә етешеп булмай хәҙер...

Ә мин, “Жигули” тәҙрәһенән ирәүән ҡарап ҡына, ошо сал ер, уны үҙгәрткән һәм үҙе лә танымаҫлыҡ булып үҙгәргән башҡорт ерекмәне тураһында уйланам. Эш ул ауыҙлыҡлап алған “ҡорос ат”та ғына ла түгел, ә заманды ауыҙлыҡлап алыуында. Планетаға ҡот бирәсәк бер нәмә лә бөгөн уның аҡылын һәм йөрәген ситләтеп үтә алмай, уның егәрле ҡулдарынан киләсәктең муллыҡ йылғаһы ағыла. Тыуған ерҙең яҙмышы ла уның йөрәге һәм аҡылы, ҡулдары аша урғылып сығып яңыра. Йәш быуынға ҡорос айғырҙың ҡырыҫ теҙгенен тапшырғанда ниндәй үҙгәреш көтәлер был сал ерҙе һәм салланасаҡ кешеләрҙе? Барыһы ла үҙебеҙҙән, бөтәһе лә кешенең үҙ ҡулында.

“Жигули” ҡапыл тау һыртына ҡалҡына ла көйәҫле ел һымаҡ шым ғына туҡтала, ишектәр һаҡ ҡына асыла. Таң еле йыуған ер ҡыртышына баҫабыҙ ипләп кенә. Алдыбыҙҙа офоҡҡаса йәйрәп ятҡан тырпай ҡамыллы баҫыу һыртына юлдашым үҙенең һарыҡ сайыры һәм машина майы һеңгән йыуантыҡ бармағын төртөп күрһәтә. Семерҙәп китә тәнем: йә Хоҙай, йөрәк елкеткес ниндәй тылсымлы күренеш был! Бала саҡтың һағынысл хәтирәләре терелеп баҫа алдыма: ҡамыллыҡта йөҙәрләгән ҡара нөктәләр ҡайсылата оҙон сираҡ-тояҡтарын! Талдай һуйҙан тояҡтар, ғорур кирелгән түштәр, ҡара суҡышлы баш ослаған һомғол-оҙон муйындар!

— Үҙеңде иҫәңгерәткән көмөш борғо тауышы ошонан килә,ҡустым.

“Жигули”гә кире кереп, торналарҙың төбәгенә яй ғына яҡынлайбыҙ, күҙәтеп кенә уҙабыҙ. Машинаға ҡоштарҙың иҫе китмәй, һаҡҡа баҫҡан ғорур ҡор башы ғына, оҙон муйынын ҡор өҫтөндә ҡайҡаңдатып, ҡарауыллап оҙата. Борғоларҙың эйәләре, донъя яратылғандан килгән серле йола буйынса, ошо тыуған һәм үҫкән, бала сығарған төйәгенән — яҡындағы Ағиҙел баш һәм Яйыҡ баш һаҙлығынан — алыҫ көньяҡтарға ҡарай ваҡытлыса ҡышлауға осор алдынан ошо ерҙә — ҡанат нығытыу, ҡорға тупланыу төбәгендә — йыйнаулашып хәл ала. Һүҙе лә ниндәй әле! Төбәк, түбә — әнә шул “туб, тубаланыу” йәғни тупланыу урыны тигәндән килә икән. Борон торналар, моғайын, бындай ҡамылда түгел, ә аҡ ҡылған араһында тупланған, шунда үҫкән үләндәрҙең орлоғонан һәм ек һайын урғылып ятҡан шишмәләрҙең, йылғаларҙың ниғмәтенән туҡланған. Заманалар үҙгәргән, сал сирәмдәр һөрөлгән, байтаҡ шишмә һәм инештәр ер аҫтына кире ҡаскан, әммә торналар һаман да бирешкеһеҙ, һаман да шул үҙҙәренең изге төбәктәрендә тупланыуҙа. Емен комбайн урып алған тырпай ҡамыл араһынан оҙон муйындарын һуҙып, әйтерһең, боронғо башҡорт хоҙайы торналар тураһында яҙып ҡалдырған Көнсығыштың сал-боронғо тарихсыһы Сыма Цяндың, ғәрәп илсеһе Ибн-Фаҙландың саңлы фолианттары үтә быуаттар төбөнән тишеп баҡҡан был торналар, офоҡ ситендә муйындарын һорау билдәләрелəй һыҙатландыртып, яңы заман

кешеһенең кешелеклелегенә һуңғы һорау менән ҡарайҙар төҫлө. Эйе, һуңғы һорау һәм һынау: машиналар йырғыслаған, мал тояҡтары төйгөсләгән, браконьерҙарҙың һөрөмлө мылтыҡ көбәктәре ыҫмаҡлаған был ҡарт ерҙең — Планетаның — тупрағында мөғжизәле йәнле утрау булып һаман һаҡланып ҡалған, һаман һаҡланырға тырышҡан ошо изге төбәкте һәм төйәкте, торналар сәңгелдәгән, кешемен тигән кеше үҙенең ыҫпай "Жигули" шиндары, ҡалын табанлы ботинкалары менән иҙә тапап уҙмаҫмы?..

— Ә был иген баҫыуҙары, урылмаҫ элек үк торналар төшһә, ни эшләр ине икән? — тимен, бошоноп.

— Ундай йылдар ҙа булғылай. Ләкин, ғәҙәттә, торналарҙың тупланыу осоро иген урылып бөтөүгә — сентябрь аҙаҡтарына тура килә, әрпеш хужалар ғына шуғаса итәк-еңен йыймай ҡала.

— Ә ундайҙар рәнйетмәйҙәрме һуң торналарҙы?

— Юҡ, бер кем дә теймәй уларға, ата-бабанан килгән йола буйынса, изге ҡош һанай. Ҡайбер етәкселәр, әлбиттә, иген баҫыуына төшкән ҡазаны процентлап һанап, теш ҡайрап ҡуя-ҡуйыуын...

Бына ошо ла инде мине иң нығ борсоуға һалғаны! Һәр хужалыҡтың йыллыҡ уңышы тонналар һәм проценттар менән иҫәпләнгән осорҙа ла торналарҙың был бизмәнгә һыймағанлығын нисек итеп аңлатырға?.. Көн килер, тип үҙемде йыуатамын, баҫыу итеп һөрөлгән был торналар төбәге совхоздың йыллыҡ балансына иген баҫыуы булып түгел, ә торналар төбәге итеп теркәлер. Көн килер, оло муллыҡҡа һәм культураға тейенгән ҙур хәрефле Кеше унда, махсус рәүештә, торналарға кәрәкле булған аҙыҡтарҙы үҙе сәсеп үҫтерер. Ә, бәлки, ундай көн килгәндер ҙә, кем белә?!.

Миңлеғәли ағай мине һәүетемсә елдертеп, бауыр аҫтымдан ел үткәртеп алырға итте, буғай — машина ҡырсын юлға сыҡты ла унарлаған саҡрымдарҙы ураны тәгәрмәсенә. Кисә генә Баймаҡтан килгәндә уң яғымда һүрәтләнгән ҡотһоҙ тауҙарҙы таныным. Машинаны туҡтатып, түтә юлдан ситкә — далаға йәйәүләнек. Дала тигәнең, һарыҡ тояҡтарынан йәнселеп, һәр үләндең төбө һарыҡ ауыҙынан ере менән ҡуша кимерелеп, таҡыр ырҙын табағына әйләнеүгә ыңғайлағайны. Унда-һанда ергә батҡан ат ялдарылай елгә ялбырлаған ҡаты дала үләнен услап алып, Миңлеғәли ағай миңә еҫкәтте:

— Йә, Һаҡмар буйы егете, таныйһыңмы быныһын?

— Бүтәгә.

— Дөрөҫ, ҡустым, бүтәгә. Бүтәгәнең осондағы яҙғы көмөш сәскәһе — шул ҡылған була инде. Был ерҙең ҡара тупрағын елдән осортмай бүтәгә тотоп тора, бүтәгә бөткән ерҙе тәүҙә сибек күк үлән баҫа, шунан һуң дала үлә. Донъялағы бер үлән дә даланың тере тиреһен — бүтәгәне алмаштыра алмай, ә тиреһенән яҙған ер елгә оса. — Данлыҡлы көтөүсе, ҡулын ҡаш өҫтөнә ҡуйып, ялан иңенә төбәлеп-төбәлеп ҡараны, буй-буй һыҙатланып ятҡан, тимгел-тимгел күк үлән баҫҡан тәңгәлдәрҙе күрһәтте. — Бүтәгәһе бөткән тәнен дала ошолай ҡапларға тырышып ҡырҡыша, ләкин ул сей яраға ҡағыҙ йәбештереп ҡотолоу кеүек кенә... Күк үлән оҙаҡ йәшәй алмай,

яра ҡабат асыла. Даланы күк үлән баҫа башлауы — ерҙең йән әсеһе менән ҡысҡырыуы икәнен белеп тор, ҡустым.

— Ҡотолоу юлы ҡайҙа?

— Аҡыл менән хужалыҡ итеүҙә, ҡустым. Юғиһә, бөгөн беҙҙә нисек: көтөүлектәр майҙанын һуңғы сиккәсә еткереп тарайттыҡ, ә малдар һанын туҡтауһыҙ ыратабыҙ. Далала бүтәгә бөткәс, көтөүҙәрҙе урмандарға ҡыуабыҙ, ағас араларын шәрәләндерәбеҙ. Ер-һыу шуны күтәрә алмай илай, һөрән һала... Дөрөҫ, беҙгә тағы ла күберәк ит, һөт, йөн кәрәк, тимәк, мал һанын арттырыу кәрәк. Ләкин иҫке юл менән түгел, минеңсә. Быға ның өсөн кисекмәҫтән мал бағыу ысулын үҙгәртеү, яңыртыу талап ителә.

— Ни рәүешле?

— Фән ҡушканса, партиябыҙ күрһәткәнсә. Промышленность нигеҙендәге һарыҡсылыҡ комплекстары төҙөүҙе тиҙләтеү, һөҙөмтәлә малдарҙы күберәген ҡурала тотоп, аҙырағын ҡырҙа йөрөтөп аҫырау ғына бөгөнгө шарттарҙа Баймаҡ далаһын сүлгә әйләндереүҙән аралаясағына мин үҙемдең эш тәжрибәмдә төшөндөм.

Ҡырсын түтәне ҡалдырып, берләм юлдан йүгертә-елдертә Раймановтар көтөүлегенә еткәндә, Ҡояш тышау буйы күтәрелгәйне. Был юлдан да тайпылып, тирә-яғы баҫыуҙар менән кәртәләнгән һыулы үҙән буйлап бара башланыҡ. Һарыҡ көтөүе тарафынан үләндең ныҡ тапалып, шымарыуын күрһәтеүсе билдәләр ярылып ятһа ла, — ғәжәп! — бында сирәм үҙенең ысын сирәм ныҡлығын һаҡлаған, тубыҡҡа еткелек көр бүтәгә ултыра ине ялпылдап. Тоҡом тәкәләре торған әүеҫлекле ялан кәртә һәм таҡта будканан ғибәрәт һарыҡ ҡасырыу өшәләгенең тирә-яғында ла шул уҡ хәл. Һарыҡ тояғы был төбәкте йыш тапарға тейешле булһа ла, сал бүтәгә, нисектер, үҙенең баһадирлығын бирмәгән, күк үлән үҫтертмәгән. Күңелгә яғымлы булған ошо рәхимлелектең сәбәбен һорамай түҙмәнем.

— Эш шунда, — тине көтөү оҫтаһы, — һарыҡтарҙы көн дә бер ерҙә көтмәйбеҙ, шулай уҡ бер үк урындаятҡырмайбыҙ. Көтөү һәр саҡ яңы тибендән уҙа ла барып еткән ерендә, яланда ҡунып ҡала. Кәртәһеҙ тотоу, тип атала был. Баймаҡтан килгәндә тау биттәренең ут көйҙөргәндәй шаҡмаҡ-шаҡмаҡ ҡарайып, саңы борҡоп ятҡан үле тупраҡтарын күргәнһең — һарыҡтарҙы кәртәлә тотҡан урындар улар. Һарыҡ һыҡраһы еребеҙҙе кислоталай көйҙөрә, ун йыл үлән үҫмәй унда... Беҙҙең бөтә көтөү режимы ана шундай һәләкәттәрҙе булдырмауға, һис юғында йомшартыуға йүнәлдерелгән. Ошолар арҡаһында еребеҙ миҙгел-миҙгел ял итә, көтөү ҡасанмы кире әйләнеп килгәнсе, яраларын төҙәлтә. Хәҙерге шарттарҙа был ифрат эффектлы. Унан килеп, игендәрҙең урып-йыйылыуын да беҙ дүрт күҙ менән көтөп алабыҙ, ҡасанмы баҫыу һөрөлгәнсе көтөүҙе ҡамылда йөрөтәбеҙ. Көҙгө ҡара ямғырҙарҙа — үлән тамыры миктәгәндә — сирәмгә мал төшөрмәҫкә тырышабыҙ. Ә ер туңып, бүтәгә төбөн ҡар күмгәс, нығынғас, ҡыш уртаһынаса тибендә йөрөтәбеҙ. Ер ҙә миктәмәй, һарыҡтар ҙа киңгәмәй. Бына шулар барыһы ла ҡанһырауҙан һаҡлай даланы. — Миңлеғәли ағай машина ишеген ҡумпылдатып япты, сираҡтарға ҡыштырҙап ҡағылған ялбыр бүтәгә араһынан әүеҫлеккә ҡарай миңә юл башлап, хыялланып көрһөндө. — Их

ҡустым, күпме сәйнәһәк тә шул бер балыҡ башы: промышленность нигеҙендәге эре комплекстар кәрәк! Шуны йәһәтләмәһәк, дала менән кеше араһындағы бөйөк Килешеү өҙөләсәк, төҙәтеп була алмаçлыҡ ҡаршылыҡ тыуасаҡ.

Туҡлыҡлы аҙыҡ менән тулы утлыҡсалары эргәһендә философтарса уйсан тынлыҡ һаҡлап торған әзмәүерҙәр — ҡусҡар мөгөҙлө Алтай тоҡом тәкәләрен ғорурлыҡ һәм һөйөү менән күрһәтте. Шулай булмаçлыҡ та түгел шул: малсылыҡтағы уңыштарҙың башы яҡшы тоҡомда. Раймановтың көтөүе, башҡаларҙыҡы һымаҡ уҡ, тулыһынса элитанан ғына тора һәм ул элиталы үрсем өсөн көрәшә, сөнки быйылғы бәрәстәр — киләһе йылдың һарыҡ көтөүҙәре, совхоздың юғары табыш сығанағы бит ул. Элита бәрән һарыҡтарҙан тупланған көтөү тәүге бәрәсләүҙән алып дүрт тапҡыр бәрәсләгәненсә юғары тауарлыҡлы һанала, йәғни йылдан-йыл йөндө лә, бәрәсте лә ыратып бирә. Бишенсе йылда табыштар ҡырҡа кәмей, сөнки инә һарыҡтарҙың ҡартлыҡ осоро башлана. Райманов быға үҙенең эш тәжрибәһендә инанды: 1974 йылда һәр йөҙ һарыҡтан 132 бәрәс алып үҫтергәндән һуң, шул табышлы инә һарыҡтарҙы ит ком бинатына оҙатырға ҡыҙғанып, тағы ла бер йылға ҡалдырғайнылар, 1975 йылда бәрәс алыу ҡапыл кәмене лә ҡуйҙы — рекордлы 132-нән 110-ға тәгәрәне. Ауыҙҙары ҡаты бешеп, көтөү яңыртыуҙың дүрт йыллыҡ циклына күстеләр ныҡлап. Шунан һуң Райманов бригадаһы ҡабул итеп алған яңы йәш көтөү, бригаданың тырыш хеҙмәте арҡаһында, райондағы һарыҡсылыҡтың яңы баҫкысҡа күтәрелеүен иçбатланы: бынан алдағы циклдың тәүге, 1971 йылдағыһы, бәрән һарыҡтар һәр йөҙ баш иҫәбенә 98-ҙе бәрәсләһә һәм һәр береһе 3 кило 630 грамм йөн бирһә, 1977 йылда ошо шундай уҡ бәрәндәрҙән 110 бәрәс һәм 6-шар килограмм юғары сифатлы йөн алынды. Һиҙелерлек ҙур еңеү был, уны яулауҙа Раймановтың бөтәһен бергә кисергән һәм кисерешкән көтөүсе иптәштәре һәм бәрәс ҡараусы Иҫәнова Мәрхиҙә, Сәйетғәфәрова Хәтирә кеүек арымай-талмай йүгереп йөрөп эшләүселәрҙең хеҙмәте ҙур. Дөрөҫөн генә әйткәндә, бөгөнгө көндә был бригада Башҡортостан һарыҡсылығының иртәгәге көнө менән йәшәп ята, был өлкәлә республиканың яулаясаҡ ҡаҙаныштары, ауылдағы ул йәшәгән тау башынан күтәрелгән Ҡояш кеүек, тәүҙә Райманов урамы аша уҙа. Ул хеҙмәттең алдынғы ут һыҙығында башҡаларға юл ярып, “һуғышлы разведка» алып бара, һарыҡсылыҡ фронтындағы яңы көн унан башлана. Раймановтың иҫәпләүе буйынса, циклдың ҡалған өс йылында ла үҫеш шундай юғары баҫкыста тау үренә барасаҡ һәм был, әгәр заман талабынса яҡшы аҙыҡ базаһы, торлаҡ шарттары менән төптән нығытылһа, киләһе циклды тағы ла бер баҫкысҡа юғарыраҡ башлап ебәрергә мөмкинселек бирәсәк. Хәҙер шуның өсөн көрәш һәм тыуасаҡ көтөүҙәрҙең бәрәкәтле орлоғон һалыу — һарыҡтарҙы яһалма ҡасырыу бара. Һарыҡсылыҡ маһиры Миңлеғәли Райманов районда беренсе башлап үҙе тотонған был зарур эшкә лә быйыл мөһим яңылыҡ индереп өлгөргән — үҙе уйлап сығарған яңы конструкциялы станок. Ғәжәп ябай ул: бер нисә ҡаҙыҡҡа бер нисә кәртә бәйләп кенә ҡорола; шул уҡ ваҡытта уңайлы һәм юғары

эффектлы: обоймалағы патрондай, бер юлы биш һарыҡты ҡабул ҡыла. Алдынғы эш тәжрибәһе районға таратылған.

Раймановтың иптәштәре бөгөн ул килеүгә бер нисә тиҫтә һарыҡты айырып, ҡасырыу урынындағы ялан кәртәгә бикләп киткәндәр икән. Өшәләк эсендә зәңгәр ут бөркөп примус сыжланы, әсе спирт-ректификат еҫе таралды — өлкән чабандың техник-осеминаторлыҡ бурысын үтәүе ине был. Ул инструменттар һәм приборҙар менән шөғөлләнгән арала, өшәләк ярығына ҡыҫтырып ҡуйылған ҡырҡҡыға төштө күҙем. Башҡорттоң ябай һарыҡ ҡырҡҡыһы, һәр ике яғы айырып алынмалы. Ләкин ҡырҡҡының бала саҡтан таныш ябай конструкцияһы әллә ниндәй тәрән тарих төпкөлдәрен, һарыҡсылыҡ һөнәренең үткән юлдарын иҫкә төшөрҙө. Тап ошондай ялғанмалы ҡырҡҡылар, атап әйткәндә, бынан ике мең йылдар элек вафат булған бабаларҙың һөйәге ятҡан боронғо Урта Азия, Кесе Азия ҡәберлектәренән табылған. Ана шул һарыҡ үрсетеүсе бабалар менән аралашҡан, сауҙа итешкән гректарҙың итте — “сарк” (йәғни һарыҡ), ә һарыҡ тәнен сорнаған йөн уранаһын “руно” (йәғни урана) тип атауҙарында ла бар оло мәғәнә!..

Бындағы эштәре осланыуға өлкән көтөүсенең юлында яңы мәшәҡәт ҡупты — тоҡом тәкәләренең береһе “бойоғобораҡ торғаны» асыҡланды.

— Тоҡом — алтын, уның менән шаярырға ярамай! — тине Миңлеғәли ағай, ауырыҡһынған әзмәүерҙе “Жигули” салонына йәһәт күтәреп һалды. Мин тәкәнең башын тотоп ултырып, кисекмәҫтән совхоз үҙәгенә — ветдауаханаға елдерҙек.

— Бына шулай йәйен-ҡышын мал ҡурсалап үтә индебеҙҙең ғүмер. Бөтә донъя, бына ошо көмөш йөнлө һарыҡтай, ҡулдарыбыҙға ғына ҡарап тора һымаҡ. Шуға күрә бер минутты ла юҡҡа әрәм итке килмәй, ҡулдарыңдың һәр хәрәкәте, талпынышы илгә фәҡәт ҡот килтерәсәген тойоп ҡәнәғәтләнәһең. Эш кешеһенә, ҡустым, шунан да ҙур бәхет, ҡыуыныс бармы икән был донъяла!

Ике яндан ҡырыҫ-көрәнһыу бүтәгәле үләндәр, һалам эҫкерттәре өйөлгән баҫыуҙар, ҡоро ҡамыллыҡта һарыҡ көтөүеләй һибелеп йөрөгән торналар, уларҙан арыраҡ ерҙе япҡан ысын һарыҡ көтөүҙәре ағылды — машина, торналар төбәген артта торғоҙоп ҡалдырып, оло ҡырсын юлға сыҡты, тигеҙ генә елдереп бара башланы. Уйсанланы төшкән Миңлеғәли ағай, миңә бер һирпелеп ҡарап, фекерен дауамланы.

— Бер генә нәмә тейә теңкәгә: заман ҡушҡанса еренә еткереп эшләр өсөн заманса һарыҡ аҙбарҙары, аҙыҡ цехтарыбыҙ юҡ. Һәммәһе әүәлгесә, кустарҙарса. Ҡышҡыһын йәш бәрәстәрҙе өшөтмәҫ һәм туңдырмаҫ, мал аҙығын, әрәм-шәрәм итмәй, тәрбиәләп-эшкәртеп биреү өсөн йән тирҙәрең сыға, чабан халҡы көнө-төнө ҡуҙға баҫҡандай тыбырсына. Тыбырсынмаҫ инең, мал бағыуҙа ебәрелгән бер көн генә һүлпәнлек тә уның йыллыҡ продукцияһының күләменә лә, сифатына ла килтереп һуға. Әйтәйек, һарыҡтарҙы ашатып-эсереүҙә, уларҙың торлаҡ шарттарында алдан ҡаралған берәгәй режим һаҡланмаһа, йәки боҙолһа, һарыҡ йөнө үҫешенең дә тигеҙлеге һаҡланмай, боҙола: йөн бөртөктәре урыны-урыны менән ҡәҙимгесә, ә урыны-урыны менән шыҡһыҙ нәҙек булып үҫә. Ул

йөндән буҫтау туҡығанда буҫтау ебе тап ана шул нәҙек ерҙән өҙөлә, брак китә. Беҙҙең тәрән эске мөмкинлектәр, шулай итеп, яңы үрҙәр яулау өсөн тотолаһы урында, яуланғанын юғалтмаҫҡа күберәк сарыф ителә, үсеш темпы тотҡарлана. Һәм тағы ла замананың иң мөһим мәсьәләләренең береһе: ғаилә өсөн, китап өсөн, телевизор өсөн ваҡыт аҙ ҡала. Ә бит бөгөнгө чабан — кисәге һарыҡ көтөүсеһе түгел: үҙ эшендә ул юғары һәм иң юғары квалификацияларға эйә булған белгес, шәхес. Уға шул үҙенә лайыҡ юғары кимәлдәге эш шарттары, йәғни етештереү сараларының етештереү көстәренә лайыҡлы юғары кимәлдәге теүәл йәрәшеүе кәрәк. Ә йыш ҡына беҙҙең һарыҡсылыҡта бөгөнгө заводтағы автомат линия белгесен Петр беренсе батшаның ағас аяҡлы токарь станогында эшләргә ҡуйғандай килеп сыға...

Өҙөп кенә ни әйтергә лә белмәй, башымды сайҡап ултырҙым...

— Әлбиттә, — тине Миңлеғәли ағай, — беҙгә көллөһө лә күктән төшмәне һәм төшмәйәсәк. Бөтәһен дә үҙебеҙҙең бына ошо ҡулдар менән шаҡарып алдыҡ, илде шулай ҡотайттыҡ. Бәғзеләр уйлағанса, бына ошолай еңел машина салонына ҡырын ятып ҡына елдереп инеү түгелдер ул коммунизмға барыу. — Күҙҙәре шаян ут баҙлатып сөкөрәйҙе. — Бына бит әле, салонда ла ике ҡулға бер эш табылып тора: беребеҙ руль әйләндерһә, икенсебеҙ тәкә башын тотоп бара. Йәмғиәттә йәшәп тә, йәмғиәттән тыш йәшәп булмай, тигән ябай хаҡиҡәт ошолор инде, ҡустым. Ләкин, үкенескә ҡаршы, ҡулдағы һәммә бармаҡтар ҙа тигеҙ түгел: һарыҡ итен яратып та, һарыҡ башын тоторға ла сирҡаныусылар ҙа бар. Быға, бәлки, йәш быуынға хеҙмәт тәрбиәһе биреп еткермәүебеҙ сәбәпселер. Бер йыл шулай һарыҡтар күпләп бәрәсләгәндә ярҙамға саҡырғайным йәштәрҙе. Ундай саҡта, беләһегеҙ, һәр кем — кендек инәһе, ике ең беләктән төрөүле. Эш ҡайнағанда бер егетем ике ҡулын йәшереп, бағаналай һерәйеп тик тора бит, әй, сырайын һыта ерәнеп. Тәбиғәт килтергән күлке — бысраҡ түгел ул, тип аңлатып ҡара уға... Ахыры сыҙаманым, шаяртып һөйгән булып, бәрәс алған усым менән битенән һыйпаным егеттең. Шулай сирҡаныс алғас ҡына керешеп китте эшкә... Ләкин был сара — әмәлһеҙҙән килеп тыуған, ваҡытлыса сара ине. Ерекмән хеҙмәтенә булған ул сирҡанысты балаларыбыҙ йәштән — атай нигеҙендә һәм йәслелә үк алырға тейештер, минеңсә. Юҡһа бит ҡайһылай килеп сыға: үҙебеҙҙең көндәлек хеҙмәттең ауырлыҡтарына ла, ҡыуаныстарына ла кесе йәштән үк ирҙәрсә ҡырыҫ ерекле ерҙәреүҙе онотоп, йәш быуынға күберәген тәмле нотоҡ уҡыйбыҙ, киләсәктең улар йәшәйәсәк ожмах баҡсалары тураһында йырлайбыҙ, ә уны улар үҙҙәре үк, бөгөн үк үҙ ҡулдары менән төҙөргә тейешлеген ҡандарына һеңдерергә ҡыймайбыҙ. Уны кем төҙөйәсәк, ошо уҡ йәш быуын үҙе түгелме ни?! Коммунизм, минеңсә, ожмах баҡсаһы булыуҙан да бигерәк, кеше хеҙмәтенең иң ныҡ сәскә атҡан, етештереү сараларының етештереү көстәренә лайыҡлы булып үсешкән, эштәребеҙҙең йырлап барыр сағы ул! Ул саҡтарҙа, әлбиттә, баяғылай, автомат линияһы менән Петр беренсе батша станогы ла йәнәшә тормаясаҡ... Эй, зарлана лабашланы, тип уйламағыҙ әле! — Миңлеғәли ағай тағы ла миңә һирпелеп ҡарап алды. — Былары, әлбиттә, совхоз һәм

район етәкселәренә беҙҙең максимум үпкә һәм теләктәр. Минимумдарына килгәндә, һарыҡтарға көндәлек рационды ғына киҫмәһендәр, ем аҙыҡтарын, концентратты күберәк бирһендәр, ә ҡалған яғын... беҙ — коммунистар, тәүлегенә ҡырҡ һигеҙ сәғәт йүгереп йөрөп эшләргә лә әҙер. Малсылыҡты ҡырҡа күтәреү өсөн партияның, хөкүмәтебеҙҙең оло хәстәрлек һалғанын, беҙгә таянғанын беләбеҙ.

Өлкән көтөүсенең ғәмле һүҙҙәрен күңелдән кисереп, үҙемдең ошо көндәрҙә генә ошо совхоз етәкселәре менән булған һөйләшеүемде хәтерләнем. Ошо уҡ ғәмдәр, хәстәрлектәр менән янып йәшәй ине улар ҙа. Баймаҡ яҡтарының ҡабатланмаҫ тәбиғәтен һаҡлау тураһында һүҙ ҡупҡас, совхоз директоры Александрр Иванович Поверяевтың да, партком секретары Айрат Сәфәр улы Иҫкужиндың да йөҙҙәрендә тәрән борсолоу сағылды.

— Көтөүлектәрҙә мал йөрөтөүҙең, врачтар әйткәнсә, “рәхимле режимы” ла, көтөүҙәрҙе йәйгеһен урман зонаһына ҡыуыу ҙа, дөрөҫөн генә әйткәндә, ҡышҡылыҡҡа япраҡ аҙыҡ йыйғандай, проблеманы хәл итеүҙәге ваҡытлыса ғына саралар булып тора, — тине Александр Иванович. — Хәҙер көн кеүек асыҡ: ейәндәребеҙ беҙ тапаған саң-буранлы ҡола яланда ултырып ҡалмаһын өсөн, бөгөндән үк һарыҡсылыҡты промышленность нигеҙенә күсереп ҡорорға кәрәк — партиябыҙ был хаҡта берәгәйле иҫкәртә.

— Әммә өлгөрә алмайбыҙ. Ошо көнгәсә совхозда хатта бер генә бүлексәлә лә хатта элементарь нәмә — типовой аҙыҡ цехтарыбыҙ юҡ. Ҡаратау бүлексәһендә әллә ҡасан уҡ планлаштырылғанына ла әле булһа йыһаздары килеп етмәй, — тип көрһөндө Айрат Иҫкужин.

— Шулай.

— Былдай хәл дауам итһә, ҡасандыр Англиялағы яманаты сыҡҡан кеүек, торналарыбыҙ менән ҡуша үҙебеҙҙе лә һарыҡтар ашап бөтөрмәҫме? — тип төрттөрөп алдым мин.

— Эйе, был турала тарих та, халыҡ аҡылы ла иҫкәртә, — тине Айрат. — Торна киткән ерҙән ҡот китә, ти торғайны олатайым.

Александрр Иванович шаяртты:

— Ул тиклем үк шомға һалмағыҙ әле, партком иптәш, юҡһа сәстәр үрә торҙо. Беҙҙең торналар, беләһегеҙ, төбәктәребеҙҙә ирәүән йөрөп ята.

— Дөрөҫ, йөрөп ята, әммә төбәк шул тиклем дә тарайҙы — бейеүҙәрен күрмәгән әҙәм ҡалмай бара. Ә бит торна бейегәнен күреү...

— ...илгә афәт килтерә, тигән ата-бабалар, — тип ялғаным.

— Эйе, килтерә. Ни өсөн? Сөнки торналар төбәге был изге ҡоштарҙың туйлап бейеүҙәрен беҙ ҡарап тамаша ҡылыр рәүештә тарайһа, был төбәктең ҡороуына, торналарҙың китеүенә лә күп ҡалмаясаҡ, тигән һүҙ. Ә ер-һыу ҡороған урындан, беләһегеҙ, ысынлап та ҡот китә, ҡом баҫа. Был һис мистика түгел, ә тәбиғәт ҡануны. Мәҡәл һүҙҙең эйәһе аҡылһыҙ булмаған.

— Бына бит донъялар ҡайҙа бара: кисә генә үҙебеҙҙе саманан тыш аҡыллы, ә бабаларҙы иҫәр-миҫәр тип яҙа торғайныҡ...

Айрат Сәфәр улы мине бүлдерҙе:

— Эйе, уларҙың һыуыҡ тейеп үпкәләре шешкәндә һәм тәндәре яраланғанда күгәргән ҡорот менән дауаланыуын да, торнаны Хоҙай урынындағы тылсымлы ҡош һанауын да сабыйлыҡ тип ҡарай инек. Ә бөгөн килеп күгәргән ҡорот — антибиотикка, изге торналар — экологияға әйләнеүен абайлағас, сабыйлыҡ тигәнебеҙ көтмәгәндә аҡ һаҡаллы ҡарт булып сыҡты.

— Дөрөҫ, — тине директор, — һыу байлыҡтарын һаҡлап ҡалыу һәм арттырыу бөгөндән үк райондың беренсе проблемаһы булып тора — бына ҡайҙа баш ватаһы ғалимдарға. Архимед ҡартластың һүҙҙәрен бороп әйткәндә, бирегеҙ бөгөн миңә һыу - даланы ожмах баҡсаһы итәсәкмен!

— Быларҙы мин, әлбиттә, һүҙ ыңғайында ғына... — тип, баяғы бүленеп ҡалған фекерен нығытты партком секретаре. — Мәсьәлә үҙәгендә, беләһегеҙ, партиябыҙҙың Программаһы, илебеҙҙең Төп Законы — СССР Конституцияһы тора. Ауыл хужалығының продуктлылығын киҫкен арттырыуҙы уның дөйөм культураһын күтәреү, кешенең һәм тәбиғәттең гармонияһын тайпылышһыҙ һаҡлау юлы менән бергә алып барырға, тормошҡа ашырырға бурыслыбыҙ. Был — һәммәбеҙҙең дә кешелек Намыҫы, быны беҙҙән замана һәм киләсәк талап итә!

Шул һүҙҙәрҙең асылына тейенгәс, хәүефтәрем таралып, күҙ алдарым яҡтырып киткәндәй булды, йөрәк түренә ҡотло йылы таралды. Урал артына сығып, үҙем дә ҡуша ғәмләнеп, бөгөнгө Баймаҡ кешеһенең берҙәм йөрәк тибешен, ғәмен тойомланым кеүек — ә был иһә аҙ түгел! Фәкәт алҡынып барғанда, бейек үрҙәргә менгәндә генә шулай тибәлер йөрәк!

...Бына ошо хәтирәләр ҡосағында сайҡалам, “Жигули” елтерәп илтә, ә хужаһы ҡуш ҡуллап руль әйләндерә, минең ҡулда йылтыр ҡуҫҡар мөгөҙлө, көмөш йөнлө тәкә башы тере күҙҙәрен мөлдөрәтеп, күҙемә ҡарап бара. Артыбыҙҙа оҙон юл, әйтерһең, мәңге нәҙекләнмәүсән, өҙөлмәүсән көмөш һарыҡ йөнө булып һуҙыла ла һуҙыла, донъяның юлдар буҫтауына туҡыла. Тыуған ерҙәге юлдарыбыҙҙы һәм моңдарыбыҙҙы сифатлы итеп һуҙһаҡ, донъя буҫтауы ла сифатлы туҡыласаҡ, кешелеккә ырыҫ, ҡот ҡундырасаҡ.

Мин барам, барам, хәҙер инде үҙемдең яҙыу өҫтәлемдәге аҡ ҡағыҙ битенә һуҙған оҙон юлдарымда болоҡһоп-сайҡалып барам. Ҡомарлы юлымдың ике яғында сикләнмәгән, бөтмәгән һәм бөтмәҫ торналар төбәге, тояҡтарын ҡайсылатып борғо тартҡан изге йән эйәләре. Шуларҙың барыһын һаҡлап, ҡурсалап, үҙенең Ҡояшлы һәм йәншишмәле бейек тауынан һөйөп баға ҡытыршы ҡулында ҡырыҫ бүтәгә услап тотҡан танышым, ошо ерҙең таянысы — Райманов Миңлеғәли Әбүбәкер улы. Мин был хеҙмәт эйәһендә типик Баймаҡ кешеһен төҫмөрләнем — тыуған ергә тәрән тамыр ебәргән башҡорт кешеһен.

26.10.1977.

Йырлы һәм егәрле ер

Советтар Союзы төҙөлөүҙең 60 йыллығына арнап эшһөйәрбаймаҡ районында уҙғарылған башҡорт совет әҙәбиәте аҙналығында ҡатнашыу бәхете Насип булды миңә лә. Күренекле прозаигыбыҙ, СССР Яҙыусылар берлеге һәм ВЦСПС бүләге лауреаты Яныбай Хамматов етәкселегендәге алты яҙыусынан торған был төркөмдә өлкән шағирҙарыбыҙҙан Фәүзиә Рәхимғолова, Яҡуп Ҡолмой, әҙәби тәнҡитсе һәм ғалим Зиннур Нурғәлин, ошо бәрәкәтле Баймаҡ ерендә тыуып үҫкән шағир, комсомолдың Ғәлимов Сәләм исемендәге бүләге лауреаты Абдулхаҡ Игебаев та бар ине. Күк Ирәндек буйлап беҙгә райондың осонан-осонаса үтеп сығыу, колхоз, совхоз, леспромхоз үҙәктәрендә, бригадаларҙа, бүлексәләрҙә, фермаларҙа, мәктәптәрҙә йөҙәрләгән хеҙмәтсәндәр һәм уҡыусылар — туған әҙәбиәтебеҙҙең ихлас дуҫтары һәм терәге менән күҙгә-күҙ осрашып һөйләшеү, аралашыу форсаты тейҙе. Яҙыусы менән китап уҡыусы араһындағы был яҡынлыҡ ике яҡ өсөн дә зауыҡлы ваҡиғаға, ысын культурабайрамына әүерелде. Был иһә илдәге бөйөк тарихи хаҡиҡәтте һәммәбеҙгә уғата нығыраҡ тойоп-белергә ярҙам итте: ҡаҡшамаҫ Советтар Союзын тыуҙырған бөйөк Октябрь революцияһы, Совет хакимиәте, туған партиябыҙҙың ленинсы милли политикаһы арҡаһында ғына беҙ ошондай тантанаға: халыҡтың — әҙәбиәткә, әҙәбиәттең халыҡка айырылғыһыҙ яҡынлығына, туғанлығына өлгәштек. Беҙ йөрөгән Урал арты, Баймаҡ яҡтары ошо бөйөк хаҡиҡәтте тағы ла бер тапҡыр раҫланы.

Хеҙмәт һәм яу батырлыҡтарына, революцион традицияларғабай булған был Баймаҡ ере, егәрле Баймаҡ хеҙмәтсәндәре менән мине күптәндән ижади дуҫлыҡ ептәре бәйләй. Бынан бер нисә йыл элек райондың атаҡлы чабаны Миңлеғәли Райманов тураһында очерк яҙғайным. Ул тынғыһыҙ ҡаһармандың бөгөн дә ал-ял белмәй тырышып эшләүен, СССР-ҙың аҙыҡ-түлек программаһын уңышлы үтәү юлында һарыҡсылыҡтан районда һаман да иң юғары продукция алыуын дауам иткәнлеген белеп ҡыуандым. Ғөмүмән, илебеҙҙең экономикаһын күтәреүҙә Баймаҡ халҡы йәнен-тәнен биреп тырыша, республикабыҙҙа иң күп иген, ит, һөт һәм башҡабайлыҡтар етештереүсе райондарҙың береһе булып тора. Бында ысын игенселек оҫтаһы Риза Яхин, малсылыҡ маһиры Фира Ниғмәтуллина кеүек Социалистик Хеҙмәт Геройҙары үҫеп сыҡты. Партияның район комитетында ошо хаҡта әңгәмәләшеп ултырғанда райкомдың беренсе секретаре Милләт Ташбулат улы Хәкимов иптәштең Баймаҡ халҡы тураһында ысын-ысындан ғорурланып әйткән һүҙҙәре иҫтә ҡалды:

— Бындай кешеләр менән иң текә үрҙәрҙе лә яуларға була! — тине ул.

Баймаҡ яҡтары шул уҡ ваҡытта хаҡлы рәүештә халҡыбыҙҙың алтын биреп тә алғыһыҙ рухи гәүһәрҙәрен, йыр-моңдарын сал быуаттар төпкөлөнән күңелендә тере килеш, саф килеш һаҡлап килтереп еткереүсе, үҫтереүсе, бөгөн дә тере йәншишмәләй урғылтыусы милли хазина төйәге булыуын дауам итә.

Һүр. 1. Һулдан уңға: Йыһат Солтанов, Яҡуп Ҡолмой, Зиннур Нурғәлин, Яныбай Хамматов, Фәүзиә Рәхимғолова, А. Игебаев. Баймаҡ ҡалаһы, 17.12.1982.

Ысынлап та, күккә олғашҡан Күк Ирәндеге арҡауланып һуҙылған, Рапат тауы ер кедегеләй тиртеү бүлтәйеп торған, ҡуш имсәктәй Яғалса тауы үҙенең һомғоллоғо менән күңелдәрҙе арбаған, яландары көмөштәй сал ҡылғанлы, баҫыуҙары мул игенле был яҡтарҙың һәр ташы һәм үлән ҡыяғы Һа брау сәсәндәрҙән килгән легенда һәм эпос һөйләй, сихриәтле йыр көйләй. Сөнки унда тамыры тәрән юғары рухи культураға, эстетик зауыҡҡа эйә булған киң күңелле уҙаман халыҡ йәшәй. Шуныһы ғәжәп ҡалдырҙы ла ҡыуандырҙы: район етәкселәренең һәр береһе, яуаплы партия һәм хужалыҡ эшмәкәрҙәре булыу менән бер ҡатарҙан, халыҡтың үҙе кеүек үк нәфис талантлы — кәрәк саҡта үҙәктәрҙе өҙҙөрөрлөк йырлай ҙа, ҡурайын да һыҙҙыра, табандарҙан ут сәсрәтеп бейей ҙә белә икән. Әйтәйек, райком секретары Рәғип Хәмит улы Хисмәтуллин иптәш шуның өҫтәүенә халыҡтың бай ауыҙ-тел ижадының, изге йолаларының һәйбәт белгесе лә икән. Мәҫәлән, ул беҙгә башҡорттоң көҙгө һуғым Байрамының әлегәсә хатта этнографтар ҙа белеп бөтмәгән эске тәрән һыҙаттарын асып һалды, шул файҙалы һыҙаттарҙы бөгөн дә ижади ҡулланыу, дауам иттереү кәрәклегенә инандырҙы. Ә райбашҡарма комитеты рәйесенең культура буйынса урынбаҫары Фатиха һылыуҙы беҙ, яғымлы баҫалҡылығы һәм үҙәккә үткес моңо өсөн “Урал һандуғасы” тип атаныҡ. Был йәһәттән башҡа иптәштәр тураһында ла әллә күпме йылы һүҙҙәр әйтергә булыр ине. Ҡыҫҡаһы, халыҡсанлыҡ рухы бында иң төпкөлдәге ябай ауыл өйөнән алып райкомғаса һәммә йөрәктәрҙе лә иңләп алған, күңелдәрен

тоташтырған; был райондың йөрәк тибеше лә ысынлап та бергә тибә, ҡуша тибә.

Баймаҡтарҙың был ҡиммәтле һыҙаты хаҡында, әлбиттә, күптәр белә, был хаҡта йыш яҙылды һәм яҙыла. Әммә минең әйтергә теләгәнем икенсе — ошоғаса аҙ иғтибар ителгән йәнә лә бер мөһим милли һыҙат тураһында. Беҙҙең эраға тиклемге замандарҙан уҡ күкрәп килгән, илдең матди байлыҡтарын ишәйтеп, халҡыбыҙҙың ҡиммәтле рухи хазиналарын тыуҙырыуға нигеҙ биргән, һәм ошо көнгәсә башҡаларға ла өлгө булырлыҡ Баймаҡса егәрлелек, юғары кимәлле ***етештереүсән хеҙмәт*** культураһы тураһындабара һүҙ. Партиябыҙҙың Май (1982) пленумы ҡарарҙарын бойомға ашырыу осоронда был, йәғни әлеге юғары кимәлле ***етештереүсән хеҙмәт*** культураһының тәрән тамырҙарын барлап пропагандалау, минеңсә, айырым иғтибарға эйә. Беҙ Баймаҡта йөрөгән көндәрҙә КПСС Үҙәк Комитетының Генеральный секретары Юрий Владимирович Андропов иптәштең Советтар Союзы төҙөлөүҙең 60 йыллығына арналған тәрән йөкмәткеле докладын йотлоғоп тыңланыҡ радионан һәм ул былай тине: “Союзға берләшеү совет халҡының матди ғына түгел, ә рухи байлығының да өҫтәлмә сығанаҡтарының береһенә әүерелде. Ләкин бында ла беҙ хәҙергә бөтә мөмкинлектәрҙе файҙаланып етмәй беҙ әле. Эштең яңы, бөгөнгө көн талаптарына яуап биреүсе, культураларҙың үҙ-арабайығыуын уғата емешлерәк итергә мөмкинлек биреүсе ысулдарын һәм формаларын ныҡышмалы эҙләргә, беҙҙең халҡыбыҙҙың һәр береһенең культураһы биргән һәр яҡшы нәмәгә ҡарата бөтә кешеләргә лә Тағы ла киңерәк юл асырға кәрәк. Был изге эштә радио һәм телевидение, шулай уҡ башҡа киң күләм информация саралары, әлбиттә, даими үҫә барыусы роль уйнарға тейеш”.

Ысынлап та, аҙмы ни Баймаҡ яҡтарында быңдай “яҡшы нәмәләр” һәм ниңә беҙ уларҙы бөтә республика күләмендә күренерлек күтәрмәй беҙ?! Дандары илгә киң таралған игенсе Риза Яхиндар, һауынсы Фира Ниғмәтуллиналар төпһөҙ-тамырһыҙ буш урындан үҫеп сыҡмағандар бит ул. Атап әйткәндә, уларҙың хеҙмәт ҡаһарманлыҡтары, таланттары ошо тупраҡта йәшәгән халыҡтың кәм тигәндә һигеҙ мең йыллыҡ ***етештереүсән хеҙмәт*** тәжрибәһенә таяна. Сөнки таш быуат аҙағында уҡ бында иген игеүсе, мал аҫыраусы, йөн һәм киндер еп иләп туҡыма туҡыусы, тире иләп тун тегеүсе, металл иретеүсе, урман ҡырҡыусы һөнәрмән ата-бабаларыбыҙ донъя көткән. Энеолит осоронан уҡ тороп ҡалған таш кәтмән һәм тирмән таштары, тире ҡырғыстар, беҙ һәм орсоҡ баштары, һандал һәм сүкештәр, балта һәм бысҡылар асыҡ һөйләй шул хаҡта. Ошо ер соҡсондары, һөнәрмәндәре урындағы йәшмәташтан әҙерләгән микролит ҡоралдар, алтын, *баҡ*ыр кеүек ҡиммәтле буталдар (металдар) менән бөтә Көнсығыш Европаны, Азияны тәбмин итеп торған. Ошо ерҙән үк байтаҡ иген культуралары, атап әйткәндә, ***тары,*** Ер йөҙөнә таралған. Үкенескә ҡаршы, беҙ йыш ҡына был тәңгәлдә ҡайһы берәүҙәрҙән хата фекер ҙә ишетәбеҙ: имеш, *башҡорттар* игенселеккә ни бары 18-енсе быуатта ғына өйрәнгән, шуға тиклем улар күсмә халыҡ булған. Ә күсмәселекте тикшереүсе белгестәрҙең, шул иҫәптән совет ғалимдары С.А.

Плетневаның һәм академик Б.А. Рыбаковтың төплө дәлилләүенсә, далала һис бер ҡасан да сап-саф ҡына күсмә халыҡтар булмаған, улар һәр саҡ игенселек менән дә шөғөлләнгән.

Эйе, Баймаҡ ере лә борон-борондан уҡ игенселек төйәге ул. Абзаҡ ауылында колхозсы Р. Асылбаеваның баҡсын ҡаҙығанда килеп сыҡҡан бронза дәүере хазинаһы — бер түгел, 13 (ун өс!) бронза ураҡ — үҙе генә лә яҡшы дәлилләй быны! Баймаҡ ерендә бынан һигеҙ мең йыл элгәре үк һыйыр малы, кәзә-һарыҡ аҫыраһандар, донъяла иң беренсе булып ҡөҙрәтле йылҡы малын ҡулға эйәләштергәндәр һәм уны атланып са бырға, егергә өйрәнгәндәр. Ошо ерҙә боронғо замандың бөйөк техник революцияһы тормошҡа ашырылған — кешелек донъяһында тәүгеләрҙән-тәүге ысын мөғжизә — тап бөгөнгөләй көпсәкле, туғынлы, арасалы беренсе тәгәрмәс эшләнгән һәм донъяла иң тәүге ике тәгәрмәсле хәрби ат арбаһы ла ошо ерҙән таралған бөтә донъяға. Һәм был тарихи мөғжизәләрҙе үҙ ҡулдары менән тормошҡа ашырыусылар — ошо Тәүтөйәктең аҫабалары, туранан-турабашҡорттоң, Баймаҡ кешеләренең, беҙҙең бөтәбеҙҙең, ата-бабаларыбыҙ булған. Тап шул ерҙең һәм осорҙоң таш ҡоралына асыҡ итеп ырып яҙып ҡалдырылған Үҫәргән башҡорт ырыу тамғаһы был хаҡиҡәтте документ рәүешендә нығыта.

Миңә ҡалһа, районның тыуған ерҙе өйрәнеү музейында, ауылдарҙағы һәм мәктәптәрҙәге музейҙарҙа ошо хаҡта һөйләүсе тәрән йөкмәткеле экспонаттарға, стендтарға киңерәк урын бирелһен ине. Сөнки халыҡ үҙенең бай тарихы менән ҡыҙыҡһына, төплө белергә теләй. Баймаҡ ерендә әҙәбиәт кисәләрендә хеҙмәтсәндәрҙең беҙгә биргән һорауҙарының да күп өлөшө башҡорт халҡының тарихына ҡағылышлы ине, һәм ул һорауҙар тарихи романдар авторы Янибай Хамматовҡа яуҙырылды йышыраҡ. Был иһә беҙҙең һәммәбеҙгә лә дәрт өҫтәне. Сөнки үҙенең тамырҙарын күҙаллаған, уны ҡурсалап һаҡлаған халыҡ ҡына ошо бөгөнгөлөккә, яҡты киләсәккә эйә була ала. башҡорт халҡының тәрән тамырҙары ошо көндәге һоҡланғыс рухи һәм матди культурабыҙҙы һутландыра. Шуны белеп халыҡ ғорурланырға, емешле хеҙмәткә илһамланырға тейеш. Тамыр менән олон-ябалдаштың тоташлығын тойоу хисе — һәммәбеҙгә, илдең юғары культураһы өсөн кәрәк. Академик Д.С. Лихачев һүҙҙәре менән әйткәндә, "әгәр культура күп быуатлыҡ тәжрибәне ҡулланыу юлы менән тыуҙырылһа, уның түбән булыуы мөмкин түгел. Әгәр ул бөтә үткәндәрҙе кире ҡағыу юлы менән тыуҙырылһа, был инде ғөмүмән культура түгел". Баймаҡтар иһә үткәндәрҙең иң яҡшы культура тәжрибәһенә таянып алғабара, партиябыҙҙың Май (1982) пленумы ҡарарҙарын уңышлы тормошҡа ашырыу өсөн көрәшә.

1982.

Тарих: изге өмөттәребеҙ

Башҡорт Хөкүмәте һәм ғәскәре 1919 йылдың буранлы февралендә ҡыҙылдар яғына сығып, 20 мартта Мәскәүҙә совет хөкүмәте менән федерация берлеге нигеҙендәге ике-ара Килешеүгә ҡул ҡуйылғас, шуға ихлас инанып, үҙ аллы дәүләт тураһындағы быуаттар буйына килгән мөкәтдәс моратыбыҙға, ниһайәт, өлгәшәбеҙ тип еңел һулаған халҡым. Ульянов-Ленин етәкләгән большевиктарҙың программа һәм декларацияларында яҙылып киң шапыртылған милләттәрҙең үҙ билдәләнешкә хоҡуғы менән уны ҡайһылай бойомға ашыртыуҙары араһындағы ер менән күктәй айырманы шул саҡтан уҡ зирәк күргән юл башсыбыҙ Әхмәтзәки Вәлидов үҙе лә тоғро арҡадаштары менән бергә баяғы дәүләт-ара Килешеүҙең ике яҡ тарафынан да цивилизациялы милләттәргә хас намыҫлы һәм теүәл үтәләсәгенә, Башҡортостан менән Рәсәй араһындағы дуҫлыҡ күпере булып хеҙмәт итәсәгенә ҙур өмөттәр бағлаған, шул нигеҙҙә Башҡортостанды Рәсәй Федерацияһының ысын үҙ аллы совет республикаһы рәүешле көрәйтергә, сәскә аттыртырға иң һыҙғанып керешкән. Эйе, большевиктар тарафынан шунан һуңғы етмеш йыл буйына совет хакимиәтенең яуыз дошмандары итеп ләғнәтләнгән вәлидовсылар, аҡыллы ла, егәрле лә, яугир ҙә бабаларыбыҙ, советтарға аяҡ салыуҙы баштарына ла килтермәй, киреһенсә, Рәсәй менән Башҡортостан Килешеүе нигеҙендәге совет хакимиәтен халыҡты яҡты, мул тормошҡа сығарыуҙың төп сараһы, сығанағы һанаған, һәм көндәлек эштәре менән бойомға ашырған быны.

Башҡортостанда ғәрәсәтле граждандар һуғышы туҡталғандан һуңғы сағыштырмаса тынысыраҡ тәүге йыл — 1920 йылдың 1 Май байрамын ҡыуанып ҡаршылау... Рәсәй уҙаманы Ульянов-Ленин, үҙе ҡул ҡуйған баяғы ике-ара Килешеүҙе тупаҫ боҙоп, Башҡортостанды ҡабат колониаль тапандыҡ хәленә тәкмәстергән 19 май ҡарарын иғлан итеренә — ни бары бер айҙай, ә шул колониаль политикаға нәфрәтләнгән Башҡорт Хөкүмәтенең эш ташлап китеренә ике айҙай ғына ҡалған... Әммә былай булыры һис көтөлмәгән шул көндәрҙә Башҡорт Хөкүмәтенең үҙ тыуған халҡына ҡайһылай ҙа фиҙакәр хеҙмәт иткәнлеген һәм итергә теләгәнлеген, 1 Май байрымы алдынан ниндәй изге мораттар менән йәшәгәнлеген күҙ алдына сағыу итеп килтерерлек ҡайһы бер документтарбашҡортостан дәүләт Үҙәк тарихи архивы фондтарында һаҡлана.

Телеграмма

Күҙәй кантревкомына Эстәрлетамаҡтан. N1766, 1920 йылдың 21 апрелендә Александрров Өфөнән ҡабул ҡылды.

1 Май өмәһен үткәреү буйынса ошо йылдың 18 мартындабашревком ултырышында һайланған Комиссия һеҙгә башревкомдың пленум ҡарарын еткерә: “1 Май өмәһе айҡанлы бССР-ҙың бөтә ун бер кантонында түбәндәге сараларҙы нигеҙләргә: Үҫәргән, Бөрйән, Ҡатай, Түңгәүер, Тамьян-Ҡатай кантондарында Һары станцияһынан алып Темәс аша белорет заводы тимер юл тармағынаса тимер юл һуҙабашларға; бынан тыш, беренсенән, Үҫәргән кантонындағы Йәнсура ҡасабаһында һәм,

икенсенән, шул кантондың Түңгәүер ҡасабаһында дауахана асырға һәм Кананикольск, Темәс, А Бзанпетровск ҡасабаларын телеграф элемтәһе менән тоташтырырға, өсөнсөнән, Тамъян-Ҡатай кантонындағы Белорет һәм Балаҡкүлдән Усалы аша Мейәскә телеграф элемтәһе тартырға. Байрам айҡанлы йәнә: Ялан кантонында Шумиха станцияһы һәм Тамрыкүл ҡасабаһы араһын телеграф элемтәһе менән тоташтырырға. Арғаяш кантонында арғаяш станцияһынан Мейәскәсә Башҡортостан ере буйынса телеграф элемтәһе һуҙырға. Күҙәй кантонында Яңы Күл ҡасабаһын Иглин станцияһына телеграф элемтәһе менән бәйләргә. Дыуан-Ҡошсо кантонында ауыл хужалығы училищеһе асырға. Юрматы кантонында екәнсүкешкә яҡын тыуараҡ ҡалаһын нигеҙләргә. Табын кантонындағы Ыҡ тамағындабаҡраҡ ҡалаһына нигеҙ һалырға ла унан табынғаса телеграф элемтәһе тартырға. Ҡыпсаҡ-Етерыу кантонында тире эшкәртеү заводы һәм уның эргәһендәге тире эшкәртеү оҫталары мәктәбен асырға Мораҡта. Ҡарғалы салаһын ҡала итеп атарға һәм Һаҡмар-8 станцияһына телеграф менән бәйләргә. Туҡсоран кантонындағы Бугрово ҡасабаһы эргәһендә ауыл хужалығы мәктәбе асырға ла бугровоны телеграф менән Шарлыҡҡаса элемтәләргә”... Ошо ҡарарҙы еткереп, Комиссия бөтә кантревкомдарға бөтә башҡа учреждениелар, ойошмалар менән тығыҙ берҙәмлектә эшләргә, Башревком ҡарарын үтәү өсөн кисектергеһеҙ саралар күрергә тәҡдим итә. Барлыҡ ойошмаларҙың хеҙмәткәрҙәре һәм бөтә граждандар был эштәрҙең Башҡортостан пролетариаты өсөн мөһимлеген аңларға һәм булған көс-ҡеүәтен егергә бурыслы. 1 Май өмәһендәге башланғыстар төҙөлөштәргә ер майҙаны бүлеп биреү, төҙөлөш материалдары килтереү, бағаналар өсөн соҡорҙар ҡаҙыу, бағаналыҡ бүрәнәләр, таш, кир бес әҙерләү, станция урындарын һәм башҡаларын тәғәйенләү менән билдәләргә тейеш. Хөкүмәт учреждениеларын төҙөү һәм заводтарҙы нигеҙләү өсөн яҡындағы пристандарҙан һәм складтарҙан һәр кантонға етешәр мең бүрәнә биреү рөхсәт ителә, шул хаҡта Главлестың, Башсовнархоздың тейешле бойороҡтары атҡарылды. Һеҙҙе, иптәштәр, берҙәмлеккә һәм дәртле эшләргә саҡырабыҙ! 1 Май өмәһенән килер быуынға күҙгә күренерлек эш ҡалһын. Атҡарылған саралар тураһында аҙна һайын шәм бе һәм шаршам бы көндәрҙә хәбәр бирегеҙ.

N3, 18 апрель, 1 Май өмәһенең Комиссия рәйесе **Ишмырҙин, ағзалары Әҙеһәмов, Рәхмәт Ибраһимов.**

Өҫтәлмә текст: Төҙөлөштәге нигеҙ ташы һалыу, беренсе бағаналарҙы ултыртыу һәм телеграф сымдарын һуҙыу һәр кантонда 1 Май көнөндә башҡарылырға тейеш, был көн халыҡ күңелендә яҡты иҫтәлек ҡалдырһын.

Күп тә үтмәй, икенсе телеграмма һуғыла — башланғыстарҙы тәғәйен ҡайһы урындарҙа, ҡайһылай башҡарырға.

Телеграмма

Иглин, Күҙәй кантревкомына Главтехсчеттан, N206/4. Һуғылды 20-һендә 14 сәғәт 50 минутта. 1920 йылдың 20 апрелендә Өфөнән Александрров ҡабул ҡылды. Сираттан тыш үткәрелә.

Ошо йылдың 18 апрелендәге N3 телеграммабыҙға өҫтәп һеҙгә Тағы түбәндәгеләр бойорола: Һары — Темәс — Белорет тимер юл төҙөлөшөнөң ошо ҡасабалар аша үтәсәге билдәле: Һары — Умағол — Хәйбулла — Һа быр — Баймаҡ — Темәс — Киргәс — Әбйәлил — Салауат — Ташбулат — Байым — Әҙрәк — Белорет. Телеграф элемтәһе һуҙыласаҡ пункттарҙы күрһәтәбеҙ: Бөрйән-Түңгәүер кантонындағы темәс — Икенсе Эҫкол — Тәкә — Бүкән — Кананикольск; Темәс — Байғаҙы — Байназар — А Бзанпетровск. Тамъян-Ҡатай кантонында: Белорет — Ҡарағол — Науруз — Юлдаш — Беренсе Усалы — Теләк — Таңғатар — Кәрим — Видково — Мейәс. Ялан кантонында: Шумиха — Тамрыкүл. Арғаяш кантонында: Арғаяш — Көҙәш — Мөхәмәтҡол — Турғаяҡ — Мейәс. Күҙәй кантонында: Иглин — Яңы Күл. Табын кантонында: Баҡраҡ — Еҙем — Ҡараҡ — Табын. Туҡсоран кантонында: Ғүмәр — Туҡай — Малыҡ. Кантондарҙа тимер юл һуҙыуҙар буйынса: Үҫәргән, Бөрйән, Түңгәүер, Тамъян, Күҙәй кантондары буйынса Юғарыла күрһәтелгәндәр түбәндәге рәүештә башҡарылырға тейеш: төҙөләсәк вокзалдар өсөн һәр кантон йәмәғәт ҡарары нигеҙендә тейешле ер бүлергә лә шул вокзалдар һәм улар эргәһендәге хеҙмәтлектәр, шулай уҡ телеграф, телефон һәм тимер юл түтәләре өсөн төрлө төҙөлөш материалдары, таш килтерә башларға тейеш. Телеграф һуҙыу эштәре, мәҫәлән, түбәндәгеләй башҡарылһын: Темәстән Кананикольск яғына ла, Абзан яғына ла телеграф бағаналары ултыртыу телеграф үткәреүҙең ошоғаса йәшәп килгән тәртибе буйынса эшләнә. Башҡа кантондарҙа ла был эште ике остоң береһенән башлап, бер йүнәлештә алып барырға мөмкин. Биналарҙы — мәктәп һәм башҡаларҙы нигеҙләү эштәре уның урынын билдәләү, буласаҡ төҙөлөш өсөн шул урынға төҙөлөш материалдары килтереү рәүешле атҡарылырға тейеш, ә төҙөлөш планын әҙерләү кантревкомдарҙың үҙ ихтыярына ҡуйыла; нигеҙ ташы һалыу, эштәрҙе башлау алдынан халыҡҡа 1 Май өмәһенең, был көндәге эштәрҙең әһәмиәтен аңлатырға һәм эш барышында ла һеңдерергә. Күҙ күремле нигеҙ таштарынан тыш, был көн хаҡында күңелдәрҙә тарихи тойғо ла нығынһын. Бөтә техник ҡеүәттәрҙе һәм белгестәрҙе аҡыллы файҙаланыу кантревкомдарға ҡәтғи бурыс итеп йөкмәтелә... Йөкләмәләрҙе яҡшы үтәгән конторалар башревкомдың һәм алда торған Советтар йыйынының маҡтаулы махсус ҡарарында билдәләнәсәктәр. Юғарыла күрһәтелгән эштәрҙе дауам иттереү дәүләт иҫәбенән һәм өмәләр ярҙамындабашҡарыласаҡ. Һуңғыһы тураһындағы инструкция таратылыр. №4, Эстәрлетамаҡ ҡалаһы, 1920 йылдың 20 апреле. Башревкомдың өмә Комиссияһы рәйесе **Ишмырҙин.**

Халыҡ өмәһе ярҙамында йорттарын да, хан һәм каруан һарайҙарын да күмәкләшеп ҡороп өйрәнгән башҡорт иленең, уның арҙаҡлы ил бағар уҙамандарының күңел түре, хыялдарының сафлығы, мораттарының изгелеге, эштәренең бәрәкәтлеге тураһында һөйләй был шаһәҙәтнамәләр.

Ошо мораттарыбыҙҙың 1 Май халыҡ өмәһендә ҡайһылай бойомға ашырылабашлауын да тасуирлай документтар. Бына шуларҙың береһе:

Темәс ҡалаһына нигеҙ һалыу һәм Темәстә 1 Майҙы Байрам итеү тураһындабашревком ағзаһы Ҡарамышовтың шаһәҙәтнамәһе. 1920 йылдың 3 майы, N640.

Темәскә мин 30 апрелдә килеп төштөм дә Байрам итеүҙең тәртибе менән шул көндә үк таныштым. 1 Май Байрамын һәм өмә үткәреү буйынса бөрйән-Түңгәүер кантревкомы тарафынан комиссия ойошторолғайны, Байрамды ул ошолай итеп үткәрергә ҡарарлаған: бөтә булған яуаплы эшмәкәрҙәр һәм хеҙмәткәрҙәр 1 Май көндө иртәнге сәғәт 9-ҙа ревком бинаһы эргәһендә йыйылырға, шунан һуң ҡаланың нигеҙ таштары һалынасаҡ урынға ҡарай йүнәлергә.

1 Май иртәһендә сәғәт 9-ға мин ревком бинаһы алдына килеп еткәндә, ҡыҙыл флагтар тотоп теҙелешеп торған күмәк ир-ат, ҡатын-ҡыҙ, *бала*-сағалар күрҙем. Гүзәлдәрҙән гүзәл һәм йылы яҙғы көн ине. Көллө әҙәм йәйге еңел кейемдә; һуңғы модалы европаса кейенгәндәре лә, үҙ милли кейемдәрендә килгән башҡорт ир-аты, ҡатын-ҡыҙҙары ла күп ине.

Халыҡ йыйылып бөткәс, кантревком рәйесе абдрахманов иптәш 1 Май Байрамының һәм өмәнең әһәмиәте хаҡында ҡыҫҡа ғына телмәр тотоп, ә башҡа телмәрселәргә һүҙ ҡалаға нигеҙ ташы һалыу урынында биреләсәген әйтте лә ыҫпай тәртиптә шунда табан йүнәлеүҙәрен үтенде.

Бына беренсе рәттәр көрәктәрен, һөймәндәрен, балталарын, кәйләләрен, сүкештәрен һәм башҡа кәрәк-яраҡтарын тотоп, бер-бер артлы ҡуҙғалды. Башҡалары ла ылыҡты. Халыҡ ағымының артында бөрйән-Түңгәүер кантон хәрби комиссариатының әтрәте оҙатып барҙы. Урыҫ һәм башҡорт телдәрендә ялҡынлы революция йырҙарын йырлай-йырлай атланы халыҡ. Темәстән сығып, ҡалҡыулыҡҡа артылғас, иҫ киткес күренеш асылды күҙ алдында. Уңдан, ҡуҫҡыл ҡыуаҡлыҡтар араһынан һыҙылып, боролоп-боролоп Һаҡмар йылғаһы аға. Шуны күргәс күңелемдә халҡымдың ошо ағын һыуға бәйле тарихи хәтирәләре яңырҙы бермә-бер.

Һаҡмарҙан һулдараҡ майҙаны бер дисәтинәләй ҡуҫҡыл ҡарағайлыҡ күренде. Уйһыулыҡтан шундай мөһәбәт ҡалҡынып, бөтә үҙәнгә гүзәллек, тормош бөркөлдөрә ине был ҡарағай урманы. Урманланып үҫкән ошо ҡарағай әрәмәлегенән һулдараҡ ҙур булмаған оҙон ҡырла һуҙыла, шуның тас түбәһендә, йәшел ҡарағай ылыҫтары менән биҙәп, иркен дә, бейек тә трибуна ҡоролған.

Трибуна эргәһендә һәм баяғы тәүге бинаға нигеҙ һалынаһы урында кешеләр мыжғый — әҙерлек эштәре башҡарыла. Йырлап килгән халыҡ ағымы трибунаға тиңәлеп, сирәмгә урынлашты. Саҡ ҡынабаш-күҙ алғас, митинг һәм тантаналы йөрөш етәксеһе Сәғитов иптәш митингыны асып, телмәр һөйләне. Уның артынан 1 Май өмәһе үткәреү комиссияһының рәйесе телмәр тотто, унан һуң мин һөйләнем. Телмәремдә мин 1 Майҙың бөтә донъя пролетариаты өсөн әһәмиәтенә ҡағылып, бөтә донъя

пролетариатының Байрамы көнөндә беренсе тапҡыр пролетариат баш ҡалаһы һалына, ә бөтә башҡа илдәрҙең дәүләттәрендәге баш ҡалалар электән үк һалынған булған, тинем. Беҙҙең Совет Башҡортостаны революция осоронда үҫте һәм шуның уҡ осоронда пролетариаттың донъялағы иң беренсе баш ҡалаһын да ҡора.

Телмәремдең аҙағын ошолай осланым: Башҡортостан совет Республикаһы өсөн һәм, ғөмүмән, Көнсығыш халыҡтары өсөн яҡты нур сәсеүсе булһын был ҡала.

Минән һуң Насиров һәм Мусин иптәштәр һөйләне. П. Педанов иптәш үҙе яҙған шиғырын уҡып ишеттерҙе. Йөкмәткеһе буйынса һоҡландырғыс был әҫәрҙе тулыһынса күсерәм:

К закладке города Темясово
(1 Мая 1920 года)

Как некогда,
Из тьмы лесов из топи блат
Возник и вырос Петроград,
Так ныне:
В горах Башкирии прелестной,
Здесь, в самом сердце сей страны
Заки Валидов, вождь известный,
Глядя сюда, с той крутизны,
Вот что стоящим с ним сказал:
“Вблизи рощи там сосновой, —
И на нее он указал, —
Заложен будет город новый.
В стране, доселе угнетенной,
Здесь, в колыбели их отцов,
Устроим центр мы просвещенный
Героев наших молодцов.
Тех, кои ги бли и страдали
За счастье родины своей
И так геройски умирали
От пуль культурных палачей.
И пусть узнают все народы,
Что самобытен наш народ,
Что добыл кровно он свободу,
Что к счастью он теперь идет.
Пусть будет здесь столица ваша
Краса среди Уральских гор,
У вас богатеть тут полна чаща,
Пускай они ласкают взор.
И приложив к богатствам руки
Свою культуру создадите;
В труде не будете знать муки,

Забвенью праздность предадите.
Былого рабства сбросив цепи,
Восстав от вековогосна,
Внесите жизнь в безлюдье степи.
Создайте лучшие времена.
И там, где шли гужом обозы,
Где раб башкирин там страдал,
Засвищут новые паровозы.
А там мы выстроим вокзал.
В горах подымутся работы
По изысканию руды
И не напрасны те заботы
И не напрасны те труды.
Пройдут года, десятилетья,
И расцветет наш юный град,
Забудем время лихолетья
И время горя и утрат.
И обретем в труде мы право
И обретем в труде покой,
И будет в этом наша слава
И лучшей жизни и лучший строй”.

П. Педанов.

Педанов иптәштең шиғыры көслө тәьҫир яһаны һәм тыңлаусылар ул ижадсыны “Ура!” ҡыскырып юғары сөйҙө. Шунан һуң Сәғитов һәм Новиков иптәштәр эш тәртибен төшөндөрөп, эш төркөмдәренә бүленергә бойорҙо. Ошонан һуң бөтәһе лә Темәс ҡалаһының тәүге бинаһы нигеҙләнәсәк урынға ҡарай ағылды. Нигеҙ өсөн соҡорҙоң беренсе көрәк тупраҡтары минең тарафтан һәм кантревком ағзалары тарафынан алынды.

Соҡор әҙер булғас, Башҡортостан совет Хөкүмәтенең вәкиле булараҡ, беренсе нигеҙ ташын да үҙем һалдым. Халыҡтың бер өлөшө тауҙан таш сығарыуҙа, икенсе бер өлөшө телеграф бағаналары ултыртыуҙа эшләне. Дөйөм тырышлыҡ һөҙөмтәһендә ҡаланың тәүге бинаһының 4 сажин оҙонлоҡ нигеҙ мөйөшө һалынған, 4 бағана араһына телеграф сымы һуҙылған, ике кубометр таш сығарылып өйөлгәйне. Эштән һуң халыҡ ялан иңенә һибелде. Буласаҡ ҡала майҙаны трибунанан ус төбөндәгеләй күренә ине. Буласаҡ ҡала урыны бөтөнләй үк тигеҙ түгел, әммә бер нисә кварталды һыйҙырырлыҡ тигеҙлектәре лә бар. Учреждениелар иһә ҡалҡыулыҡтың һыртында урынлашасаҡ.

Төҙөлөшкә ҡулай ерҙең майҙаны яҡынса 3-4 квадрат саҡрымдай. Артабан ул бөтә яғынан да тауҙар һәм Һаҡмар менән уратып алынған. Ҡарағай әрәмәлеген кисекмәҫтән кәртәләп ҡуйырға бойорҙом. Был гүзәл әрәмәлектең ағастарын, баҡһаң, Айытбай Ғөбәйҙуллин тигән берәү ултыртып ҡалдырған икән. Бөтәһе лә был ҡусҡыллыҡты ҡороласаҡ баш ҡаланың баҡсаһы итеп күрә. Мөһәбәт тә, күркәм дә әрәмә был, араһынан

аллеялар ҙа кәртәләр үткәреү кәрәк ни бары. Хатта бер генә сыбығын да ҡырҡмайынса эшләп була быларҙы...

Бөтә майҙан иңе аттар, кешеләр менән мыжғый. Алыҫ-алыҫтан ҡурай моңо һыҙыла, кемдер башҡорт йырын һуҙа талғын ғына. Йәндәребеҙ елкенә лә күңелдәребеҙ тулыша, башланған эштәрҙе аҙағынаса еткереү теләге дөрләй...

Кисләтеп кенә таралыштыҡ өйҙәргә. Кисен спектакль ҡуйылды, телмәрҙәр һөйләнде. Һәр кем йөҙөндә балҡыу шатлыҡ, ҡәнәғәтлек. Башҡортостандың баш ҡалаһы темәс йәшәһен! Пролетариаттың үҙ ҡулы менән нигеҙләгән беренсе пролетариат баш ҡалаһы йәшәһен! Башҡортостандың юл башсыһы Вәлидов иптәш йәшәһен!

Башҡортостан совет Хөкүмәтен Башҡортостан хеҙмәтсәндәренең ҡулы нигеҙләгән Башҡортостандың яңы баш ҡалаһы менән ҡотлайым!..

2 майҙа мин Кананикольскиға юлланғанда Темәстән алып Тәкәһуҡкан утарынаса юл буйы теҙеп һалынған телеграф бағаналарын күрҙем. Шуны күреп мин халҡыбыҙҙың берҙәмлеге, эшкә аңлы ҡарашы өсөн ҡыуандым. Халҡыбыҙ менән барыһын дабашҡарып булырына, мөмкин булмаған бер нәмә лә юҡлығына инандым. Бөтә донъя пролетариаты менән берлектәге хеҙмәтсән Башҡортостан йәшәһен!
Башревком ағзаһы **Ҡарамышов.**

Һәм бына Вәлидов хөкүмәте киткәндән һуң Мәскәү үҙе килтереп ҡуйған хөкүмәттең һалҡын ҡыраулы һулышы — дәүләт юғарылығындағы приговор:

БССР ЦИК-ы Президиумының 11 ноябрь 1920 йыл Эстәрлетамаҡ ҡалаһындағы ултырышының №40 Журналы.

Рәйес: **Мансырев** иптәш.

Президиум ағзалары: **Зудов, Лобов, Мостовенко, Ахлов, Бейешов.**

Сәркәтип: **Юзефович** иптәш.

Көн тәртибендә:

Темәстә хәрби ҡаласыҡ ҡороу тураһында.

Тыңланыҡ: Темәстә хәрби ҡаласыҡ ҡороу тураһында (Башҡортостан Хәрби Комиссариатының 2 ноябрь 1920 йылғы N02/2908 мөнәсәбәтнамәһе).

Ҡарар ҡылдыҡ: Темәстә ҡала ҡороу эштәрен юҡҡа сығарырға һәм бөтә әҙерләнгән материалды кантисполкомға тапшырырға.

Төп нөсхәгә ҡул ҡуйҙылар
Рәйес: **Мансырев.**
Ағзалар: (ҡултамғалар юҡ).
Сәркәтип: **Юзефович.**
Дөрөҫ: техник сәркәтип (ҡултамға уҡылмай).

Картаға ҡайырылып ҡарағыҙ: ҡайҙа беҙҙең шул ата-бабалар иң һыҙғанып ҡорабашлаған мөҡәддәс ҡалаларыбыҙ, юлдарыбыҙ, элемтә һыҙымдарыбыҙ?!. Халҡыбыҙҙың күкрәп сәскә атыр өсөн ләйсән көткән яҙғы яралғылары, бөрөләре генә ине бит улар... Дөрөҫ, "яҡты киләсәк" төҙөүҙең етмеш йыллыҡ дәүерендә бәғзе бер ҡала, салалар ҙа ҡоролдо, юлдар һәм элемтәләр ҙә үткәрелде, әммә улар халҡымдың хаҡ мәнфәғәттәренән сығып түгел, ә иң элек империя убырлығына буйһондоролоп башҡарылды.

Башҡортостандың яуыз халыҡ дошмандары итеп тамғаланған ысын халыҡ хөкүмәте халҡынан мәжбүри айырылып, тарихҡа кереп китә барғаны һайын, ураҡ-сүкеш таҡҡан Ҡыҙыл Байраҡлы яһил империяның "ваҡ халыҡтар" тип аталмыш аҫаба халыҡтарҙың күҙен суҡып изге өмөттәрен өҙөү, милләттәрҙе бөтөрөү буйынса донъяла тиңе булмаған тәжрибә полигонына, геноцидтың ояһына әйләндерелде Башҡортостан тупрағы. Шул 1920 йылдан 1926 йылғаса арауыҡта (йән иҫәбен алыубуйынса) ярты миллион башҡорттоң юҡҡа сыҡҡанлығын (ә бындағы өйҙәштәребеҙ урыҫ менән татар иһә, киреһенсә, ныҡ артҡан!), унан һуңғы йылдарҙа ла тағы ла ярты миллион башҡорттоң, геноцидтан ҡасып, Тәүтөйәгенән ситкә олаҡҡанлығын, һәм шул һәләкәтле хәлдең әлегәсә дауам ҡылғанлығын хәҙер инде бер кемдән дә йәшереү мөмкин түгел, уны инде ил белә. Хаҡиҡәттең ҡабат өҫкә сығыуы — өҙөлгән өмөттәребеҙҙең терелеүенә ишара.

25.02.1992.

Дим буйҙары — алтын диңгеҙ

Башҡортостанымдың һомғол күк иҙеле — Дим буйҙарын миңә йылдың төрлө миҙгелдәрендә күрергә тура килгәне бар. Ике яр һыҙатын ҡоймалаған ҡуҫҡыл туғайҙар, тулҡын-тулҡын артылышҡан ваҡ тауҙар, халҡымдың оҙон көйө һымаҡ офоҡтарҙан-офоҡтарғаса йәйрәп киткән икһеҙ-сикһеҙ сәхрәләр төрлө саҡта тәбиғәттең төрлө сағыу төҫтәренә мансыла, күҙҙәрҙең яуын ала. Әммә Кеше, бөйөк Кеше, ҡулы менән ер йөҙөнә яғылған тере буяуҙар йылдың-йыл әйләнәһенә тормошобоҙҙо биҙәп, илгә йәшәү ҡомары тиртеп ята. Шундай миҙгелдәрҙең береһе — баҫыуҙарҙа игендәрҙең баштары ергә һығылышып, туҡлыҡ гимнын йырлап ултырған ҡыҙыу ураҡ өҫтө — айырыуса күңелемә нурланып-һеңеп ҡалған...

Бөгөн инде иген баҫыуҙарын комбайндар таҡырлаған, алтын һаламдар бейек-бейек эҫкерттәргә өйөлгән, мул төшөмлө гәрәбәләй игендәр, бәрәкәт эркелдереп, Тыуған илдең бураларына һалынған. Әммә ерҙең билен муллыҡтан һығылдыртҡан алтын миҙгел әле лә күҙ алдымда: күк иҙелкәй туғайҙарының йәшел күлдәген һалып та өлгөрмәгән, һайрар ҡоштарының йырҙары ла тынмаған, ә Кеше инде ер йөҙөнә үҙенең ырыҫлы ҡулдарының яңы төҫөн биҙәк итеп баҫырға әҙерләнә. Уның изге

һулышынан күкрәгән Дим ҡырҙарында, башаҡтан-башаҡҡа Ҡояш нурҙарын сайпылдыртып, ерҙең алтын диңгеҙе тулҡынлана...

Ел ҡотора, ел тулай...

Эйе, тәбиғәттең һәр нәмәне хәрәкәткә килтереүсе, бөгөлмәҫтәй билдәрҙе лә бөгөлдөртөрлөк ҡөҙрәте лә киң шул ул.

Ел ҡотора, ел тулай...

Йырҙарҙа маҡталып йырланған наҙлы Дим буйҙарының бөҙрә таллы ял-яурынын ҡайыра ул ҡаты ел. Ҡарамалар ҡарыш олондарын һығылдырып тулғана, өйәңкеләр һәм аҡ тирәктәр, үңәстәрен өҙҙөртә яҙып, ҡарағусҡыл толомло мөһәбәт баштарын болғап шаулай. Ә ҡарт имән, араларында иң оло атай булып ярҙың текә битләүенә йәбешеп үҫкән алты ҡоласлыҡ имән, бөтә елдәрҙең, дауылдарҙың ҡоһорон үҙенә алғандай, муйынын да һелкетмәйенсә үрә баҫып ҡаты тора, фәҡәт япраҡтары ғына елде йыртып һыҙғыра.

Эйе, барыһы ла ергә йәбешеп тартыша, үҙ ғүмерҙәре өсөн алыша. Фәҡәт оло мәғәнәһендәге *Кеше* генә үҙенең бер урында тегелеп тормауы, ҡаршылыҡтарға ҡаршы барып ҡарышыуы менән айырыла. Шуға күрә лә уны, тәбиғәттең тажы, ерҙең хужаһы, тиҙәр. Фәҡәт Кеше генә ғәрәсәттең ҡулы бөккән һәр шыйыҡ тал, ояһынан йығылып төшкән һәр сибек ҡошҡай, өҙөлөп осҡан япраҡ менән ҡыяҡ өсөн борсола. Борсолоу ғына түгел, шулар өсөн уның йөрәге әрней, ерҙең һәр ая яраһына шифалы усын я баһы килеп һыҙлана. Шуның өсөн дә, *ерҙең улы*, тиҙәр уны.

Дим ярының текәһендә ел дөргөнөн урталай ярып уҡталып барған илле ете йәшлек ир-уҙаман — КПСС-тың Әлшәй район комитеты ағзаһы, “Правда” колхозының ырыҫлы рәйесе — бына ошо турала, моғайын уйлана. Ә мин иһә уны баяғы ер улы, ысын Кеше тип атайым. Был кешенең яҙмышы, ниңәлер, йәштән үк, тап әлеге Дим ағастарын ҡайырған һауа шарттарылай, ҡырыҫ һәм елле килде — ғүмере буйына тормош дауылын ярып барырға Насип итте. Ошо көндәрҙә Тыуған илебеҙҙә бөтә халыҡ ысын күңелдән ялҡынланып, хуплап ҡулына алған СССР Конституцияһы (Төп Законы)ндағы: “Социалистик Ватанды һаҡлау — СССР-ҙың һәр гражданының изге бурысы”, — тип билдәләнгән мөҡәтдәс юлдарҙы ул донъяла тиңе булмаған дәһшәтле алыштарҙа ҡулына ҡорал тотоп бойомға ашырҙы. Тыуған ауылы Никифар мәктәбендә етенсене тамамлағанда, ул, ергә тамырын тәрән ебәргән игенсе-ерекмән улы, моғайын, үҙенең тыуған ер-төйәгендә генә иген игеп, мал-тыуар үрсетеп, игелекле, тыныс, һил киләсәк тураһында хыялланғандыр. Һәр хәлдә, етенсене бөткәндән һуң 12 саҡрым ғына китеп, Аксен ауыл хужалығы техникумына кереүе, зоотехния ғилемен тырышып үҙләштереүе шул хаҡта һөйләй беҙгә. Ләкин ғилем алып сыҡҡан йәш белгес үҙенең Ватан алдында хәрби хеҙмәт бурысын үтәргә китә, хәрби хеҙмәтен тултырып ҡайтырға ла өлгөрмәй, 1941 йылдың июнендә көнбайышта афәт ҡуба, ҡыҙыл әрмис хөлләһе кейгән егетебеҙ утлы-дауыллы һуғыш яланынабарып керә, полк комсоргы була. Әллә нисәмә тапҡыр яраланып, әллә нисә орден һәм миҙалдар алып, ҡыҙыл әрмис булып башлаған

дауыллы юлын сәстәренә аҡ төшкән полк комиссары сифатында 1946 йылда ғына осларға тура килә уға.

Һуғыштан ҡайтыу менән уны ВЛКСМ-дың Әлшәй район комитетына инструктор итеп тәғәйенләйҙәр, күп тә үтмәй, булдыҡлы йәш фронтовикты шул уҡ комсомол райкомы секретаре итеп үрләтәләр һәм ике йылдан өлкә партия мәктәбенә уҡырға ебәрәләр. Шунан һуң ул, игенсе һәм ер яҙмышы өсөн елле-һынылышлы, иң яуаплы йылдарҙа партияның Мәсетле район комитетының зона буйынса секретаре, Йомағужа райкомының икенсе секретаре була, көнө-төнө ер яҙмышы өсөн янып көн итә. Уның яугир юлы һаман партияның иң авангард сафында илдең ауыл хужалығын оло юлға сығарыу өсөн барған көрәштең алғы һыҙығында, сөнки ул — Кеше, ул — ер улы, ул бөтәһе өсөн яуаплы. Ошо яуаплылыҡ тойғоһо, ҡаршы елде күкрәк менән ярыу сәме уҙаманды көндәрҙән бер көндө, 1959 йылда, йәнә көрәштең иң алғы һыҙығына — артта ҡалған хужалыҡҡа колхоз рәйесе итеп ҡайтарҙы...

Бөгөн уның ниңәлер йөрәге ярһыған, яңғыҙы ғына ҡалып йөрөргә теләгән мәле ине. Муйыл төҫлө ҡара-йылтыр "Волга"һын ул Дим ярына етер-етмәҫ үк кире бороп ебәрҙе, шоферына колхоздың ял йортондағы ҡымыҙ бешкән ергә барып әйләнергә бойорҙо. Сөнки бөгөн, эштәрҙе байҡағанда, ял йортонда ҡуна ятып (завод-фабрикаларҙың профилакторийҙары өлгөһөндә була инде!) эшләүсе механизаторҙарҙың "яңылыш" ҡына ысҡындырған бер килке һүҙе эленеп ҡалды рәйестең ҡолағына. "Иртәнсәк, ниңәлер, ҡымыҙ ҡырҡыуыраҡ булды", — тинеләр. Бына шуның сәбәбен белеп һәм тейешле сара күреп ҡайтырға тип юлландырҙы шоферын...

Колхоз һымаҡ ҡатмарлы оло хужалыҡтың бөтә ваҡлыҡтарына ла һәр даим кереп өлгөрөп булмай, бындай саҡта янындағы кешеләргә лә таяна белергә кәрәк. Ә машина йөрөтөүсе Рәйес тап ана шундайҙарҙың береһе: эшем — руль әйләндереү, шуның менән вәссәләм, тип тормай, тәрәнерәк баға донъяға. Ир-егеттең ҡанаты — ат, тигәндәй, яҡшы шофер ҙа етәксенең ышаныслы ҡанаты.

Ватан һуғышы ялҡындарын күкрәгенә сорнап уҙған ир уҙаманы, данлыҡлы "Правда" колхозының рәйесе Әхмәт Әхмәт улы Зиннәтуллин яр ҡаяһы ҡашағаһына ҡалҡына, сал бейеклектә ҡолаҡтарҙа гөжләгән һауа ағымының тығыҙлығынан кинәнеп, йылтыр ҡара йөн костюмының төймәләрен ысҡындырып ебәрә. Дыуамал ел уның ҡарҙай аҡ күлдәгенә ҡағылып, галстугын артҡа ҡайырып тулай, баяғы дәү имәндең ҡуҫҡыл япрағы кеүек ел берҙәтә. Ҡайһылыр бер мәл киҫәгендә уҙаманға ел гөжләүе ташып барған ҡотороҡ ҡымыҙ шыжлауылай ишетелә. Их, ҡырҡыулатырға ярамаҫ ине һаумалды, эшһөйәрҙәр йөрәгенә — Ҡояшлы дәрт, беләгенә көс эркеүсе баһадир эсемлекте!

...Ял йорто асылғандан биреле асылда шулай килә лә. Ата-бабаның өҙөлгән һөнәрен ҡабаттан тергеҙергә, өлкән быуын араһынан ҡымыҙсыларҙы эҙләп тә, һайлап та алырға тура килде. Матур тәбиғәт ҡосағында йылға буйында заманса уңайлы коттедждар, иркен ашхана һалынды, электрлаштырылған һәм механикалаштырылған ҡымыҙхана

төҙөлөп, яҡындараҡ махсус йылҡы аҙбары ипкә килтерелде. Шунан биреле йәйҙең йәмле айҙарында колхоздың ошо үҙ шифаханаһы эшләй, колхоз путевкаһы менәнбайтаҡ халыҡ тыуған ерҙең үҙендә үк ҡоростай ныҒыта һаулығын. Шуныһы ҡиммәт: уттай ҡыҙыу эш ваҡытында ла кешеләр, ерҙән айырылмайынса, ошо сихәт төйөгәнән файҙалана кинәнеп — ял йортонан йөрөп тә эшләй ала. Ә шундағы ашхана иһә бер үк ваҡытта колхоздың ҡыр эшендәге бөтә халҡын баҫыуҙа уҡ мул табын ҡороп һыйлаусы тукланыу төйәге лә булып тора — ашҡабында кешеләрҙе махсус машина килтерә, кәрәк яҡтарға аш-һыу термостарҙа ла оҙатыла. Әле бая ла Әхмәт Әхмәт улы табынға тура килде, тыуған ергә ҡот ҡундырыусы ауылдаштары араһында, берсә, уйнап-көлөп, берсә, ҡайһы бер эштәрҙең һүлпән барышы тураһында янып-көйөп ултырҙы... Шуныһы сихәт күңелгә: етәксенең тәрәнтен йөрәк тойғоларын да аңлай, үҙ итә колхозсылар, уның менән ҡуша һулыш алалар, утҡа-һыуға керергә лә әҙерҙәр. Ә был иһә етәкселәргә тейә торған бәхеттәрҙең дә бәхете!

Үҙен ҡанатлы итеп тойҙорткан ошо көстөң сығанаҡтарын барларға теләгәндәй, әхмәт Әхмәт улы табындаштарының йөҙҙәренә ҡараны ла аңланы: ябай кешеләр генә түгел, ә Ҡояштар араһында нурланып йәшәй икән дә ул, колхозының рәйесе!.. Бына уң яғында уның, Ҡояш уғылай шаян-шуҡ һүҙҙәр һибеп, колхоздың егәрле сөгөлдөрсөһө Вәлиев Марат Кәбир улы, ә һул яҡта, йөҙөнән нур балҡытып, йәшелсә үҫтереү оҫтаһы Кәримова Фәһимә Миңлеғол ҡыҙы ултыра. Үткән йылдың уңыштары өсөн уларҙың тәүгеһе рәйес менән бергә дәүләтебеҙҙең Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ орденын алды, икенсеһененең күкрәген "Почет билдәһе" йәйғорланы. Уларға яҡын урынлашҡан игенсе-механизатор Ризуанов Рәшит Зәки улы һәм Хафизов Рәшит Лотфрахман улы — III дәрәжә Хеҙмәт Даны ордендары, ә Иркәбаев Айтуған Хәйрулла улы "Өлгөлө хеҙмәт өсөн" миҙалы менән бүләкләнде. Ҡаршы яҡта алсаҡланып тел сарлашҡан һигеҙ һөнәрмән — тракторсылар Маликов Рим, Усманов Миҙхәт, шоферҙар Вәлиев Риф, Зиннәтуллин Найыл, сөгөлдөрсө Ғилмитдинова Хәйәт, һауынсы Миңъярова Фәһимә, бригадир Хафизов Рәмис, һарыҡ фермаһы мөдире Иркәбаев Фазулла — егәрле хеҙмәттәре өсөн басСР Верховный Советы Президиумының Почет грамоталары менән билдәләнделәр. Һәр береһе — тыуған ергә Ҡояш тамғаһын балҡытып һалыусылар былар, ысын Ҡояш табыны кешеләре!

Димгә йәнәш тау битләүендә арыштың тәүге яҫмаларын һалып өлгөргән комбайнерҙар һүҙ алды. Башаҡтар тос, яҫмалар ятымлы, әммә ерҙең Димгә төртөлгән башы ифрат соҡор-саҡыр — эшкә ныҡ ҡамасаулай, тинеләр. Тракторсылар иһә иптәштәренең тел төбөн шунда уҡ шәйләп тә алды — уларҙың һөрөү сифатына һуҡтырмаҡсылар түгелме?.. "Сәскәндән һуң баҫыуҙы үҙегеҙ ҡабул ҡылып алдығыҙ, өҫтәл кеүек шыма икән, тинегеҙ!" — булды яуаптары. Рәйес иһә сәкәшеүҙең сәмен тойомлап барғанда, көтөүселәр ҙә телгә килде, ул тау битен ямғыр һыуы йыуып соҡорланы, тине. Яуынлы йылдарҙа йырғанаҡланып, ҡоролоҡтан ел осороп ашай торған ҡыҙыл балсыҡлы баҫыу баштарын ғәрәсәттән нисек

ҡотҡарыу хаҡында бәхәс ҡупты, колхоҙ етәксеһенә лә төштө таяҡтың башы:

— Шул ҡыҙыл балсыҡҡа күпме тиреҫ ташыныҡ — түккән тирҙәребеҙ бушҡа сыға түгелме?.. Ундай мөйөш-һәйештәрҙе һөрмәһәк тә, әллә ни зыяны теймәҫ ине.

— Зыяны теймәҫ ине, әммә ергә файҙаһы ла булмаҫ ине, — тине рәйес. — Киреһенсә, күҙҙән ысҡынып ҡарауһыҙ ҡалған ер яҙмыш ҡулына тапшырылыр ҙа уғата йырғысланыр ине. Ә кешенең бурысы — тәүҙә ергә һәм шуның аша үҙенә файҙа килтереү.

— Фәҡир-фоҡор ерҙәрҙе эшкәртеү ейәндәребеҙгә ҡалһын, улар беҙгә ҡарағанда аҡыллыраҡ та, көслөрәк тә буласаҡ, — тине йор һүҙле береһе. Тик был шаяртыу Зиннәтуллинға әллә ни барып етмәне, әллә нескә күңел ҡылдарына сиртә алманы — түңәрәк күҙлек быялалары аҫтындағы ял быр ҡара ҡашлы уйсан күмер күҙҙәре ҡырыҫ һәм етди ине.

— Ләкин ерҙең шул беҙ юғалтҡан, фәҡир тип аталған бер күҙәнәк-тәпрағын ғына ла өр-яңынан хасил итеү өсөн етерме икән ейәндәрҙең ғүмере?! Быны өсөн, беләһегеҙ, Планетаға миллиард йылдарҙың ҡатлам-ҡатлам түшәлеүе кәрәк булған...

— Ни ҡылырға һуң?

— Ағас ултыртырға. Ер яраһына йәшел ямау һалырға. Юҡһа, ейәндәргә ышанып, дәү олон булып шауларҙай төҙ ағастарҙы харап оҫта ауҙара беләбеҙ бит...

Рәйестең уйҙары ҡабат баяғы ҡырҡыу ҡымыҙға ҡайта, ошо көндәрҙә ҡымыҙ яһаусы Гәрәйева Әсмә ханымдың һәм унан ата-бабаның сихәтле һөнәренә ылығырға беркетелгән йәш ҡыҙҙарҙың — һигеҙенсене тамамлап ҡына эшкә сыҡҡан тай-тулаҡтың — алсаҡ йөҙҙәре күҙ алдына килә уҙамандың. Әсмә ҡорҙашы, моғайын, дил бегәне йәш быуынға ваҡытынан элегерәк тапшырырға йыйынғандыр, ҡымыҙ һөнәренең серен асып еткермәгәндер... Әхмәт Әхмәт улы ошо тәңгәлдәге бер ирмәк хәлде иҫләп, күңелле йылмайып ҡуя. Һауын бейәләре араһында өс сирек һаумал бирә торған, йыуаш тәбиғәтле Ҡола бейә бар. Теләһә кемдән һауҙырта — имсәктәре татлы һут менән тулышҡан ҡамыш кеүек. Бына шул ғүмере оҙон булғыры малҡайҙың, ниңәлер, киреһе тотто ла ҡуйҙы бит бер көн: күнәк тибеп донъя ҡуптара, ҡыҙҙарҙы хафаға һала. Шул саҡ бер ағай иркәләп ялынан һыйпағас, арҡаһынан һөйөп кенә өндәшкәс, ҡолаҡтарын шырт һындырған ҡола бейә майҙай ирене лә китте, гөбөрҙәтеп эйә башланы һөтөн. Бына шунан был донъяның иң оло сере аңлашылды: һәр кемгә лә йөрәк йылыһы кәрәк. Бына шуны һәр беребеҙ белергә, ә йәш быуын йәштән үк яҡшы аңлап үҫергә тейеш.

Әҙәм балаһының күңеле ифрат сәйер ҙә инде: оло эштәр хаҡына көнө-төнө янып-көйөп йөрөгән колхоз етәксеһе, әйтерһең, бөгөнгө мәл шунан да ҙурыраҡ ғәмдәре булмағандай, уйҙары менән әйләнә лә баяғы ҡымыҙға ҡайта. Ә бит һөтсөлөк тармағының бер тамсыһы ғына был, уйлай-уйлай баш ватырға колхоздың өс МТФ-һында мөһимерәк эштәр ҙә бар! Әйтәйек, шуларҙы замандың фәнни-техник революция талаптарына тулы яуап бирерлек, сәғәт механизмы кеүек эшләп торорлоҡ итеп

йыһазландырырға, тоҡомсолоҡ эшен яйға һалырға, шуларға бәйле бөтә малсылыҡ тармағын да үҙгәртеп ҡорорға кәрәк. Бының өсөн капиталь төҙөлөш, юғары әҙерлекле кадрҙар, ғөмүмән, бөтә мәсьәләләргә өр-яңы ҡараш талап ителәсәк. Дөрөҫ, ошо көндә лә колхоз һауынсылары алдынғыларҙан бара районда. Ә Никифарҙағы 3-өнсө ферма һауынсылары район буйынсы икенсе урында тора. Балғажы һәм айҙағол ауылдарында ла һауынсылар һыр бирмәй. Наси буллина Кинйәбикә, Миңъярова Миңлекамал, Хәсәнова Хәмиҙә кеүек тырыш ҡуллылар арҡаһында бит колхоз һөт буйынса ла үҙенең ярты йыллыҡ планын тәүге биш айҙа уҡ арттырып үтәне, алынған шул ырамлы темп йылдың икенсе яртыһында уғата үҫтерелде. Әлбиттә, район йөҙөнә лә күркен өҫтәгән, күҙгә күренеп торған уңыштар былар. Ләкин яуланғандар менән генә ҡәнәғәтләнеп ҡалмаҫҡа, алға ҡарарға, замандан бер аҙым алғабарырға өйрәтә тормош. Әгәр шулай булмаһа, бөгөнгө темп ҡоло булып ҡалырға ла мөмкин бит.

Туҡта, ошо юғары замандыҡлы проблемалар араһына ниңә иң боронғо һөнәр, ҡайберәүҙәрҙең уйлауынса, архаик һөнәр яҙмышы ла килеп ҡыҫыла әле?.. Ата-баба бейәне бынан меңәр йылдар элек ҡул менән нисек һауған булһа, бөгөн дә ул шулай дауам итә һәм бынан һуң да шулай дауам итәсәк бит. Моғайын, фәнни-техник революция шауҡымы ла бейә еленен ҡулдарҙан айырмаясаҡ. Ә уны ҡулдан айырырға кәрәкме икән һуң әле? Бейә елене, бәлки, беҙҙе тереклек һәм ер менән туранан-тура бәйләүсе һәм өҙмәүсе иң боронғо ептәрҙең береһелер, уны шул тәбиғи көйөнсә ҡурсалап һаҡлап ҡалдырыу үҙебеҙгә һис бер алтындар һәм һумдар менән иҫәпләнмәҫлек саф табышты бирәлер?.. Эйе, шундай уйҙар ҙа килә рәйес башына. Ҡауырһыны ла ҡатмаған йәш-елкенсәкте бейә һауырға ҡушыу, моғайын, ҡайберәүҙәргә сәйер ҙә күренгәндер. "Хәҙерге тай-тулаҡтың юлдары башҡа: баштары ситкә — ҡалаға тартып тора", — тип тә әйтеүселәр булды. Ләкин Әхмәт Әхмәт улы шуға ныҡлы ышана: Байтаҡтарҙың башы ситкә тартылыуҙы тыуған ерҙең тартыу көсө еңәсәк, әгәр ваҡытында уҡ хәстәрләһәк. Быға фәҡәт ваҡыт ҡына бирегеҙ, кешеләрҙең тыумыштан уҡ тыуған тупраҡҡа һуҙылыусы ҡылдай нескә тамырҙарын күрергә лә үҫтерергә, ашларға өйрәнегеҙ.

Әлбиттә, һуңғы йылдарҙа хужалыҡ экономикаһының күҙгә күренеп үҫеүе, был көрләктөң кешеләрҙең өйҙәренә лә эркелеүе, йөҙҙәрен дә көләсләтеүе — Баяғы нескә тамрҙарҙы нығытыусы көс булды, "Правда" колхозын бөтә Әлшәй районына емелдәгән йәйғор дуғаһына күтәрҙе: хужалыҡтың һәммә күрһәткестәре лә дөйөм район күрһәткестәренән бер башҡа юғарыраҡ. 1975-енсе үтә ҡоролоҡло йылда ла колхоз үҙенең төп-нигеҙен ҡаҡшатманы, ә былтыр һәммә өс тармаҡ — игенселек, малсылыҡ, йәшелсәселек — буйынса ла йыллыҡ пландарҙы ғына түгел, ә юғары социалистик йөкләмәләрен дә арттырып үтәп сыҡты. Быйылғы аҙымдар уғата ырамлыраҡ: баҫыуҙарҙа гөрләп уңыш өлгөрҙө, малсылыҡ ниғмәттәре һатыу планы буйынса ла алынған социалистик йөкләмәләр ярты йыллыҡта арттырылып үтәлеп, райондың күсмә Ҡыҙыл Байрағы яуланды. Колхоз көллө тармаҡтар буйынса ла үҙенең йыллыҡ йөкләмәләрен бөйөк Октябрь революцияһының 60 йыллығынбайрам иткән көндәргә тиклем үк

шаҡтай арттырып үтәү юлында тора, шуның хаҡына һыҙғанып эш башҡарыла.

Эш кешеһе бирелеп китеп эшләй ҙә, аҡсаһын да ала көрәп. “Правда”ла механизаторҙар уртаса — 7,39; шофер — 7,30; һауынсы — 5,72; мал бағыусы — 5,37; ә һарыҡ көтөүселәр 6,74 һум көндәлек эш хаҡы ала. Хужалыҡтың дөйөм рентабеллеге, үҙған йылдың күрһәткестәренә ҡарағанда, 78,1 процент тәшкил итә.

Бөгөнгө совет кешеһенең килемдәре, әлбиттә, уның ҡулына туранан-тура килеп ингән һумдарҙа ғына түгел. Уның шаҡтай мул өлөшөн шәхси бураларға һыймаған, дөйөм йәмәғәт файҙаланыуындағы байлыҡтар кәүҙәләндерә. Бөгөнгө “Правда” колхозының ағзаһы, мәҫәлән, тирмән эҙләп ситкә сығып йөрөмәй — юғары сортлы синкә онон үҙҙәренең ауылында тарттыра. Кәрәк-ярағын заманса йыһазландырылған магазиндан барып ала. Ҡаланыҡынан кәм булмаған аптека уны һәр төрлө сырхауҙарҙан ҡурсалай. Балаларын типовой проект буйынса һалынған урта мәктәптә уҡыта, кескәйҙәрен йыл әйләнәһенә йәслегә бирә ала, ә буш ваҡытта матурлығы һәм архетектура ҡоролошо яғынан районда иң шәптәрҙән һаналған культура һарайында кинәнеп зауыҡлана. Ситтән килгән ҡунаҡтарҙы ҡаласа юғары культуралы ҡунаҡхана, ашхана, почта, ауыл Советы һәм колхоз идараһы биналары ишектәрен киң асып ҡаршылай. Быларҙың береһе лә күктән төшмәгән, ә колхозсыларҙың үҙҙәренең хәләл күкрәк көсө менән ишәйтелмеш колхоз аҡсаһына ҡоролған. Беҙҙә дәүләт Конституцияһына халыҡ мәнфәғәттәрен күҙәтеп яҙылған алтын һүҙҙәрҙең һәр хәрефе шулай игелекле эштәр, ҡаҙаныштар, дөйөм байлыҡтар менән тәьмин ителә. Бына шуларбарыһы бергә кешенең тамырын ергә, Тыуған илгә ныығыраҡ беркетеп-тоташтырыусы көстәрҙең үҙәге булып тора. Ләкин ерҙең йәш быуынын ауылдан ситкә тибәреүсе көстөң барлығын да онотмаҫҡа кәрәк. Әлбиттә, был тәңгәлдә хәл итеп бөтмәгән мәсьәләләр, ҡыйынлыҡтарбар әле, улар төрлө урындарҙа төрлөсә. Әйтәйек, “Правда” колхозында егеттәрҙең күбеһе ауылда ҡала, армияға киткәндәре лә кире әйләнеп ҡайта. Зарланып булмай ул яҡтан. Ә бына ҡыҙҙар мәсьәләһенә килгәндә... еткән бере ҡул аҫтынан һыпырылып сығырға, ҡанат килеп ҡалаға осорға ғына тора һымаҡ. Ни өсөн? Сөнки егеттәр техникаға ултыра ла бүрәнәнең еңел башынан тота, ә ауыр башы ҡыҙҙар иңенә төшә. Ҡыҫҡаһы, был хужалыҡта ошо көнгәсә башлыса ҡатын-ҡыҙ башҡарған һауынсы һәм сөгөлдөрсө һөнәрҙәре тулыһынса механикалаштырылып етмәгәндәрҙән һаналып килә... Һауын эшен яйға һалырға, *баягы*са, эре комплекстар төҙөү, сменалы хеҙмәткә күсеү кәрәк; ә сөгөлдөр мәсьәләһен ергә-һыуға зыянлыҡһыҙ гер бицид һәм бактеридтарға эйә булыу менән бергә һыңар шытымлы орлоҡ сәсеү нигеҙендә механизмдарҙы киң ҡулланыуҙы юлға һалыу ыңғай хәл итәсәк. Был йәһәттән Әхмәт Әхмәт улының ышансы ҙур: әгәр ергә иғтибарҙы, уны бағып-тәрбиәләү культураһын яңынан бер баҫҡысҡа ғына күтәргәндә лә, ҡул эштәренең байтағы үҙенең әһәмиәтен юғалтасаҡ, ауыл кешеһе еңелерәк һулаясаҡ... Ә хәҙергә иң мөһиме, ғәзизерәге — кешенең үҙенең эске күңел ҡылдарының тыуған ерҙең ҡусҡыл ҡыяҡтары менән ҡуша

яңғырашында, моңдаш булыуында. Баяғы бейә һауыусы йәш ҡыҙҙарҙың да ҡайберҙәре, бәлки, ергә йөрәге менән тартылып тороп ҡалыр, ата-баба еренә ҡот килтерер. Ҡайберҙәре, бәлки, төптән ҡупҡан ҡамғаҡ кеүек тәгәрләп сығып китер. Әммә Әхмәт Әхмәт улының шуға иманы камил: тәбиғәттең ҡамыш имсәкле бейә еленен тартҡан йәнде, Ҡола бейәнең арҡаһынан һыпырып-һөйөп серләшергә өйрәнгән йәш күңелде, ҡайҙа ғынабарһа ла, тормош юшҡыны юшамаҫ, тупаҫлыҡ туты ашамаҫ. Сит яҡтарҙың ожмах мөйөштәрендә лә ул таң һарыһы ҡыйылып килгән изге, сихри минуттарҙа ҡайҙалыр офоҡ ситенә күмелгән тыуған ерҙең сәскәле көтөүлектәрен, һомғол йылҡы муйынына тағылған баҡыр бутыл ҡыңғылдауҙарын, һөлөк кеүек ҡолонсаҡтың күккә кирелеп кешнәүҙәрен ишетеп һиҫкәнеп уяныр... Юҡ, ҡорғаҡһытырға ярамай ергә һуҙылыр саф тамырҙарҙы! Дәү имәндең олпатлығы нескә тамыр остарына таяна.

Тамырҙар... Ошо хаҡта уйлағанда Әхмәт Әхмәт улы үҙенең фронт йылдарын һәм юлдарын иҫкә төшөрә. Ленин Октябре үҫтергән совет кешеһенең Тыуған илгә береккән тәрән тамырҙарының ныҡлығы бына ошо дәһшәтле яуҙа һыналды. Фашизмдың утлы йәҙрәләре ер ҡыртышын көйҙөргәндә лә, тамырҙар көймәй ҡалды, һәр һалдаттың Берлинғаса аҙымында табандары тыуған ерҙең тере һулышын тойҙо. Шинель кейгән һәр игенсе бураҙнаға ҡайтырға, кире ҡабат ерҙең улы, хужаһы булырға хыялланды.

Һуғыштан һуңғы йылдар...

Партияның Мәсетле район комитетында эшләгәндә, урман диләнкәләренең береһендә Зиннәтуллин үҙенең ауылдаштарына — "ер улдары"На тап була. Аҙып-туҙып сығып киткәндәр, ағас ҡырҡып, бура бурап, ҡыҙырып йөрөп көн итеүгә күскәндәр. Тыуған ауыл тураһында һорашҡанда күҙҙәрен йәшерәләр. Әхмәт Әхмәт улы шуларҙың ҡулдарына ҡараны ла йөрәге "жыу!" итеп китте, эс-бауыры өҙөлдө: береһендә лә тыуған тупраҡтың төҫө юҡ. Игенсе үҙенең бөйөк һөнәренән ваз кискән, ер улы булыуҙан туҡтаған. Хәйер, тип уйланы буласаҡ рәйес, ерҙең улы булыу ғына кешене игенсе итәме икән әле?! Юҡ, игенсе тип аталыу өсөн ерҙең улы булыу ғына етмәйҙер...

Никифарҙың бөлгөнлөккә төшөүен, колхоздың һис кенә лә йәлсей алмауын Зиннәтуллин ишетеп белә ине. Шул йылдарҙа партия Үҙәк Комитетының атаҡлы сентябрь пленумы булып үтте, ул күптәрҙең йөҙөн ауылға борҙо. Оҙаҡламай Йомағужа районына икенсе секретарь итеп күсерелеп, ауыл хужалығы менән етәкселек итеүҙә бай тәжрибә туплағас, әхмәт Әхмәт улы үҙенең белемдәрен урындағы тәғәйен эштә ҡулланып ҡарау теләге менән ҡомарланды. Һөҙөмтәлә 1959 йылда партияның өлкә комитетына хат яҙыла ла шунда уҡ ыңғай яуап алына — Зиннәтуллин тыуған еренә ҡайта. Фронттағыса, кирза итектәр кейелә, хеҙмәт фронтында еңеү өсөн ныҡышмалы яу көндәре башлана...

Колхозды ҡабул итеп алғанда, баҫыуҙарҙа бер нисә йөҙ гектар бойҙай, 50 гектар сөгөлдөр, емерек кәртә-ҡураларҙа бер нисә йөҙ баш эре мал була. Ураҡтың ҡыҙған мәле, әммә эшләр кеше юҡ. Ир-аттың күбеһе кәсеп эҙләп ситкә сығып киткән, бала-саға, ҡатын-ҡыҙ ғына ҡалған. Тик

улар ҙа колхоз эшенән ялтайыу яғын ғына ҡарай, сөнки колхоз күп йылдар буйына хеҙмәт көнөнә түләмәгән. Бына ошонда колхоз етәксеһе тағы ла бер хаҡиҡәткә төшөндө: ер хужаһы булыу ғына ла игенсе булыу түгел... Кешеләрҙең ышанысын юғалтыу — донъялағы иң ҙур һәләкәт икәнен дә көллө тән күҙәнәктәренә үткәҙгәнсә аңланы рәйес. Шул юғалтылған ышанысты ҡабат яулап алырға, хужалыҡты һуғышсан бер көскә уҡмаштырырға кәрәк ине. Әхмәт Әхмәт улы дөйөм йыйылышта ил алдына сығып баҫты. Ул сәхнәнең уртаһында тамыры ергә ерегеп батҡан имәндәй тора ине.

— Бына күрегеҙ, — тине ул, ике ҡулын юғары күтәреп, — был бәрәкәт һеҙҙә лә бар. Өҫтөмдәге кейемем — һеҙҙекенән артыҡ түгел. Тап һеҙҙеке кеүек үк, һалам менән япҡан атай нигеҙенә ҡайттым. Өйөмә кереп ҡарағыҙ: ундағы мөлкәт-ҡаралтылар ҙа һеҙҙекеләрҙән бер иле ле айырылмай. Ә киләсәк байлыҡтар — беҙҙең үҙебеҙҙә, бына ошо ҡулдарҙа. Бөтәгеҙгә ышандырып әйтә алам: киләсәктә лә минең кейемем дә, өйөм дә, йөҙөм дә айырылмаҫ һеҙҙекенән, үҙгәрһә лә, һеҙҙеке менән ҡуша ғына үҙгәрер. Ошоноң өсөн мин бөтә көсөмдө, аҡылымды, ғүмеремде бирер эшләргә әҙер. Бер төптән егелеп тартайыҡ!

Зал гөж килеп ҡайнашты, көллө күҙҙәр рәйескә төбәлде.

— Ҡоро ҡалаҡ ауыҙ йырта — бөгөнгөһө ҡиммәт беҙгә!

— Тураһын ярып һал, рәйес: игенде йыйып алғас, хеҙмәт көнөнә нисәшәр грамдан бирәһең? — тигән ауаздар ишетелде. Әхмәт Әхмәт улы был хаҡта ҡырҙағы игендәрҙе байҡап сыҡҡас та уйланғайны.

— Иң кәмендә яртышар килонан, — тине ул, түңәрәк быялалы күҙлеген кейҙе. — Әгәр ошо вәғәҙәмдә тормаһам... — ул һүҙен әйтеп бөтөрмәһә лә аңлашылды. — Ә хәҙер — беребеҙ ҙә ҡалмайынса ураҡҡа, кемдең кем икәнен баҫыуҙа һынашабыҙ!

Рәйес ошо әйткән һүҙендә торҙо — шул йылда уҡ хеҙмәт көнөнә 800 грамм иген, 17-шәр тин аҡса тейҙе. Һуңғыһы, хәҙергеләр менән сағыштырғанда, әҙ генә һымаҡ тойолһа ла, ул йылдарҙа күрелмәгән хәл ине. Шунан почтальон ҡапыл ғына ауылдың хат яҙырға һалышыуын, ауылға ла өҙлөкһөҙ хат яуыуын хәбәр итте — хужабикәләр үҙҙәренең кәсеп эҙләп сығып киткән "шабашник"тарына колхоздағы яңылыҡты белдерә, тиҙерәк кире әйләнеп ҡайтырға саҡыра. Ә Әхмәт Әхмәт улы иһә был ваҡытта нисек итеп игендәрҙең уңышын күтәрергә, малсылыҡтан күберәк файҙа алырға, һөҙөмтәлә колхозсыларға ҡалалағылай уҡ ай һайын эш хаҡы түләп барырға, тип баш вата, ярҙам юллап район һәм өлкә юлдарын гиҙә ине.

Ләкин "шабашник"лыҡ тамырын өҙөү еңел булманы. 1961 йылда мәсьәләне туранан-тура ҡуйҙы халыҡ алдына: игелекһеҙ әрәм тамаҡтарҙы, үҙәктәренә үткәҙеп, аҡылға ултыртырға. Был, әлбиттә, һуңғы сиккә терәлеүҙең билдәһе, тик ул ваҡытта шунһыҙ мөмкин дә түгел ине — быны көллө колхозсылар аңланы. Тик тәғәйен кемде төртөп күрһәтергә? Ҡайһы бармаҡты тешләһәң дә ауырта... Рәйес тәүҙә үк кейәү тейешле кешеһенең исемен атап яҙҙырты... Һуңынан был әҙәмдәр ҙә язаның ғәҙеллеген аңланылар, кире әйләнеп ҡайттылар, колхоздың егәрлеләренә

әүерелделәр. Әммә колхоз рәйесенең һуғыш уты ҡыраулатҡан һумала төҫлө сәстәрендә тағы ла бер юйылмаçлыҡ аҡ ҡалды...

Рәйес булып эшләй башлауға йыл тулғанда ғына ил өҫтөнә көтөлмәгән оло ҡаза ябырылды — Балғажы ауылында, йәшен атып, колхоздың һарыҡ фермаһы янып китте, ҡара көҙҙән малдар яланда ҡалды. Аҡса юҡ, ағас юҡ, шифер юҡ... Ошо ауыр көндәрҙә рәйес “әҙәм ҡулынан килмәçлек”те эшләне — дефицит төҙөлөш материалдары табылды. Колхозсылар бер төптән ҡубып сығып, ике айҙа һарыҡ фермаһын ҡабат торғоҙҙолар — кемдең кнем икәне шулай һыналды.

Алдағы йылда бесән өсөн дау ҡупты. Колхозсының яңғыҙ һыйырына ҡышлыҡ бесән әҙерләү — оҙаҡ йылдар буйынса ер кешеһенең иң ауыртҡан урыны булып килде. Сөнки уның йорт хужалығына, колхозсы үҙе ижтимағи хеҙмәт кешеһе булыуға ҡарамаçтан, “шәхси” ҡушаматы тағылған. Бер ҡайҙа ла шәхси һыйырҙы дөйөм планда бесән менән тәьмин итеү бурыс итеп ҡуйылмаған. Һәр кем бында үҙе белгәнсә “йөҙә”, төрлө этлектәргә бара, ә колхоздың “бирәм” тигән бер һүҙенә лә ышанмай. Сөнки был мәсьәлә электән үк бик тайғаҡ булып килгән.

Яңы рәйес ауыл кешеһенең мал-тыуарһыҙ ергә йәбешеп йәшәй алмауын белде. Хәҙерге заманда был, әлбиттә, проблема булыуҙан туҡтай, ер кешеһе үҙенең йортондағы ярҙамсы хужалыҡтың да дәүләтебеҙ әһәмиәтендәге мөһим сығанаҡтарҙың береһе икәнлеген төп Закондың хәрефтәрендә күрҙе. Әммә уҙып киткән ауыр йылдарҙа был күптәргә аңлашылып етмәй, ыңғай ҡаралмай ине әле. Зиннәтуллин, районда беренсе тәжрибә өлгөһө күрһәтеп, башына бәләләр ала-ала, күнегелгән инерцияны еңде — колхозға бесән сапҡанда уҡ колхозсыларҙың үҙҙәренә лә арыу ғына са бынлыҡтар бүлеп ҡалдырабашланы. Улар дөйөм хужалыҡтың бесәне менән бер ҡатарҙан са былып, колхозсыларҙың үҙҙәре һайлаған комиссия тарафынан төркөмдәргә бирелә, ә улар үҙ-ара бүлешеп ала ине. Был иһә колхоз эштәрен ҡыҙыулатты, дәрт өҫтәне. Халыҡ шулай уҡ тәүге йылдарҙан уҡ һаламдың ҡәҙерен белергә лә өйрәнде: рәйес колхозсыларын бер саҡ Украинала үҙе күреп һоҡланған һомғол һалам эçкерттәрен ҡойоу оçталығына өйрәнергә юлландырҙы. Шунан биреле йылдың-йылына һуғылған бер һалам шыплап бейек эçкерттәргә һалынды, бөртөгө лә яндырылып йә серетеп әрәм ителмәне. “Арыш һаламы алты йылдан алтын була” тигән халыҡ аҡылы үҙенең дөрөçлөгөн аҡланы: 1975 йылғы ҡоролоҡтабашҡалар Украина яландарын һалам эҙләп ҡыҙырғанда “Правда” колхозының үҙенең әллә нисә йылға етерлек һаламы бар ине... Күршеләргә лә өләшелде, колхозсыларҙың мал-тыуары ла асыҡмай ҡышлап сыҡты. Ауыл халҡының ихтыяждарын ҡәнәғәтләндергән был ысулдар бөгөнгәсә был яҡтарҙа үҙен аҡлай, ул партияның, хөкүмәтебеҙҙең халыҡ ҡулындағы ярҙамсы йорт хужалығына ла йәмәғәт фондынан матди ярҙам күрһәтеү тураһында һуңғы йылдарҙағы ҡайғыртыусан хәстәрлегенә йәрәшә.

1964 — колхоз өсөн һынылыш йылы булды. Игенселек, йәшелсәселек тармаҡтары бығаса булмаған уңыш бирҙе, ә сөгөлдөр, колхоз тарихында тәүге тапҡыр, гектарынан 300 центнер алынды. Ошо

йылда колхоз тулыһынСабурыстарынан арынды, ныҡлап аяҡкабаçты, ә етәксенең күкрәгендә хәрби бүләктәр эргәһендә Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ ордены балҡыны. Әхмәт Әхмәт улы һуңынан да үҙенең намыçлы хеҙмәте өсөн ордендар һәм миҙалдар, шул иçәптән Ленин ордены ла аласаҡ. Колхозға иһә күркәм уңыштары өсөн РСФСР, СССР күләмендәге күсмә Ҡыҙыл Байраҡтар, ҡиммәтле бүләктәр тапшырыласаҡ, Ленин юбилейы һәм СССР-ҙың 50 йыллығы хөрмәтенә Почет грамоталары биреләсәк, хужалыҡтың исеме Мәскәүҙәге Халыҡ Хужалығы Ҡаҙаныштары Күргәҙмәһендә нурланасаҡ, шулар менән рәйес хаҡлы ғорурланасаҡ. Әммә баяғы һынылыш йылында алынған тәүге бүләк — Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ ордены — рәйестең тынғыһыҙ ғүмерендәге иң яҡты, ҡыуаныслы көндәрҙең береһенең сағыу символы, яуланасаҡ уңыштарҙың маяғы булып ҡала. Тап шул орден менән бергә үҙенең яҙмышынан, һайлап алған тормош юлының иң дөрөç һәм изге юл булыуына инаныуҙан оло ҡәнәғәтлек тойғоһо ла килде һәм был тойғо ошо көнгәсә алға талпындырҙы уны.

Был урында, саҡ ҡына туҡталып, уҡыусының иғтибарын үҙебеҙҙең һулар һауа, эсәр һыу кеүек күнегелгән, шуға күрә күҙгә әллә ни салынып табармаған, ләкин беҙҙең һәр беребеҙҙе илһамланып йәшәргә, үҙен ерҙең ысын кешеһе, тулы хоҡуҡлы гражданы итеп тойорға ярҙам иткән ололарҙан да оло ла, хаҡлы ла аҡ бәхетебеҙгә йүнәлтке килә. Ошо юлдарҙы яҙғанда ла ята минең алда офоҡтарҙай киң асылып Бәхетебеҙҙең Төп Кенәгәһе — СССР Конституцияһы. Ундағы һүнмәç нурлы хәрефтәр менән һыҙатланған: "СССР граждандарының хеҙмәткә хоҡуғы, йәғни үҙенең булдыҡлылығына һәм һәләтлелегенә, профессиональ әҙерлегенә, белеменә ярашлы рәүештә һәм йәмәғәт ихтыяждарын иçәпкә алып, профессия, шөғөл һәм эш төрө һайлауға хоҡуғын индереп, хеҙмәттең күләменә һәм сифатына ярашлы рәүештә түләнә торған гарантияланған эш алырға хоҡуғы бар", — тигән юлдарҙы, миңә ҡалһа, ғүмерҙә лә уҡып туймаçмын кеүек. Совет илендә беҙҙең һәр беребеҙ ошо изге хаҡиҡәттең тайпылышһыҙ тормошҡа ашырылыуының һынланышы була ала, ләкин мин шуның сағыу миçалы итеп беренсе сиратта үҙ эше менән сикһеҙ бәхетле Әхмәт Әхмәт улы Зиннәтуллин кеүек кешеләрҙе атап күрһәтер инем. Рәйес үҙенең йондоҙло сәғәттәрен янындағы яҡын ярҙамсылары, барлыҡ колхозсылары менән бергә яулап ала белде, *бар*лыҡ ҡыуаныстарын да уртаға һалып кисерҙе.

Ғөмүмән, был рәйес кешеләрҙең күңел ҡылдарының сыңлауын камертондай нескә тоя алыуы менән бәхетле. Колхоз әгәр өҙәрем юлдан бөгөнгө оло, түтә юлға күкрәк кереп сыҡкан икән, рәйес-уҙаман кешеләргә яңылыш таянмаған, таянған ерендә үҙе һымаҡ уҡ ҡаты билле имәндәр үçтерә алған. Кем һуң уның таяныстары, ҡаты билле имәндәре? Бөтә колхоз, бөтә халыҡ, тип әйтеүе, әлбиттә, дөрөçөрәк. Сөнки ҡола яланда ағас үçмәй, үçһә лә, яңғыҙ ағас ергә ҡот килтермәй. Дәү имәндең тирә-яғында, кәм тигәндә, күләгәһен ҡаплатырлыҡ йәш туйралар терәлеп үçергә тейеш. Шунда ғына дауылдарға бирешмәй мыҡты олон. Әхмәт Әхмәт улының ошо таяныс олондары — уның бригадирҙары. Ул уларҙың

һәр береһен бураҙнала табып алып, үҙе тәрбиәләп үҫтергән. Урта звено әгәр дөрөҫ эшләмәһә, юғарынан төшөрөлгән иң эшлекле бойороҡтар ҙа, түбәндән үрккән иң игелекле ынтылыштар ҙа, орлоҡ булып уңдырышлы ергә күмелә алмай, ярты юлда сәсәп-тонсоғоп ҡала.

Шулай уҡ башҡа етәкселәр ҙә Зиннәтуллиндың күҙе алдында, ҡулы аҫтында ҡурпыған. Баш механик Найыл Вәлиев — элекке тракторист, шофер; рәйес кәңәше менән ул юғарыраҡ ынтылды — ситтән тороп техникум тамамланы. Партком секретаре азат ғәниевтың да хеҙмәт юлы шуға бик оҡшаш: шофер, бер үк ваҡытта техникум студенты; трактор бригадаһы бригадиры, бер үк ваҡытта Өфө ауыл хужалығы институты студенты. Бынан ике йыл элек үҙен коммунистар колхоздың партия ойошмаһы етәксеһе итеп һайлайҙар. Элекке шофер Рәүеф Ғәбитов та ете йыл буйына “газиг”ында колхоз рәйесен йөрөтә, шунан һуң уҙған һайлауҙарҙа ауылдаштары тарафынан Никифар ауыл Советының рәйесе итеп һайлап ҡуйыла...

“Правда” колхозы идараһына ингән кеше ундағы тышҡы һәм эске күркәмлекте, бөхтәлекте, тәрән эске культураны күреп бик яғымлы тойғо кисерә. Ҡаласа йыһазландырылған бина үҙе үк паклыҡҡа, әҙәплелеккә, ә ундағы яҡты йөҙлө кешеләр — алсаҡлыҡҡа, эскерһеҙлеккә өндәп тора кеүек. Замананың тәмәке тигән шаҡшы төтөн ыҫынан был бинаның тулыһынса азат булыуы — үҙе генә лә бындағы халыҡ әхләгенең тәрән ыңғай үҙгәрештәр кисереүе хаҡында һөйләй.

Рәйес бүлмәһендәге киске Наряд (эш тәғәйенләү) сәғәтенә эләкһәң, үҙеңдең фронт һыҙығындағы яугир штабта икәнлегеңде тояһың. Бында сафсата һатыуҙарға урын юҡ, диалогтар — шиғыр һымаҡ, йәки математик формулалай тос, тығыҙ, бәрәкәтле һәм зауыҡлы ағыла. Тикшерелгән һәр мәсьәләлә алдан уҡ төҙөлгән пландың, демократик тәриптә ҡабул ителгән мөһим ҡарарҙың көсө тойола. Был иһә етәкселектең арҡа һөйәген (умырткалығын) нығыта, һәләкәтле стихиялылыҡҡа юл ҡуймай, эш барышынан эстетик ләззәт тыуҙыра, бригадирҙарҙың да, рәйестең дә үҙ-үҙҙәренә һәм кешеләргә ышанысын арттыра. Ә был иһә аҙ түгел — уңыштың яртыһы, тигән һүҙ.

...Зиннәтуллин Әхмәт Әхмәт улы, бейек Дим ярынан төбәлеп, тыуған ерҙең әйләнә-панорамаһын күҙәтә, ундағы күркәм үҙгәрештәрҙе, яңырыштарҙы ғүмерҙә лә күреп туя алмаҫлыҡ ҡыуана. Һоҡланмаҫлыҡ та түгел, сөнки ата-баба еренең һәр аҙымы, һәр ҡарышы уның мөхәббәтле күҙҙәре, игелекле ҡулдары аша үткән, тупрағының һәр бөртөгөнә йөрәк йылыһы һеңгән. Ана ниндәй кукуруз үҫтереп бирҙе быйыл ҡасандыр ылғый таш, “үле ҡыҙыл балсыҡ” һаналған ташландыҡ ерҙәр! Заманында рәйес үҙе ең һыҙғанып сыҡты, ил-ғаләмде ҡуҙғалтты — ташландыҡ ерҙәрҙең таштары йыйып алынып, ҡыҙыл балсыҡтар майҙай йылтыр ҡара тиреҫ менән мул ашланды. Ә теге, йәйрәп киткән иркен уйһыулыҡта 1976 йылда беренсе тапҡыр ужым бойҙайы сәселеп, был ерҙәрҙә күрелмәгән юғары уңыш — гектарынан 39 центнер иген алынды, тылсымлы бойҙай орлоғо күрше колхоз-совхоздарға ла таратылды. Был баһадир “Одесская — 51” сортын Әхмәт Әхмәт улы теге ҡоролоҡло йылда Украинаның

Кировоград өлкәһенән — үҙенең яңы дуҫы, "Заря коммунизма" колхозы рәйесе Социалистик Хеҙмәт Геройы шлиффер Леонид Иосифовичтан алып ҡайтҡайны...

Күҙ иңләгән һәр тарафта — күҙҙең яуын алып шаҡмаҡланып нурланып ятҡан йә иген, йә үлән, йә сөгөлдөр, йә йәшелсә баҫыуҙары, бесән са бынлыҡтары. Быларҙың һәр береһендә Әхмәт Әхмәт улының ғүмеренең, йәнәнәң бер өлөшө тороп ҡалған. Һандуғаслы Дим ярына тоташҡан иңкеү киңлектәрҙә бына нисәмә йылдар инде йәйҙәрен күҙҙең яуын алып ҡыяҡтар ҡуҫҡыллана. Былар — йәшелсә орлоҡтары етештереү плантациялары.... Бөгөн колхозда бөтә тармаҡтар ҙа табыш килтерә: игенселек, йәшелсәселек, малсылыҡ.

Рәйестең күҙ алдында йылғаның күк таҫмаһына һипләп теҙелгән аҡ мәрйендәрҙәй балҡып тора колхоздың ауылдары: Никифар, Айҙағол, Дәүләт, Баранҡол, Алдар, Балғажы... Ә колхоз үҙе интернациональ коллектив: бер-береһен бер туғандай хис итеүсе башҡорт, урыҫ, татар, сыуаш кешеләре. Һәммәһен дөйөм маҡсат, коммунизм идеалдары туплай һәм яҡынайта.

Бөгөнгө көндә колхоздың төп малсылыҡ табыштарын тәшкил иткән, юғары килемле һөтсөлөк, һарыҡ, йылҡы фермалары урынлашҡан шул эреле-ваҡлы ауылдарҙы перспективаһыҙ тип тамғалаған, барыһын тиң Никифарға күсереп ултыртырға ҡыҫтаҡлаған сәйәсмән-димселәрҙең (әйтергә кәрәк, ошо хәл ауылдарҙы төҙөкләндереүҙә ҡамасауланы) һүҙенә ҡаршы төшөп, әхмәт Әхмәт улы Дим буйының ошо мәрйендәрен туҙҙыртмай һаҡлап ҡалды. Ни өсөн, тигәндә, был — колхоздың олпат ағас олононоң алты тамырын улар һут һурған ғәзиз тупраҡтан йолоп, көлләһөн бергә ҡушып бәйләү, бер тамырға ҡалдырыубулыр ине. Ә үндай бер тамырлы ағасты ҡоролоҡтан, ел-дауылдарҙан биртендертмәй һаҡлап ҡара!.. "Юҡ, — тине, ғәҙәттәгесә, бәғзе берәүҙәрҙең шелтә һүҙҙәрен иңенә алып булһа ла, тыуған еренең һулышы менән йәшәп күнгән рәйес, — хужалыҡтың үҙәк тамырын ҡеүәтлерәк, төпкәрәк ебәрмәй тороп, башҡа тамырҙарҙы ҡырҡыу иртәрәк. Тәүҙә колхоз етештереүсәнлеген промышленность ысулына күсереүҙең нигеҙ таштарын һалайыҡ, шунан һуң инде үҙебеҙ ҙә шул шарттарға йәрәшеп ур банлашайыҡ".

"Нигеҙ таштары" тигәне иһә рәйес аңында күптән яҡшы архитектура проектылай асыҡ кәүҙәләнә. Беренсенән, урындағы шарттарға тап килтереп, колхоздың баҫыу тармағын махсуслаштырырға: республика ихтыяжы күләмендәге йәшелсә, атап әйткәндә, һуған орлоғо етештереүгә күсергә. Икенсенән, малсылыҡ тармағында юғары промышленность нигеҙендәге һөтсөлөк комплексы, йәки һарыҡсылыҡ комплексы һалырға, малдарҙы йыл әйләнәһенә ҡурала тотоуға күсеп, шуға бәйле рәүештә баҫыуҙарҙа мал аҙығы үҫтереүҙең юғары культураһына өлгәшергә. Өсөнсөнән, Никифарҙа заманса итеп агроҡала төҙөргә, шул уҡ ваҡытта ер кешеһенең ергә берешкән кендеген өҙҙөртмәй һаҡлап алып ҡалырға. Сөнки килер быуаттарҙа ла бураларҙың бәрәкәтен кеше менән ерҙең бер бөтөнлөгө, туғанлығы ғына тыуҙырған тылсым тәшкил итәсәк. Ысын кеше, кешелектең туйҙырыусыһы булыу өсөн, үҙенде ерҙең улы, хужаһы итеп

таныу ғына ла аҙ икән: бының өсөн ер менән типә-тиң тылсымлы һәм игелекле, ерҙең игеҙәк туғаны булып эш итергә кәрәк. Ер кешеһенән бөгөнгө заман бына шуны талап итә.

Рәйес йоҡоһоҙ төндәр буйы уйлап иҫәпләгән һандарҙы, сараларҙы тайпылышһыҙ тормошҡа ашырабашларға бөгөндән үк самаһы бар колхоздың: Банкыла 4,5 миллион һумлыҡ саф маяһы ята әҙер. Ләкин бөйөктәрҙән бөйөк ҡаҙаныш — һумдарҙа ғына түгел, ә колхозсыларҙың үҙ-үҙҙәренә, етәкселргә һәм эшләгән эштәренең емеш бирәсәгенә ышанысында. Теләгән бер уңыштарҙы тәьмин итәсәк был ҡаҡшамаҫ көс Әхмәт Әхмәт улының күҙ алдында, туранан-тура ҡатнашлығында яуланды.

...Күк ебәк таҫмалай һыҙылып киткән Дим һыуының бейек ярында елгә ҡаршы күкрәк киргән мыҡты һын бара. Аҙымдарын оҙон киреп ынтылған дәү имәнде хәтерләтә ул миңә. Бер үк ваҡытта түбәһе күккә олғашҡан, тамыры ер үҙәгенә тоташҡан. Кеше. Коммунист. Ерҙең типә-тиң һәм күҙ терәп һөйләшә торған туғаны.

6. 07. 1977.

Илеш ере — иген иле

Гүзәл Илеш яҡтарына юл алғас, уның илгә танылған данлыҡлы игенселәр, малсылар, егәрлеләр төйәге икәнлеген иҫләнем.

Һәм ҡәләмдәш юлдаштарымдың да үҙҙәренә күрә "игенселәр" икәнлеген уйлап ҡыуандым.

Сөнки күренекле шағирыбыҙ Тимер Йософовтың иң тәүге китабы — "Икмәк еҫе" исемле ине.

Атаҡлы яҙыусыбыҙ Фәрит Иҫәнғолов иһә "Арыш башағы" тигән романын яҙып данланды.

"Эстә көсөк юртып" ҡуйҙы: игенселәр иленә киләм, әммә үҙемдең китаптарымдың береһенең дә тышлығында "игенле" исеме юҡ.

Ләкин үҙемдең, икенсе биш йыллыҡтың беренсе тос игендәрен колхоз бураларына һалғас, игенсе ғаиләһендә тыуып үҫеүемде, 1951 йылда хәрби хеҙмәткә лә тап игенсе рәүешендә китеүемде уйлап ҡыуандым.

Хәрби диңгеҙ флотында "диңгеҙ һабансылары" тип аталған тральщик-караптарҙың береһендә хеҙмәт итеүемде, трал-һабан менән Балтик диңгеҙен нәҡ ауылымдың баҫыуҙарындай арҡыры-буй "һөрөп", диңгеҙ юлдарын фашистарҙың үлемесле миналарынан таҙартыуымды, еребеҙгә именлек һәм тыныслыҡ орлоҡтары сәсеүемде уйлап йыуандым.

Һәм хәҙерге яҙыусылыҡ эшемдә лә мин аҡ ҡағыҙға хәреф-орлоҡ булып төшкән яҙыу-ыҙандарымды яҙғы иген баҫыуындағы буй-буй бураҙналар һымаҡ итеп күрәм. Унда сүп шыттыртмаҫҡа, тос иген генә үҫтерергә тырышам.

Бөтә Башҡортостан миңә иген иле, муллыҡ иле, гүзәл ил булып күренә. Уны мин ергә ҡот биреүсе, бәхет килтереүсе тере һын итеп күҙ

алдыма килтерәм. Ғорур тора ул һылыу, Урал тауға ҡалҡынып, башаҡтарҙан туҡылған йәйғор-көйәнтәһен һомғол иңенә һалып. Йәйғор-көйәнтәнең ике башында — Уралдың ике яғы, гәүһәр йондоҙҙарҙай балҡый республикам райондары!

Республикабыҙҙа йылдан-йыл иң юғары иген уңышы алған ошо данлы игенселәр иле Илешкә килгәс, мин үҙемде быуаттар аша тәрән тарих тупрағынабаҫҡандай итеп тойҙом. Сөнки икмәк тарихы — кешелек цивилизацияһының тарихы. Илеш игенсеһенең ергә мөхәббәте, игәрлелеге быуаттар төпкөлөнән килә.

Халҡыбыҙҙың игенселек һөнәре тураһында уйлаһам, ауылыбыҙҙың аҡһаҡалы Муллахмәт Ҡотлобаев олатайҙың һүҙҙәре иҫкә төшә.

“Беҙҙең ата-бабаларға донъя яратылғандан уҡ күктән дүрт бүләк төшкән: алтын һабан, алтын ҡамыт, алтын балта һәм алтын ҡаҙан”, — тигәйне ул.

Ошондай уҡ һүҙҙәрҙе мин донъя тарихының атаһы тип йөрөтөлгән Геродотта уҡыным: “Скиф еренә (йәғни беҙҙең бабаларҙың еренә. — Й.С.) күктән алтын әйберҙәр төшкән: һабан, ҡамыт, балта һәм ҡаҙан”. Геродотты белмәгән башҡорт ҡартының риүәйәте уныҡы менән тап килә! Шуныһы мөһим бында: икеһендә лә игенселек ҡоралдары беренсе урында тора.

Бөгөнгө “плуг” тигән һүҙ үҙе “бүләк” (йәғни күктән төшкән бүләк) һүҙе менән берәгәй булыуы ихтимал. Ә беҙҙең “һабан” һүҙенең һәм урыҫтарҙың “пахал” һүҙенең асылы боронғо Америка индейҙары майя теленән асыла. Ер һөрөү уларса “һабан-пакал” тип атала, шуның тәүге яртыһынан “һабан”, икенсеһенән “пахал” һүҙе килеп сыға. Боронғо Америка индейҙарының хәҙерге Беринг боғаҙы аша Уралдан күсенеп китеүҙәрен дөрөҫләүсе байтаҡ мәғлүмәттәр бар (мәҫәлән, археологик ҡомартҡылар араһынан киң билдәле “Дәүләкән ҡыҙыл тәнлеһе”).

Геродоттың бынан ике мең ярым йыл элек бабаларыбыҙ скифтарҙан яҙып алған легендаһы буйынса, беҙҙең беренсе бабаның исеме Тарғытай, йәғни Тары-атай булған.

Тарғытайҙың өс улы:

береһе — Липокса, йәғни ләпәксә, әпәксе (әпәкәй әүмәләүсе), йәғни бойҙайсы;

икенсеһе — Арпокса, йәғни арпасы (арпа үҫтереүсе);

өсөнсөһө — Ҡолаҡса, йәғни Һолосо (һоло үҫтереүсе).

Скиф тип аталған бабаларыбыҙ, билдәле булыуынса, Дунайҙан алып амурғаса ошо урындарҙа йәшәгән, иген икккән, мал аҫыраған, бутал (металл) иреткән.

Бөгөн дә беҙ танһыҡлап ашаған балан ҡағы, эскән ҡымыҙ, һындырған миндек, һәм беҙ яраткан эҫе ташлы мунса бынан ике мең ярым йыл элек үк скиф бабаларыбыҙ тарафынан ҡулланылған.

Сит ил кешеһенә ошо көндә лә экзотик эсемлек һаналған ҡымыҙ мәсьәләһендә беҙҙең скиф бабаларҙың юморғабай булғанлығы фашлана.

— Ҡымыҙҙы бейә елененән нисек итеп алаһығыҙ? — тип төпсөнгәстәре, грек сәйәхәтселәренә мутлашып яуаплай улар:

— Ҡурайҙың бер башын бейәнең ҡойроҡ аҫтындағы тишеккә тығабыҙ ҙа икенсе башынан сиратлап тын өрәбеҙ. Бейәнең тире араһына тын тулып, ҡабарып, елендәге һөттө күнәккә ҡыуып сығара.

Геродот ихлас ышанып, тап бына шулай яҙып ҡалдырған да. Хәҙергесә әйткәндә, дезинформация ҡорбаны булған ул йәғни...

Шуның ишебеҙҙең хаҡтағы әҙәм ышанмаҫлыҡ һүҙҙәр әле лә сит ил кешеләрен ҡаңғырта. Беҙгә дошман идеология диверсанттары тараткан ялған улар.

Нимә генә уйлап сығармайҙар беҙҙең хаҡта! Бөйөк Октябрь генә илле иткән, телле иткән, тиҙәр илдәге бәғзеләр. Илдән тыштағылары башҡортто илһеҙ ҙә, телһеҙ ҙә итеп күрһәтергә көсәнәләр. Ләкин беҙҙең бына ошо үҙ илебеҙҙә, үҙ телебеҙҙә кинәнеп һөйләшеп ултырыуыбыҙ уҡ яласыларҙың уйҙырмаларын селпәрәмә килтерә!

Иген, әпәкәй, икмәк... Ниндәйен һоҡланғыс та, ҡөҙрәтле лә яңғырай был хаҡ һүҙҙәр!

Илештәрҙең бөгөнгө гүзәл ысынбарлығы, өлгөлө уңыштары, ҡаҙаныштары — илебеҙҙең игенселек тарихына тере һәйкәл, уның сағыу сәскә тажы, тип атарға ла хаҡым бар. Игенселек — донъя цивилизацияһының нигеҙе.

Һүр. 2. Уңдан һулға: Йыһат Солтанов, Суфиян Поварисов, Муса Сиражи. Илештең Икмәк музейында. Апрель 1985 йыл

Башҡортостанда табылған бронза ураҡтар бынан 3500 йылдар элек ошо Урал баҡырынан ҡойолған — Шүлгән мәмерйәһендәге ҡаяларға тарпан, мамонт һүрәттәрен төшөргән һәм шуларға табынған

бабаларыбыҙҙың игенселек ҡоралы ул. Баймаҡ районының Абзаҡ ауылындабаҙ ҡаҙғанда бер юлы шундай 12 бронза ураҡ табылған!

Тимәк, тыуған еребеҙ борон-борондан уҡ иген иккән, әпәкәй үҫтергән ер икән. Мөғжизәләр иле икән.

Әммә бөйөк мөғжизә асылы шунда: халҡыбыҙ әгәр бронза ураҡтан иң хәҙерге ҡорос ураҡҡаса булған тарихи араны 3500 йыл буйына бөксәйеп, ҡайнар тир түгеп үтһә, шул ураҡтан алып бөгөнгө, иң хәҙерге комбайнғаса булған баш етмәҫлек араны ни бары алтмыш йылда артылған.

Тылсымлы был алтмыш йыл — Бөйөк Октябрь революцияһының алтмыш йыллығы, бөйөк Ленин Октябре биргән мөғжизә!

Шул алтмыш йылда мәҙәниәтебеҙ ҡурайҙан — операғаса, мәғрифәтебеҙ мәҙрәсәнән университетҡаса шанлы юл үтһә, игенселегебеҙ ябай ураҡтан комбайнғаса күкрәне.

Бынан алтмыш йыл ғына элек биле бөксәйгән башҡорт ураҡсыһы бөгөн илдең муллыҡ штурвалын тотҡан комбайнсыға, геройға һәм дәүләт эшмәкәренә әүерелде. Мин шул бөйөк игенсе иҫтәлегенә, әгәр ҡулымдан килһә, бөтә Ер шарынабалҡып күренеп торорлоҡ алтын бойҙай көлтәһенән ядкәр-һәйкәл ҡуйыр инем.

Тарих, тарих...

Кешемен тигән кеше ата-баба тарихын тәпәй баҫкандан, теше сыҡҡандан өйрәнеп-белеп үҫергә тейеш: шунда ғына уның ауыҙ-мороно ҡоро, быуындары ныҡ була. Ошо оло хаҡиҡәтте ҡайберәүҙәр, үкенескә ҡаршы, ике күҙе сөкөрәйгәс, биле бөкөрәйгәс, тештәре ҡойолоп бөткәс кенә ҡапыл тойоп уяна, әммә-ләкин... артҡа әйләнеп ҡарарға инде һуң була. Бындай эшем эйәһе бәндәне үҙенең ғүмеренә, кешелек бурысына үтә яуапһыҙ ҡараусы, тарих алдындағы, ил алдындағы гражданлыҡ бурысын да илке-һалҡы үтәүсе итеп күрәм мин. Сөнки тыуған еренә нык тамыр ебәргән олондар ғына һутлы емеш бирә ала, ә тамыры кәүектәрҙе уҙғынсының һулышы, салғый еле лә ауҙара...

Ундайҙарҙың фекеренсә, кешелектең шәжәрәһе фәҡәт уларҙың үҙҙәренән башлана. Улар үҙҙәре үркеп үҫкән оло имәнде һанға һуҡмаған сыбыҡ остары төҫлө. Шуға ла тотанаҡ юҡ, быуындар шыйыҡ, үләнлек көслө...

АНа шулай ғәмләнеп, ата-бабаларҙың баяғы бронза ураҡтары табылған ерҙе күрергә китеп барам. Сәғәт элек кенә ҡойма ямғыр үткәйне, ауыл магазины алдында бер аҫыл егет күләүектә ята аунап. Кеҫәһендә эсеп бөтмәгән шешәһе, эргәһендә тоҙло балыҡ башы, ә тирә-яғында суҡҡалар хорхолдаша. Өҫ-башы ыҫпай ғына, ҡиәфәте лә арыу: уҡыған кеше һымаҡ. Хәйер, был заманда уҡымаған кеше бармы һуң инде!.. Ҡулынан тартып торғоҙҙом, етәкләп, нигеҙ буйына алып барып ултырттым. Шундағы бер мәрхәмәтле еңгәй егеттең башына бер күнәк һыу килтереп ҡойғас, ике күҙе аҡайҙы, тартырға һорай башланы.

— Их һин, — мин әйтәм, — үҙеңдең кем икәнлегеңде беләһеңме?

— Ни эшләп белмәй, ти, арғы остоң Мөхәррәме мин, — ти теге.

— Юҡ, үҙеңдең кем икәнлегеңде белмәйһең һин, — мин әйтәм.

— Кем мин улайһа? — ти, ғыжылдап көлә. — Паспортымды сығарып күрһәтәйемме? Милиционер, йәки дружинник түгелһеңдер бит? Әйт, кем мин?

— Һин — совет кешеһе, — мин әйтәм, — унан һуң — башҡорт балаһы, унан һуң — ошо ауылдың бер алтын ҡаҙығы булырҙай егетһең, унан һуң — атайың менән әсәйеңдең улы, тик шуларҙан һуң ғына һин — үҙең, арғы остоң Мөхәррәме. Әгәр тарихты белһәң, һин шуларҙы минән һорамаç инең.

—Һе! Шуларҙы әйтер өсөн генә һин мине рәхәтләнеп йоҡлап ятҡан еремдән тартып торғоҙҙоңмо? — ти теге, һүгенә. — Бар, һантый, олаҡ юлымдан! Һинең тарих миңә бынауы шешә төбөн түңкәргәнсә лә кәрәкмәй, тарихты мин үҙем яһайым — донъя ҡуласаһы ҡулымда! — тип шешәһен болғап кәпәренә.

— Эйе, һин — совет кешеһе, донъя ҡуласаһын үҙ ҡулыңда тотор өсөн тыуғанһың, — мин әйтәм. — Әммә-ләкин мине һүккән "һантый" һүҙенең мәғәнәһен, үҙең инеп сумасаҡ күләүектең тәрәнлеген беләһеңме һуң һин?

— Һәй, ағай кеше, һайрарға шәп икәнһең, һайрап ебәр, улайһа! — ти теге.

— Һин һүгенеү итеп ҡулланған "һантый" һүҙе — хәҙерге һинд-европа телдәрендә лә, беҙҙең боронғо телдә лә "изге" тигән һүҙ була, — мин әйтәм. — "Санта-Клаус" тигәндәрен ишеткәнең барҙыр бит? "Санта" — шул уҡ "һантый", йәғни изге Ҡыш бабай була ул. Тимәк, һин, мырҙам, үҙең дә белмәйенсә, мине һүгеү урынына маҡтаның, изге кеше тип ҙурланың. Уныһы өсөн рәхмәт. Әммә был — аҡты ҡаранан, үткәндәрҙе хәҙергенән айыра белмәүгә керә. Шуның арҡаһында ла һин кеçәңә шешә ҡыçтырғанһың, күләүеккә кергәнһең. Ләкин донъя океандарын арҡыры-буйға ярып йөҙгән кит-балыҡ хәленә ҡалып ҡуйма. Океандарҙы айҡап йөрөгән кит-балыҡ, беләһеңме, ҡайҙа ғынабатып үлә? Күләүектә. Ҡойроғон да һелкетә алмай йән бирә...

Дөрөçөн әйтергә кәрәк: шунан һуң мин Мөхәррәмде бөтөнләй айныҡ килеш, төҙөк килеш осраттым. Егет саҡ ҡына ояла, саҡ ҡына сәмләнә ине, буғай. Минең урамда ағайҙарға бүрәнә өçтөндә ултырып һөйләгән ҡайбер вәғәздәрҙе, арттан ғына тороп булһа ла, ул да тыңлаған икән.

— Ҡайҙан соҡоп сығарҙығыҙ ул тарихтарҙы? Ысынында кем беҙ? — булды уның һорауы. Һәм мин уға һөйләнем...
1977.

Сәсеүсе

Сәсеүсе...

Яҙҙың йәмле көндәрендә ошо исем Планетаның яçы йөҙөнә ҡуйы-ҡуçҡыл буяуҙар менән яҙыла. Буйлыҡтан-буйлыҡҡа, арҡауҙан-арҡауға ер

шары буйлап аҙымлаған Яҙ артынан ҡалмай бара Сәсеүсе. Яҙ тилерткән һутлы тупраҡҡа Сәсеүсе ғүмер орлоғон, тереклек орлоғон һала. Яҙ һулышын бөркөгән тупраҡ һәр урында бер генә исемде һөрәнләп-тилмереп ята: Сәсеүсе! Сәсеүсе! Сәсеүсе!..

Бөйөктәрҙән бөйөк исем — Сәсеүсе!

Шанлы Октябрҙың 60 йыллығы алдынан килгән был йәмле яҙҙа, унынсы һәм сифатлы эшләү биш йыллығының тап икенсе йылында, ошо сал-боронғо исем айырыуса тулҡынландыра күңелде. Сөнки Сәсеүсенең тылсымлы ҡулдарына Державаның иҫ киткес ҙурбайлығы тапшырыла. “Партияның аграр политикаһы иң мөһим экономик һәм социаль маҡсаттарға өлгәшеүгә хеҙмәт итә, ул ауыл хужалығы етештереүен экономиканың ныҡ үҫешкән секторына әйләндереүгә йүнәлтелгән, — тип әйтелә “Бөйөк Октябрь социалистик революцияһының 60 йыллығы тураһында КПСС Үҙәк Комитетының 1977 йыл 31 ғинуар ҡарары”нда. — Ул Лениндың кооператив планын яңы шарттарҙа дауам итеү һәм ижади үҫтереү булып тора”. Эйе, егәрле сәсеүсе усындағы тос алтын орлоҡтай һайланып сыҡҡан хаҡ һүҙҙәр! Быны беҙ үҙебеҙ көндәлек тормошта күрҙек, унын шифалы емештәрен татыныҡ. Хатта ерҙе-һыуҙы зәһәр һулышы көйҙөргән 1975 йылғы ҡоролоҡто ла ғәрәсәтһеҙ үткәрҙек: табындарҙан икмәк тә, ит тә, аҡ-һөт тә өҙөлмәне. Сөнки партия алдан уҡ шунын хәстәрлеген күрә белде. “Үткән ун йыллыҡта ауыл хужалығын үҫтереүгә Совет хакимиәтенең элекке бөтә йылдарына ҡарағанда ла ике тапҡыр самаһына күберәк сарыф һалынды. Партияның хәҙерге аграр курсын бойомға ашырыу игенселекте һәм малсылыҡты күтәреүгә булышлыҡ итте. Туғыҙынсы биш йыллыҡта һауа шарттарының ифрат уңайһыҙ килеүенә ҡарамаҫтан, ауыл эшсәндәре һуңғы ике биш йыллыҡта иген уңышын 1,4 тапҡырға арттырыуға, йәмәғәт хужалығында хеҙмәт етештереүсәнлеген 58 процентҡа күтәреүгә өлгәштеләр”. Ә унынсы биш йыллыҡта игенселек тармағына капитал һалыуҙар 170 миллиард һумдан артып китәсәк һәм уларҙың дөйөм күләменең сирек өлөшөнән күберәген тәшкил итәсәк! Бына ни өсөн ил күңеле ҡомарланып яҙғы баҫыуҙарҙы буйлай, ундағы уңыштың саф орлоғон сәсәсәк тылсымлы ҡулдарҙы ҙурлай.

Баҫыуҙарҙан алыҫ булған ҡалалағы станогы янында торған мыҡты эшсе лә, лабораторияһында тәжрибә үткәргән зирәк ғалим да, операция өҫтәленә эйелгән тылсым эйәһе хирург та, ил сигендә йоҡоһоҙ һаҡкабаҫҡан батыр һуғышсы ла был турала уйламай булдыра алмай. Маңғышлаҡтың ҡомдарына шпалдар теҙгән, рельстәр һалған тимер юлсы ла, мәңгелек Боҙло Арктикала һәм Антарктидала тәбиғәткә берегеп ҡышлаусы ла, кара бында йыһан юлдарын гиҙеүсе ҡыйыу йөрәкле космонавт та, БМО-ның Генеральный Ассамблеяһында аҡыллы сығыш яһаусы дипломат та тап шул хаҡта уйлай бөгөн: сәсеү, Сәсеүсе... Сөнки беҙҙең бөтәбеҙҙе тыуған ергә беректереп тереклек бирә Сәсеүсе! Ил ҡеүәтен арттырасаҡ мәғрур пландарыбыҙҙың үҙәгендә иң үҙәк һын булып тора бөгөн Сәсеүсе!

Республикам баҫыуҙарында яҙғы ныҡышмалы хеҙмәт — Сәсеүсенең бөйөк көрәше бара. Уның йөрәк нуры сәскес һемәктәренән тыуған ерҙең

бәрәкәтле тупрағына бер туҡтауһыҙ игелә. “Партияның XXV йыйынының, КПСС Үҙәк Комитетының Октябрь (1976 йыл) пленумының тарихи ҡарарҙарын үтәй һәм Генеральный секретарь Леонид Ильич Брежнев иптәштең туранан-тура етәкселегендә эшләнгән, фәнни яҡтан нигеҙләнгән аграр программаһын тормошҡа ашырабарып, — тип әйтелә “ Башҡорт АССР-ы ауыл хужалығы эшмәкәрҙәренең 1977 йылғы социалистик йөкләмәләре”ндә, — Башҡортостан хеҙмәтсәндәре халыҡ хужалығын артабан үҫтереү буйынса билдәләнгән рубеждарға өлгәшеү өсөн, етештереүҙең эффектлылығын бөтә саралар менән күтәреү һәм эштең сифат күрһәткестәрен яҡшыртыу өсөн ныҡышмалы көрәшә”. Был көрәштең илгә инер игелеге билдәле: Башҡортостан игенсеһе, 1977 йылда һәр гектарҙан 20-шәр центнер иген алырға, уның тулайым йыйымын 6 миллион тоннағаса еткерергә, дәүләткә кәмендә 2 миллион 250 мең тонна иген һатырға, тип абруйлы Сәсеүсе һүҙен бирҙе. Ә Илеш районы игенселәре һәр гектарҙан 30-ар центнер, Ауырғазы, Дүртөйлө, Ҡырмыҫҡалы, Саҡмағош райондары — 25-әр, Шишмә — 24-әр һәм Эстәрлетамаҡ районы игенселәре иһә 23-әр центнер иген үҫтереп алырға ең һыҙғанды. Бөйөк Октябрҙең 60 йыллығын бына шундай яңы хеҙмәт уңыштары менән ҡаршылаясаҡ улар. Хәйерле булһын абруйлы игенсе һүҙе!

Ошо хаҡта тулҡынланып уйлағанда, борондан ҡалған ата-баба мәҡәле хәтерләнә: сәсеүҙә һайрашмаһаң, ырҙында ыңғырашырһың. Тимәк, Сәсеүсе — төп фигура!

Үҙем дә мин ҡулыма яҙыусы ҡәләмен ныҡлап алырҙан элек колхозда иген сәскән, сәскес ҡыҫамының аҫҡысын усымда йөрөткән кеше. Шуға күрә бөгөнгө Сәсеүсенең ғәмдәрен төбөнәсә төшөнәм.

Икмәк — ил байлығы, йәшәүҙең нигеҙе икәнен, бөтә ырыҫтарҙың әсәһе икәнен белә ул. Уның зирәк аҡылы, моғайын, илгә иттең һәм һөттөң күберәк һәм тиҙерәк етештерелеүенең дә туранан-тура игенгә бәйле икәнлеген тоялыр. Ул, — шуға иманым камил! — КПСС Үҙәк Комитетының Генеральный секретаре Леонид Ильич Брежнев иптәштең профсоюздарҙың XVI йыйынында малсылыҡты, атап әйткәндә, уның тиҙ өлгөрә торған һәм файҙалы тармағы — сусҡасылыҡты артабан үҫтереү кәрәклеге хаҡында әйткән һүҙҙәрен хупланы ысын йөрәктән. Шулай уҡ ул республикабыҙҙа быйыл сусҡа ите етештереүҙе ҡырҡа арттырырға, дөйөм ит әҙерләүҙә уның өлөш ауырлығын 40-45 процентҡа еткерергә, бының өсөн сусҡалар һанын 41 процентҡа арттырырға кәрәклеген дә төшөнә. Башҡалары менән бер ҡатарҙан малсылыҡтың ошо тиҙерәк өлгөрөүсән тармағына айырыуса иғтибар итеү — хеҙмәтсәндәрҙең көндәлек табынына итте күберәк һәм тиҙерәк биреү тигән һүҙ ул. Ә бының өсөн әлеге лә баяғы шул Сәсеүсенең уңғанлығы — иген уңышы кәрәк!

Ғөмүмән, кешелек эшмәкәрлегенең ҡайһы ғына тармағына ҡағылһаң да эштең башы игенгә — тере Үҫемлеккә барып төкәлә. Һәм уны Сәсеүсегә. Ҡайһы ваҡыт хәүефләнеп тә ҡуям: бына ошо хаҡиҡәтте онотоп бармайбыҙмы?.. Фәнни-техник революцияның шау-шоуҙары тураһында уйланғанымда һәм үҙенең дә тере Үҫен икәнлеген иҫтән сығарып ташлаған

“тимер йәнле” ҡайбер замандаштарымды күргәндә мине әлеге бошоноу сорнап ала. Һәм ерҙе Ер иткән бөйөк Үҫемлек-Үҫен, уны Сәсеүсе-Кеше тураһында ниндәйҙер бер төплө һүҙ әйтке килә. Ғүмер буйына әйтелгән һәм тағы ла әйтеләсәк һүҙҙәрҙең береһелер ул, бәлки. Сәсеүсенең фигураһын гәрәбә орлоҡ һалған усынан ғына түгел, ә төбө-тамыры менән ҡуша күтәреп күрһәтмәле һүҙ кәрәк. Тереклектең сығанағы лайыҡ былдай иғтибарға.

Донъя-Ғаләмдә бер туҡтауһыҙ Ваҡыт Йылғаһы ағылып торған, Төрлө Ваҡиғаларбарған ошо мәлдә Сәсеүсе үҙенең мәңгелек игелеген — сәсеүен үтәү өҫтөндә. Сәсеүселәр донъяға килә лә китә, ләкин сәскән орлоҡтары ерҙә шытырға ҡала. Һәм Сәсеүсе һөнәре шулай быуындан-быуынға күсеп бара. Бына шул һөнәр ҡулдарыбыҙҙан киләсәккә үҙенең ҡотон кәметмәй, тутыҡмай үтһен ине. Юҡһа бит бөгөн Сәсеүсенең сәсеүе өсөн тырышып эшләгән тракторсы, комбайнсы, механизатор, тимерсе һөнәрҙәрен кинәнеп телгә алабыҙ, ә төп фигура Сәсеүсе һөнәрен ҡалтайтып атамайбыҙ. Ә бит барыһынан элек ул, тере ергә йән биреүсе, исемләнергә тейеш!

Мин үҙемде Сәсеүсе иткән Олатайҙы онотмайым. Ул даланың донъяға данлы ҡаты бойҙай үҫемлеген ауылда тыуҙырған кеше. Алтын ҡуллы Сәсеүсе. Дала буйлап баҫыуҙан-баҫыуға гиҙеп, миллион башаҡтар араһынан берҙән-бер башаҡты танып, бөртөктәрен таҡыяһына тиреп, ауылыбыҙға бер таҡыя сортлы орлоҡ яһаған игенсе ул. Шул бер таҡыянан ерҙең данлы ҡото етеште.

Олатай әйтер ине: “Беҙҙең Ҡояш тигәнебеҙ — Бөйөк Сәсеүсе атабыҙ Урал батырҙың алтын тубалы ул. Урал батыр көн дә илдән элек тора, ер башынан ер башынаса һәм бер ҡаранан бер ҡарағаса үҙенең алтын тубалынан ергә нур сәсеп үтә.

Урал батыр — иң егәрле Сәсеүсе.

Сәсеүсе ерҙең бер башынан икенсе башына сығып етмәйенсә туҡтамай, боролмай, сөнки сәсеү бер ваҡытта ла ярты эшләүгә түҙмәй. Иген игеү — бөтәйеү”. Шулай тиер ине минең Олатайым.

Һәм мин ошо Олатайҙың оҙон ғүмеренең балҡышлы Байрамдарын — сәсеү яҙҙарын килтерәм күҙ алдыма. Ҡулына ҡылыс, йәки мылтыҡ алғанда ла ул фәҡәт килер яҙ өсөн, Сәсеү өсөн үҙен Сәсеүсе итеп аҫырай белде. Ҡулы һәр саҡ яуҙан арсалып сәсеү тубалына тейенде. Сәсеп бөткәс ике ҡулын тубыҡтарына ҡаушарып һалып, беҙҙәргә әйтер ине:

“Сәстем. Ас-яланғас көйө лә сәстем, туҡ һәм бөтөн көйө лә сәстем.

Ауырыған килеш тә, һау-сәләмәт килеш тә, арыған килеш тә, ял иткән килеш тә, хәлле килеш тә, хәлһеҙ килеш тә сәстем.

Сәскән өсөн ҡайырып алаһымды белеп тә, алмаясағымды күрә тороп та сәстем.

Һәм беләм: донъялағы бөтә-бөтә Сәсеүселәр ҙә шундай. Сөнки Сәсеүсе ҡолас киреп сәскән саҡта үҙенең шәхси мәнфәғәтен генә ҡайғыртып ғәмләнһә, сәсеү майҙаны тарайыр ҙа осланыр, ерҙә бер кем дә бөтәймәҫ, тереклек туҡтар ине. Сәсеүсе бөтә донъяны бөтәйтеп сәсә!”

Унының көрәктәй ҡулдары тиртеү тупраҡ өҫтөнә йылы юрған япҡандай ҡағылыр ине...

Һәм мин аҡыллы китаптарҙың биттәрендә ер хаҡында уҡығанда ошо Олатайҙы иҫкә төшөрәм дә боҙҙай һалҡын терминдарға төртөлөп тертләп китәм: “механик состав”... Юҡ, ҡәҙерле профессор, тере-йәнле тупраҡ ул, ер-әсәкәй ул! Һинең менән минең кеүек үк, Олатайым кеүек үк — йөрәге өлпөрәп торған тере!..

Һәм иң тәүге Сәсеүселәрҙе килтерәм күҙ алдыма.

Орлоҡ тигән бөйөк тылсым эйәһен тере тупраҡҡа тәүҙә елдәр, һыуҙар, кейек һәм ҡоштар тараҡҡан, сәскән. Бер һүҙ менән әйткәндә, үҫеп өлгөргән орлоҡто ергә сәсеү эше тәбиғәттең үҙағышында — “стихиялы” барған. Кеше Үҫемлектең үҫеп өлгөргән орлоғон, емешен тиреүсе генә булған.

Бына бер заман әҙәм аҡылы донъялағы иң ҙур серҙәрҙең береһен асҡан: ул орлоҡто сәсеү эшен үҙ ҡулына алған. Ул үҙен дә тәбиғәттең тере тәненең бер киҫәге, ерҙәге бөйөк тереклек әйләнешенең айырылғыһыҙ өлөшө итеп таныған. Кешелек аҡылы сәсеү эшен үҙағышынан йолоп, донъялағы беренсе Һуҡа-Һабанды һәм орлоҡ тултырылған тубалды ҡулланған, үҙе сәскән беренсе гәрәбә орлоҡтарҙың ҡуҫҡыл фирүзә ҡыяҡ булып ерҙән шытып сығыуын күреп ҡыуанған. Ошолай башланған донъялағы иң тәүге, иң бөйөк фәнни-техник революция — Сәсеүсе Революцияһы. Ул ерҙең йөҙөн йәшәрткән. Ул ергә Сәсеүсе биргән.

Сәсеүсенең йәне һалҡын “механик состав”ҡа әйләнмәһен, ул үҙенең дә, эшенең дә “тереклек” тигән бөйөк тылсымдың тере бер өлөшө икәнлеген мәңге тойһон, онотмаһын, тип теләк теләйем мин. Әгәр ошо тереклек тойғоһон Юғалтһа, Сәсеүсе үҙенең тылсым көсөн — квалификацияһын Юғалта, Сәсеүсе булыуҙан туҡтай.

Сәсеүсе үҙенең изге эшенә һалҡын “механик” эш итеп ҡарай күрмәһен, йәнендәге тереклек тойғоһон юймаһын. Сөнки ергә орлоҡ сәсеү — Балабағыу менән бер, Сабыйына әсә һөйөүе, әсә хәстәрлеге күрһәтеү менән бер; ә әсә һөйөүен, әсә хәстәрлеген — Ҡояшлы ошо тылсымды — кеше ергә үҙе генә, үҙенең ун бармаҡлы ҡулы менән генә бирә ала, уны һис ҡасан да, һис нисек тә тулы конвейрға һалып, механикалаштырып булмай. Шуға күрә лә, фән һәм техника күпме генә күкрәп сәскә атһа ла, Сәсеүсе хеҙмәте үҙенең төп асылында йөрәк эше, тылсым көсө булып ҡала. Сәсеүсе — ерҙе-күкте тылсымландырыусы! Һәм бөйөк тереклектең, кешелек донъяһының үлемһеҙлеге лә тап бына ошонда!

Олатай гел туҡыр ине: “Донъя яралғандабабаларға күктән алтын әйберҙәр төшкән: Һабан, Ҡамыт, Балта һәм Ҡаҙан.

Тимәк, Һабан беренсе урында торған — Бабалар Сәсеүсе булған. Ә Үҫемлек башланалыр сәсеүҙән. Беҙҙең мәжүси көллө Хоҙайҙарыбыҙ ҙа, бәндәләребеҙ ҙә баш ала үҫемлектән”.

Олатайҙың әйткәндәрен ғалимдар ҙа ҡеүәтләй: игенселек — эштәрҙең башы булған. Ата-бабалар тупрағында мең-мең йылдар элекке ҡатламдарҙан табылған бронза ураҡтар һәм төрәндәр дөрөҫләй шуны.

Сәсеүсенең фигураһын ҙурлап барлауға керешкәс, беҙгә алыҫ быуаттарҙы лабайҡамайса ярамай. Сөнки Сәсеүсе тамыры быуаттар төпкөлөндә!

Ошоғаса туҙға ла яҙылмаған һәм, бәлки, ғилем эйәләребеҙ дәррәү кире ҡағасаҡ минең үҙемдең фараздарым килтерелә түбәндә (уйланыусылар өсөн).

Беҙҙең иң боронғо Сәсеүсе бабалар, моғайын, һуғарыулы культуралар үҫтереп шөғөлләнгән. Шуға бәйле математика, астрономия, философия һәм фәндең башҡа тармаҡтары үҫешкән. Тимәк, Сәсеүсе кешелек донъяһына иген менән ҡуша ғилем дә биргән. Шуға күрә лә ерҙе ҡотайтҡан иң ҙур тылсымлы көскә — Үҫемлеккә (Үҫенгә) табынғандар. Сәсеү эшен тылсым көсө (маг) итеп һанағандар.

Үҫенде сәсеп үҫтереүсе ике ҡулдың ун бармағы иҫәбенсә, йыл әйләнәһенә иген игеү һәм уны ейеү (ашау) барышы календарлап ун миҙгелгә бүленгән. Һәр миҙгел — бер айҙы, ә ун ай — йыл әйләнешен тәшкил иткән. Бармаҡтар һанынса ун айлыҡ арауыҡ — "ҡул ун үтәр" тигәндән инде боронғо латинсанан мәғлүм һаналған "календарь" һүҙе тыуған. "Кулунүтәр" — календарь, минең фаразлауымса, бына нисек булған ул:

1. Бер маг — икеһен ҡушып әйтһәк, бармаҡ. Был һыу ташҡан, дөгө баҫыуҙарына һыу сыҡҡан ваҡыт, ҡулдағы беренсе бармаҡ һәм календарҙағы беренсе ай. Шунан киләлер бер — мер — море (һыу ташҡан миҙгел).
2. Ике маг — икмәк. Иген (дөгө) игеү, йәғни сәсеү ваҡыты.
3. Өс маг — үҫмәк. Иген үҫеү ваҡыты.
4. Дүрт маг — тиртмәк. Башаҡ тиртеп, игендең баш ҡыҫыу ваҡыты.
5. Биш маг — бешмәк. Иген бешеү, өлгөрөү ваҡыты.
6. Алты маг — алдымаҡ, алмаҡ. Игенде йыйып алыу ваҡыты.
7. Ете маг — йотмаҡ, еймәк. Ауыҙ итеү, ашау ваҡыты.
8. Һиккеҙ маг — һыйғызмаҡ. Ашлыҡты ҡарынға һыйҙырыу, аш һеңдереү ваҡыты.
9. Туҡҡуҙ маг — туйғыҙмаҡ. Туйҙырыу, туҡлыҡ ваҡыты.
10. Ун маг — уңмаҡ. Уңыу, йәғни эштәреңдән уңыу — үҫтергән игендең рәхәтен күреп бөтөү, алдағы сәсеүгә әҙерлек ваҡыты.

Унлыҡлы ошо циклдың бер-бер артлы айҙар сиратлашып үҫеше — "үҫ ун" йәғни Үҫен, Үҫемлек була ла инде (Үҫемлек календары). Шунан уҡ киләлер çун — сан — һан һәм дәүләттәр ҡоролошондағы санат (сенат), һанат. "Үҫәр"ҙән шыта сәр — сер, йәғни инглизса "сэр" һәм урыҫса "царь" тигән батшалыҡ дәрәжәһе. Ул ғына ла етмәһә, шул уҡ "сәр"ҙән планетабыҙҙың исеме "Ер", ә "үҫемлек"тән семләк — земляк — Земля тигән һүҙҙәр моронлай. Күрәһегеҙ: Сәсеүсене ҙурлағанда тарихты һанға һуҡмау яҙыҡ булыр ине.

Үҙебеҙҙең күнегелгән "аҙна" һүҙе лә үс-ун-аҡ (үҫеүсе ун көн) төшөнсәһенән килеп сыҡҡанға оҡшай. Унлыҡлап һаналған циклдың

үтелеүе — “уны үтелә” — нутелә — неделя (урыҫса аҙна), ә уның тулыһы (бөтә көндәренең дә бергә булыуы) “уны бар маг” — универмаг һүҙен биргәндәй беҙгә. Шулай уҡ “уны бар” — анбар, амбар. Һәм шул уҡ “тулы ун бармаҡлы ҡул” мәғәнәһендәге “ҡул үт” тигәндәре — келәт, клад һәм культ (табыныу) булып сыға.

Ун бармаҡлап иҫәпләнгән тылсымлы циклдың икенсерәк (диалект) әйтелешенән ҡыҫҡартылып, ете көнлөк “үҫенә — уҙына” — аҙна көндәренең исемдәре яһалғандай:

1. Понт идел нәҡ — Понедельник. Бында “понт” та, “идел” дә боронғоса һыу ташҡанды, диңгеҙ-даръяны аңлата.
2. Батыр нәҡ — Вторник. Йәғни орлоҡ батырыу (сәсеү).
3. Үсеретә — Среда. Йәғни үҫтерә, үҫтереү.
4. Чатыр бураҡ — Четверг. Йәғни урылған игенде сатырлап бурау, өйөү.
5. Бөтөн үсә — Пятница. Йәғни орлоҡ-үҫендең ашалып бөтөүе, сәйнәлеп “үлеүе”.
6. Үсүб үтә — Суббота. Йәғни тамаҡтан уҙып үтеү, йотолоу.
7. Басҡор үсене — Воскресение. Йәғни баш ҡор (бөтә халыҡ) үҫенен ҡабат сәсергә әҙерләнеү.

Ошо уҡ “ Басҡорүс”тән — ҡорүс, ә ҡорүстән — Христ (Христос-Хоҙай) һәм “гөрөш” (дөгөнөң үзбәксә аталышы), ә “дөгө”нән иһә “доға” — табыныуҙарҙың тамыры килә лә сыға. Һәм дөгө (гөрөш) һауыты “гөрөш аҡ”тан беҙҙең бөгөнгө көршәк (горшок) һәм боронғо дөгө хужаһы булған батшалыҡ титулы герцог хасил булалыр. Боронғо башҡорт әйтеме: “Герцог — үҙем яһап ҡуйған көршәк: теләһәм кәштәгә ултыртам, теләмәһәм тибәм дә ауҙарам!”. Хатта беҙ белгән дин башлыҡтарының (Хоҙайҙарының) исем-Шәрифтәре лә йыйыны баяғы Үҫендән килә имеш:

1. Иуда — йедә (онло ҡотой емеше).
2. Будда — будаҡ, бойҙай.
3. Ислам — үсел он, солон, соло (һоло).
4. Иисус Христос — И үс-үс, Гөрөс дус. Йәғни “Эй үҫ-үҫ, дөгө дуҫ” тигәнгә ҡайтыып ҡала.

Дөгө орлоғон боронғо бабаларыбыҙ тылсымлы өс бармаҡ (“бер өс — “перст”) менән бөрөп тотоп, түтәлдең өсәр оялы төркөмөндәге һәр ояға орлоҡто төрткән һайын, “үҫ” (үс) һүҙен (доғаһын) ҡабатлап (йәғни “үс-үс-үс” тип) иккән (сәскән), ана шунан һәр төркөм оялары һәм ҡушып һаналған төркөм оялары иҫәбенсә тылсымлы (магическое число) өс һаны, икеләтелгән алты (шайтан) һаны, өсләтелгән тылсымлы туғыҙ һаны һәм “Сәсеүсе”, “Әсә-Сәсә” тигән тылсым эйәләренең үҙҙәре тураһындағы төшөнсә хасил булғанға оҡшай. Беҙҙең әлеге “түтәл” һүҙе лә “төртөл”дән түтәлләнгән. Бабаларҙың бөтәбеҙгә уртаҡ тәүтелендә ололап әйтелгән “Үсүн улуҡ”тан (“Үҫен-олуғ”тан) — “үҫемлек” һәм “земляк”, “Земля”, ә

“Үсүр анаҡ”тан — уранаҡ — уралаҡ — орлоҡ һәм суранаҡ — сурана — зерно, шулай уҡ “Ер” төшөнсәләре түлләнгән. “Үсүн анаҡ”тан семена — смена ла өлгөргән. Ә бөгөнгө христиан дине тотоусыларҙың боронғоса “бер өс” (перст) бармаҡ бөрөп кәүҙәләренә (“түтәл”гә) өс тапҡыр төртөп суҡыныуы ла тап ана шул дөгө сәсеү культенә ишаралай. Иисустың күккә ашыу мажараһы иһә боронғо шул Үҫемлек культендәге Үҫенден, йәғни иген орлоғоноң, ун циклды үтеп (ашалып) “үлгәндән һуң”, яҙғыһын кире ҡайтып түтәлдә терелер өсөн, күккә осоуын (һүҙҙәргә иғтибар итегеҙ: “үс-үс-үс” — “осоусы”!), асманға ашыуын ҡабатлай ғына.

Күренеүенсә, исемдәре өҫтә килтерелгән дүрт дин дә күпмелер дәрәжәлә боронғоларҙың тәүге “дин”енә — Сәсеүсенең Үҫен культенә тамырланған. Тимәк, хаттабатшаларҙан да, мәжүси Хоҙайҙарҙан да юғарыраҡ торған Сәсеүсе исеме!

Һәм был ғына ла түгел.

Бабаларҙың өсәр үҫен-оялы тылсым түтәлдәре зыялыларҙың аҡҡа ҡара менән яҙыу “баҫыу”ында ла шытҡан, мәңгелек үҫен биргән. “Аҡ ер астым, ҡара бойҙай сәстем” тигән башҡорт йомағы юҡҡа түгел.

Әгәр яҙыуҙың килеп сығыу тарихына күҙ һалһаҡ, “үс-үс-үс” тип дәфтәр битенә ултыртылған, орлоҡтан шытып сыҡҡан үҫентене кәүҙәләндереүсе өс һыҙыҡты төрлөсә тоташтырып, бер ыңғай «ғәрәпсә” 3 (өс) цифрын (цифр — “өсө бер”!), С хәрефен һәм “грекса” У,С,З,Ч,Ш,Э,Е,Н,И,П хәрефтәрен, “латинса” III (Рим цифры) һәм Z,S,N хәрефтәрен, “ҡытайса” “үҫен-тау” иероглифын һ.б. күрәбеҙ.

башҡорт ырыуы Үҫәргәндең — “үҫәр ҡан (көн-һыу)”, ә баҡ, бог, маг, бәк, бай, бей һүҙҙәренең бөтәһе лә бер мәғәнә — бағыусы, баҡсасы икәнлеген таныһаҡ, боронғо дөгө бағыусы “үсәргән баҡ”тың ил телендә “серегәнбай” (Авеста) булып әүерелеп китеүенә лә иғтибар итәһе ҡала. “Үсәргән”дән сөргән (һөргән), төргән-төрән, һәм шулар төрәнләп һөрөп, һуғарып, иген үҫтергән Үсәрҡан-дарья (Сурхандарья) йылға буйҙары ла беленә. Тимәк, башҡорт ырыуы Үҫәргән — Иген Үҫтергән ҡәүем. Сәсеүсе. Бөтәбеҙҙең дә бабалары ул Сәсеүсе.

Беҙ ана шул Сәсеүселәр тоҡомо, үҙебеҙ ҙә Сәсеүсе!

Сәсеүсе...

Мин уның бөйөк үткәненә, үҙенең хеҙмәт үҫененең исемен биргән Ер шарына (үсемлек — землек — Земля) күҙ һалам да ғәмләнәм. Уның бөгөнгө бөйөк фәнгә, техника ҡаҙаныштарына эйә булыуына ҡыуанам. Киләсәк Ерҙе ейәндәребеҙ һоро ҡом сүле итеп түгел, ә һуғандай ҡусҡыл-йәшел Үҫен рәүешле күрер тип өмөтләнәм. Әммә бының өсөн беҙгә Сәсеүсенең дәрәжәһен төшөрмәйенсә һаҡларға, уны тағы ла бейегерәк күтәрергә кәрәктер. Беҙ бөгөн бабалар һымаҡ стихия алдындабаш эймәй беҙ, тылсымдан Хоҙайҙар яһамайбыҙ. Ләкин ерҙең һәм орлоҡтоң, шунда шытҡан Үҫендең бөйөк тереклек тылсымынан арбалмай мөмкин түгел. Әгәр беҙ тереклек тылсымына ғәжәпләнеп һоҡланыуҙан, уның алдында иҫебеҙ китеп баш эйеүҙән туҡтаһаҡ, тереклектең сере бөттө, бөтәһе лә “механик состав” тип хәл ҡылһаҡ, тере тупраҡ һәм үҙебеҙ ҙә йәнһеҙ шул “механик состав”ҡа — ҡом һәм ташҡа әйләнер инек. Ул саҡ ерҙә тереклек

бөтөр ине. Бына ни өсөн беҙгә бөгөн бөтә һөнәрҙәрҙең башы — иң боронғо Сәсеүсе һөнәренә бөтөнләй яңысабағырға, Сәсеүсенең Тылсымлыҡ Квалификацияһын һаҡлап ҡалырға ла яңы бер баҫкысҡа күтәрергә кәрәктер. Ниңә беҙгә техникум һәм институттарҙа махсус Сәсеүсе әҙерләп сығармаҫҡа?! Фәнни-техник революция шауҡымында ябайланып, юйылып ҡуймаһын Сәсеүсе! Сөнки был һөнәр кешене Кеше иткән, ерҙе Ер шары иткән, бабаларҙан алтын аманат рәүешле килеп еткән. Һәм беҙ яҡшы беләбеҙ: фашизмдың утлы көбәген күкрәктәре менән япҡан Шакирйән Мөхәммәтйәнов менән Миңлеғәли Ғөбәйҙуллин да, ярһыу атта еңеүгә табан сабып барып ҡолаған ғәййәр Шайморатов та, күктәргә уҡтай атылып менгән бөркөт Муса Гәрәйев тә, Рейхстагҡа еңеү әләмен ҡаҙаған ғәзи батыр Заһитов та һуңғы сиккәсә Ергә тоғро, Сәсеүсе булып ҡалдылар. Күсте улар Олатайҙар яғына...

Сәсеүселәр быуыны алмашына, ерҙең башына сығып боролған сәскес-агрегатта яңы быуын Сәсеүселәре айбарлана. Олатайлыҡ ҡорона уҙған, *баҫы*уҙарҙың осона сыҡҡан Сәсеүсе иһә мәңгелектең ыҙанында мәңге бара, сөнки борола алмай ул. Ерҙең башын аша атлап, Урал батырҙың алтын тубалын артып, офоҡҡа инеп китә. Бабаларса ул “бер өс” итеп, бөрөш итеп тотҡан өс бармағы менән йыһан ҡырында бер туҡтауһыҙ йондоҙҙар сәсеп бара: үс-үс-үс... Бөгөнгө Сәсеүселәр сәскес ҡыҫаһының асҡысын бына шуларҙың ҡотло ҡулынан алған. Шул асҡысты кәрәк беҙгә тутыҡтырмай илтергә. Сәсеүсе хеҙмәтенән шытҡан атҡаҙанған механизатор, тракторсы, комбайнсы исемдәре илдә балҡыған кеүек, кешелектең тамыр һөнәре — Сәсеүсе тигән исемде лә балҡытып атҡаҙанырға. Сифат биш йыллығының был алтын яҙы яңы Сифатлы Сәсеүсегә үҙенең ҡырҙарын аса, ер-әсә уның тылсымлы ҡулдарының, бәрәкәтле орлоҡтарының тейеүен көтөп ята. Һәм Сәсеүсе үҙенең ошо бөйөк миссияһын яҡшы аңлап сәсеп бара. Сәсеүсенең йөрәк ҡағышы партиябыҙҙың ораны булып бөтә илгә ишетелә: “Беҙ партияның ленинсы Үҙәк Комитетын, Полит бюроны һәм КПСС Үҙәк Комитетының Генеральный секретаре Леонид Ильич Брежнев иптәште, дүрт орденлы башҡорт автономиялы Совет Социалистик Республикаһы ауыл хужалығы эшсәндәре бөтә көстәрен, ижади энергияһын, белемен һәм тәжрибәһен КПСС-тың XXV йыйынында билдәләнгән мөһәбәт пландарҙы ғәмәлгә ашырыуға бирерҙәр һәм өлкә партия ойошмаһы етәкселегендә ауыл хужалығын күтәреү буйынса биш йыллыҡтың икенсе йылына һәм тоташ унынсы биш йыллыҡҡа алынған социалистик йөкләмәләрен үтәүгә лайыҡлы өлөш индерерҙәр, совет халҡы тормошондағы иҫтәлекле һәм данлы дата — Бөйөк Октябрҙең 60 йыллығын яңы хеҙмәт уңыштары менән ҡаршы алырҙар, тип ышандырабыҙ”. Амин, моратына ирешәсәк Сәсеүсе.

17.04.1977.

Толстойҙың күңел далаһы

Бына Иҙел йылғаһы, пароходтан Ул килеп төшкән пристань. Ул — ысын ҙур хәрефле Кеше, оло аҡыл эйәһе, бөйөк гуманист, донъяның даһи яҙыусыһы. Лев Николаевич Толстой. Алыҫ 1862 йыл...

Унан һуң бик күп һыуҙар аҡҡан, бик күп елдәр иҫкән, бик күп саҡдар ерҙән ҡубынып осҡан. Иҙел ярҙары танымаҫлыҡ үҙгәргән. Әммә ғали әҙиптең бөйөк рухы, бөйөк Рәсәйҙең тынғылыҡһыҙ аҡылын һәм Намыҫын кәүҙәләндереп, иңе менән һаман күкте терәп баҫып тора кеүек. Бына уның күҙ алдында сал Ватандың тарихы — үткәне һәм киләсәге бер-береһенә көрмәлешеп тартыша: яр ҡырыйында, ыңғырашып, бурлаҡтарбаржа тарта; шул уҡ юлда, күк тулҡындар һыртын урталайға ярып, тарих ҡуласаһы һымаҡ ҡуласаһын шаптор-шоптор әйләндереп, донъяның аҫтын өҫкә килтерәсәк дауыллы киләсәктең пароходы алҡына... Толстойҙың донъяға төбәлгән даһи аҡылы ла тап шул иҫке менән яңының үлемесле көрмәлеше кеүек бит: ҡапма-ҡаршылыҡтар һәм ҡатмарлыҡтар аша ошо беҙҙең көндәргә баға...

Иҫке Самараның ул килеп төшкән серек таҡталы ағас пристане серек батша Рәсәйенең үҙе менән ҡуша тарихҡа һеңгән. Күҙ алдымда хәҙер күҙҙәрҙең яуын алып торған бетон һәм быялалар — миллион халыҡлы индустриаль ҡаланың төрлө диңгеҙҙәрҙе бергә тоташтырған, йылға һәм диңгеҙ лайнерҙарын тәүлек буйы ҡаршылаған һәм оҙатҡан ҡеүәтле замана порты. Ә бурлаҡтар усаҡ өйөп уха бешергән ярҙа — болоттарға олғашып ҡалҡҡан “Россия” ҡунаҡханаһы. Риүәйәттәргә ҡарағанда, даһи яҙыусы бында, тәрән уйҙарға сумып, бик оҙаҡ баҫып торған; ул, моғайын, күп милләттәр иләүенән тағатылмаҫлыҡ итеп бергә туҡылған хәсрәтле һәм шанлы киләсәкле ҙур Рәсәй иле, уның яҙмышы тураһында уйлаған. Сөнки был саҡ инде Толстой, утыҙ дүрт йәштә көйө, донъяның утын-һыуын ныҡ кискән, әсе-сөсөһөн күп татыған философ-әҙип Толстой булған. Уның яурындары артында Ҡафҡаз һәм Ҡырым һуғыштары, крепостной правоның йәнде өҙгөс тынсыу йылдары. Үҙен Рәсәйҙең иң талантлы ҡәләм эйәләренең береһе итеп танытҡан “ Бала саҡ”, “Үҫмер саҡ” повестәре, “Маркер яҙмалары”, “Помещик иртәһе” һәм “Севастополь хикәйәләре”, яҙылабашлаған “Декабристар” романы. Тула гөбөрнәһе Крапивин өйәҙенең 4-енсе участкаһында мировой посредник булған бер йыл эсендә, крәҫтиәндәр мәнфәғәтен ҡурсалап, помещиктар менән ҡырталашып алышыуҙары... “Посредник булыу ҡыҙыҡлы һәм мауыҡтырғыс, — тип яҙа Толстой үҙенең ошо арауыҡтағы бер хатында, — ләкин... бөтә дворян халҡы миңә йәне-тәне менән үсләнде һәм улар миңә һәр яҡлап аяҡ сала”. Шундай ун һигеҙ помещик Толстой өҫтөнән уның “ҡыҫымы” тураһында юғарыға ғариза яҙып бирә: графтың эшмәкәрлеге крәҫтиәндәрҙә помещиктарға ҡарата “дошманлыҡлы ҡараш” тыуҙыра һәм помещиктар мөлкәтенә “оло ҡаза” килтерә, тиҙәр улар... Бына ошондай хәтһеҙ хеҙмәт, киҫкен көрәш арҡаһында һаулығы ныҡ ҡаҡшаған граф, яңы ғына өйләнешкәс балаға уҙған кәләше Софья Андреевнаны өйҙә яңғыҙын ҡалдырып, ҡайнатаһы врач Андрей Евстафьевич Берстың кәңәше буйынса,

ҡымыҙ эсеп дауаланырға алыҫ башҡорт далаһына уҡтала. Шуныһын дабаҫым яһап әйтеп үтергә кәрәк: күптән түгел Н.А. Некрасов “...ыласын!.. Ә бәлки, бөркөттөр ҙә” тип һоҡланып баһалаған әҙиптең ыласын ҡанаттары ошо йылда ҡайырылыу ҡурҡынысы аҫтында тора — Лев Николаевич Толстойҙы заманының медицинаһы һис кенә лә дауалай алмаған, үлемесле тип һанаған үпкә сире (туберкулез) физик яҡтан да, рухи яҡтан да ныҡ ҡаҡшата. Уны Некрасов тоҫмаллаған ысын бөркөт итеп донъя күгенә ҡыйғырлатасаҡ илаһи әҫәр — “Һуғыш һәм донъя” (“Война и мир”) эпопеяһы әлегә яҙылмаған. Уны башлар һәм яҙыр өсөн даһи тәүҙә үҙенә рәхимһеҙ янаған, үҙенең алҡымынан алған ҡурҡыныс физик үлемде лә, йәнен иҙгән, күҙҙәрен томалаған ҡараңғы рухи үлемде лә, ҡырталашып, Еңеп сығырға тейеш. Фәҡәт шуның һуңында ғына кешелек донъяһы уның ҡулынан “Һуғыш һәм донъя” мөғжизәһен аласаҡ. Тарихтың бына ошо изге талабын тойған һәм ҡыуанып үтәгәндәй, *башҡорт* ере донъяның тылсымлы һүҙ даһийын үҙенең сикһеҙ киң күңеле, сихәтле мөхите менән йәйләүҙә ҡосаҡ йәйеп ҡаршылай. Быныһын дабаҫым яһап, айырып әйтергә кәрәк: ҡымыҙға тейенгән шул уҡ йәйҙә әҙип ауҡабаға һәм, күп тә үтмәй, киләһе йылында уҡ, бөйөк эпопеяһының тылсым тулы тәүге биттәре яҙыла, шул тылсымлы бер һулыштан дауамланып, 1869 йылда ул тамамлана. Әйтергә кәрәк йәнә: башҡорттар араһына шул тәүге килеүҙән һуң теүәл ун йыллап үткәс, теге саҡтағы һымаҡ уҡ, Толстойҙың һаулығы тағы ла физик яҡтан да, рухи яҡтан да емерелә. Б. Эйхенбаум һүҙҙәре менән билдәләһәк, был “Етмешенсе йылдар өлкән быуын яҙыусыларының күптәре өсөн, Тургенев өсөн дә, Гончаров өсөн дә, Писемский өсөн дә, Лесков өсөн дә катастрофалы булды. Толстой ҙа шул уҡ хәлгә тарыны: асылда ул шөғөлһөҙ, юлһыҙ, тәьҫирлекһеҙ тороп ҡалды... Толстойҙың беренсе ҡарары — яҙыусылыҡты ташлау... 1869 йылдың шомло йәйендә ул аҡылдан шашыуға, психик ауырыубилдәләренәсә юлыға яҙҙы”. Эйе, был шомло йәй, Толстой фажиғәһе С.А. Толстая көндәлегендә лә йән тетрәткес сағыла: “Ул үҙе күп уйланы, ғазапланып уйланы; мейеһе ауыртыу тураһында, үҙендә эстән барған ҡот осорғос эш тураһында, уның өсөн бер нәмә лә ҡалмауы, үлергә ваҡыт етеүе һ.б. тураһында йыш әйтә торғайны”.

Мөшкөл хәл байтаҡҡа һуҙыла. 1871 йылдың йәйендә лә Лев Николаевич Толстой үҙе шағир Фетҡа: “Хәл ҡалманы, тыныслыҡтан башҡа, — ә ул юҡ, — бер нәмә лә кәрәкмәй һәм теләмәйем”, — тип, С.Урусовҡа: “Үҙ ғүмеремдә бер ваҡытта ла бындай төшөнкөлөк кисергәнем юҡ ине. Йәшәгем килмәй”, — тип белдерә. Бына ниндәй тетрәткес хәлдә ул ҡабаттан (1872 й.) йәнә үҙенең иркен күңелле башҡорттарына — ҡымыҙ көрәгәле киң далаға арманлыҡһыҙ килеп йығыла, ҡымыҙ эсеп сихәтләнеп, яңынан ауҡабаға. Һәм баяғы феномен: артынса уҡ (1873 й.) Толстойҙың икенсе үлемһеҙ романы — “Анна Каренина”ның тылсымлы тәүге биттәре яҙыла...

Лев Николаевич Толстойҙың йылы йән ипкенен һыуытмай һаҡлаған таш урам буйлап юғарыраҡ артылам. Быуат элек ул да ошо уҡ йүнәлештә — башҡорт далаһына йөҙ биреп атлаған. Һәм аҙаҡҡаса, 1883 йылға

тиклем, егерме йыл буйынса, уны илаһилап гиҙгән. Ошо юлдар һалған уйҙар ағышында бөйөк аҡыл эйәһенең тәрән аңында, бер юлы бөтә Донъя-Ғаләм киңлеге, йөҙәрләгән халыҡтарҙың булмышы һәм яҙмышы менән ҡуша, Аҫаба ата-бабаларым башҡорттарҙың булмышы һәм яҙмышы ла мәңгелеккә һүрелмәҫлек мөһөрләнгән. Уның тарих һәм халыҡтарға ҡарата ҡыҙыҡһыныуы ла даһиҙарса — көтөлмәгәнсә яңы булған. Оло әҙәби хеҙмәттәре өҫтөнә, үҙ алдынаборонғо грек телен өйрәнеп, Геродоттың сал "Тарих"ы урыҫ теленә тәржемә ителеүҙән егерме дүрт йыл элгәре үк әле шул әҫәрҙе оригиналда уҡып белгән толстой, бөгөнгөнөң ғилми асышын быуат аша тоҫмаллап, тарихҡа үтәләй баға — Башҡорттарҙы сал Геродот скифтарының туранан-тура тоҡомдары итеп күрә, ошоноң менән киләсәк ғалимдарға ла ҙур мәғәнәле һабаҡ бирә. "Геродот еҫе аңҡыған" был халыҡты, тупраҡты ул гуманистарса ихлас, ысын күңел менән бирелеп һөйә. Уның ҡайнар мөхәббәтенә ҡайберәүҙәр ғәжәпләнеп, аңлай алмай аптырай. Урындағы керһеҙ күңелле, Толстойҙы үҙҙәренеке күреп яратҡан ябай урыҫ крәҫтиәндәре лә хатта, үҙҙәренсә, әҙипте көнләшә бире берәк ҡуялар. "Шулай, беҙ уның менән китеп барабыҙ, йәй көнө ине, — тип хәтерләгән Захар Андреевич Кузнецов тигән бер крәҫтиән 1908 йылда. — Көн сыуаҡ, матур, тирә-яҡ йәм-йәшел, сәскәләр. Лев Николаевич далаға ҡарап бара, үҙе шундай шат, төрлө үлән дә ҡоштар тураһында һөраша. Шунан үҙенең нисек итеп беренсе тапҡыр беҙҙең Самар далаһына тарыуын, һәм нисек Кәрәлек буйындабашҡорттарҙа йәшәүен һөйләй башланы. Ифрат та маҡтаны Лев Николаевич уларҙы. Ә миңә уның һүҙҙәре оҡшаманы. Йәнәһе беҙ, урыҫтар, тим, уны ниндәйҙер башҡорттарға ҡарағанда ла нығыраҡ хөрмәт итәбеҙ бит. Мужиктар, йәнәһе, уның беҙгә килеүен йыл да өҙөлөп көтөп ала.

— Йыл буйы, тип әйтерлек, һеҙҙең хаҡта һөйләйҙәр, маҡтайҙар, — тинем аҙаҡ.

Ҡысҡырып көлдө лә Лев Николаевич былай ти:

— Маҡтайҙар, тиһең инде? Мәҫәлдәге бер ялсының хужаһын нисек маҡтап бөтә алмағаны кеүек был...

Шунан өҫтәне:

— Мужиктар мине маҡтайҙар, тиһең инде. Ә ниңә? Мине маҡтарға түгел, ә кәңәштәремде тоторға, кешегә яманлыҡ эшләмәҫкә — бына нәмә кәрәк".

Толстойҙың башҡорттарға мөхәббәте уның Кәрәлек буйынан яҙған хаттарында сағыла. "Минең башҡорттарым бөтәһе лә мине танынылар һәм ҡыуанып ҡаршыланылар" — тип хәбәр итә ул ҡатынына. — "Күп нәмә яңы һәм ҡыҙыҡлы: үҙҙәренән Геродот еҫе аңҡыған башҡорттар ҙа, урыҫ мужиктары ла, халҡының ябайлығы һәм алсаҡлығы менән күркәм ауылдар ҙа".

Иғтибар итегеҙ: "Минең башҡорттарым"!..

Киң Ватаныбыҙҙың индустриаль үҙәктәренең береһе булған, халҡы миллиондан ашып, *бал* кәрәҙеләй тулышып, ҡатмарлы транспорт мәсьәләһен хәл итмәккә ер аҫтынан метро төҙөү әҙерлектәре башланған, үҙенең революцион һәм хеҙмәт тарихы менән, ошо унынсы биш йыллыҡ

фронтындағы удар ҡаҙаныштары менән оло һәм данлы таш ҡала буйлап атлайым. Иҙелдең ике ярын иңләп йәйрәп ята ҡотло Куй бышев (элекке Самар) өлкәһе. Унда, районданрҙа ла, икһеҙ-сикһеҙ Тыуған илдең һәр бер мөйөштәрендәге кеүек үк, ил табынын муллыҡ менән тултырыу өсөн ныҡышмалы көрәш бара. Был илһамлы талпынышта унарлаған, йөҙәрләгән милләттәрҙең берҙәм, татыу ғаиләһе ҡатнаша. Һәм ул татыу ғаиләлә минең милләтем кешеләре — Лев Николаевич Толстойҙың һөйөклө башҡорттары лабар.

"Минең башҡорттарым"!..

Ҡаланың Революция майҙанында туҡталам, Толстой күреп белгән зар тормошло башҡорттарҙың тоҡомдарын ысын яҡты донъяға сығарған бөйөк даһи Ленин һәйкәле алдында сикһеҙ тулҡынланып баҫып торам. Владимир Ил бич бында 1889 йылдың Октябренән алып 1893 йылдың авгусынаса йәшәгән, Самар марксистарының түңәрәген нигеҙләгән. Ә икенсе бер майҙандағы постаменттан Ленин донъяһын ҡурсалап яу сапҡан легендар Чапайҙың яугир ғәскәр төркөмө алға атлыға. Билдәле булыуынса, граждандар һуғышының шанлы Чапаев дивизияһына Ырғыҙ — Кәрәлек башҡорттары ла үҙҙәре теләп ағылған. Изге монумент төбөндә ерләнгән ун яугир араһында таштаҡтала З.А. Сарбаев, И.В. Булатов фамилияларының да алтын хәрефтәр менән мәңгеләштерелеүе үҙе үк был хаҡта асыҡ һөйләйҙер. Бронзаланып алҡыныусы чапаевсылар араһында миңә башҡорт һуғышсыһының да ифрат таныш йөҙө баға: был һынды бит скульптор заманында Ленинград ҡалаһында уҡып йөрөүсе башҡорт шағиры Ғайса Йосоповҡа ҡарап ҡойған. Тимәк, Толстойҙың башҡорттары бөйөк Ленин асҡан юлды һаҡлауҙа һыр бирмәгән.

"Минең башҡорттарым"!..

Лев Николаевич Толстой был алсаҡ һүҙҙәрен әйткәндән һуң йөҙ ҙә ун алты йыл үткәс, шул уҡ айҙа, шул уҡ юлдан йүнәләм киң далаға. Бөйөк әҙип Самарҙан Кәрәлек йылғаһы буйынаса 130 саҡрымды даланың саңлы арба юлынан уҙған. Бөгөн иһә бында һәммә район үҙәктәренә лә Куй бышевтан ялтлап яткан көҙгөләй шыма асфальт юл һуҙылған, ныҡлы график буйынса улар автобус маршруттарына беркетелгән. Ул ғына ла түгел, йәй көндәре хатта һәр бер колхоз, совхозғаса ла өлкә үҙәгенән маршрутлы автобустар йөрөп тора. Толстой булған замандарҙан был яҡтарҙа, бәлки, бер генә нәмә үҙен һаранараҡ үҙгәрткәндер — даланың тәбиғәте...

Автобус станцияһында Ырғыҙ буйының Бөрйән ауылынан килгән ҡартты осраттым, Ырғыҙ — Кәрәлек буйҙарына мәрйендәй теҙелгән шул һигеҙ башҡорт ауылының тормош хәлен һораштым.

— Тормош шәп! — тине, ҡырт өҙөп, ҡартым. — Ашарға-эсергә лә, кейенеп-яҫтанырға ла, тигәндәй, йәнеңә нимә кәрәк, бөтәһе килеп тора. Тик йыбанма, хәләл күкрәк көсөңдө биреп эшлә генә. Әммә дала кешеһе бер нәмәнән ҡытлыҡ кисерә шул...

Өнһөҙ һорау менән төбәлеп ҡарайым.

— Ямғыр юҡ, бына нәмә, мырҙам. Ҡыяҡтар ҡоро елгә көйөп ултыра. Үҙең менән Ағиҙелдең берәй быуаҙ аҡ болотон эйәртеп алып килһәңсе!

— Их ағай! — тип, мин дә күңелһеҙ көрһөнөргә мәжбүр булдым. — Мин киткәндә Башҡортостандың көньяҡ райондарында ла тап шундай уҡ хәл ине. Дала — дала инде...

— Эйе, дала. Дала-әсәй ҡомһоҙ түгел, ни бары ике генә мул ямғыр бир уға: игендәр шытып сыҡҡанда ла ем йыйғанда.

Автобус асфальт таҫма буйлап елдерә лә елдерә Толстой башҡорттары яғына. Ҡартлас әйткән "Ағиҙелдең берәй быуаҙ аҡ болото" йәнгә тынғылыҡ бирмәй. Күктәге быуаҙ болоттар менән дә тап ерҙәгеләй идара итеп булһасы! Шулай ҙа ниндәйҙер аҡлыҡ биләй күңелде: йылғаларҙың йыйылмаһы булған Иҙелдең мул һыуҙары, күптән түгел ҡаҙылабашлаған канал үҙәне буйлап, моғайын, тап Толстой уҙған ерҙән бында ла килеп етер. Ҡыуан елдәр киҫкән иркен яландарҙы сәскә аттыртыу тылсымы ла үҙ ҡулында бит совет кешеһенең!

Юҡ, дала ла үҙгәрмәй ҡалмаған: Толстой күргән икһеҙ-сикһеҙ ҡылғанлы киңлек бәрхәт кеүек йәшел иген баҫыуҙары, кеше ҡулыултыртып үҫтергән ҡуҫкыл урман һыҙаттары, уларҙы аша атлап уҙған юғары вольтле электр үткәргестәре, бейек һыубашнялары, фермаларҙың һәм комплекстарҙың ап-аҡ шифер түбәләре менән ҡомарланған. Өлкәнең иген һәм малсылыҡ райондары был ерҙәр. Бәрәкәтле, сихәтле ерҙәр... Ҡолаҡ төбөмдә бөйөк әҙиптең ошо ерҙәргә ҡарата әйткән һүҙҙәре яңғырап киткәндәй: "Шундай көндәр тора бында, ундайҙы беҙ Тулала күҙ алдына ла килтермәй беҙ. Бысрағы бер ваҡытта ла ярты сәғәттән дә уҙмаған ямғыры, йәшене, эҫелеге лә рәхәт. Беҙҙәге һөйкөмһөҙ өйҙәгегә ҡарағанда, йәйҙәрен бында тышта йәшәү шәберәк... донъя яратылғандан биреле әҙәм ҡулы ҡағылмаған, иң яҡшы бойҙай үҫтерә торған ер"... Һәм, шул далаға ғашиҡ булып, үҙе лә шунда ер һатып алып төпләнергә хыялланып, ҡатынына е бргән тағы ла бер сәләме: "...тик һинең дала тураһындағы ҡарашың яңылыш. Туланан 100 саҡрым ситтә ағасһыҙ йәшәү ҡот осорғос; ләкин бында хәл башҡа: һауа ла, үләндәр ҙә, ҡоро көндәр ҙә, йылы ла шуны эшләй — даланы яратаһың. Күҙ алдыңа килтер шуны: биш аҙна буйы бысраҡ күрмәнек, еүешлек һәм һыуыҡ тойманыҡ. Һатып алыуҙан киләсәк файҙа иһә бында әҙәм ышанмаҫлыҡ, тик саҡ ҡына хәтәрерәк. Һатып алыу хаҡын тулыһынса бер йыл эсендә ҡайтарырға була, әммә быйылғылай уңдырышһыҙ йылда мең һум тирәһе ҡаза күрергә лә мөмкин".

Дала характерын асыуҙың артыҡ кәрәге юҡтыр!

КПСС-тың Большеглущицкий район комитетының беренсе секретаре Александрр Константинович Зининдың да мин күрешеп хәл һорашҡас әйткән тәүге һүҙҙәренән үк бөркөлдө дала һулышы:

— Ямғыр юҡ, ямғыр... Яҙ бик ауырлыҡлы килде: ҡар бик иртә китеп, көслө ташҡын булды, шунан өҙлөкһөҙ яуым-төшөм башланды. Яҙғы сәсеүҙе бик һуңлап тамамланыҡ. Ә хәҙер бына, игендәр шытып сыҡҡайны, ер ҡорғаҡһып кипте. Дала зонаһы...

Районда йәмғеһе 128 мең гектар иртә һәм 48 мең гектар һуң культуралар сәселгән, бөтәһе 44 мең баш һыйыр малы, 100 мең һарыҡ, һигеҙ меңгә яҡын инә ҡош-ҡорт бар икән. План буйынСабыйыл район

дәүләткә 112 мең тонна иген, 7 мең тонна ит, (шуның 450 тоннаһы өйрәк ите), 22 мең тонна һөт, 570 тонна йөн (һәр һарыҡтан 4,2 килограмм) етештереп һатасаҡ. Йылдың беренсе айҙары уҡ был һандарҙың реаллеген күрһәтә — квартал планы ит буйынса — 100, һөт буйынса 102 процентҡа үтәлгән. Яҡшы бағылған сәсеүлектәр һәм са бынлыҡтар һәм көр ҡышлап сыҡҡан, аҙыҡ менән тәьмин ителгән мал-тыуар был 1978 йылды уңышлы йомғаҡлап ҡуйырға ышандыра. Тик әлеге лә баяғы — ямғыр...

Баяғы бөрйән ҡарты әйткәнде иҫкә төшөрөп:

— Их, үкенес, Толстойҙың башҡорттарына күстәнәскә Ағиҙелдән аҡ болот килтерә алманым... — тип шаяртҡан булдым. Александрр Константинович аңланы, күҙҙәремә ҡарап ихлас йылмайҙы:

— Зарар юҡ. Районыбыҙҙың күп милләтле берҙәм халҡы, шул иҫәптән толстой башҡорттары ла, тәбиғәттең ҡырыҫлығын үҙҙәренең белеме, оҫталығы, ҡайнар хеҙмәттәре менән еңәләр. Унан килеп... — Секретарь район картаһына күҙ һалды. — Бәлки, беләһегеҙҙер: һеҙ килгән яҡтан дала буйлап был ерҙәргә лә ысын дарья ағылып-алҡынып килә бит. — Ошо арала шул хаҡта гәзиттәрҙә уҡығанымды иҫләберәк торғанда, дәртләнеп өҫтәп ҡуйҙы. — Иҙел һыуын Урал итәктәренәсә урғылдыртасаҡ оҙон канал 160 километрға һуҙылған да инде; 1980 йылда ул беҙҙең районда ла ошо, тап Толстой булған Моратша ауылы тәңгәленән сарсаған донъяны сихәтле һуғарып уҙасаҡ. Секундына 150 кубометр һыу алып киләсәк ул. Ҡыҙыҡ, һеҙҙең Ағиҙел менән сағыштырғанда күпмегә тартыр икән был?!

Мин юлымдың осонда — Кәрәлек буйҙарында. “Южный” совхозының үҙәге. Ул 1956 йылда бында сирәм асырға килгән комсомолдың тәүге палаткаларынан үҫеп сыҡҡан, йылдар үтеүгә олпатланып, замана ҡасабаһы рәүешен алған. Элекке ҡола ялан булған урында — ҡасаба уртаһында ҙур йәшел баҡса. Баҫыубуйҙарында ла һәр ерҙә ҡуйы-ҡуҫҡыл урман һыҙаттары. Ағаслыҡта — билдән үлән. Ҡасандыр йәш кәләш Софья Андреевна Толстояны шомландырған ағасһыҙлыҡ юҡ инде бында хәҙер. Таш биналар араһындағы иң мөһәбәтлерәге — урмандай сөм-йәшел төҫлө, ҡалалағылай күп ҡатлы урта мәктәп. Совхоз быйыл гектарынан 19 центнер иген, 12 центнер көн бағыш, 150 центнер йәшел кукуруз массаһы, бер йыллыҡ үләндән — 21 центнер һәм күп йыллыҡтан 30 центнер бесән алырға, план буйынса дәүләткә 20590 тонна урынына 27000 тонна иген һатырға, һәр бер шартлы мал башына 24 центнер аҙыҡ берәмеге етештерергә йыйына. Һимертергә ҡуйылған һәр һыйыр малы тәүлегенә 700 грамм артырға, һәр һарыҡтан — 4,3 килограмм йөн, 100 инә

Һүр. 3. Л.Н. Толстойҙың "Ясная поляна" быуаһы буйында. Һулдан уңға: Солтанов Й.Ә., Борһанов М.М., Ғарифов Л.В., Сәғәҙиев Р.А. Алексей районы Гаврилов ауыл советы

һарыҡтан — 100 бәрәс, 100 һыйырҙан 90 быҙау үҫтереп алырға, тапшырылған һәр һыйыр малының ауырлығы — 420, һарыҡтыҡы 38 килограмм тартырға тейеш. Шул саҡ дәүләткә 13100 центнер ит, 1400 центнер һөт һатыласаҡ. Совхозда быларҙың барыһын да тәьмин итерҙәй етештереү саралары — 31 мең гектар һөрөнтө ере, биш мең ярымдай һыйыр малы, утыҙ меңләп һарыҡ, етерлек техника һәм, иң ҡиммәтлеһе, шуларҙың бөтәһен бәрәкәткә ашырырҙай игенселәр, малсылар — түштәрен ордендар һәм миҙалдар биҙәгән, ҡулдарынан алтын ҡойолған Сәғдиев Ғөбәйҙулла, Ширъязданов Һатыбалды, Ғәлиәкбәров Мөхәммәткирәй, Оҫконбаев Теләүғәли, Скопец Василий, Глотов Александр, Попов Евгений, Малыкин Алексей, Куценко Владимир, Гусев Петр, Росляков Андрей кеүек егәрле кешеләр бар. Уларҙың күбеһе — совхозға беренсе палатка ҡаҙығы ҡаҡҡандан алып өҙләкһеҙ ошонда эшләүсе патриоттар, шул иҫәптән совхоз директоры Роженков анатолий акимович менән партком секретаре Сәғдиев Рәфҡәт Әкрәм улы ла.

Сәғдиев иптәш партком секретаре итеп һайланғанға ҡәҙәр оҙаҡ йылдар агроном, бүлек управляющийы булып эшләгән, Кәрәлек буйы ерҙәрен дә, кешеләрен дә үҙенең биш бармағындай яҡшы белә. Ул мине Толстойға бәйле бөтә иҫтәлекле урындарға, уның хаҡында хәбәрҙар кешеләр менән осрашыуҙарға үҙе алып йөрөнө — парткомдың әрһеҙ "уаз"ын да, егеттәрсә, үҙе теҙгенләп алды.

Артта ҡалды Кәрәлек һыуын арҡыры киҫкән быуа, быуаны сыҡҡас уң яҡ ярҙың тау битләүендә һибелеп китте совхоздың 7-нсе бүлексәһе — Толстой булған Моратша ауылының аҡ шифер түбәле өйҙәре. Бына ул

Толстой баҫҡан, Толстой һулаған, “Геродот еҫе аңҡыған” ерҙең изге тупрағы! Һәр бер туҙан

Һүр. 4. Уңдан һулға: Солтанов Йыһат (яҙыусы), Ғайсин Мөхәммәтйән, Борһанов Мәкәрим, Шакиров Миңлевәли, Сәғәҙиев Р.А., Ғарифов Латиф, Бикҡужин Ғөбәйҙулла, Әсәдуллин Миңтимер, Шакиров Ҡаһир, Шәйхисламов Шәмситдин, Аҫылкирәйев Бәхтекирәй, Сурбаев Сабир. Моратша ауылы баҡсаһында

бөртөгө, үлән ҡыяғына тиклем бөйөк әҙип тураһында иҫтәлектәр һөйләй һымаҡ. Аҡ һаҡаллы ауыл ҡарттары — Толстойҙы ҡунаҡ итеп ҡәҙерләгән башҡорттарҙың туранан-тура тоҡомдары — йыйылышып, Лев Николаевич Толстой ҡасандыр ҡырын ятып ҡымыҙ эскән, һыу ингән, тирмәләрҙә аяҡ бөкләп ултырып ҡунаҡ булған яр буйына төшәбеҙ. Быуындарҙың эстафетаһын нисек итеп ныҡлы ҡулдарға биреп ҡалдырырға уйланып бара һымаҡ аҙ һүҙле ауыл ҡарттары: Сабир Сурбаев, Мөхәммәтйән Ғайсин, Бәхтегәрәй Аҫылгәрәйев, Ҡаһир Шакиров, Миңлевәли Шакиров... Барыһы ла Тыуған ил кискән утты-һыуҙы үткәндәр, барыһы ла бөгөнгө көндә лә совхозда янып эшләп йөрөгән хеҙмәт һәм һуғыш ветерандары. Әммә елдәр иҫә, һыуҙар аға, ғүмерҙәр үтә тора шул. Толстойҙы үҙ күҙҙәре менән күреп белгән быуын инде юҡ бында, ә быларҙа олатайҙар иҫтәлеге һаҡлана. Тап ата-бабаларҙай, түңәрәк табын ҡороп, нәҡ Толстой ултырған ерҙә аяҡ бөкләшеп ултырабыҙ. Толстойҙың бында булыуы тураһында бөтә белгәндәребеҙҙе тирергә, бер табынға туплаға тотонабыҙ. Аҡһаҡалдарҙың беренсе һүҙе, әлбиттә, яҙҙың ҡорораҡ килеүе, ямғырҙың зарыҡтырыуы тураһында. Мин, “Ағиҙелдең аҡ болото”н хәтерләп, ни әйтергә белмәйерәк ултырғанда, партком секретаре йәйланы эште:

— Зарар юҡ, алдырырбыҙ нисек тә. Ә бер-ике йылдан, үҙегеҙ беләһегеҙ, Иҙел һыуы ошонда килеп етәсәк, сарсауҙы ҡандырасаҡ.

— Тимәк, үҙебеҙҙең Ағиҙелдең аҡ һыуҙарын да татыясаҡ быҙ икән, — тине күпте күргән ҡарттар.

Һүр. 5. Герой-әсә Алтынбикә Шәйхелисламова

— Эйе, изге Ватаныбыҙҙа беҙҙең эсәр һыуҙарыбыҙ ҙа, Толстой рухына тиңдәш оло күңел даръяларыбыҙ ҙа бөтәһе бергә ҡушылып, ҙур иҙел булып аға, шуның арҡаһында хатта ҡомло сүлдәр ҙә йәшәрә. (Һүрәттә Герой-әсә һәм шәп почта таратыусы Алтынбикә Шәйхелисламова. Моратша ауылы).

Аҡыллы һәм тәрән фекерле, баҫалҡы һәм ғорур тәбиғәтле был кешеләр миңә бөйөк яҙыусының “Кешегә күпме ер кәрәк?” хикәйәһендә һүрәтәнгән башҡорттарҙың Геродотса һәм Гомерса эпик ҡоласлы образдарын хәтерләтте яңынан... Ә Баш осонда, моңайып ҡына, ҡарт өйәңке япраҡтары шыбырҙаша. Йылға буйындағы көмөш ҡылғанлыҡта утлап йөрөй күңелдәргә яғымлы йылҡы өйөрө, ҡойроҡ сәнсеп са быша ҡолондары — былары ла Толстойға сихәтле ҡымыҙын биргән башҡорт аттарының тоҡомдары...

Уйланып ултыра эргәмдә Сурбаев Сабир олатай. Ғаилә шәжәрәһенең башына бер туғандар Рәхмәтулла менән Сурбайҙы теркәй ул. Рәхмәтулланың улы, билдәле булыуынса, Толстойҙың һәр саҡ бында күҙ терәп килә торған, яҡты йөҙөн, һый-хөрмәтен күрә торған иң яҡын башҡорт дуҫы Мөхәммәтша Рәхмәтуллин тап үҙе икән инде. Мөхәммәтша — заманының уҡымышлы, Толстой менән бер табында аяҡ бөкләп ултырып һөйләшерлек юғары культуралы кешеләренең береһе булған, телдәрҙән ғәрәпсәне, фарсыны, урыҫсаны яҡшы белгән. Лев Николаевич Толстой уны, яратып һәм хөрмәтләп, Романыч тип кенә йөрөткән. башҡорт халҡының тормошо, тарихы, эпик ҡоласлы ҡобайырҙары тураһында ла ул, моғайын, беренсе ҡат ошо кешенең ауыҙынан ишетеп хайран ҡалған һәм, шуларҙы Геродот тарихына сағыштырып, үҙенең баяғы, башҡорттарҙан “Геродот еҫе аңҡый”, тигән атаҡлы һығымтаһын яһаған. Мин иһә шул Мөхәммәтшаның туранан-тура тоҡомдары менән әңгәмә ҡорам. Мөхәммәтшанан тыуған балаларҙың береһе — Толстойҙы күреп белгән Нәғим, Нәғим улдары — Толстойҙы күреп белгән Ғәбделфәрит һәм Толстой үҙен тула янындағы Ясная Полянаһына алып китеп, мәктәбендә уҡытҡан, һуңынан Мәскәү университетына урынлаштырған Ғәбдрәшит. Билдәле булыуынса, 1905 йылда Ғәбдрәшит Нәғимов унда йәштәрҙең революцион хәрәкәтенә ылыға һәм, ҡара көстәр тарафынан үлтерелеп, үҙ ауылы Моратшала ерләнә. Ғәбдрәшиттән ҡалған улан Нариман Ғәбдрәшитов, отставкалағы совет хәрби-диңгеҙ офицеры, Ленинградта йәшәй хәҙер, һирәкләп ҡайтҡылап та китә икән. Ғәбделфәрит Нәғимовтың иһә улдары Әнүәр Нәғимов —

Башҡортостандың Баймаҡ районы Йылайыр совхозында, Заһретдин Нәғимов — Свердловск өлкәһендәге Ҡушуба тигән ерҙә, ҡыҙы Көмөшбикә Миһранова үҙҙәренең Моратша ауылында тора. 1908 йылда тыуған әлеге Сабир Сурбаевтың шәжәрәһе лә туранан-тура Толстой ултырған табынға барып тоташа: Сабирҙың атаһы — Хафиз, Хафиздың атаһы — Хажиморат Сурбаев имеш (Сурбай тип тә йөрөткәндәр уны). Эйе, баяғы шул Толстойҙың иң яҡын, ул Михаил Иваныч тип йөрөткән, уның менән ҡыҙып-ҡыҙып шашка-сатраш уйнаған башҡорт дуҫтарының береһе Хажиморат үҙе була ла инде! Кәрәлек буйынан ебәргән бер хатында: "Мин бында һүрәт төшөрөргә тотондом... Һәм ике башҡортто һүрәтләнем: атаһы менән улын. Атаһы Михаил Иваныч әкәмәт башҡорт, ул беҙҙе сатрашта ота һәм беҙҙе сортирҙа ҡалдыра. Бер атанан ун дүрт ул булған улар; уның үҙенең хәҙер ун бер улы бар, уға илле биш йәш һәм ике йәш бисәһе бар, беҙҙең менән ул ярышып йүгерешеүҙән дә баш тартмай. Кисә беҙ уның менән бергә һыу индек", — тип хәбәр итә яҙыусы. Хажимораттың фамилияһы быҒаса билдәһеҙ ине, ул һуғышҡа тиклем үк Толстой эҙҙәренән ошо ерҙәрҙе ҡыҙырып үткән тыуған яҡты өйрәнеүсе Е. Шаповаловтың яҙмаларынан асыҡланды.

Далаға үҙенең шифаларын шып-шым ғына һеңдереп аҡҡан сал Кәрәлек буйында, Толстой ултырған табында ултырабыҙ. Графтың төп ҡымыҙ йәйләүе бынан бер нисә саҡрым ситтәрәк булған, ләкин ул, килгәс тә 60 тәңкәгә һатып алған ҡола атына атланып, 15 тәңкәлек "Верный" тигән ҡара этен эйәртеп, ауылға көн дә, тип әйтерлек, килеп йөрөгән, килгәне һайын ошонда ҡунаҡ булған. Ул, халыҡтарҙың йолаларын тәрән ихтирам итеүсе әҙип, тирмәлә лә, табында лабашҡорттарҙан айырылмаҫҡа тырышҡан: ҡымыҙҙы ла, туҫтаҡты тултырып, ҡуш ҡуллап тотоп эскән, йылҡы итен һәм биш бармаҡты ла ҡулдан һоғоноп ашаған... Ҡымыҙы тәтемәһә лә, Толстой ейгән биш бармаҡты миңә лә шул табында уҡ ауыҙ итергә Насип булды, телде йоторлоҡ был ашты, ата-баба йолаһынаса бөтә шартына килтереп, совхоздың ошо 7-нсе бүлексәһенең уңған ашНаҡсыһы өлкән повар акирова Хөббөлнисабакир ҡыҙының тылсымлы һәм бәрәкәтле ҡулдары әҙерләгәйне.

Бүлексә етәкселәре лә ифрат та уңған, тартҡанда ла таралмаҫлыҡ өстағандай баҙыҡ ир-егеттәр булып сыҡты. Борһанов Мәкәрим Махиян улы, 1924 йылғы, Ватан һуғышы осоронда Куй бышевта оборона промышленносында эшләп ҡоростай сыныҡҡан, елегенәсә пролетариат ҡурына тейенгән кеше. 1968 йылдан биреле ошонда управляющий, ауылдың уҙаманы. Ҡарамағында меңәрләгән гектар иген баҫыуҙары, 10800 Баш һарыҡ. Һарыҡ йөнөн ҡырҡыу алдынан ҡыҙыу әҙерлек бара бөгөн (былтыр йөн һәр һарыҡтан 4,5 килаграмм алынған), дәүләткә иткә тапшырыу өсөн меңдән ашыу һарыҡ тиҙләтеп һимертеүгә ҡуйылған. Ауылда йәмғеһе 73 йорт, башланғыс мәктәп, фельдшер-акушер пункты, заманса итеп һалынған һәйбәт клуб бар. Йәштәр, уҡып сыҡҡас, күбеһенсә тыуған ерҙә тороп ҡала, һөҙөмтәлә бүлексә көллө эштәрҙе лә үҙ көсө менән башҡара. Ошо хаҡта һүҙ сыҡҡас, бүлексәнең партбюро секеретаре һәм бригадиры Бикҡужин Ғөбәйҙулла Ғәлимйән улы (1953 йылғы), аҙ

һүҙле һәм, күҙлеге үтә тура текләп, кешене үтә күреүсән етәксе, алдынғы йәш механизатор ҡыҙҙар Ҡаһарманова Вафия, Ғизетдинова Миңсылыу, шулай уҡ Ғайсин Әхмәтйән һ.б. исемдәрен ихтирам менән телгә алды, ә малсылыҡ буйынса бригадир Ғарифов Латиф Вахит улы (1920 йылғы) бүлексәнең данлы һарыҡ көтөүселәре ғәбитов Бикҡужа, Ғәзизов Ғәлимйән кеүектәрҙең егәрле хеҙмәте совхода киң танылыуын белдерҙе. Әйткәндәй, Ғарифов Латиф ағай үҙе лә алды-ялды белмәгән егәрле етәксе, өҫтәүенә, Толстойҙың замандашы ғәбдрәшит Нәғимов менән бер йылда тыуып, бергә уйнап үҫкән Вахит ғарифовтың улы булып сыҡты. Бына ошо азаматтар ҡулы менән арттырыла ерҙең даны. Толстой булған ҡотло тупраҡта шул арҡала Юғары уңыштар яуланған, бүлексәгә бик күп Почет грамоталары, шул иҫәптән СССР Ауыл хужалығы министерствоһының, профсоюздар Үҙәк Комитетының грамоталары бирелгән.

Кәрәлек буйына беренсе (1862 й.) һәм икенсе (1871 й.) килеүендә Толстой йәшәгән, ҡымыҙ эскән төп йәйләү урынына лабарып еттек. Тыныс һыҙатлы ҡалҡыулыҡтар араһында йәйрәп ятҡан һыулы үҙәк — Ильяс үҙәге — Толстойҙың рухын бөркөп асылып киткәндәй булды. Ошонда ул ғүмеренең бер өлөшөн үткәргән, анау һуҡмаҡтарҙа үҙенең тәрән фекерҙәрен, яҙыласаҡ “Һуғыш һәм донъя”, “Анна Каренина” әҫәрҙәрен уйлап йөрөгән. Бөйөк яҙыусының бындағы хәле, көн тәртибе нисегерәк булған һуң? Был хаҡта үҙе ошонан яҙған хаттарында тасуирлап бирә: “Һиңә беҙҙең көнкүреште яҙайым. — башҡорт ауылы, ҡышлау, бынан ике саҡрымда. Йәйләүҙә, ҡырҙағы йылға буйында, өс кенә башҡорт ғаиләһе.

Беҙҙең хужаның (ул — мулла) дүрт тирмәһе бар; береһендә ул үҙе ҡатыны менән һәм улы ҡатыны менән (улы Нәғим, теге юлы мин бынан киткәндә ул малай ғына ине) йәшәй, икенсеһендә ҡунаҡтар. Ҡунаҡтар өҙлөкһөҙ килә — муллалар — һәм иртәнән алып төнгәсә ҡымыҙ һемерә... Өсөнсө тирмәлә — ике

Һүр. 6. Л.Н. Толстойҙың Ильяс дуҫының йәйләүе – Ильяс Үҙәге. Һулдан уңға: Борһанов М.М., Солтанов Й.Ә., Ғарифов Л.В.,Сәғәҙиев Р.А. Таш-Күстән совхозының 3-өнсө бүлексәһе

ҡымыҙсы... Дүртенсе оло тирмәлә, элек ул мәсет булған... беҙ торабыҙ. Мин карауатта бесән һәм кейеҙ өҫтөндә йоҡлайым... Өҫтәл һәм бер ултырғыс бар. Әйләнәлә әйберҙәр эленгән. Бер мөйөштә буфет һәм аҙыҡ-түлек... икенсеһендә кейем-һалым, аулаҡ урын, өсөнсөһөндә китапхана һәм кабинет. Хәйер, тәүҙәрәк шулай ине, хәҙер бөтәһе лә бергә буталды. Бигерәк тә үҙебеҙ һатып алған һәм тиктомалдан бер поп миңә бүләк иткән тауыҡтар боҙа эште. Уның ҡарауы ошонда уҡ, үҙебеҙҙең күҙ алдында, һәр көн һайын өс йомортҡа һалалалар. Тағы атҡа һололо тоҡ һәм эт — гүзәл ҡара сеттер, — ята, исеме "Верный". Атым ҡола һәм миңә яҡшы хеҙмәт итә. Мин бик иртә торам, йышыраҡ биш ярым сәғәттә... Һөтлө сәй эсәм, өс сынаяҡ, тирмәләр тирәһендә йөрөштөрәм, тауҙан эркелгән өйөрҙәрҙе күҙәтәм, был ифрат та һоҡланғыс, — мең баш йылҡы, ҡолондары менән айырым бер өйөр. Шунан һуң ҡымыҙ эсәм, һәм иң ғәҙәти йөрөп ҡайтыу — ҡышлаҡ, йәғни ауыл; унда — ҡымыҙ эсеүсе башҡалар, барыһы ла, әлбиттә, таныштар".

— Тап бына ошо үҙәктә, — тип ҡулын һуҙып күрһәтә Латиф ағай, — Мөхәммәтшаның ҡымыҙ бейәләрен бағып, ҡымыҙ яһашып, Толстой әйткән ҡымыҙсы Ильяс ҡарт үҙенең әбейе менән бергә йәшәгән өсөнсө тирмәлә. Ҡартатайым әйтер ине: элек Ильяс үҙе лә Бикбай булған, һуңынан ярлыланған...

Бына һеҙгә, кәрәк булһа, Лев Толстойҙың "Ильяс" тигән атаҡлы хикәйәһенең тормоштан уҡ үҙ исемдәре менән алынған геройҙары:

ауылдың урта хәлле кешеһе Мөхәммәтшаһ, унда ялсылыкта көн күргән Ильяс менән уның ҡатыны Шәмшәмғи!..

Толстой Кәрәлек буйҙарында һунарсылыҡ менән дә ныҡ мауыға, көн дә, тип әйтерлек, өйрәк, туғаҙаҡтар атып ала. Шуныһы әһәмиәтле: һунарсылыҡ һуҡмаҡтары уны күрше Ырғыҙ — Кәмәлек буйҙарындағы башҡорт ауылдарына ла килтерә. “Дөрөҫөн генә әйткәндә, — тип яҙа ул ҡатынына, — беҙ, ниндәйҙер Ырғыҙ, Кәмәлек тураһында тоноҡ ҡына төҫмөрләгән килеш, ҡымыҙ булған ерҙәрҙә йөрөп күңел асырға, ҡош атырға тип киткәйнек. Сәйәхәтебеҙ дүрт көнгә һуҙылды һәм иҫ киткес шәп булып сыҡты. Улъя күп, ҡайҙа ҡуйырға белмәй беҙ — өйрәкте ашаусы ла юҡ, беҙ булған ерҙәрҙә башҡорттар ҙа, иптәштәребеҙ ҙә иҫ киткес гүзәл ине.

Мине... бындағы бөтә башҡорттар ҙа беләләр һәм бик хөрмәт итәләр. Һәр ерҙә беҙҙе әйтеп бөткөһөҙ ҡунаҡсыллыҡ менән ҡаршыланылар. Барған һәр ерҙә хужа һимеҙ ҡуй һуя, оло көрәгә менән ҡымыҙ ҡуя, иҙәнгә келәм һәм мендәрҙәр түшәй, шунда ҡунаҡтарҙы ултырта ла ҡуйын ашап, ҡымыҙын эсеп бөтөрмәйенсә сығармай. Ҡунаҡтарын үҙ ҡулынан эсерә һәм үҙ ҡулынан (сәнскеһеҙ) ҡуй ите һәм май һоғондорта, уның хәтерен ҡалдырырға ла ярамай”. Ошо барыуындалыр, моғайын, Лев Николаевич Толстойҙың йәйләүҙә өйөрҙәге бер бик шәп ҡола бейәгә күҙе төшөү була, ҡунаҡ хужаһы ул йылҡыны, Толстой ҡайтырға сыҡҡанда, башҡорт ғәҙәте буйынса, ҡунаҡтың арбаһының тәртәһенә килтереп бәйләп тә ҡуя. Мул һөтлө һәм йыуаш был бейәне Толстой үҙенең далалағы утарында оҙаҡ йылдар буйынса ҡәҙерләп аҫырай, 1883 йылда далаға һуңғы килеүендә уны, “Бына беҙ ҙә һинең менән, Захарушка, башҡорт йолаһы буйынса хушлашайыҡ” тип, шул атҡа күҙе ҡыҙған күсере Захар Андреевич Кузнецовҡа бүләк итеп биреп китә. Шулай итеп, Ырғыҙ — Кәмәлек буйҙарына ла Лев Николаевич Толстойҙың изге еле ҡағыла һәм бөйөк Октябрь революцияһы тулҡынында шул ауылдарҙан бер ыңғайҙан бынамын тигән дүрт башҡорт яҙыусыһының күкрәп ҡалҡып сығыуы ла тиктән генә түгелдер — Толстой даһилығының утлы осҡондары сәселеп ҡалған унда!

Бөйөк әҙипте, һаулығы ҡаҡшап интегеп килгәне һайын, йомарт башҡорт далаһы шулай сикһеҙ ололап ҡаршылай, ҡымыҙының сихәте менән арбай. Ә ул сихәт нисегерәк булған һуң? Бына Толстойҙың үҙенең ҡымыҙға ниндәйерәк хәлдә килеп етеүенә ишаралаған, Кәрәлек буйынан яҙылған тәүге хатындағы юлдар: “Һағыш һәм һорау: яҙмыш мине ниңә бында ташланы?.. Арыным һәм кәйефем юҡ”. Ҡымыҙ эсеп теүәл бер аҙна үтә, һәм шунан һуң ниндәй ғәжәп үҙгәреш: “Һөйөклө дуҫым, шатлыҡ менән һиңә үҙем тураһында яҡшы хәбәрҙәр яҙам, йәғни һиңә һаулығымдан зарланып яҙған һуңғы хатымдан һуң ике көн үткәс тә мин үҙемде ғәжәп һәйбәт хис итә башланым һәм һине борсоғаным өсөн оялам... Мин зарланған нәмә — һағыш һәм вайымһыҙлыҡ үтте инде”... Йәнә: “Мөһиме шул: һағыш иҫемдә лә юҡ һәм хәҙер мин ҡымыҙға утлыҡтым, ысын ҡымыҙ хәленә керҙем, йәғни иртәнән алып кискәсә ҡымыҙҙан Еңелсә иҫерек, ҡай саҡ көндәр буйына бер ни ҙә ашамайым, йә

иһә аҙ-маҙ ғына. Көндәр бында иҫ киткес”. Һәм: “Ҡымыҙға мин яңы ғына утлыҡтым. Уны элеккегә ҡарағанда ныҕыраҡ ләззәтләнеп эсәм... Һәм ҡымыҙ шул тиклем тәмле, күҙ алдына килтереп булғыһыҙ. Степа, хатта ул да, мөғжизә был, ти”.

Лев Николаевич Толстой ошо гүзәл яҡҡа шул тиклем дә ғашиҡ була, Ҡоро Таналыҡ һыуы буйындағы тучков утарын һатып алып, шунда хужалыҡ ҡороп, йыл да ғаиләһе менән йәйҙәрен үткәрергә ғәҙәтләнә; Мөхәммәтша дуҫы, әүәлгесә, йәйләүе менән шундараҡ күсеп барып, Толстойға шифалы ҡымыҙ яһауын дауам итә. Бер саҡ Иҙел буйҙарына ҡоролоҡ-ҡытлыҡ ябырылып, халыҡ асығабашлағас, Лев Николаевич ошонан тороп “Нәшер итеүселәргә хат”ын яҙа, асығыусы илгә ярҙам ойоштора. 1878 йылда ул, Маса йылғаһы буйындағы бистром (хәҙерге алексеевский районында) утарын һатып алып, үҙе һөйгән башҡорт ауылы Моратша һәм Патровка, Гавриловка тигән урыҫ ауылдарына яҡыныраҡ урынлаша, 1883 йылға тиклем, утарын һатып тамам киткәнсе, ошондағы халыҡ менән ҡайнаша... 1920 йыл Патровканан шул тирәгә күсенеп ултырған Кузяевка ауылын хәҙер Л.Н. Толстой хөрмәтенә Лев Толстой ауылы тип атағандар, Гавриловка һигеҙ йыллыҡ мәктәбенә лә уның исеме бирелгән. Әҙиптең ошо 150 йыллыҡ юбилейына ҡарата район үҙәге алексеевкала мемориал таштаҡта ҡуйыласаҡ

— Боронғоно хәтерләгән ҡарттар бөтә бара инде — күп нәмәләр онотола, юйыла. Лев Николаевич Толстойҙың беҙҙең Большеглущицкий районы Моратша ауылында, күрше район Ырғыҙ буйы ауылдарында күп тапҡырҙар булыуын да хәтерләткән изге яҙыуҙар ҡуйылһа, йәш быуынды тәрбиәләүҙә ҙур файҙаһы тейер ине, — тинеләр олатайҙар. Мин иһә райком секретары А.К. Зинин иптәш менән тап шул хаҡта һөйләшеүемде әйттем.

— Үкенескә ҡаршы, быны өсөн беҙҙең районға өлкә тарафынан бер ниндәй ҙә аҡса-сарыф бүленмәгән шул, — тип ҡуйғайны ул, көрһөнөп. Оло юбилей айҡанлы, бәлки, был хаҡта ныҡлап яңынан һүҙ ҡуҙғатылһа, уға, бәлки, Башҡортостан хөкүмәте лә ҡушылһа, яҙыҡ булмаҫтыр һымаҡ. Сөнки Толстойҙың бында һаҡланып ҡалған бөйөк рухы, — үҙе үк һөрәнләп тора! — халыҡтарҙың бөгөнгө ҡаҡшамаҫ дуҫлығының юйылмаҫлыҡ билгеһе, донъялағы иң ҡәҙерле тарихи ҡомартҡыларҙың береһе ул. Ә, СССР Конституцияһының 67-нсе статъяһында яҙылғанса, “Тарихи ҡомартҡыларҙы һәм башҡа культурабайлыҡтарын һаҡлау тураһындағы хәстәрлек — СССР граждандарының бурысы”.

Лев Николаевич Толстойҙың Маса йылғаһы буйындағы, бөгөн далала “Ясная Поляна” тип йөрөтөлгән утары урынынабарғаныбыҙҙабаяғы Лев Толстой ауылында беҙ был тирәнең иң ҡарт кешеһе Петр Кириллович Патринды осраттыҡ, фотоға төшөрөп алдыҡ. Уға быйыл теүәл 100 йәш: 1878 йылда, Толстой бындағы утарын һатып алған йылда тыуған, әҙип бынан башкөлләйгә киткәнендә биш йәш булған уға. Толстой утарында эшләгән ике туған ағаһы Андрей Харламычҡа эйәреп барып, Толстойҙы күреүҙәрен, Толстой уны башынан һыйпауын хәтерләй. Бабайҙың әйтеүенсә, Чуров тигән кеше ҡасандыр

Толстой утары урынында коммуна төҙөп маташҡан, уға, бөйөк әҙиптең иҫтәлеген хөрмәт итеп, “Ясная Поляна” исемен биргән. Шунан биреле шулай аталабыл урын.

Ҡола ялан уртаһындағы утар урынында Толстой барҙағы бейек быуа ла, ҡолас ташлап Толстой йөҙөргә яратҡан, ялтлап ятҡан һыу ҙа, быуа буйындағы һылыу өйәңкеләр ҙә һаҡланған шул көйөнсә; фәҡәт ятыуҙы уратып алған элекке ҡуйы таллыҡ менән ҡамышлыҡ ҡына эҙһеҙ юғалған. Быуа башында, тап иҫтәлектәрҙәгесә, Толстойҙың балконлы ҙур өйөнөң, уға ҡаршы бәләкәйерәк ҡунаҡ өйөнөң, башҡа ҡоролмаларҙың урындары айырым-асыҡ беленеп ята; элек яҙыусының эш кабинеты алдында күҙҙең яуын алырлыҡ аллы-гөллө сәскәләр үҫкән ике өй араһындағы майҙанлыҡта даланың мәңге тере һәм әрһеҙ ҡылғаны ялпылдап ултыра. Өйәңкеләр башындағы сытыр ояларҙа Толстойҙы күргән ҡара ҡарғаларҙың әллә нисәнсе быуындары бала осороп ҡарҡылдаша. Ә быуаға йыйылған һыу, быуа аҫтына һарҡып, Толстойҙың үҙе барҙағы кеүек үк, мәңгелеккә кире әйләнеп ҡайтмаҫҡа аға ла аға...

Эйе, беребеҙ ҙә мәңгелек түгел, ләкин бөйөк тәбиғәт, тәбиғәтте танып белгән һәм ҡусҡыллығын үҫтергән бөйөк кеше рухы ғына мәңгелек.

11.06.1978.

Ҡаяларҙы ҡырҡып уҙған ерҙә

Бөтә Союз удар комсомол төҙөлөшө (ВУКС) — Белорет — Шишмә тимер юлын һалған ергә китеп барам. Ҡолаҡтарымда зыңлап тора ҡорос сыңы, бетон гөрһөлдәүҙәре, динамит шартлауҙары. Әммә ылыҫ бөркәнеп талған тауҙарҙа ике күҙем.

Ни тиһәң дә, әҙәм балаһы — тәүбашта тәбиғәт балаһылыр инде ул. Хатта шаулы, тимер-томорло, термоядро энергиялы егерменсе быуат аҙағында ла. Илаһи аҡыл ҡанаттары рухыбыҙҙы һаман-һаман юғарыраҡ сорғолтҡан һайын, беҙ, үҙебеҙ ҙә һиҙмәҫтән, йөрәк менән ерҙең тере тупраҡ күҙәнәктәренә, шунда бөрөләнеп шытҡан йәнле йәшел ҡыяҡҡа тартылабыҙ. Һәм шул энә күҙәүендәй генә хлорофилл фабрикаһының именлеге — бөтә кешелек донъяһының именлеге икәнен аҡыл көндән-көн нығыраҡ тоя бара. Ер-әсәнең һәр саңын һәм таш киҫәген, морон төрткән үләнен, нисек булһа, шулай ҡымшатмай һаҡлау, килер быуындар өсөн ҡурсалап ҡалдырыу теләге тыуа. Ә күҙ алдында миллион йылдар тын ятҡан саф тәбиғәттең иңен ярып тауҙар күккә сәсрәһә, тәүге һөмһөр шпалдар, ҡорос рельстәр һалынһа?..

Эйе, тимер юлдар ер иңенә күк көм бәҙен тетрәтеп, тирә-яҡты һиҫкәндертеп һуҙыла. Локомотивтар төбәктәрҙең талғын йоҡоһон асып, көтөлмәгән үҙгәрештәр һулышын бөркөп килә. Берәүҙәрҙе уңдырырға, икенселәрҙе туңдырырға ла ихтимал бит әле был металл һулыш. Тарих үҙе шаһит быға. Һуңғы ике быуат һуҙымында кешелек донъяһы тимер юлдарҙы аҙ төҙөмәгән, әсе-сөсөһөн дә етерлек татыған. Уйлайым да шул

турала, ирекһеҙҙән, ҡасандыр мәктәптә алған белемдәр килеп баҫа йәнләнеп: Некрасовтың “Тимер юл” поэмаһы; инглиз колонизаторҙарының Африкала ҡолдар һөйәге өҫтөнә һалған юлы... Ҡорос рельстәр унда хеҙмәтсән халыҡтарҙың ҡанын, елек майын һурыу йәһәтенән һуҙылған. Тарих былар бөтәһе. Ә беҙ, бөгөнгө совет кешеләре, үҙебеҙ ҙә абайламаҫтан ни тиклем ҙур бәхетле: Бөйөк Октябрь илдәге ҡанһурар һөлөктәрҙең ҡәбәхәтлеген һәммәбеҙ өсөн фәҡәт тарих, дәреслектәрҙән генә уҡып белә торған мәғлүмәт яһап ҡалдырҙы. Шуға ла беҙ сал Уралдың тиртеп торған тормош тамырын ҙур Ватандың тәнендәге ҡан әйләнешенә Тағы ла нығыраҡ тоташтырыусы яңы ҡорос артерия һалына башлау көнөн бөтә ил менән ашҡынып-көтөп алдыҡ. Айныҡ аҡыл алданыраҡ йөрөнө: удар төҙөлөштөң тәүге квадрат метрына бульдозер теше батып кермәҫе борон уҡ әле, беҙ унының киләсәк игелеген аңланыҡ. Яңы юл республикамдың тәбиғәтбайлыҡтарына ифрат йомарт, ләкин уларҙы алыу, файҙаланыу юлдары булмаған төпкөл райондарын тоташтырып үтәсәген, араларҙы нисә йөҙ саҡрымға яҡынайтасағын һәм халыҡ хужалығына һәр йыл һайын күпме файҙа килтерәсәген төйөрөм белә инек. Ватман ҡағыҙына ҡәләм һуҙған һыҙыҡтарҙың ҡорос есемгә күсереләсәген күҙ алдына килтереп ҡыуана инек. Ҡыуанысты аҡыл үҙе һона ине ҡуш ҡуллап. Әммә йөрәк, миңә ҡалһа, шул хозурлыҡ менән ҡуша кешеләрсә саҡ ҡына болоҡһоу, бошоноңҡорау менән дә типкәндер, моғайын. Сөнки кеше — шатлығынан күккә сорғолған саҡтарында ла һәр саҡ кеше, үҙенең еренең хужаһы булып ҡала. Ә ер күтәргән һәр яңылыҡ ер хужаһын яңы ғәмдәр гаммаһы менән һуғара бит. Ошоғаса тәбиғәттең хозур түре итеп йырланған, ата-бабалар рухының һиллек төйәге итеп күнегелгән тауҙарыңа, урман һәм көмөш йылғаларыңа гигант ҡорос бил бауҙың ныҡлап быуыласағын күҙ алдына килтереү... йөрәк тигәнде саҡ-саҡ ҡына тибрәндертмәй ҡалмайҙыр ул. Донъяла бит цифрҙар менән билдәләнмәгән, йөрәккә уйып яҙыла торған плюс һәм минустар ҙабар, ниндәй билдә йөкмәп килә сал тауҙарға яңылыҡ?..

Удар тимер юл төҙөлөшөнөң Иҙел баштан йәғни хәҙерге белореттан башланыуы, миңә ҡалһа, үҙе ниндәйҙер ҙур яҡшы мәғәнә йөкмәүсе символ булып күренде. Республикамдың тимерлеге, башҡортост*ан* пролетариатының ҡорос бишеге булған күркәм ҡала бит ул. Бөтә Башҡортостандағы кеүек үк, бында ла граждандар һуғышы көйҙөрөп уҙған, аҡтар менән ҡыҙылдар бер-берeһен рәхимһеҙ йәнсегән. Рәсәйҙә иң тәүге марксистик түңәрәктәр төҙөүселәрҙең береһе, Белорет-Тирлән хәрби революцион комитетының тимерҙәй ҡаты күңелле рәйесе П.В. Точисскийҙың ҡаны түгелгән бында. Ошо ерҙән легендар сәрғәскәр В.К. Блюхерҙың ҡыҙыл партизан армияһы аҡтар тылынан ҡорос ташҡын булып ағылған...

Удар төҙөлөш штабы урынлашҡан Юбилейный ҡасабаһында Инйәргә поезд көтәм. Поезд тимәһәң, хәтере ҡалыр: егерменсе йылдарҙан уҡ кәлтер-көлтөр йөрөп ятҡан тар тимер юл арбаһы. Вокзалы ла ташландыҡ таш аҙбарҙы хәтерләтә. Әммә был ҡылдай нәҙек ҡорос коммуникация ошо көнгәсә металлургтар ҡалаһын Инйәр менән туҡанға

бәйләүсе берҙән-бер сара булып торған. Быйыл, моғайын, үҙенең һуңғы пассажирҙарын көтә.

Билетҡа торғанда үҙенә күрә көлкө лә, аяныс та хәл булып алды. Тажикстандың Дүшәмбе ҡалаһынан Инйәргә ҡунаҡҡа китеп баралар. Ғаилә башлығы — оло йәштәрҙәге йыуантыҡ ҡатын. Кейәүе, ике ҡыҙы һәм ҡыҙҙарының имсәк балалары бар. Моғайын, был юлдан тәүгә киләләр. Иң элек плацкарт тураһында һүҙ ҡупты:

— Сабыйҙарыбыҙ бар, яҫтаҡ алып, яйлап ятып барабыҙ, — тип кәңәшләшәләр. Ошо юлда йөрөп эт ҡайышына әйләнгән ерле пассажирҙар бер-береһенә ҡарап йылмайышты, ә кассир маръя ирендәрен ҡымтыны.

— Улайһа, купейныйҙан булһа ла бирегеҙ, аҡсаһы йәл түгел.

Залдағылар был юлы пырхылдап көлдө, ханымдар ҡыҙарынды.

— Плацкарт та, купейный ҙа, персональный ҙа, ничейный ҙа юҡ бында, кем нисек өлгөрә — шулай ултыра, — тине кассир. Бының хаҡ һүҙ икәнлеген арба йоратлы вагондарға һеперелешеп ингәс, ике яндағы буй урындыҡтарға мискәләге балыҡтарҙай шыпланып, ҡара-ҡаршы яҡтар тубыҡҡа тубыҡ терәшә яҙып урынлашҡас төшөндөк.

Арҡамдағы өҫтәл көҙгөһө ҙурлыҡ ҡына тәҙрәгә муйынымды һындыра яҙғансы боролоп, юл буйҙарын ҡараштырам. Нәҙек кенә юл таҫмабыҙ суҡай-суҡай бейек тауҙарҙы уларҙың итәген ҡаймалаған тарлауыҡ-үҙәндәрҙән уратып уҙып, бөгөлә-һығыла шыуышып барған йыланды хәтерләтә. Белореттан сыҡҡандан алып йәнәшәнән бейек өйөлмә — яңы тимер юл полотноһы һуҙыла. Унан өҫтәрәк — төҙөүселәрҙең материал ташый торған автомо биль юлы оҙатып килә. Өс йәпле был трасса тау-урмандарҙы, йылғаларҙы, соҡорҙарҙы ҡыйып үтә. Ер-әсәнең ҡырҡылған һәр ҡыртышы әлегә тән яраһылай өр-яңы — кәҫ ҡаплап өлгөрмәгән. Әҙәм ҡулы өйгән ташлы тау түбәләрендә ҡандай ҡыҙыл сурик-буяу менән яҙылған, йөрәк һәм плюс тамғалары һүрәтләнгән ҡая ярсыҡтары тарта иғтибарҙы. Былар — кисә генә мәктәп парталарында үҙ исем-фамилияларын бәке осо менән ырып ҡалдырған, ә бөгөн ошо сал тау һырттарын уйып үткән ударсы егет һәм ҡыҙҙарҙың ҡултамғалары. Беҙҙең йөрәктәр ошо тауҙарға ҡушылған, ошо тауҙарҙы өҙөлөп һөйә, йәнәһе.

Ҡояш байый, ҡарағайҙарҙың ҡара шәүләләре вагон тәҙрәләрен я ба. Баш осонда майшәм ҡабыҙыла. Йоҙроҡ тиклем генә паровоз, ҡәҙимгесә һыҙғырып-бышҡырып, артынан әсе төтөн көлтәһе болғап, вагон-арбаларын кәлтер-көлтөр йүгертә. Урман төпкөлдәрендәге ауылдарҙағы кешеләр күҙҙәре тишелеп көтә уны. Туҡталыш һайын кемдер төшә, төн ҡуйынынан халыҡ эркелеп инә. Тар булһа ла, киң донъяға тоташтырғыс һуҡмаҡ бит.

Вагонда бөркөүләнә, тын ҡыҫыла. Бая тегендә плацкарт юллаған ханымдарҙың Сабыйҙары көйөн таптыртмай илай, әйтерһең, иҫке юлдар билғауырлығын ләғнәтләй. Улар шулай көйһөҙләнеүгә йән һыҙлай. Баш осонда майшәм иреп бөтөп һүнә, донъяны ҡараңғылыҡ күмә. Шул ҡараңғы эсенән, тимер юлдар тарихына төрөнөп, ҡара йылдар хәтирәһе ныҡышып тәҙрә ҡаға. Атай-олатайҙарым һөйләп ҡалдырған,

ҡарабатшалыҡ заманында тыуған ауылым янынан уҙған тимер юл һалыныу хикәйәте ул. Тәүҙә минең яҡташтарым, эскерһеҙҙәр, арба таҡҡан ҡорос айғыр килә икән ауылға, ҡалаға юл ҡыҫҡара икән, тип ҡыуанғандар, ә аҙаҡтан ултырып илағандар. Ҡорос айғыр илдең сәсеүлектәрен, са бынлыҡтарын, урмандарын ҡорос тояғы аҫтына ҡайырып алған, күп кешеләр йортһоҙ-ерһеҙ тороп ҡалған. Көн күреү өсөн тауҙан таш аҡтарырға, ҡорос айғырҙың тояҡтары аҫтына ташып һалырға ялланған. Ләкин көн барыбер битен бирмәгән — таш өсөн хаҡ атҡа ашатҡан һолоно ла ҡаплатмаҫ булып сыҡҡан. Шуға әсенеп, ил шаулашабашлағас, *бат*ша кешеләре тәүҙә йәмәғәтте, ҙур мискә тәгәрләтеп, әсе араҡы менән һыйлаған, ә артынса казактарҙы саҡыртып, арт һандарын әсендерткәнсе ҡайыҙлатҡан. Оҙон ҡырла һырттарында — таш ҡаҙған уялар, кешеләрҙең йөрәгендә яралар тимер юлдың шпалдары һымаҡ бирсәләнеп ҡалған...

Билдәр ҡатып, ултырған көйгә ҡалғып-йоҡлап килә торғас, яурынға яурын терәшкән бер ағай менән һөйләшеп киттек. 1910 йылғы, пенсионер. Ғүмере буйына леспромхозда ағас ҡырҡҡан, күмер яҡҡан. Бөйөк Ватан һуғышы инвалиды. Шәмситдинов Ханнан Шәмситдин улы, Нуҡай ауылынан. Бөйөк Еңеүҙең 30 йыллыҡ юбилейына хәрби комиссариат районға саҡыртҡан үҙен — Еңеү парадына. Тантана итеп, металлургия ком бинатында һәм төҙөлөштә эшләгән улы менән ҡыҙҙарында ҡунаҡ булып, күңеле бөтәйеп ҡайтып бара. Һүҙҙән һүҙ сығып, тел особоҙ тимер юлға тоташты.

— Их, үҙемдең аҙ ғына йәшерәк саҡ түгел! — тип үкенеп алды ул, яңы трасса яғына ымлап күрһәтеп. — Мин ул юлды бына ошо иңдәремә һалып йөкмәп ташыр инем, гайкаларын тештәрем менән шаҡарып борор инем!

— Ҡайғырмағыҙ, ағай, — тигән булдым, көлөп. — Хәҙерге йәштәр араһында ла яҫы яурынлылар, ҡаты аҙаулылар бар.

— Барлығын беләм — үҙебеҙҙең бала-саға эшләй бит. Тик һүлпән ҡыланалар шул. Гөбөргәйел аҙымдары менән баралар. Әгәр уларҙа булған техника, белем теге ваҡытта беҙҙә булһасы!..

— Ныҡ көтәһегеҙме ни?

— Нимәне?

— Тимер юлды, тим.

Серҙәшем аңыш бәндәне осратҡандай итеп ҡараны:

— Кем генә көтмәй икән уны!

— Ошоғаса йүнле тимер юлһыҙ ҙа йәшәп ятҡанһығыҙ бит, — тип ысҡындырҙым. Ағай, күңеле ҡыйырһынып, тәрән көрһөнөп ҡуйҙы:

— И мырҙа-мырҙа! Ас ҡәҙерен туҡ белмәй, ауырыу ҡәҙерен һау белмәй, тигәндәй, үҙ башыңа төшмәгәс, ни тиһең инде һиңә. Ярай, дәүләтебеҙ хәлебеҙҙе үҙенең биш бармағылай күреп белде, хәлебеҙгә керҙе. Ә һин, ошоғаса, тиһең. Уға ҡалһа, заманында мәмерйәлә лә йәшәп ята биргән кеше. Ә хәҙер, беләһең, әллә ҡайҙағы айҙарға, йондоҙҙарға ынтыла... Дөрөҫ, ауылыбыҙ төҙөк, тормошобоҙ һәйбәт, донъя хәбәрҙәрен көн дә радиолар, гәзиттәр еткереп тора. Әммә, нисектер, күңелдең бер мөйөшө китек кеүек ине һаман, ҡолас киңлеге тар һымаҡ ине... Һуғышта

йөрөп, киң донъяны күреп ҡайтҡас, беләһеңме, мырҙа, ошо тойғо Тағы ла нык көсәйҙе. Үҙемде тауҙар араһында ишекһеҙ-тәҙрәһеҙ бурала алйып ятҡан, йомошома мөрйә төбөнән сығып йөрөгән бәндәләй тоя башланым. Тыуған төйәк, ер-һыу, ауыл — матур, мин әйтәм, әммә донъЯныбайҡар өсөн ишек тә, тәҙрәләр ҙә кәрәк икән... Белорет — Шишмә тимер юлын әйтәм...

Төн уртаһы ауышҡас, поезыбыҙ ҡаяға төртөлгәндәй шып-туҡтаны, һыҙғыртып артҡа сигенде. Полотно буйлап кешеләр йүгереште. Байтаҡ ваҡыт үткәндән һуң, күңелһеҙ хәбәр килде: поезд артабан бармай — тау ишерелеп төшкән. Тар тимер юл хәрәкәте аҙна-ун көнгә өҙөлә.

Шау-шоу ҡупты вагонда. Ике сабый сеңләп илап ебәрҙе. Уларҙың оләсәһе, йыуантыҡ ҡатын, башын тотоп өҙгөләнергә кереште:

— Ҡуй, уңмаған юлды ҡыумайым, кире ҡайтып китәйем!

— Тышта йәмле яҙ айы, шуға ҡыуан, — тип йыуатты уны был яҡ кешеләре. — Әгәр юлды көрт баҫҡан булһа, тау араһында ултырып ҡалырға тура килһә ни эшләр инең? Ғүмер буйы ошолай йөрөй бөҙ, юл аҙа бы кисерәбеҙ...

Был күңелһеҙлек тышты кинәт ярһытып ебәргән бульдозер гөрөлдәүҙәре, самосвалдар геүләүе, экскаваторҙар шығырҙауы, төҙөүселәрҙең дәртле-шатлыҡлы ауаздары аҫтында ҡалды күмелеп. Был яҡтарға, иҫке юл саңдарын ҡаплап, Яңы Юл, яңы көн килә ине.

Вагон ишегенән тура таң ҡосағына һикерҙем. Яңы юл өйөлмәһенә менеп, шыңғырҙап ятҡан шпалдарҙан бер аҙыраҡ атлағас, вагончиктар, эшселәр төркөмө күренде, координаттар асыҡланды. Ер шарының шул минутта трассала мин баҫып торған нөктәһе белореттан — 68, Инйәрҙән 15 километрҙа икән. Рельстәр тоташлай 63-өнсө километрға — Юшаға килеп еткән, шунда тауҙай төҙөлөш материалдары өйөлгән. Мин осратҡан вагончиктар 308-енсе төҙөлөш-монтаж поезының 1-енсе прора б участкаһы булып, Юшанан Инйәргә ҡарай 5 километр алғараҡ — Айғыр разъезын төҙөргә ебәрелгән. Арттарында, ҡорос юлды тартып, дан ҡаҙанған талхин Барый Талха улының юл һалыусылар бригадаһы, Ғәлиастанов Фәриттең балластирлау колоннаһы килә. Айғыр тауында бына шуларҙың яңы ынтылышы өсөн яңы плацдарм яулана. Ә Барыһынан да алдараҡ — шартлатыусылар һәм йәмғе ер эштәрен башҡарыусы “Средазстроймеханизация” тресының мехколонналары ярып бара трассаны. Бер һүҙ менән әйткәндә, караптан турабалға — трассаның ҡыҙыу фронт һыҙығына килеп ҡаптым.

Лидерлаусы 1-енсе прора б участкаһының мастеры Попов Емельян Евстигнеевич — 55 йәште ҡыуалатҡан, Белоретта тыуып үҫкән, төп имәндәй баҙыҡ кәүҙәле, урта буйлы, баҫалҡы тәбиғәтле кеше. Ғүмере буйына юл эштәрендә, ошо төҙөлөш поезында 18 йыл эшләгән. Бригадир Крутой Николай Николаевич — унан теүәл 17 йәшкә кесерәк, янып торған ҡара мыйыҡлы мыҡты ир-егет. Тыумышы Ҡырымдан, 1960 йылдан алып Белорет — Магнитогорск, Ҡаҙағстандағы Маҡат — Бенау, Төркмәнстандағы башҡа тимер юлдарҙы төҙөүҙә ҡатнашҡан, Ташкентта юл мастерлығына уҡып, 1973 йылда бында ебәрелгән.

— Бригадамдан тулыһынса ҡәнәғәтмен: кеше эшләй алырҙайҙарҙың бөтәһен дә эшләйҙәр, — ти Николай, ҡупшы мыйығын бороп.

Бригадир менән бергә уның ышаныслы арҡа таяныстары — Етегән йондоҙҙай сағыу ете уҙаман: Лоҡманов Миннәт, Китиков Урал, Әҙһәмов Ғәлимша, Дубинин Иван, Иванов Александрр һәм бер егәрле ханым — Ҡунаҡбаева Ғәфүрә. Бригадирҙан башҡаһы — һәммәһе лә тирә-яҡ ауылдарҙан. Тимәк, Яңы юл бындағы ерле халыҡҡа төшөмлө эш урындары, яңы һөнәрҙәр алыу мөмкинлектәре лә биргән — хәйерле төҙөлөш икән шул, тип ҡәнәғәтләнеп уйлап ҡуйҙым ошонда. Ғөмүмән, трассала бөгөн удар йөктөң иң тос өлөшөн ерле халыҡ күтәрә: төҙөлөштөң партком секретаре Г.Ф. Мигунов иптәштең аныҡ мәғлүмәттәре буйынса, уларбарлыҡ коллективтың 60 процентын тәшкил итә. Был яҡтың аҫабалары, ҡасандыр ата-бабалары ҡыҙыл ташҡын булып данлы блюхер армияһына ағылғандай, биш йыллыҡтың удар эшселәр колоннаһына ылыға. Н. Крутой бригадаһы быны кескәй генә асыҡ миҫалы булып тора.

Тар тимер юлда уйналған беҙҙең төнгө мажара бындағы бөтә кешеләрҙе аяҡҡабаҫтырған икән. Баҡһаң, Ҡараташ тауы моронондағы айғыр ҡаяһын шартлатыу сөн динамит һалырға бульдозер менән “ләхет” уйҙыртҡан саҡта аҫҡа эре күбәташтар тәгәрләгән. Хәҙер шуны арсаларға, тар тимер юлды был урындан күсереп һалырға кәрәк.

— Беҙҙең алғабарышты ер эштәренең өлгөрмәүе тотҡарлай, — тине, бошоноп, Емельян Евстигнеевич. — Тимер юлды ҙур энәгә һабаҡланған еп итеп күҙ алдығыҙға килтерегеҙ. Еп үтһен өсөн, бынауы тауҙарға энәнең тишеп кереүе кәрәк. Ләкин мехколонна атҡарған ер эштәре ауыр геологик шарттарҙа башҡарыла...

Поездың баш инженеры О.И. Кошман алдынғылар рәтенән миңә мастер Попов менән бригадир Крутойҙарҙы атаған кеүек, былар ҙа үҙ сираттарында иң өлкән һәм иң үрнәкле эшсе, юл монтеры Лоҡманов Миннәт Лоҡман улын күрһәттеләр. Бынан һигеҙ саҡрымдағы татлы ауылынан икән, 1926 йылғы. Бригадала ҡалғандары гел йәштәр булғанлыҡтан, үҙен аҡһаҡалға һанап, ололап йөрөтәләр. “Аҡһаҡал” да сер бирмәй, юлдарҙы тегеү машинаһылай йөйләй. Эш башланыр алдынан мин уның менән әңгәмәләшеп ултырҙым. Миннәт 29 йыл буйына ағас ҡырҡҡан леспромхозда. Удар төҙөлөш иғлан ителгәс, дәррәү шунда ташланған, ҡулында бысҡыһын йырлатып, ҡуйы урман күкрәгенән үтәсәк трассаны ярған.

— Иң яратҡан уйынсығын эләктергән йәш балалай ҡыуанып, йүгереп йөрөп эшләнем: ул көндәрҙә минән дә бәхетлерәк ағас йығыусы булмағандыр донъяла, — ти ул, үткәндәрен хәтерләп. — Мин генә түгел, бөтә иптәштәрем шулай эшләне, — тип өҫтәп ҡуя. — Ағас ҡырҡылып бөткәс, үҙем уйған осһоҙ-ҡырыйһыҙ йәшел коридор буйында хайран ҡалып ултырҙым. Нисек тә тиҙерәк гөрөлдәп поездар үткәнен күргем килде. Үҙ ҡулдарым менән шуны яҡынайтыу өсөн, бына күрәһегеҙ, профессияны алмаштырҙым — шпалдар һәм рельстәр теҙеп юл һалыу эшенә өйрәндем.

— Ниндәй көс был тиклем тарта икән бында һеҙҙе?

Лоҡмановтың күҙҙәрендә эске йөрәк уты көйрәп ҡабынды:

— Изге эш тарта беҙҙе бында, — тине ябай ғына. — Бөтәбеҙҙең әллә ҡасандан хыялланып көтөп алған изге эш был төҙөлөш. Халыҡ тимер юлы.

Һүр. 7. Уңдан һулға: Тайфур Сәғитов, Йыһат Солтанов, Абдулхаҡ Игебаев һәм урындағы уҙамандар. Белорет районы Мәхмүт ауылы, 13.10.1981

Хаҡ һүҙҙәр: халыҡ тимер юлы! Бының тап шулай икәнлегенә мин трассаның буйынан-буйына үҙҙәренең хеҙмәт ҡултамғаларын һалып киткән юлсы йәштәр менән осрашҡанда ла, унарлаған станция һәм разъездарҙы, күперҙәр һәм тор баларҙы һалыусылар егетлеген күргәндә лә, төрлө етәкселәр менән һөйләшкәндә лә инандым. Районда иң ҙурҙарҙан һаналған, төҙөлөш үҙәктәренең береһе булып әүерелгән Инйәр поссоветының рәйесе Яковчиков анатолий Иванович менән осрашыу ҡалды иҫтә. Башҡортостан картаһы өҫтөнә иңкәйеп, ҙур юлдарҙан ситтә ҡалған был төбәктең киләсәген юрап хыялландыҡ. Быға тиклем леспромхоздар ағасты һыуҙа 350 саҡрымға — Асыға ағыҙып, шунда һал бәйләп, Сим буйынса Ағиҙелгә төшөргән. Ләкин тау йылғаһы Инйәр үҙенә күрә холоҡло: яҙғыһын бер-ике көн эсендә төшөрөп өлгөрмәһәң, бүрәнә яр башында ҡала “ки беп”. Быйыл айырыуса ҡоролоҡ арҡаһында һыу Наҡыҫ булған, удар төҙөлөштөң техника менән ярҙам итеүе генә ҡотҡарған леспромхозды.

Белорет — Шишмә тимер юлы урындағы халыҡ өсөн бөгөндән үк оло яңырыштар, табыштар үҙәге булып тора. Мәшәҡәтле һәм ҡурҡыныс ҡыуғынсылар профессияһы бөтәсәк — йылына 350 мең кубометр ағас туранан-тура тимер юлдан китәсәк. Тимәк, Инйәр, Сим, Ағиҙел һыуҙары төпкә батҡан утыпша бүрәнәләрҙән, уларҙың ағыулы тәьҫиренән ҡотоласаҡ — миллионлаған балыҡ иҫән ҡаласаҡ. Урман ҡырҡыу, ҡырҡыу

ғына түгел, уны үҫтереү, кейек-ҡоштарҙы, флораны һаҡлап ҡалдырыу эштәренә лә фәнни талап, алдынғы культура керәсәк. Иҫ китмәле күркәм тәбиғәт ҡосағында хеҙмәтсәндәрҙең ялы өсөн коттедждар, туристик базалар, санаторийҙар ҡалҡып сығасаҡ, асы ҡарағай сайырлы урман һауаһы, асылағы кеүек шифалы һыуҙар, татлы урман емештәре халыҡ дауаһына хеҙмәт итәсәк. Бөгөн Инйәр станцияһында удар темп менән барған төҙөлөш объекттары араһында һыу таҙартыу ҡоролмаларының да иң мөһим бурыс итеп, беренсе күҙ уңында тотолоуы — бындағы эштәрҙең заманса, халыҡ файҙаһына алып барылыуын тағы ла бер тапҡыр иҫбатлай. Тимәк, күҙ йәшеләй үтәҙек, саф Инйәр һыуы киләсәк быуындарға ла таҙа ҡаласаҡ. Былар — халыҡҡа төбәлгән ырыҫ-бәрәкәттәрҙең өҫкә ҡалтайып сыҡҡаны, күҙгә салынып торғандары ғына әле.

— Был тимер юл — беҙҙең ерле халыҡтың утыҙынсы йылдарҙан биреле көткән хыялы ине, — тине анатолий Иванович, карта өҫтөнән бармағын йөрөтөп. — Шуның өсөн дә бөтә поссовет ең һыҙғанып төҙөлөшкә ылыҡты. Әйтәйек, 308-енсе, 182-нсе поезд эшселәре — башкөлләй, тип әйтерлек, беҙҙекеләр. 35-енсе мехколонна менән 1-енсе автоколонналарҙа ла күбеһенсә беҙҙең шоферҙар. Удар төҙөлөш төбәктең талғып-йоҡомһорап ятҡан эш көстәрен бик ҙур вакуум шикелле һурып алды үҙенә, бөтәһен эшкә ҡушты.

— Хеҙмәт көстәренең унда ағылыуы урман киҫеү эштәренең биленә һуҡмаймы һуң?

— Юҡ. Леспромхоздар эштәрҙе артабан механизациялау, хеҙмәт культураһын күтәреү иҫәбенә көйләне, планды арттырып үтәне. Быйыл, мәҫәлән, беренсе квартал өсөн Инйәр леспромхозы райкомдың һәм райсоветтың күсмә Ҡыҙыл Байрағы менән бүләкләнде. Тимәк, был да удар төҙөлөштөң шифаһы. Тормош һаман алғабара, иҫкелекте артта ҡалдыра, туған!

— Тағы ла бер һорау. "Йәштәр мәсьәләһе" нисек? Төҙөлөшкә төрлө бәндә ағыла...

— Ҡайҙан килеп төрлө булһын?! — тине поссовет рәйесе. — Төптө яңылыш ҡараш! Бөтәһе лә үҙебеҙҙең йәштәр. Совет йәштәре! Зарланмайбыҙ. — Һуңғы йылдарҙа "яңы заман йәштәре"нә ҡарата ҡайһы бер тел-тештәрҙә "модный" булып киткән, уларҙы удар төҙөлөштәргә "оҙон аҡса" менән экзотика ғына бәйләп тота, тигән серек мещан фәлсәфәһен түңкәреп ташланы был. Ә шул ваҡыт тау араһындағы төпкөл Юша станцияһында, ең һыҙғанып, вокзал менән подстанция һалыусы, шахматов Юрий етәкселегендәге ташсы-монтажбригадаһы килде күҙ алдыма. Бынамын тигән, ут сәсрәтеп янып торған егеттәр һәм ҡыҙҙар — төрлө милләт вәкилдәренән торған комсомолдар бит улар. Шуларҙың йөрәкһеп, янып эшләүҙәренең тәрән серен уйлап йөрөгәндә, Дубинск ауылынан үтергә тура килгәйне. Һәм шунда ошо эшсе йәштәр граниттан һынландырған, мөһәбәт балҡып торған о белиск йәшен утылай йәнгә үтеп тетрәтте, нурландырҙы мейемде һәм йөрәгемде. Бик йыш ҡына шулай бит: тәбиғәттәге электр көсө, үҙалдына күпме генә уҡмашһа ла беленмәй, уның барлығын көтмәгәндә йәшен сытырҙап күрһәтә. Шахматовсыларҙың

йәшен уты ла үҙенән-үҙе балҡыны: егеттәр һәм ҡыҙҙар һәр көн эш сәғәттәренән һуң ҡалып эшләнеләр, материал әҙерләнеләр, уны Дубинскиға ташынылар һәм, күмәкләшеп барып, үҙҙәре һыҙған проект буйынса, Бөйөк Ватан һуғышында һәләк булғандарға ошо мәңгелек һәйкәлде күтәрҙеләр. Бының менән улар үҙҙәренән алдағы быуындарҙың — Магнитканың туң тупрағын кәйлә менән соҡоп домна һалыусыларҙың, Днепрогэс һәм амурҙағы Комсомольск ҡалаһын төҙөүселәрҙән, Себер тимер юлын һалыусыларҙың һәм, аҙаҡ килеп, Берлинды штурмлап алыусыларҙың туранан-тура варисҭары, эштәрен дауам итеүселәре икәнен күрһәттеләр. Серек мещан фәлсәфәһе ҡорған хөрәфәтле бина йәшлек йәшененең сағыубалҡышында емерелде.

“Средазстроймеханизация” тресы управляющийының урынбаҫары Ксендз Александрр Павлович менән бергә трасса өсөн иң хәтәр алыш барған ут һыҙығында — Ҡараташ тауының айғыр ҡаяһы морононда торабыҙ. Аҫта, бик аҫта, күбәташтарға бәрелеп Инйәр шаулай, төнгө ишерелеү алҡымында тар тимер юл киҫәге һыҙатлана. Ә өҫтәрәк оло тимер юл полотноһы өсөн баяғы ҡая шартлатырға әҙерләнә. Өсөнсө яруста иһә, беҙ баҫып торған ерҙә, материал тейәген машиналар саба. Тимәк, төҙөүселәргә бер юлы өс артерияның да именлеген, хәрәкәтен тәьмин итергә кәрәк. Был үтә ҙур ҡатмарлыҡтар тыуҙыра. Белореттан Инйәргәсә тоташ трасса шулай. Быға һис тә көтөлмәгән геологик “күстәнәс”тәр, рельефтың ҡатмарлы булыуы, һәм, етмәһә, проект кәмселектәре лә өҫтәлә. Бына шуларҙың һәр береһе төҙөүселәр ҡаршыһында ҡарлы ҡаялай тора.

— Союздың төрлө мөйөштәрендә нисәмә тимер юл төҙөп, бындай ҡатмарлы шарттарға юлыҡкан юҡ ине әле, — ти, үткер ҡарсыға ҡарашы менән киң хеҙмәт панорамаһынбайҡап, Александрр Павлович. Айғыр ҡаяһын ике яҡлап бульдозерҙар кимерә, экскаваторҙар умырып алып самосвалдарға һала. Тау-таш- урман араһынан, һалынасаҡ рельстәр аҫтына ер күкрәгеләй ҡалҡып, күҙҙәрҙең яуын алып ятҡан өп-өрьяңы юл өйөлмәһе һуҙыла. Айғыр — Ҡатаҫҡын араһында Ғөбәйҙуллин Тәлғәт шәфҡәт улы етәкселек иткән данлы 35-енсе мехколонна эшләй. Хеҙмәт даны тәғәйен бына ошонда — Хеҙмәт Даны ордены кавалеры Смирнов Александрр Николаевич кеүектәрҙең экскаватор һоҫҡоһонда, Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ орденлы, 9-ынсы биш йыллыҡ ударнигы евременко Петр Несторович һәм Муллабаев Насип Яҡуп улы кеүектәрҙең самосвал йөрөткән ҡулдарында, бульдозерсы Әптелгәрәйев ишеләрҙең алғыр алҡынышында ярала... Юша — Айғыр йүнәлешендә лә эш ҡайнай, бында Земсков Александрр Александрровичтың 30-ынсы мехколоннаһы юлаҡлай ҡая аҫтын. Һомғол буйлы, һәр саҡ бөхтә кейемле, аҙ һүҙле, ләкин аҡыллы һүҙле был етәксе эштәрҙе сәғәт механизмылай көйләй белә, кешеләрҙең тын алышын яҡшы тойоп эш итә. Уның ҡул аҫтындағылар — күпселеге йәштәр һәм, уның үҙенең әйтеүенсә, отличный йәштәр. Сыроватский Виктор тәүҙә шофер булған, ошонан уҡырға китеп, экскаватор машинисы булып ҡайтҡан. Эш нормаһын 150 процентҡа үтәй. Уның ҡулалмашы, Белорет егете Ғәлимшин Буранбай ҙа һис бер ҡалышмай, ысын

ударсыларса эшләй. Йәштәрҙе лә өйрәтә үҙ һөнәренә, тәртибе менән күптәргә өлгө бирә. Бульдозерсы Макушкин Александрр, шофер Валуйский Иван, электрогазосварщик Закашев Алик кеүек уңған егеттәр бында етерлек. Күбеһе ошо биш йыллыҡ ударнигы, быйылғы социалистик ярышта еңеүсе. Барсаһының тамағын туйҙырған оҫта ашНаҡсы Семенова Валентина Николаевнаның да тырыш хеҙмәтен ихтирам менән телгә ала төҙөүселәр. Белореттан Инйәргәсә эш ҡаҙанында ҡайнаған һәм гөрләгән удар трасса — ошондай егәрлеләрҙең көллөһөнөң хеҙмәт ҡултамғаһы ул.

— Беҙҙә донъялағы иң көслө ҡөҙрәт-ҡеүәт — аңлы рәүештә ең һыҙғанып эшкә тотонған ҡулдар бар, — ти, фекерҙәрен йомғаҡлап, Александрр Павлович. — Был егәрле халыҡ ҡулы сал Айғыр ҡаяларын да, башҡаларын да ҡырҡып уҙасаҡ! — Ғорурлыҡтан уның күҙҙәре йәшләнә һәм миңә лә күсә был. Шул саҡ ниңәлер төнгө юлда илап килгән ике имсәк балаһы иҫкә төшә. Күп ҡалманы инде уларға ҡырағай тауҙар араһында юл аҙаптары сигергә. Оҙаҡламай шишмә менән белорет араһы тоташыр, һәм сабыйҙар иҙрәп китеп йоҡлай алырлыҡ плацкарттар ҙа, купелар ҙа бәхетле мосафирҙарын тейәп йүгерер.

Күҙ алдымда салт аяҙ Инйәр күге аҫтындағы үҙем күргән ҡандай ҡыҙыл ҡомас Байраҡ тулҡынлана. Ударсылыҡта еңгән, иң алдынғы өс урынды яулаған хеҙмәт кешеләре хөрмәтенә уҡтай төҙ, мачталай бейек баҡанға күтәрелгәйне ул. Бөтәбеҙгә уртаҡ булған күк аҫтында, шанлы советбайрағының ҡанаты аҫтында таҡтаташҡа алтынлап яҙылған өс исем: Айсина Наталья Васильевна — урыҫ, Талхин Барый Талха улы — башҡорт, Гордейчук Леонид Андреевич — украин... Һәм трасса буйындағы ҡаяташтарға һыҙатланған йөрәктәр һәм хәрефтәр, Бейлоғош тауындағы сорғол ҡаяның маңлайына комсомол билдәһе төшөрөп, “ВУКС, СМП-308” тип уйып ҡалдырылған яҙыуҙар ҡабат килеп мөһөрләнде күҙемә. Миңә ҡалһа, атайҙар һәм олатайҙар Берлин рейхстагы стеналарына штык менән һалған яҙыу-имзаларҙан һуң иң изге ҡултамғалар ине былар.

Йылдар үтер, бәлки, ҡаялағы тамғалар ҙа юйылыр. Ләкин бөгөнгө төҙөүселәр үҙҙәре һалған һәйкәл, Белорет — Шишмә тимер юлы, илдең тере артерияһы булып, килер быуындарға ла шатлыҡ, бәхет, ырыҫ-бәрәкәт һәм көр йәшлек һулышын илтер.

20.06.1975.

Йәнбирҙе һәм Йәнбикә -- ТәүАта һәм ТәүАна (Әсә)

Һөйөклө ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙ! Илебеҙ тормошондағы һеҙҙең түҙемлеккә, әүҙемлеккә, ҡыйыулыҡҡа нык һоҡланып йәшәйем. Ир-аттарыбыҙ йыш ҡына шөрләй биреп, телдәрен тешләп боҫоп ҡалғанда ла һеҙ, ғорур саялыҡ һаҡлап, кәрәкле һүҙҙе үҙ мәлендә һәм үҙ урынында уҡ ярып һалаһығыҙ, ауыр эштәрҙе лә йөкмәп алаһығыҙ. Шуға күрә аналыҡ (матриархат) дәүере кире әйләнеп килһен ине лә бәгзе берҙәребеҙгә һис алмаштырғыһыҙ өлгөрөп еткән гүзәлиәләребеҙ дәүләттең иң юғары

етәкселегенә дәррәү үрләһен ине, тип теләйем… Фекерҙәремдең дауамы түбәндәге йөмләләрҙә ентеклерәк асыла.

Бына ни хаҡта уйлайым: Ер йөҙөндәге иң боронғо бабаларыбыҙ табынған изге илаһиәләр (таштәреләр) – бала бағырға һәләтле мыҡты тәнле, һомғол килеш-килбәтле, ҡарынының аҫҡы өлөшө өскөлләнеп-ослайып бөтмөш тылсым эйәһе Ана (Әсә) итеп һынландырылыуы тикмәгә генә түгел:



Ни өсөн шулай икәнлеген бөтөн кешелек донъяһының салдарҙан-сал ауыҙ-тел ҡомартҡыһы “Урал батыр” эпосындағы тәүбабаларҙың исемдәре үҙҙәре үк аңғартып-әйтеп тора:

Йәнбирҙе (Йәнб бәрҙе) – тәүдонъяға башланғыс-йән (сперматозоид) бәреүсе (биреүсе);

Йәнбикә (Йән баға) – ана шул башланғыс-йәнде үҙенең изге аналығындағы башланғыс-тәненә (күкәй-күҙәнәгенә -- яйцеклеткаһына) һеңдереп йәғни уны башлы-күҙле, тере тәнле итеп үҙендә бағыусы, үҙ ҡарынында үҫтереп еткереп тыуҙырыусы. Әгәр шулай Анабыҙ Йәнбикә баҡмаһа, Атабыҙ Йәнбирҙенең бәргән йәне шул мәлендә үк үлер, кешелек донъяһы бөтөнләй булмаҫ ине. Тимәк, Анабыҙ Йәнбаға – беренсел, Атабыҙ Йәнбәрҙе икенсел урында тора. Быны бабаларыбыҙ яҡшы белгән һәм тәүикәүҙең һәр береһен тейешле үҙ урынына ҡуйған: Анабыҙ Һауа -- өҫтә, Атабыҙ Ер (Ир) – аҫта:



Боронғоларҙан-боронғо барлыҡ рәсемдәрҙән күренеүенсә, Анабыҙ Һауаның (Йәнбағаның) аналығы ап-асыҡ итеп өсмөйөш (Килен, Бирәмитә-Пирамида) рәүешле һүрәтләнгән һәм ул ысынбарлыҡтағы ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙҙа ла тап шулай.

Кешелек донъяһын тыуҙырыусы ошо изге өсмөйөштө Килен (Клин) тип тә, Бирәмитә (Пирамида) тип тә исемләгәндәр һәм уға арнап

ҡуйылған бер изге Килен-таш әлегәсә Башҡортостандың Әлшәй районы Ташлы ауылы ҡаршыһындағы күркәм тауҙа күҙҙәрҙең яуын алып тора. Тәүбабаларыбыҙ Йәнбирҙе менән Йнбикәнең ана шул тормош сығанағы булған йән (йән-эс – енес) ағзаларына оҡшатып, халыҡ көнкүрешенең дә аҙыҡ-түлек әҙерләү сараһын – килен (киле) менән бәргесте (төйгөстө) яһағандар – ашлыҡтарын шуның эсенә һалып бәргесләп (төйгөсләп) ашарҙарына яраҡлы итеп алғандар. Күрәһегеҙ, киле ысынлап та Килен (өсмөйөш), бәргес-төйгөс – оҙонса килбәтле эшләнгән:

Илаһилаштырылған ошо өсмөйөш (Килен-Бирәмитә) боронғо Мысыр (Египет) ерендә иҫ китмәле дәү аналыҡ-һәйкәлдәр – Пирамидалар (Бирәмитәләр) рәүешендә мәңгелек мөғжизә итеп һынландырылған, ә мәғәнә-доғаһы уның ошондай: илаһи өсмөйөштән тыуған йән эйәһенең йәне, ваҡытлыса фани донъянан күсеп, мәңгелек баҡый (бағыусы) теге донъяға – илаһи өсмөйөшкә кире ҡайтырға тейеш… Һәм, ғөмүмән, Ер шарының биш ҡитғаһын изге өсмөйөштәр рәүешле һүрәтләгәндәр:

Әйткәндәй, заманында тап ошондай өсмөйөшлө билдәләрҙән хасил ҡылынмыш килен-яҙыу ҡулланылған, мәҫәлән, боронғо үҫәргән-бөрйән бабаларҙың Бүрәсә (Фарсы) дәүләтендә ҡаяларға ырып ҡалдырылған доғалар:



Яҡшы аңлашыла ки, кешелек донъяһының тәүбашланғысын Аналыҡ (матриархат) дәүере тәшкил иткән – һәр йәһәттән дә ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙ өҫтә, беренсел урында, торған һәм быуындар шәжәрәһе лә, хәҙергесә йәғни патриархат дәүерендәгесә ир-ат бауы (теҙеме) булмайынса, ҡатын-ҡыҙҙар (әсә-аналар) быуындарынан төҙөлгән; икенсе төрлө әйткәндә, фәҡәт ҡатын-ҡыҙҙар ғына шәжәрә тамыры һәм олоно һаналған. Мифтарыбыҙҙы (мәҫәлән, “Урал батыр” һ.б. эпостарыбыҙҙы) ижад итеп тыуҙырыусы һәм быуындан-быуынға олғаштырыусы бик боронғо сәсәндәребеҙ ҙә иң элек ҡатын-ҡыҙ затлы булған. Ошо урында тын алып, “Сәсән” һүҙенең килеп сығышын барлайыҡ: әс-әс-ән (әсәнең әсәһенән, йәки бераҙ урыҫсалаштырып әйткәндә, “бабушканың бабушкаһынан” тыңлана килгән изге һүҙ) -- әсәсән – *сәсән*; һәм шунан уҡ: әсәс – *сәс* (сыуашса “һүҙ” -- сасси) – *сүз* – *һүҙ*. Үҫәргән башҡорттары әлегәсә “бабушка”ны -- әсәй, “мать”те – анай, әней тип әйтә.

Әлхасил, булғанына шөкөр итеп, кешелек донъяһының мөғжизәүи эпостарын тыуҙырған һәм ошо көнгәсә һаҡлап килтереп еткергән исемһеҙ сәсәниәләребеҙ һәм атамалары билдәле Хәмит, Ғәбит, Мөхәммәтша сәсәндәребеҙ рухына доға ҡылайыҡ.

Матриархат дәүерендә ил менән, әлбиттә, әсәләребеҙ һәм аналарыбыҙ етәкселек иткән, был хәл хатта патриархат дәүерендә лә бер килке күҙәтелгән. Шундай бөйөкбикәләребеҙҙең тарихта билдәле бер-нисәһенең төҫ-ҡиәфәтен ҡарайыҡ:

1. Батшабикә *Тамырәсәй* (Геродотса Тамарис), б.э. тиклем V быуатта йәшәгән, бына ул (яҙыуына ҡарағыҙ):

2. Бөйөк Ҡошан империяһының батшабикәһе *Буранбикә,* б.э. V быуатында:

3. 1917 йылғы III Бөтөн Башҡорт ҡоролтайы делегаты Бағбостан Вилдан ҡыҙы Мөьминова (һүрәттә №67):

63.Ю. Бикбов 64.А. Валиди 65. Ш. Манатов 66. Г. Таган 67. Багбустан 68. Р.Фахрутдин

4. Заманында башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарынан беренсе булып роман “Ырғыҙ”ҙы яҙған Һәҙиә Лотфулла ҡыҙы Дәүләтшина:

Урал тауҙарының буйында
Оҙон-оҙон быуат буйына,
БуйҺонмайса яуыз яҙмышҡа,
Ягалашҡан, ҡыйыу алышҡан
Башҡорт ҡыҙҙарын мин йырларга
Ҡәләм алды ниһәм ҡулдарга,
Һин, Һәҙиә, алга баҫаһың,
Һиңә мәҙех килә яҙаһым.

Башҡорт ҡыҙы әсе сеңләгән,
Тик һис кемгә башын эймәгән.
Йөҙө пәрәнжә лә киймәгән.
Ир-егеттәй һыбай менгән ул,
Илен һаҡлап, яуга елгән ул,
Үлем күҙенә багып көлгән ул! —
О Һәҙиә, һинең һының бил,
Замандашым, йәсе, йырым бул!

Башҡорт ҡыҙы ярһыу йөрәкле,
Һүрелмәҫтәй ҡайнар теләкле;
Йырҙан таша уның күңеле,
Шоңҡар ҡыйыламы — бейеүе!
Мөхәббәте уның — ут кеүек,
Ә нәфрәте — сатнар боҙ кеүек.
Үҙе дәртле, үҙе бик түҙем. —
Һәҙиәкәй, был бит һин үҙең!
Ғәрәп һүҙе булган "Һәҙиә"
"Бүләк" тигән һүҙҙер беҙҙеңсә.
Башҡорт, теләп һиңә ҙур теләк,
Биреп һиңә ҡайнар ҡуш йөрәк,
Бүләк итте һине донъяга,
Даның сиктәр аша тарала.
Йөҙөк ҡашы булдың халҡыңдың,
Күңелеңдә уның ялҡыны.

Йәмле, шаулы Ыргыҙ буйҙарын,
Ыргыҙ буйҙарының ҡыҙҙарын,
Тас та арыҫландай улдарын,

Һәҙиә, һин данлап йырланың.
Ғашиҡ инең беҙҙең заманга,
Йырың тынмай һаман, һаман да.
Юҡ, Һәҙиә, һүҙең тутыҡмаҫ,
Илең һине гүмер онотмаҫ!

Нескә хисле шағирыбыҙ Ғәйнан Әмириҙең Һәҙиәгә бағышланған ошо ихлас шиғыры һәммә гүзәл заттарыбыҙға мәҙхиә булһын ине:

30.10.2013

Алмас ҡылыстар ялтлаған яҡта
1
Һүҙ башы урынына

Протокол заседания ветеранов 16 гвардейской кавалерийской Башкирской дивизии, где присутствовали: С. Кадыров, С. Хабиров, Х. Касымов, М. Каримов. Все они участники глубокого рейда дивизии в тылу врага в феврале 1943 года. Повестка дня: обсуждение путевых заметок писателя Зигата Султанова под названием "В стороне, где сверкали алмазные клинки". Читает сам писатель З. Султанов.

После всестороннего обсуждения присутствующие единогласно решили:

Путевые заметки т. Султанова написаны с большим знанием фактического материала, путем личного посещения автором по местам действия дивизии в тылу врага и путем изучения имеющихся документов из истории действия дивизии в Донбассе. В "В стороне, где сверкали алмазные клинки" широко охвачены также имеющиеся фактические материалы в исторических музеях Великой Отечественной войны в городах Красный Луч, Усть-Белаякалитва и в селе Чернухино. Автор очень умело использует воспоминания местных граждан (Ворошиловградской и Ростовской областях), которые были очевидцами действии дивизии в тылу врага. Язык автора острый, образной и высоко литературный.

В путевых заметках хорошо показана роль осо бо отличившихся бойцов и офицеров из дивизии, которые проявили мужество и героизм в самых трудных и сложных условиях в разгроме врага в его же тылу — Донбассе.

Изложенные материалы в очерке безусловно поможет читателям глубже и всесторонне понять глубокий патриотизм и мужество участников рейда 16 гвардейской башкирской дивизии в годы Великой Отечественной войны. Автор очень умело показывает как укреплялась дружба между украинским и башкирским народами в те тяжелые дни для Великой Отчизны.

В очерке, основываясь на собранных фактических материалов последовательно показана руководящая и направляющая роль партийной организации дивизии в те суровые дни.

Очень хорошо показано умелое политическое руководство генерала М.М. Шаймуратова боевыми действиями. В очерке с большой силой раскрывается сложНая страница Башкирской кавалерийской дивизии. Мы, непосредственные участники этого рейда в тылу врага, очень хотели что бы эти очерки т. Султанова быстрее были бы опубликованы в печати, что помогло бы усилить военно-патриотическое воспитание подрастающего поколения. Мы очень благодарны автору за этот бесценный труд.

С. Хабиров, *гв. полковник запаса.* ***С. Кадыров,*** *гв. подполковник запаса.*

Ст. 33 б.

ГРАМОТА

Президиум Верховного Совета Башкирской АССР, вручая от имени башкирского народа знамя 112-й Башкирской кавалерийской дивизии, уверен, что дивизия на полях борьбы с немецкими оккупантами оправдает доверие башкирского народа и правительства Башкирии.

Личный состав дивизии должен драться не жалея сил, энергии, крови и самой жизни с тем, чтобы полностью выполнить приказы Командования, правительства Союза Советских Социалистических Республик и Народного Комиссара Обороны, любимого вождя, гениального полководца товарища Сталина.

На полях великой отечественной войны, плечом к плечу с русскими, украинцами, белоруссами, узбеками, казахами и бойцами всех других народов страны Советов, отстаивают и защищают свою родину, беспощадно бьют врага доблестные сыны башкирского народа.

Товарищи бойцы, командиры, комиссары и политработники! Правительство Башкирии уверено в том, что 112-я Башкирская кавалерийская дивизия вместе с другими частями славной Красной Армии очистят нашу священную землю от немецких оккупантов и обеспечат полную победу над фашистской бандой.

Смерть немецким оккупантам!

Президиум Верховного Совета Башкирской АССР.

Уфа, 22 марта 1942 года.

Бына беҙ, Башҡортостанда тыуып үҫкән өс мосафир, оҙон ғына юл үтеп, Рәсәй Федерацияһы менән Украина араһына тере сик һыҙып ағылған йылға яры башында баҫып торабыҙ. Бынан өс тиҫтәгә яҡын йылдар элек, донъяның сағыубуяуҙарын беҙҙәрҙәй үк үлеп һөйгән, илдә үҙҙәренең Дилбәрҙәре, *Любалары* өҙөлөп-һағынып көткән, тыуған ерҙең хәтфә үләндәрен тапап, уйнап-көлөп йәшәргә лә йәшәргә генә хыялланған атабалалары ошо урында, уттан утҡа яуыз дошмандың үксәһенә баҫа килеп, уны ошо упҡын йылға аръяғына һөрлөктөрөп, тыуған ерҙең гүзәл сәскәләре кеүек төрлө-төрлө төҫлө күҙҙәр менән бергә үҙҙәренең Урал төҫө булып килгән үткер ҡара күҙҙәрен арғы яҡҡа, фашист табаны аҫтында интегеп ятҡан яҡҡа төбәп ҡарағандар. Аяҡтарынан әле Сталинградтың һөрөмлө туҙаны, иңдәренән ҡырыҫ Дон далаларының әсе әрем еҫе лә китеп бөтмәгән булған. Бөйөк Совет иле уларҙы башҡа милләт улдары менән яңы ҡаһарманлыҡҡа — туғандаш Украина ерҙәрен немец-фашист ҡоллоғонан азат итергә саҡырған. Шуның өсөн дә был Урал тупрағындай сөм-ҡара күҙле башҡорттарҙың һәр береһе арыҫлан, бөркөт йөрәкле сая ҡаһарман булған.

Бөгөн беҙ, шул батырҙарҙың иң мөһәбәт сифаттарын туранан-тура дауам иттерергә ҡалған тоҡом кешеләре, табаныбыҙ менән изге эҙҙәр йылыһын тойоп, өсөбөҙ тиң, ауыҙ асып һүҙ әйтә алмай, янып-йөрәкһеп торабыҙ.

Арабыҙҙа иң өлкәне — ғәрәсәтле шул йылдарҙа ошо ерҙәргә үҙенең утлы эҙҙәрен һалып киткән атаҡлы уҙаман — отставкалағы полковник Сәйфулла Хәлиулла улы Хәбиров. Ҡалған икебеҙ — унан кесерәк быуын, ҡорҙаштар һәм ҡәләмдәштәр: “Ағиҙел” журналы редакторының урынбаҫары Рәйес Низамов һәм ошо юлдарҙы бәйәнләүсе фәҡирегеҙ — шул уҡ журналдың бүлек мөдире Йыһат Солтанов булабыҙ. Һуңғы икебеҙ, 16-нсы гвардия башҡорт кавалерия дивизияһының элекке капитаны, 101-енсе айырым артиллерия дивизионы (һуңынан полк) командиры Сәйфулла ағай Хәлил улы Хәбировҡа эйәреп, немец-фашист илбаҫарҙарының тәрән тылында дивизиябыҙ легендар рейдта йөрөгән ерҙәрҙе үҙ күҙҙәребеҙ менән күрергә, табандарыбыҙ менән һәрмәп ҡарарға тип килгән беҙ. Бына инде шул данлы рейд башланған ерҙә торабыҙ.

Төньяҡ Донец йылғаһы...

Борам беҙҙе, тауыш-тынһыҙ ғына һыу өҫтөнән шыуышып, эскрипкә ҡылы һымаҡ тартыу арҡан буйлап арғы ярға күсерә. Беләк йыуанлыҡ был ҡорос ҡыл, эскрипкә генә түгел, йәйә керешендәй тартылған — себен ҡунһа шартлап өҙөлөп китерҙәй. Яҙғы буйраҡ әле тоноп бөтмәгән — һыу өҫтө болғансыҡ төҫө менән, әйтерһең, күктән нимәлер көтөп, уйсанланып шымып ята. Балыҡтар ҙа ҡарпымай, тулҡындар ҙа сайпылмай. Хатта бейек яр баштарын ырмаҡлаған тирәктәрҙең япраҡтары ла һелкенмәй: ҡуйы йәшел болот, биҒәйни, күлкеп килеп төшкән дә ер я бып ойоп тора. Дон (беҙҙеңсә, Тын була инде!) һыуының кесе туғаны был йылға ла үҙ исемен аҡлар өсөн тырышып, әҙәп һаҡлай кеүек. Үҙенең тымыҡ уйсанлығы, ярҙарында тирәктәренең талығып тороуы, был тоштағы ялтлап ятҡан яҫылығы, хатта үҙебеҙсә таныш исеме менән дә ул

йөрәктәребеҙгә яҡын башҡорт йылғаларының береһен — Һаҡмар-һыуҙың тулығып типкән түбәнге тымыҡ ағымын хәтерләтә. Хәйер, исеме тигәндән, был яҡтарҙың үҙебеҙгә изге туғандар ҡәберлектәре менән тулы, туғандарса яҡын һәм йылы тупрағы беҙҙе тәүге аҙымдарҙан уҡ, әйтерһең, үтә лә яҡын күреп, үҙ күреп, “саф башҡорт телендә” сәләмләп ҡаршыланы. Бының башланышы Ростов өлкәһенең Усть-Белая Калитва (Аҡ Калитва тамағы) ҡалаһында булды. Һыу

Һүр. 8. Усть-Белая Калитва музейында Башҡорт дивизияһы түренә сәскә һалыу.
Һулдан уңға: С.Х. Хәбиров, Й.Ә. Солтанов

буйына ҡойонорға осоп төшкән аҡҡош кеүек күркәм ҡала икән был. Ватаныбыҙҙың шул аҡкошон фашистарҙан азат иткән башҡорт атлыларының ҡылыс эҙе, даға эҙе мөһөрләнеп ҡалған ерҙәрҙе күҙҙән кисереп йөрөгәндә, бөтә илгә даны ашҡан панфиловсыларҙың ҡан туғаны — Атаевсылар ҡалҡыулығына ҡараған ҡаршы ярҙа, боронғо хәсрәтле урыҫ кенәзе Игорь полкының половец-ҡыпсаҡтар (йәғни башҡорттар!) менән бәрелешкән урынында һәйкәлташ ҡуйғандар икән. Шуны тамаша иткән саҡта уҡ беҙҙе аҫта ялтырап ятҡан дәү йылғаның исеме, нисектер бик таныш тойолоп, һиҫкәндереп ебәргәйне. Шунда уҡ беҙ, үҙ-ара һөйләшеп, серенә лә төшөндөк. Баҡты иһәң, алдыбыҙҙа ағарып ятҡан белая Калитва йылғаһы, илдәге башҡа бик күп кенә ер-һыу атамалары кеүек үк, беҙҙең өсөн төптө “сит” түгел, төптө таныш һүҙҙәрҙән тора имеш. Ошоға тиклем бит беҙ, “СССР географияһы”нан уҡып, исеме буйынса “дүрт ҡатлы” һыуҙарҙың барлығын белә инек (чу-со-ва-я, бында һәр ижек “һыу” тигән мәғәнәлә), хәҙер инде “биш ҡатлы”һына ла юлыҡтыҡ: Белая (Аҡ) Калитва йәки аҡ-(А)ҡ-ал-итл-ва (боронғо телдә был ижектәрҙең дә һәр береһе “һыу” тигәнгә ҡайтып ҡала). Ошондай сюрприздар өс мосафирҙы бөтә сәйәхәт буйынса “эҙәрләне”. Уйлап ҡарағыҙ: Башҡортостаныбыҙҙағы

мәшһүр Ағиҙелдән (урыҫтар уны, калькаға күсереп, Белая тиҙәр) башҡа кемдең Тағы ла икенсе бер Ағиҙелде күргәне бар? Ә беҙ бер-бер артлы йәнә бер түгел өс Ағиҙелдең барлығын белдек (өсөһө лә Ворошиловград өлкәһендә, хәҙер улар, ғәҙәттәгесә калькаға күсерелеп, урыҫса Белая тип йөрөтөлә). Былырҙан тыш, беҙгә таныш Ҡыҙыл (Красная), Мейәс (Миус), Айҙар (Айдар), Ураз (Уразова), Урай (Ураева), Ҡазан (Казинка), Оҫкол (Оскол), Тоҙло (Тузлов), Ҡырын (Крынка), Ҡамышлы (КамышНая), Дөркүл (Деркул), Боға-осар (Богучар), Епһыу (Евсуг), Ҡыуһыу (Ковсуг) һыуҙары үҙҙәренсә сәләмләп ҡаршылаiны.

Эй Ватан, ғәзиз Ватан, бөйөк Совет Ватаны! Һинең иңһеҙ киңлектәреңдә һәр беребеҙ етмеш телдәрҙә һөйләшеп йәшәһәк тә, етмеш милләттәргә исемләнһәк тә, бөтәбеҙ бер туған булып тыуыу өсөн үҙебеҙ һәм ерҙәребеҙ аралашып, аҡ ҡайындарыбыҙ һәм һары һандуғастарыбыҙ йәнәшә-ҡуша үҫеп тә һайрашып, тупраҡтарға тирҙәребеҙ, ҡандарыбыҙ ҡуша һеңешмәгәнме ни һуң?! Туғандарса ҡыҫышырға ҡулдарыбыҙ етмәгәндә ерҙәребеҙ үҙ ҡулдарын ҡыҫышмағанмы ни һуң?! Бер милләткә генә хеҙмәт итеүҙән ары үтеп, ҙурайып, етмеш милләттәргә лә бер мәғәнәлә яңғыраған, етмештәрҙең дә үҙ туған һүҙҙәренә әүерелгән ер-һыу исемдәре түгелме быға аныҡ шаһит?! Дөйөм Ватан еренән дә ғәзизерәк нимәбеҙ бар һуң беҙҙең, Тыуған еребеҙ?! Ошо тыуған ер-һыуҙарҙы яҡлап бында фашист-илбаҫарҙарына ҡаршы тиңһеҙ алышта халҡымдың дарьялай түккән ҡандарын, том бойоҡло тымыҡ йылға буйҙарына һалған мең-мең ғәзиз баштарын да иҫләһәң, йөрәктәргә был яҡ Тағы ла һыҙлаулыраҡ, яҡыныраҡ булып сыға. Төньяҡ Донец йылғаһын борамда арҡыры киҫеп барғанда, моғайын, беҙҙең өсөбөҙ ҙә, ихтыярһыҙҙан, ошо хаҡта уйланып-тулғанып ҡуйғандыр. Әмәлгә ҡалғандай, борамсыһы ла тап беҙҙең берәй башҡорт ағайы төҫлө бит әле ул: Ҡояшҡа янып ҡарайған ҡоңғорт йөҙлө, Ҡара күҙле, аҫҡараҡ һәленеп төшкән ҡара мыйыҡлы. Өҫтәүенә, төҫө уңып бөткән йәшел гимнастерка-салбар кейеп алған. Ул, ҡорос арҡан ырғағына ҡуш ҡуллап йәбешеп, беҙҙе, беҙ ултырып килгән “Волга”ны ике республика сигендәге тымыҡ йылғанан, әкрен генә, арғы яҡтағы йәшел ярға ҡарай тарта. Үҙе, күҙҙәрен алмаҫтан, арабыҙҙағы хәрби кейемле кешегә — полковник Хәбировҡа баға.

— Йылғағыҙ һәр саҡ ошолай тын ағамы? — тине Сәйфулла ағай, борамсының күҙ ҡарашын эләктереп. Тегеһе, һүҙ осо сыҡҡанға ҡыуанып:

— Төрлө саҡтары була инде уның, иптәш полковник, — тип ҡуйҙы, — Нимә, әллә һеҙ бында тәү тапҡырмы?

— Юҡ, булғылағаным бар.

— Ҡайһы айҙарҙа?

— Шартлап торған февраль айында.

— О, ул айҙа ҡырҡҡа еткән һыуыҡтар булғылай. Шешәлә араҡы туңа. Донецты ҡалын боҙ ҡаплай.

— Әйтмәҫ инем.

— Һыуыҡ була, типме?

— Юҡ, ҡалын боҙ ҡаплай, тип.

Борамсы, арҡан тартыуынан туҡтап, полковникка сәйер күҙ ташлап алды:

— Һеҙ бында нисәнсе йылда булдығыҙ?

— Мең туғыҙ йөҙ ҡырҡ өсөнсө йылда.

— О! Аңланым! Һеҙ Донбассты азат итеүҙә ҡатнашҡанһығыҙ! Ниндәй ғәскәр сафында?

— Армия генералы Дмитрий Данилович Лелюшенко командалығындағы 3-өнсө гвардия армияһы сафындабара инек беҙ. 8-енсе кавалерия корпусында...

— О, кавалерия! Хәтерләйем, хәтерләйем. Бынан күп үттегеҙ һеҙ. Танкылар ҙа күп үтте, — тине борамсы, уйға ҡалып. — Ай-һай, тын түгел ине шул ул саҡ Донец! Ҡалын боҙҙарын селпәрәмә килтереп, ҡаҙандай ҡайнаны был һыу!..

Полковник йылға боролошона төртөп күрһәтте:

— Тап анау тәңгәлдә өлкән лейтенант Гәрәйев Миңлеғол батареяһының бер пушкаһы боҙ аҫтына киткәйне. Бөгөнгөләй хәтерләйем: нәҡ етенсе февраль көн. Аттарҙы саҡ ысҡындырып өлгөргәндәр. Мин ҡаршы яҡ ярҙан әйләнеп килгәндә һуғышсылар алғы аттың берәһен һөйрәп маташалар ине һыуҙан. Көскә тартып сығарҙыҡ. Шунда уҡ шыҡырҙап туңа лабашланы хайуан, ә дивизионда һәр ат алтын урынында. Шунда уҡ малдың тәнен бесән төйләге менән ныҡ итеп ыуҙыҡ, араҡы эсерергә әмер бирҙем. Күмәкләшеп ике яҡтан янтаҡлап тотоп, йөрөтөп алып киттек. Бара торғас хайуанҡай йылынды, юртабашланы. Шулай итеп, пушкабыҙҙы юғалтһаҡ та, алдағы алыш өсөн атты һаҡлап ҡалдырҙыҡ. Батҡан пушканы сығарырға әмер бирҙем дә батарея командиры урынбаҫары Шакирйәновҡа, тағы алға елдерҙем, — тип осланы ул. Үткәндәрен хәтерләп, борам яҡынлашып килгән ярға текләп ҡараны. Беҙҙең дә күҙҙәр төбәлгәйне. Унда Украина ере — Донец Бассейны тип аталған, мәғдәндәргә ифрат бай булған бейек һырт башлана. Ростов өлкәһенән тороп ҡарағанда, һыу буйын кәртәләп ятҡан был бейек оҙон тау һуғыш өсөн махсус төҙөлгән бихисап ҙур нығытманы — фортты хәтерләтә. Фашистар бит ошо ергә теше-тырнағы менән йәбешеп, совет ғәскәрҙәрен үткәрмәҫ өсөн оборона ҡороп ятҡандар.

— Эйе, ҡаты һуғыш булды бында, — тине борамсы. — Йылғаны кискәс тә, Давыдовка-Кружиловка ҡасабаһы эргәһендә туғандар ҡәберлеге янынан үтерһегеҙ. Шул ус аяһындай ғына ерҙә беҙҙең 560 һуғышсы башын һалды. Хәҙер унда ҙур һәйкәл...

— Шулай, һәр ҡарыш ер, һәр таш, һәр ағас өсөн йән ҡорбан итергә тура килде. — Сәйфулла ағай ауыр көрһөнөп алды. — Ләкин совет һуғышсыһы, Тыуған илдең изге әмерен үтәп, алғабарҙы туҡтауһыҙ. Беребеҙ үлһә, ҡалғандарыбыҙ уның өсөн бишәрләтә фашисты дөмөктөрҙө. Дошман да бында үлерен белмәй һуғышты...

Зәңгәр “Волга”, мыштым ғына, Донбасс һыртына күтәрелә. Бынан өс тиҫтә йыл элек кенә зәһәр пулялар һыҙғырып, снарядтар шартлап торған ерҙә бөгөн моңло ҡоштар тауышы. Ҡайҙалыр өҙөлөп-өҙөлөп һандуғас һайрай, әйтерһең, бөтә донъяны сихри мөхәббәткә сорнай. Тирә-яҡта ерҙе

кейеҙҙәй япҡан хуш еҫле үлән, сәскәләр, зифа аҡтирәк, ҡуйы-ҡусҡыл япраҡлы ял быр каштан, емештәре өлгөрөп килгән сейә, груша, алмабаҡсалары. Машина һаман талпынып-талпынып үр менә, һәммәбеҙҙе Еңелсә генә тирбәлдерә, ә йомшаҡ шин-тәгәрмәстәр аҫтында асфальт йырлай. Ике яндан йәшел таҫма һуҙып ағастар ҡалғый. Мәғдәндәрҙең өҫтөн япҡан һыртҡа ла килеп менәбеҙ. Унда күҙҙәрҙең яуын алып икенсе затлы байлыҡ — өҫтәлдәй тигеҙ, шаҡмаҡ-шаҡмаҡ йәшел баҫыуҙар иңе ята киң йәйрәп, йәшел шаҡмаҡ араларын айбарлап әҙәм ҡулы йырған йылғалар аға. Күк йөҙкәйе сөм-зәңгәр, әммә сәйер күренеш: аяҙ көндә болотһоҙ ямғыр яуғандай, ҡырҙы ҡырға тоташтырып, дуға-йәйғорҙарбалҡый — һуғарыу машиналары тырыша. Йәшел кукуруз, бойҙайҙарға, ҡорос һемәк остарынан бөркөлөп, көмөш тамсылар яуа. Болотһоҙ ерҙә лә күк күкрәтеп шифалы ямғыр һи бөләп барған был тылсымлы моторҙар — Пархоменко исемендәге совхоздың тракторҙары икән. Күренекле революционер, граждандар һуғышы ҡаһарманы, Беренсе атлы армияның легендар комдивы А.Я. Пархоменконың тыуған ауылы бына шулай ергә үҙенең йәшел имзаһын яҙа.

— Ҡырҡ өсөнсө йылда был ерҙәрҙән беҙ үткәндә ағас тигәндең төхөрө лә юҡ ине, — ти Сәйфулла ағай, юл буйҙарын, *баҫы*у аралыҡтарын йомарт ҡаймалаған ҡуйы йәшеллектәргә ымлап күрһәтеп. — Ҡола ялан ине. Дошмандың күҙ алдында, пуля-йәҙрәләре аҫтындабарабыҙ. Шунан ғына белегеҙ ҙә ҡуйығыҙ инде кавалерияға ҡайһылай ҡыйын булғанын. Өҫтән — авиация, яндан — артиллерия, танк утынан ана анауы соҡор-балкаларға төшөп һыйына торғайныҡ...

3

Был яҡтарҙың ҡалҡыулыҡлы далаһы үҙенең соҡор-саҡыр кил бәте, ҡырыҫ тәбиғәте менән Башҡортостандың Әбйәлил, Борай, Күмертау һәм Йәнсура райондарының ялан ерҙәрен хәтерләтә. Шундағы ҡылған, әрем һәм сәрелдәүек сиңерткәләр... Ҡалҡыулыҡтар аралығында ҡуйы йәшеллек — саҡрымдарға һуҙылған урманлы тәрән үҙәктәр (балкалар). Күбеһенсә имән, саған, һирәкләп шыршы-карағай ағастары менән ҡаймаланған был тәрән үҙәктәр төбөндә шылтырап шишмәләр ҙә аға. Ер йөҙөндәге йөйләнеп бирсәләнгән, әммә төптән ҡанһыраған яра эҙҙәре кеүек улар. Ошо шөкәтһеҙ балкаларға бөйөк Ватан һуғышының иң данлы ла, ҡанлы ла тарихтарының береһе теркәп ҡалдырылған. Йәғни ҙә 8-енсе корпус ҡушаһындабашҡорт кавалерия дивизияһының дошман тылына яһалған тәрән рейд йүнәлеше был.

— Төньяҡ Донецты кисеп сыҡҡас та, беҙ бына был балка буйлап киттек, — тип күрһәтә полковник Хәбиров, һул яҡҡа ишаралап. — Оҙон колонна булып, ат бауырынан тәрән ҡар ярып барҙыҡ. Пушкаларҙы тартыубигерәк ҡыйын ине. Әйтергә кәрәк, беҙҙең юлдар рейд тамам бөткәнсе күбеһенсә ошондай тәрән ҡарлы балкалар буйлап һуҙылды.

Беҙҙең өсөн алдан да, арттан да, уңдан да, һулдан да фронт ине... Дошман харап ныҡышмалы алышты, һуғыштар ҡаты барҙы...

Полковниктың һуңғы һүҙҙәребеҙҙең фекерҙәрҙе уҡмаштырып, бергә төйнәгәндәй булды. "Волга" салонында тәрән тынлыҡ урынлашты. Сәйфулла ағай тубығына йәйеп һалған картаға, Рәйес — күҙҙәре алдында таждарын елгә таратып ел берҙәп килгән, кисә генә Төньяҡ Донец ярында атай ҡәберенән алынған талымһыҙ дала сәскәһенә, ә өсөнсөбөҙ — алыҫтағы офоҡ ситенә ҡаймаланған тимгел-тимгел төҫтәргә ҡарап уйға талдыҡ, бынан өс тиҫтәләп йылдар элек булған фронт хәлдәрен кисерҙек күҙ алдынан. Теше-тырнағы менән юҡҡа ғына йәбешеп ятмаған был ергә дошман.

Сәфәр сығыр алдынан мин 1943 йылғы тәрән рейдҡа ҡағылышлы бик һаран сығанаҡ — документтар һәм мемуар әҙәбиәтте бергә туплап, ныҡышмалы рәүештә битмә-бит барлап сығып, хатта мөһим урындарын ҡуйын дәфтәремә лә күсереп, дөйөм ваҡиғалар ағышын яҡынса күҙ алдымабаҫтырып, сәйәхәткә шөйлә әҙерлекле килгәйнем. Бына хәҙер шул багажымды тәүге тәьҫораттарға ҡушып үрергә форсат тейҙе. Хәлемдән килгәненсә, үҙ ла бораториямды булдырҙым: һуғыштан һуң донъяға тыуған күптәр өсөн сер йомғағы рәүешен алған рейд хәлдәрен үҙемсә һүтеп йомғаҡларға — документтар, иҫтәлектәр һәм ер хәтере ярҙамында үткәндәрҙе аңымда ҡабат тергеҙеп, ошо сәйәхәт дауамында эҙмә-эҙлекле рәүештә яҙып барырға, киләсәк ижади эшем өсөн, *бар*са ваҡиғаларҙың бер сыл бырға теҙелеп ағылыуына өлгәшеү ине ниәт.

Инде күптәргә билдәле булыуынса, фашистар Германияһы тәү тапҡыр Мәскәү янында тештәрен һындырткас, Гитлер үҙенең ошо бәләһен төрлө һылтау-сәбәптәр менән аҡлатырға тырыша: "Һыуыҡ генерал", " Батҡаҡ генерал" һәм башҡа төрлө үҙенә аяҡ салыусы һөмһөҙ "генерал"дарҙы уйлап сығара. Ул, әлбиттә, донъяла хаҡлыҡ һәм халыҡ тигән бөйөк сәрғәскәр барлығын, совет халҡының тыуған ер, социалистик Ватан өсөн йән аямай һуғышыуын танырға һис теләмәй. Тап Наполеон кеүек, "кешелекһеҙ урыҫ ҡышы"На һылтанып, "хәл иткес" яңы һөжүмдәрен йылы яҡтан башларға ҡарар ҡыла. Тик шул уҡ хәл: егерменсе быуаттың ҡырағай баҫҡынсыларына йомарт йәй ҙә ярҙам итә алмай шул. Ерҙең ҡыртышын кимереп килгән ҡорос аждаһа-йылан — фельдмаршал Паулюстың 330 меңлек 6-нсы армияһы — берҙәм совет халҡының йәнә иҫ киткес ҡаһарманлығына ҡаты төкәлеп ҡаҡшай: Волга ярында 1942 йылдың 23 ноябрендә беҙҙең Көньяҡ-Көнбайыш һәм Сталинград фронттары тарафынан утлы ҡулса эсенә алынып, йән бирергә тыбырсына. Тарихта берҙән-бер булған, ике яҡ өсөн дә ифрат үлемесле Сталинград һуғышы башлана. Тап шул киҫкен көндәрҙә, Гитлерҙың үҙ әмере буйынса, ашығыс рәүештә, Сталинград эргәһенә рейхтың башҡа фронттарынан да эре көстәр күсерелә. Бында фашистарҙың "Дон" армиялар төркөмө командующийы генерал-фельдмаршал Манштейн тарафынан ике удар ғәскәр төркөмө туплана: береһе — Котельниковонан, икенсеһе Тормосинонан һөжүм итеп, совет ғәскәрҙәренең ут ҡулсаһын өҙөргә, Паулюс армияһын ҡотҡарырға тейештәр икән. Һөҙөмтәлә Сталинград

эргәһендә ике ҡатлы утлы кәртә — эске һәм тышҡы фронттарбарлыҡҡа килде. Уларҙың береһе Паулюс көстәрен юҡ итеү өсөн уны ҡамауҙа ҡаты ҡыҫып һуғышһа ("Уран" операцияһы), икенсеһе — Көньяҡ-Көнбайыш фронт — Манштейнға ҡаршы ("Кесе Сатурн" операцияһы) һөжүмгә күсте. Уның төп удары көньяҡ-көнсығыш тарафҡа: Түбәнгә Астахов — Тацинская — Морозовскиға йүнәлтелгәйне. Беҙҙең 112-нсе башҡорт кавалерия дивизияһы ла генерал-лейтенант М.Д. Борисовтың 8-енсе кавалерия корпусы уҡмашында (ул генерал-лейтенант П.Л. Романенконың 5-енсе танк армияһына беркетелгәйне) ошо Көньяҡ-Көнбайыш фронтта һуғышты ҡаһармандарса. Тиҙҙән совет ғәскәрҙәре, алдарына ҡуйылған бурыстарын тулыһынса үтәп, Ростов өлкәһенең көнбайыш сиген ҡаймап аҡҡан төньяҡ Донец йылғаһына килеп етте. Был йүнәлештә улар бик күп фашист дивизияларын, шулай уҡ Сталинград ҡамауындағы Паулюс армияһын тәьмин итеп ятҡан оло төйәктәрҙе — Морозовск, Тацинская авиабазаларын ҡыйратып үтте, бик күп хәрби улъялар төшөрҙө ҡулға. Ул ғына ла түгел, ғәскәрҙәребеҙҙең Ростовҡа яҡынлашыуы фашистарҙың Кавказдағы төркөмдәренә ҡамалыу ҡурҡынысы һалды, уларға стратегик әһәмиәткә эйә булған Донбассты юғалтыу кеүек ҡаза менән яналы. Бына ниңә дошман үҙенең Сталинградта ҡамалып ҡалған иң яугир ғәскәрҙәрен ҡотҡарыуҙан да ваз кисте: ифрат ашығыс рәүештә, бөтә мөмкин булған көстәрен алып, Чертково — Морозовск һыҙығында оборона тотоп ятҡан ғәскәрҙәренә (112-нсе Башҡорт кавалерия дивизияһы шуларға ҡаршы һуғыша ине бында) ярҙамға ташланы. Сталинград эргәһендәге Котельниково удар төркөмөнән ул "Гот" исемле 4-енсе танк армияның төп көсөн тәшкил иткән, ҡалын ҡорос көплө "Тигр"ҙар менән ҡоралланған 6-нсы танк дивизияһын, Тормосиндағы удар йоҙроғонан 11-енсе танк, ике пехота, ике авиаполевой дивизияларын һәм Германияның үҙенән ете дивизияны, итәгенә ут ҡапҡандай ҡабаланып, бында килтерергә мәжбүр ителде. Шул рәүешле, Сталинград эргәһендәге тышҡы фронт хәҙер дошман тылына табан 200 — 300 саҡрым төпкәрәк күсеп, Манштейнға инде Паулюсты түгел, ә үҙенең Донбасс менән Кавказ ҡапҡаларын яба алмай тонсоҡҡан "Дон" армиялар төркөмөнә ашығыс ярҙам күрһәтергә тура килде. Ә индебеҙҙе ҡыҙыҡһындырған 1943 йылдың 2 февралендә Паулюс армияһы тамам тар-мар ҡылынғас, һуғышыусы ике яҡ өсөн дә шарттар кинәт үҙгәреп, урталыҡҡа Украинаның индустриаль йөрәге — Донбасс һырты ҡалҡып сыҡты. Стратегик әһәмиәттәге хазиналарғабай был ерҙе бер яҡ — үлгәндә лә ҡулдан ысҡындырмаҫҡа, ә икенсе яҡ, беҙ, тартып алырға тейеш ине. Совет армияһы өсөн тәүге сиратта промышленность үҙәктәренең береһе булған Ворошиловградты (элекке Луганскиҙы) азат итеү бурысы йөкмәтелде.

Беҙҙең ғәскәрҙәрҙе туҡтатыу өсөн гитлерсылар, ашығыс рәүештә, оборона һыҙыҡтарын нығытыу сараһын күрҙе. Ворошиловград өс ҡат тимер-бетон кәртә менән уратып алынды, ул өс меңгә яҡын көбәктән торған доттар, дзоттар, мина яландары, һәр төрлө инженерлыҡ ҡоролмалары менән йоҙаҡланды. Ҡала үҙе ҡоралланған крепоскә әүерелде. Миус йылғаһының бейек ярҙары буйлап тылдан тағы ла бер

нығытма — “Миус-фронт” төҙөлә башланы, тирә-яҡтың халыҡтары көслөк менән бында ҡыуып килтерелеп, ер ҡаҙыу, таш ватыу эштәренә егелде. Кавказдағы 1-енсе танк армияһы берләшмәләре ошо һыҙыҡ буйына күсерелде. Тәрән тылда партизандарға ҡаршы гарнизондар көсәйтелде.

Һуңынан беленеүенсә, 4 февралдә Гитлер ставкаһында махсус хәрби кәңәшмә уҙғарыла, Донец йылғаһы буйындағы ҡырҡыу хәл тикшерелә. Ҡоралланыу һәм һуғыш монаяттары министры шпеер һәм күмер мәсьәләләре буйынса империя вәкиле Плейгер, ныҡлы дәлилдәргә таянып, беҙ Донбасстан башҡа герман хәрби экономикаһын күтәреү юлын күрмәй беҙ, унһыҙ беҙҙе һәләкәт көтә, тип һығымта яһайҙар. Гитлер ҙа улар фекеренә ҡушыла һәм, Донец Бассейнын һис тә бирмәҫкә, әгәр ҙә беҙ уны ҡулдан ысҡындырһаҡ, артабан һуғыш алып барыу ауыр буласаҡ, тип белдерә. Һуңынан “Дон” армияһы төркөмөнә Гитлер үҙе килеп етә. “Төркөмдәр штабтарының Запорожьела йыйылған кәңәшмәһендә, — тип хәтерләй Манштейн үҙенең “Юғалтылған Еңеүҙәр” китабында, — Гитлер, һис нисек тә дошманға Донбассты бирергә ярамай, хатта ваҡытлыса ла. Әгәр ҙә беҙ был районды Юғалтһаҡ, хәрби промышленносыбыҙҙы сеймал менән тәьмин итә алмаҫ инек, тип белдерҙе”.

Баяғы 8-енсе кавалерия корпусына ҡаратылған башҡорт дивизияһы 2 февралдән алып 3-өнсө гвардия армияһы уҡмашында хәрәкәт итә башлай. Генерал-лейтенант Д.Д. Лелюшенко командалыҡ иткән был армия өҙлөкһөҙ ҡаты һуғыштар менән Төньяҡ Донец йылғаһын кисеп, 4 февралдә Ворошиловград янына уҡ килеп етә. Совет һуғышсыларының алдында хәтәр дошман — фашистарҙың иң ышаныслы 6-нсы, 7-нсе, СС “Райх” танк дивизиялары, 335-енсе йәйәүле дивизияһы һәм башҡа күп берләшмәләре утлы кәртә ҡороп тора.

Ҡаланы штурм менән алыу мөмкин булмағанлыҡтан, беҙҙең 3-өнсө гвардия армияһы төп ударҙы бер юлы ике флангынан һәм, ҡаланың көньяҡ-көнбайышына урап үтеп инеп, дошмандың тәрән тылынан яһарға ҡарар итә. Ошо яуаплы операцияның уңышы өсөн баяғы өс йоҙроҡтоң да бер юлы һуғыуы зарур ине. Хәрби бурыс 18-енсе уҡсы (генерал-майор М.И. Запорожченко), 2-нсе танк (генерал-майор а.Ф. Попов), 2-нсе Тацинский гвардия танк (генерал-майор В.М. Баданов), 8-енсе атлы (генерал-майор М.Д. Борисов) корпустары ҡарамағына тап шулай ҡуйыла ла. Сталинград янындағы “Кесе Сатурн” операцияһы ваҡытындағы кеүек үк, дошман тылына ярып кереп тәрән төпкөлдән ҡылыс сабыу бурысы яугир кавалерияға йәғни 8-енсе корпус өлөшөнә төшә. Был тәрән рейд, хәрби әҙәбиәттә һис бер әйтелмәһә лә, ғәмәлдә кавалерия маршалы С.М. Буденныйҙың 1919 йылдағы аҡтар тылына, Дебальцевоға, тәрән рейдын эҙмә-эҙ ҡабатлай ине (моғайын, маршалдың теләге буйынсалыр)... Бының өсөн 3-өнсө армия тейешле урында дошмандың фронтын өҙөргә, атлылар шул “ҡапҡа”нан инеп китергә тейеш була. Юлдашыбыҙ Сәйфулла ағай яҡшы хәтерләүенсә, 7 февралгә ҡаршы төндә корпустың өс дивизияһы иртәнге шул һикереш өсөн утлы өйөрмәгә йомарлана...

Яугир иртәнең тағы ла бер абруйлы, тере шаһитына һүҙ бирәйек.

“7 февралдә иртән саҡ корпус берләшмәләре дошман оборонаһын өҙөп, йырып кереү урыны булырға тейешле ергә етте, — тип хәтерләй корпустың шул саҡтағы тыл командующийы, һуңынан, М.М. Шайморатов һәләк булғас, 7-нсе гвардия башҡорт атлы дивизия командиры, хәҙер отставкалағы гвардия генерал-майоры, Советтар Союзы Геройы Григорий Андреевич Белов үҙенең китабында (“Путь мужества и славы”, Башҡортостан китап нәшриәте, Өфө, 1967). — *Ләкин* армия тарафынан бер ниндәй ҙә йырын эшләнмәгәйне. Шуның арҡаһында беренсе эшелондабарыусы 21-енсе һәм 55-енсе атлы дивизиялар дошман танкыларының һәм йәйәүлеләренең контратакаһына юлыға, уны көн буйы кире ҡағырға тура килә. Һуғышҡа фәҡәт 112-нсе Башҡорт атлы дивизияһы индерелгәс кенә, дошманды ҡыҫырыҡлай алдыҡ. Икенсе көндә һөжүмен дауам итте корпус. Һөҙөмтәлә бесклеватый һәм *Лысый* утарҙары араһындағы фронтта ике саҡрымдай йырын барлыҡҡа килде. Бына ошо үҙебеҙҙең көстәр менән яһалған йырынға ташландылар ҙа инде корпус берләшмәләре.

Корпус йырынға ингәс, мин шунда уҡ тылдарҙы корпус артынан эйәртеү өсөн артҡа киттем. Ул саҡта корпустың тыл эшелондары менән радио элемтәһе юҡ, бөтә күрһәтмәләр һәм бойороҡтар дивизия һәм корпус командирҙарының урынбаҫарҙары менән уларға буйһонған командирҙар үҙҙәре күҙмә-күҙ осрашҡан саҡта ғына бирелә ине. 3-өнсө гвардия армияһының уңышлы һөжүм итеренә иҫәп тотоп, уҡсы дивизиялар ҡойроғонда ҡалмаҫ өсөн, мин тылдарҙы корпус хәрәкәт иткән юлға сығарырға ашыҡтым”.

Ләкин, күп тә үтмәй, корпус үҙе ярып инеп киткән тар ғына “ҡапҡа” уның алғы колонналары артынса уҡ ябыла: үкенескә ҡаршы, генерал-майор Г.А. Белов телгә алған 3-өнсө гвардия армияһы частәре, дошман фронтын йырыу түгел, хатта атлылар үҙҙәре асҡан ошо йырын урынын да кәрәк ваҡытҡаса һаҡлап тота алмайҙар...

“9 февралдә иртүк, — тип дауам итә Г.А. Белов, — билдәләнгән маршрут буйынсабарыусы тылдар подразделениелары колоннаһына минометтарҙан һәм пулеметтарҙан ут яуҙырыла. Мин барышты тиҙләтергә тырыштым, *ләкин* шул саҡ 2-нсе гвардия танк корпусының батальон командиры машинамды туҡтатты:

— Полковник иптәш, алда дошман. Мин үҙемдең батальоным менән һуғыш алып барам, *ләкин* минең хәрәкәт бына был ҡалҡыулыҡтарҙа туҡтатылды.

Ул юлдан уңға һәм һулға төртөп күрһәтте. Колоннаны туҡтатырға һәм ваҡытлыса яҡындағы ауылдарға урынлаштырырға тура килде. Мин үҙем шунда уҡ күрһәтмәләр алыу өсөн армия штабына йүнәлдем. Был тарафта беҙҙең частәрҙең һөжүме туҡтатылды, тинеләр миңә унда. Тылдарҙы урынлаштырыу районын күрһәттеләр һәм армия уңышҡа ирешкәнгә тиклем көтөргә бойорҙолар. Әммә көтөлгән уңыш булманы һаман. *Корпус шулай дошман тылына кәрәкле запастарһыҙ, фәҡәт полк обоздары менән генә инеп китте”...*

Дошман тылында пушкаларыбыҙ — етерлек снарядһыҙ, мылтыҡтарыбыҙ — патронһыҙ, аттарыбыҙ — фуражһыҙ, яугирҙәребеҙ аҙыҡһыҙ ҡалды, тимәк...

4

Ҡорос атыбыҙ зәңгәр “Волга”, елдәй елдереп, асфальт юлдан беҙҙе һаман йәшел урман һыҙаттары, баҫыуҙар, емеш баҡсалары, аҡҡош кеүек ап-аҡ өйлө ҡупшы ауылдар, ҡалалар буйлап осорта. Ауыл һайын, тип әйтерлек, майҙандарҙа гөлләмәләнеп, төрлө төҫтәргә күмелеп үҫеп ултырған саф сәскәләр, улар янындағы туғандар ҡәберҙәренә ҡуйылған һалдат һынлы һәйкәлдәр ҡаршы ала, оҙатып тороп ҡала. Улар көн дә, төн дә шулай тура ҡатып, әйтерһең, тереләрҙең тыныслыҡ һәм ғүмер һағында тора. Ни тиклем дә күп улар — Ерҙең аҡ бишеген ҡурсалап тотҡан, аҡ ҡайындарын моңһотҡан, аҡ бәпестәрен талпытҡан, һандуғастарын ярһытҡан, Ҡояш менән ер араһын яҡты нурға тоташтырған мәңгелек һалдаттары!.. Бөтәһенең, тип әйтерлек, гранит постаментында йөрәктәребеҙгә уйып яҙылған бер дата — 1943 йыл... Шофер оҙаҡ һөйләшмәй барыуҙан ялҡып, буғай, радиоалғыстың һырлы төймәһен бороп ебәрә, талғын ғына моңло көй сеңләп ағыла. Ҡушабыҙҙа юлдашланып оҙата килгән күмер-ҡара күҙле йәш кенә һылыу, беҙ булып киткән “Светоч” колхозы рәйесенең ҡыҙы, музыканы ишетеү менән ҡалҡынып, *баян*ан биреле ҡараштырған гәзитен этәре берәк һала.

— Ира, беҙҙең менән килеү һеҙгә, моғайын, күңелһеҙҙер. Һөйләшмәй беҙ ҙә, уйланып тик барабыҙ... — тип, бөтәбеҙ өсөн дә аҡланғандай итеп ҡуя алсаҡ күңелле Рәйес.

— Юҡсы, мин дә уйланып барам, — ти ҡыҙый.

— Уйландыра шул был ерҙәр... — Өсөбөҙ ҙә бер юлы көрһөнәбеҙ.

— Шулай булмай һуң! — тип Ира беҙҙең эске кисерештәрҙе ихлас аңлауын, уртаҡлашырға теләген белдерә. Беҙ унан ауыл хәлдәре, үҙе тураһында һорашабыҙ. Мәктәптә унынсыны тамамлағандан һуң, ҡанун талап иткәнсә, ике йыл колхоз баҫыуҙарында тир түккән дә Новочеркасск ауыл хужалығы институтының агрономия факультетына уҡырға ингән, быйыл дүртенсе курсты уңышлы тамамлаған, үҙҙәренең колхозына йәйге практикаға ҡайтҡан. Бер тыуған ағаһы Ростовта уҡый, ул да колхозға инженер булып ҡайтасаҡ. Ҡыҙ, форсаттан файҙаланып, шуны күрергә китеп бара икән.

Новочеркасск тигәнде ишеткәс, Ростовтан Усть-Белаякалитваға барышлай урамдарынан үҙебеҙ елдереп үткән, майҙанында Кавказды яулап алыусы Рәсәй генералы дәһшәтле Ермоловҡа һәйкәл ҡуйылған боронғо казак ҡалаһын хәтерләнек; ҡаланы уҙып, йылғаны аша сыҡҡас, тау башында ҡуҫҡыл баҡса ҡосағында үҙенә күрә бер бәләкәс ҡаласыҡ булып йәйрәп ултырған, алтын башаҡ төҫөндәге мөһәбәт биналарҙы — институт корпустарын килтерҙек күҙ алдына.

— Шәп урын. Тап кәрәкле ерҙә — колхоз баҫыуҙары араһында урынлашҡан, — тип маҡтап алдыҡ. Студент ҡыҙҙың ғорурланыуҙан күҙҙәре баҙлап янды.

— Шулаймы? Эсенә инеп күрһәгеҙ ине әле уның! — тине.

— Уҡыуҙы тамамлағас, ҡайҙа ҡарап йүнәлергә уйлайһығыҙ?

— Ҡайҙа булһын, тыуған ауылыма, — тине Ира. — Мине колхоз үҙе ебәреп уҡыта бит! Ҡыҙҙың күҙҙәре тағы ла осҡонланды.

— Имтихандар нисек бара? — тип белештек.

— Әлегә аҡһаған юҡ. Тик бына политэкономия менән философиянан ғына бер аҙ шөрләп торам, — тине, йәшермәне ҡыҙ.

— Әйтәм, тырышып гәзит уҡып бараһығыҙ.

Ҡыҙ ҡысҡырып көлдө:

— Тормоштан ярты сәғәткә лә артта ҡалырға ярамай. Юғиһә, һуңынан уны ярты йыл буйына ҡыуып етергә тура килә. Быны беҙҙең философия уҡытыусыһы шулай ти.

— Мәсьәләне шулай ҡаты тотамы?

— О! Көн үҙәгендәге политиканан саҡ ҡына тотлоҡһаң, өс көндән һуң килерһең, ти ҙә сығара.

— Тимәк, политика тигән емеш ауыл хужалығында ла бик кәрәкле үҫемлектәрҙән һанала?

— Кәрәкмәгән ере юҡ уның, — тип көлә ҡыҙ. — "Политика шиңгән ерҙә эклектика сәскә ата", тип тә әйтергә ярата беҙҙең профессор.

— Һәм һеҙ шуға ышанаһығыҙмы?

— Һе, нисек ышанмаҫҡа, ти? Унһыҙ йәшәп ҡарағыҙ.

— Бына бит заманалар: атабалалары тыумыштан уҡ политикаға йәбешә хәҙер. — Көләбеҙ. Әңгәмәгә Сәйфулла ағай ҡушыла:

— Дөрөҫ әйтәһегеҙ, Ира, бик дөрөҫ. Был донъяла сәйәсәттән ситтә ҡалырға тырышыу — ҡолаҡтарыңа һәм күҙҙәреңә үҙең теләп балауыҙ һылау ул. Ундай бәндәләр таҡыр юлда ла аҙым һайын а бына.

— Бына һеҙ хәрби кеше, — ти Ира. — Һуғыш ваҡытында был мәсьәлә бигерәк тә үткер торғандыр?

— Ҡылыс йөҙө кеүек! Һин йә патриот, йә хыянатсы. Икеһененә дә артында политика.

— Эйе, һуғыш бит ул политиканың иң юғары нөктәһе, тип әйтәләр. — Ҡыҙҙың биттәре алланды.

— Һуғыш ҡына тип әйтмәҫ инем. Тыныс тормошта ла кеше шул уҡ ҡылыс йөҙөнә баҫтырып ҡуйып һынала.

— Ҡайҙа һуң ул ҡылыс?

— Ул ҡылыс — беҙҙең үҙ Намыҫыбыҙ. Намыҫына тоғро булған совет кешеһе һәр саҡ политикаға — алғы көрәш һыҙығына атлыға. Намыҫлы кешегә политик булмай сара юҡ.

— Мин һеҙҙең менән килешәм, — ти Ира. — Хәҙербеҙҙән һәр өлкәлә активлыҡ талап ителә.

— Экзамендар өлкәһендә ләме? — тип шаярта Рәйес. Ҡыҙҙың алһыу бит остары уғата нығыраҡ яна.

— Минең өсөн бөгөн шунан да мөһимерәк өлкә юҡ!

— Ауырмы?

— Һеҙгә еңел булдымы һуң?!

Беҙ, һылыу ҡыҙ менән үҙебеҙҙең арала йылдар ғына түгел, ә психологик арауыҡ та урын алыуын күреп, студент йылдарыбыҙҙы иҫкә төшөрәбеҙ, һиҙҙертмәй генә көрһөнәбеҙ. Аралар яҡын ғына булһа ла, ни ҡәҙәре айырма: был быуынға алғы һыҙыҡтың нимә икәнен тылҡыу кәрәкмәйҙер ҙә — ул үҫтергән игенендә лә философик категория кәүҙәләнешен күрә! Ә беҙ?.. Билгә һаҡал еткәнсе лә үҙ-үҙебеҙҙе, дисцилирланған һыуҙай "сап-саф" сәнғәт тә бар донъяла, тип алдап, шуға ышанып йөрөй бөҙ, буғай... Иҫәрлекме был, вайымһыҙлыҡмы? Әллә юҡһа Сәйфулла ағайыбыҙ әйткән ҡурҡыныс "йә — йә"ме?..

Ираның ҡара-йылтыр күҙҙәренән һүнмәҫ-һүрелмәҫ ер йәме бөркөлә... Һылыу украин ҡыҙы, ҡалай ҙа беҙҙең башҡорт ҡыҙҙарына оҡшап тыуғанһың!.. Ә ниңә мин зәңгәр күҙҙәргә ғашиҡ? Йәшәйештең был сере, һуң, нимәлә? Яҙмышмы, әллә тәбиғәт-әсәме? Бына һеҙгә, кәрәк булһа, философик категория!..

Ҡайһындай ҙа матур түгелеп көлә был һылыу ҡыҙый. Ах, тағы ла күҙҙәре лә күҙҙәре — таң ысыңы үбеп сылатҡан-йылтыратҡан сөм-ҡара муйылдары! Күктең әгәр зәңгәрлеге булмаһа, аҡһылыуымдың маңлайындағы күк йондоҙҙары булмаһа, мин һис шикһеҙ йығылып ятып муйыл суғын өҙөр инем!..

"Волга"ның антенна-мыйығына эркелгән серле эфир, күңелдәөҙе иркәләүсе талғын көйҙән донъя ғәмдәренә күсеп, Мәскәүҙән һуңғы хәбәрҙәр бирә башланы. Бына нисәнсе тәүлек инде Ер шары тирәләй әйләнеп йөрөүсе йыһан станцияһында эш алып барған батыр космонавтарҙың үҙ тауыштарын ап-асыҡ ишетәбеҙ. Ерҙәге көллө халыҡтарға именлек, тыныс тормош, аҡ бәхеттәр теләй улар. Шунан һуң диктор илебеҙҙә ҡайнаған ҡыҙыу хеҙмәт ҡаҙаныштарын, капиталистик илдәрҙәге көндән-көн һаман көсәйә барған синфи бәрелештәрҙе, Америка һуғыш суҡмары Пентагондың Вьетнамдағы имәнес ҡылыҡтарын, герман фашистарына тиң ҡара эштәрен фашлаусы йәшерен документтарҙың донъяға мәғлүм булыуы, ФРГ-ла Гитлер Германияһының СССР-ға вәхшиҙәрсә баҫып инеүенә өс тиҫтә йыл тулыуы айҡанлы ҡайһы бер киҫек баштарҙың беҙгә ҡаршы йыйын шаулатырға маташыуын хәбәр итте. Ҡолаҡҡа шулар кергәс, беҙҙең күҙ алдында, әйтерһең, юл ситендә үҫкән алмабаҡсалары ҡабат көйөп, матур аҡ хаталар көлгә әйләнеп, һәйкәлдәрҙең һалдат һындары бейек постаменттарынан ырғып төшөп, фронтҡа теҙелеп, беҙ үҙебеҙ ҙә шулар рәтендә иңдәргә һоро шинель, яурындарға мылтыҡ һалып, осһоҙ-ҡырыйһыҙ утлы ғәрәсәт юлдары буйлап китеп барабыҙ төҫлө тойолдо... Эйе, алдыбыҙҙа дивизиябыҙ генерал Шайморатовын юғалтҡан Ворошиловград өлкәһе...

5

Революцион йолаларға бай Ворошиловград йәшел ҡосағын йәйеп ҡаршыланы беҙҙе.

Баҡсаларҙа ал розалар күкрәп сәскә атҡан мәл, ҡарт каштандар, уйсан баштарын эйеп, боронғо украин гетманының бунчук тупалсағын хәтерләтеүсе керпе һыртлы йоморо сәтләүектәрен күтәрә алмай һығылып төшкән мәл ине.

Һил аллеялар араһында беҙҙе көтмәгәндә Октябрь революцияһы дауылының утлы һулышы ҡаршыланы. Бына ул үҙебеҙ классик кинофильмдәрҙән генә күреп белгән, кил бәтһеҙ ҙур шынаға оҡшаған үҙйөрөшлө ҡорос көпө — инглиз уйлап сығарған иң тәүге танк. Улар икәү, скверҙың ике мөйөшөнә, әйтерһең, "Мы — из Кронштадта" кинотаҫмаһының шаҡмағынан сығып килеп ултырғандар. Донбасстағы күмер, Кавказдағы нефть, Уралдағы алтынбайлыҡтарынан ҡолаҡ ҡаҡҡан инглиз капиталы королдәре һипләп ебәргән уларҙы заманында. Ләкин Донбасс пролетариаты танкыларҙың аҙау тешен ҡайырып алған да, килер быуындарға күргәҙмә һабаҡ итеп, тыныс каштандар төбөнә сүкәйтеп ҡуйған.

Ялҡындан туҡылғанбайраҡ һымаҡ дөрләп ҡалҡҡан гранит һәм бронза ансамблдең түрендә, иң күренекле урында, мәңгелек ут яна ләүкеп. Ҡуҡыр инглиз танкыларын, фашист "панцир"ҙарын күкрәк менән бәреп ватҡан Ватан улдарының ҡайнар йөрәгенән телләнеп дөрләп сыҡҡан ут, һүнмәй торған ут был. Һаҡкабаҫҡан бронза һалдаттарҙың иңдәренә татлы сәскә еҫен бөркә ҡаланың йәшлек баҡсаһы — комсомол скверы. Сирендәр, ҡушар-ҡушар теҙелгән төпләс имәндәр. Тормоштоң дауам итеүенә, туҡталмаясағына ишаралап, зәңгәр күккә сәсрәп көмөш фонтан бәрә, тирә-яҡҡа көмөш сыңрауын һи бә. Бакса майҙанында данлыҡлы "Йәш гвардия" геройҙарының үлемһеҙ якты образдарын һынландырған бронза бюстар. Йәш кенә бронза ҡыҙҙарҙың һәм егеттәрҙең ҡайһы берҙәренең муйынына, әйтерһең, әле генә килтереп, ҡып-ҡыҙыл пионер галстуктары бәйләнгән, *батыр*ҙарыбыҙ бына-бына ҡулдарын күтәреп салют бирер ҙә, талпынып, атлап китерҙәр кеүек. Эргәләрендә йәнә лә бер гранит постамент. Унда, мәңгелеккә һалынған капсула эсендә, революция ветерандарының күкрәп килер быуындарға төбәп яҙған хаты һаҡлана икән. Был хат Октябрь революцияһына теүәл 100 йыл тулғас — 2017 йылда алып уҡылырға тейеш. Ә хәҙерен комсомол һаман көрәштә: туғыҙынсы биш йыллыҡтың үҙәген нығытыу эшендә. Был эштең ни дәрәжәлә уңышлы барыуын белдереп, шундағы хеҙмәт батырҙары аллеяһының ике яғын айбарлаған портреттар галереяһы һөйләй.

Коммунистик хеҙмәт фиҙакәрҙәре араһында йәш быуындың — бөгөнгө комсомолдарҙың да исеме бар. Мәңгелек ут яна, тормош ҡаҙаны ҡайнай, Климент Ефремович Ворошиловтың яҡташтары күмерҙе лә, тимерҙе лә геүләтеп "На-гора" өйә.

Ворошиловград күңелдәрҙе ни ҡәҙәр ныҡ арбаһа ла, ҡунаҡсыл ҡосағын йәйеп, ҡунырға ҡыҫтаһа ла, туҡталып торманыҡ беҙ — сәфәрҙе дауамланыҡ. Өсөбөҙ ҙә эш кешеһе — көндәр һанаулы, ә аҙымлап үтәһе ер,

һуғылаһы ауылдар, күрәһе әҙәмдәрбайтаҡ, дивизия һулап үткән һауаларҙың утын йотоп, уйланаһы уйҙар ҙа еткелек ине. Ҡаһарман Урал егеттәре алмас ҡылыс ялтлатҡан яҡтың төҫөн күҙ ҡараларыбыҙға тиҙерәк алғыбыҙ килде.

Перевальский районы Донбасс һыртының һыу айырғыс иң юғары урыны (беҙҙең Ямантау кеүек) — Донец ҡырлауында урынлашҡан. Диңгеҙ кимәленән 369 метрға ҡалҡыу. Тәбиғәттә генә түгел, кешеләр яҙмышында ла бит ҡалҡыуҙарға ел-дауылдар иң тәүҙә килеп һуғылыусан. Донбасс ерен азат итеүҙең прологы ла онотолмаҫ 1943 йылдың февралендә тап ошо һыртта, Дебальцево — Зверево тимер юл магистрале буйлап, 8-енсе кавалерия корпусының ҡылысы менән сабып яҙылған да инде.

Өлкәнең ун һигеҙ ауыл хужалығы райондары араһында Перевальский иң ҙуры. Хәйер, Донбасс масштабында "аграр" һаналған был "ауыл хужалығы районы" төшөнсәһе илдәге берәй сирәм ер районы кешеһе өсөн бик сәйер яңғырар ине. Сөнки унда 12 йәки 22 түгел, ә 122 мең кеше йәшәй, шул халыҡтың 65,4 проценты — күмерселәр, ун биш проценты — металл эшкәртеү һәм һигеҙ проценты еңел промышленность эшселәре икән (был "аграр район"да европалағы иң ҙурҙарҙан һаналған ком бинат, бер нисә эре завод). Ошонан ҡала ни бары һигеҙ процент ҡына халыҡ шөғөлләнә ауыл хужалығы менән. Шулай булыуға ла ҡарамаҫтан, был райондың совет хакимиәте башлығына, индустриаль үҫеш йөкмәткән оло яуаплылыҡ менән бер ҡатарҙан, үҙен ысын ер кешеһе итеп тойорға ла мөмкинлек бирә. Сөнки беҙ район башҡарма йортонабарып кергәндә, бөгөн йәкшәм бе — эшсе халыҡтың законлы ял көнө булһа ла, райсовет рәйесе Владимир Яковлевич Кравцов, эш урынында янып-көйөп, телефондан совхоз етәкселәре менән һөйләшә — баш ҡыҫып килгән иген, яуым-төшөм, көндәлек һөт һауымы хаҡында ҡыҙыу һүҙ алып бара ине. Тышта ҡоя башлаған елле ямғырҙы ла ул ысын игенсе күҙе менәнбайҡаны. Тәүге ыңғайҙа, беҙҙең ошо уттай ҡыҙыу эш мәлендә сәйәхәт ҡылырға машина һорап инеүебеҙҙе, етмәһә, иҫкәртеүһеҙ-ниһеҙ килеп төшөүебеҙҙе белгәс, тап башҡа яҡтарҙағы ауыл хужалығы районы етәкселәреләй, ҡыйынһынып, елкәһен ҡашып, бөтә шоферҙар — өйөндә, бынауы ял көндө ниндәй машина табаһың, тип ыңғыр-шыңғыр итә биргән төҫлө лә булып ҡуйҙы. Әммә шунда уҡ ни эш менән йөрөүебеҙҙе төшөнөп, йәһәт хәстәрлек күрә башланы. Полковник ағайыбыҙҙың ирәүән әйткән бер-ике һүҙе уны тамам иретеп тә ебәрҙе: улар, береһе элекке танкист, икенсеһе артиллерист икәнлектәрен танып, туғандарса ҡосаҡлашып, күҙҙәренән йәш сығарып үбештеләр. Баҡты иһәң, Сталинградтан Донбассҡаса икеһе лә иңгә-иң терәшеп бер ерҙән — 5-енсе армия сафында һуғышып үткәндәр икән. Морозовск, Тацинская, Усть-Белая Калитва юлдарында ауған дошман һөлдәләре өҫтөндә икеһенең дә утлы эҙҙәре ҡалған.

Башҡортостан хәлдәрен һорашып белгәс, Владимир Яковлевич беҙҙе районы менән ҡыҫҡаса таныштырҙы. Утыҙ бер милләт туғандарса ҡулға-ҡул тотоношоп йәшәй икән бында ("Башҡорттар ҙа күп, белегеҙ уны! — тип шаян йылмайҙы етәксе. — Мәҫәлән, шуларҙың береһе, Ҡолбарисов Нурислам, ҡойоп ҡуйған һеҙҙең төҫлө инде бына. Беҙҙә шахта

начальнигы ине, үрләттеләр үҙен — өлкәлә эшләй хәҙер!). Районда бөтәһе 32 мең гектар һөрөнтө ер, ҡалған 80 меңен шахталар, *бал*калар, соҡор-саҡырҙар биләй. Малсылыҡ тармағына ла ҙур иғтибар бирәбеҙ: совхоздарҙа алты мең һыйыр, яңы заманса төҙөлгән биш ҡошсолоҡ фабрикаһы бар (йылына 37 миллион йомортҡа һәм бик күп ит бирә). Илебеҙҙең башҡа дала районддарындағылай, бында ла Урта Азиянан иҫкән ҡыуан елдәр йонсота икән. (“Был шифалы ямғырҙы һеҙ килтерҙегеҙ”, — тип алсаҡ йылмайып ҡуйҙы рәйес). Шулай ҙа бирешмәй район, өлкәлә беренсе урында тора. Съезд алды ярышындағы уңыштары өсөн уға КПСС, профсоюз өлкә комитеттарының Ҡыҙыл Байрағы тапшырылған. Ошо көндә көллө тармаҡтар буйынса ла ярты йыллыҡ план арттырып үтәлгән.

— Ә шахтерҙар хаҡында һөйләп тораһы ла юҡ, үҙегеҙ күрерһегеҙ, — тине Владимир Яковлевич. — Өс минуттан һеҙҙе алырға үҙ машинаһында Чернухино ҡасаба советының рәйесе Владимир Григорьевич Сидоренко килеп етә. Яңы ғына һайланыҡ әле үҙен, “хужалығы” менән танышып йөрөй. Йәш булһа ла, тил бер, һис бер ятып тынмаҫ йән: барабыҙ тигән ерегеҙгә еткермәйенсә тынмаҫ. Бына килеп тә туҡтаны инде, рәхим итегеҙ. Хәйерле юл һеҙгә!

Владимир Григорьевич, ысынлап та, алсаҡ егет булып сыҡты. Ҡарҙай ап-аҡ нейлон күлдәк өҫтөнән төндәй ҡара костюм кейгән, аҡ төрткөллө ҡара ҡарлуғас ҡойроғо — галстук бәйләгән мәҙәниәтле яңы заман йәш кешеһе булып һүрәтләнеп ҡалды хәтеремдә. Йәш булыуына ҡарамаҫтан, беҙҙең дивизия һуғышып үткән юлдарҙы ул үҙенең биш бармағылай белә икән. Беҙҙең менән ҡуша тулҡынланып, машинаһын төрлө урау юлдарҙан бора-бора, бер ыңғайҙан уҡ кәрәкле эҙҙәргә төшөрөп тә алып китте.

Бына Демченко исемендәге совхоздың үҙәк бүлексәһе. Тау башында суҡайып торған һыу һурҙыртыу башнялары, ап-аҡ таш аҙбарҙар салына күҙгә. 1943 йылдың зәһәр февралендә Софиевка ауылы янындағы тәрән балка буйлап килеп сыҡҡан башҡорт атлылары бер ынтылыштан ошо совхозды һуғышып алып, 294-енсе полк командиры подполковник Георгий Ефимович Фондеранцев ошонан тимер юл буйындағы шахтерҙар ауылы Чернухинолағы фашист көстәрен барлау өсөн темеҫкенеү (разведка) ебәрә. Егеттәр тиҙ арала иҫән-имен барып етеп, әйләнеп тә ҡайталар. Станцияны һаҡлап баштан-аяҡ ҡоралланған ике “СС» батальоны, һигеҙ танк, дүрт үҙе йөрөшлө туп торғанлығы, тимер юл буйлап бер нисә бронепоезд йөрөп ятҡанлығы беленә. Корпус командиры 112-енсе башҡорт кавалерия дивизияһының командиры М.М. Шайморатовҡа кисекмәҫтән станцияға һөжүм итергә бойора...

— Ул саҡтабында ана анауы һоро башня ла бер нисә таш аҙбар ғынабар ине, — ти Сәйфулла ағай, тау башына ымлап күрһәтеп. — Ҡалғандарын һуғыштан һуң һалғандар булһа кәрәк.

— Эйе, яңы ҡоролма улар, — тип дөрөҫләй ҡасаба рәйесе. — Ғөмүмән, һуңғы йылдарҙа совхоз бик ныҡ яңырҙы, үҫте. Күрәһегеҙме анауы аҡ объектты? Райондағы иң ҙур ҡошсолоҡ фабрикаһы ул. Үҙендә генә лә етмеш туғыҙ бинабар. Йылына утыҙ тонна ҡош ите етештерелә

бында. Әгәр һәр бер совхоз шул ҡәҙәре ҡош ите бирә алһа, беләһегеҙме, ниндәй муллыҡҡа күмер инек илебеҙҙе? — Етәксенең ғорурланып әйткән һүҙҙәребеҙҙе лә һоҡландыртмай ҡала алманы.

Ап-аҡ итеп ағартылған күркәм таш бина — клуб алдындағы һәйкәл янына туҡталабыҙ. Тәрән тулҡынланыу, һағыш сорнап ала һәммәбеҙҙе. Ошо ерҙәрҙәрҙән һуғышып үткән һәм яуҙаштарын ҡара ер ҡуйынына һалған полковник, Сәйфулла ағайыбыҙ, күҙҙәре йәшләнеп, постаментҡа ырып яҙылған мәңгелек дан һүҙҙәрен уҡый.

— Нисә кеше? — ти ул, бер аҙ торғас, ҡасаба рәйесе менән клуб мөдиренә өндәшеп.

— Бында егерме һигеҙ совет һуғышсыһы ерләнгән.

— Исемдәре?

— Исемдәре билдәһеҙ, белә алманыҡ.

— Был бит беҙҙең дивизия егеттәре! — ти Хәбиров, уғата тулҡынланып. — Уларҙың исем-фамилиялары булырға тейеш. Һис шикһеҙ!

— Әгәр ҙә табышып бирһәгеҙ, бик ҙур рәхмәт әйтер инек. Беҙ уларҙы, мәңгелеккә иҫтәлек итеп, ташҡа ырып яҙып ҡуйыр инек.

Әйткәндәй, беҙ йөрөгән Украина ерендәге бик күп ҡәбер таштарында ҡаһарман яҡташтарыбыҙҙың исемдәре билдәһеҙ. Дивизияның ветерандар комитеты, башҡортостан хәрби комиссариаты, йәш эҙәрмәндәр һәм бөтә республиканың киң йәмәғәтселеге алдында был йүнәлештә йылдам эш башлап, һәләк булғандарҙың иҫтәлеген мәңгеләштереүҙә урындағы иптәштәргә төплө ярҙам күрһәтеү бурысы тора.

Тәрән уйҙарға сумдыҡ.

— Эйе, был беҙҙең, тереләрҙең, изге бурысы.

Полковник, планшетындағы картаһын йәйеп һалып, күпмелер өнһөҙ ҡала. Бармаҡтары еңелсә генә ҡалтырай.

— Бына ошо балка буйлап килеп сыҡтыҡ беҙ бында...

(Һүрәттә дивизия командиры М.М. Шайморатов. Сталинград фронты, 1942 й.).

Һүр. 9. М.М. Шайморатов. 1942

Күҙҙәребеҙ карталағы бөгәрем һыҙыҡҡа төбәлә. Бына бит ул соҡорҙар, тауҙар, ауылдар һәм ҡалалар — исемһеҙ туғандар ҡәберҙәрендә ятыусы яугир Урал бөокөттәре ҡыйғырлап ярып үткән утлы юл. Йөҙәрләгән саҡрымдар, үлемесле, ләкин батырҙар өсөн үлемһеҙ саҡрымдар...

Башҡорт дивизияһы ул көндәргәсә Сталинград янында, Дон далаларындағы һуғыштарҙа шаҡтай кәмегән сафтарын яңы көстәр менән тултырып өлгөрмәгәйне әле. Полктарҙа һуғышсылар һаны тейешләнән алтмыш процент тирәһе генә тәшкил итә, байтаҡ өлкән офицерҙар ҙа юҡ ине. Полк командирҙарынан

Нафиҡов һәм Сәйетғәлин батырҙарса һәләк булғайнылар, ә Макаев һәм Т. Кусимов, уның полк комиссары С. Әлибаев, яраланып, госпиталгә оҙатылғайнылар. Дивизияның политбүлек начальнигы А. Абдуллин да юҡ ине. Дивизия комиссары М. Нәзиров өҫтәлмә көстәр алып килергә тип Башҡортостанға ҡайтып киткәйне.

Бына ошондай ауыр шарттарҙа М.М. Шайморатов яугир башҡорт атлыларын фронт командалығының махсус бойороғон үтәргә яуыз дошмандың тәрән тылына ҡыйыу рейдҡа алып керҙе.

Поход өсөн тәбиғәт шарттары ла хөрт була. Корпустың алғы эшелонында (йәғни ут һыҙығында) барған 112-нсе дивизия колонналары сатлама һыуыҡта ат бауырына еткән тәрән ҡарҙы ярып, уйым-уйым ағаслыҡтар менән ситланған балкалар эсенән уҙып, аҙым һайын һуғыша-һуғыша, Ворошиловградтың көнбайышына уратып үтә башлай. Аттар, йән тирҙәре сығып, ауыр хәрби ҡорамалдарҙы тарта, кешеләр, билдән ҡарғабата-сума, пушка тәгәрмәстәренән этәрә. Һырттың ҡола яланғаслығы, дошман авиацияһынан, танкыларынан ышыҡһыҙлығы рейдсыларҙы ана шулай үҙәктән-үҙәккә тәрән ҡарҙан юл ярып барырға мәжбүр итә, дивизия колонналары унарлаған саҡрымдарға һуҙыла. Был иһә дошман танкыларына, һауа көстәренә, автоматик ҡоралды “СС” дивизияларына бик уңай сәп булып күренә. Етмәһә, фюрерҙың һәр һалдатына, үлем язаһы менән янап, Донбасстан бер аҙым да сикмәҫкә ҡаты әмер биреп ҡуйылған. Шул уҡ ваҡыттабатырҙарына Гитлер айлыҡ аҡсаны икеләтә түләргә, ғаиләләре янына Германияға ялға ҡайтарырға вәғәҙә ҡыла. Ҡамсы һәм прәник менән иҫкәртелгән фрицтар, арттарына атлы корпус та шыналай ярып кергәс, аҡтыҡ йәне сыҡҡансы ятып һуғыша. Рейдтың тәүге сәғәттәренән үк Манштейн фронттарҙан иң йылдам көстәрен алып, корпус өҫтөнә ташлай, колонналарҙы төрлө урындарҙан өҙөп таркатырға, юҡ итергә яҫкана.

— Ворошиловград эргәһендә дошманды ҡыҫырыҡлағас, — тип һөйләй Сәйфулла ағай, — беҙ, саҡ ҡына һулға боролоп, Новоанновка ҡасабаһы яғына хәрәкәт иттек. Ял да, йоҡо ла юҡ, көнө-төнө һуғыш. Бер заман, колоннаның бер өлөшө балканан сығып, һөҙәк кенә ҡалҡыулыҡҡа күтәрелгәс, флангынан өс фашист танкыһы тура тоҫкап атмаһынмы! Өлкән лейтенант Миңлеғол Гәрәйев бер батареяны бороп залп биргәйне, ҡырт әйләнеп ҡастылар. Дошмандың темеҫкене (разведкаһы) булғандыр инде. Алыш бер нисә минут ҡына барҙы ла юлыбыҙҙы дауамланыҡ. Тик ошо күҙ асып йомғансы арала ла фашист йәҙрәһе аранан байтаҡ иптәштәрҙе йолҡоп алып китте. Ҡаты яраланғандарҙың береһе 294-енсе полктың штаб начальнигы капитан Н.П. Красиков һәм икенсеһе, шул ҡаты яраһынан һәләк булғаны, Рәйес туған, һинең атайың замполитрук Ғилмитдин ине...

Сал Украина ерендәге ап-аҡ клуб алдында, халыҡ ҡулы менән һәйкәл ташы өйөлгән исемһеҙ туғандар ҡәбере янында, ҡарт имәндәр талғын ғына моң түгеп һағышлы шыбырҙай — илдә батырҙар ғүмеренең үлемһеҙлеген йырлай. Туғандаш украин халҡының йәш быуыны ҡоллоҡ бығауының хурлығын белмәһен өсөн, донъялағы иң-иң яҡындарынан —

атаһынан, әсәһенән, һөйгән йәренән, *бала*ларынан, бер ус туған тупрағынан мәңгелеккә айырылыуҙың әсе һағышын татымаһын өсөн ошонда һалған баштарын Урал бөркөттәре. Тыныс йоҡлағыҙ, исемһеҙ ҡаһармандар! Моңдо Украина ере һеҙгә мамыҡтай түшәк, керһеҙ Украина күге ебәк кәфен булһын. Һеҙҙең тәңгәлдәге был асыҡ зәңгәр һауалар һәр саҡ болотһоҙ торор, һеҙҙең оран менән саңҡып яңы бөркөттәр осор!

Ҡарт имәндәр талғын ғына моң көйләй, донъя серҙәрен һөйләй. Шул серле моңдо тыңлап, серле һауаны һулап, шундай уҡ исемһеҙ ятып ҡалған бер һалдаттың исемле улы батырҙарҙың башы осондабаш эйеп баҫып тора. Әле кисә генә ул үҙенең атаһы янында күкрәгенә бер ус украин тупрағын ҡыҫып, шулай моңға талғайны... Беҙ йөрөгән юлдарҙа, дивизия ҡанын түгеп үткән ерҙә, күпме исемһеҙ һалдаттарҙың башы осонда, уларҙың ғәзиз тыуған яҡтарына әйтелмәй ҡалған һуңғы сәләмдәрен нескә күңеленән кисереп, ил һағышын күкрәгенә йомарлап торорға тура килде һалдат улы юлдашыбыҙ Рәйескә. Быуын менән быуындарҙың һөйләшеүе ине был...

Һуғыш сәхифәләренә күсәйек.

Баяғы әйтелгән Новоанновка ҡасабаһына етәрәк, ҡаршы яҡлап бөтә төр ҡоралдарҙан асылған ут шквалына осрай яугирҙәребеҙ. Бында окоптар ҡаҙып, оборона тотоп ятҡан икән фашистар. 294-енсе полк барышлай уҡ һөжүмгә күсә. Ара үтә яҡынлыҡтан, артиллеристарыбыҙ тура тоҫҡап аталар. Аҡ тун, аҡ маск-халат кейгән яугирҙәр, аттарын соҡор буйҙарында ҡалдырып, йәйәүле атакаға ташлана. Фашистар, түҙмәй, позицияларын ташлап Краснов утары яғына һеперелә. Уларҙы атлы эскадрондар эҙәрләй.

9 февраль иртәһендә дивизия, дошман тылында барышын дауам итеп, Ворошиловградтың көнбайышындағы екатериновка ҡасабаһы тирәһенә килеп етә. Бөтә корпус көстәре тап ошо тәңгәлгә тупланып, ҡалаға һөжүм башлай. План буйынса, көнсығыштан һәм көнбайыштан да 3-өнсө гвардия армияһының 18-енсе уҡсы, 2-нсе танк һәм 2-нсе Тацинский гвардия танк корпустары ошо мәлдә бөтә фронт буйынса һөжүмгә күсергә, бөтәһенең берҙәм удары менән Ворошиловград азат ителергә тейеш була. Ике көн буйы алып барылған ҡанлы һуғыштабашҡорт дивизияһы һөжүмдең иң үҙәгендә Давыдовка ҡасабаһына табан дөрә. Дивизия штабы иһә Давыдовканан көньяҡтараҡ — ҡуйы ағаслыҡ араһына урынлаша. М.М. Шайморатов, бейек ҡарағай башына үрмәләп менеп (ул һәр ваҡыт ниндәй ҙә булһа бейеклектән һуғыш барышын үҙ күҙҙәре менән күреп идара итергә ярата), яу яланын биноклдән күҙәтә. Һаҡлыҡта (резервта) ҡалдырылған 313-өнсө полкты (командиры майор Захаров) иң хәл иткес урындарға йәһәт ебәреп өлгөрә.

Был алышта штурмлаусы 294-енсе полк һуғышсылары (командиры подполковник Г.Е. Фондеранцев) һәм капитан С.Х. Хәбировтың 101-енсе айырым артдивизион тупсылары айырыусабатырлыҡ күрһәтә.

Старшина Садриев Әҙеһәм (Туймазы районының Ҡабыҡҡыуыш ауылынан), ПТР-ҙан атып, бер үҙе өс танкыны яндырҙы. Пулеметсы Насибуллин Хисам ҡаты яраланып һәләк булғас, уның пулеметы артына ятып, егерме биш фашисты дөмөктөрҙө.

Давыдовка ҡырыйындағы оҙон аҙбарҙарға нығынып алған дошман, пулемет һәм артиллериянан ҡойма ут яуҙырып, штурмсыларҙы ятырға мәжбүр иткәс, дивизия политработнигы майор С.Р. Ҡадиров 4-енсе эскадронды контратакаға алып китә. Ҡыйыу эскадрон, ҡаршы сыҡҡан танкыларҙы үткәреп ебәреп (уларҙы шунда уҡ капитан С.Х. Хәбировтың артиллерияһы сәсрәтеп ташлай), танкыларға ышыҡланып һөжүм итеп килеүсе бер батальон пехотаның, уларҙы тотанаҡлаған ҡырҡ биш миллиметрлы ике пушканың өнөн тығылдыра. Етмеш биш фашист дөмөгә, йөҙ егерме бише ҡулдарын күтәрә. Әсир төшкәндәр араһында бер полковник, армия штабы офицеры, ике майор була. Давыдовканы алыуҙы шул яугир осҡорлоҡ хәл итә. М.М. Шайморатов етеҙ тура атын саптыртып килеп етеп, ат өҫтөндә килеш, рәхмәт белдерә эскадронға (һуңынан был эскадрондан утыҙ өс кешегә СССР ордендары һәм миҙалдар тапшырыла, шул иҫәптән майор С.Р. Ҡадировҡа — беренсе, өлкән лейтенант Х. Биксуринға икенсе дәрәжә Ватан һуғышы ордендары). Азат ителгән ауылдарҙа штаб комиссары Дәүләт Аритҡолов етәкселегендә дивизияның партия йыйылышы үткәрелә. Унда, 294-енсе полктың парторгы Х. Биксурин тәҡдиме менән, старшина Әҙеһәм Садриевты партияға алалар. башҡорт егеттәре айҡап үткән яланда фашистарҙың меңгә яҡын һалдат һәм офицерҙары, ете танкыһы, башҡа бик күп ҡоралдары ятып ҡала, һөҙөмтәлә 335-енсе дивизияһы тамам ҡыйралыу хәленә етә. Корпустың башҡа дивизиялары ла үҙ йүнәлештәрендә уңышҡа ирешә. Ләкин, дошмандың тәрән тылындағы ошо алыш арҡаһында фронт буйлап уларҙың күп көстәре бында күсерелеүгә лә ҡарамаҫтан, көнсығыштан беҙҙең 3-өнсө гвардия армияһы тарафынан көтөлгән ҙур һөжүм ниңәлер һаман башланмай ҙабашланмай, рейдсыларҙың уңышлы удары фронт штабы тарафынан дәррәү файҙаланылмай — Ворошиловград дошман ҡулында ҡала бирә...

1943 йылдың 10-ынан 11-енә ҡарай төндә 8-енсе атлы корпус, көнбайышҡа киҫкен боролоп, дошман тылынан уғата тәрәнерәккә — дүрт тимер юл осон бергә төйнәгән, ифрат ҙур стратегик әһәмиәткә эйә булған Дебальцево станцияһына ҡарай ташлана.

«Ғәҙәттән тыш ауыр юл шарттарында, — тип хәтерләй корпус командиры генерал-майор М.Д. Борисов, — хисапһыҙ күп йырындар телгеләгән, ҡалын ҡар ҡаплаған, бер ниндәй ҙә тәбиғи ышыҡланыр урындары юҡ ерҙәрҙән, дошмандың ҙур булмаған тыл подразделениеларын иҙеп үтеп, 12 февралдә корпус тимер юлдар төйөнө Дебальцевоға килеп етте.

13 февралдә корпус төйөн аша хәрәкәтте туҡтатты, тимер юлды баҫып алды һәм шул арҡала дошмандың Луганск (Ворошиловград) — Дебальцево һуҙымындағы бәйләнешен өҙҙө”.

Һөҙөмтәлә фашистар тылында тәрән паника башлана. Тыл ғәскәрҙәре, шулай уҡ ҡото осоп ҡурҡынған һалдат һәм офицерҙарҙың айырым хәрби төркөмдәре, бөтә техника һәм ҡоралдарын ташлап, осраған һәр машина һәм ылауҙарға эләгеп, Донецк ҡалаһына ҡарап ҡаса башлай. Ворошиловград, Коммунарск ҡалаларынан (фронттан) ғәскәр менән

лыҡама тулы эшелондар, ашығыс рәүештә күсерелеп, тәрән тылға — Дебальцевоға ҡарай ебәрелә (рейдсыларҙы иҙергә). Кавалерия өҫтөндә ҡара болоттар ҡуйыра. Был хаҡта армия генералы Д.Д. Лелюшенко һуңынан былай тип яҙа:

“3-өнсө гвардия армияһының төп көстәре Ворошиловград һәм Краснодонды азат итеү өсөн һуғыш алып барғанда, Ворошиловградты көньяҡ-көнбайыштан тәрән уратып үтеп дошман тылдарына удар яһау өсөн Дебальцево йүнәлешенә генерал-майор М.Д. Борисовтың 8-енсе атлы корпусын ебәрҙек. Нисек кенә итеп булһа ла, Донбасстың мөһим тимер юлдар төйөнөн — Дебальцево станцияһын ҡулға төшөрөргә кәрәк ине. 7 февралдә корпус дошман кәртәләрен өҙҙө һәм уның тактик һаҡлыҡтарын (резервтарын) тар-мар итте, 13 февралдә атлылар Чернухино станцияһын, андрианополь ҡалаһын, Софиевка, Городище ҡасабаларын алды, һәм шул көндө 13 сәғәттә корпус Дебальцевоның көнсығыш осонабарып етте. Бында ул дошмандың ике уҡмашлығын (соединениеһын) ҡыйратты (бер нисә айырым дошман частәре тар-мар ҡылынды), 22-нсе танк дивизияһының дивизион мәктәбен тулыһынса юҡ итте (бер меңгә яҡын һалдат һәм офицерҙар), 17 орудиеһын һәм 25 танкыһын, һуғыш техникаһы һәм снарядтар тейәлгән 10 эшелонын, бер нисә тупламын (складын) ҡулға төшөрҙө һәм тимер юл һуҙымдарын өҙҙө. Хәҙер инде дошмандың тактик түгел, ә оператив һаҡлыҡтарына (резервтарына) төҙәлмәҫлек һәләкәт килтерелде”.

Чернухино станцияһын алған саҡта беҙҙең дивизия Тағы ла һоҡланғыс батырлыҡтар күрһәтә. Был һуғышта дошмандың алты танкыһы, дүрт үҙйөрөшлө тубы, меңдән ашыу һалдат һәм офицерҙары юҡ ителә. Манштейн бында беҙҙең атлыларға ҡаршы 17-нсе танк дивизияһын ташларға мәжбүр була. Һөҙөмтәлә 14 февралдә фашист ғәскәрҙәренең күп өлөшө, Ворошиловградты ҡалдырып, атлы корпус хәрәкәт иткән тарафҡа ябырыла. Был иһә 3-өнсө гвардия армияһына ҡаланы шөйлә ауырлыҡһыҙ азат итеү мөмкинлеген бирә. Шул уҡ көндө дошман Краснодон ҡалаһын да ташлап ҡаса (уны Башҡортостандың баҡалы районы Оло Теләк ауылының элекке уҡытыусыһы полковник Мөхәмәҙиәровтың дивизияһы азат итә).

“Беҙҙең был рейд гитлерсыларҙы тамам хәүефкә һалды, — тип дауам итә армия генералы Д.Д. Лелюшенко, — был турала генерал-фельдмаршал Маштейн да үҙенең мемуарҙарында яҙмай булдыра алмаған: “Дошмандың бер атлы корпусы 1-енсе танк армияһының уң флангыһында тәрән тылда ятҡан мөһим тимер юлдар төйөнө Дебальцевоға үтеп керә алды... Әммә был корпус Дебальцево янында ҡамап алынды. Ләкин уны юҡ итеү эше ауыр була һәм бик яй бара, сөнки ул... ныҡышмалы ҡаршылыҡ күрһәтте. 17-нсе танк дивизияһы, ул армияның көнбайыш флангыһы өсөн үтә кәрәкле булыуына ла ҡарамаҫтан, тәүҙә бынан арына алмайынса быҒауланып ҡалды”. Манштейн үҙенең хикәйәтендә, — тип дауам итә Д.Д. Лелюшенко, — ваҡиғалар ағышын боҙоп күрһәтә. Беренсенән, корпусты юҡ итеү дошман өсөн ауыр ғына түгел, ә бөтөнләй мөмкин булмаған эш булып сыға, ә

икенсенән, 8-енсе атлы корпус дошмандың 17-нсе танк дивизияһын үҙенә бығаулап ҡына ҡалманы, — Дебальцевоға удар туранан-тура дошмандың бөтә Донбасс төркөмөнөң тылдарына янаны, Ворошиловград менән Краснодонды алыуҙа 3-өнсө гвардия армияһының төп көстәренә генә түгел, ә бәлки, бөтә фронттың тулайым хәрәкәте уңышына сәбәпселек итте".

1943 йылдың 13 февраль иртәһендә Шайморатов генералдың атлылары Чернухино ҡасабаһының оло урамына килеп керҙе. Игенсе һәм шахтер халыҡ уларҙы шатланып ҡаршыланы. Авдотья Ивановна КушНарева икмәк-тоҙ менән сыҡты. Һуғышсыларға әсәләрсә хөрмәтле баш эйеп, ошо һүҙҙәрҙе әйтте:

— Хуш килдегеҙ, туғанҡайҙар! Хуш килдегеҙ, ыласындар! Өҙөлөп көттөк һеҙҙе!

Элекке колхоз идараһы бинаһы өҫтөндә Ҡыҙыл Байраҡ ел берҙәгәс, кешеләрҙең күҙҙәренән шатлыҡ йәштәре тамды. Мәғрур әләм күңелдәрҙә фашист ҡоллоғонан тамам ҡотолоуға өмөттө уғата көсәйтте.

Чернухино шахтаһының за бойщигы Петр Дошечкин менән отделение командиры коммунист З.С. Иҫәнгилдин ошо көндәрҙә осрашып дуҫлаштылар. Оҙаҡламай Дошечкин менән уның иптәштәре Леонид Казаков, Евгений Аксенов һәм бүтәндәр башҡорт кавалерия дивизияһының батыр һуғышсылары булып киттеләр. Тыуған ҡасаба урамдарында алды улар беренсе һуғышсан сынығыуҙы. Автоматчик ине Петр. Ленин урамында фашист танкыһы менән алыш ғүмерлеккә ҡалды уның хәтерендә. Станция яғынан килеп сыҡты танк. Уға ышыҡланып, алты фашист яҡынлай. Дошечкин башҡорт дуҫы Иҫәнгилдин отделениеһы сафында һарай артына позицияғабаҫты. Автоматчиктар дүрт фашисты дөмөктөрҙө. Гранаталар бәреп, танкыны ла яндырҙы. Артынса уҡ икенсе танк күренде. Отделение Змеевка урамына сигенде. Бына шунда улар Леонид Казаков менән уның дуҫтарының, өс башҡорт яугиренең, ҡанғабатҡан мәйеттәренә тап булдылар. Донбасс шахтеры менән алыҫ Башҡортостан улдарының ҡайнар ҡаны Украина ерен бына шулай һуғарҙы.

Чернухинола ауыҙынан кәкре төрөпкәһен төшөрмәй йөрөгән һуғышсыны әле булһа хәтерләйҙәр. Мохтаров фамилиялы рядовой ине ул. Колхоз идараһы бинаһы башына бына ошо төрөпкәле кеше ҡаҙаны Ҡыҙыл Байраҡты, тип һөйләйҙәр. Ҡасабаның икенсе яртыһындағы фашистар, сарҙаҡтарға пулеметтар ҡуйып, эскадрондың юлын бүлгәс, Мохтаров, өй башына үрмәләп менеп, дошмандың биш пулеметын юҡ итә...

Иҫ киткес ҡаһарманлыҡ, хәрби бурыстарҙы һуңғы сиккәсә еренә еткереп үтәү, һуғыштарҙа күрһәтелгән ҡыйыулыҡ һәм фиҙакәрлек өсөн СССР Оборона халыҡ комиссарының 1943 йыл 15 февралдәге 194-енсе фарманы менән 8-енсе атлы корпусҡа 7-нсе гвардия атлы корпусы тигән данлыҡлы исем бирелә, шул рәүешле, гвардия исемдәре алған дивизияларҙың да номерҙары үҙгәрә: 21-енсе дивизия — 14-енсе, 55-енсе дивизия — 15-енсе, ә беҙҙең 112-нсе башҡорт дивизияһы — 16-нсы гвардия

башҡорт кавалерия дивизиялары булып китә. Дивизия командиры полковник М.М. Шайморатов генерал-майор һәм корпус командирының урынбаçары дәрәжәһенә күтәрелә.

Ватан данлаған иң юғары яугирлек баһаһы менән сикһеҙ рухланып, корпустың бөтә һуғышсылары батырлыҡ һыҙығынабаçа, гитлерсыларҙың көслө авиация удары менән тотанаҡланған танк атакаларын бер-бер артлы кире ҡағыуын дауам итә. Дошман көстәре бер туҡтауһыҙ өçтәлеп кенә тора: тәрән тылына үтеп ингән һәләкәттән ҡотолорға тырыша. Манштейн, һуңынан үҙе яҙғанса, Ростов янындағы 1-енсе танк армияһының 17-нсе танк дивизияһын ғына түгел, ә бәлки 22-нсе танк һәм 304-енсе йәйәүле дивизияларын, һауа көстәрен һәм башҡа уҡмашлыҡтарын (соединениеларын) да ырғыта атлылар өçтөнә. Күпкә артыҡ дошман менән көн-төн ҡаты һуғыш бара. Атлыларҙы күктән дә, ерҙән дә һуғыш монаяттары менән тәьмин итерҙәй юлдар ябылған була, корпус тулыһынса ҡамауҙа ҡала. Ошо ауыр хәлгә лә ҡарамаçтан, совет һуғышсыларының ихтыяр көсө ҡаҡшамай...

6

Һәм бына беҙ шул көндәрҙең утлы эҙҙәренә баçып торабыҙ.

Владимир Григорьевич, йәштәргә хас өлгөрлөк менән беҙҙе юлда уҡ “бөрөп” алып, Чернухино ҡасабаһына ҡағылышлы ҡайбер мәғлүмәттәр менән таныштыра. Чернухино хәҙер элеккегә ҡарағанда икеләтә-өсләтә үçкән: бына-бына иçке “күлдәген” бүçерелдереп, ҡалаға әүерелəм тип кенә тора икән. Барлығы ун дүрт мең халыҡ йәшәй, күбенеһе шахтерҙар. Бында йәнә геологоразведка партияһы, ме бель фабрикаһы, тимер юл станцияһы, ҙур больницабар. Ҡасаба үҙе йәшел баҡсалар эсендә күмелеп ултыра, һырт яғынан бейек ҡарауыл тауҙары кеүек суҡай-суҡай ҡара террикондар — шахталар сығарып өйгән ҡара Убалар уратып алған. Машина беҙҙе проспект һымаҡ ҡыл тартып һыҙылған урамдан алып китте. Бер осонан икенсе осо күренмәй; ике яҡлап, йорттарҙы ҡалын иңдәренә ҡосаҡлап, йәшел кейемле һалдаттарҙай теҙелеп үçкән ағастар...

— Был ниндәй урам һуң әле? Танымайым... — Аптырап өндәшә полковник ағайыбыҙ.

— Ленин урамы, — тип аңлата Владимир Григорьевич, тауышында ошо ерҙең төп хужаларына хас ғорурлыҡ та һиҙелә. — Танымаçһығыҙ ҙа шул: был йорттарҙы һуғыштан һуңғы беҙҙең быуын һалып керҙе.

— Һәйбәт проспект, — тибеҙ беҙ, — гүзәл проспект!

— Оҙаҡламай ул Тағы ла гүзәлерәк буласаҡ. Район бюджеты буйынса, был үҙәк урамға реконструкция үткәреү ҡаралған.

— Владимир Григорьевич, һеҙгә, яңы ғына һайланып эшкә керешкән, уттай янып торған йәш рәйескә, һайлаусылар, моғайын, быны Наказ итеп биргәндәрҙер әле, — тип шаярта полковник.

— Әлбиттә.

— Тимәк, һеҙгә был эште оҙаҡҡа һуҙып тынысланырға ярамай...

— Ошо биш йыллыҡта беҙ күп, бик күп эшләргә тейеш! — тип дөрөҫләй рәйес, эске тулҡынланыу менән дәртләнеп. — Алдыбыҙҙа ҡыҙыҡтырғыс байтаҡ пландар тора.

— Мэр үҙе әйткәс, еҥ һыҙғанып керешкәс, пландар һис шикһеҙ үтәлер! — тип, уғата дәртләндере берәк ебәрә Рәйесебеҙ.

— Үтәлмәй ҡараһын!

“Москвич” беҙҙе күркәм проспект буйлап ҡыҙыуыраҡ елдерә лә янтая бире берәк борола, ниндәйҙер ваҡ урамдарҙы, тыҡрыҡтарҙы геүләп уҙа ла йөрөшөн аҡрынайта.

— Ә беләһегеҙме, мин һеҙҙе ҡайҙа килтерҙем? — ти Владимир Григорьевич, машинаһын йәшел баҡса эсенә күмелеп ултырған бер йорттоҥ нәҡ ҡапҡа төбөнә туҡтатып. Ихатала өйкөм-өйкөм йәмәғәт, күҥелле гармун тауыштары, йыр, шатлыҡлы-ғәмһеҙ көлөүҙәр. Кемдер тупырҙатып тубыҡтарын сәпәләп бейей. Беҙ, бер нимә лә аҥлап еткерә алмай, машинанан төшәбеҙ, тирә-яҡҡа әйләнеп бағынабыҙ. Таш ҡоймалар ирнәүләгән оҙон буй урам, ҡаршылағы өйҙәр артында уҡ ҡасабаны ҡапуртаға ярып үткән балка — тәрән ҡа бырый йырын. Балканыҥ арғы ярынан йәнә йорттар теҙмәһе китә.

— Туҡта-туҡта, был... беҙҙеҥ ут һыҙығы бит был! — ти Сәйфулла ағай, ҡапыл төҫө үҙгәреп. — Эйе, ут һыҙығы! 1943 йылдыҥ февраль айында ошо урам буйлап беҙҙеҥ алғы линия үтә ине. Соҡорҙоҥ теге яғында фашистар, был яғында беҙ инек. Бына бынауы ҡойма буйҙарынан, өй түбәләренән тороп ата инек... Ике яҡтан да йорттар дөрләп яна, стеналар ауа, ут өйөрмәһе ҡайнап тора ине бында...

— Ә бөгөн бында туй, — тине ҡасаба рәйесе, тыныс ҡына. — Мөхәббәтле ике йәш йөрәк ут һыҙығында ҡауыша.

— Туҡтағыҙ... беҙ ҡайҙа килдек?

— Ҡайҙа булһын — туйға инде. Күрәһегеҙме ана: уттай ҡыҙыу туй бара!

Икеләне берәк ҡалабыҙ.

— Нисек килеп сыға һуҥ был? — ти Рәйес. — Үҙебеҙ — туйға, ә туй бүләктәребеҙ ҙә юҡ.

— Шулай шул... — тип беҙ ҙә икеләнәбеҙ. Ләкин ҡасаба етәксебеҙ күп уйланырға бирмәй, беләктәребеҙҙән ҡыҫып тотоп уҡ дөрә:

— Ауыҙығыҙҙы ла асмағыҙ! Һеҙ үҙегеҙ иҥ ҙур бүләк!

— Улайһа, егет менән ҡыҙҙыҥ исемдәрен генә булһа ла белеп инәйек, — тинем. Владимир Григорьевич көлә:

— Исемдәре лә, үҙҙәре лә бынамын тигән — ингәс күрерһегеҙ.

— Шулай ҙа беләйек, — тип ҡуйырта Рәйес.

— Береһенә Николай, икенсеһенә Люба тип өндәшегеҙ.

— Люба?! — Беребеҙҙеҥ йөрәк төбөн ҡылыс киҫеп үткәндәй булды.

— Эйе, Люба. Ниҥә аптыранығыҙ?

— Юҡ, былай ғына... Люба исемле танышым бар ине. Бында түгел, Мәскәү яғында!..

— Ҡарағыҙ уны, танышығыҙҙы осратып ҡуймағыҙ! — тип көлә Владимир Григорьевич. — Был *Люба ла* Мәскәү яғынан килде. Һәм Николай Гончар уны кире ҡайтып китмәҫлек күрмәп тә алды.

Ул арала булмай, шау-гөр килгән ихата ҡапҡаһынан бер төркөм ҡатын-ҡыҙ, яурындарына ҡыялатып һөлгө һалған егеттәр, ап-аҡ һаҡаллы бер нисә ҡарт ашығыс йүгереп сыҡты, тап беҙҙәге кеүек үк, ҡуш ҡул биреп беҙҙең менән күрешергә, ҡосаҡлашырға, тәбрикләп йорт ихатаһына әйҙәргә тотондо. Улар беҙҙе тәү сиратта егет менән ҡыҙ янына килтергәс, ысын йөрәктән икеһенә *лә* бәхетле тормош, тигеҙ ғүмер теләп, ҡул ҡыҫышып күрештек. Йорт хужаһы менән хужабикәһе, йәш кейәү менән йәш килен, иң яҡын ҡоҙалары беҙҙе, етәкләп, табын түренә килтерҙеләр:

— Әйҙүк, ҡәҙерле ҡунаҡтар, күркәм туйыбыҙға рәхим итегеҙ! Көттөк беҙ һеҙҙе, килерегеҙҙе белмәһәк тә, килерһегеҙ тип көттөк, һеҙ беҙҙең иң ҡәҙерле ҡунаҡтарыбыҙ!

— Һеҙ бит беҙҙең башҡорт туғандарыбыҙ!

— Беҙҙең азат итеүселәребеҙ, ҡотҡарыусыларыбыҙ!

— Һуғыштан һуң ватыҡ-емерек хужалыҡҡа көтөү-көтөү мал-тыуар ҡыуып килтереп бүләк итеүселәребеҙ! — Ысын йөрәктәрҙән шундай ихлас һүҙҙәр яңғыраны. Онотмайҙар икән беҙҙе. Һәр береһе, олоһонан алып кесеһенәсә, *башҡорт а*тлыларын белә, хөрмәтләп һәм ғорурланып иҫкә ала. Хәбиров полковникты күптәр, күҙҙәренән йәш балҡытып, ҡосаҡлап-ҡосаҡлап үптеләр, утлы үткәндәрҙе хәтерләнеләр. Сикһеҙ тулҡынланып, халыҡ күңелендә шундай юйылмаҫ эҙ ҡалдырған ҡаһарман атлыларыбыҙ өсөн ғорурланып, берсә иларға, берсә көлөргә итеп, албырғанып ултырҙыҡ. Украина ере үҫтергән һый менән тулы мул табында изге хистәр кисереп, бөгөн бергә ҡауышасаҡ ике йәш йөрәктең бәхете, улар кинәнеп йәшәһен, ҡайғы-хәсрәт күрмәһен өсөн ошо ерҙә ғәзиз баштарын һалған данлы башҡорт атлылары хаҡына, *башҡортост*ан менән Украина дуҫлығы, бөтә СССР халыҡтарының ҡаҡшамаҫ туғанлығы хаҡына мөлдөрәмә тулы тостар күтәрелде һәм уны эсмәҫ ереңдән эсеп, төп-күтәреп ҡуйырлыҡ ине... Алсаҡ ҡоҙа-ҡоҙағыйҙар ҡотҡоһона юлығып, ҡулға-ҡул тотоношоп, әйләнәлә ҡандай ҡыҙыл сейәләре һығылып бешеп ултырған, *баш* осонда зәңгәр күкте йәшел йөҙөм тармаҡтары әүеҫләкләгән тыныс ерҙе, бәрәкәтле еребеҙҙе, табандар менән тупылдатып, ҡәҙимгесә бейергә *лә* төштөк беҙ...

Энгельс урамындағы был ҡунаҡсыл йорттоң хужаһы Виктор Иванович Моисеев, төплө шахтер, кәләштең атаһы икән. Кейәү кеше Николай Гончар шахтала эшләй, ә Люба — балалар баҡсаһында. Виктор Ивановичтың үҙе ише оҙон төҙ буйлы, оҙонса матур йөҙлө, шахтерҙарға хас көслө тарамыш ҡуллы бер туған ҡустылары ла бар имеш. Өлкәнерәге Николай — шахтаның партком секретаре урынбаҫары, ә Владимир күмер сығара. Һәр береһе айырым йорт һалып, бер-береһенә яҡын ғына торалар. Әсәләре Екатерина Мартыновна ла иҫән. Эс-бауырға кереп барған алсаҡ хужалар беҙгә донъяларын күрһәтеп ташланылар. Владимир Иванович ҡатыны Мария Никитична менән икеһе ике яҡтан ҡултыҡлап, үҙҙәренә алып инде мине. Башы ҡалайлап ябылған, тирә-яғын алма, сейә, черешнялар уратып алған дүрт бүлмәле аҡ йорт. Таҙа итеп тәрбиәләнгән

көндәй яҡты бүлмәләрҙә етешлек, байлыҡ. Бейек ботло бала бишеге түрҙә батша тәхетеләй ныҡ тора. Эйе, ерҙең киләсәге бында тәхеткә менеп ултырған.

— Бергә тормош көтә башлауыбыҙға ун алты йыл китте инде, — ти һутланып бешкән слива кеүек ҡоңғорт тулы йөҙлө, ҡарағаттай янып торған ҡара күҙле украин ҡатыны Мария Никитична. — Үткәндәрҙе хәтерләһәң, хәҙер ышанмай ҙа торорһоң. Һуғыштан һуңғы ауыр йылдар, икебеҙҙең дә атайҙар фронтта үлеп ҡалған... Ҡулыбыҙға сумаҙан тотоп ҡына килеп ҡауыштыҡ, торор ҡыуышыбыҙ ҙа, ҡағыр ҡаҙағыбыҙ ҙа юҡ ине. Икебеҙ тиң шахтала эшләп хәлләнеп, үҙ ҡулдарыбыҙ менән һалып керҙек ошо йортто. Донъялар имен торһа, бөтәһе лә була икән ул.

— Эйе, һуғыш ҡына булмаһын, — тип дөрөҫләне ире. — Иҫкә төшһә, әле лә тән сымырҙап китә. Иҫеңдәме, Маша, беҙҙең өйҙөң һалам түбәһенә фашистың яндырғыс пуляһы тейеп дөрләп яныуы?

— Иҫемдә булмай ҡайҙа ул. Һинән бәләкәсерәк булһам да, арғы остараҡ йәшәһәм дә, бөгөнгөләй хәтеремдә. Бик күп өйҙәр дөрләне был урамда...

— Иҫеңдәме, Маша, тәү тапкыр бында үҙебеҙҙекеләрҙең килеп кергәне?

— Онотоп буламы һуң! Буран ине. Ел уйнап тора өйҙә. Әсәйем иртүк һоҫко тотоп күршеләргә утлы ҡуҙ алырға ебәрҙе. Тышта фашистарҙан ҡурҡыныс, ләкин өйҙә ут яҡмай ҙа ултырып булмай. Шыңшый-шыңшый һөйрәтәләнеп сыҡһам, ни күҙем менән күрәйем, яр аҫтынан ап-аҡ тунлы, маск-халатлы хәрбиҙәр сығып килә. Ә үҙҙәре, мөңгөр-мөңгөр, ниндәйҙер телдә һөйләшә. Кемдәр икән тип торам.

— Әй, кәшкәй танау, ауылда фрицтарбармы? — тип көтмәгәндә урыҫса өндәшмәһенме иң алдан килгән берәүе. Ни эшләргә белмәй, шаҡ-ҡатып ҡалдым. Фашистар тиер инең, үҙебеҙсә һөйләшә. Рустар тиер инең, теле төптө ысын рустыҡына оҡшамай. Хәрби ниңәлер башлығын асып ебәргәйне, бүркендәге сөм-ҡыҙыл, ҡан кеүек сөм-ҡыҙыл йондоҙон күреп:

— Әсәй, үҙебеҙҙекеләр! — тип ҡысҡырып ебәргәнемде һиҙмәй ҙә ҡалдым, һоҫҡомдо атып бәреп, фашистарҙың ҡайҙа торғанын төртөп күрһәтә башланым...

— Ҡара төндә балҡып сыҡҡан Ҡояш һымаҡ булды улар, — тип дөрөҫләне ире. Түгелергә өлгөрә алмай ҡалырбыҙ тип ҡурҡҡандай, бер-береһен бүлдереп, үҙҙәре күргән һуғыш хәтирәләрен ҡыҙып һөйләргә керештеләр.

— Ул саҡта миңә ун ике, Николай ағайыма ун дүрт йәш ине, — тип хәтерләй Владимир Иванович. — Өйөбөҙҙө дошман атып яндырғас, усаҡ ишараты әтмәләп, мөгәрәптә ултырабыҙ. Ишек алдындағы ана анауы таш келәткә үҙебеҙҙекеләр яралыларҙы һалды. Алғы бүлмәһендә танабыҙ ҙа тора, ә һандыҡта аҙ ғына кукуруз бар. Мөгәрәп өҫтөндә шарт та шорт атыш тынмай. Мин көн дә үрмәләп барып таш келәттән бер һауыт кукуруз алып киләм. Әсәйем һыу ҡайната, кукурузды ҡул тирмәнендә тартып, мамалыга (бутҡа) бешерә лә, ағайым менән икебеҙгә тottороп, келәттәге яралыларға ебәрә. Тышта снарядтар шартлай, пулялар һыҙғыра. Беҙҙең

менән бергә баҙҙа Новиков фамилиялы кулак ҡылыҡлы бер күрше ҡарт та ултыра ине. Ҡот осҡос һаран бәндә. Үҙенең баҙы тулы бәрәңге, әммә йәшереп һаҡлай, алдыртмай — беҙҙең мамалыганы һағалай. Етмәһә, гел битәрләй әсәйемде:

— Ниңә шул антихристар өсөн балаларыңды ут аҫтына ебәрәһең? Күр ҙә тор: йә аяҡтарын, йә ҡулдарын өҙҙөртөп ҡайтырҙар әле!

— Улар өсөн башыбыҙ өҙөлһә лә йәл түгел! — ти әсәйем, тупылдатып арҡаларыбыҙҙан һөйә. Барығыҙ, балаҡайҙарым, бар. Аяк-ҡулдарығыҙ өҙөлһә лә барығыҙ. Һау булһам, ғәрип булып ҡалһағыҙ ҙа ҡарармын. Совет власы ҡарар!

Бер көн снарядтарҙан мөгәрәп дер-һелкенеп торғанда, әлегебеҙҙең һаулыҡты "ҡайғыртыусы" Новиков ҡарт, мине мөйөшкә генә саҡырып алып, ҡулыма асҡыс тотторҙо: йүгереп кенә барып картуф баҙын ҡарап кил, йоҙағы тутығып ҡалманымы икән, йәнәһе. Яралылар өсөн берәй күнәк картуф сәлдерергә шәйләп, *баҙ*ға ҡарай шыуыштым. Шарт та шорт атыш, етмәһә, урамда, яҡында ғына, немецтарҙың да, беҙҙекелерҙең дә ҡысҡырып һүгенгәне ишетелә. Баш өҫтөнән пулялар жыйлап ҡына тора. Хәйерһеҙҙең баҙынабарып етеп, йоҙаҡҡа асҡысты тығайым ғына тиһәм, бармағым инеп китә яҙҙы: сумаҙан асҡысы биреп, картуф баҙының именлеген барлатҡан икән ҡарун! Иларҙай булып буш ҡул ҡайтып киләм. Ҡапҡа төбөндә генә гранаталар шартлауға ла иғтибар итмәй, тура йүгерәм хәҙер. Шул саҡ берәү шытырҙатып ҡолағымдан бороп алмаһынмы!

— Ҡайҙа сабаһың, иҫәр көсөк? Әсәйеңдең имсәгенән туйҙыңмы? — тине лә, арт яғыма усы менән берҙе шапылдатып, таш келәткә төртөп төшөрөп ебәрҙе. Ишек ябылыуы булды, артында шартлап граната ярылды, тупһа ярығынан эскә нәҙек кенә ҡан юлағы һарҡыны...

Иҫтәлекле таш келәтте күмәкләшеп сығып ҡараныҡ.

— Бынау урам яҡ мөйөшөнә иғтибар итегеҙ, күрәһегеҙме? — тине Владимир Иванович. Ул тошта стена яңыртып буралғайны — емерелеп төшкән булған.

— Һөйләп бир әле, әсәй!

— Нимәһен һөйләйһең инде уның, — тине сәстәренә сал ҡунған, әммә һаман мыҡты, көр күңелсән Екатерина Мартыновна. — Иҫегеҙҙәлер: ул төндә беҙ мөгәрәптән сығып, яралылар эргәһенә таш келәткә кереп ҡунғайныҡ. Төн урталарында ҡаты атыш ҡупты. Бер яҡтан беҙҙекеләр, икенсе яҡтан фашистар пушканан яуҙыра. Үрҙән фашист самолеттары бомбаға тота. Үләбеҙме, ҡалабыҙмы, тип кенә ятабыҙ. Бер заман уртансы улым, нимәлер эҙләп, тороп, ана шул мөйөштәге тәре эргәһенә бармаһынмы. Икенсегә дөбөр-шатор иткәнгә әйләнеп ҡараһам, улым — янымда, ә тәре юҡ: урынында төпһөҙ күк, йондоҙҙар сөкөрәйә. "Әсәй-әсәй, ҡара әле, тыш күренә!" — тип ҡысҡырып ебәрҙе кесе улым. Алғы бүлмәләге танабыҙ мөңөрәп баҡырабашланы. Тышҡа ҡараһам, бер башҡорт, автоматынан ут һиптереп, беҙгә табан йүгереп килгән немецтарға ташланды... Баҡты иһәң, автоматчиктарын тейәп урамға фашист танкыһы килеп ингән дә мөйөштө умыра атып бәргән, үҙен дә шунда юҡ иттебеҙҙекеләр.

— Шунан һуң беҙ яралыларҙы плащ-палаткаларға һалып, бынан бер өй аша мөгәрәпкә ташыныҡ, — тине ҡарсыҡтың уландары.

— Ә беҙҙекеләр киткәндә ҡайһылай ҡыйын булды...

— Бер ваҡыт, ун һигеҙенсе числоларҙа булһа кәрәк, шундай тынлыҡ, шундай тынлыҡ... Мөгәрәпкә йүгереп барып инһәк, беҙҙекеләр юҡ. Күп тә үтмәй, немецтар лауылдаша башланы. Үҙәккә үткес...

Полковник ағайыбыҙға эйәреп, Чернухино урамдары буйлап “походҡа” сыҡтыҡ. Алсаҡ хужалар беҙгә ихлас гид йомошон үтәнеләр. Хәбировтың айырым дивизион батареяларының ауыл ситендәге ут позицияларын, Ленин, Кокин урамдары мөйөшөндәге ике, Папанин урамындағы бер РС (“Катюша”) ыҫтандары торған һәм һуңынан атыр нәмәләре булмау сәбәпле шартлатып кителгән урындарҙы, дивизиялар һәм корпус штабтары урынлашҡан йорттарҙы, 1943 йылдың 17 февралендә дивизияларға тантаналы рәүештә гвардия исеме бирелгән больница бинаһын эҙләп таптыҡ. Уға йәнәш баҡсала — һәйкәл һәм сәскәләр менән күмелгән бик ҙур туғандар ҡәберлеге, рейдтың ҡаһармандары унда уянмаҫ йоҡоға талған. Хәстәрлекле ҡулдар ҡуйған таштаҡтаға, билдәһеҙлек сәбәпле, бик аҙ ғына исемдәр ырып яҙылған, ә полковник әйтеүенсә, бында тағы ла кәмендә 305 яугиребеҙҙең исем-фамилияһы аталырға тейеш: Башвоенком аша юллап табып була уларҙы. 35-енсе һанлы һигеҙ йыллыҡ мәктәп алдында ла исемһеҙ туғандар ҡәбере бар. Уҡыусылар ҡулы менән мөһәбәт һәйкәлташ ҡуйылған, тирә яғы тере сәскәләр менән уратып алынған. Дөрләп торған мәңгелек факелды һынландырған мемориалға йәш ҡулдар менән ошо һүҙҙәр яҙылған: “Конникам — славным героям 7 гвардейского корпуса, рейд легендарный в тыл злого врага совершившим, Октябрьское знамя над Чернухино поднявшим в суровые дни февраля 1943 года”.

Һүр. 10.Чернухинола данлы атлыларыбыҙға һәйкәл. Һулдан уңға:

Ткачук П.А. – Башҡорт дивизияһы.ның 275 полк штабы башл. элекке урынбаҫары.

Плохой П.А. – корпус ветераны.
Плохая Д.И. – яралы атлыларға шәфҡәтлек күрһәтеүсе.
Яугир.
Иващенко Г.И. – ҡасаба музейы директоры.
Брагин Ю.С. – Чернухинола һәләк булған атлы яугир Брагиндың улы.
Аксенова Р.Ф. – атлы корпустың элекке разведчигы.
Брагина Л.Н. – Ю.С. Брагиндың йәмәғәте.

Мәктәптә рейдҡа арналған махсус музей бар, уны ла украин пионерҙары үҙҙәре төҙөгән.

Хәбировтың команда пункты торған йортто эҙләп табыу беҙҙең өсөн бик ҡатмарлы ла, ҡыуаныс та булды. Утыҙ йылға яҡын ваҡыт эсендә ветерандың хәтерендә йорт хужаларының исем-фамилиялары юйылып бөтә яҙған, тик ул саҡтарҙа бик йылғыр бер малайҙары барлығын, ун биш-ун алты йәшлек бик йор ҡыҙҙарының Маша исемле икәнлеген генә онотмаған. Ләкин артиллеристың күҙ хәтере уларҙың буй-һынын, төҫөн, торған ерҙәрен, йорт-ҡураларының рәүешен ғәжәп теүәл һаҡлап ҡалдырған икән. Шул төҫмөрҙәр буйынса, “иң һырттағы таш ҡоймалы йорт”то эҙләп ҡыҙыра торғас, муйынына ал ялҡын бәйләгән бер пионерка ҡыҙ, әсәһенән һорашып, беҙҙе һырттан бороп төптө көтөлмәгән яҡҡа — ҡасаба эсенә алып инеп китте.

— Беҙгә ҡасаба һырты, иң ситтәге өй кәрәк! — тип полковник төҙәтергә тырышып ҡараны. Тыңлап торған ҡарттар, мыйыҡтарын һыпырып, көлдөләр:

— Һеҙ бында һуңғы тапҡыр ҡасан булғайнығыҙ һуң?

— 1943 йылдың февралендә.

— Ҡыҙ артынан барығыҙ, ул саҡтағы иң ситтәге өй шул тирәлә була инде!

Ә береһе хатта теүәлләп тә ҡуйҙы:

— Первомайская урамы, утыҙ ете.

Үҙенең элекке фатирын танныны яугир. Йорт шөйлә сүгеп, күҙгә күркәмһеҙ булып, урталыҡта тороп ҡалған; хужалары Ковалев Иван Семенович ҡарт менән Марина артомоновна ҡарсыҡ күптән донъя ҡуйғандар. Ә улдары Петр менән ҡыҙҙары Марина, башлы-күҙле булып, ике яндан икеһенә яңы өй һалып кергән, һүтелеү көтөп ултырған "ветеран"дың тәҙрәләренә арҡыс-торҡос таҡта ҡаҙаҡлағандар. Үҙҙәрендә тороп киткән элекке капитанды улар ҙа таныныдар, туғандарылай күреп ҡосаҡлап алдылар. Күҙ асып йомғансы асҡыс килтереп, иҫке йоҙаҡты астылар. Хәбиров бер ҡарауҙа уҡ ҡайҙа ҡарттың карауаты, ҡайҙа үҙенеке тороуын күрһәтеп шаҡ ҡатырҙы. Таныштарҙың өсөһө лә иҫтәлектәр донъяһына кереп сумдылар. Йәнә лә: "Хәтерләйһегеҙме? Хәтерләйһегеҙме?" — тигән таныш һүҙҙәр ҡабатланды.

— Ах, ғүмергә лә онотолоҡ түгел шул ул көндәрҙе! Хәтерләйһегеҙме, полковник иптәш, фашистар беҙҙе ҡайһылай бомбаға тотто, ошо ишек алдында күпме аттарығыҙ ҡырылды (һеҙ киткәс беҙ ай буйына туң ат ите менән туҡландыҡ)?..

— Ә теге яр башынан ҡап-ҡара танкылар уратып алыуысы?

— Ә беҙҙекеләр, беҙҙекеләр нисек немецтарҙың бронепоезын атып шартлатты!

— АНа тегендә балка аръяғында күренеп торған пионер лагеры элек тә бар ине. Шунда фашистар мыжғый башлағас, беҙҙең "Катюша" бер генә залп биргәйне, көлдәрен күккә осорҙо ла ҡуйҙы мәлғүндәрҙең.

— Ә беләһегеҙме, ун һигеҙендә, һеҙ бынан сығып Стрюковоға табан киткәс, ниндәй әкәмәт булды? Беҙҙекләр, китерҙәре алдынан ғына, "Катюша"ның һуңғы миналарын юлда торған ике фашист бронепоезына яуҙырғайны. Беҙҙекеләр балка буйлап һеңергә лә өлгөрмәне, бронепоездар беҙҙең баш өҫтөнән Демченко совхозы яғына шквал ут асты. Ә ул тарафтан икенсе бер немец дивизияһы Чернухиноға һөжүм итеп килә имеш. Улар ҙа үҙ сираттарында тимер юлдан рустар ут яуҙыра икән тип уйлап, тағы ла беҙҙең баш өҫтөнән теге ике бронепоезға туптарҙан атабашланылар. Китте бер-береһен атыш, ҡыйратыш! Ышанаһығыҙмы-юҡмы (Ә беҙ үҙ күҙҙәребеҙ менән күрҙек!), аҙаҡтан фашистар үлектәрен ете көн буйына поезға тейәп ташынылар. Фюрерҙарына, моғайын, рустарҙы бик ныҡ ҡыйраттыҡ, тип рапорт та биргәндәрҙер.

— Беҙҙекеләр ҙә балка буйында аҙ ятып ҡалманы...

— Һеҙ бынан киткәс, шуны белмәйенсәлер инде, төндә беҙҙең самолет осоп килеп, парашюттарҙа десант төшөргән, ләкин уларҙы фашистар ҡырып ташланы. Иртә менән апайымдарғабарырға йүгереп сыҡһам, — тип илап алды Марина Ивановна, — ер өҫтө сып-сыбар: сәстәре елгә ел берҙәп, йәп-йәш кенә егеттәр — беҙҙекеләр ята. Ун туғыҙ мәйет һананым, бөтәһе лә аҡ тунлы. Бәғзеләренекен һалдырып алырға ла өлгөргәндәр, бәдбәхеттәр...

— Ярҙам ҡулын һуңлап һуҙғандар икән, фронт штабы менән беҙҙең арала элемтә өҙөлгәйне шул... — тине Сәйфулла ағай.

Мөкипбән китеп тыуған яҡ тарихын өйрәнеүсе пенсионер, элекке О БХСС Начальнигы Семен Семенович Гатченко йәмәғәтселек башланғысында Чернухино ҡасабаһының музейын һәм шул йортта уҡ йәш быуындың мәргәнлеген һынау өсөн мылтыҡтан атыу майҙансығы булдырған икән. Хәрби-патриотик тәрбиә биреүҙең ике мөһим тармағының шулай бер түбә аҫтында тоташыуы беҙгә үҙенсәлекле лә, аҡыллы ла хәл ителеш булып күренде. Энтузиаст тарафынан ысын бәҫен тойоп тупланған ҡомартҡыларға ҡарап районның ғына түгел, бөтә Донбасстың тарихын яҡшы төҫмөрләргә мөмкин. Бындабашҡорт атлыларына ла нығ иғтибар бирелеүе шатландырҙы. Музей стендтарынан беҙгә шундайын да яҡын һәм таныш, туған йөҙҙәр ҡараны.

Легендар рейд ваҡытында патриоттар көрәше киң йәйелдерелгән. Дивизия штабы урындағы йәштәрҙе темеҫкенлектә (разведкала) файҙалана. Комсомолка ҡыҙҙар Раиса Аксенова, Надежда Антонина бик һәйбәт һәм Намыҫлы башҡара был бурысты. Командованиеға Чернухиноның көньяҡ-көнсығышындағы тимер юл будкаһы тирәһендә фашистар төркөмөнөң нығыныуы беленә. Ҡыҙҙар 58-енсе полктың отделениеһын йәшерен һуҡмаҡтар буйлап алып китә. Иҫкәртмәҫтән һөжүм итеп, 17 һалдат юҡ ителә, фельдфе бель менән бергә 11 фриц ҡулдарын күтәрә.

Чернухино, Дебальцево, Городище (йәтим бала сағында халыҡ шағиры Рәшит Ниғмәтиҙе һ.б. астан үлтертмәй туйындыртҡан изге ҡасаба!), Фащевка тирәләрендә фашистарға ҡаршы хәрәкәт иткән йәшерен төркөмдәр атлы корпус штабы менән даими элемтә тотҡандар, тимер юл һәм күперҙәрҙе шартлатыу, темеҫкенлек, дошман гарнизондарын юҡ итеү кеүек операцияларҙа ҡатнашҡандар. Бигерәк тә Фащевка ҡасабаһынан ун һигеҙ йәшлек ҡыҙ Юлия Мацен ҙур ҡыйыулыҡ күрһәтә. Шул 1943 йылдың февралендә әшәке хыянатсы тотторғас, Юлия Мацен менән уның бер туған һеңлеһен, йәштәрҙән тағы ла ун дүрт патриотты фашистар шахтаға алып китеп атҡандар...

Чернухино менән Дебальцево араһында темеҫкенлектә пионерҙар ҙа әүҙем йөрөгән. Улар араһында үҙҙәренең тапҡырлығы, ҡыйыулығы менән Андрей Васильевич Дошечкин (1943 йылда һәләк була), Николай Романович Баранов (шул уҡ йылда Дебальцевола фашистар тотоп ата) һәм ун ике йәшлек Виктор Иванович Моисеевтар бигерәк нығ иҫтә ҡалды. Әсәһенең яңғыҙ ғына улы, Витя, мауығып һүрәттәр төшөрә, рәссам булырға хыяллана. Фашистар ояһы Дебальцевоға әленән-әле үтеп инеп, ундағы ғәскәр, штабтар, уҙып тороусы хәрби эшелондар хаҡында мәғлүмәттәр ташый. Йәшерен эше фашланып, үҙебеҙҙекеләр яғына сығыу өсөн фронт һыҙығына китеп барғанында, Чернухинонан ун биш саҡрым алыҫлыҡтағы Красный Кут ҡасабаһы янында ун ике һатлыҡ йән-полицай юллап барып тота уны. Йәш патриотты гестапола язалап, кәүҙәһен ҡойоға ташлайҙар. Килер быуындарға иҫтәлек булып уның ҡыҙыл йондоҙло буденовка кейеп төшкән берҙән-бер фотоһы ла сағыубуяуҙар менән үҙе таҡтаға һүрәтләп яһаған ҡанатлы хыялы — киң болондар буйлап осоп барыусы толпар аты ғына тороп ҡала (ул да һаҡлана музейҙа).

Гвардиясыларҙың иҫ киткес ҡыйыулыҡ күрһәтеп һуғышыуҙарына ла ҡарамаҫтан, корпус хәрәкәт иткән Чернухино — Софиевка — Городище төбәгендә хәл барған һайын киҫкенләшеп, һуғыш кәрәк-яраҡтары, аҙыҡ табыу мәсьәләһе ауырая. Хәйер, был ваҡытта инде атлылар үҙҙәренә йөкмәтелгән төп бурысты үтәгәйне. Әйтеп үтеүебеҙсә, 18-енән 19-ынсыға ҡараған февраль төнөндә, дошманға һиҙҙертмәй генә, корпус штабы менән ҡуша, дивизиябыҙ Чернухинонан көнсығышҡа — фронт һыҙығына табан ҡуҙғалғайны. Урындағы тәжрибәле кешеләрҙән Привальцев менән Ковалев юл күрһәтеп бара. Буй еткергән Чернухино йәштәре лә үҙҙәре теләп атлылар сафында китә, улар араһында Николай Сенченко, Виктор Миленин, Владимир Дощечкин, Федор Полеев һәм башҡа егеттәр була.

Тороп ҡалған патриоттар, бигерәк тә ҡатын-ҡыҙҙар, яралы совет һуғышсыларын йәшереп аҫырауҙы, тәрбиәләүҙе ала үҙ өҫтөнә. Антонина Митина, Анастасья Денисова, Анна Чуприна байтаҡ ҡына яугирҙәрҙе шахта баҙҙарында фашистарҙан йәшереп һаҡланылар, дауаланылар, мәсхәрәләнеүҙән ҡурсалап алып ҡалдылар.

Городище ҡасабаһында яралы кавалеристарҙы антон Пискунов отрәтенең партизандары тәрән шахтаға йәшереп аҫыраны. Был отрәт үҙе атлы корпус штабы тарафынан төҙөлгәйне.

Хәҙерге Дебальцево ҡалаһында тарих уҡытыусыһы Георгий Иващенконың раҫлауынса, беҙҙең атлылар Чернухинонан киткән саҡта Стрюково ҡасабаһында йәшәгән А. Дорошенко ханым үҙ йортонда гвардия подполковнигы Г.Е. Фондеранцев полкынан башҡорт автоматчиктарының туҡталыуын яҡшы хәтерләй. Полк Стрюковонан Рассыпная станцияһына ҡыйыу һөжүм итеп, яғыулыҡ цистерналарын шартлата, һуғыш монаяттары тейәлгән эшелондарҙы ҡыйрата. Был һөжүмдә, атлылар менән бергә, урындағы патриоттар Иван Мельников, Василий Жарков, Георгий Гончаров һәм башҡалар ҡатнаша. Уларҙың күбеһе кавалерстар менән китә һәм, фронт аша сыҡҡанда, батырҙарса һәләк була. Ә Александрр Кочергин дивизия сафтарында Польшағаса барып етә һәм 1944 йылдың апрелендә шундабаш һала.

Атлыларҙың Донбасс шахтерҙары менән берлектәге көрәшен Грабово ҡасабаһында йәшәүсе А.Д. Бойко ла хәтерләй. 19 февралдә ул ҡасаба идараһына килгән. Староста һәм ике немец була унда. Һис көтмәгәндә, бүлмәгә фашист формаһы кейгән кешеләр инеп тула.

— Фрицтар ҡайҙа? — тип һорай улар.

— Ә һеҙ кемдәр? — тип аптырап ҡала староста. Атыштар яңғырай, староста һәм немец юҡ ителә. Фашист кейеме кейгән кешеләрҙең береһе бойконың ауылдашы Михаил Борисенко булып сыға. Бер аҙҙан ҡасабаға кавалеристар инә. Фашист гарнизоны коменданты Гофман һалдаттары менән ҡуша ҡыйратыла. Хыянатсы Нестор Борисенко ла ҡотола алмай язанан. Беҙҙекеләрҙең яҡынлашыуы тураһында ул старостаға алдан хәбәр еткергән...

Сәйәхәтебеҙ дауам итә, дивизия юлдары беҙҙе элекке фронт һыҙығы үткән ергә тарта. С.В. Коссиор исемендәге шахта идаралығына индек. Беҙҙе партком секретаре Николай Федорович Горшков, директорҙың экономика

буйынса урынбаҫары Эдуард Ҡотдос улы Абдуллин мөләйем ҡаршыланы. Һуңғыһының тап үҙебеҙҙең яҡташ, Ағиҙел буйы башҡорто булыуы күңелдәрҙе күтәреп ебәрҙе. Түңәрәк өҫтәл тирәһендә, туғандарса яҡынайышып, күмер ҡаҙыу эштәренең барышы тураһында ҡыҙып китте әңгәмә. Беҙ, бынан бер-ике йыл элек үк, “Правда” гәзите биттәренән уҡып, ил-ғәләмде шаулатҡан “Воротниковсылар хәрәкәте” хаҡында бер талай хәбәрдар инек инде. Шуның тыуған ерендә булыу, шахтерҙарҙың үҙҙәрен күреү патриотик башланғыстың бәҫен уғата күтәреп, беҙ уҡып белгән ҡоро ғына гәзит юлдары ялҡынланып ләүкегән тере тормошҡа әүерелде. Хәҙер за бойҙа элекке дүр бригада урынына комплекслы берәү эшләй, “һәр кем — һәммәһе өсөн, һәммәһе — һәр кем өсөн” тырыша һәм яуап бирә. Шунлыҡтан ең һәлендереп йөрөргә, намыҫһыҙлыҡҡа, хеҙмәт тәртибен боҙоуҙарға юл ҡуйылмай. Шуныһы ла фәһемле: бригада ағзалары бөтәһе лә ситтән тороп, йә киске уҡыу йорттарына йөрөп белем ала, араларында бер түгел өс Социалистик Хеҙмәт Геройы бар. Яңы ысул менән эшләгәс, хеҙмәт етештереүсәнлеге киҫкен үргә һикергән: шахта элек тәүлегенә 450 тонна күмер биргән булһа, бөгөн өс мең тоннаны “эһ” тә итмәй “На-гора” күтәрә.

Шахта идаралығының алдында, күренекле революционер С.В. Косиорға ҡуйылған һәйкәлдең һуңыраҡ үҫеп сыҡҡан мәрмәр ике ҡанатында, бөтә совет кешеләренә лә аңлайышлы телдә ике яҙыубар:

“На этом месте в феврале 1943 года стояли насмерть воины 7-го гвардейского корпуса и шахтеры-патриоты в борьбе с фашистскими захватчиками”. Икенсеһендә бөгөнгө шахтерҙарҙың һоҡланғыс хеҙмәт батырлыҡтары бәйән ителә. Был талмаҫ ҡуш мәрмәр ҡанат киләсәккә быуындарҙың изге эстафетаһын осортоп илтә.

Йәшә, сәскә ат, данлы шахтерҙар төйәге Чернухино! Бындай ҡанаттарың барҙа бейектәргә сорғорһоң, Донбасс ере!

7

Чернухинонан маршрутыбыҙ эреле-ваҡлы ауыл-ҡасабалар һәм йыйнаҡ шахтер ҡалалары аша Ҡояш сығышына — элекке фронт һыҙығындағы район үҙәге Новоанновкаға табан һуҙылды. Дивизияның шул йүнәлештә тотҡан юлын һәм маҡсатын анығыраҡ күҙ алдына килтереү өсөн, беҙ, тыныс көндәрҙә “ирегеп”, һуғыш юлы буйлап сығып киткән өс мосафир, үҙебеҙҙең бәләкәй генә “штаб” кәңәшмәһен йыйҙыҡ. Полковник ҡыҙыл һәм күк ҡәләмдәр менән сыбарланып бөткән юл “йәймә”һен — карта сығарып һалды өҫтәлгә.

— Маршрутыбыҙ һыҙылған, юл асыҡ, бер кемдән дә һорап тораһы юҡ — сығырға ла китергә! — тип белдерҙе ул. Әммә һәр нәмәне алдан уҡ ҡәләм осона элеп үлсәп ҡараусы һөнәр эйәләре — журналистар ҙабар бит әле.

— Маршрут ҡына етмәй шул, Сәйфулла ағай. Ул маршрут буйлап һуҡыр килеш бармаҫ өсөн, ваҡиғалар сыл бырын күҙаллар дөйөм мәғлүмәт тә кәрәк.

— Ул мәғлүмәт бына бында, — тине полковник, маңлайына сиртеп күрһәтеп. — Теләһәгеҙ, тағы ла бер ҡат энәһенән е бенәсә ҡалдырмай һөйләп бирәм.

— Ҡырҡ ҡат тыңларға ла әҙер. Атайым бахыр әйтмешләй, ишетеп белгәндән алыу — бер алтын булһа, үҙе күргәндән — мең алтын. Һеҙҙең хәтер һандығында ваҡиғалар кино таҫмаһындағылай теҙелеп ята, тиҙәр бит.

— Киноғыҙҙы белмәйем, — тине ветеран, — әммә был һандыҡты бәғзеләр тура атыусы пушка тип атағандарын ишеткән бар.

— Полковник, атығыҙ пушкағыҙҙан! — тинек бер юлы. Һәм Сәйфулла ағай бына нисәмә тапҡыр индебеҙгә үҙенең артиллерия дивизионын рейдтан сығарғанында күргәндәрен бөтмөрләп теҙеп бирҙе. Күпте күргән, күпте йыйған юл дәфтәрем әллә ни тиклем яңы исемдәр, цифрҙар, схемалар менән сыбарланды. Үҙебеҙҙең шундай алтын гидыбыҙ булыуҙан тағы ла бер тапҡыр ҡәнәғәтләнеп, картаға өңөлөштөк.

— Етер, киттек. Был тупраҡтың һәр аҙымына тиклем ҡарышлап күрһәтә алам, — тине мыҡты гидыбыҙ. Тик тынғыһыҙ журналист йәне тынманы:

— Полковник, һеҙҙең һәр фразағыҙ — беҙҙең өсөн саҡрым бағаналары. Әгәр тайғаҡлап китһәк, уларға тотонасаҡ быҙ. Әммә ғәфү итегеҙ: беҙҙең хыялый нәфсе-шайтан тағы ла бер нәмә яҫҡана...

— Нимә ул?

— Беҙгә, а бынмай барыу өсөн, саҡрым бағаналарынан тыш, нурлы маяҡтар ҙа кәрәк. Гәзит теле менән әйтһәк, рейд барышын дивизия, корпус, хатта фронт штабтары бейеклегенән яҡтыртыу.

— Дөрөҫ, был бик мөһим, — тине ҡәләмдәшем. Полковник карталарын төрнәне.

— Егеттәр, ул тиклемен минән һорамағыҙ. Һәр әтәс үҙ кетәге башынан тороп ҡысҡыра, тигәндәй, мин дә, бөтә булғандарҙы түкмәй-сәсмәй, бер иле лә арттырмай һәм кәметмәй, башҡаларҙың ҡунаҡсаһына менмәй һөйләп биреүҙе Намыҫым бурысы күрәм. Етмәгәнен үҙегеҙ йүнләрһегеҙ — күҙегеҙ яҙыу таный бит. Һеҙ ризамы шуға?

— Әлбиттә! Был — элементар әҙәплелек.

— Әгәр киңерәк ҡараш кәрәк тиһәгеҙ, рәхим итегеҙ: тере ҡалған өлкән офицерҙарҙан дивизияның штаб Начальнигы Голенов — Мәскәүҙә, полк командиры Фондеранцев — Минскиҙа, ә корпус командиры хәйерһеҙ Борисов — ҡайҙалыр Украинала. Дивизияның политбүлек Начальнигы Ҡадиров — үҙебеҙҙең Өфөлә...

— Их, улар ҙа бына ошонда — беҙҙең менән бергә йөрөһәләр икән! — Рәйес ҡәләмдәшем елкәһен ҡашыны.

— Уныһы инде, ҡустым, олатайым әйтмешләй, Алла ҡулында. Осраштырыуын көтөгөҙ.

— Ниңә көтөргә? Үҙебеҙҙең ҡулда ла мус бөтмәгән! — Портфелемдән хәрбиҙәрҙең мемуар китаптарын һөйрәп сығарҙым. — Бына һеҙгә Лелюшенко, бына Борисов, бына Ҡадиров! Һәр береһе үҙ телдәре менән һөйләргә әҙер.

Һүр. 11. Сабир Ҡадиров

Юлдаштарымдың шатлыҡтан күҙҙәре дүрт булды.

— Иллә хәйләкәр ҙә икәнһең, малай! Өндәшмәй генә йөрөй... — тине ҡәләмдәшем.

— Тымыҡ күлдә шайтан була тигәндәре дөрөҫ шул! — тине полковник.

— Йәгеҙ, был шаһиттарға ла һүҙ бирәбеҙме, егеттәр?

— Әлбиттә!

— Улайһа, тыңлағыҙ, бына һеҙгә генерал-майор Борисовтың һуғыштан һуң генерал-лейтенант Платоновҡа ебәргән хаты:

“Корпусҡа, көнбайышҡа табан барғаныбыҙ һайын, немецтарҙың ҡаршылыҡ күрһәтеүе бермә-бер артты. Корпус дошмандың торған һайын көслөрәк танк һәм пехота һөжүмдәренә тарыны. 12-һенән 18 февралгә тиклем булған арауыҡта, немец-фашист ғәскәрҙәренең тылында Бронская, Чернухино, Городище станциялары төбәген үҙ ҡулдарында тотоп, 7-енсе гвардия атлы корпусы дошмандың күп тапҡырға артыҡ пехота һәм танк көстәре менән ҡаты һуғыштар алып барҙы. Дошман байтаҡ дивизияларын, фронттың башҡа участкаларынан күсереп, ошо төбәккә тупларға мәжбүр булды. Шуға ла ҡарамаҫтан, биләнгән төбәкте корпусыбыҙ частәре үҙ ҡулдарында ныҡ тотоп, аҙыҡ һәм һуғыш монаяттары һаҡлауыҡтарына (складтарына), яғыулыҡ баҙҙарына өҙлөкһөҙ сапҡындар яһауын дауам итте, уларҙы шартлатты һәм яндырҙы. Бынан тыш, ҡыйыу һәм тәүәккәл эш ҡылып, атлылар дошмандың яғыулыҡ һәм башҡа хәрби материалдар тейәлгән эшелондарын түңкәрҙеләр, шуның менән уға ҙур зыян килтерҙеләр.

Атлыларҙың уңышлы хәрәкәт итеүҙәренә лә ҡарамаҫтан, хәл шаҡтай ҡатмарлана бара, сөнки корпустың тороп ҡалған тылы менән бәйләнеш юҡ ине. Дошман ҡеүәтләнгән һайын, һуғыш монаяттарыбыҙ етмәй башланы. Атлылар бер килке күләмдә немец-фашистар иҫәбенә, нигеҙҙә уҡсы ҡоралдары менән, ҡоралландылар. Әммә һуғыш монаяттарына ҡытлыҡ бөтмәне. Беҙҙең 3-өнсө гвардия армияһы командалығына йүнәлтелгән бөтә үтенестәр яуапһыҙ ҡалды”...

Тимәк, дошмандың тәрән тылында үлемесле һуғышҡан атлы корпус фронт штабы тарафынан “онотолған”, бер ниндәй ҙә ярҙам күрһәтелмәйенсә, яҙмыш ҡулына ташланған...

Был урында, ғәҙеллек өсөн, тарихҡа аҙ ғына экскурс яһап, ул саҡта, фронт хәлдәре үҙгәреп китеү сәбәплә, 3-өнсө гвардия армияһының һәм, ғөмүмән, фронттың үҙе лә нык ауырлыҡ кисереүен әйтеп үтергә кәрәк. Армия генералы Д.Д. Лелюшенконың һүҙҙәренә иғтибар итәйек. “Февраль

буйына, ти ул, — беҙҙең ғәскәрҙәр һәм фронттың башҡа армиялары һөжүм итеү һуғыштарын шаҡтай ауыр шарттарҙа алып барҙылар. Февраль урталарына Көньяҡ-Көнбайыш һәм Воронеж фронттары, Краснорадтан, Ново-Московскиҙан, Павлоградтан, Красноармейскийҙан, Славянскиҙан, Ворошиловградтан көньяҡтараҡ һыҙыҡҡа сығып, шул бөгөлгән һыҙыҡ буйлап 400 километрҙан артығыраҡҡа һуҙылған фронтты биләнеләр, һөҙөмтәлә үҙ базаларынан 300 — 350 километрға айырылдылар. Дивизиялар һуғыш монаяттарына, яғыулыҡҡа һәм башҡа төрлө тәьминәткә ҡаты мохтажлыҡ кисерҙе. Аэродромдар һәм авиобазаларҙың алыҫлығы арҡаһында һөжүм итеүсе ғәскәрҙәрҙе тотанаҡлау өҙөк-ярыҡ эшләнде. Шул арала дошман үҙенең резервтарын килтерҙе һәм ике ҡеүәтле танк төркөмөн төҙөнө: береһен Красноградтан төньяҡ-көнбайыштараҡ төбәктә, икенсеһен Красноармейскийҙан көньяҡтараҡта.

Үкенескә ҡаршы, был беҙҙең өсөн көтөлмәгән хәл булды, сөнки темеҫкенлек (разведка) етешмәүе һөҙөмтәһендә фронт етәкселегендә дошман тураһында кәрәкле мәғлүмәттәр юҡ ине. Штабтарҙың тейешле органдары дошмандың мөмкинлектәрен етерлек иҫәпкә алманы, үҙебеҙҙең көстәрҙе аштырып баһаланы һәм, һөҙөмтәлә, 6-нсы, 1-енсе һәм 3-өнсө гвардия армияларының хәҙер инде хәлһеҙләнгән ғәскәрҙәренә, шулай уҡ генерал-лейтенәнт М.М. Поповтың хәрәкәтсән төркөмөнә *хәлдән килмәҫ бурыстар ҡуйҙы.* Дошман ғәскәрҙәре Донец түбәнге ағышынан һәм Дондың үрге ағышынан китә башлағас, *был китеү дошмандың асыҡтан-асыҡ Днепр аръяғына сигенеүе һәм Донбассты ҡалдырыуы тип ҡабул ителде. Ғәмәлдә иһә был дошмандың үҙ гәскәрҙәрен алдан уҡ әҙерләп ҡуйылган Миус йылгаһы — Дебальцево — Артемовск һыҙыгына оборонага күсереүе, шуның менән фронт һыҙыгын ҡыҫҡартыуы һәм беҙҙең Көньяҡ-Көнбайыш фронты гәскәрҙәренә контрудар яһау маҡсатында танк һәм моторлаштырылган дивизияларын кәрәкле урынга күсереү өсөн эшләнә ине.*

Шул маҡсатта уның 1-нсе танк армияһы (3-өнсө, 7-нсе, 11-енсе танк дивизиялары һәм моторлаштырылған "Викинг" дивизияһы) ҙур йоҙроҡҡа тупланды. 18 февралдә дошман М.М. Поповтың хәрәкәтсән төркөмөнә көслө контрудар яһаны. Унан һуң 48-енсе немец танк корпусы (6-нсы, 17-нсе танк дивизиялары), 2-нсе СС танк корпусының "Үле баш" танк дивизияһы, "Райх" танк дивизияһы һәм ике "тигр" танк батальоны менән көсәйтелгән йәйәүле дивизия килтерелде. Был ҡеүәтле төркөм беҙҙең Көньяҡ-Көнбайыш фронттың уң ҡанатына һәм үҙәгенә көслө контрудар яһаны, һөҙөмтәлә беҙҙең Көньяҡ-Көнбайыш фронт ғәскәрҙәре (6-нсы һәм 1-енсе гвардия армиялары) Донбасс үҙәгенән көнсығышҡа ҡыҫырыҡландылар, Красноармейск, Славянск, Крамоторск, Лисичанск һәм башҡа пункттар ҡалдырылды. *1-енсе гвардия армияһы командиры генерал-лейтенант М.Ф. Харитоновтың һәм танк төркөмө командующийы генерал-лейтенант М.М. Поповтың докладтарына ла ҡарамаҫтан, ҡурҡыныс иҫәпкә алынмай.*

Хатта дошман 20 — 22 февралдә Көньяҡ-Көнбайыш фронт гәскәрҙәренә өс йүнәлештән ҡеүәтле контрудар яһап, М.М. Поповтың танк төркөмөнөң

төп көстәрен ҡамағас, киң участкала 6-нсы армия ҡушылмаларының оператив теҙемен һәм һуғышсан тәртибен боҙғас, һөҙөмтәлә ике танк корпусы менән ике уҡсы дивизияны бүлгәс тә әле, дошман күп көстәрен Днепр аръяғына алып китеүен дауам итә, ә уның контрударҙары осраҡлы хәл, тип һаналды. Һәм фәҡәт 24 февралдә генә танк ғәскәрҙәренә оборонаға күсергә әмер бирелде".

Курсив менән бирелгән йөмләләрҙән совет армияһы юғары командованиеһының фронттағы ғәҙәттән тыш әрпешлеге фашлана: дошман көстәре, уларҙың урынлашыуы һәм маҡсаты тураһында аныҡ һәм дөрөҫ мәғлүмәт тупламай тороп, һуҡыр килеш киҙәнеп, Борисовтың атлы корпусындағы Башҡорт дивизияһын һәм башҡа дивизияларҙы фашистарҙың тәрән тылына күрәләтә үлемгә ташлағандар, кешеләребеҙҙең мәғәнәһеҙгә ҡырылыуын себен ҡырылыуы һымаҡ күргәндәр. Һөҙөмтәлә тәрән рейдҡа кергән 7-нсе кавалерия корпусына ғына түгел, ә бөтә Көньяҡ-Көнбайыш фронт ғәскәрҙәренә көтөлмәгән тарафтарҙан үҙҙәренән күп тапҡырға артыҡ көслө дошмандың ҡаты контрударҙарына юлығырға, етди юғалтыуҙар кисерергә тура килә. Ошоно иҫәпкә алғанда, беҙҙең кавалеристарҙың "Оло ер"ҙән көтөлгән ярҙамды ала алмауҙарының да сәбәбе аңлашыла. Рәсәйҙең ғали йәнәптәре ҡылығында борондан уҡ күҙәтелгән, улар үҙҙәре үк әйткән сираттағы "головотяпство" был.

"Дошмандың танкылары менән көрәшеү өсөн артиллерия снарядтары кәрәк ине, — тип белдерә генерал-лейтенант М.Д. Борисов үҙенең баяғы хатында. — Корпус шул йәһәттән яман ҡытлыҡ кисерҙе. Дошман танкыларына ҡаршы ҡуйыу өсөн атлыларҙың бер генә лә танкыһы юҡ ине.

Ҡамау балдағын ҡыҫып, дошман үҙенең көстәрен ашығыс рәүештә үҫтереүен дауам итте. Катастрофа янаны атлыларға. Корпус командиры 3-өнсө гвардия армияһы командующийынан, ә унан һуң Көньяҡ-Көнбайыш фронт командующийынан баҫып алынған төбәкте ҡалдырып китергә һәм үҙ ҡарамағында хәрәкәт итергә рөхсәт биреүҙәрен һораны. *Быны эшләү рөхсәт ителмәне. Биләгән районды ҡулда торорға ҡушылды, шул уҡ ваҡытта беҙҙең 7-нсе гвардия корпусына ярҙамға танк һәм механикалаштырылған корпустар йырып үтеп бара, тип вәғәҙә ителде.* ***Әммә был корпустар кавалеристарға һис бер ҡасан килеп етмәне. Һуғыш монаяттары ла килтерелмәне"...***

Ни өсөн?!

СССР Оборона министрлығындағы архив материалдарына таянып, Д.Д. Лелюшенко асы хаҡиҡәтте асып һала: фронттағы шарттар үҙгәреү сәбәпле, ти ул, 2-нсе танк корпусы был ваҡытта, 7-нсе кавалерия корпусы тап Чернухинола саҡта уҡ, 17 февралдә үк, кешеләр һәм матди яҡтан тулыландырыу өсөн, ут һыҙығынан алып тылға фронт резервына ебәрелә, ә 22 февралдә 2-нсе Тацинский гвардия танк корпусы ла тылға күсерелә. ***Тимәк, командующийҙар М.Д. Борисовты һыйлаған вәғәҙәләр — шыр-ялған, бушҡыуыҡ булып сыға.***

М.Д. Борисовтың хатын артабан ентекләйек.

“17 февралгә ҡарай ошондай шарттарҙа ҡалдыҡ: беҙҙең 7-нсе гвардия корпусына йә һис бер ниндәй файҙаһыҙга һәләк булырга, йә ҡамау ҡулсаһын өҙөргә лә дошмандың тылында, уны югалтыуҙарга юлыҡтырып һәм тылын ҡаҡшатып, йылгыр хәрәкәткә күсергә. Корпус командиры 18 февралгә ҡараган төндә ҡамау ҡулсаһын өҙөргә әмер бирҙе...

18 февралгә ҡараган төндә, фронтты йырып сыгыу урынында ойошҡан ҡаршылыҡҡа осрамай, Фащевка станцияһының көньяҡ-көнсөгөш йүнәлешендә дошман тылындагы ҡамауҙан сыҡты корпус, әммә тәрән рейдта килеш ҡалыуын дауам итте. Шул уҡ 18-енең иртә таңында корпус командиры әмер алды: үҙе белгәнсә эш итергә. Дошман беҙҙе көтмәгән Фащевка станцияһы һәм Покровский ҡасабаһына килеп етеп, алгы частәребеҙ немец-фашист көстәрен юҡ иттеләр, һәм корпус, туҡталып тормай, артабан көньяҡҡа китте. Әсир төшкән немец офицерҙарынан гитлерсы командование тарафынан әллә нисә дивизияның, шул иҫәптән, танк дивизияһының, фронттан бында күсерелеүе, улар алдына корпусты уратып алып юҡ итеү бурысы ҡуйылганлыгы беленде. Шул уҡ ваҡытта әсирҙәрҙән немецтарҙың ошо төбәктә Миус йылгаһы буйында, гәскәрҙәре сигенә ҡалһа, тип, оборона ныгытмалары ҡороуҙары хаҡында мәглүмәт алынды. Фашистарҙың шул эштәренә ҡамасаулау маҡсатында, шунда ашыҡты корпус.

Ысынлап та, урындагы халыҡты ҡыуып килтереп, саперҙары етәкселегендә Миус йылгаһы буйын ныгыта ине немецтар.

Саперҙарын юҡ итеп һәм ерле халыҡты өйҙәренә таратып, 7-нсе гвардия атлы корпусы бүлектәре был ерҙе биләп алды. Корпус командиры был ҡарарга килеп шуны күҙ уңында тотто: әгәр немецтар үҙ тылдарында оборона төҙөйҙәр икән, тимәк, фронтта уларҙың эше мөшкөл, уларҙы унан беҙҙең гәскәрҙәр бәреп сыгарганда Миус йылгаһы буйындагы был ныгытмаларҙан файҙалана алмаясаҡтар: 7-нсе гвардия корпусы ла улар өҫтөнә тылдан ябырыласаҡ. Шул рәүешле был төбәктәге дошманды тулыһынса юҡ итергә булыр ине”...

“Увы!..”, урыҫтар үҙҙәре әйтмешләй. Үкенескә ҡаршы, өҫтәрәк күрһәтелгән сәбәптәр арҡаһында изге маҡсат бойомға ашмай ҡала. Фашистарҙың Миус оборонаһын Көньяҡ-Көнбайыш фронт ғәскәрҙәренә шөйлә һуңыраҡ, шул 1943 йылдың август — сентябрь айҙарында, ҙур ҡорбандар биреп, штурмлап алырға тура килә. (Билдәле булыуынса, ике тапҡыр Советтар Союзы Геройы Муса Гәрәйев тә ҡатнаша ул штурмда).

Борисов хатының дауамы:

“Ошоларҙың бөтәһе тураһында 7-нсе гвардия кавалерия корпусы командиры, йәгни мин, Көньяҡ-Көнбайыш фронттың командующийы генерал Ватутинга еткерҙем һәм унан корпусты кисекмәҫтән һугыш монаяттары менән тәьмин итеүен һораным.

Фронт командующие шунда уҡ яуап бирҙе. Ул, биләнгән һыҙыҡты ҡалдырмаҫҡа ҡушып, корпус командиры ҡарарын хупланы һәм, 19 февралдә бөтә фронт авиацияһы корпусҡа эшләйәсәк, һугыш монаяттары ла алып барасаҡ, тип ышандырҙы. Эштең былайга бороло шона шатланып, 19 февралдә корпус бүлектәре самолеттарга төшөү майҙансыҡтары әҙерләнеләр, унда танытыубилдәләре күрһәтеп киҙеү торҙолар, осҡостарҙы көттөләр. Ләкин самолеттар булманы. Баҡты иһәң, фронтта шарттар үҙгәреү сәбәпле, авиация

башҡа яҡтарҙа хәрәкәт итә икән. (Бында фронт штабы тарафынан оператив хата ҡылынған булһа кәрәк. Сөнки беҙ Чернухинола, бөтә шаһиттарҙың ауыҙынан, 1943 йылда беҙҙең атлылар ул станциянан ҡамауҙы өҙөп сығып киткәндәренән һуң, 19 февралдә иртән совет самолеттарының Чернухино өҫтөнә осоп килеүен, һауанан һуғыш монаяттары, аҙыҡ һәм 19 һуғышсынан торған десант ташлауҙарын ишеттек. Бөтә әйберҙәр фашистар ҡулына эләккән, десантсыларҙың береһе шунда уҡ үлтерелгән, ә ҡалғандары, һуғыша-һуғыша, Чернухинонан ситкәрәк урман эсенә сигенгән. Бәғзеләрҙең һөйләүенсә, десансылар шул төшкән урынында уҡ ҡырып ташланған. — Й.С.). Шул сәбәпле 7-нсе гвардия корпусына Широкий утары йүнәлешенә китергә, шунда тылдан удар яһап, 3-өнсө гвардия армияһы ғәскәрҙәренә дошман оборонаһын өҙөүҙә ярҙамлашырға тәҡдим ителде.

Әммә 7-нсе гвардия корпусына бер үҙе генә дошман пехотаһына, танкыларына ҡаршы ауыр һуғыштар алып барырға һәм рейдтан, фронттағы ғәскәри бүлектәрҙең ярҙамын күрмәйенсә, үҙе генә йырып сығырға тура килде. Юғалтыуҙар кисереп, ләкин шул уҡ ваҡытта дошманды ла аҙ ҡыйратмай, 24 февралдә корпус үҙ бурыстарын шанлы үтәп сыҡты рейдтан”.

Корпус командиры М.Д. Борисовтың шаһәҙәтнамәһе шуның менән тамам.

Фашистар Миус буйындағы емергес сапҡындан иҫтәренә килергә лә өлгөрмәй, 16 гвардия Башҡорт кавалерия дивизияһы менән 15-енсе гвардия дивизияһы (ә 14-енсе гвардия дивизияһы, Дебальцево янынан уҡ үҙенә башҡа китеп, төп йүнәлештән бер аҙ ситтәрәк Елизаветовка ҡасабаһы тәңгәлендә юғалтыуһыҙ сыға рейдтан) көнсығышҡа ҡырт борола, иң аҡтыҡ снаряд һәм патрондарын ата-ата, ашығыс рәүештә, йырын өсөн билдәләнгән тәңгәлгә китә. Өҫтән ябалаҡлап ҡар яуа, буран куба. Кешеләр, өс көн буйына ашамай, йылы күрмәй, бил тиңентен ҡар йырып бара лабара. Аттар балка буйындағы ағас ҡайырыларын кимерә, саған сыбыҡтарын ашай. Хайуанҡайҙарҙың күп өлөшө Чернухино ҡамауында бомбанан ҡырылып бөткән. Иҫән ҡалғандарын арттилерияға, яралылар тейәлгән саналарға егәләр. Дивизияның байтаҡ өлөшө йәйәү бара. Тирә-яҡтан әленән-әле дошман танкылары килеп сығып һөжүм итә, колонналар, барған ыңғайса уҡ боролоп, һуғышҡа инеп китә. Корпус үткән юлдың буйынан-буйына шартлатылған фашист танкылары, үләкһәләре аунап ятып ҡала (беҙҙекеләрҙе әйтеп тә тормайым). Әммә дошман уғата ажарланып, атлы ғәскәрҙәрҙең тирә-яғына һырышыуын дауам итә, уны фронт һыҙығына еткермәҫ борон уҡ уратып алып юҡ итергә яҫҡана. Гвардиясыларҙың баш осонда ҡара болоттар ҡуйырғандан-ҡуйыра.

Рейдсыларға яндан танкылар килеүе беленә.

21 февралгә ауышҡан төндә корпус артиллерияһы командующийы полковник Головановский етәкселегендәге темеҫкенлек (разведка) күрһәтелгән урынғабарып етеп эш башлай. Темеҫкендәрҙең күбеһе генерал-майор М.М. Шайморатов дивизияһынан һайлап алынған егеттәр була. Көслө ихтыяр, тәүәккәллек, совет ватанына фиҙакәр бирелгәнлекте талап иткән был операцияла гвардиясылар үҙҙәренең ҡаһарманлығы

менән тағы ла бер таң ҡалдыра Донбасс ерен. Һүҙҙе шул алышта ҡатнашыусыларҙан запастағы майор Мөғин Кәрим улы Нагаевҡа бирәйек.

“Беҙ, артиллеристар, — тип хәтерләй ул, — бөтә матди бүлектәребеҙ менән фронт аша Малониколаевкаға дөрөп сығырға тип бара инек. 7-нсе гвардия башҡорт атлы дивизияһының 191-енсе айырым атлы артиллерия дивизионы командиры капитан Сәйфулла Хәбиров мине, шулай уҡ өсөнсө батареяның идаралыҡ итеү взводы командиры лейтенант Окунев анатолий Ивановичты һәм башҡа иптәштәрҙе темеҫкенлеккә (разведкаға) ебәрҙе. Беҙҙең менән ул саҡта дивизия артиллерияһында хеҙмәт иткән лейтенәнт Бикмәтов Ниғмәт Ишмырҙа улы лабар ине. Темеҫкенлек төркөмө ҙур түгел ине, уны полковник Головановский етәкләне. 21 февралдә төндә беҙ Артем ҡасабаһы осона килеп туҡтаныҡ. Көслө ҡар яуа, буран. Иң остағы өйҙә йәшәгән ҡартты шым ғына уятып, полковник Головановский хәлдәрҙе һорашты.

Ҡасабала немецтар, утыҙлап-ҡырҡлап танк. Танкыларына яғыулыҡ тултырылған, моторҙары йылытылған, әҙер тора, — тине ҡарт.

Полковник Головановский беҙҙе бишәр-алтышар кешелек ваҡ төркөмдәргә бүлеп, кемдең ҡайһы өйҙө барып баҫырға тейешлеген билдәләне.

Шып-шым эш итергә, хатта немецтар һиҙә ҡалғанда ла, сигналһыҙ ут асмаҫҡа кәрәклеген ҡәтғи киҫәтте. Һуғыш — һуғыш инде: уның рәхимһеҙ ҡанундарын рәхимһеҙ шарттар тыуҙыра. Был юлы ла шулай булды.

— Кем дә кем был әмерҙе боҙа, бына ошо өй янына килтереп атыласаҡ, — тип киҫәтте полковник. Хаҡ һүҙгә ҡарыу ҙа юҡ.

Мин үҙ төркөмөм менән урамдың уң яғындағы унынсы йортҡа яҡынлаштым. Алыҫ маршта танк эсендә йонсоп килгән фашистар, рейдсыларҙың быңдай ыҙғар буранда төндә килеп етерҙәрен күҙ алдарына ла килтермәй, ояуһыҙланып йоҡлай. Уратып алабыҙ өйҙө.

Бына көтөлгән сигнал. Ауыл буйынса бөтә фашист һаҡсыларының өнө тығылырға тейеш. Һаҡ ҡына ишек ҡағам. Ҡатын-ҡыҙ тауышы: “Кем бар?”

— Асығыҙ, рустар. Шау-шоу күтәрһәгеҙ, тәҙрәгә граната.

Тынлыҡ...

Ике темеҫкенде тышта һағауылда ҡалдырҙым. Ҡара бушлат бөркәнеп сыҡҡан оло ғына йәштәрҙәге ҡатын кухняға үткәрҙе, гитлерсылар урынлашҡан яҡҡа ымлап күрһәтте. Ишекте тибеп ебәреп, фонарҙәр һәм гранаталар тотҡан килеш, “һенде һох!” тип ҡысҡырып, иптәштәрем Ғәликәрим Әминев, Зариф Ғаббасов, Минһажев һәм мин ташландыҡ бүлмәгә. Күҙ асып йомғансы ҡоралһыҙландырып, урамға алып сыҡтыҡ фрицтарҙы. Бөтә ҡасаба буйлап башҡа өйҙәрҙә лә шундай уҡ хәл ҡабатланған. Бына шулай тауыш-тынһыҙ, юғалтыуһыҙ, фашистарҙың беҙҙе ҡырырға йүнәлтелгән танк батальоны юҡ ителде. Беҙҙең арттан килгән саперҙар танкыларын шартлатып, яндырып киттеләр”.

Артем ҡасабаһы менән бер ҡатарҙан дивизиялар 152-нсе шахтаны, тимер юлға яҡын Владимировка ҡасабаһын биләй. Генерал Шайморатов, Артем менән 152-нсе шахта араһындағы бейек ҡалҡыулыҡҡа меңеп, картаһын алып, ат өҫтөндә килеш, тирә-яҡты күҙәтә, дивизияның бурыстарын билдәләй. Был минутта ул түбәндән ҡарап торған атлыларға ниндәйҙер мөһәбәт статуя һымаҡ күренә. Күптәрҙең иҫендә ул ошо ҡиәфәтендә ғүмергә һаҡланып ҡала.

Башҡорт кавалерия дивизияһының төп көстәре, шул иҫәптән 294-енсе (командиры подполковник Г.Е. Фондеранцев), 313-өнсө (командиры майор Захаров) полктар һәм 101-енсе айырым артдивизион (командиры капитан С.Х. Хәбирпов), Владимировка янында ныҡынып, Петровеньки тимер юл станцияһына тупланған дошман ғәскәрҙәренә ҡаршылыҡ әҙерләй. Генерал баҡҡан ҡалҡыулыҡтан корпус юлында һуңғы кәртә булып ятҡан Фремандировка, 1-енсе һәм 2-нсө Юлино утарҙары, унан ары ҡул һуҙымы ғына ерҙә дивизия өҙөргә тейешле фронт һыҙығында Малониколаевка, ә һул яҡтараҡ дошман ғәскәрҙәре менән лыҡама тулы Петровское заводы, йәнә килеп Штеревка тимер юл станцияһы, ә уң яҡта Ивановка ҡасабалары күренеп тора ине. Шулай итеп, 1943 йылдың 22 февралендә дивизиялар, план буйынса Көньяҡ-Көнбайыш фронттың 3-өнсө гвардия армияһы ғәскәрҙәре ҡаршы яҡтан ярҙам итеү һөжүменә күсергә тейешле (ләкин үтәлмәгән!) фронт һыҙығына тамам терәлгәнсе яҡынлашып, йырып сығыу өсөн һуңғы хәл иткес тәңгәлгә етте. Яҡынлашып килгән 23 февраль — Совет армияһы көнөн улар ошонда дошман тылындамы, әллә, фронтты ярып үтеп, оло ҡыуаныс менән үҙебеҙҙең яҡта ҡаршылармы — һәр һуғышсы күңелендә ошо уй ҙа быҫҡып янғандыр, моғайын...

8

Был ерҙәр хәҙерге Красный Луч ҡалаһы тирә-яғында булып, Ворошиловград өлкәһенең Антрацит районына ҡарай. Беҙ, әлеге лә баяғы өс мосафир, Бөйөк Ватан һуғышы башланыуға нәҡ 30 йыл тулған көндә — 1971 йылдың 22 июнендә килеп еттек унда.

Красный Луч ҡалаһы! Данлы шахтерҙар төйәге!.. Уның хужалары беҙҙе күтәреп, тигәндәй, алдылар. Изге яуҙа бергә ҡайнар ҡандарын ҡойоп туғанлашҡан ҡәрҙәштәр араһында ғына була торған ҡәҙер-хөрмәт күрһәтеп, өрмәгән ергә ултыртманылар өсөбөҙҙө.

Эштәрҙең үтә тығыҙ сағы булыуға ла ҡарамаҫтан, һөйләр һүҙ ҙә, алсаҡ йөҙ ҙә бөтмәне. Ҡала советы рәйесенең урынбаҫары Елисей Федорович Левандовский, беҙҙе оло ҡунаҡ дәрәжәһендә йөрөтөү өсөн, бөтә сараларҙы ла күрҙе.

Шул уҡ көндә, "Волга»ға тейәлеп, ҡала һәм уның тирә-яҡтары менән таныштыҡ. Культура бүлеге мөдире, алсаҡ украин уҙаман Михаил Прокопьевич Зайчук, һәр аҙымда туғандарса хәстәрлек күрһәтеп, эс-

бауырыбыҙға инеп бара ине. Бөйөк Ватан һуғышында күкрәген емертеп, аяҡтарын имгәтеп, һыңар ҡулын Юғалтып ҡайтҡан был ҡыйыу темеҫкендең (разведчиктың) тормош юлы үҙе бер китап.

Госпиталдә ятҡанында ул, яҙа-йоҙа, врачтарҙың үҙе хаҡында һөйләшкәнен ишетеп ҡала. Хәле өмөтһөҙ, әжәлгә дусар ителгән, тип ҡарайҙар.

— Ни бары егерме йәшемдә генә инем әле мин, — тип хәтерләй Михаил Прокопьевич, — янып торған егет хәлемдә һуғышҡа китеп, хәҙер, бөтә һөйәктәрем онталып, үлем түшәгендә ятамын. Хатта бер тапҡыр ҙа һөйгәнемде үпкәнем дә юҡ ине. Ошо килеш ҡарттар кеүек түшәктә ятып донъянан китеү сикһеҙ рәнйеткес күренде миңә. “Юҡ, Михаил Прокопьевич, — тинем мин үҙемә, — үлмәҫкә тейеш һин. Тешең-тырнағың менән йәбешеп булһа ла, тере ҡалырға тейешһең!”

Шул көндән алып врачтар миңә, “теге донъя”нан кире ҡайтҡан мөғжизәләй, иҫтәре китеп ҡарар булдылар. Күп тә үтмәй, кеше ярҙамынан тыш, тороп ултырабашланым”...

Ул ғына ла етмәһә, Михаил Прокопьевич был донъяла тере ҡалыу ғына түгел, ә һәр яҡлап камил килгән тулы ҡанлы кеше булып йәшәү бурысын ҡуя үҙенә. Госпиталдә ятҡан килеш ул юғары уҡыу йортон тамамлай, шул уҡ ваҡытта, ныҡышып, төрлө физик күнекмәләр менән шөғөлләнә. Тиҙҙән ул, күптәрҙе хайран ҡалдырып, йүгереү, йөҙөү һәм ҡайһы бер башҡа физик әҙерлектәр буйынса нормаларҙы тапшыра, үҙ ғүмерендә шатлыҡтың иң түбәһе булған икенсе вузды — физкультура институтын тамамлап сыға...

Бына шул кеше, ялҡынлы көрәшсе һәм патриот, партияның антрацит район комитетының пропаганда бүлегендә эшләгән сағында, райондағы бөйөк Ватан һуғышы ҡомартҡыларын эҙләү һәм табыу, иҫәпкә алыу, һаҡлау эштәрен башлап ебәрә. Һәләк булған һуғышсыларҙың исем-фамилияларын аныҡлау өсөн, уларҙың туғандары, яҡташтары, министрлыҡтар һәм архивтар менән яҙыша өҙлөкһөҙ. Һөҙөмтәлә егерме алты туғандар ҡәбере тәртипкә килтерелеп, иҫтәлекле һәйкәлташтар ҡуйылып, һәр береһенең паспорты булдырылған. Ҡала советының культура бүлегендә ҡәҙерләп һаҡланған был паспорттарғабатырҙарҙың исеме һаман өҫтәлә тора. Сәскәләргә күмелгән был изге һәйкәлдәр бөтә күңел-зиһендәрҙе биләне, сағыу ҡыҙыл ҡәнәферҙәр, алһыу розалар беҙгә ҡасандыр ошо ерҙә түгелеп ҡалған тамсы-тамсы ҡандар һымаҡ булып күренде. Һуғыштар ифрат ҡаты барған, был тупраҡтар совет армияһы һуғышсыларының да, ерле патриоттарҙың да ҡайнар йөрәк ҡандары менән мул һуғарылған. 152-нсе шахта терриконы эргәһендә юл ситенә ҡуйылған һәйкәл-монумент үҙе бер тарих. “Богдан” исемләнгән был шахтаның шурфына фашист-йыртҡыстар ике мең ярымдан ашыу патриотты — коммунист шахтерҙарҙы ташлаған.

Батырҙарҙың йөрәк тибешен ҡаны аша үҙендә һаҡлаусы етмеш алты йәшлек, йөҙ һикһән мең кешеле ҡала бөгөн яңы быуын кисергән көрәш ялҡындарында яна йәшәреп. Уның көньяҡ курорт пейзажын хәтерләткән сағыу йәшел урамдарында ерҙең бәхетле быуыны ашыға эшкә. Шуларҙың

егәрле ҡулы менән мөһәбәт культура һарайҙары, ашхана һәм магазиндар, яңы торлаҡ йорттар ҡалҡынған. Төҙөүселәре һәр йыл һайын егерме мең квадрат метр майҙанлы яңы торлаҡ төҙөп тапшыра. Донбасс өсөн иң әһәмиәтле мәсьәләләрҙең береһе — халыҡты тәмле, саф һыу менән тәьмин итеү көйләнгән бында. Кокслаңыусы иң яҡшы күмер сығарыла. Халыҡтың күпселеге — елегенәсә ташкүмер еҫе һеңгән шахтерҙар. Улар араһында беҙҙең башҡорттар һәм татарҙар ҙа күп (“Шахта” йырын хәтерләгеҙ!), хатта шуларҙан ғына торған айырым урамдар ҙабар икән. Ҡала үҙәгендә йыш ҡына үҙебеҙсә һөйләшеп үткән егеттәрҙе һәм ҡыҙҙарҙы, яулыҡтарын арҡаларына төшөрөп бәйләгән олпат әбейҙәрҙе лә күрергә тура килде. Ҡала советы рәйесе урынбаҫарының хөрмәт менән: “Тәртипле, эшсән, берҙәм, тотанаҡлы халыҡ”, — тип телгә алыуы яҡташтар өсөн ғорурлыҡ тойғоһо уятты беҙҙә.

Кисен ҡаланың зиннәтле кинотеатрында “Төп ударҙың йүнәлеше” тигән киң форматлы яңы фильмде ҡараныҡ. Экранда сағылған Ватан һуғышы күренештәренән өсөбөҙҙөң дә күңелдәр уғата нығыраҡ албырғанып, һуғышсы һәйкәле торған тыныс йәшел сквер буйында тәрән уйҙарға талып йөрөнөк. Ирекһеҙҙән хәтергә Леонид Ильич Брежневтең бынан биш көн генә элек Берлинда әйткән һүҙҙәре килде: “Бөгөн, Гитлер Германияһының Советтар Союзына һөжүм итеүенең 30 йыллығы алдынан, кешеләрҙең уй-фекерҙәре ошо ваҡиғаға — икенсе бөтә донъя һуғышы һабаҡтарына йүнәлтелә. Был һуғыштың ниндәй ҡиммәткә төшөүен совет кешеләре лә, немецтар ҙа, *башҡа* халыҡтар ҙа онота алмай. Ундарса миллион кешеләр үлеп ҡалды. Һуғыштан һуңғы осорҙа яңы быуын кешеләре үҫеп сыҡһа ла, һуғыш яралары, уның ауыр эҙемтәләре, политикала булһын, экономикала, шулай уҡ кешеләрҙең психологияһында ла, һиҙҙертә үҙен. Хәҙер, һуғыш тамамланғандан һуң сирек быуаттан артыҡ ваҡыт үткәс, Европа халыҡтары алдында бер төп бурыс: үткән заман фажиғәһенең ҡабатланыуына юл ҡуймау, ысын мәғәнәһендә ныҡлы тыныслыҡ, оҙаҡ ваҡытҡа тыныслыҡ тәьмин итеү бурысы тора”. Был тәңгәлдә һуғыштың утын-һыуын баштан-аяҡ кисеп үткән Сәйфулла ағайҙың да, тылда уның ауырлыҡтарын иңгә йөкмәгән йәшерәк быуын Рәйес менән минең дә уйланаһы уйҙар ҙа, әйтеләһе һүҙҙәр ҙә күп кенә, әлбиттә. Күңелдәребеҙ мөлдөрәмә килеп тулышҡан килеш, үҙебеҙҙе хәстәрлекле ҡала хужалары урынлаштырған уңайлыҡлы ҡунаҡхананың аҫҡы ҡатына төшөп, заманса йыһазландырылған, хеҙмәтләндереүсе алсаҡ йөҙлө кешеләренән алып өҫтәлдәге аштарына тиклем өйҙәгеләй йәнде үҙенә тартып торған балҡыу залда, үҙебеҙсә бәләкәй генә тантаналы мәжлес ҡороп, киске ашҡа ултырҙыҡ. Тәүге тосыбыҙ һәләк булғандарҙың яҡты иҫтәлегенә күтәрелде. Икенсеһен һуғышта еңеп иҫән-һау ҡайтҡандарға — Сәйфулла ағайға арнаныҡ. Өсөнсөһөн тыуған көнөнә ҡәһәрле һуғыш ҡара һөрөмөн яғып киткән юлдашыбыҙ Рәйескә бөгөн йәғни 22 июндә утыҙ туғыҙ йәш тулыу хөрмәтенә күтәрҙек, ҡалғандарын минең һымаҡ ҡалғандарға күсерҙек... Уйлап ҡараһаҡ, үткән ҡаһарман быуынды һуңғы йәш быуынға тоташтырып тороусы алтын быуын инде бөгөн беҙ инек. Донъя йөгөнөң дә

күп өлөшө ятҡайны ошо иңдәргә. Изге иҫтәлектәр ҙә, киләсәккә төбәп әйтелгән ниәттәр ҙә ҙур булды был табында...

Тыуған ил, халыҡ, быуындар яҙмышы, тарих алдындағы яуаплылыҡ хаҡында ҡупты һүҙ.

— Ҡарап-ҡарап торам да мин һеҙгә, зыялылар халҡына, — тине полковник, хәрбиҙәрсә өҙә сабып, — Тағы ла бер ҡарап ҡуям. “Халыҡ”, “ил”, “быуындар” тип үтә күп тылҡыйһығыҙ.

Был беҙҙең ҡыҙған баштарға бер күнәк һалҡын һыу тондорғандай тәьҫир итте. Аптырабыраҡ, бер-беребеҙгә ҡараштыҡ.

— Ни әйтмәк кәрәк — интеллигенция!.. — тип позицияһын нығытты артиллерист. Рәйесебеҙ тоҡанды:

— Сәйфулла ағай, һеҙ нимә... әллә хәрбиҙәр “халыҡ” тигән төшөнсәне белмәйме?

— Ҡоро тел — ҡуңалтаҡ итек, тигән төшөнсөне лә яҡшы беләләр...

— Тимәк, һеҙҙеңсә, ҡуңалтаҡ итек булып сығабыҙ? — тип ялҡын ялманым мин дә.

— Һеҙ икегеҙ нисектер — белмәйем... — тип тылын ҡапларға ла өлгөрҙө артиллерист.

— Вәт хәйләкәр төлкө. “Белмәйем” тигәнегеҙ ҙә, ҡоро телегеҙҙән башҡаны күргәнем юҡ әле, тигән һүҙ була инде, шулаймы?

— Тейешле һығымта яһанығыҙ — миңә шул еткән.

— Ярай, ҡуңалтаҡ итек тә булайыҡ, — тинем. — Ләкин ҡуңалтаҡ итек тә итек бит әле!

Полковниктың ҡаштары емерелде:

— Үҙ ғүмерегеҙҙә бер көн генә булһа ла хәрбиҙәрсә итек кейеп, илле саҡрымлыҡ марш үтеп ҡарағанығыҙ булдымы, егеттәр?

Өндәшмәнек. Сөнки мин, дүрт йыл хәрби ғүмеремде диңгеҙҙә үткәргәнлектән, унда итек кейергә лә, карап палубаһынан башҡа маршларға ла тура килмәне, ә ҡорҙашым Рәйес хәрби хеҙмәткә эләкмәгән.

— Ҡуңалтаҡ итектең нимәгә ярағанын белер инегеҙ шунан.

— Беҙҙең урында һеҙ үҙегеҙ булһағыҙ, ни ҡылыр инегеҙ, ағай?

— Бында уйланаһы юҡ. Күрәһегеҙме? — Полковник майҙан уртаһындағы монумент-ҡәберлеккә төртөп күрһәтте. — Унда ятҡандар ҡоро тел болғап тормаған...

— Бөтәбеҙгә лә улар кеүек үлергә лә тимәгән.

— Дөрөҫ. Әммә тере ҡалғандарға үҙ эшендә, үҙ һөнәрендә, шулар кеүек үк, эшләй алмаҫтайҙарҙы ла түңкәреп һалыу фарыз.

— Ә беҙ түңкәрәбеҙҙер ҙә!

Ағайыбыҙ көрһөндө:

— Күренмәй шул, егеттәр, күренмәй...

— Беҙҙең әҙәбиәт, беҙҙең сәнғәт, беҙҙең журналистика күренмәйме?!.

— Беҙҙең фән, беҙҙең мәҙәниәт күренмәйме?!

— Стоп, тынысланығыҙ, егеттәр! Күренә, бөтәһе лә күренә! Уға ҡалһа, бөтәһе лә манара кеүек сыҡайып тора. Тик эш манарала түгел, ә уның шпиле төрткән бейеклектә шул. Мин барыһын да уҡып, ҡарап, бер-береһе менән сағыштырып барам — туң ҡауын икән был, тимәгеҙ...

— Ҡыҙыҡ, нисегерәк күренә һуң беҙ икәү төҙөшкән манаралар?

— Ярты яҡ бураһы күтәрелгән, ә яртыһы ниргәлә килеш ҡалған.

— Йәғни мәҫәлән?

— Мәҫәлән, “Халыҡ” тигән бөйөк теманың һеҙ “халыҡ тыныс тормошта” тигән өлөшөн генә кир бес өҫтөнә кир бес һалып күтәрәһегеҙ әле, ә шундай уҡ мөһиме — “халыҡ яуҙа” тигәне — бер ҡат кир бес теҙелгән килеш ҡала килә...

Полковникка һуғыш темаһына яҙылған нисә повесебеҙ, романыбыҙ, сәхнә әҫәребеҙ, һынлы сәнғәт мөғжизәләребеҙ барлығын бөртөкләп һанап бирергә булдыҡ. Әммә, аянысҡа ҡаршы, ҡыҙышып алған артиллерист үҙенең ауыр снарядын туп-тура тағы ла сәпкә ҡундырҙы:

— Бармаҡ бөкләп хисаплағыҙ: һәр жанрҙан нисәшәр килеп сығыр икән?..

Бармаҡтарыбыҙ жанр һайын бишкә тиклем дә бөгөлмәне, ә һынлы монументаль сәнғәт... бөтөнләй тип әйтерләк буш икәнлеге асыҡланды.

— Инде хәрби эштең туранан-турабашҡорт халҡына ҡағылышлы яғын — милли ғәскәр формированиеларын алып ҡарайыҡ. Башҡаларын әйтеп тормайым, әммә Рәсәйҙең ике Ватан һуғышында ла беҙҙең кеүек үҙаллы, иғтибар итегеҙ, үҙаллы, милли полктар һәм дивизиялар төҙөп яуғабарыу хөрмәте бик аҙ халыҡтарҙың өлөшөнә төштө. Ә шул хаҡта бер генә булһа ла романыбыҙ, йәки картинабыҙ бармы һуң? Һәр хәлдә, минбайғышығыҙға ундайҙарҙы күреү бәхете теймәне.

Аяныс, ләкин беҙгә лә уның менән килешергә тура килде.

— Хәҙер мин, шул бөйөк һуғыштың һәм дивизияның ҡарт һалдаты булараҡ, икегеҙҙән дә һорайым: ниңә яҙмайһығыҙ?

— Ысынлап та, ниңә яҙмайбыҙ әле, әй? — Шаяртыуға борорға теләнек. Тик барыбер етдилек һүрелмәне.

— Һәй егеттәр-егеттәр! Ветерандарҙың үлеп бөткәнен көтәһегеҙме әллә? Күп ҡалманы инде улар...

— Һеҙҙән төпсөнөп йөрөп ятабыҙ ҙаһа!

— Эш миндә генә түгел, егеттәр.

— Кемдә һуң?

— Бөтә халыҡтың ысын яугир образын тыуҙырыуҙа. — Полковник уйсан күҙҙәрен төбәнебеҙгә. — Ҡаршығыҙҙа бына мин фәҡирегеҙ — миллиондар араһындағы милионынсы бер ҡарт һалдат, гвардиясы, элекке артиллерия полкының командиры — күҙле бүкәндәй таш байып ултырам. Ватан һуғышында полковниктар ҙа, артиллерия полктары ла бик күп булды, әлбиттә. Ләкин мәсьәләне төптәнерәк ҡармап, икенсе, тарихи планға күсереп ҡарағыҙ әле: башҡорт халҡы тарихындабашҡабындай фактты осрата алырһығыҙмы икән? Маҡтаныу өсөн түгел, ә йәш быуынға фәһем өсөн әйтәм: ҡаршығыҙҙа ябай ғына полковник түгел, ә тарихтағы беренсе башҡорт *артиллерия* полкының командиры ултыра, белегеҙ шуны.

— Ай-бай! Атайым бахыр әйтмешләй, йүкәлә икән ул сәтләүек — бына беҙгә тыуасаҡ әҫәрҙәребеҙҙең геройы! — тип тубыҡҡа һуғырға мәжбүр булдым.

— Да-а-а... — тине ҡәләмдәшем.

— Унының өсөн тимәйем, дөрөҫ аңлағыҙ мине. Үҙегеҙ менән бергә көн дә уйнап-көлөп, йә әрләшеп арағыҙҙа йөрөйҙәр ул йөҙәрләгән геройҙарығыҙ. Йөрөмәгәндәре — тарих битен генә асыуҙы көтөп ята. Әйтәйек, Петр I Батшаның 1695 — 1696 йылдарҙағы Азов походының башланмыш алышы. Бер яғына төрөк, икенсе яғына урыҫ ғәскәрҙәре ҡара-ҡаршы теҙелгән иркен ялан. Ул замандағы хәл иткес ҙур һуғыштарҙың үҙенсәлекле йолаһы буйынса (1380 йылғы атаҡлы Куликов һуғышын хәтерләгеҙ!), тәүҙә ике яҡтан һайлап алынмыш ике батыр йөҙгә-йөҙ бәрелешә. Төрөктәр яғынан әзмәүерҙәй атаҡлы черкес батыры, ә урыҫ ғәскәрҙәре исеменән батыр булып аҫаба башҡорт Алдар Иҫәнгилдин (һуңынан башҡорт восстаниеларының етәксеһе) сыға. Асырғанышлы алыш Алдарыбыҙҙың еңеүе менән ослана: ике яҡтың меңәрләгән ғәскәрҙәре ҡаршыһында үлтереп ташлай төрөк батырын. Был иһә һуңғы еңеүҙең дә ҡайһы яҡҡа ауышҡанын күрһәткес булып тора, урыҫ ғәскәрҙәрен еңеүгә рухландыра. Ошо түгелме ни киң ҡоласлы полотнола сағылдырыуҙы һорап тороусы тема?.. Йәки бөйөк немец шағиры Гетегә оло ихтирам белдереп үҙенең иң ҡәҙерле монаятын — уҡ-янын бүләк иткән башҡорт яугирен алайыҡ. Йә булмаһа Париж урамдарында толпарҙарын елдерткән данлы ата-бабаларҙы төҫмөрләйек. Бик тә тәрән төшөргә ҡыйынһынһаҡ, беҙҙең ошонда фашистар тылына тәрән рейдтың ниндәй ҙә бер эпизодын ғына һынландырырға тырышып ҡарайыҡ. Аҙмы ни сал тарихыбыҙҙа асылмайынса ябылып тороп ҡалған утлы-ялҡынлы биттәр?!. Ҡайҙа беҙҙең Лев Николаевич Толстойҙарыбыҙ?!.

Шулай тине полковник...

Бөйөк Ватан һуғышы башланыуға теүәл утыҙ йыл тулған төндә, үҙе тарих булып ҡалған Донбасс ерендә алыҫтан килгән өс мосафирҙың ысын күңелдән һөйләшеүе булды был. Иртәгәһен Михаил Прокопьевич хәстәрлегендә юлға әҙерләнеп бөтөүгә, Петровское ҡалаһының завод дирекцияһы беҙҙе алырға ебәргән автобус геүләп килеп тә етте. Унан, ашығып, өҫтөнә ҡыҫҡа еңле аҡ күлдәк, башына һалам эшләпә кейгән, 50 — 60 йәштәрҙәге етеҙ хәрәкәтсән бер ир һикереп төштө лә, ҡосаҡтарын киң йәйеп, туп-тура полковник Хәбировҡа уҡталды. Йәнә беҙҙең күҙ алдында йөрәк тетрәткес изге мәл — ике фронтовиктың утыҙ йылдан һуң ҡуш килеп осрашыу минуты ҡабатланды. Хәҙер запастағы майор, пенсионер Иван Васильевич Родин да 7-нсе гвардия атлы корпусының 15-енсе гвардия дивизияһында эскадрон командиры булған икән, тәрән рейдта ла бергә йөрөгән. Фронтовиктар, ирҙәрсә һаран күҙ йәштәре аралаш, бер-береһен күкрәктәренә ҡыҫышып үбештеләр. "Хәтерләйһеңме?!", "Ә һин хәтерләйһеңме?!" — тигән таныш өндәштәр ишетелде...

Петровское ҡалаһына елдертеп барып етеүгә, ҡала советы рәйесенең урынбаҫары Николай Григорьевич Зимин менән заводтың партия комитеты секретаре Владимир Кузьмич Дъяченко ҡаршы сығып көтөп торалар имеш.

— Хуш килдегеҙ, яҡташтар, һеҙ бит ысындан да беҙҙең яҡташтар! — тип тәбрикләне улар.

— Башҡортостан еренән, яҡташтарығыҙҙан сәләм! — тип күрештек беҙ. Былай өндәшеүҙең үҙенсә ҙур сәбәбе бар. Сөнки һуғыш ваҡытында Петровское исемендәге химия заводы беҙҙең Эстәрлетамаҡта эвакуацияла булған, шуға ул беҙгә яҡын да, яғымлы ла ине. Завод хәлдәре менән ҡыҫҡаса танышабашлағас, беҙгә бер мөһим яңылыҡ мәғлүм булып, хужаларҙың уңышы өсөн ҡыуандырып ебәрҙе.

— Ҡала советы рәйесе һеҙгә, ҡәҙерле ҡунаҡтарыбыҙға, үҙе ҡаршы сыға алмағанға ғәйепләмәгеҙ инде, — тине Николай Григорьевич. — Бөгөн беҙҙең ҡайнап торған ваҡиғалы, ығы-зығылы сағыбыҙ. Ҡала башлығыбыҙ шул уңайҙан мәшәҡәтләнеп йөрөй...

— Эйе, беҙҙең Красный Луч ҡала советының рәйесе лә һеҙҙе тап шул ваҡиға арҡаһында шәхсән үҙе ҡабул ҡыла алманы бит, — тип ҡушылды беҙҙе оҙатып килеүсе Михаил Прокопьевич та, ҡәнәғәт йылмайып. Аңлай алмай тороуыбыҙҙы күреп көләмһерәгән партком секретаре Дъяченко иптәш төшөндөрөп бирҙе:

— Мәскәүҙән министр көтәбеҙ, иптәштәр. Тантаналы йыйылыш бөгөн. Йөҙ илле шахтерға, хеҙмәт уңыштарын билдәләп, СССР-ҙың иң Юғары ордендары һәм миҙалдары тапшырыла. Һәм Ҡыҙыл Байраҡ!

Донбасс ере бына ҡайһылай юғары тотабатырҙарҙың ҡаны һеңгән әләмде!

Ошо данлы ерҙә халыҡтың мәңгелек таҙа Намыҫы булып йомшаҡ тупраҡ түшәктә ятҡан батыр яҡташтарыбыҙ менән өҙөлөкһөҙ ҡорурланып, завод баҡсаһы эсендәге изге туғандар ҡәберенә ҡандай ал гөлдәр һалдыҡ. Бында рейдтан сыҡҡан саҡта 1943 йылдың 23 декабрендә һәләк булған ете йөҙ илле ҡаһарманды элекке силос ямына күмелгән урындан күсереп, ошондағы М.М. Шайморатов ҡәбере янына ерләгәндәр, рейдҡа киткән башҡорт атлыларының да күбеһе ошонда икән. Баһадирҙарҙың баш осонда ике бронза һалдат мәңгелек һаҡта тора. Береһе, полк байрағын үпкәндәге кеүек, һыңар тубығына сүгеп, бронза гөлдәмә һалып торғаны, айырым ерләнгән генерал-майор М.М. Шайморатовтың баш осонда (киләсәктә кәрәк була ҡалһа, эҙләп табырға билдә). Дивизия яугире башҡорт яҙыусыһы Әхтәм Ихсан, һуғыштан һуң СССР Оборона министрлығының архивтарында соҡсоноп, тап шул легендар рейд осоронда полковник М.М. Шайморатовҡа генерал-майор дәрәжәһе бирелеүе һәм уның, генерал Дүдко үлгәндәс, корпус командиры урынбаҫары итеп тәғәйенләнеүе тураһындағы документтарҙы эҙләп тапҡандан һуң, М.М. Шайморатов ҡәберенең шул постаментына, ошо регалияларын яҙҙыртып, бронза таҡта ҡуйҙыртҡан. Әммә ул бронза таҡтаның беҙ дүрткелләнеп ҡалған урынын ғына күрҙек: рейд барышында үлеп ҡалған икенсе бер генерал Дудконың уны-быны белештермәйенсә бында килгән тол ҡатыны: “Шайморатов бит ул генерал булмаған. Тимәк, был генерал зираты — минең мәрхүм ирем Дудконыҡы!” — тип инстанцияларҙа даулап йөрөй башлағас, шулай уҡ мәсьәләне төплө белмәгән урындағы түрәләр, кәрәкмәгән шау-шоу ҡубыуҙан ҡурсаланып, яҙыулы бронза таҡтаны ҡуптартып алдыртҡандар ҙа Шайморатов ҡәбере исемһеҙ ҡалған...

(Һүрәттә уңдан һулға: С.Х. Хәбиров, Й.Ә. Солтанов, И.В. Родин М.М. Шайморатовтың ҡәбере эргәһендә. Петровский исемендәге завод баҡсаһы).

Һүр. 12. Уңдан һулға: С.Х. Хәбиров, Й.Ә. Солтанов, И.В. Родин генерал ҡәбере янында

Һәләк булған батырҙарҙың береһе-нең сал әсәһе менән улы һәм кейәүе алыҫ Алтай еренән килтереп ултыртҡан йәш кенә өс аҡ ҡайын, йәшел һыр-ғалы тәлгәштәрен һәл-ендереп, үҙҙәренсә нин-дәйҙер талғын ғына моңға шыбырҙашып ул-тыра. Ҡәберлектең баҡ-са яҡ түрендә, шаулап торған ҡуйы тирәктәр ҡосағында, һалдаттарҙай теҙеп мәрмәр таҡталар ултыртылған. Урталағы иң олоһона алтын хәрефтәр менән 8-енсе гвардия корпусы командиры урынбаҫары гвардия генерал-майоры Степан Иванович Дудко, 16-нсы гвардия башҡорт кавалерия дивизияһының командиры генерал-майор Миңлеғәли Минһаж улы Шайморатов, корпус штабы начальнигы гвардия полковнигы Иван Дмитриевич Сабуров, корпус политбүлеге начальнигы гвардия полковнигы Карпушенколарҙың исемдәре мәңгеләштерелгән. Уларҙан ҡала ике яҡ ҡанатта һәләк булған башҡаларҙың исемлеге, бөтәһе дүрт йөҙ туҡһан бер кеше мәғлүм. Ҡалғандарының исем-фамилиялары әлегә билдәһеҙ. Беҙ батырҙар ҡәберенән бер ус тупраҡ алған саҡта яугир-ветеран Михаил Прокопьевич Зайчук әйткән һүҙҙәр ғүмергә ҡалды иҫтә. "Һәр халыҡҡа — йөрәгенән сыҡҡаны, үҙенеке ғәзиз. Ҡабат уны йөрәккә алып һалып булмай, башҡаларға бирелә ул һәм, ошо геройҙар кеүек, бирелгән ерендә ҡала. Шуға күрә лә беҙ, барлыҡ милләт кешеләре, ҡайҙа ғына йәшәһәк тә, ул ғәзиздәрҙән ғәзизде — туғанлыҡтың изге билдәһен саф килеш үҙ еребеҙҙә ҡәҙерләп һаҡларға тейеш... Был туғандар ҡәберендә СССР-ҙың барлыҡ милләт улдары ла ерләнгән, улар бөтәһе лә һәммәбеҙгә уртаҡ изге бер Ватан — Совет Социалистик Республикалар Союзының ҡаҡшамаҫ берҙәмлеге, ныҡлығы өсөн йәндәрен аямай биргән. Бына ни өсөн был ҡәберҙәр беҙгә сикһеҙ ҡәҙерле, изге!" — тине ул.

Эйе, һәммәбеҙгә уртаҡ изге бер Ватан — Совет Социалистик Республикалар Союзы! Шунан да яҡынығыраҡ, күҙ ҡараһындай ҡәҙерлерәк нимәбеҙ бар икән тағы?!

Һүр. 13. Һулдан уңға: Йыһат Солтанов, Иван Родин, Сәйфулла Хәбиров, Михаил Зайчук,

Владимир Дьяченко, Рәйес Низамов

(Һүрәттә).

Батырҙарҙың баш осонда алыҫ Алтай еренән күсеп килеп ултырған баяғы аҡ ҡай-ындар менән ҡушылы-шып башҡа ҡайындар ҙа шаулай. Ҡайһындай ҙа саф улар, пак улар — мәңгелек ҡайғы кисер-ергә көс тапҡан аҡҡай-ындар! Өсөһө лә йөрәккә яҡын бер төҫлө, бер кил бәтле — Бала саҡтан һәр беребеҙ үҙ ерендә, үҙ өй артында ултыртып үҫтергән аҡҡайындары кеүек. Бөтә ерҙең аҡҡайындары кеүек. Әйтерһең, өсөһө юрый өс ерҙән — Алтайҙан, Мәскәү янынан, Башҡортостандан йәки башҡа төбәктәрҙән күсеп килеп тамыр йәйгәндәр ҙә: “Ҡарағыҙ, сағыштырығыҙ: өс тарафта тыуһаҡ та, өс һыуҙы эсеп үҫһәк тә, бөтәбеҙ ҙә бер туған түгелме ни, бер түгелме ни?” — тип баҡҡандар күҙҙәребеҙгә. Һеҙ хаҡлы, мең тапҡыр хаҡлы, һөйөклө аҡҡайындар! Аҡҡайындар милләтһеҙ, расаларға бүленмәй улар. Әгәр ошонда бөйөк Ватан СССР-ҙың
барлыҡ ауылдарынан да берәр төп ҡайын килтереп ултыртһаҡ ине, — айырым-
айырым ағастарҙы түгел, ә бөтөн бер аҡ урманды — ҡуш килгән дә күҙҙе арбаған фәҡәт бер үк ике төҫтө генә, йәшлек төҫө йәшел менән Намыҫ төҫө аҡты ғына күреп ҡыуаныр инек.

Йәшәү һәм Намыҫ! Был бит бөтә кешелектең билдәһе! Уртаҡ төҫө! Бына ни өсөн был ағастарҙың раса һәм милләте бер — Планета ҡайындары, Ер ҡайындары улар. Шул Ер ҡайындарын паклап ерҙә батырҙар йоҡлай — Планетабыҙ йәшәүен, Планетабыҙ Намыҫын, Планетабыҙ батырлығын ҡурсалап яу ҡайтарған ҡаһармандар. Уларҙың да милләте бер — Кешелек улдары. Ә Кешелектең гвардияһын фашизмды еңеп сыҡҡан совет халҡы тәшкил итә бөгөн!

Хушығыҙ, ҡайындар, хушығыҙ, баһадирҙар!

9

Рейдтың һуңғы аҙымдарын аҙымлап сығып барабыҙ — тиҙҙән сәйәхәт тамам.

Батырҙарҙың баш осонда һуңғы тапҡыр баш эйеп, һалдат вазифаһын улар һуңғы сиккәсә еткереп үтәгән һуғыш яландарынбайҡарға сыҡтыҡ. Әле лә ерҙә иҫке окоптар яра бирсәһеләй йөйләнеп ята. Шуларҙы үҙ баштарынан кисергән ике һуғышсы — урыҫ менән башҡорт: Хәбиров менән Родин — беҙгә һәр таш, соҡор һәм ҡыуаҡлыҡты үҙ ҡулдары менән төртөп күрһәтте.

Петровеньки станцияһының тимер юл полотноһы буйы. Ҡаршыла, ҡул һуҙым ғына ерҙә, Владимировка ауылы.

1943 йылдың 22 февралендә, ошо тимер юл полотноһы аша, дивизияға фашистарҙың ҡорос суҡмары ябырыла. Петровское ҡалаһы яғынан орудиеларының уты тотанаҡлаған хәлдә, бер юлы өс колонна менән һөжүм ҡыла ҡара тәреле танкылар. Бронянарға ышыҡланып, автоматтар менән ҡоралланған күп һанлы пехота килә. Үлемесле суҡмар дивизияны сәсрәтә һуғырға йыйына. Ләкин, генерал-майор М.М. Шайморатовтың ҡәҙимгесә алдан күреүсәнлеге арҡаһында, беҙҙең атлылар өсөн был көтөлмәгән хәл булмай. Хәбиров дивизионының ҡарға күмеп йәшерелгән орудиелары, танкыларҙы яҡын уҡ ебәреп, тура тоҫҡап ут аса. Әммә фашист армадаһы, көбәктәренән ҡурғаш һәм суйын ярсыҡтары яуҙыра-яуҙыра, шыуышыуын ғына белә. Яҡындағы ҡыуаҡлыҡҡа урынлашҡан корпус артиллерияһы ла һөжүм итеүсе немецтарға ут аса. Ике аралағы ҡалҡыу әрәмәлек, корпус тупсыларынан сәпте ҡаплап, тура атырға ҡамасаулай — снарядтар ситкә төшөп ярыла. Фашист теҙмәләре бына-бына алғы рәттәрҙе иҙеп үтер кеүек.

Ошо хәл иткес мәлдә дивизия артиллерияһы командующийы майор Вәлиев үҙенең күҙәтеү пунктынан телефон аша Хәбировҡа өндәшеп, корпус артиллерияһы утын яйға һалыуҙы үҙ өҫтөнә алырға бойора. Капитан Хәбиров телефонсы Сарбаев менән бергә, телефон сыбығы һуҙа-һуҙа, снарядтар сәсрәп тороған текәнән орудиелар урынлашҡан тау башына йүгерә. Дошмандың эре кали брлы пулеметы, пуляларға ҡойондороп эҙәрләй капитанды. Подполковник Фондеранцев менән майор Захаров (полк командирҙары) тулҡынланып күҙәтәләр был эште. Капитандың иҫән-аман үтеүенә бер аҙ инанғас ҡына, Еңел һулап ҡуялар. Һөҙөмтәлә корпус батареяһының мәргән уты дошмандың баш һөйәктәрен дәррәү төйгөсләй башлай — һуғыштың хәл иткес мәлдәренең береһе була был.

Владимировка ҡасабаһы ҡырында, Хәбировтың үҙ дивизионының батареяларында, фашист танкылары менән алыш киҫкенлектең иң Юғары сигенә етә. Урал батырҙары үҙҙәренән күп тапҡырға көслө дошман менән арыҫландарҙай һуғыша. Улар атҡан һайын ҡорос “панцир”ҙарҙың түбәләре әйләнеп оса, ҡара төтөн бағаналары күтәрелә. Беҙҙең яҡта ла Юғалтыуҙар артҡандан-арта. Туп расчеттары һирәкләнеп, бармаҡ менән генә һанарлыҡ ҡала. Ошо мәлдә һуғыш менән идара итеүсе полк командирҙары подполковник Фондеранцев менән майор Захаров иҫ китмәле ҡаһарманлыҡтың шаһиты булалар. Ялҡын-ут араһында, етмеш алты миллиметрлы орудиеның көбәген һөжүм итеп килеүсе ете танкыга тоҫҡап, берҙән-бер тупсы йәнтәслим алыша. Үҙе снаряд килтерә, үҙе

пушканы ҡора, үҙе тоҫҡай, үҙе атып ебәрә. Тирә-яғында снаряд һәм миналарҙан ерҙең аҫты өҫкә килә. Әммә тупсының һәр бер хәрәкәте һәлмәк, үлсәүле. Пушкаһын бороп ҡуя ла, тыныс ҡына, нәүбәттәге фашист танкыһының тимер юл өйөмөнә үрмәләп менеүен көтә. Сәптең кәшкәйеүе була, броняһы йоҡа ҡойолған ҡорһағына тура төбәп атып та ебәрә. Танк юл өйөмөнән, ҡултыҡ аҫтына бысаҡ ҡаҙалған сусҡалай, салҡан әйләнеп төшә. Һуғышсы алдында бер-бер артлы өс "тигр"ҙың һөлдәһе төтәп ултырып ҡала, ҡалған дүртеһе кире боролоп ҡаса. Тиңһеҙ алышта еңеп сыҡҡан был арыҫлан-ир — башҡорт халҡының тоғро улы, аҫкын районы егете лейтенант Хәмит Әүхәтов була.

Дошмандың бер снаряды тура төшөп ярылғас, Әүхәтов, һуштан яҙып, ҡарға күмелгән килеш ятып ҡала. Ул иҫенә килгәндә инде фашистар ҡулында була. Батыр һуғышсыны Петровеньки тимер юл станцияһына килтерәләр, тауар вагонына бикләп, Дебальцево станцияһына оҙаталар. Ләкин юлда барышлай уҡ Әүхәтов вагон иҙәнен ҡуптарып аса ла рельстәр араһына шыуышып төшөп ҡала. Шул китеүҙән ул Украина партизандарына барып ҡушылып, совет армияһы менән ҡабат осрашҡанға тиклем, ҡулынан ҡорал төшөрмәй, фашист илбаҫарҙарына ҡаршы һуғышын дауам итә. Әүхәтов регуляр ғәскәрҙәр сафында оҙон һәм данлы юл үтеп, туғандаш Венгрияның баш ҡалаһы Будапештте азат иткәндә батырҙарса һәләк була. Рейдтан сыға алмай бүленеп ҡалған башҡа байтаҡ атлылар ҙа урындағы партизан әтрәттәрендә көрәшә...

— Фашист танкылары берәм-берәм боролоп ҡасабашлағас, — тип хәтерләй Сәйфулла ағайыбыҙ, Владимировка ҡасабаһы янындағы һуғыш ҡырын беҙгә күрһәтеп, — мин, анау тау итәгендәрәк үҙебеҙҙекеләр ятҡанды Абайлап ҡалып, шунда йүгерҙем. Барһам...

— Унда беҙ, 15-енсе дивизияның эскадроны, ята инек! — тип тулҡынланып ҡысҡырып ебәрҙе хикәйәне иғтибарлап тыңлап барған юлдашыбыҙ Иван Васильевич Родин. — Бөгөнгөләй хәтеремдә: төп имәндәй баҙыҡ кәүҙәле бер капитан үрҙән шинель салғыйҙарын бөркөт ҡанаттары шикелле ялпылдатып осоп төштө... Килеп етте лә: "Алға, Ватан өсөн!" — тип оранлап, беҙҙе дошман теҙмәләре өҫтөнә алып китте...

— "Ура" ҡысҡырып күтәрелдегеҙ, — тип теүәлләне Хәбиров. — Иҫемдә, эргәмдә генә ҡылысын болғап эскадрон командиры килә. Бөгөнгөләй күҙ алдымда: Башы аҡ бинт менән уратып бәйләнгән...

— Иптәш полковник, мин инем шул!..

Теүәл утыҙ йылдан һуң, окопташ ике һуғышсы, икеһе бергә үлемгә ҡаршы барған ҡалҡыулыҡта ҡабат ҡауышып, шатлыҡ ҡатыш хәсрәтле күҙ йәштәрен тамыҙҙылар ҡанлы тупраҡҡа...

Иртәнән кискәсә һуҙылған бәрелештә Петровеньки йүнәлешенән һөжүм итеүсе дошман көстәренең ажары һындырылғас, 23 февралдең төн урталарында дивизия йәнә алға ҡуҙғала. Бер ынтылышта, ике сәғәт самаһы ваҡыт араһында, 1-енсе һәм 2-нсе Юлино утарҙары әрселә фашистарҙан. Һул флангынан хәрәкәт иткән күрше 15-енсе дивизия Фремандировка ҡасабаһын биләргә тейеш була, ләкин көслө ҡаршылыҡҡа юлығып, ҡасаба осондағы совхоз фермаһының таш аҙбарында нығына, шунан тороп ҡанлы

бәрелеш алып бара. Бөтә штабы менән, ғәҙәттәгесә, Башҡорт дивизияһы колоннаһында килгән корпус командиры М.Д. Борисов 1-енсе Юлинола хәрби кәңәшмә йыя. Рейд ваҡытында дивизияның политбүлек Начальнигы вазифаһын башҡарыусы майор Сабир Рәхим улы Ҡадиров үҙе шаһиты булған шул шомло кәңәшмә хаҡында былай тип яҙа (яҙырға ярамағандарын телдән һөйләп йөрөнө): "Корпус командиры кисекмәҫтән дошман фронтын йырабашларға тәҡдим итте. М.М. Шайморатов иһә ашыҡмайыраҡ эш итеү, түңәрәк оборона тотҡан хәлдә, тәүҙә көслө темеҫкенлек (разведка) ебәреп, урындағы хәлде яҡшы аныҡлау, артта ҡалған тылды, артиллерияны килтереп еткереү, шунан һуң ғына хәрәкәт итеү яғында торҙо. Корпус командиры, корпус разведкаһы эшләне, алда юл асыҡ, тип, һаман үҙ фекеренән ҡайтмағас, М.М. Шайморатов, ҙур түҙемлек һаҡлап, икенсе тапҡыр дәлилләне тәҡдимдәрен. "Бер тәүлек ваҡыт бирегеҙ, бөтәгеҙҙе иҫән-һау, юғалтыуһыҙ алып сығам", — тине ул. Ләкин корпус командиры тауышын яман күтәреп (еңелсә иҫерек ине ул – 152-нсе шахтала спирт эскәнен белдек), тупаҫ һүҙҙәр әйтеп, ҡәтғи рәүештә, хәҙер үк йырын яһарға рәсми әмер бирҙе. Юғары Начальнигының әмерен һүҙһеҙ үтәргә тейешле яугир М.М. Шайморатов дивизияға ҡуҙғалырға бойорҙо".

Корпус командиры М.Д. Борисовты, моғайын, Ҡыҙыл Армия көнө байрамын, 23 февралде, утлы ҡулсаны ярып сығыусы герой рәүешендә мотлаҡ "Оло ер"ҙә ҡаршыларға ҡоторҡандыр шайтаны...

1943 йылдың 23 февралендә төнгө сәғәт икеләрҙә гвардиясылар, колонналарға теҙелеп, 2-нсе Юлинонан сығып китте. Төн һалҡын, көнбайыштан һөйәктәргә үтеп асы ел иҫә ине. Тәрән ҡар йырып, ауыл осондағы һирәк ағаслыҡ буйынан һөҙәк һыртҡа күтәрелә башланылар. Һепертмә буран уйнап торған киң ялан, ниндәйҙер шомло ҡуйы ҡараңғылыҡҡа сорналып, йоторға йыйынған аждаһа алҡымы шикелле болара ине. Дивизия колонналары ҡар ярып барҙы лабарҙы. Сәғәт дүрттәр тирәһендә төн ҡараһы яҙылып, офоҡ буйлап суҡайышҡан ҡалҡыулыҡтарҙың түбәләре беленер-беленмәҫ һыҙатланды. Бик ҙур суйын ҡаҙандың ян-тирәһеләй ҡарайып торҙо улар. Шығыр-шығыр аҙымлаған аттар, ҡоралл‌ы йәйәүлеләр, әйтерһең, яртылаш ҡар менән тулы шул ҡаҙандың эсенән баралар ине. Колоннаның тап башында, дивизия штабы тиңәлгән ҡола ялан уртаһында, боронғо ҡарауыл ҡорғанын хәтерләтеп, түңәрәк Уба күренде. Ул, әгәр карта буйынса яҡын ауыл-ҡасабалар — пункттар аша һыҙыҡ үткәреп күрһәтһәк, Ивановка, 1-енсе Юлино, Фремандировка, Штеревка, Малониколаевка һәм ҡабат Ивановка нөктәләрен бергә тоташтырған түңәрәктең уртаһында булыр ине. Гвардия генерал-майоры М.М. Шайморатов, дивизия штабы Начальнигы гвардия полковнигы И.И. Голенов, юлдаштарын бер нисә минутҡа түбәндә ҡалдырып, һыбай килеш ҡорған башына менделәр, тирә-яҡты ентекле күҙәттеләр. Үҙ-ара ни һөйләшкәндәре билдәһеҙ. Әммә шуныһы асыҡ: моғайын, алда ялан бөткән иңкеү ерҙә ҡарайып төҫмөрләнеүсе соҡор-балканы, артта — Хәбировтың дивизионы ҡалған 2-нсе Юлино тарафында пушка гөрһөлдәүҙәрен, Фремандировка йүнәлешендә пулеметтар

тырылдауын, унда Ивановка яғынан күмәк танк моторҙары гөрөлдәүен абайламай ҡалмағандарҙыр.

Ошонан һуң сәғәт биштәр тирәһендә булып үткән драматик ваҡиғаларҙың ҡайһы берҙәрен иҫән ҡалған рейдсыларҙың хәтерләүҙәренә таянып яҙабыҙ.

Шайморатов, түбән төшөп, яңы әмерҙәрен бирҙе. Шуның буйынса дивизия өс колоннаға бүленде. Хәҙер инде урта колоннаның иң башында үҙенең махсус подразделениелары менән ҡуша дивизия штабы, уның артынса уҡ корпус штабы бара. Штабтарҙың һул янынан башында полковник И.И. Голенов торған атлылар, уң яғынан подполковник Г.Е. Фондеранцев башлығындағы йәйәүлеләр (аттары ҡырылып бөткән) янтаҡлап килә ине. Артиллерия дивизионының төп көстәре (капитан С.Х. Хәбиров) байтаҡ артта — 2-нсе Юлино янында тороп ҡалғайны, бер нисә батареяһы ғына колоннала килә ине. Ә корпустың 15-енсе гвардия дивизияһы, корпус командиры әмере буйынса ошо төндә Фремандировканы һуғышып алып, корпус фронт йырып үтер ерҙә һул флангыны Штеревка яғынан ҡапларға тейеш ине. (Ләкин был дивизия, фашистарҙың ҡаты ҡаршылығын һындыра алмай, Фремандировканан кире сигенә лә Шайморатов дивизияһы артынан асылған юлға төшөп йүнәлергә мәжбүр була). Колонналар яланды иңлап үтеп, Широкая балкаһына күҙ күреме яҡынайғас (балка аръяғында совет ғәскәрҙәре ҡулындағы Малониколаевка ҡасабаһы), һул яҡтан — Штеревка тарафынан — яланға һирәмек снарядтар төшөп ярыла башланы. Шайморатов менән Голенов, аттарын туҡтатып, снаряд осҡан яҡҡа ҡолаҡ һалдылар. Уларҙың ҡысҡырып һөйләшкәне бик күп һуғышсыларға — ике яҡ колоннаға ла ишетелеп торҙо.

— Үҙебеҙҙең етмеш алты миллиметрлы пушка, — тине элекке артиллерист Голенов.

— Булмаҫ, — тине артиллерияны бик яҡшы белгән Шайморатов, — уға оҡшамай.

— Шул, минеңсә.

Ошо мәлдә арттан корпус командиры генерал-лейтенант М.Д. Борисовтан ашығыс әмер килеп етте: һис туҡталып тормаҫҡа, Штеревкаға ҡарай боролорға. Ләкин командир менән штаб начальнигы һаман, һағайып, Штеревка яғын тыңлайҙар ине әле. Колонналар ҙа туҡталды.

Яндырай холоҡло ике турат егелгән, айыу тиреһе көпләп йылытылған санаһында, ҡар бураны уйнатып, Шайморатов башлап барған урта колонна янынан корпус командиры М.Д. Борисов саптыртып килеп етте, киҫкен тауыш менән Шайморатовҡа: “Ниңә ҡатып ҡалдығыҙ? Ҡурҡаһығыҙмы?! Алға! Алға!” — тип, ҡулын болғай-болғай оранлап, ылауын Штеревка яғына тура дондорҙо. (Корпус командирының был имәнес ҡылығын уның янында булған, иҫән ҡалған рейдсыларҙың күбеһе асыҡ хәтерләй). Корпустың штаб начальнигы И.Д. Сабуров санала корпус командиры менән ҡушарлап ултырғайны. Улар “дошман фронты аша юл асыҡ — Штеревка үҙебеҙҙең 3-өнсө армия ғәскәрҙәре ҡулында” тип белде, буғай. (Аҙаҡ мәғлүм булыуынса, шул Штеревка юлында фашистар

тоҙағына барып ҡапҡан баяғы ылауҙағы И.Д. Сабуров һәләк була; М.Д. Борисов үҙе, яраланған килеш дошман ҡулына эләгеп, әсирлектә йөрөп ҡайта).Сана күҙҙән юғалды. Шайморатов дивизияны шул корпус командиры менән штаб начальнигы олаҡҡан яҡҡа борҙо ла ҡыҙыу темп менән алға әйҙәне. Күп тә үтмәй, Штеревка яғынан атлыларыбыҙға ҡаршы бөтә төр ҡоралдарҙан шквал ут асылды. Снарядтар колонналар өҫтөнә төшөп шартланылар, аттар, кешеләр барыһы бергә буталды. Шайморатов, тыныслыҡ һаҡлап, полктарҙы һуғышсан тәртипкә теҙҙе, эскадрондар, ҡырға һибелеп, ҡар өҫтөнә ятып, һөжүм итеп килеүсе фашист һалдаттарына ата башланы. Тап ошо мәлдә гитлерсылар йәнә уң флангынан — Малониколаевка яғындағы Пасечная балкаһынан көйҙөрөп ут асты. Ивановка тарафынан, көбәктәрҙән ут ләүкетеп, егерме биш танк үрмәләп сыҡты (Ә беҙҙең артиллерияның төп көстәре артта ҡалғайны...), Фремандировка, 2-нсе Юлино йүнәлештәренән дә төркөм-төркөм автоматсылар күренде. Бер үк ваҡытта Штеревканан ун алты самолет күтәрелеп, дивизияны бомбалар менән төйгөсләргә тотондо. Самолеттар боролоп китеү менән, төрлө яҡтан автомат уттары һиптереп, фашистар тура атакаға ташланды, ике яҡтың да сафтары аралашып, боғаҙға-боғаҙ алышып һуғыш башланды...

“Мин дивизияның махсус бүлек начальнигы майор М.И. Кузнецов менән бергә генерал-майор М.М. Шайморатов тәңгәленә яҡынлағанда, — тип яҙа С.Р. Ҡадиров билдәле иҫтәлегендә, — дошмандың утыҙлап һалдат һәм офицерҙары сорнап алғайны уны. Генералды аралап ут астыҡ. Ләкин тиҙҙән минең дә, Кузнецовтың да аты ҡанһырап ҡоланы. Ҡар өҫтөнә ятып, дошман менән ҡаты һуғыш алып барған арала, көтмәгәндә, генерал да аты өҫтөнән ҡоланы. Был хәл миңә ер тетрәгәндәй тәьҫир итте. Уның аты беҙҙең күҙ алдында йәшендәй елеп үтеп китте. Генералды һаҡлаусы ун ике һуғышсы (командиры — Хәйбулла районы егете сержант Абдрахман Нагаев), генералды ҡурсалап, үлемесле һуғыш алып бара. Беҙ, ни тиклем тырышып ҡараһаҡ та, уларға ярҙам итә алманыҡ, сөнки үҙебеҙ ҙә уратып алынғайныҡ. Ут ҡулсаһына тарыған дивизия, ваҡ-ваҡ төркөмдәргә бүленеп, бик күп урындарҙа үлемесле һуғыша ине. Алдыбыҙҙағы фашистарҙан арынғас, һулдараҡ ҡайнаған алыш ҡосағына ташландыҡ. Бына полковник Голенов, ҡаты яраланып, үлектәр араһында ята. Аяғын ашығыс бәйләнем, ятып торорға ҡуштым. Шундағы иптәштәр йыйналышып, генерал ҡалған ҡалҡыулыҡҡа һөжүм итеп ҡараныҡ, тик һуң ине инде. Унда дошмандың өҫтәлмә көсө килеп урынлашҡан да яңы атака әҙерләй ине. Генералды һаҡлаусы яугирҙәрҙең Нагаевтан ҡала бөтәһе лә һәләк була.

Һуғыш иһә көсәйгәндән-көсәйә генә. Беҙҙән алыҫ түгел урында сержант Садиҡов Ғәтиәт үҙенә ташланған дүрт немецты ҡылысы менән тураҡлай ҙа: “Иптәштәр, алға! Ватан өсөн!” — тип йүгерә. Лейтенант Шәмғутдинов Мөнир, беҙҙең менән бергә килеп еткән батареяһын алға сығарып, һанаулы ғына снарядтарын танкыларға терәп ата. Ахырҙа фашист һалдаттары уратыуында ҡалғас, гранаталар ырғытып, утыҙлабын дөмөктөрә, үҙе лә шул урында ятып ҡала.

1-енсе Юлино яҡлап килгән танкыларҙың береһенә: “Ҡырағай монголдар (беҙҙе улар шулай тип тә йөрөтә ине), әле һуң түгел, бирелегеҙ!” — тип яҙыулы таҡта беркетелгәйне. Әхкәм Зәйнитдин улы Сирбаев (лейтенант Кәримов Зиннур батареяһынан) ҡырҡ биш миллиметрлы пушкаһынан ут аса, алты танкыны бер-бер артлы юҡ итә. Снарядтары ҡалмағас, граната күтәреп, танк аҫтына ташлана...

ТАСС хәбәрсеһе Лотфулла Яҡуповтың күкрәгенән бызырлап ҡан сәптерә. Мине күргәс: “Иптәш майор, ана унда дошмандың ДЗОТ-ы бар, шартлатырға кәрәк уны!”, — тип, хәлһеҙ ҡулын көньяҡҡа иҙәне лә ергә ауҙы. (Яраһын бәйләп, ни булһа ла булыр, тип, атының арҡаһына бәйләп һалдым, уҙып барыусы бер яугиргә ат теҙгенен тотторҙом; Ғәжәп! — шул рәүешле ул рейдтан иҫән сыҡты). Ысынлап та, аҡ ҡар өҫтөнән ҡыҙыл таҫмалай эҙ ҡалдырып, трассирлаусы пулялар оса. Өлкән лейтенант Аҙнабаев Рәшит: “Иптәш майор! Рөхсәт итегеҙ, мин уны хәҙер!..” — тип алға йүгерҙе, дошман уты баҫтырылды. Шуға рухланып, 2-нсе гвардия полкы, полктың парторгы капитан Хәсән Биксурин етәкселегендә, “Алға, алға, дошманға үлем!” орандары аҫтында яңы атакаға күтәрелде. Гвардиясылар башы өҫтөндә дивизияның ҡанлы байрағы елберҙәне. Иртәнге сәғәт биштән етеләр араһында дошман беҙгә алты тапҡыр ябырылды, ләкин һәр юлы, күп көстәрен юғалтып, кире сигенергә мәжбүр булды. Дивизияны юҡ итергә маташҡан дошман маҡсатына ирешмәне”.

Пасечная балкаһы башындағы ҡарлы яланда ошо сикһеҙ драматик ваҡиғалар барған саҡта гвардия капитаны С.Х. Хәбировтың 101-енсе айырым артдивизионының төп көстәре, Владимировка янындағы ҡаты һуғыштан һуң иҫән ҡалған кешеләрен һәм пушкаларын йыйнап, автомашина әрйәһе ултыртып яһалған, ат ҡушарлап егелгән ҙур санаға яралыларын һалып, дивизия артынан ашыға. Ләкин күп аттарҙың ҡырылыуы, иҫән ҡалғандарының да йонсоғанлығы тәрән ҡарҙа тиҙ барырға ҡамасаулай. Етмәһә, 2-нсе Юлиноға тиңәлгәс, Ивановка яғынан ашығып төшөп килгән дошман пехотаһы күренә. Һуңынан асыҡланыуынса, беҙҙең атлылар менән алышыусы ғәскәрҙәренә ярҙамға ебәрелгән автоматсылар батальоны була был. Ваҡ ағаслыҡҡа ышыҡланған беҙҙең артиллеристар, орудие һәм минометтарын тоҫҡап, шым ғына көтөп алалар. Бер-бер артлы гөрһөлдәгән мәргән залптар ер менән тигеҙләй дошманды.

Һүр. 14. Мәңгелек дан

Ҡышҡы суланың ҡараңғылығы тартылып, офоҡ ситтәре ағара башлағас ҡына, Хәбиров баяғы таң-иртәлә Шайморатов менән Голенов булып киткән убаға менеп баҫа. Малониколаевка яҡлап тып-тын ғына үле ялан йәйелеп ята алдында. Тәртипһеҙ һибелгән һоро таптар тимгелләнә. Төшөнөп етә алмай, Хәбировтың үткер ҡарашы һаман дивизияны ҡармай. Бына ул уңдараҡ грейдер юл аша Широкая балкаһыморононда ҡарға ышыҡланып ятҡан тере һуғышсылар төркөмөн күрә, ләкин ҡайһы яҡ икәнен айыра алмай. Ахырҙа дивизионын түңәрәк оборонаға һала. Күп тә үтмәй, генерал-майор Челенконың да Фремандировканан сигенеп килеүсе 15-енсе дивизияһы, Хәбировсылар һалған эҙҙән ҡыуып етеп, батареялар теҙмәһе араһынан грейдер юлды арҡыры киҫеп үтеп, Широкая балкаһына төшөп юғала. Тимәк, Шайморатовтың тәүге йүнәлеше дөрөҫ булған — унда үҙебеҙҙекеләр. Дивизион да ҡуҙғала. Әммә шул арала Хәбировсылар танкылар һөжүменә юлығып, алыш башлана. Командир үҙ ҡулы менән фашистарҙың биш автоматсыһын дөмөктөрөп, шул урында фронт тотҡан һәм яраланған 55-енсе дивизияның артдивизион командиры Иосиф Митрофанович Саверскийҙы яралылар тейәлгән санаға күтәреп һалғас ҡына (1955 йылда улар Порт-Артурҙа осраша, был саҡ И.М. Саверский бригада командиры була), балкаға барып етә, дивизияның төп көстәренә ҡушыла.

Дивизия үлемесле һуғышҡан, генерал Шайморатов ауған ус яҫыһындай асыҡ яланда 749 яугиребеҙ ятып ҡала. Дошман да иҫен йыя алмай, һуғылған бүре кеүек, тәрән өңөнә боҫоп, ҡанлы яраларын ялай. Был иһә беҙҙең иҫән ҡалған һуғышсыларҙы бөтәһен бергә тупларға, һуғышсан хәлгә килтерергә форсат бирә.

Широкая балкаһында кискә тиклем яңынан фронтты йырып үтеү әҙерлеге бара. Дивизияның өлкән офицерҙарынан бында яраланған полковник Голенов Иван Иванович, подполковник Фондеранцев Ефим Григорьевич, майорҙар Вәлиев Мөһип Мөнир улы, Ҡадиров Сабир Рәхим улы, Сарыгин Александр Александрович, Кузнецов Михаил Ильич һәм капитан Хәбиров Сәйфулла Хәлиулла улы бар ине. Подполковник Г.Е. Фондеранцевты бер тауыштан командир, майор С.Р. Ҡадировты комиссар

итеп таныйҙар. Капитан С.Х. Хәбиров алғаҫҡы (авангард) батальон командиры итеп тәғәйенләнә. Һуғышсылар ҡабат берҙәм сафҡа баҫып, емергес көскә әйләнә.

— Иптәштәр, дивизия иҫән, ул көрәштә, немец-фашист илбаҫарҙарын туҡмауын дауам итә. Беҙ Ватандың, башҡорт халҡының ышанысына тап төшөрмәбеҙ! Беҙ еңербеҙ! Үлем немец-фашист илбаҫарҙарына! — ти комиссар С.Р. Ҡадиров, көсәйә барған пулемет тауыштары аҫтында, үҙе һаҡлап алып ҡалған ҡандай ҡыҙыл изге Байраҡты балка буйлап баҫып торған яугирҙәрҙең башы өҫтөндә елберҙәтеп. Ҡаһарман коммунист, политработник, туны аҫтынан йөрәк тәңгәленә урап, дивизияның шул яугир поход әләмен һәм күҙе алдында батырҙарса һәләк булған ун ете коммунистың партия билеттарын дошман ҡулын ҡағылдыртмай алып сыға...

Әлбиттә, беҙҙең ҡыҫҡа ғына сәйәхәтнамәлә Башҡорт кавалерия дивизияһының рейдта күрһәткән батырлыҡтарын да, ҡорбандарын да һөйләп бөтөрмәк мөмкин түгелдер.

1943 йылдың 24 февраль иртәһен дивизия, ут ҡулсаһын күкрәк менән ярып үтеп, совет ғәскәрҙәренең алғы фронт һыҙығында ҡаршылай.

7-нсе гвардия кавалерия корпусының туғандаш Украина ерен немец-фашист илбаҫарҙарынан азат итеү өсөн дошман тылындағы героик эпопеяһы ана шулай тамамлана.
1971, июль.

Һүҙ аҙағы

Өҫтә бәйәнләнгән дәһшәтле ваҡиғаларҙың дөрөҫлөгөн ҡыялатып (косвенно) раҫлаусы һәм күпмелер дәрәжәлә яңы мәғлүмәттәр ҙә өҫтәүсе мөһим ике документты килтерәм.

I. Беҙҙең 16-нсы гвардия кавалерия дивизияһының дошман тылында тәрән рейды осоронда дивизия политбүлек башлығы вазифаһын үтәгән Сабир Рәхим улы Ҡадировҡа шул ваҡыттағы уларға күрше 15-енсе гвардия кавалерия дивизияһы штабының оператив бүлеге башлығы Павел Иванович Макаровтан килгән хат:

"Я пишу свои воспоминания о боевых действиях 15-ой гв. кавдивизии и от имени наших ветеранов дивизии прошу помочь осветить некоторые вопросы как начальника политотдела 16-ой гв. кавдивизии, которая систематически взаимодействовала с 15-ой гв. кавдивизией во многих операциях...

Многое я сохранил у се бя в документах, но вот мне, вернее нам, необходимо осветить взаимодействие с Вашей дивизией по двум вопросам: это по рейду на Донбассе и по освобождению г. Мозыря.

По операции рейда на Дебальцево:

1. На каком рубеже Ваша 16 гв. к.д. действовала при прорыве под Ворошиловградом (Луганск). На сколько я помню, Вы были правее и

впереди 15 гв. к.д., которая действовала уступом сзади 16 гв. к.д. Кратко опишите в общих чертах бой частей дивизии во взаимодействии с нами.

2. На каком рубеже 16 гв. кавдивизия оборонялась в Чернухино. Кто был соседями справа и слева.

3. В каком порядке по отношению к 15 гв. к.д. части Вашей дивизии выходили из рейда из Красного Кута в Юлино — Фремандировка. Если сможете то набросите краткую схемку.

4. При подходе к Юлино наша 15 гв. к.д. шла головной и при каких обстоятельствах 16 гв. к.д. стала выходить в голову 15 гв. к.д., какой полк 16 гв. к.д. шел головным. Очевидно о выходе на голову колонны главных сил корпуса 16 гв. к.д. был приказ комкора, не так ли, и какая задача была поставлена комкором Вашей дивизии как головной. И заодно напишите, почему штаб корпуса и штаб 16 гв. к.д. оказались впереди боевых порядков частей. Напишите, при каких обстоятельствах произошла катастрофа со штабом корпуса и Вашим комдивом и как выбыл из строя комкор генерал Борисов...

Про рейд материалов у нас не сохранилось — мы их сожгли и приходится восстанавливать по памяти...

Остаюсь с уважением к Вам: ***П. Макаров.*** *Город Бобруйск Могилевской области".*

II. Билдәле булыуынса, яҙыусы Йыһат Солтановтың ярҙамында Башҡорт дивизияһы ветераны С.Р. Ҡадировтың "Уттар-һыуҙар аша", "Урал бөркөтө" тигән иҫтәлек китаптары донъя күргәйне һәм уны бик күп уҡыусылар, шул иҫәптән дивизия ветерандары ла, тәбрикләп ҡаршылағайны. Әммә тәүгеһен беренсе башлап "Ағиҙел" журналында сығарғандан һуң *ике йыл үткәс*, көтөлмәгән шикәйәтселәр ҙә табылды һәм шуға бәйле партия Өлкә комитеты беҙҙән, йәғни "Ағиҙел"селәрҙән, рәсми аңлатма яҙыуҙы талап ҡылды. Һәм беҙ шуны атҡарҙыҡ:

"КПСС-тың Башҡортостан Өлкә комитеты пропаганда һәм агитация бүлеге мөдире У.Н. Бакиров иптәшкә.

Һеҙҙең 1974 йылдың 8 майында редакцияға ебәргән хатығыҙға (уға М.М. Халиҡов, М.С. Ильясов, Н.Я. Дауытов иптәштәрҙең "С. Ҡадировтың нәүбәттәге уйҙырмалары" тигән 43 битлек жалобаһы ла теркәлгән) ҡарата түбәндәгеләрҙе хәбәр итәбеҙ.

Әле әйтелгән жалобала 112-нсе Башҡорт дивизияһы ветераны С.Р. Ҡадировтың "Ағиҙел"дең 1972 йылғы 5-енсе һанында донъя күргән "Уттар-һыуҙар аша" исемле фронт яҙмалары тәнҡит күҙлегенән ҡарап анализланған, авторға күп кенә үпкә һәм ғәйепләү һүҙҙәре белдерелгән. Редакция тарафынан былар барыһы ла иғтибарға алынды һәм ихлас тикшерелде.

"Уттар-һыуҙар аша" фронт яҙмаларында, ул ваҡиғаларға өс тиҫтәгә яҡын йыл үткәс яҙылғанлыҡтан, автор тарафынан, ысынлап та, рейд эпизодтарына ҡағылышлы ҡайбер кескәй деталдәрҙә, календарь-көн

иҫәптәрендә һәм төбәктең географик атамаларында, айырым кешеләрҙең исем-фамилияларында, уларҙың тыуған һәм үлгән йылдарында һ.б. теүәлһеҙлектәргә юл ҡуйылған икән. Иҫтәлек һымаҡ ауыр жанрҙа шулай булыу ихтималлығын алдан уҡ күҙ уңында тотоп, "Ағиҙел"дә әҫәрҙең тәүге юлдарында уҡ автор тарафынан уҡыусыларына өндәшелеп, үҙҙәренең фекерҙәрен һәм төҙәтмәләрен яҙып ебәреп, хикәйәләнгән ваҡиғаларҙың теүәллегенә ирешеүҙә ярҙам күрһәтеүҙәрен һорап мөрәжәғәт ителгәйне. Шул иҫәптән был өс иптәштең ғәҙел тәнҡит өлөшө лә әҫәрҙе китап итеп сығарыу алдынан авторға файҙалы буласаҡ.

Шуның менән бергә, "Ағиҙел"дә баҫылған фронт яҙмаларының дөрөҫлөгө ул өс иптәш тарафынан тулыһынса инҡар ителеп, "уйҙырмалар" тип аталыуы менән редакция килешә алмай. Дивизияның тәрән дошман тылына героик рейды тураһындағы әлегәсә билдәле булған был берҙән-бер яҙма-иҫтәлекте ташҡа баҫып сығарырҙан алда редакция ҡулъяҙманы рейдта ҡатнашҡан ветерандар комиссияһының тикшереп хуплау протоколы менән да танышҡайны; бынан тыш, редакция хеҙмәткәрҙәре, хәлдәренән килгәнсә, архивта һәм әҙәбиәттә тейешле тикшеренеүҙәр башҡарҙы, ә икеһе (Й.Ә. Солтанов, Р.Н. Низамов) шул дәһшәтле 1943 йылдың февралендә туғандаш Украина ерендә (Донбасс) дивизиябыҙ хәрәкәт иткән урындарҙа булып ҡайтты. Әҫәр баҫылып сыҡҡандан һуң, журнал уҡыусыларҙың, шул иҫәптән рейдта ҡатнашыусы ветерандарҙың да, хуплау хаттары күп килде. Әйтелгәндәрҙең барыһына нигеҙләнеп, С.Р. Ҡадиров иптәштең "Ағиҙел» баҫып сығарған "Уттар-һыуҙар аша" тигән фронт яҙмаларының, үрҙә әйтелгән ваҡ етешһеҙлектәре булһа ла, рейд барышын дөйөм алғанда дөрөҫ яҡтыртыусы һәм әлегәсә берҙән-бер иҫтәлек икәненә ышанабыҙ. Үкенескә ҡаршы, шуны шиккә алыусы шикәйәтнамә (жалоба) авторҙарының — М.М. Халиҡов, М.С. Ильясов һәм Н.Я. Дауытовтарҙың үҙ намыҫтарына үҙҙәре тоғро булмауҙарын, коммунистик принципиаллекте юғалтыуҙарын әйтергә тура килә. Сөнки улар әҫәр донъя күргәндән һуң редакцияға үҙ ҡулдары менән яҙып ебәргән хаттарында С.Р. Ҡадировтың фронт яҙмаларының дөрөҫлөгө, ифрат та кәрәклеге, үҙҙәре өсөн ҡиммәт булыуы тураһында С.Р. Ҡадировҡа рәхмәттәр аша белдерәләр. Был иһә һеҙ беҙгә оҙатҡан документтың ысын күңелдән төҙөлөүен, дөрөҫлөгөн шик аҫтына ҡуя.

Баш редактор: **Р. Низамов".**

Ҡырҡ өс битлек шикәйәтнамә менән, әлбиттә, фронт яҙмаларының авторын да таныштырҙыҡ һәм ул рәсми рәүештә беҙгә бына нәмә яҙып бирҙе:

"Аңлатма, "Ағиҙел" журналы редакцияһына.

Дивизия ветераны
С.Р. Ҡадиров 70-се йылдарҙа.

(Һүрәттә С.Р. Ҡадиров, ғүмеренең һуңғы йылдары).

Һеҙҙең һорау буйынса, түбәндәгеләрҙе беллерәм.

“Ағиҙел” журналының 1972 йыл май айы һанында “Уттар-һыуҙар аша” тигән иҫтәлектәрем баҫылып сыҡҡайны. Уға рейдта булған сержанттарҙан М.С. Ильясов, Н.Я. Дауытов һәм лейтенант М.М. Халиҡов иптәштәр үҙ фекерҙәрен әйтеп рецензия яҙғандар. Был бик урынлы, сөнки мин үҙ иҫтәлегемдең башында уҡ был хаҡта: “Утыҙға яҡын йыл үткән, рейдҡа ҡағылышлы штаб материалдары үҙ ваҡытында яндырылған. Күп иптәштәр ул ут эсенән сыға алмай батырҙарса һәләк булдылар, шуға күрә үҙ кәңәштәрегеҙ, хәтерегеҙҙә һаҡланған факттар менән миңә, рейд тарихын тулыраҡ төҙөү өсөн, ярҙам итһәгеҙ ине”, - тип мөрәжәғәт иткәйнем. Был саҡырыуға бөгөнгө көндә рейдта ҡатнашҡан 54 иптәш мин яҙғандарҙы ысын күңелдән дөрөҫләп, тулы һәм асыҡ хат яҙып ебәрҙеләр. Улар үҙ хаттарында минең иҫтәлекте бик күп яңы факттар менән байыттылар, шуның өсөн уларға ысын күңелдән рәхмәт.

Ә юғарыла әйтеп үтелгән иптәштәрҙең рецензияһын уҡып сыҡҡас, шуны әйтке килә: ул рейд хаҡында бер төрлө лә белеме булмаған, унда ҡатнашмаған кеше тарафынан тик ниндәй ҙә булһа асыуын ҡандырыу, үс алыу ниәте менән яҙылған, тиәһе килә. Сөнки аҡты ҡара тип яҙмаҫтар ине. Шул уҡ ваҡытта рецензия яҙыусының хәрби белеме лә бик түбән икәне асыҡ күренеп тора. Бының тап шулайлығын иҫбатлау өсөн, түбәндәге факттарҙы килтерәм.

1. Рецензияның авторҙары: “Ҡадиров ниңәлер 58-енсе полк командиры Кусимов хаҡында бер һүҙ ҙә яҙмай”, — тиҙәр. Рейд алдынан һәм рейд ваҡытында (1942 йылдың ноябренән алып 1943 йылдың 25 мартына тиклем) Кусимов дивизияла булманы. Уның урынына килгән капитан Иҙрисов та 1943 йылдың февраль баштарында уҡ яраланып дивизиянан китте. Полк комиссары С. Әлибаев “һалҡын тейҙереп” тылға күсте. Шулай итеп, 58-енсе полк “хужа”лары рейдҡа инеү алдынан таралышып бөттөләр. Икенсенән, рейдта дивизия частәре номер менән йөрөтөлмәнеләр. Полк урынына — “хужалыҡ”. Рейдҡа беҙ ни бары сабельниктарҙан — ике хужалыҡ (беренсеһе Фондеранцев хужалығы, икенсеһе Захаров хужалығы) һәм артдивизион (С.Х. Хәбиров хужалығы) менән индек. 58-енсе полк яугирҙәрен ошо хужалыҡтарға бүлеп бирҙек. Тимәк, рейдта 58-енсе полк айырым булып хәрәкәт итмәне.

2. “Һалдат һәм командирҙарҙы Ҡадиров гвардиясылар тип атамай”.

Был ысынлап та дөрөҫ, сөнки беҙгә гвардия исеме тик 1943 йылдың 14 февралендә генә, Ворошиловградты дошмандан азат иткәс кенә, бирелде. Һәм был хаҡта күпселек рядовойҙар һәм кесе офицерҙар рейдтан

сыҡҡас ҡына белде. Мәҫәлән, дивизияның һуңғы командиры генерал Г.А. Белов үҙенең билдәле китабында: “Вышедшие из рейда полки получили новые номера и стали называться гвардейскими”, — тип яҙа (76-нсы бит).

3. “Артиллеристар, минометчиктар ҡылыс һәм автомат менән һуғышмайҙар”. — Асыҡтан-асыҡ наҙанлыҡ. Беҙ, атырға снарядтар бөткәс, бер килке пушкаларҙы, хатта “катюша”ларҙы ла шартлаттыҡ. Уларҙың расчеттары сабельниктар менән бергә автомат, ҡылыс һәм гранаталар менән ҡырҙылар дошманды. Хатта артдивизион командиры майор Хәбиров та муйынына автомат аҫты.

“Артиллеристар, ветеринарҙар разведкаға барманылар”. — Юҡ һүҙ. Обстановканы белмәү. Өлкән лейтенант Мөғин Нагаев батарея командиры ине. Ләкин Миус йылғаһынан башлап ул һәр ваҡыт алда разведка алып барҙы. Хатта корпустың артиллерия башлығы полковник Голованов үҙе шул разведчиктар менән етәкселек итте. Улар төндә Артемовск ҡасабаһында йоҡлап ятҡан бер батальон фашист танкистарын дөмөктөрҙөләр (ҡулға төшкән танкыларын саперҙарыбыҙ шартлатты).

4. “Беҙ рейдҡа ингәндә Ворошиловградта немецтар юҡ ине”. — Был инде оятһыҙлыҡ. “Беҙҙең Донбасста хәрәкәт итеү Ворошиловградты азат итеүҙе тиҙләтте” (Белов, 77-нсе бит).

5 “Тәрән соҡорҙар, урмандар юҡ ине”. — Бының дөрөҫ түгеллеген иҫбатлау өсөн, корпус командиры М.Д. Борисовтың мәҡәләһе баҫылған “Твои освободители, Донбасс!” тигән китаптың 35-енсе битен асабыҙ: “Порывистый ветер бросает в лицо комья снега. Открытая донецкая степь перерезана *глубокими балками и оврагами.* Сугробы снега в них достигали несколько метров высоты. Часто пушки, автомашины и повозки приходилось вытаскивать на руках. Эти балки часто окружены *лесами и кустарником*”.

6. “Партизандар булманы, дивизия етәкселәре улар һәм урындағы халыҡ менән бәйләнештә булманы”. — Был инде рейд хаҡында бер нәмә лә белмәү һәм рейд батырҙарына туранан-тура ҡара яғыу. Әле әйтелгән китаптың 36, 42-нсе биттәрендә генерал Борисов бына нимә ти: “Уже с самого начала рейда корпус постоянно получал поддержку со стороны местных партизан и стихийно возникающих патриотических групп... Навечно останутся в нашей памяти имена командиров партизанских отрядов А. Пискунова, И. Чернявского и их товарищей”. Беҙҙең капитан Ҡасимов Хәмзә дошман тылында бүленеп ҡалғайны. Ул партизандарҙың бер бригадаһында комиссар булып хеҙмәт итә. Күп наградалар менән ҡайтты, әле лә иҫән, Өфөлә йәшәй.

7. “Рейдта Ҡадиров яҙған ҙур һуғыштар булманы”. — Ҡаты һуғыштарҙа үлеп ҡалған меңләгән батырҙарыбыҙҙы мәсхәрәләү был. Тап ошо хаҡта бит генерал Борисов яҙа: “Ворошиловград противник опоясал тремя мощными оборонительными рубежами, плотно насыщенными войсками. Здесь целый день (8/II) вели упорные бои с 335-ой пехотной дивизией и частями танковой дивизии СС “Рейх” (34-енсе бит).

А.Г. Белов: “За время нахождения в рейде корпус успешно выполнил все возложенные на него задачи. Он нанес значительный урон

62-ой, 164-ой пехотным и 17-ой танковым дивизиям врага, в 36 местах взорвал железнодорожное полотно и три моста,...уничтожил до 12 тысяч солдат и офицеров, 28 танков, 15 складов с боеприпасами, 10 складов с продовольствием, 85 орудий и минометов, 54 пулемета, 152 автомашин, 830 повозок. Разгромил штаб 62-ой пехотной дивизии, освободил из плена 1480 человек и эшелон с гражданским населением. Своими действиями корпус облегчил освобождение Луганска войсками 3-й гвардейской армии, вселил надежду в советских людей, находившихся под гнетом немецких оккупантов, в их скорое освобождение, поднял их на активные действия в партизанских отрядах и подполных группах" (77-нсе бит). Бына ошо героик һәм ҙур һуғыштар хаҡында — улар ҡайҙа, ҡасан һәм нисек ойошторолғанын, кемдәр ҙур батырлыҡ күрһәткәнен хәлемдән килгәнсә асыҡлап яҙам да инде.

8. "Үҙен ҙур күрһәтеү өсөн, подполковник А. Черновты, майор Таицты һәм капитан Зәйнуллинды иҫкә алмай, улар политбүлектә етәкселек эшен башҡарҙылар". — Дөрөҫ, мин улар хаҡында яҙманым. Уларҙы белмәгән, күрмәгән өсөн түгел, ә халыҡ дошмандары менән бер ниндәй ҙә уртаҡлығым булмағаны өсөн. Һалдаттарса күрә алмайым мин уларҙы. А. Чернов, дивизияла комиссарлыҡ вазифаһын үтәй тороп, иң ауыр осорҙа, пленға ҡалыуҙан ҡурҡып, үҙенең офицер кейемен һалды, үлеп ятҡан һалдат кейемен һалдыртып кейҙе. Ғәфү ителмәҫлек енәйәт был. Таиц, политбүлек башлығы урынбаҫары булып та, дошман фронтын өҙөп уның тәрән тылына кергән көндә (7/II) ҡайҙалыр ҡасып сығып китте. Рейдта булманы. Зәйнуллинды иһә хөкүмәтебеҙгә, илебеҙгә асыҡтан-асыҡ хыянат ҡылғаны өсөн дивизияның "смерш"ы ҡулға алып атты. Уларҙы маҡтап С. Әлибаев яҙа, ләкин мин яҙа алмайым. Ул хаҡта шигегеҙ булһа, Өфөнөң госбезопасность комитетына мөрәжәғәт итегеҙ.

Һәм йәнә: "Улар урынына үҙен маҡтай, ул политотдел башлығы вазифаһын үтәмәне". — Был хаҡта күп яҙып тормайым, тик А.Г. Беловҡа һүҙ бирәм: "Тепло встретились мы с полковником И.И. Голеновым, подполковником М. Валиевым, майором С.Х. Хабировым, временно исполняющим обязанности начальника политотдела дивизии майором С.Р. Кадыровым. Когда я был заместителем командира дивизии, Кадыров был заместителем начальника политотдела дивизиии. Высокий, стройный, с выразительными черными глазами, Кадыров был печален; как и все в дивизии, он был удручен гибелью генерала Шаймуратова. Он рассказал, как трудно было выходить из рейда, как



Дорогой
Сабир Рахимович!
Получила Ваше письмо, спасибо что не забываете. Благодарю Вас также за память о Шаймуратове. Дорогой Сабир Рахимович, всех друзей близких Шаймуратова я похоронила, вы учтите что все они были рождены 1898-1899, возраст большой да учесть что были войны, а они все участники, т/к. у Шаймуратова были друзья, только военные. Шаймуратову в 1979 году тоже было бы 80 лет.
В отношении работы Шаймуратова после Китая? работал он в Разведуправлении а кем? секрет. (я не знаю)
Сабир Рахимович, как Ваше личное дела семейные? как чувствует жена? Как Ваше здоровье? где Вы работаете, или на пенсии? у меня со здоровьем, тоже плохо, ноги стали болеть, голова кружится. ведь тоже много лет 70 ступило.
На этом заканчиваю желаю Вам и Вашей жене много здоровья, уважающая Вас Ольга Павловна

Һүр. 15. Генерал Шайморатовтың ҡатыны Ольга Павловнаның
С.Р. Ҡадировҡа рәхмәт хаты. 1978 йыл аҙағы

после гибеля Шаймуратова он и временно вступивший в командование дивизией полковник Г.Е. Фондеранцев наводили порядок, собирали людей, готовили их к выходу... За решительные и смелые действия в тылу врага орденом А. Невского были награждены полковник Г.А. Черников, майор С.Х. Хабиров; орденом Отечественной войны I степени — подполковник М. Валиев, майор С. Кадыров" (78, 80-енсе биттәр). Ошолай

булғас, минең рейдта кем булыуым һәм нисек һуғышыуым тураһында башҡаса яҙып тороуҙың кәрәге юҡ, тип һанайым.

9. “Шайморатов партсобраниела доклад яһаманы, ул политик тәрбиә эше менән шөғөлләнмәне, уның уға ваҡыты булманы. Ысын коммунист, легендар полководец, шуға күрә лә Ҡадиров менән дә мөнәсәбәте яҡшы булманы”. — Уның өҫтөнән көлөү был. Генерал мине хәрби эшкә өйрәтте, тактик белем бирҙе. Бер ваҡытта ла партйыйылыштарҙан ситтә тороп ҡалманы. Иҫ киткес принципиаль кеше ине. Дошман тылында бер ҡалаҡтан ашап йөрөнөк. Булған эске фекерҙәрен һөйләй ине. Шуның өсөн дә мин 1948 йылда Башҡорт АССР-ы Верховный Советы Президиумының ҡушыуы буйынса уның кәүҙәһен эҙләп табып, ҙур хөрмәт менән Петровский ҡасабаһында туғандар ҡәберлегенә ҡәҙерләп күмдем. Уның дошмандары тараткан төрлө ялған хәбәрҙәрҙе алып ташланым. Ул хаҡта кәрәкле материалдар хәҙер ҙә Башҡорт АССР-ы Верховный Советы Президиумында һаҡлана.

“Рейдта политик эш күренмәне”. — Асыҡтан-асыҡ ялған. Политик эштең тейешле юғарылыҡта булыуы арҡаһында дивизия составынан рейдта ғына түгел, унан алдараҡ һәм һуңғараҡ та бер генә лә хыянатсы, ҡурҡаҡ һалдат, офицер булманы (юғарыла әйтеп үткән өс кешенән башҡа). Һәм дивизия составынан ни бары ике кеше ҡыуылды (Ә. Ихсанов — А. Карнайға ҡарата провакаторлығы өсөн штрафротаға тапшырылды, С. Әлибаев милләтселеге өсөн армияның резервына оҙатылды).

10. “Дошман фронтын Башҡорт дивизияһы өҙмәне, уға тиклем 1,5 — 2 километр асыҡлыҡ бар ине”. — Авторҙар үҙ наҙанлыҡтарын үҙҙәре асалар. Һүҙҙе шул уҡ генерал Беловҡа бирәйек:

> *“Утром 7/II соединения корпуса вышли на рубеж, где должен был находиться участок прорыва во вражеской обороне. Но никакого прорыва сделано не было... Только, когда в бой была введена 112-я Башкирская кавалерийская дивизия, противника нам удалось потеснить... В итоге между хуторами Белесклеватым и Лысым образовался прорыв до двух километров. Вот в этот сделанный своими силами прорыв и устремились соединения корпуса” (70-енсе бит).*

11. “Рейдтан сыҡҡанда генерал Шайморатов үлгән, ләкин Ҡадиров үҙе иҫән ҡалған, ул уның менән яҡын дуҫ, фекерҙәш булһа, үҙе үлер ине”. — Был йөмләлә ни тиклем ахмаҡлыҡ! Быны һуғышта булмаған, йәки булып та ситтән ҡарап торған ахмаҡ яҙырға мөмкин. Рецензенттар, генерал Шайморатовтың һәм башҡаларҙың батырҙарса һәләк булыуы менән генә сикләнмәй, уның менән бергә дивизияның башҡа — осраҡлы ғына иҫән ҡалған иптәштәрҙе лә үлтереп бөтөрөргә теләйҙәр. Шул саҡ ҡәнәғәт булырҙар ине улар. Минеңсә, фашистар һүҙе был. Рейдтан сыҡҡандағы ауыр һуғыштарҙан һуң, рейд батырҙарынан — өлкән командирҙарҙан И.И. Голенов (штаб башлығы), Ҡадиров (политбүлек башлығы), Хәбиров (артдивизион командиры), Черников (штабтың оператив бүлек башлығы), М. Вәлиев (дивизия артиллерияһының бүлек башлығы), доктор Сарыгиндар ғына иҫән ҡалды. (Героик үлгәндәр

хаҡында яҙған инек). Рецензенттар уларҙың да үлеп ҡалыуҙарын теләгәндәр. Ниндәй ҡәбәхәтлек! Нафиҡов үлде — комиссары Әхмәтов иҫән ҡалды. Сәйетғәлин Байғужа үлде — командиры Захаров иҫән ҡалды. Бер санала ултырып барған (рейдтан сыҡҡан көндә) корпус штабы башлығы полковник Сабуров үлде — Борисов иҫән ҡалды һ.б. Бындай ахмаҡлыҡты һуғыш хаҡында аҙ ғына белеме булған кеше һис ҡасан да яҙасаҡ, һөйләйәсәк түгел.

Генерал Шайморатов хаҡында ысынбарлыҡты дөрөҫ асып яҙыусылар юҡ ниңәлер. Мин көсөмдән килгәнсә тырыштым, яҙҙым — уны халыҡ белә.

12. "Чернухинола яраланғандарҙы ҡалдырманыҡ". — Бының ялған икәнлеген иҫбатлау өсөн, рецензияға беренсе булып ҡул ҡуйған лейтенант М.М. Халиҡовтың үҙенә һүҙ бирәйек: "Ул рейдҡа хәҙер утыҙ йылға яҡын ваҡыт үтеп китте, күп ваҡиғалар хәтерҙән сығып бара. Һеҙҙең "Ағиҙел" журналының 5-енсе номерында яҙған хәтерләүҙәрегеҙҙе уҡып сыҡтым... *Рәхмәтемде белдерәм һеҙгә...* Дебальцевоны ҡалдырып киткәндә беҙ заслонда инек... Мәктәптә беҙҙең *ҡаты яраланган һалдаттарҙы ҡалдырып китеү* бик йән әрнеткес ҡыйын булды"... (Хатты уҡығыҙ). Ошо хәлде күргән, ошоларҙы дөрөҫ яҙған "алдаҡсы" Ҡадировҡа ҡаршы әтмәләнгән рецензияға ҡайһы ҡулы менән ҡул ҡуйҙы икән?.. Тимәк, уң ҡулы "рәхмәт" әйтә, һул ҡулы ҡаршы килә...

Чернухинола ҡалдырылған — яраланған иптәштәрҙең бер өлөшө (хәлдәренән килгәндәре) улар (Халиҡов әйткән заслондағылар) артынан Юлиноға тиклем килделәр һәм, хәлдәре ауыр булыуға ҡарамаҫтан, ауырыу ҡулдарына ҡайтанан ҡорал алып һуғыштылар. Дивизия прокуратураһының секретаре Йәһүдин дә Чернухинола ҡалдырылғайны. Өс урындан яралы, башы бәйләнгән. Ул да Юлино-I өсөн барған һуғышта ҡатнашты; уң ҡулы хәрәкәтһеҙ, һул ҡулы менән автоматтан фашистарға ут асты... Ләкин һәләк булды. Мин ундай онотолмаҫлыҡ батырҙар тураһында күп яҙыр инем, шулай уҡ башҡалар ҙа яҙһындар.

13. Иҫкәртмә: а) исемдәре әйтелгән рецензенттар бик күп фамилияларҙы — кешеләрҙе бутайҙар. Билдәле, сержанттар үҙ подразделениеһынан, һирәк осраҡта үҙ полкынан башҡаны белә алмай. Миҫал өсөн: Хәкимов Моталлап (былтыр Өфөлә үлде, һуғышта 62-нсе полктың инструкторы ине) менән мин яҙған Хәкимов Салауат хаҡында һүҙ бара. Салауат Өфөлә түгел, ә 1944 йылда Польшала һәләк булды. Һуңғы ваҡытта ул 62-нсе полктың минбатарея командиры ине. Белмәгәнде яҙыу түгел, һөйләргә лә ярамай. "Юрғаныңа ҡарап аяғыңды һуҙ", тигәндәр;

б) Нурғәлиев Хәнәфи. Дөрөҫ, ул 58-енсе полк штабында эшләне. Һәм Сталинград өсөн барған һуғышта һәләк булды. Ләкин мин яҙған Нурғәлиев Хасифулла Фатҡулла улы бөтөнләй башҡа кеше. Рейдҡа тиклем ул 62-нсе полктың штаб башлығы ярҙамсыһы ине. 23/II ул дивизия Байрағын юғары күтәреп алға ташланды;

в) "Кубе наместник түгел, ә рейхскомиссар; Украинала наместник Кубе булманы, ә Кох булды". — Быныһы ла Бөйөк Ватан һуғышы тарихы буйынса наҙанлыҡ. Гитлер осоронда һәр бер наместник шул уҡ ваҡытта

рейхскомиссар ҙа булды. 1941 — 1943 (13/I) йылдарҙа Кубе Украинала рейхскомиссар-наместник ине. Һуңынан, Гитлер бойомо буйынса, ул Белоруссияға күсерелде. Уны шунда 1943 йылдың 28 сентябрендә партизандар дарға аҫтылар;

г) "Боевой листок"ты Ҡадиров яҙған Сөйәрғәлиев сығарманы". — Политотдел аппаратын белмәү, унан алыҫ тороу (сержант). Политотделда тех. секретарь булып бер генә Сөйәрғәлиев эшләне, исеме уның Барый. Һуғышҡа тиклем Дәүләкән педучилищеһенең директоры ине. Һуғыштан һуң Өфө сәнғәт техникумында завуч. Һуңғы ваҡытта филология фәндәре кандидаты. *Белмәгәс, һөйләмә.*

Ошолары менән бергә рецензия яҙыусыларҙың ҡайбер дөрөҫ кәңәштәре лә бар. Шулары өсөн рәхмәтемде белдерәм:

1. Минең иҫтәлектә барлығы 178 кеше хаҡында яҙыла, шуларҙың араһынан 9 иптәштең исем-фамилиялары, тыуған йылдары дөрөҫ яҙылған булһа ла, һуғышҡа тиклемге ауыл, райондары дөрөҫ бирелмәгән (документтар яндырылғайны). Төҙәткәндәре өсөн ҡайтанан рәхмәт.

2. Ҡайбер һуғыштарҙың даталары бер-ике көнгә яңылышыуҙары бик мөмкин. Дошман тылында йөрөгәндә бит бер һуғыш бөтмәй тороп икенсеһе башлана... Бының өсөн дә рәхмәт.

3. Арыҫлан Мөбәрәков халҡыбыҙ ебәргән ҡәҙерле бүләктәр менән беҙгә (Кременчук) килгән булһа ла, беҙҙе көтмәй ҡайтып китә. Алып килгән бүләктәрен алдыҡ, уға ҙур рәхмәт. Әйтелгән сәбәп арҡаһында дивизия ҡаршында ул сығыш яһаманы, уның урынына Бикбулатова Зәйтүнә, Абдулла Шамуҡов, яҙыусы Сәғит Агиш, Ольга Калининалар телмәр һөйләнеләр һәм концерт ҡуйҙылар. Бының өсөн уларға ла рәхмәт.

4. Генерал Шайморатовтың "тыуған көнө" тип минең тарафтан дөрөҫ үк яҙылмаған. Уның менән ултырҙашлыҡ Совет армияһының 25 йыллығына бағышланғайны. Шунда генерал: "Үҙемдең тыуған көнгә тип алынған коньякты Шакиров һаман да һаҡлаған", — тине. Беҙ уның бәхете, Ватан өсөн "бокал" күтәрҙек.

5. "Тельман совхозы түгел, Тельман поселкаһы". — Ул ваҡыт өсөн дөрөҫ.

Шуны әйтергә кәрәк, аҡты ҡара итеп көсәнеп, юҡты бар итеп ваҡыт уҙғарғансы, рецензия яҙыусы "иптәштәр"гә үҙ ваҡыттарын, көстәрен Штеревка ҡалҡыулығында күмелгән 769, Петровскийҙа — 103, Чернухинола — 97, Фащевкала 79 исемһеҙҙең — батырҙарса көрәшеп үлеп ҡалған иптәштәренең исемлектәрен төҙөүҙә ярҙам итһәләр бик файҙалы булыр ине. Әлбиттә, мин яңғыҙым уларҙың барыһын да белмәйем. Мин унан, Украинанан, өҙлөкһөҙ хат, саҡырыу ҡағыҙҙары алам, ләкин ҡарсығымдың хәле ауыр булғанлыҡтан унда бара алмайым.

6. "Рейдта ҡатнашҡан бик күп кешеләрҙе иҫкә алмаған". — Был да дөрөҫ. Сөнки журнал редакцияһы бик аҙ урын бирә. Мин яҙғандарҙың 57 процентын киҫтеләр. Алған хаттарға таянып алдағы көндә (көсөм-ҡеүәтем етһә) өҫтәп яҙасаҡмын.

Рецензия авторҙарына шуныһы өсөн рәхмәт: улар минең әҫәр менән ҡыҙыҡһынғандар, уҡығандар. Ләкин киләсәктә ундай рецензия яҙғанда

ижадсылар араһында ҡулланылмай торған жаргондарҙы файҙаланмаҫка кәңәш итәм. Был бит әҙәпһеҙлек, наҙанлыҡ. Йәнә:

1. Рейдта булып та, минең иҫтәлекккә ҡарата үҙ фекерҙәрен яҙған иптәштәрҙең хаттарынан өҙөктәрҙе теркәйем.

2. М.М. Халиҡов иптәштең элек миңә ебәргән хатын теркәйем.

3. Рейдта ҡатнашҡан иптәштәрҙең иҫтәлек баҫылғанға тиклем үк уны баҫырға тәҡдим итеп яҙған ултырыш протоколы журнал редакцияһында.

Һеҙҙе ихтирам итеп: **С. Ҡадиров.**
17 май 1974 йыл".

2. ЙЫРҘАШТАРЫМ

****

Яңы Юл — оло юл

(“Ағиҙел” журналының 60 йыллығына мәҙхиә[3])

1

Донъяла мәңге ҡалыр эш —
Донъяны матур төҙөгән,
Бағты мәңге биҙәгән —
Ул да булһа яҡшылыҡ.
Күккә лә осмаҫ — яҡшылыҡ,
Һыуға лабатмаҫ — яҡшылыҡ,
Утҡа ла янмаҫ — яҡшылыҡ,
Телдән дә төшмәҫ — яҡшылыҡ.

“Урал батыр”.

Һин юҡ саҡта ла беҙ бар инек,
Беҙ барыһын юҡтан бар иттек.

Билдәһеҙ шағирҙан.

Журнал уҡыусыларыбыҙ өсөн айырыуса ҡыуаныслы көн бөгөн.

Бөгөн шундайынбайрам: иң-иң нескә хистәрҙе лә тартынмай әйтеп була.

Халҡыбыҙҙың аҡ күңеленән урғылып-ташып торған аҡыҡ-ынйыларҙы аҡ донъяға олғаштырып, үҙенең ап-аҡ ҡанат-биттәренә аҡ нур итеп теҙеп барыусы ғәзиздәрҙән ғәзиз журналыбыҙға теүәл алтмыш йәш бөгөн.

Халыҡтың даһи хыялы яралтмыш Урал батыр ҡаһарманлыҡтарын унан да шәберәк итеп бойомға ашырған, батша Рәсәйенең барлыҡ ҡара көстәрен, дейеү-аждаһаларын Ленин сүкегән алмас ҡылыс менән тар-мар итеп тураҡлап, Октябрь таңын аттырған, иҙелгән бөтә ил өҫтөнә Йәншишмәне уртлап бөркөп ебәргән бөйөк Ленин партияһы юлында — Яңы Юлда — иң бәхетле сабый балалай яҡты донъяға килеп, иле менән

---

[3] Был мәҡәлә 1983 йылда тантаналы байрам ителергә тейешле «Ағиҙел”дең 60 йыллыҡ юбилейына арнап яҙылған булған, ләкин заманына хас сәбәтәр арҡаһында байрам тыйылып, журналда сыҡмай ҡалған (һәм ошоғаса бер ҡайҙа ла ташҡа баҫылмаған). Матбуғат һәм әҙәбиәтебеҙ тарихына бәйле ундағы мәғлүмәттәр бөгөн дә, “Ағиҙел”ебеҙҙең меңенсе һанын билдәләгәндә лә уҡыусыларыбыҙ өсөн ҡыҙыҡлы булмаҡсы. Шул осорға хас ҡайһы бер сәйәси акценттар, тарихилыҡты һаҡлап, үҙгәрешһеҙ ҡалдырылды.

ҡуша талпынып үҫеп, утын-һыуын бергә кисеп, ололарҙан оло юл үткән иң оло әҙәби журналыбыҙға тулы алтмыш йәш бөгөн.

Совет Башҡортостанының мәңге алсаҡ күгенән, мәңге уңдырышлы тупрағынан, мәңге саф һыуҙарынан үҙенә төҫ-ырыҫ алған, ҡуш ҡанатын яҙа киреп мәңгелектең аҡ юлында алҡынып барған “Ағиҙел”ебеҙгә алтын алтмыш йәш бөгөн.

Ғәзиздәрҙән ғәзиз, сөнки халыҡтың күп мең йыллыҡ тарихында күҙ текәп көтөп алған беренсе хыял емеше — *үҙ телендә* сыҡҡан әҙәби-нәфис һәм ижтимағи-сәйәси баҫмаһы булды ул.

Иң оло, сөнки ул йәмәғәт фекеренең иң оло осош осоронда тыуҙы, шул фекерҙең кәүҙәләнеш, тупланыш урыны булды; коммунистик оло юлдан барған оло йөрәкле халҡыбыҙҙың бер үк ваҡытта төп юлъяҙмаһы ла, партия һыҙған төп йүнәлеште күрһәтеүсе компасы ла булырҙай дәү матбуғат органы ул.

Мәңгелектең аҡ юлында, сөнки алҡынып талпыныштары үткәндәргә кире әйләнеп ҡайтыу өсөн түгел, хатта бөгөнгөнөң дә тымыҡ мөйөштәрендә уңыш һанап ултырып ҡалыу өсөн түгел, ә өмөтлө киләсәккә ҡарай төбәлгән. Шул оло юлдан юл ярып барыу — “Ағиҙел”дең бурысы булып ҡала ла.

Туған журналы “Ағиҙел”дең һәр яңы һанын ҡулына алған һайын, уҡыусы тәүҙә уның тышлығына иғтибар йүнәлтәлер, тормошобоҙ кеүек аяҙ зәңгәр фонда йөрәк кеүек типкән тере тулҡындарға, мәңге талыҡмаҫ толпарлы Салауат батыр силуэтына, йәйә-яндай рухын киргән аҡ ҡанатлы аҡсарлаҡҡа ҡарап уйланып алалыр. Шул уҡ ваҡытта былар бөтәһе уның өсөн ябай ҙа, тәбиғи ҙә кеүек. Ысынлап та: башҡорт халҡы борон-борондан тормошоноң болотһоҙ күктәй күркәмлеген, толпар менгән баһадирҙарының еңелмәҫ ғәйрәтлеген, кеше рухының һынмаҫ ҡанатлы булыуын һәм быларҙың һәммәһенең дә халыҡтың ғәмәли яҙмышына, ҡайнап торған тормош тулҡындарына бәйле хәрәкәтен хыялланып алға һөргән түгелме ни — үҙебеҙ өсөн ошо ябай нәмәләрҙе нисек ябай күрмәҫһең! Һәм йығылған баһадирҙарҙы ҡабат толпарға күтәреп мендереүсе, һынған ҡанаттарҙы яңынан төҙәтеп-кирҙертеп осортоусы, илдең ҡанһырап ҡупҡан ере менән күген ҡабат сикһеҙ мәңгелеккә тоташтырып, халыҡтың үҙенә ҡайтарып биреүсе бөйөк Октябрь еңгәндән һуң быларҙың барыһын нисек тәбиғи тип әйтмәҫһең дә күрмәҫһең!

Башҡорт уҡыусыһы бөгөн ана шулай, уны мең йыл буйына почта аша яҙҙыртып, рухланып уҡып килгәндәй, “Ағиҙел”ен тәбиғи генә ҡабул ҡылып ала ҡулына, уны аҡсарлаҡ ҡанаттарылай алдына асып һалып, сихриәтле донъя ҡосағына сума. Мауыҡтырғыс талмаҫ ҡанаттар уҡыусыны ете йәйғор төҫөн бөркөп балҡыған сағыу күңел йыһанының тулы хужаһы итә. Быныһы ла бик тәбиғи, сөнки Ленин партияһы тырышлығы менән 1923 йылдың мартында тәүге һаны донъя күргән “Яңы юл”дан башлап бөгөнгө “Ағиҙел”гәсә үтелгән алтмыш йыллыҡ оло юл дәүмәлендә мәшһүр журнал башҡорт йәмәғәтселек тормошоноң һулҡылдап типкән ҡан тамыры, иң үҙәк артерияһы, икенсе төрлө әйткәндә, ил күңеле ярҙарынан алҡыныусы Ағиҙел йылғаһы булды. Ә ғәмәлдә иһә барлыҡ

йылғалар ҙа Ағиҙелгә ҡоя, барлыҡ күңел хазиналары ла "Ағиҙел" журналы аша ағыла...

Башҡорт телендә иң тәүбашлап (хатта мең-мең йылдар элек!) ижад ителгән әҫәрҙәрҙән алып бөгөнгө иң һуңғыларынаса һәммәһе тиң алҡын "Ағиҙел" бишегендә тирбәлеп үткәс кенә, уҡыусыға бер ҡат барып еткәс кенә китап рәүешендә сығып, тел һәм әҙәбиәт факторы булараҡ килә донъяға. Халҡыбыҙҙың ижтимағи-сәйәси тормошоноң, тарихының, мәҙәниәтенең иң әүҙемәл мәсьәләләре күбеһенсә "Ағиҙел" биттәренә дөрөп инә лә шуның аша йәмәғәт фекере алдына ҡуйылып хәл ителә. "Ағиҙел" журналы башҡорт әҙәбиәтенең Мәжит Ғафури, Дауыт Юлтый, Афзал Таһиров кеүек беренсе быуын совет яҙыусыларынан алып утыҙынсы йылдарҙың әҙәби гвардияһы Ғәйнан Хәйри һәм Имай Насири, Ғәлимов Сәләм һәм Сәғит Мифтаховтарғаса, Бөйөк Ватан һуғышы һәм унан һуңғы осорҙа патриотик ижадтары айырыуса сағыу балҡып киткән Рәшит Ниғмәти һәм Сәйфи Ҡудаш, Баязит Бикбай һәм Мостай Кәримдәрҙән алып бөгөнгө көндөң иң әүҙем һәм талантлы йырсыларынаса булған аралағы бөтә сағыу талант эйәләрен үҙенә ылыҡтырып, үҙ тирәһендә көслө авторҙар коллективы итеп туплап алып килде, әҙәбиәт һалдаттарын Коммунистар партияһы, Совет хөкүмәте алдыбыҙға ҡуйған мөһим бурыстарҙы үтәү өсөн алғы фронт һыҙығына сығарып теҙеүҙә туранан-тура ҡатнашты. Башҡорт совет әҙәбиәтенең иң күренекле вәкилдәре, шул иҫәптән халыҡ шағирҙары Мәжит Ғафури, Рәшит Ниғмәти, Мостай Кәрим, Сәйфи Ҡудаш; Салауат Юлаев исемендәге дәүләт бүләге лауреаттары Һәҙиә Дәүләтшина, Зәйнәб Биишева, Баязит Бикбай, Назар Нәжми, Хәким Ғиләжев, Ким Әхмәтйәнов, Фәрит Иҫәнғолов; Ғәлимов Сәләм исемендәге комсомол бүләге лауреаттары Абдулхаҡ Игебаев, Әнүәр Бикчәнтәйев, Рауил Бикбаев, Шәриф Бикҡол, Әсғәт Мирзаһитов, Салауат Галин, Әнғәм Атнабаев һәм башҡалар үҙҙәренең ҡәләмдәрен "Ағиҙел" биттәрендә сарлап үткерләнеләр, иң яҡшы әҫәрҙәрен тәүбашлап ошонда баҫтыртып сығарҙылар; ә шул шанлы гвардияның башында барған халыҡ шағиры Мостай Кәрим бер түгел өс Юғары бүләк — Салауат Юлаев, РСФСР һәм СССР дәүләт бүләктәре лауреаты булып һүнмәҫ дан ҡаҙанды. Был әҙиптәрҙең "Ағиҙел"дә йәшәү һәм йәшнәү хоҡуғы яулаған бөтә күркәм әҫәрҙәре һуңынан китап булып, республика һәм бөтөн Союз китапханаларының алтын фондын тәшкил итте, миллионлаған уҡыусыларҙың даими күңел юлдашына әүерелде. Бөгөнгө көндә республика театрҙарында шаулап барған сәхнә әҫәрҙәренең, филармония концерт залдарында, эстрадаларҙа, һәүәҫкәрҙәр башҡарылышындағы клубтарҙа яңғыраған, радио һәм телевидение аша эфирға сыҡҡан әҙәби һәм музыкаль программаларҙың, тамашасыларҙың күҙ яуын алған сәнғәт мөғжизәләренең дә күбеһе киң ҡатлам халыҡҡа табан тәүге аҙымдарын "Ағиҙел» ағымына ҡушылып башланы, шуның аша күңелдәргә тиҙерәк һәм нығыраҡ үтеп инде. Тимәк, "Ағиҙел" журналы алтмыш йыл буйына нәфис һүҙҙең, башҡорт теленең һәм әҙәбиәтенең йәшәү нормаларын, башҡорт мәҙәниәтенең эстетика ҡағиҙәләрен тыуҙырыуҙа, асыҡлауҙа һәм раҫлауҙа ла иң хәл иткес роль уйнаны, тиһәк тә яҙыҡ булмаҫ. Биш-алты

тиҫтә йыл эсендә ул, “Ағиҙел”, иң беренсе ташҡа баҫҡан башҡорт алфавитынан алып, ташҡа баҫылып сыҡҡандан һуң үҙенә икенсе үлемһеҙлек яулаған бөйөк халыҡ эпосы “Урал батыр” китабынаса, *башҡорт* яҙыусыларының иң оҙаҡ йәшәрҙәй аҫыл китаптарынаса булған арауыҡта туған әҙәбиәт ниндәй хикмәтле юл үтһә, һәм башҡорт мәҙәниәте шул биш-алты тиҫтә йыл эсендә ҡурайҙан милли операғаса, балаҫ һәм келәм биҙәктәренән — профессиональ рәссамдарының илгә киң танылған тәрән йөкмәткеле полотноларынаса ниндәй хикмәтле юл үтһә, ул, “Ағиҙел”, ошо хикмәттәрҙең бөтәһен дә баһадирҙай үҙ иңендә күтәреп-сағылдырып барҙы, үҙе лә шул бөйөк Октябрь тыуҙырған, партияның ленинсы милли сәйәсәте биргән иң хикмәтле емештәрҙең береһе булып йәшәп килде һәм килә. Шуға күрә лә хәҙерге уҡыусы был мөғжизәне үҙенән-үҙе аңлашылған, үҙенән-үҙе йәшәргә тейешле булған бик тәбиғи тәбиғилек, бик ябай ябайлыҡ итеп ҡабул ҡылыуы менән хаҡлы.

Ләкин бөгөнгөнөң ошо күҙгә күренеп бармай торған бөйөклөгөн төшөнөү өсөн, һәр беребеҙгә аҙыраҡ «ғалим” булырға, өйрәнелеп кителгән “ябай” һәм “тәбиғи” күренештәр тирәһендә айырымыраҡ туҡталып, фекер йөрөтөп ҡарарға, күнегелгән факттар артындағы тәрән-төпкөл бәйләнештәрҙе юллап фәһем алырға ла кәрәктер.

Алтмыш йәш, алтмыш йыл...

Быуатты быуаҙыта торған, ирҙәрҙе ил ағаһы яһай торған иллене уҙған алтмыш. Шул уҡ ваҡытта иҫкән елдәй, аҡҡан һыуҙай, оҫҡан төтөндәй бер эҙ ҡалдырмай үтеп китеүе лә ихтимал алтмыш...

Алтмыш та алтмыш тип йөрөй торғас, ябай ғына алты һымаҡ күнегелеп тә китә торған алтмыш. Ләкин күнегелгән алтмыштар араһында ла ергә һәм халыҡ күңеленә мәңгелек ут менән яҙылғандары була.

Бына бер “күнегелгән” факт: беҙ һуңғы ваҡытта республикала бер-бер артлы алтмыш йыллыҡ юбилейҙар теҙмәһен байрам итәбеҙ: Октябрҙең алтмыш йыллығы, Башҡорт АССР-ының алтмыш йыллығы, СССР-ҙың алтмыш йыллығы... Һәм бына аҙаҡ килеп, “Ағиҙел” журналының алтмышы. Уларҙың һәр береһенең шанлы йәше үҙенә күрә айырым бер мөҙҙәттә тулғанлығы, байрамға байрам ҡатар килмәгәнлеге, ҡот өҫтөнә ҡот ҡына өҫтәгәнлеге лә мағлүм беҙгә. Ә бына ошо даталарҙың бер-береһенә эске мөнәсәбәтен, ниңә фәҡәт ошо тәртиптә, ә башҡаса килеүе мөмкин түгеллеген һәммәбеҙҙең дә етди уйлап ҡарағаны бармы икән?..

Һәм икенсе факт: ниңә беҙҙең барлыҡ милли ҡаҙаныштарыбыҙҙың сәскә атыу фазаһы тап һуңғы илле-алтмыш йыллыҡҡа тура килгән?

Ә бит донъялағы бер генә милләттең дә, милли мәҙәниәттең дә тылсым таяғы һелтәп кенә бер көндә, йәки иң күбеһе илле-алтмыш йылда юҡтан бар ителмәгәнлеге билдәле.

Ни өсөн һәм ни өсөн?..

Береһенән береһе үҫеп сыҡҡан баулы быуындар теҙмәһе рәүешендә күҙ алдына баҫтырһаҡ ҡына, беҙ ул бөйөк даталарҙың асылын аса алырбыҙ. Бөгөн бөтә республика юбилейын тантаналы билдәләгән “Ағиҙел” журналының туған халыҡ тормошонда ниндәй урын тотоуын,

ошо датаның ниндәй баһалап бөтөргәһәҙ оло әһәмиәткә эйә булыуын аңлап-төшөнөү өсөн кәрәк был.

2

Борон-борон борондан,
Кеше-маҙар булмаған,
Килеп аяҡ баҫмаған
(Ул тирәлә ҡоро ер
Барын һис кем белмәгән),
Дүрт яғын диңгеҙ уратҡан
Булған, ти, бер урын...

“Урал батыр”.

Ҡулыма алған был күмер —
Йортобоҙҙан ҡалған күмер ул,
Утҡа ташлаған сабый балалай,
Һулҡылдап янған күмер ул.
Ҡулымды көйҙөргән шул күмер
Эшебеҙгә геуаһ булһасы, —
Күмергә әйләнгән күк үлән
Юлыбыҙҙа түшәк булһасы, —
Бөркөттәй күктә осорға,
Балыҡтай һыуҙа йөҙөргә,
Боландай ҡырҙа елергә —
Теләгебеҙ шул булһасы!

Салауат Юлаев.

Һарғайтты аҡ йөҙөмдө ҡара таш өй,
Ниҙәр күрмәй ат менән әҙәм башы!
Ҡаңғырҙы башым минең тауыш менән,
Яҡшының ямандан юҡ айырмаһы.

Мифтахитдин Аҡмулла.

Айға үрләп, нурҙа уйнап,
Күкрәгемде нурланым.
— Ит ғәфү, әй, Ай, — тинем мин, —
Нурҙарыңды урланым.
— Һис зарар юҡ, ал, — тине Ай, —

Ал да сәс нур халҡыңа.
Мин дә бит төн хаҡына
Алдым Ҡояштың нурҙарын.

Шәйхзада Бабич.

Белмәй әйтмәгәндәрҙер: милли әҙәбиәттәрҙең тыуыу тарихы — оло йылғаларҙың тыуыу тарихына ике тамсы һыуҙай оҡшаш.

Йылғаларҙың тыуыуы өсөн тәүҙә ер һәм күктең булыуы кәрәк. Йәшен һәм күк күкрәүҙәрҙән, вулкан һәм ер тетрәүҙәрҙән донъяларҙың айҡал-сайҡал килеп тороуы кәрәк. Офоҡтарҙы берсә сәмүм еле көйҙөрһә, берсә ыҙғар буран туңдырыуы, берсә ҡойоп ямғыр яуһа, берсә күмеп ҡар ишерелеүе, берсә балҡып нәжәғәй уйнаһа, берсә дөрләп һаҙағай ҡабыныуы, берсә көләп Ҡояш сыҡһа, берсә илап Ай ҡалҡыуы, берсә ағарып көн алланһа, берсә ҡарайып төн ялланыуы кәрәк. Донъялағы илауҙы ла, көлөүҙе лә бер юлы үҙендә кәүҙәләндергән әсе һәм татлы күҙйәш тамсылары ярала шул мөҙҙәттә.

Тамсылар бер туҡтауһыҙ ергә һеңә, һеңә; миллионлаған, миллиардлаған тамсылар бер өҙлөкһөҙ һеңә ергә. Ер барыһын да күтәрә, үҙенә йыя. Тәрән ҡатламдары уның тамсыларға тулышып, ер аҫты күлдәре, диңгеҙҙәре, даръялары барлыҡҡа килә. Был даръялар тынғы бирмәй ер йөрәген ҡалтырата. Шишмәләр булып тишеп сыға ер йөрәген.

Ер йөҙөндә ваҡ шишмәләр серәкәй кеүек кенә селтерәп ағып китә. Уларҙың күбеһе сыҡҡан урында уҡ әхүәле бөтөп ҡорой, күбеһе юлда эҫе сүлгә, тәрән ярлауыҡҡа убылып юҡҡа сыға. Иң мулдары ғына оҙон юл уҙып, бер-береһе менән ҡауышыу, күмәкләшеү, бер йүнәлешкә ҡарай дөрөү бәхетенә ирешә. Иҫәпһеҙ күп тамсыларҙан, шишмәләрҙән, йылғаларҙан иҙел барлыҡҡа килә, шул ерҙең барлыҡ һыуҙарын бергә йыйған аҡ сабаҡлы, аҡсарлаҡлы Ағиҙел булып йәйрәп ағып китә ул.

Әммә Ағиҙел булмаҫтан элек үк әле, ерҙе Боҙлоҡ дәүерҙәре ҡатырып, йылғаларҙың бөйөк тупланыш барышын тәүге тамсылар хәлендә үк туҡтатып, туңдырып тороуы ихтимал. Ағиҙел булғас та әле уға ҡойоусы шишмәләр һәм йылғалар боҙ ҡыҫымынан шартлап юҡҡа сығыуы, быҒауланыуы мөмкин. Хатта Ағиҙел үҙе үк миҙгел-миҙгел туңып тороуы ихтимал. Эйе, милли йылғаларҙың яҙмышы милли әҙәбиәттәрҙеке кеүек.

Бөгөн күкрәп сәскә атҡан башҡорт совет әҙәбиәте, яҙма әҙәби теле, мәҙәниәте әгәр үҙенең тәүбашын шул тәүге тамсылар, йылғалар кеүек тәрән быуаттар төпкөлөнән үк алмай, ни бары совет осоронда ғына бер көн эсендә юҡтан бар ҡылынды, тиһәк, был уйламай ашығыс әйтелгән һүҙ хата булыр ине һис шикһеҙ. Шуның менән беҙ халыҡ хәтлем халыҡты ғәйепһеҙгә кәмһеткән һәм бөтә халыҡтар — шул иҫәптән башҡорт халҡы тарихындағы бөйөктәрҙән бөйөк, изгеләрҙән изге Октябрь революцияһы эшен үҙебеҙ ҙә абайламаҫтан үтә ябайлаштырып, үтә кесерәйтеп ҡалдырған булыр инек. Юҡ, Бөйөк Октябрь социалистик революцияһы халыҡтарҙың мәҙәниәттәренең тәрән тамырҙарын киҫеп көршәккә

ултыртыу менән шөғөлләнмәне. Ҡояш һәм дым күрмәйенсә һулып барған, һүнеп барған гөлдәрҙе ул ҡороған ҡыуботаҡтарынан ҡотҡарып, үҙенең йылы һулышын туң тупраҡҡа өрөп, унда тотҡарлаған меңәр йыллыҡ Боҙлоҡтарҙы иретеп, өр-яңынан күкрәтеп сәскә аттырҙы. Шуға тиклем булған башҡорт хәлен аҙмы-күпме аныҡ асыҡламаһаҡ, беҙ Октябрь ҡулы иккән был тарихи игелектең тулы ҡиммәтен дә тейешле баһалай алмайбыҙ һәм, әлбиттә, “Ағиҙел”дең аҡ һыулы инеш баштарына ла барып етмәйбеҙ. Ә бит төптән тибеп аға ул гүзәл Ағиҙелебеҙ.

Ысын-ысындан иң боронғо башҡорт тормошоноң энциклопедияһы тип аталырға хаҡлы, йәшәп килеүенә меңәр йылдар үткәс тә, ошо көндәрҙә лә әҙәби телебеҙҙең саф шишмәһе булып ағылған салдарҙан сал “Урал батыр” эпосының, шул баһадир ҡомартҡының уҡ әле тәүге юлдары: “Борон-борон борондан, кеше-маҙар булмаған (беҙ был урында “һәм шағир-маҙар булмаған” тип өҫтәргә баҙнат итәбеҙ! — Автор), килеп аяҡ баҫмаған... булған, ти, бер урын”, — тип башланып китешендә генә лә оло бер мәғәнә бар. Һәр халыҡтың ҡомартҡыһы бөтөнләй буш урында юҡтан бар булып түгел, ә үҙенә тиклемге оҙай дәүерҙәрҙең ижад емеше булараҡ донъяға килеүен иҫләһәк, тимәк, эпостағы һис кем “аяҡ баҫмаған урын” — “Урал батыр»ғаса дәүерҙәрҙән дә алдараҡ имеш. Ә инде “Урал батыр”ҙан ҡала осорҙарҙа иһә — халыҡтың тап бөгөнгөләй саф әҙәби телдә килеп еткән ифрат бай йөкмәткеле һәм күп һанлы ауыҙ-тел һәм ҡайбер яҙма ижад өлгөләре шаһит быға — халыҡтың үҙ-үҙен танып-белеү аңы ла, эстетик кисерештәрен художестволы образдар аша донъяға фаш итеү йәғни ижадлыҡ ҡеүәһе лә күкрәгендә борондарҙан уҡ тулышып тормаған түгел, торған. Ул шишмәләр берәм-һәрәм урғылып, боҙ ҡатламын ярып сығып ағылып та китә торған булғандыр. Кем белә, бәлки, беҙҙең эраның беренсе яртыһында тәүбашлап башҡорт еренә аяҡ баҫҡан мәғрифәтле ғәрәп сәйәхәтсеһе Ибн-Фаҙланға башҡорттоң мәшһүр “Сыңрау торна” легендаһын һөйләп яҙҙыртҡан билдәһеҙ башҡорт үҙе үк шундай шөңгөр шишмәләрҙең береһе, сәсән-шағир булғандыр? Ун беренсе быуаттың атаҡлы ғалимы, төрки телдәр һүҙлеге “Диван луғат-ат-турк”тың бөйөк авторы Мәхмүт Ҡашғаригә башҡорт теленең тәбиғәте, башҡа төрки телдәр араһында уның тотҡан урыны тураһындағы мәғлүмәттәрҙе лә, бәлки, халыҡтың шундай уҡ тере шишмәләренең береһе еткергәндер? Кем белә, бәлки, ун өсөнсө быуаттың энциклопедисы Яҡут әл-Хәмәүи алыҫ Хәләб ҡалаһында (хәҙерге Сирияла) мәҙрәсәлә осратып һөйләшкән “Әл-Башғордиә” (Башҡортостан) шәкерттәре лә халыҡ урғылтҡан шишмәләрҙең иҙелгә тартылып барып сыҡҡан йәнле-шөңгөр остарылыр? Күпме шундай саф шишмәләр һәм йылғалар Ағиҙелен таба алмайынса һеңеп, юғалып ҡалмаған?..

“Урал батыр” ише бөйөк эпостар тыуҙыра алған халыҡ яйы килгәндә ҡулына ҡәләм тотоп яҙырҙай әҙиптәр ҙә бирә алыуҙан мәхрүм булған икән тип уйларға урын юҡ. Ер-әсәнең ҡөҙрәте киң — ул үҙенең шишмәләрен мәңге күкрәгендә биләп ятҡырмай. Мәсьәлә шунда ғына: улар урғылып сыҡҡандан һуң бергә ҡушылып ағырға табылғанмы төп үҙән?

Ә милли әҙәбиәт тыуһын өсөн төп үҙән — яҙма әҙәби тел икәне билдәле: шунда ҡойоп ҡына шишмәләр һәм йылғалар Ағиҙелгә әүерелә. Яҙма әҙәби тел юғында халыҡ күңеленән тиртҡән ижади көстәр ҡом сүлендә йә боҙлоҡта сарсап-сәсәп юғала, юғалмағандары башҡа үҙәндәргә ҡойоп олаға, халыҡтың тик мәңгелек хәтер һандығы бикләп һаҡлаған, ергә яҙма-ярҙар менән беркетелмәгән сикһеҙ күңел даръяһы — ауыҙ-тел ижады ғына шул халыҡ исеме менән йәшәргә тороп ҡала. Ул алыҫ замандар өсөн шуныһы ла хас: "олаҡҡан"дар ҡайһылыр ят тупраҡтарға ерегеп, тыуған халҡының "мөлкәте" булыуҙан туҡтай, йә үҙе яҙма әҙәби телен ҡабул итеп алған башҡа бер халыҡтың, йә халыҡтар төркөмөнөң уртаҡ әҙибенә әйләнә. Башҡорт ырыу шәжәрәләренең береһе быға бик миҫал: әйтәйек, шул шәжәрәнән күренеүенсә, Әйле ырыуының боронғо башҡорт кешеһе Ҡол Ғәли ун өсөнсө быуат башында ниндәйҙер сәбәп менән Урта Азияның Хорезм ҡалаһында пәйҙә булып, шундағы "төрки" яҙма әҙәби теле ҡатыш үҙенең телендә бөтә төрки донъяһына мәшһүр "Ҡисса-и-Йософ" поэмаһын ижад итә һәм шул яҙма әҙәби телдең "хужа"лары булған бөтә төрки халыҡтарҙың уртаҡ шағирына әүерелә; шул атаҡлы Ҡол Ғәлиҙең ун һигеҙенсе быуын нәҫеле Тажитдин Ялсығол улы Әл-Башҡорди (XIX быуат суфый шағиры) иһә үҙ заманының "төрки" менән сыбарланған татар әҙәби телендә яҙып, "татар шағиры" булып китә. Бер ниндәй ҙә ғәжәпләнер урын юҡ: һыу кем улағына ҡойһа — шуның тирмәнен әйләндерә, әҫәр ниндәй телдә яҙылһа — тәүбашта шул халыҡтың әҙәбиәтенә хеҙмәт итә. Әлбиттә, донъялағы бер генә етди әҙәбиәт тә, әгәр ҙә ул артабан да йәшәргә, үҫергә, сәскә атырға теләһә, үҙ ҡабығына бикләнеп ҡала алмай, ә кешелек өсөн дөйөм сифаттар ҡаҙана, бөтә телдәргә лә тигеҙ хеҙмәт итә, кешелек донъяһының уртаҡ хазинаһына әйләнә. Ләкин бында һүҙ ул хаҡта түгел, ә айырым тарихи шарттарҙағы айырым бер әҙәбиәттең йәшәйеш һәм үҫеш үҙенсәлеге тураһында, ерҙә үҙен раҫлау өсөн уның яҙма әҙәби телгә ни тиклем мохтаж булыуы хаҡында бара. Ленинсы милли сәйәсәттең яҡты таңы атҡанға ҡәҙәр "ваҡ" халыҡтың ижад көстәре тарих тирмәнендә аҙ ваҡланмағандыр, аҙ әләф-тәләф ҡылынмағандыр. Был йәһәттән ҡарағанда, ун дүртенсе быуат баштарында Египетта күренекле ғәрәп шағиры булараҡ танылған башҡорт Насритдин Әл-Насриҙың әҙәби яҙмышы ғибрәтле. Үҙ телендә яҙыуҙан мәхрүм булғанлыҡтан, "ғәрәп телен камил үҙләштереү өсөн", егерме йыл буйынса ул әсә телендә һөйләшмәгән. Үҙ заманының ғәрәп донъяһында арыу ғына шағирлыҡ даны ҡаҙана, ләкин, шуға ла ҡарамаҫтан, бер халыҡтың да күңел һандығында аҫыл гәүһәр булып балҡына алмай, сүлгә төшкән ямғыр тамсыһы кеүек, быуаттар ҡомо араһында йотолоп-юғалып ҡала...

Башҡорттарҙың үҙҙәре теләп берәгәй Рәсәй дәүләтенә ҡушылыуы халыҡтың артабанғы яҙмышы өсөн ғәжәп шифалы бер тарихи акт булып, халыҡтың ул милләт булып нығыныуына этәрә, ырыу-ара бәйләнеш һәм кәртәләрҙең емерелеүенә, уларҙың дөйөм экономик мөнәсәбәттәр менән алмаштырылыуына, милли аңдың үҫеүенә көслө йоғонто яһай. Киң тәбиғәтле, алға киткән мәғрифәтле урыҫ халҡы менән тығыҙ аралашып йәшәү, уның бай мәҙәниәте менән яҡындан танышыу, ауылдарҙа

һирәкләп асыла башлаған урыҫса-башкортса мәктәптәр, унда башҡорт мәҙәниәтенең аҫыл ҡомартҡыларын өйрәнеү, уларҙы йыйыу, ташҡа баҫтырып сығарыу өлкәһендә игелекле эш алып барған алдынғы урыҫ мәғрифәтселәренең, ғалимдарының ыңғай йоғонтоһо аҫтында халыҡта яҙма милли әҙәби телде юҡһыныу тойғоһо артҡандан-арта бара. Уртаҡ тел булып хеҙмәт иткән “төрки”ҙең тәүҙә татар, татарҙан — башҡорт яғына “ауыштырылған” варианттары барлыҡҡа килә, был яҙма тел ҡулъяҙма (һуңыраҡ — ташҡа баҫҡан) китаптарҙа, ҡулдан-ҡулға күсерелеп йөрөтөлгән мөнәжәт һәм бәйеттәрҙә, хаттарҙа, рәсми ҡағыҙҙарҙа һәм восстание етәкселәренең хәрби фармандарында киң ҡулланыла. Халыҡ батыры Салауат Юлаев шиғырҙарында уҡ үҙенең барлығын белдертеп, үткән осорҙоң ташҡа баҫтыртып китап сығарған шағирҙары Әбелмәних Ҡарғалы, Һибәтулла Сәлихов, Шәмситдин Зәки, Ғәли Соҡорой ижадтарын иңләп үтеп, башҡорт халыҡ әҙәбиәтенең ҡотолғоһоҙ рәүештә сәсәнлек институттарын ҡалдырып яҙмаға күсеүенең һуңғы сик һыҙығын үҙ һынында кәүҙәлендергән Мифтахитдин Аҡмулла, һәм шул сик һыҙығының инде был яғында, башкөлләй яҙма әҙәбиәткә “беркелгән” Мөхәммәтсәлим Өмөтбаев әҫәрҙәренә килеп ялғанып, Сафуан Яҡшығолов, Ғизитдин Иҫәнбирҙин, Ямалитдин Юмаев, Фазыл Туйкин ишеләрҙән ҡалған ҡомартҡылар аша үҙ йәшәүен дәлилләп, халыҡтың үҙ яҙма әҙәби теленә сикһеҙ ғажизлығын донъяға торған һайын ныҒыраҡ иҫбатлап, дәғүә ҡылыу билдәһе рәүешендә ул егерменсе быуат башынаса, инде профессиональ маһирлыҡтың сағыу сағылына ирешеп, Шәйхзада Бабич теҙгән күңел гәүһәрҙәренәсә килеп тоташа...

Башҡорт халҡы тарих буйынса үҙенең милли үҙенсәлеген, айырым милләт булып йәшәү ҡеүәһен раҫлау өсөн ҡаты көрәшеп килде. Бының тәүге саҡтылары Ибн-Фаҙлан яҙмаларында уҡ сағыла биреп ҡалғайны: ғәрәп сәйәхәтсеһе бит башҡорттарҙың ифрат яугир ҡәүем булыуы, сит-яттарҙан үҙ ерҙәренә рөхсәтһеҙ аяҡ баҫтыртмауҙары, баҫҡандарының башын ҡырҡырға әҙер тороуҙары хаҡында хәбәр итә. Ә унан һуң был халыҡтың, Европа һәм Азия араһындағы ҡалҡанға оҡшап, быуаттар буйына сит ил баҫҡынсылары — татар-монгол урҙаларына, Урта Азия деспоты Аҡһаҡ Тимер сиреүҙәренә, манжур-айрат яуҙарына ҡаршы тороуҙары, алтын Урҙа хандарының иҙеменән арыныу өсөн көрәшеүҙәре, ә һуңыраҡ батша самодержавиеһының “ваҡ” милләттәрҙе бөтөрөүгә алып барған колонизаторлыҡ сәйәсәтенә яуап итеп туҡтауһыҙ баш күтәреүҙәре тарихта киң билдәле. Емельян Пугачев менән Салауат Юлаев етәкселегендәге милли-азатлыҡ һуғышынан һуң көл ителгән, ҡанға батырылған Башҡортостан батша самодержавиеһының ҡанлы ҡылысы һәм батша тарафынан өгөтсө итеп ҡуйылған мөфти хәҙрәттәренең өгөт әфиүне һеңгән имам таяғы аҫтында иҫәңгерәп тынып ҡала бер талай. Башҡорт ерҙәрен рәхимһеҙ талау, өйөр-өйөр күсенеп килеп колонизациялау башлана, ярым феодаль башҡорт халыҡ хужалығына Рәсәйҙәге үҫеп килгән капитализмдың йыртҡыстарса ҡомһоҙ тырнағы батып керә. Ерһеҙ ҡалған, малһыҙ ҡалған, үҙенең “милли” байҙары һәм колонизаторҙар тарафынан бөлдөрөлгән башҡорт ауылдарын наҙанлыҡ,

фәҡирлек, аслыҡ, эпидемиялар ҡыра, ауылы-ауылы менән ҡәбергә кереү факттары ишәйә. Ә быларҙың һөҙөмтәһе — рухи яҡтан иҙелеү һәм йәберһетелеү уғата ҡот осҡосораҡ була: тиккәме ни В.И. Ленин ул саҡтағы Башҡортостанды, был "колониаль сәйәсәттең шундай киҫәге, ул немецтарҙың ҡайҙалыр Африкала теләгән бер ажарлыҡтары менән тиңләп-сағыштырыуға торорлоҡ", тип юҡҡа ғына әйтмәгән.

Егерменсе быуат башына Башҡортостан шулай ҡанһыратылып, шул замандың авторҙары билдәләүенсә, үлем хәлендә килеп керә. Халыҡтың үҙ улдары ғына түгел, ә Рәсәйҙең иң алдынғы аҡыл эйәләре лә башҡорт яҙмышы хаҡында борсолоп баш вата. Үткән быуаттың Башҡортостан хужалығын тикшереүсе танылған ғалим Л.П. Сабанеев, мәҫәлән, башҡорттарҙа "Балалар араһындағы үлем ҡот осҡос, һәм башҡорт нәҫеле, үҙенең күп булыуына ҡарамаҫтан, моғайын, үлеп бөтөп баралыр, һәм эштәр һаман да ошолай килеш барһа, уның тамам ғәйеп булыуына ла күп ваҡыт ҡалмаған инде", тип белдерә. Башҡортостанда тыуып үҫкән, башҡорт тормошон яҡшы белгән яҙыусы Н. Крашенинников үҙенең башҡорттар тураһындағы китабын "Һүнеп барыусы Башҡортостан" тип атай, оло әҙип Мамин-Сибиряк: башҡорт халҡы асылда һәләк булған инде, ҡәбер өҫтөндә ләүкегән һуңғы ут һымаҡ, уның һағышлы йыры ғына тороп ҡалған; был халыҡтың тормош энергияһы сығып бөткән, ә киләсәге бөтөнләй юҡ, тигән фекергә килә. Был фажиғәле юрауҙарҙың көллөһөнән һығымта сығарғандай, демократ Глеб Успенскийҙың тәрән әсенесле һүҙҙәре Рәсәйҙе иңләп үтә: "Һәләк була башҡорт, һәләк була! Һис һүҙһеҙ, һәләк булып бөтә был башҡорт тигәнең!.." Ошо хәлгә нык ҡыуанып, "оҙаҡламай һуңғы башҡорттоң ҡәбере өҫтөндә һуңғы ҡурай уйналасаҡ" тип устарын сәпәкәйләүселәр ҙә, булманы түгел, булды... Урал батыр ҡиәфәтендә үҙ булмышын һынландырған ғәййәр халыҡ был ваҡытта, ысынлап та, ҡулындағы һынмаҫ алмас ҡылысынан да, толпар аты аҡ буҙынан да мәңгелеккә яҙған кеүек, көмөш суҡлы ҡурай баҫҡан Урал һыртын әжәл түшәге иткән кеүек, ҡанлы йәштәр түгеп һыҙылған ҡурай моңон, хәлһеҙ йөрәктән һыҡтап сыҡҡан һағыш йырҙарын — ҡара груһ йылдарында асы төшөнкөлөккә бирелгән Сафуан Яҡшығолов, Ғизитдин Иҫәнбирҙин, Ямалитдин Юмаев һымаҡ шағирҙарының аһ-зарын тыңлап һулҡылдап ятҡандай ине. Салҡан ауҙарылған алыптың тас йөрәге тәңгәлендә батша самодержавиеһының ҡанлы ҡылыс-хәнйәр осо, боғаҙы өҫтөндә мөфти хәҙрәттең йәшел имам таяғы ине. Улар Урал батырға уның быуаттар буйы теләп көткән яҙма әҙәби телен, шул телдә баҫылған бөгөнгө "Ағиҙел" ише журналын биреү генә түгел, ә ауыҙындағы тере телен төбөнән умырып ташларға әҙер ине. Ләкин Урал буйындағы аяныслы ауаздарҙың хәлһеҙ йыназа хорын бүлеп, сал Уралдың буйҙарында күкрәп тыуыр яҡты киләсәккә, яңы заманға тәрән ышаныс менән тулы, көрәшсән рухлы "йәшел йырҙар" — халыҡтың Шәйхзада Бабич, Мәжит Ғафури кеүек шағирҙарының дәртле тауышы, беренсе башҡорт большевиктарының яугир орандары яңғыраны бер заман. Рәсәйҙең һөрөмлө завод цехтарында тыуып үҫкән Ленин партияһы ҡара батшалыҡ

зинданында яфа сигеүсе халыҡтарға — шул иҫәптән ярлы башҡорт иленә лә яңы тыуар көн алып, таң аттыртып килә ине.

3

Мин күренмәҫ үлемде
Юҡ итергә сыҡҡанмын;
Ҡан эсеүсе батшанан,
Кеше ашар дейеүҙән
Бар кешене ҡотҡарыу,
Йәншишмәнән һыу алып,
Үлгәндәрҙе терелтеү
Өсөн тыуған батырмын.

“Урал батыр”.

Сикһеҙ Ватансы мин,
Совет иле
Булыу шарты менән ул Ватан.
Советтарға дошман кеше — миңә
Дошман, әгәр булһа ла атам!

Мәжит Ғафури.

Ел берҙәһен эшселәрҙең
Байрағы ҡандар менән!
Беҙ әҙер ҡорбан булырға
Большевик намдар менән!

Дауыт Юлтый.

Партиябыҙ
уттар аша беҙҙе
Коммунизм йортона килтерҙе.
Ул саҡ
бер ҡат һөйһәк был тупраҡты,
Инде мең ҡат һөйәбеҙ был ерҙе!

Сәйфи Ҡудаш.

Егерменсе быуат башы — империализм ҡарсығаһының Ер шарында иң шашынып ҡанат ҡаҡҡан сағы, ҡитғаларға ҡанлы тырнаҡтарын батырып, алтын менән бүкһәһен төйөргә баҙарҙар һәм колониялар баҫып

алған, илдәрҙе рәхимһеҙ талаған, йырткыс ҡара суҡышы менән халыҡтарҙың тере йөрәген суҡыған сағы ине. “Цивилизациялы аҡ тәнлеләр” хакимлығы һөҙөмтәһендә Австралия аборигендарының ерҙә дүрттән бер өлөшө генә ҡалған, Америка ҡитғаһындағы иң боронғо, үҙенсәлекле цивилизация вариҫтары булған ҡасандыр 50 миллионлыҡ индейҙарҙың ҡап-яртыһы — 25 миллионы ҡырылып бөткән, ә үҙен донъялағы иң азат ил тип шапырыныусы Америка Ҡушма Штаттарында иһә ҡалғандары ла ҡырағай малдар рәүешендә резервацияларға ҡыуып индерелеп, тамам бөтөү, юҡҡа сығыу хәлендә торған, ә “Ҡара Африка” халыҡтарын иһә төптө кешегә лә һанамай вәхшилек ҡылған сағы ине. Ул ғына ла түгел, хатта цивилизация бастионы тип аталмыш Европа илдәренең үҙҙәрендә лә капитализмдың “кеше кешегә бүре, көслөнөкө — донъя” тигән төп ҡанунының тантана иткән сағы ине. “Ҙур” халыҡтар тарафынан “ваҡ” халыҡтарҙың тиреһен һыҙыртып талау, уларҙы физик яҡтан юҡ итеү, көсләп ассимиляциялау — империализмдың үҙенсәлекле ҡанлы ҡултамғаһы, почеркы булып танылды.

Ҡитғаларҙың һуңғы быуаттары тарихы халыҡтарҙың үҙ-үҙҙәрен халыҡ килеш һаҡлап ҡалыу өсөн алып барған үлемесле көрәш миҫалдары менән тулы. Европалағы шундай халыҡтарҙың береһе булған күп миллионлы ирландтарҙы инглиздар баҫып алып, бер нисә быут дауамында ут һәм ҡылыс менән уларҙың милли мәҙәниәтен, телдәрен йолоп ташларға тырышалар һәм, әйтергә кәрәк, был йәһәттән шаҡтай ғына «уңыш”ҡа ла өлгәшәләр. “Англия быуаттар буйына Ирландияны ҡоллоҡҡа төшөрҙө, ирланд крәҫтиәндәрен әҙәм ҡолағы ишетмәгән аслыҡ ғазаптарына һәм астан ҡырылыуға алып барып еткерҙе, уларҙы ерҙәренән ҡыуҙы, йөҙәр меңләп һәм миллионлап үҙ илдәрен ташлап китергә һәм Америкаға күсеп барырға мәжбүр итте. XIX быуат башында Ирландияла биш миллион биш йөҙ меңлек халыҡ бар ине, хәҙер ни бары дүрт миллион өс йөҙ мең генә. Кешеһеҙ ҡалды Ирландия. XIX быуат буйына биш миллиондан ашыу ирланд күсеп китте Америкаға, һәм хәҙер Ҡушма Штаттарында ирландтар һаны Ирландиялағыға ҡарағанда ла күберәк!” — тип күрһәтте В.И. Ленин. (Шуны ла өҫтәйек: хәҙерге көндә Ирландияла ирландтар һаны ике ярым миллион тирәһе генә). Шулай итеп, цивилизациялы Англия “кесе туғаны” Ирландияға үҙенең “цивилизация”һын ана шулай керетте. Әммә-ләкин тарихтың үҙ мәңгелек ҡанундары бар: бер халыҡтың икенсе халыҡты көсләп ассимиляциялау, шул ысул менән уны “үҙ яғына ауыштырыу” сәйәсәтенең хәтәр нигеҙгә ҡоролғанлығын күрһәтә ул. Бөгөнгө көндә инглиздар итеге аҫтында интеккән төньяҡ Ирландия — Ольстерҙа инглиз оккупанттарына ҡаршы барған ҡан ҡойошло милли көрәш — граждандар һуғышы бик асыҡ дәлил быға, ул Англия империалистарының ут һәм ҡылыс ярҙамында бер ваҡытта ла ирландтарҙы ирланд булыуҙан туктата алмаясаҡтары хаҡында һөйләй. Фридрих Энгельс әйтмешләй, ирландтар “инглиз телен ни тиклем ныҡ үҙләштерә һәм үҙҙәренекен онота барһалар, шул тиклем үк ныҡ ирланд була барҙылар”.

Бына ошо тарихи мөхиттәге батша Рәсәйенең шундай уҡ колонизаторлыҡ сәйәсәте үткәреү төйәктәренең береһе булған Башҡортостанда ла бөтә социаль һәм милли ҡаршылыҡтар үтә лә киҫкенләшеп, оҫкон ғына көткән дары мискәһе — шартларға етешеү шарты тыуҙы. Был, әлбиттә, үҙ ҡабығы эсендә йомолоп түгел, ә бөтөн Рәсәй пролетариатының оҙайлы революцион хәрәкәте, күп йылдарға һуҙылған ғәрәсәтле империалистик һуғыш, большевиктарҙың "ваҡ" халыҡтар араһында ныҡышмалы алып барған дөрөҫ милли сәйәсәте һөҙөмтәһендә барлыҡҡа килде. Ленин партияһы, Рәсәйҙең башҡа "ҙур" һәм "ваҡ" милләттәре менән бер ҡатарҙан, башҡорт халҡының да милләт булып йәшәү ихтыяжын иҫәпкә ала ине.

Әйтергә кәрәк, бөйөк урыҫ халҡының алдынғы фекер эйәләре уҙған быуат урталарынан уҡ был халыҡтың милләт булып формалашыу тенденцияларына иғтибар итә килде. Уның тарихын, этник тибын, физик тәбиғәтен, психик көйләнешен, телен, мәҙәниәтен, демографик хәлен өйрәнеүгә ынтылыштар яһалды. Заман тарафынан: "Башҡорттар ҡырылып бөтөп барыусы халыҡмы, әллә уларҙың да киләсәге бармы?" — тигән һорау ҡуйылғайны. Империализм ҡоралы булған раса теорияһы яҡлылар быға кире яуап бирҙе. Уларҙың раҫлауынса, аҡ һанлы һәм хәлһеҙ раса төркөмдәренең һәм халыҡтарының башҡа бер көслөрәк, мәҙәниәтлерәк милләттәр менән бәрелешендә тарих сәхнәһенән төшөп юғалып ҡалыуҙары, үҙҙәренең этник, көнкүреш, тел, бөтә физик үҙенсәлектәрен юйып, ассимиляцияға дусар ҡылыныуҙары — "ғәҙел" һәм "ғәҙәти" социаль күренеш, "хаҡ яҙған күрәсәк" ине. Ләкин ғалимдар араһында быныӊ кireһен факттар менән иҫбатлаусылар ҙа булды. Оҙаҡ йылдар буйы башҡорттарҙы һәр яҡлап тикшергәндән һуң, 1899 йылда сыҡҡан "Башҡорттар" тигән хеҙмәтендә Д.П. Никольский, башҡорттар үлеп бөтөп барған халыҡ түгел, тигән фекерҙе асыҡ әйтте. Шул фекер яҡлылар араһында М.В. Лоссиевский, Н.А. Гурвич, Н.Л. Скалозубов, А. Калачов, С. Сомье һәм башҡалар бар ине. Был халыҡтың башҡа төрки халыҡтарҙан айырмалы үҙ теле, мәҙәниәте барлығын тикшереп инанған, артабан да уны сәскә аттыртырға теләгән аҡыл эйәләре араһынан С.Г. Рыбаков ошолай тип белдерҙе: "Минең инаныуымса, Рәсәйҙәге халыҡтарҙың индивидуаллеге үҫеүҙән Рәсәй өсөн, рус халҡы өсөн бер ниндәй ҙә ҡурҡыныс юҡ... Рәсәй, минең уйымса, унда йәшәүсе айырым халыҡтарға үҙенең мәҙәниәте менән ифрат ғәҙел рухи тәьҫир яһауҙан ситләшмәйенсә, уларҙың индивидуаль үҫешен яҡлау һәм һаҡлау принцибын ҡурҡмай ҡабул итә ала". Бындай уйҙа тороусылар Рәсәйҙә бер ул ғына түгел ине. "Төрки ҡәбиләләр тәбиғәтенең бер ҙә ярамаған ере юҡ, — ти профессор В.М. Флоринский, тап шул башҡорттарҙы күҙ уңында тотоп һәм шулар миҫалына таянып. — Киреһенсә, һәләтле, көслө һәм энергиялы тәбиғәт был. Әгәр инде был ҡәбиләләр үҙенсәлекле үҫештәрендә тарихи аҙ һөҙөмтә биргәндәр икән, бында уларҙың тәбиғәте түгел, бәлки сәйәси һәм дини шарттарҙың йоғонтоһо ғәйепле. Төрки ҡәбиләнең үҫеш юлында Мөхәммәт диненең фанатизмы һәм идара ҡылыуҙағы деспотлыҡ принциптары тормаған булһа, был халыҡтар

Европа мәҙәниәтенән бөтөнләй ситләштерелмәгән булһалар, хәҙерге ваҡытта уларҙың тарихы, моғайын, бөтөнләй икенсе төрлө булған булыр ине". Халыҡтың телен яҡшы өйрәнгән, уның бай ауыҙ-тел ижадын бөртөкләп йыйған, яҙма әҙәби телен бойомға ашырыу өсөн янып-көйөп эшләгән А.Г. Бессонов та, баяғыларға ҡушылғандай, башҡорт телен үҙенсәлекле "иҫ киткес ғәжәп һәйбәт, ҡолаҡҡа яғышлы тел" тип баһалай һәм башҡорт яҙыуы тарихында беренсе булып урыҫ графикаһы нигеҙендә башҡорт теле алфавитын төҙөй, 1907 йылда Ҡазанда "Башҡорттар өсөн Әлифба" китабын баҫтыртып сығара. 1908 йылда Ырымбурҙа В.В. Катаринскийҙың "Башҡорттар өсөн Әлифба"һы, ә 1912 һәм 1919 йылдарҙа Ҡазанда башҡорт ғалимы доктор М.А. Ҡулаевтың шул уҡ урыҫ-грек графикаһы нигеҙендә төҙөлгән Әлифбаһы донъя күрә. Быларҙан тыш, XIX быуат урталарынан башлап башҡорт телендә айырым әкиәттәр, легендалар ҙа ташҡа баҫыла килгән була. Ләкин батша самодержавиеһы шарттарында урыҫ халҡының иң кешелекле улдарының был изге ынтылыштары — башҡорт яҙмаһын булдырыу ғәмәлгә ашмай, башҡорт халҡына һуҙған ярҙам ҡулдары һауала аҫылынып ҡала. Дөрөҫ, башҡорттарҙың үҙ аллы телдә һөйләшеүен, ижад итеүен, Рәсәйҙең прогрессив көстәре генә түгел, ә ҡарагруһ руханиҙарына тиклем "танып", иҫәпкә алалар: 1899 һәм 1900 йылдарҙа шул уҡ Ҡазандағы миссионерҙар йәмғиәте, урыҫ шрифтын бик йәтеш ҡулайлаштырып, христиан диненең таянсыҡ өс "кит"ын — "Православный сиркәү тәғлимәте буйынса теге донъя тормошо тураһында", "Изге Евангелие", "Иҫке һәм Яңы Васыяттың изге тарихы" китаптарын башҡорт телендә баҫтырып сығара. Танырға кәрәк: был әҫәрҙәр хатта тап бөгөнгөләй саф башҡорт телендә тәржемәләнгән була. Ләкин батшалыҡ тарафынан фатихаланып, изге тәре өҫтөнә һалып тәҡдим ителгән "игелек", башҡорт йөрәгенә үтеп инә алмай, ерҙә ятып ҡала — көсләп аҫкан күҙҙең яҡтыһы юҡ бит... Рәсәйҙәге иҙелеүсе милләттәрҙе быуаттар буйына зарығып көткән мораттарына ирештереү өсөн, икенсе шарттарҙың тыуыуы, икенсе көстәрҙең килеүе кәрәк була.

Батша тәхетен алып орған февраль буржуаз революцияһы Рәсәйҙең барлыҡ мөйөштәрендәге ҡыҙышып торған хәтәр дары мискәләрен — милли нәфрәт төйәктәрен детонатор һымаҡ шартлата, быға тиклем быҕауланып, иҙелеп йәшәгән "ваҡ" халыҡтарҙы милли азатлыҡ, бойондороҡһоҙлоҡ яулау өсөн ярһыу хәрәкәткә килтерә. Шул иҫәптән башҡорттар ҙа үҙҙәренең Милли шураһын төҙөп, Әхмәтзәки Вәлидов юлбашсыһын байраҡ итеп күтәреп, "хөрриәт" органдары менән ҡайнашып торған хәтәр тарих аренаһына сығалар. Күптәр иҫен йыйып баш-күҙ алғылағансы, Октябрь таңы һыҙылып, "Аврора»ның күҙ сағылтҡыс үткер нурҙары милләттәрҙең быуаттар буйына һағынып көткән изге теләктәренә ирешеү юлын айбарлап, бөтә Рәсәй өҫтөн балҡытып ебәрә. Фәҡәт Ленин партияһы, был партия алға һөргән бөйөк гуманизм идеалдары, уның даһийы В.И. Лениндың үтә һиҙгер йөрәкле булыуы баррикаданың ҡаршы яғында ҡалған, граждандар һуғышының рәхимһеҙ тирмән таштары араһында тартылырға дусар булған халыҡ тиклем

халыҡты үҙ яғына тартып ала, Башҡортостанда килеп тыуған киҫкен тарихи ситуацияға дөрөҫ һәм ғәҙел баһа бирә, көн үҙәгендә торған мәсьәләләрҙе эҫе мәлендә хәл итеү өсөн кисектергеһеҙ тәғәйен саралар күрә. Урыҫ түгел милләттәрҙең үҙ билдәләнешкә ынтылыштарын танымаған, “саф революция” яғында торған ҡайһы бер эшем эйәһе “революционер”ҙарҙы Ленин киҫкен тәнҡит утында көйҙөрә. “Социалистик революцияны һәм капитализмға ҡаршы революцион көрәште демократия мәсьәләләренең береһенә, был осраҡта милли мәсьәләгә ҡаршы ҡуйыу мәғәнәһеҙ, — тип иҫкәртә бөйөк даһи. — Капитализмға ҡаршы революцион көрәште беҙ бөтә демократик талаптарға: һәм республикаға, һәм милицияға, һәм чиновниктарҙы халыҡ һайлауға, һәм ҡатын-ҡыҙҙарҙың тиң хоҡуҡлылығына, һәм милләттәрҙең үҙ билдәләнешенә һәм ана шундайҙарға ҡарата революцион программа һәм тактика менән бәйләргә тейеш... Сөнки, — ти ул, — колонияларҙағы һәм Европалағы ваҡ милләттәрҙең восстаниеларынан тыш, үҙенең бөтә хөрәфәттәре менән бер өлөш ваҡ буржуазияның революцион шартлауҙарынан тыш, аңһыҙ пролетар һәм ярым пролетар массаларҙың алпауыт, сиркәү, монархия, милли һәм шуларға оҡшаштарҙың иҙеүҙәренә ҡаршы хәрәкәтәненән тыш социаль революция булырға мөмкин тип уйлау, тимәк, социаль революциянан ваз кисеү ул... Кем “саф” социаль революция көҫәй — ул уны бер ҡасан да күтәп ала алмаясаҡ. Ысын революцияны аңламаусы, һүҙҙә генә революционер ул”. Был һүҙҙәр даһи тарафынан ирланд халҡы миҫалында әйтелһә лә, ул борондан иҙелеп килгән башҡа халыҡтарға, шул иҫәптән башҡорттарға ла, бик тура килә ине, сөнки, Ф. Энгельс 1869 йылдың 24 октябрендә үк К. Марксҡа яҙған хатында ифрат тапҡыр билдәләп үтеүенсә, “Ирландиянан Рәсәйгә тиклем бер генә аҙым”...

Рәсәй пролетариатына, уның авангарды большевиктар партияһына быуаттар буйына халыҡтарҙы бикләп тотҡан “халыҡтар төрмәһе”нең (В.И. Ленин) ҡанлы диуарҙарын бәреп ауҙарырға, милли мәсьәләнең ошоғаса донъяның бер титаны ла, аҡыл эйәһе лә, революцияһы ла сисә алмаған симәлсек төйөнөн сабып өҙөргә кәрәк ине. Бының өсөн быға тиклем ҡулына хакимиәт алған бер генә сәйәси партия ла ҡотола алмаған үлемесле ике яман сирҙән — бөйөк держава шовинизмы менән буржуаз милләтселектән аша атлап үтергә, донъяла беренселәрҙең беренсеһе булып, халыҡтарҙың күҙҙәренә тура ҡарап, милләттәрҙең хатта Рәсәйҙән айырылып сығыуына тиклем булған үҙ билдәләнеш хоҡуҡтарын аныҡ һәм тулы итеп танырға, яҡлап сығырға кәрәк ине. Бөйөк тарихи миссияны беренсе булып бөйөк Ленин партияһы тормошҡа атҡарҙы һәм, әйтергә кәрәк, ошо юлда иң тәүгә ғәмәли сараларҙың, милли мәсьәләне хәл итеүҙәге үҙенә күрә тәжрибә төйәктәренең береһе булыу — ҡатмарлы тарихи яҙмышҡа эйә Башҡортостан өлөшөнә төштө. Ленин партияһына бик һаҡ эш итергә, бер үк ваҡытта Башҡортостандың төп милләтенең дә, уның менән бергә йәшәгән башҡа милләттәрҙең дә, шулай уҡ бөтә Рәсәйҙәге барлыҡ милләттәрҙең дә мәнфәғәттәре тап килешерлек итеп, шул уҡ ваҡытта башҡорт хеҙмәт эйәләренең үҙ билдәләнешкә булған бөтә

ихтыяждарын да тулыһынса ҡәнәғәтләндерерҙәй итеп хәл ҡылырға кәрәк ине. Һәм партия милли мәсьәләнең яртылыҡ юлында туҡталып ҡалманы, үҙенең изге принциптарын аҙағынаса еткереп, милләттәрҙең ныҡлы берҙәм союзына бисмилла — иң элек уларҙың Рәсәйҙән айырылып сығыу хоҡуҡтарын дөрөҫләү һәм тәьмин итеү аша ятҡанлығын танып эш итте. Был иһә “ваҡ” милләттәрҙең генә түгел, ә иң “ҙур” милләттең, атап әйткәндә, бөйөк урыҫ милләтенең дә яҡты киләсәге хаҡына үтә зарур, ифрат ярашлы ине, марксистар пролетариатты шул йүнәлештә революцияға тиклем үк, үткән быуаттан уҡ тәрбиәләп килә ине. К. Маркс һәм Ф. Энгельс фекерҙәрен артабан үҫтереп, В.И. Ленин былай тип яҙҙы: “Маркс Ирландияны, — “гәрсә айырылғандан һуң эш федерацияға килтерһә лә” — Англиянан айырыуҙы талап итте һәм быны ваҡ буржуазияның тыныс капитализм утопияһы күҙлегенән сығып түгел, “Ирландияға ҡарата ғәҙеллек”тән дә түгел, ә иҙеүсе, йәғни Англия, милли пролетариатының капитализмға ҡаршы көрәш мәнфәғәттәре күҙлегенән сығып талап итте. Был милләттең азатлығын шул бәйләне һәм ғәрипләне: башҡа милләтте иҙә ине ул. Әгәр ҙә ул Ирландияның айырылыуын талап итмәһә, Англия пролетариатының интернационализмы ике йөҙлө булып ҡалыр ине”.

Саф күңелле башҡорт большевиктары Октябрҙең тәүге көндәренән үк бөтә халыҡ өмөттәрен сағылдырып күтәреп сыҡҡан Совет Рәсәйе составындағы автономиялы башҡорт Совет республикаһын төҙөү — ул халыҡты милләт итеп таныуҙың, шул иҫәптән уның иң мөһим күрһәткестәренән булған милли телде таныуҙың да иң хәл иткес акты булыр ине. Тик был юлда быуат буйына төрлө милләт вәкилдәре аңында йәшәп килгән ҡайһы бер хата ҡараштар ҙа кәртә булмай ҡалманы. Сөнки, һуңынанараҡ башҡорт совет тел ғилеменең нигеҙен һалыусы профессор Н.К. Дмитриев һүҙҙәре менән әйткәндә: “Иҫке Рәсәйҙә башҡорт теле бер ҡайҙа ла һәм бер ҡасан да уҡытылманы. Мосолман мәктәбенә эләккән аҙ-маҙ башҡорттарға асылда татар теле йәки татар буржуазияһының һәм руханиҙарының “төрки” тип йөрөтөлгән яһалма телен уҡыттылар... Башҡорттарҙы мәҙәниәт һәм сәнәғәт йәһәтенән “татарлаштырыу” — татар милләтенең программаһына инә ине. Башҡорттарҙы: бер ниндәй ҙә башҡорт мәҙәниәте юҡ ул, башҡорт теле — тел түгел, ә бары тик татар теленең боҙолған бер диалекты ғына, был диалектта халыҡтың артта ҡалған өлөшө генә һөйләшә, ә яҙыу иһә бөтөнләй мөмкин түгел, татар телендә генә яҙырға ярай... тигән уйға төшөрәләр ине”. Бөйөк Октябрь революцияһы алдынан ғына әле Ырымбурҙа сыҡҡан “Ваҡыт” гәзите (1917 йылдың 14 май һәм 5 сентябрь һандары): “Диалекттарҙағы ҙур булмаған айырмалыҡ нигеҙендә татарҙарҙы һәм башҡорттарҙы төрлөсә атап йөрөтөү — ғәмәлдә берҙәм халыҡты яһалма рәүештә айырырға тырышыу булып һаналыр ине... Башҡорттарҙы башҡа эске Рәсәй мосолмандарынан айырған нәмә, ул да булһа, үҙенә башҡа тел һәм милләт түгел, ә көнкүреш һәм, бигерәк тә, асығыраҡ әйткәндә, ер мәсьәләһе... Быға нигеҙләнеп кенә башҡорттарҙы үҙ аллы халыҡ тип һанарға ярамай. Һәм милли, һәм дөйөм эштәрҙә лә уларҙы бер нисек тә “башҡорттар” тип атарға ярамай... Урта

Рәсәй мосолмандары дөйөм төрки-татар милләтен тәшкил итә, уның эсендәге ырыу айырмалары бик аҙ урын алып тора”, — тип яҙҙы. Милли буржуаз гәзит тырышып яҡлаған был “берҙәм”лек, әлбиттә, кәм тигәндә шул милләтселектән килеп тыуған буш хыял, фикция, алдынғы татар һәм башҡорт коммунистары, башҡа милләт коммунистары тарафынан киҫкен кире ҡағыла торған бер нәмә ине. Сөнки ленинсы большевиктар Ф. Энгельстең заманындағы Рәсәйҙәге шуға оҡшаш панславистик ҡараштарҙы тәнҡитләп әйткән: “Панславистик берҙәмлек — ул йә сеп-сей фантазия, йә — урыҫ сыбыртҡыһы” һәм: “Айырым славян телдәре бер-береһенән инглиз, немец, швед телдәре кеүек үк дәрәжәлә айырыла”, — тигән һүҙҙәрен һәр саҡ иҫтә тоттолар, һәр төрлө милли сикләнгәнлек һәм хөрәфәттәрҙең эҙмә-эҙлекле дошмандары булдылар. Улар “буржуаз милләтселәр” тип тамғалаған татар һәм башҡорт милли хәрәкәттәре етәкселәре ғәмәлдә бер үк ҡарашты алға һөрҙө: беренселәре, татар милләтселәре, бөтә төрки халыҡтарҙы, шул иҫәптән башҡорттарҙы ла, бер милли аҙбарға ҡыуып керетеп, дөйөм “төрки-татар” яһарға яҫҡанһа, икенселәре, башҡорт милләтселәре, көллө төрки халыҡтарҙы, шул иҫәптән башҡорттарҙы ла, бер өлгөлө беселгән милли фәс аҫтына тығып, ахырҙа “бөйөк төрөк милләте” итергә самалай — айырма шунда ғына. Рәсәй шарттарында ул ике юлдың ҡайһыныһы отһа ла, татар ғына отасаҡ, ә башҡорт отоласаҡ ине, сөнки “дөйөм”лөк аҫтында башҡорт милләтенең танылмай ҡаласағы, юҡҡа сығарыласағы ап-асыҡ. Башҡорт милләтенә ҡарата хата фекер революцияға тиклем үк ҡайһы бер урыҫ авторҙары араһында ла йәшәп килгәнен иҫәпкә алһаҡ, мәсьәләнең ҡатмарлашыуы уғата асыҡлана. Хатта прогрессив ҡараштары менән беҙгә билдәле В.М. Флоринский ҙа үҙ ваҡытында: “башкир” йәки “башкурт” тигән бер төрки атамаһы ғына, “казак”, “сибиряк» атамаһы кеүек үк, һис кенә лә айырым халыҡ булыу файҙаһына һөйләмәй әле... башҡорттар шул уҡ баяғы татарҙар”, — тип яҙғайны. Иҫке замандың ауыр йөгө үҙенең төрлө сағылышында Рәсәйҙә Октябрь революцияһы булғандан һуң да, хатта коммунистар араһында ла, ул ғына ла түгел, үҙҙәрен башҡорт коммунистары тип күрһәтеүселәр (мәҫәлән, Ғ.Шәмиғолов, Б. Нуриманов) араһында ла тамырланғайны. Совет осоро тарихсыларының яҙыуынса, партияның ленинсы Үҙәк Комитетына, уның юлбашсыларына быңдай хаталаныусылар менән ныҡышмалы көрәш, тәрбиә эше алып барырға, ҙур такт һәм түҙемлек һаҡлап, уларға дөрөҫ йүнәлеш бирергә тура килде. Ә был иһә асылда ирландтар хәленә төшөрөлгән башҡорт халҡының халыҡ булып йәшәү яҙмышын ғына түгел, ә уның үҙенсәлекле милли мәҙәниәтенең, шул иҫәптән милли яҙма әҙәби теленең, тимәк, әле беҙ һүҙ алып барған, алтмыш йыллыҡ юбилейын байрам иткән бөгөнгө “Ағиҙел” журналының да яҙмышын ыңғай яҡлап хәл итеү ине. Владимир Ильич Ленин үҙе был мәсьәләләрҙе даими күҙ уңында тотто һәм, бөтә ваҡлыҡтарына тиклем үтеп кереүҙән дә тартынмай, ең һыҙғанып эшләне. Автономиялы Татар Совет Республикаһы Халыҡ комиссарҙары Советының беренсе рәйесе, ә уға тиклем Көнсығыш халыҡтары коммунистик ойошмаларының Үҙәк бюро рәйесе Сәхипгәрәй

Сәйетғәлиевтың бер иҫтәлегендә В.И. Лениндың урындағы милли мөнәсәбәттәрҙең күҙгә күренмәҫ нескәлектәрен нисек дөрөҫ тотоп алыуы, бының өсөн уға ҡайһындай белеп эш итергә кәрәк булғанлығы күҙ алдына баҫтырыла.

Баяғы Үҙәк бюро кәңәшмәләренең береһендә, ти Сәйетғәлиев, “башҡорт автономияһы тураһында һүҙ сыҡҡас, Татар республикаһын ойоштороусылар, уларҙың үҙҙәренең ирониялап әйтеүенсә, “ҡыйыу рәүештә”, Совнарком рәйесен татарҙар менән башҡорттар араһында “асылда айырма юҡ тип әйтерлек” булыуына инандырырға тырышалар.

— Ә татарҙарҙың һәм башҡорттарҙың телдәрендә йәки һөйләштәрендә айырма бармы? — тип һорай Владимир Ильич.

— Бар, ләкин бөтөнләй бәләкәй, ул да крәҫтиәндәр араһында, — тигән яуап ишетә ул һәм, аяныс, хаҡиҡәттән йыраҡ торған, йәнәһе татарҙарға ҡарата буржуаз милләтселәр тарафынан көйрәтелеүсе дошманлыҡ фәҡәт шовинистарса көйләнгән башҡорт инттелигенцияһы өсөн генә хас, тигән ышандырыу ала.

— Ну, ә кем һуң... башҡорт ауылдарынан татар уҡытыусыларын һәм хатта муллаларын туҡмап ҡыуа ине... башҡорт интеллигенцияһымы, әллә крәҫтиәндәр үҙҙәреме? — тип ышанмаусан иҫкәртә Владимир Ильич.

— Әлбиттә, крәҫтиәндәр эшләй ине уны, — тип танырға мәжбүр була татар иптәштәр, — ләкин ул башҡорт интеллигенцияһының өгөтләү һөҙөмтәһе ине...

— Ә кем башҡорт крәҫтиәндәренән полктар һәм бригадалар төҙөнө һәм уларҙы яуға алып бара алды?.. — Контрһорау ҡуя Ленин.

— Ул да башҡорт интеллигенцияһы... -- тип төшөнкө тауыш менән белдерә Башҡортостанды һоралмаған “татарлаштырыу” яҡлылар.

Сәйетғәлиев һымаҡ зирәк күҙәтсенең баһалауынса, Владимир Ильич кәңәшмәлә ҡатнашыусыларға “иҫ киткес шәп һабаҡ” бирә.

Октябрь тарафынан азат ителгән милләттәрҙең бер ниндәйенә лә “көсһөҙөрәк халыҡты... ярлыҡаусы ролен үҙ өҫтөнә алырға, ә бигерәк тә уның теләктәренә ҡаршы эш ҡылырға” юл ҡуйылмаған”. (“Дружба народов” журналының 1972 йылғы 11-енсе һаны, 171 — 172-нсе биттәр).

Ғәмәлдә быуаттарҙан килгән, башҡорттарға милләт булып йәшәргәме, юҡмы, тигән һорауға иң аныҡ һәм иң ғәҙел, иң һуңғы һәм иң хәл иткес тарихи яуапты бирҙе Ильич. Ленин сәйәсәте еңеп сыҡты, халыҡтың мөҡәддәс хыялдарын ҡанатландырған ленинсы большевиктарҙың эше еңеп сыҡты: 1919 йылдың 23 мартында донъяға РСФСР составындағы Башҡорт АССР-ы иғлан ителде; артабан ул синфи көрәштәр усағында сыныҡып, тамам тантана итте. Бер-бер артлы автономиялы һәм союздаш башҡа республикалар ҙа төҙөлөп, 1922 йылда ҡаҡшамаҫ халыҡтар дуҫлығының бөйөк төйәге СССР барлыҡҡа килеүе — Ер шарының алтынан бер өлөшөндә милли мәсьәләнең ғәҙел хәл ителеүенең аҫыл һөҙөмтәһе ине. Илебеҙҙең бөтә халыҡтары социалистик милли үҫеш юлына сыҡты, шағир әйтмешләй, бөйөк Ленин партияһы ҡулынан ҡулһыҙҙар — ҡул, күҙһеҙҙәр — күҙ, телһеҙҙәр тел алып, бөтә ижади хоҡуҡтарға эйә булып, милли мәҙәниәттәрҙең күкрәп сәскә атыу

осоро башланды. Быуаттар буйына башҡа изге идеалдары менән бер ҡатарҙан үҙ яҙма әҙәби теле хаҡында ла хыялланған башҡорт халҡы ла шул телдең һәм әҙәбиәттең формалашыу, нығыныу, сәскә атыу усағы булған “Яңы юл” журналын — бөгөнгө “Ағиҙел”ебеҙҙең шишмә башын — 1923 йылдың мартында ҡулына алып, бөйөк хыялдарҙың тормошҡа ашыу ватанында йәшәүенә, һәр яҡлап та тиң хоҡуҡлы граждан булып йәшәүенә инанды. Был иһә үҙ нәүбәтендә батша Рәсәйендә бөйөк Октябрь социалистик революцияһы еңеп сығыуҙың, Башҡорт АССР-ы, башҡа республикалар һәм СССР төҙөлөп бөтөп, милли мәсьәләнең ахырынаса ыңғай хәл ителешенең аныҡ дәлиле ине.

Коммунистар партияһы башҡорт халҡына яңы яҡты юл асыу менән генә сикләнмәне, ә беренсе көндәрҙән үк, граждандар һуғышының иң хәтәр ялҡындары араһынан уның иң аҫыл ижади көстәрен үҫтереп сығарып бергә туплау, киләсәк өсөн уларҙы һаҡлап алып ҡалыу, тәрбиәләү, ысын ижад юлына төшөрөү хаҡына арымай-талмай эшләне, тыуасаҡ социалистик башҡорт әҙәбиәтенең, мәҙәниәтенең тәүге нигеҙ таштарын бөхтәләп һалышты. Колчак ғәскәрҙәрен ҡыйратып Башҡортостанға ҡарай килеүсе Ҡыҙыл армия сафтарында беренсе башҡорт театры, беренсе башҡорт матбуғаты, *башҡорт* әҙәби теленең беренсе баҫма өлгөләре тыуа ине. Мәҫәлән, Вәлидов ҡулы аҫтындағы башҡорт ғәскәрҙәре Колчак яғында йөрөгәндә үк әле 5-енсе Ҡыҙыл армия политбүлеге тарафынан ялҡынлы большевик Шәһит Хоҙайбирҙиндың публицистик мәҡәләләре, шиғырҙары саф башҡорт телендә ташҡа баҫыла һәм таратыла, Төркөстан фронтының политбүлеге ойоштторған күсмә театрҙа буласаҡ башҡорт драматургы һәм композиторы Хәбибулла Ибраһимовтың тәүге әҫәрҙәре сәхнәгә ҡуйыла. Ҡыҙыл армия частәрендә Башҡортостандың буласаҡ күренекле әҙиптәре, ғалимдары, партия һәм дәүләт эшмәкәрҙәре Афзал Таһиров, Бәшәр Хәсән, Ғариф Ғүмәр, Ғөбәй Дәүләтшин, Булат Ишемғол, Төхфәт Йәнәби, Имай Насири, Ғабдулла Амантай һәм башҡалар азат илгә һүнмәҫ яҡты өмөт, дәрт алып ҡайта. Шулай итеп, большевиктар партияһы төҙөгән һәм тәрбиәләгән ҡыҙыл әләмле ҡыҙыл ғәскәр, иҙелгәндәргә ирек биреп кенә лә түгел, тиңһеҙҙәргә тиңлек биреп кенә лә түгел, ә милли мәҙәниәттәрҙең үҫеш шарттарын өр-яңынан тыуҙырып, Урал иленә Урал батыр Йәншишмәһен бөркөп килә ине. Донъялағы ниндәй ҡоралл көс илгә шулай шифалы килгәне бар?!.

4

Бар халыҡты эйәртеп,
Урал юлға сыҡҡан, ти;
Йәншишмәгә барған, ти,
Һыуын уртлап алған, ти;
Үҙе ярған юлына,

Дейеүҙән өйгән тауына —
Һыуҙы шунда бөрккән, ти.
— Тау-урмандар йәшәрһен,
Мәңге үлмәç төç алһын,
Ҡошо һайрап маҡтаһын,
Халҡы йырлап хуплаһын,
Ерҙән ҡасҡан дошмандар
Бары Күреп һоҡланһын,
Ил һөйөргә ил булып,
Ер һөйөргә бағ булып,
Дошман күҙен ҡыҙҙырып
Балҡып торған ер булһын! —
Тигән һүҙен әйткән, ти.

"Урал батыр".

Ер өçтөндә Байраҡ булып балҡының һин,
Илдең Намыçы, аҡылы булып яҡтырҙың һин,
Мөхәббәтен ҡаҙандың бар халҡымдың һин,
Уйҙарым да, йырҙарым да һиңә, Мәскәү.

Рәшит Ниғмәти.

Рус түгелмен, ләкин россиян мин,
Россиян мин — ниндәй ғорурлыҡ!
Ун ғүмерең миңә кәрәк түгел,
Бер яҙмышым шуға торорлоҡ!

Мостай Кәрим.

Һелкеп ташлап баçҡыл йоҡоно,
Сылбыр өҙҙө Урал тоҡомо.
Тотмаç уны үлем биҙгәге:
"СССР" тип тибә йөрәге.

(Бер шағирҙан).

Ирек һөйөүсән башҡорт халҡы быуаттарҙың ҡара төпкөлөнән үк ғәййәр түҙемлелек, ижади көсөргәнеш, оло хеҙмәт, ҡан һәм тирҙәр аша елкенде, кешелектең бөйөк илеалдарына йән атып алҡынып килде, шуларға тоғро ҡалды.

Ғүмеренең яртыһы ас-ялангас, ҡараңғылыҡ, иҙем, һуғыш ғәрәсәттәрендә уҙһа ла, рухының ул сая ныҡлығын һындыртманы, яҡты

өмөттәренә кер ҡундыртманы. Уның үткер ҡарашы ҡәберҙә түгел, ә Ҡояш сығышында булды.

Рухы менән ул беләгендәге бығауҙарҙан, тирмәһенең һөрөм һырған тындыҡ-түбәһенән, баҫҡынсылар уратып алып киҙәнгән һөңгө һәм штык остарынан, дин һәм деспоттар һалған манара һәм ҡәлғә баштарынан күпкә өҫтөн булды, ғорур сағыл-ҡаялай юғары ҡалҡынып, донъяларҙа тотҡарлыҡһыҙ, бойондороҡһоҙ үҙ күңел күген эҙләне.

Алыптарҙың алыбы Аҡъял батыр булып, ул әҙәм аҡылы иңләй алмаған ете ҡат ер аҫтарына үтеп керҙе, ундағы бығау сылбырҙарын ҡыйратып, ҡара көстәрҙе еңеп, ерҙең бикле ятҡан аҫыл хазиналарын кешелек бәхете өсөн яҡты донъяға сығарҙы.

Уҙамандарҙың уҙаманы Заятүләк-Һәүбән батыр булып, алтмыш ҡолас арҡан етмәҫлек һыу аҫтарына төштө, ундағы сихри һыу аҫты донъяһын гүзәл ер өҫтө донъяһына тоташтырып, байлыҡтары менән ерҙе ҡотайтты.

Батырҙарҙың батыры Урал батыр булып, кеше ҡулынан килә алмаған бөйөк вазифаны үтәне: ер йөҙөнән кешегә зыян килтереүсе барлыҡ дейеү-аждаһаларҙы, хатта әжәлдең үҙен дә һеперәп түгеп, мәңге йәшәү йәшнәтеүсе Йәншишмә сихәтен уртлап илгә бөркөнө. Хыялдарҙың хыялы етә алмаҫ бейек космосҡа — Күк батшаһы Самрау иленә осоп менеп, ер улдары өсөн унан матурлыҡтың һылыулығын — Ҡояш ҡыҙы Һомай менән Ай ҡыҙы Айһылыуҙы, мәңге һынмаҫ алмас ҡылыс менән мәңге талмаҫ толпар аҡ буҙатты алып төштө.

Ул ер йөҙөндә кешелек донъяһы барлыҡҡа килгәндән биреле кеше хыялы тыуҙыра алған иң титаник образдарҙың өлгөһө булырҙай үҙ батырҙарын бер-бер артлы тыуҙырып, мәңгелек изге көрәш юлына сығарып, бар кешелек донъяһының мәңгелеген раҫланы.

Бына шул мәғрур алып, Урал батыр образында үҙен даһилыҡҡа күтәргән халыҡ, Рәсәйҙең ҡара ҡатил-батша империяһының дейеү-йыландарынан йөрәк-бауырҙары телгеләнеп, осло батша хәнйәре менән иҫке хөрәфәт таяғы аҫтында иҫәңгерәп, хәл йыя алмай ята ине. Өндәге ҡара донъяны еңергә бер халыҡтың ғына көсө етерлек түгел ине. Кемдеңдер уға кешелекле итәғәте, ярҙам ҡулы кәрәк ине. “Аврора”ның залптары ҡара империяны вайран ҡылып, хәнйәр менән таяҡты һуғып һындырҙы, Ленин ҡулы менән ҡуша бөтә Рәсәй пролетариатының дуҫлыҡ ҡулы һонолоп, Уралдағы Урал батырҙы ҡәбер ҡырынан тартып торғоҙҙо, биленә алмас ҡылысын, ҡулына аҡ буҙатын биреп: “Алҡынып ос, әйҙә, башҡортом!” — тине. Шунан һуң башҡорт тормошоноң яҡтынан — яҡтығаса: беренсе комбед һәм коммуналарҙан хәҙерге бай миллионер колхоздар һәм совхоздарғаса, беренсе данлы биш йыллыҡтарҙан бөгөнгө шанлы туғыҙынсы биш йыллыҡҡаса, Ишембайҙың беренсе нефть фонтанынан — бөгөнгө Башҡортостан йөрәген һуғарып үткән бөтә Союз ҡантамыры Усть-Балыҡ — Өфө — Әлмәт нефть йылғаһынаса һәм шул бөйөк яңырыштарҙы илгә сағылтыу көҙгөһө булып тыуған “Яңы юл” журналынан — “Ағиҙел”гәсә нәжәғәйләнеп һуҙылған, “Аврора»ның сағыу көмөш нурҙары менән ырыҫлатылған Яңы Юлы — оло юлы, мәңгелеккә

яҡты юлы башлана. Журналдың бөгөн алтмыш йыллыҡ юбилейын байрам иткәндә бөтә йөрәктәребеҙ менән тап ана шул юлға тиклемге урау-урау ауыр юлдарҙы уйлап, юлдарҙың бәрәкәтле башы бөйөк Октябрь таңына барып тоташҡанлығынан ҡәнәғәтләнеп, күңел күктәребеҙ Ленин партияһына бөтмәҫ рәхмәт тойғоларынан тулыша. Һәм шунда күп нәмәләр иҫкә төшә. Тыуып үҫкән ғәзиз иле кеүек үк, яҙмышы менән дә, ижады менән дә бик ҡатмарлы урау-урау юл уҙған, әҙәби зауҡы теге быуаттың дөмә-ҡараңғы төпкөлөндә моронлап, икеләнеүҙәр, хаталар, яңынан тоғро юлға ҡайтыуҙар аша Октябрҙең нурлы таңына килеп тоташҡан, заманында сәсәндәребеҙҙең теленән үлемһеҙ "Урал батыр" эпосын аҡ ҡағыҙға күсереп яҙып алып, уны мәңгеләштергән бөйөк сәсән Мөхәммәтша Буранғоловтың халыҡсан йор һүҙәре менән әйткәндә:

Халыҡ бәхетен табырға
Партия юл күрһәтеп,
Ҡол йәшәүҙән сығырға
Аң-белемде өйрәтте,
Иҫке тормош тамырын
Бөтөнләйгә ҡыйратты.

Байҙың толпар буҙатын,
Ҡойошҡан етмәҫ ҡола атын,
Айыл етмәҫ ала атын;
Ҡырас яллы, шеш ҡолаҡ,
Суртан һыртлы, өкө аяҡ,
Тар бөйөрлө, ҡуш йөрәк,
Ҡобаға тояҡ тура атын
Эйәрләтеп байынан
Көтөүсеһенә мендерҙе!
Түрҙә ултырған түрәнән
Эшсәнгә түр бирҙерҙе.

Бай ҡулында ҡолланып,
Үлем баҫҡан улдарҙы,
Бай тупһаһын һеперӗп,
Кәмһетелгән ҡыҙҙарҙы
Ирҙәр менән тиң итте.

Ил тоторҙай, төҙөрҙәй,
Типһә тимер өҙөрҙәй;
Ҡарсығалай беләкле,
Ыласындай йөрәкле,
Балыҡтай, һыуҙа йөҙөрлөк,
Күктә ҡоштай осорлоҡ;
Танкыларға ултырып,

Илен яуҙа һаҡларлыҡ,
Комбайнға ултырып,
Игенен дә урырлыҡ,
Тракторға ултырып,
Ерҙәрен дә һөрөрлөк;
Аң-белемде тултырып,
Күкрәк киреп ултырып,
Улын, ҡыҙын барын да
Ил тоторҙай бер итте.

5

Яңы асылған журнал ана шул дәртле халыҡ тормошоноң көҙгөһө, йылъяҙмаһы һәм юлъяҙмаһы, уның хәл ителеш өсөн алға һөргән иң әүҙемле ижтимағи-сәйәси, әҙәби-нәфис мәсьәләләренең дөрләп янған усағы һәм ҡайнап торған ҡаҙаны булды ла инде. Журнал биттәрендә сағылып асылда яңы әҙәбиәт, сәнғәт, тарих, тел ғилеме тыуҙы. Былар бөтәһе, әлбиттә, Башҡортостан совет хөкүмәтенең, партия Өлкә комитетының хәстәрлекле етәкселеге аҫтында барҙы.

Тәбиғи, Башҡорт АССР-ы төҙөлөү менән, башҡорт яҙыуын барлыҡҡа килтереү мәсьәләһе мәҙәниәт төҙөлөшөнөң беренсе сираттағы мөһим бурысы булып тора.

РКП(б)-ның 4-енсе бөтөн Башҡортостан конференцияһы (1921 йыл) үҙенең милли мәсьәлә буйынса ҡабул ҡылған тезистарында мәктәптәрҙе, суд һәм административ органдарҙы Башҡортостандағы һәр милләттең әсә теленә күсереү мәсьәләһен ҡуя.

1921 йылдың июлендә Советтарҙың икенсе бөтөн Башҡортостан йыйыны Башҡортостан хөкүмәтенә башҡорт телен бойомға ашырыу юлында ғәмәли саралар күреүҙе йөкмәтә һәм шул ҡарар нигеҙендә Башҡортостан хөкүмәте 1922 йылдың 5 декабрендә башҡорт телен бойомға ашырыуҙың ғәмәли сараларын күрһәтеп, махсус ҡарар сығара һәм шул көндән алып ныҡлы эшкә керешелә. Ләкин башҡорт яҙыуын ғәмәлләштереү юлында оҙаҡ һәм етди әҙерлек эштәре лә талап ителә: башҡорт әҙәби теленең алфавитын, орфографияһын, шулай уҡ грамматикаһын, терминологияһын һ.б. булдырырға кәрәк ине. Бының өсөн ойошторолған айырым комиссияла иң талантлы көстәр: буласаҡ "Яңы юл" журналының нигеҙ һалыусылары һәм әүҙем авторҙары, шул иҫәптән Шәһит Хоҙайбирҙин, Дауыт Юлтый, Фатих Сәйфи-Уфалы, Ғабдулла Шөнәси, Шәриф Манатов, Хөсни Кәрим, Сәғит Рәмиев кеүектәр тырышып эшләй. Башҡорт әҙәби теленең "Хәреф вә имлә ләихәһе" тип аталған иң беренсе алфавиты һәм орфографияһы 1924 йылда ошо "Ағиҙел" (ул саҡтағы "Яңы юл") журналында баҫылып сыға. Башҡорт яҙма әҙәби телен камиллаштырыу һәм нығытыу эштәре күп йылдар дауамында

алып барыла һәм уларҙың иң мөһимдәре журнал биттәрендә сағылдырыла.

“Яңы юл”дан алып “Ағиҙел”гәсә журналыбыҙҙың ниндәй данлы юл үтеп, ниндәй һоҡланғыс уңыштарға ирешкәнлеген күреү өсөн, ҡасандыр колониаль окраина хәлендәге Башҡортостандың совет хакимиәте йылдарында үткән юлына, киң аҙымдарына саҡ ҡына күҙ һалыу ҙа етә. Быны КПСС-тың Башҡортостан Өлкә комитетының беренсе секретаре М.З. Шакиров үҙенең бер докладында һаран, ләкин ышандырғыс һандар теле менән дәлилләп үтте.

Бөгөнгө Башҡортостан — илдең иң ныҡ алға киткән индустриаль үҙәктәренең береһе, тине ул. Уның индустрияһы хәҙерге замандың 150-нән ашыу һәр төрлө тармағын ала үҙ эсенә. Промышленность етештереүенең күләме революцияға тиклемге осор менән сағыштырғанда 518 тапҡырға, ә республика төҙөлгән осорҙағы менән сағыштырғанда 1554 тапҡырға артты.

Совет хакимиәте йылдарында яңы социалистик ҡалалар — Ишембай, Октябрьский, Салауат, Күмертау, Сибай, Усалы, Нефтекамск, Туймазы үҫеп сыҡты, Өфө һәм Эстәрлетамаҡ танымаҫлыҡ булып яңырҙы, Белорет, Бәләбәй һәм Бөрө ҡалалары үҫте.

Ауыл хужалығы хәҙерге замандың юғары техникаһына нигеҙләнгән эре, юғары тауарлыҡлы хужалыҡ булып әүерелде. Унда 32 меңдән ашыу трактор, 17 мең самаһы комбайн һәм бик күп башҡа төр машина эшләй. Ауылдарҙы электрлаштырыу тулыһынса тамамланды, тип әйтерлек. Игенселек һәм малсылыҡтың мәҙәнилек кимәле күтәрелде.

Әгәр ҙә бынан ярты быуат элек Башҡортостанда грамотаһыҙлыҡты бөтөрөү ҙур проблема булып торһа, хәҙер дөйөм урта белем биреүгә күсеү уңышлы тормошҡа ашырыла. Дөйөм белем биреү мәктәптәрендә 900 меңгә яҡын кеше уҡый. Юғары һәм урта махсус уҡыу йорттарында 107 мең егет һәм ҡыҙ белем ала. Хәҙер беҙҙә һәр 10 мең кешегә вуздарҙа уҡыусы 113 студент тура килә, был ныҡ алға киткән күп кенә капиталистик илдәрҙәгенән юғарыраҡ. Сәнғәтте һәм мәҙәниәтте үҫтереү проблемалары менән СССР Фәндар академияһының Башҡортостан филиалы, 60-тан ашыу ғилми-тикшеренеү учреждениелары, проект институттары, конструкторлыҡ бюролары шөғөлләнә. Республиканың дәүләт учреждениелары системаһында ғына ла 1546 клуб, мәҙәниәт йорттары һәм һарайҙары, 1394 китапхана эшләй. Шулай уҡ 3 музей, 7 театр, филармония, 75 балалар музыка һәм художество мәктәптәре бар. Бөгөнгө көндә Башҡортостандың 4250 дөйөм белем биреү мәктәбендә, 67 махсус урта һәм 9 юғары уҡыу йортонда бер миллионға яҡын кеше уҡый. Башҡортостан Яҙыусыларының әҫәрҙәре СССР халыҡтарының 29 телендә, шулай уҡ сит илдәрҙә баҫыла. Беҙҙең рәссамдарҙың картиналары күп ҡалаларҙың сәнғәт музейҙарын биҙәй. Танылған драматургтарыбыҙҙың әҫәрҙәре туғандаш республикаларҙың театрҙарында уңышлы ҡуйыла...

Шакиров иптәш һүҙҙәре менән әйткәндә, һуҡанан хәҙерге заман машиналарына тиклем, мәҙрәсәнән университетҡа тиклем, ҡурайҙан классик музыкаға тиклем, грамотаһыҙлыҡтан фәндәрҙең сәскә атыуына

тиклем — совет халҡының туғандарса ғаиләһендә Башҡортостан хеҙмәтсәндәре үкән юл бына ошондай.

Шул илле-алтмыш йыл эсендә “маҡтаулы” капитализм донъяһы үҙ ҡулы аҫтында иҙелеп интеккән халыҡтарға нимә бүләк итә алды һуң?..

Совет Башҡортостаныбыҙ бер нәмәгә лә ҡарамай үҫә, ныҒый, уның әҙәби ауазы ла йылдар үткән һайын көрөрәк яңғырай. Башҡорт совет яҙыусылары интернационалсы идеалдарға һәм коммунизм идеологияһына, коммунистик төҙөлөш мәнфәғәттәренә кер төшөрмәй, халҡыбыҙҙы ла шул рухта — пролетар интернационализм рухында тәрбиәләүҙе үҙҙәренең мөҡәддәс бурысы һанай. Совет яҙыусылары СССР милләттәренең һәм халыҡтарының бер-береһе менән һаман яҡынлаша барыуын, уларҙы айырып торған иҫке кәртәләрҙең дуҫлыҡ күперҙәре менән алмашына барыуын теләй, улар “бәләкәй” халыҡтың да, “ҙур” халыҡтың да араһындағы милли сикләнеүҙәргә ҡырҡа ҡаршы сыға. Башҡортостан яҙыусыларының төп органы булған “Ағиҙел” журналы ла үҙенең данлы алтмыш йыллыҡ йәшәү дәүерен ошо яҡты идеалдарҙы халыҡҡа нур итеп сәсеүгә арнаны.

Социалистик реализмдың түтә юлына сыҡҡан башҡорт совет әҙәбиәтенең иң һокланғыс уңыштары ошо журнал биттәрендә миллионлаған уҡыусыларына барып ирешә. Тәүге көндәрҙән үк унда классик шағирыбыҙ Мәжит Ғафуриҙың тәрән йөкмәткеле, патриотик аһәңле шиғырҙары яңғыраһа, Дауыт Юлтый һәм Афзал Таһировтарҙың үткер граждандлыҡлы проза һәм сәхнә әҫәрҙәренән иһә замананың утлы һулышы бөркөлә. Утыҙынсы йылдарҙа был дәү журналда әҙәбиәтебеҙҙең Һәҙиә Дәүләтшина, Имай Насири, Сәғит Агиш, Али Карнай, Рәшит Ниғмәти, Ғәйнан Әмири, Батыр Вәлит, Мөхәмәтйәров Хәй, Әкрәм Вәли, Баязит Бикбай, Сәғит Мифтахов, Ғәйнан Хәйри, Хәниф Кәрим, Ғәлимов Сәләм, Мөхөтдин Тажи, Мөслим Марат, Сәләх Кулибай, Кирәй Мәргән, Ҡадир Даян, Мостай Кәрим, Мәҡсүд Сөндөклө кеүек бик күп шоңҡарҙары ҡанат ныҒыта. Был йылдарҙың алтын фондын тәшкил иткән аҫыл шиғырҙар, поэмалар, хикәйәләр, повестәр, романдар һәм сәхнә әҫәрҙәре араһында, әҙәбиәтебеҙҙә беренсе булып, бөгөн дә әле ҡайбер экономистар һәм философтар аныҡ ҡына төҫмөрләй алмай баш ватҡан күренеште — Башҡортостанда башҡорттар араһында капиталистик мөнәсәбәттәрҙең үҫеш һәм ҡыйралыш барышын образлы итеп кәүҙәләндергән беренсе башҡорт романы — Ғәйнан Хәйриҙең “Боролош”о ла бар ине. Бөтә Союз әҙәбиәте күләмендә беренсе булып Сәйфи Ҡудаштың (М. Шолоховтың “Күтәрелгән сиҙам”енән ике йыл алдараҡ) СССР ауыл хужалығындағы киҫкен һынылыш — шәхси милекселектән коллектив тормошҡа күсеү һөҙөмтәһендә кешеләрҙең психологияһындағы драматик кисереште тасуирлаусы “Хат” поэмаһы, Имай Насириҙың киң масштаблы прозабыҙҙа тәү тапҡыр ошо мәсьәләне психологик тәрәнлектә уңышлы сискән “Еңелгән ятыу” повесе лә, Ғәлимов Сәләмдең совет ысынбарлығында яңы кеше формалашыу барышын ғәжәп баҙыҡ образ аша йырлап биргән “Шоңҡар” поэмаһы ла башҡа авторҙарҙың иң яҡшы әҫәрҙәре менән бергә шул фондҡа ҡарай ине.

Бөйөк Ватан һуғышы һәм унан һуңғы ялҡынлы йылдар әҙәбиәте йылъяҙмаһында Рәшит Ниғмәти һәм Мостай Кәрим кеүек коммунист шағирҙар иң алғы сафта юл йыры йырлап әйҙәгән әҙәби гвардияны, шуларға эйәреп йылдам барған һуғышсан әҙәби ғәскәрҙе күрәбеҙ журналыбыҙ биттәрендә. Был ҡаҡшамаҫ сафтарҙа Зәйнәб Биишева, Хәким Ғиләжев, Ғәйнан Әмири, Кәтибә Кинйәбулатова, Назар Нәжми, Фәүзиә Рәхимғолова, Әнүәр Бикчәнтәйев, Муса Ғәли, Әсғәт Мирзаһитов, Яныбай Хамматов, Ибраһим Абдуллин, Фәрит Исәнғолов, Абдулхаҡ Игебаев, Рафаэль Сафин, Рәми Ғарипов, Ғабдулла Әхмәтшин, Нәжип Асанбаев һ.б. бик күп, бик күп талантлы ҡәләм эйәләре — "Ағиҙел"дең егәрле һәм әүҙем авторҙары бар. Бөгөнгө көндә республиканың фән донъяһын айбарлаған ғилми көстәр — шулар араһында танылған доктор һәм профессорҙарыбыҙ Жәлил Кейекбаев, Ҡасим Әхмәров, Әхнәф Харисов, Ғилемдар Рамазанов, Кирәй Мәргән, Раил Кузеев, Ғайса Хөсәйенов, Ғәли Сәйетбатталов кеүектәр — ҡәләмдәрен "Ағиҙел"дә сарлап штыкка әйләндерҙе, "Ағиҙел" журналын сығарышыуҙа һәм байыҡтырыуҙа туранан-тура ҡатнашты. Юғарыла һанап үтелгән барса әҙип һәм ғалимдарҙың, атап әйткәндә, "Ағиҙел" журналы авторҙарының ижад емештәре бөгөнгө башҡорт әҙәбиәтенең, сәнғәтенең, ғөмүмән мәҙәниәтенең һоҡландырғыс ҡаҙаныштарын кәүҙәләндерҙе. Уларҙың һәр уңышы халыҡ, партия һәм хөкүмәт тарафынан ихлас ҡабул ителеп, лайыҡлы баһаланып, иң күренеклеләренә Салауат Юлаев исемендәге дәүләт бүләге бирелде. Халыҡ шағиры Мостай Кәрим 1972 йылдың СССР дәүләт бүләген алыуы менән бөтә башҡорт әҙәбиәтен киң донъяға данланы, уның инде өлгөрөп еткән әҙәбиәт икәнен, бөтә СССР халыҡтарының уртаҡ ҡаҙанышы, ғорурлығы булып әүерелеүен раҫланы.

Хәҙерге башҡорт әҙәбиәтен, "Ағиҙел"дең күмәк һанлы авторҙар коллективын, алдараҡ аталып үтелгәндәрҙән тыш, исемдәре бында телгә алынмаған, ләкин уларҙың һәр береһенең илһамлы ижадынан башҡа социалистик әҙәбиәтебеҙҙең бөгөнгөһөн дә, киләсәген дә күҙ алдына килтереүе лә мөмкин булмаған бик күп өлкән һәм урта быуын әҙиптәре, күкрәп үҫеп килеүсе йәштәр тәшкил итә. Уларҙың һәр береһенең исемдәрен һәм ижад емештәрен журнал уҡыусылар бөгөн дә, киләсәктә лә "Ағиҙел" биттәрендә осратып ҡыуанасаҡ. Улар барыһы ла юлда — алҡын "Ағиҙел" юлында!

Башҡорт әҙәбиәтенең мәңге тынмаҫ оло йылғаһы туҡтау белмәй йәйрәп аға, аяҙ зәңгәр күкле "Ағиҙел" ярҙарын иңләп алҡына ул. Был ишелмәҫ ярҙар бөйөк урыҫ әҙәбиәтенең емерелмәҫ ныҡ ярҙарына барып тоташып, бөтә донъя прогрессив әҙәбиәте океанына ҡоромаҫ Йәншишмәһен илтеп еткерә.

1983.

Шәйхзада Бабич

1. Ысын халыҡ шағиры

Шағир Назар Нәжми әйтә торғайны: “Дәүләт башлыҡтарының рәсми укзы менән “халыҡ шағиры” исемен алыусылар бар, указһыҙ-ниһеҙ халыҡ үҙе үҙ иткән халыҡ шағирҙары ла бар, һуңғылары – ысын халыҡ шағирҙары”.

Шәйхзада Бабичтың кескәй генә бер томлыҡ һайланма әҫәрҙәр йыйынтығын ҡулыма тотоп, уйға ҡалдым. Ни нәмә менән сағыштырырға был бөйөк шағирыбыҙҙың ижади ғүмерен? Уны билдәләү өсөн, ниндәй образдар табырға?

Мәшһүр татар яҙыусыһы Ғалимъян Ибраһимовтың мәғлүм тасуирлауы иҫемә төштө.

Һәм шунда уҡ күҙ алдымда, күптән түгел генә үҙем Ағиҙел пароходствоһының һал тартыусы судноларының береһендә эшләп йөрөгәндә күреп тәьҫирләнгән, таулы Башҡортостан күкрәген сал ҡаялар араһынан урталай ярып, сылтырай-йырлай, шаулай-гөрләй аҡҡан көмөш һыулы саф шишмәләр, көр ағынлы йылғалар төҫмөрләнде. Эйе, Шәйхзада Бабич табашҡорт халҡының рухы төпкөлөнән бәреп сыҡҡан шиғри саф шишмә бит ул! Үҙ халҡының иң яҡты сифаттарын, иң көслө тойғоларын, иң изге өмөттәрен йөкмәп урғылды ул Аллаһы тәғәлә бирмеш яҡты донъяға, шөңгөр шиғри байлыҡтарын илкәйенә сама белмәй мул-йомарт һибеп ырғытты, тирә-яғын йөрәктәрҙе ҡанатлағыс гүзәл моңдар шаңы менән сыңратты, күңел тирбәлдергес тәрән һағыш менән иңрәтте. Шағир шишмәһенең ҡандырғыс мул тере һыуын көллө донъя ләззәтләнеп йоторға тейеш ине...

Тау йылғалары ҡая аҫтынан бәреп сыҡҡан ерендә әллә ни ҙур булмайҙар, уларға бында тәрәнлек тә хас түгел. Ләкин улар шул урында, Ҡояшты күреүҙәренсә үк, тулҡындарын уңлы-һуллы ҡағып, сикһеҙ иркенлеккә табан ынтылыуҙарына кинәнеп, селтер-селтер селтерәйҙәр, йылтыр-йылтыр йылтырайҙар, иңдәрендә сағыу ҡырсын таштарының шат ауазлы моңон, һырттарында алтын Көндөң яҡты нурын күтәрмәкләп еләләр. Тәүләп донъя күргән шул ерендә шишмә фәҡәт яҡты өмөттәр менән генә тулы әле, Ҡояш ҡаймағы яғылған ҡырыҫ ярҙарына ла хәүефһеҙ эскерһеҙлек менән, аҡ күңелдән кинәнеп баға, уларҙы уғата нурлыраҡ, матурыраҡ итеп күргеһе килә, йәйғорло ошо хистәрен дәртле тулҡындарында тирбәлтепме-тирбәлтә...

Бына шишмәнең юлы оҙоная: ул үҙенән яҡты Ҡояшты ҡаплап торған һалҡын ҡаяларҙы, серек һаҙлыҡ еҫе аңҡытмыш мүкле Убаларҙы уратып сирғый, юлындағы һәр төрлө балсыҡ-комдарҙы эләктереп ала, буръяҡлана; уның йәп-йәш битенә, моңһоулатып, ҡая күләгәләренең һалҡын ҡараңғылығы ята. Ағышы ла инде ярһыулы һәм асыулы, йырҙары ла, битенә төшкән баяғы күләгә һымаҡ, ҡарайып, томраланып һуҙыла. Оҙағыраҡ күләгәлә барышын дауамлаһа, ул хатта, Ҡояшты инде күрә алмаммы икән, тигән хәүефле өмөтһөҙлөккә бирелеүе лә мөмкин —

һаҙлы ярҙарҙан, мүкле Убаларҙан һарҡҡан ағыулы бүлемтәләр унының шағирәнә саф йөҙөнә үҙгәреш керетеүе, саф һыуҙарын әсе юшҡын менән боҙоуы бик ихтимал. Ләкин күләгәләр мәңге булмайҙар, тил бер-йүгерек ағынды Ҡояш нурҙары һис юғалтмай. Шишмә ағылып-үҫешендә үҙен ҡыҫҡан тарлауыҡтарҙы артта ҡалдыра, унның үҙәне киңәйә, унның юлы тас Ҡояш аҫтына алҡынып килеп сыға. Һәм бына ошонда күрһәтә лә инде йылға илаһи тәрәнлеген, ололоғон, уйсанлығын, шатлығын. Көллө бәллүр булмышҡайы сағыу нурға тулыша, бөрсөк-бөрсөк тулҡындарҙан ҡупҡан сихри һәр ауазы донъя моңон шаңғырта...

Шәйхзада Бабич та тап бына шулай халҡы күкрәгенән дөргән гүзәл йыр шишмәһе ине шул. Унның йөҙөнә лә ҡайсаҡ ҡараңғы үҙәндәр шәүләһе шомло томорайып ятты, йырҙарын да, билдәле булыуынса, ғалимдарыбыҙ әйтмешләй, “дошман яҡ”тан һарҡҡан әсе юшҡын бер талай “ағыуланы”, ләкин ул бында һис туҡталып ҡалманы, Ҡояшлы иркен үҙәндәргә юл ярып сыға алды. Уны ҡитғалар араһын тоташтырғыс бөйөк йылғаға ғына хас бөйөк үҫеш көтә ине. Ләкин... Шартлап ер умырылды, дәртле илһам ҡапыл ғына ер аҫтына убылды. Әммә көмөш кеүек сыңрау ҡыҫҡа ғына алҡынышы ла уны донъяға танытты, үҙәне ҡом баҫҡыһыҙ тәрән ҡалды...

Шәйхзада Бабич кеше булараҡ та, шағир булараҡ та йәне-тәне менән халҡының улы ине. Сабый күңелле, тәрән аҡыллы туған халҡы кеүек үк, ул да тәүге шиғырҙарынан уҡ яҡтыға, мәғрифәт Ҡояшына ынтылды, күңелдәрҙе баҫҡан Наҙанлыҡ ҡараһын белем нурҙары менән яҡтыртырға хыялланды (“Эй китап”). Быны ул, әлбиттә, үҙен ғәләмгә ялтыратып күрһәтер өсөн түгел, ә иленә аң-белем менән хеҙмәт итеү теләгенән эшләне. Шул йылдарҙа яҙылған “Һин алдама” тигән шиғырында йәш шағир бындай алдынғы кешенең икенсе бер мотлаҡ сифаты итеп халҡына хас “ысын һүҙле”, “тура һүҙ”ле булыуҙы алды һәм шуға өндәне, сөнки ысын һүҙле, тура һүҙле булыу — ябай халыҡтың мәнфәғәтен һаҡлау икәнен ул яҡшы белә ине:

Алма ат “алдаҡсы” тип, кәкерене турыла, алдама!
Тиҙ тайырһың алдаһаң, алдау юлы бик боҙло юл.
Ал исем “ысын һүҙле” тип, бер ҙә ҡурҡма, ысынды әйт,
Сөм-кара, ап-аҡты айырырға тура һүҙ көҙгө ул.
Ҡалһын исемең мәңгегә, ысын һүҙ менән ал атаҡ!
Ҡыҫҡаһы: гәйрәтле бул, ысын һүҙле бул! Был — изге юл.

Бабич ижадының башланғыс осорондағы был тойғоларҙы киләсәктә халҡы өсөн ялҡын булып дөрләр күңел уттарының тәүге ялтырағы тип ҡарарға кәрәктер. Унның ошо ун беренсе йылдарҙағы беҙгә билдәле булған ижадында мөһимерәк күтәрелеште табып булмайҙыр әле. Ә бүтән шиғырҙары ун алты йәшлек үҫмерҙең тыуған ауылынан ситкә сығып китеүе өсөн үкенеүен (“Эй дуҫтарым”), белем ала алмай, сит ерҙәрҙә зарығып йөрөгәндә һағышланып, тыуған илен һағыныуын ғына еткерә,буғай. Әммә «нәсихәт” исемле бер әҫәрендә шунның ише

зарланыуҙар, һағышланыуҙар араһында осҡон һымаҡ ҡайҙандыр килеп төшкән бәләкәс кенә яҡты өмөт тә быҙлап китә:

Һәр ваҡыт теләгеңде телән, тимен.
Түбәңдән, Хоҙай ҡушһа, күтәрелер
Ҡаплаган йондоҙоңдо томан, тимен.

“Моңланам” шиғырында иһә быларына ҡапма-ҡаршы тойғолары ҡуйҡымланып уҡмашҡан. Быныһы ла шул уҡ 1911 йылда яҙылған. Ләкин унда Шәйхзада Бабич ижадында һуңғараҡ, ҡанлы бөтөндонъя империалистик һуғыш йылдарында өҫтөнлөк аласаҡ төшөнкөлөк, өмөтһөҙлөк иңрәүҙәренең башланғысы ятҡандай.

Белмәйем инде, ниңәлер гел моңланам,
..
Ҡайгы-хәсрәт,моң вә зарлыҡтар менән,
Юҡ тынысльыҡ, тулганам да тулганам, —

ти шағир. Йәш күңел үҙенең ни сәбәптән үрһәләнеүен дә йүнләп аңлап еткермәй әле, ләкин быныӊ тикмәгә түгеллеген, был хөртләктән сығыу юлын тапмаһа, тамам һәләк буласағын төшөнә:

Ихласым юҡ, баҫмай аяҡ, йөрөмәй ҡул:
Әллә ниҙән шикләнәм һәм шомланам.
Ялтырап өмөт Ҡояшы нур сәсмәһә,
Мин был хәл, был зар менән булмам әҙәм.
Китмәһә баштан был болгансыҡ томан,
Аһ дуҫ-иштәр, мин була алмам әҙәм.

Ҡайҙан килгән һуӊ был “болғансыҡ томан”? Уны әллә, йоморо башлы бәғзеләр фаразынса, шәхестең үҙенә генә хас буталсыҡ тәбиғәте тартҡанмы?.. Юҡ һәм юҡ! Шәйхзада Бабичтың йәшел ҡурай кеүек шаңғырап торған саф ижады менән аҙмы-күпме таныш булған бер әҙәм дә быны былай тип әйтмәҫ. Йырып сыҡҡыһыҙ ауыр моңдо шәхестең эске донъя сатаҡлыҡтары түгел, ә халыҡтың түҙеп торғоһоҙ һәм йырып сыҡҡыһыҙ (булып күренгән) ауыр тормошо тыуҙырған булыр халыҡ шағире күңелендә. Ул халҡының бөтә моң-зарын эсенә йыйып йөрөгән, ә халҡында моң-зар шул тиклем дә күп булғас, үҙенең дә ғүмеркәйе моң-зарға сумып үтә башлаған. Халҡы менән бер тән, бер ҡан булып тыуған шағирҙе башҡаса күҙаллау ҡыйын! Халҡы өсөн янып-көйөп йөрөүе, ғәжәп гүзәл ижадының мең төр нурҙар менән балҡымыш гәүһәрҙәрен тулыһынса һөйөклө халҡынабағышлауы, аҡтыҡҡаса халҡына игелекле хеҙмәт итергә биргән изге антын үтәү өсөн “йәш сағын, алтын сағын, ялҡын сағын” фиҙа итергә һәр ваҡыт әҙер тороуы уның башҡорт шиғриәтендә гәүһәрҙәрҙән гәүһәр булып мәңге балҡыясаҡ “Халҡым өсөн” тигән ҡайнар эстәлекле шиғырында йөрәк башҡайҙарын семерләтеп ҡомарлай:

Ап-аҡ алтын йырҙарымды
Йырламыйым данлыҡ өсөн;
Йырлаймын алтын илемсөн,
Үҙ туған халҡым өсөн.
Саф көмөштәй йырҙарымды
Йырламыйым алтын өсөн;
Йырлаймын тик саф көмөштәй
Саф йөрәк халҡым өсөн.
....
Иламайым мин көндәрем
Һыргаҡ, һыуыҡ, һалҡын өсөн;
Илайым тик ярлы, меҫкен,
Ҡыҙғаныс халҡым өсөн.
Йәш сагым, алтын сагым,
Ялҡын сагым булһын фиҙа
Халҡым алдында минең
Биргән таҙа антым өсөн.

Шағир мөҡәддәс ижад юлын, халҡына хеҙмәт итеү юлын үҙенең бөтә булған эске байлыҡтарын дөрләтеп яҡмайынса тороп үтә алырын күҙ алдына ла килтермәй:

Ярһымаһа күкрәк йәшнәп, күкрәп,
Телдәреңдә ялҡын яна алмай.
Аһ ормаһаң һыҡрап, тетрәп-тәтрәп,
Ҡулдарыңдан алтын тама алмай.
(“Ярһымаһа күкрәк”.)

Күңеле шул тиклем көйрәй: бер минутта ут та ҡаплай, туңдырғыс һыу ҙа томалай — бер минут эсендә әллә нисәмә төрлө кисерештәр бер-бер артлы ҡабатланып тетрәтә. Ләкин был ярһып-яныу — донъянан төңөлөп түгел, ә изге өмөттәр бағлап ҡанатланыу ул, был тойғоно уға үҙенең бар ғүмерен халҡына арнау теләге бүләк иткән. Шуға күрә йөрәгендә, ҡара томандарын ҡыуып, аҡыҡтай аҡ хистәр ялҡыны дөрләй:

Ул яна, тик ҡайғырып янмай, яна шатлыҡ менән,
Ул яна был донъяны күрмәк булып аҡлыҡ менән.

Туған халҡының яҙмышы, уның ғәрәсәтле көндәре тураһында уйланғанда йәш шағирҙың күҙенә был ғәҙелһеҙ тормоштоң төп сәбәпсеһе — социаль тигеҙһеҙлек баҙыҡ һүрәтләнә башлай. Донъяның ул байҙарға һәм ярлыларға, иҙеүселәргә һәм иҙелеүселәргә бүленгәнен асыҡ күрә:

Эс яна, тормош тигеҙһеҙлектәрен уйлап яна,

Моңло меҫкен бәндәләрҙең моңдарын һөйләп яна.
(“ Бай һәм ярлы”.)

Ошо синфи тигеҙһеҙлектәрҙән һыҡрап яныуы унық шундайын да ғазаплы, ә яндырғыс ҡара көндәрҙең осо-ҡырыйы юҡ һымаҡ — бер-бер артлы сиратланып ҡына торалар улар. “Ник һыҙлайһың, күңелем, ник юҡ өсөн ағыулайһың минең аңымды?” — тип, бөткөһөҙ күңел ғазаптарынан тайшанып ҡалырға ла итә йәш шағир. *Ләкин* кешемен тигән кеше халҡы яҙмышынан янтайырмы һуң:

...бул түҙемле,
Агыулама юҡка тамырыңды.
Ысын ирекле алгы көн өсөн
Көрәшеп үткәр ҡыҫка гүмереңде! —

тигән дөрөҫ һығымтаға килә автор (“Көрәшеп үткәр ҡыҫҡа ғүмереңде”). Һәм йәшендәй саҡҡыланып-сытырҙап киткән асышынан дәрте ташып, фекерен илгә еткерергә ашыға, милләтте изге көрәшкә йөрәкһеп өндәй:

Юл ауыр, юл болгауыр булһа ла, милләт, әйҙәле:
Алда рәхәт ҡәҙерене белмәккә михнәт файҙалы.
(“Әйҙә, милләт!”).

Ләкин кешеләрҙе донъяның ауырлыҡтары баҫа, милләттең бил быуып, ең һыҙғанып көрәшкә ашығыуы ла әллә ни күренмәй, етмәһә, ерҙең ҡыртышын кимереп, ҡанлы бөтөндонъя һуғышы ҡоторона, бәндәләр вәхши йыртҡыстарса бер-береһен үлтерәләр, ер йөҙөнә миллиондарҙың кәүҙәһенән ҡанлы ҡорған өйөлә. Ғөмүми һуйыш, ҡырылыш, ҡан һәм күҙ йәштәренән башы ҡатҡан Шәйхзада был осорҙа бөтөн донъяны ҡан шәүләләре аша ғына күрә башлай:

Ерҙә ҡан, ҡандан томан, күктә эленгән ҡанлы ҡул,
Ҡанлы ҡулда ҡан тамып торган ҡот осҡос балтабар.

Империалистик һуғыштың сәбәптәрен ул төшөнә алмай интегә, был ҡот осҡос фажиға уның күҙенә үҙенән-үҙе килеп тыуған маҡсатһыҙ ҡырылыш булып күренә, бер-береһен үлтерешкән өсөн ул бөтә әҙәм балаларын ғәйепләй, үҙенең иһә Ҡаф тауы артында йәшәүсе ен затынан түгел, ә әҙәм затынан яралыуына үкенә:

Ен балаһы булһам, Ҡаф тауында
Тыуган булһам уттан-ялкындан,
....
Әҙәм улы кеүек йөрөмәҫ инем,
Ҡәрҙәшемде бөтөрөү ҡәстында, —

ти ул, кешелек донъяһы өсөн әсе һыҙланып (“Үткән көндәр”). Ҡурҡыныстан сығыу юлы һаман да күренмәгәс, күңелен тәрән өмөтһөҙлөк биләүләй:

Йондоҙом өмөтһөҙ,
Күҙ илай өҙлөкһөҙ.
Ҡаҙалһын донъяһы —
Күңелгә ҡыҙыҡһыҙ.
(“Аптыраған минуттарҙа”.)

Ошондай ҙа шәфҡәтһеҙ, мәғәнәһеҙ ерҙе бөтөнләй ташлап китергә теләп, йәш күңелен күккә осорға өндәй:

Әйҙә, күңелем, бында торма, күккә, күккә, күккә ос,
Күккә ос: күктә тыныс, бында һуғыш, бында ҡылыс!
(“Әйҙә, күңелем”.)

Шулай итеп, ун беренсе йылдарҙағы халыҡтың билғауыр тормошон бергә кисереп йәшәүҙән шағир аңына һарҡҡан моң-һағыш орлоғо ҡанлы бөтөндонъя империалистик һуғыш осоронда тәрән тамыр йәйеп, күңелендә ҡанға мансылған өмөтһөҙлөк сәскәләрен аттырыу менән ослана. Ә шулай ҙа пессимизм томаны оҙаҡкабармай: тыуған Уралын, үҙенең ғорур башҡорт халҡын өҙөлөп һөйгән нескә күңелле шағир күкрәгендә, ул тирә-йүнен күҙәткән, иленең тын алышын ныҒыраҡ тойған һайын, яҡты нурҙар бөрсөкләнеп тупланабара, күҙҙәре донъяға өмөт менән бағалар, тыуған Уралҡайына тиҙҙән аҡ көндәр килерен һиҙенеп үк көтә ул:

Янып-көйөп, бәгерем өҙгөләнеп,
Ләғнәт уҡыйым, кемгә — белмәйем.
“Килер микән аҡ көн беҙгә лә?” — тип,
Уралҡайға ҡарап илайым.
Күрәм: үҙ олпатын боҙмай һаҡлап,
Урал ята әкрен, тын ғына;
Ала шунда йәнде тынлыҡ ҡаплап,
Килә башлай тәмле уй ғына...
Ишеткәндәй булам әллә ҡайҙан
Ырыҫ, бәхет, өмөт йырҙарын;
Өмөт ҡайнап, ташып күкрәгемдән,
Көтәм тиҙҙән аҡ көн тыуғанын.

Көтөп кенә ҡалмай, бәлки, *барлыҡ* илһам көсөн егеп, шул аҡ көндө яҡынайтыу өсөн йәнтәслим көрәшә. Халҡының аңындағы ҡара быуаттарҙан мираҫланып килгән Наҙанлыҡ ҡараңғыһын көргөп сығарыуҙы, аң-белем менәнбайыҡтырыуҙы, уны яҡты көндәр яулауға әҙерләүҙе үҙенең төп ватансылыҡ вазифаһы итеп һанай; “Кем өсөн?”

тигән һигеҙ юллыҡ ғәжәп шөңгөр шиғырында, кинәйәле ай образы аша, быны һәр кемдең мөҡәддәс бурысы яһай:

Айға үрләп, Айҙа уйнап,
Күкрәгемде нурланым.
— Ит ғәфү әй, Ай, — тинем мин, —
Нурҙарыңды урланым.
— Һис зарар юҡ, ал, — тине Ай, —
Ал да сәс нур халҡыңа;
Мин дә бит төн хаҡына
Алдым Ҡояштың нурҙарын.

Күп йылдарға тартылған ҡанлы һуғыш, иҙелеү, аслыҡ арҡаһында көнләп түгел, ә сәғәтләп халыҡ массалары төпкөлөндә яралып ятҡан һәм туҡтауһыҙ үҫә барған революция һулышы Шәйхзада Бабичты ла уратып үтмәй, әлбиттә, һиҙгер шағир күңеле быға күрелмәгән ҙур үҙгәрештәр яҡынлашып килеүен, тиҙҙән илдә бөрө ярғыс яҙғы шифалы елдәр иҫәсәген төшөнә. Ул хатта түҙемһеҙләнеп тә ҡуя: ирекһеҙлек ситлегенә ябылған Былбыл — йәғни туған халҡы яҙ етерен шәйләмәй, ситлектән сығыу сараһын күрмәй төҫлө:

Яҙ етә тип мин дә бер ҡыуанам,
Бер йырлайым өҙөлөп, һағынып.
Торорһоңмо, Былбыл, һин зарығып,
Ситлегеңдә һаман ябылып? —

тип өндәшә ул ("Ситлектәге һандуғас янында") ҡара йөрәкле Рәсәйҙең "аҡ батша"һы ҡулында интеккән туған халҡына.

Ниһәйәт, шағир көткән мөҡәддәс көн дә килеп етте бына: өс йөҙ йыл буйына халыҡтар арҡаһында, йыртҡыс-ҡарағош кеүек, кәкере тырнаҡтарын батырып бауырҙарын суҡып ултырған ҡанлы батша Романовтар нәҫеле нәфрәтләнгән халыҡ диңгеҙе тарафынан тәхеттән бырғытылды. Әйтерһең:

Емерелеп китте кинәт серегән диуарҙар, матсалар,
Тумырылып китте юғартын төрлө йыртҡыс батшалар.
("Тәмҫил киҫәге".)

Һөҙөмтәлә:

Көн тыуҙы ҡараңғы ватанға,
Юл бөттө хаҡтарҙы тапарға! —

тип тантана итә ошо көндө күрергә зарыҡҡан йырсыбыҙ. Быуаттар буйына шаҡшы Рәсәй империяһы халыҡтар төрмәһе булды, быуаттар буйына

шул төрмәнән ҡотолоу өсөн ҡанлы көрәш ҡайнаны — илдәр азатлыҡ дауланы. Һәм, ниһәйәт, мораҙына ирешә лә башланы. Ни ҡылыр хәҙер милләттәр: һәр ҡайһыныһы үҙ башына үҙе бесеп теккән "ирек кәпәсе»н кейеп, *башы* ҡараған тарафҡа олағырмы, әллә, ҡулға ҡул тотоношоп, дөйөм бер "кәпәс" — ирекле Ватан күге аҫтында уртаҡ ирек юлынан алҡынырҙармы?.. башҡорт халҡы тыуа-тыуғандан үҙ аллылыҡ даулап күп һуғышты, уның ҡайнар ҡаны тарих биттәрен баштан-аяҡ ҡандырҙы. Бәлки, башҡорт халҡына, бығау-сынйырҙары шартлап өҙөлгәс, үҙ яҙмышын Рәсәйҙән башҡа ҡурсалау хәйерлерәктер?.. Туған халҡының империя тарафынан ҡаты иҙелеүенә, өҙлөкһөҙ йәберләнеүенә бәғеркәйе ҡанһырап, уның азатлығы өсөн йән атып йөрөгән, тик әлегә ныҡлы тормош тәжрибәһеҙ йәш шағирҙән мөмкин ине көтөргә бындай хистәрҙе. *Ләкин*, — юҡ! — Шәйхзада Бабич ошо бик ҡатмарлы осраҡта ла тейешле кимәлдә ҡала белде, тәбиғи һиҙгерлеге уны был урында оло ватансылыҡ һәм баяғы пролетар интернационаллыҡтың шөйлә яҡты юғарылығына күтәрҙе:

Ватаның Россия — уртаҡ ил,
Кер татар, кер татар, ҡатарга! —

тип өндәшә белде шағир ("Хөрриәт бүләге") урыҫ булмаған милләттәрҙең барыһына. Ә инде "Йәшәһен эшселәр!" тигән атаҡлы шиғыры байҙарҙан, помещиктарҙан, капиталистарҙан яфа сигеүсе хеҙмәт халҡын киң йыһанды тар ҡәбергә әйләндермеш ана шул иҙеүселәрҙе бөтөрөргә, "тигеҙһеҙлекте сәнселдерергә", "берлек тыуын ҡулға алып" күтәрелергә саҡырған ялҡынлы марш кеүегерәк яңғырай:

Эшсе халыҡ ҡуҙгалһын,
Беләктәрен һыҙганһын,
Теләктәрен ҡулга алһын,
Кәрәктәрен эҙләнһен.
Эшсе халыҡ йәшәһен,
Тигеҙ юлдар яһаһын!

Шағиребеҙ революция дауылы дөргән ирек елдәрен киң күкрәккә һулап тантана итә, шул дауылды тыуҙырған миллиондарға: "Афарин һеҙгә, ирек сулпандары!" — тип мөрәжәғәт ҡыла ("Афарин"). *Ләкин* ул, хаҡлы рәүештә, революцияның төп бурысын "ирек" тигән а бстракт төшөнсә килтереүҙә генә түгел, ә шул төшөнсәне матдилаштырған тәғәйен эштәр үтәүҙә итеп күрә һәм табан төйөп тап шуны талаплай ҙа:

Бөтһөн инде: буржуаздар донъягабаш булмаһын!
Бөтһөн инде: ярлылар мохтаж-ялангас йөрөмәһен!

Бөтһөн инде киң йыһанда тар ҡәберҙәр тарлыгы!
Бөтһөн инде бикләнеп ятҡан ҡарундар һандыгы!

(“ Байҙарға”.)

Февраль революцияһы шауҡымына тағылып, “Уң беләккә ҡыҙылдан таҫтамал” бәйләп йөрөгән ҡапҡорһаҡтар унын нәфрәтен ҡуҙғата, революцияны ул “ҡып-ҡыҙыл ҡандар йүгергән” йөнтәҫ ҡулдарҙан башҡа, ә тап эшсе-крәҫтиәндәрҙең революцияһы итеп күрергә теләй, шуға ҡаршы көрәшеүсе буржуазияға үҙенең әсе иронияһын түгә:

Ник һинең мәкһүр ҡалын иренең ҡарагусҡыллана?
Сөнки күҙеңдә фәкирҙәргә асыу, мыҫҡыл яна.

Шул көйөңсә һин тагы булган булаһың социал,
Уң беләккә бәйләп алаһың ҡыҙылдан таҫтамал!

(“Буржуй”.)

Был осорҙа Ш. Бабичтың шиғриәте ҡыйыу рәүештә социаль көрәш усағына дөрөп керә, халыҡ массаларын дөрөҫ революцион рухта тәрбиәләүгә үҙ өлөшөн индерә. Хәҙерге ҡайһы бер тәнҡитселәр тарафынан ялҡынлы йәш шағиребеҙҙе сәйәси яҡтан үҫеп етмәгән бер ҡатлыраҡ ауыл малайы итеп күрһәтеү ҡалыплашҡан булһа ла, мин уның ошондай таяҡ тыҡҡан ҡырмыҫҡа иләүеләй мыжғып-ҡайнап торған ҡатмарлы Рәсәй шарттарында тәжрибәле көрәшселәрҙекенән бер ҙә кәм булмаған синфи һиҙгерлек күрһәтеүенә ғәжәпләнеп бөтә алмайым. Тап ошо йылдарҙа яҙылған “Мөртәт социалистарға” һәм “Әй большевик!” тигән ике шиғырын ғына алайыҡ: Шәйхзада Бабичтың ялған ҡыҙылды ысын ҡыҙылдан, дөрөҫ юлды алдаҡ юлдан икеләнмәй айыра белеүе күренмәйме ни ошонда?!. Билдәле булыуынса, эсерҙар үҙҙәрен ерекмән (крәҫтиән) синыфының партияһы итеп йөрөткәндәр һәм синфи алыштарҙа улар үҙ мәнфәғәттәрен яҡлау өсөн ерекмән күңеле ҡылдарының иң нескәләренә оҫта сиртә белгәндәр. Тыуа-тыуғандан ерекмән — крәҫтиән улы булыуына ҡарамаҫтан, шул шарттарҙа ла шағир “мөртәт социалистар”ҙың йәғни эсерҙарҙың ҡара йөҙөн асып һалырға өлгәшкән бит! “Социалисмын” тип яңғырауыҡлы фразалар менән шапырынып йөрөмөш был “мөртәт” бәндәләр, шағирҙең күрһәтеүенсә, социалист-революционер битлеге кейгән шул уҡ буржуйҙар, иҙеүселәр улар; тимәк, эсерҙар һәм шулар ише башҡа социалистар — бөтәһе лә иҙеүсе синыфтың тоғро ялсылары ғына:

Тышҡа сыҡтың алдыңа тупраҡ һалып, икмәк турап,
Өйгә керҙең — торҙо алдыңда көмөштәр шылтырап.
Нәгрә орҙоң иҙмәһен тип бай фәкирҙәр елкәһен,
Ә үҙең ас елкәһенән күпме дәүләт сиртәһең!

(“Мөртәт социалистарға”.)

Күренеүенсә, уларҙың “ҡып-ҡыҙыл һүҙҙәре” эсендә ҡайһындай ҡара бысраҡ йәшеренеп ятҡанын шағир бик яҡшы белгән:

Ҡып-ҡыҙыл һүҙҙәр һалып йөрөттөң ҡара күкрәктә һин,
Бысраҡ төрҙөң дә ырғыттың ҡыҙыл сепрәккә һин.

Хеҙмәтсән халыҡтың ҡан дошманы буржуйҙарға, тимәк, уларҙың баяғы партияларына, “йәшен” итеп, “гөрзөй” (суҡмар) итеп шәйхзада Бабич меҫкен “өйрәк-ҡаҙға” ирек яулаусы бүтән көстө — Башында В.И. Ленин торған большевиктар партияһын ҡаршы ҡуя:

Әй большевик, эшең ҡылдың һәр өйәҙҙә:
Йәшен булдың, гөрзөй булдың буржуазға.
Юлың имен — юл башсың Ленин булһа,
Ҡыр төлкөнө, ирек булһын өйрәк-ҡаҙға!

Тимәк, большевиктар партияһының һәр өйәҙҙә ныҡышмалы һәм уңышлы эш алып барыуын, уның иҙеүселәр синыфына ҡаршы ҡыйратҡыс көс булып әүерелеүен күреп һоҡлана шағир, халыҡҡа ысын.азатлыҡ килтереүсе ыңғай көс итеп билдәләй. Әлбиттә, оҙон-оҙон поэмалар яҙып ҡалдырмаған Бабич был осорҙа ул хаҡта, сөнки уның үҙенең ғүмер юлы ла, күктән атылып сәсрәгән йондоҙҙоҡолай, үтә лә ҡыҫҡабулған... Ләкин факт — факт көйөнсә ҡала: Шәйхзада Бабич был осорҙа хеҙмәтсән халыҡтың иҙеүселәргә ҡаршы көрәштә таяныр көсө итеп большевиктар партияһын таныған. Халыҡтың күпселеге ҡара Наҙанлыҡта томаланып йәшәгән, ә урыҫ телен бик аҙ инсандарыбыҙ ғына уҡып таный белгән, большевистик өгөт-нәсихәт милләтебеҙ араһына әллә ни ныҡ үтеп керә алмаған болғанышлы шул Башҡортостан осоронда шиғырҙары бөтә халыҡ тарафынан һөйөлөп уҡыла, ятҡа алып һөйләнә, көйләп йырлана торған, тәүге шиғри тауышынан уҡ ярлы-я бағай халҡы өсөн янып-көйөп, уға аҡ юлдар теләп йырлаған һәм ошо юлында танылған һөйөклө, абруйлы халыҡ шағиренең зирәклеген, сәйәси көрәштең иң алғы һыҙығында торғанлығын дәлилләүсе был юлдарҙың үҙ ваҡытында матбуғатҡа сығыуы — ифрат ҙур ижтимағи әһәмиәткә эйә ине, әлбиттә. Һәм был шиғырҙар халыҡ фекерен большевиктар партияһы яғынабороуҙа заманында ҙур ғына эш башҡарып өлгөргәндер. Әлбиттә, Шәйхзада Бабич үҙе большевиктар партияһында ағза булып тормай ине, ҡатмарлы тормош һикәлтәләре уны был хәл иткес юл сатына килтермәгәйнеләр әле. Ләкин быға ул ғәйепләме ни? Миллионлаған массаларҙың бөтәһе лә торманылар ҙабаһа большевиктар партияһында, шулай ҙа үҙ яҙмыштарын улар компасы күрһәткән яҡҡа дәррәү борҙолар, сөнки тормош быны уларға үҙе әсе һабаҡтар аша өйрәтте. Шәйхзада Бабич иһә, халҡының иң алдынғы улы һәм ысын-ысындан халыҡ шағире булараҡ, төп сәйәси йүнәлеште бүтәндәрҙән элегерәк билдәләне һәм шул саҡта үҙе хаҡ тип һанаған ошо юсыҡҡа туған халҡын аҙымландыртыу өсөн бөтә шиғри оҫталығы, Намыҫы менән үтәне үҙ бурысын. Һуңғараҡ ул, рәсми тарихсыларыбыҙ һәм әҙәби тәнҡитселәребеҙ раҫлауынса, ошо дөрөҫ йүнәлешенән, имеш, ваҡытлыса тайпылды, гүзәл талантын “хата юлды” маҡтау өсөн сарыфланы. Ләкин

быны, минеңсә, уға шәхси ғәйеп итеп йөкмәтеп ҡуйып булмай, ҡатмарлы тарихи шарттар килтереп сығарҙылар бит быны. Шәйхзада Бабичтың дөйөм ижади мираҫын бәғзеләр әйтмеш ошо ҡыҫҡа миҙгелле "тайпылыш" түгел, ә халыҡ мәнфәғәттәрен дөрөҫ күҙәткән һәм сағылтҡан, халҡы өсөн йөрәк итен әрнетеп яҙған әҫәрҙәре билдәләй, ә улар уның мираҫының төп өлөшөн тәшкил итә — беҙҙең өсөн бына нимәһе мөһим.

Башҡорт халҡының үткәне, хәҙергеһе һәм киләсәк яҙмышы хаҡындағы уйланыуҙар Ш. Бабичты бер ваҡытта ла тыныс ҡына ҡалдырғаны юҡ ине. 1918 йылда ул, йәш кенә көйөнсә, үҙенең ошо уйланыуҙарының гүзәл емеше булырҙай "Ҡурайҡайға" тигән тәрән эстәлекле шиғырын яҙҙы. Күкрәгендә башҡорт йөрәге ярһып типкән һәр инсан күңелендә, сихри ҡурай моңон ишетеү менән, төрлө хистәр уяна, һөйөклө халҡының шул ҡурай моңона торош оҙон-оҙаҡ һуҙылған ҡатмарлы тарихы күҙ алдына килеп, тойғоларҙың әсеһе лә, татлыһы ла йөрәк башҡайҙарын һыҙлата. Ә халҡының ысын улы, ялҡынлы шағире Шәйхзада Бабич өсөн был тылсымлы ауаздар бигерәк тә ҙур тәьҫирле булғандыр... Уның ярһыу йөрәгендә ялҡындарын ләүкетеп шул ҡурай моңо тулҡына, уландарса мөхәббәт йәштәре ҡаплаған уйсан күҙҙәренә, бер-бер артлы һүрәтләнеп, һөйөклө Уралының ҡабатланмаҫ гүзәл тәбиғәте — Һаҡмар, Яйыҡ, ашҡаҙар буйҡайҙары, ожмах кеүек сахраларҙа йәйрәп йөрөгән йылҡы, ҡуй көтөүҙәре, аҡ тирмәле йәйләүҙәр, ҡашмау кейеп, селтәр бәйләп ҡымыҙ бешкән һылыуҙар һүрәтләнә. Тирмә эстәренән уның ҡолағына сыңылдатып ташҡа ҡылыс ҡайраған, аҡ тирмәләрҙең сихри тынлығын өҙөп, һөңгөгә һөңгө бәрелешкән, йән биреп ыңғырашҡан, дөһөрҙәп йорттар ауған, шалтырап һауыт-һайман ҡыйралған, үкһеп-үкһеп балалар илаған тауыштар ишетелә. Юҡ, үткәндәрҙе һағынып маҡтау өсөн генә ҡуҙғатмай шағир был теманы, шағир ҡарашы үткәндәр үтәләй хәҙерге һәм киләсәк заманға төбәлгән. Йәш күңелен ут һәм ҡанға һуғарылған башҡорт тормошо иңрәтә, илкәйенә ирек яулап күтәрелгән башҡорт уҙамандары ғорурландыра. Эйе, бындай ғорур халыҡтың мөҡәддәс төйәге мөһәбәт Урал ҡоллоҡ сынйырҙарына сорналып ятырға тейеш түгел!..

Бына Башҡортостандың шул ҡанлы күген балҡып сыҡҡан азатлыҡ Ҡояшы яҡтыртты. Быға тиклем ҡурай башҡорттоң һағышлы үткәнен генә һыҙҙыра ине, хәҙер:

Килде заман, инде шатлан, ҡурай,
Йәмле тауышың илгә яңраһын!
Ҡыуанып китһен урман, сахра, тугай,
Буҙ тургайҙар ҡыуанып һайраһын!
Уйна, ҡурай, күктән йәм шаулаһын,
Нур яйнаһын баштар өҫтөндә.
Йәм яҡтыһы юйһын ҡан шәүләһен,
Гөлдәр үҫһен таштар өҫтөндә!
Күкрәп, геүләп, һайрап, өзләп

Килде, ҡурай, уйнар миҙгелең,
Яҡты уйҙар һалып, дәрттәр ҡуҙғап
Күккә ашыр йөрәктәр һиҙгерен!

Эйе, был миҙгел килде хәҙер, тип ҡыуана шағир, быны бөйөк революция килтерҙе! Һәм уның изге күңеле һөйөклө Башҡортостанының киләсәген аҡ нурҙар эсендә күрә. Был нурҙарға табан барыр юлды кәртәләп бәғзе ҡара көстәр торғанлығын ирек Ҡояшының тәүге сатҡыһына күҙе сағылған йәш шағир тәүҙәрәк, бәлки, абайлап та еткермәгәндер...Халҡын һөйөп яһилдарҙан алған йөрәк яралары, ниһәйәт, төҙәлгәндәй ҙә итә, ул азатлыҡ яулай барған туған халҡы, тыуған иле — Башҡортостаны өсөн ихлас шатлана, халҡының ғәййәр йөрәгендә диңгеҙ ҡайнатырлыҡ ялҡын, егәрле беләгендә Сулпан йондоҙға уҡ атып тейҙерерлек ғәйрәт тойоп дәртләнә. Һәм ул ошо иленә, ватанына йәш йөрәктән урғылып сыҡҡан изге хистәрен арнай, ә уның дәрьяһы сикһеҙ:

Илебеҙ түшәк, еребеҙ карауаттай,
Ҡары-боҙо эҫе юргандай...
(«ғәскәр маршы”.)

Әйтегеҙсе, әйтегеҙ, тыуған илгә булған оло мөхәббәтте донъялағы ҡайһы әҙәбиәттә ниндәй шағир был тиклем дә йөрәккә яғышлы итеп, үҙәккә үткәҙерлек ҡайнар итеп еткерә алды икән?!

Өҫтәрәк мин Бабичтың революция ваҡытында яҙылған бер шиғырында Рәсәй менән берҙәмлек темаһының бик баҙыҡ, баяғы сәйәсмәндәр теле менән әйткәндә, пролетариат интернационаллығы рухында дөрөҫ яҡтыртылыуын баҫымлыҡлап үткәйнем. Һәр хәлдә, Шәйхзада Бабич ижады тураһында һүҙ алып барғанда, беҙҙең ғалимдарыбыҙға уның “ваҡытлыса милләтселек тапмаһы” тураһында ғына түгел, ә ижады һуҙымында һис ҡасан өҙөлмәгән, ҡыҫҡа ғүмере буйынса нурлы аҡ һыҙат булып барған ана шул интернационаллыҡ хистәре юҫығында ла үткерләргә кәрәк ине фекерҙе. Әлбиттә, башҡорт халҡының ҡоралы улдары — башҡорт ғәскәрҙәре ул саҡта ирекле Башҡортостан төҙөү мәсьәләһендә, тарихсыларыбыҙ әйтмешләй, “тәрән яңылышып, үҙҙәренең ҡан дошманы Колчак яғында һуғышып” йөрөгәнлектән, һәр ерҙә — шатлыҡлы табында ла, ҡанлы яуҙа ла үҙенең һөйөклө халҡынан бер иле лә айырылғыһыҙ ҡайнар ватансы Шәйхзада Бабич та иле менән ҡуша “яңылышты”, боролмалы юлдарҙа ғазап сикте, әммә шуныһына иманыбыҙ камил: көрәштең ул әсеһен дә, сөсөһөн дә халҡы менән бергә кисерҙе. Ләкин был “яңылышыу” тигән нәмә уның тыумыштан уҡ нурлы ижадына хәл иткес ҡара тап яғырға хоҡуҡ бирмәй һис кемгә, сөнки халыҡсан рухы уның бар булмышын һәм ижадын һау тәбиғәтле яһаны. Әле әйтелгән иң ҡатмарлы, ауыр осорҙағы шиғриәтендә лә Бабич шул уҡ иң сәләмәт халыҡсанлыҡ ҡылын сыңратып сиртте. “Башҡортостан” шиғырында шағир үҙенең гүзәл иленә, быуаттар буйына азатлыҡ яулап

көрәшкән арыҫландай ил батырҙарына, һәм уларға мәңгелек изге төйәк булмыш мөһәбәт Уралға һүрелмәҫ дан йырланы. Бабич Уралдың һуғышсан үткәнен, революцион хәҙергеһен данлау менән генә сикләнмәйенсә, алдағы көнөнә лә зирәк күҙ ташлап, уны киләсәктә "Хоҙай үҙе ҡыҙығыр" ер тип атаны. Дөрөҫ, атаҡлы бер ғалимыбыҙ яҙыуынса, Бабич үҙе төҫмөрләгән ана шул фирҙәүес һымаҡ йәмле, тигеҙ һәм алсаҡ тормошҡа барыу юлдарын бәғзе бер саҡ әллә ни баҙыҡ белмәгәндер ҙә, бәлки: "мөхтәриәт санаһына ултырып ҡараңғы, урау һәм хәтәр ерҙәрҙән тиҫкәре маҡсатҡа табан инде байтаҡ ара үткәнлектән, ул революцияның ленинизм байрағы менән яҡтыртылған оло юлынан алыҫлашҡайны. Шулай ҙа ул, ижадҡа бөйөк революция килтергән ысын азатлыҡ менән рухланғанлыҡтан һәм халыҡҡа тоғро моңдаш булыуҙан башҡа теләге булмағанлыҡтан, үҙенең йырҙарында тар күңелле, тиҫкәре холоҡло "сана хужаһының" кәйефе менән иҫәпләшмәҫ булды" (Ә. Харисов. Әҙәби күренештәр. Өфө, 1963; 63-сө бит).

1918 йылдың аҙағындабашҡорт ғәскәрҙәре, үҙҙәренең ысын дуҫтары кем икәнен яҡшыраҡ төшөнөп, ҡыҙылдар яғына сығабашлайҙар. Бабичтың да рухи-сәйәси ҡарашында һынылыш барлыҡҡа килә. Бөтөн халҡыбыҙ һымаҡ уҡ, шағир ҙә үҙенең "яңылышыуҙарын" (әгәр ҙә улар булған булһа?!.) аңлай, кемдең дуҫ, кемдең дошман икәнен күреп өлгөрә. Һәм башҡорт ғәскәрҙәре Ҡыҙыл Армияға ҡушылыу айҡанлы ул, үҙ-ара ҡул бирешеүсе башҡорт һәм Совет хөкүмәттәре ҡаршыһында үҙенең шағирлек бурысын теүәл үтәп, "Башҡорт халҡына көйлө хитаб"ын — тәрән сәйәси йөкмәткеле шиғри өндәмәһен яҙа; ул бында бер-береһенә дошман торған ике яҡтың — большевиктарҙың һәм колчаксыларҙың ниндәй маҡсат өсөн һуғышҡанлыҡтарын ябай халыҡҡа аңлашылырлыҡ ябай рәүештә, дөрөҫ итеп асып бирә, һәм башҡорт халҡы өсөн ул форсатта ҡыҙылдарға ҡушылыу хәйерлерәк икәнен дәлилләп күрһәтә. Үҙ халҡын ул сос булырға — хәйләкәр дошманды дуҫтан айыра белергә, Башҡорт Хөкүмәте алған дөрөҫ юлдан барыу өсөн йәнде-тәнде аямаҫҡа саҡыра. Шулай итеп, ялҡынлы шағирыбыҙ Шәйхзада Бабич, ниһәйәт, иле менән ҡуша үҙенең хаҡ юлына ирешкәйне, киләсәктә халҡын да, үҙен дә Ҡояшлы аҡ бейеклек көтә кеүек ине... Халҡы был көндө күпмелер күрә алды, ләкин шағирҙың ғүмере, таң юлына килеп тоташҡас ҡына, фажиғәле киҫелде...

Шәйхзада Бабичтың тәрән ватансылыҡ хистәре менән һуғарылған шөңгөр-яҡты шиғриәте Ҡояшҡа йөҙ борған ирекле халҡыбыҙҙы әлегәсә ифрат ныҡ рухландыра. Кеше күңеленең иң изгелекле нескә тойғоларын бөтәһен бер йәйғор-шәлкемгә туплаған лирикаһы рухи донъябыҙҙы артабанбайытыуға, халыҡсанлыҡ хистәре тәрбиәләүгә хеҙмәт итә. Уның сағыу, бай теле, шағирәнә тапҡырлығы, әҫәрҙәренең баштан-аяҡ гүзәл халыҡ ижадына һуғарылышы уҡыусылар күңелен арбап ала, халыҡҡа, халыҡтың әсә теленә ҡарата ихтирам һәм һөйөү тойғоһо уята. Егерменсе быуаттағы беренсе талантлы шағирыбыҙ булараҡ, Ш. Бабичтың совет осоро башҡорт әҙәбиәтенә нигеҙ һалыуҙағы өлөшө лә ифрат ҙур. Бабичтан

һуңғы күп кенә башҡорт һәм татар шағирҙары унең илаһи ижадын һеңдереп үҫтеләр, унең тәьҫирендә тәрбиәләнделәр.

Аҙаҡҡы һүҙ итеп, Шәйхзада Бабич ижадының совет кешеһенең рухи донъяһында тотҡан иң ҙур урынын күрһәтке килә. Был шунан ғибәрәт: Шәйхзада Бабичтан беҙ үҙ халҡыңды нисек өҙөлөп һөйөргә, теләгән бер шарттарҙа ла халҡың менән бер йән, бер тән булып йәшәргә, нисек итеп халыҡ бәхете өсөн аҡтыҡҡаса фиҙакәр хеҙмәт итергә, нисек итеп халыҡ өсөн, үлемдән дә ҡурҡмайынса, дәһшәтле көрәшкә керергә, кәрәк булһа, ғәзиз башты ла һалырға өйрәнәбеҙ.

Ҙур таланттарға бай булған Ватаныбыҙ әҙәбиәте күгендә ысын-ысындан халыҡ шағиры Шәйхзада Бабичтың да ап-аҡ көмөштәй шағирәнә йондоҙо мәңге балҡып янасаҡ.

11.11.1964.

2. Бабичса көйлө хитаб

Шағирҙың йөҙ йыллығына хөр әҙерлек көндәрендә үҙебеҙҙең Яҙыусылар берлегенең юбилейҙар гөрләтеү буйынса маһир чиновнигы ҡәләмдәштәргә Бабич йөҙө мөһөрләнгән буласаҡ ҡалай миҙал макетын (әммә мин бының бойомға ашырына ышанмайым!) тантаналы тамаша ҡылдыртып, әгәр артына "Бөйөк Ш. Бабич" тип яҙҙыртһаҡ, килешерме, тип һораны. "Эш беҙҙән генә ҡалһа, алдына яҙыу ҙа бик килешер, халыҡҡа ла 1919 йылдан уҡ *бөйөк* бит ул, ниңә уны йәшерергә! Тик шуныһы, һуңғы кәңәш һорап, барыбер, "Мудрый» ағайыңа бараһың — килештерерме икән ул? Ул бит *"бөйөк"тө* макетығыҙҙан мотлаҡ һыҙып ташлаясаҡ, тыуһан биш йыллыҡ юбилейында районлағы йорт-музейына вывеска ҡуйҙыртыуығыҙҙы хәтерләгеҙ, — тинем. — *"Күренекле шағир* Ш. Бабич" тип яҙырға теләгәнегеҙҙең «күренекле»һен бер баҫҡысҡа түбәнерәк төшөртөп, «танылған»ға алмаштырткайны түгелме, сөнки ул саҡта "Мудрый" үҙе «күренекле» һаналып йөрөй ине бит (ә уға тиң булырға тейеш түгел!)... Бабичтың шул йылда сыҡҡан китабына ла тейҙе буғай шауҡымы: Баш һүҙҙәрҙең береһендә "танылған", икенсеһендә «күренекле» тип икеле-микеле нарыҡланды... Шунан һуңғы осорҙа бит "Мудрый"ыбыҙҙың дәрәжәһен "бөйөк"кә күтәрҙегеҙ, тимәк... аръяғын үҙегеҙ белерһегеҙ".

Ҡыҙыҡһынған уҡыусыларҙың хәтерен яңыртайым: КПСС империяһы заманында: "Мәскәүҙә — "культ" (шәхес культе), Өфөлә — "культик", ә "культик"тың ҡулы аҫтында — "культя" ("Мудрый"), — тип мәрәкәләнгән ҡанун хөкөм һөрә ине. Шуның һөрһөү ҡалдығы әле лә ғәмәлдә: рухи донъябыҙға ҡағылышлы өлкәләрҙә республика күләмендәге ниҙелер булһа хәл ҡылғанда "культик" иң элек "культя"нан кәңәш ала. Сөнки "культик", ҡәҙимге империя ғәҙәте буйынса, зыялыларҙың һәммәһен бергә — һарыҡ көтөүе тип, ә "культя"ны шуларға оҙон сыбыртҡылы көтөүсе итеп һанағанлыҡтан, һәр "һарыҡ" менән айырым-

айырым мәшәҡәтләнеүгә ҡарағанда көтөүсе аша ғына эш ҡылыуҙың йәтешлеген яҡшы белә. Шуға күрә, теләйме-теләмәйме, мәҙәниәт чиновниктары үҙ ҡылыҡтарын "Мудрый"ҙыҡы менән яраштырырға мәжбүр: Юғары зауыҡлы ағай-энегә торлаҡ-фатирҙар, дәүләт бүләктәре, хөрмәтле исемдәр бүлешеүҙән башлап — китап баҫтырыу, сәхнәгә сығыу, хатта некрологка эйә булыу йәки булмау кеүек икһеҙ-сикһеҙ өлкәләрҙә бөтәһенән өҫтөнөрәк һерәйтелгән "Мудрый" ҡулы баҫа бизмән табағына. Һәм, әйтергә кәрәк, күптәребеҙгә унһыҙ йәшәү мөмкин дә түгел һымаҡ, сөнки һөрһөү империя мөхитендәге "утта янмаҫ, һыуғабатмаҫ" Микоян, Абуталиповтарҙай бик тәбиғи "мудрый"ҙарҙың береһе ул. Иҫегеҙгә төшөрөгөҙ: күҙ алдыбыҙҙа сиратланмыш "культик"тарҙың һәр береһе, кәмәләренең төбө умырылып, ҡуштандары менән ҡушабата тора, ә "Мудрый» ғына һәр саҡ яңы кәмәләге "культик"тың "культя"һы булып ҡала ла бизмән табағын әүәлгеләй әүештереүен белә...

Юбилей айҡанлы "Китап" нәшриәтебеҙ ошо билғауыр заманда ла яйын табып киң күңел, юғары зауыҡ менән биҙәп сығарған Бабич әҫәрҙәренең һуңғы баҫмаһының һуңғы битендә, көтмәгәндә, *"Бөйөк башҡорт* шағиры Шәйхзада Бабич" тигән өр-яңыса нарыҡлауҙы уҡығас, ваҡыт иләге хөкөмөн үҙ хөкөмөнә алмаштырған "Мудрый"ыбыҙҙың әллә ҡулы ҡалтырай башлағанмы, әллә үҙен "бөйөк"тән дә бөйөгөрәк "бәйғәмбәр"леккә сөйгәндәрме, юғиһә (уны Хызыр-Ильяска тиңләүҙәрен уҡығаным бар ине!), тигәнерәк уй килде башҡа, сөнки һуңғы йылдарҙа бит, башҡа берәүҙе лә түгел, тик уны ғына "бөйөк"ләп килгәйнеләр — бер үк дәрәжәлә күпме йөрөргә мөмкин!..

Һәр хәлдә, хаҡиҡәт был юлы еңгән, аҡка ҡара менән ташҡа баҫылған. "Бөйөк" билдәһен Бабич китаптарының башында ла күрербеҙ, Алла бирһә, сөнки тарих ғәҙел ул: империя ялағайҙарын түгел, ә уға ҡаршы фиҙакәрҙәрен нарыҡлай ул исем менән...

Бөйөк шағирыбыҙҙың ошоғаса ут күрше Татарстанда ғына юл ярған, ә башҡортсабаҫмаларына индерелмәгән әҫәрҙәренә лә аҡ юл һыҙылған икән был йыйынтыҡта. Быныһында ла ғиллә барҙыр, сөнки "культик" һәм "культя"ларыбыҙ ут күршеләребеҙ башларҙан элек эш башларға үҙҙәре баҙнат итмәй, беҙгә лә рөхсәт бирмәй килде бит бығаса. Быуа йырылған, тимәк — "бөйөк" тип ауыҙ асылғас, йотоп ебәреү фарыз: текстологик йәһәттән дә ижадын бөйөк кимәлдә тикшереп нәшерләү, ошоғаса, ат ялына йәбешкән тегенәктәй, *баҫ*манан баҫмаға тегелеп йөрөгән боҙоуҙарҙан, хаталарҙан арындыртыу мөмкин булғандыр, тим, был юлы. Әйткәндәй, бөйөк шағирҙың ижадын да, заманын да арыубелгән Сәйфи Ҡудаш: "Хәсән Туфан менән тикшереп ҡарап, беҙҙә нәшер ҡылынған Шәйхзада Бабич китабында йөҙ егерме биш етди хатаға юлыҡтыҡ, ғалимдарыбыҙ ниңәлер шул хаҡта тыңларға теләмәйҙәр", — тип рәнйей торғайны, күптәрҙең хәтерендәлер...

Ниһайәт, был изге эштең үтәлешен бағып ҡыуаныр өсөн, бөйөк шағирыбыҙ үҙе тере саҡта үҙенең ҡулы аҫтынан уҡ яугир листовка рәүешендә ташҡабаҫтыртып сығарып халыҡҡа тараҡҡан, шулай уҡ һуңғы йыйынтыҡты төҙөүсе лә ғилми аңлатмаларында һылтанған киң билдәле

"Большевиктар менән килешеү туралы башҡорт халҡына көйлө хитаб"тың тексын хәҙерге баҫмалағыға сағыштырып ҡараным. Дәрәжәләр бүлешеүгә урын юҡ был тәңгәлдә, кемдәндер фатиха юллау ҙа мотлаҡ түгел — көйлө хитаб, ниһайәт, Бабичса көйләнгәндер? Ҡайһындай ҙа тос һәлмәкләнә бит ҡулыбыҙҙа нәшриәтебеҙҙең игелекле бүләге!

Оҙон һүҙҙең ҡыҫҡаһы, хозур кәйефем көтмәгәндә ҡыйралды, күңелем тоноҡланды. Күҙ һирпеүҙән үк шәйләнә: Бабич үҙе бүлектәрҙе билдәләүҙә рим цифрҙары ҡулланһа (сәйәси әҫәргә ул эпик олпатлыҡ өҫтәй), хәҙергеләр иһә ғәрәп һандары ҡуйып сыҡҡан (әйтерһең, Бабич үҙе ғәрәпсә белмәгән!). 224 шиғри юлдарҙың 74 урынында Бабичтың хаҡлы һайланған һәм шиғри аһәңенә хеҙмәт иткән тыныш билдәләре, минеңсә, бикәр алмаштырылған. Кәрәк булғанда иҫке текстарҙың хаталарын төҙәтеү, тыныштарын яңыса билдәләү тәбиғи ҙә, мотлаҡ та эш, әлбиттә; ләкин, ҡаш төҙәтәм тип, күҙ сығарып ҡуймағайҙары. Уғата аянычлыһы — Байтаҡ урында Бабич һүҙҙәренең төптө башҡа һүҙҙәргә әйләнеүе йәки мәғәнәһен боҙоп яҙылыуы. Шулай уҡ дөйөм башҡорт тексы эсенә 47, 48-енсе юлдарҙа автор тарафынан ***махсус саф татарса*** яҙылмыш: "...Дутов яҡлы булып,/ Ҡара,пычраҡ юлны ҡуғансыз!" — тип пантатарсылар ауыҙынан әйттертелгән тура телмәрҙе бөгөн килеп саф башҡортсаға үҙгәртеү ҙә бөйөк шағирҙың милли-сәйәси позицияһын дөрөҫ күрһәтеүгә, ихтыярын ихтирам итеүгә кермәйҙер (Л.Н. Толстойҙың романындағы французса тура телмәрҙәрҙе береһен-бер ҡалдырмайынса урыҫсалаштырыу уйы берәүҙең дә башына килмәгән дәһә!). Дөрөҫ, әҫәрҙәренең ошоноһонан башҡаларының төп нөсхәләренә етмәне ҡулым, ни бары ошо береһе хаҡында ғына һүҙем, әммә, әммә... Бер мискә балды боҙған дегетте иҫтә тотоп, йыйынтыҡ бәҫен ебәрә яҙған мөшкөл хәлгә күсәйек (һулда — өҫтән башлап һанағандағы шиғри юлдың урыны һәм Бабичтың үҙ һүҙҙәре, һыҙыҡ аша уңда шуларҙың китапта баҫылышы):

15. Уйла, ул һис... — Валлаһи ул...
16. Донъя нәһтәһенә... — Донъя аҡсаһына...
39. "Краснай гвардия" — "Красный гвардия".
45. ...быcраҡ таштаб — ...быcраҡ ташлай.
46. Йөрөй... — Юрый...
49. Яуыз яндар... — Ауыҙы яман...
60. Таныймын тип — Таныйым тип.
69. ...шул Дутовтан — ...ти шул Дутовтан.
71. ... Балшауик мән — ...большевик менән.
75. Ярлы, эшселәрҙең... (өтөр айыра) — Ярлы эшселәрҙең... (өтөр юҡ).
78. ...менһен, ти, — ... менһен, тип,.
79. ...имһен, ти, — ...имһен, тип,.
87. ...ярлы, эшсе халыҡ... (өтөр айыра) — ...ярлы эшсе халыҡ... (өтөр юҡ).
95. ...иҙелһен, ти... — ...иҙелһендәр...
107. ...тере яман... — ...төрө яман...

108. ...әллә балшауикме... — ...әллә большевиктар...
123. ...Себер яҡта... — ...Себер яҡтан...
125. ...түшен асҡас... — ...төҫөн асҡас...
129. ...бикар түккәнбеҙ... — ...бикар ҡоймайбыҙ...
130. ...әйтә башланы... — ...һуғыш ташланы...
132. ...илдәренә ҡайта... — ...өйҙәренә ҡайта...
142. ...әйҙәй күҙҙәрен... — ...атты күҙҙәрен...
149. башҡорт халҡын... — башҡорт халҡы...
153. ...беҙҙең башҡортлоҡтоң... — ...беҙҙең, башҡорттарҙың...
161. Белеп тороң... — Белеп торһон...
177. ...Ғәрәсәт ваҡыт... — ...форсат ваҡыт...
185. Әйтә ине... — Уйлай ине...
186. Үлем, иҫереклек... — Үлем иҫереклеге...
199. ...Ғәзиз иле... — ...Ғәзиз ере...
203. Инанмағыҙ... — Ышанмағыҙ...
204. ...йырҙап һөйҙәйем... — ...йырлап көйләйем...
211. Һеҙҙе аяғандай... — Һеҙҙе ҡыҙғанғандай...
217. Ҡотҡо һалып... — Фетнә һалып...
Теләстең башҡорт... — Теләс башҡорт...

Хитаб ошо егерменсе быуат башындағы башҡорт яҙма әҙәби теленең бик ҡиммәтле ҡомартҡыһы булғанлыҡтан һәм әлеге көндә ул листовка илебеҙҙә бер нисә бөртөк кенә тороп ҡалғанлыҡтан, был мәҡәләнең “Башҡортостан” гәзитенә (1995 йыл 20 ғинуар һаны) тәғәйенләнешендә уны, зауыҡлы киң ҡатлам уҡыусыларҙың да ҡулын оҙайтыу өсөн, хәлебеҙҙән килгәненсә хәҙерге яҙмаға күсереп, нисек бар — шулай ташҡа баҫтыртып сығарыу кәрәклеге тойолдо. Ул замандағы ғәрәп хәрефле яҙыуыбыҙҙа етешмәгән ҡайһы бер өндәрҙе, ҡәҙимге ҡағиҙә буйынса, һәр кем үҙе етештереп уҡыһын. Тикшереүгә уңайлыҡ өсөн, шиғри ун юллыҡтар минең тарафтан номерланды.

30.12.1994.

3. Бабич ҡулъяҙмаһы

Бабич әҫәрҙәренең дә, шағирҙың үҙе һымаҡ уҡ, фажиғәле һәм ҡатмарлы яҙмышҡа дусар булғанлығы билдәле. Шуға күрә байтаҡ ҡына шиғырҙары, үкенескә ҡаршы, ҡасандыр кемдәрҙер ҡайҙалыр боҙоп йә ботарлап баҫтыртҡанынса, хаталы килеш әлегәсә китаптан китапҡа күсенеп йөрөүен дауамлай; хатта киң билдәле “Большевиктар менән килешеү туралы башҡорт халҡына көйлө хитаб”ы ла, “үҙгәртеп ҡороу” заманаһы арҡаһында мәжбүри сонторлоғонан ҡотҡарылып, ниһәйәт, тарихыбыҙҙа икенсе ҡабат тулы килеш донъяға сығарылһа ла, баяғы бәғзе бер кәмселектәрҙән арына алманы әле. Шуға күрә бынан биш-алты йыл элек шул әҫәрҙең Бабичыбыҙ үҙе иҫән сағында һәм күҙе алдында уҡ

листовка итеп ташҡабаҫтыртып таратылған төп нөсхәһен архивтан табып алып, күрер күҙлеләргә көҙгө булһын тип, нисек бар — шулай (башҡорт теленең көнсығыш һөйләшендә) гәзитебеҙ “Башҡортостан”да сығарткайным, әммә... зыялы бер әфәндебеҙҙең: “Б...та соҡсонаһың!” — тип битәрләүенән ғәйрене ишеткәнем булманы. Сөнки шул мин башҡарған эш - төп нөсхәләгеп китаптарҙағы текстка сағыштырып ҡарау һәм рыяларын “аулау” уйы һис берәүҙең башына килмәгәйнее, буғай... Дөрөҫ, бөйөк шағирыбыҙҙың утлы юлдарында түгелеп-сәселеп ҡалған ижад ынйыларын берәмтекләп йыйнауҙа һәм һаҡлап ҡалдырыуҙа бер нисә быуын ғалимдарыбыҙ, шағирҙарыбыҙ, бигерәк тә хәҙерге заманда Рауил Бикбаев уҙаман, күп эшләне һәм эшләй. Әммә был эшкә махсус шарт тыуҙырылмай тороп, баяғы “күсенеп йөрөүсе” етешһеҙлектәрҙе бөтөрөп булмаясаҡ. Бының өсөн, атап әйткәндә, Шәйхзада Бабич әҫәрҙәренең барлыҡ мәғлүм текстарын ҡағыҙҙары туҙып бөтмәҫтәре элек ғилми йәһәттән энә күҙәүенән үткәреп, а**кадемик баҫмаһын әҙерләп сығарыу утә зарур.** Әле килеп изге эшкә иғәнә өҫтәлә торһон тип, бөйөк шағирыбыҙҙың йәнә бер ҡулъяҙма ҡомарткыһына иғтибар иттертмәксемен: *игелек ҡыл да һыуға һал — халыҡ белер, халыҡ белмәһә — Балыҡ белер*, тиҙәр бит. Йәғни, эсәр һыуы менән ҡуша эсенә йота тороп та, шуны ла белмәһә халыҡ, һыу аҫтындағы балыҡ — донъя тотҡаһы (тәүдиндәге Тотан-Хоҙайыбыҙ) үҙе белер, игелегең елгә осмаҫ, йәнәһе...

Игелек, тигәндән, бынан һикһән ике йыл әүәл бөйөк шағирыбыҙ ҡулы сыбарлаған мөҡәддәс ҡағыҙҙарҙы, юҡҡа сығыу яҙмышынан йолоп алып, бынан алтмыш дүрт йыл элгәребеҙҙең өсөн бүләк итеп биреп ҡалдырған бер игелекленең аңлатмаһын уҡыйыҡ.

“Ошоноң менән, — тип яҙа ул уҙаман, — Ш. Бабичтың үҙ ҡулы менән 1918 йыл 2 июндә яҙылған “ Башҡортостан” һәм “Ҡан шәүләләре” тигән ике яҙмаһын ебәрәм. Был шиғырҙар быға тиклем дә матбуғатта яҙылып сыҡты булһа кәрәк. Ҡиммәте шунда: быларҙың үҙ ҡулы менән яҙылыуында.

Был ике шиғырҙы ул 1918 йыл ниндәйҙер сәбәп менән үтеп барышлай хәҙерге Баймаҡ төбәге Таулыҡай ауылы Вәлиулла Шоңҡаров тигән мулланың төрлө иҫтәлектәр яҙа торған бер “мәжмүғә”һенә (о бщая тетрадь) яҙып киткән. Шунан ҡырҡып алынды.

1917 йыл Октябрь революцияһы булғас та (8/XII — 1917) сыҡҡан шул ваҡыттағы газеталарҙабаҫылғанын (“Истиҡбал шиғыры. Оло Башҡортостан ҡоролтайына килгән вәкилдәргә”) үҙ ваҡытында ҡыҙыҡһынып күсереп алғанмын. Быны ла ебәрәм.

Баймаҡ төбәге, Таулыҡай ауылы башланғыс мәктәп уҡытыусыһы **Абзаҡов Исмәғил** һәм **Абзаҡов Әхмәт.**

1/I —1936 йыл.

P.S. Был шиғыр (“Истиҡбал”. — *Й.С.*) Октябрь революцияһынан һуң Ырымбурҙа ҡоролтайға йыйналыусыларға арнап яҙылған ине. Шул йылда

Ырымбурҙа сыға торған “Башҡорт” газетаһында баҫылып, шунан күсерелгән.

Баймаҡ төбәге, Таулыҡай ауылы: **Абзаҡов.**

1/I — 1936”.

Ҡиммәтле ҡулъяҙма башындағы өҫкө мөйөшкә: “Был яҙма мәшһүр башҡорт шағиры Шәйехзаҙа Бабичтың үҙ ҡулы менән яҙылған бер шиғыры булыр. 14/III — 34 й.” — тип аңлатып, “А Б...” ҡултамғаһы ла ҡуйылған. Был дата, тимәк, ҡомартҡы-ҡағыҙҙың мөхтәрәм Вәлиулла Шоңҡаров дәфтәренән ҡырҡып алыныу ваҡыты. Әйткәндәй, ошо ике шиғырҙың береһенең — милләтебеҙҙең ул саҡтағы программаһы һәм гимны булырҙай мәшһүр “Башҡортостан” әҫәренең — ҡасан, ҡайҙан, кемдән алыныуы билдәһеҙ ҡалған фотокүсермәһе Рәсәй Фәндәр академияһы фәнни үҙәге Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты архивында ятһа ла, уға ҡарап ҡына ҡулъяҙманың үҙенең яҙмышын һәм шуға бәйле Бабич биографияһы мәғлүмәттәрен (өҫтә килтерелде) асыҡлау мөмкин түгел ине; был табыш иһә шул бушлыҡты тултыра һәм ике шиғыр тексының хәҙерге баҫмаларҙағы бәғзе бер етешһеҙлектәрен (яңылыштырылған йәки алмаштырылған һүҙҙәр, һүҙҙәрҙәге мәғәнәүи хәрефтәр, тыныш билдәләре һ.б.) кәметеүгә форсат бирә. Әйтәйек, “Башҡортостан” шиғыры хәҙерге баҫмаларыбыҙҙа авторҙың үҙ ҡулъяҙмаһындағы “Ҡаһарман ғәскәрҙәребеҙгә бүләк” тигән арнауҙан һәм:

Башҡортостан, нурбостан —
Сөнбөлөстан, гөлбостан,
Шунда тыуған, шунда үҫкән —
Башҡорт атлы арыҫлан! —

тигән, ә 1918 йыл авторҙың үҙ ҡатнашлығында айырым бит — листовка булып баҫылып сыҡҡан тексындағы һәм шул йылғы “Йәш Башҡортостан. Зәңгәр йырҙар” китабындағы:

Башҡортостан — гөлбостан,
Сөнбөлбостан, нурбостан... —

тип бер аҙ үҙгәртелгән шул беренсе строфаны бөтөнләй юҡҡа сығарып (ә Татарстандыҡылар быны һаҡлаған!), икенсеһенән башлап ебәреү сәбәпле, шиғырҙы уҡый башлағас та ундағы “арыҫландар”ҙың кемдәр улар — тәбиғи арыҫландармы, әллә кешеләрме икәнлеге шунда уҡ аңлашылмай. Ә бит автор баяғы юғалтылған строфа менән баштан уҡ уларҙың аслан башҡорт халҡы икәнлеген ауыҙ тултырып әйткәйне...Әлегәсә йөрөп-ятҡан текстарҙың төрлөлөгөнә ҡарата ла иҫкәртәйек: һуңғы варианттағы “Ҡыуан аңлап, әй Ватан”, — тип башланмыш аҙаҡҡы строфа был ҡулъяҙмала юҡ (һуңғараҡ өҫтәлгәндер); ә унан алдағы: “Уралҡайҙың аҫты алтын”, — тип башланғаны иһә баяғы бит-листовкаға кермәгән (бәлки, биткә һыйышмау сәбәпле ҡыҫҡартылғандыр). Ғөмүмән, ҡулъяҙма һәм баҫма текстарҙы

сағыштырып тикшереү емешле буласағын иҫтә тотоп, күпселек уҡыусыларыбыҙ өсөн ауыр тойолған ғәрәп хәрефле ҡулъяҙманы хәҙергегә әйләндереп бирәйек (баҫмаларҙа төрлөсә йөрөгән урындар әүеш (курсив) хәрефтәр менән айырыла):

Башҡортостан

Башҡортостан, *нурбостан* — сөнбөлөстан, *гөлбостан,*
Шунда тыуған, шунда үҫкән — башҡорт атлы арыҫлан*!*
　　Арыҫландар үҙ ерен залимдарҙан таптатмаҫ,
　　Таптайым тип атлаһа — башҡорт ҡаны атлатмаҫ,
　　Ил өҫтөнә сапҡан яу — башҡорт *йәнен* ҡаҡшатмаҫ,
　　Бысраҡ табан аҫтында — башҡорт намыҫы ятмаҫ*!*
Башҡортостан — *нурбостан, сөнбөлөстан, гөлбостан,*
Шунда тыуған, шунда үҫкән — башҡорт *тигән* арыҫлан!
　　Башҡортостан баҡсаһы — арыҫландар торған ер,
　　Арыҫландар бабаһы — ҡаһармандар йөрөгән ер,
　　Ҡаһармандар кәүҙәһен — ҡосаҡлаған, күмгән ер,
　　Хәләл ҡандар шәүләһен — күккә тәрсим ҡылған ер*!*
Башҡортостан — *нурбостан, былбылстан, гөлбостан,*
Шунда тыуған, шунда үҫкән башҡорт *улы* арыҫлан*!..*
　　Башҡорт халҡы тарихта — ғәйрәт менән фаш булған,
　　Киң иреккә ашҡынған — *рухындағы т*ашҡындан;
　　Һәр ваҡытта намыҫын — үҙ башына баш ҡылған...
　　Тыуған илен *һаҡларга* — үҙе булған таш ҡурған.
Башҡортостан — гөлбостан, *сөнбөлөстан*, нурбостан,
Шунда тыуған, шунда үҫкән башҡорт *тигән* арыҫлан*!*
　　Көслө намыҫ, ташҡын йән — торҙо, тағы ҡалҡынды;
　　Тағы башҡорт *халҡына* — иҫке ялҡын балҡыны;
　　Мең йәһәннәм тыуҙырыр — бер башҡорттоң ялҡыны*!!.*
　　Миллион ожмах яра(л)тыр — бер Уралдың алтыны*!!.*
Башҡортостан..
....
　　Уралҡайҙың аҫты алтын — өҫтө шиғыр, үҙе нур,
　　Киләсәктә был ергә — Хоҙай үҙе ҡыҙығыр*!*
　　Фирҙәүестәр төҙөлөр — әлүән ниғмәт теҙелер...
　　Күкте ташлап мәләктәр — был *ерҙәрҙә* гиҙенер*!*
Башҡортостан..
....

Шәйхзада.
Июнь — 2. 1918.

Был дата, моғайын, шиғырҙың тыуыу көнөлөр — беренсе башлап шул дәфтәргә яҙылғандыр ҙа һуңынаныраҡ ике тапҡыр баҫмаға әҙерләү

барышында текстка артабан билдәле яңы строфалар, һүҙҙәр ҙә өҫтәлгәндер, ҡайһы урындар саҡ ҡына үҙгәртелгәндер. Әммә мәшһүр "Башҡортостан" шиғырының тәү башлап аватор үҙ ҡулы менән датаһын билдәләгән баяғы көндә - 1918 йылдың 2 июнендә (иҫке стиль) хәҙерге Баймаҡ районы Таулыҡай ауылында Вәлиулла мулла Шоңҡаров йортонда яҙылыуына шикләнмәйем. Быға ышаныслы дәлил – шул йылда (8 июлдән һуң Башҡорт Хөкүмәте Силәбенән Ырымбурға ҡайтҡас) Ырымбурҙа донъя күргән "Йәш Башҡортостан. Зәңгәр йырҙар" китабындағы текстка Таулыҡай нөсхәһендә булмаған "Ҡыуан аңлап, әй Ватан..." тип башланмыш һуңғы строфаның өҫтәлеүе. Күренеп тора: шағир әҫәр өҫтөндә артабан эшләгән дә китапҡа баяғы һуңғы өлөштө өҫтәп кереткән. Был хәл, әлбиттә, тәүге Таулыҡай тексын яҙыуҙан һуңғараҡ булған.

Яңы стиль менән 1918 йылдың 11 мартында Ырымбур большевиктары тарафынан ҡулға алынған шағир, апрелдең өсөнән дүртенә ҡаршы төндә ҡаһарман Әмир Ҡарамышев әтрәте килеп төрмә ишектәрен ҡайырып асҡас, шуларға ылығып, Үҫәргән ерҙәре аша Баймаҡ төбәгенә олаҡҡан һәм баяғы Таулыҡай ауылындағы Вәлиулла мулла Шоңҡаров йортонда күпмелер ваҡыт йәшәп алған, ҡайһы бер шиғырҙарын да шуларҙа ижад иткән булһа кәрәк. Бабичтың был ҡасыу маршрутын асыҡлағанда шуны иҫтә тотоу мөһим: Ырымбурҙағы уның иң яҡын дуҫы – Һаҡмар буйындағы Рәдүт ауылынан сыҡҡан шағир Төхфәт Сенәкәй (Рәдүди). Бабич, бәлки, тәүҙә дуҫының шул Рәдүт

ауылында боҫоп, артабан Һаҡмар аръяғындағы татар Һарыҡташы ауылы – урыҫ ҡасабаһы Спасское аша (быныһы бик шикле) киткәндер; йә булмаһа (быныһы ышаныслы), Һаҡмарҙы Эйек Тамағы (Воздвиженка) тәңгәлендә, йә булмаһа үрҙәрәк Сәнкем-Биктимер ауылы тәңгәлендә кисеп, дуҫы Төхфәт Сенәкәй мәҙрәсәлә уҡып сыҡҡан һәм үҙенең яҡшы танышы – Башҡорт Хөкүмәтенең иң беренсе финанс бүлек мөдире Фатих мулла Дәүләтшин йәшәгән башҡорт ауылы Сәнкем-Биктимер һәм Зәйнулла мулла Ишдәүләтов ауылы Юлдаш аша Ҡаҫмартты үрләп барып Йылайыр юлынан Таулыҡайға еткәндер...

"Ҡан шәүләләре" ҡулъяҙмаһының аҙағында авторыбыҙҙың үҙенсәлекле имза-ҡултамғаһын да күрәбеҙ — китаптарына биҙәк итеп ҡуйырлыҡ. Шунан аҫтараҡ ҡунаҡсыл ғаилә ағзаларының береһенең ифрат мөһим өндәмәһе яҙылған: "Йәшәһен Шәйхзада Бабич — йәшәһен башҡорт халыҡ эше өсөн өмөтөн арытмаусы!" Тимәк, большевиктар тарафынан милли хөкүмәтебеҙ тар-мар ҡылынған һәм күптәр өмөтһөҙлөккә төшкән аяныслы шул осорҙа ла Башҡортостаныбыҙҙың ҡабат аяҡҡа баҫырына Бабичтың өмөтө ҙур булған. Ябай халыҡ тарафынан үҙенә ҡарата әйтелгән ошо ихлас, ялҡынлы һүҙҙәр бөйөк шағирыбыҙ күңеленә һеңеп ҡалып, артабан әлеге шиғырына:

Башҡортостан йәшәһен,
Сөнбөлөстан йәшәһен!
Шунда тыуған, шунда үҫкән
Арыҫландар йәшәһен! —

тигән дөрләүек юлдарҙы өҫтәргә этәргес булғандыр, бәлки, тип уйларға ла урын бар...

Төпләмәһенән киҫеп алып ебәрелгән был дәфтәр битендә саҡ ҡына аҫтараҡ йәнә яҙыу — киләсәктә бында (шул дәфтәр битендә) ядкәр мөһөрләйәсәк тилбер йәндәр киҫәтелә:

“Тамғаһын ғарузға (ғаруз — шиғыр үсәүе тураһындағы белем — метрика. — *Й.С.*) төҙөгән шиғыр. Ҡулың менән ядкәр яҙып, *Бабич* ҡулын боҙмаһаң ине, тип, — **Әхмәр Шонҡаров**”, — Вәлиулла мулланың улылыр, моғайын...

21.11.2000.

ӘҘИПТЕҢ РУХИ ДОНЪЯҺЫ

1. Тормошҡа ғашиҡ

(Шағирҙың 60 йәшенә яҙылғайны)

Һин уларға һөйлә минең хаҡта —
Алтын көҙҙә бында килгәнде,
Һөйлә минең, тау һауаһы кеүек,
Керһеҙ һөйөү менән һөйгәнде
Бынау ҡаяларҙы, урмандарҙы,
Урмандарҙың һәр бер ағасын,
Ағастарҙың һәр бер япрағын да!
Һуңғы һулышымды алғансы
Һөйәсәкмен Урал-атайымды —
Шундай йөрәк миңә ул бирҙе;
Һыйҙырҙы ул, минең кескәй йөрәк,
Бар донъяға булған һөйөүҙе.

Ғәйнан Әмири. “Имәнгә”.

Беренсеме, икенсеме класта уҡып йөрөгән мәл. Тәнәфестән яңғыҙ үҙем генә атлығып индем. Ниндәйҙер йәшәрән тойғо, сихри тойғо мине класс бүлмәһенә ҡыңғырау тауышынан элек һөйрәне. Берәү ҙә юҡ унда, тәрән тынлыҡ. Һаҡ ҡына баҫып өҫтәл эргәһенән үтеп барғанда, ҡапыл тулҡынланып, мин үҙемде тартып индергән әлеге серле көстө абайланым. Класс журналы өҫтөндә латин хәрефтәре менән ташҡа баҫылған “Ауғус төнөндә” тигән китап ята ине.

Йөрәгем дерелдәп, уҡытыусым өҫтәленә эйелдем. Китап тышы, үҙенең тылсымлы “ауғус төнө” менән башкөлләй арбап, урғылып ташырға торған балалыҡ хыялыма тылсымлы офоҡ асып, һыҙылып ҡына сыҡҡан

ҡурай моңолай, күңел түремдән һүрелмәй сыңлап торҙо. Шул арбаулы хәлдә мин хатта китапты яҙған кешенең исемен дә хәтерләп ҡалырға өлгөрмәнем — уҡытыусым килеп инде. Ошо көндән һуң минең үҙемдең ғүмер буйына һуҙылған “ауғус төнөм» башланды. Бына тора ул: тымыҡ ҡына, уйсан ғына төн, ялтлап ятҡан һыу өҫтө. Күктә йоҙроҡтай шаҡырай-эре йондоҙҙар, тамсылай тулышып Ай йөҙә. Һарғылт Ай нурҙары үтәһенән алыҫ офоҡ, ә унда миңә ҡарай елеп килеүсе, көмөш елкәндәрен ебәрә киргән сихри карап күренә. Ул мине үҙенең тылсымлы донъяһына, “ауғус төнөнә” сәйәхәткә алып сыып китәсәк...

Үҙемә ошо тылсым донъяһын бүләк иткән әҙиптең кем икәнен мин бары тик күп йылдар үткәс, 1962 йылда Өфөгә йәш яҙыусылар семинарына килгәс кенә, белдем. Үҙебеҙгә ысын атайҙай хәстәрлек күрһәтеп йөрөгән өлкән шағирҙың фатирындағы тар ғына эш бүлмәһендә күңелдәребеҙ киңәйеп ултырғанда, кәштәләге таушалып бөткән бер китапҡа күҙем төштө һәм, теге саҡта уҡытыусым өҫтәле эргәһендә иҫәңгерәп торғандай, йөрәгем дереләп, ҡысҡырып ебәрә яҙҙым: “Ауғус төнөндә”!..

Был китаптың авторы һәм беҙ ултырған ҡунаҡсыл бүлмәнең хужаһы бер үк кеше — фронтовик шағир, Сталинград ҡаһарманы Ғәйнан Әмири ине.

Башҡорттоң күренекле яҙыусыһы Ғәйнан Әмири — тыумыштан Ғәйнан Ғимазитдин улы Әмиров — 1911 йылдың 25 авгусында Яңауыл районының Яңы Уртауыл (Янтыҡ) тигән ауылында ярлы ерекмән ғаиләһендә донъяға килә. Тыуған ауылы мәктәбендә башланғыс белем алғас, 1927 — 1930 йылдарҙа бөрө педагогия техникумында уҡый. Тиҙҙән ул башҡорт әҙәбиәтенең үҙәгенә — Өфөгә күсеп, 1930 йылда “Коммуна” гәзитенә эшкә инә. Унан һуң “Йәш төҙөүсе”, “Ленинсы” гәзиттәре редакцияларында эшләй. 1933 — 1935 йылдарҙа Ҡыҙыл армия сафтарында хеҙмәт итеп ҡайта һәм Өфөлә башҡорт педагогия институтын тамамлай. 1938 йылдан 1942 йылға тиклем Башҡортостан тарих, тел һәм әҙәбиәт ғилми-тикшеренеү институтында ғилми хеҙмәткәр булып эшләй. 1942 йылда Башҡортостанда төҙөлгән башҡорт бригадаһы сафында фронтҡа китә, Сталинградтағы ҡаты һуғыштарҙың башынан алып аҙағынаса батырҙарса ҡатнаша. Орел — Курск дуғаһы, Днепр аша кисеү һуғыштарында ла ул уттың эсендә була.

Һуғыштан ҡайтҡас, Ғәйнан ағай Әмири бер нисә йыл буйы Башҡортостан Яҙыусылар берлегендә рәйес урынбаҫары, партияның Башҡортостан Өлкә комитетында әҙәбиәт һәм сәнғәт секторы мөдире булып эшләй. 1952 — 1955 йылдарҙа ул СССР Фәндәр академияһының Башҡортостан филиалы тарих, тел һәм әҙәбиәт институтында сектор мөдире, 1955 — 1957 йылдарҙа “Әҙәби Башҡортостан” (хәҙерге “Ағиҙел”) журналында редактор урынбаҫары вазифаһын башҡара. 1958 йылдан алып ул профессиональ яҙыусы.

Ғәйнан ағай Әмириҙең тилбер ҡәләме утыҙынсы йылдарбашында, “Коммуна” гәзитендә эшләгәнендә замандың көрәш һандалында сүкелеп үткерләнә башлай. Ул ваҡыттағы йәш яҙыусы, яңылыҡҡа табан әүҙем

үҙгәрештәр барған ҡатмарлы ауыл тормошо ҡаҙанында ҡайнап, 1933 йылда “Яңы уйҙар” тигән тәүге очерктар китабын сығара. Синфи көрәш рухында яҙылған әҫәрҙәрҙә колхоз ҡороу юлындағы яңы характерҙар яралыуы, кисәге аңһыҙ ярлы ерекмән ағайҙарҙың бөгөн күмәк эш өсөн әүҙем көрәшсе булып әүерелеүҙәре илдәге бөйөк боролоштоң төп һыҙаты итеп бәйәнләнә ине.

Был йылдарҙа Ғәйнан Әмири шиғриәттә лә үҙен күрһәтеп өлгөрҙө. Ваҡиғаларҙың эҫе эҙенә баҫып ижад ителгән “Кәмһетелгән Шәмситдин, трутденһеҙ Нуритдин” поэмаһында ул ауылдағы иҫке менән яңының ҡырҡыу бәрелешен, социалистик мөнәсәбәттәрҙең урта хәлле ерекмәндәр аңына нисек үтеп кереүен, һөҙөмтәлә синфи алыш күмәк хужалыҡ файҙаһына хәл ителеүен теремек картиналар, халыҡҡа үтемле йор тел менән һүрәтләп бирә алды.

Һуғышҡа тиклемге башҡорт прозаһына өҫтән генә күҙ һалғанда ла, Ғәйнан ағай Әмириҙең заман йөрәк тибешенә ни тиклем һиҙгер булыуын, социалистик Ватан, партия мәнфәғәттәре менән башкөлләй янып йәшәүен, үҙенең төп ҡоралы ҡәләмде үткер штык дәрәжәһенә күтәрә алыуын асыҡ күрергә мөмкин. Бөгөнгө көндә лә, империалистик лагерь донъяға әсе һуғыш һөрөмөн бөркөп һулаған дәүерҙә, әҙәбиәтебеҙгә хәрби-патриотик тема ни тиклем мөһим булһа, фашизмдың һоро үләт сире таралған 30-ынсы йылдар ахырында бигерәк тә зарур ине был. Ошо зарурлыҡ заманында ҡыҙыл йондоҙло шлем кейгән Ғәйнан Әмири Тағы ла ут һыҙығының алдында барҙы: уның баяғы “Ауғус төнөндә” тигән ҡыҙыл әрмис хикәйәләре китабы баҫылып сыҡты. Был әҫәрҙәрҙә автор йәшлек дәрте илһамландырған революцион романтизм алымы менән хәрби антҡа тоғролоҡ, тыуған илдең фиҙакәр һаҡсыһы, ҡалҡаны булып етешеү мәсьәләләрен ҡуя.

“Беренсе һикереү” хикәйәһендә ҡыҙыл әрмис Кинйәбулат Ҡәҙерғолов хаҡында бара һүҙ. Был ябай башҡорт балаһының ете быуын ата-бабаһы Ҡош Юлына осоп менеп ерҙе күҙләргә хыялланған, ләкин шуны тормошҡа ашыра алмаған. Уларҙың кинйәһе ҡыҙыл әрмис Булат ҡына ата-баба хыялын ғәмәлгә әйләндерә башлай: ҡыҙыл йондоҙло самолетта ул бөркөт Юғарылығына күтәрелеп, ыласын кеүек ҡанат киреп тыуған ергә һикереп төшә.

“Йәлил” хикәйәһендә хәрби сәйәхәт ваҡытында саңғысылар әтрәте ыжғыр буранда аҙашып юлдан яҙғас, үлер сиккә етеп сирләгән ҡыҙыл әрмис Буранбаев иптәштәрен, колонна башында барып, еңеүле финишҡа еткерә, шунан һуң ғына иҫен юйып йығыла.

1939 йылда яҙылған “Гөлбикә” нәҫерендә автор социалистик Ватан темаһына тәрәнерәк үтеп инеп, уны символ дәрәжәһенә күтәреп, ситлек эсенән киң донъяға — азатлыҡҡа сыҡҡан бөркөт-халыҡ яҙмышын Коммунистар партияһы, Ленин исеме менән бәйләй. Бында автор оҙаҡламай көнбайышта ҡабынып китәсәк тиңһеҙ яуҙа еңеүебеҙҙең нигеҙҙәрен алдан уҡ барлай кеүек...

Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында Ғәйнан Әмири шиғриәте оран булып яңғырарлыҡ публицистик төҫ алды. Быны уларҙың исемдәре үк

әйтеп тора: “Ҡуҙғал, Урал!”, “Яуға, Октябрь быуыны!”, “Ҡырырға! Турарға! Турарға!”, “Ун ҡат артыҡ эшлә!” һ.б. Уның “Ерән ҡашҡа атҡайым”, “Ҡара юрғам”, “ Батырҙар йыры”, “Волга йыры” тип аталған һәм композиторҙар тарафынан көйгә һалынған йырҙары яуға ингән халыҡты рухландырҙы. Ғәйнан Әмири утлы-төтөнлө һуғыш яландарында ла, ялҡынлы шиғриәт майҙанында ла ысын яугир, совет һалдаты булды, замананың сикәләрҙе өткән һулышын тойоп барыу ҡеүәһе һис ҡасан ташламаны уны.

Был тәңгәлдә Тағы ла шуны өҫтәп әйтәһе килә. Беҙ йыш ҡына трибунанан көрәшсенең “ҡорос һалдат” ныҡлығын мауығып телгә алабыҙ, ә уның ихлас кешелек сифаттарын онотобораҡ ебәрәбеҙ, буғай. Ләкин кеше булмай тороп шағир ҙа, баһадир ҙа тыумай донъяға — был бик борондан уҡ килгән хаҡиҡәт. Һәм ул Ғәйнан Әмиригә тулыһынса ҡағыла.

Минең Ғәйнан ағай Әмири менән беренсе ҡат хатлашыуым һәм осрашыуым бынан ун биш йылдар самаһы элегерәк булды. Бында ла оҫкор яҙмышыма тылсымлы “ауғус төнө” йәйҙе, буғай, аҡ ҡанаттарын.

Балтиҡ флотында хәрби хеҙмәттә саҡта һәм 1956 йылда Ағиҙел пароходствоһында эшләп йөрөгән бер йәйҙә сыбарлаған бер нисә ҡульяҙмамды “аҡ”ҡа күсереп, Башҡортостан Яҙыусылар берлегенә ебәргәйнем. Ауылымда зарығып яуап көтәм. Тиҙҙән үҙемә яҡташ тейеш бер оло әҙиптән хат килде. Асып уҡыным да күҙ алдарым ҡараңғыланып китте.

“Яҙмаларыңды насар ҡара менән насар ҡағыҙға яҙғанһың. Был — әҫәреңде уҡыған кешене ихтирам итмәү тип атала. Ундай нәмәне уҡый алмайым”, — тип машинкала бер нисә юл ғына баҫылғайны. Өлкән әҙиптең мыжыуында дөрөҫлөк бар ине шул: ул заманда колхоздың ҡара ялпыһына йүнле яҙыу әсбаптары табыуы ҡыйын ине...

Күп йылдар үткәс, үҙем редакцияларҙың ҡара эшен эшләп күнеккәс кенә, яҡташ әҙиптең хәлен мин ысынтылап төшөндөм. Минең «нәмә”ләр, *башҡа*һы юҡлыҡтан, зәңгәр төҫлө почта ҡағыҙына ерек ҡайырыһынан ҡайнатып үҙем яһаған һоро төҫлө ҡара менән ашыҡ-бошоҡ эш араларында ғына ултырып яҙылғайны шул. Уны таныу, әлбиттә, еңел булмағандыр. Әммә ул саҡта мин быны аңламай инем әле, шуға күрә, күңелем ҡыйырһынып, төшөнкөлөккә бирелдем.

Бер нисә айҙан һуң, көтмәгәндә, икенсе бер хат килеп төштө Өфөнән. Ярһыу-шашҡын хәрефтәр менән ҡулдан ғына яҙылғайны ул.

“Йыһат туғанҡай! — тип уҡыным мин. — Бик оҙаҡ ваҡыт тауыш бирмәй, һине билгеһеҙлектә ғазаплағаным өсөн ғәфү ит. Бик үтенәм.

Мин ауырыным, бик ҡаты ауырыным. Баш менән. Больница — йорт — Кавказ. Шулай үтте көндәр. Миңә килгән әйберҙәрҙе бүтән берәү ҙә уҡымаған (Хоҙайға шөкөр! — *Й.С.*).

Бына яңы ғына баш-күҙ алып киләм кеүек. Әйберҙәреңде “сукно аҫтынан” һөйрәп сығара башланым...

Әле был әҫәрең баҫылып та ҡуймаҫ... Ә “Урмандар” — китәсәк. Кем белә, бәлки, тегеләрен дә баҫып булыр.

Был хатта мин бүтән мәсьәлә күтәрәм. Һинең алдағы яҙмышың тураһында уйлайым. “Белемһеҙ аҡыл — ҡанатһыҙ ҡош”, — ти ҡарттар. Һиңә уҡырға — иң яҡшы мәктәптә уҡырға кәрәк. Дөрөҫ, һин күп уҡыған күренәһең, ләкин системалы белем кәрәк. Һин миңә ашығыс яҙ: белемең ниндәй? 10 класс бармы? Әгәр ҙа шундай документың булһа, мин һине Мәскәүҙәге А.М. Горький исемендәге Әҙәбиәт институтына уҡырға ебәреүҙе тәҡдим итеүҙе үҙ өҫтөмә алам! Унда махсус йәш яҙыусылар уҡый...

Шулай, ашығыс рәүештә минең һорауға яуап бир һәм, әгәр ҙә урта белемең бар икән, мин тәҡдим иткән институтҡа уҡырға китергә әҙерлән, күҙ үк.

Хәҙергә хуш. Сәләмәт бул. Яҡын күреп, **Ғәйнан Әмири”.**

Уҡыусы аңларға тейеш: оло әҙип хатының был юлдарын мин уның, шағирҙың, иң яҡшы кешелек сифаттарының береһен — күңел киңлеген һәм тормошҡа, кешеләргә ғашиҡлығын күрәлем төҫмөрләтеү өсөн күсерәм. Эйе, Ғәйнан Әмириҙең шифалы күңел йылыһы, бер миңә генә түгел, ә башҡа бик күп йәштәргә лә ныҡлап аяҡҡа баҫырға ярҙам иткәндер. Миңә, мәҫәлән, уның һуңғы биш йыл эсендә Башҡортостан Яҙыусылар берлегенең шиғриәт секцияһы бюроһы менән етәкселек иткән дәүерендә тиҫтәгә яҡын йәш яҙыусының тәүге китабын нәшриәткә тапшырыуҙа туранан-тура ҡатнашлығы билдәле. Ә “Ырғыҙ” романы авторының ауыр көндәрендә уға беренсе булып дуҫтарса ҡул һуҙыусының да кем икәнлеге мәғлүмдер һәммәбеҙгә.

Баяғы хатты алған йәйҙә үк мин Ғәйнан ағайҙы тәүгә күреп таныштым. Ул, һаман да шул ауыр һуғыш яраларынан интегеп, Пушкин урамындағы ике ҡатлы биналағы больницала ята ине. “Ағиҙел”дә әҙәби хеҙмәткәр булып эшләгән драматург Әсғәт Мирзаһитов мине уға “күрһәтергә» алып китте. Врачтар индермәй ине, беҙ дүрткел ихата эсендә тышта ғына тороп көттөк. Бына беҙ текләгән икенсе ҡаттың балконына күкшелт халат кейгән ир кеше сығып баҫты һәм, йонсоу төҫө менән ихлас йылмайып, аҫҡа ҡарап баш эйҙе. Уның ялтас түбәһе өҫтөнә ятҡырып һалған шыйыҡ ҡына сәс лоҡманын әкрен генә иҫкән ел тарап уйната ине.

Шул саҡ минең ҡолаҡ төбөмдә шағирҙың ошо йөрәкһеү шиғри юлдары сыңлап торғандай булды:

Ял иткәндә уҡыр өсөн генә
Яҙмайым мин, дуҫтар, йырҙарҙы,
Һәм дә түгел улар тамаҡ туйғас
Эсеп ҡуйыр шәрбәт һыуҙары.
Утлы йөрәктәргә яңы ялҡын
Өҫтәһендәр ине йырҙарым;
Йәки улар, ҡайғы баҫа ҡалһа,
Күҙ йәштәрен һөртһөн дуҫтарҙың.
Бик бойоҡмам, әгәр йырҙарымды
Йырламаһағыҙ ҙа байрамда,

Бошонормон үтә, улар һеҙгә
Иш булмаһа юлда барғанда.
Ылау сапҡандарҙың ауыр йөгөн
Еңеләйтһә генә йырҙарым,
Мин үҙемде хаҡлы иҫәпләрмен
Шағир тип атарға, дуҫтарым.
Йырламаһағыҙ ҙа йырҙарымды
Табындарҙа шарап эскәндә,
Үпкәләмәм...
Йырлаһағыҙ ине
Уттар үтеп, һыуҙар кискәндә.

Әллә ни күп һөйләшергә тура килмәне беҙгә. Уны врачтар алып инеп киттеләр. Ләкин шағирҙың ихлас һөйөү менән тулы күҙҙәрендә мин бик һирәк кешеләргә генә бирелә торған бәхеттең сығанаҡ серен уҡыным: ул йотлоғоп ошо аҡ донъяға — беҙҙең кеүек ябай башҡорт малайҙарына, ағастарға, өйҙәргә, күктәге осоп йөрөгән ҡоштарға, ерҙәге ҡыяҡ сығарып килгән йәшел үләндәргә — бөтә, бөтә тормошҡа ғашиҡ ине. (“Ижадымды күҙәтеп барыусы тәнҡитсе иптәштәр минең шиғырҙарҙа “яҡты” һүҙенең йыш ҡабатланыуын әйтәләр, — тип яҙҙы ул үҙенең бер китабына биргән инеш һүҙендә. — Мин унан ҡотолорға күпме тырышып ҡараһам да, булдыра алмайым. Күрәһең, был донъяны Ҡояшлы тойоуыма бәйләнгән”). Мин, тулҡынланып, шул минутта шағирҙың төп ижад сынүҙәген дә асҡандай булдым: тормошҡа ысын ғашиҡ күҙе менән ҡарау һәм уны даими хәрәкәткә, үҙгәрешкә, үҫешкә өндәү ине ул!

Ғашиҡтарҙың көсө — Ғишыҡ уты хаҡына үлемде аша атлап уҙыуҙа. Ғашиҡ булыу, тимәк, һуғышсы ла булыу тигән һүҙ ул. Ғашиҡ һуғышсы иһә тормоштоң бисмиллаһын — Ғәҙеллекте яҡлап минут һайын оло яуға сыға.

Тормошҡа, кешелек донъяһына йәне-тәне менән ғашиҡ булған көрәшсегә генә хас баҙыҡ сифаттарҙы беҙ Ғәйнан Әмириҙең бөтә шиғриәтендә, проза әҫәрҙәрендә күрәбеҙ. “Туғандаш азат халыҡтар ғаиләһендә беҙҙең республиканы... сәскә атыуға килтергән бөйөк көрәштең ябай эшсеһе һәм рядовой һалдаты мин. Үҙемдең был яҙмышым менән сикһеҙ ғорур һәм бик бәхетлемен”, — тигәне бар уның. Эйе, ул үҙенең тәрән иҫтә ҡалырлыҡ саф күңелле, ялҡын йөрәкле геройҙарына ла үҙендәге шул ғорурлыҡты, бәхетте, күңеленең бөркөт юғарылығын мул бүлеп бирә алды.

Был урында юбилярҙың һуғыштан һуң яҙылған “Ҡош ояһы” исемле хикәйәһе иҫкә төшә. Бер батарея тормошо һүрәтләнә унда. Батарея командиры Александр Уткин һәләк булғас, уның урынына капитан Малаховты ебәрәләр. Тәү көндәрҙә яңы командир һалдаттарға ҡырыҫ, ҡаты бәғерле кеше һымаҡ күренә. Ләкин тыштан ғына шулай тойолған был кешенең эсендә ысын кешелеклелек, тыуған ергә һәм кешеләргә ҡарата оло һөйөү ҡуҙрап ята. Командирҙың күркәм сифаты фронт һыҙығы буйында ағас төбөнә оя ҡорған кескенә бер ҡыҙыл түшле

ҡошсоҡтоң ояһын һуҡыр һәләкәттән ҡотҡарған сағында күңелдәргә үтеп керә.

“— Беҙҙең оябыҙға ла эт һөжүм итте, — ти капитан Малахов, тулҡынланып, — Бик көслө, ҡоторған эт. Ул оя — Советтар Союзы. Тик беҙ — ҡоштар түгел. Тарихта иң ғәҙел, иң бөйөк, иң бәхетле тормош төҙөй алған, иң Юғары аңлы, иң талантлы кешеләр беҙ. Совет кешеләре! Һәм беҙ үҙебеҙҙең оябыҙҙың — бөтә алдынғы кешелектең өмөтө икәнлеген яҡшы, бик яҡшы аңлайбыҙ. Шуға күрә беҙ ҡоторған эттәр өйөрөнә — фашизмдың һөжүменә ҡаршы үҙебеҙҙе аямай ташландыҡ. Ләкин фашизмдың намыҫы юҡ. Эт, исмаһам, ҡошсоҡтоң тиңһеҙ көсө алдында тартынып, сигенә. Ә беҙҙең дошман һуңғы һулышына тиклем ҡаршы һуғышасаҡ. Ләкин ул, үҙенең ояһын һаҡлап, ҡотҡарып ҡала алмаясаҡ. Ояһы юҡ уның. Фашизм Маркс, Энгельс, Гете, Гейне, Бетховен кеүек генийҙарҙың тыуған ере булған Германия тәненә йәбешеп үҫкән ағыулы бәшмәк ул. Беҙгә, һуғыш яландарында еңгәндән һуң да әле, был ағыулы бәшмәкте ҡырсып ташлау өсөн бик күп эшләргә тура киләсәк”.

Автор хаҡлы: был юлдарҙы яҙғанынан һуң сирек быуат үткәс тә әле, бөгөн дә, фашизмдың ағыулы бәшмәге донъяның ҡап-яртыһына үлемесле спораларын таратыуҙы дауам итә, уны ҡырсып ташлау өсөн ысындан да беҙгә Тағы ла бик күп эшләргә тура киләсәк әле!

Яугир-һалдат йөрәгенән ярып сыҡҡан “Ҡош ояһы” хикәйәһе ошондай киң дөйөмләштереү менән тамамлана:

“...Беҙҙең тарафтан азат ителгән Польша ауылында бер ҡарт беҙгә былай тине:

— Беләһегеҙме, Советтар Союзы һәм уның кешеләре тураһында беҙҙең илдә ни тиҙәр? — Бөркөттәр ояһы! — тиҙәр.

Был һүҙҙе беҙгә чехтарҙан да, болғарҙарҙан да, румындарҙан да, венгрҙарҙан да һәм Югославия халыҡтарынан да ишетергә тура килде. Улар беҙҙең илде — Бөркөттәр ояһы, тип атайҙар ине”.

Бөркөттәр ояһы! Үткер ҡарашлы бөркөттәр ояһы булған Советтар Союзында йәнә лә бар бер мәғрур бөркөттәр төйәге — Башҡортостан. Ә был Башҡортостанда бар йәнә лә ғорур бөркөттәр тоҡомо бала сығарған изге ояларҙың иң-иң аҫылдарынан береһе — Яңауыл яҡтары. Сал Яңауыл сағылында тыуған бөркөт, күк Ирәмәл түбәһендә сая суҡыштарын, алғыр тырнаҡтарын үткерләп, ҡанаттарын көйҙөртмәйенсә бөйөк Ватан һуғышы яландарынан ҡыйғырлап үтте, бөгөн башҡорт әҙәбиәтенең, — үлемһеҙ Урал батырҙары, Салауат батырҙары, Мөхәммәтша Буранғол сәсәндәре, Мәжит Ғафуриҙары һәм Шәйхзада Бабичтары, Рәшит Ниғмәтиҙәре һәм Мостай Кәримдәре булған башҡорт әҙәбиәтенең балҡып торған яҡты күгенә саңҡып күтәрелде. Бының өсөн, ошондай бөркөт ул табып биргәне өсөн, рәхмәт һеҙгә, игелекле Яңауыл яҡтары! Ҙур рәхмәт!

Башҡорт әҙәбиәтендә дәһшәтле Сталинград эпопеяһына арналған үҙенә күрә бер тос, йоморо һүҙ булып, һуғыш темаһына яҙылған әҫәрҙәр араһында үҙенең ирҙәрсә ҡырыҫ дөрөҫлөгө, бер үк ваҡытта ысын ирҙәр күңеленә хас нескә лиризм менән һуғарылышлы, авторҙың үҙ һүҙҙәренә ялғап әйткәндә, бер тамсы һыуҙа ла Ҡояштың һынын сағылта алышлы

менән күренекле урын тотҡан «ғашиҡтар” повесендә шундай бер эпизод бар. Сталинград һуғышының ҡорос менән бетон иреп шлакка әйләнгән утлы ғәрәсәте эсендә лә үҙҙәренең саф мөхәббәттәрен һаҡлап ҡалған башҡорт егете Әнүәр менән урыҫ ҡыҙы Алла, ҡыҙыу һуғыш һөрөмө ҡайнаған ерҙә кинәт осрашып, бәхет йәштәре мөлдөрәмә тулы ғашиҡ күҙҙәрен киң асып, алышыусы ике яҡ боғаҙға-боғаҙ килгән әжәл ҡырында ерҙәге бөйөк ғәҙеллектең тантана итеүенең шаһиттары булалар. Был икәүгә башҡорт бригадаһы командиры полковник Горохов иғтибар итә.

“Полковник Горохов Волга яры ситендәге бейек ҡаяға баҫып, дала яғынан һөжүм итеп килеүсе Дон фронты һалдаттарын күҙәтеп торған Йәғәфәров менән Алланы күреп алды һәм ҡысҡырҙы:

— Төшөгөҙ унан!

Йәштәр үҙҙәренең бәхеттәренән, әллә далала барған һөжүмдең тантанаһынан мауығыпмы, — Сергей Федоровичты ишетмәнеләр, ҡая башында тора бирҙеләр.

— Төшмәһендәр әйҙә, — тине Греков. Владимир Александррович Алла менән Әнүәрҙең мөхәббәт тарихын белә ине инде. Һәм хәҙер уларҙың бында, ут эсендә, бер-береһен осрата алыуҙарына бик шат, киң һәм яҡшы күңелле кешеләргә хас, ысын күңелдән ҡыуана ине быға. — Төшмәһендәр, бер ваҡытта ла төшмәһендәр, Сергей Федорович. Гел юғары торһондар!

— Ғашиҡтар, — тине Горохов. — Ләйлә менән Мәжнүн тиерһең үҙҙәрен!

— Юҡ, полковник, уларҙың мөхәббәте көслөрәк. Йәғәфәров менән Шмакалова, Шәреҡ легендаларындағы шикелле, ғәрип ғашиҡ түгел, ә сәләмәт, ғәйрәтле ғашиҡтар. Улар үҙ мөхәббәттәрен уттар-һыуҙар аша алып сығалар. Улар, Сергей Федорович, донъяға, беҙҙең идеалдарға, беҙҙең яҙмышҡа ғашиҡ. Беҙҙең көсөбөҙ шунда. Шунһыҙ беҙ һинең менән бөгөнгө тантананы күрә алмаған булыр инек!”

Ошондай уҡ “донъяға, беҙҙең идеалдарға, беҙҙең яҙмышҡа ғашиҡ” тәбиғәтте беҙ бынан бер ни тиклем алдараҡ әҙәбиәтебеҙ донъяһынбайтаҡ һәм хаҡлы шаулатып алған уның “Мораҙым” повесендәге халыҡ судъяһы Расцветаева образында ла күргәйнек. Хәтеремдә, 1960 йылда “Әҙәби Башҡортостан” (хәҙерге “Ағиҙел”) журналының шул әҫәр баҫылған һандарын беҙ йотлоғоп уҡыныҡ. Әҫәр Ғ. Әмири прозаһына хас үҙенең ихласлығы, образдарының баҙыҡлығы, халыҡсан һутлы теле менән әүрәтте.

— Бына ниндәй була икән ул башҡорттар! — тип һоҡланып ҡуйҙы бер татар иптәшем, журналды миңә килтереп биргәнендә. — Ошоға тиклем башҡорт китаптарын уҡығаным юҡ ине әле, инде уҡыясаҡмын! — тип өҫтәне.

Халыҡсанлыҡ һәм партиялылыҡ — ысын совет көрәшсеһенә хас сифат; үҙендә саҡ ҡына булһа ла граждандлыҡ хисе тойған бер кем дә был мәсьәләне ситләтеп үтә алмай, ә совет яҙыусыһы тигән яуаплы исемде күтәргән кеше — бигерәк тә. Ғәйнан Әмири ижады тап ошо иң Юғары, изге маҡсатҡа арналды. 1930 йылдан башлап Өфөлә “Коммуна” гәзите редакцияһында эшләгәнендә лә, үҙе әйтмешләй, “райондарҙа колхоздар

ойоштороу, сәсеү, уңыш йыйыу, иген әҙерләү кампанияларын үтәүҙе тәьмин итеү" кеүек тынғыһыҙ бурыстарҙы йөкмәгәнендә лә, һуңынан Башҡортостан китап нәшриәтендә, Яҙыусылар берлегендә, партия өлкә комитетында, СССР Фәндар академияһының филиалында яуаплы эштәр башҡарғанында ла ул үҙен һәр саҡ халыҡтың, Коммунистар партияһының тоғро улы, яугир һалдаты итеп тойҙо. Ошо тойғо һәр саҡ уның башын юғары, күҙҙәрен үткер тотто. Шуға ла ул ижадының башынан уҡ илдең тын алышын, пульсен һиҙеп йәшәне һәм ҡәләмен кәрәк саҡта "кәйлә, ураҡ, утлы Байраҡ һәм ҡылыс" итә белде.

Яугирмен тигән ысын яугир үлемесле һуғыш барған саҡта ҡулындағы мылтыҡҡа ғына ҡарап ятмай, ә хәрби шарттар нимә ҡушһа, шулай һуғыша. Әҙәбиәтебеҙгә ысын яугир булып килгән Ғәйнан Әмири ҙә ошо көнгәсә бына шулай бөтә жанрҙарҙы ла тиң күреп эшләй: шиғриәт, проза, драматургия, публицистика һәм әҙәби тәнҡит — бына уның үткер ҡәләм йөрөтөр майҙаны. Оло әҙиптән быны үҙенең тынғыһыҙ тәбиғәте, уҙаманлығы, заманы талап итә.

"Төрлө жанрҙарҙа яҙыуыма ҡарамаҫтан, — ти ул, — минең темам, нигеҙҙә, бер булды. Был — Ватан өсөн барған һуғыштарҙа, социализм тантанаһы өсөн тыныс хеҙмәттә тиңһеҙ ҡаһарманлыҡтар күрһәткән замандаштарыма дан йырлау, уның фиҙакәрлеген, халыҡ мәнфәғәттәрен бөтәһенән дә өҫтөн ҡуйып, изге дөйөм маҡсат хаҡына уның хатта үлемгә барырға ла әҙерлеген әҙәби оҫталығым еткәнсә художество образдарында һүрәтләү".

Дөрөҫ, утыҙынсы йылдар шиғриәте хаҡында һүҙ сыҡһа, ҡайһы берәүҙәр, уларға ҡушылып хатта шағир үҙе лә, уның фәҡәт бер яғын: "ҡоро лозунгылар ҡысҡырыуҙан, сәйәси фекерҙе көйгә һалып сығыуҙан — риториканан ғибәрәт икәнлеген" генә билдәләйҙәр, ә ул шиғриәтте лә заман талабы үҙе тыуҙырған икәнлеген хәтерҙән сығарып ташлайҙар, һәм, ҡабалан һығымтаға килеп, ундай көндәлек шиғриәт күрәләтә үлемгә дусар ителгәйне, тип ерләп тә ҡуялар.

Эйе, тибеҙ беҙ, ул шиғырҙар — заман шаңы һорап алған "көндәлек шиғриәт" ине, күрәләтә үлемгә дусар ителгәйне". Ләкин уларҙы йөрәк ҡаны менән һуғарып яҙған шағир үҙе лә, көнө килгәс, Ватаны өсөн кәрәк булғас, һалдатҡа — ләкин ысын һалдатҡа! — әүерелеп, 1942 — 1945 йылдарҙа бөйөк Ватан һуғышының иң хәл иткес һәм ауыр фронттарында: Мәскәү, Сталинград, Орел — Курск дуғаһы, Днепрҙы аша кисеп сығыу һуғыштарында көн һайын, сәғәт һайын, секунд һайын "күрәләтә үлемгә" барманымы ни?!. Хәҙербеҙҙең күптәребеҙгә өлкән быуындың халыҡҡа һәм партияға фиҙакәрлеген көндәлек һабаҡ итеп алаһы бар әле. Ут эсендә һалдат һымаҡ Намыҫлы үлем менән үлгән шиғырға дәғүәбеҙ юҡ.

Ләкин Ғәйнан Әмири шиғырҙары һаман һалдат — автоматынан ут сәсрәтеп һөжүмгә барыусы һалдат. Шағир үҙе лә, йәштәргә һоҡланғыс үрнәк күрһәтеп, йәштәрсә янып йәшәү, үҙ ижадын тәнҡит күҙлеге аша үткәреп ҡеүәтләү, байыҡтырыу өҫтөндә.

Ерҙән йөҙәр мең саҡрымға айырылып киткәндә лә, хатта ерҙең тартыу көсөн юйғанда ла космонавтар именлеге ерҙә ҡала. Шуның кеүек,

шағир ҙа көндән-көн үҙенең йөрәк тамырҙарының төбө туған халҡында икәнлеген, донъяға тыуып кендегең киҫелеү — ул әле әсәй менән бәхилләшеү тигән һүҙ түгеллеген нығыраҡ тоя бара, был иһә уның элек-электән граждандлыҡ пафосы менән ялҡынланып дөрләп торған поэзияһын йөрәккә яғышлы тәрән моң, тормош философияһы менән һуғара. Шағир, ергә нык баҫып тороп, донъялағы үҙенең есемен, урынын асыҡ күрә:

Мин, тыуғас уҡ, күҙем асыу менән,
Тәү ҡат Урал күген күргәнмен;
Әсә һөтө аша Ағиҙелдең
Пак һыуының тәмен белгәнмен...
Геннадий ҙа түгел, йә Гено ла,
Миңә Ғәйнан исеме биргәндәр;
Тәпәй баҫҡас атҡа мендергәндәр,
Башҡорт булып үҫһен, тигәндәр.
Башҡорт булып үҫтем. Былбыл йыры
Һымаҡ моңло әсә телемдә
Мин донъяны астым; аяҡ баҫтым
Күп телле һәм йырлы илемдә.

Йөрәгеңә үҙ халҡыңды һыйҙырмай тороп, бүтән халыҡтарға ул була алмайһың; иң ҙур интернационалист та тәүҙә үҙ халҡына булған изге һөйөүҙән ҡанатлана — ошо хаҡиҡәткә таяныу Ғәйнан Әмири шиғриәтен яңы офоҡтарға күтәрә, шағирҙың ғашиҡ күҙҙәре күргән Урал күген барлыҡ милләт уҡыусыларына ла бик яҡын, аңлайышлы итә. “Ағиҙел” журналының быйылғы беренсе һанында баҫылып сыҡҡан “Салауат аманаты” поэмаһы шуның һоҡланғыс дәлиле булып тора ла инде.

Шағир һаман егеттәр һымаҡ ергә нык баҫып йөрөй, уның бөгөнгө алтмыш йәше — егерме өҫтөнә өҫтәлгән алты кеүек кенә. Уның ижад ла бораторияһында иҫ китмәле аҫыл заттар — яңынан-яңы әҫәрҙәр балҡып кристаллана. Ләкин ул, боронғо алхимиктар кеүек, ус аяһындай бүлмәлә генә көнө-төнө бикләнеп ойоп ултырмай — һәр саҡ халыҡ араһында. Халыҡтан ул үҙе һирпеп уйнатасаҡ — йәйғорлатып балҡытасаҡ иң-иң аҫыл таштарын һайлап ала. Бәрәкәтле алтмыш йәшен ҡаршылаған быйылғы йәйҙе лә ул даими йөрөп үткәрҙе, ярһып йырлар яңы йырҙары өсөн туған халҡының йөрәк тибешен тыңланы.

Салондарҙа түгел, һаламдарҙа
Тыуып үҫкәйнең бит, эй йырым.
Һәм бөгөн дә елле яландарҙа,
Эҫе цехта булһын урының.
Ваҡыт ҡыҫыҡ, әле яҙыусылар
Союзына инеп тормайыҡ,
Командировка ла һорамайыҡ, —
Тура далаға юл тотайыҡ.

Унда, беләһең бит, был көндәрҙә
“Йөҙ миллион бот өсөн” яу бара.
Глубинкалар элеваторҙарға
Көс-хәл менән иген сығара.
Көнө-төнө яуған ямғырҙарҙан
Юлдар иҙелгән, ти, бөтөнләй.
Йөклө машиналарбата, тиҙәр,
Көшөлдәрҙә бойҙай төтөнләй...
Әйҙә, тартышайыҡ ауыр йөктө, —
Һин бит, шиғыр, көслө, батырһың.
Кәрәк булһа, батҡаҡ юлдарға һин
Ҡырсын ташы булып ятырһың.
Бөгөн бар донъяның бар яҙмышы
Беҙҙең елкәләргә һалынған.
Беҙ яуаплы ятып ҡалған һалдат
Һәм тыуасаҡ бала алдында.

Был — уның йөрәк ҡағышы!

Башҡорт шиғриәтендә тәүгеләрҙән булып уңышлы рәүештә Салауаттың монументаль һынын тыуҙырған оло быуын шағир бөгөн, янып-көйөп, поэманың икенсе, өсөнсө киҫәктәрен эшләү өҫтөндә. Үҙенең алтындай алтмыш йәшен ул, кемдер кеүек, ижад тоғоноң төбөндәге һуңғы бөртөк ярмаларын елгә ҡағып түгел, ә аҫыл таштар менән тулы бураһынан гәүһәр-гәрәбә байлыҡтарын ил күгенә ҡушуслап-ҡушуслап һибеп, шул гәрәбә-гәүһәрҙәрҙең һары Балтиҡ ярҙары менән зәңгәр Урал түбәләрен тоташтырған йәйғор-нурлы Салауат күперен әкиәттәге баһадирҙай көслө яурындары менән кирә терәп, алыҫ офоҡтарға зирәк күҙ атып ҡаршылай. Ғашиҡтарҙың күҙгөһө һаналған тылсымлы Ай нурына, эре-эре йондоҙҙарға, осҡор хыялдарға ғәжәп бай булған “ауғус төнө”, был тылсымлы аҡ елкәнен киргән карап, күңелдәрҙең көмөш йыһан тулҡындарын тирбәлдертеп, киләсәккә табан аоҡынып бара.

Хәйерле юл һиңә, Шағир, тормошҡа ғашиҡ Шағир! Шулай мәңге ғашиҡ булып ҡал, Шағир!

8.08.1971.

2. Мәңге ғашиҡ

Башҡорт булып үҫтем.
Былбыл йыры
Һымаҡ моңло әсә телемдә
Мин донъяны астым;
аяҡ баҫтым
Күп телле һәм йырлы илемдә.

Ғ. Әмири.

Беҙ, донъяла Ғәйнан Әмири бар, тибеҙ...

Ғ. Сәләм.

Авторҙан. Был ҡисса күренекле ҡәләмдәшебеҙҙең 90 йыллыҡ юбилейына ҡарата “Ағиҙел” журналы редакцияһына 2001 йылда уҡ тапшырылғайны. Әммә унда тасуирланған әҙәби тормошобоҙҙағы ҡайһы бер хәлдәр һәм фекерҙәр бәғзеләрҙең теңкәһенә тейеп, ахыры, әҫәр үҙенең уҡыусыларына еткерелмәй ҡалдырылды. Баҫып сығарырға иртәрәк, тип дәғүә белдереүселәрҙең төп фекере түбәндәгеләрҙән ғибәрәт ине:

«Ғәйнан Әмиригә һәм уның тирәһендә барған мәсьәләләргә ҡарата Йыһат Солтановтың үҙ ҡарашын белдереүе, остазын яҡлап сығыш яһауы менән автор һүҙһеҙ хаҡлы, әлбиттә.

Минең үҙемдең, мәҫәлән, Ғәйнан Әмиригә кеше һәм яҙыусы булараҡ ҡарашым бик ыңғай. Һәйбәт кеше, һәр кемгә, айырыуса йәш яҙыусыларға ҡарата ярҙамсыл шәхес ине. Уның әҙәбиәттә үҙ урыны, исеме бар.

Ә әлегә, минеңсә, «Мораҙым» повесенә бәйле мәсьәләләрҙе яңынан ҡуҙғатмай тороу, элек ҡупҡан шау-шоуға, шул арҡала тыуған шик-яраларға ҡағылмай тороу хәйерле. Ул үтә бәхәсле, үтә дәғүәле мәсьәлә...

Унан Й. Солтановтың был мәҡәлә-очеркында яҙыусылар тормошона бәйле ҡараңғы, ғауғалы бүтән мәсьәләләр ҙә яңынан ҡуҙғатылған. Ул яҡтан автор хаҡлы ла. Ләкин был яҙыусылар исемен бысрата, күләгә төшөрә торған нәмәләрҙе яңынан әлегә аҡтармау, яраларҙа соҡсонмау яғындамын мин...

Минең уйым шулайыраҡ: «Мәңге ғашиҡ» мәҡәлә-очеркын әлегә «Ағиҙел» журналында баҫтырыуҙан тыйылып торған яҡшыраҡ. Ул бөгөнгө көндө журнал өсөн дә, авторҙың үҙенә лә йылы һүҙ килтермәйәсәк. Иҫке яраларға ҡағылмай торайыҡ».

*(**Ғайса Хөсәйенов,** академик. 20.12.2001).*

«Ҡулъяҙманы бик ҙур ҡыҙыҡһыныу менән уҡыным, сөнки бында тасуирланған хәл-ваҡиғалар беҙҙең быуындың да күҙ алдында барҙы. Яҙылышы ла мауыҡтырғыс.

Шулай ҙа уны тулы килеш кенә журнал биттәрендә биреү — бөтәшеп барған яраны яңынан асыу кеүек, сөнки төп иғтибар Ғәйнан Әмиригә ялған яла яғыуҙы юҡҡа сығарыуға бирелгән һәм «Мораҙым»дың уныҡы икәнен дәлилләүгә йүнәлтелгән. Быны менән тынып ҡалған бәхәсте ҡуҙғатып ебәреү булмаҫмы был? Ул замандағы партия документтарынан өҙөктәр килтереү ҙә хәҙергесә яңғырамай, теге замандың йәмһеҙ елен өрҙөрөп, ихтирамлы һаналған оло быуын кешеләренә тап ташлай...»

*(**Зиннур Ураҡсин,** академик. 15.10.2001).*

«Мәҡәлә осор ижади процесына байтаҡ ҡына яңы һыҙаттар өҫтәй, йәнләндерә төшә. Ошо осор әҙиптәре, бигерәк тә Ғ. Әмири ижады тураһында бөгөнгө көндән сығып фекер йөрөтөлә. Был тәңгәлдә Й. Солтановтың һуңғы йылдарҙа бөтөнләй онотола төшкән Ғ. Әмири шәхесе һәм ижадына мөрәжәғәт итеүе хуплау уята. Хеҙмәтте, минеңсә, журналда файҙаланып була.

Шул ыңғай бер нисә шәхси иҫкәрмә:

а) мәҡәләлә бәхәсле мәлдәрҙең иң ауыры, әлбиттә, «Мораҙым» мәсьәләһе. Һүҙ юҡ, һәр кемдең был юҫыҡта үҙ фекере. Әммә ҡаршы яҡ һымаҡ, мәҡәлә авторының да «һуңғы инстанция» булып сығыш яһауы, был буталсыҡ мәсьәләне бөгөн тағы ҡуҙғытып ебәреүе үҙен ни кимәлдә аҡлай?..

б) теге йәки был әҫәр, ижадты байҡағанда теге йәки был йыйылыш, секция ултырышы протоколдарынан өҙөктәр килтереү һәр саҡ автор әйтергә теләгән фекергә хеҙмәт итә алмай һымаҡ... Шуға ундай тәнҡит осорҙо билдәләй алырлыҡ критерий була аламы?

Дөйөмләштереп әйткәндә, мәҡәлә йәнле яҙылған, әгәр автор билдәле эмоцияналлыҡтан ҡотола бирһә, хеҙмәт объективлыҡ йәһәтенән ота ғына төшөр ине».

*(**Роберт Байымов,** филология фәндәре докторы профессор**.** 17.05.2001).*

«Исемһеҙ тәнҡит. Датаны бутау (12-нсе бит). Өсәү түгел, дүртәү. Буранғолдо хөкөм итеүҙә кемделер аныҡларға тырышыу (15-енсе бит). Юзиев — Ямаҙынан, Янтыҡтан түгел (17-нсе бит). Х. Ғосман бөтәбеҙҙе лә аш мәжлесенә саҡырҙы?.. Ҡазанда ул мәлдә мин дә булдым, тик ул эште белмәйем (18-енсе бит)...»

*(**Рауил Бикбаев,** филология фәндәре докторы,*
*Башҡортостан Яҙыусылар берлеге рәйесе**.** 2001).*

Һулдан уңға алдан Ғ. Әмири.

Күренеүенсә, әҫәремә дөйөм ҡараш ыңғай булһа ла, уны ташҡа баҫып сығарырға әлегә иртәрәк, сөнки уҡыусы аңламаҫ, ваҡыт үтә бирһен, тигән фекер өҫтөнлөк алған. Ләкин инде уҡыусыларыбыҙҙың аң даирәһе хатта бәғзе бер әҙиптәрҙекенән дә юғарыраҡ, ә тарихи хаҡиҡәткә ылығыу теләге көслөрәк икәнлеген оноторға ярамай. Хаҡиҡәтте әйтеү иһә бер саҡта ла иртә булмай, ә уның һуңлап ҡалыуы үтә аяныс. Дөйәғош һымаҡ, башты ҡомға тығып ҡына арына алырбыҙмы икән торғонлоҡ касафатынан, намыҫтың өйкәлеүенән?.. Тарих бит ул телеграф бағанаһылай шымартыуҙы күтәрә алмай.

Ике яҡтың бәхәсендә хаҡиҡәт табыла, тиҙәр. Тик быҒаса был мәсьәләлә бер яҡ ҡына тамаҡ ярып лаф орҙо, икенсе яҡтың ауыҙы томаланды. Ҡыҫҡаһы, быуаттарҙың ағылып ҡына үтеүен

көтөп ятмай, нормаль диалог булдырырға вакыттыр? (Тураһын әйткән — туғанына ярамаған, тиһәләр ҙә, һуңынан рәхәт була ул). Хәйер, көтөлгән был диалогты тормош хәҙрәттәре үҙе башланы ла, буғай, инде: халык шағиры Мостай Кәримдең ошо күңелһеҙ темаға карата үҙенең тос фекерен белдергән көндәлектәренән бер сәхифәһе 2006 йылда шул ук “Ағиҙел”дә баҫылып сыкты:

03.05.1989.

1937 йылда тик тереләр өҫтөнән генә донос яҙалар ине. Хәҙер, илгә фашлап, мәрхүмдәр өҫтөнән ялган донос яҙалар. Мәрхүм Ғәйнан Әмири ана шул хәлгә дусар ителде. “Мораҙым”ды Дәүләтшинанан урлаган, тип гәйепләйҙәр. Дәүләтшинаның ундай кулъяҙмаһы юк ине. Быны мин бик якшы беләм.

Ә. Вәли журналда (ул сактагы “Әҙәби Башкортостан”, бөгөнгө “Агиҙел” – Й.С.) “Ыргыҙ”ҙан өҙөктәр баҫтырырга баш тарткас, мин һәҙиәнән һораным: “Юкмы берәй бәләкәйерәк әҫәрең? Бир, шуны баҫтырайык”, -- тинем. “Юк шул. Бар яҙганым ошо “Ыргыҙ”, -- тине.

***Мостай Кәрим.** Көндәлектәр. “Агиҙел” №11, 2006 йыл, 75-енсе бит.*

Донъялағы иң дәһшәтле Сталинград һуғыштарының каһарманы, гүзәл әҙип һәм кеше тураһындағы был фәкир яҙмамды, оппоненттарымдың кайһы бер файҙалы кәңәштәрен дә иҫәпкә алып, кабат карап сыкканымдан һуң, Тыуған илебеҙ бөйөк Еңеүҙең 62 йыллығын мәртәбәле Байрам итеп үткәргән һәм яугир-әҙибебеҙҙең тыуыуына 96 йыл тулған ошо көндәрҙә баҫмаға тағы тәкдим итәм (үкенескә каршы, был юлы ла тәкдимем үтәлмәне). Уны донъяға сығармай артабан да быуып тотоу — авторҙың һәм матбуғат укыусыларының мәғлүмәт бирергә һәм алырға хокуғын сикләү, шуның буйынса Рәсәй Федерацияһының Төп Канунын боҙоу булыр ине. Шулай итеп, түбәндә төп текст килә.
11.07.2007.

1

Был донъяға һәм донъялағы бөтөнөбеҙгә, бөтөнөбеҙгә лә мәңге ғашик булып якты донъяға килгән, мәңге ғашик булып донъяла йәшәгән һәм шулай ук мәңге ғашик көйөнсә үк был донъянан күсеп киткән акыктай ак күңелле (үҙе әйтмешләй, “ак елкәнле”), ак һөттәй пак намыҫлы, йәненә һис тынғы бирмәҫ кайнар йөрәкле уҙаман ағайыбыҙ — башкорт халкының арҙаклы ысын улы, мәшһүр шағир, прозаик, публицист һәм драматург, Рәсәйҙең һәм Башкортостандың атказанған мәҙәниәт эшмәкәре, кешелек донъяһы тарихындағы иң дәһшәтле бөйөк Ватан һуғышында дәһшәтлеләрҙән дәһшәтле, изгеләрҙән изге Сталинград алышының тап уртаһынан, тамук уты эсенән Еңеп сыккан каһарманы — шундағы данлы 62-се армияның 124-се айырым уксы **Башкорт бригадаһы** яугире Ғәйнан ағай Ғимазитдин улы Әмириҙең тыуыуына ла бына инде теүәл туҡһан йыл тулды. Эйе, йыл, тибеҙ, сөнки был түңәрәк датаны беҙ, уның йөрәктәштәре, йөрәк һыктатып, үкенескә каршы, уның үҙенән

башҡа ғына билдәләргә мәжбүрбеҙ... Үҙе яратып әйтә торған “аҡ елкәнле”ләр араһында алҡындырткыс тығыҙ елгә йәш “елкән”дәрҙең кирелешен шул елкәнле карабыбыҙҙың таһыллы капитанылай даими барлап-ҡанатландыртып йөрөгән был хәстәрлекле оло шәхестең 1982 йыл 8 октябрҙә көтмәгәндә, Ватан һуғышы ҡырында атакаға барғанында пуля тейгәндәй ҡапыл сәсрәп ауыуы намыҫлы бөтә йәмәғәтселекте шаңҡытты, республикабыҙҙың барлыҡ гәзит һәм журналдарында йөрәк өҙгөс ҡара ҡаймалы матәм мәҡәләләре ҙур урын алды, шуларҙың иң тетрәткесе — элекке фронтовик мәрхүмдең тоғро окопташтарының 10 октябрҙә Мәскәүҙән һуҡкан телеграммаһы ине:

“КПСС-тың Башҡортостан өлкә комитетына. Вафат булған Ғәйнан Әмириҙең Сталинград оборонаһы буйынса яугир ҡорҙаштары уның гаиләһе һәм яҡындары, республика йәмәғәтселеге менән бергә тәрән ҡайғы кисерә. Волга буйындағы бөйөк бәрелештең утлы-гәрәсәтле бөтә биш айы дауамында Әмири ***Башҡорт уҡсы бригадаһы*** *сафтарында өҙләкһеҙ һуғышты. Ватандың ҡаһарман улының ҡәбере алдында баш эйәбеҙ һәм Сталинград армияһы ветерандары Советының тәрән ҡайғы уртаҡлашыуын мәрхүмдең гаиләһенә еткереүегеҙҙе һорайбыҙ. Генерал-полковник* ***В. Греков****”.*

Рәсми некрологка, беренсе булып, КПСС өлкә комитетының беренсе сәркәтибе М.З. Шакиров иптәш үҙе ҡул ҡуйҙы, йыназала мәрхүмдең башы осонда партия һәм хөкүмәт етәкселеге вәкилдәре ҡайғылы баш эйеп торҙо. Былар бөтәһе рәсми даирәләр тарафынан Башҡортостандың халыҡ шағиры йәки яҙыусыһына ғына күрһәтелә торған, ләкин бик һуңлап килгән айырым хөрмәт, үкенес билдәләре ине...

Ғүмер тигәнең, ысынлап та, халыҡ үҙе әйтмешләй, аҡкан һыуҙай, иҫкән елдәй елеп кенә үтә лә үтә икән: Ғәйнан ағайҙың баҡи донъяға күсеүенә лә инде, бер түгел, ике тиҫтә йыл самаһы булып килә. Шул ваҡыт-арауыҡ эсендә уның 75 йыллығы ла, 80 йыллығы ла, 85 йыллығы ла һиҙҙертмәҫтән тулып та үтеп торҙо. Ҡәләмдәштәребеҙҙең яңы заман йылғырҙары (һай, афариндар ҙа инде!), әйтәйек, 40 йәштән үк башлап һәр биш йылы һайын “шанлы” юбилейҙарын сәхнәлә лә, матбуғатта ла шаулатып-гөрләтеп уҙғаралар, ә иһә шундай уҡ әшнә-мәрхүмдәре йәшәп киткән, тупһаларында эҙҙәре лә һыуынмаған йорттарға (Аллаға шөкөр!) иҫтәлекле таҡтаташтар, ҡәберҙәренә лә, хәлдән килгәнсе, ядкәрле һәйкәлдәр ҡуйыла, музейҙары асыла, хатта ҡала урамдарына исемдәре бирелгәндәре лә бар. Әммә арҙаҡлы әҙип, һуғыш һәм хеҙмәт ветераны Ғәйнан Әмириҙең иҫтәлегенә бындайҙарҙың береһе лә тәтемәне, әйтерһең, һыуға баткан балталай онотолдо (дөрөҫөрәге, онотторорға тырышылды). Ғүмеренең ахырынаса уны һәм уның һымаҡ уҡ башҡаларҙы йылы ҡуйынына һыйындырып йәшәткән Ленин урамындағы 2-се һанлы йорттоң (инш-Алла!) буйынан-буйына шаҡмаҡлап беркетелгән һәм әҙиптең күренекле ҡорҙаштарының исемдәрен мәңгеләштергән мәрмәрташтар араһында әлегәсә Ғәйнан Әмири исеме юҡ, ә бит бындай сара әлеге заманыбыҙҙа мәрхүмдәребеҙҙең ҡырҡын уҡытканда уҡ (бик изге йола!)

бойомға ашырыла. Яҙыусылар берлеге бер осорҙа, Хоҙай биргән форсаттан файҙаланып, мәрхүм әҙиптәребеҙҙең ҡәберҙәренә (хатта төпкөл райондарҙағыларға ла), Эстәрлетамаҡ оҫталарынан юндыртып яһатып, әҙәм рәтле яҙыулы таштар ҡуйҙыртты, шуның менән бик күп һауаптар алды. Әммә абруйлы ижади берлегебеҙ ни бары бер Ғәйнан Әмиригә генә бындай һәйкәлде ҡыҙғанды; уны, шул уҡ Эстәрлетамаҡтан, үҙ аҡсаһына яһатып, ылауын да үҙе яллап, уның бер туған кейәүе Ленис Нурми улы Асаев уҙаман үтәне. Вафатына өс йыл тигәндә, әгәр ҙә ки ҡәҙимгесә әҙәмдәрсә ҡыланһаҡ, матбуғатта ғына булһа ла 1991 йылдың авгусында 80 йыллығы билдәләнергә тейеш ине, ләкин үҙебеҙҙең башҡорт телендәге республика матбуғаты, күренекле был датаны белмәмешкә һалышҡандай, өнһөҙ-тынһыҙ тороп ҡалды, сөнки редакцияларыбыҙҙа эш ҡырып ултырмыш ҡайһы бер әһелдәребеҙ, үҙҙәренә хас күңел тарлығы күрһәтеп, мәрхүмдең исеме тирәһендә бәғзе бер ҡара йәндәр тарафынан ҡуйыртылған ғәйбәткә бирелделәр (бының асылын һуңғараҡ аңлатырбыҙ), атаҡлы башҡорт әҙибен, теләйҙәрме-теләмәйҙәрме, әҙәбиәттең ете ят, тип әйтерлек, “татар” кәштәһенә һалып ҡуйҙылар. Шул уҡ ваҡытта, әллә ғөмүмән киң күңеллелек күрһәтепме, әллә үҙенең матбуғат бурысын теүәл үтәпме икән, татар телле гәзитебеҙ генә ошо изге иҫтәлеккә ишеген асыҡ ҡалдырҙы: юбилей айҡанлы мәшһүр шағир Яҡуп Ҡолмойҙоң игелекле ҙур мәҡәләһен уҡыусыларына матурлап еткерҙе (“Ҡызыл таң”дың 1991 йыл 21 август һаны).

“Татар” тигәндән, “башҡортмон” тип кәпәренеп йөрөп тә үҙ тиреһен һәм ҡорһағын ғына ҡайғыртҡан, башҡорт мәнфәғәте өсөн, әгәр үҙенә файҙаһы таммаһа, эйелеп сүп тә ҡалҡытмаған бәғзе берәүҙәребеҙ, йыландай телдәрен сығарып, “тейһә — тейенгә, теймәһә — ағас ботағына” рәүешендә ҡуллана был ләҡәпте, башҡорт Ғәйнан Әмиригә ҡарата ла тап шулай. Уҡыусы дөрөҫ аңлаһын: подъезда йә кухнялағы ябай көнкүреш кимәлендәге түгел, ә бәғзе бер зыялыларыбыҙ араһындағы киҙеү сире тураһында бара һүҙ. Ипһеҙлеге тулы асылһын өсөн, мин фәҡирегеҙ үҙе кисергән асы миҫалды һөйләйемсе түбәндә (һис кенә лә үҙ шәхесемде ҡалтайтыу өсөн түгел, ә алған мөҡәддәс темамды — Ғәйнан Әмири яҙмышын асыҡлау, уға ни тиклем дә ҡыйын булғанын аңлатыу өсөн генә).

Ваҡиғаларҙың тамырын сурытыу килешмәҫ — һүҙ оҙонға китәсәк; асылы бына нимәлә: минең инде исеме күптәргә мәғлүм “Хәтерхитап” намлы ике томлыҡ хеҙмәтемдең[4] “Урал батыр шәжәрәһе” тигән тәүге бүлектәре “Ағиҙел” журналының 1982 һәм 1984 йылдарҙағы дүрт һанында, журналдың баш мөхәррире һәм яуаплы сәркәтибе (Ә. Гәрәйев, Ә. Әхмәтҡужин), “милләтселек” булып ҡуймағайы, тип, ҡырҡа ҡаршы торһалар ҙа, асмандағы Дәү Хоҙайыбыҙҙың рәхмәтенә ирешеп, КПСС-тың Башҡортостан өлкә комитеты сәркәтибе Т.И. Ахунйәнов (милләте татар) иптәштең “Басып сығарығыҙ!” тигән ике һүҙе арҡаһында ғына ташҡа баҫылып сыҡҡайны. Бындай хәлде һис көтмәгән ҡәләмдәштәрҙең бер килкеһе миңә шөйлә ҡырын ҡарап йөрөнө, «Ахунйәнов уны ярлыҡағас,

---

[4] “Ядкәр”, инш-Алла, Башҡортостан «Китап» нәшриәтендә, ниһәйәт, донъя күрҙе.

“татар икән был Йыһат” тигән сәйер хәбәр ҙә таралды араларында. Шундайҙарҙың береһе (һуңынаныраҡ республикабыҙҙың ҙур бүләге миҙалын үтә хозур ҡиәфәттә шул уҡ Т.И. Ахунйәнов ҡулынан түшенә таҡтыртып ҡуҡырайып төшкән фотоһын «Ағиҙел»дә сығартып маһайып йөрөүсе зат йәғни Рәшит Солтангәрәйев), күҙемә тишерҙәй ҡарап: “Һин татар икәнһең дә, паспортыңа ла “татар” яҙылған, тиҙәр, ысынмы?” — тип ныҡыуғаса барып еткәс: “Эйе, бер юлы татармын да, сөнки ғәзизә ҡартәсәйем мишәр бит. Өҫтәүенә, кеҫәмдә биш паспорт йөрөтәм, береһендә милләтем — башҡорт, икенсеһендә — татар, өсөнсөһөндә — сыуаш, дүртенсеһендә — мордва, бишенсеһендә мари тип яҙылған”, — тинем... Был ғына аҙ, тигәндәй, ҡарт шайтан Йософ Гәрәй, гәрсә үҙе татар милләтенән булһа ла, тегеләр тылҡыған ғәйбәтте Мәскәүгә -- КПСС үҙәк комитетының сәркәтибе Е. Лигачевҡа уҡ еткергән булып сыҡты: “В журнале “Агидель” были обнародованы три больших статьи “писателя” З. Султанова об истории башкир, об истории языка и прочая дребедень... Автор устанавливает башкирско-шумерские связи, башкирско-скифские связи. По его мнению, “просвещенного до высшего совершенства”, такие связи были. Диких лошадей сделали ручными в Башкирии... Вот так вот. Знай наших!

Ученый Суфиян Сафуанов сказал в разговоре очень кратко: “По этим материалам выходит, что вся культура зародилась на Урале и распространилась затем по свету”.

Как это дурь пропустили в журнале, нам непонятно. А на что смотрел секретарь обкома по идеологии Ахунзянов, тоже неведомо. Как бы ни было, автору статей этого ярого “башкириста” выдали годовую премию журнала.

Прошло много времени, но кроме восхваления этих статей, никакого опровержения “глубоких истин” Султанова и возражений не было. Значит, новоявленный “башкирин” Султанов изрек правду, только правду. (***Он – татарин,*** так хорошо подделался под вкусы национализма)”.

Быға ла мөрәхәтһенмәнеләр шылмалар: яҡын ҡорҙашым (йәштәшем) Илшат Йомағоловтан да (Аллаға шөкөр, әле иҫән) “татармы ул?” тип төпсөнгәндәр икән дә! Күренекле драматург һәм артист былай тип яуаплаған: “Был хаҡта мин һеҙгә шуны ғына киҫеп әйтә алам: әгәр Йыһат Солтановты бер ҡаҙанға ете татар менән ҡуша һалып, ете көн, ете төн ҡайнатһағыҙ ҙа, ҡаҙандан ул етеләтә башҡорт көйөнсә боҡорҙап килеп сығасаҡ”...

Әммә эш уйынлы-көлкөлөнән уҙып, ҙурға ла барып еткеләне. Шундай йәмһеҙ ваҡиғаларҙың береһенә был тәңгәлдә киңерәк урын бирергә тура килә, ләкин быны уҡыусы дөрөҫ аңлаһын: унда үҙем хаҡында һүҙ барһа ла, асы фәһеме Ғәйнан ағай Әмиригә һәм уның кеүектәргә туп-тура ҡағылышлы тынсыу әҙәби мөхитебеҙҙе күҙ алдына баҫтыра... Бер саҡ шулай Яҙыусылар берлеге партия ойошмаһының йыллыҡ хисабында мин баяғы ҡыҙыҡһыныусыларымдың икеһенең сит илгә (ул саҡтағы ГДР-ға) барып ҡайтҡандарынан һуң яҙа һалып “Ағиҙел”дә сығартҡан берлектәге

йылғалай оҙон сәйәхәтнамәһен — «кәсепнамә, өйҙә ултырып энциклопедия һәм белешмәләрҙән сүпләп алынған күсермә” тип нарыҡлаған, Яҙыусылар берлегендә аҙмы-күпме вазифа биләгән был икәү һәм уларҙың фекерҙәштәре мин “татар”ҙың “Ядкәр” тигән романының нәшриәткә юлын киҫеп, ун ете йыл буйынса быуып йонсотто. Ул йыйылышта минең арттан коммунистарҙың күпселеге ҡубынып, түрҙә ултырған «әҙәбиәт генералдары»ның бөтә булдыҡһыҙлыҡтарын, гонаһтарын күҙҙәренә төртөрҙәй асып һалдылар. Әрпешлектәре арҡаһында Яҙыусылар берлеген дә, «Ағиҙел» журналын да көрсөккә таяндырҙкан етәксе-аппаратсыларыбыҙ (дүрт әҙәби чиновник) иһә шул тәнҡитте күтәрә алмайынса, тәнҡитләүсе ҡәләмдәштәре өҫтөнән 1986 йылдың декабрендә КПСС-тың Башҡортостан өлкә комитеты сәркәтибе Т.И. Ахунйәнов иптәш исеменә рәсми шикәйәтнамә яҙып бирҙеләр, бына ул ғибрәтле документ (шул көйөнсә үҙ телендә күсерәм):

«Секретарю Башкирского обкома КПСС тов. Ахунзянову Т.И.[5]

Уважаемый Тагир Исмагилович!

Доводим до Вашего сведения свою оценку отчетного партийного собрания писателей, состоявшегося 2 декабря 1986 года. Фактически оно провалилось, было уведено в сторону от насущных проблем дальнейшего развития башкирской советской литературы демагогическими выступлениями некоторых коммунистов, выдвинувших на первый план свои сугубо личные корыстные интересы...

Теперь очевидно, что среди писателей сложилась группа, поставившая перед собой цель очернить руководство Союза писателей и редакции журнала «Агидель»...

В этот раз для нападков была использована 12-летняя история с рукописью так называемого романа-эссе «Ядкарь» Зигата Султанова. Это произведение, не имеющее каких-либо художественных достоинств (ни сюжета, ни одного героя с более или менее приемлемой нравственностью, карикатурное изображение секретаря обкома), трудно читаемое, правда, не содержит в себе высмеянного Мустаем Каримом султановского утверждения, что башкиры первыми придумали колесо и мазь для него, но целиком подчинено той же глобальной султановской мысли: вся цивилизация началась с башкир, полно унизительных намеков в адрес соседних народов[6]... И это произведение в 1974 году было обсуждено на заседании секции прозы и получило одобрение (по словам одного из оставшихся в живых участников обсуждения Нугумана Мусина — с многочисленными серьезными замечаниями). Тогда же роман начал печататься в газете «Совет Башкортостаны», в предисловии автор заявил,

---

[5] Текст өҫтөнә: «Получено 11 декабря 1986 г.» тип билдәләп ҡуйылған.

[6] Һүҙ барған партия йыйылышында идара сәркәтибе Б.З. Рафиҡов белдереүенсә, «Ядкәр» романының авторы, имеш, башҡорт милләтсеһе булараҡ, күрше татар халҡына яла яҡҡан. Бының нахаҡлығын йыйылыш барышында уҡ фашланым. Ә теләгән һәр кем быға әҫәрҙе (Йыһат Солтанов. Ядкәр. Роман-ҡисса. Өфө, Башҡортостан китап нәшриәте, 1992) үҙе уҡып инана ала.

что он задуман из 20 (двадцати) книг[7], но газетная публикация была прервана по указанию обкома партии[8]...

В течение многих лет Зигат Султанов молчал и года 2-3 назад вновь принес свою рукопись, уверяя, что она переписана заново. Роман прочитали, подробно отрецензировали Булат Рафиков и Асхат Мирзагитов. Было сказано, что роман нуждается в серьезной переработке и в идейном, и художественном аспектах. Автор согласился с доводами рецензентов. Но через некоторое время поведение Зигата Султанова неожиданно приобрело агрессивный характер...

В истории с этим романом нас особенно удивляет позиция Кадима Аралбаева[9]. После второй жалобы Зигата Султанова в обком партии на Асхата Мирзагитова и Амира Гареева, которые якобы мешают публикации романа из-за личной вражды автору, он (Аралбаев) стал настаивать на немедленном печатании этого произведения в журнале, пугая тем, что иначе автор напишет и в ЦК КПСС. Более того, на заседании редколлегии настойчиво требовал начать его публиацию немедленно, с январского номера, доказывая, что это произведение о становлении башкирской советской интеллигенции и явится хорошим подарком 70-летию Великого Октября. У членов редколлегии создалось впечатление, что Кадим Аралбаев или толком не прочитал этого произведения, или не смог разобраться в нем[10]. Было решено отдать «Ядкарь» еще на одну рецензию — доктору филологических наук Гилемдару Рамазанову, который тоже пришел к мнению, что роман в таком виде печатать нельзя[11]. То же самое сказали профессоры Гайса Хусаинов и Роберт Баимов, прочитавшие роман позже...

Так вот, на отчетном собрании Зигат Султанов выступил с пространной речью. Изрядно поехидничав по поводу «мудрости» Амира Гареева, болезней и заграничных поездок Асхата Мирзагитова, узости плеч Булата Рафикова, он, уволенный недавно из редакции журнала по собственному желанию, а фактически за развал работы отдела критики, взялся за критический разбор работы отдела прозы, а уменшение тиража журнала объяснил тем, что не публикуют его роман.

Тон был задан. Зайнаб Биишева объявила Зигата Султанова великим тружеником, по своему обыкновению прошлась по адресу Мустая Карима («ваш кудрявый», «ваш герой»), свое падение с лестницы в здании Союза писателей СССР в начале VIII съезда представила чуть ли не организованным покушением на нее (какой-то знакомый высокий мужчина с портфелем в руке, о ноги которого она споткнулась), заявила,

---

[7] Ә дөрөҫө, ҡамса — биш китаптан торасаҡ, тип әйткәйнем.

[8] Теүәлерәге, идара рәйесебеҙ Ә.М. Мирзаһитовтың партия өлкә комитетына барып ошаҡлауы буйынса.

[9] Ул саҡтағы партия өлкә комитеты культура бүлегенең инструкторы һәм Яҙыусылар берлеге, «Ағиҙел» журналы буйынса куратор.

[10] Йәғни «башҡорт милләтселеге» саҡтыларына күҙ йомған.

[11] Ғ. Рамазанов, шул «әҙәбиәт генералдары» өйөрөнөң айырылғыһыҙ бер вәкиле булараҡ, әҫәрҙе тоҡтарлау йәһәтенән өйөрҙөң заказын, әлбиттә, еренә еткереп үтәне.

что в республике ее не признают, притесняют, лишь Москва ее спасает. Ее слово кое-кому пришлось по вкусу, и они пытались организовать массовую овацию... Тайфур Сагитов предложил ввести в решение отчетного собрания специальный пункт о романе «Ядкарь», отстранить от этого дела редколлегию журнала, к которой теперь Зигат Султанов не питает доверия.

Таким образом, собранию вновь был навязан роман «Ядкарь», который и так заслонил собой наиболее актуальные вопросы литературного процесса, которые пытается решить правление и редколлегия журнала... К сожалению, оскорбления в адрес нынешних руководителей Союза и редакции, выпады против Мустая Карима, вся эта работа локтями не были замечены лишь руководящими партийными работниками, присутствовавшими на собрании. Зав. Отделом культуры обкома КПСС тов. Дильмухаметов А.М. назвал все выступления хорошими, принципиальными.

Получилось так, что он молча одобрил и то, что Зайнаб Биишева начисто отрицала целесообразность решения партийных органов после гражданской войны об образовании комиссии по реализации башкирского языка и ее работы во главе с Шагитом Худайбердиным, а также призвала собрание брать пример с татарских писателей и перестать ругать эмигрировавшихся после революции башкирских деятелей, то бишь Закия Валидова[12]. Мы понимаем, что демократизация советского общества предполагает открытое выслушивание всех мнений, но всему должна быть дана партийная оценка.

Обструкция, устроенная на партсобрании группой себялюбцев, не стесняющихся в выборе средств для прокладки себе пути, прямо скажем, не лучших представителей нашей литературы, конечно же, преследуют цель свалить нынешнее руководство Союза и редакции еще до съезда писателей Башкирии, который не за горами. А приход таких людей в руководство чревато многими осложнениями для всей башкирской советской литературы.

Тов. Дильмухаметов А.М., видимо, из-за своей перегруженности работой слишком полагается на мнение своего инструктора Кадима Аралбаева, на его партийную объективность и прозорливость. Но член СП СССР Кадим Аралбаев, любящий часто повторять «обком так думает!», в некоторых случаях показал себя совсем иным. Являясь куратором журнала «Агидель» он не может идти дальше мелочной опеки, придирок по поводу знаков препинания. Его же предложения по содержанию журнала часто дают отрицательный результат. Так, 60-летию журнала он опубликовал материал со ссылкой на буржуазного националиста Х. Габитова. Его

---

[12] Тимәк, Зәйнәб Биишева ла, “совет хакимиәтенең ҡан дошманы” Әхмәтзәки Вәлидов кеүек үк, һөрһөп бөткән башҡорт милләтсеһе ул, тимәккә баралар һәм бер киҙәнеүҙә уны ла юҡ иттертергә яҫканалар.

хлопоты по поводу романа «Ядкарь» также вызывают сомнения относительно его компетентности[13]...

А. Мирзагитов. А. Гареев.
Т. Юсупов. Б. Рафиков».

Ошо ғына ла етмәһә, өҫтәүенә, баҫылып сыҡмаған романымды яманлап (ә был бөтөнләй хилаф эш!) һәм «Урал батыр шәжәрәһе» өсөн миңә «Ағиҙел» журналының йыллыҡ бүләге биреләүенә асы нәфрәт белдереп, идара рәйесебеҙ Әсғәт Мирзаһитов исеменән Мәскәү-мәркәздең үҙенә үк емерткес мәҡәлә-шикәйәтнамә атҡарылған булып сыҡты (ләкин ул Өфөләге ваҡиғаларҙың эҫе мәленән ике айға һуңлап ташҡа баҫылды. — «Литературная Россия» гәзитенең 1987 йыл 13 март №11 һаны). Әйтелгән шикәйәтнамәләрҙең икеһе лә, был осорҙағы миңрәүләнгән (был хаҡта хатта рәсми органдарҙа ла беләләр ине) Мирзаһитов үҙе ҡәләм тибрәтеп фекерләй алмағанлыҡтан, эргәһендәге «серый кардинал» тип аталмыш (был ләҡәп Тайфур Сәғитовтың романында ла бар, буғай) әлеге лә баяғы шул Б. Рафиҡовтың ҡәләме аҫтынан сыҡҡанлығы күптәргә билдәле ине. Заманында «йәшел йылан» тәьҫиренә ныҡ биреләүе арҡаһында (быны ул аҙаҡ үҙе лә яҙып ҡалдырҙы) алтындай йылдарын ижадһыҙ яндырғаны өсөн, хәҙер килеп, уға тамсы ла зыяны теймәгән, әммә айныҡ аҡыл менән ижат иткән ҡайһы бер ҡәләмдәштәренән үс алғандай ине был... Һәм бына килеп яҙыусыларҙың үҙҙәре генә түгел, ә етәкселек итеүсе партияның район, өлкә комитеттары вәкилдәре, матбуғат органдары хәбәрселәре лә ҡатнашлығындағы шул оло йыйылышта ижадыма ҡарата ҡылынған ғәҙелһеҙлеккә ҡаршы мин тороп оторо телмәр тотҡас һәм залдағы ипле генә коммунистар: «ни өсөн һуң тотҡарлайһығыҙ уның романын, аңлатып бирегеҙ?» тип идара етәкселәренән һорағас, идараның сәркәтибе булмыш баяғы Б.З. Рафиҡов, күҙ ҙә йоммай: «Сөнки ул роман — милләтселек емеше, татар милләтенә ҡаршы яҙылған», — тип шаңҡыта һуҡты башыма — партия өлкә комитетынан мине туҡматыу өсөн иң отошло «милләтселек» кәртен уйнатыуы күренеп тора ине. Бының улай түгеллеген янып дәлилләһәм дә, ҡолаҡҡа элмәнеләр һәм партия өлкә комитетының, район комитетының вәкәләтле вәкилдәре (күбеһе татар милләтенән!) йыйылыштан ошо шомло уй менән ҡайтып китте — мине тамам ергә һеңкәҙәтә һуғыу, романымдың башына етеү ине был (шуның өсөн дә ул оҙаҡ — ун ете йыл буйына тотҡарланды). Үҙем кеүек үк ҡәләмдәштең (хатта фекерҙәштең, тип әйтә алам!) ҡара яла яғыуы рәнйетте күңелемде, көтмәгәндә йөрәгемде йылан саҡҡандай булды. Ошоғаса һәр төрлө ҡыйырһытылыуҙарҙы сабыр кисерә тороп та, был юлы хәтәр яҙмышҡа дусар ҡылыныуымды яҡшы аңлап, Лев Толстойҙың: «Уң сикәңә һуҡһалар, һуҡтыртырға һул сикәңде ҡуй», — тигәненең оторонһон ҡылырға — һуғыусыға уның үҙенең «милләтселек» суҡмары менән уғата ҡатыраҡ

[13] Заманаһының халыҡ шағиры (20-се йылдарҙың рәсми ҡағыҙҙарында ул тап шулай «халыҡ шағиры» тип атала), ләкин 1937 йылда «башҡорт буржуаз милләтсеһе» итеп тамғаланмыш Хәбибулла Ғәбитовҡа һылтаныусы Ҡ. Аралбаев та, уның башлығы Ә. Дилмөхәмәтов та, һәм улар тарафынан яҡланған Й. Солтанов та, тимәк, «башҡорт милләтселәре» кәштәһенә һалына.

ҡундырырға ҡәһәтләндем һәм йәберсемдең шул арала журналда баҫылып сыҡҡан романы тураһында ул үҙе үк миңә ҡаршы йөрөп шымартҡан түтә юлдан партияның өлкә комитетына хат күндерҙем. Асылда башҡорт араһына килмешәк-ят бауыр булып кергән ылғый аферист-шпионды башҡорт халҡының милли геройы итеп күтәрергә, төрлө уйҙырмалар аша башҡорт халҡын — урыҫ халҡына, урыҫ дәүләтенә ҡаршы ҡуйырға маташыуҙы төрлө тарихи документтарға таянып дәлилләнем[14]. Бер уйлаһаң, яҡшы ла түгелдер был, әммә, башына баҫһаң, баҡа ла башмаҡтай баҡыра, тиҙәр бит... Һәм, әйтергә кәрәк, «ни тиһәң дә, үҙ этең бит», тигәнде иҫкә төшөрөп, ошо ҡыҙыулығым өсөн үкенә биреп тә йөрөгәйнем. Әммә, шөкөр, эште ҙурға ебәртмәй, мәкерле йәндең табаҡташтары үҙҙәре әйткән «нәүбәттәге йыйын-һайлауҙарғаса» уны түрәлегенән ҡолатмай яҡлап алып ҡалдырҙылар — бер аҙ өркөтөлөү менән генә арынды. Ә китап итеп сығарғанда әҫәрен ул мин күрһәткән етешһеҙлектәрҙән шаҡтай арсалап, һуңынан бүләк тә алды.

Әрпеш етәкселек әһелдәрен тәнҡитләүсе ҡәләмдәштәре өҫтөнән яҙылған шикәйәтнамә авторҙарына килгәндә, моғайын, улар шуның ярҙамында беҙ фәҡирҙәрҙе әүәлгесә Юғарынан күсәкләттертеп, һыуҙан ҡоро сығырға маташҡандарҙыр. Ләкин КПСС Үҙәк Комитеты күптән түгел иғлан ҡылған билдәлелек (гласность) шарттарында осло беҙҙе тоҡта йәшереп тотоу һис мөмкин түгел ине. Түрәләребеҙҙең беҙҙең өҫтән яҙған баяғы шикәйәтнамәһен күмәкләшеп тикшереү кәңәшмәһе протоколының тәүге бер бите генә лә күрһәтә шуны:

«Список приглашенных в обком КПСС на совещание к тов. Ахунзянову Т.И. 22 декабря 1986 г. 16.00. ч. в ком. 409. (Бөтәһе 34 кеше, шуларҙың 26-һы — яҙыусылар, был һөйләшеү сәбәпселәренең береһе булмыш Й. Солтанов ҡына саҡырылмаған. — Й.С.).

Протокол совещания у секретаря обкома КПСС товарища Ахунзянова Т.И. 22 декабря 1986 г. 16.00. ч.

Совещание открыл т. Ахунзянов Т.И.

Приглашены члены правления Союза писателей, члены партбюро, члены ревизионной комиссии и члены редколлегии, редакторы республиканских газет, секретарь Уфимского ГК КПСС т. Мирсаев Р.Н., секретарь Кировского РК КПСС т. Султанова Р.И.

Письмо в адрес обкома зачитывает Т.И. Ахунзянов.

Х. Гиляжев. Как Вы смотрите: если директор завода жаловался бы на своих подчиненных?

Т.И. Ахунзянов. Они написали бы жалобу сверхстоящим.

Т.Б. Сагитов. Что имеется в виду о коллективной подготовке выступлений?

А. Мирзагитов. Можно понимать как угодно. Но стиль выступления Султанова был очень отшлифован, подготовлен»...

---

[14] Ҡыҙыҡһынғандарҙың иғтибарын «Башҡорт батыры Йеҙекәй (Едигей)» тигән әҫәремә йүнәлтәм («Ағиҙел» журналының 1999/12, 2000/1 — 5 һандары).

Ялыу яҙыусы чиновник-түрәләребеҙ һис кенә лә көтмәгән хәл: Яҙыусылар берлеге, партбюро, «Ағиҙел» журналы етәкселәренең башы өҫтөндә ҡойон уйнатып сығыш яһаған ун алты телмәрсенең береһе лә Йыһат Солтановҡа ҡаршы һөйләмәгән, ә алтыһы (башҡорттар ҙа, татарҙар ҙа) асыҡтан-асыҡ яҡлап сыҡҡан уны. Шыма телле Әнғәм Атнабаевҡа тиклем: «Я думал, что письмо в обком написал Султанов. Оказывается, все наоборот. Их мне стало жалко. Если бы Султанов написал, было бы понятно. Что же случилось? Кто их обидел?.. — тип көлкөгә һалып, ҡырҡыу йомғаҡлап ҡуйған. — Правление не работало, партбюро не работало»...

Дилбегәне ҡаты йомарлап тотоусы Т.И. Ахунйәнов иһә, шикәйәтнамә маһирҙарының тишек кәмәһен тамам һыуға батырып, партия өлкә комитетының рәсми ҡарашын белдерә:

«Можно было и без повода организовать такой разговор. Дильмухаметов дал хорошую оценку собранию (и правильно сделал). Я бы такое письмо не написал.

Положительно то, что это было перед съездом писателей — всколыхнуло всех. Письмо — это творение не только Мирзагитова. Мы не умеем жить в условиях демократии. Демократию надо понимать во всей полноте. Собрание не провалилось. Провалилось наше мнение, наш метод, наши устаревшие устои. Это ваша общая вина, что доклад не состоялся»...

Йыһат Солтанов яҙмышының бизмән табағына иһә Т.И. Ахунйәнов иптәш ыңғай-тос герен һала:

«Какая придирка к роману Султанова? Обязательно ли должна быть старая форма? Надо осмыслить по-новому. ***Опубликовать надо роман!***»

Артабанғы биш йыл буйынса ла әҫәремә кәртә ҡороуҙары туҡталмай һуҙыласаҡ ғәрәсәтле юлымда был — туннель осонда балҡымыш яҡты нур ине. Бер ваҡытта ла Т.И. Ахунйәнов иптәштең тупһаһын ашатлап уҙғаным, бер ерҙә лә тап килешеп һөйләшкәнем булмаһа ла, тел ярҙамы тейҙе бит ижадыма. Иншалла, Хоҙай Бабайҙың ҡөҙрәте киң.

Әммә төп һүҙ бында минең хаҡта түгел, ә Ғәйнан Әмири яҙмышын яҡшыраҡ аңларға бер миҫал ғына. Йәнде иҙгән ошондай тынсыу әҙәби мөхитебеҙ саф күңелле Ғәйнан Әмириҙең ижади яҙмышына күрәләтә ҡара һөрөмөн һалды. «Башҡортмын» тип кәперәйеп йөрөүселәр миңә, көньяҡ-көнбайыш (Үҫәргән) башҡортона, ошолай ҡарағастары, төньяҡ-көнбайыш (Ғәйнә) башҡорто Ғәйнан Әмиригә уғата ҡыйыныраҡ булғандыр, тим (ғәйнәләр, билдәле булыуынса, «үҙебеҙ — башҡорт, телебеҙ татар», тиҙәр). Тап ана шул тар күңелле, һай белемле бәғзеләребеҙҙең тупаҫ һәм наҙан эшмәкәрлеге арҡаһында бит милләтебеҙҙең хәтһеҙ ҙур бер өлөшө — төньяҡ-көнбайыш башҡорттары — ғәзиз балаларын татар мәктәптәрендә

уҡытырға, милләттәрен «татар» итеп яҙҙыртырға мәжбүр ҡылынды (хәйер, мин был хаҡта 60-ынсы йылдарҙа уҡ баяғы «Ядкәр» романымда йәнем әрнеп яҙғанмын)... *Ләкин* Ғәйнан ағайыбыҙ, күпме генә рәнйеһә *лә*, минең һымаҡ тәртә тибеп һындырырға һис тә һәләтле түгел, үтә нескә тойғоло һәм йомшаҡ күңелле ине — үҙе иҫән сағында уҡ әленән-әле шом һалыусы мөртәттәрҙең моронона ҡанатҡансы ҡаты һуға алманы, шул арҡала ғәйбәт тигән ҡара болот тарҡалмай, үлемесле рак сирендәй үҫә һәм ҡуйыра барҙы... Бының менән мин артабан был яҙмамда ентеклерәк һөйләнәсәк һәм шәхсән Ғәйнан ағайға нығ ҡағылышлы күрә алмаусан хаслыҡтың арабыҙҙа, үкенескә ҡаршы, ағыулы ҡара үрмәкселәй күңелдән күңелгә, быуындан быуынға үрмәләп, күптәребеҙҙе күнектермеш "ғәҙәти" бер бәләгә әүерелеүен, етмеш йыллыҡ тоталитар хакимиәт осоронда ул әҙәби тормошобоҙға шаҡтай тәрән тамырланып өлгөрөүен иҫкәртергә теләнем.

2

Ғәйнан ағай үҙенең бөтә булмышы, йәне-тәне менән, тынғы белмәҫ елкәнле аҡ күңеле менән донъяның бөтә кешеләренә *лә* мәңге ғашиҡ, бигерәк тә беҙҙең ише елкенеп-талпынып ҡәләм тибрәтеүсе йәш шағирҙарға һис кенә *лә* һүрелеүҙе-төңөлөүҙе белмәүсән ғашиҡ ине һәм ул беҙҙе, әле яңы моронлаған балапандарын, йылы ҡанаты аҫтында һаҡ ҡурсалаусы бөркөттәй, йөрәк төпкөлөндә типкән дерелдәүек һөйөүе менән һөйөр, һәм үҙе *лә* һиҙмәйенсәлер, моғайын, шул тойғоһон тәрән күкрәк тауышына сығарып, "минең ҡәҙерле йәш дуҫтарым", тип үҙәккәйе өҙөлөп әйтер ине. Быға инаныу өсөн, беренсе шиғри китабыма бөркөлдөргән йөрәк йылыһын уның үҙ ҡулъҙмаһынан уҡып ҡарау ҙа етә:

«Йыһат туғаным!

Бына «Йондоҙ ямғыры»ның корректураһын ҡарап сыҡтым. Сыҡтым да шатлыҡтарға сумдым: «нindәй гәжәп китаптың редакторы булыу бәхете төшкән минең өлөшкә!» — тинем.

Ысынлап та гәжәп китап был! Кескәй генә ул. Әммә — имән сәтләүеге кеүек кескәй. (Шундай сәтләүектән дәһә, таш-ҡаяға баҫып, ел-дауылдарға баш эймәй, горур шаулап торған мәңгелек имән үҫеп сыға).

Ғәжәп китап был. Кескәй генә ул. Уға тупланған шиғырҙар ҙа ваҡ ҡына. Тик улар йә ынйы бөртөгө кеүектәр (ынйы бөртөгө бик ваҡ — ә нindәй ҡиммәтле!), йә бойҙай орлоголай (яҙын ул «ҡулына йәшел ҡылыс тотоп сығасаҡ»!), йә тылсымлы бөрөләй. Эйе, был китапта бөрөләр ҙә күп. Ләкин тамсы ла шикләнмәҫкә мөмкин: улар мотлаҡ япраҡ ярырҙар, сәскә атырҙар — ил күрке булып гөрләрҙәр.

Ғәжәп китап ***бу.*** *Халыҡсан. Просто халыҡсан ғына түгел —* ***башҡортсан!*** *Унда, уның һәр юлында (тиерлек) башҡорт йөрәге тибә, башҡорт һулышы бар;*
уның уйы, хисе — бөтәһе лә һинең, Йыһат туғаным, башҡорттоң бик оло йырсыһы булып күтәреләсәгеңә, осасагыңа шикләнмәйем! Һәм был һүҙҙәрҙән

һинең башың әйләнеп китмәйәсәген дә беләм. (Бөркөт балаһын космосҡа алып менһәң дә, уның башы, моғайын, әйләнмәç ине).

Тағы нимә тим?

Миңә хәҙер 59-ынсы йәш. Йылтыраууыҡ тәтәй күреп сәбәкәй саба торған сағым үткән. Һнйыны ябай быяланан айыра беләмдер тип уйлайым.

Хоҙайым, һиңә сәләмәтлек, оҙон ғүмер бирһен. Бер ҡасан да ваҡлана күрмә, гел генә шулай эре булып йәшә.

Ҙур ышаныс менән —

Ғәйнан Әмири.

10.10.1969».

Донъяға һәм донъяның барлыҡ кешеләренә ысынлап та мәңге ғашиҡ йөрәк кенә ошондай хисле тойғоларҙан мөлдөрәп таша алалыр.

Бер уйлаһаң, йәштән үк ул шулай булған, ап-аҡ күңел елкәненә үҙенән кесерәк һәр бер быуын йәш йөрәктәрҙе хәстәрлекләп туплаған да баплаған (хәҙерге олпат ҡәләмдәштәрҙең ҡайһыныһынан ғына һорап ҡараһаң да, быны ихлас дөрөçләйҙәр).

"Бала саҡтан һөйөнөслө был ваҡиға, — тип яҙа күренекле шағирыбыҙ Яҡуп Ҡолмой өçтә телгә алынған мәҡәләһендә, — ярты быуаттан артыҡ инде хәтеремдә һаҡлана. Әле Эстәрле педтехникумында уҡый ғына башлаған үçмерҙең ҡыйыуһыҙ күңеленә осор ҡанат ҡуйҙы был көтөлмәгән хат. Өфө һынлы Өфөнән килгән был хат кинәт зиһенемде һүргәндәй булды. Ундағы һүҙҙәр әле булһа хәтеремдән сыҡмай: "Яҡуп, энем, һинең шиғырыңды ла, һүрәтләмәңде лә алдыҡ. Икеһен дә әҙерләп бирҙем, оҙаҡламай баçылып сығыр. Сәләм менән **Ғәйнан Әмири**", — тип яҙылғайны. Уҡыу башланып ун көн самаһы үткәс, "Йәш төҙөүсе" гәзитенең беренсе битендә нәçер һымағыраҡ мәҡәләм, дүртенсе битендә "Һау булығыҙ, ҡоштар" тигән шиғырым баçылып та сыҡҡан. Бер группала уҡыған ауылдашым Ғәйфулла ла, Әрмет егете, хәҙер яҙыусы Ибраһим Ғиззәтуллин да, беҙҙән юғары класта уҡыған Нурулла Янбаев та гәзитте ҡулдан ҡулға йөрөтөп уҡынылар... Һуңыраҡ үҙем дә Өфөлә, "Ленинсы" гәзитендә эшләй башланым...

Белеүемсә, шул йылда Ғәйнан Әмири пединститутты тамамлап сыҡты. Йыш ҡына редакцияға килә, шиғырҙарын баçтыра, беҙҙе лә ситләтеп китмәй торғайны. Мин ултырған ҡыçыҡ бүлмәгә лә керә, яңы ғына әүмәләгән ҡулъяҙмаларымды ҡараштыра, "был юлын былайыраҡ әйтергә кәрәк", тип, төҙәткеләп тә ҡуя. Бара-тора ул минең серҙәш ағайым, ижадымда яҡын кәңәшсемә әүерелде... Ғәйнан Әмири — ижадымдың бөрөләнгән осоронда ла, шаҡтай сыныҡҡас та иркен һулыш алырға булышлыҡ иткән оло ҡәләмдәштәремдең береһе ул... Дөрөçөн әйткәндә, яғымлы ижадсы менән йәнәш йәшәү — үҙе бер әҙәби дәрес һымаҡ була торғайны миңә. Бигерәк тә ул Тарих, тел һәм әҙәбиәт ғилми-тикшеренеү институтында эшләй башлағас, яңы шиғырым булһа-булмаһа ла, йыш ҡына кереп йөрөнөм мин уның янына"...

Йәшерәк быуын вәкиле булмыш мине иһә ағайым менән тәүбашлап илленсе йылдар аҙағында, ул саҡта әле "Әҙәби Башҡортостан" (хәҙерге

“Ағиҙел”) журналы редакцияһында ябай әҙәби хеҙмәткәр булып эшләгән һәм, тупаҫ кирза итектәрен шарпаңдатып ундағыларҙың ваҡ-төйәк йомоштарына әрһеҙ йүгереп йөрөгән (һуңынан — журналдың баш редакторы, ә торараҡ Яҙыусылар берлеге рәйесе) Әсғәт Мирзаһитов таныштырҙы.

Иң элек беҙ ниндәйҙер складҡа барып, сарпалып бөткән иҫке йөк машинаһына оло бер уралан (рулон) ҡағыҙ тейәнек тә типографияға илтеп ҡуйҙыҡ. Шунан һуң Мирзаһитов мине, “әйҙә, Ғәйнан ағайҙың хәлен беләйек” тип (ул ваҡыт журналдың баш редактор урынбаҫары булып эшләгән әҙипте “Август төнөндә” тигән хикәйәләр йыйынтығы буйынса ғына яратып белә инем), Пушкин урамындағы “түрәләр хәстәханаһы»на алып китте; ағайыбыҙ, һуғышта алған ҡаты шаңҡыуы (контузияһы) ҡуҙғалып, башы бик ныҡ ауыртыуы сәбәпле, дауаланып ята икән. Карантин булғанлыҡтан, эскә үткәрмәнеләр, ләкин беҙҙең килеүҙе ишетеп икенсе ҡаттағы балконға сыҡты шағир һәм, нисектер, ғәйепле йылмайыбыраҡ баш эйҙе; шул саҡ уның түбәһе ялтас икәнлеге, аҡһыл йөҙө үтә йонсоу булыуы, әммә минең менән ихлас танышыуы, хәл-әхүәлемде хәстәрлекләп һорашыуы иҫемдә тороп ҡалды. Шунан һуң мин, төрлө сәбәптәр арҡаһында баш ҡалала артабан ҡалыуҙан тыйылып, ауылға ҡайтып киттем дә алтмышынсы йылдарғаса морон төртмәнем Өфөгә. Ләкин ағайым мине теге күрешеүҙә үк күңеленә беркетеп ҡуйған икән. Улай ғына ла түгел, минең ауылдан “Әҙәби Башҡортостан»ға юлландырған хикәйәләремдең дә, үҙемдең дә яҙмышты ҡайнар ҡайғыртҡан, ҡырыҫлыҡтар донъяһында аҙап сиккән минең өсөн был һис тә көтөлмәҫ хәл ине. Бына әле алдымда ята тап шуның, башланғыс йәш яҙыусының киләсәген атайҙарса йән атып ҡурсалауҙың, ҡабатланмаҫ өлгөлө бер дәлиле — Өфөнән ауылға күк күгәрсендәй осоп килеп еткән хат һәм шуға яуапнамәм. Заманыбыҙҙа ҡайһындай ҙа изге рухлы ағайҙарыбыҙ булғанлығын һәм уларҙың күңел шаңы беҙҙең, йәштәрҙең, күңелендә ҡайһылай ныҡ шаңдауланғанын дәлилләү өсөн, икеһен дә тулы килеш күсерәм (шуға торошло былар!):

“Йыһат туғанҡай!

Бик оҙаҡ ваҡыттар тауыш бирмәй, һине билгеһеҙлектә ғазаплағаным өсөн ғәфү ит. Бик үтенәм.

Мин ауырыным, бик ҡаты ауырыным. Баш менән. Больница — йорт — Ҡафҡаз. Шулай үтте көндәр. Миңә килгән әйберҙәрҙе бүтән берәү ҙә уҡымаған.

Бына яңы ғына баш-күҙ алып киләм кеүек. Әйберҙәреңде “сукно аҫтынан” һөйрәп сығара башланым. Поэмаң М. Тажиҙа. Ҡалғандарын беҙ Әсғәт Мирзаһитов менән уҡыйбыҙ. Ҡәләмең яҡшы. Һин яҙыусы булырға тыуған кеше! Һин быны бел һәм үҙеңде һаҡла, ҡара, үҫтер. Танауыңды күтәрмә был һүҙҙәр өсөн, ләкин ҡәҙереңде бел.

Әле был әҫәрҙәрең баҫылып та ҡуймаҫ. Сөнки был замандарҙа сатираның абруйы төшөп тора бит...

Ә “Урмандар” — китәсәк. Кем белә, бәлки, тегеләрен дә баҫып булыр.

Был хатта мин бүтән мәсьәлә күтәрәм. Һинең алдағы яҙмышың тураһында уйлайым. “Белемһеҙ аҡыл — ҡанатһыҙ ҡош”, — ти ғәрәптәр. Һиңә уҡырға — иң яҡшы мәктәптә уҡырға кәрәк. Дөрөҫ, һин күп уҡыған күренәһең, ләкин системалы белем кәрәк. Һин миңә ашығыс яҙ: белемең ниндәй? 10 класс бармы? Аттестатың? Әгәр ҙә шундай документың булһа, мин һине Мәскәүҙәге А.М. Горький исемендәге Әҙәбиәт институтына уҡырға ебәреүҙе тәьмин итеүҙе өҫтөмә алам! Унда махсус йәш яҙыусылар уҡый.

Шуны уҡып бөтөрһәң, *һинән беренсе дәрәжәле прозаик сығасаҡ.* Мин былдай һүҙҙе ғүмеремдә *икенсе генә* кешегә әйтәм, бел. (Һуңынан белеүемсә, беренсе кешеһе йәш Мостай Кәрим булған[15]. — *Й.С.*).

Шулай, ашығыс рәүештә минең һорауға яуап бир һәм, әгәр ҙә урта белемең бар икән (документально), — мин тәҡдим иткән институтҡа уҡырға китергә әҙерлән, көҙ үк.

Хәҙергә хуш. Сәләмәт бул.

Яҡын күреп, **Ғәйнан Әмири.** 11/IV — 57.

Г. Уфа, Ленина, 2, кв. 36. Амири Г.Г.

PS. Бында шундай һүҙ ҙә бара әле, дөрөҫөрәге — фекер тыуып тора: һине берәй 10 көнгә саҡыртып алдырырға ниәт. Берлек иҫәбенән, әлбиттә. Мирзаһитов менән бергә хикәйәләреңде баҫырға әҙерләү буйынса эшләр инегеҙ. Ләкин был хаҡта 1-2 көндән конкрет яҙырбыҙ.
Әмири”.

Бының ише лә изгелекте, игелекте, ҡабатлайым, быға саҡлы үҙ ғүмеремдә күргәнем юҡ ине (атай-әсәйҙән башҡа, әлбиттә), артабан да башҡаларҙан да был тиклемен үк күрергә насип итмәне...

Инде бына мәрхәмәтле шул ауазға минең күңел шаңдауым:

“Иҫәнмеһегеҙ, Ғәйнан ағай!

Кисә төнлә генә Һеҙҙең хатығыҙҙы алып бик ҡыуандым. Оҙаҡ хәбәр килмәй торғас, һуңғы көндәрҙә күңелһеҙләнә башлаған инем. Һеҙҙең әйткән һүҙҙәрегеҙ миңә ҡанат үҫтереп ебәрҙеләр. Рәхмәт, ағай, йылы һүҙ, игелекле уйҙарығыҙ өсөн. Мин бер ваҡытта ла танауымды күтәрмәм, үҙ-үҙемде әллә кемгә ҡуймам, сөнки минең бөтә теләгем, бөтә ынтылышым шәхси үҙем өсөн түгел, ә башҡорт халҡыма яҡшы хеҙмәт күрһәтеү, нисек тә уның культураһын, рух байлыҡтарын үҫтереү өсөн йүнәлдерелгән. Бала сағымдан уҡ мин туған халҡымдың быуаттар буйына ирек яулап яҙған данлы тарихы менән ғорурландым, уның йыр-моңдарға бай булыуын күреп шатландым, ләкин, шул уҡ ваҡытта, әҙәбиәтебеҙҙең, искусствобыҙҙың сағыштырмаса арттараҡ барыуын һиҙеп һыҙлана инем.

[15] Халыҡ шағиры Мостай Кәрим “Ғүмер миҙгелдәре”ндә үҙе хәтерләүенсә, Ғ. Әмири уға: “Һинән шағир сығасаҡ... Һин тере сағыңда уҡ юбилейы уҙғарыласаҡ шағир буласаҡһың”, — тигән (“Ағиҙел”, 1996/9, 39-сы бит).

Туған халҡым бәхете өсөн йәшәргә теләп янам мин, ағай. Әгәр ошо ниәтемә ирешә алһам, бик бәхетле булыр инем.

Аҙыраҡ лирикаға бирелеп киттем, буғай, ғәфү итегеҙ. Практик мәсьәләләргә күсәйек. Берәй 10 көнгә Өфөгә килергә, тигән тәҡдимегеҙҙе бик, бик шатланып ҡабул итәм. Мөмкин булһа, шуны ойоштороғоҙ әле, ағай; хикәйәләрҙе үҙем дә әҙерләшһәм, бик тә шәп булыр ине. Унан, миндә йәнә бер әйбер бар — ирекле (аҡ) шиғырҙа яҙылған повестең беренсе киҫәге. Шуны ла үҙегеҙгә уҡып, кәңәштәр алыр инем. И так, мин шатланып риза Өфөгә барырға.

Ә белем мәсьәләһенә килһәк, һеҙ хаҡлы: системалы белем юҡ миндә. Минән тормаған сәбәптәр арҡаһында мин урта белемһеҙ ҡалдым. Өҙөп-йолҡоп, тигәндәй, туғыҙынсыныҡын үтә башлаған инем (Чкаловтағы колхоз председателдәре әҙерләү урта мәктәбендә), хеҙмәткә алып киттеләр. Аттестат юҡ. Шулай эштәр...

Әҙәбиәт институтында уҡыу минең өсөн донъялағы бөтә бәхеттәрҙең иң өлкәне булыр ине. Хыялдарымдың осланышы булыр ине ул, ағай.

Һеҙҙең хәлдәр нисек? Тамам һауыҡтығыҙмы? Сәләмәтлек, уңыштар теләйем. Хушығыҙ, хат көтәм.
Йыһат Солтанов”.

Мәскәүгә шул Әҙәбиәт институтына барыу яҙманы миңә, әлбиттә (һуңынанырак, Яҙыусылар берлегенең етәксеһе Ә.М. Мирзаһитов ине, шундағы уҡ һиммәтле 3 йыллыҡ Әҙәбиәт курстарына алҡынып-алҡынып ынтылғанымда ла мине ебәрмәнеләр). Ә шулай ҙа мин, остазымдың изге кәңәшен тотоп, үҙ алдыма ла, ситтән тороп та уҡып, тәүҙә — урта белем, унан һуң юғары белем алыуға — “аҡылымды ҡанатлы ҡылыуға” өлгәштем. Бында ла баштан уҡ Ғәйнан ағайҙың ныҡ ярҙамы тейҙе миңә: күрше ауыл урта мәктәбендә ситтән тороп уҡырға морон төртә алмай интегеп йөрөгәнемдә, мәктәп дирекцияһына Башҡортостан Яҙыусылар берлеге идараһынан минең хаҡта үтенесле телеграмма килеп төштө, Мостай Кәрим үҙе ҡул ҡуйған, тинеләр (ул мине белмәй ине). Ғәйнан ағай хәстәрлекләп ойошторған ошо ҡағыҙ, миңә белем ҡәлғәләренә юл асып, бөтә яҙмышымды ыңғай хәл итте...

Өфөгә барғылап йөрөй башлаған бер осорҙа Күмертауҙан шахтер егет (үҙем һымаҡ уҡ, элекке хәрби моряк) Хөснулла Түләкәйев менән дуҫлаштым; Ғәйнан Әмири менән ул ныҡ бәйләнештә, сөнки ағайыбыҙ шахтерҙар тормошон өйрәнеп әҫәр (“Мораҙым” повесының дауамын) яҙыу өсөн 1964 — 1965 йылдарҙа Күмертауҙа йәшәп алған, шул арала күмер саңы араһынан шағир Түләкәйҙе танып, республика эфирҙарын шаулатырлыҡ “шахтер шағир” яһаған һәм беренсе китабын да сығарышҡан, — бына ошо Хөснулла Түләкәйев менән икәүләшеп Ғәйнан ағай тупһаһын тапаштырғаланыҡ. Әйтеүемсә, икебеҙ тиң элекке хәрби моряктар, ә ағайыбыҙ хәрби моряктарҙы ифрат ярата, ярата ғына түгел, уларға мәңге һәм мөкиббән ғашиҡ ине, шуға күрә лә ул беҙҙе, йәшермәйенсә, айырата йәненә яҡын күрҙе. Баҡтиһәң, бының сере ағайыбыҙҙың Сталинград һуғышынан килә имеш: бер төркөм моряктар

унда, фашистарҙың тәрән тылында уратылып ҡалып, әллә нисәмә аҙналар буйына һуңғы патронға, һуңғы тамсы ҡанғаса бирешмәй һуғышҡан — шанлы Брест ҡәлғәһе ҡаһарманлығын ҡабатлаған. "Шунан биреле мин моряктарға ғашиҡмын, мин уларға ныҡ ышанам: бер ҡасан да һатылмай һәм һатмаясаҡтар улар!" — тип ҡабатларға яратыр ине яугир-әҙип (шул моряктар хаҡындағы ялҡынлы хикәйәһе уның "Ғашиҡтар" китабына керетелгән). "Сталинград хәтирәһе" тигән шиғри шәлкеме һәм атаҡлы "Салауат аманаты" поэмаһы тупланған "Толпарҙар" йыйынтығын миңә бүләк итеп биргәнендәге иҫтәлекле яҙыуы тап ағайым күрергә теләгән шул моряклығыма ишара: "Иң һәм бик ышаныслы дуҫым — моряк, шағир һәм әҙип, ифрат ҙур киләсәкле Йыһат Солтановтың үҙенә — **Ғәйнан Әмириҙән.** 26/VII — 76". Шулай уҡ "Аҡ елкән" китабындағы саф күңелдән бағышлауында ла яугир ағайым мине яҙыҡ юлдан йән атып ҡурсалай кеүек: "Аҡ елкәнле йәш дуҫым Йыһат Солтановҡа. Мин һиңә ниндәй ҙур ышаныстар бағлап йөрөгәнде, нисек ышанғанымды яҡшы беләһең инде — ҡабатламайым.
Ғәйнан ағайың. 21/XII — 71 й."

1969 йылда донъя күргән "Йондоҙ ямғыры" тигән шиғри йыйынтығымды, өҫтәрәк әйтелгәнсә, йәмәғәтселек башланғысында Ғәйнан Әмири үҙе редакторлап сығарҙы — "һине үҙе һорап алды", тинеләр... Изге күңелле мәшһүр әҙиптең йәш ҡәләмдәштәренә ҡарата бына ошондай йомартлығын, бөтәбеҙгә мәңге ғашиҡ булып йәшәүен халыҡ шағиры Мостай Кәрим дә үҙенең «ғүмер миҙгелдәре"ндә күпмелер сағылдырған: "Ғәйнандың бер сәйер сифаты бар: ул, теге йәки был хәл тураһында фараз итеп, алдан нәтижә сығарырға, йәғни әүлиәлек ҡылырға ярата. Бигерәк тә башлап яҙыусыларға, иң яҡшы ниәттән сығып, ҙур гарантиялар бирә... Һәр юрағаны, әлбиттә, ғәмәлгә ашманы", — тип отороаҡ һөҙөмтә сығарһа ла, бушҡа түгел ине был күңел йомартлығы, сөнки Ғәйнан Әмири ҡуйған ҡанаттар йәш ҡәләм эйәләренең байтағын төңөлмәҫкә, ергә йөҙтүбән ҡапланмай талпынырға, хатта сорғолоп осоп китергә дәртләндерҙе, — ә был иһә беҙҙәйҙәргә тынсыу һәм тар бүлмәнең тәҙрәһен асыу, сихәтле һулыш өрөү менән бер ине. Быны хәҙерге танылған шағир Абдулхаҡ Игебаевтың ҡатмарлы ижади яҙмышында ла айырым-асыҡ күрәбеҙ.

40-сы, 50-се йылдарҙа ВКП(б) Үҙәк Комитетының әҙәбиәт һәм сәнғәт өлкәһендәге билдәле яһил ҡарарҙарын еренә еткереп үтәү йәһәтенән республикала әҙәбиәт һәм сәнғәт эйәләренең баш ҡала күләмендәге йыйылыштарын гөрләтеп үткәреү һәм шунда, Юғарынан төшкән күрһәтмә буйынса, бер килке әҙиптең (мәҫәлән, М. Буранғоловтың, Б. Бикбайҙың, Ҡ. Даяндың, ә иһә шул Буранғоловты төрмәгә ултыртҡас, ҡалған баяғы икәүҙең һәм Р. Ниғмәтиҙең) тетмәһен тетеп, күҙен суҡып тәнҡитләү, милләтселектә фашлау йолаһы йәшәп килгән; тәғәйен кемдәрҙең күҙен суҡытыуҙы, әлбиттә, йәшерен рәүештә, партия өлкә комитеты үҙе алдан уҡ билдәләй, ә Яҙыусылар берлеге идараһы иһә был "юғары идеялы" сараны дәррәү күтәреп алырға ла хатта арттырып үтәргә тейеш булған.

Йәш яҙыусыларҙың 1953 йылдың 28 февраленән — 2 мартынаса дауамланған республика күләмендәге оло кәңәшмәһе лә тап шул рухта әҙерләнә, әлбиттә; тик был юлы айырма шунда — "һөрһөгән милләтселек" сирен олораҡтар өләшөнә ҡалдырып тороп, буғай, әҙәбиәтебеҙҙәге графоманлыҡ бәләһен бер һуғыуҙа юҡ итергә йыйыналар һәм, бөтә йәштәргә лә күргәҙмәле һабаҡ өсөн, һуғылыуға иң йәтеш һәм берәгәй кандидат итеп әлегә теше лә сыҡмаған, шағирәнә исеме лә хәҙергеләй оҙонайып өлгөрмәгән **Абдул Игебаев** тигән азаматты тәғәйенләйҙәр. Ҡуҙғатылған мәсьәләнең йәш шағир өсөн ни дәрәжәлә хәтәрлеген күҙалларға, протоколдан өҙөмтә килтерәйек:

"**Башҡортостан Яҙыусылар берлеге рәйесе Кәримов (Мостай Кәрим) иптәштең докладыˌ** — ...Ғәлиев, Бакиров, Миронов, Атнабаев, Сиражитдинов кеүек йәш шағирҙар емешлерәк эшләнеләр... Әле телгә алынған йәш яҙыусыларҙан тыш, беҙҙә Марат Кәримов, Рәми Ғарипов, Сафаров, Мансуров, Салихов, Алғушаев, Мулдабаев кеүек башланғыс шағирҙар һәм Хөсәйенев, Зарипов, Хәсәнов, Абдуллин кеүек башланғыс тәнҡитселәр ҙә аҙ түгел...

Үкенескә ҡаршы, башланғыс әҙиптәр араһында шундай иптәштәр ҙә бар: улар был намыҫлы ижад эшен еңел кәсепкә әүерелдергәндәр. Был йәһәттән иң күренекле урынды **Абдул Игебаев** алып тора, биш йыл эсендә ул иң кәмендә биш йөҙ шиғыр яҙған, тиҙәр. Ул шиғырҙарҙың күбеһе гәзиттәрҙә һәм журналдарҙа баҫылып сыҡҡан.

Әммә, иптәштәр, турыһын әйтергә кәрәк — Игебаев иптәш һәр осраҡҡа һәм осраҡһыҙ ҙа рифмаланған мәҡәләләр сығарыу менән шөғөлләнә.

Быларҙан тыш, абруйлы гәзитебеҙ "Совет Башҡортостаны" биттәрендә ул (Игебаев) башланғыс яҙыусыларҙы "теоретик уҡытыу" менән дә шөғөлләнә. Ошо йылдың февралендә генә лә уның шундай "теориялы", һәр ҡайһыһы яртышар подваллыҡ ике мәҡәләһе баҫылған. Шуларҙың береһендә ике бүлек башы аҫтында Игебаев утыҙ өс (!) йәш авторҙың ижадын тикшерә; бүлектәрҙең беренсеһе — "Тема", икенсеһе — "Мәҫәлдәр, сатира, юмор". "Шиғыр тураһында" тип ҙур мәғәнәле исемләнгән икенсе мәҡәләһендә ун бишләп башланғыс авторҙың әҫәрҙәре тикшереүгә һалына. Теманың нимә икәнлеген йәш авторҙарға Игебаев бына ниндәй стилдә аңлатып бирә: "Башлап яҙыусыларҙан Х. Хәлисов (Әбйәлил районынан), З. Кәримов (Шаран районынан), К. Аҡбашев, Б. Рафиҡов, А. Камалитдинов (Эстәрлетамаҡтан), И. Яҡупов (Черниковск ҡалаһынан), Р. Фазлыев (Илеш районынан), Ф. Ҡужин (Ғафури районынан), А. Ғарипов (Илеш районынан), А. Китиков (Күгәрсен районынан), Р. Сәхәүетдинова (Мәсетле районынан), А. Шәйәхмәтов (Ғафури районынан) иптәштәрҙең үҙҙәренең һайлаған темаларын ситләштереүҙәре уларҙың төп етешһеҙлек булып тора". Нәүбәттәге абзацта нәүбәттәге тиҫтәләрсә исемдәрҙе һанау китә һәм артабан да шулай.

Быҙың ише яҙышыуҙың башланғыс яҙыусылар өсөн ҙур зыяны тураһында әйтеп тормайынса уҡ, мине, журналист булараҡ, беҙҙең партия

матбуғатына ҡарата ошондай хөрмәтһеҙлек нәфрәтләндерә. Әгәр Игебаев быны аңламаһа, ул саҡта өлкәнерәк иптәштәр гәзит биттәрендә үҙҙәренең бюрократлашҡан әҙәби хеҙмәткәренең стандарт яуапнамәләрен (уны, күрәһегеҙ бит, һәр авторҙың үҙенә айырым яуап биреү ирендерә) баҫтыртып сығарыуҙың юл ҡуйылғыһыҙ икәнлеген төшөнөргә тейештәр.

Игебаев үҙенең "теоретик" хеҙмәттәренең береһендә башлап яҙыусыларға ошондай күрһәтмә бирә: "Автор һайлап алған тема поэтик һүрәтләү һәм образдар аша асылырға тейеш". Ошо дөрөҫ күрһәтмәһен шиғырҙар яҙыу эшендә ул үҙе нисек үтәй һуң? Мәҫәлән, "Уҡытыусы" тигән шиғырында Игебаев теманы ошолай аса:

Беләм, иптәш, оло хөрмәт йөрөй
Һәр берәүҙең күңел хисендә
Һиңә, миңә тормош юлы асҡан
Уҡытыусы тигән исемгә.

Оператормы ул, журналисмы,
Ғалим, доктор, техник, актермы,
Агроном, танкист, капитанмы,
Художникмы, шагир, шахтермы? —

һәм артабан да шулай дауам итә бирә...

Бер минутҡа ғына ошондай нәмәне күҙ алдына килтерәйек: әйтәйек, бөтә башлап яҙыусылар, Игебаевтың "теоретик тәғлимәттәрен" үҙләштереп, шиғырҙарында үҙҙәренең ошо остазына эйәрә башланылар, ти. Иллә көлкөлө күренеш килеп сығыр ине, шулай бит?

Ә бит бында Игебаевтың ҡағылышы юҡ, тиерлек. Барыһынан элек был беҙгә, яҙыусыларға һәм тәнҡитселәргә ҡағыла. Әгәр ысынлап та матбуғатта беҙҙең әҙәби йәштәрҙе, шул иҫәптән Игебаевтың үҙен дә өйрәтеүсе юҡ икән, ул саҡ теләгән бер халтурасы тотонасаҡ был эшкә. Һәм улар тотона ла"...

Ул замандарҙың ныҡлы тәртибенә күрә, доклад буйынса фекер алышыусыларҙың да исемлеге алдан уҡ Юғарынан (йәғни партия өлкә комитетынан) билдәләнеп, уларҙың да докладсы һыҙған төп юҫыҡты көсәйтергә һәм йыйылыштың алдан уҡ яҙылған ҡарарын күпселек тауыштан ҡабул ҡылыуҙы тәьмин итешергә тейешлектәре әшкәртеп ҡуйылған була. Исемлек буйынса беренсе һүҙ алыусы төп мәсьәләне тап шул юҫыҡта самалап, докладсы саҡҡан тәнҡит утын дөрләтә:

"Сиражитдинов иптәш. — Бөтәбеҙ ҙә хөрмәт иткән "Совет Башҡортостаны" гәзите редакцияһы Игебаевты үҙенең һөйөклө уланҡайы яһаны һәм, ул ғына ла етмәһә, редакторы Ғафаров иптәш ағастар аша бөтөн урманды күрмәне һәм был эшкашмаған халтурасыны йәш таланттар күгендәге сағыу йондоҙ итеп һанай. Һәм был гәзит һәр көн һайын, тип әйтерлек, үҙенең биттәрен Игебаев плагиатына бирә. Ошоноң менән шағирҙар һәм яҙыусылар тураһында ялған фекер туплана. Йәштәребеҙ шулай уйлай һәм ышана: әгәр Игебаевтың шиғырҙары кеүек

нәмәләр ташҡа баҫыла икән, ныҡышмалы хеҙмәт итеү, үҙең өҫтөндә эшләү уларға ла һис тә кәрәкмәй; шул арҡала брак, макулатура тыуҙырыла; ысын яҙыусы һәм шағир булыу өсөн күп һәм ныҡышмалы эшләргә кәрәклеген онота йәштәр. Игебаев шиғырҙары кеүек нәмәләр килтергән зыян ифрат ҙур, ә бер ҡатлы бәғзе бер кешеләр, Р. Бикбулатовты күҙ уңында тотам мин, Игебаевҡа арнап шиғырҙар яҙа, өҫтәүенә, Игебаевтың бөйөк таланты алдында теҙ сүгеп тубыҡланыу рухында яҙыла был шиғырҙар. Игебаев, әле генә яҙа башлағанынан алып, ике йөҙләп шиғырын баҫтыртып сығарҙы, ләкин улар араһынан уҡыусы күңелендә ҡалырҙай береһен дә тапмаҫһың. Игебаев ябай плагиат менән шөғөлләнә, иң яҡшы шағирҙарыбыҙҙың иң яҡшы шиғырҙарынан йолҡа.

Беҙ бөтәбеҙ ҙә үҙебеҙ яратҡан Сәләмдең атаҡлы "Республикам иртәһе"н беләбеҙ, бына ошолай яңғырай ул (башҡортса уҡып ишеттерә). Билдәле булыуынса, әҫәрҙе башҡа телгә тәржемә итеү барышында оригинал үҙенең милли колоритын юғалта. Игебаев башҡортсанан башҡорт теленә тәржемә итергә тотонған, шуның һөҙөмтәһендә мәғәнәһеҙлек килеп сыҡҡан. Сәләмде ул ҡәбәхәтләгән. Хәҙер мин Игебаевтыҡын уҡып ишеттерәм (башҡортса уҡый). Башҡортсанан башҡорт теленә тәржемә был. Һеҙ, иптәштәр, ғәжәпләнмәгеҙ, ташҡа баҫылды был шиғыр. Игебаев үҙенең хәшәрәт ҡулдары менән хатта бөйөк Маяковскийға ҡағылыуҙан да ҡурҡып торманы. Был хаҡта иптәштәр әйтер"...

Тап шул илленсе йылдарҙа мин үҙебеҙҙең колхоз тауыҡ фермаһында инкубатор себештәренең ытырғаныс ҡылыҡтарын күреп тетрәнгәнем бар: араларында береһе насарландымы, — үткән һәр береһе уның ҡойроҡ аҫтын ҡанығып суҡый башлай ҙа, беренсе ҡан тамсылауы менән үк, бәхетһеҙгә бөтәһе бер юлы ябырылып, ҡаурыйҙарын туҙҙырып, шыр һөйәккә ҡалдырғансы тереләтә ашайҙар... Заманындағы ҡанун-йолалар буйынса, башланғыс шағир Абдул Игебаевты ла шуға оҡшашлы яҙмыш көткәнен төҫмөрләү ҡыйын түгел. Әммә, үрҙәге Дәү Хоҙайыбыҙҙың рәхмәте булыптыр инде, йыйылышты ойоштороусы һәм алып барыусыларҙың береһе лә көтмәгәндә, баяғы инкубаторлыҡ ҡанунын аша атлап сығыусы изге йән табыла һәм, һәүәҫкәрҙе һеңкәҙәтерлек һәләкәтле тәнҡит ялҡыны шул арҡала һүрәнәйеп, бара торғас һүрелеп, йәш шағир Абдул Игебаевтың исеме йыйылыш ҡарарында суҡып ташланаһы себеш рәүешендә мөһөрләнеүҙән ҡотола — башына һелтәнгән буйтлы күҫәктең еле генә һирпелеп ҡала ла онотола. Кемдер әйтмешләй, Абдул яғына "аумаҡайланып" сығыш яһаусы был уҙамандың телмәре хатта рәйес һөйләгән, өҫтә килтерелгән төп докладтан да сағыуыраҡ булып, бөгөнгө йәш әҙиптәргә лә фәһеме тейер кеүек:

«**Ғ. Әмири иптәш.** — Иптәштәр, күптән түгел мин "Совет Башҡортостаны" гәзитендә Ким Ибраһимовтың[16] шиғырын уҡыным; ул

[16] Һуңынан ул талантлы тәнҡитсе Ким Әхмәтйәнов булып китә.

“Күңелле һөйләшеү” тип атала — сюжетлы шиғыр был, мин уны һеҙгә һөйләп кенә бирәйем.

Дүртенсе синыфта уҡыған ҡыҙ өйгә эштәрен эшләп ултыра. Атаһы эштән ҡайта ла унын ҡайһылай дәрес әҙерләүе менән ҡыҙыҡһына. «Ниндәй китап уҡыйһың?” — тип һорай ул. “Географияны”, — ти ҡыҙы. Атаһы унын белемен, географияны ҡайһылай белеүен тикшерә, һорау бирә: “Волга йылғаһы ҡайҙа ҡарай аға һәм ҡайһы диңгеҙгә ҡоя?” Ҡыҙы яуаплай: “Советтар Союзының йылғалары, беҙ ҡайҙа теләһәк, шунда ҡоя”.

Ҡайһы бер иптәштәр әйтеүенсә, башланғыс шағир Ибраһимов беҙҙең нисек коммунизм төҙөүебеҙҙе образлы һынландырған. Ә мин был фекер менән риза түгел, иптәштәр.

Дүртенсе синыфта уҡыған ҡыҙ атаһының “Волга ҡайҙа ҡоя?” тигән һорауына тура яуап бирергә тейеш ине. Волга Каспий диңгеҙенә ҡоя, тип яуапларға тейеш ине ул.

Әгәр ҙә беҙ балаларыбыҙҙы был “Күңелле һөйләшеү” тигән шиғырҙың авторы тәрбиәләгәндәй итеп тәрбиәләй башлаһаҡ, балаларыбыҙ кәпәс ырғытып ҡына еңеүселәр булып үҫәсәк. Улар географияны белмәйәсәктәр, арифметика-математиканы, химияны белмәйәсәктәр; тимәк, коммунистик төҙөлөштөң әүҙем ҡатнашсылары булып үҫә алмаясаҡ улар.

Беҙ балаларыбыҙҙы, йәштәребеҙҙе белемгә сарсау, фән нигеҙҙәрен үҙләштереү рухында тәрбиәләргә тейешбеҙ, ә баяғы кәпәс ырғытып ҡына еңеүселәр итеп түгел...

Ҡайһы бер йәш шағирҙарыбыҙ үҙҙәре үк тейешенсә ныҡышмалы уҡымайҙар, дөйөм мәғариф белемдәренә эйә булырға ныҡышмалы уҡталмайҙар һәм оҫталыҡҡа өлгәшеү өҫтөндә насар эшләйҙәр, тип әйтер инем мин. Атнабаев, Сиразитдинов, Карам Бакиров, Муллабаев, Миронов һәм башҡалар кеүек ышаныслы һәм һәләтле йәш шағирҙарыбыҙҙың байтағы, шаҡтай йәштә булыуҙарына ҡарамаҫтан, ошоғаса үҙҙәренең ҡасандыр алған урта ғына белемдәре менән ҡәнәғәтләнеп йәшәйҙәр.

Бер нәмәгә лә ярамай был, иптәштәр. Мин махсус ҡыҙыҡһындым: ситтән тороп уҡыу институтында уҡыйҙармы ошо иптәштәр? Баҡтиһәң, уҡымайҙар, хатта киске марксизм-ленинизм университетына ла йөрөмәйҙәр.

Иптәштәр, совет Яҙыусылары берлеге был иптәштәрҙең ижади үҫешенә ярҙам итергә күпме генә тырышһа ла һәм был йәһәттән редакциялар күпме генә ынтылһа ла, әгәр улар һаман ошолай урта белемле килеш ҡалһалар, уларҙан яҡшы яҙыусылар сығыуы икеле[17].

Үҙ быуыным яҙыусылары яҙмышынан яҡшы беләмен: 30-сы йылдарҙа башҡорт әҙәбиәтенә килгән, ә дөрөҫөрәге, әҫәрҙәрен ташҡа баҫтырта башлаған, ләкин тейешле белем алмаған иптәштәр аҡрынлап әҙәбиәттән киттеләр. Партия һәм халҡыбыҙҙың әҙәбиәткә талаптары арта

---

[17] Остаздың был изге өгөтөн мин үҙем ихлас ҡабул ҡылғанмын һәм, үҙ алдыма ла, ситтән тороп та уҡып, башланғыс мәктәп белеменән иң юғары белемгә эйә булғанмын.

бара, иптәштәр, шуға күрә белемһеҙ эшләүе ҡыйын. Әйтергә теләгәнемдең беренсеһе был.

Унан һуң мин Сиразитдинов иптәштең Игебаев тураһындағы сығышы буйынса һөйләшергә теләйем. Сиразитдинов иптәш Игебаевты һәм уның ижадын ифрат ҡаты тәнҡитләне, хатта уны ауыр һүҙҙәр менән дә тамғаланы (жулик, тип). Уның ғәйепләүҙәре нигеҙҙә ике моментҡа ҡайтарып ҡалдырылды:

1. Игебаев бөтәһе тураһында ла яҙа[18] ("Ленинсы" гәзите редакторының урынбаҫары быға, Игебаев ни ҡушһаң — шуны яҙа, тип тә өҫтәне).

2. Йәнәһе, Игебаев плагиат йәғни әҙәби ҡараҡлыҡ менән шөғөлләнә.

Сиразитдиновтың тәнҡитендә, бәлки, дөрөҫлөктөң күпмелер өлөшө лә барҙыр, ләкин нигеҙҙә ул үҙенең юҡҡа сығарғыс тәнҡите менән хаҡлы түгел.

Игебаев бөтәһе хаҡында ла яҙа, тигән беренсе ғәйепләүен алайыҡ. Ни хаҡында яҙа ул? Игебаев иптәштең мин һуңғы осор шиғырҙарының исемдәрен һанап бирәм: "Юлбашсы телмәре" — Игебаев иптәш Сталин иптәштең партияның XIX йыйынындағы телмәре хаҡында яҙа һәм шаҡтай яҡшы яҙа. Шуның бер генә строфаһын урыҫсаға юлға — юл тәржемәләйем (уҡый).

Игебаев иптәштең нәүбәттәге шиғырҙары "Владимир Ильич исемендә", "Волга — Дон тураһында" тип атала. Артабан ошондай шиғырҙар: "Тракторсы", "Аҡ күгәрсен", "Хеҙмәт", "Зарланмайым", "Йомағужа далаһы", "Партия", "Мәскәү", "Мин тауыш бирәм, иптәштәр", "Тыныслыҡ законы", "Тыныслыҡ һуғышты еңер", "Совет байрағы", "Башҡорт нефтселәренә", "Мәжит Ғафури" һ.б., һ.б[19].

Күренеп тора, былар бөтәһе бик кәрәкле патриотик темалар һәм Игебаев иптәш уларға мөрәжәғәт итеп ифрат дөрөҫ эшләгән. Тап ошо — йәғни төрлө һәм кәрәкле темаларға яҙып бик яҡшы итә. Ғафури традициялары, Маяковский традициялары өйрәтә шуға.

Үкенескә ҡаршы, бындай ифрат мөһим темалар өҫтөндә йәш шағирҙарыбыҙҙың бөтәһе тиң эшләмәй. Байтаҡ ҡына йәш шағирҙарыбыҙ йыш ҡына үҙҙәренең "Мин"е эсендә соҡсоноу менән артыҡ күп шөғөлләнә, быны улар лирик шиғырҙар тип атай. Уларҙы был тема тарлығына, йәмғиәти һәм социаль яҡтан әһәмиәте аҙ, альбом шиғырҙары тыуҙырыуға килтерә, шуға ла улар совет кешеләре массаларын тулҡынландыра алмай.

Ә мотлаҡан Игебаев иптәш был темаларҙы ҡайһылай хәл ҡыла — уныһы икенсе эш. Турыһын әйтергә кәрәк, етерлек тәрән, етерлек художестволы рәүештә түгел. Был иһә башланғыс шағирҙарҙың барыһына ла хас, тип әйтерлек.

---

[18]Был тәңгәлдә Ғ. Әмири нигеҙҙә М. Кәримдең докладын тәнҡитләй.

[19] Күренеүенсә, Ғәйнан Әмири йәш шағирҙы яҡларға алдан уҡ әҙерләнеп, уның рәсми әһелдәр фекерен ыңғай яҡҡа борорҙай "партиялы" шиғырҙарының күркәм исемлеген төҙөп килгән, шуның менән докладтағы төп юҫыҡтан "ауышҡан".

Игебаев иптәштең ижадын күҙәтеп барам мин. Йәш, башланғыс шағирҙарҙың бынан алдағы кәңәшмәһендә үк мин Игебаев иптәштең әҫәрҙәрен тәнҡитләп сығыш яһаным, уның етешһеҙлектәрен күрһәттем, ләкин шул уҡ ваҡытта мин, ул — һәләтлектәргә эйә, үҙ өҫтөндә етди эшләргә тейеш, тип әйттем.

Шунан һуңғы ике йыл эсендә күрәмен: Игебаев иптәш үҫә һәм ифрат етди шөғөлләнә.

Артабан. Игебаев иптәшкә тағылған плагиат тураһындағы икенсе ғәйепләү. Сиразитдинов иптәш быға миҫал рәүешендә Ғ. Сәләмдең "Республикам иртәһе" шиғырын килтерә. Баҡтиһәң, Игебаевтың "Һалсылар" тигән шиғыры темаһы буйынса шул шиғырға тартым имеш. Ике шағир бер үк тулҡынландырғыс картинаны күреү нигеҙендә генә Игебаев иптәште плагиатлыҡта йәғни әҙәби ҡараҡлыҡта ғәйепләргә ярамай. Әгәр айырым фразалар, эпитеттар, образдар оҡшаш икән, ҙур ғәйеп юҡ бында. Мин уның "Эҙҙәр" тигән шиғырын уҡыным, ул иһә миңә үҙемдең "Ҡыҙҙарыма" тигән шиғырымды хәтерләтте; оҡшашлыҡ шунда: мин дә, Игебаев та ҡыҙҙарыбыҙ, ҙур үҫкәс, ер йөҙөнә оло юлдар һалһындар, тип яҙғанбыҙ. Ләкин Игебаев иптәш был теманы шулай ҙа үҙенсә сискән һәм мин бында бер ниндәй ҙә хилафлыҡ күрмәнем, киреһенсә, Игебаев иптәште минең шиғырым тулҡынландырғаны һәм, оҡшашыраҡ булһа ла, башҡа, яңы шиғыр яҙырға этәргәне өсөн бик шатмын. Йәш бит әле ул.

Тәнҡит беҙҙең һәр беребеҙ өсөн кәрәк — ҡартына ла, йәшенә лә, яҙа башлаусыға ла. Игебаев иптәш иһә ярҙамлыҡлы, иптәштәрсә етди тәнҡиткә мохтаж, ләкин һәләкәтле, мәсхәрәле тәнҡит булмаһын был, гонаһ шомлоғо түгел бит ул. Бына шуны әйтергә теләгәйнем".

Аҙаҡ бәғзе берәүҙәргә "аумаҡайлана" тип баһаларға ем биреп, йыйылышҡа Юғарынан күрһәтелмеш "дөрөҫ" юлдан бына шулай ауышты, "аумаҡайланды" Ғәйнан Әмири... Артабанғы матбуғатта ла йәш шағирҙың шиғри ҡаҙаныштарын да, ысын етешһеҙлектәрен дә иптәштәрсә күрһәтеп, эшлекле кәңәштәрен дә бирә барҙы ("Талапһыҙлыҡ — ижадтың дошманы". — "Әҙәби Башҡортостан" журналы, 1956/9). Ошолар барыһы Игебаевҡа рухланырға — үҙ ижадына яуаплыраҡ ҡарарға ярҙам иткәндер, моғайын; сөнки Ғәйнан Әмириҙең артынса уҡ, Игебаевтың "Йәшлек йыры" тигән тәүге китабына ҡарата Рәшит Ниғмәти ҙә йылы һүҙ әйтте; ә торараҡ, 50-се йылдар аҙағында, Мостай Кәрим дә үҙ фекерен ыңғай яҡҡа үҙгәртте лә үҫеп барған йәш ҡәләмдәшен заманында күҙгә салынырлыҡ дүртәүҙең береһе итеп дөрөҫ баһаланы (Ғәйнан Әмири юрауы юш килде, тимәк!). Шуға күрәлер ҙә инде, әлеге дүртәү араһынан ошо беҙ әйткән берәү генә (быныһына афарин!) дүртәүһен берәгәй баһалаусы олпат Мостай ағаһына ғүмере буйынса осраҡлы ла, осраҡһыҙ ҙа икһеҙ-сикһеҙ рәхмәттәрен яуҙырыу, мәҙхиәләр арнау буйынса барыһынан да уҙҙырҙы (рәхмәт төшкөрө!), тик был ифрат та игелекле һәм йомарт күңелле инсан, йәғни Игебаев, үкенескә ҡаршы, баяғы баҫалҡы һәм ғәйәт инсафлы, игелекле Ғәйнан ағаһының ғына иҫтәлеген иҫенән бөтөнләй сығарҙы ла

баяғы шөһрәтле ағаһын ғына маҡтаны (ҡойроғон киҫһәң, эт һине "еҙнәм" тип әйтер, тиҙәр бит!)... Ә иҫләү һәләтен юймаған һәм баяғы йыйылышта партия ихтыярын үткәреүсе докладсыға көтөлмәгән ҡапма-ҡаршылыҡлы телмәр һөйләп, "аумаҡайлығы" менән Абдул Игебаевты яҡлап сығып зиттарына тейгән бәғзе бер "көслө" һәм "аумаҫтай"ҙар иһә йомшаҡ күңелле остазды үҙ бизмән табаҡтарында әүмәләтеп үлсәнеләр: "Әмири менән ғүмер буйы тиерлек һәйбәт мөнәсәбәттә, теләктәшлектә булдыҡ... Тик йәнгә йән һыйынырлыҡ яҡынайыуға нимәлер ҡамасауланы. Арабыҙҙа кәртә юҡ ине. Тик һирәк-мирәк ниндәйҙер йоҡа пәрҙә тартылып ҡуя торғайны. Быының ниҙән икәнен самалап әйтә лә алам. Кемдәргәлер йәки кемгәлер оҡшарға (йәғни яҡшы булып күренергә. — *Й.С.*) тырышып, ул бәғзе саҡта аумаҡайланып ҡуя торғайны. Файҙа ла күҙәтмәй шикелле. Ә үҙен күрһәтеп ҡалырға ярата ине. Ошо ҡылығы уның шәхсән миңә зарар килтермәне, әммә үҙенә зыян итте. Аумаҡайҙарға көслөләр[20] генә түгел, көсһөҙҙәр[21] ҙә таянмаҫҡа тырыша" (М. Кәрим. — "Ағиҙел", 1996/9, 39-сы бит). Тимәк, мәрхүм булған Ғәйнан Әмириҙең ҡәбере өҫтөндә 1988 йылда ҡара ҡойон уйнатыусыларҙың ҡылығына Яҙыусылар берлегендәге "көслөләр"ҙең төптө битараф ҡалыуы тап ошо сәбәпле икән...

Эйе, ундай сифаты бар ине шул Сталинград яугире булған ағайҙың: "юғарынан күрһәтмәләр"гә буйһонһа ла, үтә буйһоноп та бармай ине бит. Быны йәш шағир Игебаевтың ғына түгел, ә ҡарттарының да яҙмыштарында шаҡтай сырамытып була.

3

Шуныһын да аңлатып үтергә кәрәк: ҡитға халыҡтарын йүгәнләп һәм ауыҙлыҡлап тотоу мәсьәләһендә 1917 йылғы ихтилалға тиклемге Рәсәй империяһы менән унан һуңғы Совет империяһы араһында хәтһеҙ ҙур айырма бар: большевиктар был йәһәттән дә "ҙур революцион үҙгәртеп ҡороу»ға өлгәшкәндәр. Әйтәйек, әленән-әле азатлаҡ даулап баш күтәреүсе башҡорттарҙы батша хөкүмәте уларҙың үҙҙәренән үк һуйҙыртып, үҙ ҡандарында тонсоҡтороу сәйәсәте алып барһа, ҡыҙыл империя өсөн дә был сәйәсәт бер үк ҡалған, әммә уға өлгәшеүҙең *ысулы һәм масштабы* бығаса һис күрелмәгән дәрәжәлә "ғилми яҡтан" үҫтерелеп үҙгәргән. "Аҡ батша"лар, мәҫәлән, башҡорттоң байғураларын һәм түрәләрен, муллаларын һәм шуларҙың ярандарын (йәғни "зыялы"ларын) империяға тоғролоҡло "һуйыусылар" ("лутшие башкиры") рәүешендә ел-ямғыр тейҙертмәй һаҡлап аҫырағандар — илдең "айыртылған һөт" һаналмыш ябай-ялпыһына ҡаршы ҡуйыу өсөн ошо ҡуйы "ҡаймағын" булдырғандар; бер үк ваҡытта империя золомона һәм уянған Намыҫы өйкәүенә түҙә алмай шул уҡ "ҡаймаҡ"тан "май" булып айырылып сыҡмыш, империяның ҡорос ауыҙлығын сәйнәп өҙөргә яҫҡаныусы бер

---

[20] Мәҫәлән, М. Кәрим кеүектәрҙер.

[21] Мәҫәлән, А. Игебаев кеүектәрҙер.

килке яңы зыялыларҙы ла “айыртылған һөт” (ябай-ялпы) менән ҡуша тарих сүплегенә түгеп ташларға тырышҡандар. Шулай булған батша ғали йәнәптәренең милли сәйәсәтенең асылы. Ә большевиктар отҡорлоғо уларҙан, батша сатраптарынан, күп тапҡырға уҙҙырып ебәреүе менән нығ айырылып тора: тәүҙә улар, большевиктар, “аҡ батша»ның үҙе менән ҡуша ул айыртҡан әлеге “башҡорт ҡаймағы”ның да (“лутший башкир”) бер юлы башына етеп, шул уҡ ваҡытта большевиктарға мөкиббән табыныусы ябай-ялпының — “айыртылған һөт”төң дә революция шауҡымында өҫкә ҡалҡҡан йоҡа ғына ярылы “ҡаймағын” (зыялыларын) уларҙың үҙ ҡулдарынан уҡ бер туҡтауһыҙ юҡ иттертеү (йәғни, “ата большевик” Лев Троцкий тәғлимәтенсә, перманентный революция алып барыу), шул рәүешле “ваҡ” милләттәргә баш-күҙ алырға һәм сәйәсәттә үҙ башы менән уйлап эш итергә мөмкинлек бирмәү, милләтте тамам “айыртылған һөт” (маңҡорт) хәленә ҡалдырып имгәтеү, ә ахыр сиктә үҙенән үк үҙенең боғаҙын салдыртыу ысулын уйлап тапҡандар... Был сәйәсәт 1937 йылдан башлап Башҡортостан Яҙыусылар берлеге (“ил ҡаймағы”!) етәкселегенең яҙмышында ап-асыҡ күҙәләнә: тәүҙә Афзал Таһиров һәм уның ҡорҙаштарын — Төхфәт Йәнәби һәм уның ҡорҙаштарынан “фашлаттыртып” юҡ итәләр ҙә Төхфәт Йәнәбиҙе ҡорҙаштары менән бергә тегеләр урынына етәкселеккә үрләтәләр. Күп тә үтмәй, Төхфәт Йәнәбиҙе һәм ҡорҙаштарын шул уҡ ысул менән Йософ Гәрәй һәм ҡорҙаштары алмаштыра, ә уларҙы — Низам Ҡәрип һәм ҡорҙаштары (былар барыһы 1937 — 1941 йылдар араһында була)... Бына ошо “әһәмиәтле” тәжрибәне әсе һабаҡ рәүешендә үҙ елкәләрендә кисергән һәм бөйөк Ватан һуғышы һәм унан һуңғы йылдарҙа ла, хәҙер инде ҡан ҡойошһоҙ фашлау юлы менән генә булһа ла, бер-береһен әүәлгесә алмаштырып, Яҙыусылар берлеген етәкләгән Баязит Бикбай, Сәйфи Ҡудаш, Әхнәф Харисов, Мостай Кәрим һәм уларҙың ҡорҙаштары, әлбиттә, был арала көнбайыштағы ҡанлы һуғыш ғәмдәренән бушанмаған “халыҡтар атаһы” Сталиндың ҡулы теймәү арҡаһында ғына үҙҙәренең дә, баяғыса, һирпеп ташланған “ҡаймаҡ” хәленә ҡалыуҙарының күпмегәлер кисектерелеүен, әммә сират яҡынлашыуын яҡшы аңлайҙар ине, буғай. Ысынлап та, һуғыш бөтөү менән үк “бөйөк юлбашсы”быҙ йәнә көр баш-күҙ алып, Башҡортостандағы милли сәйәсәткә иғтибарын бүлә: 1945 йылдың 27 ғинуарында һәм 1946 йылдың 26 августында туранан-тура Кремлдең үҙенән үк атҡарылмыш “тарихи фарман” — М. Буранғоловтың “Иҙеүкәй һәм Мораҙым”ы менән “Батырҙар тураһында эпос”ы, Б. Бикбайҙың “Ҡаһым түрә”һе тураһындағы, бер түгел, ике дана шанлы ҡарар — буласаҡ яңы репрессияларҙың нәҡ елкәгә өргән һалҡын һулышы икәнлегенән, моғайын, ытырғанып, яҙыусылар ойошмаһы етәкселегенә килгән был әһелдәребеҙ ҙә, баяғы бахыр инкубатор себеше хәленә ҡалмаҫ өсөн, ҡарарҙарҙа атап күрһәтелгән шаҡшы ике “себеш”те күмәкләшеп суҡырға тейеш булалар. Һөҙөмтәлә Мөхәммәтша Буранғолов башы-тояғы илә Гулагка олаҡтырылғас, унан ҡала бер-бер артлы Ҡадир Даян, Рәшит Ниғмәти, Батыр Вәлид, Нәжиб Иҙелбай кеүектәргә лә суҡыла башларға сират етә... Бына ошондай фажиғәле заманала Яҙыусылар берлегенең

етәкселек ҡоронда ҡорҙаштары менән бергә әүҙем эшләп йөрөмөш Ғәйнан Әмири ҙә, суҡылыусы "себеш" көнөнә төшөргә теләмәһә, баяғы имәнес инкубатор себештәренең ҡорлоҡ (өйөр) ҡанунынан бер иле лә тайпылмаҫҡа — "аумаҡайланмаҫҡа" тейеш була, әлбиттә. Ләкин...

"1946 йылдың 26 октябрендә Башҡортостан Яҙыусылар берлеге идараһы киңәйтелгән ултырышының 10-сы һанлы протоколы.

Ҡатнашалар: Башҡортостан Яҙыусылар берлеге идара ағзалары — С. Ҡудаш, Ғ. Зөлҡәрнәйев, Х. Кәрим, Ғ. Әмири, Р. Ниғмәти, С. Агиш һәм яҙыусылар — Ә. Харисов, Ә. Вәлиев, С. Кулибай, М. Буранғолов, Б. Бикбай, Ә. Кирейев, Ғ. Ғөзәйеров.

Рәйеслек ҡыла — С. Ҡудаш.

Протоколды алып бара — Ә. Кирәйев".

Партия Үҙәк Комитетының баяғы билдәле ҡарарҙарында бөтә ҡыҙыл империяға яңғыратып ҡаты тәнҡитләнмеш ике башҡорттоң, ҡәләмдәштәренең, яҙыусылар сафында артабан торорға лайыҡлымы, түгелме икәнлеген ҡәтғи хәл ҡылалар бында. Партбюро сәркәтибе һәм идара ағзаһы Ғ. Зөлҡәрнәйев үҙенең рәсми вазифаһына яраҡлы кимәлдә сәйәси аңлатма бирә:

"Буранғоловтың бөтә ижады милләтселек менән һуғарылған. Уның тарихи темаларға яҙған пьесаларында башҡорт халҡының тарихы милләтселек идеялары файҙаһына боҙоп күрһәтелгән. Хәҙерге заман темаһына яҙған нәмәләре совет ысынбарлығын тупаҫ боҙоп күрһәтеү булып тора.

Икенсе ҙур хата булып Б. Бикбайҙың айырым әҫәрҙәре тора. Бикбаев та башҡорт халҡы тарихын боҙоп күрһәтте. Хәҙерге заман темаһына яҙған әҫәрҙәрендә совет йәштәренең ҡиәфәтен яңылыш ҡылыҡһырланы"…

"Хата"ларҙың беренсеһе буйынса сығыш яһаусы идара ағзаларының күпселеге ғәмәлдә ошо аңлатманы ҡабатлай һәм, алдан һөйләшеп ҡуйғандай, Буранғоловты яҙыусылар сафынан сығарыуҙы ғәйрәтле алға һөрһә, шул уҡ ваҡытта икеһенең генә — Ниғмәти менән Әмириҙең сығыштарында большевиктарға хас булмаған һүлпәнлек — баяғы бәғзе берәү әйтмеш "аумаҡайлыҡ" һиҙелә биреп ҡала: ғәйепләнеүсегә улар башҡаларҙай ныҡ ҡаҙалып бармайҙар һәм уларҙы яҙыусылар сафынан сығарып ташларға кәрәклеген дә әйтмәйҙәр. Рәшит Ниғмәти тәнҡите ғәмәлдә Буранғоловтың "үҙ ғәйебен танымауына" нигеҙләнһә, Ғәйнан Әмири иһә халыҡ сәсәненең төп ғәйебе итеп уның хатта бөгөн дә, ВКП(б) Үҙәк Комитетының 1945 йылғы ғинуар ҡарары менән хөкөм ҡылына тороп та, "Батырҙар тураһында эпос"ын һаман "халыҡ эпосы" тип атауҙан төңөлмәүен, "башҡорт фольклорын күп бутауын һәм фальсификациялауын" — йәғни үҙе яҙған эпосты ла халыҡ ижады әҫәре

итеп иғлан ҡылыуын күрһәтә[22]. Ә шулай уҡ ҡыл осонда торған Баязит Бикбай яҙмышы иһә Ғ. Әмириҙең: “Уны Яҙыусылар берлегендә ҡалдырырға, ләкин эшендә, тәртибендә киҫкен һынылыш яһауын талап итергә”, — тигән тәҡдиме буйынса әллә ни бәлә-ҡазаһыҙ хәл ҡылына.

Баязит Бикбай яҙмышына ҡағылышлы тағы ла бер документ: Башҡортостан Яҙыусылар берлеге консультанты Ғ. Әмири 1949 йылдың июнендә Б. Бикбайҙың, ҡат-ҡат эшкәртелеп тә, сәйәси кәртәләр аша үткәрә алмай аҙапланған “Салауат” исемле либреттоһына (һуңынан З. Исмәғиловтың “Салауат Юлаев” операһы) бик ыңғай рецензия яҙа, һөҙөмтәлә яңынан бер ҡат эшкәртелгән был әҫәр “Салауат тураһында йыр” исеме менән шул уҡ йылдың 17 декабрендә Опера һәм балет театрының солистар цехы дөйөм йыйылышында “опера яҙырға яраҡлы” тип ҡабул ителә...

Дөрөҫ, НКВД органдары төҙәлмәҫ “башҡорт милләтсеһе” М. Буранғоловты Гулагка олаҡтырғас, шуға тиклем үк ул рәсми рәүештә Башҡортостан Яҙыусылар сафынан ҡыуылған булһа ла, ғәмәлдә иһә СССР Яҙыусылар берлегенең шул саҡтағы “иҫкергән” ҡарары буйынса һаман “Һынау срогы үтмеш әҙип” статусында ҡалғанлыҡтан, “халыҡ дошманы»н, ниһәйәт, Яҙыусылар берлеге ағзалығынан тамам ыраҡтырыу көн үҙәгенә баҫа ла Әмири менән Ниғмәти инде уның хаҡта башҡалар рәтенән шөйлә ҡатыраҡ һөйләргә мәжбүр була, шулай ҙа Ғәйнан Әмири телмәре һағыраҡ, сама белеүсәнерәк йәһәттән айырыла. Тарихҡа күҙ һалайыҡ:

“Башҡортостан совет Яҙыусылары берлеге идараһының 1950 йыл 20 апрелдә киңәйтелгән ултырышының 5-се һанлы протоколы.

16 кеше ҡатнашты.

Тыңланды: М. Буранғоловты совет Яҙыусылары берлеге сафтарынан сығарыу тураһында.

Ә. Харисов аңлатма бирә һәм күрһәтә: М. Буранғолов күп йылдар һуҙымында үҙенең әҫәрҙәрендә беҙҙең ҡоролошҡа ҡарата дошман идеялар үткәрҙе. Башҡортостан совет Яҙыусылары берлеге һуңғы йылдарҙа Буранғолов әҫәрҙәрен күп тапҡыр хөкөм итте. Хәҙергеһен Буранғолов именлек һаҡлау органдары тарафынан ҡулға алынған”.

Сығыштарында С. Ҡудаш, Р. Ниғмәти, Ғ. Әмири, Х. Кәрим, С. Агиш һ.б. Буранғоловтың “зыянлы” яҡтарын күрһәтеп тәнҡитләйҙәр, шулар араһында Ғәйнан Әмири, Юғарынан талап ителгәнсә үк ҡаты ҡағылмай, баяғылай, “аумаҡайлыҡ” күрһәтеп маташа һаман... Миҫал өсөн ике телмәрҙе бирәйек:

“Р. Ниғмәти. — Буранғолов, үткәндәре ҡараңғы бәндә булараҡ, котрреволюцион вәлидовщина менән бәйле булараҡ, күптәндән үк билдәле ине беҙгә. Ул, драматургиябыҙҙың йомшаҡлығынан файҙаланып,

---

[22] Ғәйнан Әмириҙең шул ваҡытта уҡ үҙенсә хаҡлы булыуын инде ғалимдарыбыҙ ҙа таный: “Халыҡ ижады әҫәрҙәре булып йөрөгән был ҡобайырҙар М. Буранғоловтың үҙе тарафынан ижад ителгәндәр. Улар халыҡ араһында йөрөгән легендаларға нигеҙләнеп яҙылғандар”. (Мөхәммәтша Буранғолов. Сәсән аманаты. — Өфө, “Китап”, 1995; 351-се бит).

этнографик әҫәрҙәр маркаһы аҫтында идеологик диверсия үткәрҙе, үткәндәрҙе идеаллаштырҙы, тормошобоҙға яла яҡты. Буранғолов беҙҙең тарафтан 1946 йылдың 26 октябрендә үк Яҙыусылар берлегенән сығарылғайны. Буранғоловты мин шунан биреле Яҙыусылар берлегендә тормай тип иҫәпләү яҡлымын.

Ғ. Әмири. — Яҙыусылар берлеге Буранғоловтың һәр әҫәрен идея яғынан зыянлы тип хөкөм ҡылды. *Ләкин сәнғәттәр эше буйынса* Идаралыҡ, шуны белә тороп та, уның менән килешеүҙәр төҙөнө, ҙур аҡсалар түләне, уны аҫыраны. Быға юл ҡуйылырға тейеш түгел ине".



Күрәһегеҙ: Гулаг лагер-ына бикләнгән килеш быңдағы ҡәләмдәштәренән суҡылыуға дусар ҡылынған Буранғоловты Рәшит Ниғмәти туранан-тура контрреволюционер, идеология диверсанты, совет тормошона яла яғыусы сәйәси дошман рәүешендә фашлаһа, Ғайнан Әмири иһә ни бары Яҙыусылар берлегенең уны «хөкөм ҡылыуына» һылтанып, Буранғоловтың хатта үҙен дә түгел, ә уға ҙур гонорар биреүселәрҙе шелтәләү менән сикләнә. Ҡәләмдәштәрҙең икеһененең сығышы — ер менән күк араһы. Шулай була тороп та, әлегәсә аҡ эт бәләһен ҡара эткә япһарыу дауамлана...

Ҡатмарлы заманалар, ҡатлаулыҡлы бәндәләр...

Шулай ҙа ул, Ғ. Әмири, М. Буранғоловтың "Батырҙар тураһында эпос" китабы юҡ

ителеүгә ғүмере буйына эстән әрнеп йөрөгән, сөнки ҡыҙыл империя күләмендә тыйылған һәм ләғнәтләнгән "Иҙеүкәй һәм Мораҙым"дың геройының исемен бит ул, Ғ. Әмири, үҙенең данлыҡлы "Мораҙым" әҫәренә бирә... Өҫтәүенә, "Батырҙар тураһында эпос"тың макулатураға тураҡланыуҙан нисектер ҡурсалап алып ҡалынған тулы корректураһының ҡатырғы тышлы китап итеп төпләтеүле данаһын, етешмәгән 67-68-се биттәре урынына: "Был битте аҙаҡ күсереп бирермен", — тигән яҙыулы ҡағыҙ ҡыҫтырып, ошо изге аманатын бағышлағайны миңә:

“Йыһад,

был — бик бәхетле лә, бәхетһеҙ ҙә китап... (быны үҙең теләгәнсә — башың еткәнсә — аңла).

Радищевтың “Путешествие”һе шикелле, донъя йөҙөндә бер-нисә генә дана ҡалған ул. Шуларҙың береһе һиндә булыр. Яҡшы һаҡла. Мин уны һиңә бик ныҡ ышаныуымдың һәм хөрмәтемдең билдәһе итеп биреп ҡалдырам.
Ғәйнан Әмири. 30 ноябрь 1972 йыл”.

Әле мәғлүм булыуынса, бөтә тиражы тип әйтерлек юҡ ителгән китаптың йәнә лә бер данаһы бар икән дә Өфөбеҙҙә...

Егетлектең икенсе бер миҫалы: ташҡа баҫылып сыҡмаҫы борон уҡ “Туғандар һәм таныштар” романы һәм табындарҙа яттан һөйләнмеш ҡобайырҙары өсөн һис кенә лә көтмәгәндә Мөхәммәтша Буранғоловтың һәләкәтле “милләтселек арбаһына” ултыртылып тәнҡитләнә башлаған йәш әҙип Жәлил Кейекбаев яҙмышында ла йәштәше һәм ҡәләмдәше Ғәйнан Әмириҙең хәл иткес урын алғанлығы билдәле. Яҙыусыларҙың һәм сәнғәт эшмәкәрҙәренең Өфө ҡала күләмендәге 1948 йылда уҙғарылған һәм көн тәртибенә баяғы “ВКП(б) Үҙәк Комитеты ҡарарҙары яҡтылығында башҡорт әҙәбиәтендәге хаталар һәм етешһеҙлектәр тураһында»ғы хәтәр мәсьәлә ҡуйылған (ғәмәлдә М. Буранғоловты ҡулға алдыртыуға әҙерлек булған) йыйылышында большевистик боҙло суҡмар М. Буранғолов менән бер ҡатарҙан Ж. Кейекбаев башына ла йыйылыштың ҡәтғи резолюция проекты рәүешендәге күҫәге булараҡ зәһәр-яһил тоҫҡалғанында әлеге лә баяғы шул “аумаҡайланған» Ғәйнан Әмири ғәййәрлеге хәлде ҡапыл Ж. Кейекбаев файҙаһына үҙгәртә. Дөрөҫ, һәләкәттән ҡотолоу өсөн Кейекбаев үҙе лә, аҡыллы башын иҫәргә һалып, мутлашып ҡарай-ҡарауын тәүҙә, ләкин уңышҡа ирешмәй — бына ул ғибрәтле протокол:

“Кейекбаев иптәш (яҙыусы). — Уны, башҡа күптәр кеүек үк, ВКП(б) Үҙәк Комитеты ҡарарҙары тулҡынландырыуын һөйләй. Шунан һуң ул, “Иҙеүкәй һәм Мораҙым” эпосы мәсьәләһенә күсеп, шуны әйтә: яҙыусылар ҙа, Тел һәм әҙәбиәт институты ла был эпосты матбуғатта сығартып хата эшләнеләр...

Мин ике китап яҙҙым, ти Кейекбаев, ләкин береһе (“Туғандар һәм таныштар”. — *Й.С.*) эшкашмаған булып ҡуйҙы. Ләкин мин артабан эшләйәсәкмен һәм ***юлбашсыбыҙ Сталин иптәш тураһында яҡшы китап яҙасаҡмын”...***

Әммә баяғы бахыр себеш хәлендәгенең юлбашсыға таянып яҡшатланыуы, әйтеп үтеүебеҙсә, йыйылыш тарафынан иҫәпкә алынмай һәм алға һөрөлмөш резолюция проектының милләтселекте ҡырҡа хөкөм ҡылыусы пунктында М. Буранғолов менән бер ҡатарҙан Ж. Кейекбаев исеме лә алға баҫа шаҡырайып...

Резолюция проекты тауышҡа ҡуйылған хәл иткес минута әлеге лә баяғы шул берҙән-бер тынғыһыҙ йән — Ғәйнан Әмири ырғып тора ла

яҙыусы Ж. Кейекбаевтың милләтселеге тураһындағы хәтәр һөйләмде резолюциянан алдыртып ташлауға өлгәшә... Шул уҡ Ғәйнан Әмири йәнә, әйтеп үтелгән “аумаҡайлығы»на барып, 1963 йылда һөргөндән ҡайтҡан “халыҡ дошманы” Әбүстең (Сабит Суфияновтың) шиғырҙар йыйынтығын китап итеп сығартырға тәҡдим иткән рецензия яҙып бирә...

4

Эйе, Ғәйнан Әмири уҙаманыбыҙ башҡорт әҙәбиәтенә шаҡтай һуңыраҡ шытҡан быуын беҙгә лә, йөрәк йылыһын йәлләмәй, ҡулынан килгәненсә ихлас ярҙам итер, яҡын ҡустылары күреп йөрөр ине. Уның игелеге тейгән, бөркөтләнеп осорға ул ҡанат ҡуйған күптәребеҙ араһынан сағыу йондоҙобоҙҙың — Башҡортостандың буласаҡ халыҡ шағиры, ләкин ул саҡта (1950 йыл) ҡауырһыны ла ҡатмаған йәш үсмер Рәми Ғариповтың үҙенән һөйләтәйексе. 10-ынсы синыф уҡыусыһы ҡулы менән ылғый ғына үҙ тормошонан алып яҙылған һәм «роман» тип билдәләнгән, ике ҡалын дәфтәрҙән хасил был ҡулъяҙма ғәмәлдә ул саҡтағы “Бабай” ҡушаматлы Рәми Ғариповтың (икенсе дәфтәрҙә ул үҙен Рәми Салауатский тип тә атай) бик ентекле көндәлектәре булып тора — бөтөн персонаждар үҙ исемдәрендә, фәҡәт төп геройҙар Рәми үҙе лә уның тәүге мөхәббәте Марият ҡына Вахит һәм Айһылыу итеп үҙгәртелгән; ваҡыт-ваҡыт текста улар үҙ исемдәрен (Рәми, Марият) ала; йәш шағирҙың остазы Ғәйнан Әмиригә хаттары ла Рәмиҙең үҙ исеменән яҙыла, ә әҫәренең эпиграфы итеп Ғ. Әмири шиғырын алыуы — үҙе үк күп нәмә хаҡында һөйләй. Рәми-Вахит, әлбиттә, шиғриәт менән нығ иҫерек, был йәһәттән уның берҙән-бер рухи терәге-таянысы (үҙе әйтмәшләй, «штурманы») — Ғәйнан ағаһы ғына... Инде шағирҙың үҙенең һүҙҙәре менән дауам итәйек:

«Бабай. 1950. Йәшенле йәшлек.
Өфө, детдом (С. Ҡудаш мәктәбе). Роман.

Күпме шатлыҡ, күпме хәсрәт,
Күпме дәрт, моң, уй, теләк,
Күпме һөйөү, күпме нәфрәт
Һыйҙыра минең йөрәк!
Ғ. Әмири.

Үҙенең ул «Ленин һәм шағир» поэмаһын яңынан эшләргә тотондо. Был — өсөнсө вариант ине инде. Ни булһа ла, баҫтырыу тураһында уйларға кәрәк. Иң башта Әмиригә, һис шикһеҙ, күрһәтергә кәрәк. Бер генә шиғыр ҙа уның күҙ һалыуынан башҡа тыумаҫҡа тейеш. Сөнки ул ысынлап та ысын кеше. Вахиттың (йәғни Рәмиҙең. — *Й.С.*) ул беренсе штурманы!..

Әмиригә хат

Ҡәҙерле штурманым минең! Мин Һеҙгә беҙҙең осрашыуҙан һуң үҙемдең фекерҙәремде әйтергә теләһәм дә, һаман һуңланым. Сөнки был осрашыуҙан һуң мин үҙемдең тотҡан юлым тураһында бик ныҡ уйланырға мәжбүр булдым. Йәшермәйем, нисектер, мин ҡәләмгә тотонманым. Ниндәйҙер туҡтап тороу килеп сыҡты. Мин үҙемдең яҙғандарымды, бәлки, улар осраҡлы ғына бер күренештер, тип уйланым. Ләкин яҙмайынса тороу һис бер, һис бер мөмкин түгел ине. Түҙемлелек етмәне. Тик ҡәләмем менән генә мин күберәк файҙалы буласаҡмын, тигән фекер миндә көндән-көн ныҒыны. Ә ул миңә иң ҡатмарлы, иң ауыр, иң ғазаплы, ләкин хөрмәтле эш булып тойолдо.

— Мин көрәшә алырмынмы? — Был һорауға:

— Әгәр янып торған йөрәк, һүнмәҫ теләк, ижадҡа ҡанатландырып торған тормош булғанда, ниңә көрәшмәҫкә? Көрәшәсәкмен! — тип яуап бирҙем.

Миңә тормошта кәртәһеҙ генә еңел юл һайлау — иң мәғәнәһеҙ, иң ҡәбәхәт, иң хурлыҡлы нәмә булып, һәм былдай йәшәүҙең ҡыҙығы ла юҡтыр кеүек күренде.

Һәм тормошомда Һеҙҙең кеүек ябай, кеше өсөн бөтә йөрәген, аталарса ҡайнар йылылығын, аҙ ғына булһа ла ижад итеп, шытып килгән кескәй генә бер нөктәгә лә ҙур иғтибар биргән кешене, ысын Кешене осратыу миңә иң бәхетле көндәремдең береһе булды. Был осрашыу минең йәшлегемдә юйылмаҫ, тәрән һәм ҡайнар эҙ ҡалдырҙы. Үҙ көсөмә мин бер аҙ ышанып ҡарай башланым. Мине, аҙашып йөрөгән сағымда, донъяла иң кешелекле кеше булған бөйөк Горькийҙың йылы ҡулдары тотоп алған кеүек булды.

— Их, бар кешеләр ҙә шулай булһын ине! — тип яндым мин. Ләкин, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, миңә боҙ кеүек һалҡын, хатта кешегә ерәнеп ҡарай торған тереклектәрҙе лә осратырға тура килде. Ләкин мин көсһөҙ инем. Ә Һеҙҙең: «Рәми туған! Һин Яҙыусылар союзына — минең янға бар әле. Шиғырҙарыңды алып кил. Уҡырбыҙ, кәңәшербеҙ», — тигән һүҙҙәрегеҙҙе уҡып сыҡҡас, мин шатлығымдан ни эшләргә лә белмәй аптырап ҡалдым. Мин, үҙ-үҙемә ышанмайынса, «юҡ, быны берәйһе шаяртып яҙғандыр», тип уйланым. Сөнки ауылда Һеҙҙең «Август төндәре»н, «Алтын»дарығыҙҙы уҡып сығып, «был кешенең үҙен күрһәң ине», тип хыялланып йөрөгән булһам, ул мине үҙе күреп, хатта үҙенә кәңәшләшергә саҡыра!

(Ышанығыҙ,
зинһар өсөн әйтәм;
Уйламағыҙ:
«Таҫма тел...» — тиеп, —
Донъя
уларға ла мохтаж түгел:
Күп ағастар
йөрөй «гөл» кейеп).

Барҙым. Һәм был көндә мин ни тиклем бай һәм ни тиклем ярлы инем!..

Сөнки быға тиклем мин «беләм» тип йөрөнөм. Һеҙ, әлбиттә, «белмәйһегеҙ» тип әйтмәнегеҙ. Өйрәттегеҙ. Юл күрһәттегеҙ. Ләкин мин шунда үҙемдең ни тиклем ярлы, ни тиклем әле зәғиф, ни тиклем әле наҙан икәнлегемде һәм ни тиклем миңә уҡырға, белергә, күрергә, кисерергә кәрәклекте күрҙем. Мин бик ныҡ әрненем дә, шатландым да. Мин Һеҙгә, «күберәк фекер ишетермен» тип, элегерәк яҙылған «шиғыр»ҙарҙы күрһәтеп, хәйләләнем. Һеҙ быны, әлбиттә, ғәфү итерһегеҙ.

Мин, ашыҡмаҫҡа, тигән инем. Ләкин был үҫергә юл ҡуймаясаҡ. Сөнки миңә күптәрҙең фекерен ишетеү бик кәрәкле. Быныӊ әһәмиәте тураһында Һеҙ беләһегеҙ.

Икенсенән, минең бөтә хыялым — белемде арттырыу. Әҙәбиәт институтына инә алыу өсөн, минең баҫылған әйберҙәрем дә кәрәк буласаҡ.

Һеҙ был эштә ярҙам итә алырһығыҙ тип мин ышанам. *Минең бер генә шигри юлым да Һеҙҙең ҡулығыҙҙан үтмәй ҡалырға тейеш түгел.* Был ышаныска, минеңсә, Һеҙ шатланырһығыҙ ғына.

Бына Һеҙгә мин «Ленин»дың өсөнсө вариантын ебәрәм. Шулай уҡ: «Үлем көсһөҙ — көслө алдында» һәм Һеҙ бүләк иткән «Дуҫлыҡ».

Әлбиттә, мин әле Һеҙҙең бөтә талаптарға яуап бирә алмағанмындыр. Шулай ҙа эволюция булырға тейеш. Был турала Һеҙ үҙегеҙҙең фекерҙәрегеҙҙе яҙһағыҙ, етешһеҙлектәрен әйтһәгеҙ, мин бик шат булыр инем.

Ҡулдарығыҙҙы ҡыҫып,
Рәми Ғарипов.
9.01.1950».

Һәм бына һеҙгә кеше менән кеше араһы (контраст): Рәми-Вахит, Ленин тураһындағы баяғы шиғри әҫәрен тотоп (икенсе тапҡыр), яҙыусыларҙың «ояһы» булған «Әҙәби Башҡортостан» (хәҙерге «Ағиҙел») журналы редакцияһына килә (кәңәш, йылы һүҙ ишетергә):

«...Ләкин ул тейешле бүлмәгә инмәйенсә, бик оҙаҡ тәҙрә төбөнә ултырып, «Ленин»ды яңынан ҡат-ҡат ҡарап сыҡты. Бер куплет яңынан төҙәтелде.

Баҫҡыстан аҡрын ғына күтәрелгән, ҡултығына папка ҡыҫтырған Ҡадир Даянды күреп, урынынан торҙо ла:

— Һаумыһығыҙ, — тине Вахит.

— Ә, Ғалимов, һинме? Нәмә, әллә бында ултырып шиғыр яҙаһыңмы? — тип күреште Даян. Ләкин ул, артыҡ иғтибар итмәйенсә, Вахиттың: «Яҙылған. Ләкин бына инергә ҡурҡып торам әле», — тигән һүҙҙәрен тыңланы ла:

— Ҡурҡмаҫҡа кәрәк, — тип, Вахит инә торған бүлмәгә инеп китте. Вахит кисәге күренеште күҙ алдына килтереп, «бөгөн дә, бәлки, миңә: «бушамайым, бына эш муйындан, төҙәтергә кәрәк — бағана артынан

бағана...» тигән һүҙҙәрҙе ишетергә тура килер әле...» тип уйланы. «Ниңә һуң был кешеләр үҙҙәре лә бағана икән?!» — тип ҡуйҙы Вахит. Бер аҙ торғас, ул инде. Күк төтөн менән ҡапланған бүлмәләге тәмәке еҫе уның боғаҙынан быуып алған кеүек булды...

— Һеҙ миңәме? — тине таныш апа. Вахит, яҡыныраҡ килеп, шунда ултырған Сәғит Агиш менән күреште лә:

— Эйе, — тине һораусыға.

— Ниндәй йомош?

— Билгеле инде. Кисәге шиғыр. «Иртәгә килерһегеҙ», — тигәйнегеҙ бит...

— Бына тағы эш күп, — тине өҫкө яҡтан ҡырылып, аҫҡа ҡыуып төшөрөлгән ҡашлы, ирене һәм бармаҡ тырнаҡтары ҡыҙылға буялған эшлекле кеше. — Ялдан һуң килерһегеҙ. Бына хатта был ағайҙарыңдың шиғырҙарын да уҡымайынса һалып ҡуйҙым. Эш, эш... — тип зарланды эшсе кеше.

— Ул ағайҙарҙың, әлбиттә, уҡып та тораһы юҡ, — тип йылмайҙы Вахит. Ләкин уның был йылмайыуы аҫтында икенсе бер уттар ҡайнай ине.

— Юҡ-юҡ, ҡарайҙар... — тине Ҡадир Даян, әҙәп һаҡлап. — Ҡарайҙар, что һин?!.

— Ҡалдырығыҙ шиғырығыҙҙы, — тине ҡыҙыл ирендәр. Вахитҡа ҡапыл беҙ менән сәнскән кеүек булдылар.

— Юҡ, — тине ул. — Миңә һөйләшергә кәрәк. Һөйләшер...

— Улай булғанда, ялдан һуң килерһегеҙ, — тип бүлдерҙе уны ҡыҙыл ирендәр.

Вахит өндәшмәне. Ул үҙен ошо минутта иҙелеп осоп киткән кеүек һиҙеп, бүлмә эсендә йөҙгән күкһел төтөнгә оҡшатты.

«Нисек һуң?.. Нисек?.. Хатта бит шиғырҙың исеме менән дә ҡыҙыҡһынмайҙар! Ә ул исем... Ә ул исем?.. Их, һинең бит, революцияға тиклем үк: «Долой партияһыҙ әҙәбиәтселәр!» — тип әйтеүеңде һаманға тиклем ишетмәгән, тормоштоң ҡойроҡ осонда һөйрәлеп килгән ҡолаҡҡа ҡаты әҙәбиәтселәр ҙә бар...»

Вахиттың илағыһы килде... Ләкин ул ҡапыл ғына:

— Һинең менән, энем, эш бөттө булһа кәрәк?.. — тигән тауышҡа һиҫкәнеп китте. Вахит бүлмәнән туҡмалған кеүек сығып китергә мәжбүр булды...

Ә ҡайтып, Әмириҙең хатын алғас, осор дәрәжәгә етте:

«Рәми туған! Хатыңды һәм «Ленин»ды бөгөн генә алып уҡыным. Хатыңда керһеҙ йөрәгеңде күрҙем. Шиғырыңдың аҙаҡҡы өлөшөн һис бер үҙгәртеүһеҙ журналға тапшырҙым. С. Кулибай: «Февраль номерында мотлаҡ баҫырбыҙ», — тине. Көт.

Әлегә оҙон хат яҙа алмайым, кәйефем насар, эшем күп. Һуңыраҡ яҙырмын. Мин хәҙер гел өйҙә эшләйем. Һөйләшәһең килһә, һин минең квартираға шылтырат (2-98-37).

Үҙеңә бәхет теләп, **Ғ. Әмири.**

18.01.50».

«Аңлаған ул мине! Аңлаған! Ниндәйен ижад диңгеҙендә йөҙгәндә лә ул, бер нөктәгә иғтибар итеп, уға яуап яҙырға тартынмаған!.. Ниндәй кешеләр була донъяла!» — тип шатланды Вахит. Уға бынан да ҡәҙерлерәк хаттың булғаны юҡ ине».

Һәм бына шул «роман» тип аталған икенсе бер дәфтәренән сәхифәләр:

«Ҙур өмөт...

4 май. *Был минең иң бәхетле көндәремдең береһе. Ғәйнан Әмири мине үҙенә саҡырҙы.* Мин уға үҙемдең шиғырҙар йыйынтығын уҡыным.

Ә ул...

Юҡ, туҡта, һуңынан... — тип яҙҙы Вахит үҙенең көндәлегенә.

Быға тиклем уны Ғ. Әмири урамда осратып:

— Барып сыҡ, ҡустым, һөйләшеп ултырырбыҙ, — тиһә лә, Вахит бер нисек тә быға батырсылыҡ итә алманы.

«Нисек инде Вахит ҡына башың менән шундай ҙур, яҙыусы кешегә барып ултырырға. Ул үҙенең ни тиклем алтын ваҡытын ҡорбан итһенме һиңә? Һин бит, Вахит, әле генә уның китаптарын уҡып төндәр уҙҙыра һәм уның үҙен рәсеменән генә ҡарап белә инең...» тип уйланы ул.

Ләкин шундай кешенең һиңә иғтибар итеүе ни тиклем бәхет! Бәлки, ул ысынлап та һиңә бөтөнләй яҡын иптәштәрсә ҡарар, кәңәштәр бирер, юлдар күрһәтер? Бит ул бөтөнләйгә ябай күренә. Урамда осрағанда һин йәшенеп кенә үтеп китергә тырышаһың, ә ул һине үҙенең асыҡ йөҙө менән танып ала, иҫәнләшә һәм һуғыш яландарында ярты ҡанын һеңдереп, хәҙер ябыҡ ҡына булып ҡалған ҡулы менән һинең ҡулыңды ҡыҫа...

Вахит шуға күрә лә бөгөн «Фотография»нан үҙенең рәсемдәрен алып сыҡҡас та уҡ, уға барырға ҡарар итте.

Вахит барып ингәндә Әмири үҙе өйҙә юҡ ине.

— Көтөп ултырығыҙ. Ул хәҙер ҡайтыр, — тип урындыҡ бирҙеләр.

Вахиттың күҙе иң беренсе китаптарға төштө.

— Китаптар!.. Күпме китаптар!.. — тип ғәжәпләнде Вахит. Ул бөтә полкаларҙы күҙе менән генә ентекләп ҡарап сыҡты.

Ғ. Әмири көтөлмәгәнсә ябай ине. Әйтерһең дә, ул Вахитты үҙенең туғаны итте.

Вахит үҙенең был беренсе юл күрһәтеүсе уҡытыусыһы өсөн шатланып бөтә алманы.

Вахиттың шиғырҙарын Әмири бик ныҡ иғтибар менән, ҡулындағы йәшел ҡәләменән төрлө билдәләр ҡалдырып, уҡып сыҡҡансы, Вахит уның китаптарын ҡараны. Китаптарҙың күбеһен яҙыусының ҡәләмдәштәре, дуҫтары, рус шағирҙары бүләк иткәндәр.

Бер китаптағы Сәләмдең тапҡыр һәм көлкөлө ҡулъяҙмаһын Вахит айырыуса оҙаҡ ҡарап ултырҙы.

Сәләм, сәләм!

Йырҙарыңды һинең
Йөрәгемдә
һаҡлап йөрөтәм.
«Эшкә тора
Республикам!»
тиеп
Ҡабатлайым
һине һәр иртән, —

тип ҡуйҙы ул, ауыҙ эсенән генә.

Ун ғүмергә бөтмәҫ
йәшәү дәртен
Йөрөтә алды
һинең йөрәгең.
Һин йәшәйһең:
ҡасан,
кем һуң күргән
Ҡанатлы йыр
үлеү белгәнен?..

— Һин беҙҙең әҙәбиәттә ҡыҙыҡ ҡына бер фигура булырға оҡшайһың, — тип йылмайҙы Әмири. — Яҡшы. Яңы тормошто һин яңыса, үҙеңсә йырларға тырышаһың. Был барыһынан да яҡшы.

Ул урынынан торҙо ла китаптары араһынан үҙенең «Ҙур баҡса» тигән хикәйәләр йыйынтығын алып, уға ниҙер яҙҙы ла Вахитҡа бүләк итте.

— Ғәйнан ағайыңдың ҙур баҡсаһының да емештәрен аша, — тине ул.

Вахит шатлығынан йөрәге дөп-дөп типкән килеш, китаптың титул битенән: «Вахитҡа ҙур, бик ҙур өмөт һәм ышаныс менән, — **Ғәйнан Әмири.** 4.05.1950 йыл», — тигән юлдарҙы уҡығас уҡ, ул, тулҡынланып, ауырттырғансы итеп, үҙенең уҡытыусыһының ҡулын ҡыҫты һәм кеҫәһенән рәсемдәренең береһен алып, тышына яҙҙы ла уға бүләк итте.

— Рәхмәт, — тине яҙыусы.

Вахитҡа ул уның етешһеҙлектәрен күрһәтеп, әҙәбиәткә килеүсе йәштәр тураһында, Мәжит Ғафури тураһында йылы иҫтәлектәр һөйләп, улар бик оҙаҡ ултырҙылар. Вахит уға шиғырҙарынан Айһылыу тураһында яҙылғандарын йәшерергә итһә лә, ул:

— Юҡ, Ғәйнан ағайыңдан һин бер ниеңде лә йәшермә. Ул һине белә. Әгәр ҙә һин был турала яҙмаған булһаң һәм һиндә шундай иң гүзәл тойғолар булмаған булһа, мин һине шағир ҙа, кеше лә тип атамаҫ инем. Һәр шағирҙың ул башынан үткән һәм улар аҡылдан шашып, бөйөк һөйөү менән һөйгәндәр, — тине ул, нисектер яғымлы итеп һәм уның күҙҙәре ҡайҙалыр бик алыҫҡа — йылы иҫтәлектәргә, дауыллы йәшлек йылдарына барып төбәлделәр. Вахиттың ул:

Мөхәббәт ул миңә

berəү genə, — no

Тик шунда ул

матур,

күңелле.

Тауҙар емерелеп

Таштар баҫһын,

Мөхәббәтһеҙ үтһә,

Ғүмерҙе, —

һәм:

Бәхетле мин

әгәр әйтә алһам,

Юлдашым, тип

тик бер ***Маръятты.***

Беренсе һәм

бәлки

һуңғы ҡабат

Уны ғына

шулай ***яраттым,*** —

тигән юлдарын уҡыны ла:

— Гүзәл, — тине. — Тик һин яңылышма. Рифмалары ниндәй матур! Бына ошо рифмалар шиғырында ике фекерҙе матур итеп бәйләгән кеүек, һеҙҙең арағыҙ ҙа шулай бәйләнһен. Ул һиңә бөтә ғүмереӊ буйынса ярҙам итерлек һәм ҡәнәғәтләндерерлек булһын. Барыһынан да элек, уның һинеӊ ни тиклем ауыр һәм ҙур эш эшләүеңде тәрән итеп аңлауы кәрәк.

«Ниндәй гүзәл кеше!» тип уйланы Вахит.

Әмири, бер аҙ тынып торғандан һуң:

— Мин дә берәүҙе ярата инем... Ләкин беҙгә бергә булырға тура килмәне. Йылдар үттеләр... Ә мин уға һаман да инде йөрәгемдә йылы тойғолар һаҡлайым. Һаман да ул миңә яҡын... — тип ул үҙенең башынан үткәндәре тураһында ла һөйләне.

Вахитҡа был көн сикһеҙ хыялдар томын тотороп, уны ашҡыныулы тойғолар диңгеҙенә ташланы...»

Халыҡ шағиры Рәми Ғариповтың был һөйөнөслө һәм ялҡынлы йәшлек кисерештәрен биргән ҡәҙерле сәхифәләр аҫтына, әлбиттә, ул йылдарҙа һәм һуңыраҡ та Ғәйнан ағай Әмириҙе күреп белгән йәш әҙиптәрҙең бөтәһе лә ихлас ҡул ҡуйырҙар ине.

Һәм бына Ғәйнан Әмириҙең әҙәбиәткә яңы ғына морон төрткән йәш таланттарҙы үтәләй күреү, үлсәй белеү маһирлығы, бизмәненең теүәллеге (Рәми Ғарипов тураһында иҫтәлектәр йыйынтығынан. Хөснулла Түләкәйев. Кешелә ине эше.):

«Күмертау ҡалаһында йәшәгәнемдә, Өфөнән Ғәйнан ағай Әмириҙән кескәй бандероль алдым. Асһам, һинең (Рәми Ғариповтың. – Й.С.) «Һабантурғай йырҙары исемле китабың сыҡҡан икән дә -- Ғәйнан ағай миңә шуны ебәргән. Китаптың аҡ битенә түбәндәге һүҙҙәр яҙылғайны:

«Хөснулла туғаным!

Бына һиңә Рәмиҙең яңы китабын бүләк итеп ебәрәм. Үҙе ебәреп өлгөргәнсе уҡый тор. Китапта һиңә бағышланған «Торналар» бар. Рәми ул — ҙур талант! -- башҡорт халҡының ысын 5-енсе халыҡ шағиры буласаҡ кеше. Әйтте, тиерһең.

Ғәйнан Әмири. 17.Х.1964 йыл».

Ысынлап та, ҡарағыҙ: Башҡортостандың «указлы» халыҡ шағирҙары исемлегендә халыҡ шағиры Рәми Ғарипов нәүбәттәге бишенсе урында тора — «күрәҙәсе» Ғәйнан Әмири 1964 йылда уҡ күрә белгән, әйтеп биргән буласаҡ ысын халыҡ шағирын! Сөнки уның үткер күҙе, йөрәк йылыһы ярҙам иткән танырға. Тейешенсә таныны, бер туған ҡустылары кеүек күрҙе шул һәммәбеҙҙе Ғәйнан ағайыбыҙ...

Ысынлап та, бөтәбеҙ ҙә аҙаҡҡаса тоғро дуҫтары булып ҡала алмаһаҡ та, йәштәребеҙ буйынса ҡустылар инек шул. Әйтәйек, уның "Яңы уйҙар" тигән тәүге очерктар китабы 1933 йылда сыҡҡан — минең менән бер йәштә, тип әйтерлек! Бына хәҙер инде үҙем Ғәйнан ағай йәшенә етеп киләм — ҡултыҡ араһындағы ҡустылыҡтан — йәштәшлеккә ҡурпыным, уның ҡорҙашы булдым. Ағайымса әйткәндә, уның менән яу ҡырындағы бер үк рота һалдатына әйләндем! Ә бәлки, Ғәйнан Әмири ротаһының һуңғы һалдатылыр ҙа; был иһә миңә изгеләрҙән дә изге бурыс — "ротала ҡалған һуңғы һалдат һүҙе"н илгә еткереүҙе йөкмәтә:

"Һуғышта шулай була торғайны, — ти ул, — һөжүм һуғыштарынан һуң иҫән ҡалған һалдаттар һәләк булған дуҫтарының яҡындарына хаттар яҙалар, ҡайһылай батыр алышҡанлыҡтарын бәйнә-бәйнә һөйләп, иптәштәренең иҫтәлектәрен мәңгеләштерергә, уларҙың туғандарының ҡайғыларын еңеләйтергә тырышалар ине.

Бер-нисә ваҡыттан һуң — тағы һөжүм операциялары. Быныһында инде был хаттарҙың авторҙары баштарын һала... Был юлы иҫән ҡалғандар уларҙың үҙҙәре хаҡында яҙалар.

Был изге эш ротала һуңғы һалдат ҡалғанға тиклем шулай дауам итер ине.

Дүрт йәштәштән мин яңғыҙым ҡалдым. Ваҡытһыҙ сафтан киткән ҡәләмдәш-көрәштәш дуҫтарымдың ҡайһылай итеп батыр алышыуҙары тураһында хаттарҙы инде мин яҙырға тейешмен"... (Ғ. Әмири. Аҡ елкән. 146-сы бит).

Минең дә, роталағы тере ҡалған һалдат Йыһат фәкирегеҙҙең дә, тим мин, биш-алты ҡәләмдәш-яуҙаш хаҡында шулай уҡ яҙаһым бар...

Хәҙергеләргә һәм килерҙәргә ғибрәт өсөн шул хаттарҙың беренсеһен яҙып ултырам бына...

5

“Беҙ — ғәйнәләр, — башҡорттоң төбө булабыҙ”, — тип бәйән ителә Башҡортостаныбыҙҙың төньяғында һәм ут күрше Пермь өлкәһендә аҫабаланып йәшәүсе Ғәйнә ырыуы башҡорттарының донъяға билдәле мифында.

Башҡорттоң мәшһүр шағиры һәм прозаигы, Тыуған илебеҙҙең дә, милләтебеҙҙең дә ялҡынлы патриоты, ғүмере буйына йәшәүгә, кешеләргә булған һүнмәҫ мөхәббәтен бөйөк Ватан һуғышының Сталинград тамуғынан көйҙөртмәй-бөлдөртмәй алып сыҡҡан һәм аҙаҡҡаса мәңге ғашиҡ булып ҡалған Ғәйнан ағай Ғимазитдин улы Әмиров (Ғәйнан Әмири) 1911 йылдың 25 авгусында хәҙерге Яңауыл районының Яңы Уртауыл (Янтыҡ) ауылында тыуып, тап ана шул “башҡорттоң төбө” булмыш Ғәйнә башҡорто ине.

Шағир тыуған йорт

Минең Ырымбур яҡташым, юмор һәм сатира оҫтаһы Сәғит ағай Агиш мәҙәкләп һөйләй торғайны: йәйҙең йәмле көндәрендә Өфөнән — башҡорт әҙибе Ғәйнан Әмири, Ҡазандан татар әҙәбиәтсе ғалимы Нил Юзиев менән үҙҙәренең Янтыҡ ауылына[23] икеһе бер юлы ҡайтып төшкәндәр имеш. Ауылдың данлыҡлы баҡсасыһы Нуримөхәммәт ағай Раянов (Ғ. Әмириҙең “Ҙур баҡса” хикәйәһе геройының прототибы) табынында саҡ ҡына “йылымыс” булғандан һуң мендәргә янтая биреп, ара-тирә баҡса емештәренән дә ҡапҡылап, шул емеш исемдәренә бәйле мәсьәләне сисергә керешеп киткәндәр, ти.

— Безнең саф татар телендә мона бу жимеш — ҡарлыған, ә мона монысы — шомырт диб, ә мона бу ағач — нарат диб әйтелә, — ти икән Нил Юзиев.

— Ә беҙҙең саф башҡорт телендә улар ҡарағат, муйыл, ҡарағай була, — тип әшкәртә имеш ырыуҙашын Ғәйнан Әмири. Шулай ныҡыша торғас, төптө “емеш”ле булмаған һүҙҙәргә күсеп, ҡыҙыша башлағандар:

— Безнең саф татар телендә болай була бу!

— Ә беҙҙең саф башҡорт телендә былай был!

Өндәшмәй генә тыңлап ултырған-ултырған да, ти, Нуримөхәммәт ағайыбыҙ, тамағын ҡырып, “Ә беҙҙеңсә бына былай була ул”, тип, тегеләр уртаҡ тел таба алмаған бөтә һүҙҙәрҙе лә тап ғәйнәләрсә теҙгән дә биргән, имеш, һәм өҫтәкләп тә ҡуйған:

— Их-ма, янтыҡтар! Бер төптән шытһағыҙ ҙа, икегеҙ ике яҡҡа янтайғанһығыҙ...

[23] Күренекле был райондаштарҙың икеһе ике ауылдан икәнлектәрен яҡшы белһә лә, көләмәс шартына тура килтереп, шулай һөйләй торғайны.

Ошоноң ише “саф татар”лыҡ һәм “саф башҡорт”лыҡ мәсьәләһе заманабыҙҙа зыялыларыбыҙҙың байтағының, бигерәк тә Ғәйнан Әмириҙең, тере теңкәһенә тейеп, ижади яҙмышында хатта фажиғәле, тип әйтерлек, сағылғанлыҡтан, “мәсьәлә”гә ҡағылышлы тағы ла бер-нисә эпизодҡа туҡталып китмәксемен.

Етмешенсе йылдар уртаһында яҙыусыларҙың Мәскәү янындағы ижад йортонда шул Нил Юзиевтың Ҡазандан килмеш бер туған ҡустыһы — татарҙың атаҡлы шағирҙарының береһе Илдар Юзиев менән “мәй” янында һөйләшеп ултырғайныҡ. Һүҙҙән һүҙ сығып, мин: “Их һин, Ҡазанда аҙашып ҡалған башҡорт балаһы!” — тип өндәшкәс, табындашым, ҡуҙға баҫҡандай тыбырсынып: “Ник мин башҡырт булайым, паспортымда ғына башҡырт дип язғаннар!” — тип өҙөп алмаһынмы...

Шул уҡ йылдарҙа Өфөбөҙҙә саф татарса тел сарлап йөрөмөш Әнғәм Атнабаев тигән ҡәләмдәшем менән бер соҡортайҙан “зәм-зәм һыуы” тәмләгән хозур минуттарҙа мин уға, күңелем тулышыптыр инде: “Мең йәшә! Һинең кеүек аҫыл татарҙың, Ҡазанға китмәй, бында ҡалыуы ниндәй шәп!” — тигәйнем, күҙен аҡайтып ҡараны ла: “Ник мин татар булайым, башҡорт мин!” — тип паспортын сығарып күрһәтте...

Шуныһы ла хәтерҙә: 1967 йылда Ҡазанда Волга буйы йәш яҙыусыларының конференцияһы йыйылып, беҙҙән ҙур ғына делегация барғайны. Ҡунаҡханаға урынлашыуыбыҙ менән үк, татарҙың оло әҙәбиәтсе ғалимы, Ғәйнан ағайҙың ырыуҙашы Хатип ағай Ғосман өлтөрәп килеп етте, беренсе ял кисенә үк бөтөнебеҙҙе[24] фатирына аш мәжлесенә саҡырҙы: “Үҙемдең башҡорттарым менән гөрләшеп ултырғым килә”, — тине ул ихластан. Нәҡ башҡортса хозур табында ағайыбыҙ үҙенең, аҫаба башҡорт була тороп та, башҡорт әҙәбиәтенә һәм фәненә хеҙмәт итергә Хоҙай яҙмауын, Башҡортостанын ныҡ һағынып йәшәүен, ләкин инде тәртәләрҙе ҡайырырға һуң икәнен ныҡ моңайып һөйләне... Шул йәһәттән ҡарағанда, Ғәйнан ағайыбыҙ бәхетле башҡорт булды тип һанайым: үҙенең башҡорт әҙәбиәтенә һәм сәнғәтенә, фольклорына ғүмере буйына мөкиббән һәм фиҙакәр хеҙмәт итте, Бөйөк Ватан һуғышының Сталинград тамуғынан да 124-се айырым **Башҡорт уҡсы бригадаһында** ҡаһармандарса һуғышып еңеп сыҡты, һуғыштан ҡайтып мәшһүр “Мораҙым”, «Ғашиҡтар” повестәрен һәм гүзәл хикәйәләрен, публицистикаһын яҙҙы, шиғри йәйғорлоғо менән гәрәбәле Балтик диңгеҙе ярҙарын алтын Урал түбәләренә тоташтырып “Салауат аманаты»н йөрәкһеп йырланы, аҡтыҡ сиктә есеме лә тыуған еренең есеменә ҡушылды...

Бала сағынан уҡ күңелен әҙәбиәт ғашиҡ итә, ауыл башланғыс мәктәбендә уҡығанда ла, Бөрө педагогия техникумында ла ҡулъяҙма журналдар сығарыуҙы башлап ебәрә, 1928 йылдан алып әҫәрҙәре Өфө һәм Ҡазан гәзиттәрендә баҫыла, утыҙынсы йылдар башында тәүҙә — “Коммуна” гәзитенең яуаплы сәркәтибе, шунан һуң “Йәш коммунар” һәм “Ленинсы” гәзиттәренең мәҙәниәт бүлеге мөдире булып эшләгән осоронда

---

[24] Дөрөҫ, бәғзе берәүебеҙ унда барыуҙан мәхрүм булып, Бахус ҡунағы рәүешендә иҙерәп ятып ҡалды.

ижад ителгән “Кәмһетелгән Шәмситдин, трудденһыҙ Нуритдин” тигән беренсе поэмаһы уҡ уға танылыу килтерә заманында. Бөтәһен дә тормоштан алып яҙыусан ҡәләм эйәһе 1933 — 1935 йылдарҙа Ҡыҙыл Армия сафтарының кесе командиры булып хеҙмәт итеү осоронда ла ғүмерен елгә осормай — 1936 йылда яугир рухлы “ҡыҙыл әрмис хикәйәләре”нән хасил “Ауғус төнөндә” тигән өсөнсө китабы баҫылып сыға. Ләкин ғүмере буйына белемгә һыуһаған һәм үҙенең йәш ҡәләмдәштәрен дә юғары белем тауҙарына үрләргә өндәгән яҙыусы тынысланмай — армиянан ҡайтыуы менән үк Башҡорт педагогия институтында белем алыуын дауамлап, уны тамамлаған та уҡ 1938 йылда Башҡортостан тел һәм әҙәбиәт институтына фольклор секторы мөдире итеп эшкә тәғәйенләнә. Шунда эшләү осоронда башҡорт халыҡ ауыҙ-тел ижадын тәрәндән өйрәнә, башҡорт фольклорын йыйыу буйынса ғилми экспедицияларҙа ҡатнаша, башҡорт әкиәттәрен, йырҙарын китап итеп баҫтыртып сығарыуҙа, Батыр Вәлид, Фәррәх Дәүләтшин, Йәрми Сәйете кеүек хәҙерге заман башҡорт сәсәндәренең ижадын юлға һалыуҙа тырышып эшләй, уларға ныҡ ярҙам итә. Шул арҡала үҙенең бөтөн әҫәрҙәре лә, тип әйтерлек, сағыу башҡорт фольклорына, халыҡсанлыҡ аһәңенә мул һуғарылған, былар уның хикәйәләүенең һәм тасуирлауының үҙенә хас колоритлы стилен тәьмин иткән. Бигерәк тә Урал артына сәйәхәттәре яҙыусының күңелендә һүрелмәҫлек сағыу тәьҫораттар, хәтирәләр булып ярылып ҡала, шунда йыйылған бай тарихи һәм ғәмәли материал уны ғүмере буйынса уйландырып, һөҙөмтәлә “Атлы халыҡ” тигән затлы очергын, атаҡлы “Мораҙым” повесен (роман тиергә лә була), “Башҡорт толпарҙары» балладаһы һәм “Салауат аманаты” поэмаһы кеүек шиғри әҫәрҙәрен яҙырға илһамландыра һәм, ысынлап та, үҙен “башҡорттоң төбө” итеп тойоу ҡеүәһен нығыта. 1939 йылғы баяғы “Атлы халыҡ”та ул оҙаҡламай бөйөк Ватан һуғышында тиңһеҙ данланасаҡ Башҡорт а**тлы дивизияһы т**өҙөлөрөн дә алдан күрҙе — күрәҙәләне һымаҡ:

“Бөгөнгө Сталинлы азат илдә мәңгелек бәхеткә ирешкән башҡорт халҡы — үҙенең бәхетен һис ваҡыт, һис бер дошманға бирмәҫ! Әгәр ҙә дошман уның был бәхетенә ҡул һуҙа ҡалһа, барлыҡ азатлыҡ һөйөр башҡорт халҡы — йәше-ҡарты, ҡатын-ҡыҙы, үҙенең толпарҙарына атланыр ҙа, башҡа туған халыҡтар менән бер стройға баҫып, үҙенең бай, гүзәл Ватаны өсөн, бөйөк Сталин өсөн яуға сабыр һәм дошман башына йәшен булып атылыр!”

Эйе, үҙҙәре теләп баяғы **Башҡорт атлы дивизияһына** киткән геройҙары менән бер үк йылда, нәҡ утыҙ бер йәшендә, бәхетле тәүге китаптарының тәүгеләрҙән береһенә (“Ауғус төнөндә”) һәм иң һуңғыһына ла (“Август йондоҙҙары”) заманында берҙәй үк тылсымлы исем биргән сөмәкәй күкле, шау йондоҙло август төнөндә — 1942 йылдың 24-нән 25-нә ауышҡан һәм тап үҙе әсәнән донъяға тыуған август төнөндә — баяғы 124-се айырым **Башҡорт уҡсы бригадаһында** дәһшәтле Сталинград һуғышына

барып керҙе, ҡан ҡойошло бөйөк эпопеяның башынан алып аҙағынаса атаҡлы “үлем ҡулсаһы”нда тороп һуғышты. “Юйылмаç ҡултамғалар” тигән әçәрендә ул, берсә тетрәнеп, берсә ғорурланып яҙҙы:

“Сталинград һалдаты мин. Был легендар ҡалала йөҙ ҙә етмеш тәүлек буйына барған титаник ҡыйралыштың ҡатнашсыһы булдым... Өс мең дә һикһән сәғәт буйына барған дәһшәтле һуғыш геүелдәүе (сәғәткә күсерәм, сөнки Сталинград һуғышында артиллерия уты, бомбаға тотоу, йөҙәрләгән самолет һәм танкыларҙың мотор тауыштары бер генә сәғәткә лә тынып торманы) ҡолаҡтарҙа ғүмергә шаулап торор, ҡот осҡос янғындарҙың ялҡындары ғүмергә күҙҙәрҙе сағылдырыр, бындағы имәнес күренештәр һуңынан төштәргә кереп, йәнде һәр ваҡыт тетрәтеп торор... Әсәләр һәм балалар тейәлгән ҙур пароходтың фашист бомбалары тарафынан батырылыу күренеше һәм күкрәктәренә балаларын ҡыçып, шашып ҡысҡырған бер-нисә йөҙләгән әсәләрҙең аһы, сабый балаларҙың һалҡын Волга һыуына батҡан ваҡытта һуңғы һулыш алып ҡысҡырыу тауышы”...

Хәтеремдә, таңдар утта сәсәй,
Көндәр — төтөндәрҙә тонсоға,
Ҡояш, яраланған һалдат булып,
Алыç медсанбатта төн сыға...

Таштар янды, Волга үҙе янды! —
Ә беҙ генә иреп аҡманыҡ;
Мамай ҡурғанында Ҡафҡаз, Урал,
Карпат түбәләрен һаҡланыҡ...

(“Сталинград хәтирәһе” шәлкеменән).

Тыуған иленә, Уралына сикһеҙ ғашиҡ күңелле йәш патриоттың 1935 йылда яҙған “Йәлил” хикәйәһенең шул исемле геройы бит әҙәм балаһы үтәй алмаçлыҡ шарттарҙа ла үҙенең мөҡәддәс һалдат бурысын еренә еткереп башҡара. Шуның һымаҡ уҡ, капитан Ғәйнан Әмиров та фашистарҙың хатта ҡош та осоп сыға алмаçлыҡ ҡамауы аша алты саҡрым “үлем ҡулсаһы»н түше менән шыуышып үтеп, бригада командиры Горохов менән фронт сәрғәскәре Чуйков араһында йәшәү һәм Еңеү элемтәһе булдыра... 1936 йылда яҙылған “Байраҡ өсөн” хикәйәһендәге автор күрәҙәлеге лә ошо һуғышта әҙиптең үҙе тарафынан уҡ тормошҡа ашырылды: хикәйәләге пионер отряды Байрағын йөрөтөүсе Хәким шул Ҡыҙыл Байраҡты дөрләп янған ут эсенән алып сығып ҡотҡарһа, Сталинград мәхшәрендә комиссар Греков бойорған бригада Байрағын иһә капитан Әмиров баяғы “үлем ҡулсаһы” эсенән ҡурсалап алып сыға:

“Үлем ҡулсаһы»нда беҙҙең менән, —
Тап йөрәктәй күкрәк эсендә, —

Байраҡ булды. Йәшәү, яҙмышыбыҙ
Тупланды бер ошо есемгә!

(“Сталинград хәтирәһе” шәлкеменән).

Ул изге Еңеү Байрағын, әлбиттә, изге Тыуған илкәйен үтә лә өҙөлөп һөйгән, үлемесле ут эсендә лә һөйөү сафлығын юғалтмаған, йәшәүгә мәңге ғашиҡ ҡалған йәндәр генә бөтә фронттар аша ғорур юғары күтәреп уҙҙы, фашизмдың үләт ояһы Берлинғаса алып барып еткерҙе. Сталиградтың ер ҡыртышын иретеп әжәл вулканы ҡайнағанда ла йәшәйешкә, һөйгәненә мәңге ғашиҡ килеш ҡалған Әнүәр Йәғәфәров менән Алла Шмакалова («ғашиҡтар”), Ғәбделхәй менән Ниночка (“Һуңғы таж япрағы”) тап бына шундайҙарҙан. Бөйөк Ватан һуғышы темаһына СССР халыҡтары әҙәбиәттәренең һоҡланғыс ҡаҙаныштарының береһе итеп баһаланырға хаҡлы “Ғашиҡтар” китабы хаҡында өҫтәп әйтергә кәрәк: донъяла тиңе булмаған шул ғәрәсәтле һынауҙа ла халҡыбыҙ рухының иң юғары соръолошон ифрат юғары художество кимәлендә һынландырыусы ифрат берәгәй әҫәр был — Ғ. Әмири ижадының да, әҙәбиәтебеҙҙең дә аҫыл йөҙөк ҡашы булып балҡып тора ялғанлыҡтан ике күҙе тонмаған намыҫлы бәндәгә һәм уны, ниһәйәт, бөтәбеҙгә лә лайыҡлы баһаларға, уңайы тура килгән һайын, затлы хитап бәрәбәрендә нәшерләргә кәрәк ине. Бөйөк Ватан һуғышында еңеүебеҙҙең юбилейҙары айҡанлы баплап китаптар сығарыла, ләкин шулар араһында “Ғашиҡтар”ҙың булмауы бик аяныс...

6

Оборона Халыҡ Комиссары ҡарамағындағы ғәскәри берләшмәнең элемтә башлығы капитан Ғәйнан Әмиров 1946 йылдың ғинуарында хәрби хеҙмәттән бушатылып, шунан элегерәк, 1944 йылда, Ҡафҡаздың Ахал-Теки ҡалаһындағы хәрби госпиталдәрҙең береһендә һуғыш яраларынан дауаланып ятҡанында танышып өйләнешкән Сара еңгәй, 1945 йылда тыуған игеҙәк ҡыҙҙары Лилиә, Нелли, үгәй улы Ефим һәм ҡайнатаһы Семен Мильман менән шау-гөр килеп Өфөгә ҡайтып төшә. Шул айҡанлы йәнә лә шул мәрәкәсе Сәғит Агиш ағайыбыҙ уйынлы-ысынлы көләмәсен тарата: “Был донъяла бармаҡтар ҙа, кешеләр ҙә тигеҙ түгел икән, әй. Бөйөк Ватан һуғышынан капитан Н. немецтың еңел автомобиле “Оппель”дә өйөнөң эсен йыһазларлыҡ затлы-ялтлы тауҙай байлыҡ тейәп ҡайтып килһә, капитан Ғ. тау аҫтындағы вокзалыбыҙҙан, алаша ат еккән ылау яллап, бер арба йәһүд сиреүен тейәп күтәрелде”... Көләмәстең тарихи ерлеген икенсе бер реалист әҙибебеҙ, шулай уҡ Сталинград яугире Ибраһим ағай Абдуллиндың хәтирәләрендә күрәбеҙ: “Минең тиҫтерҙәрем Яҡуп Ҡолмой, Ғәли Ибраһимов, Мостай Кәрим, Сабир Кинйәкәй — фронтта, ә Назар Нәжми Новосибирскиҙа КГБ мәктәбендә “смерш”лыҡҡа уҡый икән. Йәйәләр эсендә әйтеп үтәм: “Смерш” — ул “смерть шпионам” тип атала ине, ә һуғышҡа саҡлы ул “ОО” — особый отдел булып йөрөнө.

Назар фронтта ла ана шул “Смерш”та хеҙмәт итте; беҙ инвалид булып, ҡултыҡ таяҡтары менән фронттан ҡайттыҡ, ә ул Германиянан бер машина трофей тейәп ҡайтты. Нишләйһең бит, кемгә һуғыш — ҡан түгеү, кемгә — майлы аш... Мин быны менән талантлы шағир Назар Нәжмигә ғәйеп ташларға теләмәйем, тик уның хәрби яҙмышы һәм һуғыштан һуңғы булған яҙмышының еп-еңел, шып-шыма булыуын ғына әйтеп үтеп китәм” (“Ағиҙел”, 1997/4, 23-24-се биттәр).

Кемгә нисектер, тигәндәй, һуғыштан ҡайтҡан Ғәйнан Әмиригә ул көндәрҙә, ысынлап та, үҙенең ишле, татыу ғаиләһе булғандыр иң ҙур байлыҡ һәм таяныс. Әҙиптең ҡайһындай ҙа эскерһеҙ саф һәм киң күңеллелеген, әхләҡи камиллығын күрһәтеүсе кес кенә бер ҡомартҡы алдыбыҙҙа: Өфө Авиация институтының бишенсе курсында уҡып йөрөгәнендә 1958 йылдың июлендә сит өлкәлә хәрби уйындар ваҡытында һыуға батып үлгән һөйөклө улы (үгәй һанамай ине уны) Ефимдың ҡасандыр бер саҡ студент хеҙмәт отрядында эшләгәнендә колхоздан ебәргән берҙән-бер хатын, үҙенең дә вафат булырына дүрт йыл ҡалғас, конвертының тышына: “*Лилиә, Нелли, Ефимкәйҙең берҙән-бер хаты был. Иҫтәлеккә һаҡлағыҙ. Атайығыҙ. 19 октябрь 1978*”, — тип яҙып, мәрхүм егеттең һуғышта юғалып ҡалған үҙ атаһының бер ус фронт хаттары менән ҡуша күн ярпыһына төрнәп һаҡлап ҡалдырған. Улының шул фажиғәле үлемен һөйләп ҡайғырғанын үҙем дә йыш күрергә тура килде. Быға бәйле шуныһын да әйтмәй булмай: Ефим һәләк булғас та, әҙип фатирына почта аша ҡултамғаһыҙ үсәү ҡағыҙы килеп төшә, ағайыбыҙ шуны ғүмере буйына, әллә хаҡ, әллә Нахаҡ, тигәндәй, баяғы атаҡлы мәҙәксебеҙҙән күреп әрнене...

Ҡайтып төшкән айында уҡ (ишле ғаиләне аҫырарға кәрәк бит!) Ғ. Әмири Башҡортостан китап нәшриәтенең балалар-үҫмерҙәр әҙәбиәте бүлеге мөдире булып эшкә урынлаша, ә 1947 йылдың октябренән 1949 йыл аҙағынаса ул — “Үктәбер” (һуңғараҡ “Әҙәби Башҡортостан”) журналының яуаплы редактор урынбаҫары. Яугир рухлы күренекле әҙип һәм һәләтле етәксене 1950 йылда КПСС-тың Башҡортостан өлкә комитетының әҙәбиәт һәм сәнғәт секторы мөдире итеп партия эшенә үрләтәләр, ләкин, бер генә йыл эсендә ҡапыл, беҙҙең өсөн билдәһеҙ ҡалған сәбәптәр арҡаһында (моғайын, “халыҡ дошманы” Һәҙиә Дәүләтшинаның “Ырғыҙ” романы ҡулъяҙмаһын партия эшмәкәренә хас булмағанса ихлас күңелдән дәррәү күтәреп алғаны, йәғни, “аумаҡайланып”, авторына ярҙам иткәне өсөндөр?) 1951 йылда уны СССР Фәндәр академияһы Башҡортостан филиалы тарих, тел һәм әҙәбиәт институтының тел һәм әҙәбиәт секторы мөдире итеп күсерәләр. Ошо эше дәүерендә уға Сәйфи Ҡудаш ижады буйынса монография яҙыу йөкмәтелә, ләкин быға әллә күңеле тартмаймы, эште оҙаҡҡа һуҙып, үтә һүлпәнлек күрһәтә (“Сәйфи Ҡудаш ижады” тигән ул монографияны ғилми карьераһын башлап ебәргән йәш ғалим Ғ. Хөсәйенов тиҙ арала атҡара). Ғ. Әмири 1955 йылда институттан китә, өс йыл тирәһе тағы “Әҙәби Башҡортостан” журналының баш мөхәррир урынбаҫары булып эшләп, 1958 йылдан кәйен үҙ алдына әҙәби ижад менән генә шөғөлләнә.

Ғәйнан Әмири ғүмеренең баяғы, партия өлкә комитетының әҙәбиәт һәм сәнғәт секторы мөдире булып эшләп йөрөгән осоронда унаң ижади эҙмышында һәм, ғөмүмән, әҙәбиәтебеҙ тарихында тәрән эҙ ҡалдырған әһәмиәтле ваҡиға булып уҙа — 1937 йылдың ноябренән үк әҙәбиәтебеҙ донъяһында юҡҡа сығып торған бөйөк шәхес Һәҙиә Дәүләтшина яҙмышы менән унаң яҙмыш юлдары ҡабат киҫешә һәм бөйөк әҙибә өсөн был бик хәйерлегә була. Сөнки ул, 1943 йылда тотҡондан ҡотолғандан һуң, Башҡортостан Яҙыусылар берлегенә лә, гәзит-журнал редакцияларына ла ижады буйынса ҡабат-ҡабат мөрәжәғәт ҡылып ҡарай, ләкин “халыҡ дошманы»на яҡты йөҙ күрһәтеүсе, хәленә кереүсе табылмай.

Ни өсөн тигәндә, ул саҡтағы рәсми әҙәмдәрҙең бөтәһенең дә үтә тупаҫлығынан, йәки яуызлығынан түгелдер был, — билдәле репрессияларҙан һуң партия өлкә комитетынан, НКВД органдарынан шөрләү өҫтөнлөк алғандыр күңелдәрендә — һәр зыялының башы өҫтөндә партияның һәм чеканың ҡыҙыл һаплы балтаһы яһил һағауыллаған замана бит... Һәҙиә Дәүләтшина быны, әлбиттә, барыһынан да яҡшыраҡ белгән һәм романын тотҡарлыҡтан сығартыуҙың берҙән-бер хәл иткес юл башы булған партия өлкә комитетының үҙенә төбәлеп килгән, ундағы әҙәбиәткә ҡағылышлы яуаплы урында үҙенең элек пединститутта бергә уҡыған яғымлы кесе ҡәләмдәше Ғәйнандың ихлас эшләп ултырыуы ла уға, яҙмышы ҡара мөһөрләнгән зыялыға, тәүәккеллек биргәндер. Бының ҡайһылай булғанын Әмириҙең үҙенән һөйләтәйек:

“Ҡыҫҡараҡ ҡына буйлы, йоҡа кәүҙәле, ғәҙәттән тыш ябай ҡиәфәтле һәм баҫалҡы Һәҙиә Дәүләтшина, ғәҙәтенсә йылмайып, ирендәре менән генә түгел, ә барлыҡ мөләйем йөҙө менән, мөхәббәтле күҙҙәренең осҡонло ҡарашын туп-тура һинең йөҙөңә йүнәлтеп йылмайып, иркәләүсән, күгәрсен гөрләүенә оҡшаған һәм тыныс тауыш менән: “Бына, туғандар, оҙаҡ йылдар яҙыша-ныҡыша торғас, мин дә бер роман яҙған булдым да... Белмәйем, оҡшатырһығыҙмы, юҡмы инде, әлләсе...” — ти кеүек... Һәҙиә апа А.П. Чеховтың матур кеше тураһындағы идеалына артығы менән тап килә ине — унаң йөҙө лә, уйҙары ла, кейеме лә гүзәл ине... Беҙ кабинетҡа индек. Ултырыштыҡ. Иҫәнлек-һаулыҡ һораштыҡ. Һәҙиә апа үҙенең башынан үткәндәрҙе һәм әле ҡайҙа, нисек йәшәүе тураһында ҡыҫҡаса ғына һөйләп бирҙе, минең сәләмәтлегем менән дә ҡыҙыҡһынды... Бик тулҡынлана, ара-тирә йөҙө ағарып киткәндәй була, йә унда тимгел-тимгел ҡыҙыл таптар тыуа. Мин уны тынысландырырға тырыштым, студент саҡтарыбыҙҙы, дөйөм таныштарҙы, уҡытыусыларҙы хәтергә алып, көлкөрәк тойолған бер-ике эпизодты һөйләп алдым; ул үҙен ҡулға алырға тырышты, күҙ йәштәре аша йылмайҙы”... (Ғ. Әмири. Аҡ елкән. 90 — 91, 100, 110-сы биттәр).

Ҡыҫҡаһы, унаң “Ырғыҙ буйҙарында” тигән повесенең машинкала өс дана итеп баҫтыртылған ҡулъяҙмаһының бер данаһын Ғәйнан Әмири шунда уҡ үҙе уҡырға ала, ә ҡалған икеһен, Яҙыусылар берлеге идараһы менән телефондан һөйләшеп, тәжрибәле ике әҙиптән тиҙерәк уҡыттыртырға һәм (ыңғай) фекерҙәрен яҙҙыртырға килешә. Эште оҙаҡҡа

һуҙмайынса, ул үҙе әҫәрҙе ҡулына ҡәләм тотоп, йотлоғоп уҡый башлай; был партия эшмәкәренең ҡулъяҙманы ни тиклем дә ентекле итеп, күңел биреп уҡығанлығын ҡулъяҙма биттәрендә ҡәләменең эҙҙәренән күрәбеҙ: машинистка ебәргән хәреф хаталарына тиклем, һүҙҙәр аҫтына һыҙып, бермә-бер күрһәтә барған, авторҙың буталсыҡ һөйләмдәрен (37, 114, 116, 121-се биттәр) хәстәрлекле төҙәткән (романдың баҫма тексынан күренеүенсә, автор был төҙәтмәләрҙе ҡабул ҡылған) һәм шул тәңгәлдәрҙә ҡағыҙ ҡырыйына: "Һәҙиә ханым, һөйләм төҙөүгә иғтибар итегеҙ! Ғ.Ә."; "нимәне?"; "русса ҡоролош"; "өтөрҙәрҙе дөрөҫ ҡуйыуға иғтибар итегеҙсе!"; "һөйләм!"; "һәйбәт!" тигән һүҙҙәрен теркәп ҡалдырған... "Ҡулъяҙманы ошо уҡыу, яҙмышын хәл итеү дәүерендә, эҫе йәй көндәрендә, — тип хәтерләй бөйөк әҙибәбеҙ менән айырата йылы мөнәсәбәттә булған хәҙерге оло шағирәбеҙ Кинйәбулатова Кәтибә апай, — Һәҙиә апайыбыҙ Ғәйнан ағай менән күрешеп һөйләшергә баш ҡалаға йыш ҡына килеп йөрөнө[25]... Тәүгеһендә уның эштән сығыуын өлкә комитет йортоноң ишеге төбөндә көтөп торған икән, был хәл Ғәйнан Әмириҙе ныҡ һағайтҡан, сөнки "халыҡ дошманы" тип тамғаланмыш кеше менән осрашыуы хәүефле (бигерәк тә партия эшмәкәренә!) — элекке яҡын таныштары ла бит уны, Һәҙиә апайҙы, күрмәҫкә лә белмәҫкә тырыша ине. Мәҫәлән, шул саҡтарҙа күҙгә яҡшы ғына салына башлаған коммунист-әҙибә З. апайҙың фатирына Һәҙиә апай менән эйәртенешеп барғаныбыҙҙа ул беҙҙе: "Йөҙөмә ҡара яғып тертәңләп йөрөмәгеҙ!" — тип, ишектән бороп ебәрҙе; ә Башҡортостан яҙыусыларының 1954 йыл июнь айындағы 2-се йыйынына "әҙәбиәт һөйөүселәр" төркөмөндә генә саҡырылған Һәҙиә апай залға инеп, минең менән З. апай эргәһенә килеп ултырғас, ҡобараһы осҡан З. апай, тиҙ генә тороп китеп, икенсе урынға төпләнде... Бына шундай тынсыу мөхиттә рәсми вазифа башҡарған Ғәйнан Әмириҙең һаҡлыҡ күрһәтеүен яҡшы аңлап була. Һәҙиә апайҙың үҙенең һөйләүенсә: "Яр башындағы баҡсағаса артығыҙға ҡарамай ғына барығыҙ, шунда осрашырбыҙ", — тип, уның ҡолағына шыбырҙап уҙған ул. Ағастар араһында үләнгә ултырып һөйләшкәндәр. "Беҙҙең һәр беребеҙ күҙәтеү аҫтында тора бит, апа, — тип ғәфү үтенгән Ғәйнан ағай һәм инде бынан һуң уға эш урынына килмәҫкә, ә кистәрен, ил аяғы һил булғас ҡына, Ғ. Әмири фатирының ишеген ике тапҡыр шаҡырға һүҙ ҡуйышҡандар. — Үкенескә ҡаршы, өйгә саҡыра алмайым, сөнки үҙем дә, ҡыҫылып-мыҫылып, ишек төбөндә, тип әйтерлек, көн күрәм", тип тә өҫтәгән (фатир ғынаһы, ысынлап та, ҙур ғаилә өсөн тар ине)... Айырылышҡанда, кеҫәһенән сығарып, ҡағыҙға төрнәүле (эшендәге буфеттан өйгә алып ҡайтырға алған) һимеҙ селедка менән аҡ булка бүләк иткән апайыбыҙға; ә ул уны юлда уҡ асып ашағыһы килеп, ауыҙ һыуҙары ҡойолоп, туҡталған фатирына саҡ ҡайтып еткән"... Шул уҡ К. апай иҫләүенсә, Һәҙиә апайыбыҙ былай тип тә өҫтәгән: "Ғәйнан Әмири ошонан һуң да, осрашҡаныбыҙ һайын, кеҫәһенә һалып миңә йә бешкән бәрәңге менән икмәк киҫәге, йә

[25] Ул һөйләгәнде яҙып бармағанлыҡтан, һүҙмә-һүҙ түгел, ләкин дөрөҫ мәғәнәһендә килтерәм.

бер-нисә конфет менән печеньеләр килтерә, улар ифрат бөхтә итеп ап-аҡ ҡағыҙға төрнәлгән, еп сырмап бәйләнгән була”...

Шулай итеп, әҫәргә ҡарата беренсе булып үҙенең эш-вазифаһы буйынса хәтәр рәсми кеше Ғәйнан Әмири яҡшы фекер тыуҙыра һәм ентекле, хәстәрлекле ыңғай рецензия яҙа; шулай уҡ күп авторҙарыбыҙҙың әҫәрҙәрен юҡҡа сығарып тәнҡитләүе менән хәүефле дан ҡаҙанған, “нигилист” тип тә нарыҡланған татар Әмир Чаныштың да рәсми яҙмаһы ыңғай була. Түрәләрҙең тын алышын һәм өҫтәнерәк иҫкән елдең көсөн сос тойоусан йән булараҡ өсөнсө рецензиясы Сәғит Агиш ҡына, тыны аша кемдеңдер аҫтыртын-баҫымлы һулышын үткәреп, романды бөтөнләй юҡ итерлек оторо талаптар ҡуя, әммә партия өлкә комитетында ултырған баяғы “аумаҡайлыҡлы” иптәштең һулышы еңгәнлектән, “погода яһай» алмай...

“Роман мауыҡып уҡыла ине. Быға тиклем миңә башҡорт тормошонан был тиклем үк колоритлы, реалистик художестволы әҫәр уҡырға тура килгәне юҡ ине әле. Уны яҙыу өсөн авторҙың иҫ киткес ҙур, күп көс һалғанлығы ла билдәле ине миңә. Әммә шул уҡ ваҡытта китаптың теүәлләнеп етмәүе лә күҙгә ныҡ ташланып тора ине. Мин үҙемдең был осраҡта ябай рецензент ҡына түгел, ә партия өлкә комитеты исеменән фекер йөрөтөргә тейешлегемде лә аңланым... Унда әҫәрҙең бик күп ыңғай сифаттары әйтелде, әлбиттә, һәм шулай уҡ етешһеҙлектәре лә күрһәтелде, тәҡдимдәр яһалды, теләктәр белдерелде. Улар, нигеҙҙә, шуларға ҡайтып ҡалалар ине: был килешендә ҡулъяҙма көнкүреш (бытовой) романы[26] булып тора; хикәйәләүҙең егерме йылға һуҙылған ваҡыт эсендә булып үткән тарихи ваҡиғалар фонында алып барылыуын иҫкә алғанда, әҫәрҙе күп темалы, тулы ҡанлы ысын социаль романға әйләндереү мөмкинлеге ап-асыҡ күренеп тора. Икенсенән, ошоға бәйле, Ырғыҙ буйы башҡорт крәҫтиәндәренең тормошон, уларҙың азатлыҡҡа ынтылыуҙарын, үҙҙәрен генә айырып һүрәтләү менән сикләнмәй, ысынбарлыҡта булғанса, башҡорт ярлыларының көрәшенә тирә-яҡта йәшәгән башҡа халыҡтарҙың, айырыуса Самар ҡала пролетариатының революцион хәрәкәте йоғонто яһауын да күрһәтеү бөтә яҡтан да уңышлы булыр ине” (Ғ. Әмири. Аҡ елкән. 112 — 113-сө биттәр).

Һәҙиә Дәүләтшина, уйланып йөрөй торғас, былар менән тулыһынса килешә һәм, бөтә көсөн һалып, әҫәрҙе ысын роман итеү йәһәтенән тырышып эшләй башлай, һөҙөмтәлә хәҙер инде бөтәбеҙгә яҡшы таныш (дөрөҫ, бер аҙ схематизмдан да арынмаған) тулы ҡанлы “Ырғыҙ” романын өлгөртә. Шуныһы ла ифрат ҡыҙыҡлы: Ғәйнан Әмири тәҡдимдәренән һуң шулар буйынса тулыландырылған “Ырғыҙ”ҙың сюжет һөлдәһе, бер үк ҡалыпҡа һалынғандай, Ғ. Әмириҙең күпкә элегерәк һәм ул «Ырғыҙ» ҡулъяҙмаһы менән таныш түгел осоронда уҡ (ул уны 1951 йылда уҡый) — 1947 йылда яҙылған “Бәхет тауы (Гөлбикә әбей һөйләгән легенда)”

---

[26] Әҫәрҙең был тәүге варианты ысынлап та шундай сикләнгәнлеккә эйә.

әҫәренекенә ғәжәйеб тап килеп тора: Әмириҙең символик “Өмөт үре” — романдағы коммунистар партияһы ул, “Дуҫтар” — романдағы урыҫ халҡы, “Бөркөт халыҡ” — романдағы башҡорт халҡы, “ике башлы аждаһа” — романдағы батша самодержавиеһы һәм уға ҡаршы баяғы халыҡтарҙың партия етәкселегендәге берҙәм көрәше... Оҡшашлыҡтың сере генә мәғлүм түгел: Һәҙиә Дәүләтшина хатта үҙе лә абайламай ҡулланғанмы был уның “Ырғыҙ”ына тиклем үк булған ҡыҙыҡлы үрнәкте, әллә легенда авторының ихлас күңелле кәңәше, йомартлығы менәнме?.. Моғайын, хаҡлыҡ һуңғыһындалыр. Әммә бөйөк әҙибә Ғәйнан Әмириҙең, Өфө, Ырымбур губерналарында булып үткән ваҡиғаларҙы ла романда бер юлы иңләргә, тигәнен ҡабул ҡылмай, “мин был өлкәләрҙә йәшәүсе башҡорттар тормошон кәүҙәләндереүҙе бурыс итеп ҡуйманым, бары Куйбышев өлкәһендә — Ырғыҙ буйҙарында йәшәүсе бик аҙ һанлы башҡорттар хаҡында ғына яҙырға теләнем”, ти (бик дөрөҫ: тамсы һыуҙа ла бөтә диңгеҙҙе сағылдырып була бит!). “Күрәһегеҙ, Һәҙиә апа, мин артығыраҡ мауығып киткәнмендер, — тинем мин, тип хәтерләй Ғ. Әмири. — Шулай ҙа Ырғыҙ буйы башҡорттары Өфө, Ырымбур яғы башҡорттары менән бөтөнләй аралашмай йәшәмәгәндәрҙер бит?” — “Юҡ, әлбиттә. Әммә, минеңсә, был аралашыу үтә тығыҙ булмаған”, — тип килешә биреп тә ҡуя автор”...

Ошо урында йәнә лә ҡыҙыҡлы фактҡа төбәләйек: Һәҙиә Дәүләтшина, “үтә тығыҙ булмаған был аралашыу”ҙы шулай ҙа күрһәтеү кәрәклеген төшөнөп, шул уҡ Ғәйнан Әмириҙең 1939 йылда яҙылған “Гөлбикә” хикәйәһенең “ойотҡо”һон (моғайын, авторҙың фатихаһы менәндер) киң ҡуллана, сөнки хикәйәләге дала яҡтан Уралға күсеп килгән колоритлы Гөлбикә әбей образы — романдағы, киреһенсә, Уралдан дала яҡҡа күсеп ҡайтҡан “Урал әбейе” Шәһиҙәнең ҡойоп ҡуйған һыны ул. Хатта ваҡлыҡтарынаса тап килә: икеһе лә ун ике йәшлек кенә ҡыҙ саҡтарында тыуған ерҙәренән ситкә сығып китә, икеһе лә күргәҙмәле тере тарих һәм йырсы булып үҫә. “Гөлбикә әбей әле лә иҫән. *Ҙур легендаға оҡшаған уның ғүмере”* (Ғ.Ә.). “Урал әбейе” лә шулай уҡ “әллә ҡайҙа бер кәштәлә саң баҫып ятҡан еренән табып алып уҡылған *бер иҫке тарих һымаҡ йәшәй”* (Һ.Д.). “Бәхет тауы”ндағы символик “Аждаһа»ға ҡаршы алышыусы егет — “Ырғыҙ”ҙағы “Урал әбейе”нең батша самодержавиеһына ҡаршы көрәшсе улы Аҫҡар ул...

Бара-тора Ғ. Әмириҙең “Гөлбикә” хикәйәһенең икенсе бүлегендәге Гөлбикә образы йәнә “Ырғыҙ”ҙағы ҡойоп ҡуйған Гөлйөҙөмгә әйләнә (бөтә көнкүреш-ваҡиғалары менән): Гөлбикәне — бай улы Байымбәткә, ә Гөлйөҙөмдө Моратшабай улы Сәйетғужаға көсләп кейәүгә бирергә йыйыналар. Байымбәттең “ҡартлығы арҡаһында аҡылына ла еңеллек килә башлаған” булһа, Сәйетғужа ла шулай уҡ “кылый күҙле тинтәк”, тилемиле... Байымбәт Гөлбикәне дүртенсе ҡатынлыҡҡа алһа, “буласаҡ ир Сәйетғужаның әле Гөлйөҙөмдөң өҫтөнән тағы өс ҡатын алырға иректе икәне тураһында һөйләйҙәр ине”...

Бына ҡалым хаҡында килешәләр: “ун биш йылҡы, утыҙ баш ҡуйға күнербеҙ. Туй килем-китемдәре өсөн йөҙ һум аҡса ла өҫтәрһегеҙ” (Ғ.Ә.).

“Бер һарыҡ, йөҙ ҡырҡ һум мәһәр, туйға бер тыу бейә, ҡалымына ла бер һимеҙ йылҡы малы, ҡайныма бер сапан, ҡәйнемә инә туны, һиңә бер ҡат яҡшы кейем” (Һ.Д.). Әмири Гөлбикәһе, ҡыҙ сафлығын һаҡлаған килеш, ирен сәнсеп ҡаса. Дәүләтшина Гөлйөҙөмө лә ҡыҙ сафлығын юймаçы борон никах мәжлесенән ҡаса... Роман авторы ана шулай Ырғыҙ менән Урал араһындағы талап ителгән бәйләнеште, тимәк, Ғ. Әмириҙән “үтескә алынған” “Урал әбейе” образы аша булдыра, был иһә əçәр ваҡиғалары даирәһен ысынлап та шаҡтай киңәйтә төшә. Шулай итеп, Ғәйнан Әмириҙең йомарт күңелле булышлығы арҡаһында «Ырғыҙ» романы һуңғы эшләнешендә шаҡтай киңәйеп, тәрәнәйеп һәм тулыланып, хәҙерге мәшһүрлегенә эйә була; уның күп кәртәләр үтеп донъяға сығыуында — ниһәйәт, уҡыусылар ҡулына килеп ирешеүендә лә Ғәйнан Әмириҙең игелеге һанап бөтөргөһөҙ ҙур һәм хәл иткес булды, быны хатта уның яһил дошмандары ла һис кире ҡаға алмай.

“Ырғыҙ” романы, үкенескә ҡаршы, авторы вафат булғандан һуң ғына донъяға сыға һәм бының өсөн Ғәйнан Әмириҙән дә нығыраҡ әрнеүсе лә, ғорурланыусы ла булмағандыр ҡәләмдәштәр араһында, бына шуның билдәһе:

Урал тауҙарының буйында
Оҙон-оҙон быуат буйына,
Буйһонмайса яуыз яҙмышҡа,
Ягалашҡан, ҡыйыу алышҡан
Башҡорт ҡыҙҙарын мин йырларға
Ҡәләм алды ниһәм ҡулдарға,
Һин, Һәҙиә, алга баçаһың,
Һиңә мәҙех килә яҙаһым.

Башҡорт ҡыҙы әсе сеңләгән,
Тик һис кемгә башын эймәгән.
Йөҙө пәрәнжә лә киймәгән.
Ир-егеттәй һыбай менгән ул,
Илен һаҡлап, яуга елгән ул,
Үлем күҙенә багып көлгән ул! —
О Һәҙиә, һинең һының был,
Замандашым, йәсе, йырым бул!

Башҡорт ҡыҙы ярһыу йөрәкле,
Һүрелмәçтәй ҡайнар теләкле;
Йырҙан таша уның күңеле,
Шоңҡар ҡыйыламы — бейеүе!
Мөхәббәте уның — ут кеүек,
Ә нәфрәте — сатнар боҙ кеүек.
Үҙе дәртле, үҙе бик түҙем. —
Һәҙиәкәй, был бит һин үҙең!
Ғәрәп һүҙе булган “Һәҙиә”

“Бүләк” тигән һүҙҙер беҙҙеңсә.
Башҡорт, теләп һиңә ҙур теләк,
Биреп һиңә ҡайнар ҡуш йөрәк,
Бүләк итте һине донъяға,
Даның сиктәр аша тарала.
Йөҙөк ҡашы булдың халкыңдың,
Күңелеңдә уның ялкыны.

Йәмле, шаулы Ырғыҙ буйҙарын,
Ырғыҙ буйҙарының ҡыҙҙарын,
Тас та арыҫландай улдарын,
Һәҙиә, һин данлап йырланың.
Ғашиҡ инең беҙҙең заманга,
Йырың тынмай һаман, һаман да.
Юҡ, Һәҙиә, һүҙең тутыҡмаҫ,
Илең һине ғүмер онотмаҫ.

Романға баш һүҙ яҙыуҙы ла уның иң шәп белгесенә әйләнгән Ғәйнан ағайға тапшыралар, ләкин, Сталин репрессиялары йылдарында “халыҡ дошманы” рәүешендә билдәһеҙлеккә һөрөлгән, шунан һуң да, күпме генә йөрәкһеп талпынһа ла, Яҙыусылар берлегенә ҡабат ағза итеп алынмаған, шул арҡала вафатынан һуң да ижад мираҫын йыйнап алып өйрәнеү, һаҡлау өсөн рәсми органдар тарафынан бер сара ла күрелмәгән тынсыу осраҡта тота һалып ундай етди темаға мәҡәлә яҙыу һис тә мөмкин булмаған эш ине, иң элек уның, әҙибәнең, ҡағыҙҙарына күҙ һалыу кәрәк ине. Был саҡта “Әҙәби Башҡортостан” журналы баш мөхәрриренең урынбаҫары булып эшләгән уҙаманыбыҙ мәрхүмәнең дөмә-һаңғырау әсәһе Гөлйәүһәр инәйгә килә һәм, ҡарсыҡ яҡшы танып белгән ғәрәп хәрефтәре менән кәрәкле һорауҙарҙы ҡағыҙ ярпыларына яҙа-яҙа һөйләшеп-ризалаштырып, киндер тоҡта карауат аҫтында туҙанланып аунап ятмыш ҡәҙерле ҡулъяҙмаларҙы фатирына күтәреп алып ҡайта. (Әйткәндәй, Ғәйнан ағай үҙенең тар ғына бүлмәһендә янына ингән һәр берәүгә, күңеле тулыуҙан ике күҙе йәшләнеп, Һ. Дәүләтшинаның ҡаҙ тешендәй ваҡ ҡына ғәрәп хәрефтәрен теҙеп яҙылған дәфтәрҙәрен алып күрһәтер ине, — хәҙер улар барыһы ла Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтының ғилми архивы фондында). Шуларға таянып, Һ. Дәүләтшинаның “Ырғыҙ” романының ике баҫмаһына, “Айбикә” китабына баш һүҙҙәр, “Аҡ елкән”гә “Башҡорт гүзәле” тигән гүзәл иҫтәлеген яҙа, тап ошо тәүгел материалдар унан һуңғы башҡаларға ла әлегәсә булһа улар бөйөк әҙибә хаҡында яҙғандарында яҡшы нигеҙ булып тора (береһе лә Ғәйнан Әмириҙән уҙып яңы һүҙ әйтә алғаны юҡ). Архивта иһә Һ. Дәүләтшина ҡағыҙҙарының тулы исемлеге һәм уларҙы Ғәйнан Әмириҙән ***тулыһынса ҡабул ҡылып алыу*** тураһында рәсми комиссия ағзалары, шул иҫәптән Гөлйәүһәр инәй үҙе лә, ҡул ҡуйған акт, өҫтәүенә, яҙыусы Ғ. Әмири тарафынан Һ. Дәүләтшина материалдарының ***тулыһынса тапшырылыуы*** тураһында әҙибәнең вариҫы (мираҫсыһы) булған шул уҡ Ильясова

Гөлйәүһәр инәйҙең үҙ ҡулынан яҙып биргәне лә бар. Тимәк, бөйөк әҙибәнең архивын килер быуындар өсөн һаҡлап алып ҡалыуҙа ла Ғәйнан ағай Әмириҙең хеҙмәте ҙур, әммә бының өсөн рәхмәт урынына ҡара яла яғыусылар ҙа табылды — “ит изгелек — көт яуызлыҡ” тигәндәре ошолор...

7

Тәүҙә шиғырҙар яҙған һәм тора-бара очерк, публицистика, хикәйә, драматургия толпарҙарын уңышлы эйәрләгән Ғәйнан Әмири утыҙынсы йылдар аҙаҡтарынан уҡ әҙәбиәттең тар жанр ҡыҫаларына һыйыша алмай башлағайны һәм, бәлки, үҙе лә абайламаҫтан, “Гөлбикә” һәм һуғыштан һуңғы “Бәхет тауы”, “Бер өйҙөң кешеләре”, “Ҙур баҡса”, «Ғәскәровтар ғаиләһе” кеүек гүзәл сәсмә әҫәрҙәренә тулы ҡанлы повесть йәки роман булырҙай киң ҡоласлы материалдарын һалғайны. Ә илленсе йылдарҙа был бәрәкәтле рухи мая бойомға аша башлай һәм әҙәби факт булараҡ рәсми һанға һуғыла, сөнки ВКП(б)-ның Башҡортостан өлкә комитеты әҙәбиәт һәм сәнғәт секторы мөдире Рәжәп Хәйруллин иптәш 1950 йылда яҙыусыларҙың һуңғы ике йыл дауамындағы эше тураһында ВКП(б) Үҙәк Комитеты вәкиле Новиковҡа биргән хисапнамәлә: “Ғ. Әмири совет кешеләренең Бөйөк Ватан һуғышы фронттарында һәм тылда күрһәткән ҡаһарманлыҡтары тураһындағы “Ватандаштар” повесе өҫтөндә эшләй” тип әйтелә. Шуныһы ҡыҙыҡ: Башҡортостан Яҙыусылар берлеге рәйесе Мостай Кәрим 1954 йылдың 26 июнендә КПСС өлкә комитеты сәркәтибе Саяповҡа яҙған белешмәһендә Ғәли Ибраһимов “Ватандаштар” тигән романын тамамлай, тип хәбәр итә. Күренеүенсә, ике ҡәләмдәш, үҙҙәре лә белмәйенсәлер, моғайын, әҫәрҙәренә бер үк исем алғандар... Һуңынан был әкәмәт хәл уларға мәғлүм булғандыр, сөнки ул исемдән икеһе тиң ваз кисеп, Ғ. Ибраһимов әҫәре 1956 йылда “Бер полк кешеләре” тип нәшер ителә, ә Ғ. Әмириҙеке иһә 1960 йылда “Әҙәби Башҡортостан” журналында бөтәбеҙгә мәғлүм “Мораҙым” булып сыға. Һ. Дәүләтшинаның шунан өс йыл элек кенә дан ҡаҙанған “Ырғыҙ” романынан һуң ошондай уҡ тулы ҡанлы яңы әҫәрҙәргә сарсап йәшәүсе әҙәбиәт һөйөүселәр араһында “Мораҙым” шундайын да ныҡ күтәреп алынып, яратып уҡыла ки, редакцияларға өҙлөкһөҙ хаттар яуа, уҡыусылар конференцияларында телдән төшөрмәй маҡтала (ҡарағыҙ: “Мораҙым” повесе хаҡында китап уҡыусылар фекере. “Ағиҙел”, 1961/3). Әммә ҡыуаныс менән көйөнөс йәнәшә йөрөй икән: авторҙың ҙур уңышына билдәле сәбәптәр арҡаһында “эстәре көтөрҙәгән” ҡайһы бер ҡәләмдәштәре (ни хәл итәһең, ундайҙар ҙа булып тора — улар ҙа бәндәләр бит!) быны күпһенеп, шик аҫтына алып: “Эт һейгән арала яҙҙы — бының былай булыуы мөмкин түгел!” (үҙенең романы юғары баһаланмауҙан рәнйеп йөрөгән әҙип С.А.), йәки: “Үҙенеке түгелдер ул...” (повесе кире ҡағылған әҙибә З.Б.) тип һөйләнеп йөрөнөләр, ә был уңышҡа авторҙың бөтә ижади ғүмере буйына тап шундай уҡ темаларға һәм художестволы кимәлдә яҙылған сәсмә әҫәрҙәре аша бик

тәбиғи килеүен, повесте яҙа башлауына ла инде аҙ түгел — теүәл ун йыл уҙыуын уйлап та торманылар.

Тема һәм сюжет йәһәтенән ҡарағанда, бәлки, шикләнеүҙәргә тамсы ғына сәбәп тә барҙыр бында: бер үк темаға һәм сюжетҡә төрлө авторҙарҙың төрлөсә әҫәр яҙыуы донъя әҙәбиәтендә таралған тәбиғи хәл. Бигерәк тә иң яратҡан ҡәләмдәшеңдең иң яҡшы әҫәре күңелеңдә ярылып ятып ҡала ла, үҙең дә абайламаҫтан, теге йәки был формала һинең дә ижадыңда ҡабатлана (һис юғында өҫтәрәк күрһәтелгән Һәҙиә Дәүләтшина миҫалын хәтерләйек). Йән дуҫы Ғәлимов Сәләм донъянан киткәндән һуң Ғәйнан Әмириҙең: “Йөрәк итем, йәнем, дуҫым, Сәләм...” тип әрнеп өҙгөләнеүҙәрен, ғүмере буйына уның ялҡынлы ижадын, бигерәк тә атаҡлы “Шоңҡар” поэмаһын күңелендә һүрелтмәй һаҡлап йөрөтөүен беләбеҙ (уның хаҡындағы иҫтәлеген дә “Шоңҡар” тип исемләне, “ат өҫтөндә шоңҡарҙай осоусы халыҡ” тигән һүҙҙәрҙе йыш ҡулланды). Миндә һаҡланған бер ҡәҙерле ҡомартҡы ла тап ошоно дәлилләй — Ғ. Сәләмдең вафатына утыҙ бер йыл тулыры алдынан бағышлаулап тапшырылған ифрат һирәк фото ул: Ленинградтағы зиратта (ҡәбер ауыҙында) сәскәләргә күмелгән шағир табутын янлап беҙгә таныш булмағандар араһында мәрхүмдең ағаһы Ғ. Ғәлимов, дуҫтары Баязит Бикбай, Ҡадир Даян һәм Әмир Чаныш баҫып тора. Фотоның артында яҙыу:

Ғәлимов Сәләмде ерләү. Ленинград

“Йыһат ҡустым һәм дуҫтым, минең йәштәшем Сәләмдең ҡәбере юғалған. Ә, бәлки, һеҙ табырһығыҙ? Арттағы яҙыулы ике ташҡа иғтибар итегеҙ: бәлки, улар аумағандыр? Эҙләгеҙсе!..

Ғәйнан Әмири.

P.S. Ошондай ҡайғы йөкмәткәнем өсөн ғәфү ит. 32 йыл буйына күтәреп йөрөттөм мин уны — миңә лә ауыр булды.

Ғ.Ә. 20. III. 1970”.

Текстағы, тора-тороп, “һеҙ”гә күсеүенең мәғәнәһе шул: бер миңә генә түгел, ә миңә тиңдәш бөтәбеҙгә лә өндәшә шағир... Шунан һуңғы ғүмеремдә Ленинградҡа бара алмағанлыҡтан, был матәмле вазифаны егәрле һәм форсатлы бер егеткә — ул саҡтағы “Ленинсы” гәзитенең баш мөхәррире Марат Әбүзәровҡа үтенеп тапшырҙым; ул, фотоһүрәт

күсермәһен яһатып (гәзитендә лә баҫтыртып сығарҙы), Ленинградҡа бер барғанында эҙәрмәнләнеп ҡайтты, ләкин изге ҡәберҙе таба алманы...

Быныҡ менән мин, Ғ. Сәләмдең үҙе кеүек үк, "Шоңҡар" поэмаһы ла Ғ. Әмири күңеленә тәрән тамыр йәйеүен, атаҡлы повесен яҙғанда ла ныҡ тәьҫир итеүен баҫымсаҡларға теләйем. Сәләм үҙе "Шоңҡар"ының темаһын һәм аһәңен күпмелер дәрәжәлә Булат Ишемғоловтың "Ҡараҡлыҡ" поэмаһынан алғанлығын йәшермәгән; үҙ сиратында Ғ. Әмири "Мораҙым"ының темаһы һәм сюжеты ла Сәләмдекенә иш килә, хатта икеһе бер ҡалыптан, тип әйтерлек, әммә улар һәр ҡайһыһы бер үк теманы ике төрлө һәм үҙенсә балҡытҡан (ижадтағы былдай хәлдәрҙең тәбиғилеге тураһында Ғ. Әмириҙең А. Игебаевты яҡлап әйткән һүҙҙәрен хәтерләйек). Яңылыш юлдан барһаҡ, Ғ. Әмириҙең "Салауат аманаты»нан һуң яҙған З. Биишеваның "Салауат монологы»н да, йомшаҡ ҡына әйткәндә, Ғ. Әмириҙе ҡабатлау тип, М. Кәримдең "Беҙҙең өйҙөң йәме" повесен — З. Биишеваның "Гөльямал" шиғри повесенән (әйткәндәй, унда "Өйҙөң йәме" тигән бүлек тә бар!) алынған, тип баһалап булыр ине... Зирәк уҡыусы шуға ла иғтибар итә: "Мораҙым" повесенең сюжет-йөкмәткеһендәге бөтә аһәңен, ваҡиғаларының нигеҙен төньяҡ Башҡортостанда тыуып үҫкән Ғ. Әмириҙең 1939 йылдың йәмле йәйендә мөһәбәт-сал Урал тауҙарына ғилми сәйәхәтендә тәрән хисләнеп кисерелгән, "Атлы халыҡ" әҫәрендә маһир тасуирланған онотолмаҫ сағыу тәьҫораттары тәшкил итә.

"Хөкүмәт беҙҙе Башҡортостандың көньяҡ районданрында йәшәүсе халыҡтарҙың тел һәм музыка ижадын яҙып алыу өсөн экспедицияға сығарҙы, — тип яҙҙы ул. — Ҡунаҡсыл кешеләр беҙҙе һәр ауылда киң күңел менән ҡаршы алалар һәм эйәрле аттар биреп оҙаталар...

Урал.

Тау шишмәһе кеүек саф, шыңғырауыҡлы йырҙарҙа, туңған йөрәктәрҙе лә йылытырлыҡ көйҙәрҙә, меңәр йыл буйы халыҡтың иң ҙур васыяты булып, юғалмай, һөйөлөп һөйләнгән легендаларҙа маҡталған Урал!

Һәр бер һүҙе — мең Ҡояш йылыһы кеүек ҡайнар, океан һыуҙары кеүек бай, бер йылмайыуы — миллион геройға дәрт, илһам, ҡанат биргән бөйөк Сталин тарафынан маҡталған бай, матур, ғорур Урал! (Бөгөнгө уҡыусы иҫтә тоторға тейеш: ул йылдарҙа Уралды һәм Урал балаһы башҡортто данлау — милләтселек сире булып һанала һәм киҫкен хөкөм ҡылына, быны фәҡәт "бөйөк Сталин"ды ҡушып маҡтау аша ғына атҡарып була ине. — *Й.С.*).

Ни генә юҡ һуң беҙҙең Уралда!

Бына шул Урал, — уның, ишелеп төшһәләр, йылғаларҙың ағышын кирегә борорлоҡ ҙур, ҡыҙыл, йәшел, һары, зәңгәр, ал төҫтәге, күп мең йылдар йәшәгән мөһәбәт ҡаялары, шаулауҙары күк күкрәүен йоткан ҡалын урмандар менән ҡапланған, түбәләре болоттарҙы шәл итеп ябынған тауҙары, йырып сыға алмаҫлыҡ үләндәр, донъяның бөтә төр хуш еҫле майҙарын килтереп һипкән кеүек хуш еҫле сәскәләр, ашап туя алмаҫлыҡ

татлы еләктәр менән ҡапланған, диңгеҙ кеүек киң болондары, иң татлы шәрбәттән дә татлыраҡ, иң саф хрусталдән дә сафыраҡ һыулы йылғалары менән беҙҙең күҙ алдыбыҙҙа мәңге онотолмаçлыҡ картина булып баçты"...

Урал тәбиғәтенең ошо һәм 1947 йылда яҙылған "Ҡояшлы йыр" хикәйәһендәге тап ошондай уҡ тасуирнамәһе тулы килеш "Мораҙым»ға барып кергән; икеһендәге лә *"бик боронғо крепостәрҙең харабаларына оҡшап ултырған ҡаялар"* ҙа шул көйөнсә күсерелгән. "Мораҙым"дың 18-се битендә башҡорт халҡы тураһындағы: *"Атҡа менһә, ул ҡош булып осҡан,* ат өçтөндә сабып барышлай, һауала осҡан ҡарсығаны атып төшөргән", — тигән, йәки 154-се биттәге "Башҡорттар, ат менеп, шоңҡар булып осҡандар", кеүек һоҡланыуын да шул уҡ 1939 йылғы "Атлы халыҡ"та күрәбеҙ: "Эйе, башҡорт халҡы атты һөйә, данлыҡлы толпарҙар үçтерә белә һәм шул *толпарҙар өçтөндә ыласын ҡоштай оса белә".*

Авторҙың шундағы һәм 1947 йылда яҙылған "Йыр" хикәйәһендәге башҡорт халыҡ йырҙарына сикһеҙ һоҡланыуы ла тап шул көйөнсә, тип әйтерлек, "Мораҙым"дың 69-сы битендә һ.б. урындарҙа ҡабатлана. Йәғни ҙә нәҡ бына ошо, үҙенең элекке хикәйәләрендә һәм очерктарында йырланған иç киткес хозур тәбиғәт ҡосағында, батыр кешеләр араһында тыуып үçә, йәшәй ҙә инде "Мораҙым"дың төп геройы Мораҙым! 1947 йылғы "Бәхет тауы" хикәйәһендәге "бөркөт халыҡ"тан алынып, уның тыуған ауылы ла "Бөркөт", ә халҡы иһә "бөркөтләләр[27]" тип исемләнә бит.

Автор Уралға сәйәхәтендә тыңлаған һәм яҙып алған легендалар араһында, баяғыса, ҡоштай осоусы толпарҙар, уларҙы урлаусы атаҡлы ат ҡараҡтары тураһындағылары ла байтаҡ ине, әлбиттә. Яҙыусы үҙе Мораҙым һәм уның "остаз"ы — һөрһөгән ат ҡарағы Иркәбай образдарының тере прототиптарын тап шунда, Уралға сәйәхәтендә, осратыуын, ат урлауҙың үтә ескә серҙәрен иһә үҙенең тап шул яҡтарҙа тыуып үçкән дуçы шағир Батыр Вәлидтән ишетеп белеүен һәм файҙаланыуын (Аҡ елкән. 256 — 257-се биттәр) кинәнеп һөйләй торғайны. Ғәйнан Әмири хикәйәләрендәге ("Беренсе һикереү", "Бер өйҙөң кешеләре", "Һуңғы таж япрағы") егеттәре гел "һары сәсле, зәңгәр күҙле", күбеһенсә урыç милләтле ҡыҙҙарға ғашиҡ булһалар, Мораҙымдың һөйгәне Лидия Расцветаева ла шундай уҡ. Хатта ваҡ ҡына деталдәр ҙә уның әүәлге әçәрҙәренән килә: "Ҙур баҡса"лағы (1947), ҙур баҡса үçтереп тә, варенье ҡайната белмәү — "Мораҙым"дың 70-се битендә ҡабатлана, ә «ғәскәровтар ғаиләһе»ндәге (1956) "аҡ самауыр сәйенән" (араҡы) ауыҙ итеү — "Мораҙым"дың 157-се битендә урын ала...

Былар ҙан тыш, повескә авторҙың фольклорсы булараҡ индергән өлөштәре лә байтаҡ: бөрйән риүәйәттәре (30-сы бит), башҡорт халыҡ йырҙары тураһында уйланыу (69, 127-се биттәр); шулай уҡ автор-публицист сәхифәләре: әсәлек миссияһы, изге әсәләр тураһында уйланыуҙар (214 — 216-сы биттәр), башҡорт атлыларының Рәсәй тарихындағы яу батырлыҡтары (153 — 154-се биттәр) һ.б.

---

[27] Тап Ғ. Әмириҙең Ғәйнә һөйләшенсә. Ә көньяҡ һөйләштә ул "бөркөттәр" булыр ине.

Тап "Мораҙым" повесе яҙылыу осорондағы автор үҙе эсендә ҡайнап йәшәгән билдәле факттар, замана үҙе тыуҙырған яңы һүҙҙәр (неологизмдар) һ.б. йыш осрай. Мәҫәлән, повесть геройы «Мораҙым»дыҡынан һуңғыраҡ осорға ҡараған, армияға алғанда "ҡараусыһы булмаған яңғыҙ әсәләрҙең улдарына льгота биреү тураһындағы закон" (80-се бит), "мильтон" (милиционер), "еүеш эш" (үлтереү), "бейеүселәр ансамбле", "хореографик композиция", "һауынсы", "капут" (немецса), "кәкүк" (1939 йыл фин һуғышындағы "кукушка" — ағас башына ҡунаҡлаған снайпер)... Мәшһүр хореограф Фәйзи Ғәскәровтың шанлы бейеү ансамбленең һәм ул сәхнәгә ҡуйған бейеүҙәрҙең повесть геройы Мораҙымға "йәбештерелеүен" дә күрәбеҙ: "бөркөттәр бейеүе" (81-се бит), "Ете ҡыҙ" бейеүен хәтерләткән "ете ҡыҙ менән ете егет" (83-сө бит); "бөркөттәрҙең осорға өйрәнеүе" тигән хореографик композиция ла (95-се бит) Ф. Ғәскәров либреттоһына ҡуйылған "Сыңрау торна" балетын һ.б. хәтерләтә. Һәм йәнә Ғ. Әмири, ҡайһы берҙә урыҫса уйлап яҙыу шауҡымылыр инде, урыҫтың "орел" (ата бөркөт), "орлица" (инә бөркөт), "орленок" (балапан — бөркөт балаһы) тигән һүҙҙәрен күҙ уңында тотоп, буғай, "бөркөт" тип кенә әйтәһе урында, Мораҙымын ҡолаҡты ярғыс "ата бөркөт" рәүешендә бейетә (Һәҙиә Дәүләтшина һис тә былай эшләмәҫ ине)... Композитор Мәсәлим Вәлиевтың һуғыштан һуңғы заманала (Ғ. Әмириҙең "Мораҙым"ды яҙыу осоронда) киң билдәле булған "Умырзая" йырының тексын, сәсмәүерләндереп, повескә индереп ебәреү осрағы ла бар: "Умырзая ла барлыҡ гөлдәрҙән элек, ҡар ҡатламын ярып сығып, сәскә ата, ләкин үҙе яҙ Ҡояшының сыуаҡ һәм йомарт нурҙары аҫтында ҡаушап-юғалып ҡалғандай, уның йөҙөнә тура баға алмай, бәбәктәрен түбән эйә" (82-се бит). Шул йылдарҙа институттың фольклор бүлегендә Ғәйнан Әмири менән бергә эшләгән Нәҡи Исәнбәт тә хас үҙе көйө әҫәргә инеп киткән: "Бер ауылға барып сыҡһам, унда башына кейеҙ эшләпә, ялан аяғына сабата кейеп алған, ҡап-ҡара түңәрәк һаҡаллы, бик сибәр бер кешегә тап булдым; арҡаһына тоҡсай аҫҡан, ҡулына дәфтәр менән ҡәләм тотоп алған. Ҡойоп ҡуйған мосафир, йәки народник инде! Танышып, һөйләшеп киттек. Баҡһам, был татар яҙыусыһы Нәҡи Исәнбәт булып сыҡты. Ул икенсе йәй инде шулай, ауылдан ауылға йәйәү йөрөп, ҡарттарҙан һорашып, **<u>башҡорт</u>** (мин һыҙыҡ өҫтөнә алдым. — *Й.С.*) әкиәттәрен, йырҙарын, мәҡәлдәрен яҙып алыу, башҡорт халыҡ теле диалекттарын өйрәнеү менән шөғөлләнә икән... Хәтеремдә, яҙыусы үҙенең шаҡтай ҡабарынҡы тоҡсайына күрһәтте лә: "Беләһегеҙме, бында күпме байлыҡ ята? — тине. — **<u>башҡорт</u>** күңелендә быуаттар буйына йыйналған ынйы-мәрйендәр, алтын-көмөштәр улар!" ("Мораҙым", 185-се бит).

Әйткәндәй, бына шул "бер тоҡсай" (әсе телле Сәғит ағай Агиш уны "бер вагон" ти торғайны) байлыҡты сибәр татар ағай, күҙ ҙә йоммай, Ҡазан ҡаҙнаһына илтеп ауҙарҙы — татар фольклоры яһап томдар сығарҙы...

Ғәйнан Әмири бөтәһен ылғый тормоштан һоҫоуы хаҡында үҙе лә яҙғылаˊны, мәҫәлән, "Ҙур баҡса"һы геройының прототибы итеп —

ауылдаштарынан Нуримөхәммәт ағайҙы, “Мораҙым”дағы Ғәлимулла Дәүләтшин образының прототибы итеп Ғәлимулла ағай Долғаршинды алыуы, ә уның ҡыҙы Зөбәйҙә иһә повескә хатта исемен дә үҙгәртмәй кереп китеүе тураһында (Аҡ елкән. 365, 372-се биттәр). Адвокат Әмирхановты ла ул үҙ фамилияһы менән үк тормоштоң үҙенән һурған — һуғыштан һуңғы осорҙа был зыялы татар кешеһе беҙҙең районда ла прокурор булып эшләп киткәйне. Уға ҡалһа, Мораҙым һәм Лидия Расцветаева образдары, шулай уҡ уларға тығыҙ бәйле, повесте повесть иткән көсөргәнешле ваҡиғалар үҙҙәре үк шау тормоштан — ғүмеренең һуңғы йылдарында Өфөлә йәшәүсе халыҡ судьяһы Шацкая Валентина Антоновнаның эш тәжрибәһенән алынған. Уҡыусыларға киң билдәле “Йәлил” хикәйәһенең нисек яҙылыу тарихына туҡталып, автор былай тип хәтерләне: «Ғәҙәттә, дуҫтарыма хөрмәт йөҙөнән, мин әҫәрҙәремдәге ыңғай геройҙарҙы күңелемә яҡын кешеләрҙең исемдәре менән атаусанмын. Исемдәре генә түгел, йыш ҡына үҙҙәре лә ниндәйҙер күләмдә геройҙарымдың прототибы була. Был осраҡта ла шулай эшләнем — хикәйәмдең геройын йәшлек дуҫым Жәлил Кейекбаев хөрмәтенә уның исеме менән атағайным. Ул сағында минең дуҫым танылған, популяр кеше түгел — Мәскәүҙәге сит телдәр институтының студенты ғына; геройымдың фамилияһын да Кейекбаев тип алырға баҙнат иттем.

Ун һигеҙ йыл буйына минең геройым Йәлил Кейекбаев булып йөрөнө. Был ғүмер эсендә Жәлил Кейекбаев үҙе бик ҙур ғалим дәрәжәһенә күтәрелеү менән бергә, бик үҙенсәлекле яҙыусы ла булып китте. Мин китап уҡыусыларҙан хаттар ала башланым, улар: “Хикәйәлә тасуир ителгән ҡыйыу ҡыҙыл әрмис ысынлап та беҙҙең Жәлил Кейекбаевмы?” — тип һорайҙар. Мин уларҙың һәр береһенә, эштең ҡайһылай булғанлығын аңлатып, яуаптар яҙҙым. Тик хаттар килде лә килде. Аптырағас, мин ятраҡан геройымдың фамилияһын үҙгәртергә мәжбүр булдым, ә исемен шулай ҙа ҡалдырҙым, артыҡ күнеккәйнем инде уға, Йәлилдең исемен үҙгәртергә ҡулым барманы” (Аҡ елкән. 207-се бит). Бының дөрөҫлөгөн “Мораҙым”да ла күрәбеҙ: әле әйтелгәндәрҙән тыш, унда авторҙың замандаш һәм ҡәләмдәштәренең фамилияларын йөрөткән Юлтыев, Кулибаев, Кусимов, Дәүләтшина кеүектәр ҙә бар...

Билдәле булыуынса, теләгән бер яҙыусының һүҙ байлығының нигеҙендә уның тыуып үҫкән үҙ ауылының, ырыуының, төбәгенең һөйләше, мәҡәл һәм әйтемдәре “алтын фонд” тәшкил итә; әҙип йыш ҡына, теләйме-теләмәйме, әҫәрҙәрен яҙғанда беренсе сиратта, хатта үҙе лә һиҙмәҫтән, бала сағынан үҙләштерелгән шул байлыҡты шул көйөнсә ҡағыҙ битенә төшөрә лә ебәрә. Быны беҙ Һәҙиә Дәүләтшина текстарындағы Ырғыҙ буйы үҫәргән-бөрйән һөйләшенә генә хас айырым һүҙҙәр рәүешендә лә күрәбеҙ, һәм шулай уҡ башҡорт әҙәби телен гәрсә яҡшы итеп үҙләштергән Ғәйнан Әмири “Мораҙым”ында ла телдәре ярым татарлашҡан Ғәйнә башҡорттары һөйләшенең үҙенсәлекле “боҙоҡ” һүҙҙәре, мәҡәлдәре сифатында автор тексында ла, персонаждар телмәрендә лә һибелеп ятыуын шәйләйбеҙ. Бына шуға миҫалдар (тәүҙә — Ғ. Әмири һүҙе, һыҙыҡ аша икенсе урында — шул уҡ һүҙҙең әҙәби тел

үрнәге, йәйәләр эсендә шул уҡ һүҙҙең Һ. Дәүләтшинала осраған әйтелеше килтерелә):

дертләп — тертләп (тертләп); баçынҡы — баçалҡы; сибәрлеге (ҡатын-ҡыҙға ҡарата) — һылыулығы; соҡондолар — соҡсондолар (соҡсондолар); алты баçмалы тальян — алты телле тальян; конюх — ат ҡараусы (көтөүсе); бәртәкә — ? — (?); тоҙаҡлап (сабып барған атты) — ҡороҡлап (ҡороҡлап); үкәлде — һөйкәлде (һөйкәлде); әйбәт — һәйбәт; кипшек ҡар — ҡырпаҡ ҡар (ҡырпаҡ ҡар); икмәк силәге — ашлау (ҡоштабаҡ); саңғы аçты — саңғы табаны; итәгеңде -- сабыуыңды — итәк-салғыйыңды; мамыҡ шәл — дебет шәл; һыу ҡыҙы — һыуһылыу; ыҡтымат — ыҡсым; ҡорт иле — ҡорт күсе; нәләтләнгән — ләғнәтләнгән; имеҙлеге (ҡатын-ҡыҙ имсәгенең) — имсәк башы, бәбәге; ҡабилиәтле (Ғ. Әмириҙең ятраҡан һүҙе); йомшаҡ күңеллелек — миһырбанлылыҡ; үткен — үткер (үткер); мүкәйләп — имгәкләп (имгәкләп); еүеш тауыҡ — күшеккән тауыҡ (күшеккән тауыҡ); мунса төшөп — мунса инеп (мунса инеп); арт аяҡтарына үрә баçтылар (аттар) — ҡарғынылар; бүрене күпме генә ашатһаң да урманға ҡарай — бүре балаһын бүреккә һалһаң да урманға ҡарай; кикереге төшөр — кикереге шиңер; ҡойроғоңдо һабынларға — ҡойроғоңдо топтортмаçҡа; тәңкәһен һыуға төшөрөп ебәргән ҡыҙ шикелле (ир-атҡа ҡарата) — балтаһы һыуға батҡандай; "татарҙа бер һүҙ бар: тилене тиле дигән саен тигәнәк буе сикерә" (үҙҙәрендә йөрөгән мәҡәл); киçеп ҡаплаған кеүек — һуйған да ҡаплаған; үҙең баш, үҙең ҡуш — үҙең баш, үҙең түш (үҙең баш, үҙең түш)...

Күренеүенсә, "Мораҙым»ға Ғәйнан Әмириҙең фәҡәт үҙенең генә шуға тиклемге барлыҡ тормош, эш, ижад тәжрибәһе һәм тел үҙенсәлеге (уңышлыһы ла, уңышһыҙы ла) һалынған, уны башҡа авторҙарҙың (бигерәк тә Һ. Дәүләтшинаның!) әçәрҙәре менән бутау һис кенә лә мөмкин түгел. Уның текстарының һәр һөйләме, абзацы йырлап тора, әлбиттә, ләкин был һис тә бөйөк Һәҙиә Дәүләтшина йыры түгел, ә Ғәйнан Әмири йыры. Ябайлаштырып әйткәндә, әгәр Һәҙиә Дәүләтшинаныҡы йырсы Иншар Солтанбаев, йәки Абдулла Солтанов башҡарған оҙон көйҙәребеҙгә оҡшаһа, Ғәйнан Әмириҙеке иһә йырсы Ғүмәр Әбделмәнов башҡарған ҡыçҡараҡ көйҙәргә тартым, ләкин икеһе лә гүзәл һәм йөрәккә яғышлы... Шундай айырма күҙгә ташлана тороп та, баяғы әйткәнемдәй, "Мораҙым" авторының хатта һыуынып өлгөрмәгән ҡәбере өçтөнә нахаҡ бәлә өйөүселәр табылды, ҡайһы бер яһил һәм яуапһыҙҙар ҡыçырыҡта ҡыçыр ҡойон уйнатып, ялаларын ҡуйыртты ла ҡуйыртты. Мәрхүмдең бөтә тормош юлын, ижадын, намыçлылығын яҡшы белгән замандаштарына был ғиллә шомло борсоу һалды. Өçтә телгә алынған мәҡәләһендә оло шағирыбыҙ Яҡуп Ҡолмой, "Мораҙым" хаҡында уйланып, бөтә республика йәмәғәтселегенә ишеттереп әрнене: "Шуны ла әйтергә кәрәк, һуңғы осорҙа был әçәрҙең авторы хаҡында бик буталсыҡ уйҙырма йөрөй. Уҡыусылар араһында шундай шикле, асыҡланмаған һүҙҙәр таратыуҙы сикләргә ваҡыттыр инде".

Кемдәр улар, ни өсөн? — Был ауыр һорауға ошоғаса һәр төрлө имеш-мимештәрҙән тыш төплө яуап бирелмәгәнлектән, мәсьәләне

ышаныслы сисер өсөн, күптәнге түгелге тарихыбыҙға йәнә бер килке күҙ һалайыҡ, шул йылдарҙың тынсыу һауаһы менән һулыш алайыҡ.

ВКП(б) Үҙәк Комитетының бер-бер артлы 1945 йылдың 27 ғинуарында һәм 1946 йылдың 26 авгусында башҡорт яҙыусылары башына һелтәнгән баяғы тос күсәге урындағы партия өлкә комитеты тарафынан уғата һәлмәкләтелеп, әҙиптәребеҙҙең милләтселеген тамырынан ҡоротоу буйынса "изге көрәш"тең ни рәүешле барышын асыҡлау өсөн, ышаныслы коммунистарҙан махсус бригада төҙөлә һәм улар, темеҫкенеп йөрөп, Юғарыға ошондай яугир хисап бирә (ҡыҫҡартыбыраҡ алынды):

"ВКП(б) өлкә комитеты сәркәтибе С.А. Ваһапов иптәшкә — Башҡортостан совет Яҙыусылары берлегенең эше тураһында ВКП(б) өлкә комитеты бюроһының 1946 йыл 22 октябрь ҡарарын үтәү барышы тураһында хисапнамә.

...Шулай итеп, мәҫәлән, Р. Ниғмәти үҙенең "Большевик" поэмаһында байтаҡ ҙур, принципиаль сәйәси хаталарға юл ҡуйҙы. Иң ҙур хаталары большевиктар партияһының теорияһы һәм тарихы мәсьәләләрендә ебәрелгән. Унда коммунизм тураһында фәнгә ҡаршы концепция киңәйтеп үткәрелгән. М. Тажиҙың "Ер һулышы" поэмаһы идея яғынан да, художество йәһәтенән дә колхоз тормошон тупаҫ боҙоп күрһәтеүсе әшәке нәмә булып тора. Ҡ. Даяндың "Йәш бөркөт" поэмаһында ваҡыт тойғоһо юҡ, тик бер урында ғына колхоз хаҡында иҫкә алына...

Ҡайһы бер яҙыусылар, хатта 15 — 20 йыллыҡ ижади стаждары була тороп та, ошоға тиклем урыҫ телен үҙләштермәгәндәр (М. Буранғолов, С. Агишев, Ҡ. Даян һәм башҡалар)...

...Яҙыусыларҙың лайыҡһыҙ ҡылыҡтары буйынса ла байтаҡ миҫалдар килтереп була бында. Шулай, мәҫәлән, Башҡортостан совет Яҙыусылары берлегенең партия ойошмаһы сәркәтибе Ғ. Зөлҡәрнәйевтең үҙенең үк белдереүе буйынса, ул яҙыусы Кирәйевтең фатирында иҫенән яҙғансы эскән, уны кеше ҡатыны менән бер койкаға һалғандар һәм эш оло ғауға менән тамамланған... Яҙыусы Баязит Бикбай, етди киҫәтеүҙәрҙән һәм бер нисә тапҡыр һөйләшеүҙән һуң, шаҡтай ваҡыт аҙмы-күпме әҙәм рәтле тотҡайны үҙен, ләкин һуңғы ваҡытта йәнә ҡәбәхәтләнә башланы. Ошо көндәрҙә иҫерек килеш опера театрының художество етәксеһе Григорян иптәштең кабинетына ябырылған һәм уны иң тупаҫ һүҙҙәр менән битәрләгән, физик көс ҡулланыуға тиклем саҡ-саҡ барып етмәгән... Яҙыусылар араһында үҙенең йыш эскеселеге менән Чанышев иптәш айырылып тора. Мәскәүҙә булараҡ, тәнҡитселәр кәңәшмәһендә ул үҙен лайыҡһыҙ тотҡан. Уны ресторандан иҫерек хәлендә дәүләт хәүефһеҙлеге майоры алып киткән. Чанышев иртәгәһенә генә ҡайтҡан, ә уның Лоҡманов иптәштә ҡалған партбилеты икенсе көндә генә ҡайтарылған.

Зарарлы кәйефтәрҙең моронлау осраҡтары ла булды йыш ҡына, мәҫәлән: Рәшит Ниғмәти, Кейекбай һәм Буранғолов иптәштәрҙең

башҡорттар һәм татарҙар араһында ҡаршылыҡ тыуҙырғыс зарарлы һөйләшеүҙәре. Әммә шулай ҙа совет Яҙыусылары берлегенең партия ойошмаһы был факттарға мөнәсәбәтен белдермәне.

...Ә инде З. Биишева кеүек ҡайһы бер иптәштәр, урта белемле булараҡ, йәнәһе "беҙ ошоғаса ошолай йәшәнек, артабан да ошо белемебеҙ менән йәшәрбеҙ", тип белдерәләр.

Башҡортостан совет Яҙыусылары берлегенең органы "Үктәбер" (яуаплы мөхәррире Зөлҡәрнәйев иптәш) хәҙерге тормоштан артта ҡала, партиябыҙ тарафынан бөгөн әҙәби-художестволы журналдарға ҡуйылған талаптарға яуап бирмәй... М. Тажиҙың "Ер һулышы" тигән идеяһыҙ, әшәке поэмаһын, Р. Ниғмәтиҙең тарихи ысынбарлыҡты һәм большевик образын боҙоп күрһәткән "Большевик" поэмаһын, Б. Вәлидовтың тупаç, артта ҡалған кешеләрҙең зауығына иçәпләнгән шиғырҙарын, Н. Иҙелбаевтың "Күк шинель" тигән китабын лайыҡһыҙ маҡтаусы Ғиләжев иптәш мәҡәләһен һәм шул Н. Иҙелбаевтың "Фронт хәтирәләре" маркаһы аçтында әүмәләгән халтураһын урынлаштырыу журналдың хатаһы булып тора...

...Шул уҡ ваҡытта яҙыусы Буранғолов үҙенең милләтселек йәһәтендәге иçке хаталарын ҡабатлауҙы дауам итә ("Тулҡынлы көндәр" пьесаһы)...

...Тәнҡитсе Ә. Чанышев, "Үктәбер" журналында (1947 й.) С. Ҡудаштың "Ленин һәм һуғышсы" поэмаһына ифрат юғары баһа бирә тороп та, 1948 йылдың мартында "Әҙәбиәттә патриотлыҡ темаһы" тигән мәҡәләһендә шул уҡ поэманы тар-мар ҡыла. Принцип та, логика ла юҡ бында. Ошо уҡ тәнҡитсе, сама тойғоһон юғалтып, бер мәҡәләһендә шағир Мостай Кәримовты бөтә совет йәштәренең йырсыһы итеп иғланлай, ә икенсеһендә иһә уны милли архаизмда ғәйепләй. 1947 йылда яҙыусы Ғ. Ғүмәровтың әҙәбиәттә Ленин һәм Сталин образдарын һынландырыуҙағы ҡаҙанышын һыҙыҡ өçтөнә алған Чанышев башҡа мәҡәләләрендә, Ғ. Ғүмәров 28 йыллыҡ ижади эшендә совет кешеһен аҙ ғына булһа ла һынландырған әçәр тыуҙыра алманы, тип раçлауға тиклем барып етте...

Һөҙөмтә: Яҙыусылар берлеге идараһы рәйесе һәм сәркәтибе һуңғы ваҡытта, һаулыҡтарына бәйле, етәкселек итеүҙән янтайҙылар, ә партойошма сәркәтибе үҙенә йөкмәтелгән эшкә яуаплылыҡ тойғоһон юғалтты.

Бригада етәксеһе — партия өлкә комитетының мәҙәниәт секторы мөдире вазифаһын башҡарыусы **Р. Хәйруллин.**

Бригада ағзалары: **1. И. Мамлеев, 2. Ә. Харисов, 3. И. Гулин, 4. В. Нафиҡов".**

Партия өлкә комитеты үҙенең был бригадаһын юҡҡа ғына юлландырмаған икән: хисапнамә артынса уҡ Яҙыусылар берлеге етәкселеген үҙгәртеп ҡороу, етәкләнеүселәрҙе ҡалыпҡа ултыртыу башлана: С. Ҡудашты, Ғ. Зөлҡәрнәйевте "һаулыҡтары ҡаҡшау сәбәпле ирекле ялға" ебәреп, урындарына Ә. Харисовты — идара рәйесе, С. Агишты — "Әҙәби Башҡортостан" (элекке "Үктәбер") журналының

яуаплы мөхәррире итеп, ә Ғ. Әмириҙе шул яуаплы мөхәррир урынбаҫары һәм партбюро сәркәтибе (ә урынбаҫары — Ә. Бикчәнтәйев) итеп тәғәйенләйҙәр; тәртиптәре бушаҡланған әҙиптәр ҡорон, тоғро юлдан яҙлыҡтыртмай, ҡаты ауыҙлыҡлап тотор өсөн, кисекмәйенсә йыйылыштар, ултырыштар үткәрә башларға бойорола. Үҙен арыу ауыҙлыҡсы итеп таныҡҡан Р. Хәйруллин иптәш иһә вазифаһында үрләтелеп, партия өлкә комитетының әҙәбиәт һәм сәнғәт секторы мөдире булып ала.

Инде ошо шаҡтай етди һөҙөмтәләргә килтергән баяғы текстка — бригада хисапнамәһенә иғтибар йүнәлтәйек. Шунан күренеүенсә, атаҡлы "милләтсе-контрреволюционер" М. Буранғоловҡа эйәртеп, заман ихтыяжы талап иткән яңы "башҡорт милләтселәре"н эҙләп табып әтмәләү эше ҡыҙа — Юғарынан шулай ҡушҡастары ни, үтәмәй ҡайҙа барһындар, быларҙың да башы ике түгел бит. Ләкин большевистик тәнҡит күҫәгенең гелән генә башҡорт милләтле әҙиптәр башына ғына яҫҡаныуы, татар милләтлеләрҙең гелән ситтәрәк тороп ҡалыуы ул саҡтағы ҡәләмдәштәрҙе үҙенең шул сәйерлеге менән ифрат хәүефләндереп, шаҡтай шомға ла һала. Юғарынан ҡубынғанға икеләнмәй ышаныусан ихласйәндәр был тәңгәлдә абруйлы бригада ағзаларының ауыр хәлгә ҡалғанлығын әллә аңлап еткермәйҙәр, әллә төптө төшөнөргә теләмәйҙәр; сөнки уйлап ҡына ҡарағыҙ: ылғый татар милләтле, йәки урыҫ милләтлеләрҙән "башҡорт милләтселәре" яһап буламы?.. Булмай, әлбиттә, быны тарих күрһәтә! "Башҡорт милләтселәре"н ҡырсыған һәм һепереп түккән 1937 йылғы репрессияларға ла, бер Имай Насириҙан башҡа, башҡорт милләтле әҙиптәр генә тарыған бит... Шул яуаплы мәсьәләне шул көйөнсә ҡабул ҡылмай, мөйөш-һәйештә сөңкөлдәшеүселәр (мәҫәлән, "хисапнамә"лә телгә алынмыш "Р. Ниғмәти, Кейекбай һәм Буранғолов иптәштәр") араһында үҙенең һөйөклө партияһының рәсми мөнбәренә тәүәккәл сығып, тура ярып әйтерлек коммунист-әҙибә була икән алай ҙа — Зәйнәб апай Абдулла ҡыҙы Биишева. Шул хаҡтағы архив шаһаҙәтнамәләрен, алға һөргән теманы асыуға нык бәйле булғанлыҡтан, өсөһөн тиң тулы килеш күсереүҙе тейешле һананым. Бына беренсеһе —партия өлкә комитеты вәкиле булып яҙыусылар йыйылышында ҡатнашҡан Р. Хәйруллиндың Юғарыға йүнәлтелмеш шикәйәте:

"ВКП(б) өлкә комитеты сәркәтибе С.А. Ваһапов иптәшкә хисапнамә — Башҡортостан совет Яҙыусылары берлеге партия ойошмаһы йыйылышында ВКП(б) ағзаһы, Башгосиздат балалар әҙәбиәте секторы мөхәррире З. Биишеваның милләтселекле сығышы һәм ВКП(б) ағзаһы Ә. Чанышевтың партияһыҙлыҡлы сығышы тураһында.

Ошо йылдың 11 ноябрендә Башҡортостан совет Яҙыусылары берлеге партойошмаһы ВКП(б) өлкә комитеты бюроһының "Башҡортостан совет Яҙыусылары берлегенең эше тураһында" 1948 йылдың 2 ноябрь ҡарары буйынса фекер алышыу йыйылышы үткәрҙе. Ошо йыйылышта, ВКП(б) өлкә комитеты сәркәтибе Шафиҡов иптәштең ҡушыуы буйынса, мин баяғы ҡарарҙы уҡып ишеттерҙем, шунан һуң үҙемдең бюрола биргән

хисапнамәмде ҡабатланым. Хисапнамәлә Биишева фамилияһы үҙенең белемен күтәрергә теләмәүсе булараҡ телгә алынды.

Минең доклад артынан уҡ Биишева иптәш ошондай һорауҙар бирҙе:

1. Ни өсөн беҙҙә фәҡәт башҡорт яҙыусылар ғына хаталана, ә татар яҙыусылар түгел?

2. Ни өсөн һәр саҡ башҡорт яҙыусыларҙы ғына әрләйҙәр?

Бер килке яҙыусылар (М. Кәрим, Ә. Кирәйев, Министрҙар Советы вәкиле Ғәлиев иптәш һ.б.) башҡорттар һәм татарҙар араһында ошондай һорауҙар биреп ҡаршылыҡ дөрләтеүҙең түҙеп торғоһоҙ икәнлегенә күрһәттеләр һәм Биишева белдереүен зарарлы, асылында партияға ҡаршы, ВКП(б) өлкә комитеты ҡарарын ревизияларға маташыу рәүешендә хөкөм иттеләр. Ләкин Биишева үҙенең ялалы, милләтселекле сығышын дауамлау өсөн һүҙ алды. Ул былай тип белдерҙе:

“Кадрҙарҙы тәрбиәләү өсөн, Яҙыусылар берлеге етәкселеге үҙ урынының бейеклегендә булырға тейеш, әлеге осраҡта был С. Ҡудашҡа ҡағыла. Ул йәш яҙыусылар кадрҙарын тәрбиәләмәй. Әгәр ғаилә башлығы шәхси өлгө күрһәтә белмәһә, ғаиләлә эш бармай ул. Беҙҙә лә тап шулай. Юғары белемле түгел, ә урта белемле генә булыуым менән хурлайҙар мине. Мин урыҫтың бер-нисә әҫәрен тәржемәләнем. Урыҫ телен мин арыу беләм, үҙ әсә телемде лә насар белмәйем һәм насар яҙмайым, тип уйлайым. Халҡым мине баһалар[28]. Ошондай бейеклеккә күтәрелгән берҙән-бер ҡатын-ҡыҙ яҙыусы мин. Мин үҙемде оҫталыҡ яғынан Бикчәнтәйевтән дә түбән тип һанамайым. Талантлыларҙы тотанаҡламайҙар беҙҙә, һәр саҡ тәнҡитләйҙәр, ошолайтып бар таланттарҙы ла юғалтып бөтөрөүебеҙ мөмкин. Бына Ниғмәти — ул бит беҙҙә иң талантлы башҡорт шағиры[29], ә уны даими әрләйҙәр. Мин, әлбиттә, хисапнамәсегә бик тупаҫ һорау бирҙем. Тик мин әйтергә теләнем: шул тиклем дә аңра халыҡмы ни башҡорттар? Башҡорт шағирҙар ғына яһаймы ундай хаталарҙы? Ни өсөн башҡа шағирҙарҙың хаталары тураһында бер кем дә һәм бер ҡайҙа ла өндәшмәй? Беҙҙә хаталарҙы фәҡәт башҡорт яҙыусыларҙан ғына күреүсән бәндәләр бар...

(Йыйылыш рәйесе Әмиров иптәш репликаһы: “Тәғәйенерәк мөмкин түгелме? Кем ул быны шулай эшләй?”)

...Бына, мәҫәлән, Ғ. Әмиров, Ә. Бикчәнтәйев, Р. Хәйруллин, *башҡорттар* уҡырға теләмәй, улар насар әҫәр тыуҙыралар һәм башҡалар, тип, *башҡорттарға* ҡаршы кампания алып баралар”.

Шулай итеп, Биишева иптәш партйыйылыш трибунаһынан ВКП(б) өлкә комитеты вәкиле булараҡ миңә һәм Башҡортостан совет Яҙыусылары берлеге партойошмаһының беҙ күтәргән яңы етәкселеге Ғ. Әмиров һәм Ә. Бикчәнтәйевкә алдан уйланылған, бер нәмә менән дә нигеҙләнмәгән ялалы сығышы менән ябырылды. Партиялы түгел, ә партияға ҡаршы,

---

[28] Хаҡ әйткән: Зәйнәб Биишеваға “Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы» тигән хөрмәтле исем бирелде.

[29] Был баһаһы ла лайыҡлы: Рәшит Ниғмәтигә “Башҡортостандың халыҡ шағиры» тигән хөрмәтле исем бирелде.

милләтселекле ерлектән сығыш яһаны ул. Ҡайһы бер башҡорт яҙыусылары араһында урынлашҡан, үҙҙәренең хаталарының партияның һау тәнҡитенә дусар булыуын уларҙы башҡорт булғандары өсөн туҡмарға яҫҡаныу билдәһе итеп аңлатырға ынтылған ошо һау булмаған һәм бер-береңә ҡаршы ҡуйыусан кәйефтәрҙе түгелдерҙе ул уҙенән.

Ә Чанышев иптәш үҙенең сығышында түбәндәге фекерен белдерҙе:

...ВКП(б) өлкә комитеты ҡарарында һаналған бөтә бәләләрҙең — натурализмдың, примитивизмдың, схематизмдың һәм башҡаларҙың йөкмәткеһе булып Сәйфи Ҡудаш тора. Ул яҙыусылар араһындағы бөтә хөсөттәрҙең дә ойоштороусыһы. Яҙыусылар берлегенең рәйесе ул булғанда хөсөттәрҙән арыныу мөмкин түгел. Хисапнамәлә һәм Яҙыусылар берлегенең эшен тикшереү бригадаһы мәғлүмәттәрендә лә С. Ҡудаш хөсөтөнөң тәьҫире тойола. С. Ҡудаш өсөн яҙыусы хеҙмәте — дәүләт бурысы түгел, ә йән аҫырау сараһы булып тора. Йәшермәйем, бар ул миндә өйәнәк — эсәм мин, ләкин быны, моғайын, С. Ҡудаш һәм шуның ишеләрҙең ошағы буйынса ҡуйырталар.

Чанышев иптәш үҙенең партияға ҡаршы[30] сығышы менән йыйылышта баш-баштаҡлыҡ тыуҙырырға һәм ВКП(б) өлкә комитеты ҡарарының һәм докладтың әһәмиәтен һәм асылын йәнәһе Сәйфи Ҡудаш тыуҙырған хөсөткә һәм ғәйбәткә ҡайтарып ҡалдырырға маташты.

ВКП(б) өлкә комитетының әҙәбиәт һәм сәнғәт секторы мөдире **Р. Хәйруллин[31]".**

Алдараҡ килтерелгән, хәҙерге заман Яҙыусылар берлеге аппаратындағы дүрт хөсөтсө-етәксе тарафынан 1986 йылда яҙып атҡарылған шикәйәтнамә менән ҡайһындай ҙа ауаздаш!..

Ошоноң менән партаппарат маховигы өйөрөлтөлөп ебәрелә, уның ҡаты тәьҫирендә Яҙыусылар берлегенең партойошма етәкселеге лә (Ғ. Әмири, Ә. Бикчәнтәйев), теләйҙәрме-теләмәйҙәрме, рәсми яҙыуҙары менән ҡәтғи саралар күреп, "себен"де үҙ баштарынан осорорға мәжбүр була, сөнки баяғы 11 ноябрҙәге З. Биишева һәм Ә. Чаныш "партияға ҡаршы" сығыш яһаған дөйөм йыйылыштың ҡәтғи ҡарары уҡ шуны эшләргә бойора бит. Ул саҡтағы партбюро сәркәтибе Ғәйнан Әмири урынына әгәр үҙебеҙҙе ҡуйып ҡараһаҡ, мин үҙем дә ул заманда һәм ул осраҡта, партия тәртибенә теүәл буйһоноусы коммунист һәм, өҫтәүенә, шул йыйылышты үткәргән партойошма етәксеһе булараҡ, үҙ вазифамды шулай уҡ үтәүҙән янтая алмаҫ инем, сөнки дөйөм партйыйылыш ҡарарын һәм партия өлкә комитеты күрһәтмәләрен формаль яҡтан ғына булһа ла үтәмәү мөмкин түгел... Һәм бына үтәлеше:

"ВКП(б)-ның Өфө ҡалаһы Ленин район комитеты сәркәтибе Вәлиев иптәшкә — Һеҙҙә (Башгосиздат партойошмаһында)

[30] Ә. Чаныштың С. Ҡудашты тәнҡитләүе лә, З. Биишеваның Р. Ниғмәтиҙе яҡлауы ла берҙәй үк нарыҡта — партияға ҡаршы булып сыға, күрәһең...

[31] Датаһы ҡуйылмаған, ләкин йыйылыштың иртәгәһенә үк — 1948 йылдың 12 ноябрендә яҙылған булырға тейеш.

иҫәптә тороусы ВКП(б) ағзаһы Биишева Зәйнәб Абдулла ҡыҙының ҡылығы тураһында.

Башҡортостан совет яҙыусылары берлеге партойошмаһы ағзаларының дөйөм ябыҡ йыйылышы ошо йылдың 11 ноябрендә ҡарар сығарҙы:

"6. ВКП(б) агзаһы Биишева иптәштең Совет Башҡортостаны башҡорт яҙыусылары һәм татар яҙыусылары араһында ҡаршылыҡ тыуҙырыуга йүнәлтелгән партияга ҡаршы, асылында милләтселекле сыгышын тикшерергә. Партия ҡарарҙарын тикшергәндә Биишева иптәш икенсе тапҡыр инде милләтселекле сыгышына юл ҡуйыуын иҫәпкә алып, Биишеваның ҡылыгы тураһында ВКП(б)-ның ул иҫәптә торган Ленин район комитетына хәбәр итергә".

(Иғтибар итегеҙ: бөтә коммунист яҙыусылар ҡатнашҡан дөйөм партия йыйылышының ҡарары был һәм ул партия ойошмаһында мотлаҡ үтәлергә -- ойошма сәркәтибе Ғ. Әмири тарафынан партияның Ленин район комитетына хәбәр ителергә тейеш! – *Й.С.*)

Биишева иптәш ҡылығындағы етешһеҙлектәр түбәндәгеләрҙән хасил:

1. Биишева иптәш, әҙибә булараҡ, ошо йылдың 11 ноябрендә Башҡортостан совет Яҙыусылары берлегенең партия йыйылышында ҡатнашты, унда ВКП(б) өлкә комитеты бюроһының "Башҡортостан совет Яҙыусылары берлегенең эше тураһында" 1948 йыл 2 ноябрь ҡарары өйрәнелгәйне, ВКП(б) өлкә комитеты вәкиле Хәйруллин иптәш партия өлкә комитеты бюроһының ҡарары хаҡында информация биргәс, Биишева иптәш уға: "Ни өсөн фәҡәт башҡорт яҙыусылар ғына хаталана, ә татар яҙыусылар түгел? Шул мәсьәләне тикшереп ҡараманығыҙмы? Ни өсөн башҡорт яҙыусыларҙы ғына әрләйҙәр? Һеҙҙең хәбәр итеүегеҙ буйынса шулай килеп сыға", — тип һорау бирҙе.

Биишеваның башҡорт һәм татар яҙыусылар араһында ҡаршылыҡ тыуҙырыуға йүнәлтелгән һәм ВКП(б) өлкә комитеты бюроһы ҡарарын ревизияларға маташҡан был сығышын башҡа байтаҡ коммунистар үҙ сығыштарында хөкөм итеүҙәренә ҡарамаҫтан, ул үҙенең сығышында хатаһын таныманы. Ул үҙенең телмәрендә былай тине: "Мин, әлбиттә, бик тупаҫ һорау бирҙем. Тик мин шуны әйтергә теләнем: шул тиклем дә аңра халыҡмы икән ни башҡорттар, *башҡорт* шағирҙар ғына хаталанамы? Ни өсөн башҡа шағирҙарҙың хаталары тураһында бер кем дә һәм бер ҡайҙа ла өндәшмәй? Башҡорт яҙыусыларының ғына хаталарын күреүсән кешеләр бар беҙҙә".

2. Партия ҡарарҙарын тикшергәндә Биишева иптәштең былдай сығыштары тәүге түгел. Мәҫәлән, ошо йылдың 21 апрелендә өлкә партконференция һөҙөмтәләрен һәм ҡарарҙарын тикшергәндә, — уларҙа башҡорт зыялыларының бер өлөшөндә, бигерәк тә яҙыусылар араһында милләтселекле кәйефтәр барлығы күрһәтелгәйне, — Биишева иптәш ошондай телмәр менән сығыш яһаны: "Милләтселек ярлығын ҡайһы саҡта нахаҡтан йәбештерәләр. Теге йәки был кешеләрҙе күрәләтә юрый милләтселектә ғәйепләргә тырышыусы бәндәләр бармы икән әллә

арабыҙҙа? Ундай бәндәләргә отпор бирергә кәрәк”. Ул йыйылышта яҙыусылар Буранғоловтың һәм Бикбаевтың 1945 һәм 1946 йылдарҙа ВКП(б) Үҙәк Комитеты һәм 1946 йылдың 22 ноябрендә ВКП(б) өлкә комитеты бюроһы ҡарарҙарында күрһәтелгән милләтселекле хаталары тураһында бара ине һүҙ[32].

3. Хатта уның шундай сығышын хөкөм итеүсе партия йыйылышы ҡарарынан һуң да Биишева иптәш, үҙенең хаталарын танымау ғына түгел, ә уларҙы тәрәнәйтә генә. Мәҫәлән, ошо йылдың 24 ноябрендә ул, партбюро сәркәтибе булараҡ, минең янға инде. Партия йыйылышы ҡарары менән танышып, ошолай тип белдерҙе: “Башҡортостан совет Яҙыусылары берлеге етәкселегендә башҡорт яҙыусыларын тукмау сәйәсәте үткәреүсе татар милләтселәре (Сәйфи Ҡудаш, Ғ. Әмири) ултыра. Әгәр БАССР совет Яҙыусылары берлеге башында башҡорт ултырһа, ул саҡта башҡорт яҙыусыларына бөтөнләй башҡа мөнәсәбәт булыр ине”.

Шуны әйтергә тейешмен: Башҡортостан совет Яҙыусылары берлеге рәйесе С. Ҡудаш иптәш һәм партбюро сәркәтибе Ғ. Әмири икеһе лә башҡорт[33] һәм башҡорт телендә яҙалар. Ләкин Биишева уларҙы башҡорт тип һанамай, сөнки улар сығыштары менән Биишева тыуған райондан түгел, ә башҡа райондарҙан һәм уларҙың әсә теле лә нигеҙҙә татар теле ине.

Ошо уҡ әңгәмәлә Биишева иптәш, Бөйөк Ватан һуғышында татарҙар ҡатнашманы, ә тик башҡорттар ғына булды, тигән фекер ҙә әйтте. Ул ошолай тип белдерҙе: “Бына татар Ғөзәйеровтарҙы ғына алып ҡарағыҙ. Ғөзәйеровтарҙың өсөһө лә һуғыш ваҡытында бронь бирелә торған урындарға оялап алды. Һәм шулайтып береһе лә фронтта булманы”.

Биишева иптәш бер туған Ғөзәйеровтар хаҡында әйтә: бер Ғөзәйеров — һуғыш йылдарында ВКП(б) өлкә комитетының матбуғат секторы мөдире булып, икенсе Ғөзәйеров “Правда” гәзитенең Башҡортостан буйынса үҙ хәбәрсеһе булып эшләнеләр, ә өсөнсө Ғөзәйеров (ҡарты) әллә ҡасандан уҡ КОГИЗ директоры булып эшләй. Һәм улар, ВКП(б) өлкә комитетының һәм Үҙәк Комитетының номенклатур эшмәкәрҙәре булараҡ, һуғыш йылдарында үҙ урындарында ҡалдырылғандар. Әйткәндәй, Ғөзәйеровтарҙың өсөһө лә үпкә ауырыуы менән сирләй.

4. Биишева иптәш әле һаман, бөтә ерҙә һәм бөтә урында милли ҡапма-ҡаршылыҡ сәсергә тырыша. Шулай, мәҫәлән, Башгосиздат мөхәррире булараҡ уға башҡорт яҙыусыһы Н. Иҙелбаев (партияһыҙ) ошондай һорау менән мөрәжәғәт итә: ниңә уның әҫәрҙәре Яҙыусылар берлеге төҙөгән әҙәби альманахҡа керетелмәгән? Был һорауға Биишева

---

[32] “Һөрһөгән милләтсе” М. Буранғоловты һәм Б. Бикбайҙы эҫе мәлендә үк яҡлап рәсми сығыш яһаусы берҙән-бер ҡыйыуйән — Зәйнәб Биишева булған. Ләкин был партия сәйәсәтенә ҡаршы килә һәм шул ҡаршы килеүгә ҡаршы партия органдары, шул иҫәптән партбюро сәркәтибе Ғәйнан Әмири, ең һыҙғанып көрәшергә тейеш була. Ғәмәлдә Ғ. Әмири ҙә, З. Биишева ла, башҡа ҡәләмдәштәре лә тоталитар режимдың ҡотолғоһоҙ ҡорбандары инеләр.

[33] Бер аҙ фәстереү бар бында: Сәйфи Ҡудаш милләте буйынса татар.

иптәш — рәсми кеше — ошолай яуап бирә: "Башҡорт бит һин. Шуның өсөн керетмәгәндәрҙер, моғайын".

ВКП(б) өлкә комитеты ҡарары менән Ғ.К. Зөлҡәрнәйев иптәш Яҙыусылар берлеге партбюро сәркәтибе вазифаһынан бушатылғайны. Ошоноң буйынса Биишева, "Зөлҡәрнәйевте татарҙар яуыз ниәт менән ошо хәлгә төшөрҙө", — тигән версия тарата.

Биишева иптәштең ошондай зарарлы һөйләнеүҙәрен күп килтерергә була. Ундай һөйләнеүҙәр өсөн бөтөнләй нигеҙе юҡ уның. Башҡортостан совет Яҙыусылары берлеге хисабын тыңлап, ВКП(б) өлкә комитеты бюроһы Башҡортостан совет Яҙыусылары берлегенең сәйәси линияһын дөрөҫ тип тапты.

Партия йыйылышының ҡарары нигеҙендә Һеҙгә Биишева иптәштең ҡылығы хаҡында мәғлүм иттем.

Башҡортостан совет Яҙыусылары берлеге партбюро сәркәтибе Ғ. Әмири. 26.11 48 й."

Партия өлкә комитеты тарафынан бойоролған, партия йыйылышы протоколынан партбюро сәркәтибе мотлаҡ күсереп бирергә тейешле формаль сара был.

Документтың бөтә пункттарындағы ла З. Биишева "ҡылыҡтары" хаҡында яҙылғандары — хаҡ һүҙ икәнлеген ҡәтғи дөрөҫләргә тейешмен, сөнки Зәйнәб апай ундағы "хаталарын» барыбер таныманы һәм, нисек бар — шулай, ғүмеренең ахырынаса минең һымаҡтарға һөйләп йөрөнө...

Башҡорт әҙәбиәте тарихындағы был ысын-ысындан драматик ваҡиғаларҙың йылъяҙмаһын өсөнсө ҡағыҙ ослай:

"ВКП(б)-ның Башҡортостан өлкә комитеты сәркәтибе Ваһапов иптәшкә — ВКП(б) ағзаһы, әҙибә З.А. Биишеванан ғариза.

1948 йылдың 11 ноябрендә совет Яҙыусылары берлеге партия йыйылышында минең ипһеҙ сығышым булды, ул хаҡта мин Һеҙгә ҡабул ҡылыуығыҙ ваҡытында ентекле һөйләгәйнем һәм үҙ сығышымдың ипһеҙлеген танығайным.

Шул йыйылыштан һуң совет Яҙыусылары берлеге партойошмаһы минең өҫтән материал төҙөнө һәм ВКП(б)-ның мин хисапта торған Ленин район комитетына атҡарҙы.

Минең ҡылығымды артабан тикшереүҙе туҡтатыуығыҙҙы һорайым Һеҙҙән, сөнки был минең беренсе хатам һәм һуңғы хатам буласаҡ.

Большевистик матбуғат органдарында яуаплы вазифаларҙа мин егерме йылға яҡын эшләнем, оҙаҡ йылдар комсомолда торҙом, партия ағзаһы булып торам һәм ошоғаса бер ваҡытта ла бер ниндәй ҙә хатаға юл ҡуйманым, бер ниндәй ҙә киҫәтеү алманым. Һәр саҡта ла намыҫлы, тотанаҡлы, әүҙем эшмәкәр һаналдым. Ышандырам Һеҙҙе, Ваһапов иптәш, мин артабан да шундай уҡ булырмын. Сөнки был минең төп фиғелем. Ә Һеҙҙең аталарса хәстәрлекле кәңәштәрегеҙҙән һәм инандырыуҙарығыҙҙан һуң, мин уғата бер ваҡытта ла бындай ипһеҙлеккә юл ҡуймам һәм артабан

бөйөк совет Ватаныбыҙҙың файҙаһына тағы ла яҡшыраҡ, тағы ла емешлерәк эшләргә тырышасаҡмын.

Үтенеп: **З. Биишева.** 26.11.48".

Ҡағыҙ мөйөшөндә резолюция: "Шафиҡов иптәшкә. Ошоноң менән мәсьәлә сиселде тип иҫәпләргә. 26.11. — **Ваһапов".**

Шулай итеп, республикалағы "беренсе кеше" С.А. Ваһаповтың "күҙ йомоп ҡарауы" (йәки, баяғы иптәш һүҙҙәре менән әйткәндә, "аумаҡайлығы") арҡаһында ғына З. Биишева көтөлмәгән бәләнән — "һөрһөгән милләтсе" М. Буранғолов урынына иң кәмендә беренсе кандидат ителеүҙән ҡотолоп ҡалды, ләкин был уның йөрәгендә бөтәшмәҫлек ҡанлы яраға әйләнде.

Дөрөҫ, был драматик алыш, рәсми яҡтан ҡарағанда, Зәйнәб апай Биишева файҙаһына осланды. Ләкин ғорур һәм үҙ һүҙле әҙибә быны Юғары хакимиәт ҡаршыһында тубыҡландырылыуы, үҙе төптө юҡ һәм булмаған тип һанаған "хаталарын» бар тип таныу һәм ваз кисеү хаҡына яулай алды, шуның арҡаһында сикһеҙ тетрәнеп түбәнһенде, уны мөшкөл хәлгә төшөргән "дошман"дарына (башлыса Ғ. Әмиригә, М. Кәримгә) һүрелмәҫлек әсе нәфрәт тойғолары кисерҙе һәм ошо хис ахырғаса уны оҙата барҙы (Өфөгә күсеп килгәнемдән биреле апай менән ныҡ аралашыусы булараҡ, быныһын да яҡшы беләм); баяғы йыйылыштың етәксеһе Ғәйнан Әмири менән йыйылышта уны иң ҡаты тәнҡитләүсе Мостай Кәрим уның иң ныҡ "дошман" күргән кешеләре булып ҡалды. Үс иткәндәй, биш йылдан һуң йәнә шул уҡ З. Биишева мәсьәләһен партия йыйылышында дөйөм тикшереүгә һалдылар һәм шулай уҡ үҙенең партбюро сәркәтибе булмыш вазифаһы буйынса Ғ. Әмири рәйеслек иткән, ә М. Кәрим төп тәнҡитсе булған йыйылыштың һөҙөмтәһе З. Биишеваның был икәүгә ҡарата яндырғыс нәфрәт хистәрен уғата дөрләтеп ебәрҙе лә һүнмәҫлек ҡылып ҡалдырҙы. Эш шунда: Зәйнәб апай Биишева балалар өсөн, ашыҡ-бошоҡ, тигәндәй, "Юлдаш һәм Ҡыҙрас" тигән ҙур ғына повесть яҙа һәм уны, балалар әҙәбиәте секцияһында "сей" тип кире ҡағылыуға ҡарамаҫтан, "башҡорт әҙәбиәтендәге бөтә нәмәне хурлаусы нигилист" тип яманатланған баяғы Ә. Чаныштан, шуныһы ғәжәп, матбуғатҡа тәҡдимләгес ыңғай рецензия яҙҙыртып ала ла, ҡулъяҙмаларын бер юлы Башҡортостан китап нәшриәтенә һәм "Әҙәби Башҡортостан" журналына тапшырып, кисекмәҫтән ташҡа баҫтыртып сығарыуҙарын дәғүәләп йөрөй башлай. Нәшриәттә эштәр ҡайһылай торғандыр, әммә журналда ҡабул ҡылынған тәртип буйынса әҫәрҙе башта редактор урынбаҫары Ғәйнан Әмири уҡып, редакциянан тыш йәнә бер әҙәбиәтсенән ентекле эске рецензия ла яҙҙыртып, уның "сеп-сей" икәнлеге тағы ла дөрөҫләнгәс (был рецензия һаҡланған), ғауғалы эш Яҙыусылар берлеге идараһына барып етә лә берлектең ул саҡтағы рәйесе Мостай Кәрим үҙ сиратында повесте тәүҙә үҙе уҡып сыҡҡас, йәнә байтаҡ кешенән уҡытып алалар, ләкин береһенең дә фекере ыңғай булмағанлыҡтан, апайҙың баш бирмәүсәнлеген иҫәпкә алып, партия ағзаһы булараҡ ошо ойошмала теркәлеүен дә иҫкә төшөрөп, мәсьәләне, коммунистарса, ябыҡ партия

йыйылышында тикшереп хәл ҡылырға ҡарар итәләр; был йыйылыш 1953 йылдың 11 майында, КПСС-тың Киров район комитеты өгөт-нәсихәт бүлеге мөдире Әхмәтова иптәш ҡатнашлығында уҙа. Көн тәртибенә ҡуйылған "З. Биишева иптәштең "Юлдаш һәм Ҡыҙрас» повесен тикшереү" тигән мәсьәлә буйынса яҙыусы Хәким Ғиләжев доклад яһай. Повесть, темаһы менән мөһим булһа ла, етлекмәгән хәлендә ҡалған, ти ул һәм, бөтә етешһеҙлектәрен ентекләп күрһәтеп, авторға мәктәп тормошон яҡшылап өйрәнергә лә ныҡлап ултырып ҡабат яҙырға кәрәк, тигән кәңәшен бирә. Уның артынан һөйләгән С. Агиш, Ә. Вәли, Ә. Харисов, К. Кинйәбулатова, Ҡ. Даян, Ә. Ғафури нигеҙҙә докладсы фекерен ҡеүәтләйҙәр, ҡайһы берҙәре Биишеваның тәнҡитте күтәрмәүен, тәнҡитләүсегә асыуланыуын әйтәләр. Ошоларҙан һуңғы өс сығыштың протоколын тулыраҡ сағылдырһаҡ, дөйөм фекер яҡшыраҡ аңлашылыр.

"**М. Кәрим.** — Повесть балалар әҙәбиәтендәге яуаплы темаға яҙылған. Повестә ҡыҙыҡлы, файҙалы нәмәләр күп, ләкин ул ҡабат, ә бәлки тамырынан уҡ үҙгәртеп, эшләүҙе талап итә.

Повескә хас етешһеҙлектәр: геройҙарҙың хәрәкәт даирәһе тар, урыҫ халҡы менән дуҫлыҡ һулышы өрөлмәгән; ошо дуҫлыҡ атмосфераһының булмауы хаҡында балалар әҙәбиәте секцияһында повестең беренсе вариантын тикшергәндә лә ғәҙел әйтелгән. Ләкин Биишева иптәш идея йәһәтендәге был киҫәтеүҙәрҙе иҫәпкә алырға теләмәне; шуныһын әйтергә кәрәк, Биишева иптәш ғөмүмән ижади тикшереүҙәрҙәге тәнҡитте ауыр кисерә. Шуға күрә лә уның повесен партия йыйылышында тикшерергә, үҙебеҙҙең партиялы тура һүҙебеҙҙе әйтергә һәм иптәшкә әҫәренең етешһеҙлектәрен аңлауҙа ярҙам итергә кәрәк булды. Бөтәһе лә насар түгел повестә. (Ыңғай яҡтарын һанай). Ваҡ иҫкәртмәләр: повестә шулай килеп сыға: инженер балалары яҡшы уҡый, ә эшсе балалары — насар. Был, һис һүҙһеҙ, сәйер яңғырай. Автор мәктәптә социалистик ярыш тураһында һөйләй. Дөрөҫ түгел был.

Повесте уҡып сыҡҡандан һуң ғына белдем: ***был повесть хупланған һәм баҫмаға әҙерләнгән.*** Миңә ҡалһа, повесте был көйөнсә ***баҫырға ярамай*** һымаҡ күренде. Хәҙер ҙә шулай уйлайым. Мин үҙемдең фекеремде нәшриәттең баш мөхәрриренә яҙҙым. Минең иҫкәртмәләремдә, шулай уҡ башҡа иптәштәрҙекен дә Биишева иптәш ***дошмандарса ҡаршыланы.*** Тап бына шуға күрә лә, ҡабатлап әйтәм, партия йыйылышында беҙгә уртаҡ тел табырға кәрәк ине һәм, моғайын, ул телде табырбыҙ ҙа.

Биишева З. — Мин сығыш яһарға теләмәгәйнем. Ләкин һорау тыуа миндә: эш ниҙә? Нимә хаҡында һүҙ бара — минең әҫәрем тураһындамы? Башҡортостан китап нәшриәтенән рецензенттарҙы саҡырырға кәрәк ине. Мине һөмөрөм ҡойолоп ултырыуҙа ғәйепләйҙәр. Ләкин йөрәк өйәнәгем тота минең һәм мин ҡайһылай итеп тыйылып ҡалырмын икән, тип уйланып ултырам. Мин "Дуҫлыҡ" тигән пьеса яҙҙым, насар түгел ул, ләкин хәҙер академтеатр сәхнәһендә ҡуйылмай. Сөнки Яҙыусылар берлегенең һулышын тоя театр. Мин хеҙмәтсән халыҡтың үҙ араһынан сыҡҡан башҡорт ҡатын-ҡыҙы тураһында "Гөльямал" тигән повесть яҙҙым. Был

хаҡта һөйләмәйҙәр ҙә, яҙмайҙар ҙа... Белмәйем, Яҙыусылар берлеге ни өсөн ҡаршы икән миңә? *Ләкин аяҡ сала алмаясаҡһығыҙ...*

Мин повесть өҫтөндә эшләйем. Һеҙ повесте сығартмаҫҡа күпме генә аяҡ салһағыҙ ҙа, ул барыбер сығарыласаҡ...

Әхмәтова. — ...Һигеҙ кеше сығыш яһаны. Ләкин З. Биишева иптәш был йыйылыштың файҙалы икәнен, күрһәтелгән иҫкәртмәләр артабанғы эшендә уға ярҙам итәсәген аңламаны, был уға барып етмәне.

Биишева иптәш тәнҡитте яратмай, партиялылыҡ һәм эшлеклелек етешмәй уға. Үҙенде коллективҡа ҡаршы ҡуйыу — кәрәкмәгән эш...

Ғ. Әмири. — Биишева иптәш йәнәһе был повесте партия йыйылышында тикшереүгә кемдер[34] һөйрәп сығарған, тигән фекер белдерҙе. Эш шунда тора, повесть тәүҙә секцияла тикшерелеп, автор тарафынан Башгосиздатҡа һәм "Әҙәби Башҡортостан" журналына тапшырылған. Йәнә килеп, Биишева иптәш, Яҙыусылар берлеге, редакция, партия ойошмаһы Һеҙгә ҡаршы сәйәсәт үткәрә икән тип уйларға ярамай. Был Һеҙҙең ижади эшегеҙҙе һәм беҙҙең дөйөм эште ҡыйынлаштыра. Һеҙ үҙегеҙҙең һаулығығыҙҙың насар булыуына зарландығыҙ. Ә Һеҙ Әкрәм Вәли (журналдың баш мөхәррире) һау тип уйлайһығыҙмы: һуғышта шаңҡыған (контужен), яраланған. Партия уны редактор итеп ҡуйҙы — Һеҙ уны төрлөсә хурлайһығыҙ. Хөрмәт итегеҙ уны ла. Мостай Кәримде партия яҙыусылар ойошмаһы менән етәкселек итергә ҡуйҙы. Ул да сирле, үлемдән саҡ ҡалған. Һеҙгә ҡарата объектив мөнәсәбәте өсөн Һеҙ уны төрлөсә хурлайһығыҙ.

Дөйөм йыйылыш ҡарар ҡыла:

1. Биишева иптәштең повесть өҫтөндә артабан эшләйәсәге тураһындағы белдереүен иғтибарға алырға. Бер үк ваҡытта партия йыйылышы Биишева иптәшкә тәнҡиткә партиялы мөнәсәбәттә булырға кәрәклеген күрһәтә.

2. Биишева иптәшкә повестең йыйылышта сығыш яһаусы коммунистар ғәҙел күрһәткән етешһеҙлектәрен иҫәпкә алырға һәм төҙәтергә тәҡдим итергә.

Рәйес: **Ғ. Әмиров.**

Сәркәтиптәр: **Ш. Бикҡолов, П. Куликов".**

Партия йыйылышындағы берҙәм тәнҡит шулай ҙа повесть авторы өсөн файҙалы була: күпме генә киреләнеп маташһа ла, әҫәрҙе ул, ғәрләнеп, бер йыл буйы баш ҡалҡытмай өр-яңынан эшләп сыға һәм ул "Дуҫ булайыҡ" тигән яңы исемдә донъя күрә, ләкин авторҙың Ғ. Әмиригә, М. Кәримгә тотҡан ауыр кенәһе, йәшермәйек, ниндәйҙер сир рәүешен алып нығына. Бының яңынан дөрләп тышҡа сығыуын етмешенсе йылдар башында яҙыусыларҙың партия йыйылышында үҙемә күрергә тура килде: З. Биишева үҙенең сығышында ҡәләмдәше М. Кәримгә бик ҡаты ябырылып, шул урында йөрәк өйәнәге тотоп йығылыуынаса барып етте. Ике яҡтың береһен дә яҡлап сығыш яһаусы кеше булманы, ә абруйлы

[34] З. Биишева уны Ғ. Әмири тип һанай.

ағайыбыҙ (М. Кәрим) һуңынан тап ошо хаҡта үҙенең, хәтерем яңылышмаһа, "Оҙон-оҙаҡ бала саҡ" повесендә, булһа кәрәк, йыйылышта дошманым йөҙөмдө йыртҡан саҡта миңә дуҫ булып йөрөгәндәрҙең береһе лә мине яҡлап һүҙ әйтмәне, тиеберәк әсенеп яҙҙы һәм шул әҫәр биттәрендә Зәйнәб исемле бик алама ҡатынҡайҙың ҡиәфәтен күргәҙмәле ҡылыҡһырлай биреп тә ҡуйҙы (теңкәһенә нык тейгәнгәлер инде). Әммә оҙаҡ йылдарғаса һуҙылған хөсөт касафатының иң ауыры Ғ. Әмири өлөшөнә төшөргә яҙған икән...

1956 йылда З. Биишева "Кәмһетелгәндәр" романының беренсе вариантын баш мөхәррир урынбаҫары булып Ғ. Әмири эшләгән "Әҙәби Башҡортостан" журналына килтерә; редколлегия ағзалары (бигерәк тә Баязит Бикбай) уҡығандан һуң әҫәр, өлгөрөп етмәгән тип, авторына эшләргә кире ҡайтарыла (был йәһәттән редколлегия ағзаһы Б. Бикбайҙың абруйлы һүҙе ҙур урын тота), ләкин нәфрәтләнгән автор быны фәҡәт Ғәйнан Әмириҙең этлеге итеп һанай, ошо фекерен Әмириҙе дуҫ күрмәүсе ҡәләмдәше С. Агиш менән уртаҡлаша һәм унан теләктәшлек таба, сөнки тап Ғәйнан Әмири партия өлкә комитетының әҙәбиәт һәм сәнғәт секторын етәкләгән осорҙа С. Агиштың «Нигеҙ" романы әҙәбиәтсе йәмәғәтселек тарафынан уңышһыҙ тип баһаланғайны (хаҡ баһа!), өҫтәүенә, "Үктәбер" журналының сифат-күрке түбән төшөү арҡаһында, уның яуаплы редакторы С. Агиш вазифаһынан бушатылғайны. Ошондай ғәмдәр ҡыҫымында ғазапланмыш был икәүгә 1960 йылда "Әҙәби Башҡортостан" һандарында Ғ. Әмириҙең "Мораҙым" повесенең күкрәп килеп сығыуы, уҡыусылары тарафынан да, тәнҡитселәр күҙенән дә йылы ҡаршыланыуы көтөлмәгән һәм теләнмәгән хәл була, асыуҙарын ҡабарта, шомло шиккә төшөрә. Һәҙиә Дәүләтшина тере ваҡытында, етәксе ҡәләмдәштәре даирәһендә асып керер ишек таба алмай ҡулъяҙмаларын күтәреп интегеп йөрөгәнендә уның барлығын белергә лә теләмәгән (Сәғит ағай Агиш хатта "Ырғыҙ" романына күпмелер аяҡ та салған), вафат булғас та шулай уҡ ҡулъяҙмаларын йыйып алыу, һаҡлап ҡалыу йәһәтенән ҡыл да ҡымшатмаған хөрмәтле әҙибә һәм әҙибебеҙ, ни өсөндөр, көтмәгәндә, мәрхүмәнең архивының яҙмышын ҡайғырта башлайҙар һәм уны үҙендә ваҡытлыса һаҡлап тотҡан намыҫлы әҙип Ғәйнан Әмириҙең өҫтөнә үҙҙәре уйлап сығарған һәр төрлө яла, бысраҡ өйөргә керешәләр. Һөҙөмтәлә Ғ. Әмириҙең "Мораҙым"ы — Һ. Дәүләтшинаның урланған "Ат ҡарағы" тигән әҫәре икән ул, тигән ялалы имеш-мимеш таратыла түҙеп торғоһоҙ тынсыу әҙәби мөхиттә. Яҙыусылар берлеге идараһында (рәйесе Мостай Кәрим) был шик-шөбһәнең нигеҙһеҙлеген, Ғ. Әмириҙең повесть яҙа башлауы тураһында бынан ун йыл элгәре үк рәсми хәбәр ителеүен иҫтәренә төшөрөп, кире ҡаҡһалар ҙа, тегеләр төңөлмәйҙәр һәм нахаҡ ғәйбәт оҙаҡ йылдарға һуҙылған һәм Ғ. Әмириҙең ҡанын ағыулаған бәләгә әүерелә. Шулай ҙа яугир әҙип, һуғышта алған шаңҡыуы, яралары, өҫтәүенә шәкәр ауырыуы (диабет), тын быума сире (астма), әҫпе (аллергия) һәм йөрәк өйәнәге менән интекһә лә, рухи яҡтан бирешмәй, шиғриәт һәм проза өлкәһендә бер юлы ырамлы эшләй: 1965 йылда — "Ғашиҡтар", 1971 йылда — "Аҡ елкән", 1976 йылда "Толпарҙар", 1981 йылда "Август йондоҙҙары"

тигән китаптары күкрәп донъя күрә. Хәким Ғиләжев етәкләгән Яҙыусылар берлегенең киңәйтелгән ултырышы 1971 йылда шағирҙы мәшһүр “Салауат аманаты” поэмаһы өсөн шул йылдағы Салауат Юлаев исемендәге дәүләт бүләгенә кандидат итеп күрһәтә, ләкин бүләк бирелмәй...

Йөрәге ярылып үлгән әҙиптең яҡты исеме өҫтөндә ҡара ғәйбәт ҡойоно ҡабат ҡоторона — шуларға алданған һәм үҙ ҡылыҡтары өсөн яуаплылыҡ тоймаған бер килке бәндәләр ул ҡойондо 1988 йылда Башҡортостандың Юғары хөкөм залына илтеп керетәләр (күренекле әҙиптәребеҙ Х. Ғиләжев, Н. Нәжми, И. Абдуллин унда мәрхүмдең намыҫлы исемен яҡлап сыға), ғәҙел хөкөм иһә ҡойонсолар дәғүәһен нигеҙһеҙ тип таба ла башкөлләй кире ҡаға. Шуға ла ҡарамаҫтан, башта уҡ әйтелеүенсә, мәшһүр әҙип Ғәйнан Әмириҙең ижады һәм исеме хаҡһыҙ рәүештә һәм күрәләтә онотолоуға дусар ҡылына, сөнки ҡойон уйнатыусылар Яҙыусылар берлегендә күпмелер вазифа биләп, әлегәсә баяғы ҡылған гонаһтары өсөн үкенгәндәре, мәрхүмдең яҡындары һәм йәмәғәтселек ҡаршыһында ғәфү үтенгәндәре юҡ (ҡайһы берҙәре шул гонаһлы көйө мәрхүм дә булды инде), Яҙыусылар берлеге лә башын ҡомға тыҡҡан баяғы дөйәғоштай өндәшмәйенсә ҡалды. Сталинград тамуғынан да бирешмәй еңеп сыҡҡан, аҡтыҡҡаса бирешмәйенсә йәшәгән һәм ижад иткән өлкән ҡәләмдәшебеҙҙең яҡты рухы ҡаршыһында шул арҡала барыбыҙҙың тиң гонаһлы булып йөрөүебеҙҙең, ҡалыуыбыҙҙың билдәһе түгелме был?..

Сталинград алыштарының ҡатнашсыһы булған татар яҙыусыһы Абдулла Әхмәт һуғыштан һуң ошолай хәтерләне:

“Ҡала яна. Әйтергә яраһа, Волга ла ут эсендә. Арғы ярҙан катерҙар, баржалар ҡорал, техника, һалдаттар сығара. Дошман йылғаны ла, Волга ярын да ҡотороп утҡа тота. Ана шул йәһәннәм ваҡытында йәш, зифа буйлы сибәр офицер сабый баланы күкрәгенә ҡыҫып, арылы-биреле сәбәләнеп йөрөй, ҡотҡарған сабыйын биреп ебәрергә арғы яръа сығыусы карапты эҙләй. Был офицер — күренекле башҡорт әҙибе капитан Ғәйнан Әмири була”.

Сталинград тупрағында мине ерләгеҙ,
Гильзаларҙан көрәк кермәҫ ерҙе асып.
Һалдаттарым менән бергә ятайым,
Һалдат винтовкаһын ҡосоп.

Сталинград ҡаһарманы Ғәйнан Ғимазитдин улы Әмировҡа лайыҡлы хаҡ һүҙҙәрҙер.

“Эйе, Ғәйнан ağa ифрат кеселекле, кешелекле шәхес ине, — тип өҫтәй быға үҙебеҙҙең өлкән ҡәләмдәшебеҙ Ибраһим ағай Абдуллин. — Ул күп кенә шағирҙарға аҡ юл теләп, фатиха бирҙе. Тик үҙе үлгәс ҡара эсле кешеләр уға бысраҡ яғырға тырышты, әммә алтын саф булһа, уға бер

бысраҡ та йәбешмәй. Был осраҡта ла шулай булды” (“Ағиҙел”, 1997/4, 18-се бит).

...Германияның баш ҡалаһы Берлиндың атаҡлы Трептов-паркында фашизмды еңгән совет һалдатына мөһәбәт һәйкәл ҡуйылған: бер ҡулындағы булат ҡылысын фашист тәреһенә үлемесле сабып, икенсе ҡулында көнгә табан талпыныусы сабый баланы ҡосаҡлап тотоп, йәшәйешебеҙгә мәңге ғашиҡ уҙаман баҫып тора. Унын яҡты һынында мин бөтәбеҙгә мәңге-мәңге ғашиҡ булып йәшәгән мәшһүр шағир Ғәйнан ағай Әмириҙе лә күрәм.

14.01.2001

ҮҘЕ КӨЙӨНСӘ ҠАЛДЫ

1. Метеор

Л.-Хәким һәм Лина Ғиләжевтар

Йәйге тымыҡ кисәләрҙә ҡараңғы Күкте дөрләтеп-һыҙылып киткән сағыу йондоҙ бар — метеор тиҙәр үҙен. Яҡтылығы менән бергә хәтәрлеге лә йөрөй: ергә-фәлән еле тейһә, сәсрәтә һуҡмаҫ, тимә. Уны беҙгә, моғайын, ваҡыт-ваҡыт Юғарынан Дәү Хоҙайыбыҙ үҙе мәтәлдерәләр — түбәнлекле донъябыҙҙа беҙ-бәндәләргә, Күк бейеклеген күрмәй, ергә йәбешеп ятмаҫҡа, үрмәләүсе ер ҡортона әүерелеп аҙмаҫҡа. Мәтәлеүсе метеорҙың үҙен-үҙе баҙлап яндырыуынан һибелеп ҡалған илаһи осҡондары — Дәү Хоҙайҙың беҙгә ҡабыҙған саф аҡыл хәйерелер. Аҡыл ғына кешене кеше ҡыла, саф аҡылға ылығып ҡына аҡ күңел, игелек, миһырбанлыҡтар килә. Ғүмерҙә башын ҡалҡытмаған, биле дуғалай бөгөлгән аҡтыҡҡы йән эйәһе лә, метеорҙың күҙ сағылтып сәсрәүҙәренән һиҫкәнеп, ҡапыл билен турайта ла Күккә бағылып ҡарай. Һәм ҡараны яҡтыртып бармыш нур һыҙаты иң ҡараңғы күңелгә лә ғүмерлеккә һүрелмәҫтәй сағыуланып сыйыла — бәндәнең илаһи аҡыл бизмәне булып ҡала: артабан ул үҙ эштәрен, теләйме-теләмәйме, шул бизмәнгә һалып үлсәп ҡараясаҡ. Гүр тупрағы еңел булғыры талантлы өлкән ҡәләмдәшебеҙ Лоҡман-Хәким ағай Ғиләжевте юҡһынып иҫкә алғанымда ана шул ***аҡыл метеоры*** дөрләп тора күҙ алдымда. Был хәл, моғайын, бер минең генә түгел, ә уны күреп белгән, уның менән бер һауаны һулап йәшәгәнбайтаҡ замандаштарының уртаҡ кисерешелер. Ә инде беҙ, һуғышҡа алынырға өлгөрмәй ҡалған, әммә фронтҡа икмәк үҫтереү фронтында ялан аяҡланып һабан һөрөргә әмәлһеҙҙән өлгөрөп

еткән йәшерәк быуын, һуғыштан ҡайтҡан бер тиҫтер фронтовик шағирҙарҙың ауыҙҙарына ҡарап, һүҙҙәренә ҡолаҡ һалып йәшәргә ныҡ күнектек — әҙәбиәттә улар донъя тотҡаһы, абруйҙары шул тиклем юғары ине. “Партиябыҙ”ҙың ҡыҙыл матбуғатында, хәтерләйем, уларҙы гел ошолай маҡтап яҙҙылар: “яугир-патриот шағир”, “партияның тоғролоҡло һалдаты”, “ялҡынлы публицист-шағир”, «нескә лирик” һ.б.ш. Бөтәһенән өҫтөнөрәк сурайтып ҡуйылғаны — “фәлсәфәсе” (философ) эпитетын тиреүсе уҙаман булды, быныһы иһә уны урыҫ һәм донъя әҙәбиәте классиктары (“хлястик”тары, юмор маһиры Сәләх ағай Кулибай әйтмешләй!) кимәленә күтәрергә көсәнеү ине. Шул уҡ ваҡытта бәғзеләрҙең арттарынан, ҡәҙимге тормоштағыса, матбуғатҡа һыйышмаҫлыҡ ҡапма-ҡаршы мәғәнәле, хатта мәсхәрәле лаҡаптәр ҙә эйәреп йөрөнө — бәндәләрҙең ауыҙына келәп һалып булмай бит. *Лоҡман-Хәким* ағайҙы ла ошо мөхит сорнағайны, әлбиттә, әммә шуныһын ышанып әйтә алам: уның ысын кешелек асылын билдәләрлек бөйөк һүҙҙәрҙе матбуғатҡа сығарып бармаһалар ҙа, *Лоҡман-Хәким Ғиләжевте*, артынан, дуҫы *ла* дошманы *ла* бер төрлө баһаланы — ***“аҡыл эйәһе”.*** Ысынлап та, аҡыл эйәһе ине ул.

Урыны ожмахта булғыры Сәләх ағайыбыҙ йәнә әйтмешләй, “хис кешеләре» араһында оҙаҡ йылдар бергә хисләнеп-кайнашып йәшәгәнемдә һәр төрлө күмәк мәжлестәрҙә, уртаға һалып фекер алышыуҙарҙа, шау-шыулы һәм даулы йыйылыштарҙа, шулай уҡ бер килке ағай-эненең тар түңәрәктә һәүетемсә генә серләшеүҙәрендә *лә* ҡатнашырға һәм кемдең теленең үткерлеген, аҡылының тәьҫир көсөн шәйләргә, күрергә *лә* тура килде. Бер нәмә асыҡ хәтерҙә һәм күҙ алдымда тороп ҡалған: уртаҡ телгә килешә алмай аҙапланған иң сетерекле мәлдәрҙә генә *Лоҡман-Хәким* ағайыбыҙҙың үҙенә хас ҡалын тамаҡ төбө менән ҡырыҫыраҡ һөйләшкән тауышы бөтә шау-шоуҙы баҫып яңғырап китер ҙә кешеләрҙе шым ҡалып, ҡолаҡ һалып тыңларға мәжбүр ҡылыр, мәсьәләнең тере елеген һулҡылдатҡансы фашлап, бар нәмәне үҙ урынына ултыртыр, аҙаҡ килеп уның ғына тос фекере үҙенән-үҙе дөйөм-уртаҡ фекергә, ҡарарға әйләнер ине. Ҡәләмдәштәренә тәьҫир итеү ҡеүәһен яҡшы аңлап, ул саҡтағы донъя кендеген үҙ ҡулында тотҡан партия өлкә комитеты уны үҙенең “идеология фронты”ндағы етәкселек эшендә, Яҙыусылар берлегендәге иң яуаплы вазифаларға тәғәйенләп, бик яҡшы һәм ярашлы файҙаланды, хатта фирҡәнең иң ҡыҙыл танаулы һәм ҡолаҡлы, иң ышаныслы ялағайҙары ваҡыт-ваҡыт уның өҫтөнә сүп-сар өйөп аҫтан аҫтыртын кимергәндәрендә *лә* оҙаҡ йылдар “түрә”лектән төшөртмәй ҡалдыра килде, сөнки баяғы “ҡыҙыл”дарҙың йыйыныһы бер юлы *ла* бер Ғиләжевте алмаштыра алыуҙары ифрат икеле ине. Сөнки үҙен ысын партия һалдаты, совет иленең патриоты итеп ихлас һанаған, шул тойғоһоноң сафлығын һуғышта үҙ ҡанын түгеп дәлилләгән был яуҙарҙан һуңғы “погонһыҙ һалдат”ыбыҙ йәне инанған изге бурысын, бәғзеләрҙәй, Юғарынан “ус ялау” өсөн түгел, ә саф намыҫының бойороғо буйынса башҡарҙы һәм үҙенең хаҡ юлдан барыуына аҡтыҡҡаса инанды. Шаҡшы ҡыҙыл империя түңкәрелеп, күптәребеҙ үҙ ҡараштарын яңыса үҙгәртеп ҡорғанда *ла* ул үҙ хаҡлығына топ-тоғро ҡалды, буғай, — “Дерьмократтар” тигән аяуһыҙ шиғыры быға

дәлил. Эйе, Күктән атылған илаһи метеор бит ул, һауа шарттарына ҡарап, үҙ юлынан тайпылмай ҙа боролмай — тура һыҙыҡ осонаса дөрләп барып ярыла...

Лоҡман-Хәким ағай менән беренсе ҡат осрашыуым әкәмәт килеп сыҡты.

Әҙәбиәт йөрәгемде мисәүләп тартҡанлыҡтан, 1956 йылдың февралендә Балтик диңгеҙ флотында хәрби хеҙмәтемде тамамлағас, заманында автономиялы Башҡортостандан Ырымбур өлкәһенә ҡайыра ҡырҡып алынған һәм әҙәбиәтһеҙ-мәҙәниәтһеҙ тип әйтерлек интегеп йәшәп ятҡан ауылымдағы яңғыҙ әсәйем янына ла һуғылмай (йәнәһе, һуңынан ҡайтып алырмын!..), туп-тура Өфөгә тоҫҡағайным табанды. Тимер юл вокзалы ҡаршыһындағы хлор һаҫыһы аңҡыған махсус мунсала санитар сафлығын алғас (ҡалала шунһыҙ пропискаға ла, эшкә лә — бер ҡайҙа ла үткәрмәйҙәр), сумаҙанымды һаҡлау камераһында ҡалдырып, Совет урамындағы Башҡортостан Министрҙар Советы бинаһын эҙләп таптым, ишек төбөндәге милиция һағынан әллә ни тотҡарлыҡһыҙ уҙып (хәрби кейемем ыңғай тәьҫир иткәндер, күрәһең), арба юлындай киң баҫҡыстан "Әҙәби Башҡортостан" (хәҙерге "Ағиҙел") журналы редакцияһы урынлашҡан 5-се ҡатҡа күтәрелдем. Йөрәгем дарҫлап тибә: үҙ ғүмеремдә беренсе тапҡыр Башҡортостанымдың баш ҡалаһындағы башҡортса ташҡа баҫылып сыҡмалы ятаҡан берҙән-бер журналымдың редакцияһының ишеген асып инәм бит, бына тора ул шундайын да серле-тылсымлы ишек! Тура үтергә ҡыймай, коридор башындағы тәҙрә төбөнә туҡталып зиһен йыйҙым. Бөхтә кейенгән, күҙлек элгән әҙәми заттар (гелән генә зыялы-интеллигенттар!) баҫҡыстан йә күтәрелеп, йә түбәнләп уҙғылай, ул йылдарҙа был яҡтарҙа һирәк күренмеш диңгеҙсе ҡиәфәтем күҙҙәренә салына. Ә эргәмдә тәҙрә төбөндә ябай совет халҡына хас ҡаласа ҡул тоҡсайым — ҡара кирзанан фабрикала тегелгән бөрмә ауыҙлы, ҡуш тотҡалы хужалыҡ сөмкәһе тора. Быйдайын да түбәнлекле ябай "тормош прозаһы"н яҙыусы тиклем яҙыусы булған илаһи заттар ҡатарына тотоп кереүҙе оторо һөмһөҙлөк һанап, үҙем инеп сыҡҡансы тип, баяғы шул урынында ҡалдырып торҙом...

Ингәс тә төптәге һул яҡ түрҙә ҡағыҙ өйөүле өҫтәл артында эйелә биреп ултырған, ҡара урмандай текә һәм ҡуйы сәсле, быжырыраҡ һымаҡ йөҙлө ағай кеше ҡапыл башын ҡалҡытып ҡараны, үҙенә бик килешмәле ҡара дүрткел тирәсле күҙлек үтәләй ул, мине үтә күргәндәй, тура төбәлеп текләне — журналдың баш редакторы Лоҡман-Хәким ағай Ғиләжев ине ул. Ошо тәүге күрешеүҙән һуң да мин оҙаҡ йылдар бергә аралашыуҙа уның шулай үҙемә, ниндәйҙер йомаҡты сисергә теләгәндәй, үтә текләп ҡарауын тойоп килдем...

Баш редакторға ҡаршы яҡтағы өҫтәл артында, һыңар күҙе менән генә тексәйеп, сәстәренә сал керә башлаған Мөхөтдин ағай Тажи, журналдың яуаплы секретаре, корректура уҡый, ә ул саҡтағы ябай әҙәби хеҙмәткәр Әсғәт ағай Мирзаһитов, совет һалдатының тупаҫ кирза итектәрен шарпылдатып, йомошсо малай рәүешендәрәк, бер инеп, бер сығып, ниндәйҙер мәшәҡәтле эш башҡырып йөрөй. Исем-фамилиямды

әйтеп танышҡас та, мине сикһеҙ албырғатып, Мөхөтдин ағай һөрәнләп үк ебәрҙе:

— Оһо, Балтик матросы Солтанов! Диңгеҙ бүреһе! — Редакцияла яңыраҡ эшләй башлаған, мине ҡыҙыҡһынып күҙәткән баш редакторға шунда уҡ аңлатып та бирҙе: был егет дүрт йыл буйына алыҫ Эстонияға журналыбыҙҙы редакция аша алдыртып ятты, үҙе лә шиғыр яҙа — “Моряк һүҙе” тигән шиғыры, хәрби-әфисәр Зәйни Рафиҡовтыҡы менән бергә, бынан өс йыл самаһы элек, Ҡыҙыл армия көнөнә ҡарата журналыбыҙҙа сыҡты...

Лоҡман-Хәким ағайҙың үтә талапсан һәм ҡырыҫыраҡ күренгән йөҙө ҡапыл яҡтырып китте, күҙлеген һалып, быялаларын ҡулъяулығы менән һөртә-һөртә, ул минең хәл-әхүәлемде бик ентекләп һорашырға кереште. Уға шул аңлашылды: ошоғаса күрмәгән дә Башҡортостанымды сит илдәрҙә үтә лә һағынып, башҡорт һүҙе хатта бер иле ҡағыҙҙа ла ташҡабаҫылып сыҡмаған, башҡорт китаптары ла, гәзит-журналдары ла килеп етмәгән тыуған ауылыма ҡайтыуҙан биҙәрләп, туған әҙәбиәттең урғыл ҡаҙанында ҡайнамаҡҡа, Өфөнөң үҙенә килгәнмен; берәй эш һәм торлаҡ табып ошонда төпләнергә лә әсәйемде лә күсереп алырға; һәм, әгәр ҙә мөмкин булһа, тап ошо “Әҙәби Башҡортостан”ыбыҙ ташҡа баҫылып сыға торған станок төбөндә эшләргә бик теләймен... Хыялыйҙарса ялҡынлы был телмәремде бүлдертмәй тыңлап бөткәс, әлегәсә ер һөрөү ҙә ат көтөүҙән башҡа һөнәрем юҡлығын тамам шәйләп, бер талай уйға ҡалдылар. Үҙ-ара кәңәшләшеп алғас, Лоҡман-Хәким ағай төрлө урындарға шылтыратырға кереште һәм миндәй “ат көтөүсеһе»нә, гәрсә бынамын тигән хәрби диңгеҙсе булып ҡайтһам да, баш ҡалала эш табыу бик ситенлеге, тапҡан сүрәттә лә, иң элек торлаҡлы булыу тәүшарт икәнлеге асыҡланды. Тәү башта ниндәй ҙә булһа фатир эҙләп табырға, тигән ҡарарға килеп, редакциянан сыҡһам, — ни күҙем менән күрәйем! — тәҙрә төбөнә ҡуйып торған хужалыҡ сөмкәмдән елдәр иҫкәйне инде. Бындайын да изге урында битәбиғи тойолған был имәнес хәлгә иҫем-аҡылып китеп, һис тә аңлай алмауымды белдертергә, буғай, редакцияға кире атылып керҙем дә аптырап һөйләп бирҙем.

— Сөмкәң эсендә нимәләр бар ине һуң? — тип белеште Лоҡман-Хәким ағай.

— Китап, һабын, теш шүткеһе менән пастаһы, таҫтымал һәм бер кейем эске күлдәк-ыштан... Ләкин эш ундамы ни, унан да шәберәк әйберҙәрҙе урлатҡаным бар минең! Ә эш шунда — һис кенә лә башыма һыйҙыра алмайым: маңлайына “ Башҡортостан Министрҙар Советы” тип ололарҙан да оло исем яҙылған ошондай ҙа ҙәү һәм үтә яуаплы бина эсендә, “Әҙәби Башҡортостан” журналы тиклем журналыбыҙҙың нәҡ ишеге ҡаршыһында нисек итеп бындайын да түбәнселек — оғролоҡ ҡылмаҡ кәрәк?!. — Бүлмәнең түшәмен күтәрерҙәй хахылдап көлөү яуап булды сикһеҙ аптырап-албырғап ҡалыуыма. Лоҡман-Хәким ағай тороп, сатанлай-сатанлай килеп, арҡама ҡулын һалды:

— Их һин, эскерһеҙ ат көтөүсеһе! Ысынлап та ат йәнле икәнһең шул... — Ошонан һуң ул мине йыш ҡына, күп йылдар буйынса ла, “ат

көтөүсе шағир" тип мәрәкәләр булды, шул атама, хәтеремдә, ҡайһылыр бер яҙмаһында ла сағылды; мин әүәлге башланғыс белемемә өҫтәп университетта юғары белеп алып сыҡҡас ҡына үҙенән-үҙе онотолдо был ләҡәп...

Ҡыҫҡаһы, Нижгородкалағы бер оҙон һаҫы күл буйында серек-мерек фатирға урынлашып та, прописка тигән яһил кәртәне һис тә ырғып үтә алмағас, баш ҡалаға төпләнеү хыялым хыялыйлыҡҡа әүерелә башланы. Әммә Лоҡман-Хәким ағай мине һаман күҙ уңынан ысҡындырмаған икән. Бер килеүемдә ул, хәрби һөнәрем моторист икәнен иғтибарлап, Ағиҙел йылға пароходсылыҡ идараһы башлығының үҙе (Кибальник) менән һөйләште, һөҙөмтәлә бер ыңғай өс айлыҡ мотористар курсына ла, түшәк-яҫтаулы йылы ятаҡҡа ла урынлаштым.

Һыуҙар ташып, боҙ китеүе менән үк, йылғаларҙа ҡыҙыу эш — Навигация башланды, йәй буйына егәрле буксир-теплоходта Ҡариҙел буйлап Өфөгәсә арауыҡта баржалар һәм һалдар тартып йөрөнөк. Аҡ ҡағыҙ биттәрендә эсемде бушатырға теләгәндәрем шиғырға ғына һыя алмауын кисереп, прозаға тотонғайным һәм әҙәм рәтле төҙөк проза яҙырға өйрәнеүҙе бурысым итеп алғайным. Ҡара көҙҙә йылғаларҙы шыйҙым күперләй башлап, Навигация ябылғас, мин, тап боронғо зимагорҙарҙай, ҡабат эшһеҙ ҙә, торлаҡһыҙ ҙа тороп ҡалып, бейек түбәһенә үҙемде мендертмәй интектергән баш ҡалаға яр яҡаһынан йәнә лә күтәрелдем. Был юлы сөмкәмдә Нижгородканың үҙем күргән ажарлы хулигандары тормошонан бер сатирик повесть, шанлы йылғасылар тормошонан бер сатирик повесть һәм лирик хикәйә ҡулъяҙмаларым бар ине. Прозаға башлап тотонған саҡтағы балалар өсөн яҙылған "Урман бабай" тигән моңһоу хикәйәм дә ошонда. Был юлы сөмкәм үҙем менән ҡуша керҙе, әлбиттә. Лоҡман-Хәким ағай иң әүәл балалар өсөн яҙылғанын уҡып сыҡты ла, шунда ултырған Әсғәт ағай Мирзаһитовҡа мине "шефлыҡҡа" (йәғни күҙ-ҡолаҡ булып ярҙам итергә) беркетте, хикәйәне, бергәләшеп, "Пионер" журналына илтеп бирергә ҡушты. Үҙе иһә ошо көндәрҙә Мәскәүгәме, башҡа яҡҡамы китергә йыйынғанлыҡтан, баяғы ике сатирик повесть менән бер хикәйәне лә Мирзаһитовҡа, ентекле уҡып сығып, фекерен әйтергә, тип тапшырҙы. Шул арала редакция бүлмәһендә ут бөрсәһеләй өйөрөләп йөрөгән, үҙенән һәр саҡ үтә таныш шешә еҫе аңҡып торған һәм бешкән ҡауын кеүек шыма, ялтыр башлы бер эшмәкәр Моталлап ағай Хәкимовҡа ла эш ҡушты:

— Ҡарале, кем, һинең таныш-белештәрең һәр ерҙә быуа быуырлыҡ. Бына ошо матрос иптәшкә арыу ғына фатир табышып биреп, егетлегеңде күрһәт.

"Пионер" журналы редакцияһында беҙҙе матур аҡ йөҙлө, үргә торғоҙоп шыма таралған ҡуйы һарғылт сәсле уйсан ағай бик йылы ҡаршыланы (Лоҡман-Хәким ағай, беҙ барып еткәнсе телефондан шылтыратып, һөйләшеп өлгөргән, имеш), ҡулъяҙманы шунда уҡ ҡармап алып, ҡыҙыл ҡаралы ҡәләме менән бер юлы төҙәткеләп, уҡый ҙа башланы. Күҙ алдыбыҙҙа тамамлап, ҡарарын да сығарҙы:

— Ярай, һәйбәт, нәүбәттәге үк һанға керетеп ебәрербеҙ, — тип яғымлы йылмайҙы миңә ҡарап. Шулай уҡ фронтовик, күренекле башҡорт шағиры Муса Ғәли булып сыҡты игелекле был ағай. Һәм хикәйәм, ысынлап та, оҙаҡламай журналда донъя күреп, һуңынан ул минең тәүге китабым да булып ҡуйҙы. Ә сатирик повестарға килгәндә, партиялылыҡ принциптарына үтә тоғро Әсғәт ағай, уларҙы үҙенең партиялы энә күҙәүенән үткәреп, тәүгеһендәге ифрат ҡот осорғос ваҡиғаларҙың, партиябыҙ күҙлегенән ҡарағанда, беҙҙең гүзәл совет ысынбарлығы өсөн һис кенә лә типик күренеш булмауын, хатта яла яғып ҡуйыу ихтималлығын, ә ундағы бер шомло эпизодты уҡығандан һуң үҙенең, ҡурҡышынан, төнө буйы йоҡлай алмайынса, һаташып сығыуын йәшермәйенсә һөйләне. Ә повестең икенсеһен, бер аҙ шымарта төшөп, журналда, бәлки, биреп тә булырын әйтте. Теге лирик хикәйәне лә, баҡтиһәң, Лоҡман-Хәким ағай уҡып өлгөргән, автор хистәргә бирелеп киткән тәүге өлөшөн ҡыҫҡартыбыраҡ, эшләп килтерергә ҡушҡан. Һәм ул тап шулай эшләнештә “Ағиҙел”дең 1962 йылғы йәш яҙыусылар ижади конференцияһына арналған һанында донъя күрҙе, ә йәйғорло өмөт уятҡан икенсе сатирик повескә килгәндә... шул 50-се йылдар аҙаҡтарында ул, “Ағиҙел”гә бына-бына кереп китергә торғанында, ҡапыл быраҡтырыла: Яҙыусылар берлегенең эше буйынса Мәскәүгә китмеш үтә яуаплы секретаре Хәниф ағай Кәрим (һуғышта ул ҡурҡыу белмәҫ принципиаль комиссар, һәр урында партияның “генераль линияһы”н тайпылышһыҙ үткәреүсе фиҙакәр булып өлгөргән), атаҡлы яҙыусы Зощенконың сатираһын партия Үҙәк Комитеты нисек итеп “ҡаты тәнҡит уты аҫтына алыуын” һәм ғөмүмән сатираның көнө бөтөүен үҙ күҙҙәре менән күреп ҡайтҡан да, журнал йөкмәткеһендәге ниндәйҙер бер йәш авторҙың сатирик әҫәренән тертләп, “Ағиҙел”селәрҙең Юғарынан тейешле һабаҡ алмауҙарына оло хәүефен белдергән... Күҫәк менән башыма һуҡҡандай булды, сатирик роман яҙырға ла дәртләнеүемде селпәрәмә килтерҙе...

Баш ҡалала төпләнеп ҡалырға өмөтөм ҙур ине әле. Мине үҙенең шыма ҡойроғона тағып өлгөргән баяғы Моталлап ағай Хәкимовҡа, һуғышта уның Башҡорт атлы дивизияһында булғанлығын да ишеткәс, ауыҙынан баяғы еҫ ифрат аңҡып торһа ла һәм әленән-әле үҙемде шул еҫ тулы шешә алып килергә мәжбүр ҡылһа ла, ҙур ихтирам һәм өмөт менән ҡараным. Ә ул иһә миңә журналдың тәүге (титул) битенең артын мәғәнәле асып күрһәтеп, аҫта типография мәғлүмәттәре (ҡағыҙ форматы, тираж һ.б.) теркәлмеш бер тошта “Техник редактор **М. Хәкимов**” тип шаҡырайтып ташҡа баҫылған йөмләгә иғтибар иттерткәс, ихтирамым уғата ныҡ артты: редактор тиклем редактор менән һин дә мин бергә тағылып йөрөйөм дәһә! Шунан һуң ағайым хәрби моряк кейеменә үлеп ғашиҡ булыуын, шуны өс кенә көнгә булһа ла бер кейеп алырға ла “бер ергә» барып ҡайтырға хыялланыуын әйтеп үтенгәс, ауыҙымды ла асмай, үҙем менән эйәртеп алып ҡайтып, сумаҙанымды аҡтарып, баштан-аяҡ диңгеҙсә кейендерҙем: түбәһе яп-ялтас булһа ла, ҡара буҫтауға аҡ һыҙатлы күк яҡа, ҡыйыҡ уйылған түшендәге ала-ҡола тельняшка ағайымды егеттәрсә йәшәртеп үк ебәрҙе. Өҫтәүенә, бер барып ҡайтҡансы ғына тип,

беләгемдәге сәғәтемде лә һалдыртып алғас, күңеле теүәлләнеп, дөбөрҙәп сығып китте, мин үҙем дә ҡәнәғәт тороп ҡалдым, сөнки Моталлап ағайымдың тырышлығы арҡаһында редакцияларға тумбочкалар яһап һатып йөрөмөш бер алкаш татар олатайҙың тап ҡала үҙәгендәге йылы фатирының мөйөшөн биләргә өлгөргәйнем. Моталлап ағайым, әлбиттә, әйтелгән өс көндән һуң да, өс тапҡыр өс көндән һуң да күҙемә салынманы — һыуға төшкән балталай юҡҡа сыҡты. Баҡтиһәң, ҡатыны менән аралары боҙолошоп, көнө-төнө ятып эсәр мөҙҙәте яҡынлашып, хатта “техник редактор”лығын да оноткан — аяғы тартҡан тарафҡа сығып киткән...

Быныһына иҫем китмәне инде — ваҡ нәмә. *Лоҡман-Хәким* ағайға ла әкәмәтте хикәйәтләп торманым — теге береһе лә еткән... Минең өсөн мөһиме — прописканан үтеү, паспортыма кәрәкле мөһөрҙө сәпәтеү. Мораҙыма ирешергә, нәҡ үҙәктә *Ленин* һәйкәле артындағы бинаға — Өфө ҡалаһы Киров район милиция бүлегенең паспорт бүлексәһе башлығына сират тороп яҙылып барып керҙем. Үҙебеҙҙең татар кешеһе икән, ғаризам һәм ҡағыҙҙарым күҙе алдында ята. Мосолманлығына барып, бәлки, түп-түңәрәк мөһөрөн һуғып та ҡуйыр... Ауыҙымды асырға ла өлгөрмәнем, башлығым үҙе урыҫсалап аҡырҙы:

— Башҡорт, нишләп йөрөйһөң бында, нишләп ҡалманың үҙеңдең Ырымбурыңда?! Бар, Каруанһарайыңа ҡарап табаныңды ялтырат! — Ажарланып, ҡағыҙҙарымды ҡулыма атып-бәрҙе лә артымдан шартлатып ишекте япты. Шуның менән ул абзыйым тәржемәи хәлемдең бер сәхифәһен осланы: прописканан үтмәгәс, бер ҡайҙа ла эшкә кереп булмаясаҡ, юлдар кәртәле ҡаласаҡ...

Иртәгәһенә *Лоҡман-Хәким* ағай тура нәшриәттең цинкография цехы башлығына алып барҙы һәм мине шунда, пропискаһыҙ-ниһеҙ, өйрәнсек итеп эшкә алыуҙарына иреште. “Аҙаҡ күҙ күрер — берәй яйын табырбыҙ”, — тине ул.

Ағыулы цинк, әсеткеләр төтөнө балта аҫып ҡуйырҙай ҡуйырған дәһшәтле цехта ошоғаса ата-бабам күрмәгән дә белмәгән эшкә тотондом һәм шунда үткән хәйерһеҙ тәүге сәғәттәрҙән үк күкрәгемдең утҡа янғандай әсетеүен, хәлем бөтөп быуылыуымды тойҙом. Дүрт йыл буйы хәрби караптың иң аҫкы ҡатламында — машиналар бүлегендә газ-төтөн йотоп йөрөп тә, бындайын да түҙеп торғоһоҙ тамуҡ ыҫына осрағаным юҡ ине. Ә башҡалар, шул иҫәптән цех башлығы үҙе лә, һис ни булмағандай, һин дә мин эшләп йөрөй... Кисендә үк йөҙөм һулығып-һарғайып, башым әйләнеп ҡайттым. Икенсе кис өй хужаһы, баяғы алкаш олатай, өҫтәлгә ҡуйған шешәмде йәһәт аса башлағайны ла, мауығыуынан кинәт кенә өҙөлөп, йөҙөмә текләп ҡарап, ҡысҡырып уҡ ебәрҙе:

— Ай балаҡайым, ни булды һиңә?! Былайһа, бөтәһең бит һин, балаҡай, харап ҡына булаһың!.. Көҙгөгә баҡ ана! Хәйерле сәғәттә ыҫҡын — ҡотола күр был эшеңдән! — Көҙгөнән, ысынлап та, бөгөн-иртән буласаҡ мәйет баға ине күҙемә... Иртәгәһенә үк ғаризамды кире алдым һәм Ғазраилдың ҡылысынан хәйерле сәғәттә тайшандыртҡан алкаш татар олатайға әлегәсә рәхмәтемде уҡыйым...

Баш ҡалаға һылашыр әмәл ҡалмай, һис юғында Башҡортостан сиктәренән тышҡа һөрөлмәç өсөн, юлдар эҙләй башлағас, Лоҡман-Хәким ағай мине элек Павлов ГЭС-ының Төҙөлөш комитеты рәйесе булып эшләгән гүзәл урыç Дмитрий Филимонович Швецов менән таныштырҙы ла, ошо егеткә ГЭС-та эш табылмаçмы икән, тип һораны. Дмитрий Филимонович үтенесте ихлас ҡабул ҡылып, шундағы таныштарына яҙған хатын ҡулыма тоттороп сығарҙы. Ләкин юлым уңмай ҡуйҙы унда ла. Кире боролоп ҡайтып, редакцияға кереп тормайынса уҡ, тәүҙә — яңы һалынып ятҡан Салауат ҡалаһына, унан һуң Күмертауға елеп барып килдем. Һәр ерҙә лә булған эш миңә ярамай, ә яраҙайына үҙем яраҡһыҙ булғанлыҡтан, ауыл балаһының башы ҡалаға һыймаçтыр, тип, үҙемде зарығып көтөп торған әсәйем янына төңөлөп ҡайтып киттем, колхоздағы ҡәҙимге ҡара эштәремә башкөлләй егелдем. Ә шулай ҙа, көндәлек ауыр мәшәҡәттәрҙән арынған һәм күҙ асҡыһыҙ Ырымбур бурандары тәҙрә ҡағып олоп торған һыуыҡ оҙон төндәрҙә, етеле шәм яҡтыһында суҡайып, ауыл тормошона арналған тәүге сәсмә романымдың яртыһын, боронғо аяныс ҡатын-ҡыҙ яҙмышын йырлаған шиғри романымдың яртыһын аҡҡа күсереп яҙҙым һәм, дөрөç юлдан бараммы, юҡмы икәнлегемде маһирҙарҙан һынатып шәйләр өсөн, хәҙер инде Яҙыусылар берлегенең партбюро секретареме, әҙәби консультантымы булып үрләгән яғымлы “шеф”ым исеменә Өфөгә юлландырып ҡараным, әммә Әсғәт ағай Мирзаһитовтың — аҡыллы, уның фекерҙәш дуçы Фәрит ағай Исәнғоловтың яғымлы итеп яҙылған һәм изгелектәр теләгән матур-матур хаттарынан йомшаҡ түшәп ҡатыға ултыртыу тәьçире генә ҡалды. Баш ҡала тауының маңлайына миңә ҡаратып кире магнит ҡуйылғандай, ебәргән бер әйберем гелән кире ҡағылып торғанлыҡтан, күңелем тамам боларып, рухым ҡараңғыланып, инде артабан бер юл да яҙмаçҡа, әҙәбиәтте оноторға тип үҙемә үҙем һүҙ биреп, ҡара эштәрҙә төңөлөргә тырыштым, — йөрәгендә ут ҡабынған башлап яҙыусыларҙың күбеһенең һүнеү юлы ошолор. Быны менән әçәрҙәрем шәп кенә булған тип раçларға йыйынмайым, ләкин мине көн күрһәтмәй томалау ҙа дөрөç булмағандыр ул... Хушлашыуҙай тороп ҡалған һәм нәшриәткә Әсғәт ағай илтеп тапшырған “һуңғы” әçәрем — “Йәш көстәр” альманахында ташҡа баçылып сыҡҡан “Яғымһыҙ кеше йылмая” хикәйәм булды.

Өс-дүрт йыл тынып торғандан һуң, түҙемлегем ҡаҡшап, тағы ҡәләмгә тотондом, ата-бабанан ҡалмыш әрһеҙлегемде, үҙем дә һиҙмәй, әүҙемләтеп ебәрҙем. Һис кенә лә көтмәгәндә, шәлкем-шәлкем шиғырҙарым “Ағиҙел”дә тоткарлыҡһыҙ донъяға сыға башланы һәм шуға сәбәпсе булған, Мәскәүҙән уҡып ҡайтып, “Ағиҙел”дә эшләй башлағандан һуң үҙе өсөн мине “асҡан”, үҙем күреп тә белмәгән ғәҙәттән тыш игелекле, киң күңелле ҡорҙашым Рафаэль Сафиндан, шул тотанаҡ менән бергә, әленән-әле ҡанатландырғыс хаттар алып рухландым. “Һәнәк”тәге мине яҡын юлатмаған тиçкәре тунлы әһелде лә ҡайҙалыр яңы вазифаға үрләтеп ҡуйғандар икән, — ул журналда ла бер-бер артлы бер шәлкем сатирик хикәйәләрем юлланды, быны шифалы һөҙөмтәһе тормошомда ҙур боролош яһаны: 1965 йылда мине, һуңынан ишетеп белеүемсә,

журналдың баш редакторы И. Әсәдуллин ағай минең хаҡта Лоҡман-Хәким ағай менән кәңәшләшкәндән һуң, "Һәнәк"кә, әҙәби хеҙмәткәр итеп, эшкә саҡырып алдылар. Өҫтәүенә шул арала, Дәү Хоҙайҙың рәхмәте булып, машинистка Фәхриә апайҙан бушанған тар ғына коммуналь фатирҙы, баш редакторыбыҙ Әсәдуллин ағайҙың ҡала түрәләренән нығышып йөрөп юллауы арҡаһында, килмешәк зат миңә биреп ҡуйҙылар — ғаиләмде күсереп килтерҙем. Тик әлеге лә баяғы шул Киров район милиция бүлегендә һаман, ҡануни үҙ фатирым була тороп та, прописканан үткәрмәҫкә яһил маташҡастары, Әсәдуллин ағай мине яҡлашырға Яҙыусылар берлеген (рәйесе Назар Нәжми) һәм "Ағиҙел"де лә (баш редакторы Л.-Х. Ғиләжев) ылыҡтырҙы, һөҙөмтәлә Яҙыусылар берлегенең партбюро секретаре Әсғәт ағай Мирзаһитов мине партия өлкә комитетының бүлек мөдире Николай Константинович Розановҡа алып инеп, мәсьәлә ыңғай хәл ителде.

"Һәнәк"тә эшләп йөрөгәнемдә "Ата һәм бала" тигән повесем дә бар ине, шуны ҡорҙашым һәм дуҫым Рәми Ғариповҡа күрһәткәс, ул мине, ҡулъяҙма һалынған папкамды ҡултыҡ аҫтыма ҡыҫтыртып, ҡорҙашыбыҙ Рафаэль Сафиндың фатирына алып китте. Фатир хужаһы редакциялағы эш сәғәттәрен тамамлап, өйгә ҡайтҡан хәйерле мәле ине — уның аулаҡ бүлмәһендә төнө буйы ултырып, повесте алмашлап ҡыҫҡырып уҡып сыҡтыҡ, тиҫтер ҡәләмдәштәр араһындағы хәҙер инде онотола барған ихлас теләктәшлек, дуҫлыҡ хөкөм һөргән заман ине шул. Иртәгәһен "Ағиҙел"гә алып килдек. Был саҡ Лоҡман-Хәким ағай Ғиләжев ҡайҙалыр ситкә ял итергәме киткән, урынында уның ифрат эшлекле, ҡабилиәтле урынбаҫары — туған әҙәбиәт шишмәһенең ылғый башында булырға тип Мәскәүҙән ""һыуһап" ҡайтҡан һәм туған әҙәбиәт өсөн яныып-көйгән таныҡлы ғалим һәм тәнҡитсе Әхиәр ағай Хәкимов тырышып эш башҡармаҡта ине. Ҡорҙаштарым Рәми Ғарипов менән Рафаэль Сафин үҙҙәренең был яҡын дуҫы һәм мине лә яҡшы уҡ белгән Әхиәр ағай Хәкимовҡа повесемде тикшереүҙе тиҙләтергә ялҡынлы тәҡдимләгәс, ул шунда уҡ риза булды һәм, ҡулъяҙманы ваҡытлыса үҙе торған "Ағиҙел" ҡунаҡханаһына алып ҡайтып китеп, ашығыс уҡып сыҡты. Әҫәр уға ла оҡшаны — "Ағиҙел"дең әле әҙерләнеп ятмыш һанына уҡ индереп ебәрәргә хәл ҡылдылар һәм был ысынлап та шулай була яҙҙы ла — редколлегиянан да үтеп, тексты баҫмаға әҙерләү эштәре лә бөттө, бына-бына наборға төшөп китәсәк ине. Был тиклем дә донъяла булмаған тоткарлыҡһыҙ ҡыҙыу барыуына ҡыуанып, әҙәбиәт ылауының дилбегәһе үҙебеҙҙең быуын ҡулына күсә барыуы ошолор инде, тип ирәүәнләнеп кенә йөрөгәнемдә... Ҡараһаҡалдың ҡара һаҡалы ҡайҙа ла ҡалмай, тигәндәй, көтмәгәндә яр аҫтынан яу сығып, Лоҡман-Хәким ағайыбыҙ алыҫтағы ялынан ифрат асыуланып, ажарланып ҡайтып төштө лә, коллегалары әҙерләгән журнал һанының йөкмәткеһен пыран-заран туҙҙырып, минекен дә быраҡтырған булып сыҡты һәм, әйтергә кәрәк, ваҡиғаның иң елле-дауыллы өлөшө редакцияла үҙемдең күҙ алдында барҙы. Редакция коллективы был осорҙа, дөрөҫөн әйтергә кәрәк, баш редакторҙың етәкселек ысулындағы ҡайһы бер "баш- баштаҡлығынан" йөҙәп, бер килке

хеҙмәткәр, шул иҫәптән баш редактор урынбаҫары Әхиәр ағай Хәкимов һәм әҙәбиәт-сәнғәт бүлеге мөдире Рафаэль Сафин, дыуамалланып “баш күтәргән” — тейешле урынға ҡағыҙ юлландырған хәтәр мәл ине, мине лә, бәлки, шуның еле көйҙөргәндер. Тейешле урын был низағты ла баш редактор файҙаһына хәл ҡылғас, Әхиәр ағай Хәкимов, яратҡан эшен ташлап, Мәскәүенә ҡайтып китте һәм шунда һеңеп ҡалды, ә ҡорҙашым Рафаэль Сафин, тешен ҡыҫа биреп булһа ла, өнһөҙ-тынһыҙ эшләүен дауам итте. *Лоҡман-Хәким* ағайҙың, тыштан ҡырыҫ ҡыланһа ла, эстән йомшаҡ күңелле, эскерһеҙ булыуы һәм дөйөм эш мәнфәғәтен шәхсилектән өҫтөн ҡуйыуы ошонда ла күренде — Рафаэль менән артабан да улар бергә-бергә бер бүлмәлә ултырып эшләнеләр һәм, минең белеүемсә, икеһе лә бер-береһенә юғары ихтирамлы, татыу булдылар. Ә үҙемә килгәндә, үтә ҡаты бәрелеүенә үкенеберәк, буғай, *Лоҡман-Хәким* ағай баяғы шомло аҙна араһында уҡ мине саҡырып алды, әҫәремдең тәүге бер өлөшөн бөтә ғәләм алдында, күңелемде күтәрергәләр инде, “Шолохов ҡәләменә тиң проза” тип маҡтап, шул өҙөгөн “хәҙер үк Наборға төшөрөп ебәрергә” тәҡдим иткәс, икеләнмәй ризалаштым һәм ул баҫылып сыҡты. Тиҙҙән Ҡазанда Рәсәй йәш яҙыусыларының ижади конференцияһы асылып, унда ҡуйылған баяғы повесемдең урыҫсаға һүҙмә-һүҙ тәржемәһе Мәскәү яҙыусыһы Йәмил Мостафиндың хуплауына лайыҡ булмағас, теге ваҡыт әҫәремдең ыңғай яғына өҫтөнлөк биргән өс ҡәләмдәшем дә, кире яғына төп иғтибарын йүнәлткән *Лоҡман-Хәким* ағай ҙа бер юлы хаҡлы булғандар, тигән һөҙөмтә яһаным.

Лоҡман-Хәким ағай Ғиләжев, өҫтәрәк әйтеүемсә, әҙәбиәттә *лә*, сәйәсәттә *лә* мәсьәләне үтәнән-үтә күрә, дөрөҫ баһа бирә торған аҡыл эйәһе ине. Һәр кем менән дә һәр урында тураһын ярып һөйләште, түрәләргә ҡойроҡ болғамаған ғорур етәксе булды, ә был уға еңел бирелмәгәндер. Сөнки беҙҙең замандағы тоталитар хакимиәт партияһының “әҙәбиәт фронты”ндағы етәкселек ысулы, ябай ғына әйткәндә, шунан ғибәрәт ине: бөтә яҙыусылар — көтөүсе әйҙәгән яҡҡа ғына барырға тейешле һарыҡ көтөүе, ә көтөү башында партия үҙе ҡулына шөңгөр борғо менән оҙон һаплы сыбыртҡы тотороп ҡуйған, түше йылтыр миҙалдар менән биҙәлгән һәм ижадын донъя классикаһы кимәленә күтәреп ҡупырайтылған берҙән-бер олпат көтөүсе, “мудрый”, партия борғоһона өрөп һәм сыбыртҡыһын шартлатып, көтөүҙе “генераль линия”ла өйөрөп алып бара. Ҡыҙыл фирҡәнең һиммәтле был ҡустыһына эреле-ваҡлы фиҙакәрҙәр — түбәнгерәк дәрәжәле ҡустылар беркетелгән, йәмғеһе бергә Яҙыусылар берлегенең һәм редакцияларҙың аппараттары тип атала (был минең генә фекер түгел, ә заманында зыялылар араһында таралған мәрәкә ине). *Лоҡман-Хәким* ағай ана шул иерархияны танырға теләмәне, Яҙыусылар берлеге һәм редакциялар өҫтөнән борғо уйнап сыбыртҡы шартлатмыш “олпат көтөүсе” менән дә, йәне инанған үҙ ҡараштарын яҡлап, ҡара-ҡаршы алышты. Тураһын әйткән — туғанына ярамаған, тигәндәй, ана шул туралығы өсөн ул аҫтан да, өҫтән дә бер юлы ҡыҫым аҫтында иҙелеп йәшәне, буғай; быны үҙе һис кемгә һиҙҙертмәһә лә, рухи көсөргәнешен баҫырғалыр, нәҡ шул йылдарҙағы атаҡлы А.

Твардовский һымаҡ уҡ, баяғы шул “асы һыу»ға ныҒыраҡ тартылды. Аҡыл эйәһенең ошо йомшаҡлығын һәр төрлө ялағайҙар, яланыусы ярандар йәтеш файҙаландылар, балға ҡунған себендәй һырынылар. Бер өйлә ваҡытында, мәҫәлән, үҙәк ялғарға тип, Ленин урамындағы фирма магазины буфетына һуғылғанда уны ике яранының “шефлығында” осратып ытырғандыҡ: береһе үҙ ҡулы менән ағайыбыҙҙың ауыҙына рюмка түңкәрә, икенсеһе, үҙ ҡулы менән ҡабығын әрсеп, уға беше йомортҡа һоғондора... Шундайын хәлдәрҙән хәүефләнгән бер ҡорҙашы, үҙе һымаҡ уҡ утты-һыуҙы кискән фронтовик әҙип (ул иҫән), ошо хаҡта иптәштәрсә киҫәткәс, “Һе! Рәхәт бит ул ялағайҙар янында донъя көтөүҙәре — ауыҙыңды асҡан һайын ҡалъя һалырға әҙер генә торалар!”, тип хахылдап көлдө, тип әсенеп һөйләгәйне. Был иһә Лоҡман-Хәким ағайҙың, аҡыл эйәһенең, әсе кинәйә менән үҙенең йомшаҡлығынан да, йомшартыусыларынан да көйҙөрөп көлөүе булғандыр. Әммә ҡайһы бер ҡылыҡтары ҡайһы саҡта айныҡ аҡылын томалап, көтмәгәндә ҡырын килтереп һуҡҡан саҡтары ла булғыланы... Мине Яҙыусылар берлегенә ағза итеп, ҡәҙимгесә алдан билдәләнгән исемлек буйынса түгел, ә шул исемлеккә исемемде Зәйнәб апай Биишеваның даулап теркәттертеүе һәм Яҙыусылар берлегенең рәйесе Лоҡман-Хәким ағайҙың да көр тауыш менән тотанаҡлауы арҡаһында алғайнылар. Был ваҡыт мин “Ағиҙел”дә тәнҡит һәм публицистика бүлеген алып бара инем. Шунан һуң ай ҙа үтмәгәндер, рәйесебеҙҙең баяғы ике яранының береһе менән эш буйынса ҡаты асыуланыштым. Өҫтәүенә, сүп өҫтөнә сүмәлә өйөлгәндәй, редакцияла башты баҫып эшләп ултырғанымда ҡыҙмасаланмыш рәйесебеҙ килеп инеп, өҫтәлем ҡаршыһына баҫып, миңә оҙаҡ ҡына текләп торҙо ла, йыйын йәмәғәт алдында йөҙөмдө йыртып: «ниңә ҡалҡынып күҙемә тура ҡарамайһың, күҙеңде йәшерәһең?!” — тип кинәйәле бәйләнде. Ағайымдың баяғы буфет күренеше күҙ алдымда мәсхәрәле шәүләләнеп торғанлыҡтан, ярһыуымды баҫа алмайынса: “Әгәр мин һеҙгә тура итеп ҡараһам, күҙ ҡарашым менән яндырып көл итермен тип ҡурҡам!” — тип оторо яуапланым. “Һе!” — тине лә ағайыбыҙ, өндәшмәй, таяғын туҡылдатып, бүлмәнән елтерәне. Шуның менән эш тә бөткән һымаҡ ине, әммә баяғы бер ялағай яраны ағайыбыҙҙы, ағза итеп алғандан һуң етәкселеккә буйһынмай башланы был малай, тип, өгөп йөрөп миңә ҡаршы ҡыҙҙырған да йәшертен генә “һабаҡ” бирҙерткән булып сыҡты: Яҙыусылар берлегенә яңы алынмыш ағзаларға, тантаналы мәжлес ҡороп, Мәскәүҙән ҡайтартҡан мөҡәддәс ағзалыҡ билеттарын тапшырғанда бөтәһенеке лә теүәл, тик минең билет ҡына “Мәскәүҙән килмәгән” ине... Ә бит яңыраҡ миңә лә, берлеккә алыныуымдың Мәскәүҙә раҫланыуы менән ҡотлап, оло түрә Г. Марков үҙе телеграмма һуҡҡайны... Шулай өс ай кәмһенеп йөрөгәндән һуң, түҙә алмай, Мәскәүгә хат яҙып һорағас, “Ағза итеп алыныуың менән тағы ла бер тапҡыр ҡотлайбыҙ, ағзалыҡ билетыңды, башҡаларҙыҡы менән бергә, үҙегеҙҙең берлек идараһы хеҙмәткәре (баяғы яран! — *Й.С.*) алып ҡайтып киткәйне бит — үҙеңә тапшырырға тейештәр”, — тигән аныҡ яуап килде, бер ыңғайҙан идарабыҙ ҙа иҫкәртелгәндер, буғай. Сөнки, иртәгәһенә үк йүгереп барып ингәс, идара секретаре, ауыҙ

ҙа асмай, сейфтан алып билетымды тотторҙо — шулай булды көтөп алынған тантанам... Эйе, Лоҡман-Хәким Ғиләжев ағай был саҡта, ҡасандыр үҙе 2700 дана ғына тираж менән ҡабул ҡылып алған “Ағиҙел”ен тиҫтәләрсә мең дана тиражға күтәреп, уны ысын халыҡ журналына әйләндергән хәлендә кесерәк ҡәләмдәшенә тапшырып китеп, Яҙыусылар берлегенең рәйесе булып эшләй ине. Тик, үкенескә ҡаршы, үҙенән һуң журнал да, Яҙыусылар берлеге лә лайыҡлы ҡулдарға ҡалманы — баяғы шул үҙен һырып алмыш шылағай бәндәләр хужа булды. Әммә эштән бушатылған пенсионер хәлендә лә Лоҡман-Хәким Ғиләжевтең аҡыллы күр тауышы, төплө-мәргән фекерҙәре әҙәбиәтебеҙҙең бизмән табағын тос баҫыуҙан туҡталманы, ә шиғри ижады, йылдар үтә барған һайын, нескәреп сәскә атты. Йылы һүҙгә мохтажлыҡлы йәш ҡәләмдәштәренә аҡыллы кәңәштәр биреүҙән, ярҙам ҡулы һуҙыуҙан да һис туҡталманы, туранан-тура уның тел дә, ҡул да ярҙамы менән, мәҫәлән, хәҙер инде күренекле шағирә Факиһә Туғыҙбаева ҡурпып күтәрелде, Марс Нуриевтың “аҙашып йөрөгән” романы донъя күрҙе.

Ҡыҙыл империяның ғибрәтле түңкәрелешенә тиклем һуңғы 10-15 йыллыҡтағы башҡорт әҙәбиәтенә ябырылған яһил милли ҡыҫым, геноцид арҡаһында ике тиҫтәгә яҡын башҡорт яҙыусыһының, салғы сапҡандай ҡырылып, ваҡытһыҙ донъянан китеүе, һәм шул “милләтсе” тоҡомдоң фәҡәт йәштән үк ҡара эштә янып сыныҡҡан, “эт ҡайышы”На әүерелгәндәренең генә аумайынса сыҙап тороп ҡалыуҙары күптәребеҙгә мәғлүмдер. Мин дә ул саҡта тарихыбыҙҙың тыйылған һәм йәшерелгән сәхифәләрен аҡтарып, бәғзе берәүҙәр әйтмешләй, күрәләтә “милләтселек һуҡмағы»на баҫҡайным. 1920 йылғы бөйөк башҡорт ихтилалы тураһындағы романымды тамамлап, тәүҙә үҙем яҡшы белгән тәжрибәле бер-ике заттан уҡытып, уларҙың кәңәше буйынса, “ҡыҙыл күҫәк ҡундырыуҙы һорап торған хәтәр урындарын» алып ташлап, “йәмәғәт фекеренә ярашырҙай” ҡабат эшкәртеп, 70-се йылдар башында Яҙыусылар берлегенең сәсмә әҫәрҙәр секцияһына тикшертергә бирҙем (секциянан хуплау ҡағыҙы алмай тороп, әҫәргә юл ябыҡ ине) һәм, бәхетемә күрә, ҡулъяҙма унда шөйлә ыңғай баһаланды; фәҡәт бер һәм берәгәй ҡатнашсы ғына, “Ағиҙел”дең ул саҡтағы баш редакторы, партия өлкә комитетының һ.б. даирәләрҙең Яҙыусылар берлегендә “генераль линия”ны ҡурсалаусы әүҙем күҙ-ҡолағы Ә.М. Мирзаһитов иптәш, мөһәбәт олпатлығы менән албырғатып: “1920 йылғы советтарға ҡаршы баш күтәреү — милли хәрәкәт түгел, ә Башҡортостан көнсығышындағы локаль (сикләнгән) бер ваҡиға ғына ул һәм башҡорт халҡы өсөн типик күренеш түгел” (тимәк, әҙәбиәт темаһы була алмай!), — тип Нарыҡлап эште бөлдөрҙө, гәрсә ул дәһшәтле хәрәкәтте үҙ ваҡытында уҡ “ленинсы партия” ауыҙынан Өфө лә, Мәскәү ҙә Мирзаһитов раҫлауының тап киреһенсә баһалаған булһа ла... Ябылған ишекте ҡабат астыртыу өсөн, ҡулъяҙмалағы “һөрһөп бөткән буржуаз милләтселәр”гә ҡағылышлыларын яңынан мөнтәп ташлап, йәнә төрлөсә ботарлап, ҡыҫҡартыбырак бирһәм дә, юристар әйтмешләй, “приговор к обжалованию не подлежит” булып сыҡты, ә, “Ағиҙел”дә баҫылмай тороп, китап нәшриәте лә ҡулъяҙманы ҡабул ҡылып алмай ине. Ошо арҡала

ҡабартылған “аҫтыртын “милләтсе”легем, 80-се йылдар башында йәнә килеп Дәү Хоҙайҙың әмере менән “Ағиҙел”дә “Хәтерхитап” исемле тарихи хеҙмәтемдең “Урал батыр шәжәрәһе” тигән айырым бүлектәре ташҡа баҫылып сыҡҡас, айырыуса шойҡанланып көсәйҙе... Яҙған берем үтмәй быуылып ятҡан, олпат етәкселәребеҙҙең “Ағиҙел”дәге баш мәҡәләләрендә исемем һәм ижадым ылғый ғәйепләүҙәр менән телгә алынған, “Урал батыр” эпосының әллә нисәмә мең йылдар элек үк ошонда ижад ителеүен, донъялағы тәүге тапҡыр ат өйрәтеүҙең һәм тәгәрмәс уйлап табыуҙың да күп мең йылдар элек ошо Уралда уҡ башҡорттар тарафынан башҡарылыуын көс-хәл менән халыҡҡа еткергәнем өсөн миҙаллы һәм миҙалһыҙ “мудрый” түрәләребеҙ Өфөнөң һәм Мәскәүҙең Юғары трибуналарынан, исемемде әйтеп тә, әйтмәй ҙә, “милли сикләнгән автор”, “һаташыусы” мөртәт рәүешендә хәтәр тамғалаған саҡтарында ла, бөтә ғаләм, тигәндәй, миңә арҡаһы менән боролғанында ла быларҙың барыһын да үтә күреп дөрөҫ аңлаусы, баһалаусы, хаҡиҡәтте ярып һалыуҙан ҡурҡмаусы Лоҡман-Хәким ағайҙың ошо донъяла барлығы, ваҡыт-ваҡыт миңә теләктәшлек белдереүе рухыма терәк булды. Баяғы шул “милли сикләнгән”легем арҡаһындалыр инде, 50 йәшлек юбилейым айҡанлы икенсе бер романымдан ҡалынырак китап сығарыу (ә ул сыҡмаһа, тапап ташларҙар ине!..) мөмкинлегем дә ҡыл осонда эленеп ҡалғас, Яҙыусылар берлегенең яуаплы бер эшмәкәре яуаплы партия йыйылышында романымды асыҡтан-асыҡ ылғый милләтселектә — татарҙарға ҡаршы (ә партия өлкә комитетында һ.б. етәксе урындарҙа ғәййәр холоҡло татарҙар өҫтөнлөк алған саҡ!..) йүнәлдерелгән, тип “фашлағас” (һуңынан был ҡәләмдәшем бәғзе әҫәрҙәремә юл ярыуҙа ярҙамлашты, шуның өсөн мин уға рәхмәтлемен), ә шунан һуң ҡулъяҙмамды партия өлкә комитеты “иләгәндә” ҡыҙыл фирҡәнең икенсе бер өлгөр “опричнигы” тупар балтаһын сапҡас, донъяла мине ҡотҡарырлыҡ бер генә йән эйәһе ҡалғанлығын яҡшы тойоп, үҙем дә ғәййәрләнеп йөрөп, әҫәр хаҡында нәшриәткә эске рецензия һәм китапҡа баш һүҙ яҙыуҙы Лоҡман-Хәким ағай Ғиләжевкә тапшырыуҙарына өлгәштем һәм ул уның еңел ҡулынан китап булып донъяға килеп сыҡты.

“Йыһат туған! — тип өндәште ул миңә 1982 йылдың 5 декабрендә аҡландағы баҡса йортонан яҙған ҡанатландырғыс хатында. — “Лучше поздно, чем никогда”, ти быңдай саҡта урыҫтар. Һиңә лә ярты быуат булып киткән дә баһа! Төҫ-башыңа ҡарап ҡына түгел, ижади дәртең менән дә һиңә быңдай йәште бирмәҫ инем, Валлаһи. Айырыуса хәҙерге йәш ҡәләмдәрҙең ҡайһы берҙәре менән сағыштырғанда. Ундайҙарға ҡарайһың да, ни әйтергә белмәй, аптырап ҡалаһың: төҫ-киәфәте былай йәш тә кеүек, ә әйберҙәрен уҡыһаң, ҡарттар хәлһеҙлеге, ҡарттар мығырҙаныуы, ғөмүмән, — һөрһөгән еҫ аңҡып тора. Ҡыҫҡаһы, ҡанаттары юҡ, елкәнһеҙҙәр.

Ә һинең көр тауышың, тос фекерең, ҡаты (моряктарса!) аҙымың әллә ҡайҙан ишетелеп тора: вайымһыҙҙарҙы һиҫкәндерә, моңһоҙҙарҙы уйланырға мәжбүр итә, талсыҡҡандарға көс-ҡеүәт бирә, хатта үҙен ғалим һанап йөрөгәндәрҙең дә “академический” олпат йоҡоларына ҡамасаулай,

кандидатско-докторский диссертация ҡорамаларынан һырылған юрғандарын һирпеп ташлап, торғоҙоп ултырта.

Ә бит һинең, өҫтөңә Ағиҙел пароходствоһы матросының бушлатын кейеп, "Ағиҙел" (ул саҡта "Әҙәби Башҡортостан") журналы редакцияһына хикәйә күтәреп килеп кереүең, кисә генә кеүек, бөгөнгөләй күҙ алдымда. Хикәйәң дә Ырымбур далалары тураһында ине буғай (Шолохов манераһындараҡ. Хәтеремдә шулай ҡалған).

Ай, ғүмер тигәндәрҙең үтеүҙәре шул була торғандыр инде ул. Ләкин уфтанып, үкенерлек йәшәмәнең һин уны, Йыһат туған! Киреһенсә, башҡаларға өлгө булырлыҡ! Күпме ауырлыҡтарҙы еңеп сыҡтың! Сөнки һәр саҡ үҙең булып ҡалдың, морадыңа ынтылдың. Азамат һин, Йыһат. Һәр ваҡыт шулай булып ҡал.

Һинең эҙләнеүҙәреңде, ижадыңды һәм үҙеңде яратып, ҡәләмдәшең **Хәким Ғиләжев**".

...Тере саҡта һуңғы тапҡыр күрешеүебеҙ уның 70 йәшлек юбилей тантанаһында Өфө дәүләт филармонияһында булды. Дөрөҫ, йүгереп килеп ҡулын ҡыҫа алманым, сөнки ул фоегә сыҡманы, ә түрәләр йөрөй торған артҡы ишеккә барырға баҙнатһыҙландым. Хәйер, халыҡ менән бергә килеп, халыҡ араһында залда уртаҡ ҡыуаныс кисереү — ихтирамдың иң оло билдәһелер... Ул сәхнә түрендә ултырған еренән залдағы һәр кемдең йөҙөнә моңһоу күҙҙәрен тултырып, һуңғы тапҡыр күрешкәндәй, оҙон-оҙаҡ текләп ҡараны һымаҡ. Бер мәл икебеҙҙең күҙҙәр осрашты, ул, көлөмһөрәп, һиҙелер-һиҙелмәҫ кенә эйәк ҡағып хушлашты... Саҡыланып, осҡонланып ҡара Күкте сыйып барған сағыу метеор үҙенең тура һыҙыҡлы юлының мәңгелек осона сыҡты, гонаһ шомлоҡтары менән тулы әрһеҙ донъябыҙҙа яҡтылығы баҙлап ҡалды.

1998.

2. ҺҮРЕЛМӘҪ МОҢ

Бөтәһе лә, бөтәһе лә тик әле генә кеүек – 70 йәшлек юбилейы тантана-һында Филармонияның ҙур залынан хәләл ефетем Сания менән сәхнәгә күҙ тегеп ултырыуыбыҙ: ҡәҙимгесә ялҡынлы телмәрҙәр, йырҙар, сәскәләр, "Каруанһа-рай" ижад төркөмөнөң тиҫтәләгән ҡорал-дарҙа һауа шаңғыртып, ер тетрәтеп уйна-уы; уҡмаш сал сәстәре иңдәренә төшкән аҡмыйыҡ юбилярҙың, шул шау-шоуҙан интегә биреберәк, буғай, күреп ҡалайым-сы, тигәндәй, залға әленән-әле күҙ йөрөтөүе, ҡәләмдәштәре араһынан беҙ икәүгә ҡарашын туҡталдырып, уйсан ғына баш һелкеп сәләмләшеүе... Инде нисәмә-нисә йылдар һыуҙай ағылып үтте, вафатына ла тиҫтә йыл, әммә уны беҙҙән айырған арауыҡ, әйтерһең, булмағандай. Сөнки күңелдәрҙә һаман тере ул: үтәләй күрер күҙ ҡарашы; ирҙәрсә ҡырыҫыраҡ тауышы; тыштан – йомоҡ, эстән дарьялай киң-нескә күңеле; ете үлсәп бер киҫмәле тәрән аҡылы, шул уҡ ваҡытта ҡылды ҡырҡҡа ярырҙай ҡыйыулығы; уҙаманлыҡ намыҫы; дуҫтар менән ултырҙаш саҡтағы

илһамлы сәғәттәрендә ғәжәп аһәңле итеп, бүлмәне тултырып өзләүе һәм, әлбиттә, нәфис лириканы яугир публицистикаға ҡуша биләүләгән көр шиғриәте; шиғриәтле прозаһы – бөтәһе бергә йөрәк елкеткес көслө моң хасил итеп, биғәйни, өзләп тора...

Ватаныбыҙға тоғролоҡ антын намыҫлы үтәү хаҡына йәшләй генә ут эсенә барып кергән взвод командиры Лоҡман-Хәким Ғиләжевтең ижади яҙмышын шул бөйөк яу йылдары билдәләне:

Аңды юйып яра һыҙлаганда,
Кипкәндә лә хатта електәр,
Һынмай торган тимер ихтыярымды
Мин Ватаным тиеп йөртәм.
(Ватанымдың йөрәк ялҡыны).

Эйе, миңә ун һигеҙ йәш ине. –
Иртә эйәр һалган тай кеүек,
Йәшлегемдең хозур сахраһына
Дыулап килеп керҙе яу көнө...

Ауыр йылдар... Ергә һеңеп ҡалыр
Одерҙагы усаҡ көлдәре.
Беҙҙең быуын һаман алга барыр,
Йәшел һалдат тогон күтәреп.
(Агиҙелдә йәшен уттары).

1964 – 65 йылдарҙа әҙәбиәтебеҙ донъяһын шаулатҡан илаһи моңло әҫәр – һуғыштан ҡайтҡан тоташ быуынға һәйкәл булырҙай баҙыҡ романы тыуҙы һәм ул “Погонһыҙ һалдаттар” тип юҡҡа ғына аталманы, сөнки автор үҙе лә бит ижадындағы яугир -- погонһыҙ һалдат ине (мәңге шулай ҡалды ла).

Әгәр уның биографияһын барлаһаң, яугирлек ойотҡоһо уға, әйтерһең, яҙмыштың үҙе тарафынан әсә һөтө менән һалынған.

Лоҡман-Хәким Ғабдрахман улы Ғиләжев 1923 йылдың 1 мартында хәҙерге Бүздәк районының Ҡаңғы-Төркәй ауылын-да донъяға килә; бәләкәстән етем ҡалып, донъяның әсе-сөсөләрен ныҡ татыһа ла, бирешмәй, мәғрифәт нурҙарына сарсап ынтыла. Ауылдың ете йыллыҡ мәктәбендә белем алғас, 1937 – 1940 йылдарҙа Дәүлә-кән педагогия училищеһен уңышлы тамам-лай ҙа шундағы урта мәктәптә уҡытып йөрөй. Әүҙем яҙышҡан егетте район гәзитенә эшкә саҡыралар; шунан һуң ул район халыҡ мәғарифе бүлегендә -- инспектор, МТС-та – политбүлек башлығы ярҙамсыһы.

1941 йылдың 22 июнендә Ватаныбыҙға герман-фашист ғәскәрҙәре баҫып кергәс, егетебеҙ хәрби хеҙмәткә алынып, Эстәрлетамаҡтағы Ҡыҙыл Армия политсоставын камиллаштырыу курсына ебәрелә; аҙаҡ Өфөләге хәрби училищене бөтөп, взвод командиры сифатында фронтҡа оҙатыла.

Һуғыштан ҡаты яраланып ҡайтҡан яугир иң тәүҙә белемен арттырырға тотона: 1949 йылда Башҡорт дәүләт педагогия институтын тамамлап, 1959 йылға тиклем Эстәрлетамаҡ уҡытыусылар институтында тел-әҙәбиәт уҡыта; шул осорҙа ижады әүҙемләшеп, 1948 йылда сыҡҡан "Йәшен уттары" йыйынтығы әҙәбиәтебеҙгә тос фекерле, нескә тойғоло үҙенсәлекле шағирҙың килеүен хәбәр итә. Артабан уның китаптары йыл аралаш йәки йыл һайын, тигәндәй, донъя күрә.

Тәрән белемле, зыялы ҡәләм эйәһенең ғилми эштәргә лә, журналистикаға ла маһирлығы СССР Фәндәр академияһының Башҡортостан филиалына ҡараған Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтында, артабан "Совет Башҡортостаны" гәзитендә эшләгәнендә уңышлы һынала. Туған әҙәбиәтебеҙҙең уҙаманы булырҙай кешене тиҙ үк күреп, шуғаса бер ҙә мантый алмаған, тиражы 3 -- 5 меңдән ары үтмәгән "Әҙәби Башҡортостан" (хәҙерге "Ағиҙел") журналына баш редактор итеп тәғәйенләйҙәр; ул шунда 1955 йылдан алып 1968 йылға тиклем иң һыҙғанып эшләй; баҫмаға күркәм аҡсарлаҡлы "Ағиҙел" исемен биреп, уны уҡыусылар араһында таратыу эшен киң йәйелдереп (хатта шырпы ҡаптарына ла "Ағиҙел"ле рекламалар баҫтыртып), һөҙөмтәлә журнал тиражын тарихыбыҙҙа булмаған бейеклеккә -- 60 меңдән ашыу данаға күтәрә (бындай ҡаҙанышты һуңынан төшөбөҙҙә лә күрмәнек)... 1968 – 1972 йылдарҙа Л.-Х. Ғиләжев – Башҡортостан Яҙыусылар берлеге рәйесе, бер үк ваҡытта СССР һәм РСФСР Яҙыусылар берлектәренең идара ағзаһы, БАССР Верховный Советы депутаты.

Һуғыштағы батырлыҡтары ике тапҡыр I дәрәжә Ватан һуғышы ордены һәм миҙалдар менән билдәләнгән оло шәхес тыныс хеҙмәттә лә, тап фронттағылай, иң алғы сафта бара: әҙәбиәтебеҙҙе үҫтереүҙәге емешле эшмәкәрлеге өсөн Хеҙмәт Ҡыҙыл Байрағы ордены менән бүләкләнә. 1973 йылда уға республикабыҙҙың Салауат Юлаев исемендәге юғары бүләге бирелде, РСФСР-ҙың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре тигән исемде алды – партия һәм хөкүмәтебеҙ ил фиҙакәрен лайыҡлы һәм ғәҙел баһалай кеүек ине. Ләкин тоталитар режим сәйәсәтенең аҫтыртын төпкө ағыны был уҙаманға ла йыш ауырттырып һуғылды. Сөнки ул – шәхес ине: аҙым һайын юғарыға ҡарап яраҡлашманы, һәр йәһәттән үҙен ғәҙел Ватанда, ғәҙел заманала йәшәгән ғәҙеллек яугире итеп тойҙо; бәғзеләрҙәй бер төрлө һөйләп, икенсе төрлө эшләүҙе йәне һөймәне; намыҫын юйған, ләкин түрәлек креслоһын юймаған һәр төрлө бушҡыуыҡ бойормандарҙың ҡылығынан көйөнөп ҡырыҫланды:

Йәшлегемдән килә ҡырыҫлығым,
Ғәмһеҙ ышаныҫым, һағышым.
Мөхәббәттә уға бурыслымын,
Бөтәһен ул бирҙе табышып, --
Барын икәү алдыҡ һуғышып.
(Минең йырым).

Ҡыҙыл партия билетлы битһеҙҙәрҙән айырмалы булараҡ, Ватаны, берҙәм совет халҡы өсөн йәнен фиҙа ҡылырҙай ысын коммунист, инанған коммунист ине ул; яҡты киләсәккә ихлас ышанып, күрәләтә серегән режимдың сереклеген күрмәҫкә тырышып (сөнки гүзәл идеалдары селпәрәмә киләсәк!..), күргәндә лә, моғайын, уны ҡурсалап (сөнки идеалһыҙ ҡалыу – үлем менән бер!..) йәшәне. Әммә ул, ҡорҙашы Назар Нәжми тамғалаған "һарай йырсыһы" – әҙәбиәт генералы булыуҙы үҙһенмәне, инанған үҙ юҫығынан елгә ҡаршы юл ярҙы, яуаплы мәлдәрҙә яуаплылыҡты үҙ өҫтөнә алыуҙан да ҡурҡманы. Хамелеонға әүерелмәй йәшәүҙәре ни тиклем ҡыйын булһа ла, үҙ аҡылы, намыҫы буйынса барҙы, был йәһәттән уны урыҫ әҙәбиәтендәге осорҙашы А.Т. Твардовский менән тиңләргә мөмкин. Әйтәйек, Шәйехзада Бабич исемен матбуғатҡа сығарыуҙан күптәр шөрләгән, ә Назар Нәжмиҙең Башҡортостан китап нәшриәтендә баҫылып һәм төпләнеп бөткән йыйынтығы (Н. Нәжми. Һайланма әҫәрҙәр. Өфө -- 1968) бер битендә Бабич исеме киткән өсөн генә лә тотҡарланып, һәр китаптан шул битен йыртып ташлатып, "Бабичһыҙ" бит йәбештерткән шомло дәүерҙә лә шөңгәр ҡыйыулыҡҡа барҙы: бөйөк шағирҙың яҡты һынын халҡыбыҙға ҡайтарып биреү йәһәтенән уның Ырымбур осоро дуҫы, ҡәләмдәше Төхфәт Сенәкәй хәтирәләрен 1959 йылда "Әҙәби Башҡортостан" журналында донъяға сығарҙы. Шулай уҡ тыйылған һәм онотолоуға дусар ителгән милли ҡаһарманыбыҙ Муса Мортазин тураһында башлап халыҡҡа еткертеүсе ("Әҙәби Башҡортостан" журналы, №9, 1959) лә Ғиләжев уҙаман ине. Бының өсөн партия өлкә комитеты бюроһы 12 июнь 1963 йыл ултырышының үтә йәшерен ("совершенно секретно") ҡарарында: "Указать редколлегии журнала "Агидель" на ее неразборчивость в подборе материалов для публикации. Потребовать от редактора журнала т. Гилязева усилить требовательность к идейному содержанию публикуемых материалов", -- тип шелтәләнһә лә, йылдар үтеү менән редакторҙың хаҡлылығы, ә хөкөмдарҙарының тишек кәмәгә ултырыуы асыҡланды.

Яҙыусылар берлегенең рәйесе булып эшләгән йылдарында уның етәкселек, кешелек, ватансылыҡ сифаттарының иң күркәм һәм емешле яҡтары асылды. Юғарынан "айт!" тигәнгә "тайт!" тип бармаған, үҙ ҡарашын ныҡышмалы яҡлаған тура һүҙле кадрҙы өҫтәгеләр өнәп еткермәһә лә, фекерҙәренә йыш ҡына ҡолаҡ һалалар, ҡабул ҡылалар ине. Шул осорҙа әҙәбиәтебеҙ баҙыҡланып, күп кенә яңы таланттар үҫеп сыҡты, байтаҡтары Яҙыусылар берлегенә ағза итеп алынды. Тыштан ҡырыҫыраҡ холоҡло, ләкин ғәҙел һәм кеше йәнле булараҡ, Лоҡман-Хәким ағай ауыр яҙмышлы таланттарҙы, бигерәк тә йәштәрҙе ҡурсаларға, уларҙың үҙ-үҙҙәренә ышанысын нығытырға тырышты. Мәҫәлән, башын ҡайҙа терәргә белмәй интегеп йөрөгән моңло шағир Нур Хәбиров кеүектәргә һәр яҡлап ярҙам күрһәтеүе билдәле. "Әҙәбиәт маһирҙары" тарафынан ситләтелгән, бер-ике повесен шулар хатта "йоторға" ла өлгөргән Марс Нуриевтың ҡулъяҙмаһын ҡулына ҡәләм тотоп уҡып, ҡайһылай ипкә килтерергә кәрәклеген күрһәткәс, был роман китап булып баҫылып сыҡты (әйткәндәй, заманында Вәзих Исхаҡовтың беренсе романы менән дә шулай булған).

Мине ул 1956 йылда Хәрби-диңгеҙ флотынан ҡайтып күҙенә сағылыуым менән үк хәтеренә ныҡлы беркетеп, ғүмере буйына айырым иҫәптә тотто, мөмкин тиклем ярҙам итергә тырышты. Үҙенә лә “тарих ене” ҡағылғанлыҡтан, Уралдың үткәндәре, археологияһы буйынса яңылыҡтарҙы гәзит биттәренән ҡырҡып алып, почта аша ебәреп торҙо. 2002 йылда ғына донъя күрәсәк “Хәтерхитаб”ымдың тәүтелгә һәм һүҙҙәрҙе реконструкциялауға ҡағылышлы ҡайһы бер өлөштәре, ҙур ҡыйынлыҡтар аша үтеп булһа ла, матбуғатта баҫылып сыҡҡас, ҡаршы суҡмар һаплаусыларҙың ишәйеүенән үҙем менән ҡуша көйөндө. Ҡаңғырып йөрөгәнемдә фатирына саҡырып, күңелемде күтәреп, рухи тотанаҡ рәүешендәлер инде бүрәт ғалимы С.Ш. Чагдуровтың 1980 йылда “Наука” нәшриәте сығарған “Происхождение Гэсэриады. Опыт сравнительно-исторического исследования древнего словарного фонда” тигән китабын бүләк итте. Бер-беребеҙҙе бөтөнләй белмәһәк тә, был ғалим да тап мин барған юлдан бара, боронғолоҡто төпсөүҙә мин ҡулланған ысулдарҙы ҡуллана; тимәк, яңылышмағанмын! Ныҡыша торғас, “Ағиҙел”дең 1982 һәм 1984 йылдарҙағы дүрт һанында баяғы буласаҡ китабымдың “Урал батыр шәжәрәһе” тигән тос ҡына өлөшөн сығартырға өлгәштем, хатта журналдың йыллыҡ лауреаты ла иттеләр. Әммә ҡара болоттар тағы ҡуйырып, 1984 йылдың 8 июнендә (протокол №1) Яҙыусылар берлеге рәйесе Ә.М. Мирзаһитов бүлмәһендәге редколлегия ултырышында (мине саҡырманылар) әҙәбиәтебеҙ генералы: “Урал батыр шәжәрәһе” эссеһы нимә ул? Иптәш тарихсылар, аңлатып бирегеҙ! Был бит ***бред!***” -- тип уҫал екергәс, Йыһат Солтановты эштән олаҡтырыу мәсьәләһе ҡуҙғатыла; Мәскәүҙәге “Литературная Россия” гәзитенең 1987 йыл 13 март һанында рәйесебеҙ Ә.М. Мирзаһитов та ҡәләмдәшенең ошо хеҙмәтен ***“бред”*** тиеп тамғалай...

Илдә дөйөм етәкселек сереп ҡаҡшаған шарттарҙа 1986 йылдың 2 декабрендә яҙыусылар партия ойошмаһының асыҡ йыйылышы булды. Докладтан һуң һорауҙарға яуап биреү өлөшөндә берлектең яуаплы сәркәтибе Б.З. Рафиҡов, нигеҙһеҙ яла яғып: “Беҙ Йыһат Солтановтың романын шуның өсөн баҫтыртмаҫҡа ҡарар ҡылдыҡ, сөнки унда ***милләтселек*** көслө -- күрше туғандаш татар милләтен түбәнһетә”, -- тип иғлан ҡылғас, мин һүҙ алып, туранан-тура барыһын ярып һалғайным, оло ғауға ҡупты: коммунистар, бер-бер артлы трибуна артына баҫып, “милләтсе” Й. Солтановтың тетмәһен тетәһе урынға етәкселектең серегән эш ысулдарын яман ҡамсыланылар, бюроның һәм идараның йыллыҡ эшен “ҡәнәғәтләнерлек түгел” тип баһаланылар. Ауыҙҙары ныҡ бешкән дүрт әҙәби түрәбеҙ ҡул ҡуйған уҫал шикәйәтнамә 11 декабрҙә үк юғарыға атҡарылды; шәхсән Й. Солтановты, булған һәм булмаған “гонаһ”тары менән бергә, теге йыйылышта Б.З. Рафиҡов иғлан ҡылған, заманына күрә иң ҡурҡынысла сәйәси сирҙә (милләтселектә) ғәйепләү ярылып ята унда:

Секретарю Башкирского обкома КПСС тов. Ахунзянову Т.И.

Уважаемый Тагир Исмагилович!

Доводим до Вашего сведения свою оценку отчетного партийного собрания писателей, состоявшегося 2 декабря 1986 года. Фактически оно провалилось, было уведено в сторону от насущных проблем дальнейшего развития башкирской советской литературы демагогическими выступлениями некоторых коммунистов, выдвинувших на первый план свои сугубо личные корыстные интересы...

Теперь очевидно, что среди писателей сложилась группа, поставившая перед собой цель очернить руководство Союза писателей и редакции журнала «Агидель»...

В этот раз для нападков была использована 12-летняя история с рукописью так называемого романа-эссе «Ядкарь» Зигата Султанова. Это произведение (...карикатиурное изображение секретаря обкома), ...правда, не содержит в себе высмеянного Мустаем Каримом султановского утверждения, что башкиры первыми придумали колесо и мазь для него, но целиком подчинено той же глобальной султановской мысли: вся цивилизация началась с башкир, ***полно унизительных намеков в адрес соседних народов...*** *И это произведение в 1974 году было обсуждено на заседании секции прозы и получило одобрение... публикация была прервана по указанию обкома партии...*

Обструкция, устроенная на партсобрании группой себялюбцев, не стесняющихся в выборе средств для прокладки себе пути, прямо скажем, не лучших представителей нашей литературы, конечно же, преследуют цель ***свалить нынешнее руководство Союза и редакции*** *еще до съезда писателей Башкирии, который не за горами. А приход таких людей в руководство чревато многими осложнениями для всей башкирской литературы...*

Меҫкендәр, түрәлек креслолары ауыуҙан ҡурҡалар!..

Шул уҡ айҙың 22-һендә 16.00. сәғәттә “бөйөк” документты тикшерергә партия өлкә комитетында 34 кеше (26-һы әҙип) ҡатнашлығындағы йәшерен йыйылыш була, төп ғәйепләнеүсе Й. Солтановты саҡырмай ҡалдыралар (үҙе юҡта туҡматырғалыр, моғайын). Тик бында ла сығыш яһаусыларҙың береһе лә Солтановҡа ҡаты тел тейҙермәй, киреһенсә, шикәйәтнамә авторҙарын баштан-аяҡ ғәйепләй. Л.-Х. Ғиләжев асыҡтан-асыҡ мине бәләнән аралап, уйындан уҫмаҡ сығарыусы дүрт түрәне үҙ шәреләренә ултырта:

Л.-Х.Г. Гиляжев*. В центральном месте письма — обвинение Султанова в каких-то порочных деяниях. Так вопрос ставить нельзя. Это не времена культа личности. Мы — люди трезво и реально смотрящие на жизнь. Без освоения прошлого невозможно продвигаться вперед.*

П. Загребельный, Ч. Айтматов, А. Алимжанов, бурятский эпос Гэсериада и др. — служат освоению истории. Башкиры поскольку прибыли на Урал из Алтая, мы должны обратиться к истокам своей истории. Жаль, что доктора наук, филологи, не занимаются этим. Если этим занимается Султанов, что в этом плохого? Этого человека надо поддержать, у него очень много наивности, его надо редактировать, поправлять, а не обрубать его работающую руку. Зачем прикреплять ему ***ярлык националиста!***

Роман Султанова читал дважды. А почему бы не обсудить нам всем роман З. Султанова, пригласив ученых из БФАН, БГУ, БГПИ? Выгнали его с работы, это удар по голове главе семьи. Надо бороться со знанием дела. Я не снимаю этот вопрос, пусть прочтут еще человек 15.

Возьмите «Память» В. Чивилихина. Это ведь тоже трудная вещь. Произведение-размышление, эссе. Мы не должны тормозить его работе. Чиновничьий подход к творчеству — пора кончать. В письме много неверного, обывательского.

Мирзагитов пошел на поводу у кого-то, групповщину вы сами создали. Кресло правды не каждому дано. Ты научился писать над другими. Хватит. Пора кончать. Всему есть предел. Мое предложение: пускай они письмо забирают обратно.

“Милләтсе” тамғаһы “халыҡ дошманы”на барәбәр ҡулланылған ул заманала тоталитар режимдың үҙенең ояһында уҡ ҡәләмдәштәрем араһынан мине: “Ул милләтсе түгел!” – тип яҡлаған берҙән-бер инсан ине...

Ун өс йыл буйына төрлө кәртәләр ҡороп интектерелгән, тышҡы һәм эске цензуралар ботарлаған шул “Ядкәр”ем 1992 йылда Л.-Х. Ғиләжевтең баш һүҙ яҙып тотанаҡлауы арҡаһында донъя күрҙе.

Күрмештәрем былың менән осланманы, әлбиттә. 2001 йылдың ғинуарында “Башҡортостан” гәзитендә дауамланып баҫыла башлаған “Башҡорт Шата Ырыҫтаулы – грузиндың бөйөк шағиры” тигән хеҙмәтемде, авторын “башҡорт гегемонсылығы”нда ғәйепләп, аҙағына еткертмәй ҡырҡып ташланылар, “Ватандаш” журналына ла юлды яптылар... Шулай ҙа бирешмәҫкә, башымды юғары тоторға рухландырған таянысым бар ине – Л.-Х. Ғиләжев ағайҙың “Аҡлан” дачаһынан ебәргән ҡотлау хаты:

“Йыһат туған!

“Лучше поздно, чем никогда”, ти быңдай саҡта урыҫтар. Һиңә лә ярты быуат булып киткән дә баһа! Төҫ-башыңа ҡарап ҡына түгел, ижади дәртең менән дә һиңә быңдай йәште бирмәҫ инем, Валлаһи. Айырыуса хәҙерге йәш ҡәләмдәрҙең ҡайһы берҙәре менән сағыштырғанда. Ундайҙарға ҡарайһың да, ни әйтергә белмәй, аптырап ҡалаһың: төҫ-ҡиәфәте былай йәш тә кеүек, ә әйберҙәрен уҡыһаң, ҡарттар хәлһеҙлеге, ҡарттар мығырҙаныуы, ғөмүмән, — һөрһөгән еҫ аңҡып тора. Ҡыҫҡаһы, ҡанаттары юҡ, елкәнһеҙҙәр.

Ә һинең көр тауышың, тос фекерең, ҡаты (моряктарса!) аҙымың әллә ҡайҙан ишетелеп тора: вайымһыҙҙарҙы һиҫкәндерә, моңһоҙҙарҙы уйланырға мәжбүр итә, талсыҡҡандарға көс-кеүәт бирә, хатта үҙен ғалим һанап йөрөгәндәрҙең дә “академический” олпат йөҙоларына ҡамасаулай, кандидатско-докторский диссертация ҡорамаларынан һырылған юрғандарын һирпеп ташлап, торғоҙоп ултырта.

Ә бит һинең, өҫтөңә Ағиҙел пароходствоһы матросының бушлатын кейеп, “Ағиҙел” (ул саҡта “Әҙәби Башҡортостан”) журналы редакцияһына хикәйә күтәреп килеп кереүең, кисә генә кеүек, бөгөнгөләй күҙ алдымда.

Хикәйәң дә Ырымбур далалары тураһында ине бугай (Шолохов манераһындараҡ. Хәтеремдә шулай ҡалған).

Ай, ғүмер тигәндәрҙең үтеүҙәре шул була торғандыр инде ул. Ләкин уфтанып, үкенерлек йәшәмәнең һин уны, Йыһат туған! Киреһенсә, башҡаларға өлгө булырлыҡ! Күпме ауырлыҡтарҙы еңеп сыҡтың! Сөнки һәр саҡ үҙең булып ҡалдың, морадыңа ынтылдың. Азамат һин, Йыһат. Һәр ваҡыт шулай булып ҡал.

Һинең эҙләнеүҙәреңде, ижадыңды һәм үҙеңде яратып, ҡәләмдәшең
***Хәким Ғиләжев**".*
Аҡлан, 05.12.1992.

Йылдар үткәс ағайыбыҙҙың ышанысы аҡланды – сал тарихыбыҙҙа шул уҡ минең юл-юҫыҡтан соҡсоноусыларҙың хеҙмәтен хәҙер "бред" тип тамғаламайҙар, ә үҙҙәрен "милләтсе" тип ғәйепләмәйҙәр... Ә һуң унның үҙенең шул замандарҙа, башҡаларҙы таяндыртып йәшәһә лә, йән таянысы булдымы?

Булды, әлбиттә, сөнки шунһыҙ йәшәүе мөмкин түгел. Һөйөклө хәләл ефете Лина ханым, ятраҡан балалары – һәр саҡ янында; ҡәләмдәштәренән Назар Нәжми, Яныбай Хамматов, Шәриф Биҡҡол, Ғәли Ибраһимов кеүек яҡын дуҫтары, серҙәштәре бар ине. Барыһынан да бигерәк, һүрелмәҫ ижады йәшәтте:

Усаҡта ут һүнгән, тимәле һин,
Йыназаны иртә башлама.
Дуҫтар ташлар, туғандарым ташлар,
Ә йырҙарым мине ташламаҫ.
(Ғүмерем башы).

Ләкин яҙмыш ғәрәсәтенән кем генә лә ни генә аралаһын?..

Һаҡланып ҡалған кескәй автобиографияһында һуғыш ҡырында дошман окобын ырғып үткәнендә аяғын пулә һындырып ҡолауын яҙа. Тыныс тормош тип аталған йылдарҙың 1972-һендә шундай уҡ окопты уҙғанында йөрәгенән яраланды -- ҡолас ташлап дүрт йыл ғына эшләп өлгөргән вазифаһынан бушаттылар (уны алмаштырған "яраҡлы кадр" түрәлек бүкәне ыуалып ауғансы егерме йыл ултырҙы), донъяла унның барлығын, янып йәшәүен күрмәмешкә һалышып, Яҙыусылар берлеге идараһындағы, "Ағиҙел" редколлегияһындағы көндәлек тормоштан да ситләттеләр. Сәхнәһенә хатта Айдар Халим тигән гонаһ шомлоғон ытырғанмайынса мендергән театрыбыҙ патриот шағирҙың Александр Матросов (Шакирйән Мөхәммәтйәнов) ҡаһарманлығына арналған "Ил улы" исемле героик трагедияһын яҡын юлатманы – урыҫсаға тәржемәлә генә урыҫ театрында ҡуйылды. Яһалма онотолоуға дусар ҡылыныуын яҡшы аңлап, ағайыбыҙ Аҡландағы дачаһына йомола, ҡайтмайынса уйланып-моңланып йәшәй. Икмәклеккә эшләп йөрөгән хәләл ефете Лина ханым йәйен-ҡышын аҙнаға бер, йә ҡул арбаһы, йә бәләкәй сана һөйрәп, аҙыҡ килтерә, өҫ-башын, йорт-караһын ҡараштырып ҡайтып китә:

Бәләкәй сана эҙе

Хәләл ефетем Линаға

Өрһәң, ҡанатланып осор һымаҡ,
Күбәләк ҡар япҡан Дим буйын.
Нимә хаҡындалыр серләшәләр
Бары майсыл менән күк муйыл.

Әле төшмәгән хатта ҡуян эҙе,
Ошо мамыҡ ҡарҙар өҫтөнә.
Шул сафлыҡтың үҙенә эҙ һалып,
Һин киләһең сана өҫтөрәп.

Ырыуым тамғаларын һаҡлай һаман
Әсәйем ҡулы баҫҡан аҡ кейеҙ.
Шул тамғалай ҡалһын күңелдәрҙә
Бәләкәй сана һалған һинең эҙ.

Подвалдарҙы, ауыр һөйөүебеҙҙе
Сағылдыра сана эҙҙәре.
Эҙең булып инһен йөрәктәргә
Әйтеп бөтөлмәгән һүҙҙәрем.

Яҙҙар килер, сана эҙе буйлап
Гөрөн йүгерер Димгә, Иҙелгә.
Ҡалын боҙҙарҙы ла күтәреп бәрә,
Дамбаларҙы ла йыра гөрөндәр!

Йырырҙар, Инш-Алла!

СССР тигән бөйөк Ватанды бөлдөргән иҫерек-фетнәсел йылдарҙың һәм ялмауырҙарҙың шауҡымы патриот шағирҙың ҡанһыраған йөрәгенә юшҡын булып ултырҙы; ялмауырҙарға яуап итеп ул Аҡланынан ләғнәт ҡатыш аҡлыҡ шиғырҙарын яҙҙы. Тыуа-тыуғандан туған телен, туған халҡының тарихын барыһынан өҫтөн ҡуйып йөрәк түрендә йөрөткән Лоҡман-Хәким ағайҙы шөкәтһеҙ был ваҡиғалар үткәндәргә тәрәнерәк күҙ аттыртып, үҙенең сал быуаттарҙан дөрөп килгән ырыуының шәжәрәһен төптәнерәк барларға ашҡындырҙы:

Боронго ул ауылым. Мәңге тере
Ҡаңғы ырыуының төркәйе.
Йоҡлай легенданың шаһиттары,
Зыярат сирәменә бөркәнеп.
(Ауылым).

Шиғырҙа телгә алынған был “легенда”ның асылына төшәйек (әйткәндәй, замандаштарыбыҙҙың байтағы быны белмәйҙер). Ул,

ҡабилиәтле инсан, тарихта төрлөсә яҙып йөрөтөлгән үҙенең Ҡанҡа (ҡаңғы, ҡаңғый, кангюй) ырыуының саллығын – иң боронғо Үсәр-Ҡан (Үҫәргән) төп ырыуының көньяҡ-көнсығыш "Ҡан" ҡанаты икәнлеген; йәғни Үҫәргән – шул уҡ Ҡанҡа, ә Ҡанҡа – шул уҡ Үҫәргән (Әхмәтзәки Вәлиди Туған. Башҡорттарҙың тарихы. Өфө -- 1994; 162-нсе бит) икәнен; бөгөнгө Үҫәргәнде биш ара тәшкил иткәндәй, хәҙерге Һиндостандың Ҡанҡа (Ганга) йылғаһы буйындағы сал-боронғо Ҡанҡа ләҡәпле баба ырыуы ла шулай уҡ бер туған биш аранан тороуын, аҙаҡ уларҙың, бөгөнгө Үҫәргән башҡорттарының "Бишкунаҡ" (ҡаҙаҡта "Аҡман-Тоҡман") бураны тураһындағы мифындағылай, алыҫ төньяҡтағы ҡарлы-буранлы изге Уралға хаж сәфәре ҡылыуҙарын һәм уларға ҡушылған бер ҡатын менән бишеһе шул юлда туңып ҡалып, юлбашсы Ҡанҡа баба ғына Дәү Хоҙайыбыҙға барып етеп табына алыуын һәм шунда тороп ҡалыуын (Һинд эпосы "Махабхарата", М. – 1974. 117, 502, 600-өнсө биттәр) яҡшы белгән, әлбиттә. Билдәле булыуынса, "Үҫәргән" этнонимы Әс-Әр-Ҡан (Һыу-Ер-Көн) өлөштәренән хасил – бабаларыбыҙ шуларға табынып йәшәгән; "Махабхарата"ла йырланған биш бабабыҙ ана шул Көн-Ҡояш (йәғни "Кунти") исемле әсәнән тыуған... Һәр хәлдә, 1979 йылда айырым китап булып сыҡҡан "Минең ырыуым" циклын яҙырға шағирҙы шул миф рухландырғандыр.

Инде бөйөк шәхес тураһындағы иҫтәлегемде йомғаҡлайһы ғына ҡалды.

Мәшһүр "Урал" гимны халҡыбыҙҙың барса аҫыл йырҙарының алтын үҙәген тәшкил иткәндәй, Л.-Х. Ғиләжевтең "Башҡорт теле" лә мәшһүр шағирҙың бөтә тәржемәи хәленең, аң-белеменең, ижадының, кисереш һәм яҡты хыялдарының төйнәлеше, төп сыңы булып яңғырай:

Беҙҙе Илле иткән тел ул;
Беҙҙе билле иткән тел ул;
Беҙҙе йәнле иткән тел ул;
Беҙҙе йүнле иткән тел ул! –
Һай, афарин, башҡорт теле!

Беҙҙе батыр иткән тел ул;
Беҙҙе матур иткән тел ул;
Беҙҙе ғорур иткән тел ул;
Беҙҙе сабыр иткән тел ул, --
Һай, афарин, башҡорт теле!

Уралды төйәк иткән тел ул;
Беҙҙе һөйәк иткән тел ул;
Беҙҙе көйөк иткән тел ул;
Беҙҙе бөйөк иткән тел ул, --
Һай, афарин, башҡорт теле!

Йөҙ халыҡты аңлар тел ул;

Изгелекте һанлар тел ул;
Моңло, йырлы сәсән тел ул;
Утты-һыуҙы кискән тел ул, --
Һай, афарин, башҡорт теле!

Мең-мең йылдар үткән тел ул;
Мең киҫелеп үҫкән тел ул;
Ҡылды ҡырҡҡа киҫкән тел ул;
Дуҫлыҡты аманат иткән тел ул, --
Һай, афарин, башҡорт теле!

Шағирҙың был – илгә васыяты ине һәм ил быны яҡшы белеп, тойоп йәшәр, йөрәкте һыҙып үткән моң һис һүрелмәҫ, Инш-Алла!
05.02.2008.

Инсафлыҡ һәм ихласлыҡ

Ғәли ағай Ибраһимовҡа мин иң элек уның 1961 йылда «Ағиҙел» журналында баҫылып сыҡҡан «Йәшен ташы» повесы буйынса иғтибар иттем. Йәшлек-йүләрлектәнме, әҫәрҙәге, миңә ҡалһа, ифрат сағыу сафлыҡ аңҡытҡан үҙенсәлекле ҡатын-ҡыҙ образдары, улар гөрләшеп доньъя көткән ябай ғына ысынбарлыҡ күренештәре күңелемдә онотолмаҫлыҡ булып ярылып ҡалды (әлегәсә һүрелмәй). Ошондай уҡ шөңгөр хисте бала сағымда Сәйфи Ҡудаштың «Ҡушҡайын» шиғри романына бәйле ныҡ кисергәйнем. Шуға күрәлер ҙә инде, был икәүҙе уйлағандан уҡ, иң әүүәл баяғы әҫәрҙәре «ҡылт!» итеп иҫкә төшә.

Уҙамандың үҙен ныҡлап белеүем иһә 1969 йылда «Ағиҙел» журналы редакцияһына эшкә килеүемдән башланды. Етәкселәребеҙҙән Әсғәт Мирзаһитов — баш мөхәррир, йәштәшем Рәйес Низамов — уның урынбаҫары, ә Ғәли ағай Ибраһимов яуаплы сәркәтип булып, барыһы ла «Ағиҙел»де уғата матурыраҡ итеп сығарыу өсөн йән атып йөрөгән әҙәпле, игелекле инсандар ине (ул заманда). Башҡа редакциялар менән сағыштырып ҡарағанда, бындағы тәртип һәм мәҙәнилек бер баш дәүмәленә юғарыраҡ, егәрле бөтә коллектив та күҙгә күренеп торған шул күркәмлекте бер иле лә төшөрмәҫкә тырышып ятҡандай ине һәм был хәлдә, һуңғараҡ аңлап белеүемсә, талапсан да, тәртипле лә, шул уҡ ваҡытта үҙе ғәжәп инсафлыҡ, ихласлыҡ эйәһе булған ғәҙел йәндең — «штаб башлығыбыҙ» Ғәли ағай Ибраһимовтың хеҙмәте ифрат ҙур булды. Бер ваҡытта ла бер минутҡа ла сәбәпһеҙҙән эшкә һуңлап йөрөмәҫ, көн оҙонон башын баҫып ҡулъяҙмалар, корректуралар уҡыу өҫтөндә үткәрер (шуның менән беҙгә лә егәрлелек сәмен йоҡторор), бер кемгә лә, гәрсә ул ғәйепле булһа ла, тауышын һис күтәрмәҫ — дәлилдәрен тыныс ҡына сүкеп һеңдерер ине. Әммә атанан ала ла, ҡола ла тыуа, тиҙәр бит. Миңә тиклем «Ағиҙел»дә шағир Хәсән Назар менән йәнәшә ултырып эшләгән, тәүге китабынан уҡ үҙен шөңгөр шағир итеп танытып та, сығынсы аттай

тибеп тәртә һындырырға һәләтле ҡулсырйән хеҙмәткәр ҙә бар ине — хәйерһеҙҙән шәхсиәте мөхтәрәм Ғәли ағайға һәм башҡаларға ла күләгәләнеп шөкәтһеҙ ҡағылыу ихтималлығынан, телгә алырға тура килә уның бер «шуҡлығын» да. Сөнки «йырҙың йыртығы юҡ» тиҙәр бит; хәтирәләрҙә лә шулай — яҡшымы, яманмы, барыһы ла баштан үткән хәлдәр ул. Шулай ҙа, рәнйетешеүҙәргә юл ҡуймаҫҡа, Ә.Х. тип кенә атайыҡ ул мырҙаны.

Асылы бына ниҙә: мин килерҙән алда ғына коллективта көтөлмәгән хилафлыҡ булып алған, һөҙөмтәлә шуның күңелһеҙ шауҡымын оҙаҡ ҡына төрлөбөҙгә төрлөсә, ләкин ҡыйын кисерергә тура килде, байтағыбыҙҙың ижадына, көндәлек тормошона ла ул шомон һалып йонсотто...

Ҡорҙашым Рәми Ғарипов менән гөр-килешеп «Башҡортостан ҡыҙы» журналында эшләп йөрөй инем әле. Йомош төшөп, «Ағиҙел» редакцияһына барып керһәм, ундағы ҡойто күренештән албырғанып уҡ ҡалдым: барса эшем эйәләре, өҫтәренән әле генә яу ҡыйратып уҙғандай, ҡобаралары осоп, ҡалҡынып та ҡарай алмаҫ хәлдә бойоғоп ултыра, ә йор күңелле Рәйес Низамов үкһеп илар сиккә етеп рәнйегән. «ни булды, ҡорҙаш?» — тип һорауыма ул: «Эй, булды инде, нисек итеп һөйләп торайым шуны!» — тип ҡулын ғына һелтәне. Баҡтиһәң, эш көнөн башлар алдынан бөтөн коллектив менән алдағы бурыстар тураһында ҡәҙимгесә кәңәшеп алыу (планерка) сәғәтендә мөхәррир урынбаҫары булараҡ Рәйес Низамов баяғы әҙәби хеҙмәткәр Ә.Х.-ның ниндәйҙер әхләҡи сатаҡлығын фашлап тәнҡитләй башлағас, ҡолаҡтары ҡыҙарып ярһыған тәнҡитләнеүсе мырҙабыҙ, ырғып тороп, ике ҡуллап ултырғысын күтәргән дә Рәйес Низамовҡа киҙәнгән, ҡыҙыу мәлендә тотоп ҡалғандар, ярай... Ҡулсыр йәнгә һөҙөмтәлә коллективы менән хушлашырға тура килде. Ғауғаны ҙурға ебәрмәй генә йомоп ҡалдырҙылар шулай — ни тиһәң дә, үҙ ҡәләмдәшебеҙ бит. Ләкин бәләсел мырҙа, ағайҙарына рәхмәт әйтәһе урынға, ҡазаланыуын һис сәбәпһеҙ яуаплы сәркәтиптән күреп, юкты-барҙы һөйләнеп тә йөрөнө... Шул һөрөмө алъюҫыҡтан Ғәли ағай Ибраһимовтың яҡты образына ҡунмаһын өсөн, ҡулсыр йәндең әхләҡи йөҙөн төҫмөрләткес кескенә бер тимгелде лә өҫтәйем.

Әйтелгән йәмһеҙ ваҡиғанан элегерәк, ни ҡылырын алдан уҡ юҫыҡламай, баш ҡалаға кәләше менән орҙоло-һуҡтылы килеп төшкән шул йәш ҡәләмдәшебеҙ Ә.Х.-ны, башлап морон төртөр ҙә урыны булмағас, яңы ерҙә баш-күҙ алғандарынса тип, Рәми Ғариповтың үтенесен дә тыңлап, Хоҙай ҡушып «Һәнәк» журналынан өлөшөмә төшкән барлы-юҡлы йылы мөйөшөмә (ҡыҫҡа ваҡытлыса ғына!) өйҙәшлеккә кереткәйнем. Был бик иҫке йорт булып, дүрт ғаиләгә бер кухнялы, һис бер ниндәй уңайлыҡтарһыҙ егерме ике квадратҡа ҡатыным, өс балам һәм оло йәштәге әсәйем Ырымбур яғынан бына-бына күсеп килеп етергә тейештәр ине... Шарт итеп ҡуйылған аҙналар ҙа уҙып китте, минекеләрҙән «фәлән көндән юлдабыҙ» тип телеграмма ла килде, ләкин, нисәмә генә үтенеп иҫкәртһәм дә, бүлмәләштәрем ҡубынырға уйлап та ҡарамайҙар... Ахырыһы, башҡа сарам булмағас, киҫеп кенә ныҡырға тура килде. Әлделәр ҡолаҡҡа, ниһайәт, йәһәт кенә һыпырылып та сыҡтылар, әммә-тик... кешеләрсә

итәғәтле хушлашаһы урынға, Ә.Х. тигәнебеҙ мине донъялағы быҒаса ҡолағым ишетмәгән иң әшәке һүҙҙәр менән эттән алып-эткә һалып һүгеп китте...

Бының менән генә бөтһә, ярай ҙа. Редакциялағы ултырғыслы «батырлығының» шауҡымы, һис бер иҫләмәгәндә, ярлыҡаусыһы Рәмигә лә һирпелде.

Йәштәшем Рәми Ғарипов менән арабыҙға ел-ямғыр үткеһеҙ яҡынлығыбыҙҙың нигеҙе — туған әҙәбиәткә, туған халҡыбыҙ тарихына ҡарата ҡайнар фекерҙәш тә хәстәрҙәш икәнлегебеҙҙә ине, Рәмиҙең эскерһеҙ алсаҡлығы һәм аҡыл эйәһе булыуы ла арбаны күңелемде. Шағирҙы «Туған тел» шиғыры өсөн милләтселектә ғәйепләп (моғайын, КПСС Өлкә комитетының һөстөртөүе буйынса), 1963 йылда «Совет Башҡортостаны» гәзитендә ҡәләмдәше Ғилемдар Рамазановтың мәҡәләһе килеп сыҡҡас, яманатлының тирәһендә уралыусыларға ла Юғарынан шаҡтай шикләнеп ҡарай башланылар. Мин фәҡирегеҙ хаҡында ла, моғайын, йә КПСС Өлкә комитетынан, йә КГБ-нан (был органдың кураторы ла баш мөхәррребеҙ Ә. Мирзаһитов эргәһенә йыш килеп йөрөр ине) “мәғлүмәт”тәр соҡсоноп, бәғзеләребеҙҙе тертләтеү-фәлән булғандыр. Сөнки бер көн, коридор башындағы тәҙрә янында аулаҡлап торғаныбыҙҙа, Ғәли ағай иплэп кенә ҡолаҡҡа тумбыта ҡуйҙы:

— Һин, ҡустым, ауылыңдан яңы ғына килгәнһең, йәшһең әле, талантлыһың, тырышһың. Һәр яҡлап үҫергә, ижадыңды сәскә аттыртырға кәрәк һиңә. Ләкин бының өсөн алдың-артыңды ҡараңҡырап, итәк-салғыйыңды йыйыңҡырап йөрөүең хәйерле, сөнки ижад юлдары бик сутырмаҡлы, ҡатмарлы... — Тәмәкеһен тәрән-тәрән тартып алды ла (ныҡ «тәмәжник» ине ул), күҙҙәремә эскерһеҙ-ихлас текләп, нимәһендер әйтеп еткерә алмағандай, ҡыйынһынып ыуаланды — үҙемде хәстәрләгәне, нимәнәндер ҡурсаларға тырышҡаны күренеп тора ине. Ошоно яҡшы тойһам да, өгөтөнөң артабанғыһы, көтмәгәндә, сәстәремде үрә торғоҙҙо. — Һине, ҡустым, йыш ҡына Рәми Ғарипов менән бергә күрәләр икән... харап булып ҡуйма тағы...

— Нимә?! — Һиҙмәй ҙә ҡалдым тауыш күтәреүемде.

— Үҙеңә мәғлүм булған, Рәми Ғарипов етәкләгән *милләтселәр ойошмаһында...*

— Ялған! Кем әйтте быны? — Ҡолаҡтарыма ышанмай өтөрәйҙем, сөнки ул саҡ «милләтсе» атамаһы «советтар хакимиәтенең дошманы» тигәнгә тиң ине...

— Үкенескә ҡаршы, мин йәки башҡа берәү уйлап сығарған нәмә түгел был, ҡустым... Теге көндө редакцияла Ә.Х.-ның ни ҡыланғанын белдең бит... Профсоюз комитеты һәм партбюро ағзалары (үҙең белгән куратор ҙа) ҡатнашлығында йыйылыш үткәреп тикшерҙек мөшкөл хәлде. Бына шунда (рәсми урында) өмөтлө йәш ҡәләмдәшебеҙ Ә.Х. хәтәр белдереү яһаны: «Баш ҡалала Рәми Ғарипов етәкселегендәге ун һигеҙ ағзанан торған милләтселәр төркөмө бар, мин шулар ҡотҡоһона төшөп кенә ҡылдым был яңылышлыҡты» — тине айырым-асыҡ, һәм шул ун

һигеҙҙең араһында һине лә атап әйтте... Ышанмаһаң, ана Хәсән Назаровтан һора.

Ул саҡта совет ҡоролошона йәнем-тәнем менән бирелгән фиҙакәр коммунист булараҡ, Рәми менән шағирәнә дуҫлығымды милләтселәр ойошмаһының ағзаһы булыу менән бәрәбәр ҡылып башыма ла килтергәнем юҡ ине — шаңҡытҡыс хәл кисерҙем.

— Бына шулай, — тине Ғәли ағай, — ерле-юктан бәләгә тарыуың бар... өҙә күр ул Рәми менән араңды.

— Юҡ! Минең берҙән-бер йән дуҫым ул һәм мин бер ҡасан да өҙмәйәсәкмен уның менән араны! — тинем кинәт күҙҙәрем томаланып, тамағыма ҡаты төйөр тығылып. Ғәли ағай, өндәшмәй, тәмәкеһен төтәтеп тороп ҡалды.

Әлбиттә, төбөнә туҙ ҡуйып (йәки, боҙоп әйтелеүенсә, «тоҙ ҡойоп») төпсөндөм Хәсән туғандан.

— Эйе, тап шулай булды шул, — тип тыныс дөрөҫләне ул. — Рәми ағай етәкләгән милләтселәр ойошмаһы бар, тине. Ун һигеҙҙең араһына һине лә ҡыҫтырып һананы. Етәксебеҙгә ҡул күтәреүенең сәбәбен дә тап шулай, илай-илай, «ойошма»ға япһарҙы...

Яҙыусылар берлеге партия ойошмаһының нәүбәттәге дөйөм йыйылышында партбюро сәркәтибе Фәрит Исәнғоловтың (Юғарынан бойоролғандыр инде): «Арабыҙҙа боҫоп ятҡан милләтселәр төркөмө белеп торһон — эҙҙәренә төшәсәкбеҙ уларҙың!» — тип ажғырыуы ла дөрөҫләне был хәлде. Оҙаҡламай Мирзаһитовтың миңә ҡарашы һалҡынайып, артында кем торғанлығын шәйләнем.

Шуныһы бик имәнес: йылдар үтеп, алтын аҡылға ултырырлыҡ алтмыш йәшен тултырған баяғы япһарыусы, ҡыуаныслы юбилейында зәңгәр экранға сығып, хатта күҙен дә йоммай, «әҙәплемен, ғүмерем буйына әҙәпле булдым» тип үҙен-үҙе ҙурлауы ғына етмәгән, өҫтәүенә: «Ағиҙел»дә эшләгән йәшлек йылдарымда ҡара яла яҡтылар миңә — «милләтсе» тигән ярлыҡ йәбештерҙеләр», — тип алъюҫыҡтан кемдәрҙелер ғәйепләргә маташты...

Ауыр заманалар ине шул Ғәли ағай Ибраһимов сәркәтип булып эшләгән ул йылдарҙа. Илдең, халыҡтың бөтә яҙмышы тулыһынса берҙән-бер һәм сикһеҙ хоҡуҡлы КПСС ҡулында, ә беҙ тырышып хеҙмәт иткән һәм «партияның идеология фронты» тип аталған матбуғат сараларында шул КПСС Өлкә комитетының милли мәсьәлә буйынса йәтешләнмеш ҡыҫынҡы ҡалыбынан бер иле лә сығырға ярамай ине. Башҡорт халҡының тарихы 1917 йылғы бөйөк Октябрь революцияһынан һуң ғына башлана, тигән ҡараш мейеләрҙә ифрат нығынғанлыҡтан, унан боронғораҡҡы тарихыбыҙға ҡағылыу иһә һөрһөп бөткән милләтселек һаналып, республикалағы ни бары ике-өс авторға — партияның «генераль линияһы»нан бер иле лә тайпылмаҫлыҡ һынаулы арҙаҡлыларына ғына ундай теманы кәрәк саҡта кәрәкле рәүештә «яҡтыртырға» ирек ҡуйыла, ләкин хатта улары ла, редакцияның тығыҙ иләгенән тыш, журнал булып сығырҙан элек баяғы Главлиттың (Цензорҙың), партия Өлкә комитеты һәм КГБ-ның үтә нескә еҙ иләге аша тизып үткәрелә, хатта «башҡорт» тигән

һүҙҙе лә корректура биттәренән һыҙып ташлап, «башҡорт халҡы» тигәнде иһә «халҡыбыҙ» тип төҙәтеп ҡуйырҙар ине. Шундай тынсыу мөхиттә авторҙар араһында бының сәбәбен, төптән уйланып ҡарамай, журналдағы бөтә материалдарҙы үҙ ҡулынан үткәреүсе һәм шулар өсөн яуаплы «штаб башлығы» Ғәли ағайҙан күреп рәнйәүселәр ҙә, һәм баяғы үҙен-үҙе мөшкөлләгән алабарман мырҙалай, артынан әрләп йөрөүселәр ҙә булғыланы — Ғәли ағай ана шулай, үҙенең яуаплы вазифаһына бәйле, ике ут араһында янып эшләне (башҡа редакцияларҙа ла шулай булғандыр). Әммә асыҡлап китергә бурыслымын: яҙыусылар өлөшөнә төшкән «партия ҡыҫымы» тигән йәбер Ғәли ағай урынында редакцияла башҡа инсандар эшләгәндә лә һис кенә лә туҡталманы, хатта ул партия юҡҡа сыҡҡан сүрәттәге яңы быуатта ла белдерә барҙы үҙен (мәҫәлән, 2001 йылда минең «Башҡортостан» гәзитендә сыға башлаған «Башҡорт Шата Ырыҫтаулы — грузиндың бөйөк шағиры» тигән тәүәрихемде, «башҡорт гегемонсылығы» тигән ғәйепләү тағып, яртылаш мөнтәттеләр)... Ә инде мөхтәрәм Ғәли ағай Ибраһимовҡа килгәндә, башҡорт халҡының боронғо тарихына, ауыҙ-тел ижадына һәм сәнғәтенә ҡағылышлы материалдарға ул эске тәрән теләктәшлек менән ҡыҙығып ҡарай, журналда уларҙы мөмкин тиклем үткәрергә, халыҡҡа еткерергә тырыша, ундай саҡтарҙа ағайым хатта үтәнән-үтә балҡып, нурланып йөрөр ине. Ошо күркәм сифаттары арҡаһында беҙҙең аралар барған һайын яҡынайып, йылдар уҙымында ихлас серҙәштәргә лә әүерелдек (башҡалар, мәҫәлән, Б. Рафиҡов, менән дә улар шулай булды). Ғүмеренең аҡҡош йыры булып тыуасаҡ данлы «Кинйә» тарихи романын автор ана шул үтә ҡатмарлы йылдарҙа уҡ һөйөп йөрөткән булһа кәрәк күңелендә. Тап ошо әҫәрен яҙып тамамлар өсөн ул 1973 йылда «Ағиҙел»дәге яуаплы эшенән арынып, профессиональ яҙыусы булып китте.

«Ядкәр» тигән романымды мин «Ағиҙел»гә эшкә килгәнсе үк яҙғайным, әҙәби мөхиттең баяғыса тынсыулығы арҡаһында ул оҙаҡ ҡына ҡаралама хәлендә ятты. Етмешенсе йылдар башында, ниһәйәт, машинканан үткәреп, йәнә лә күпмелер «һыуытҡас», «Кинйә»нең мәшһүр авторына уҡырға бирҙем. Башҡорт зыялыларының янып-көйөүле тормошона бағышланған был әҫәремдә хәҙерге һәм боронғо замандар бер-береһенә үрелгән, милләтте борсоған тел һәм тарих мәсьәләләре ҡуйылғайны үҙәккә (партияның баяғы ҡалыбына мөмкин тиклем һыйҙырырға тырышып, әлбиттә). Ләкин тырышлығым бушҡа булып сыҡты: тәжрибәле матбуғатсы Ғәли ағай, дөйөм алғанда, әҫәргә ифрат йылы ҡарашын белдереп, ошо килеш кенә уны был шарттарҙа бер ваҡытта ла ташҡа баҫмаясаҡтарын, хатта башыма бәлә генә аласағымды әйтте асыҡтан-асыҡ... Романдың бөгөнгө көнгә, тәбиғәттең, ер-һыуҙың сафлығын һаҡлау өсөн көрәшкә бәйле һыҙығын ғына айырып алып көсәйтергә кәңәш итһә лә, аяҡ терәп ҡарыштым... Күпмелер ваҡыт үткәс, Ғәли ағай ҡулъяҙмамдың яңы вариантын да йыбанмай уҡып сыҡты, ул ғына ла етмәһә, яҙыусылар берлегенең нәүбәттәге бер йыйынында романды донъяға сығарырға димләп сығыш яһаны. Әммә уның элегерәк әйткәндәре алдыма килде барыбер: китап М.С. Горбачевтың «үҙгәртеп

ҡороу» осоронаса (1992 й.) һис бер ҡуҙғатылмай ун ете йыл буйына «тоҙланып» ятып,байтаҡ ҡына тартыштар аша үтеп, унда ла ярым-йорто хәлдә генә баҫылып сыҡты. Әйткәндәй, әҫәрҙең «Ағиҙел»гә бирелгән вариантын редколлегия ултырышында тикшереп хәл иткәндә (ә был иһә бик мөһим — журналда баҫылмаған әҫәрҙе китап нәшриәтендә ҡабул ҡылмайҙар ине), редколлегия ағзаларының күңелен иретмәккә (унда минең үҙемде саҡырманылар), Ғәли ағай бер ҙур сөмкәне тултырып боронғо тарих буйынса том-том китаптар йөкмәп килгән, хатта фән докторҙары ла был китаптарҙың донъяла барлығын шуғаса белмәгән, имеш...

Башҡорттоң боронғо рухи-мәҙәни тарихы буйынса оҙаҡ йылдар яҙылған, ике тиҫтә йылдан һуң ғына (2002 й.) китап рәүешен аласаҡ «Хәтерхитап» тигән етди хеҙмәтемә лә заманында (1982 й.) Ғәли ағай юл ярып ебәрҙе, тиһәм дә һис хата булмаҫ. Ул, «Урал батыр шәжәрәһе» тигән бер бүлегенең «Ағиҙел»дә «туңып» ҡалыуынан борсолоп йөрөй торғас, яҙыусыларҙың дөйөм партия йыйылышында, көтмәгәндә, «боҙ»ҙо ҡуҙғатып ебәрҙе. Эш шунда: партияның Өлкә комитеты сәркәтибе (буласаҡ әҙип) Т.И. Ахунъянов иптәш шәхсәнә үҙе йыйылышта ҡатнашып, әҙәбиәтебеҙҙә «ер-һыу проблемаһын яҡтыртыу»ҙы ялҡынланып көн үҙәгенә ҡуйғас, Ғәли ағайыбыҙ, итәғәтле генә тора һалып, коммунист яҙыусы Йыһат Солтановтың «Урал батыр шәжәрәһе»ндә тап ана шул проблема тәрән тарихи планда бик ҡыҙыҡлы күтәрелгән, әммә ошо фәһемле әҫәр әле булһа журналыбыҙҙа быуылып ята бирә — ярамай былай, тип әйтеп һалмаһынмы! Ҡөҙрәтле түрә ҡыҙыҡһынып иғтибар итте миңә — Ғәли ағай һүҙенең баҫымы тос ине. Иң мөһиме, Ахунъянов иптәш иртәгәһенә үк «Ағиҙел»дең баш мөхәррире Ә. Гәрәйевте ҡулъяҙмам менән ҡуша саҡыртып алыуын, «Басып чығарығыз!» тип ике генә һүҙ әйтеүен дә ишеттек...

Тарихҡа тарихсан ҡараш менән яҙышыуҙың ул йылдарҙа әҙипкә килтергән бәлә-ҡазаһын Ғәли ағай Ибраһимов та үҙ елкәһендә баштан ашырлыҡ татыны. «Кинйә»нең тәүге китабының ҡулъяҙмаһы, күпселек әҙиптәр тарафынан йылы ҡабул ителеп тә, рәсми органдар яғынан тарихтың был өлкәһендәге берҙән-бер хаҡ баһалаусы абруй итеп һаналмыш Ә.Н. Усманов хөкөмөнә тапшырылып, ҡырҡа кире ҡағылды ла байтаҡ ҡына ваҡыт «ҡаҡланып» ятты. Бер ҡайҙан да, бер ниндәй ҙә эш хаҡы алмайынса, шул әҫәрен яҙыу менән шөғөлләнгән авторҙың ғаилә усағын һүндермәй тоторлоҡ, хатта туҙған өҫ-башына алырлыҡ та сарыфы ҡалмағайны — быны ул ауыр кисерҙе, күҙ алдында ҡартайып, сүгеп ҡалғандай булды. Ә инде ошо ауыр һынауҙарҙы үтеп, әҫәр, ниһайәт, ташҡа баҫылғандан һуң, авторҙың ҡайһылай ҡапыл ғына йәшәреп-балҡып китеүен күрһәгеҙ икән!

...Партия ойошмабыҙҙың бер йыйылышында көн тәртибенә хосусан уның ижади хисабы ҡуйылғас, докладсы итеп ул үҙе мине һайланы һәм был сара арыу ғына килеп сыҡты ла, буғай (бер аҙ ҡыҫҡартылып, 1978 йыл «Ағиҙел»дә баҫылды). Ҡәләмдәштәр ауыҙынан йыйылышта «Кинйә» авторына ихласланып йылы һүҙҙәр әйтелде. Әммә беҙҙә ысын талантты

баһалау, ҡәҙерен белеү етеңкерәмәй шул барыбер. Салауат Юлаев исемендәге дәүләт бүләге лә уға, һабан үгеҙеләй ығышланып, роман урыҫ телендә баҫылып сыҡҡандан һуң ғына 1983 йылда килеп иреште. Ә шунан саҡ ҡына алдараҡ, ғәҙәттәгесә, әҫәр хаҡында киң йәмғәт күләмендәге фекер алышыуҙар булды, тейешле урынға мин дә яҙып ебәрҙем:

«Салауат Юлаев исемендәге бүләк буйынса республика комиссияһына. Өфө, Ғ. Туҡай урамы, 46, 4-енсе ҡат, 408-енсе бүлмә.

Ғәли Ибраһимовтың «Кинйә» романының беренсе китабы республикабыҙҙың Салауат Юлаев исемендәге бүләгенә күрһәтелеү хәбәре яҙыусылар араһында ҡәнәғәтлек менән ҡабул ителде. Сөнки ул, «Кинйә», башҡорт совет әҙәбиәте тарихында иң беренсе һәм иң уңышлы тип иҫәпләнергә хаҡлы булған, ысын мәғәнәһендәге тарихи роман. Уның ошо иң мөһим сифатын документтарға нигеҙләнгән теүәл тарихи ерлек тәшкил итә. Органик рәүештә бергә үрелгән Юғары кимәлле художестволылыҡ әҫәрҙе заман-ваҡыт һынауҙарына бирешмәҫлек эстетик ҡиммәт яһаған.

«Кинйә» романында беҙ бер юлы юғары профессионализмға эйә булған әҙиптең, яңы асыштар менән килгән тарихсының, тел стихияһында үткәндең һәм хәҙергенең сағылышын дөрөҫ тойоп берләштергән лингвистың, халыҡ күңелен яҡшы аңлаған фольклорсының һәм этнографтың ижади ҡаҙаныштарының бергәй автор ҡәләме аша аҫыл эпик туҡымаға туҡылғанын күрәбеҙ. Тап шул яғы менән дә был роман һуңғы йылдарҙағы башҡа ҡайһы бер авторҙарҙың «тарихи роман» исеме аҫтында донъя күргән, ләкин тарихи ерлектәре шыйыҡ булған китаптарынан һәм башҡа баҫмаларҙан ныҡ һәм яҡшы яҡҡа айырыла. Был әҫәрҙе уҡыған кеше башҡорт халҡы менән урыҫ халҡының һәм башҡа халыҡтарҙың үҙ-ара ҡаҡшамаҫ дуҫлығының тәрән тамырҙарын күреп фәһем ала, интернационализм һәм совет патриотизмы рухында тәрбиәләнә. Бындай китаптар йәш быуынды тәрбиәләүҙә үҙе бер мәктәп булып тора.

Ошо иң мөһим күрһәткестәрҙе хөрмәтле Комиссия иҫәпкә алыр һәм «Кинйә» романына лайыҡлы баһа — республикабыҙҙың Салауат Юлаев исемендәге бүләге бирелер, тип ышанабыҙ. Яҙыусы Ғәли Ибраһимовтың ғына түгел, ә ғөмүмән әҙәбиәтебеҙҙең ҡыуанысльı ҡаҙанышын бик лайыҡлы баһалау булыр ине был.

«Ағиҙел» журналының әҙәби тәнҡит һәм библиография бүлеге мөдире: ***Йыһат Солтанов.***

28 февраль 1983 йыл».

Алтын һәр саҡ алтын килеш ҡалғандай, мәшһүр әҙип вафат булып, байтаҡ йылдар үткәс тә, әҙәбиәтебеҙҙең табыштарын да, яңылыштарын да ваҡыт иләге иләгәс тә үҙгәрмәгән икән дәһә ҡарашым! «Кинйә»нең авторы хаҡында иҫтәлек һөйләргә тип бер көн үҙемде ашығыс саҡыртҡастары, ҡағыҙ битенә ҡабалан-ҡобалан һырытҡан фекер төйөндәрем үҙҙәре дәлилләй быны:

«Ғәли Ибраһимов тураһында радионан шаңғыртыр өсөн тезис-теҙмәләр (10.01.1999 й.).

1. Лев Толстойҙың «Война и мир»ы 19-ынсы быуат урыҫ тормошоноң энциклопедияһы булһа, Ғәли Ибраһимовтың «Кинйә» романы — 18-енсе быуат башҡорт тормошоноң энциклопедияһы ул. «Энциклопедия» тигән һүҙ менән бөтә нәмә әйтелгән: 1) көнкүреш, 2) тел, 3) гөрөф-гәҙәт һәм йола, 4) дин, 5) мәҙәниәт, 6) сәнгәт, 7) мәғрифәт, 8) иҡтисад, 9) сәйәсәт, 10) хеҙмәт һөнәрҙәре, 11) һуғыш һөнәрҙәре һ.б, һ.б.

Ҡыҫҡаһы, Ғәли Ибраһимовтың «Кинйә» романында бер быуат башҡорт тормошоноң үтәнән-үтә ҡырҡылыш ҡатламдарын (срез) күрергә мөмкин.

Һәм был әҫәр әҙәбиәтебеҙҙә башҡорт тарихи романының эталоны — йәғни нисек яҙырға күрһәткес өлгөһө булып тора.

2. Әҙип менән яҡындан танышыуым — 1969 йылда. «Ағиҙел»гә эшкә килеүем.

3. Әҙиптең характеры: «ҡоро һәм ҡаты ҡуллы», тиҙәр ине бәғзеләр. Сәбәбе — журналдың яуаплы сәркәтип вазифаһын башҡарыуында. Ул саҡтағы яуаплы сәркәтип — ҡурҡыныслы өс органдың: Обкомдың, КГБ-ның, Главлиттың (Цензорҙың) әҙәбиәт ҡапҡаһына ышанып ҡуйылған һағауылы, күҙ-ҡолағы булырға тейеш ине. Үҙемдең дә яуаплы сәркәтип була яҙыуымдан беләм (70-енсе йылдар).

4. Шул ваҡыттағы уҡ уның, мәшһүр әҙиптең, эске донъяһы: башҡорт милләтенә, башҡорт тарихына, башҡорт халыҡ ижадына оло мөхәббәт.

5. «Кинйә» романын яҙырға рухланыуы, материал туплауы — боронғоно әнәһенән ебенәсә ентекләп өйрәнеүе.

6. Шуны яҙыу өсөн эштән китеүе; бер урындан да эш хаҡы алмайынса, өйҙә ултырып эшләп, матди бөлгөнлөк кисереүе: өҫ-башы туҙыбыраҡ, йонсоборак йөрөүе.

7. «Кинйә»не «Ағиҙел» редколлегияһында тикшергәндә килеп тыуған тотҡарлыҡ (абруйлы бер тарихсы ҡаршы төштө), күңел төшөнкөлөгө.

8. «Кинйә» баҫылып сыҡҡас, йөҙө яҡтырып, йәшәреп китеүе — көләс йөҙлө Ғәлигә әйләнеүе.

9. Минең ижадҡа йылы мөнәсәбәте. «Тарих һеңмеш» бер романымды «Ағиҙел»дә тикшергәндә, мине тотанаҡлар өсөн, бер сөмкә тарих китаптары күтәреп килеүе. «Александр Македонскийҙың кейәүе» тип, Вәзих Исхаҡовтың уны мәрәкәләүе. Көнкүрештәге икебеҙҙең хозур мөнәсәбәттәр»...

«Кинйә»һе өсөн Салауат Юлаев исемендәге Юғары дәүләт бүләген алғанынан һуң, бер арала бер аулаҡта туғандарса ҡосаҡлашып, тулы коньяк шешәһен дә, тулыш эс серҙәребеҙҙе лә бушатышып ултырҙыҡ. Уның саф күңеле миңә тапланмаған гәлсәр кеүек үтәнән-үтә күренде. Әлегәсә ошолай ҡала.

2 сентябрь 2002 йыл.

Заманаһы ҡушыуынса

Замандаш әҙип Әмир Гәрәйев тураһында нәшер ителәсәк иҫтәлектәр китабына яҙыуымды һорап уның тол ҡатыны Фәниә ханым (уны электән беләм һәм хөрмәт итәм) телефондан ике-өс шылтыратҡас һәм йыйынтыҡты төҙөүсе ҡәләмдәшем Әмир Әминев тә иҫкә төшөргәс, уңайһыҙ хәлдә ҡалып, уйланып йөрөгәндән һуң, "быны булдыра алмам" тигән бер ҡарарға килгәйнем һәм Әминевкә лә әйткәйнем. Әммә бөгөн таң алдынан өсөһөн дә төшөмдә күреп уяндым: әүәлге бергә "Ағиҙел" редакцияһында эшләгәндәгесә теп-тере һәм алсаҡ йөҙлө Әмир ағай, яғымлы-йор һүҙле Фәниә еңгәй күҙҙәремә ҡарап баяғыны көтә, ә яуаплы мөхәррир Әминев өндәшмәй генә бер ситтәрәк күҙәтеп тора...

Ысынын әйтергә кәрәк: был төш миңә яңы борсолоу килтерҙе, сөнки үҙем белгәндәрҙең дөрөҫөн һөйләргә күнеккәнмен, дөрөҫө иһә заманабыҙ ҡушыуынса ҡатмарлы ла, аяныслы ла булды; баш бирмәүсән байтағыбыҙ коммунистик идеология тирмәнендә онталды, онталырға теләмәгән күпселегебеҙ тирмән таштары араһына яраҡлашып йәшәргә мәжбүр булды -- Әмир Сәлимгәрәй улы Гәрәйев тап шундай ҡорҙоң вәкиле, әүҙем береһе ине; шуға күрә күпселекте хөкөм итеүе ҡыйын, уны дөрөҫ аңларға ла аңлата белеү мөһим.

Әмир Гәрәйевтең "Ағиҙел"дә бергә эшләгән йылдарҙағы ҡиәфәте һаман күҙ алдымда тора: уртанан юғарыраҡ буйлы, ҡалын мыҡты кәүҙәле, тулыш түңәрәк йөҙлө. Тоҡанып китмәй тыныс ҡына саф башҡорт әҙәби телендә һөйләшә, ҡайһы бер өндәрен теш араһынан, үҙе лә абайламаҫтандыр, "һыуыр һыҙғырыуы" итеп шыйылдатып сығара. Ҡара-йылтыр ботинкалар, энәнән-ептән ҡара йөн костюм кейеп йөрөргә ярата (был төҫкә тартым, бәлки, флот кейеменән киләлер?), мин белгәндән ручкаһы ла (шариклыны ҡулланманы) ҡуйы ҡара төҫлө генә яҙыр ине. Икебеҙ ҙә хәрби диңгеҙ флотында оҙаҡ хеҙмәт иткәнбеҙ, Әмир ағай хеҙмәтенең һуңғы ике йылы минең тәүге ике йылға тап килә. Ул, эскадра минаносецының команда старшинаһы, әсмүхә ҙурлыҡ флот гәзитендә әүҙем яҙышҡан, ә мин, өлкән матрослыҡтан ары уҙмаған әҙәм, 1953 йылда уҡ шиғырым "Әҙәби Башҡортостан" (хәҙерге "Ағиҙел") журналында ташҡа баҫылып сыҡһа ла, урыҫ телендә яҙыуҙы башыма ла килтермәй инем.

1965 йылда ғаиләм менән Өфөгә күсеп килгәс кенә Әмир Гәрәйев тигән журналистың "Совет Башҡортостаны" (хәҙерге "Башҡортостан") гәзите редакцияһында ауыл хужалығы бүлегенең мөдире булып эшләүен, мәҡәләләр, очерктар яҙыуын белдем, ләкин айырым иғтибарға алманым. Артабан ул гәзиттең яуаплы секретары итеп үрләтелде һәм, моғайын, яуаплы редактор вазифаһына ла күтәрелер ине, әгәр ҙә ки 1970 йылда коллективта килеп тыуған ығы-зығы арҡаһында ҡапыл ғына редакциянан һөрөлмәһә. Быны айышын байтаҡ һуңыраҡ партия архивында эшем буйынса соҡсонғанымда осраҡлы рәүештә төшөндөм: "сәбәбен ҡатын-ҡыҙҙан эҙлә", тигән боронғо мәҡәлдең асылы дөрөҫтөр.

Әмир ағай ҡыҫҡа ғына ара "вольный казак" булып йөрөнө, буғай; мин иһә "Ағиҙел" журналында эшләй генә башлағайным; журналист менән яҡындан аралашыуым редакцияның бер шүрлегендә "ҡаҡланып"

яҡкан очергын соҡоп сығарыуымдан башланды һәм мин мыҡты кәүҙәле авторға ныҡлы иғтибар иттем, сөнки әҫәрҙең теле һәм стиле, хикәйәләү рәүеше гәҙәти гәзитселәрҙекенән күпкә айырылып, әҙәбилеккә нығыраҡ тартым, тик әлегә "ҡоролма"ның "йәне" етешмәй, ә шулай ҙа әҙип булып үҫерҙәй ҡеүәһе бар, һымағыраҡ тәьҫир ҡалдырҙы.

Ул заманда партияның баҫма органдарынан шелтәләнеп китеү – профессияң буйынса тыйылыу, эшһеҙ ҡалыу менән янай ине (редакциялашы Рәми Ғариповтың асы яҙмышын хәтерләйек); бындай бәлә, ғәжәпкә ҡаршы, Гәрәйевте ситләтеп үтеп, коллегалары ла, башҡалар ҙа һис көтмәҫтән уны яҙыусыларҙың яҙмышын хәл ҡыла торған юғары вазифаға – Башҡортостан китап нәшриәтенең баш редакторы итеп тәғәйенләнеләр. Рәми хәленә ҡалмауының сәбәбен аңлай алмайынса, төрлөсә юраныҡ, әммә заманаһы өсөн һирәк осраҡлы ыңғай күренеш булды был, ә сере лә уның заманса ине. Эш шунда: урыҫ телендә ижад иткән башҡорт, татар прозаиктарының бер килкеһе, әҫәрҙәрен журналдарыбыҙҙа баҫтыртҡанда "тәржемәсеһе фәлән" тигәндән екһенеп, йәки ике телдә лә һыуҙағы балыҡтай йөҙөүен күрһәтергә теләпме, аласаҡ гонорарының ҡырҡ проценты хаҡына "башҡортлаштырыу"ҙа шыма ҡәләмле "невидимка"ларҙы йәтеш файҙаландылар; мәҫәлән, Әнүәр Бикчәнтәйев текстарын – Ихсан Әхтәмйәнов, Азат Мағазовтыҡын – Хәсән

Бер төркөм ҡәләмдәштәр: арҡы буйҙа уңдан һулға Әмир Гәрәйев, Йыһат Солтанов, Фәниә Гәрәйева, Абдулхаҡ Игебаев, Риф Мифтахов, Әмир Әминев "Ағиҙел" редакцияһында.

Назар эшләп биргәне мәғлүм. Ул саҡтағы КПСС өлкә комитеты секретарҙарының береһе, ошондайҙарҙың бәхетенә күрәме, төп эше менән бер ҡатарҙан яҙыусылыҡҡа һәүәҫләнеп, уҙамандың урыҫ телле повестарын башҡорт теленә ауҙартмаҡҡа баяғылай күренмәҫ ҡәләмдәр сифатында Ә.

Гәрәйев, Т. Сәғитов кеүек егәрлеләрҙең йәлеп ителеүе сер түгел ине (тәүгеһенең ошолай маһирлығын "Ағиҙел"дә бергә эшләгәндә күреп беләм). Партия "бос"ы бының әжерен, әлбиттә гонорар иҫәбенән түгел, ә үҙенең юғарылыҡлы тотанаҡлауы менән ҡайтарыуы һиҙелде, ә хәсрәтле көнкүрештә һәр кемгә лә тәтемәгән йәлсеү, хыял ителмеш бәхет һымаҡ ине был. Һәр хәлдә, Әмир ағайҙың хеҙмәт арбаһы артабан, сутырмаҡтарға бирешмәй, гел алға тәгәрләне: башта яҙыусылар ҡоронда тормаһа ла, 1975-81 – яҙыусыларҙың төп органы "Ағиҙел" журналының яуаплы секретары, 1981-88 – яуаплы редакторы һәм Яҙыусылар берлеге идараһының партбюро секретары. Шулай юғары сорғолошона, әлбиттә, һөйөнөүселәр ҙә, көйөнөүселәр ҙә булды – бөтәбеҙ ҙә ауыр тормош баҫымынан арынырға тырышҡан, ләкин нисек итергә белмәй тыпырсынған бәндәләр инек бит; ошо хәлде архивымдан табып алынған бер текст та шаһитлай: "В 1987 году Гареев А.С. неожиданно для литературной общественности был награжден орденом "Знак Почета", причина такого чествования остается до сих пор тайной за семью печатями. Год спустя ему же присвоено высокое звание Заслуженного деятеля культуры РСФСР, в честь чего?". Ҡырыҫ яҙма авторының аптырауы аңлашыла (тарихи сәбәбе билдәле): тап шул осорҙа яҙыусыларҙың күп һанлы партия йыйылыштарында һәм йыйынында Мирзаһитов менән Гәрәйев етәкләгән Яҙыусылар берлеге идараһының, партия ойошмаһы бюроһының, "Ағиҙел" редколлегияһының эше ҡаты тәнҡитләнде, ул тәнҡит хатта КПСС өлкә комитеты тарафынан дөрөҫ тип танылды. Ләкин шуныһы бәхәсһеҙ: яҙыусылар күмәкселегенең ҡаты хөкөмө ошо ике шәхес аша, уларҙан да бигерәк, замананың төп ғәйеплеһенә -- илде тынсыу мөхиттә йонсотҡан тоталитар режимға тоҫҡалғайны. Теләһә ниндәй шарттарҙа ла, тәбиғи, һәр кемдең дә кешесә йәшәгеһе, тормош һаҙлығынан өҫкәрәк күтәрелгеһе килә, ләкин һәләт тигән нәмә бәндәләргә тигеҙ бүлеп бирелмәгән. Әмир ағайҙың тыумыштан өлгөрлөгө, үргә ынтылыш ҡеүәһе ғүмеренең башынан уҡ уның ауыл тормошонда ла, хәрби хеҙмәтендә лә, гәзит редакцияһында эшләгәнендә лә асыҡ күренде; ындай шәхес һәр осраҡта үҙ юлын һәм файҙаһын таба белә, заманаһының өлгөрмәненә, лидерына әйләнә. Инде әйтә алабыҙ: ундайҙарға теге саҡтарҙа төрлө ҡараш булһа ла, хәҙерге заман хуплап маҡтай, өлгө итеп күтәрә -- алъюҫыҡтан ғәйепләргә ашыҡмайыҡ. Улар йәшәгән заман – бөтәбеҙҙең заман ине, һәр беребеҙ үҙ яҙмышына яҙылғанды үтәне. Коммунистик әфиүн менән тилертелгән бөйөк илдең күпселеге бер үк әхләҡ даирәһендә хәленән килгәнсә үҙ йүнен күреп йәшәнек.

Әмир ағайҙың журналистан яҙыусыға әүерелә башлауы ла барыбыҙҙың күҙ алдында, уның эшмәкәрлегенә тығыҙ бәйлелектә барҙы. Йәшермәйек: китап нәшриәтендә эшләүе дәүерендә әҙиптәрҙән ялағай дуҫтары күбәйҙе, улар уны, маҡтай-маҡтай, әҙәбиәткә тиҙерәк керешергә өндәне. Әмир ағайҙың үҙе үк таныуынса, ул, Яҙыусылар берлеге рәйесе Әсғәт Мирзаһитов ҡорҙашының аҡыллы кәңәшенән ҡанатланып, "Ҡарағайлы яҙҙары" исемле очергын ике киҫәкле повесть итеп дәррәү

эшләп бирә һәм был әҫәр, авторын тиҙерәк Яҙыусылар берлегенә ағза итеп алырға әҙерлек йәһәтенән, "Ағиҙел"дә дәррәү ташҡа баҫылып, йыйылышта тикшереү ойошторола. Шунда ҡатнашҡан миңә лә, "беренсе ҡоймаҡ төйөрлө була", тигән мәҡәлде иҫтә тотоп, авторға ҡаты бәрелмәҫкә кәрәккәндер, моғайын; әммә шуны белештермәй, йүнһеҙлегемә барып, мәҙхиә яуҙырыусылар араһында бер үҙем: "Повесть килеп сыҡмаған – ҙур күләмле очерк хәлендә ҡалған, ә иң мөһиме – тырпырап торған йәне юҡ", -- тип яңғыҙ ҡарғалай ҡарҡылданым. Әшнәм бөйөргә төрттө:

-- Һантый, нәшриәттә ҡулъяҙмаң бармы?

-- Бар, балалар өсөн китап.

-- Аллаһы әкбәр, алайһа, төтөнһөҙ янды китабың. Их һин, баш редакторҙы үлтереп маҡтарға ғына кәрәклеген белмәнеңме?

Эйе, донъя – кәкере мөрйә, тигәндәй, юғарылыҡлы етәкселәр ҙә үҙебеҙ кеүек үк бәндә бит. Бер ай үтер-үтмәҫтән, төш күреп тертләп уяндым: Күккә ашҡан, мыҡты олононда йәшәү һуты тиртеп торған дәү тирәгем ҡапыл һулып ергә ҡоланы. Аңлашылды: китабым...

Иртәгәһенә үк, Черниковскиҙың арғы осондағы меҫкен фатирыма, ых-бых итеп, курьер апай килеп етте, баш редакторҙың кире ҡағыу хаты менән ҡулъяҙмамды ҡалдырҙы ("Аҡсарлаҡ" исемле был китабым Әмир ағай нәшриәттән киткәс кенә 1990 йылда баҫылып сыҡты. Әйткәндәй, халыҡ шағиры Мостай Кәримдең "Салауат" трагедияһын "Ағиҙел"дә тикшергәндә лә тиктормаҫ телем арҡаһында шулай бәләгә тарыным). Бер ауыҙым бешкәндән һуң Әмир ағайҙың әҫәрҙәрен, дөрөҫөн генә әйткәндә, уҡыуҙан тыйыла килдем, әммә бер-бер артлы сыҡҡан китаптарына ҡәләмдәштәрҙән кире фекер ишеткәнем булманы -- моғайын, яҡшы яҡҡа үҫешеү билдәһелер. Ә шулай ҙа беҙҙең араларҙың һыуынһыуының төп сәбәбе был түгел – ижадыма бәйле юҫыҡта төптәрәк ята тип һанайым. Тураһын әйткән – туғанына ярамаған, тигәндәй, әҙиптәрҙең танылған лидеры Мостай Кәрим менән мөнәсәбәтем ҡырҡыулашып, гәзит биттәренән, партияның өлкә конференцияһы һәм хатта РСФСР Юғары Советы трибуналарынан уның миңә, минең кеүектәргә йәбештерелгән "милли сикләнгән"лек мөһөрө йөҙәтте; үҙем дә абруйлыны тәнҡитләп КПСС Үҙәк Комитетына яҙҙым. Ошо ғына ла етмәгәндәй, "Башҡортостанда башҡорт халҡына ҡарата эҙмә-эҙлекле үткәрелгән геноцид" тураһындағы "Думы о народе" тигән ҙур күләмле тикшеренеүем Генеральный секретарға атҡарылып, "урында хәл ҡылыу" өсөн Мәскәүҙән кире Өфөгә -- партияның өлкә комитетына ҡайтарылғас, эштәрем эт илағыс була башланы. Әмир Гәрәйевкә тиклемге осорҙа уҡ әле баш редакторыбыҙ Рәйес Низамов әленән-әле Оло йортҡа саҡыртыла ла, йөҙө ҡара янып ҡайтып: "Ҡасан эштән китәһең? Ғариза яҙ!" – тип теңкәгә тейә торғайны; ул баҡыйға күскәндән һуң оторо "вазифа" яңы баш редактор Әмир ағайға йөкмәтелеп, ул да ныҡып игәне, хатта партия өлкә комитеты секретары һәм Мостай Кәрим, Ғилемдар Рамазанов һәм башҡалар ҡатнашлығында редакциябыҙҙан ситтә редколлегия ултырышы үткәреп, Йыһат Солтановты эшенән бушатырға, тигән ҡарар сығарғандар

(протоколы бар). Ниңәлер быны үҙемә белдертмәйенсә (сөнки бәйләнер урын юҡ), һөйөкһөҙҙән шау-шоуһыҙ ғына арынып өсөндөр инде, көндәлек эш шарттарымды түҙеп торғоһоҙ яһанылар (редакцияға көн дә иртән тетрәнеп килер инем); ижадымды быуып интектерҙеләр. Бөтәһе лә юғарынан – партия өлкә комитетынан һәм КГБ-нан һөстөртөлөүен аңланым һәм, нервыларым ҡаҡшап ауырыуға һабыша барыуымды тойоп, 1986 йылда улар көткән ғаризаны яҙып бирҙем...

Әҙиптең һуңғы йылдарында осрашыуҙарыбыҙ һирәк булды, сөнки икебеҙ тиң тейешле ялға сыҡҡан пенсионер, күберәген фатирында яҙыу өҫтәленән ҡупмай ултырыусыларға әйләндек. Уның хаҡта ҡәләмдәштәрҙән ишеткәндәрем гел ыңғай булды, йәшерәк быуындан байтаҡтары әҫәрҙәрен “Ағиҙел”дә беренсе башлап сығарыусы Әмир ағайға рәхмәтле ине. Замандашым һәм ҡәләмдәшемде һуңғы тапҡыр шул уҡ ҡара костюмында Яҙыусылар берлеге идараһында тап иттем – шаҡтай өлкәнәйеп таяҡҡа таянған, сирләштереүе тойола, әммә алсаҡлығын юймай, минең янға үҙе елтерәп килеп күреште, хәл-әхүәлдәрҙе белешеп айырылыштыҡ...

Беҙҙә сыҡҡан иҫтәлек китаптарына, ғәҙәттә, иҫтәлек әһелен маҡтаған хәтирәләр генә һайлап туплана, ә шәхесте тыуҙырған һәм йәшәткән ҡатмарлы замана сағылып етмәй ҡала; мин иһә был йоланы тотмай яҙҙым, шуға күрә аяҡ терәп йыйынтыҡтан урын дәғүәләй ҙә алмайым.

Әйтеп үтеүемсә, икебеҙ ҙә элекке хәрби диңгеҙсе инек, ҡәләмдәштәр ҡоронда быңдайҙар байтаҡ ҡына; әммә, белеүемсә, хәрби диңгеҙ флотына ҡағылышлы әҫәрҙәр ырамаңы; минекеләр ҙә ни бары бер поэма, очерк, тиҫтәгә яҡын шиғырҙан ары уҙмаңы; ә Әмир ағай ошо юҫыҡта емешлерәк ижад итеп, әҙәбиәтебеҙҙәге һирәк теманы сағылтҡан бернисә китап ҡалдырҙы, шуныһы менән генә лә ул үҙенсәлекле айырым урын биләй.

19.02.2010

Шакир Бикҡоловтың “Ҡыҙыл ҡар яуғас”ы

Башҡорт балалар әҙәбиәтендә, бигерәк тә балалар өсөн сығарылған шиғри йыйынтыҡтарҙа, хатта тәжрибәле генә авторҙарҙың да бала психологияһын хөрт белеүҙән бала менән “балаларса” уйнарға ҡылансыҡланып, “өлкәндәр генә күпте аңлай, ә бәләкәс уҡыусы үҙенең танау осонан ары китеп фекер йөрөтә алмай” тигәнерәк наҡыҫ ҡараштан сығып, сонтор итәк-еңле шиғри тун бесеүҙәре, шуның менән йәш уҡыусының алдындағы донъяны — ҡараш даирәһен, киңәйтәһе урынға, ишек ярығындай ғына ҡыҫыҡ итеп ҡалдырыуҙары, шул ярыҡтан ҡаратып ҡына киң донъяны астыртырға тырышыуҙары беҙҙә туҙға яҙылмаған ҡанунға, өлгө-нормаға әйләнеп китте түгелме?!. Бына шуның һөҙөмтәһендә гәзит-журнал һәм китап биттәрен, кемдер әйтмешләй, ҡағыҙға ат һүрәтен төшөрөп, аҫтына “Ат” тип яҙып ҡуйыу менән бәрәбәр, М. Ғафури хикәйәһенең исеме менән әйткәндә, “фәҡирлектә үткән тереклек” — портрет-шиғырҙар, пейзаж-шиғырҙар, уйын-шиғырҙар һәм, ғөмүмән, “юҡтан бар ҡоҙағый” итеп яҙылған “шиғыр”ҙар даръяһы баҫып

китеп, тешкә тейгән әсе йөҙөм емешеләй эсте бошора, дөйөм әҙәбиәтебеҙҙең бәсен ебәреп ҡаңғырта ине (хәйер, “ине” тип әйтеү әлегә иртәрәк — хәҙер ҙә ул шулайыраҡ килә бит инде!..). Шул арҡала йәш быуын күңеле туған әҙәбиәттән үҙенең мең һорауҙарына мең яуап һәм тағы ла өҫтәлмә мең һорау алаһы урынға, ҡатыраҡ итеп әйткәндә, өйрәнелгән өс-дүрт һорау тирәһендә бикләнеп, ҡабығын ярып сыға алмаған себештәй, микродонъяла йомолоп ҡалыуға дусар ҡылына ине. Был хәл бик күптән үк бик күптәрҙе һағайтырға тейеш ине лә бит...

Туған әҙәбиәтебеҙҙә балалр өсөн баҙыҡ ҡына эшләп килгән ҡәләмдәшем Шакир Бикҡоловтың ошо яңы йыйынтығы (“Ҡыҙыл ҡар яуғас”) миңә баяғы торғонлоҡтан, микродонъянан сығыу өсөн ынтылыштың шатлыҡлы бер саҡтыһы булып күренде, дөйөм балалар әҙәбиәтенең алға ҡарай алҡыныуҙа, хәрәкәттә икәнлегенә ышаныс һәм өмөт уятты.

Баяғыса әйтмешләй, ат һүрәте төшөрөп, аҫтына “Ат” тип яҙып ҡуйыуҙан шағир нисек ҡотолорға иткән һуң?

Әлбиттә, бының өсөн алымдар һәм юлдар күп, һәм ул һәр бер айырым шағирҙа үҙенсә — төрлөсә булырға мөмкин. Ш. Бикҡолов иһә, минеңсә, мажаралы сюжет ҡороу — сюжетлы шиғыр яҙыу юлын һайлаған. Һәм ул ошо маҡсатына шаҡтай яҡшы ирешкән дә.

Өҫтән генә күҙ һалғанда, бик ныҡ ябайлаштырғанда, йыйынтыҡты йәмғеһе 4-5 темаға бүлергә мөмкин: туған тәбиғәткә, ундағы кейек-хайуандарға, ҡош-ҡорттарға, үҫемлектәргә ҡарата йәш күңел мөнәсәбәтендә һоҡланыу, һөйөү тойғоһо, тәбиғәт серҙәрен асырға сәмләндереү, уҡыусыла кешелеклелек тәрбиәләү, ғөмүмән, кешене ҙур хәрефле Кеше, гөмансы (гуманист) итеп үҫтереү темаһы; хеҙмәткә, оҫталыҡҡа, һөнәрмәнлеккә, игелеклелеккә ҡарата һөйөү тойғоһо тәрбиәләү темаһы; намыҫлылыҡ, тоғролоҡ, иптәшлек, дуҫлыҡ темаһы; баланы ватансы итеп үҫтереү — граждандлыҡ темаһы һ.б. Беҙ биргән был формаль бүленеш, әлбиттә, өс табаҡтай күләмле шиғри китап фәҡәт шул дүрт теманы ғына ҡабат-ҡабат сәйнәп-тылҡыуҙан тора икән, тигән хата фекергә ҡайтып ҡалмай. Киреһенсә, шағир шул 4-5 дәү олондоң һәр береһенең тамырын тәрән ебәреп, һәр ҡайныһынан унарлаған ян ботаҡтар ярҙырған һәм шул рәүешле уҡыусы йәнен арбап гиҙҙертерлек күркәм шиғри туғай үҫтергән. Ул туғайҙың һәр ботаҡ аҫтында серле-сәмле үҙ һуҡмағы, ә осонда һайрап торор үҙ ҡошо бар — уҡыусыны хәтһеҙ матур сәйәхәт сәғәттәре көтә.

Юғарыла һанап кителгән темалар араһынан беренсеһе — Кеше тәрбиәләү темаһы — шиғыр юлдары һаны буйынса ла беренсе урында тора (ҡалғандары рәт һаны һайын ҡалыша бара унан) һәм был юҡҡа ғына түгел, сөнки барлыҡ яҡшы сифаттар шуға йәбешеп үрһен өсөн, баланан иң тәүҙә ысын Кеше тәрбиәләргә кәрәк, ә кеше булмаған кешегә өмөт тә юҡ. Шуға күрә, минеңсә, тәүге темалағы “Дельфиндар — беҙҙең дуҫтар” бүлегенең уңышһыҙлығын, ә граждандлыҡ темаһының сонторлоғон иҫәпкә алмағанда, йыйынтыҡта һәр теманың күләм пропорцияһы ла урынлы, ә инде граждандлыҡ темаһына яҙылған киң даирәле шиғырҙарҙы тағы ла

өҫтәй төшкәндә, китап бермә-бер һәлмәкләнер, уның шиғри мускулдары уғата тығыҙланыр, йөкмәткеһе ҡорос ҡеүәт менән тулышыр ине. Ҡабатлап әйтәм: буласаҡ китап, автор тарафынан етди эшкәртелгәндә, етешһеҙлектәрҙе бөтөрөү иҫәбенә граждандлыҡ аһәңен арттырыуҙы ныҡлы күҙҙә тотоп эшләнергә тейеш. Сөнки баланы кеше йәнле кеше итеп кенә тәрбиәләү беҙгә аҙ; ул, ысынлап та ҙур хәрефле Кеше булып етешһен өсөн, бер үк ваҡытта бөйөк совет Ватанының патриоты, гражданы ла булырға тейеш. Йыйынтыҡта был йүнәлешкә юл баштары һалынған (“Баҡсала”, “Осрашыу”, “Поста торғанда”), һәмҡайһы бер башҡа шиғырҙарҙы ла эшкәрткәндә (әлбиттә, барыһын да бер ҡалыптан түгел!), уларҙа ла ошо юлды яңы тарафҡа дауам итеү бурысы ғына тора. Был әйткәндәрем — китапты артабан тәрәнәйтеп яҡшыртыу өсөн тик изге теләк кенә, ә йыйынтыҡ ошо килеш тә донъя күреүгә дәғүәлекле. Шулай булғас, ауыҙ тултырып бәйнә-бәйнә маҡтау өлөшөн киләсәккә — тыуасаҡ китаптың уҡыусыларына ҡалдырып, һис шикһеҙ китапҡа индерелергә лайыҡлы шиғырҙарҙың бөгөн күҙгә салынған, эшкәртеүҙе талап иткән етешһеҙлектәрен күрһәтеүгә күсәйек.

“Бәхәс”. 9-ынсы шиғри юлда “саңғы йөрөү шәп”те халыҡ “саңғы шыуыу шәп” ти бит (матур аллитерация ла бар бында). Шиғырҙың был варианты тамамланып та етмәгән кеүек. Унынса, бәхәстең асылы “йәй көнө генә шәп” тигәнгә ҡайтып ҡала, шағир әйтергә теләгән, “йылдың бөтә миҙгелдәре лә арыу” тигән фекер бирелеп бөтмәй — теүәлләргә кәрәк шуны!

“Еләктән ҡайтҡан саҡта”. Был шиғырҙа геройҙарға ҡарата дүрт тапҡыр “улар» алмаш һүҙе һәм дүрт тапҡыр төрлө бирелештә “аҡты” ҡылымы ҡулланыла — бер төрлөлөк (тавтология) тыуа. Әгәр ҙә 2-нсе строфала уҡ йылғаның ямғырҙан күпсеп ташыуына иғтибар ҡылып, нәүбәттәге ике строфаны бөтөнләй алып ташлағанда, әҫәр шыйыҡ “һыу”ҙан ҡотоласаҡ, ыҡсымланасаҡ, динамика артасаҡ. 7-нсе строфала психологик теүәлһеҙлек: Айрат һис тә: “Аҡһын”, — тип кенә вайымһыҙ ҡала алмаҫ. Һис юғында: “Аҡһа ла ҡайғырма”, — тигәнерәк мәғәнәлә йыуатырға тырышыр ине ул ҡыҙыйҙы. 9-ынсы строфала Ғәлиәнең ике тырызы тураһында бара һүҙ — яһалмалылыҡ. Еләккә барғанында бала ат башындай күнәк тотһа тотор, әммә бер үҙенә ике тырыз алмаҫ (көйәнтәләп алһа, бер хәл). Алһа ла, ике тырыздың береһен биреү генә егетлеккә инмәй әле: ҡайғыға ҡалған иптәшенә берҙән-бер тырызын бирһә, булыр ине ул егетлек! Бәлки, Ғәлиә түгел, ә Ғәли (малай кеше) үҙ еләген таҡыяһына бушатып, тырызын ҡыҙға һоналыр?.. 10-ынсы строфала “Ләләнең һауыты ла” урынына, моғайын, “тырызы ла” кәрәк: ул ниндәйҙер “һауыт” түгел, ә ауыр саҡта дуҫтары биргән баяғы “тырыз” икәне онотолмаһын! Иптәшлек тураһындағы был һәйбәт шиғыр тағы ла бер тапҡыр һәйбәтләп эшләп алыуға торошло.

“Илдарҙың дуҫтары”. 1-енсе строфалағы “көндә” түгел, ә “көн дә” (һәр көн, көн һайын) талап ителәә. (Әйтергә кәрәк, бындай буталыш — ғәҙәти күренеш йыйынтыҡта; улар ҡулъяҙмала күрһәтелгәнлектән, артабан айырым туҡталып тормайым). 2-нсе строфала Илдар ҡош-ҡортто

“ашата һәм эсерә”. Яңылыш был. Билдәле булыуынса, хайуандарҙы ғына ашатып-эсерәләр, ә ҡош-ҡортҡа ем бирәләр, һыу бирәләр. 3-өнсө строфала “Илдар ялҡау түгел ул”. Ялҡау түгеллеге былай ҙа күренә бит. “Илдар егәрле малай” тип ыңғай сифатын раҫларға кәрәк. Шунда уҡ, шул ыңғай малайыбыҙға ҡарата, Илдар “ә әтәсте ашатмай” ти автор. Тәрбиәүи хилафлыҡ был, минеңсә: ул ҡоштарҙың барыһын тиң, хатта үҙе яратмаған һуғыш суҡмары әтәсте лә, ашатырға бурыслы: уға йорттоң үҙенә күрә бер эшлеклеһе, хужа кешеһе булыу вазифаһы йөкмәтә шуны. Был юлды “Әтәс кенә яратмай” тип үҙгәртһәк, ярашлыраҡ булмаҫмы?

“Рәхмәткә — рәхмәт”. 2-нсе строфала уңышһыҙ рифма: һәйбәт — Рәхмәт.

“Аҡбай ферманы һаҡлай”. Тәүге строфала “Сәйфитдин бабай: — Көлкө, ти, көлкө”. Йән эйәһе булған тауыҡты төлкөнән быуҙыртыу (ғөмүмән, әжәл) бәләкәй уҡыусы өсөн үҙе бер фажиғә: быны хатта Сәйфитдин бабай ҙа һис “көлкө” тип баһаламаҫ. Хәйер, хатаһын автор үҙе үк тоя,буғай: тәүге строфалағы урынһыҙ “көлкө» аҙаҡҡыһында бик урынлы “һуҡраныу” тип алынған.

“Йәйләүҙә”. Аҙаҡтан 8 — 9-ынсы юлдарҙа “һыйыр һауған саҡта әсәйем минең йырлай” ти автор. Яһалмалылыҡ: беҙҙең халыҡта һыйыр һауған саҡта йырлап ултырыу ышандырмай (гәзиттәрҙә яҙылғанынса, патефон, радио йырлатһа, бер хәл), сөнки һыйыр һауыу ул уйын түгел. Бәлки, әсәһе түгел, ә күнәк төбөндә “көбөр-көбөр һөт йырлай”ҙыр?

“Ике ҡурсаҡ”. Шәп шиғырҙы һәләк иткес һуңғы өс юл: ҡыҙ баланың уянып килгән әсәлек инстинктын кире ҡайтара торған көләү (“әсә көлә”) һәм уның үҙен күрәләтә ҡурсаҡҡа һанауҙы белдертеү... Әсәнең был ҡылығы, минеңсә, антипедагогично. Беҙ, киреһенсә, ҡыҙ балалағы әсәлек хисенең яңы үреп килгән сибек бөрөләрен хуплап-һаҡлап ныҒытырға, көйләп үҫтерергә тейеш. Шиғырҙы “Ҡурсаҡ” тип кенә исемләп, аҙаҡҡы өс юлды ла шул һөйөклө ҡурсаҡҡа, әсәлек инстинктын хуплауға ҡайтарып ҡалдырыу отошло булмаҫмы?

“Балта оҫтаһы”. Ысын балта оҫтаһы булыу әлегә Вилдең ҡулынан килмәй торған эш, әлбиттә. Ләкин... былай ғына бөтөрөп ҡуйыу — малайҙың һөнәрмәнлек зауығын үлтереү булыр ине. Йәнә лә бер строфа өҫтәп, һөнәрмәнлек юлы — тырышлыҡ, түҙемлелек аша ятҡанын тойҙортоп ҡуйырға кәрәктер.

“Һунарсы ҡарт”. 3-өнсө строфаға иғтибар. Бында был бүренең дә, был һарыҡтың да хәле үтә аяныс бит, улар икеһе лә фажиғәле хәлдә. Ә Сәйет ағай... ниндәйен дә выжданһыҙ, ҡаты күңелле кеше ул, ниңә фажиғәне мәрәкәгә әүерелдерергә? Был бит балала ҡанһыҙлыҡ, антигөманлылыҡ тәрбиәләү булыр ине. Шиғырҙы әгәр ошо килеш ҡалдырғанда ла, тағы бер строфаға арттырып, аҙаҡтан лирик геройҙың (малайҙың) был аяныс күренеш-хәлгә — бабайҙың шомло “мәрәкә”һенә ҡарата гөманлылыҡ позицияһын, хөкөмөн биреү урынлы булыр ине. Шулай эшләгәндә, был шиғыр йыйынтыҡты ҡатмарлы яңы тойғолар коллизияһы менәнбайытасаҡ. 5-енсе строфала тотҡондағы бүре хаҡында: “Шөрләмәнем, мин дә күрҙем, яҡын килеп, яуызды”, — тип әйтелә. Хәҙер

ул ниндәй яуыз булһын инде? Дошманды юҡ итеү теләгебеҙҙән рәхимһеҙ ҡылыс күтәртһә, ҡыйратылған, еңелгән дошман беҙҙә шәфҡәт тойғоһон уята — бына ниндәй ул беҙҙең ысын гөманлылыҡ! Тоҡонлоҡҡа эләккәс, “ауыҙы тегелгәс” (әйткәндәй, “тегелгән шул ауыҙы” тип алыу — үҙе натурализмға тарта, бында “бәйләнгән” тип әйтеү хәйерлерәк), бүре лә ҡыҙғаныс хәлдә, йәш уҡыусы күңелендә хатта ул да, моғайын, һарыҡ һымаҡ уҡ “илай”... (Әллә яңылышамдыр?..). Һәр хәлдә, автор хаҡлы булғанда ла, һаҡ һәм нескәрәк алымдар менән эш итеү хәйерле булмаҫмы?

“Әнисә”. “Һалған” һүҙе ике тапҡыр юл аҙағында ҡабатлана — тавтология.

“Үгеҙ”. Был ҡыҙыҡлы шиғыр асылып етмәгән, фактография хәлендә ҡалған. Аҙағын йәнә ике юлға үҫтереп, һуҡыр көс менән аҡыл алышында тәүгеһенең еңелеүен, икенсеһенең тантана итеүен “эш мөгөҙҙә түгел” икәненә ишаралап асырға кәрәктер. Юғиһә, был көйөнсә генә әҫәр теүәл идея бирмәй.

“Мәскәй әбей”. Аҙаҡҡы ике строфаны үҙгәртеү яҡшы. Ағай кеше бит тәбиғәт ҡанунын малайҙы шомло зиратҡа алып бармайынса ғына, телдән генә (йәки мәктәптә химик тәжрибә юлы менән) аңлатып бирһен ине. Юғиһә, натурализм еҫе килә.

“Дельфиндар — беҙҙең дуҫтар”. Ҡыйын булһа ла, әйтергә кәрәк: был бүлеккә ингән шиғырҙарҙың береһендә лә автор йәш уҡыусы күңелен арбарлыҡ яңы нәмә аса алмаған, дельфиндар тормошоноң бөгөн телеэкрандан миллиондарға таныш булған картиналарын ғына күсереп сыҡҡан ҡағыҙға, тигән уй тыуа. Шуға күрә лә ул күңелде йылытмай кеүек. Әгәр ҙә инде автор үтә ныҡышһа, ә редактор уның шул ныҡышлығын өлөшсә ҡәнәғәтләндереү кәрәк тип тапһа, бер талай ҡыҫҡартып һәм эшкәртеп (ҡулъяҙмала былар сыйғыслап күрһәтелде), йыйынтыҡтың географик диапазоны хаҡына 2-3 шиғырҙы (“Дельфин өҫтөндә малай”, “Ярҙам”, “Дельфин һәм акванавт”) китапта ҡалдырыу яғын ҡарарға ярай. Ә инде автор ваҡыт һәм илһамға ирешеп, бик ныҡ уйланып, аҡыллы хайуандар тормошон бөтөнләй үк беҙ көтмәгән яҡтан, башҡа шиғырҙарындағы кеүек үк оригиналлек менән йәнләндереп ебәрә алһа, иш янына ҡуш ҡына бклыр ине.

“Терпе”. 2-нсе строфа: “еҫнәнеп” түгел (ул татарса ғына шулай), ә “еҫкәнеп” булырға тейеш.

“Ҡыҙыл”. “Һыуы ҡыҙыл булған өсөн исеме уның — Ҡыҙыл”, тип бөтөнләй уҡыусы белгән хаҡиҡәткә тап килмәҫлек уйҙырма менән башлана шиғыр. Киреһенсә: “Һыуы ҡыҙыл булмаһа ла исеме уның Ҡыҙыл”, — түгелме? Бында уҡыусының йәше, аң даирәһе, мәктәп дәрестәре тураһында ла артыҡ онотоп ебәрмәйек. Исемдәренә ҡарамаҫтан, Ҡара диңгеҙҙә — ҡара, Һары диңгеҙҙә — һары һыу булмағанын бәләкәс бала — һорашып, ә уҡыусы — уҡып белә бит инде...

“Поста торғанда”. 1-енсе бүлектең 3-өнсө строфаһында ил сигенең һаҡсыһы тураһында “Часовой тора, уйлай *аптырап*”, 4-енселә “*ҡурҡма,* часовой, болоттар — дуҫтар”, 5-енселә “һәр саҡ уяу бул, ***һаҡлан*** һин унан”.

Юҡ, кәрәкмәй улай! Бала күңеле беҙҙең часовойҙың аптырауын, ҡурҡыуын, һаҡланыуын (ул, үҙенән дә бигерәк, Ватанды һаҡларға тейеш!) һис тә күтәрә алмаç, сөнки совет иленең часовойы беҙҙең өсөн ысын герой, идеал ул. 3-өнсө бүлектең 3-өнсө строфаһында "йәшен *ниҙелер атты*" Бында «ниҙелер" (билдәһеҙлек) түгел, ә тәғәйенлелек талап ителәә: Бала күңеле, бик ҡатмарлы мәсьәлә булһа ла, ниндәйҙер билдәһеҙлеккә түгел, ә берәй аныҡ әйбергә төбәлеүсән. Был осраҡта йәшен атҡан географик координатҡа йәки башҡаға ишаралау йүнлерәк булмаçмы? Һуңынан иһә уның тәғәйен объекты ла (һарай) асыҡлана бит. Тағы. Ниңә инде автор тарафынан башта ҡуйыртылған болотто, ямғырҙы — стихия боларыуын 4-енсе строфала бер сәбәпһеҙ таралдырырға, уҡыусы аңын иңләй барған көсөргәнеште кәметергә? Өс тапҡыр атыу (сигнал) тауышын часовойға "ишеттереү" өсөн генәме? Әлеге лә баяғы, А.П. Чехов әйткән мылтыҡтың атмай ҡалыуы түгелме был?... 4-енсе бүлектең 1-енсе строфаһында "күрәләр: *балҡып* бер һарай яна". "Балҡып" һүҙе бында бармай — ул һүҙҙе халыҡ үҙе өсөн ыңғай күренештәргә ҡарата ғына ҡуллана; ә шиғырҙағы *беҙҙең* ҙур һарайҙың яныуы, әлбиттә, *беҙҙең өсөн* һис тә ыңғай күренеш түгел. Был осраҡта "дөрләп", "шатырҙап" кеүек башҡа һүҙ ҡулланыу уңайлылыр. 2-нсе строфала уңышһыҙ рифма: пожар — дуçтар. Шиғырҙың аҙағын саҡ ҡына үçтерә биреп, уны "һәм Ватанға тоғро хеҙмәт итеү" тип ослап ҡуйырға ине.

"Ҡалас". Был бик һәйбәт сюжетлы шиғырҙы ҡайбер урындарын аныҡлау, ҡайбер бүлектәрен ҡыçҡартыу иçәбенә ыҡсымландырыу хәйерле: шуның ҡайбер әмәлдәре ҡулъяҙмала тәҡдимләнде. Автор иғтибар итергә тейешле иçкәртмәләрҙең иң эреһе: икмәк заводына (хатта ауылдарға ла) күбеһенсә ондо ауыл тирмәненән түгел, ә ҡалалағы, ҡасабалағы дәүләт он заводынан, заводҡа игенде — ауылдан килтерәләр; ауыл тирмәндәре иһә (әгәр ҙә улар булһа!) урындағы ихтыяждарҙы ғына ҡәнәғәтләндерә. Минеңсә, тирмәнде, бөгөнгө көн индустрияһына ярашлы рәүештә, завод тип алып, шул 3-өнсө бүлекте 4-енсе, 4-енсене — 3-өнсө урынына күсереп ҡуйып, тирмән-завод бүлеген, әлеге ялҡытҡыс оҙонлоҡтан арындыртыу өсөн, яртылаш ҡыçҡартып, өр-яңынан эшләү зарур. Иген урыу күренешен дә айырым — 5-енсе бүлек итеп, ә 5-енсене — 6-нсы итеп биреү һорала, буғай.

"Тотҡондар". 24-енсе строфала "турғайҙың да күңел шат: "чирек, чирек, чирек", ти". Бында турғай *сырҡылдауына* ымлаусы "чирек", һис шикһеҙ, "ирек" менән рифмалаштырыу өсөн генә "чырҡылдатып" алынған. Башҡорт телендә иһә бер һүҙ ҙә "ч" өнөнә башланмай, тимәк, *башҡорт* күңеле бирелешендә турғай ҙа "чирек-чирек" итеп һайрмай. "Ч" өнө урынында бында "с" килергә тейеш, был мотлаҡ ("чырҡылдау" түгел, ә "сырҡылдау"!) — телде вайымһыҙ емерергә бер кемебеҙҙең дә хаҡы юҡ.

Йыйынтыҡтың ҡоролошона ҡарата фекер: ул, күренеүенсә, 4 бүлеккә бүленгән, ләкин ҡулъяҙмала бары икеһенең генә исеме ҡуйылған ("Ҡыҙыл ҡар яуғас", "Дельфиндәр — беҙҙең дуçтар"), ә тәүге һәм аҙаҡҡы бүлектәр ниңәлер айырым аталмай ҡалған.

Йыйнап ҡына әйткәндә, Шакир Бикҡоловтың ошо яңы йыйынтығы — балалар әҙәбиәте өлкәһендә ең һыҙғанып эшләүсе был шағир ижадындағы етди уңыш булып тора һәм ул, ҡайһы бер ваҡ кәмселектәренән арсылып, йәш уҡыусы ҡулына тиҙерәк китап булып барып етергә, йәш быуынға коммунистик тәрбиә биреү юлындағы яҡшы ҡорал булып хеҙмәт итергә хаҡлы.

11.08.1973.

Саҡматояҡ аттарҙа елеүселәр

Әхтәм Ихсандың “Саҡматояҡ аттарҙа” тигән документаль повесенең икенсе киҫәгенә (машинкала 476 бит) ҡарата фекер яҙыуымды һоранылар.

Әҫәрҙең беренсе киҫәген беҙ бынанбайтаҡ йылдар элек ҡыҙыҡһынып, документаль теүәллектә тасуирланған яугир ҡаһарманлыҡтарына һоҡланып уҡығайныҡ һәм дәһшәтле ваҡиғаларҙың ҡатнашсыларының да байтаҡтары иҫән ине әле ул саҡта. Әжәл диңгеҙҙәрен йырып сыҡҡан элекке ҡырыҫ һалдаттарҙың да, уларҙың командирҙарының да ул китапты Ҡөрьән урынына яндарында йөрөтөүен беләбеҙ. Сөнки ул — Бөйөк Ватан һуғышында тиңһеҙ батырлыҡтар күрһәткән Башҡорт гвардия кавалерия дивизияһының данлы хәрби юлы тураһындағы беренсе китап ине. Һәм, иң мөһиме, шул дивизияның яугире, күп ваҡиғаларҙы һәм кешеләрҙе үҙ күҙҙәре менән күргән йәки беренсе ауыҙҙан ишеткән, ҡан быуын һәм дары тәтөнөн үҙе еҫкәп белгән профессиональ яҙыусы тарафынан яҙылғайны. Был иһә әҫәрҙең ышандырыу ҡеүәһен, ысынлап та документаллеген, шул уҡ ваҡытта художество ҡиммәтен дә арттырҙы.

Һәм бына шул әҙәби ваҡиғанан һуң ике тиҫтә самаһы йыл үткәс, ҡалған ижади ғүмерен берәгәй изге эшкә — туған дивизияһының ҡаһарманлыҡ сәхифәләрен йәш быуынға аманат итеп еткереүгә арнаған әҙип ныҡышмалылығы яңы емешен бирҙе — әҫәрҙең икенсе китабы тамамланды. Ҡулъяҙманы мин ҙур ҡәнәғәтләнеү, халҡыбыҙҙың Бөйөк Ватан һуғышында күрһәткән күмәксел ҡаһарманлығы менән хәләл ғорурланыу тойғолары кисереп уҡып сыҡтым. Эйе, *күмәксел ҡаһарманлыҡ — китаптың төп аһәңе, ҡиммәте, тәрбиәүи көсө бына нимәлә!* Ҡорал тотҡан һәр һуғышсы ғына түгел, ә һәр ағас, таш, туҙан бөртөгөнә тиклем унда фашист илбаҫарҙарына тоҫкап ата, боғаҙға-боғаҙ килеп алыша кеүек. Иң ябай рядовойҙан башлап иң юғарығы командирғаса һәр кем бер теләк менән яна — бөйөк совет Ватаны хаҡына дошман менән йән аямай һуғышырға. Был китапта граждандар һуғышының башҡорт ҡаһармандарының рухы менән бөйөк Ватан һуғышы ҡаһармандарының рухы тоташа — Башҡорт дивизияһы һуғышсылары элекке Башҡорт бригадаһы яугирҙәре аҡтарға ҡаршы һуғышҡан ерҙәрҙә алышалар, Днепрҙы ла шулар кискән тәңгәлдәрҙә кисеп сығып данланалар. Дөрөҫ, һуғыштың еңеүһеҙ тамамланған көндәре, асы юғалтыуҙары, әжәл күҙенә

тура ҡарағанда ҡайһы саҡта ҡайһы берәүҙәрҙең ҡойолоп уҡ төшөүҙәре лә бар был фронт сәхифәләрендә һәм шулай булыуы дөрөҫ тә. Әммә барыбер күмәксел ҡаһарманлыҡ, Еңеү өсөн дөйөм алҡыныш аһәңе өҫтөнлөк ала — китаптағы уйлап сығарылмаған иҫәпһеҙ күп кешеләрҙең көрәше һәм үлеме эпизодтарында сағыу һынлана. Фашистарҙың Украина, Белоруссия халҡына ҡылған йыртҡыслыҡтары башҡорт яугирҙәрен нәфрәтләндереп, үлемесле яуға саҡырып тора. Ныҡлыҡ өсөн автор архив материалдарын, яуҙаштарының иҫтәлектәрен киң файҙаланған — һәр ваҡиға датаһы, ерлеге, ысын исем-фамилиялары, документаль һандары менән теүәл. Китаптың икенсе һәм иң мөһим үҙенсәлеге: хикәйәләү баштан-аяҡ сағыу совет патриотизмы, милләттәрҙең дуҫлығы, интернационализм рухына һуғарылған, быны өсөн ваҡиғаларҙың ерлеге — дивизияның фашистар ҡоллоғонан туғандаш Украина, Белоруссия тупрағын азат итешеүгә бөтә булған киңлегендә һәм тәрәнлегендә оҫта итеп файҙаланылған. Автор баштан ахырғаса дивизия үткән юлдарҙағы билдәле ҡасабалар, ҡалалар һәм унда тыуып үҫкән күренекле кешеләр, иҫтәлекле ваҡиғалар тарихына туҡтала, шуларҙы документаль нигеҙҙә Башҡортостан, башҡорт халҡы тарихы менән бәйләй, тиңләштерә, сағыштыра, кеше менән кешеләрҙең, халыҡ менән халыҡтарҙың яҙмышын, дуҫлығын, туғанлығын ҡушып үрә, ә был иһә китаптың Союз-ара, халыҡ-ара әһәмиәтен күтәрә, уны интернациональ тәрбиә сығанағына әүерелдерә. Һәм уны, моғайын, башҡа телдәргә лә тәржемә итерҙәр, баҫып сығарырҙар, тип уйлайым.

Ҡулъяҙмала күҙгә салынған ҡайһы бер ҡытыршылыҡтар.

Тәүге бүлек оҙонораҡ кеүек, уны бер-береһенә оҡшаш ҡайһы бер вағыраҡ эпизодтар иҫәбенә һыға төшөргә мөмкин һымаҡ. Автор бүлектең исемен дә уйлап ҡарар: “Атлы арыҫландар” — һүҙҙәрҙең икеһе лә мал-тыуар булғанлыҡтан, ат арҡаһына арыҫлан-яныуар атланып алған һымаҡ тәьҫир ҡала. Дөрөҫөрәге “Атлы ир арыҫландары” булыр.

“Ул — йырға лайыҡлы” бүлегендә хронология боҙолған: Мөғин Нагаев ноябрь айында, бөтөнләй башҡа шарттарҙа һәм ғәмдәрҙә, күптән үткән сентябрь һуғыштарын (Ш Рәхмәтуллин ҡаһарманлығы, 269 — 278-енсе биттәр) оҙон итеп хәтерләй. Был киҫәкте өҙөп алып үҙенең урынына — сентябрь һуғыштары сәхифәләренә күсереп теркәү хәйерле.

5-енсе биттә Әбдрәүеф, аты яраланып ауғас, “тел”де (фашист офицерын) йөкмәп алып сыға, ә ниңә уны үҙ аяғы менән атлатып түгел? Фашист яраланмаған, һап-һау бит? Әллә һуғыштың берәй ҡатмарлы шарттары мәжбүр итәме быны?

Әҫәрҙең буйынан-буйына диалогтар, бигерәк тә урыҫтар менән һөйләштергәндә, урыҫса һөйләмдәр, һүҙ бәйләнештәр менән сыбарланған. Бөтә текст башҡортса булырға тейеш. Ә урыҫ һүҙҙәре былай ҙа күп ҡаласаҡ бит — хәрби терминдар, мәҫәлән.

Ҡайһы бер башҡорт һүҙҙәренең дә тейешле яҙылмаған, йәки яңы орфография ҡағиҙәһе үтәлмәгән урындар бар — уларын китап редакторы ла төҙәтер.

Башҡорт атлылары сафында дәһшәтле яу юлын бергә үткән яҙыусының был китабы үҙенең документаллеге менән әҙәбиәтебеҙгә бер

табыш, йәш быуынға хәрби патриотизм буйынса тәрбиә сығанағы, ә киләсәк өсөн ҡомартҡы буласаҡ. Шуға күрә уны тиҙерәк донъяға сығарыу мотлаҡ.

28.02.1987.

И. Мостафин иптәш әҫәренә ҡарата

Ильяс ағай Мостафиндың “Башҡорт тураһында бер повесть” тигән эссеһын (үҙебеҙсә әйтһәк, ҡиссаһын) — был ысынлап та повесть түгел, ә эссе! — бер ултырыуҙа ҡыҙыҡһыныуым һүрелмәй уҡып сыҡтым, әҫәрҙең тап ошо бер сифаты, уҡымлылығы, ғына ла уның дөйөм иғтибарға лайыҡлылығын билдәләй. Ҡулъяҙмаһынан тыш, үҙе менән дә күҙмә-күҙ фекер алышыуым һөҙөмтәһендә тарихҡа һәм, ғөмүмән, донъяға төплө үҙ аллы ҡарашлы, был әҫәрен яҙыу өсөн мотлаҡ булған тарих фәне һәм лингвистикала ғына түгел, ә физика, математика, философия, теология (дин белеме) өлкәләрендә лә ярайһы киң даирәле һәм ҡабилиәтле булып күренде автор. Был иһә тәбиғи һәләттән тыш оҙаҡ йылдар буйына баш ватып ныҡышмалы эҙләнеү, “тарих саңында соҡсоноу» арҡаһында килә торған һирәк егәрле сифат. Шуның арҡаһында автор сал быуаттар шырлығына үҙ юҫығында үтеп керә алған, тарихыбыҙҙың ҡараңғы күгендәге төрлө фәндәр йондоҙлоғоноң маяҡ булырҙай йондоҙҙарына күҙ төбәп, йондоҙо юҡ тәңгәлдәрҙе эссе жанры ҡанунынса ижади тоҫмал шәмдәрен элеп ҡалдырып, үҙенең “Колумб сәйәхәтен» башҡарған — ошоғаса аҙ өйрәнелгән тәрән-төпкөл тарихыбыҙҙың яңы ҡитғаһын асмаҡсы. Колумб үҙе юллаған Һиндостан урынына Американы асҡаны һымағыраҡ та булып ҡуйыр был, бәлки, унынһын киләсәк күрһәтер, әммә “Колумб сәйәхәттәре»нә сарсап-һыуһау, оло ихтыяж кисерә бөгөн зыялы донъя. Һәр хәлдә, башҡорттоң аҙ өйрәнелгән тәрән-төпкөл тарихына “нәҙек эҙ һалып ҡуйыу” тип билдәләй эссе авторы үҙ маҡсатын һәм ул шуға өлгәшкән тип иҫәпләргә нигеҙ бар. Авторҙың үҙ һүҙҙәренә килгәндә, был әҫәрҙә “халҡыбыҙҙың тарихының бик ябай контуры яҡынса һупланды тип әйтер инек” — бынынһы ла мәслихәт.

Кешелек донъяһының бишеге һәм ҡитға буйлап таралыу юлдары тураһында бер нисә төрлө теория-тоҫмаллау бар әлегә, уларҙың һәр ҡайһыһы йәшәргә хаҡлы. Эссе авторы Кесе Азия “бишеге”нә таянған, әммә халыҡтар таралыу юлын ул өр-яңыса билдәләй — бәхәслелер ҙә был, бәлки, тик шуныһы менән дә үҙенсәлекле, ҡыҙыҡлы.

Инде килеп, әҫәрҙе матбуғатҡа әҙерләү барышында уйланыу һәм, әгәр кәрәкле табылһа, ҡулъяҙмаға ҡайһы бер төҙәтмәләр индереү өсөн авторға тәнҡит-кәңәштәр.

12-нсе биттә инглиздар Урта Азиянан сығып киткән Көнбайышҡа, ә Б. этносы — Кесе Азиянан, тип әйтелә. Кешелек тоҡомо бер үк ваҡытта региондың ике урынында: береһе — Кесе Азияла, икенсеһе Урта Азияла яралған, тигән һүҙме был? Шулай була ҡалғанда ла, Б. этносы менән

инглиз, Бөйөк Британия утрауҙарына барып етмәҫтәре борон уҡ осраша алыр ине бит: Кесе һәм Урта Азия — терәлеп үк тора лаһа, ҡитғаның бер мөйөшө (ундағы мәҙәниәттәр ҙә бер-береһенә оҡшаш). Шуға күрә лә эссела "Башҡорттарҙың инглиздар менән фәҡәт Британия утрауҙарында осрашыуҙарын күрһәтә алабыҙ" тигән автор раҫлауы икеләндертә. Әммә автор ҡараштарының "бәхәсһеҙ һәм төплө" икәнлегенә (15-енсе бит) һәм башҡа шундай уҡ "бәхәсһеҙ"лектәргә баҫым яһала йыш ҡына (ҡулъяҙма биттәрендә күрһәтә барҙым). Ундай ҡәтғи раҫлауҙарҙан һаҡ булырға, бәхәстәргә лә юл ҡуйырға кәрәктер.

"Волга буйы болғарҙары улар ниндәйҙер сәбәп менән Дунай йылға буйында йәшәгән болғарҙарҙан айырылып киткәндәр", — тигән раҫлау бар (41-енсе бит). Был урында авторыбыҙ ныҡ танылған тарихи ваҡиғаны күҙ уңынан ысҡындырмаһын, концепцияһын шуның менән дә йәрәштереп, осон осҡа бәйләһен ине: Ҡара диңгеҙҙең төн яғында Ҡубрат хандың ике улы ике яҡҡа айырылып, береһе — Дунай, икенсеһе Иҙел буйына йүнәлә бит үҙ ҡорҙары менән.

"Б. этносының Британия утрауына тиклемге сәйәхәте кәм тигәндә өс мең йылдар дауам итеүе ихтимал" (15-енсе бит). Ошондай меңәр-меңәр йыл арауыҡтарын билдәләгән урындар байтаҡ ҡына. Бөтөнләй, тип әйтерлек, өйрәнелмәгән был өлкәлә башҡаса мөмкин дә түгелдер, ләкин шундай дөйөмлөк өсөн дә ниндәйҙер терәк ишараттарын төҫмөрләйҙер бит эссесы? Һорауҙарға урын ҡалдырмаҫ өсөн, ваҡыт һүҙымдарын нимәгә таянып тоҫмаллауын әҫәр башындараҡ ҡыҫҡа ғына иҫкәртеп китһә ине.

"Башҡорт металл ҡоймаған" (19-ынсы бит). Иген игеү, тимер иретеү, алтын-көмөш серенә төшөнөү эштәрендә татарҙар — алдан, башҡорттар эйәреп кенә барған уларға (28-енсе бит). "Төрөктәр иген сәсеү эшенә татарҙарҙан өйрәнә" (18-енсе бит). — Тарихи факттарға бер нисек тә тап килмәй был раҫлауҙар, хата ҡараш.

30 — 33-өнсө биттәрҙә бирелгән башҡорт-татар мөнәсәбәте, татарҙарҙың башҡорттарҙан айырылып китеү мотивтары һис ышандырмай. Унынса, ултыраҡ тормошҡа күсеүҙә лә "консерватив башҡорттар"ҙы "прогрессив татарҙар" өгөтләп саҡ күндерә... Башҡорт милләтенең үҙ-үҙен һаҡлап ҡалырға, татар ассимиляцияһына бирешмәҫкә тырышыуын "консерватив шелуха" тип Нарыҡлап, шуны "һыпырып ташларға" өндәй автор (43-өнсө бит) — быныһы ла хилафтыр...

Былар барыһы ла еңел, бер ултырыуҙа төҙәтер ҡытыршылыҡтар. Иң мөһиме — мәсьәләгә авторҙың яңыса һәм үҙ аллы ҡарашы, тонйорап ятҡан өлкәлә ҡыҙыҡһыныу, фекер уятыу, бәхәс сәме тоҡандырыу һәләте. Бәхәс аша тыуасаҡ хаҡиҡәт хаҡына матбуғатта оҙаҡламай донъяға сығарырға кәрәк эссены.

12.04.1990.

Ҡәләме көн үҙәгендә

1

Тәрән йылға тын аға — халҡыбыҙҙың ошо баҙыҡ әйтеме “ҡылт!” итеп күңелгә килә, арҙаҡлы әҙип Агиш Ғирфановтың мәҙәниәтебеҙ ҡитғаһынан арымай-талмай талғын ғына ағылыусы ижад йылғаһы асылын барлағанда. Дөрөҫ, төбө тәрән булһа ла, тонйорауыҡ-тын ғына түгелдер һис: ярһыу шаршыларҙа үткер һыртлы хәтәр сатира тулҡындарының ҡаяларға ишерелеүе ҡасан тын ғынабарған?! Заманабыҙ бәндәләренең күләгә артына йәшерелмеш мең-мең ҡылыҡлы кире тәбиғәтенең иң-иң сағыу һырҙарын һәм “йәйғор”ҙарын хужабикә усындағы йомарлаҡ майҙай таныҫҡалап илтә белә бит ул шаян тулҡындар; әммә йомарлағы рәхәт ҡа бып йотмалы май түгел, ә киҫкен йөҙлө алмас — тыштан ғына көндәй көләп ялтырамыш һалҡын быяланы ла, Көн юлына арҡыры торған ҡаяны ла, хатта ҡорос сыл бырҙарҙы ла ҡырҡып үтә яҙыусының күҙйәш үтәләй көлөүе...

Юҡ, тын-тонйорау түгел был тәрән йылға — ғүмеренең инде етмешен артылмыш уҙаман әҙибебеҙҙең үҙенсәлекле ижады. Йылға аға ла аға, тулҡындарын ярға ҡаға ла ҡаға, ә ярҙарында йәйрәп ятып “әҙәби тәнҡит” сүбәге сәйнәүселәр генә “абайламай” уны — йөрәкһеп-ярһып һүҙ әйтәһе урында ла телдәрен кинәйәле тешләп, бармаҡтарын ҡолаҡтарына тығып, күҙҙәрен сытырлата йомоп, балыҡ тынлығы һаҡлай. Шулай уҡ тип әйтмәҫ инем, тар күңелле әҙәби даирә бойорған бойомобоҙ быны мәжбүрләй. Сөнки әлерәк кенә сыҡҡан, тәнҡитселәрҙең тап үҙҙәре тарафынан уҡ “киң ҡоласлы” тип маҡталған алты томлыҡ “ башҡорт әҙәбиәте тарихы” ла сатирабыҙҙың баҙыҡ күренеше, кәм тигәндә айырым барлауға лайыҡлы был тос ижад хаҡында ике ауыҙ һүҙ менән генә сикләнеүенә ҡарап, сәйер хис кисерәһең: “өнһөҙ балыҡ”тар — һыуҙа түгел, ә ярҙа икәндәр ҙә ул, тип уйлап ҡуяһың, кемдер әйтмешләй... Шуға күрә, теге йәки был ижадты баһалау минең ишенең бурысы булмаһа ла, уның арпалыҡлы[35] абруйлылар (профессиональ тәнҡитселәр) икмәге икәнен белһәм дә, “балыҡ”тарҙың оҙайлы өнһөҙлөк тонйорағына зәғиф кенә бер ташымды сорғоторға баҙнатланым.

Сатира ул, ғөмүмән, авторҙан айырым талант, махсус фекерләү ҡеүәһе талап иткән һәм йыш ҡына бәлә-ҡазаға юлыҡтырыусан ауыр ҙа, хәтәр ҙә кәсеп икәнлеген үҙҙәре яҙып ҡарағандар беләләр. Шуға күрә лә шанлы сатирик Ерәнсә-сәсәндәрҙән һуң уға (ысын сатираға, тим!) ҡыйып тотоноусылар ҙа бик һирәк. Әммә иң мөһимен иҫтә тотайыҡ: ерлекле сатираға, юморға өлгәшкән әҙәбиәт — етлеккән әҙәбиәт. Ә *сатирик роман* иһә әҙәбиәттең фәҡәт бөтә яҡлап та үҫешкән, камиллыҡҡа ирешкән мәлендә генә тыуа һәм уның тажының үрендәге гәүһәрҙәренең береһен тәшкил итә. Был гәүһәр милли әҙәбиәтте донъяның сағыу әҙәбиәттәре кимәленә күтәрә, шуларға тиңләштерә. Тел төбөмдөң асылы шул: арҙаҡлы ҡәләмдәшебеҙ Агиш Ғирфановтың инде бынан күп йылдар элек бер нисә

---

[35] Арпалыҡлы — эш хаҡы алыусы: борон (мә¤әлән, шумер бабаларыбыҙ заманында уҡ) хеҙмәт хаҡын арпалата һәм һыралата түләгәндәр.

телдә донъя күргән “Дан туртаһы” тигән сатирик романы тап ана шундай ҡаҙанышыбыҙ булды.

2

Һәм бына ҡулымда “Серле бетеү” — тукһанынсы йылдар башында яҙылған һәм аҙағында (1998 йыл) Башҡортостан “Китап” нәшриәтендә ташҡа баҫылып сыҡкан сатирик повестар һәм хикәйәләр йыйынтығы (авторының 70 йәшлеге айҡанлылыр, моғайын). Быларҙы беҙ үҙ ваҡыттарында “Ағиҙел” һәм гәзит биттәренән кинәнеп уҡығайнык, әммә уларға ҡарата, баяғылай, әҙәби тәнҡит ярындағы өнһеҙлөктөң шаһиттары ла булғайнык. Эйе, әҙәбиәт белгестәребеҙ ана шул саҡтарҙа ла, хәҙер ҙә үҙ мәҡәләләрендә бер үк сүбек сәйнәп йәтеш май сығара: яҙыусылар бөгөнгө хәтәр һәм ҡатмарлы тормошобоҙҙо әҫәрҙәрендә сағылдырырғабаҙмай — ваҡыт йылғалары ағылып үтеүен, бөгөнгөнөң кисәгегә әүерелеп хәүефһеҙ алыҫайыуын, айғолағынан хәтәрлекһеҙ матҡып алырҙай балыҡ төйөрөмләнеүен көтөп яталар, йәнәһе. Ләкин Агиш Ғирфановтың сатираһы күрәләтә быны юҡка сығарҙы — ваҡиғаларҙың тап үксәһенә баҫты һәм баҫа, хатта алдына уҡ зәһәр апсайып, күҙенә үк ҡарап әсе йылмая...

Үҙем дә күпмелер “сатира ене ҡағылған” зат булараҡ, ҡәләмдәшемдең ошо яңы йыйынтығын һөнәрмәнлек йәһәтенән дә, китап уҡыусы зауҡынан да ентекле ҡарап сыҡтым. Әҫәрҙәренең мауыҡтырғыс ағышында ҡайһы бер ҡытыршылыҡтар ҙа Абайланым, ләкин авторҙың тап “бөгөнгө көн ҡаҙағына һуғыусы” тапҡырлыҡтары аҫтында йылға төбөндәге ҡырсынташтарҙай күмелеп ҡалды улар, шуға күрә уларын епкә теҙеүҙе мин баяғы һөнәр маһирҙарына тапшырып, уҡыусыларыма уғата яҡыныраҡ килмәксемен — китап биттәре буйынса сәйәхәттәрен Еңелләштереүсе гид вазифаһын алам. Ә гидтың бурысы, һөйләүҙән дә бигерәк, күрһәтеү булғанлыҡтан, ҡоро һүҙ гәпереүҙән мөмкин тиклем тыйылып, иғтибарҙы күберәген автор тексының тәрән йөкмәткеле һәм сағыу һүрәтле өлөштәренә туранан-тура йүнәлтәм — күп урында үҙем әйтергә теләгәнде лә текстың үҙенән һөйләттертәм. Ҡыҫҡаһы, китапты уҡыусы менән бергә уҡырға, зауыҡланып аңларға тырышайыҡ.

Бына беренсе әҫәр — “үҙгәртеп ҡороу” тигән сәйәсәт маңлайҙарға зерә лә шаңҡытып һуҡкан, бәғзеләребеҙҙең ҡулдан ҡәләмен төшөрткән 1990-1991 йылдарҙа уҡ яҙылмыш “Алтын төлкө” повесе. Үҙебеҙ белмәгән нимә бар: зәңгәр экрандарҙан күҙгә ҡарап күҙ быуыусы эреле-ваҡлы Чумактар һәм Кашпировскийҙар (әҫәрҙәге Чудактар һәм Кармировскийҙар) өшкөрөүенән һаташыулы төштәгеләй илергәйнек тә баһа!.. Повестәге (һәм ғәмәлдәге лә!) ҡаланың элекке “Коммунистик” майҙаны — хәҙер мыжғыу “ Баҙар иҡтисады” төйәге, ә әүәлге “фиҙакәр” коммунистар үҙҙәре — коммунистик “бәхет ҡошо»н мәсхәрәләп алмаштырмыш “алтын төлкө” (ҡараҡлыҡ-бизнес) ҡойроғона кемуҙарҙан тағылышып йәнтәслим йүгереүселәр... Коммунистик донъя түңкәрелер

саҡта ҡаланы ялмап алған ошо дөйөм психоздан башланып китә әҫәр: күктә икенсе планетанан (капиталистик ҡоролоштан, тип әйтәйек) тура тоҫҡап ебәрелгән, үҙенең килеш-кил бәте менән бирәнтамаҡ буржуйҙарҙың эт ялаҡкыс алтын тәрилкәләренә оҡшаш сәйер “ТОО-лар (Танылмаған Осоусы Объекттар)» айҡалыпмы айҡала, ерҙә баяғы “ Баҙар иҡтисады” майҙанында, бәндәләрҙе и блессән ымһындыртып, бер түгел өс алтын төлкө, ҡойроҡтарын уларҙың танау аҫтарында уҡ болғай-болғай, уйнаҡлапмы уйнаҡлай... Эйе, өсәү, сөнки әлегәсә бөйөк ҡыҙыл империяның донъя тотҡалары булып йөрөмөш коммунистик “өс батыр”ҙың һәр береһенең көҙҙәрен тамам ҡыҙҙыртырға ла өсөһөн дә коммунистик “тура юлдан” бер юлы яҙҙыртырға оһолланып яҫҡанған, шуның өсөн “ТОО”-нан десант итеп төшөрөлмөш йылғыр тылсым эйәләре бит улар, алйытҡыс алтын төлкөләр. Шуны күргәҙмәле һабаҡлау өсөн, автор ҡөҙрәтле өс батырҙың шуға тиклемге коммунистик эшмәкәрлеген халыҡ әкиәттәрендәге алым менән билдәләй: Иванов тигәне — “Тау батыр”, Петров атлыһы — “Төтөнсө батыр” һәм Маңҡорт ләҡәплеһе — “Ерҡоротор батыр”, ләкин бар ҡылыҡтары — үҙебеҙ күреп белгән, татыған асы хаҡиҡәт... Йәғни “ҡасандыр был ерҙәр йәйрәп ятҡан ҡылғанлы дала булған. Унда меңәр-меңәр баш мал артынан тирмәләрен күсереп, ит ашап, ҡымыҙ эсеп башҡорт йөрөгән. “Ул артыҡ рәхәт йәшәй башланы буғай, боронғо тормошто маҡтап йырлай, әҙерәк майын кәметергә кәрәк” тип, далаға сәнәғәт алып килделәр. Ерҙе тишкеләп, ер майы таптылар. Унан башҡортҡа әйттеләр: “Бәй, һеҙҙә завод тор баһы юҡ бит! — тинеләр. — Барса тәрәҡҡи иткән халыҡтарҙың тор балары бар, ә һеҙҙеке юҡ. Яҡшы түгел, яҡшы түгел! Әйҙәгеҙ, тор ба ҡуйып, һеҙҙе бәхетле итәйек”. Шулай итеп, ер майын эшкәртергә заводтар ҡорҙолар, тор балар ҡуйҙылар”...

Әйткәндәй, тор балар менән ҡуша ҡалаға әллә ниндәй шикле-микле йән эйәләре — халыҡ өлөшөн үҙ кеҫәләренә “һулдан” сумырып көрәүсе “жульник”тар ҙа йыйын алыпһатарҙар — килмешәктәр килеп тула һәм улар, килмешәктәр, ҡалалағы төп халыҡ ҡуйҡымын шөйлә шыйыҡлатыусы, тимәк, СССР-ҙың даны сыҡҡан “халыҡтар дуҫлығы”н ҡуйыртыусы “тотҡа”ларға әйләнә. Шундайҙарҙың береһе, мәҫәлән, “оҙаҡ йылдар ОРС Башлығы булып эшләгән” һәм “эскән саҡтарында “бөтә түрәләр минең ҡулда” тип маҡтанырға яратҡан” Хай Нехаевич Тюфтик тигәндәре, болғансыҡ һыуҙан балыҡ тоторға үҙенә ҡулайлы мөҙҙәттәрҙе кәкере танауы менән әллә ҡайҙан шәйләп алып, күҙ менән ҡаш араһында, шомло әкиәттәгесә, “тор ба эсенән килеп сыға”, ә хәтәр мәлдә шул уҡ юл менән “тор баға инеп китә”... Тик авторҙың әсе көлөүле “әкиәте” быны менән генә сикләнһә икән! “Әммә мәркәз башлығиәтенә был да аҙ тойолдо, — ти ул.

— Халыҡ һаман үҙен бәхетле тоймай, сөнки тор балар етешмәй, — тинеләр.

Ана шунан йәнә бер завод ултыртыр һәм ун тор бабаҫтыртыр өсөн алыҫтан (ҡайҙан икәнен дә яҡшы беләбеҙ! — *Й.С.*) баяғы *өс батырҙы ебәр*ҙеләр. Иванов, Петров һәм Сидоров, ҡеүәтле Йәьжүз-Мәьжүздәре

менән ер гөрһөлдәтеп, ҡалаға яҡынлашабашланы. Арттарынан әле генә төҙөп киткән заводтары шартлай, ә былар, ғәрәсәт ҡуптарып, алға шыуыша. Әйтерһең дә, йәйге эҫе көндә Мамай яуы, Ҡырым сиреүе килә. Имәнес геүләп, бейек саң ҡойоно күктәргә аша. Ул, гүйә, офоҡто ҡапларға, Ҡояшты йоторға ынтыла. Унан саң ҡоймаһы, бер божорға бөгәрләнеп, үҙ күсәре тирәһендә өйөрөлөргә тотона. Хас ҡот осҡос дәһшәтле ҡойон ҡоторона... Ҡотороноп килә торғас, инде ҡалаға етәрәк кенә күңелһеҙ ваҡиға булды — саңға төйөлөп, Сидоров үлеп ҡалды"...

Тап бына ошонда, ошо ҡойонло ерлектә гелән "Еңеүҙәргә илтеүсе" ҡыҙыл фирҡәбеҙҙең етмеш йыл буйына арымай-талмай бойомға ашырған һәм "артта ҡалған ерле халыҡтан" ипле кадрҙар шыттырған шанлы милли сәйәсәте күкрәп-күкрәп тантана итә лә инде: "урыны ожимахта булғыры Сидоров урынын Мөхәммәтәмин алды. Милләттәштәре уға: "Маңҡорт булма, былай ҙа аяҡ баҫҡан һайын — завод, тын алырлыҡ та түгел, халҡыңды тонсоҡтороп үлтереүселәрҙең ҡәһәрле исемлегенә инергә, яуыз Тәфтиләү кеүек ҡара тарихта ҡалырға итәһеңме?" — тинеләр. Тыңламаны. "Мин һеҙҙе бәхетле итер өсөн килдем, — тине. — Тор баларҙан ситкә нефть продукттары ағасаҡ, ә һеҙгә бында тауар ағыласаҡ. Экология, һулар һауа, тарихи ҡомартҡылар тип йәбешеп ятҡан булып, һеҙ үҙ ҡәҙерегеҙҙе үҙегеҙ белмәйһегеҙ!" Үҙҙәренеке әйткәс, кешеләр нишләһен?! Ышандылар. "Сидор түгел инде был, Мөхәммәтәмин, моғайын, алдамаҫ", — тинеләр". Эйе, үҙебеҙҙең Мөхәммәтәминдәребеҙҙең нисек итеп Маңҡорттарға әүерелеү юлы был һәм уларҙан Еңел генә алданыусы үҙебеҙ ҙә маңҡортлоҡҡа ҡалып тынысланабыҙ (шуның бер хәтәр өлгөһө — Башҡортостан административ сиктәренең эсендәге Ямантауҙы Рәсәйҙең Межгорье ҡалаһын һалырға шым ғына биреүебеҙ һәм Ямантау аҫтындағы тамуҡ утына илтмеш шомло туннелдәрҙе "тикшерергә" ебәрелгән комиссия ағзаларынан яулыҡлы бер Мөхәммәтәминәбеҙҙең ҡоролтайҙа һәм матбуғатта уны хас та ожмах юлы итеп тасуирлауына ауыҙ ҙа асмай ышанып шымыуыбыҙ)... "Ә тегеләр ни, әлегесә саң-буран уйнатып... "һарыҡ массалары" (халыҡ массалары. — **Й.С.**) йәшәгән йорттар эргәһенә үк терәп һалырға итәләр мәхшәр-заводты...

Бер мәлде Ерҡороторҙоң, йәғни Маңҡорттоң, төҙөлөш юлында һыуҙар осраны... Ул йылғалар, ул күлдәр, ул һаҙлыҡтар, ул инештәр. Үҙҙәрендә етмәһә килеп төрлө-төрлө балыҡтар уйнай. "Һа-ай, еребеҙ һыуҙарғабай икән дә!" — тип бот сабып хайран ҡалды ерҡоротор батыр. Әммә был һыуҙар төҙөлөшкә ҡамасау итә ине. Үс иткәндәй, буласаҡ заводтың тап уртаһында ята һыуҙар.

— Һыуҙарҙы ҡоротторға! — тип әмер бирҙе трест управляющийе Ерҡоротор.

Аһ, ҡалай көрәште ул һыуҙар менән! Бөтәһен дә ҡоротоп бөттө...

Тау батыр, билдәле инде, тауҙарҙы бер урындан икенсе урынға күсерҙе, тауҙарҙы түңкәрҙе. Бер мәлде уның йәтмәһенә башҡорт халҡының тарихи ҡомартҡыһы эләкте... Уны йә берәй ун биш-егерме саҡрымға тартттырып алып китергә, йә сода-маҙар сығара торған заводтың ауыҙына илтеп тығырға кәрәк. Әйҙә, биш йыллыҡ буйы көйшәп ятһын".

Ғәфү ителгеһеҙ оло гөНаһыбыҙ ҙа үтәнән-үтә күренеп тора бында: бөтә кешелек донъяһының тәүдиненең изге ҡомартҡыһы булмыш Шәке тауҙы кер содаһына әйләндереп йыуынтыға ағыҙыу (терһәгебеҙҙе тешләргә итербеҙ әле!)...

Ә Батырҙарҙың өсөнсөһө, Төтөн батыр тигәнебеҙ, "ул завод ҡына ултыртмай, ҡаланы ла төҙөй. Завод, *уның эргәһенә* торлаҡ йорттар, йәнә завод, йәнә ҡаланың бер өлөшө, йәнә завод. Йәғни мәҫәлән ҡала ҡатлы-ҡатлы пирук һымаҡ килеп сыға, — тип билдәләй яҙыусы. — Заводтар араһында йәшәй кешеләр, шунда эшләй, шунда төтөн еҫкәй, шундабалалар үҫә, шунда кешеләр үлә...

Ҡаланың үҙәк майҙаны уртаһында градусник һымағыраҡ бейек бер нәмәкәй баҫтырып ҡуйҙылар. Уның ал яғы — нефть-химия заводы төҙөүселәр-Еңеүселәргә һәйкәл, арт яғы — бүлемдәргә бүленгән шкала ине. — Бына ҡарағыҙ! — тинеләр ҡала хеҙмәтсәндәренә. — Элек бында ҡылғанлы даланан башҡа бер ни ҙә булмаған. башҡорт эскән ҡымыҙ күләмен нигеҙ итеп алһаҡ, хәҙер һеҙҙең ҡалала производство күпмегә артҡан?

Ҡарайҙар — бүлем 1000-де күрһәтә.

— Күрәһегеҙ, 1000 процентҡа артҡан. Тимәк, һеҙҙең ҡалала урынлашҡан завод-фабрикалар 1913 йылғы ҡымыҙ менән сағыштырғанда әҙәм ышанмаҫлыҡ күп продукция бирә. Ә хәҙер, яңы нефть-химия заводын тәртипкә кереткәс, был күрһәткес 1500-гә етергә тейеш. Уйлап ҡына ҡарағыҙ: үҫеш — 1500 процент!.. Үрә-ә, иптәштәр!

Майҙанды "үрә» ауаздары яңғыратты".

Халыҡ тормошона түгел, ә ҡыҙыл фирҡәнең "Еңеүсәнлекле" идеологияһына нигеҙләнгән был бөйөк "тау күсереү", "тор бабаҫтырыу", "ер ҡоротоу» батырлыҡтарының сәбәптәре лә, тап әкиәттәгеләй, яп-ябай ғына, имеш: "Төтөнсө батыр бала сағында ҡатлы-ҡатлы пирук яратҡан икән: бер ҡаты — ҡамыр, бер ҡаты — балыҡ, бер ҡаты — кәбеҫтә, йәнә бер ҡаты ҡамыр" — шуға күрә лә был Еңермән төтөн борхотҡос заводтарын торлаҡ йортттар менән ҡатарландырып һала... Тау батыры йәш сағында тауға а бынып ҡолаған да, үҫеп ир-егет булғас, йөрөгән юлында осраған барса тауҙарҙы ситкә алып бырғытырға һүҙ биргән икән. Ә инде Ерҡоротор — үҙебеҙҙең Маңҡорт — " Бала сағында күләүеккә батып үлә яҙған. Шунан һуң йөрөгән юлындағы бөтә һыуҙарҙы ҡоротторға ант иткән һәм ошо антын бөгөнгәсә уңышлы үтәп килә, тиҙәр"... Шул ҡылыҡтары өсөн "Социалистик Хеҙмәт Геройы" исеме алған "Тау батыр", "Төтөнсө батыр", "Ерҡоротор батыр"ҙарҙы һәм ошолар ыңғайынан үҙенә "Социалистик Михнәт Геройы" исемен булдырыуҙы юллап мәш килеүсе ата ялҡау, әммә-ләкин хакимиәт файҙаһына боғаҙ ярыусанлығы өсөн рәсми телдә "ҡаланың иң алдынғы эшсеһе" тип күтәрмәкләнмеш Михнәтте, аҡыллы баш беҙҙәрҙән ныҡ айырмалы булараҡ, "ҡырағай башҡорт" һаналмыш бабаларыбыҙ хатта һанға ла алмаҫ, һис юғында боҙоҡлоҡтарын арт һабағы уҡытып дауалар ине. Әммә ҡыҙыл идеологияны майҙандарға проценттар итеп һәйкәлләмеш йәмғиәттең төп тоткалары һаналып йөрөй улар, һөҙөмтәлә "атҡарған" шомло

процентары шкаланы ашып китеп, ҡала халҡын иҫертеп алйыткыс ағыулы төтөнгә әйләнә, бәндәләрҙең күңел донъяларының өҫтөн аҫка түңкәрелдерә. Ғөмүми иҫереклек арҡаһында юҫыҡтар алмашына: ошоғаса эшләп кенә табыла торған бәхет ҡошон бәғзеләр күктәге ТОО-нан төшөп килә тип көтә. Тик күҙҙәре алдында уҡ бәхет ҡоштары тәүҙә — ала ҡарғаға, аҙаҡ әлеге лә баяғы тОО-Ға әйләнеп осоп китә. Иҫереклекте уғата йәйелдертеп, Төтөнсө батырҙың әлеге “ҡала пируғы”ндағы нәүбәттәге “Начинкаһы” — заводы ағыулы ыҫмаҡ борхотоп шартлай. Иҫереклеге әлегә һуңғы сигенә етеп терәлмәгән, шул арҡала зәһәр ыҫмаҡты шәйләп нәфрәтләнгән ҡайһы бер “һарыҡ массалары»ның күҙен буярға хакимиәт тарафынан сираттағы комиссия төҙөлә. Комиссия тикшереү һәм хәл күреү эшен... әлеге лә баяғы өс батырға тапшыра: “Үҙегеҙ шартлатҡан — үҙегеҙ тикшерегеҙ”... Һөҙөмтә: “Элек төҙөгәнде нигеҙенә тиклем емерәбеҙ, унан етмеш йыл буйы төҙөй бөҙ ҙә йәнә емерәбеҙ.

— Ә унан?

— Унан тағы етмеш йыл буйы төҙөй бөҙ.

— Унан?

— Унан, моғайын, тағы емерербеҙ”.

Быға яуап итеп, тамам көрсөккә терәлгән “һарыҡ массалары” “ирекле ил”дә үҙҙәренә тыйылмаған берҙән-бер сараны ҡуллана — Башкөлләй эскегә һа быша (бына ҡайҙа ята бөгөнгө эскелектең тамыры!). Авторыбыҙ әйтмешләй, “халыҡ ашарға булмағанға эсә... Хөкүмәткә үс итеп эсәләр. Эскән быуындар тиҙерәк ҡырылып бөтөп, донъяға айныҡ быуындар килһен өсөн эсәләр. Эшләгән өсөн дәүләт бик аҙ биргәнгә эсәләр. Үткәндәге хаталарға үс итеп эсәләр... Ә ҡалабашлығиәтендә... етенсе йыл инде сүбек сәйнәйҙәр, ә май һаман сыҡмай. “Халыҡты ашатырғамы, әллә эсерергәме? Тауар хаҡын кәметергәме, әллә арттырырғамы? “Һарыҡ массалары»на хут бирергәме, әллә юҡмы? Байҙар иҡтисадына күсергәме, әллә ярлылар иҡтисадынамы?” — Етенсе йыл инде хәл итә алмайҙар шуны...

“Ҡалабашлығиәте ҡарары менән фенол, диоксинды һыуҙағы файҙалы элемент тип иғлан итергә! — тип ҡысҡырҙы төтөнсө батыр.

— Гәзиттә “һыуҙар ағыулы” тип яҙыуҙы туҡтатырға!

— Ғөмүмән, матбуғаттың телен киҫергә кәрәк!” — Авторҙың шул ваҡытта уҡ үҙ заманынан бер аҙым алдабарыуын күрһәткес был — Рәсәй Дәүләт Думаһының 1999 йылғы эшмәкәрлеге теркәлмәһенән күсерелгән, тиерһең...

Ләкин иҫереп-алйымыш “һарыҡ массалары”ның да заманаһына күрә араҡы сире бигүк ҡағылмаған, табыш килтерер тайпылышты алдан күрә белгән үҙ “ҡашҡа тәкә”ләре бар имеш. Ҡыҙыл донъя түңкәрелмәҫе борон уҡ үҙе эшләгән заводтан “һул яҡлап” буяу шылдырырға йәтешләнгән, шуны ҡарабаҙарҙа “болғап» ғүмере буйына йыйған болдарының (аҡсаларының) бер өлөшөн егерме өс бидонға нышып һалған, икенсе өлөшөн, ҡыштырлауыҡ о блигацияларға әйләндереп, аҙбарының иҙәненән алып түбәһенәсә шыплап тултырған һәм, ошо кәсеп жаргонында теле лә тамам шымарып, ҡартайған көнөндә хатта үҙенең эсә телен дә

оноткан — фәкәт “акса теле” менән генә һөйләшә башлаған Зәйнетдин Кылыйбаев тигәндәре был. Бөйөк Ватан һуғышының “тыл комағы” тип Нарыкланмыш ошо бәндә, “дерьмократия»нан үҙенсә файҙаланып, “һуғыш бөткәс 45 йылдан һуң” үҙ кулы менән үҙенең яҫы түшенә һәм хатта аркаһына ла, бер түгел, ун ете дана хәрби батырлык ордены, утыҙ биш миҙал Тағып алған, “Бөйөк Ватан һуғышы геройы”На әүерелгән...

Бынығын күпмелер ғәфү итергә лә мөмкиндер — Баштан ук үҙ ки блаһына табына. Әммә автор калтайткан типтар араһында етмеш йыл буйы йәмғиәт тоткаһы иҫәпләнмеш тоташ, тип әйтерлек, фиркәнең 180 градуска боролошон күргәҙмәле кәүҙәләндереүсе шак катырғыс әүерелмән образы лабар. Номенклатуралы кыҙыл фиркә эшмәкәре ул — електәренәсә кыҙыл фиркәле, хатта исеме лә шуға лайыклы — *Револь* (“революция” һүҙенән). Силәгенә күрә капкасы, тигәндәй, заманында кыҙыл фиркәнең райком сәркәтибенең *Люция* (шул ук “рево-люция” һүҙенән) исемле кыҙына өйләнгән, *Револь* менән *Люция* никахланып кушылыуынан тулы канлы *Революция гаиләһ*е барлыкка килгән. Һәм ул, Револь, фиркәһенең “тура һыҙығынан” илле йыл буйына тайпылмай әйҙәп барыусы, *башкалар*ҙы ла шул “тура һыҙык”ка йөгөнөкләтеп көн күрә. “Ул һыҙык... һынмаҫ бөйөк юл башсының һыҙығы булырға тейеш, башка һыҙыктар барыһы ла кәкере”, — ти ул, әйләнгәне һайын,.”һарык массалары»на. *Лә*кин кәкерәймәҫ тигән “тура һыҙык” та, баяғылай, “Коммунистик” майҙанға карай кыҙыл уктай тоҫкалып елгәнендә генә кәкерәйеп, көтмәгәндә, “ Баҙар иктисады” майҙанына килтереп сығарып, Революция-Ғаилә башлығын тамам аймылыш кыла, ки блаһын буталдыра: “Дөрөҫ юлдан бармағанбыҙ икән. Тура һыҙык дөрөҫ булмаған, кәкере һыҙык дөрөҫ булған”, — тигән һығымта яһай ул, әйтелгән “алтын төлкө”ләрҙе койроғонан һәрмәп алырға ымһынып. Һәм үҙенең заманса яугир шиғарын (*лозунгы*һын) һөрәнләп яуға сыға: “Бөтһөн тура һыҙык! Йәшәһен кәкере һыҙык!..” “Эйе, — тип уфтанғандай итә авторыбыҙ. — Хәҙер ул йыйылыштарҙа, митинг тигән баҙарҙарҙа гел кәкере һыҙыкты алға һөрә. Уның һыҙығы йөҙ һикһән градуска кәкерәйҙе... Моғайын, уға фиркӘ билетын райком өҫтәленә илтеп һалырға тура килер. Йәл, әлбиттә. *Револь* булып йөрөүҙән дә туктаны, *Раббил* булып китте. Инде *Раббил* тип кенә түгел, *Әбделраббил* (“Тәңре коло”) булып йөрөһә, муллалар ҙа ихтирам итә башлар ине. Унан... “Фиркәһеҙҙәр фиркәһе” ойошторол, бөтә райкомдарға, рескомға каршы һуғыш асырға ниәте лә юк түгел. Сөнки хәҙер шундай шаукым китте. Ә һуғышыр өсөн, аһ, күп белә ул! Етмеш ике йыл эсендә, ай, күп белем йыйылды”... Һөҙөмтәлә Әбделраббил Хөббөтиҙең дә, Зәйнитдин Кылыйбаевтың да етмеш йыллык үҙенсәлекле алтын белемдәре тоттортмаҫ алтын төлкөләрҙе койроктарынан маткыу өсөн йәтешләп кулланыла — Баяғы донъя бөлдөргөс һәм короткос өс батыр менән берлектәге һәм “ике аяклы төлкөбикә” Илиза ханым рәйеслегендәге “Алтын төлкө» акционерҙар йәмғиәте әтмәләнә. Әммә һатылған акциялар уларҙы һатып алмыш “һарык массалары»ның янсыктарында төн сыккансы ғәжәп үҙгәреш кисереп, яҙыуы уңған ябай туалет кағыҙҙарына әйләнә... Һәм шул асык

ауыҙҙарҙан йыйылған аҡсалары илә алтындары билдәһеҙ йүнәлеш буйынса ТОО-ла осоп барышлай "ҡара тишекккә" убылып, алтын төлкөнө эҙәрлекләүсе баламуттар үҙҙәре лә төп башына ултыртыла (Рәсәй-әсәйҙә уларҙан да мутыраҡтар бар имеш)...

Ошо әҫәр яҙылғандан һуң биш йыл үткәс ил буйынса ағыулы бәшмәктәрҙәй шытасаҡ хәтәр финанс "пирамида"ларына, хатта Рәсәй дәүләтенең үҙенең халҡын үкертеп талаясаҡ "Һаҡлыҡ кассаһы" тигән упҡын "пирамида"һына яҙыусының мәргән күрәҙәлегелер был...

3

"Баҙар иҡтисады" майҙанында алтын төлкөләр ҡойроҡ болғап уйнаҡлаған газлы-төтөнлө мут мөхиттә әлеге "Һарыҡ массалары»н рухи аҙыҡландырыусы зыялылар — ижади интеллигенция ла бар бит әле, нимәләр ҡыйратып йәшәй икән улары?

"Был көндө яҙыусылар беҙҙең иҫ киткес күңелле баҙар иҡтисадын сағылдырған яңы әҫәрҙәр ижад итте, — тип "шатландыра» авторыбыҙ. — Был көндө улар замандың бөгөнгө йөҙөн хәтерҙә ҡалдырырлыҡ китаптар яҙҙы". — Шулай күңелле башлана йыйынтыҡтың 1993 йыл менән тамғаланған "Йүбәләй" повесе. Әҫәрҙе уҡып сыҡҡас, ысынлап та, иң күренекле һәм иң күренекһеҙ әҙиптәребеҙҙең бөтәһе бергә баяғы баҙар ҡанунынса әүҙемләнеп, шанлы заманаға лайыҡ тос ижади емештәрен уҡыусының ауыҙына уҡ тәлгәшләндергес ҡәҙимге берәгәй ҡорға — яҙыусылар берлеге тип йөрөтөлгән, ә минең зәғиф ҡарашымса, алъяпҡыслы олпат ағайҙар кирелеп китеп урам һеперә торған ҙур һепертке бәйләмен ныҡ хәтерләтеүсе ойошмаға уғата нығыраҡ ойошоуын, Юғарынан ҡыҫып тотмош оло ҡулдың баҫымы ыңғайына йылдам һепереүен — баҙармандар күңеленең «нескә" ҡылдарын сиртерлек күргәҙмәле "тарихи әҫәр" әтмәләүен шәйләйбеҙ. Һепертке үҙе айырым-айырым сыбыҡ-ҡәләмдәрҙе бер ҡыҫаға уҡмаштырмыш коллектив көс булараҡ, ул һепереп өйөргән баяғы шанлы "тарихи әҫәр" ҙә ылғый коллектив ижад — ҡалабыҙҙа шаулатып-гөрләтеп үткәрелгән "йүбәләй" (юбилей) тап үҙе була ла инде. Эйе, ҡәһәр һуҡҡыр заманаһына ярашлы, көсәнә-көсәнә хәреф йыйнамаған, ҡатырға тышлы китап яҙмаған улар, беҙҙең һепереүселәр, ә һеперткенең "типичный" бер сыбығының, йәғни ҡәләм эйәһенең, ҡала күләмен шаулатырлыҡ йүбәләй тантанаһын "яҙғандар". Ошоноң менән, шау-гөр килеп, алдағы бер-бер артлы шытасаҡ ошондай уҡ замана шауҡымлы "йүбәләй-китап"тарҙың йәғни күперек-ҡыуыҡ йүбәләйҙәребеҙҙең бәрәкәтле башланғысын да һалғандар, буғай, улар, рәхмәт төшкөрҙәре...

Әлеге әйтелгән һеперткеләйберәгәй-күмәк ҡәләмдең дә үҙҙәренә күрә төрлө-төрлө ҡәләмдәрҙән хасиллығын йәнә лә иҫтә тотоп, бәғзеләренә автор менән бергә айырымыраҡ иғтибар йүгертәйек. Бына буйтлы береһе, "һепертке"нең шул тарихи мәлдәге иң үҙәк йүбәләй сыбығы — үҙ ғүмерендә бер шиғыр ҙа яҙмаған һәм китап та сығармаған, әммә-ләкин, машинкалабаҫтыртып, ун ете том "эпистоляр жанр" — сәләм-хаттар мәжмүғәһен ифрат баплап туплаған, үҙ ғүмерендәге өс кенә

бөртөк эссеһын һәм парсаһын сәхнәләрҙән бер өҙлөкһөҙ һөрәнләп тә оранлап йөрөүе арҡаһында “эссеист һәм парсаист” тип “әҙәби” даны сыҡҡан һәм, быларынан тыш, “романдар серияһы яҙып һалдым, биш йөҙ шиғыр ижад иттем!”, тип күкрәк ҡағып йөрөгән, һөҙөмтәлә шул үҙенең “тыуыуына 60, ижади эшмәкәрлегенә 50 йыл” тулыу йүбәләйен тантаналы үткәрергә, тип башына тай типкән “осло ҡәләм” эйәһе, исеме уның Олпат Шәнәби булыр. Ә шаян тайҙың мотлаҡан уның маңлайына тибеүенә шанлы “Шишмә дворяны” ләҡәпле ветеран шағир — туған әҙәбиәтебеҙҙә “араҡыны болғап-болғап эсеүе” менән генә айырым дан тотмош Болғашкин сәбәпсе имеш: “Йүбәләй кәрәк, иптәштәр! Йүбәләй!” — тип ҡәләм эйәләре араһында сәбәләнеп йөрөй ул бер туҡтауһыҙ. Һөҙөмтәлә Олпат ҡына шәнәбиҙе ана шулай сығырынан сығарғансы маңлайына тай типтерткәндән һуң, өҫтәүенә, ҡәләм сарламыш барса ағай-эне шул Шәнәби йүбәләйен гөрләтеү идеяһын дәррәү күтәреп алғас, Болғашкиндың көтмәгәндә эсендә көнсөл көсөк юртып, шәнәби йүбәләйен булдыртмаҫҡа төрлөсә аяҡ салып ҡарай ул ҡарауын, ләкин берҙәм һепереүсе ярһыу ҡәләмдәштәрҙе бер алынған йүнәлештән тыйып-туҡтатып буламы ни! Йүбәләйгә әҙерлек ҡыҙғандан ҡыҙа — йүбәләй һөйөүсе берәгәйле “һеперткегә яңы сыбыҡтар” өҫтәлгәндән өҫтәлә...

Бына шуларҙың ҡайһы берәүкәйҙәре: Сибәрбикә, Гүзәл бикә, Һылыубикә тип үҙҙәрен-үҙҙәре нәзәкәтле ләҡәпләгән, әйтелгән был сифаттарын йөҙҙәрендә фәҡәт имнек, кершән-буяу менән генә сетерекле һаҡлап килгән “шиғриәтле” өстағән бикә — автор әйтмеш “аҡ беләк”ле әҙибә ханымдар. “Ҙур булмаған ошо ҡалала әҙәбиәткә һәм сәнғәткә терһәк менән юл йырыусы өс һылыубулыр улар. Үҙҙәре шиғыр сығара, үҙҙәре шуға көй яҙа, үҙҙәре сәхнәлә йырлайҙар. Үҙҙәре йә гармунда һыҙҙыра, йә мандолина сиртәләр. Уларҙың аҡ беләктәре һәр саҡ терһәккә тиклем һыҙғанған булыр. Ғәләмәт әһәмиәтле эш башҡарғандай, ең һыҙғаныып, ялҡынланып-янып йырлауҙары, аһ-ваһ килеп бил уйнатыуҙары, түш бейетеүҙәре, ян баш һикертеүҙәре тамашасы күңеленә хуш килә...

— Ир кеше тәнемә тейһә, — тип шәнәби-йүбәләйсегә үҙенең ижад серҙәрен сисә күңелсәк Сибәрбикә, — “һөйәм, яратам” тип тә ултырһа, башыма яҡты уйҙар килә — йыр тыуа. Ҡулын алыу менән башта бер фекер ҙә ҡалмай. Хет һин ҡосаҡлап ятыр инең, Шәнәби! Их һин, туң йөрәк!..”

Аҡ беләктәрҙең ижад итеү ысулы — иҙәнгә һуҙылып төшөп ятыу, ә ҡулдарында ҡағыҙ-ҡәләм уйнатыу имеш. Бындай акттар күберәген Оло шәнәби өйөндә атҡарыла: “Шәнәби аяҡтарын мосолманса бөкләп иҙән уртаһына ултырҙы ла һәр береһенең арҡаһына ҡулын тейҙерҙе, иңбаштарын, сәстәрен һыйпаны, йомшаҡ ерҙәрен яратып алғыланы. Шулай ғына иткәйне, һылыуҙарҙың ижады тирмән быуаһылай йырылды ла ҡуйҙы... Улар яҙғы ташҡын булып һылыуҙарҙың ҡағыҙҙарын тултырҙы, көй булып гармун, мандолиналарға инде:

Ай-һай-һай, һай-һай-һай,
Мин һине яратам.

Трат-та-там, трат-та-там,
Һин мине яратаң"...

Был юлдарҙы уҡығас, күптән түгел вафат булған халыҡ шағирының һуңғы мәҡәләләренең береһендә ошоноң ише "аҡ беләк"тәрҙең шиғриәтебеҙҙә бер туҡтауһыҙ моронлауына эсе бошоп уфтаныуы иҫкә төшә — ысынлап та, шиғри бәлә түгелме?!.

Ә шулай ҙа, тип хушкүңел йылмайырға тейешбеҙ, — уфтаныусы халыҡ шағирҙарынан ғына тормай ҙаһа донъя! Шиғриәт халҡын өҙгөләргә ҡайһындай ғына бүреләр оломаһын, күҙен быуырға ниндәй генә алтын төлкөләр ҡойроғон болғамаһын, донъя тигәнең шундайын да гүзәл һәм миһырбанлы — әлегеләй аҡ беләк шағирәләрен дә, эссеист-шағирҙарын да танауын ергә ҡаҙалдыртмай дәррәү күтәреп алыр, муйынына атландыртып Олимп тауына елдертер изгеләрҙән изге йәндәре лә бар имеш. Шундайҙарҙан бына һеҙгә "һепертке»нең нәүбәттәге бер күренекле "сыбығы" — изге күңелле Шағир: баяғылай аҡ беләкле бер һылыуҡайҙы елкәһенә атландыртып алған да, ых-бых килеп, маңлай тирҙәрен ағыҙып, туп-тура туған әҙәбиәтебеҙ ҡәғбәһенә — Яҙыусылар берлегенә ағза итеп индертергә елдерә. Ҡырыҫ баҙар иҡтисады мөхитендә нескә хистәргә һыуһаған илебеҙҙе нәүбәттәге хис эйәһе менән ҡотлап байытырғабара ул. Ҡайһындай ҙа тәүәккәллек, егетлек: аҡ беләкте матҡып йөкмәп алышында хатта үҙенең еңел-елпе — "кәүҙәгә йоҡараҡ" булмышын да, ә фатиры тәҙрәһенән дүрт күҙ менән "паровоздай бәһлеүән бисәһе" һағалауын да оноҡҡан (әйткәндәй, "кәүҙәгә йоҡараҡ шағир"ҙың гүзәл затҡа ҡаратабыл йәһәттән үҙ талымы тотороҡло: уның тәүге ҡатыны ла көрәшсе һымаҡ ғәләмәт таҙа булһа, икенсе ҡатыны ла шундай уҡ бәһлеүән икән. Авторҙың әйтеүенсә, "Малдың — итлеһе, бисәнең һимеҙе кәрәк, тип маҡтанып йөрөй Шағир")...

Йә, ярай, баяғы хис эйәләрен елдертеү барышын барлайыҡ: "Уныңса булмай, бер бабайҙы елкәһенә атландырып алған урта йәштәрҙәге лауреатты күрҙеләр. Тимәк, быныһын да шунда — әҙәбиәткә алып китте"... Һәй рәхмәт төшкөрө!.. Әлеге йүбәләй һеперткеһенә айырылғыһыҙ сыбыҡ булып бәйләнеүсе — зәһәр "ерән һаҡал-мыйыҡлы Тараҡов"тыр, моғайын. Ә ниңә "Тараҡов", тиһегеҙме? Уныһын автор аңлатһын: "Ул ялбыр йөндәрен тарарға тараҡ оноҡҡан була, һәр саҡ кешенән һорай, шуға ла Тараҡов йөрөй"... Тараҡов үҙе лә яҙмай (ваҡыт юҡ — рүмкә тоторға кәрәк!), башҡаларҙы ла уҡымай, әммә бөтә әҙәбиәтебеҙҙең белгесе булып йөрөй. Кәрәккәндә тап унан белешәләр:

— "Шәнәби ағаның әҫәрҙәрен уҡығаның бармы?

— Бар. Һәйбәт! — тине Тараҡов, керпеген дә һелкетмәйенсә. — Талантлы яҙа! Ләкин уны бер кем дә аңламай. Уны илле, йөҙ йылдан һуң ғына аңларҙар. Беҙҙең әле уны баһаларлыҡ аңыбыҙ юҡ.

...Яҙыусылар бер-береһенең әҫәрен уҡымай, сөнки үҙҙәре яҙа. Улар теге йәки был яҙыусының әҫәре хаҡында йәһәт кенә Тараҡовтан һорашып алалар: "Әйтсе, дуҫҡайым, теге шағирҙың өҫтәл һөртөргә лә ярамаған теге нәмәкәйендә ниндәй образ бар?" — "Салғы! — ти Тараҡов. — Ҡайынға

элеп ҡуйылған үткер салғы. Ул ут булып Ҡояшта яна һәм ҡайнар мөхәббәт хистәре уята". — "Булды!" — ти яҙыусы һәм һәр осрашҡан һайын шағирға маҡтау ырғытып үтә: "Уҡыным, уҡыным поэманды, — ти. — Һоҡланғыс! Бигерәк тә ҡайынға элеп ҡуйылған, Ҡояшта ут булып янған салғы образы шәп!" — Бына ошо тараҡһыҙ Тараҡов йүбәләйсе Шәнәбиҙе лә, йүбәләйгә лайыҡ булырҙай таныҡлап, һыйыр урынына һаумаҡсы.

"Тараҡов Шәнәбигә эйәреп сыҡты. Ул Шәнәбиҙең бик һәләтле, хатта "гениальный" яҙыусы булыуы һәләтенән һүҙ ҡуйыртып торманы, фекерен туп-тура белдерҙе:

— Мин һине маҡтаным. Баш ауырта — башты төҙәт! — тине"... Эйе, "баш төҙәтеү" мәсьәләһе лә йүбәләйҙәрҙе гөрләтеп алға этәргес көс булып тора шул гонаһ шомлоҡло заманда. Был гонаһтан хатта абруйлы аҡһаҡалдар ҙа азат түгел. Күрмәйһегеҙме ни: "арыҫландай ҡалын, көслө тауышлы, ап-аҡ мыйыҡлы яҙыусы — был ҡаланың иң абруйлы, иң уҫал аҡһаҡалдарынан береһе, күҙлеген һикертеп шул сама әйтте лә:

— Ә ниңә мин белмәйем? (Йүбәләй тураһында. — *Й.С.*).

— Һеҙ бит йыл буйы дачала йәшәйһегеҙ. Ҡайтып та әйләнмәйһегеҙ.

— Берәй малайҙы йүгертеп булмаймы ни?! — тип гөрһөлдәне Көслө тауыш. Уның күҙлеге ҡул тейҙермәйенсә лә үҙенән-үҙе берсә урынына ултыра, берсә маңлайына һикереп менә ине. — Яҙышырға маташыусы малайҙар күп. Тотһондар ҙа килһендәр.

— Эйе шул, *тотһондар* ҙа (араҡыны. — *Й.С.*) барһындар, — тип айырата баҫым яһай Тараҡов. — Яҙа башлағанда беҙ, "ярты" тотоп, өлкән яҙыусыларҙы нисек эсерергә белмәй аптырап йөрөй торғайныҡ. Ә быларға "тот та кил" тип торалар. Юҡ, һанға һуҡмай хәҙерге йәштәр аҡһаҡалдарҙы".

Их был хисле Шәнәбиҙе! Татлы хистәргә талып, был донъяла "әсе һыу"ҙың дабарлығын, мәсьәләләрҙең күбеһе шул "әсе" ярҙамында ғына сиселеүен иҫенән сығарып ташлаған. Баштан уҡ баяғы "ярты»ны тотоп аҡ мыйыҡлы аҡһаҡалға ыңғайлаһа, йүбәләй юлында көтөлмәгән ҡатмарлыҡтар ҙа ҡалҡынмаҫ ине, бәлки. Бына хәҙер өтөрәйеп аяҡ салыусы көнсөл Болғашкин болғата — аҡ мыйыҡлы аҡһаҡалды һәм уның пүнәтәйҙәрен шәнәбигә ҡаршы аяҡландыра: туған әҙәбиәтебеҙҙә таланттар ғына йырылып алға сығырға, графомандар быуылып ҡалырға тейеш, тип төкөрөк сәсрәтәләр. Шәхсәнә Шәнәбигә ҡаршы ҡоролған был "заговор"сылар дөйөм ҡарарға килгән: "Йүбәләйгә барырға! Йүбәләй башланыу менән үк тәүгеләрҙән сәхнәгә сығып, шәнәбиҙең юҡ ижадын пыр-туҙҙырырға! Шәнәбиҙе бөтөрөргә!" Мөҡәддәс ошо ниәт менән "заговор"сылар улар уйынса мәсхәрәле буп-буш булырға тейешле йүбәләй залына инәләр, ә ул... шығырым тулы — "уҡыусы балаларҙы килтереп тултырғандар. Мәктәбе-мәктәбе менән!..

Тараҡов ҡыҙмаса килгәйне:

— Уның ҡайында эленеп торған салғы образы шәп! — тине. — Вәт шәп Шәнәби! Шәп Шәнәби! Шиғыр бит был! Ал, шағир, һатам.

— Аңын эскән нәмәкәй! — тип асыуланды Көслө тауыш (аҡ мыйыҡ). — Салғы образы Шәнәбиҙекеме ни?!

— Ундамы, һиндәме, Мөхәммәтәминдәме — ни айырма. Барыбер башҡорт әҙәбиәтендә. “Йүбәләй”ҙең тәүге өлөшөн тиҙ генә бөтөрәйек тә сәй-мәй бүлмәһенә күсәйек. “Ашайыҡ та, эсәйек тә, ҡайтайыҡ та йоҡлайыҡ”. Оҙон һөйләмәгеҙ. “Шап-шоп, шәп!” тип әйт тә, Шәнәбиҙе ҡосаҡлап үп тә сәхнәнән төш тә кит. Һин йәки беҙ “хөрт” тиеүҙән донъя үҙгәрәме ни? Байрам ғына боҙола. Һин бигерәк, абзыҡайым аҡ мыйыҡ. Йүбәләйҙә бер кем дә йүбәләрҙе хурламай инде. Сәхнәгә хет ишәкте мендереп ҡуй, бер йыйылғас, барыһы ла “талант!” та “гений!” тип маҡтай ул.

— Ә мин боҙам йүбәләйҙе!

— Боҙ, ләкин ҡысҡырма. Үҙең уйлап ҡара: “хөрт!” тигәс ул сәйенә саҡырамы ни?! АҺа, секцияла берәүҙе тәнҡитләгәйнек, әҙер табынына ла саҡырманы. “Фәлән нәмәмде эсһендәр” тип әйткән, ти...

Шул саҡ өс һылыу (аҡ беләктәр. — ***Й.С.***), рәт араларынан йөрөп, кәрәкле кешеләргә генә саҡырыу ҡағыҙы таратып сыҡты.

— Кәрәкмәй! Сәйгә инмәйем! — тип баш тартты Көслө тауыш (аҡ мыйыҡ). — Сөнки мин Шәнәбиҙе юҡҡа сығарам.

— Сығарһаң сығарырһың, — тине Сибәрбикә. — Бисәң дә килмәгән икән. Сәйҙә-мәйҙә һыйынып ҡына йәнәшә ултырырбыҙ. Әҙерәк тотҡаларға ла рөхсәт итермен.

— Кит, оятһыҙ! Мин ҡарт бит инде хәҙер.

— Етмеш йәш ул нишләп ҡарт булһын?! Самай ҡыҙҙан йәш бисә ала торған ваҡыт! Мин һине, абзыҡайым аҡ мыйыҡ, мунса яғып ҡунаҡҡа саҡырам әле. Арҡаңды йыуырмын.

Сибәркәй һандуғас булып һайраны ғына — саҡырыу ҡағыҙын алғанын да һиҙмәй ҡалды Көслө тауыш...

Шағир ҙа мәйгә барыуға тәүҙә ике ҡуллап ҡаршы торҙо. Унан һуң ҡулы саҡырыу ҡағыҙын көтмәгәндә алды ла ҡуйҙы.

— Ҡыҙыҡ ағза икән ҡул, — тип фәлсәфәгә бирелде шағир. — Баш алмаҫҡа ҡуша, йөрәк нәфрәтләнә, ә ул ала! Донъя был, иптәштәр! Донъя был!

Тараҡовты әйтеп тораһы ла түгел — саҡырыу ҡағыҙын тыны менән һурып тигәндәй алды. Ә бына Болғашкин алманы. “Минең өйҙәге буфетта утыҙ “ярты” ултыра, — тине”. Ах был шайтан ҡотҡоһон! — Йүбәләйҙе Болғашкиндан болғаттыртыу өсөн генә лә уның өйөнә утыҙ “ярты”ны теҙгән дә ҡуйған икән шайтан — “Шишмә дворяны»ның ғәҙеллек өсөн тип зыҡ-ҡубып көрәшеп йөрөүенең дә нигеҙе бына нәмәлә!.. (Үҙ араҡыһы булмаһа, әтәсләнмәҫ тә ине).

Графоман йүбәләйенең ҡыйралыштан башланыуын көҫәгән ғәҙелйән “заговор”сылар, сәхнәләге тамашаның көтмәгәндә тантаналы рәсми төҫ алыуын күреп, ҡойолоп уҡ төшәләр. “Асыуҙан Болғашкин мыйығының бер нисә бөртөгөн йолҡоп иҙәнгә ташланы. Көслө тауыш (аҡ мыйыҡ) саҡырыу ҡағыҙына ҡарап ултырҙы ултырҙы ла нәфрәт менән аҫҡа ырғытты. Унан күрә шағир ҙа бырғытты. Бергилке өндәшмәйенсә ултырҙылар. Көслө тауыштың башына үҙе генә белгән ниндәйҙер аҡыллы фекер килде. Шуға ла ул Тараҡовҡа:

— Ал! — тип бойорҙо. — Йә тапап бөтөрҙәр.

Тараҡов, иҙәндән саҡырыу ҡағыҙын саҡ табып, аҡһаҡалға тотторҙо. Шағир ҙа ҡағыҙҙы табып алды...

АНа сәхнәгә, июнь Ҡояшылай балҡып, филармония фәндәре докторы, шымартыу фәндәре профессоры, күренекле тәнҡитсе Шымартаев сыҡты. Ул бер яҙыусыны ла тәнҡитләмәй, ҡаты һүҙ әйтеп кәйефен ҡырмай, улар хаҡында йүбәләйҙәрҙә, кисәләрҙә, йыйылыштарҙа тик маҡтау һүҙҙәре генә һөйләп йөрөүсе әҙәбиәт белгесе ине. Яҙыусы ижады тураһында бер ниндәй фекер ҙә әйтеп булмаҫтай ҡыйын хәлдәрҙә йүбәләйҙәргә тик уны ғына ебәрә торғайнылар". Тимәк, "филармония фәндәре докторы" Шымартаев Юғарынан (һеперткене матҡып тотоусы ҡулдан!) баҫымлатылған рәсми йүнәлеште трибунанан гөрләтеүсе ҡиммәтле рупор ҙа икән — тап бына ошо һөйләрмән телдәрен тешләтеп йомдортто ла инде нәфрәт сәсергә ҡәһәтләнмеш "заговорсы"ларҙың ҙур асыла башлаған ауыҙҙарын. Сөнки, шул уҡ Тараҡов шәйләүенсә, үрҙән төшөрөлгән күрһәтмә — ауыҙыңа инеп килгән "ярты"нан да ҡеүәтлерәк!

"Инде Көслө тауыш сәхнәгә менде... "Донъяны һин генә төҙәтә алаһыңмы? Шулай булған, шулай бара, шулай буласаҡ! Боҙма йүбәләйҙе!" — тип артынан өгөтләп ҡалды Тараҡов.

"Аҡ мыйыҡлы абзыҡай Шәнәбиҙең легендар әҫәрҙәрен, уларҙың үҙе белгәндәрен һәм белмәгәндәрен яйлап ҡына һанап сыҡты, үҙәк өҙгөс "ҡайын" эссеһын телгә алды, аҙаҡ ҡына әҙәбиәт, яҙыусылар, заман хаҡында һөйләне-һөйләне лә һүҙен:

— Шәнәбиҙең ижады бай, әҫәре шәп! — тип йомғаҡланы ла ҡуйҙы. — Тәнҡит һүҙҙәрем бар, әлбиттә, Шәнәбигә. Ләкин уларҙы мин башҡа урында әйтермен"...

Ошоноң ише йүбәләйҙәрҙең ифрат шанлы өлөшө — йүбәләйсегә, халыҡтың күҙен баҡтыртып, төрлө бүләктәр тапшырыу, ә бүләктәрҙең иң еллеһе — йүбәләйсегә инселәнмеш дүрт тояҡлы арғымаҡтың ауыҙлыҡлы ҡайыш йүгәнен шалтыратып тотторто, йә булмаһа йүбәләйсене "яҙыусыларҙың ханы" итеп бәҫле келәмдә күтәреү икәнлеген сәхнәләрҙән күҙәтеп күнеккәнбеҙ. Ә бына Олпат Шәнәбигә тапшырырға тип уның мөҡәддәс тыуған колхозынан ошоғаса ил күҙе күреп өйрәнмәгән бүләктәр — эске кисерештәре ҡуҙҙай ҡуҙрап тышына сығып торған ылғый хәҙерге заман *ҡыҙыл үгеҙ* менән үткән замандың шулай уҡ уттай яныпялҡынланмыш ураҡ-сүкеш һәм ялтыр баш даһи һүрәтле күсмә *ҡыҙыл Байрағын* килтереп еткергәндәр, өҫтәүенә, етәкләп, елберҙәтеп, сәхнәгә лә мендергәндәр! Әммә ошо иң юғары тантаналы, зерә лә яуаплы мәлдә Ҡыҙыл Байраҡ шауҡымынан ҡапыл ғына ҡыҙыл үгеҙҙең шарҙай күҙҙәрен ҡан баҫып, айырса аяҡтары иҙәнде ярырҙай төйөп, баш бирмәй туларға керешә лә үткән замандың ураҡ-сүкешле, ялтыр баш даһи һүрәтле ҡанлы символын сүпле оркестр соҡорона һөҙөп бырғыта...

Ҡыҫҡаһы, повесте уҡыу барышында "ауыҙың ҡыйыш булғанға көҙгөгә үпкәләмә" тигән боронғо мәҡәлде күп тапҡыр иҫләргә мәжбүрбеҙ, сөнки ҡыйыш көҙгөләге һәр йөҙҙән үҙебеҙҙе күрәбеҙ... Әммә авторҙың сатираһы кинәт кенә йомшарып, йүбәләйсе Шәнәбиҙе тәүфиҡҡә

күндереүен — тантаналы бөтә йәмәғәт алдында үҙенең юҡмыш ижадының ысынлап та юҡмышлығын үҙенән танытыуын ғына таныуы ҡыйын беҙгә: шәнәбиҙәр менән быйндай хәлдең булғаны юҡ — булмаҫ та...

4

Замананың сәйәсәт вә иҡтисад тигән һөмһөҙ ҡыҙыл үгеҙенән һөҙөлөп, тарихтың упҡын соҡорона ураҡ-сүкешле, ялтыр башлы ҡыҙыл Байрағыбыҙ менән ҡуша үҙебеҙҙең СССР тигән ғәййәр империяның, 250 миллионлы совет халҡының да, сатирик әйтмеш хәмер йәнле Нитрат менән Фитраттарыбыҙ ауыртҡан баштарын төҙәтергә сеүәтә тотҡан арала ғына кризис тигән упҡын соҡорға бырақтырылыуын беләбеҙ. Әммә шуныһы аяныс: соҡорҙан сығыу сеүәтәһе лә шул уҡ Нитрат менән Фитраттар ҡулында ҡалған икән. Бының баш етмәҫ фажиғәһен яҙыусыбыҙ “Осоусы сеүәтәлә сәйәхәт” тигән повесендә уйынлы-ысынлы хикәйәләү ярҙамында күҙҙәрҙән йәш сығартырлыҡ кинәйәлә әллә инде көлдөртөп, әллә илатып, тигәндәй, үҙәктәргә үткәҙә. Повестәге Кәкереҡайын ауылының һәм уның билғауыр тормоштан йәнселеп алйымыш кешеләренең яҡтылыҡҡа, Еңеллеккә ынтылып осоусы сеүәтәлә иркен ғаләмгә үркелеүе лә төңөлөүе үҙебеҙҙең яфа сикмеш Рәсәй халҡының әле “яҡты коммунизм үрҙәренә”, әле “ Бай капитализм ожмахына” елкенеп уҡталыуын, уҡталғаны ғына һайын, уҡталтыусы баламуттарының баяғы мут Нитрат һәм Фитрат булып сығыуын һәм шул арҡала иләүе менән һалҡын упҡын ямына ҡолауын илатҡыс хәтерләтә... Барыһы ла ысын Рәсәй халҡы характерынса: оса-оса айҙы уҙып Ҡояшҡа етер саҡта ғына баламуттарының мутлығы арҡаһында осоусы сеүәтә моторының яғыулыҡһыҙ тороп ҡалыуы, шул арҡала кире-ҡабат Кәкереҡайынға мәтәлеүҙәре... Баҡты иһәң ғаләм юлындабаш төҙәтеү хәжәте кисермеш баяғы Нитрат менән Фитрат спирт яғып эшләүсе моторҙың яғыулыҡ көпшәһен аҫтыртын игәп тишкән дә бактағы спиртты көллө ауыл халҡы менән аҫтыртын эсеп бөҫкәрткән, ә мутлыҡтары беленмәһен өсөн бакка күнәкләп һыу ҡойған... Уға ҡалһа хәҙерге Рәсәйҙең дә йылына бер нисә тапҡыр алмашыныусы һәм һәр юлы мутлыҡтары илде кризис ямына ҡолатып интектереүсе хөкүмәттәре лә 1994 йылда яҙылған был әҫәрҙәге Нитрат менән Фитраттан һис ҡалышҡыһыҙ. Айырма шунда ғына: әҙип ҡорған осоусы сеүәтәнең пилоттары көллө салон иҫергәндә лә һәр даим айныҡ ҡалһа, ғәмәлдәге Рәсәй кара бы штурвалын тотоусының үҙенең теле аяныслы көрмәлеүсән...

Нәүбәттәге “Серле бетеү” повесенең дә серле-мерле боролоштары хас та ошо үҙебеҙҙең үгәй әсәй-Рәсәйҙең халыҡ тигән үҙенең үгәй балаларына күрәләтә күрһәтмештәрен ғибрәтле хәтерләтә: “етәксе” ҡатлам менән мәңге “етәкләнеүсе”ләрҙең араһында упҡын ятыуы сер түгел. Әйтәйек, повестәге таш ҡалала гөрләтеп заманса уңайлы бейек йорттар һалына, уларғабаяғы айырым етәкселәр һәм уларҙың ҡәҙерле бала-сағалары, дуҫ-иштәре кинәнеп эйә була, ә сереүҙән емерелеп төшөргә

торған һәм ел иҫкәндә лә шыйыҡ тирәктәй сайҡалған ике ҡатлы барак ти бындағы "янвалид йорт"та һуғышта һәләк булғандарҙың ҡартайып барған ҡатындары, теген фабрикаһының әрһеҙ эшсе ҡыҙҙары, баштарын артабан ҡайҙа терәргә белмәй, фатирһыҙлыҡтан ҡаңғыра. Ҡала хакимиәте иһә уларҙы шул һуңғы "ҡомаҡ ояһы»нан да мәхрүм ҡылмаҡсы: төрлө хәйләләр ярҙамында төрлөһөн төрлө яҡҡа олаҡтырып, шулай береһенә лә фатир бирмәгән көйөнсә "ҡомаҡ ояһы"н емертеп, проблеманан еңел генә арынырға тырыша. Шул нигеҙҙә ҡупҡан ике аралағы тартыш үҙәгендә һылыуҙарҙан һылыу журналистка ханым Динә-Асия пәйҙә булып, донъяның матди байлыҡтарын ғына түгел, ә һылыуҡайҙарын да һәрмәп ҡалырға ҡыҙышҡан мут түрә-ҡараның барыһын магниттай тарта — улар уға "түшәк аша" фатирын да, башҡаһын да вәғәҙәләп ҡомарына. Тик шуныһы, айғырланып маташыусы түрә-ҡараның һушын алған, ҡулдарын уйнатҡан ифрат сексуаль түш йоморолары араһындағы "серле бетеү" — журналистканың заманға тиң ҡот осорғос ҡоралы, мут йәндәрҙең теш араһынан сыҡҡан берен магнитлы таҫмаға теркәп барыусы кес кенә япон магнитофоны, барыһын бер юлы тишек кәмәгә ултырта... Тәү ҡарауға еңел-елпе генә тойолмош ҡыҙыҡ-мыҙыҡтар ахыр килеп шул "серле бетеү" тәңгәлендә сифати һикереш кисереп, сәйәси йәһәттән иң Юғары нөктәгә етеп төйнәлә — сәйәсәттән ситтә йөрөмөш уҡыусыларыбыҙ быны хатта һиҙмәй ҙә ҡалыуы мөмкин. Әммә шуныһын иҫкәртеү урынлы булыр: сатириктың шул ваҡыттағы көрәҙәлеге бөгөнгө Рәсәй хөкүмәт етәкселәренең хәттин ашҡан мутлыҡтарын һәм магнитлы таҫмаға теркәгес "серле бетеү"ҙәрҙең ғауғалы киләсәген, шуның арҡаһында хатта Рәсәйебеҙҙең юстиция министры, генераль прокуроры кеүек юғары әһелдәрҙең дә повестәге шыйғалаҡ Ғәйни Хазиевич, Хәрби Хәрбич өлгөһөндә шау-шоулы мәсхәрәләнеүҙәрен алдан уҡ киҫәтеп ҡуйған!..

5

"Сәсмә трагикомедия" тип билдәләнмеш "Бойраҡай" повесе лә үҙенең ғәжәп заманлылығы, әле генә барыбыҙ күреп-кисереп өлгөргән һәм шуның шауҡымынан беребеҙ ҙә әлегәсә айный алмаған хәтәр ваҡиғаларҙы, микроскоп үтә баҡтырҡандай, бөтә шаҡшы яланғаслығында бер нөктәгә туплауы менән йыйынтыҡтың аҫыл үҙәген тәшкил итәлер тип уйлайым.

Рәсми фәнгә таянып эш ҡылыусы ғилем эйәләре, билдәле булыуынса, илдең халыҡтарын әллә нисәмә синыфҡа һәм синыф араһындағы ҡатламдарға бүлгесләп зыҡ-ҡубалар. Автор иһә, минең уйымса, сатира өсөн бик нигеҙле рәүештә, уларҙы тик ике төркөм итеп ҡарай: Рәсәй империяһы кешеләренең күпселек өлөшө өҫтөнән бойороп ҡына ултырмыш аҙсылыҡ — дәүләт (партия) чиновниктары — *"бойраҡай"ҙар* һәм шулар бойороғона ярашып ҡына көн күреүсе, хатта һулар һауаһын да шуларҙан *һорап алып* ҡына һулаусы баяғы күпселек — *"һораусиндар"*. Ә тап беҙҙең йөмһүриәттә был бүленештең ҡайҙан килеп ҡайһылай хасил булғанлығын әҫәр геройҙарының береһе, тарих яҙыусы

ғәйрәтбай, ошолайыраҡ билдәләй: “Биш йөҙ илленсе йылдарҙа, Ҡазан алынғас, Урал илселәре аҡ батшағабаш һала. Кинолағы шикелле, йүгереп барып Ҡанлы Иван IV алдында тупҡаялар, *баш* оралар, тороғоҙ тип әйтмәйенсә тупҡайышып иҙәндә тик яталар. Батша уларға аяҡҡабаçырға рөхсәт итә. Шунан һуң илселәр уға бүләктәрен бирәләр, милләттең ҡыйын хәлдә ҡалғанын һөйләйҙәр”... Һөҙөмтәлә батша уларға, башҡорттарға, *“үҙ һыуҙарында* балыҡ һымаҡ йөҙөргә, *үҙ ерҙәрендә* йәнлек һымаҡ йүгерергә” *рөхсәт итә”...* Шулай итеп, “тәүге *һораусиндар* барлыҡҡа килә, ни өсөн тигәндә, сөнки илселәр *үҙҙәренең ирекле иләндә ирекле йәшәүҙе һорап* рөхсет алып ҡайталар”... Афарин! Ҡуш башлы Рәсәй ҡоҙғононоң тырнаҡтарына матҡылып, “үҙ аллы һәм азат” йәшәүебеҙҙе ҡанлы йәштәр аша көлдөртөп баҡтыртыусы әҙип тапҡырлығы был!

Һораусинлыҡ сифатының быуындан быуынға ҡайһылай ҡанға һеңә барыуын һәм ошо көндәргә тоташыуын әҫәрҙең бер “теге донъя — был донъя” персонажы — кәфене өҫтөнән “сал бар, ҡыйыш яғалы күлдәк кейгән, билен билбау менән быуған, башында — урыç картузлы, аяҡтарында — ботфорт-итекле” Өрәк, тарихыбыҙҙа билдәле Тевкелевтың (повестәге Фортунатовтың) шомло шәүләһе, үҙ теле менән ярайһы тәфсилләп бирә: “Рөхсәт кәрәк! Мисәт кәрәк! Аҡ батша илселәргә мөһөрлө грамота тоттороп ҡайтара: “Ярай, рөхсәт — түңәрәк мисәт!” Бына ҡайҙа ул әтнәкә!.. Рөхсәтһеҙ, түңәрәк мөһөрһөҙ, *хатта үҙеңдең ирекле илеңдә ирекле йәшәргә ярамай!”* — тип һөҙөмтәләй сатирик. Рәсәйҙең хәҙерге дәүләт эшмәкәрҙәренең дә байтағы кире ҡайтарырға хыялланған һәм, ағыуҙарын сәсеп, бойомға ашырырға маташҡан “берәгәй һәм бүленмәç Рәсәй” тәғлимәте ошо булалыр инде. Ләкин һөрһөгән “рөхсәт — не рөхсәт!” ҡағиҙәһенең рыялығы яуыз Иван замандарында уҡ фашлана, сөнки “ Батшаның тәүге указдарын тәүләп башына — теҙген, арҡаһына — эйәр, аяғына тышау һалынған йылҡы һымаҡ ҡабул иткәндәр. Мөһөрлө грамота килһә, “хәреф танымайбыҙ, аңламайбыҙ” тип йыртып ташлағандар, указдарға буйһонмағандар”...

Ваҡиғаларҙың артабанғы тарихи ағылышынан әҫәрҙәге тарих яҙыусы ғәйрәтбай үҙе лә бихәбәр түгел имеш: “Йылдар үткән, һыуҙар аҡҡан, — тип дауамлай ул Өрәктең вәғәзнамәһен. — башҡорттар менән батшалар араһында аңлашылмаусанлыҡ үҫә барған. “Фәлән заводсыға фәлән ырыуҙың фәлән тиклем ерен киçеп бирергә!” — тигән указ килә. башҡорттар аңламай, ниңә шул тиклем? Ул бит ырыу ере. Бөтә йәмәғәттеке! Икенсе ырыуға икенсе указ килә: фәлән алпауытҡа фәлән ырыуҙың фәләнсе ерен киçеп бирергә! башҡорттар аңламай, ниңә шул тиклем күп? Ул бит ырыу ере! Ерһеҙ, һыуһыҙ нисек йәшәр беҙ? АНа шул саҡ урыçса һупалаған берәү һикереп сыға: “Аҡ батша фарманын үтәргә, ер-һыуҙарҙы бирергә кәрәк! Улар беҙгә күп итеп күстәнәс алып килгән: сәй, шәкәр, араҡы”... Әйткәндәй, былдай күстәнәс көçәүсе йәндәр башҡорт ерендә ошо көндәрҙә лә, ус ярарға йыландай телдәрен һәлендереп, күстәнәсселәрҙең аяҡтарына урала: Әбйәлил районының гүзәл ер-һыуҙарын йә бер түбә я бырлыҡ ҡалай, йә бер тонна бәрәңге, йә булмаһа бер ултырып эсер араҡы хаҡына магнитогорскиҙарға ҡанатландырып

осороусыларҙы әйтеүем... Әммә ер-һыу алырға килеүселәрҙең, араҡы менән генә түгел, утлы көбәк тоҫҡап ҡайырыуҙарын да онотмайыҡ: “заводсыларға, алпауыттарға ер бүлеү йәһәтенән һөйләшеү барғанда тау башында мылтыҡлы бер рота һалдат торған”, ти автор...

Шулай итеп, әлегәсә тамырҙары ҡоромаған һораусиндарҙың ошо ғәзиз еребеҙҙә ҡайһылайыраҡ шытҡанлығы асылды. Ә инде “тәүге бойраҡайҙың нисек килеп сыҡҡанын” тикшерә китһәк, ти автор, ул “былай була. Тәүҙә ул тылмас булған, аҡ батша, губернатор кешеләре тирәһендә дүртаяҡлап йүгереп йөрөгән (эйе, Ҡотломөхәммәт Тевкелев — нәҡ Тәфтиләү үҙе! — *Й.С.*). Урыҫ түрәкәйе уға өҫтәленән киҫәктәр ырғытҡан. Ул, артҡы ике аяғынабаҫып, алғы ике аяғын уйнатып, ауыҙы менән киҫәктәрҙе тотоп торған, йотоп торған... Роталы түрә уны арт аяғында торорға ғына түгел, шымсылыҡ итергә, боласыларҙы еткереп торорға, *башҡа* һөнәрҙәргә лә өйрәткән...

— Юҡ! — тип һикереп торҙо Өрәк. Һөйәк-бармағын алға һуҙҙы. — Һин тарихты боҙоп күрһәтәһең! Барыһы *ла килешеү* буйынса эшләнгән. Тылмас урыҫ чиновнигына, урыҫ түрәһенә *үҙе теләп* ялланған. Служба! Дәүләткә хеҙмәт итеү!

— Бәлки, шулайҙыр. *Эткә лә “служи!” тиҙәр бит.* Унан ауыҙына һөйәк ырғыталар. Ҡыҫҡаһы, тылмас урыҫса уҡырға, яҙырға өйрәнгән һәм писыр булып ултырған. Һәм бына — *күкрәген киреп, мыйығын бороп, **тәүге милли бойраҡай баҫып** тора: «**нилзә!**”.*

Совет осоронда оторо бүртенеп, ошо көндәрҙә лә битлек аҫтында күкрәген киреп йөрөмөш таныштарҙан таныш бойраҡай бит был!.. Биләмәләре осһоҙ-ҡырыйһыҙ империяның хакимиәт ҡоролошонда өҫтән алып аҫка тиклем бойороп ултырыусы бойраҡайҙарҙың әҫәрҙәге “һары башлы” иң өҫтә ултырғанын — “Ер шарында беренсе дәүләт башлығы” була тороп та, “урыҫ мужигы һымаҡ эсә, һүгенә” торғанын беренсе сиратта танып беләбеҙ, әлбиттә. Шул уҡ ваҡытта үҙебеҙҙең совет осоро йөмһүриәттең дә әлеге “һары башлы юл башсыға оҡшатып һирәк сәсен һарыға буяткан бойраҡай”ын үтәнән-үтә күрәбеҙ: эш бүлмәһенә берия һүрәтен элеп, Юғарынан рөхсәт ителмеш идеологияны “ирекле-азат” йөмһүриәттең символына әүерелгән тиләләр йортонда мейеләргә һеңдереү, һөҙөмтәлә мәркәздәге баяғы “һары башлы»ны “дурак” тип тамғалауҙарына сик ҡуйыу өсөн йән атып көрәшеүсе ул (сөнки һораусиндар нәҫеленең күпселеге бойраҡайҙар тураһында, “аҡыллы” тип, ылғый ялғанды ҡабатлаған сүрәттә лә тиләләр йортондағылары, “дурак” тип, асы дөрөҫлөктө асып һалып йөҙәтә!..). Идеология бойраҡайының Берия һүрәтенә табыныуы ла тикмәгә түгел икән — дөрөҫөн һөйләүсе “тиле”ләрҙе ауыҙлыҡлауҙа ул йөмһүриәттең КГБ бойраҡайы менән ҡулға ҡул тотошоп эшләй:

—“Бөттө! — тине Бойраҡай, ябай ғына иттереп. — Икенең бере: хөкүмәт башлығын мәсхәрә иткән өсөн йәки төрмәгә күсәһегеҙ, йәки һеҙ ысынлап та тиле һәм шым ғына бында (тиләләр йортонда) ятаһығыҙ. Аңлашыламы?”

Ләкин был йәтеш ике юлды аңларға теләмәүсе “тиле”ләр һаны йөмһүриәттә артҡандан артабара, һөҙөмтәлә бойраҡайҙан үҙҙәренең тиле түгеллектәренә танытма-ҡағыҙ юллауға бөтә ғүмерҙәрен арнаған һәм шул юлда көҙгө ҡарғаларҙай оло ҡорға тупланғандарҙың һораусиндар тубы барлыҡҡа килә, барыһы ла Бойраҡай ишеген ҡаға. Уларҙы ҡабул ҡылыуҙа һәм йомшаҡ түшәп ҡатыға ултыртыуҙа Бойраҡайҙың, идеология бойраҡайы булараҡ, хосусан эш алымы бар: һораусиндарын ҡубыҙ уйнап ҡаршылай, ҡубыҙ уйнап оҙатып ҡала (бөтәбеҙ ҙә күреп белгән бойраҡайыбыҙ иһә, өҙҙөрөп-өҙҙөрөп, тальян гармун тартыр ине!)... Кемдәр генә юҡ был ишек ҡағыусы туп эсендә! Бына элекке колхоз рәйесе Бишҡолов: йөмһүриәт һәм район етәкселәре уйлап сығарған «Уңыштары” өсөн Социалистик Хеҙмәт Геройы исемен алыуҙан ҡырҡа баш тартҡанға күрә япҡандар тилеләр йортона. Бының ғәҙеллеген Бойраҡайыбыҙ инаныслы нигеҙләй: “Социалистик Хеҙмәт Геройы тигән маҡтаулы исемдән баш тартҡанһығыҙ. Шул кеше аҡыллы буламы ни? Тимәк, күкрәгенә алтын йондоҙҙар теҙгән кеше (Мәркәздәге бойраҡай Л.И. Брежневты тумбытыу! — *Й.С.*) *аҡыллы булмай?!* Һиҙәһегеҙме, тел төбө ҡайҙа бара. Ҡыҫҡаһы, логика яғынан ҡарағанда, бында әллә нисә боролош”...

Фән өлкәһендәге үҙенең алтынға тиң асыштары менән илдең иҡтисадын алға ебәрергә, халҡын байытырға хыялланып эш ҡырған Уйлап табыусының тапҡан һәр берен шул бойраҡайҙар сүплеккә быраҡтырғандар, ахырҙа, аҡыл эйәһе һис бер ятып тынмағас, уның үҙен дә баяғы тилеләр йортона олаҡтырғандар. “Алтмышынсы, етмешенсе йылдарҙа ла асыштарымды, идеяларымды күтәреп бойраҡайҙарға күп йөрөнөм, — ти Уйлап табыусы. — Бер нәмә лә килтереп сығара алманым. Һикһәненсе йылдарҙа әлеге... Бойраҡайға индем. “Ҡайҙа илтергә был алтындарҙы, — тинем. — Һөйөклө СССР-ыбыҙ бермә-бер алға китһен өсөн, ил буйынса бөтә завод-фабрикаларға таратырға кәрәк”. — “Һеҙҙең тел төбөгөҙ, СССР артта ҡалған ил, тиеүгә бара, — ти Бойраҡай. — Ә бының өсөн төрмә! Беҙ былай ҙа Американы уҙып барабыҙ”. — “Һеҙ нимә һөйләйһегеҙ? — тинем Бойраҡайға. — Уҙып китергә ярамай”. — «ни өсөн?” — “Ыштандағы тишек күренә”. — “Һеҙ миңә әкиәт һөйләмәгеҙ, — ти Бойраҡай. — Радионан йыр тыңларға кәрәк. Унда нимә тиелә: ҡыуып еттек беҙ, уҙып киттек беҙ Американы, тиелә. Шулай булғас, беҙҙең радиоға ышанмау — ул контра һүҙе. Юҡ менән йөрөгәнсе, һеҙ бына шундай патриотик йырҙар тыуҙырығыҙ, вәт булырһығыҙ уйлап табыусы. Партия, ватан, Ильич тураһында”. — “Ҡайһы Ильич тураһында?” — “Әгәр уйығыҙ булһа, тағы килерһегеҙ, — ти Бойраҡай, — ҡайһы Ильич тураһында икәнен әйтербеҙ”... Аҙаҡтан, саҡыртып, “япон шпионы” тип эт ектерҙеләр... ултыртып та сығарҙылар”...

Ҡиәмәт исемле рәссамдың, элекке фронтовиктың, тәржемәи хәле лә тап үҙебеҙ күреп белгәндәрҙән ғибәрәт (әйткәндәй, ул шулай уҡ ижадында үҙебеҙҙең Бойраҡайҙы хәтерләтмеш сатирик образды тыуҙырған бер яҙыусыбыҙҙың аяныслы күрмештәренә бик оҡшаш!): “Ҡиәмәтте бер күргәҙмәгә лә үткәрмәйҙәр. Ул заманда Өлкәмиттә ултырған Бойраҡай III

(партия өлкә комитетының өсөнсө йәғни идеология секретарелер. — *Й.С.*) Ҡиәмәт ижадында беҙҙең совет ысынбарлығын боҙоп күрһәтеү, уға яла яғыу күрә:

— Ни өсөн ҡан, мәхшәр күп?

— Һуғыш шулай булды, — ти Ҡиәмәт.

— Ни өсөн совет һалдаттары күп үлә, ә фашистар — аҙ?

— Һуғыш шулай булды.

— Ни өсөн беҙҙең егеттәр немец танкыларына тапала, ә билдәрендә гранаталар бәйләме юҡ? Улар бит барыбер үлә. Шуға күрә уларҙың һәр береһендә гранаталар бәйләме булырға, уларҙың һәр береһе берәр танк шартлатырға тейеш.

— Ниңә һеҙ шунда барып өйрәтмәнегеҙ, бында ҡасып яттығыҙ? — ти Ҡиәмәт. — Барырға, һис юғында ул бәйләмдәрҙе бәйләшергә кәрәк ине.

— Ярай, был мәсхәрәне йотам, — ти Бойраҡай. Эш миндә түгел. Һеҙҙә лә түгел... Беҙгә социалистик реализм кәрәк. Ҡыҙыл ғәскәр бер аҙымға сигенмәй, дошманды ҡырып гел алғабара, үлгәндә лә дошманын үлтереп үлә, сигенә икән — ваҡытлыса сигенә, *оптимистик ҡырыла.* Бына нәмә кәрәк беҙгә... Беҙ живописта ғына түгел, поэзияла, концерт эшмәкәрлегендә ҙур асыштар алдында торабыҙ, — ти Бойраҡай. — Был иһә шуны күрһәтә: большевиктар улар ерҙе генә түгел, йырҙы ла үҙгәртә алалар икән. Әле миндә шағир менән йырсы булды. Беҙ улар менән “Һандуғас” йырын үҙгәртеүҙе уйлашып ултырҙыҡ. Сөнки был йырҙың көйө иҫ киткес матур булған кеүек, һүҙҙәре лә ҡот оҫҡос тоҙһоҙ: “Ҡасан да ғына һайрай һары ла һандуғас, апрель айы үтеп тә май тыуғас”. Ниндәй Нагрузкабар был һүҙҙәрҙә? Бер ниндәй ҙә! Шуға күрә беҙ өсәүләп былай уйлап сығарҙыҡ. — Бойраҡай йырлап уҡ ебәрҙе:

— Йырла, совет, киреп фирҡә күкрәгең,
Яңғыратып БАССР буйҙарын.
Ҡасан да ғына һайрай ҡыҙыл һандуғас,
Хеҙмәт яҙы үтеп тә 1 Май тыуғас.

АНа ниндәй йөкмәткеле йырға әйләнде!

Бойраҡай Ҡиәмәткә ошо йүнәлештә бик оҙаҡ нотоҡ һөйләй. Рәссам ауыр таяғы менән шаҡ иттереп уның өҫтәленә һуға. Өҫтәл мөйөшө кителеп төшә. Тауышҡа хеҙмәткәрҙәр йүгереп инә. Бойраҡай өлкәмитеттәгеләргә: “Бының әҫәрҙәрен бер ҡасан да күргәҙмәләргә сығармаҫҡа, матбуғатта баҫмаҫҡа!” — тигән фарман бирә. Ҡиәмәттең тиҫтә йылдар йөрөүе ана шунан башлана”.

Бер заман “Ҡиәмәт бер карикатура яһай. Кемгә лә оҡшатырға теләмәй уны. Былай ғына, башынан сығарып эшләй. Карикатураны матбуғатта баҫтыра. АНа шул саҡ Бойраҡай III һүрәттә (бая әйтелгән яҙыусыбыҙҙың сатирик хикәйәһе менән дә тап шулай! — *Й.С.*) үҙен күрә бит! Бәлки, ул үҙе күрмәҫ, танымаҫ та ине, тәрилкә тотоусылар ҡоторта: “Ба-а! Хас һеҙ бит, Фәлән Фәсмәтәнович! Ҡойған да ҡуйған. Ләкин һеҙҙең ҡорһаҡ юҡ. Ә ҡәһәр һуҡкан Ҡиәмәт һеҙгә буржуй ҡорһағы яһап ҡуйған”.

Ярандары ҡоторҡас ни, Бойраҡай ҡотора ла китә: “Мөхәррирҙе саҡыртырға! Ҡиәмәтте саҡыртырға!” Мөхәррирҙе саҡыртып эт ектерәләр. “Тәүбә, тәүбә! — ти ҡобараһы осҡан мөхәррир. — Беҙ һеҙҙе уйламаныҡ та, Фәлән Фәсмәтәнович!” — “Уйларға кәрәк ине. Тимәк, уйламай эшләйһегеҙ”. — “Беҙ уйланыҡ, Фәлән Фәсмәтәновичҡа оҡшамаймы, тинек. Юҡ, оҡшамаған, тинеләр”. — Быныһын мөхәррир аптырағандан әйтте, үҙ башына.

Бойраҡай иһә ошо һүҙгә бәйләнеп алды ла китте: “Әһә, һеҙ уйлағанһығыҙ. Оҡшамағанмы, тигән фекер башығыҙға килгән?! Тимәк, аңлап, белеп баҫҡанһығыҙ”...

Аҙна буйы тәүбәгә килтерәләр мөхәррирҙе. Улай ғынамы — бөтә мөхәрририәтте дер һелкетәләр”... Ә Ҡиәмәттең исемен иһә фатирға сират тороусылар исемлегенән һыҙып ырғыта Бойраҡай...

Бойраҡайҙың, баяғыса, халҡыбыҙҙың мәшһүр “Һандуғас” йырын «нагрузкалау” кеүек идеологик ҡағиҙәләрен танымаған, һандуғас йырҙарын һандуғас көйөнсә йырлаған һәм шул мөҡәддәс юлында, һораусиндар тубына ла теркәлмәй, үҙе булып ҡалған, үҙенсәлеге арҡаһында, ҡыҫымдарға түҙә алмай, йөрәге ярылып үлгән, үлгәс кенә күккә сөйөп изгеләштерелгән, ысынлап та ҙур хәреф менән яҙылырға тейешле ысын шағирыбыҙ ҙа бар ине... «нисәнсе йылдар булғандыр, — тип билдәләй китап авторы, — әҙәбиәткә, сәнғәткә ҡеүәтле тулҡын булып бер төркөм йәштәр килде. Уларҙың ҡараш былай ине: һандуғас һайраған һымаҡ иркен, ирекле ижад итергә. Бөтһөн цензура! Йәшәһен “Һандуғас балалары”!

Бына улар ошо фекергә ярашлы ижад итә башлайҙар. Бер кемдән дә ҡурҡмайҙар, бер кемдән дә һорамайҙар: яҙалар, йыр тыуҙыралар, йырлайҙар, бейейҙәр, һүрәт төшөрәләр. Быны Бойраҡай III һиҙеп ҡала.

— Ул ниндәй ирекле ижад?!

Һандуғастарҙы ашауҙы Бойраҡай III шағирҙан башлай.

Шағир телевидение аша шиғыр һөйләргә сыға. Унда цензураны үткән шиғырҙарын ғына һөйләргә тейеш була. Әммә телевидение аша һөйләп торғанда шағир эсендә һандуғас һайрай башлай бит. Ул, сәсән һымаҡ, уйлап сығарып шиғырҙар шартлатырға тотона: “*Батшаларға башын эймәгәнде, башҡаларға башҡорт баш эймәҫ”...* (Был шиғырҙың мәшһүр авторының ысын исеме зыялы уҡыусыларыбыҙға сер түгел!.. — *Й.С.*).

Шул саҡ шап итеп уның алдындағы камераны ябып ҡуялар. Ә телевизорҙар эшләй — унда мультфильм ебәрелә.

Оло бер ғауға.

— Кем рөхсәт итте?! Был нимә был?! Яуапһыҙҙарҙы эшенән алырға! Шағирҙы телевизорға ла, газет-журналдарға ла сығармаҫҡа!

Шағир Бойраҡай III-кә инә:

— Нишләп мине тыйып ҡуйҙылар?

— Тыйманыҡ. Яҙығыҙ. Ижад итегеҙ. Беҙҙә ирек. Бер кемде лә тыйыу юҡ.

— Әҫәрҙәрем бит халыҡҡа етергә тейеш!

— Етер. Бер әҫәр ҙә халыҡҡа етмәй ҡалғаны юҡ.

— Мине бит бөгөн сығармайҙар!

— Ҡасан аҡыллы булаһығыҙ, шунда сығыр. Ә әле һеҙ, аҡыллы башығыҙҙы аҡылһыҙ итеп, “Һандуғас балалары” тигән контрреволюцион берләшмәнең идеологы булып йөрөйһөгөҙ.

Китә аңлашыу, китә һөйләшеү. Бойраҡай III ҡат-ҡат теге шиғырҙағы “башҡалар”ҙы соҡой:

— Кем ул “башҡалар”? Йәшел йортмо (йәғни партияның өлкә комитетымы. — *Й.С.*)? Татарҙармы? ӨК секретарҙарымы? Ул ниндәй “һандуғас һайраған һымаҡ иркен ижад итеү?”

...Урал аръяғынан һандуғас килә. Үҙе йырҙың һүҙҙәрен яҙа, үҙе көйөн сығара, үҙе йырлай, үҙе ҡурай тарта. Ижад итә лә, бер бойраҡайға ла барып тормайынса, халҡы алдына сығып йырлай.

Йәнә Бойраҡай III туҙа:

—Ҡайҙа цензура рөхсәте? Ҡайҙа Обллит? Ҡайҙа Культура министерствоһының рөхсәте?

Юҡ.

— Ниңә гел Урал да ҡурай, башҡорт та ҡымыҙ? Ҡайҙа бында фирҡә, йөмһүриәт, СССР һәм БА ССР?

— Ә минең йөрәккә үҙенән-үҙе килгән моңдо ғына йырлағым килә, — ти Урал һандуғасы.

— Бар, өйөңә бикләндә хет тәүлегенә егерме биш сәғәт йырла!

— Һандуғастар ижадын тыяһығыҙ.

— Юҡ, тыймайым. Теләгәнсә ижад итегеҙ. Беҙҙә свобода-хөрриәт. Бер кемде лә тыйыу юҡ.

Бойраҡай III бына шулай бер-бер артлы һандуғас балаларын ашай.

— Ул ниндәй беспартийный бейеү?! АНа, теләгәнсә өйөңдә бейе.

— Ул ниндәй фирҡәһеҙ һүрәт?! АНа, һүрәт төшөр ҙә өйөңдә тултыр. Күргәҙмә тип ауыҙ асаһы булма!

— Ул ниндәй беспартийный композитор?! АНа, өйөңдә ижад ит. Партийный йыр яҙғас та башҡарырһың. Хет оперныйҙа башҡар. Ләкин булһын ул шундай йыр — Мәркәз ишетерлек. Мәркәз һоҡланырлыҡ булһын. АНа, *“башҡорт булһам да... мин урыҫмын”*, тигән һымаҡ. Вәт шағир! Яҙ!

Артыҡ та түгел, кәм дә түгел, шундай ҡеүәтле бойраҡайыбыҙ ҙа бар ине беҙҙең. (Аҙаҡтан ул, *үҙ ғүмеремдә мин егерме ете һандуғас ашаным*, тип бик яҡын дуҫтары араһында маҡтанып йөрөгән, имеш”...

Бер уйлаһаң, бойорманлы бойраҡай ҙа бәндә балаһы ғына: тыумаҡ барҙың — үлмәге, йәшлек барҙың ҡартлығы ла бар икән. Уларҙың да пенсияға китеүҙәре ихтимал.

“Бойраҡай III пенсия ашап ятҡанлыҡтан, бер кемдән дә ҡурҡмайынса, оҙон ҡара мыйығы менән уйнап килә ине. Йәһүдтәр үҙ милләте хаҡында рәхәтләнеп анекдот һөйләгән кеүек, Бойраҡай III тә бөгөн баҡсала үҙҙәрен “старпер” (старый пердун. — *Й.С.*) тип йөрөткән ҡарт пенсионерҙарға — элекке аппаратсыларға фирҡә һәм шура анекдоттары һөйләүе менән шөһрәт тота ине. “Һа-ай, күп ҡырҙың бит

һин милләттең талантгарын!” тиеүсе яҡындарына ул былай тип кенә яуап бирә торғайны:

— Тарихта үҫтергән, тәҙөгән, тыуҙырған кеше түгел, бәлки, ҡырған, емергән, үлтергән кеше ҡала”. Ундайҙарҙың даны халыҡ хәтерендә юйылмайынса һаҡлана — автор шөһрәтләп тамғалаған “тәүге писыр” Тәфтиләүҙеке кеүек, тип тә өҫтәр инек беҙ. Юҡҡамы ни уның, Бойраҡайҙың, фиҙакәр бойорманлығын, аҙаҡ килеп, теге “тәүге писыр”ҙың шәүләһе Өрәк үҙе баһалай:

— “Һин, Бойраҡай, халыҡ көтөүе менән ҡаты алыштың, — тине Өрәк, ҡулына ниндәйҙер ҡаты ҡағыҙ төргәге алды. — Үлемдән дә ҡурҡмайынса, дәүләт мәнфәғәтен яҡлау һыҙығында торҙоң. Батыр һаҡсы булып торҙоң. Һин фуртатовтар (тевкелевтар, тип аңлайыҡ! — *Й.С.*) һәм бойраҡайҙар нәҫеленә тап төшөрмәнең... Бына шул батырлыҡтарың өсөн һине бөтә быуын бойраҡайҙары исеменән ошо грамота менән бүләкләйем. Әле теге йылдарҙа — писыр сағымда алып ҡалғайным. Аҡ батшаның мөһөрө һәм тамғаһы бар. Был — би-и-ик ҙур бүләк!” — Тәфтиләү үҙенең грамотаһын бүләк иткәс, Тәфтиләүҙән дә уҙҙырып ебәргән шул үҙебеҙ күреп белгән Бойраҡай!..

Повестәге тарих яҙыусы Ғәйрәтбай Тағы шуныһын да асыҡлай: “Усына ҡуша мисәт үҫкән бойраҡайҙар ҡайҙан сыға?.. Усына ҡуша мисәт үҫкән бойраҡайсыҡтар ҙа кеше сыҡҡан ерҙән сыға икән. Атаһы ла, әсәһе лә мисәт услы бойраҡайҙар булғас, баланың усына ҡарында уҡ мисәт үҫә башлай һәм... ҡулына мисәт услап тотҡан бойраҡайсиҡ тыуа.

Бойраҡайсиҡ үҫеп буй еткерә, бәлиғ Бойраҡайға әйләнә. Уң ҡулының усында мисәт. Ул ҡара эшкә лә, ижади эшкә лә ярамай. Мисәтле бала ҡайҙа ғына ярай? Әлбиттә, бойраҡай хеҙмәтенә генә. Бойраетдин менән Бойорниса уны, шатланып, өгөт-нәсихәт менән хеҙмәткә оҙаталар:

— Ҡара эшкә эләкмәүеңә шатлан, балам, — тиҙәр. — Аҡыллы ғына булһаң, ҡарап, күҙәтеп, күршеңде ошаҡлап ултырыу ауыр эш түгел. Ниңә барса ата һәм әсә балаһын бойраҡай итергә ынтыла, тиһең. Тән вата торған эш түгел. Тиҙ үрләтә торған эш. Унда, бүлмәңдә: “Бөтәһе лә халыҡ өсөн!” тигән саҡырыу эленеп торор. Хаталана күрмә. Ул саҡырыу һораусиндар халҡы өсөн. Һинең сүрәң: “Бөтәһе лә дәүләт өсөн!” Халыҡ бай булған һайын, дәүләт ярлы була. Халыҡ ярлы булған һайын, дәүләт бай була. Аңланыңмы?

— Аңланым!

— Алға, балаҡай! Бойраҡайҙар генералы (Генеральный секретары. — *Й.С.*) булғансы гел үргә, гел Юғарыға!”

Һандуғас йырлы шағир үҙенең һуңғы төйәгенә ирешкән “Обсерватория тауы»нда зыярат ҡылып, бойраҡайҙарҙың бөтмәҫ-төкәнмәҫ һәләтенә, нәҫелдәрен һаҡлау ҡеүәһенә ирекһеҙҙән һоҡланыу кисерә тарих яҙыусы Ғәйрәтбай...

“Ҡайтып барғанда, уның ҡолағына ҡайҙалыр көслө хор йырлағаны ишетелде. Әллә оперныйҙан, әллә филармондан. Әллә сәнғәт институтынан килә ине был тауыш.

Ғәйрәтбай ҡолаҡ һалды. Элекке йылдарҙағы: “Йәшәһен, йәшәһен, дуҫтар, партия!” кеүегерәк ғәйрәтле-дәһшәтле йыр яңғырай ине:

— Йөмһүриәт беҙҙең ил!
— Йөмһүриәт мөстәҡил!

Бинаны күтәреп кенә баралар.

“Тимәк, беҙҙең республикабыҙ үҙ аллы, ирекле, үҙ яҙмышын үҙе хәл итә, өс йөмһүриәтте туйҙырырлыҡ йөмһүриәт үҙ халҡын үҙе ашата, халыҡ шат, халыҡ ҡул саба, — тип уйланы Ғәйрәтбай. — Хор бит ул бөтәһен дә әйтеп бөтмәй. Үрҙәге ике генә шиғри юлдан тап бына шуны аңларға кәрәк”.

Шул саҡ “выжт!” иттереп әҙип танауы алдынан ҡара “Волга”лар каруаны уҙып китте.

— Ни ғәләмәт?!

— Беҙҙең хөкүмәт Мәркәзгә ирек һорарға юллана, — тине берәү. — Аэропортҡа киттеләр.

— Бәй, беҙҙә ирек юҡмы ни әле?

— Юҡ бит, бирмәйҙәр. Өс йыл тапайҙар инде Мәркәз юлын. “Күпме йота алаһығыҙ, иректе шул тиклем алығыҙ”, — тип киткәйне бер башлыҡтары (Б.Н. Ельцин. — *Й.С.*)...

— Бәй, — тине Ғәйрәтбай, — әле 1557-се йылдарҙа уҡ аҡ батша беҙгә үҙ һыуыбыҙҙа балыҡ һымаҡ йөҙөргә, үҙ еребеҙҙә йәнлек һымаҡ йүгерергә ирек биргәйне түгелме? *Ирекле көндән* барып, туңҡайышып, башты ташҡа ороп ирекле йәшәргә рөхсәт алғайныҡ таһа.

— Улай ғынамы! — тине теге ир. — 1919 йылда ла “автономия” тигән ирек биргәйнеләр.

— Бәй, — тине Ғәйрәтбай. — Нисек була инде ул бер халыҡҡа өс тапҡыр ирек биреү?! Бик ҡыҙыҡ була бит. Цирктағы кеүек була түгелме?! Әйтәйек, бер кешенән өс тапҡыр бығау һалдыралар. Бер кем дә уны бығауламай, ә ул бығаулы. Килә лә шалтор-шолтор сынйырын алалар, килә лә алалар. Кешене азат итеп торалар, ә ул һаман бығаулы. Үҙе йырлай:

“Дан һиңә, дан, ирекле Башҡортостан!
Йөмһүриәт — һораусин!”

Һораусиндар йөмһүриәтендә йөрөйбөҙ икән шул әле... Тимәк, бойраҡайҙар тамыры ҡоромаған, уларҙы тыуҙырыусы мөхит баштүбән түңкәрелмәгән!..

29.09.1999.

P.S. *70 йәш!*

Ошо юбилейым айҡанлы әҫәремә аҡ юл асырға вәғәҙә[36] *биргәндәре өсөн "Агиҙел"селәргә рәхмәтемде белдереп, бер ынғайҙан көрһөнөп тә ҡуямын.*

Сөнки ғүмер тигәнең шундайын да ҡыҫҡаҡ: "Бер ишектән кереп, икенсеһенән сыҡҡандай ғына булдым", — тигән, ти, бит хатта "фани мең йәшәгән Лоҡман" да... Шуныһы ла аяныс: ижадымдың ҙур өлөшө китап булып сыҡмаған, уҡыусыға барып етмәгән... Әле тәҡдим ителгән был хеҙмәтем дә мәшһүр сатиригыбыҙ Агиш Ғирфановтың аҡкош йырылай китабына автор үҙе иҫән сағында уҡ яҙылғайны бит...

Дөрөҫөн генә әйткәндә, ошо 70 һаны миңә үтә лә сәйер тойола, сөнки рухым менән һаман 50-не лә үтмәгәндәй талпынам. Һәм, ғөмүмән, Дәү Хоҙайым бүләк итеп биргән һәр көнөмдө (шул иҫәптән юбилейымды ла) теләһә нindәй шау-шоуһыҙ, егәрле эш менән үткәреү яғындамын. Тарих тиреүемдән, ниһайәт, арынып, романдарымды, пьесаларымды дауам итермен кеүек.

Хәҙерге хәлемә килһәк, 1994 йылда уҡ яҙылған һәм "Агиҙел" уҡыусыларына өлөшләтә мәғлүм булған "Сөләймән Мырҙабулатов: заманы һәм көрәше. Тәүәрих (1917 — 1922)" тигән ҙур күләмле китабымды нәшриәткә тапшырыр алдынан компьютерға һалып ултырам.

Автор.

Талант сағылы

Мин уны яҡындан күреп белмәйем. Ләкин ул һәр саҡ минең менән бергә. Электәнге рухи дуҫым, серҙәшем, шатлыҡтарымды ла, ҡайғыларымды ла уртаҡлашыусым ул минең. Был уҙаман — Башҡорт АССР-ының атҡаҙанған рәссамы Әхмәт Лотфуллин.

Бына нисәмә йылдар инде мин уның менән шулай күрмәй ҙә күрешеп, танымай ҙа танышып йәшәп киләм.

1957 йылда яҙылған "Әсәйем портреты»нан ул миңә үҙемдең түҙемле һәм ҡайнар һөйөүле әсәйем, ә ҡытыршы буяулы "Сафа ҡарт"ынан — йылы сырай һыҙаттарын үҙемә күреп белергә лә Насип итмәгән атайым, йәки ҡартатайым булып өндәште. Ә "Ҡара кейем кейгән ҡыҙ"ында иһә мин тыуған даламдың хуш еҫле күркәм сәскәһен дә, тыйнаҡ тәбиғи сафлығы менән мәңге-мәңге иҫтә ҡалған һағыныслы йәшлек дуҫымды ла таныным. "Ударница Г. Ишмөхәмәтова", "Йәш эшсе" портреттары күҙ алдыма үҙем тыуып-үҫкән Ырымбур яҡтарымдағы иң ҡәҙерле яҡташтарымды — донъя ҡуласаһын матҡып тотҡан хеҙмәт баһадирҙарын килтереп баҫтырҙы. Был тәбиғи ҙә. Сөнки Әхмәт Лотфуллиндың тылсымлы бумалаһы иң ерләшкән реаль шәхестәрҙең дә бөтә кешеләргә лә хас типик һыҙаттарын өҫкә сығарып ҡалтайтып биреү. ҡеүәһенә эйә. Был иһә уның портреттарының йөкмәткеһен тар индувидуаллектән дөйөм халыҡ характеры бейеклегенә күтәрә.

Мин Әхмәт Лотфуллин эштәренең күргәҙмәһендә төркөм-төркөм тамашасыларҙың "Герой-әсә" һәм яҙыусы Һәҙиә Дәүләтшина

---

[36] Вәғәҙә үтәлмәне...

портреттары ҡаршыһында һоҡланып баҫып торғандарына иғтибар иткәнем бар. Ысынлап та ошо ике тәңгәл — портреттар галереяһын биҙәп тороусы сихри көскә эйә шул. Һаран, баҫалҡы ғына буяуҙар аша һүрәтләнгән Һәҙиә Дәүләтшинаға ҡарағыҙ. Күпме ихтыяр көсө, киләсәккә ышаныс сағыла уның нурлы күҙҙәрендә! Төҫһөҙ тоноҡ фонда айбарланып һомғол, нәфис яурын баштарын төҫмөрләткән тыныс ҡына яғымлы һыҙаттар, иғтибарҙы үҙенән-үҙе күрмәп алып, әҙибәнең ниндәйҙер эске аҡ яҡты менән инсафланған күркәм йөҙөнә йүнәлтә һәм, беҙҙең ҡараш, ихтыярһыҙҙан, уның иртәнге ысыҡтай саф, эскерһеҙ асыҡ күҙҙәренә туҡтала. Был күҙҙәрҙе алыҫ офоҡ артындағы таңғы өмөт, оло бәхет Ҡояшының нурҙары яҡтырта кеүек. Ошолай эстән нурланып ултырыу “Герой-әсә”лә уғата ҡалҡыуыраҡ төҫ алып һынлана. Әйтерһең дә, ялҡынланып янған буяуҙар байрамында донъялағы иң бәрәкәтле, ҡөҙрәтле көс — йәшәү дәрте тантана итә һымаҡ. Әсәнең йыуантыҡ тос кәүҙәһендә, көрлөк нуры бөркөп торған алһыу йөҙөндә күпме сиселмәгән ҡөҙрәт, энергия ята! Баҙыҡ маңлайға баҫып бәйләнгән аҡ яулыҡ, һул ҡолағында буталланып ялтлап киткән алтын алҡа сағымы дөйөм рухҡа тағы ла яңы тон өҫтәп, үҫтереп ебәргәндәй. “Кешелеккә мин бөтәһен дә бирҙем һәм бирә алам!” — Ни бары мәңге бәрәкәтле ер ҙә әсә генә әйтә ала торған изге кисереш беҙҙең күңелдәрҙә ана шулай ярала.

Әхмәт Лотфуллиндың ижад шишмәһе баштан уҡ һутлы, бәрәкәтле ерҙән сығып, дөрөҫ йүнәлеш алды: үтеүе еңел ялған үҙәндәр ҙә, елғыуарҙай таштан-ташҡа һикереп шарлап ағылыу эфекты ла мауыҡтырманы уны. Тыуған ерҙе туйындырған мул Ағиҙелебеҙ кеүек, ул тәрәнлеккә, бөтә халыҡ тормошон иңләп алырға ынтылды. Тупрағында яралған һәр тамсыны, инеш һәм йылғаларҙы иңенә индереп ҡолас киргән шул көр иҙелдәй, ул да үҙенең уйсан-талғын ижады өсөн бәрәкәтте ябай халыҡ араһынан бөртөкләп тупланы. Портреттарҙа ынйы һымаҡ йылтырап киткән айырым әҙәм характерҙары рәссамды оло типиклаштырыуға — милли характерҙы, халыҡ образын асабашлауға килтерҙе: Әхмәт Лотфуллин ҙур күләмле полотнолар тауына аяҡ баҫты.

Ул әҫәрҙәр беҙҙең көндәлек тормош менән ауаздаш тыуҙы. Ҡараңғы быуаттар төпкөлөнән бәреп сыҡҡан яугир халыҡтың үҙ ғүмерендә тәү тапҡыр ҡанлы яуҙарҙан арынып, сыуаҡ Ленин яҙында кинәнеүен, халыҡ битенә таснап төшкән ошо шифалы яҙғы Ҡояштан һәр шәхестең үҙ йөҙөн, үҙ яҙмышын, үҙ кисерештәрен һәм өмөттәрен сағылтып яҡтырыуын, нурланыуын тасуирлаған “Ауылда байрам, 30-ынсы йылдар” полотноһы һәм, әйтерһең дә, шул әҫәрҙең рухи дауамылай яҙылған икенсе картина — тормош яҙының емешен йыйған мул табында талғын ғына хыялдар һәм өмөттәр, иҫтәлекле кисерештәр моңона яй ғына көйләнеп ултырыусы, көҙгө байлыҡ-йомартлыҡ айҙары ырыҫын халыҡтың бөтә тәрән үткәне, бөгөнгөһө һәм киләсәге менән ҡуша үҙҙәрендә һынландырыусы өс әсә — өс быуын образы — “Өс ҡатын” быуна шулай барлыҡҡа килде. Был берәгәй полотнолар хаҡында үҙебеҙҙең республикала ла, шулай уҡ үҙәк матбуғатта лабайтаҡ ҡына маҡтау һүҙҙәре яңғыраны һәм, әйтергә кәрәк, ике әҫәр ҙә киң йәмәғәтселек фекерендә шаҡтай көслө резонанс алды. Бигерәк тә

һуңғы аталған картина унда һүрәтләнгән әҙәм характерҙарының психологик яҡтан ентекләп эшләнеше, тәрәнлеге менән күңелдәрҙе арбаны. Йәшермәйем, был миңә рәссамдың ижад түбәһе килеп төкәлгән “түшәмтаҡта”, ары ҡалҡына алмаҫтай иң юғары нөктәһелер һымаҡ тойолдо. Әммә ошо көндәрҙә генә Өфө ҡалаһының Коммунистик урамында Әхмәт Лотфуллин эштәренең сираттағы күргәҙмәһе асылып, унда ҡуйылған яңы картина мине яңы ҡитға асҡан Колумб матросылай тетрәргә мәжбүр итте.

“Көтөү. 1941 йыл” тип аталған был әҫәр — ингән берәүҙе магнит һымаҡ үҙенә тартып ала, шартларға торған динамиттай көслө тәьҫир ҡалдыра. Ул күрәләтә ҡырыҫ, һуғыш төтөнө һымаҡ ыҙғар буяуҙар менән яҙылған. Ғәрәсәттән көйгән ҡола ер, һорғолт-ҡараңғы йоморо таштар фонында ҡырыҫ йөҙлө өс башҡорт ҡатыны ҡаялай ҡалҡып тора. Уларҙың баҙыҡ, көслө һындары халыҡҡа ғына хас айырым олпатлыҡ, ябайлыҡ, бөйөк баҫалҡалыҡ менән тулы. Са бырлыҡ һаҡлап өнһөҙ ҡымтылған ирендәре, тыныс, ләкин ғорур күҙ ҡараштары өс ҡатындың күкрәгендә ауыҙлыҡланған мәңге янар вулкандарҙың бөйөклөгөн ишаралай; өҫтәренә кейгән ябай кейемдәре, ауыр эш эшләп ҡалсайған, быуын-быуын тумырайған ҡулдары, кешеләргә ҡая ныҡлығы бирә торған эске ихтыяр көсөнә берегеп, көллөһө ҡуша бөйөк Ер кешеһенең, бөтә халыҡтың үлемһеҙ образы дәрәжәһенә күсә. Киндерҙәге һәр деталдең, һәр штрихтың урынлы һәм мас ҡулланылышы, быҒаса күрелмәгән композиция теүәллеге, форма менән идеяның бер-береһенә тығыҙ үрелеп үҫеше хайран ҡалдыра.

Уртала торған ҡатындың ҡулдары күренмәй, туҡыма аҫтында улар. Ҡатын, бөркәнсек ҡырыйын ҡалҡытып, ауыҙын ҡаплаған (әйтерһең дә, үкһеүен баҫыр өсөн). Өҫтөндәге ҡыҙыл күлдәк — ҡан да, ут-ялҡын да төҫлө. Һуғыштың көйҙөрткөс ғәрәсәте тәүбашлап, моғайын, ошо ҡатынға ҡағылғандыр. Уға, моғайын, иренең үле хәбәре килгәндер. Ул инде үҙе лә рухы менән һалдат булып, ауыр һалдат итектәре кейеп алған бит. Ил иңенә төшкән афәттәрҙе теш ҡыҫып баштан ахырынаса кисеп сығырға уҡталған. Был әҫәрҙе ҡараған саҡта берсә һулығып илағы, берсә ярһып ғорурлыҡ хистәрен урғылдыраһы килә. Ахырҙа күңелдән яҡты оптимизм тойғоһо ташып сыға. Эйе, бында һынмаҫ рух ҡаялары баҫып тора шул. Ирек яулап ут эсенә Салауаттарын һәм Кинйәләрен, Мусаларын һәм Шәһиттәрен атҡа мендереп оҙатҡан әсәләр генә ошолай ғорур баҫып тора алалар. Ил өҫтөнә ябырылған фашизмдың ҡырағай урҙа-өйөрҙәренә ҡаршы аталарының, ирҙәренең, ҡыҙҙарының һәм улдарының күкрәктәрен ҡалҡан иткән ҡатындар ғына ошолай һынмаҫ сағылға әүерелә алалар. Бындай ҡатындар гөманланып тапҡан халыҡ еңелеүһеҙ, үлемһеҙ. Өс ҡатындың аяғы янында ҡола ерҙән баш ҡалҡытҡан тере сәскә, сөйәлләнгән әсә ҡулдары ҡамтарып тотҡан саф йөҙлө сабый бала — ошо үҙе ер һәм халыҡ үлемһеҙлегенең, мәңгелегенең символы түгелме ни!

Геологтар ерҙең төпкөл төҙөлөшөн, үткәнен һәм киләсәген бейек сағыл һырттарына йөйләнеп сыҡҡан тау тоҡомо ҡатламдарына ҡарап билдәләй. Ысын сәнғәт әҫәрҙәре лә шундай уҡ мөһим “геологик”

вазифаны башҡара. Эйе, фәҡәт ысын талантҡа ғына, халыҡтың тәрән төпкөлдәренән йөйлө сағылдай ҡалҡып сыҡҡан талантҡа ғына иленә иш әҫәрҙәр ижад итеү ҡеүәһе бирелгән. Әхмәт Лотфуллиндың ошо һуңғы полотноһын мин ана шундай әҫәрҙәр рәтенә индерәм.

Өс ҡатын, өс һын һәм шулар һынында... бөтөн бер милләттең һыны! Был хаҡта күргәҙмә залындағы тәьҫораттар китабына ла йылы һүҙҙәр аҙ яҙылмаған. Төрлө яҡтарҙан килгән төрлө милләт һәм һөнәр кешеләренең дә был тәңгәлдә ҡарашы бер: улар, хаҡлы рәүештә, әхмәт Лотфуллин ижадының тәрән милли ерлектән сығып бөгөнгө коммунистик идеалдарҙы кәүҙәләндереүен уның төп һыҙаты, ҡаҙанышы тип билдәләйҙәр. Шулай уҡ тамашасылар араһында күнегелгән иҫке «ғәҙәт” менән фекер йөрөтөүселәр, полотноларға йән өрөүсе сихри көстөң серен ниндәйҙер “милли колорит”тан эҙләп табырға тырышып баш ватыусылар ҙа юҡ түгел. Ләкин, минеңсә, бындай Наҡыҫ төшөнсәләргә тормош үҙе күптән инде сик ҡуйҙы. Дөрөҫтән дә: билдәле бер әсәнән тыуып, шул милләттең улы булған ижадсының булмышынан “милли колорит” һәрмәнеп маташыу үҙе бер көлкө түгелме? Ул һис ниндәй ҙә “колорит”лы түгел, ә ысын ленинсы мәғәнәһендә милли генә булырға мөмкин!

Картинанан (“Көтөү, 1941 йыл”) бер генә деталь килтерәйек. Бына һеҙ, әйтеп бөткөһөҙ ҡатмарлы тойғо кисереп, урталағы ҡыҙыл күлдәкле ҡатындың кил бәтһеҙ кейем кейгән аяҡтарына төбәлгәнһегеҙ. “Милли колорит” тип тамғаланырҙай нәмәнең төхөрө-остоғо ла юҡ бында: ҡатып-ҡалсайып бөткән, кирзанан тегелгән һалдат итеге милли була аламы? Әммә ошо аяҡтарғабағыу менән үк һеҙҙең йөрәк һыҡтап-һыҙлап тибә, һулышығыҙ ҡыҫыла: әсәйҙеке һымаҡ үҙәккә үткес яҡын, таныш позанан тамаҡ төбөнә күҙ йәштәре килеп тығыла... Рәссам бында миллилеккә бутафория ярҙамында түгел, ә йәшерен эске хәрәкәтте тотоп алып бирә белеү маһирлығы менән өлгәшкән. Ғөмүмән, был ҙур дөйөмләштереүгә, киң ҡоласлы психологизмға эйә булған полотноны тыныс ҡына ҡарауы мөмкин түгел: ундағы һәр бумала юлы ҡанлы яралай асылып, һәр ҡарышынан йөрәк тетрәткес хиссиәт шаңы бәреп тора. Рухи яҡтан нығынып, йәшәү ҡеүәтең артып, яңы бер баҫҡысҡа күтәрелгәндәй байығып китәһең әҫәр янынан. Социалистик реализм ысулының ысын-ысындан тантана итеүе түгелме был!

Тәрән океандарҙа хасил булған айсбергтың гигант һыны ҡалын һыу ҡатламы аҫтында күренмәй ята. Ҡитғаларҙың күкрәгенән күтәрелгән мәғрур сағыл дауамы ла һәр саҡ ҡына иңләнеп бармай ҡарар күҙгә: уны бейеклек һәм болот томалай. Бына бөгөн болотто ел ҡыуаланы, беҙҙең алда көтмәгәндә үҙенең мөһәбәт һыны менән иҫ киткес яңы сағыл ҡалҡып сыҡҡандай булды. Был — Башҡорт АССР-ының атҡаҙанған рәссамы Әхмәт Лотфуллиндың талант сағылы. Һәм үҙенә тиң үлсәү көтә ул беҙҙән.

Тәбиғәттең ташлы тау түбәләре, әлбиттә, ни тиклем генә текә-бейек булмаһындар, күккә сөйөлмәһендәр, һаман йәнһеҙ таш ҡына булып ҡалалар. Кемдер уларҙы үлсәү йәки үлсәмәүгә ҡарап саҡ ҡына артып та, кәмеп тә китмәйҙәр — улар өсөн барыбер. Ләкин талант сағылының үҙенә күрә айырым бер «ғәҙәте» бар: ул бирелгән ғәҙел баһанан уғата нығыраҡ

үҫә, Юғарыраҡ ҡалҡына. Шуға күрә лә Башҡортостан рәссамдары берлеге тарафынан Әхмәт Лотфуллин ижадының Салауат Юлаев исемендәге республика бүләгенә күрһәтелеүен ысын күңелдән хупламай мөмкин түгел. Талант сағылы үҙенә лайыҡ баһаны алырға хаҡлы.
06.03.1971.

Кеше — бөйөк мөғжизә

(Әхмәт Лотфуллинға — 50 йәш)

1

Урал сағылынан малай күкте барлай.

Аҫта, бик аҫта, тыуған ауылы йәйрәп ята. Әбйәлил яҡтарының ябай ауылы. Сағыл башынан өйҙәрҙең төрлө төҫтәге түбәләре генә күренә. Малай белә: түбәләрҙең тимгел-төҫтәре унда ябылған һаламдың “йәшенә” ҡарап йөрөй. Ҡара-һоролоҡ — һаламдың түбәлә ятып ыуалабашлауы, “ҡартайыуы”. Ә сағыу һары һалам быйыл ғына ябылған — баҫыуҙарҙы ҡойондорған Ҡояш һарыһын ул иңдәренән һалып та өлгөрмәгән. Шуны ла белә малай: һуғыш тигән ҡурҡыныс һәм зәһәр афәттең һулышы килеп ҡағылғанға тиклем, ул йорт түбәһе йәшел ҡалайлы ине, ауылда бер булып, йәшел төҫкә балҡып ултыра ине. Йорт хужаһы үҙе лә малайға, әкиәттәге тылсым эйәһеләй, түбәһенән ниндәйҙер серле йәшел нурҙар балҡытып нурланып йөрөй һымаҡ ине. Әлеге зәһәр һулыш килеп ҡағылды ла нурлы йөҙлө хужаны ла, йәшел ҡалай түбәне лә әллә ҡайҙа һыҙырып алып китте, башы шәрә ҡалған өй, яланғаслығынан оялып, ғәрәсәттең әрһеҙ һалам эшләпәһен кейеп алды...

Өлкәндәрҙең күкте зәңгәр итеп кенә күреүҙәренә лә аптырай ул. Ә бит улай түгел был. Нисәнсе ҡат инде малай һомғол сағылға артыла, әммә һәр саҡ яңыса күрә күкте. Ҡай саҡ ул, күк, йоҡа ғына аҡ шәкәрә эленеп торғандай, ҡалтырай. Ҡай саҡ уның зәңгәр ҡабағын ҡуйы-көрән яҙыу ҡараһы яғыныслай. Ҡай саҡ буръяҡ болғанғандай алһыу ҡан төҫө ялмай... Күк — тере кеүек, уның үҙгәреп тороуының иҫәбе-хисабы юҡ. Тик бөтәһенән дә ғәжәберәге — шул төҫтәрҙе үтә тишеп ергә баҡҡан күҙҙәрҙә. Зәңгәр күктең текләүсән күҙҙәре был. Малай үҙе лә шул күҙҙәргә күк үтәләй төбәлеп баҡҡаны һайын, донъяла үҙенә нимәлер етмәгәнен, нимәнеңдер бик кәрәклеген тоя бара ныҡыраҡ. Шул етмәгәне, уны йөрәкһеткәне — бер мөғжизә донъяла. Ул, моғайын, күктең төпһөҙ күҙҙәренең төбөнә йәшерелгән.

— Ҡолонсағым, салҡан төшөп ни эшләп ятаһың бында?!

Әсәй тауышы. Малай һиҫкәнеп китә, тороп ултыра. Әсәһе уның янына сүкәйә. Ҡулында оҙон һаплы ырғаҡ-багоры. Малайға ул хәҙер ҡалын китаптағы һүрәттә һөңгөһөнә таянып ултырған боронғо һуғышсыны хәтерләтә. Әсәй, арып-талып, үҙе эшләгән леспромхоздан — ҡыуғындан ҡайтып килә. Бүрәнәләрҙән һалдар бәйләгән, йәғни. Атай кеше йылға буйлап шул һалды оҙата киткән — ҡаланың тас үҙенәсә. Фронтҡа

бик күп мылтыҡ төйҙәләре, блиндаж түбәләре, ә ер ҡуйынындағы шахталарға таяуҙар — ағас кәрәк... Әсәһенең шырауланып бөткән, тупаҫ багор һабын матҡыған ҡулдары малай күңелендә ҡапыл, күктең тере күҙҙәре менән бер ҡатарҙан, бөтә һыҙаттарын киреп тамырланды, ауыл янындағы ғорур тауҙар һыны менән типә-тиң ҡатарланды, олғашты. Эйе, олғашты — киләсәктә рәссам Әхмәт Лотфуллиндың полотноларына ерҙән үрккән мөғжизә, хеҙмәт кешеһенең егәрле ҡулдары рәүешендә ерегеү өсөн.

— Әсәй, күкте үтә күрәм мин!

Әсә малайҙы етек ҡара сәстәренән иркәләп һыйпалай:

— Тоҙһоҙ ашағанғалыр ул, балаҡайым. Нисә йыл инде Гитлер-яуыз ғәрәсәтенән икмәк юҡ, шырпы юҡ, тоҙ юҡ...

— Йондоҙҙар унда шундай эре, ялтырҙар!

— Ә һин ерҙе лә үтәнән-үтә күрмәйһеңме ни, ҡолонсағым? Ҡара әле эйелеп: еребеҙ ниндәй матур, аҫтында ниндәй хазиналар!

Малай беренсе тапҡыр ергә, әсәй күрһәткән ергә, күккә баҡҡан шикелле үк, иғтибар менән төбәлә һәм ундағы мыжғып ятҡан мең төрлө тереклектәрҙән, үләндәрҙән, суйыр таштарҙан — төҫтәр төрлөлөгөнән телһеҙ ҡала.

— Былары әле тәү күргәнең генә, Балам. Иң мөһиме — кеше, ерҙәге *кеше тигән бөйөк мөгжизә!*

Бала саҡтың ошоға оҡшаш кисерештәре, моғайын, күптәребеҙҙең күңелендә мәңгегә уйылып ҡалғандыр, ә, бәлки, рәссам күңелендә ул уғата самими төҫтәрҙә емелдәйҙер. Әммә шуныһын асыҡ әйтә алабыҙ: Урал сағылында тыуған изге тойғо — Кеше ғүмеренең бөйөк Мөғжизәһен эҙләп табыу, уны кешеләргә бүләк итеү рәүешендә ул беҙҙең бөгөнгө танылған сағыу талант эйәһе, Башҡортостандың атҡаҙанған рәссамы Әхмәт Лотфуллинды бөтә ижад юлдары буйынса ҡалмай оҙата килде. Һәм әсәһе күҙен астырған тыуған ерҙең тере күрке уның сағыу күҙҙәренән китмәне. “Кеше — бөйөк мөғжизә!” — ҡолағында ошо тылсымлы һүҙҙәр гел сыңлап торҙо. Бер туҡтауһыҙ, тип әйтерлек, күсенлектә үткән һалсы ғаиләһенең тынғыһыҙ тормошо малайға донъяның әсе-сөсөләрен татытты, шул уҡ ваҡытта уның алдына тыуған яҡтың сағыу төҫтәрен дә, келәмдәге биҙәктәрҙәй, бер-бер артлы бик йомарт асып һалабарҙы. Үҙе артылған үркәс тауҙар, йәшәп киткән ауылдар һәм ғорур кешеләр, үҙе һал ҡыуған йылғаларҙың ҡандай ҡыҙыл ташлы ярҙары сағылды ҡарашында, күңеленә тыуған ерҙең тын алышы, кешеләренең йәнле тауышы һеңде. Үҫмерлеккә барғаны һайын, ике нәмә тилертеп биләне аңын — ауаздар һәм буяуҙар моңо. Ауаздарҙың сихриәтен мандолино ҡылдарына сиртеп түгелдерҙе, ә буяуҙарҙы...

Тыуған Ишҡол ауылында күрше әбей бар ине, уҡымышлы булғанға, Ғәйшә абыстай тип йөрөттөләр үҙен. Малай сағында шуларға йомошҡа ингәне һайын, әбейҙең тәҙрәгә киҫеп элгән ҡағыҙ селтәрҙәрен күреп хайран ҡала: ниндәй генә семәр-биҙәктәр юҡ унда! Ә бер көндө барып керһә, “абыстай” өйөнөң стеналары ишектән түргәсә йәйғор буяулы мөғжизә: ҡунаҡҡа ҡайтҡан килене, күҙҙең яуын алырҙай төҫтәр һалып, аҡ

ҡағыҙға төрлө-төрлө һүрәттәр яһап элгән. Малай шул саҡ донъяла акварель тигән буяубарлығын, уны тотонған әҙәм балаһы тылсым эйәһенә әүерелгәнлеген төшөнә...

Ләкин көнбайышта ҡабынған һуғыш уты һаман дөрләй ҙә дөрләй, һаман көсәйә ине. 1943 йылда Әбйәлил районының йәш үсмере Әхмәт үҙҙәренә яҡын Магнитогорскиға һөнәрселек училищеһенә китә. Токарь булырға. Шул йылдарҙа ҡулына бумала ала — заводтың төрлө агитһүрәт эштәренә егелә. Күҙе сағыубуяу таныған йәш кешегә иғтибар итәләр шундуҡ: 1945 йылда уны Ленинградтағы художество-һөнәрселек училищеһенә уҡырға ебәрәләр. Бында Әхмәт Лотфуллин рәссам-альфрейщик һөнәре ала, блокадала ҡыйралған "Төньяҡ Пальмираһы"н — революция бишеген — ҡабат аяҡҡабаҫтырыусылар сафында йәш күкрәк көсөн биреп эшкә егелә. Атап әйткәндә, "Ленакадемстрой"ҙа Ғалимдар йортоноң сихриәтле биҙәктәрен көл эсенән ҡабат торғоҙоу эштәрендә ҡатнаша. Ошо йылдарҙа ул, бөйөк даһи атлап үткән Смольный таштарының изге йөрәк йылыһын тойоп, үҙенең тәрән йөрәк кисерештәренә сума. Ленин ҡалаһының мөһәбәт һыны ҡабат күркәмләнеп балҡығас, 1949 йылда, ҡанатланып, тыуған Башҡортостанына уҡтала. Ул йылдарҙа бында уның һөнәренә килешле эш табылып бөтмәй әле, әммә һәләтле егетте шунда уҡ Өфө сәнғәт училищеһенең дүртенсе курсына уҡырға алалар. Уҡыу йортон тамамлап, әхмәт Лотфуллин сәнғәт белемен арттырырға ҡарар итә — 1951 йылда Вильнюс дәүләт сәнғәт институтына керә.

Дүрт йылдан һуң ул Тағы ла, йөрәкһеп, үҙенең тыуған яҡтарына — атай йортона ҡайта.

Ватан өсөн иҫтәлекле һәм ҡөҙрәтле тәрән һулыш алыу йылдары була был.

Үсмер сағында Әхмәт һал ағыҙған моңһоу йылғаларҙы инде күкрәү-гөрөлтөлө машиналар шаңғырта.

Урал тауынан меңәр саҡрым алыҫлыҡта Мәскәү янында донъяла беренсе промышленность атом электр станцияһының реактор йөрәге геүләй. Донъяла беренсе яһалма ер юлдашы, ерҙе хайран ҡалдырып, кешеләрҙең башы осонан көнө-төнө урап йөрөй. Лотфуллин да, яҡташтары ла кистәрен күкте һыҙып үткән көмөш йондоҙсоҡҡа хисләнеп ҡарай. Кешелек донъяһы, Гагарин булып ырғылып, ерҙең тартыу көсөн өҙөргә самалай. Шағирҙар ғаләм киңлегенең йондоҙ туҙанлы юлдарын маҡтап йырлай. Ерҙең сағыубуяулы бумала маһирҙары — рәссамдар — инде ҡырҡ тапҡыр күнегелгән ер һыҙаттарынан күҙҙәрен айырып, алыҫ космос төптәренә төбәлеп ҡарай, уның сағыу төҫтәрен хикәйәт ҡылыр өсөн мольберттарын эшкә яйлай. Хатта бәғзеләре инде Венера һәм Марстың (планеталарҙың) ғәжәйеп пейзаждарын һүрәтләгән полотноларын әҙерләй күргәҙмәгә...

Әммә йәш рәссам Әхмәт Лотфуллиндың дәртле-сая ҡарашы ерҙең тылсымлы тартыу көсөн данлай — ул Өфөгә, илһамланып, "Әсәйем портреты"н (1957 йыл) алып килә. Ихлас уйлап ҡараһаҡ, шул уҡ Гагарин-бөркөттәрҙе талпындырҙҡан ил әсәһе образы ине был. Рәссамдың ошо

беренсе аҙымын йылы ҡаршылай өфөләр. Икенсе портрет — “Йәш башҡорт ҡатыны” — Мәскәүҙәге Халыҡ-ара йәштәр фестивале күргәҙмәһенә ҡуйыла, ер кешеһенең ерсән төҫө төрлө яҡтарҙың төрлө милләт кешеләре тарафынан таныла. Портреттарҙың авторы Өфөгә килеп, Халыҡ ижады йортонда методист булып эшләй башлай, был уға тыуған Башҡортостандың төрлө райондарына, ауылдарына сығып йөрөү, халыҡ ижады ынйыларының балҡышын үҙ күҙҙәре менән күреп таныу мөмкинлеген аса. Уның портреттары тамашасы алдында үҙе көн дә күреп йөрөгән данлы яҡташтарының тулы ҡанлы образы булып килеп баҫа, ошо портрет жанрында камиллашыу рәссамдың киләсәк картиналарында һынланасаҡ тетрәткес тормошсанлыҡҡа, психологик тәрәнлеккә нигеҙ һала. Халыҡ-ара йәштәр фестиваленән аҙаҡ, автор үҙенең яңы хеҙмәттәрендә ырамлы ғына үҫеп, Союз күләмендәге күргәҙмәләргә ҡатнаша. Йәш рәссамды туған халҡының ирек өсөн героик көрәш тарихы, революция ялҡыны, уның ҡаһармандары темаһы тынғы бирмәйенсә болоҡһотоп арбай, был иһә уға портреттан киңерәк полотноға күсеүҙе һорай. 1959 йылда рәссам “Һәләк булған геройҙың әсәһе” тигән картинаһын яҙа, әҫәр Мәскәүҙә бөтә Сюз күргәҙмәһендә ҡуйыла, ә унан һуң Польша Халыҡ Республикаһында уҙғарылған Халыҡ-ара күргәҙмәгә сығарыла. 1961 йылда Лотфуллин СССР Рәссамдар берлегенә ағза итеп алына.

Ләкин ижади үҫеш фәҡәт еңеүҙәрҙән, сағылдан-сағылға һикереүҙәрҙән генә тормауы ла билдәле.

1963 йылда Свердловскиҙа “Социалистик Урал” зона күргәҙмәһе асыла. Унда Лотфуллин “Һабан туйына” тигән картинаһын ҡуя. Әҫәр арыу ҡабул ителә, әммә етди кәмселектәре лә бар ине. Атап әйткәндә, әҫәрҙәге персонаждар кәйефенең дөйөм Байрам кәйефе менән тап килешмәүе (кешеләрҙең йөҙөндәге ҡо бараһыҙлыҡ), етмәһә, оҫталыҡ та аҡһа быраҡ китеүе күңелде ҡыра. Шул уҡ ваҡыттабыл картина киләсәктә тематик полотнолар яҙыу кеүек оло артылыш та рәссамдың ҡулынан килерҙәй, тигән өмөт уятты.

Икенсе юлы Пермдә асылған зона күргәҙмәһенә Ә. Лотфуллин ике әҫәрен алып килде — “Алтын көҙ”, “Колхозсы ҡатын-ҡыҙ портреты” — һәм берәгәй уңыш ҡаҙанды: тәүгеһен йәш ҡала Нефтекамскиҙа ғүмерлеккә “пропискаға теркәнеләр”, икенсеһенең репродукуияһы Мәскәүҙә “Донъя халыҡтары сәнғәте энциклопедияһ»нда ташҡабаҫылып сыҡты. Шуны әйтергә кәрәк, уңыштар ҙа, хаталар ҙа күктән төшмәне Әхмәткә, ул уларҙы, ерҙең үҙе игелек биргән кеүек, күкрәк көсө менән ирешеп, үҙ иңендә күтәрҙе. Илдең бөйөк революцияла ҡорбандар биреп яулаған шифалы ленинсы милли сәйәсәте уға ауырлыҡтарҙы ла еңергә, үҙ ижадын халыҡтың ырамлы хеҙмәт ижадына ҡушырға, бөйөк совет иленең ирекле гражданы булып, ергә ныҡлы баҫып тороп сәнғәт һүҙен әйтергә илһам көсө һәм дәрт бирҙе. Ул үҙенең халыҡҡа хеҙмәт итеү бурысын мольберт тотоп башҡарған, йәмғиәткә файҙалы эштәрендә, Ватан ихтыяждарына тап килерлек, туған совет халҡының талымлы теләгенә яуап бирерлек тәғәйен эштәрҙә күрҙе. Бының өсөн рәссам кеше Ватандың,

туған халҡының данлы бөгөнгөһөн дә, шанлы үткәнен дә, *балҡ*ыу киләсәген дә — өсөһөн бер юлы иңләп белергә, ерҙең тере һулҡылдауын тойорға, йөрәгенә һыйҙырырға тейеш ине. Әхмәттең тап шул йылдарҙа ижад, ижади бурыстар хаҡындағы уйланып әйткән һүҙҙәре төшә иҫкә.

— Мин үҙем хәҙер, — тигәйне ул, — бөгөнгө ҙур темаға тотоноу теләге менән янып йәшәйем. Сәғәтлек түгел, көнлөк түгел, ә тамашасы йөрәгендә мәңге ҡалырлыҡ эштәр эшләге килә. Бөгөнгө көн темаһы минең күңелдә Тыуған ил тарихы тураһында уйланыуҙар менән ҡуша үрелгән. Бөйөк Ватан һуғышын ғына алайыҡ. Халыҡты бөйөк итер өсөн тарихтағы ошо бер бит тә етер һымаҡ. Картиналарымды яҙғанымда мин бөтә үткәндәрҙе күҙ алдымдан кисерәм — йырҙарҙы һәм хикәйәттәрҙе лә ишетәм...

Мәскәүҙә — “Художник” журналындабаҫылып сыҡты был һүҙҙәр.

Силәбелә ойошторолған нәүбәттәге зона күргәҙмәһендә шул тойғо һәм уйланыуҙарҙың емеше — “Өс ҡатын-ҡыҙ” (1969 йыл) картинаһы Юғары баһаланды. Яурындары артындағы үркәс-үркәс тыуған тауҙар һыҙатына тоташып-ауаздашланып, һындары менән мәғрур ҡая киртләстәрен хәтерләткән, ауыр һынауҙарҙа сыныҡҡан һынмаҫ характерҙар ныҡлығын ана шулай метафора дәрәжәһенә күтәргән ҡырыҫ йөҙлө был өс фигура тураһында беҙҙең көндәлек матбуғатта ла, ҡалын китаптарҙа ла күренекле совет сәнғәт белгестәре тарафынан авторға ғәжәп йылы һүҙҙәр әйтелде, тәрән анализ яһалды картинаға. Милли һынлы сәнғәтебеҙ тарихына ентекле ҡараш ташлап яҙылған шундай юлдарҙың бына береһе: “20-нсе — 50-нсе йылдарҙағы башҡорт сәнғәте нигеҙҙә үҙ-ара һирәк һөйкәлешкән йәки киҫешкән ике йүнәлештә үҫте. Уға, бер яҡтан, этнографизм тенденцияһы, халыҡ көнкүреше, фольклор һәм декоратив сәнғәт, боронғо милли тормош, патриархаль ғөрөф-ғәҙәттәр менән мауығыу хас ине. Икенсе яҡтан, тормош һәм художество материалының милли үҙенсәлегенә бер ни тиклем вайымһыҙлыҡ менән бергә бөгөнгө заманға, актуаль тематикаға, художестволы репортажға һәм документаллеккә төбәлеш. 60-ынсы йылдарҙабашҡортостандың йәш рәссамдарында был тенденциялар бөтәһе бергә ҡушыла, шул уҡ ваҡытта яңы сифат кимәленә күтәрелеп синтезлаша. Ә. Лотфуллиндың “Өс ҡатын-ҡыҙ” картинаһы миҫал була ала быға. Рәссам живописта шөйлә киң таралған, өс йәш айырмаһы, өс быуын темаһын хәл итә. Ләкин тәрән үҙенсәлекле хәл итә уны...

Ҡатын-ҡыҙҙарҙың фигураһы картинала фронталь рәүештә урынлаштырылған. Тантаналылыҡ һәм ҡырыҫлыҡ бар уларҙа. Шул уҡ ваҡытта характерҙары төрлө. Быуындан-быуынға кешенең бойондороҡһоҙлоғо, азатлығы арта, тормош һаман бәхетлерәк булабара. Кеше рухының матурлығы, ғорурлыҡ һәм ҡаҡшамаҫ ныҡлығы раҫлана был картинала. Ундағы образдар милли характерҙарҙы, тәбиғәтте һәм көнкүрештең үҙенсәлектәрен, тарихты һәм халыҡтың бөгөнгө тормошон тәрән аңлап эш итеү арҡаһында тыуған. Ә был картинаның формаһы иһә башҡорт сәнғәтенең үҙенсәлектәре менән органик рәүештә бәйләнгән”. (В.

Ванслов. Станок сәнғәте һәм уның яҙмыштары хакында. Социалистик реализм проблемалары. М., 1972 йыл, 281 — 282-нсе биттәр).

2

Атҡаҙанған рәссам Әхмәт Лотфуллин үҙенең ижади оҫталығын өҙлөкһөҙ камиллаштыра, республика хеҙмәтсәндәре — яҡташтары араһында туҡтауһыҙ ҡайнауын, илһамланып, уларҙың сағыу портреттарын эшләүен дауам итә. Уны бала сағынан уҡ тынғы бирмәгән ҡанатлы хыял — туған халҡының күҙен асып нурландырған, үҙ еренә үҙен хужа иткән бөйөк кешелек яҙы — Революция темаһын илгә һынландырып биреү теләге дәртләндерә лә ҡомарлай, бөйөк юл башсының юбилейы яҡынлашҡан һайын, тора-бара был ижадындағы изге көскә әүерелә. Бала саҡтан иҫтә ҡалған ике төҫтөң, ике күрктең йәшеле — йәшлек яҙы яңыртҡан ауылдың ҡусҡыл ҡыяҡлы ер йөҙөнә, ҡыҙылы — дөрләү Байраҡтарға ҡунып ел берҙәй, рәссам илдә йөрөп күргән яҡты йөҙҙәр, нурлы күҙҙәр Ҡыҙыл Байраҡ шәүләһе үтә дәртләнеп баға донъяға. Күк йөҙө яҡты, киң, тыуған тауҙар рухы иркен, кешеләрҙең аҙымы ныҡ — бөйөк даһи төҫөн таныған Еңелмәҫ рухлы халыҡты ошо үҙе һайлап алған иркле юлдан тайҙыртырлыҡ, туҡтатыр көс юҡ инде!.. “Беренсе Май” картинаһы (1969 йыл) барлыҡҡа килә шулай. Әйтергә кәрәк, ҡайта-ҡайта, оҙаҡ эшләй ул уның өҫтөндә. Бында Әхмәт Лотфуллиндың күптәнге оло хыялы — блокадала ғорур көрәшкән һәм Еңеп сыҡҡан Ленин ҡалаһын үҙ ҡулдары менән төҙөп торғоҙошҡан йылдарында уҡ йөрәгенә ныҡлап кереп ултырған, ошоғаса һаман уны үсергә, оҫталығын камиллаштырырға дәртләндергән мөҡәддәс изге тема — даһи темаһы һиҙҙертә биреп ҡуйҙы үҙен... СССР Сәнғәт академияһы Президенты Н. Томский 1970 йылда “Коммунист” (N13) журналындабаҫылған “Социалистик реализм позицияларынан” тигән мәҡәләһендә “Совет Рәсәйе” күргәҙмәһендә ҡатнашыусы рәссамдарҙың эштәрен юғары баһалап, “һәр яңы күргәҙмә һайын үҙенең ижади өлгөргәнлеген һәм рәссамлыҡ үҙенсәлеген ышандыртҡыс итеп раҫлаған, билдәле аныҡ маҡсат тотоп уңыштан-уңышҡабарған” РСФСР-ҙың күренекле рәссамдары араһында “ Башҡортостандың талантлы вәкиле Ә. Лотфуллиндың” да исемен атап үтә. В.И. Лениндың тыуыуына 100 йыл тулыу айҡанлы 1970 йылғы юбилей күргәҙмәһендә күрһәтелгән “Беренсе Май” картинаһы өсөн Әхмәт Лотфуллинға “СССР Сәнғат академияһының дипломы” бирелә.

Ләкин тормош Байрамдарҙан ғына тормай, ә ил, халыҡ тормошо бигерәк тә. Үткән һуғыштың яралары кешеләрҙең төшөнә кереп йәрәхәтләй. Рәссам оҫтаханаһында станоктағы полотнола яҡты буяуҙарҙы илдең һөрөмлө күгенең төҫө алмаштыра. Күк аҫтында бөтә фонды аҡтарылып ҡайнап ятҡан төтөнмө, ҡара болотмо, әллә ҡырағай монолиттарҙан өҫтө-өҫтөнә өйөлгән таш диуарҙармы биләй. Ер ҡара көйөп янған, ҡанлы яра бирсәһеләй сатнаған. Быны баҡҡан кешелә ул

илде баҫҡан оло афәт хисен уята. Ошо ғәрәсәтле фонда Мәғрур Урал ҡаяларылай ерҙең төбөнән үҫеп сыҡҡан, һынмаҫ рухлы өс ҡатын һыны тора... Рәссамдың шәхсәнә күргәҙмәһендә (1971 йыл) башҡа бик күп сағыу әҫәрҙәре менән бергә ҡуйылған "Көтәләр, 1941 йыл" картинаһы тетрәтте тамашасыларҙы...

1974 йыл, башҡалабыҙ Өфөлә шаулап үткән "Социалистик Урал" зона күргәҙмәһе... Бында Әхмәт Лотфуллиндың беҙгә таныш "Көтәләр, 1941 йыл" әҫәре менән бергә тағы ла өр-яңы полотнолары күрһәтелде. Шул йәйҙә генә тыуған Әбйәлил районының алдынғы колхозсылары портреттарын яҙып алып ҡайтҡайны, сәнғәт белгестәре уларҙы күргәҙмәлә, ә һуңынан Мәскәүҙә лә бик ыңғай баһаланы; тормоштоң үҙенән дөрөп ингән ихласлыҡлы был характерҙар ҡаршыһында тамашасылар үҙҙәре лә оҙаҡ-оҙаҡ туҡталып ҡарап торҙо. Сағыу портреттарҙан улар, моғайын, алтын ҡуллы, ҡайнар йөрәкле замандаштарын, үҙҙәренең яҡындарын танығандарҙыр. Ошо тема нәүбәттәге "Ғаилә" полотноһында ла ғәжәп көр, монументаль аккорд булып яңғыраны.

Күргәҙмәлә Лотфуллиндың әҫәрҙәре эркелдергән тойоғоларҙың төрлөлөгөн һәм муллығын айырата әйтеп китмәйенсә мөмкин түгелдер. Киндерҙәге һәр йөҙ беҙҙә тәрән хистәр ҡуҙғата — йәнһеҙ йәндәр юҡ бында. Тамашасы, әйтерһең, һығып ҡуйыртылған, концентрацияланған характерҙар донъяһынабарып инә лә, шул донъя менән ҡомарланып, күңеле байығып сығып китә... Әйтәйек, ҡулъяулыҡтан саҡ ҡына ҙурыраҡ форматтағы "Портрет этюды" тәңгәлендә кемдәр генә туҡталмай ҙа оҙайлы ҡатып ҡалмай!

Шундай уҡ тәрән кисерештәр ябырылдырыусы тағы ла бер яңы әҫәр бар ине — "Тәҙрә янындағы әбей". Исеменән үк күренеүенсә, өй алдында тәҙрә янында ауыҙын уң ҡулы менән ҡымтып бер ҡарсыҡ тора. Һул ҡулы уңының терһәк аҫтында. Уйсан. Ҡырыҫ йөҙ һыҙаттары. Төҫтәр ҙә бында ҡырыҫ, һаран.

Өй эсе күренә тәҙрәнән: мөйөштәрәк милли биҙәкле урын-ҡара йыйыштырылған, тәҙрә төбөндә боросгөлдөң боросо ҡыҙарып бешкән. Ҡыҙыл боростоң нәҙек-оҙон һыны әбей һыны менән, ә төҫө — әбейҙең камзул түшендәге берҙән-бер сөм-ҡыҙыл төймә төҫө менән ауаздаш. Моғайын, был әбейҙең йәш ғүмере ҡыҙыл борос һымаҡ әсе үткәндер... Ә өй эсендә — уны сағылтҡан күҙ ҡараһы төбөндә — артҡы стенаға уйылған икенсе тәҙрә; унан асыҡ яҡты күк, аҡһыл-һоро ирәбе тауҙар — аҡ донъя балҡып күренә. Рәссам бында, әйтерһең, тамашасы ҡарашын әбейҙең күңел күҙе аша алға — киләсәккә үткәрә. Өй төбөндәге аҡ тәҙрә — ҡарсыҡтың тәрән күңел тәҙрәһе, уның ейән-ейәнсәрҙәренең аҡ донъяһы... Шулай итеп, шиғриәттәге кеүек үк ишлелек — параллелизм алымдарын ҡулланып, рәссам беҙҙе, көтмәгәндә, трагик хәлдән оптимизм тойғоһона һуғара, тормошобоҙ яҡтылығын раҫлауға килтерә.

1974 йылдың Октябрендә Өфөлә РСФСР Рәссамдар берлегенең пленумы булып үтте, унда, башҡалар менән бер ҡатарҙан, әхмәт Лотфуллин ижадына ла оло баһа бирелде. Унан һуң, Бөйөк Октябрҙең 60

йыллығы алдынан былтыр Мәскәүҙә асылған ҙур күргәҙмәлә ҡатнашыу, “Правда”, “Советская культура” һәм башҡа үҙәк гәзиттәрҙә йылы һүҙҙәр менән телгә алыныу...

Хәтерҙә, “Социалистик Урал” күргәҙмәһенең тамашасылар менән ҡайнап торған мәлендә үк әле мин рәссамды үҙенең оҫтаханаһында илһамлы эш өҫтөндә осраттым. Станокка оло полотно беркетелгән, ул унның ижад юлындағы яңы артылыш нөктәһенә тиңәлтеп төҫмөрләнгән. Алдағы күргәҙмәләрҙең береһенә өлгөртөү өсөн, “Һабан туйы” картинаһы яҙылып ята ине. Уны ҡарауҙан әле булһа күңелемдә Урал еренең характерҙар бәйгеһе, яҙ еҫе аңҡый бөркөлөп!

Картина инде теүәлләнде, былтыр үҙенең юғары зауыҡлы тамашасылары алдына ла ҡуйылып, беренсе ыңғай баһаларын да алды. Әммә тынғы белмәҫ рәссамды инде нәүбәттәге өр-яңы полотноның төҫмөрө тулҡынландыра. Ул үҙенең күп йылдар буйы — ғүмеренең Ленин ҡалаһы осоронан уҡ — оло хыял итеп һаҡлап йөрөткән теләген, ниһайәт, тормошҡа ашырырға ҡомарлана.

— Владимир Ильич Ленин тураһында уйлаһам, — ти ул, — нимә тип кенә әйтергә! — әсәйемә ҡайтҡандай, Ҡояш балҡығандай күҙ алдарым яҡтырып, илһамым артып китә — шундай илаһи көскә эйә был образ!

Тулҡынланыуынан эшен туҡтатып, бүлмә буйынса йөрөп ала ла яғымлы, әкрен генә тауышы менән “Урал” көйөн йөрәк төбөнән һыҙылдыртып моңлана.

— Көпә-көндөҙ күк үтәләй йондоҙ күрә алған кешене, әсәйем әйтмешләй, үткер күҙле, тип һоҡланабыҙ, — тип дауам итә ул, йәнә хискә бирелеп. — Ә Ленин күҙе быуаттар, дәүерҙәр аша күргән — быны нимә тип атарға?... — Һәм үҙе үк үҙенә яуап та бирә: — Даһи!

Оҫтахана стеналарына ҡат-ҡат һөйәлгән рамдарҙы — яҙылып бөткән (араһында минең ҡырҡ йәш тулған осор портретым дабар) һәм яҙылабашлаған унарлаған “ҡулъяҙма”ларҙы әйләндереп ҡарайбыҙ, уйланабыҙ.

— Бик ауыр эшләйем мин, — ти Әхмәт. — Һәр яңы әҫәрем артында ошондай унарлаған варианттар, этюдтар, “тамамланмаған мазок”тар ҡала ятып... Һәр яңы эшемдә үҙемдән ҡәнәғәтһеҙлек, тағы ла яҡшыраҡ итеп яҙыу теләге артабара.

Әскелтем буяу еҫтәре аңҡыған оҫтаханан сығабыҙ, урамды аша үтеп, тын баҡсаға инәбеҙ. Рәссам мине үҙенән-үҙе Ҡояшлы майҙан түренә — бөтәбеҙ өсөн иң бөйөк һәм изге кешене һынландырған һәйкәл янына тарта. Туҡталып, оҙаҡ уйланып тора... Аҡ ҡайындар аллеяһы буйлап китеп барғанда, хистәре кинәт урғыла:

— Ниндәйен оло ҡыуанyслы ла, яуаплы ла даһи образын буяуҙар йөҙөндә һынландырырға самалау! Мин ғүмерем буйына шуға әҙерләндем, шуның менән хыялланып йәшәйем!..

Тимәк, кеше туҡтауһыҙ эҙләнә, үҙенең берҙән-бер, бөйөк Мөғжизәһен табырға ниәтләнеп эҙләнә.

Ҡәҙерле тамашасы, һин рәссамдың картиналары ҡаршыһында оҙон-оҙаҡ баҫып тор, ундағы йөҙҙәргә ҡарап, ашыҡмай, күңелеңдән

үҙенден бөтә тормош юлыңды кисер. Рәссам аҫкан яҡты күңел тәҙрәһе үтә һин үҙенден тоймай ҙа эҙләгән, ғүмер буйы хыялланып эҙләгән берҙән-беренде — Кеше тигән бөйөк Мөғжизәне күреп танырһың. Һин үҙенде табырһың.

01.11.1974.

Донъяны күркәм күреүсе

Республикабыҙҙың күренекле фотохәбәрселәребеҙҙең береһе Вячеслав Александррович Стрижевский менән мин бынан бер нисә йылдар элек, икебеҙ ҙә бер мәлдә "Башҡортостан ҡыҙы" журналының хеҙмәткәрҙәре рәүешендә командировкаға барғанда таныштым нығлап. Шуға тиклем уның ғәжәп тормошсан һәм оригиналь һүрәттәрен күберәген "Ленинсы" гәзите биттәрендә осрата, авторҙың ябай әйберҙәрҙең дә эске матурлығын тоя, башҡаларға ла шуны нәфис асып бирә белеүен күреп һоҡлана инем. Оҙаҡламай, был һәләтле егеттең эштәребеҙҙең яңы сығабашлаған ҡатын-ҡыҙҙар журналы биттәрен биҙәне — "Башҡортостан ҡыҙы»ның тәүге һандарын уҡ әҙерләшеүҙә ҡатнашты ул. Ә торараҡ В. Стрижевский йәнә үҙе һөйгән тынғыһыҙыраҡ эшкә — "Вечерняя Уфа" гәзите редакцияһына күсте. Хәҙер инде республикабыҙҙың һүрәтләнеп сыға торған бер генә лә олпат баҫмаһы, мат бағаһы ла, бигерәк тә төҫлө фотолар менән эш итә торғандары, В. Стрижевский хеҙмәттәренән тыш бигүк тулы булмаҫ ине, тип әйтһәк, моғайын һис арттырыу түгелдер. 1977 йылда бөйөк Октябрҙең 60 йыллығы айҡанлы КПСС-тың Башҡортостан Өлкә комитеты нәшриәте баҫып сығарған, В. Стрижевский фотолары менән биҙәлгән "Октябрь Ҡояшы аҫтында" тигән китап, 1978 йылда ГДР-ҙа донъя күргән " Башҡортостан — Һалле, дуҫлыҡ юлдары" исемле фотоальбом, шулай уҡ төрлө күргәҙмәләрҙә (һәм сит илдә лә) В. Стрижевский фотоларының ыңғай баһаланыуы ошо хаҡта үҙҙәре аныҡ һөйләй.

Бына хәҙер минең алда В. Стрижевскийҙың сағыу төҫлө фотоларынан төҙөлгән тағы ла ике хеҙмәт: "Ағиҙел буйындағы ҡала" (КПСС-тың Башҡортостан Өлкә комитеты нәшриәте, Өфө, 1978) һәм " башҡорт дәүләт халыҡ бейеүҙәре ансамбле" (Башҡортостан китап нәшриәте, Өфө, 1978) альбомдары. "Ағиҙел буйындағы ҡала" (ул ВЛКСМ-дың Башҡортостан Өлкә комитетының халыҡ-ара йәштәр туризмы бюроһы "Спутник" заказы буйынса нәшер ителгән), исеме үк әйтеп тора, республикабыҙҙың гүзәл башҡалаһы Өфөгә арналған. Уның тышлығынан уҡ төп идеяһы елкендерә күңелде: бөйөк Ленин булған ҡала, Ильичтың эҙҙәрен ҡәҙерләп һаҡлаған, ленинизм Ҡояшы аҫтында йәшәгән һәм йәшәргән, сәскә атҡан һылыу ҡала!

Мин тормошҡа бағам: йәшәй Ленин,
Ил яҙмышы, минең яҙмышта. —

Башҡортостандың халыҡ шағиры Рәшит Ниғмәтизең ошо ялҡынлы шиғри юлдары менән асылып киткән тәүге бүлек тамашасыны башҡаланың В.И. Ленин исемендәге гүзәл майҙанына, даһи һәйкәле алдындағы Ҡыҙыл Байраҡтар һәм галстуктар ташҡынына — ил йәшлеге пионерҙарбайрамына алып керә. Йәшелгә төрөнгән ер, тыныс-аяҙ зәңгәр күк совет халҡының бәхетле тормошоноң ныҡ һәм даимилығы, күркәмлеге хаҡында сағыу төҫтәр телендә хикәйәләй кеүек. Артабан Ленин йорт-музейы һәм ундағы Ильич ҡулы ҡағылған изге экспонаттар арбап ала йәнеңде. Ленин йөрөгән ерҙәрҙең күренештәре, даһиға һәм революция ҡаһармандары иҫтәлегенә ҡуйылған һәйкәл һәм мемориалдар, шуларға йәнәшә һынланыусы тере замандаштарыбыҙҙың рухланған көләс йөҙҙәре. Фотокадрҙарҙа ярылып яткан тәрән мәғәнәүи йөкмәткенән башлап төҫтәр алсаҡлығына тиклем, бөтәһебеҙҙең күҙҙәрҙе ҡыуандыра, күңелгә йылы нур бөркә. Артабанғы биттәр башҡалабыҙҙың киң билдәле ғорурлығын — уның ныҡ үҫешкән, күп тармаҡлы, ҡеүәтле промышленносен, ҡаһарман эшселәр синыфын баҫтыра күҙ алдына; тамашасыһын донъяның дүрт тарафы менән дә тоташтырған Өфө ҡапҡаларынан алып инеп китеп, ҡаланың иң иҫтәлекле һәм матур урындары буйлап йөрөтә; Өфөнөң алдынғы фән һәм юғары мәҙәниәт төйәге лә икәнен, формаһы яғынан милли, йөкмәткеһе социалистик сәнғәттең, спорттың, туризмдың, һаулыҡ һаҡлау һәм йәш быуынға бәхетле бала саҡ тәьмин итеү, халыҡты интернациональ рухта тәрбиәләү эштәренең бында даими көн үҙәгендә тороуын бәйән итә. Шуныһы әһәмиәтле: был йыйынтыҡта В. Стрижевскийҙың хатта пейзаж һүрәттәре лә яңғыҙ тәбиғәт йә индустрия тантанаһы ғына булып ҡалмай, ә уларҙа тере кешеләр, социализм төҙөп өлгөрткән алтын ҡуллы һәм ялҡын йөрәкле замандаштарыбыҙ ҡуйыла иғтибар үҙәгенә.

Хәйер, Вячеслав Александрровичтың бөтә эшмәкәрлегенә уңыш килтереүсе ошо төп һыҙатты мин баяғы, уның менән бергә барған тәүге сәйәхәтемдә үк шәйләгәйнем инде. Хәтерҙә, беҙ унда, гүзәл бөрйән төбәгендә, халҡыбыҙҙың яҡты йөкмәткеле милли байрамына тап килеп, байтаҡ фотокадрҙар алып ҡайттыҡ һәм шуларҙың байтағы матбуғат биттәрендә донъя күрҙе, кемдер әйтмешләй, районды ла бер иле күтәреп ебәрҙе. Бының сере — В. Стрижевский фотообъективының тап донъя үҙәгенә — хеҙмәт кешеләренең йөҙөнә һоҡланып һәм ихтирам итеп төбәлә белеүендә ине.

Бынан һуң да беҙгә уның менән төрлө төбәктәрҙә йыш ҡына бергә йөрөргә тура килде һәм һәр юлы ул үҙенең эскерһеҙ алсаҡлығы, тормошто һөйөп һәм уға йөрәк йылыһын һалып ҡараусанлығы менән һоҡландырҙы. Ҡарурманлы бөрйән тауҙарынан артылғанда ла, сал быуаттар серен төйнәп һаҡлаған Шүлгәнташ мәмерйәһен үтеп сыҡҡанда ла, селтерәп аҡҡан Ағиҙел башының көмөш-гәлсәр һыуҙарын кискәндә лә В. Стрижевскийҙың тылсымлы фотообъективы Башҡортостаныбыҙҙың иҫ китмәле тәбиғәт хозурлыҡтарын ғына түгел, ә шул хозурлыҡ ҡосағында ҡанат киргән, шул ерҙәрҙең егәрле хужаһы ла, аҫыл биҙәге лә булған кешеләрҙе — ҡабатланмаҫ кеше йөҙҙәрен донъяның үҙәгенә ҡуйып

балҡытып бирә белде. Унның фотоһүрәттәренә айырыуса йылылыҡ өҫтәгән һыҙат — кешеләрҙең дөйөм кешелек сифаттары менән бергә күркәм милли сифаттарын да ихлас күрә һәм күрһәтә белеүҙер, моғайын; Ә бының өсөн фотоаппарат объективы үтә бағыусыға ла ул һалҡын быяланы йылытырҙай ҡайнар һәм ҙур йөрәкле күркәм сифат — кешеләрҙе ныҡ яратыу кәрәктер. Стрижевскийҙың бына ошо бәрәкәтле үҙенсәлеге уға осраған һәр бер ерҙә таныш булмаған кешеләр менән тиҙ үк һин дә мин һөйләшеү, уртаҡ тел табыу мөмкинлеген бирә.

Иҫке Собханғол ҡасабаһының Ағиҙел күперен сыҡҡан ерҙәге әллә быҙау ҡыуыпмы, әллә ҡаҙ көтөпмө ҡайтып барған бөрйән ҡарсығын осратыуыбыҙ, уны туҡтатып һөйләшеүебеҙ иҫтә һаман. Был дәү башҡорт әбейенең йылдар һуҡаһы йырғыслаған, тәрән бураҙналанып һырланған сырай һыҙаттары шундай ҙа үҙгәле — ул сал ҡаяморононда дүрт офоҡтоң һәммә елдәренә лә ҡарышып үҫкән, дауылдарҙы иңе менән ҡайырып күнгән мөһәбәт ҡарт ҡайындымы, имәндеме хәтерләтә ине. Стрижевскийҙың ҡарсыҡ менән һүҙҙәре беректе лә уны төрлө ракурстан тылсымлы таҫмаһына төшөрөп тә алды. Оҙаҡламай был фото, тыуған Башҡортостанда ғына түгел, ә Союз, хатта сит ил салондарына ла йәм өҫтәп, кеше тигән мөғжизәнең үҙенә тейгән хәләл ҡартлыҡты ҡайһылай ғорур ҡаршылауы тураһындағы йыр булып яңғыраны.

Шул уҡ Иҫке Собханғолда бөрйәндең милли бейеү оҫтаһын сәхнәлә бейеү Барышында уҡ һүрәтләү өсөн, күпме тырышлыҡ һәм оҫталыҡ һалып эшләгәйне ул! Тап бына шунда мин В. Стрижевскийҙың башҡорт милли бейеүҙәрен ни тиклем яратҡанын, кейемдәге кескәй биҙәктәрҙән башлап, бейеүсенең үҙенсәлекле хәрәкәтенә тиклем, һәммәһен йотлоғоп күҙәтеүен һәм фотоаппарат хәтеренә "мисәтләп" ҡалдырырға ынтылыуын күргәйнем. Үҙ эшенең оҫтаһының был мауығыуы, күрәһең, күп йылдар буйынса ла уңышлы дауам иткән һәм уға, аҙаҡ килеп, бөгөн беҙ ҡулға тота алырлыҡ ижади емеш биргән.

Һүҙебеҙ унын баяы, 1978 йылдабаҫылып сыҡҡан икенсе — " башҡорт дәүләт халыҡ бейеүҙәре ансамбле" тигән төҫлө фотоальбомы хаҡындабара. Беҙ унда донъяны әйләнеп ҡайтҡан, башҡорт халыҡ бейеү сәнғәтен Юғары профессиональ оҫталыҡ менән оло аренаға сығарып дан ҡаҙанған һөйөклө ансамблебеҙҙе — һылыу егет һәм ҡыҙҙарыбыҙҙы уларҙың бөтә матурлыҡтарында, бейеү сәмендә балҡып асылған күҙҙәренең нурында — илаһи-изге мәлдәрендә күрәбеҙ. Халҡыбыҙҙың дарьялай киң күңелен, ҡаһарман үткәнен һәм бөйөк хәҙергеһен кәүҙәләндереүсе "Ете ҡыҙ", "Төньяҡ амурҙары", "Гөлнәзирә", "Зарифа", "Заһиҙа", "Өс туған", "Һунарсы", "Биш бармаҡ", "Азамат", "Шаян ҡыҙҙар", "Дуҫлыҡ" һ.б. бейеүҙәрҙән алып, *башҡа ту*ғандаш халыҡтарҙың һәм хатта сит ил, мәҫәлән, Африка, Һиндостан, Пакистан, Бангладеш, Греция халыҡтарының, характерлы бейеүҙәре ҙур профессиональ оҫталыҡтабашҡарылыу мәлдәре сағылдырылған. Уларҙа беҙҙең формаһы яғынан милли, йөкмәткеһе менән социалистик сәнғәтебеҙҙең интернациональ рухы уғата сағыуыраҡ асыла, инандыра.

Тик был көләс фотоларҙан, дөйөм тәрән ҡәнәғәтлек кисереү менән бергә, шундайыраҡ теләк тә тыуа икән: республикабыҙҙа йәшәгән һәм сәнғәттәре сәскә атҡан туғандаш башҡа халыҡтарҙың бейеүҙәрен дә ифрат оҫтабашҡара алған ансамблебеҙҙең был йәһәттәге хеҙмәттәре тағы ла тулыраҡ һынланһасы альбомда! Әйтәйек, йыйынтыҡтың бик ҡиммәтле, һанаулы ғына биттәрендә данлы ансамблебеҙҙең күркәм ижади йөҙө өсөн әллә ни яңылыҡ өҫтәмәгән “Әпипә” һәм “Еңел баҫ” кеүек шөйлә еңелерәк баҫымдағы бейеүҙәр урынына берҙәй үк яҡын туғандарыбыҙ сыуаш, удмурт һ.б. халыҡтарҙың характерлы бейеүҙәрен дә биреп булыр, ә был иһә баҫманы уғата төрләндерер, *байы*ҡтыра төшөр ине.

В. Стрижевскийҙың был хеҙмәтендә йәнә шул ҡыуандыра: төҫлө һүрәттәрендә ул Башҡортостан тәбиғәтенең аҫыл буяуҙарын киң файҙала — ансамбль тиклем ансамблде һәр осраҡта ла киң сәхрәләр ҡосағына алып сыға алған. Әммә матурлыҡ та төрләнергә тейештер: бер төрлө генә булһа, ялҡытабашлай ул да. Һүрәт фондарының йышыраҡ йәшел төҫтә булыуы юҡ-юкта күҙҙе талдыра, йәшел япраҡтар артында гөрләгән ҙур тормош билдәләрен дә күрге килә. Әйтәйек, ҡайһы бер күмәк бейеүҙәрҙе башҡарғанда уларға фон булып башҡаланың индустриаль силуэты, илдәге мөһәбәт һәйкәлдәр, Юғары вольтле электр йә нефть вышкалары селтәре, йәки ауыл ҡырҙарының алтын башаҡтар диңгеҙе кеүек бөгөнгө көн аһәңе менән тулышҡан, тормошобоҙҙоң мәғәнәһен тәшкил иткән күренештәр аҫыл тәбиғәт күренештәре менән йәрәшеп килгәндә лә һис хилаф булмаҫ, ә, киреһенсә, һәр кадрҙың перспективаһын тәрәнәйтә генә төшөр ине. Ә был йүнәлештә авторҙың тәүге иҫкә алынған фотоальбомындағы уңыштар, бынынһындағы ярайһы ғына ынтылыш маялары бар: мәҫәлән, ҡурайсылар ансамблен (17-нсе бит), “Дуҫлыҡ”, “Азамат”, һалдат бейеүҙәрен һүрәтләгән биттәр. Былары, әлбиттә, табыштар һәм бер ыңғайҙан киләсәккә киҫәтеүле теләктәр; әммә альбом ошо килеш тә үҙенең ихлас тамашасыһын табасаҡ, йомарт күңел сафлығына һуғарасаҡ.

Һүҙҙе йомғаҡлап, шуны хәбәр итәйек: В. Стрижевский һаман да тынғыһыҙ эшләй, эҙләнә, таба; тапҡандарын тамашасыға тапшырып, уға донъяны күркәм күрергә булыша. 1979 йылда сығасаҡ “Республика иртәһе” тигән баҫмала ла был оҫтаныңбайтаҡ ҡына һүрәттәре әҙерләнгән. Һуңғы йылдарҙа республикала бындай баҫмаларҙың күбәйә барыуы, әлбиттә, үҙе ҡыуаныслы хәл. Сөнки тыуған Башҡортостан, мөһәбәт башҡалабыҙ йылдан-йыл нығыраҡ үҙгәрә, әүҙем туризм төбәгенә лә әүерелә һәм Өфөнән иҫтәлеккә, төрлө китап һәм сувенирҙар рәүешендә, Салауат иленең төҫөн алып ҡайтып китергә теләүселәрҙең һаны ла бермә-бер арта. Ә алыҫтан килгән ҡунаҡтың зауҡын ҡәнәғәтләндерерлек ер-һыу төҫөн, кешеләр күркен сағылтҡан ошондай альбом һәм сәйәхәтнамәләрҙең булыуы — һәр мәҙәниәт үҙәген дә биҙәй торған мәҙәнилек билдәһе ул. Тик баҫмаларҙың тиражы ғына әлегә Наҡыҫыраҡ, ләкин тора-бара был да етешер. Бына шул матур эшкә, күреүебеҙсә, телгә алынған фотоальбомдарҙың авторы ла файҙалы өлөш индергән. Ә инде уның яҡындағы эш пландарына килгәндә, бөйөк йылғабыҙ Ағиҙелдең монарлы Урал ҡаяларында урғылып сыҡҡан башынан алып Камаға ҡойған

тамағынаса, илде байҡап, тылсымлы объективын йөрөтөп үтергә, тормошобоҙҙоң сағыу төҫлө күренештәренән “Ағиҙел мәрйене»н теҙеп бирергә хыяллана икән ул. Уңышлы юл теләйек.

1978.

Факел во мраке ночи

(К 150-летию поэта Мифтахитдина Акмуллы)

Бывает, битва света с мраком длится иногда очень долго, даже веками, и народ на передний край своего поступательного движения выдвигает выдающихся светоносцев-сыновей. Таким светочем башкирской поэзии XIX века был великий поэт-просветитель Мифтахитдин Акмулла.

Грандиозный пожар народной войны под руководством Емельяна Пугачева и Салавата Юлаева, породившая впоследствии таких замечательных поэтов-импровизаторов башкирского народа, как байык айдар-сэсэн, Буранбай Яркэй-сэсэн и Ишмухаммет-сэсэн, не говоря уже о самом Салавате Юлаеве, был потоплен в крови. Воистино о бщенародня Отечественная война 1812 года против иноземных захватчиков, всколыхнувшая всю многонациональную Россию священным пламенем битвы и братского единения, патриотизма и героизма и призвавшая под стяги Отечества около тридцати башкирских до бровольческих кавалерийских полков, осталась тоже позади. До грядущей эпохи революционных сражений предстояло народам брести еще почти целый век в темноте и бесправии царского деспотизма и казалось, что не будет конца их постылому и унылому прозя банию. Ислам и его шариат, словно паутиной, опутали жизнь башкир, а зажигательную поэзию башкирских поэтов поколения Салавата Юлаева сменил суфизм, порожденный религиозной идеологией, на основе которого лежала проповедь аскетизма, мистицизма, пессимизма и фанатическая любовь к богу. Такие выдающиеся башкирские поэты того времени, как Тажитдин Ялсыгол аль-Башкорди, Менди Кутуш-Кыпсаки, а бельманих Каргалы, Хибатулла Салихов, Шамситдин Заки, Гали Сокрый и другие, хотя и проповедовали равенства людей перед богом, считали, что в земной жизни все преходяще, тленно, воспевали надежду на лучшую жизнь в другом, загробном мире. Вот в такой беспросветный момент истории перед башкирским, казахским и татарским народами ярко воспламенился факел поэта Акмуллы, озаривший все вокруг до рези в глазах. Его свет и пламя озарили не только бедную башкирскую деревню Тукханбай, где в 1831 году он родился, но и всю тюркоязычную окраинную Россию, и бо Мифтахитдин, как яркий мыслитель и поэт своего времени, сумел во брать в се бя классическую наследию поэзии Востока и частично Запада, включая, надо полагать, русскую и в какой-то мере французскую. Недаром он так страстно призывал свой народ: “Нужно стараться разные науки одолеть, нужно равняться к светлым умам. Не только по-русски должны уметь мы читать, но и французским языком владеть должны”. Мастерски оперируя таким

острым оружием своего богатейшего поэтического арсенала, как сатира, беспощадно клеймил и выжигал он своих классовых врагов: алчных баев, невежественных мулл, звал народ к просвещению, к овладеванию ремеслами, прославлял разум, справедливость и гуманизм. Сочувствие акмуллы всегда на стороне бедных, угнетенных, а его сердце жаждет сво боды: "До каких пор в мире правда и справедливость будут угнетены и попраны?! Придет ли час, когда будут разбиты каменные сердца... и возрадуется бедный люд?" Поэт считает, что несправедливость в о бществе сохраняется так долго потому, что до сих пор ум и просвещение не смогли восторжествовать над темнотой и невежеством. Его тревожные раздумья и желание торжества разума и справедливости осо бенно ярко выражены в оде "Памяти Шихабутдина Марджани", где автор прославляет человека-борца, "зажегшего фонарь в ночи", "до бывшего из глубоких недр, недоступных даже инженерам, живую душу правды". Виртуозно владеющий живым народным языком, в отличии от своих предшественников суфистов с ног до головы пропитанный реалиями земной жизни и афористичный до мозга костей, поэт бесстрашно смотрел правде в глаза и острой как меч правдой разил носителей несправедливости и тьмы. Как он сам признает, его "правдивое слово одним — исцеление, другим отраву приносил". В стихотворном письме, о бращенном одному из своих ярых противников, великий поэт с воинствующей прямотою говорит: «нургали, не думай, что я испугался: если ты возьмешся за палку, то я за стрелу возьмусь. Пока я жив, книгу с рук не уроню, если ты возьмешся за ружье, то я за пушку возьмусь!.."Непримиримый о бличитель мрако бесия и ханжества, неутомимый поборник добра и всего светлого, вступает он в конфликт даже со своим родным отцом.

В третьем десятке своей неугомонной бунтарьской жизни поэт Мифтахитдин Камалитдинович окончательно покидает родное гнездо и под светлым, как награду самим народом присвоенным, именем Акмулла (что в переводе означает Светоносный Просветитель) пускается на вечное скитание по степям и горам родного башкортостана и братского Казахстана, гордо нося свой горячий факел поэзии всемубесправному угнетенному люду окраин Российской империи. В мастерски изготовленном самим поэтом и запряженном лохматым башкирским конем двухкамерной ки битке-телеге помещалось все его богатство: самодельный раскладной письменный стол и шкафчик с книгами, походный верстак и полный набор столярных инструментов. Везде, где поэт по бывал, оставались шедевры его столярного мастерства и поэзии. Его стихи, так глубоко впитавшие в се бя всего прогрессивного, народного и насыщенные острыми социальными мотивами, щедрым пламенем зажигали народные сердца. Любили его простые пастухи и хлебопашцы, ненавидели богачи. За резкое выступление против казахских феодалов поэт был заточен в Троицкую тюрьму, где томился долгих четыре года. Произведения, написанные им в эту пору, входят в число лучших образцов

башкирской классической поэзии, свидетельствуют они о несги баемой духовной силе и неиссякаемом таланте поэта.

Наряду с богатым разнообразием жанров, форм, для его поэзии характерен глубокий реализм, она отмечена свежестью и новизной в о бластях размера стихов, ритма-интонации, тональности, рифмы, структуры строф. Доведен им до совершенства древнейший башкирский народный стих кубаир-эпос с его аллитерациями, ассонансами, системой рифм, поэтическими периодами, а также псьменный восточный стих рубаги. Под его пером рождаются и прекрасные образцы газели (“Хода”, “Трудно наити друга сердечнего...”, “Проклятому не молюсь...”, “Дружочки”, “Не было” и т.д.), как органичный элемент башкирского стиха и закрепляется в нем анафора и эпифора, внутренняя гармония строки. Акмулла был хорошо знаком с древней философией (Платон, Газзали, Фараби и др.), писал прекрасные философские стихи. Его многочисленные произведения до сих пор живут в памяти народа и поются как песни, а меткие строки его стихов продолжают бытовать как народные пословицы и поговорки. Поэзия Акмуллы о богатила литературы трех братских народов: башкир, казахов и татар. Впоследствии многие выдающиеся поэты этих литератур справедливо считали Мифтахитдина Акмуллу своим учителем. Поэтическую школу Акмуллы продолжили и развивали его сородичи — видные башкирские поэты, как Д. Юлтый, Ш. Бабич, М. Гафури, С. Кудаш, С. Якшыгулов, Ш. Аминев, Г. Йомрани и другие. Огромную силу воздействия его творчества испытали на себе классики татарской литературы Г. Тукай, Дэрдмэнд и другие. Бесценное творческое наследие поэта (при его жизни увидел свет только одна-единственная тонкая книжечка) по крупицам собрал, сберег и до наших дней донес сам народ — не это ли является признаком величия и жизненной силы таланта! Наконец, в этом юбилейном году башкирским книжным издательством выпущен самый полный сборник произведений Акмуллы.

Конечно, Мифтахитдин Акмулла жил и творил в трудную, сложную эпоху, и емубыли присущи тоже оши бки и недостатки своего времени. Например, путь к прогрессу видел он только через просвещение, в своих исканиях частенько опирался на религию. Однако это ничуть не умаляет выдающееся значение поэта, и бо, как он сам говорит, “если меня будете умалять, то я готов малым стать, но только что бы вы сами были спосо бны стать большими”. Как видно, соотношение здесь о братнопропорциональное.

...Неукротимо при ближался XX век с его бурными со бытиями, призванными отогнать вековечный мрак и тьму, против которых так неистовоборолся М. Акмулла. Однако, как и все выдающиеся таланты царской России, поэт был убит — убит жестоко, коварно. Произошло это в 1895 году, вблизи города Миасса. Но горячий факел поэзии, высоко поднятый Акмуллой, не погас, лучезарный свет его и сегодня продолжает освещать нам путь и согревать сердца людей.

01.09.1981.

Күп һырлы талант

Мөхтәбәр Мөхәммәтсәлим Өмөтбаев яҡташтары хәтерендә ғүмере буйына халыҡ мәнфәғәтен ҡайғыртып һәм даулап батша Рәсәйенең дәүләт ҡапҡаларын ныҡышмалы ҡағыусы әрһеҙ юламан (ходотай), тыуған иленең моң-зарҙарын йөрәге әрнеп йырлаусы ихлас шағир булараҡ тороп ҡалған иң беренсе сиратта һәм был хәтер быуындан-быуынға күсә. Ә инде бөйөк мәғрифәтсенең бай йөкмәткеле ижади мираҫына һирпелеп ҡарау менән үк, аҡыл эйәһенең юғары зауыҡлы бөхтәлеге — хәрефтәрен матур итеп мөһөрләүсе каллиграф, үҙ әҫәрҙәрен үҙе һүрәтләп биҙәкләүсе оҫта рәссам да икәнлеге салына күҙгә. Ошо бәрәкәтле рухи хазина, мәғрур Урал ҡаялары күкрәгенән урғылыусы һыуһын ҡандырҡыс саф шишмәләй, күңелеңде үҙенә тартып ала ла авторының аң даирәһенең киңлеге, белеменең байлығы, фекеренең ябайсан тәрәнлеге менән хайран ҡалдыра: ошо көндә лә ул мәшһүр затыбыҙ хәҙерге дипломлы һәм дәрәжәле тиҫтәләгән ғалимдарыбыҙ, әҙиптәребеҙ араһында оло бер башҡа юғарыраҡ ҡалҡынып, башҡорт донъяһында һирәгерәк булған, Ирәмәл тауҙай сурайып торған күп һырлы ғалим-энциклопедист рәүешле күҙаллана. Ысынлап та, кемебеҙгә тәтей ундай уңғанлыҡ: бер юлы үҙе мәғрифәтсе-педагог, шағир, публицист, тәржемәсе, сәнғәтсе, әҙәбиәтсе, телсе, фольклорсы, тарихсы, этнограф һәм топонимика маһиры...

Билдәле булыуынса, был кешелек донъяһында халыҡ асылының күсәгилешлеге үткәндәрҙән бөгөнгөгә лә киләсәккә игеҙәк-йәнәш булған тере сыл быр-бауҙай һуҙылып бара— тыумыш быуындар рәүешендәге матди һәм рухи (хәтер) сыл быры кил бәтендә. Әсә менән атабарҙа матди сыл быр өҙөлмәҫ, ә рухи сыл быр яҙмышы хәтәрерәк: быуын хәтере яһил аяҡ аҫтына һалынһа йә көл ҡылынһа, заманалар һуҙымы өҙөлә лә дөйөм рухи сыл бырыбыҙ (тимәк, халыҡ!) төп-тамырын юғалта... Быуындар хәтерен аманатлап илтеүселәр бармаҡ менән һанарлыҡ — бына шуларҙың берәгәйле береһелер Мөхәммәтсәлим хәҙрәтебеҙ. Шуныһы ифрат мөһим: халҡыбыҙҙың меңәр йыллыҡ хәтере менән бер ыңғайҙан башҡа халыҡтарҙың дабашҡорт тарихына тығыҙ бәйлебеҙ белмәгән шаһәҙәтнамәләрен туплаған был ғалимыбыҙҙың бай мираҫы. Әгәр шуны игелекле ҡабул ҡылып алмаһаҡ йә әрәм-шәрәмләп юғалтһаҡ, Башҡортостан тарихының киләсәктә яҙыласаҡ тәрән тамырҙарын юллау бик ауырға төшәсәк... Аянıслы хаҡиҡәт: Мөхәммәтсәлим Өмөтбаевтың ижадында бик егәрле сәсеүсенекеләй услап-услап йомарт һибелгән тарих мәғлүмәттәренә иғтибарһыҙ ҡала бирә бәғзе тарихсыларыбыҙ, шул арҡала күпте юғалта улар. Миҫал өсөн был ҡарыйҙың фәһемле әшкәртеүҙәренең бер нисәһенә генә йүнәлтке килә зауыҡлылар иғтибарын: гун (һун) башҡорттар һәм юғур (уғыр) башҡорттар тураһында (этнографтарыбыҙ иғтибарына). Билдәле булыуынса, бик боронғо һундарҙың һәм уғырҙарҙың бөгөнгө башҡорт бабалары икәнлеге хәҙер инде торған һайын ныҡыраҡ асыҡлана. Телселәребеҙгә лә уйланаһы урын бар: боронғо

башҡорт теленең фәҡәт үҙенә хас һүҙ байлығынан өлгөләр килтерә ғалим. Археологтарға: ислам динен ҡабул иткәнсе үк әле башҡорттоң *етмешләп ҡалаһы* булғанлығын әйтә лә, "Ағиҙелдең уң яғында, Инйәр һәм Сим һыуының Ағиҙелгә ҡойған ерендә, аҡташ тигән бейек тау өҫтөндә һәмишә (хәҙергәсә) төрлө урында ҡала әҫәрҙәре бар", Дәшти Ҡыпсаҡ тигән мәшһүр империяның тәхете торған шунда, тип тә өҫтәй ул бик ипле. Топонимистарға ла файҙалы һабаҡ: ҡайһы бер ер-һыу, ҡала атамаларыбыҙҙың асылы. Мәҫәлән, боронғо болғар ҡалабыҙҙың (ә ул Аҫабабашҡорт ҡалаһы!) тулы әйтелеше икән болғара. "Болғара исеме асылда ике атаманы үҙендә берләштерә: Болға — Волга, Ра шулай уҡ Волга". Һуңғыһы иһә донъя диндәре тарихтарын, тәғәйен алғанда, боронғо башҡорт еренән донъяға таралған зороастризмды, өйрәнеүселәргә фәһемле; сөнки изге Ра йылғаһы (Иҙел башы Ағиҙел) исеме зороастризмдың изге китабы Авестаға (Иран), Ригведаға (Һиндостан) аныҡ итеп теркәлгән. Әйткәндәй, ике болғар (Иҙел буйындағы һәм балҡан ярымутрауындағы) дәүләтен дә башҡорттар ("болғар" шул уҡ "башҡорт" һүҙенең үҙгәреше генә) төҙөгәнлеге тураһындағы боронғо ғәрәп сығанаҡтары илебеҙҙә матбуғатҡа һуңғы ун йыллыҡта ғына сығарылһа ла, Мөхәммәтсәлим Өмөтбаев шул турала үҙ ваҡытында уҡ аныҡ яҙып ҡалдырған һәм, Иҙел буйындағы болғар иле хандарының тәхеткә башҡорттарҙан ғына күтәрелеүен иҫкәртеп, беренсе Туҡый хандан алып аҙаҡҡы Ғәлимбәккә тиклем башҡорт хандар шәжәрәһен быуынлап теркәгән. Тарихсылар өсөн йәнә бер һабаҡ: атаҡлы йыһангир (илбаҫар) Зөлҡәрнәйен (Александрр Македонский) илбаҫарҙарына йән аямай ҡаршы тороп һуғышыусы, дошмандарҙы Уралына уҙғармай сигендертеүсе ай барлы башҡорт батыры аҡташ ханды ла тәржемәи хәле менән ентекләп тасуирлай ғалим. Диҡҡәтлерәк ҡараһаҡ, ошо аҡташ ханыбыҙ — боронғо грек тарихына ла теркәлгән донъяға мәғлүм Спитамен (Өсбит-Әмин — Аҡташ хандың маҡтаулы ләҡәбе булһа кәрәк), ә ул хәрәкәт иткән Ағиҙел буйҙары — Окс (Аҡсу — аҡ һыулы икенсе Ағиҙел — хәҙерге амударъя) йылғаһы, хандың баш ҡалаһы аҡташ — Сәмәрҡәнд янындағы әле лә имен аҡташ ҡалаһы булып ҡабул ҡылына, сөнки Ҡуңыр буға юлыбыҙ киҫеп уҙған амударъя буйҙары боронғо башҡорт-массагет (мәсәғүт) биләмәләре икәнлеге бөгөнгө фәндә киң мәғлүм (хәйер, М. Өмөтбаев үҙе үк ошо турала икенсе бер хеҙмәтендә ап-асыҡ итеп әйтә). Өҫтәүенә, ғәскәре ҡыйратылған ауыр бер осорҙа Тәүтөйәк Башҡортостанға ("Болғар иленә") сигенә лә Аҡташ хан, унан яңы ғәскәр алып көрәшен дауам ҡыла. Шулай итеп, боронғо башҡорт донъяһы боронғо грек донъяһы менән тығыҙ үрелә, быны иһә хәҙерге яңы мәғлүмәттәр ҡеүәтләй...

Мөхәммәтсәлим Өмөтбаев әле лә фәндең алғы һыҙығында ҡала, яңы быуын тикшеренеүселәрҙе ҡыйыу асыштарға юҫыҡлай.

20.08.1991.

Совет әҙәбиәтенең ғорурлығы

Туғандаш ҡаҙаҡ халҡының бөйөк улы, донъяға танылған “Абай юлы” роман-эпопеяһының авторы, талантлы яҙыусы, публицист, ғалим-академик Мохтар Әүәзовтың тыуыуына 80 йыл тулыу юбилейын бөтә совет иле хөрмәтләп билдәләй.

Мохтар Үмәрхан улы Әүәзов үҙенең данлы яҡташы, бөйөк ҡаҙаҡ шағиры Абай Ҡонанбаевтың тыуған ерендә — элекке Семипалатинск өйәҙенең Сыңғыҙ ылыҫына ҡараған Сыңғыҙтау итәгендәге йәйләүҙә 1897 йылдың 16 (28) сентя брендә донъяға килә. 1928 йылда Ленинград университетын, һуңғараҡ Ташкенттағы Урта Азия университеты эргәһендәге аспирантураны тамамлай. 1946 йылда Ҡаҙаҡ ССР Фәндәр академияһының академигы итеп һайлана.

Мохтар Әүәзовтың әҙәби эшмәкәрлеге 1917 йылда яҙылған һәм Абай ауылындағы тирмәлә сәхнәгә ҡуйылған “Енлик-Кебек” трагедияһынан башлана, тип әйтергә мөмкин. Ҡаҙаҡ халҡының боронғо феодаль-ырыу тормошондағы фажиғәле мөхәббәт легендаһына нигеҙләнгән һәм ғәмәлдә милли ҡаҙаҡ театрының башланғысы булған был әҫәр ошо көнгәсә төшмәй сәхнәнән.

Совет ҡаҙаҡ әҙәбиәте яңы ғына тыуып килгән 20-нсе йылдарҙа уҡ инде урыҫ һәм донъя әҙәбиәте мәҙәниәттәренә эйә булған йәш Әүәзов ҡәләменең новаторлыҡ ҡеүәһе ҡапыл балҡып китә, һәм күптәргә аңлашылмай был балҡыш; шуға күрә тәүге осорҙа уның “ҡатмарлы” әҫәрҙәрен киң ҡатлам уҡыусылар ғына түгел, хатта әҙиптәр ҙә баһалап еткермәй. Ләкин шул уҡ 1921 йылда яҙылған “Етем яҙмышы” хикәйәһе генә лә үҙендәге һүрәтләнгән тормош ваҡиғаларының тәрәнлеге, киңлеге менән йәш ҡәләмде Европа новеллистикаһы кимәленә күтәрә. Бер-бер артлы “Кем ғәйепле?”, “Өйләнеү”, “Мәғрифәтле граждан” (1923), “Ҡайғы кисереүсе һылыу” (1925), “Күк бүре” (1929) хикәйәләре, “Артылыштағы атыу” повесе (1927) һ.б. әҫәрҙәре сыға донъяға. Илдә ауыл хужалығын коллективлаштырыу осоронда яҙыусы колхоз төҙөлөшөнә арналған “Иңгә-иң терәп” (1933), “Текәтау”, “Эҙҙәр” (1935), “Бөркөтлө һунарсы” (1937) һ.б. хикәйәләрен, повестәрен ижад итә. Драматургия өлкәһендә лә ең һыҙғанып эшләй — йәмғеһе егерменән ашыу пьесаның авторы ул.

Мохтар Әүәзов үҙенең тыуған еренә, халҡына, уның ауырлыҡтарҙа ла еңеп сығырлыҡ ҡаҡшамаҫ рухына бәләкәстән үк йөрәгендә оло мөхәббәт һаҡлай, иленең үткәне, бөгөнгөһө һәм киләсәге менән даими янып йәшәй. Ете йәшендә үк үҙ күҙҙәре менән Абайҙы күреп ҡалған, шул саҡтағы батша самодержавиеһының һәләкәтле колониаль сәйәсәтенең һәм урындағы феодал- Байҙар иҙеменең ябай хеҙмәтсән халыҡҡа һалған ғәрәсәтенең шаһиты булған Мохтар Әүәзов Бөйөк Октябрь революцияһы килтергән совет осоронда илдең күкрәп сәскә атыуына сикһеҙ һоҡлана, иле үткән оло һәм ауыр тормош юлын киң ҡоласлы әҫәргә һалып һүрәтләү теләге һис тынғы бирмәй уға. Һөҙөмтәлә XIX быуаттың икенсе яртыһындағы ҡаҙаҡ йәмғиәте тормошоноң ҡатмарлы панорамаһын — феодаль-ырыу һәм синфи көрәш, хеҙмәтсәндәрҙең ауыр тормошо һәм уларҙың аңында иҙеүгә ҡаршы нәфрәт уяныуы, алдынғы урыҫ мәҙәниәтенең шифалы тәьҫире арҡаһында халыҡтың синфи

тойғоларының үҫеше, көсәйеүе кеүек тәрән һулышлы тарихи ағымды иңләгән, совет әҙәбиәтенең һоҡланғыс ҡаҙанышы булған “Абай юлы” роман-эпопеяһы тыуа донъяға. Әҫәрҙең беренсе китабы “Абай” 1942 — 1947 йылдарҙа яҙыла һәм 1949 йылда СССР Дәүләт бүләген ала. 1952 — 1956 йылдарҙа тамамланған һәм “Абай юлы” тип аталған икенсе китабы өсөн Мохтар Әүәзовҡа 1959 йылда Ленин бүләге бирелә, халыҡтар дуҫлығы, гөманлылыҡ, социалистик интернационализм идеялары менән тәрән һуғарылған был сағыу роман-эпопея СССР һәм башҡа сит ил халыҡтарының бик күп телдәренә тәржемә ителә.

Мохтар Әүәзов халыҡ тормошо ҡаҙанында ҡайнап йәшәй, ялҡынлы публицист булараҡ та көндөң үҙәк темаларына әүҙем ҡағыла. Сиҙәм ерҙәрҙе үҙләштереүгә арналған “Төркөстан шулай тыуҙы” (1956) очерктар шәлкеме һәм халыҡ-ара темаға “Һиндостан тураһында очерктар”ы (1958) ошоноң асыҡ миҫалы булып тора.

Һуңғы йылдарҙа ул замандаштары тураһында киң ҡоласлы әҫәр ижад итеү дәрте менән ялҡынлана, ләкин башлаған эшен тамамлап өлгөрә алмай: “Йәш тоҡом” романының беренсе китабы үҙе үлгәндән һуң, 1962 йылдабаҫылып сыға.

Ысын гөмансы-яҙыусы һәм интернационалист Мохтар Әүәзов үҙенең бөтә ижадында халыҡтарҙың дуҫлығын, илдәрҙең тыныс һәм татыу йәшәүен маҡтап йырланы, ул СССР халыҡтарының ҡаҡшамаҫ берҙәмлеген, именлеген урыҫ халҡы менән берҙәмлектә күрҙе. Совет иле ошо бөйөк идеалдарҙы ла тормошобоҙҙоң Төп Законы итеп нығытҡан СССР Конституцияһының яңы проектын бер тауыштан хуплап, Бөйөк Октябрь революцияһының 60 йыллығын ҡаршылаған ҡыуаныслы был көндәрҙә талантлы совет яҙыусыһын беҙ уғата һоҡланып иҫкә алабыҙ
1977.

Балаларға шиғриәт

“Башҡортостан пионеры” гәзитенең 1983 йылғы һандарын ҡарап сыҡҡас, унда баҫылған шиғриәтте шартлы рәүештә *дүрт* төркөмгә бүлергә мөмкин:

1. Көндәлек шиғриәт — редакцияға үҙ ағышында ингән шиғырҙар;
2. Күренекле даталарға арнап яҙылғандары;
3. Шағирҙарҙың юбилейҙары айҡанлы бирелгән шиғри шәлкемдәр;
4. Тәржемә шиғриәт.

Гәзиттә ҡатнашҡан авторҙар даирәһе лә шуға бәйле күҙаллана. Мәҫәлән, әҙәби барышты сағылтыусы “көндәлек шиғриәт” тыуҙырыусылар араһында Миңлегөл Хисмәтуллина, Файыҡ Мөхәмәтйәнов, Сафуан Әлибаев, Ирек Кинйәбулатов, Мәүлит Ямалитдинов, Тимер Йософов, Фәрит Хәсәнов, Берйән Байымов, Альберт Ҡотойов, Әлфинур Вахитова, Ғәлим Дәүләтов, Ихсан Әхтәмйәнов, Фәүзиә Юлдашбаева, Муса Сиражи, Рәшит Сабитов кеүек төрлө быуын авторҙары бар. Күренеүенсә, бәләкәй генә күләмле балаларбаҫмаһы өсөн авторҙар даирәһе шаҡтай киң һәм

шиғри ҡәләмдәрҙең сағыулығы, төҫтәре лә төрлө-төрлө. Һәм был төркөмдө тәшкил иткән шиғырҙар, моғайын, күберәген редакцияның "социаль заказ"ы менән түгел, ә үҙаллы талпыныш йәғни авторҙарҙың үҙҙәренең башланғысы, "йөрәк ҡушыуы" буйынса тыуҙырылған. Шуға күрә улар ниндәйҙер дәрәжәлә балалар шиғриәтендәге бөгөнгө әҙәби барышты — уңыштарыбыҙҙы һәм уңышһыҙлыҡтарыбыҙҙы сағылдыра.

Баштан уҡ шуны әйтеп үтергә кәрәк: гәзиттең шиғриәте дөйөм алғанда яҡшы тәьҫир ҡалдыра, редакцияла нескә зауыҡлы иптәштәр эшләгәнлеге күренә. Йыллыҡ продукцияла сифат кимәлдәренең бер тигеҙ булмауы һиҙелһә лә, етди "шиғри брак" тип тамғаланырлыҡ бер шиғырҙың да табылмауы ошо ыңғай һөҙөмтәне дөрөҫләй. Юғарыла аталған авторҙарҙың әҫәрҙәре уҡыусы балаларҙа Тыуған илгә, ер-һыуға, туған тәбиғәткә мөхәббәт тойғоһо тәрбиәләүгә (М. Ямалитдинов, И. Кинйәбулатов, И. Әхмәтйәнов шиғырҙары), тәбиғәттең серҙәрен һәм матурлыҡтарын аңлатыуға, уға ҡарата һаҡсыл мөнәсәбәт уятыуға (Т. Йосопов, Ғ. Дәүләтов, Ф. Хәсәнов) йүнәлтелгән. Ғәлим Дәүләтовтың "Йондоҙҙар" шиғыры хеҙмәт темаһын сағыу һынландырыуы менән иҫтә ҡала. Балаларҙың кире ҡылыҡтарын сатира һәм юмор менән йылмайтып ҡына асып һалған (М. Хисмәтуллина, М. Сиражи, Б. Байымов, Р. Сабитов), шулай уҡ халыҡсан йоморо тел төбө менән мәҫәлләгән (М. Ямалитдинов) шиғырҙарбар. Былар бөтәһе бергә, әлбиттә, йәш быуынды тыуған ерҙең патриоты һәм эшмәкәре, үҙенең ыңғай һәм кире сифаттарын анализлай, етешһеҙлегенә ҡаршы көрәшә белеүсе итеп тәрбиәләүгә булыша. Ләкин был төркөм шиғриәттең даирәһе, үкенескә ҡаршы, шулар менән сикләнә, тормоштоң бөгөнгө иң-иң әүҙем проблемалары (мәҫәлән, һуғыш һәм тыныслыҡ, ҡаһарманлыҡ һәм ҡурҡаҡлыҡ, әүҙемлек һәм вайымһыҙлыҡ, халҡыбыҙҙың үткәне һәм бөгөнгөһө һ.б.) иңләнмәй тороп ҡала. Анығыраҡ әйткәндә, граждалыҡ ялҡыны, публицистик үткерлек етешмәй бөгөнгө шиғриәткә. Был, әлбиттә, авторҙарҙың бер яҡлыраҡ эшләүенән киләләр — бөгөнгө балалар шиғриәтенең дөйөм етешһеҙлегелер. Әммә гәзит дөйөм әҙәби барышты ойоштороусы ла булырға тейеш бит әле.

"Көндәлек шиғриәт"тең был бушаҡлығын редакция, күренеүенсә, беҙ билдәләгән баяғы шартлы төркөмдәрҙең ҡалған өсөһө иҫәбенә тултыра һәм уңышлы ғына тултыра. Мәҫәлән, күренекле даталарҙы тантаналы билдәләү өсөн йәшерәк быуын менән бергә Хәким Ғиләжев, Нәжиб Иҙелбай, Яҡуп Ҡолмой, Йософ Гәрәй, Әлфинур Вахитова кеүек тәжрибәле ҡәләмдәр йәлеп ителә лә ыңғай һөҙөмтәләр бирә. Тик ундайҙар "ҡыҙыл дата"һыҙ һандарҙа ла ҡыҙышып ҡатнашһын ине, баяғы "көндәлек шиғриәт" тип аталған төркөмдөң етешһеҙлектәрен тултырышһын ине.

Күренекле шағирҙарҙың юбилейҙары айҡанлы бирелгән шиғри шәлкемдәр менән дә шундай уҡ: уларҙың һәр ҡайһыныһы гәзит биттәрен юғары шиғриәт өлгөһө, авторҙарының баҙыҡ граждандыҡ позицияһы һәм публицистик аһәңе менән шаңдаулап, йөрәккә үтеп керә. Назар Нәжми, Хәким Ғиләжев, Зәйнәб Биишева, Дауыт Юлтый, Владимир Маяковский, Рәсүл Ғамзатов, Сергей Михалков шиғырҙары һәм поэмалары улар.

Туғандаш әҙәбиәттәрҙән махсус тәржемә ителгән әҫәрҙәр араһында Михаил Юхма, Роберт Миңнуллин шәлкемдәре иҫтә ҡала. Гәзиттә әленән-әле нәҡ балалар өсөн яҙылған һәйбәт текслы йырҙарҙың ноталары менән бергә баҫылып сығыуы ла яҡшы хәл.

Әммә баҫма алдында бер бурыс барыбер үҙ талабында ҡала: Баяғы “көндәлек шиғриәт”тең даирәһен киңәйтеү һәм йөкмәткеһен тәрәнәйтеү. Әле телгә алынған Сергей Михалков (“Степа ағай — ветеран”, Рәмил Йәнбәков тәржемәһе), Рәсүл Ғамзатов (“Зарема”, Сафуан Әлибаев тәржемәһе) поэмалары ошо юлда һәйбәт үрнәк була ала. Бөгөнгө көн геройҙары бөгөнгө көн ғәмдәрен йөкмәгән, үткәндәргә лә, киләсәккә лә бөгөнгө көн күҙе менән ҡараған әҫәрҙәр улар. Гәзиттәге шиғриәттә ошо сифат (донъяға тулайым ҡараш) көсәйә төшһөн ине. Юғһә бит йыш ҡына шағирҙарыбыҙ иғтибары тормоштағы эпизодик хәл-ваҡиғаларға бикләнеп, уҡыусыһын да торғоҙоп ҡалдыра шунда. Ваҡиғалар призмаһы үҙе үтә оло донъяны күрергә һәм иңләргә ярҙам итһә, отошлораҡ булыр ине. Ошо йәһәттән Әлфинур Вахитованың “Илем — именлек терәге” поэмаһы яҡшы яҡка айырыла һәм, ҡайһы бер художество етешһеҙлектәре булыуға ла ҡарамаҫтан, ыңғай тәьҫир ҡалдыра. Героик үткән менән бөгөнгөнө тығыҙ бәйләп тоташтырған, көндәлек ил ғәмдәрен (һуғыш һәм тыныслыҡ) үҙенә нығ һеңдергән, әүҙем позицияла торған әҫәр был. Теле, шиғри эшләнеше лә төҙөк кенә; Еңел уҡыла, уйландыра. Автор биргән прозаик “кәрзинкә”нән үк туҡымалағы хәл-ваҡиғаларҙың сәбәби сығанағы (Бөйөк Ватан һуғышы ғәрәсәте) аңлашыла. Ләкин әҫәрҙе китап иткәндә биреп булырмы ул “кәрзин”де?.. Шуға күрә уны поэма сюжетына тәбиғи һеңдерһен ине автор — ошондай теләк ҡала. Быныһы — икенсе мәсьәлә, әлбиттә. Ә ғөмүмән әҫәр үҙенең заманса яңғырашы, замана ғәмдәрен иңләүе менән яҡшылата гәзитте, башҡа шиғри шәлкемдәрҙә етешеңкерәмәгән граждандлыҡ баҙыҡлығын, публицистик ярһыулыҡты көсәйтә. Гәзитте сығарыусыларға, минеңсә, ошо йүнәлештә уйланаһы бар әле.

24.11.1983.

3. ҠОРҘАШТАРЫМ

****

Бөйөк туғанлыҡ тураһында йыр

— Бар унан да олораҡтар...
— *Ләкин Ғилуан ер улы бит.*
Н. Нәжми.

1

Былтыр беҙ, бер төркөм шағирҙар, көҙҙөң моңһоу көндәрендә, ҡурайсылар иле Йәнсура яҡтарынабарғайныҡ шиғырбайрамына. Тәүгә килеп төшкән көнөбөҙҙө дуҫыбыҙ, "Совет Башҡортостаны" гәзитенең үҙ хәбәрсеһе Ғәли Ильясовтың йылы түрендә уҙғарҙыҡ. Яңы урында, нисектер, тойғолар ҙа Яңыраҡ, нескәрәк кеүек ине. Иртән уяныу китеүебеҙгә, талғын ғына һыҙылыусы туған моң Һарып алды бүлмәне. Баҡтиһәң, Ғәли, быйыл ғына ҡырҡып әҙерләгән бер ҡосаҡ һуйҙан ҡурайҙы алдына Һалып, беҙҙең уянғанды ғына көтөп удтыра икән. Бына ул бәйләмдән көпшәләрҙе берәм-берәм алып тартабашланы. Шул ваҡыт мин, хайран ҡалып, үҙемә әллә ҡасандан таныш, ғәзиз көйҙөң бер үк инсан күкрәгенән нисәмә төрлөгә әйләнеп сығыуының тере шаһиты булдым. Бер үк сағыл башында үҫкән бер үк оҙонлоҡтағы таҡыя баш ҡурайҙарҙың һәр ҡайһыныһының тик үҙенә генә тартым сихри моңо бар ине. Бәйләмдәге ахырғы ҡурай барыбыҙҙы ла әсир итте, уйға талдырҙы.

Беләм, ҡурай тигән шөһрәтле ҡоралдың ил башына төшкән оло ҡайғынан һулығып-һулығып илағаны бар.

Халыҡтың хөрбайрамдарында, табындарҙы сайпылдыртып, бейеү көйө тартҡаны бар.

Ерҙе ғәрәсәт уты япҡан иңрәүле саҡта ярһып-ярһып яу маршын Яңғыратҡаны бар.

Ә был ҡурай, шағир дуҫыбыҙ тотоп тартҡан был ҡурай, шуларҙың барыһын бергә йыйнап, бергә үреп, ниндәйҙер саф ауаз менән һулығып-һулығып инрәп, күңелдең иң нескә ҡылдарын бөтәһен бер юлы сиртеп моңланды, бөтәбеҙҙең йөрәктәрен беректереп, тамырҙарын тыуған еркәйебеҙгә килтереп ялғаны. Әйтерһең, тылсымлы был көпшәнән Ер үҙе ғәзиз моңон ағылдыра ине...

Моңһоу, йонсоу көҙ айҙарын үткәреп, я балаҡ ҡарҙар өлпөрәп яуып торған декабрҙең һөттәй аҡ болотло көндәрендә мин, шиғыр эҙләп йөрөгән еремдән магазинға һуғылып, Назар Нәжмиҙең "Ҡарҙар яуа" тигән Яңы китабына юлыҡтым. Был бәләкәс кенә йыйынтыҡ — ҡатырғаһы

эсендәге тупраҡ төҫө кеүек ҡара буяу һыртынан, хас та инде ҡар бөркәнгән әлеге еребеҙҙәй, ап-аҡ тышлыҡ я бынып сыҡҡайны был донъяға, әйтерһең, быйылғы йыл көҙөнөң оҙаҡ көттөртөп алынған аҡлығына ла, үҙемдең эске тойғоларыма ла тиңдәш-ауаздаш ине. Тәүге биттәрҙе асып ебәреп уҡыу менән үк, беренсе һиҙемләүем берәгәй булыуына инандым: күңелемде Йәнә лә әлеге йырғабай, моңғабай Йәнсура яҡтарында дуҫтан ишеткән, ғәзиз ғүмерҙәй нескә ағылып һуҙылған ҡурай моңо, ер моңо арбап алды. Эй туған кешеләрем, эй тыуған ер, тип эстән генә тәкрарларға мәжбүр булдым, китап биттәренә шағирҙың Йәнле юлдар булып кергән йөрәк моңона ҡушылып. Икегеҙ бер туған бит һеҙ, икегеҙ бер яҙмышлы Йән эйәләре бит һеҙ — юҡҡамы ни исемдәрегеҙ тарихтарҙа ҡушарлатып яҙыла! Берәүҙәргә мамыҡтай йомшаҡ иңен биреп һөйҙөртә ул ер, берәүҙәргә таштай ҡаты арҡаһы менән әйләнә, әммә быға ҡарап ҡына ергә булған туғанлыҡ хисе, бөйөк дуҫлыҡ хисе әҙәм балаһының йөрәгенән һүрелмәй, сөнки, шағир әйтмешләй:

Таштарына ятып йоҡлаған бар,
Око бына булды кергәндәр.
Ҡаты ерем, һиңә: “Сәңгелдәк”, — тип
Юҡҡамы ни исем биргәндәр.
Әй сәңгәлдәк! Әсә ҡулдары бит
Тейгәнгә ул изге, берҙән-бер,
Үҙе әсә, сәңгелдәк тә үҙе
Мәрхүмдәргә лә шул тыуған Ер!

Ер менән кешенең ошо туғанлығы, берҙәйлеге “Ҡарҙар яуа” китабының авторы өсөн үҙен ҡыҫып-ҡамтауырлаған кисерештәрҙән, тойғоларҙан ғына килеп тыуған субъектив бер төшөнсә түгел, ә тормоштоң мәңге дауам итмәле, һәр бер ғүмер бөрөләнеп тыуғаны Һайын Яңы ауаз сығарып Яңғырап китә торған иҫке йырылай, ҡабат ҡабынып балҡып барыусы үлемһеҙлек ҡануны, юйылмаҫ йылъяҙмаһы ул. Әлбиттә:

Ғүмер! Һин бер иҫке йыр икән дә...
ЙӘ бер йыйып һине, бер һүтеп,
Ваҡыттың тар сәхифәләренә
Мин дә яҙҙым һине йыр итеп... —

тип, үкенес белдереп, был һуҡмаҡтың төптө Яңы түгеллегенә бошона биреп тә ҡуя автор. Ни хәл итмәк кәрәк, бары менән — байрам, тигәндәй, ир-егеткә был донъяла йыр иңенә Яңы моң-эҙ өҫтәп үтеү ҙә үҙе бер ырыҫ булыр. Тәүге хыялый “Йәшлек моңо” менән дә, “илдең ҡайғыларын, шатлыҡтарын” күтәреп ил ағаһы ҡорона кергәс, “Йәшәүенең саҡматашын” сағып та яҙыла был эҙ-йыр. Ләкин әлегә беҙҙең шағир өсөн һөҙөмтә бер: элеккеһе лә, “был йырым да минең шәп сыҡманы, шәбе әле уның яҙылыр”. Тик кемгә һуң Насип булыр уны кинәнеп яҙыубәхете? Әкиәттәге алтын ҡошто тота алмай интегеү түгелме был?.. Ошо аяныс әсе асыш

шағир күңелен ҡотайтмаç, йөрәк тигән йоморо бер нәмәң шартлап ярылыр төçлө ине. Әммә, Һары Һағышҡа батһа ла, йырсы тигәнең ныҡ баçып ҡала аяғында; Башы эйәлгән, маңлайы терәлгән ерҙән ул, әкиәт батырылай, көс-дарман ала үҙенә. Әл дә был ауыр-билғауырҙан арьндыртыр изге әсә — тыуған ер бар, “сәңгелдәк” ер бар икән: ошо ер бит быуьн-быуьн кеше ғүмерҙәрен күҙ асып йомғансы сәсрәп һүнер осҡон хәленән ҡотҡарып, дөрләп яныр мәңгелек ут итеп уҡмаштыра бергә. ШУға ла алдағы тыуыр көнгә, тормоштоң һәм йырҙың мәңге өҙөлмәй ағылырьна өмөт тә үлмәй-һүнмәй:

Өйҙән киткәндәргә: “Һау бул!” — тиҙәр,
Ерҙән киткәндәргә: “Бәхил бул...”
Бер кемде лә ситләп үтмәй торған
Бер юл бар шул, бар шул — һуңғы юл.
Ул мине лә, беләм, ситләп үтмәç,
Һуңғы һулыш бер саҡ альныр.
Мин әйтермен: йырым шәп сыҡманы,
Шәбе әле уның яҙылыр.

Эйе, ул йыр мәңгелек ерҙә мәңгел кешелек тарафьнан һәр бер Яңы быуьн алмашьнған Һайьн тағы ла һәм Уғата шәберәк яҙылыр, шул йыр менән “мәңге иçке” ер ҙә, кешелек тә бер туҡтауһыҙ Яңырыр... Тормоштоң бөйөк хаҡиҡәте ҡаршыһьндабаш эйеп, шағир менән ҡуша утты-һыуҙы үткән, үҙ ҡандарьн түгеп кешелеккә Йәшәү хоҡуғы килтергән быуьн — атыр таңдар өсөн офоҡ ҡапҡаларьн хәләл күкрәк көсө менән этәреп асҡан, инде уйсан маңлайҙарьна ғүмер декабренең моңһоу көмөш ҡарҙары яУған ололарҙан-оло бөтә бер быуьн кешеләре тәбиғәттең мәңгелек хәрәкәт, Яңырыу юльнда тап шул мәңгелеккә булған ышаныс, инаныс һүҙҙәрен изге доға урьньна ҡабатлап әйтә кеүек:

Ә мин киттем... “Эй малайҙар! — тинем, —
Тороп ҡалған өсөн көймәгеҙ.
Һеҙме мине ҡыуып етмәç ирҙәр?!
Етерһегеҙ! Ҡалдыҡ, тимәгеҙ.
Һеҙҙең менән Ер үҙе бит ҡала,
Малай булып, мәңге Йәш булып...”
Күрәм: улар миңә ҡул болғайҙар...
Күҙҙәремә китте Йәш тулып.

“Ер үҙе бит ҡала...”

Әҙәм ғүмеренең, Йәшәү һәм үлемдең тәрән мәғәнәһенә, ике ҡапма-ҡаршылыҡтың бөйөк берҙәйлегенә ихлас күңелдән инаныуҙан, ерегеүҙән хасил булған тәрән оптимизм рухы был. Һәм ул бөтә китап үҙәгенән үтәнән-үтә тығыҙ лазер нуры һымаҡ һыҙылып, ябай ғьна күҙ нурыбыҙ иңләй алмаған Яңьнан-Яңы ҡатламдарҙың йомоҡ серен ярып үтә, тьнғыһыҙ уй-лазер осо доньялағы иң ҡиммәттәрҙең ҡиммәтенә —

мәңгелекте бар ҡылыусы, Йәшәтеүсе һәм Йәшәртеүсе берҙән-бер көскә — Йәшәйештең *асылына* (сущности бытия) уҡталып оса. Аҡ нур үтеп кергән ҡатлам Һайын, шиғыр Һайын был *асылдың* көр һулышы йөрәккә яҡыная, шағирҙың да уҡыусыһына уҡтаған йөрәк ҡөҙрәте артабара. Был *асылдың* серен сисеү юлындағы илһамлы асыш-талпыныш тойғоһо беҙҙе "Ҡарҙар яуа" китабында ерҙең илаһи тупраҡ майы, "халыҡ күҙ нуры" булған, " Батшаларҙан да юғары тора" торған, күҙгә тура ҡарап әсе дөрөҫлөктө һыҙҙырта алған ғәҙелдәрҙән-ғәҙел хаҡиҡәт "ҡурай"ҙарына — шағирҙарға килтерә. Шуларға арнап яҙылған шиғыр-портреттарҙа ул күңелдәргә ныҡлы тоҫмалын Һалып, ялмап ала ла иғтибарҙы, баяғы фекер-лазер нуры һыҙылған төп юҫыҡҡа йүнәлдертеп, шиғри юлдан шиғри юлға, шиғырҙан-шиғырға һуңғы биткәсә, һуңғы нөктәгәсә оҙатабара. Шағир әгәр баштараҡ, бер төрлө үҙенә хас Шуҡлыҡ менән, тип әйтәйекме, мәшһүр композитор Заһир Исмәғилевкә мөрәжәғәт итеп:

Күптән инде һиңә тигән йырым
Әллә ҡайҙа йөрөй аҙашып.
Ҡалды әллә Сермән буйҙарында
Һинең моңдар менән Һаташып.
Һаташһындар!.. Бер ҙә Һаташмаған,
Аҙашмаған йыр ул йырмы ни?!
Ата-баба ҡанлы, халыҡ Йәнле
Ир бирмәгән ер ул ерме ни!
Дан ереңә, аҡҡан һыуҙарыңа,
Ҡурай моңло һәр бер туғайға.
Һин үҙең дә оҡшаш ерҙән үҙе
Шытып сығып үҫкән ҡурайға... —

тип өндәшә икән, беҙ, әлбиттә, уның шиғырҙарының "Сермән буйҙарында" һис тә "Һаташып" түгел, ә баяғы берҙән-бер ысын мәңгелектең мәғәнәһенә — *Асылға* ирешеү өсөн берҙән-бер дөрөҫ юл Һайлап, юҫыҡ юҫап йөрөүен дөрөҫ аңлайбыҙ, һәм шул шиғыр юлдарынан уҡ ул хаҡ-дөрөҫ юҫыҡтың табылыуын да һиҙенеп төшөнәбеҙ. Был туранан-тура атап-төбәп әйтелмәһә лә, зирәк уҡыусыбарыбер ошо үҙәк теманың "Шағирҙар" шәлкеменә лә Йән өрөп, үҙәк идея йүнәлешен төҫмөрләтеп килеүен, шиғырҙарҙың һәр береһен, ошо урында китапҡа ҡапыл көй боҙоусы ят бауырҙай килеп кергән ваҡсыл-шәхси мотивтарбатырмысынан арындыртып, субъективизм Һаҙлығына юлыҡтыртмайынса, ҡалҡыуыстай тотоп тороуын тоя. Дөрөҫ, был "ҡалҡыуыс"тың күтәреү ҡеүәһе ҡайбер осраҡта әлеге лә баяғы шул "батырмыс" ауырлығынан еңелә яҙып та ҡуя, трибун булырға тейеш шағир һүҙе шуның арҡаһында ваҡсыл рәнйеү, аулаҡта көҙгө ҡаршыһында ултырып алып, билдәһеҙ ҡалған кемгәлер ҡылансыҡ үпкә белдереп уйнау рәүешенә әүерелеп тә ҡуя, шиғырҙың бәҫен ебәрә. Әйтәйек, ерҙәге һәр бер ҡурайҙың үҙ тауышы-моңо барлығын, шуның һымаҡ, шағирҙарҙың да бер-береһен ҡабатлай, алмаштыра алмағанлығын башта уҡ тел төбө менән тойҙортоп үткәйнек инде, һәм

уҡыусы, айырым алғанда, Назар Нәжми тигән шағирҙың да ҡабатланмаҫ моң булып донъяла Йәшәүен, шиғриәт күгендә үҙ йондоҙо балҡыуын белә. Иҫке хаҡиҡәт был һәм ул ошо уҡ шәлкемдә Рәсүл ғамзатовҡа арнап яҙылған “Һәр таланттың ерҙә үҙ урыны бар, һәр телдә бар аҡыл, моң вә сәм” тигән аныҡ юлдарҙан уҡ китап авторын да ситләтеп үтмәй кеүек. *Ләкин шул уҡ* ваҡытта шағир “Һатылырға бөгөн әҙермен, Туҡай сыкҺа минән иртәгә” (“Ғабдулла Туҡай”) тип, Йәки ғүмере буйына әҙәбиәтебеҙҙең аҡҺаҡалы рәүешендә маҡталып йөрөтөлгән, халыҡ шағиры тигән хөрмәтле исемгә *лә* лайыҡ булған шағирыбыҙ Сәйфи Ҡудашҡа ҡарата “Тешләнмәгән ере, тешләнмәгән йылы, тешләнмәгән юлы юҡ кеүек” тип үҙенә күрә “оригиналь” хаҡиҡәт уйлап сығарырға көсәнә икән, бьны инде һис тә авторҙың ихлас, логик фекер йөрөтөүе һәм шуның аша объектив ысьнбарлыҡтың сағылышы итеп ҡабул ҡылыу мөмкин түгел. Ошо тенденция “Ваҡыт Һаҡлай әҙәп” (“Мостай Кәрим”) тигән шиғырҙа шаҡтай өҫтөнлөк алып, хатта авторҙан үҙенә бурыс итеп ҡуйылған портретлау объектьн да онотторта, дуҫьның портреты булаһы урьнда, шағирҙың үҙ ихтыярьнан тыш, автопортреты килә *лә* сыға... Хөрмәтле авторыбыҙҙың һуңғы йылдарҙағы ижадьнда, айырыуса поэмаларьндағы *лирик* сигенештәрҙә, күҙгә бәрелеп, сир көсөн алабарған был ваҡ “шәхсилек”, “Ҡарҙар яуа” йыйьнтығьның алтьн бағанаһьн тәшкил иткән “Дуҫ тураһьнда ун бер йыр” поэмаһьнда *ла лирик* геройҙың дан һәм орден алыу тураһьндағы фәлсәфә йөрөткән юлдарьна үҙенең еңелсә шауҡымьн Һалып ҡуя. *Ләкин* телгә алып үтелгән бәләкәс кәмселек һис кенә *лә* китаптың ҙур философик ағымьна тоҡарлыҡ яһамай, йылға үҙенең тәрән ағышьн дауам итә, автор Һаман әлеге бөйөк мәңгелек көсөнөң, *асылдың* серенә төшөндөртөү өсөн, уҡыусьның ҡульнан етәкләп бара. Петр I батша һәм Салауат батыр һәйкәлдәрен ҡапма-ҡаршы Йәнәшәләп һьнландырған “Ике һыбай” шиғырьнда был эҙләнеү шаҡтай тил бер заңланып, үҙенең дөйөм композицион аһәңе яғьнан алдағы беҙ көткән ҙур табыштың күҙгә күренер бөрөһө булып йомарланабашлай. Шағир зиһенен тарихи ике шәхестең халыҡ аңындағы һәм бронзалағы монументаль бөйөклөгө арбап биләй, Яңы асышҡа әйҙәй уны. Был икәүҙең:

Беренсеһен әбей батша
Ҡойоп ҡуйған — ҙур данлаған.
Икенсеһен, тере саҡта,
Шул уҡ әбей бығаулаған.
Беренсеһе Йәйгән ҡанат,
Баҡыр һыбай булғас, ҡабат
Бөйөк шағир йырҙарьнда.
Икенсеһе килгән Йәшәп
ТУған халыҡ моңдарьнда.
Быуаттарҙың төпкөлөнән,
Халыҡтың моң-күңеленән
Ҡалҡып сығып, балҡый бьнда.

Алдында осор юлдары,
Батшаларҙан да юғары
Тора Иҙел буйҙарында...

Алдыбыҙҙа үҙенең арҙаҡлыһын, Йән әсеһен быуаттарҙың рәхимһеҙ елдәре аша үҙенең именлек фатихаһы менән һыбайлатып юлға сығарыр ике көстөң, ике титандың барлығы беленде бермә-бер — бөрө йомарланды. Әммә киләсәк хаҡына атҡа атландырылған был һыбайҙарҙың ҡайһыныһы киләсәклерәк икән һуң? Ҡайһы титан үҙ һыбайына, таштай ҡатып баҫып тормалы бейек постамент ҡына түгел, ә быуат-быуат һәм быуын-быуын кешеләр күңеленән ҡанат киреп елмәлекле түтә юлдарын да түшәп, киң офоҡ ҡапҡаларын асып ҡалдырған? Бәндәләрҙең фани донъя хакимдары — тере батшалар үҙҙәре заңлы фатихабиреп баҡыр атҡа атландырған, *баҡ*ыр көптә мәңгеләштерелгән ошо Петр I кеүек “ Батшаларҙан да юғары” ҡалҡыныуҙың мәғәнәһе, һуңғы *асылы* нимәлә һуң?.. — Шағир бына ни хаҡта өҙәләнә. Тынғыһыҙ йырсы йөрәгенең иң түренә инеп йомолған бөрө, асылыу сәғәттәрен кисереп, Йән ярғыс елдәр һорай. Ҡай саҡ шағирға был бөрө елдәре мәңге иҫмәҫ, япраҡ ярылмаҫ, яҙҙы көтмәйенсә үк зәһәр ҡыш биләп алыр төҫлө тойола — икенсе бер шиғырынан һарыла был һағышы:

Тып-тын ғына ҡарҙар яуа,
Ел иҫмәйсә, сыҡмай буран.
Аяғөҫтө шыр-яланғас
Йоҡлай ағас, йоҡлай урман.
О, миндә лә ҡарҙар яуа,
Яуа ҡарҙар — йылдар ҡары.
Ғүмер тигән урманымда
Ҡойола ағас япраҡтары.
Асылмайса ҡалды миндә
Күпме сәскәм бөрөләре.
Уянманы хистәремдең
Тереләрҙән тереләре.
Күп йырҙарым — миндә шытмай
Ҡалған орлоҡ-бөртөк кеүек.
Миндә моңдар ояһынан
Осалмаған бөркөт кеүек.
Донъямдың тар ситлегендә
Остоң бары, күңелем ҡошо.
Шундай булып тыуҙым микән,
Тормош микән шулай ҡушты? —

ти ҙә шағир, үҙенең бындай хәлгә дусар ҡалыуына үҙе лә аптырап:

Ниндәй хәл был? О көндән-көн
Ҡайғы баҫа мине.

Тиҫкәре яҡтан иҫәме
Әллә заман еле? —

тигән һорау ҡуя икенсе бер урында. Ҡай саҡ Уға хатта тыуған ер ҙә үҙенең Йәберһенгән күңел офоғо кеүек үк тарайып ҡалған, “һайрар ҡоштар күптән” уны ташлап киткән, фәҡәт “моңһоҙ ҡоштар менән алтын көҙ” генә тороп ҡалған һымаҡ күренә.

Моңһоҙ ҡоштар! Һеҙҙең менән бергә
Мин дә ҡалам — китер ерем юҡ.
Минең дә бар осор ҡанаттарым,
Ләкин ташлап китер ерем юҡ.
Булмаһын да! Ә бит ер ни күрһә,
Беҙгә яҙған шуны күрергә.
Беҙгә яҙған ошо ерҙә тыуып,
Ошо ерҙә Йәшәп үлергә, —

тип йөрәк йыртып Хоҙайғамы, халҡынамы, әллә үҙенәме өндәшергә мәжбүр шағир. Ул эсендә нимә бар — Шуны һөйләй, йөрәген һыҙлатҡан хистрҙе зирәк уҡыусыһы менән ихлас уртаҡлаша. Һәм уҡыусыһы уны аңлай. Кем белә, үкенескә ҡаршы, ҡай саҡ китаптарҙан-китаптарға күсеп ҡабатлана килгән Яңғырауыҡ риторикаға, ҡыҫыр рифма уйнатыуға һәм сәйәси ҡылансыҡланыуға күнеге берәк киткән ҡайберәүҙәребеҙ, бәлки, шағирҙың әле килтерелгән йөрәк Һағышлы юлдарынан “төшөнкөлөк билдәләре”, өйрәнелгән, Йәтешләнеп, шымарып киткән “дөйөм ҡалып”тан сығыу, үҙенә күрә бер бәйһеҙлек ғәләмәте лә төҫмөрләп ҡуйыуҙары, шул рәүешле, үҙҙәренең тар күңел тәҙрәһен донъяға уйып ҡуйырға тип Һауалан хөкөм йөрөтөүҙәре лә ихтимал. Ләкин ундай осраҡта уларҙың үҙҙәрен генә шағирға ҡарата “бәйһеҙлектә” ғәйепләргә ҡала, сөнки үҙен бәйле тойоп яҙған шағир ихлас буламы һуң?! Был урында немецтың бөйөк аҡыл эйәһе, социалистик Германияның күренекле дәүләт эшмәкәре булған коммунист шағир Иоганнес Бехер һүҙҙәре иҫкә төшә. “Үҙенән-үҙе аңлашыла, — тине ул “Мөхәббәтем минең, шиғриәт” тигән китабында, — сәнғәттең бөйөк әҫәрҙәре ирекле рәүештә ижад ителгән, — Данте һәм Кальдерон сиркәү менән теологияның доктринаһына буйһонмағандар, ә ул доктринаға риза булғандар, һәм ошо ризалыҡта уларҙың рәссамлыҡ ирке кәүҙәләнгән. Рафаэль һәм Микельанджело үҙҙәренең заказ биреүселәре өсөн, гәрсә принципиаль характерҙа булмаған ҡайбер айырмалылыҡтар Йәшәп килһә лә, уларҙың ҡараштарын уртаҡлашып, ирекле рәүештә ижад иткәндәр. Ошоноң кеүек үк, беҙҙең рәссамлыҡ иркебеҙ ҙә шунан ғибәрәт: беҙ үҙебеҙ хеҙмәт иткән принцип менән риза; икенсе төрлө әйткәндә, беҙҙең рәссамлыҡ иркебеҙ шунан ғибәрәт: *беҙ үҙебеҙ менән риза* һәм үҙебеҙгә хеҙмәт итәбеҙ. Беҙ үҙебеҙ менән ризалыҡта, ләкин субъективсылыҡ ыңғайына түгел, — беҙҙең ризалыҡ — *субъект менән объекттың берҙәйлеге* ул. Шулай итеп, Гете әйтмешләй, беҙ “Хоҙай, донъя һәм тәбиғәт” менән берҙәм һәм үҙебеҙҙе “бөтөн” менән бер

бөтөн итеп тоябыҙ". Назар Нәжми шиғриәтенә лә, дөйөм алғанда, бына ошо "бер бөтөн"лөк, икенсе һүҙ менән әйткәндә, Партиялылыҡ тойғоһо хас, минеңсә. Ләкин ул үҙенең Партиялы шиғриәтен, лирик шағир булараҡ, бүтәндәрҙекенә оҡшамағанырaҡ, шөйлә нескәрәк һәм нәзәкәтлерәк үҙ ҡурайы менән раҫлай. Ысын затлы ҡурай моңон яндан көйәҫләп иҫкән елдәр түгел, ә көпшәнең утлы үҙәген буйлатып өргән тыуған ерҙең утлы һулышы үҙе үҙәкте өҙгөс итеп тарта. Тыуған еренең хаҡ моңон һыҙҙырған шағир үҙенең ижады менән һәр саҡ тәбиғи ҙә, сәйәси ҙә булып ҡала: Уға ҡайһы Партияла тороуын, кешелектең ҡайһы идеалдары өсөн янып, ҡайһы баррикада артында Йән атыуын күкрәк һуғып, тамаҡ ярып әйтеүҙең кәрәге лә ҡалмай, ул үҙенән-үҙе аңлашыла. Сөнки тыуған ер, халыҡ, Партия төшөнсәләре бөгөн бер-береһенән айырылғыһыҙ ул Намыҫы теүәл кешегә, шуларҙың өсөһө бергә Йәрәшеп килгәндә генә беҙҙең совет тормошоноң һоҡланғыс гармонияһы барлыҡҡа килә.

"Ҡарҙар яуа" китабының авторы, ленинизм идеалдарын ҡәләм осо менән генә түгел, ә фашизм үләтенә ҡаршы тиңһеҙ алышта штык менән яҡлаған коммунист шағир, әлбиттә, ниндәй генә Һағышлы моңдарға бирелеп киткәндә лә ошо тәрән хаҡиҡәттән сығып эш итә:

Ленин!
Исеме лә байраҡтарға байраҡ,
Ҡаныбыҙҙа уның шиғары.
Ленин ғүмере үрә баҫтырҙы бит
Бар донъяны, бөтә Ер шарын.
Данлаһам да, "һөйәм" тиһәм дә мин —
Кәрәк микән уның бөтәһе?
Ҡояш һәр саҡ Ҡояш булып ҡала —
Ленинды юҡ Ленин итәһе.

2

Ай нурынан ҡойолған аҡ ҡурайҙы күҙ алдына килтерегеҙ. Ғалимдарҙың ғаләмдәрҙе барлау өсөн ҡара йыһан төпкөлөнә һуҙған лазер нурҙары ла шул аҡ ҡурайҙы хәтерләтә түгелме? Әҙәм күңелдәренең серле төпкөлдәренә үҙенең тәьҫирен Һала торған шиғриәт тигән "фән"дең дә үҙ лазер-ҡурайы бар. Уны Назар Нәжми бер үк ваҡытта үҙенең һәм уҡыусыһының да йөрәк тәрәнлеген үлсәп ҡарау өсөн ҡуллана. Шағирҙың моң ағылышы булып һыҙылып киткән лазер осо, шиғри пласт-ҡатламдарҙың үҙәгенән һүреп үтә-үтә, китаптың тәүге биттәренән үк төҫмөрләнгән асышҡа — Йәшәйештең мәғәнәһен билдәләүсе бөйөк көстөң, мәңгелектең *асылына* табан уҡталып хәрәкәт итә, Уға Һаман яҡынайғандан-яҡынайып, шағирҙың зирәк күңел күҙен бөйөк серҙең сиселеш төйөнө, бөрөһө, булыр тарафҡа тарта. Үҙ ғүмерендә ете илдәр, ете ер-һыуҙар үтеп, ете төҫлө ялтырауҙарға күнегеп бөткән мосафир-

шағир, сабыйҙай хайран ҡалып, үҙенең тыуған төйәгенең баҫыу ҡапҡаһы алдындабаҫып тора. Ят яҡтарҙың Нараси сафлыҡтан мәхрүм кершән матурлыҡтары шағирҙың Йәшле күҙҙәре баҡҡан изге ябайлыҡ алдында Йәнһеҙ осҡондай кинәт һүнеп юғалыу өсөн генә ҡабатлана:

Тыуған яғым! Ярай бирелмәгән
Һиңә шундай ялтыр матурлыҡ.
Бәлки, һинән бер ни ҡалмаҫ ине
Йөрәгемә кереп ятырлыҡ.
Күпме баҡма, һиндә шул тиклем сер,
Асһам, асмаһам да — минеке.
Ҡайҙа барма, аҙым Һайын миңә:
"Мин һинеке, — тиһең, — һинеке".

Баҫыу ҡапҡаһы артында сылтыр-сылтыр егерме бер тылсымлы шишмә йыр көйләй, шифалы һыуынан ауыҙ итеп, арбау арбаһына ултырып китеүҙе юрай. Сеү, мосафир-шағир ҡулдары ҡапҡаны асты: әйҙә, беҙ ҙә уның эҙенән үк йырлы шишмәләр иленә инәйек.

"Ҡарҙар яуа" китабының гәүһәре булып балҡыған был атау — "Дуҫ тураһында ун бер йыр" поэмаһы. Йырҙарҙың һәр береһе — моңло шағир тарафынан серле шишмә ярында уйланып ултырып яҙылған бер мәҙхиә. Йырҙарҙың һәр береһендә туған халыҡ моңо, тыуған ер моңо. Беҙгә уларҙың серле телен, икмәк телгәндәгеләй йөрәккә ҡуйып, аса белергә генә кәрәк.

"Шишмә телен кем белә?" — тип
Һораным мин кешеләрҙән.
— Белһә белер Ғилуан ғына,
Ул, — тинеләр, — һүҙгә мәргән.
— Ниңә Ғилуан? Ник һеҙ түгел?
— Беҙ әле Йәш! Ул оло бит.
— Бар унан да олораҡтар...
— Ләкин Ғилуан ер улы бит.

Бына кем сисә белә икән ул халыҡ моңоноң, ер моңоноң ысын сихриәтле телен — *ер улы!* Ундай бәрәкәтле тылсым асҡысы, тимәк, һәр кемгә лә тәтемәгән. Кем һуң ул "ер улы"? Ниндәй генә арҙаҡлылар ҡулына бирелә һуң, әгәр бирелә икән, ниңә аралап-Һайлап ҡына — тәү ҡарамаҡҡа кешеләрҙең һәр береһе быға лайыҡ табаһа?

— Беҙ һуң бына, бөтәбеҙ ҙә,
Ер улдары түгелме ни?
— Ә, һеҙҙеңсә, ерҙең улы
Булыуы бик еңелме ни?
Яҙҙан алып көҙгә тиклем
Ул бит ергә, һыуға күнгән.

Ултырғаны, ятҡаны ла
Ҡара тупраҡ, Йәшел үлән.
Баш өҫтөндә, түшәм түгел,
Ҡояшлы Йә болотло күк.
Әйтерһең, ул ергә үҫкән
Үлән кеүек, имән кеүек.

Тик беҙҙең теләгебеҙҙе әле был ғына мөрәхәтһендермәй. “Яҙҙан алып, көҙгә тиклем... ултырғаны, ятҡаны ла ҡара тупраҡ, Йәшел үлән” генә булған, шул уҡ ваҡытта ҡара тупраҡтың, Йәшел үләндең ҡарабашлы ҡортона, ҡороҡҡосона әүерелгән әҙәмдәр ҙә юҡ түгел был донъяла. Тәбиғәткә физик яҡынлыҡ ҡына әле “ер улы” тип аталырға хоҡуҡ бирәме?.

Был юлы инде күҙҙәребеҙ поэмалағы сыңрау лирик геройға — Шағирҙың үҙенә төбәлә; Ғилуандың ул ауылдашы, ҡорҙашы, балалыҡ дуҫы ла бит.

“Кем һуң ул, тип, һораһағыҙ,
Һинең дуҫың, һинең Ғилуан?”
Бик ябай ҙа түгелдер ул,
Уға барғас шиғри донъям.
Бирһен Илаһ көс һәм илһам,
Көтөүсе дуҫ — шиғри донъям.

Бьна кем икән дәһә беҙ аптырап баш ватҡан Ғилуан: ул, көтөүсе, шағирҙың шиғри донъяһьна әүерелгән Йән Йәки шағирҙың шиғри донъяһы үҙе — ул, көтөүсе образьн алып, килеп баҫкан алдыбыҙға. Ни тиһәк тә, һығымта бер: был урьнда шағирҙың ҡанһырау йөрәге, башҡорт еренең тирбәлеп үҫеп ултырған таҡыя баш ҡурайы кеүек, бөтә тамырҙары менән тыуған тупраҡҡа ерегә, уның гәлсәр шишмәле һәм егерме бер ауазлы йырьнан илаһи көс ала үҙенә. Поэмала лирик герой — Шағир Йәнәшәһендә — Ғилуан, ә Ғилуан үҙе — Шағирҙың шиғри шәүләһе, ул яньнда шағир булған өсөн генә һьнланып Йәшәй, икеһе Йәнәшә баҫып, бергә тьн алып, бер-береһен тултырышып, үҫтереп һәм раҫлап килә. Был икәүҙең кендектәре берешкән, ә кендек төбө — әсәйҙәрҙең әсәһе булған тыуған тупраҡта.

Тыуған тупраҡтың яҡьнлығы, кендек төбө икәнлеге баштан-аяҡ контрастарға ҡоролған беренсе йырҙан уҡ (“Әсә”) уҡыусы йөрәген арбап ала; бьнда, бер-береһенә ҡапма-ҡаршы ҡуйып бирелгән ике бала яҙмышьнан тыш (берәүҙәр тау башьнда ат-ат уйнай, ә Ғилуан үлгән әсәһе яньнда илай; Ғилуан әсәһеҙ ҡала, ә уның дуҫы өйгә әсәһе менән ҡайта), мәңгелек һәм ваҡытлылыҡ төшөнсәләренең дә тел төбөндә Йәнәшә ҡуйылып һүрәтләнешебеҙҙең алда үҙе төп контраст тыуҙырып, үҙебеҙ имеп үҫкән әсәләрҙең дә, бөгөн тере булһалар ҙа, мәңгелек түгеллеге, ләкин барыбер ниндәйҙер мәңгелектең, “үлмәй торған” әсәнең барлығы, уның яҡьнда ғына, Йәнәшә генә икәнлеге тойғоһон уята. Шул уҡ контраст алымы, беҙҙең йөрәктәргә һыҙлатҡыс моң өҫтәп, икенсе йырҙа ла

("Ҡолон") дауамлана, был юлы ул, ябай ҡабатлау ғына булып ҡалмайынса, Йәнәшәлек үреме аша Яңы сифат үҫеше кисереп, донъяның барлыҡ балаларын — ауа-түнә үҙаллы тәпәй баҫыусы ғәзиз балаларын — күҙ алдына килтерә торған символик образ (ҡолон) дәрәжәһенә күтәрелә.

Бесән өҫтө... халыҡ менән
Сып-сыбар болон.
Кешнәй-кешнәй сабып йөрөй
Болонда ҡолон.
Кешнәүҙәре үҙәк өҙгөс —
Ниңә кешнәй ул?
Меҫкен, юғалтҡан әсәһен
Кешнәп эҙләй ул, —

ти икән әгәр автор, беҙ инде бында ҡолон йөрәкһеп эҙләп йөрөгән әсәйҙе лә символик образ итеп күрәбеҙ, үҙебеҙ ҙә эстән генә ҡолонға әүереләбеҙ. "Кешнәй-кешнәй китте сабып, болондан ҡолон" — ти шағир һәм ул ошолай алып тартҡан тылсымлы ҡурай осонан әҙәм балаһы ғүмерендәге өсөнсө "моң" — өсөнсө йыр ("Шөшлө. Итек. Кожан") күңелдәргә өҙөлөп-тамып төшә. Хәҙер инде ситкә сабып киткән ҡолон — Ғилуан — көҙгө ырашҡы менән ҡуша ялтлап өйгә ҡайтып төшкән, уның ҡулында ят яҡтарҙың ялтыр бүләге — бынамын тигән "тамыр һаплы шөшлө", ә өҫтөндә иҫ китмәле "кожан, аяғында — итек"... Был байлыҡтар ҡаршыһында Ғилуандың өйҙә ҡалған дуҫы (лирик герой) үҙенең хатта донъялабаш терәрлек ҙурҙан-ҙурбайлығы — әсәһе барын да онота, уның күҙҙәренә фәҡәт ситтән ҡайтҡан итектең контраст-киреһе — үҙенең аяғындағы шапшаҡ сабата ғына һөмәйеп күренә, ул хатта Ғилуан көнөнә төшөп бәхет эҙләп китә алмауы өсөн яҙмышҡа үпкә белдерергә лә әҙер...

Шаҡтар ҡатты бөтә халыҡ
Мин дә шаҡтар ҡаттым.
Иларҙай булып, көнләшеп,
Шул көн өйгә ҡайттым...

Ә дүртенсе йырҙа инда автор "яландар, юлдар гиҙеп йөрөгән, *баҫ*маған һуҡмағы, инмәгән ауылы ҡалмаған" Шул Ғилуан дуҫына һоҡлана, уның "урыҫтарҙа — урыҫ, мариҙарҙа — мари" булып әүерелешен ҡайһылыр бер Яңы, өҫтөн сифат итеп баҫым менән телгә алып үтә. Бында инде Ғилуаныбыҙ, ун туғыҙы тулып, буласаҡ "малай"ы хаҡында хыялланып, мари ҡыҙы Сәликәгә лә ғишыҡ уты менән янып күҙ ташлай, тик уны алып ҡайтырға тыуған нигеҙ — торор ере юҡ, шуға күрә ҡауышыуға ла өмөт юҡ. Хатта "Яратһа, ул, ҡыуыш та йорт!" тигән мәңгелек аҡыл да ярҙам итә алмай бында... Бөйөк Роберт бернстың "Финдлей"ын хәтерләткән анафоралы диалог менән яҙылған был көмөш ауазлы сыңрау бүлек (бишенсе йыр — "Мом штет? Молан?") үҙенең

Яңысыл формаһы, музыкаль Яңғырашы менән поэмала айырым урынды биләй.

Йыр дауам итә, "Йә башҡортса, Йә мариса" көйләргә өйрәнеп киткән Ғилуанды яҙмыш әлегә үҙ ҡарамағынан ташларға теләмәй — Яңынан-Яңы һынауҙар аша үткәрә, әйтерһең, ир булаһың килһә, донъяның бөтә әсе-сөсөһөн, тәмен татып үт, тип бойора. Асы дала елендә төп-тамырынан ҡупҡан ҡамғаҡтай оролоп-һуғылып, тәгәрләп йөрөгән етем яҙмышы егетебеҙҙе Йәнә лә Яңы көй көйләтергә Яңы мөхәббәт тупһаһынан килтереп индерә, был юлы инде ул тамам һушынан яҙа:

Йәшлек, Йәшлек! Маруся бер
Һикертте ҡашын.
Әйләндерҙе лә ҡуйҙы бит
Ғилуандың башын.
Донъя ал да гөл, ә юлдар
Сәскәле, таҡыр,
Хатта шөкәтһеҙ сусҡалар
Күренә матур.

Әммә көтөүсе Ғилуандың "малай" тураһындағы татлы хыялы был юлы ла бойомға ашмай: ул, хәҙер инде "Ғилуан-Иван", Марусяһына ҡауышыуының баллы айҙарында уҡ көтмәҫтән һуғыш сығып, фронтҡа китә, ғәрәсәттә ҡулын да, һөйөклө Марусяһын да юғалта. Ғилуандың үҙе тураһында ла үлем хәбәре тарала. Тик ауыл ауыллығын итә шул: ирҙәр китеп бөтөп, Еңеү хаҡына һыйырҙарын да, ҡатындарын да Һабанға еккән тыуған яҡ Һаман да Ғилуан улын онотмай, көтә уны. "Ғилуан үлергә ятҡанда ҡысҡырған, имеш", тигән шомло хәбәргә лә ҡарамай көтә өмөтләнеп. Һәм бына шул өмөт-теләктәр ҡабул булып, "һуғыш бөткәс ҡайтып төштө бер ҡулһыҙ Ғилуан" (алтынсы, етенсе, һигеҙенсе йырҙар). Ул тура тыуған төйәккә ҡайтты ҡайтыуын, әммә Һалдаттың башы ҡайҙа ҡарағаны билдәһеҙ әле. Шуға күрә ауылдаштар ҙа һорауҙы уға ҡа бырғаһы менән ҡуя: "Ауылға төҫ бирмәҫкәме иҫәбең Һаман?". Ғилуан да инде элекке Ғилуан түгел: уның "итек, кожан"дарында хәҙер тирә-яҡ ауылдарҙың, ер-һыуҙарҙың балсыҡ-туҙандары ғына түгел, ә бөтә Европа илдәренең юл саңы, янғын һөрөмдәре. Уның ҡолаҡтары ла инде күп көйҙәрҙе айырырға өйрәнгән... Бына ни өсөн Һалдат та, уйланып-нитеп тормай, ҡырт өҙөп яуап бирә ауылдаштарына: "Һеҙ минең икенсе ҡулым — ауылда ҡалам".

"Мәликә" бүлегендә (туғыҙынсы йыр) утты-һыуҙы үтеп сыҡҡан, өтәҫләнгән ҡырыҫ Ғилуандың аңғармаҫтан "тар һуҡмаҡта Мәликәгә" тап булыуы, донъяға Яңы тыуғандай тетрәп ҡалыуы әҫәрҙең төп идеяһын асыҡлаусы хәл иткес ҙур кисереш булып, уҡыусы аңына ла үтеп инә, тәбиғәттең үҙе тарафынан алдан уҡ билдәләп-тәғәйенләп ҡуйылған ошо тәбиғи-изге мәлдең күкрәп-тетрәп тыуыуы, ниһайәт, көтөп алынып, поэманың тәүге өлөшөндә кешнәй-кешнәй сабып сығып киткән символик ҡолондоң кире әйләнеп ҡайтыуы рәүешендә ҡабул ҡылына.

“Ниңә? Ниңә?” Яҙмыштарҙан
Уҙмыш юҡҡа шулмы әллә?
Ҡара күҙкәй, ҡара сәскәй,
Яҙмышым шул һинме әллә? —

тип, Ғилуан менән ҡуша йөрәкһеп-тетрәп, тыуған ер, күк, эскән һыуҙар, ғүмерҙәштәреңә тоғро ҡалыуыңды изгеләштереп, шағир иҫкә алып киткән мөхәббәт Аллаһы (Илаһ) үҙебеҙгә ял бара-ҡабатлай төҫлө. Ошо урьнда, беҙҙе тулҡьнландырып, борон-борондарҙан уҡ кешене кеше иткән оло хис — илаһи ябайлыҡ, тәбиғилек, Кеше менән Ерҙең бөйөк туғанлыҡ хисе ярала күңелдә.

Донъя әҙәбиәтенең иң яҡшы традицияларьн да (Р. Бернс), башҡорт халыҡ ижады үрнәктәрен дә үҙенә буйтлап һеңдерә алған ҡыҫҡа монологтарҙа (уньнсы йыр — “Һөйгәнең менән ҡауыш”) Мәликә менән Ғилуан кисерештәребеҙҙәге был тәрән хис ташҡьньн Уғата ҡеүәтләндереп, үҙеңде үҙең — тыуған тәбиғәт балаһы, ер улы итеп тойоу хәленә еткерә — ошо түгелме ни беҙҙең Йәшәйештең ас*ылы?!* Эйе, шул үҙе! Ә бьны иһә шағирҙың ҙур уңышы, башҡорт шиғриәтенең Яңы проблематик табышы, тип билдәләмәй булмайҙыр. Бөгөндән үк күҙ алдыбыҙҙа кешелек тормошондағы үҙәк проблемаларҙың береһенә әүерелгән, ә яҡьн киләсәктә шиғриәттең дә проблемаһьна әйләнәсәк был мотив — Ер менән Кешенең, Тәбиғәт менән Кеше аҡыльның һәм хистәренең бөйөк туғанлыҡ мотивы — беҙҙең беребеҙҙе лә битараф позицияла ҡалдырмай, ә тиҙҙән һәр беребеҙҙе үҙенең ҡыйыу яҡлаусылары, яугирҙәре лә итәсәк. Сөнки бьның ҡотолғоһоҙ заруриятьн егерменсе быуатыбыҙҙың ҡорос аҙымдары үҙе алға һөрә. Ҡайһы бер йор һүҙле әҙәмдәр әйтмешләй, беҙҙең замандағы балалары “әсәнән үк етенсе класты бөтөп тыуған”, “уҡымышлы среда”ла тере үләндең бесәндән айырмаһьн күрмәгән, бәғере таштай ҡорғаҡһып ҡаткан бәндәләр ҙә юҡ түгел бит әле.

Бер ваҡыт мин һирәк инеп йөрөй торған күршемдең телевизор ҡарап ултырған мәленә тап килдем. Ҙур заводта ул технолог булып эшләй, коммунистик хеҙмәт ударнигы, ял көндәрендә бисәһе менән ҡултыҡлашып театрҙарға йөрөй, ә бүлмәһендә, иҙәндән түшәмгәсә, кәштәләре тулы китап. Шау ебәк кенә пижама кейеп тамаша ҡылған күршем ҡатарьнда зәңгәр экранғабаҡтым: данлыҡлы бер ҡурсаулыҡтың иҫ киткес матур Йәнлектәрен күрһәтәләр ине. Уҡымышлы замандашымдың экранғабармаҡ төртөп әйткәне мине шаҡ ҡатырҙы, тетрәндерҙе:

— Ә быларҙы ашайҙармы икән?

Әммә ул һис тә шаяртҡанға оҡшамай, хәтәр тьныс, етди ине. Был әҙәм, күрәһең, кейек-ҡоштар донъяһының хозурлығьн, матурлығьн да табала ҡурып килтерелгән бефштекс Йәки отбивной котлет рәүешендә генә танып белә, мейеһе лә һаман, моғайьн: “Хәҙер физиктармы, әллә лириктармы кәрәк?” — кеүек етлекмәгән фекерҙәр тирәһендә сУралып интегә. Заманьның фантастик әҫәрҙәренән шомон Һалған тимер Йәнле, бәғерһеҙ робот-кешеләр (Френкинштейн) образы, бәлки, ошо ерлектә

яралалыр? Бындай әҙәм йоратына юл ҡуйһаң, усында тот Йәнеңде: бомбанан һаҡлағыс бетон баҙға үҙе төшөп ултырып алһа, бөтә Ер шарын шартлатыу өсөн кнопкаҒабаҫҡанында ла “аһ” итмәҫ...

Ошо көндә америка ҡитғаһының бөйөк күлдәрен промышленность ҡалдыҡтары ағыҙып үлем төйәгенә, тере шишмәләрен ағыуға әйләндереп, миллион йылдар Йәшәп килгән тәбиғәткә ҡәбер ҡаҙығы ҡағыусылар ҙа капитализм һаҙлығында шаҡшылығы хәттин ашҡан шундай уҡ “уҡымышлы” бәндәләр түгелме ни? Кешелек донъяһы был ауыр шауҡымдарҙы, һуңла быраҡ булһа ла, һиҫкәнеп ҡабул итергә мәжбүр хәҙер. *Байҡал* күленең фәҡәт саф *байҡал* килеш кенә *байҡал* була алыры инде һәр бер мәктәп уҡыусыһына мәғлүм. Ә кеше күңеленә һалынған ағыуҙарҙы кем үлсәп ҡарар икән?.. Йәнле тәбиғәткә, ергә ҡарата үҙеңде уның бер туғаны итеп түгел, ә һалҡын ҡанлы “потре битель”, хужа, хатта “Хоҙай” урынына ҡуйыу, күҙгә күренмәҫ вирустай, шаҡтай күп кешеләр ҡанына һеңешеп бара, тиһәк тә хата булмаҫ. Еребеҙҙең *байҡал* күлен һәләкәттән һаҡлап ҡалдыҡ, инде кешеләребеҙ күңелендәге көмөш *байҡалдарҙың* сафлығын арсалау өсөн тауыш ҡуптарырға ваҡыт. Күктәге йондоҙҙарҙың һалҡын ялтырауына хушһынып, аяҡ аҫтыбыҙҙа ҡалып онотолған, бөгөлөп һынырға әҙер торған сәскәгә, ҡорос дағаа аҫтына ҡанаты ҡыҫылған килеш өҙөлөп һайраған һадуғасҡа ҡарайыҡсы әйләнеп. Юрий Гагарин да ете ҡат күктең бикле ҡапҡаһын ер улы булып ҡайтыу хаҡына асты бит. Физиктар һәм лириктар тураһындағы зәғиф бәхәстең сығыу сәбәптәрен һәм нәтижәләрен яҙыусыларға ғына түгел, ә социологтарға, философтарға ла фекерләп ҡарарға кәрәктер. Бына шундай уйҙар килә “Ҡарҙар яуа”ны уҡып сыҡҡас. Шуныһы менән ул мөһим, ҡәҙерле, заманлыҡлы ла.

Поэманың аҙағында Ғилуан менән Мәликәнең, лирик герой шағирҙың “Мөхәббәт” һәм “Һағыш” шишмәләре урғылған ергә йөрәктәрен ҡуш килтереп осрашыуҙарында ла ҙур ғилләр бар.

Беҙ бында поэмалағы сюжет тотҡаһы өс геройҙың ғына түгел, ә ундай ябай “герой”лыҡтан уҙып, бөтә халыҡ булмышын иңдәүсе символдарҙың осрашыуын күрәбеҙ. Тыуған ерҙең мәңгелеген билдәләүсе мәңге талмаҫ йырлы шишмәгә — Ер тәбиғәтенең символына әүерелгән шишмәгә — халыҡтың тынмаҫ Йәне-Тәне (Ғилуан менән Мәликә), Рухы (лирик герой шағир) килеп тоташа, шулар бөтәһе берегеп кенә бөтәһенең мәңгелеген, үлемһеҙлеген тәшкил итә. Тыуған ергә һәм туған халыҡҡа физик яҡынлыҡта ғына түгел, ә бөтә Йәнең-тәнең менән, рухың менән ҡуша тоташыуҙан тыуған туғанлыҡта икән ул тылсым асҡысы. Ошо бөйөк туғанлыҡтың баш шишмә-сығанаҡтары бергә ҡушылып аҡҡанда ғына ерҙә Йәшәүеңдән барҙыр мәғәнә, беҙҙең ҡулдарҙалыр бөйөк Мәңгелектең асҡысы, тип әйтмәкселер шағирыбыҙ. Беҙ эҙләгән мәңгелекте тыуҙырғыс көстөң ас*ылы* тап бына ошо берҙән-бер асҡыс менән асыла ла инде.

Мәңгелек һәм мәл. Был төшөнсәләр икеһе лә бер-береһенә ҡапма-ҡаршы кеүек, ләкин шул уҡ ваҡытта улар бер-береһен тыуҙырыусы ла. Мәңгелектең үҫеш емеше булып меңәр йылдар дауам итеп килгән цивилизация — көндәрҙән бер көндө Хиросима һәм Нагасаки мәлдәрен дә

кисереп алды. “Аврора»ның мәле иһә, уҡып һәм ишетеп белеүебеҙсә, быуындарға тормош саҡҡыһы һуҙып, быуаттар һәм эпохалар аша дауам итәсәк. Шағир йөрәгенең тибеш мәлендә тыуған художество образы ла, идея ла, үҙ ҡосағына мәлдәрҙең һәм мәңгелектең синтезын йомған мең мегатонналыҡ Йәҙрә яҫау һымаҡ булып, донъяға күкрәп сыға. Уның “Йәҙрә энергияһы” Хиросима һәм Нагасаки таштарына мәңгелек тереклек килтереү, гөл үҫтереү өсөн хеҙмәт итә. Күренекле шағирыбыҙҙың “Дуҫ тураһында ун бер йыр” поэмаһын, китапҡа ингән башҡа шиғырҙарын мин ошондай “тормош Йәҙрәһе” менән тынҡыслы тылсымлы “яҫау”ға оҡшатыр инем. Поэма үҙенең ваҡыт һынауына бирешмәҫ киң ҡоласы, заманлыҡлы идеяһы, шул идеяны йөкмәп илткән шаҡтай ҡатмарлы Яңы формаһы менән дә Назар Нәжми ижадында айырым урын тота.

Билдәле булыуынса, Йәҙрәле яҫауҙың шартлау ҡеүәтен, ул ни ҡәҙәр генә төпкөл-тәрәнлектә ятмаһын, кеше уйлап сығарған бик нәҙек-нәҙ берек при борҙар тоймалап, регистрациялап өлгөрә. Шуға ҡарап, Йәҙрә сыл быр реакцияһының көсө тураһында фекер йөрөтөлә. Ә шағирҙың “Йәҙрә яҫауы” Уғата ғәжәберәк, ҡөҙрәтлерәк. Шиғриәттең һүнмәҫ “сыл быр реакцияһы” китаптың ҡуш ҡатырғалары араһында ғына түгел, ә йөрәктән-йөрәккә күсеп дауам итә; был күренмәҫ “яҫау” ҡай саҡ миллиондарҙы хәрәкәткә килтерергә лә һәләтле. Бына шунда ята ла инде ысын художество әҫәренең көсө. “Дуҫ тураһында ун бер йыр”ҙа кешеләрҙә тыуған ергә, туған халыҡҡа ҡарата тәрән тоғролоҡ хистәре, шуның аша бөтөн совет Ватанына фиҙакәр бирелгәнлек, һөйөү, Патриотизм сифаттары тәрбиәләү Йәһәтенән башҡорт совет әҙәбиәте арсеналына индерелгән ышаныслы ҡорал ул. Әҙәбиәт белгестәренең иғтибарын ул оҙаҡ ваҡыттар буйы тартасаҡ үҙенә. “Ҡарҙар яуа” китабына Салауат Юлаев исемендәге республика бүләге бирелеү ҙә асыҡ һөйләй ошоно.

Дөрөҫ, тәү ҡарауға был поэма тарҡауыраҡ та кеүек, уның төҙөлөш структураһы ҡайберәүҙәргә аңлашылып та етмәҫкә мөмкин — бына ниңә беҙҙең әҙәби тәнҡиттең ваҡытлы матбуғат биттәренән үк бәғзе “ем”де эләктереп ала ла шаулата торған айырым маһирҙары ла, гәрсә был әҫәрҙең “Ағиҙел”дә баҫылып сығыуына ике йыл самаһы ваҡыт үтеп барҺа ла, уның хаҡында әле булһа төплө бер һүҙ әйтә алғандары юҡ. Ләкин “Дуҫ тураһындағы ун бер йыр”ҙағы “тарҡаулыҡ” — әҫәрҙең асыл елегүҙәген, төп идеяны Уғата нығыраҡ ҡалтайтыу өсөн авторҙаң үҙе тарафынан күрәләтә ҡулланылған сара ул: диалектикаға ярашлы килгән ошо “тарҡаулыҡ” — үҙе берҙәйлек, форма менән йөкмәткенең тап килешен тәьмин итеүсе, сәйер һымаҡ күренгән Яңы форма аша тәрән йөкмәтке алып килеүсе берҙәйлек. Был урында Йәнә лә Иоганнес Бехер һүҙҙәренә мөрәжәғәт итке килә. “Шулай ҙа була, — тине ул үҙенең баяғы китабында, — ысын Яңы үҙен формаль яҡтан һис нәмәһе менән дә иғтибарҙы Йәлеп итмәгән традицион формаларҙа кәүҙәләндерә, һәм шуның менән ул әҙәбиәттә йышылмаған уҡыусы өсөн нығыраҡ аңлайышлы, үтемле булып сыға.

Әммә шулай ҙа була: ысын Яңы ла үҙен эксперименталь формала кәүҙәләндерә, ул, беҙҙе формаль экстровагантлылығы менән Йәлеп итеп һәм кире ҡағыуға сәмләндереп, беҙҙең аша Яңы стиль һынап ҡарай кеүек.

Ошондай юлда ла беҙҙең Яңы менән осрашыу һәм танышыубулырға мөмкин”.

...Теге саҡта Йәнсурала шағирҙар йөрәген арбап алған нескә хисле ҡурайҙың беҙ һәр быуыньн тотоп-тотоп ҡраныҡ, әммә уның көсөнөң серенә һис төшөнә алманыҡ. Бьна ҡурайсы Ғәли дуҫыбыҙ бик ябай аңлатып бирҙе:

— Күрәһегеҙме, — тине ул, — был ҡурай, үргә үркегәне Һайьн, иң осонан таҡыя башьн аҫка ҡарай эйе берәк, тыуған ергә тартыла бире берәк үҫкән. Ошондай ҡурай моңло була...

Ижады менән Урал иңендә генә түгел, ә башҡа сит республикаларҙа ла таныҡлы булған Назар Нәжми шиғриәтен беҙ башҡорт еренең яҡты Һағышьн, йөрәк моңон ағылдырыусы үҙенә күрә бер ҡурайы итеп бәләбеҙ. Әлбиттә, халыҡтың “ҡурай”ҙары күп, уларҙың барыһы бергә ҡушылып Яңғырап, башҡа туғандаш милләттәр өсөн дә яҡьн, аңлайышлы уртаҡ моңдо тыуҙыра.

Шул моң менән башҡорт халҡы донъяны таныл белә, СССР тип аталған киң Ватаньн һөйә һәм шуның өсөн Ер менән Кешенең туғанлығьн, Ер менән Күктең туғанлығьн йөрәгенән урғылып сыҡкан шишмәләре йырьнда тоташтыра. Шул йырҙы үҙ йөрәгенән үткәреп, халҡьның бер моңло ҡурайы булған шағир бәхетле.

02.01.1972, сәғәт 12.20.

Эш самауырҙа шул!

Докладтарҙа әҙәбиәтебеҙҙең уҙған йылғы ҡаҙаныштары һоҡландырҭкыс балҡытып һүрәтләнә.

Эйе, элекке хәрби диңгеҙсе булараҡ әйтәм, башҡорт әҙәбиәтенең ҙур һыу һыйҙырышлы кара бы йыл дауамьндабайтаҡ милдәрҙе үткән. Ул Ватандың Йәшәү темпы менән барырға тырышҡан.

“Ҙур һыу һыйҙырышлы карап” тигәндән, беҙҙең оҫтаханалыҡ телендә “һыу” һүҙе бушаҡ ижад рәүешендә ҡулланылһа ла, моряктарҙа ул караптың ололоғон, ҙур йөк тейәргә һәләтлелеген аңлата.

Әҙәбиәтебеҙ кара бы ла йөктәренең еңел-елпе генә булмауьн күрһәтте. Уның тәрән трюмдарьнда күп тонналыҡ баҙыҡ йөк — байтаҡ ҡьна романдар, повестәр, хикәйәләр, поэма һәм шиғырҙар, сәхнә әҫәрҙәре бар. Был тонналарбаҫымы аҫтьнда беҙҙең карап ғәжәп олпат, һис бер ниндәй штормға, тулҡьндарға ла бирешмәҫтәй көр бара.

Ләкин бер һорау тыуа: күңелгә олпатлыҡ хисе Һалып ҡыуандырған тонналарҙың сифат яғы ниндәй һуң? Бөтә Ватан үҙ эшендә иң юғары сифат өсөн көрәшкән был ялҡьнлы осорҙа тоннажыбыҙ ошо юғары талаптарға яуап бирә аламы?

Карап тейәп илткән йөктө икегә бүлә моряктар: балласт һәм файҙалы йөк. Файҙалы йөктө тәғәйенләнгән портҡа еткереп бушатҡандандан һуң, карап кинәт балыҡты күшкәте күтәргәндәй ҡалҡьнып, үтә еңеләйеп ҡала. Әгәр ҡабат тейәп алырға файҙалы йөк

булмаһа, асыҡ диңгеҙҙә дауыл карапты түңкәреп һалмаһын өсөн, трюмдарға тонна-тонна ябай һыу тултырыла ла шул файҙаһыҙ балласт менән юлын дауамлай карап. Һәр карап өсөн файҙалы йөктөң — күберәк, *бал*ластың аҙыраҡ булыуы яҡшы.

Әммә ҡайһы бер капитандар файҙалы йөктән баш тартып, *бал*ласт тейәп алыусан. Сөнки файҙалы тигәнебеҙ Йә ҙур габаритлы — тейәүе мәшәҡәтле, Йә форма-конфигурацияһы ҡатмарлы — трюмдарҙы үҙгәртеп ҡороуҙы талап итә. Ошо мәшәҡәттәрҙән һырт тайҙырып, йылғыр капитан карап трюмын файҙаһыҙ һыу менән тултыра. Ә һыуға һин юл ғына ҡуй: энә күҙәүендәй генә ек асһаң да, иҙелдәй ағылып инә лә теләгән бер формаға майлаған ҡайыштай яраҡлашып, Йәпләшеп кенә ята...

Беҙҙең ғәзиз әҙәбиәт кара бы ла һуңғы ваҡытта үҙ бортынабалласты күберәк алабашланы түгелме?!.

Дөрөҫ аңлағыҙ мине: әҙәбиәтебеҙҙең олпатлығына тел тейҙерергә йыйынмайым. Ул олпатлыҡ күбеһенсә балласт иҫәбенән түгел, ә файҙалы йөк иҫәбенән артҡан. Быға беҙҙең байтаҡ ҡына әҫәрҙәребеҙҙең, республика порттарын үтеп, киң Союзға, хатта донъя акваторияһына сығыуы асыҡ шаһит. Әммә беҙгә шул уҡ ваҡытта, кара быбыҙҙың тышҡы мөһәбәтлеге менән үтә мауығып, трюмдарҙы онотоп ташларға ла ярамай. Ә унда файҙалы йөк урынын балласт баҫабашланы. "Ҡуян һурпаһының һурпаһының һурпаһының һурпаһы" рәүешендәге үҙлекһеҙ һәм төҫһөҙ әҫәрҙәр йышайҙы. Һуңғы йылдарҙа хатта күрәләтә халтураға юл асыу кеүек күңелһеҙ осраҡтар ҙа сальнды күҙгә. Етмәһә, үҙебеҙҙә шаҡы-шоҡо бөткәндәй, башҡа телдә әтмәләнгән һәм шул телдә юл яра алмаған ҡайбер йылғыр халтураның шундай уҡ йылғыр халтурасылар тарафынан тәржемә ителеү, әҙәбиәтебеҙгә еректерергә тырышып көсәнеү күренеше лә шаҡтай һиҙҙерте үҙен. Был бигерәк тә прозала төҫмөрләнде.

Халтураға иғтибар йүнәлтеп, ҡиммәтле ваҡытты әрәм итеү кәрәкмәйҙер ҙә, бәлки, сөнки көнләксө-халтурасынан башҡасаны талап итеп тә булмай — Шуның өсөн дә ул халтурасы. Бәлки, олпат әҙәбиәт кара бының трюмдарында ундай балластҡа лабарҙыр урын. Ләкин беҙҙе әлеге "ҡуян һурпаһының һурпаһының һурпаһын" әҙерләү алымы фәҡәт халтурасылар һөнәре генә булыуҙан уҙып, етди әҙиптәр ҡулына ла үнәр булып күсә барыуы, байтаҡтарыбыҙҙың ғәҙәти ижад нормаһына әүерелеү ҡурҡынысы борсолдора. Шуға күрә, иптәштәрҙең һүҙемде дөрөҫ аңлауына өмөтләнеп, докладсыбыҙ тарафынан маҡтап телгә алынған, ысынлап та һәләтле булған ҡәләмдәштәр ижадынан тәғәйен миҫал килтерәм. Ҡабатлап әйтәм, миҫалды мин аңлы рәүештә үҙебеҙҙең өмөтлө, һәләтле тип һаналған ҡәләмдәштәрҙән алдым.

Былтыр Рәшит Солтангәрәйевтең "Ҡояш балҡыр тәҙрәләр" һәм Әмир Гәрәйевтең "Ҡарағайлы яҙҙары" тигән әҫәрҙәре баҫылып сыҡты ("Ағиҙел" журналының 3-өнсө һәм 11-енсе һандарында). Әҙәбиәтебеҙ "түрә"легендә вазифалы урындарҙы биләгән, ижадтары буйынса икеһе ике төрлө автор тарафынан төрлө оҫталыҡ кимәлендә яҙылып, беренсеһе — хикәйә, ә икенсеһе ун өс бүлектән, эпилогтан торған күләмле повесть булыуға ла ҡарамаҫтан, нимәһе менәндер уларҙың беҙгә бик таныш, ике

тамсы һыуҙай оҡшаш икәнлектәребәрелде күҙгә. Ысьнлап та, альнған тема һәм проблемаһы менән дә, хатта төп ваҡиғалары, геройҙарьның характеры яғьнан да игеҙәк ине былар. Схемаға Һалғанда, икеһендә лә ҡалала Йәшәүсе улан тарафьнан ауылда ҡалған әсәйҙе Йә атайҙы ҡалаға еректереү ьнтылышы, һөҙөмтәлә әсәй Йәки атай күңелендәге бьның кире Һьнылышы тасуирлана. Әҫәрҙәрҙең икеһе лә уҡыла, ҡәҙимге әҙәби ҡанундарға таяныып яҙылған кеүек, ләкин күңелде байытмай, Яңыртмай. Йомшаҡ ҡьна итеп әйткәндә, ризаһыҙлыҡ уята. Эш нимәлә һуң?

“Эш самауырҙа!” — тип ҡысҡырып ебәрәһе килә ошо урьнда һәм талымсан күңел, үҙенән-үҙе, мәшһүр Сәғит Агишыбыҙҙың 1939 йылда уҡ яҙылған һәм классикаға әйләнгән хикәйәһенә — “Эш самауырҙа түгел”гә барып төртөлә. Айырма шунда ғьна: классигыбыҙ мәсьәләне өс-дүрт герой ярҙамьнда бәрәкәтле хәл ҡылһа, һуңғы ике әҫәр иһә тиҫтәләгән персонаждар менән тьнҡыслап тултырылған, ҙур ҡағыҙ майҙаньн алған, шулай ҙа һүрән ҡалған. Һүрән мейестә һүрән бешкән икмәктәй.

Моғайьн, Сәғит Агишҡа тиклем дә был мәсьәләне күп әҙиптәр ҡуҙғатҡандыр, уңышлы яҡтыртҡандыр. Бьнан һуң да ҡуҙғатырҙар һәм яҡтыртырҙар. Тик барлыҡ фәһем шунда: Сәғит Агиш мәсьәләлә үҙ “самауыр”ьн тапҡан. Уҡыусьның ауыҙьнда Сәғит Агиш самауырьның хуш еҫле сәй тәме ҡалған. Утыҙ биш йыл буйьнса ул онотолмаған. Ләкин беҙҙең хөрмәтле ике ҡәләмдәш кенә шуны онотоп ебәргән дә табьнды үҙ самауырҙарьн табып ҡуймай отолған. Сөнки иҫке теманы ҡабатлау Яңы асыш талап итә. Копировка ҡулланыу яҙыусыға түгел, ә яҙыу машинкаһьна ғьна килешә.

Бьндай төҫһөҙ һәм тоҙһоҙ әҫәрҙәрҙең бер-бер артлы тыуа тороуьның аяныс сәбәбе — беҙҙең, Йәғни ҡайбер авторҙарҙың, ҙур донъяға ысьн граждан күҙе менән баға белмәүендәлер, моғайьн. Кухня ыҙғышьнан оло халыҡ-ара проблема сығарырға маташҡан бисә-сәсәләй, ваҡ “конфликт”иктар араһьнда буталыбыраҡ ҡалабыҙ. Ә бит һәр осорҙоң үҙенең һәр конфликтҡабашланғыс биреүсе иң төп конфликты була, ҡалған барлыҡ конфликттар ҙа шул төп конфликтҡа ялғана һәм буйһона. Беҙҙең замандың ошо төп конфликты — донъялағы ике идеологияның ҡаяларҙай ҡапма-ҡаршы килеп бәрелеше ул. Киҫкен төкәлешкән ергә утлы осҡондар оса, көндәргә мөһөр Һала. Ә беҙ ҡай саҡ, шул ҡаялар бәрелеше масштабьнда һығымта яһайһы урьнда, ергә төшкән осҡонға ла иғтибар итмәй ҡалабыҙ, шуның арҡаһьнда һүрән копиялар тыуҙырабыҙ.

Әлбиттә, һәр кемдең дә ҡәләм осонан аҡ ҡағыҙға титан ҡаялар бәрелешенең вольт дуғаһы ҡуҙрау мөмкин дә түгел. Әммә шуныһы асыҡ: ул вольт дуғаһы һәр әҙиптең йөрәгендә дөрләргә тейеш, ҡағыҙға шул уттың ҡыҙыуы ҡунырға тейеш. Фәҡәт Шул осраҡта ғьна үҙ “самауыр”ыңды ҡуйып була, уҡыусьны, йөҙ ҡыҙартмай, табьнға йыйып була.

Дөрөҫ, классиктар самауыры бешергән сәй квитэссенция дәрәжәһендә ҡуйы, бәрәкәтле. Тонна-тонна һыуға уның бер ҡалағьн ғьна болғатып эрзац-эсемлек (ҡуян һурпаһы) яһарға ла уны хикәйә һәм повесть формаһьна ҡойоп, Йәки роман тигән кү батУралы цистернаға Һалып та оҙатырға, әҙәби ҡарап трюмьн шул балласт менән тултырып

ебәрергә була. Ләкин был беҙҙең дөйөм кара быбыҙ өсөн ялған олпатлыҡ булыр ине, файҙалы йөк урыньнабалласт илтеү беҙҙең капитанға ла, командаға ла ҡот-шөһрәт килтермәҫ ине.

Әгәр ҙә беҙ ысьн совет Патриоттарьнса заман ҡушҡан дөйөм Ватан мәнфәғәттәрен алға һөрһәк, һан өсөн генә түгел, ә сифат өсөн дә ике еңде һыҙғанып керешеү һәр әҙиптең Намыҫ бурысы булып тора.

Оло юлға сыҡҡан оло кара быбыҙ балластҡа аҙ урьн бирһен, илдең файҙалы йөктәрен күберәк тейәп илтһен!
22.01.1975.

Атайҙар эҙе — мәңгелек

Бьнан бер нисә йыл элек Йәмле июнь урталарьнда Ростов өлкәһенең Түбәнге Грачихи ҡасабаһьндағы колхоз алма баҡсаһьның иң түрендә баштарҙы эйеп тороуыбыҙ мәңге хәтерҙә. Беҙ, Башҡортостандан барған өс юлдаш, Башҡорт кавалерия дивизияһьның һуғышсан эҙҙәрен буйлап килгәйнек унда. Аралағы бер иптәшебеҙ ул минуттарҙы, моғайьн, бөтәбеҙгә ҡарағанда ла асыраҡ кисергәндер. Ошо туғандар ҡәберендәге атаһьның баш осонан алып бүләк ителгән гөл тамырьн йөрәк тәңгәленә ҡыҫып тотҡан был кеше — яҙыусы Рәйес Низамов ине.

Шунан һуң бер нисә йыл үтте һәм изге гөлдөң Һалдат ульның йөрәгенә нык тамыр ебәргәнлеге, инде китап уҡыусылар күңелендә сәскә атыу өсөн көнгә ҡурпып сыҡҡанлығы беленде: "Ҡызыл таң" гәзите биттәрендә яҙыусьның "Атай эҙенән" тигән повесенең Һайланма өҙөктәрен уҡьныҡ һәм тиҙҙән ул әҫәр тулайым килеш тә "Ағиҙел" журнальн алдырыусылар ҡульна барып етәсәк. Тимәк, атай эҙе йылдар аша Яңы быуьн йөрәктәргә юл яра.

"Йәшәрен Йәшәгән" ҡарт быуьндың үҙен алмаштырып килгән Яңы быуьнға һәр саҡ бер аҙ бошоноңҡорап, мыжыҡланыбыраҡ ҡарауы билдәле. Ләкин был бошоноу, мыжыҡланыу — Йәштәргә ышанмауҙан түгел, ә үҙенең ҡиммәтле тормош тәжрибәһен тулыһьнса мираҫ итә алып-алмағанлығьна кешеләрсә хәүефләнеүҙән, ата-бабаларҙан һәм үҙенән күскән ул мираҫты юл ситендә ҡәҙерһеҙ аунатып ятҡырып ҡалдыртмаҫҡа тырышыуҙан килә торғандыр. Әҙәмгә хас был тибрәнеш Рәйес Низамов повесенең эпилогьнда уҡ әҫәргә моңһоу ҡанатьн яҙып ебәрә лә буйҙан-буйға һыҙылған хис ҡауырһьндарьн эпилогкаса таралтып йыйып ала.

"— Ни алып ҡайттың? — тип Айрат, атаһьнан ысҡьнып, ауыр сумаҙанға Йәбеште.

— Хәҙер, үҙем.

Өйгә хуш еҫтәр таралды. Өҫтәлгә үләндәр шәлкеме, ағас япраҡтары, ваҡ ҡьна таштар, янсыҡ менән тупраҡ алып ҡуйҙы.

— Һиии, — тине Айрат, ҡашьн емереп, артыҡ иҫе китмәйенсә, — Ә был нәмәҫтәкәй? — Ул сумаҙан төбөндә Йәшел ҡыяҡтарьн Йәйеп ятҡан үҫемлеккә төртөп күрһәтте.

— Олатайыңдың ҡәберендә үҫкән сәскә ул, балам".

Һиҙгер күңелле уҡыусы бында утлы йылдар ҡаһарманлығының символы булып килеп ингән тере гөлгә бәләкәс малайҙың иҫе китмәйерәк ҡарауын шәйләп һағайып ҡала. Артабаныраҡ, әҫәрҙең аҙағынараҡ, беҙ был һағайтыу тойғоһоноң ерле юҡҡа түгеллеген, ул төп герой Рәҡиптең күңелендә алыҫ сәйәхәттә йөрөгәндә — атай ҡәберен ҡуйынлаған Украина ерендә үк яралғанлығын күрәбеҙ. Ҡаһарман кавалеристарыбыҙ мәңгелек дан ҡаҙанған "Чернухинола музей асылғас: "Беҙ бынан, балаларыбыҙҙы дөрөҫ тәрбиәләй беҙме, аталары, олаталары һымаҡ була, уларҙы алмаштыра алырҙармы, тип тәрән кисерештәр менән сыҡтыҡ", — тигәндәр ҡатындар.

Был юлдар Рәҡипте лә уйға һалды... Кешене хеҙмәткә күнектереү, уға һөйөү уятыубик бәләкәйҙән, сәңгелдәктән, бала ҡулына уйынсыҡ алыуҙан башлана. Бөгөнгө йәштәргә нисегерәк ҡарайбыҙ һуң? Чернухино ҡатындары һымаҡ, һәр ата, һәр әсә үҙ алдына шундай борсоулы һорау ҡуямы икән?

Рәҡиптең үҙ улы ла — Айрат — олатаһы кеүек, тыуған иле өсөн ярһып барырмы?" Ошо борсоулы уй — әҫәрҙең төп проблемаһы — сюжет һыҙығы буйынса төп геройҙы ла, авторҙың үҙен дә, уҡыусыны ла тынғы бирмәй әйҙәп килә, повестең умыртҡа бағанаһын тәшкил итә һәм, әлбиттә, бер юлы өс заман яҫылығын тоташтырырлыҡ һүрәтләү алымын да һорай. Бына шунан инде әҫәрҙең тематикаһын билдәләүсе тарихсанлыҡ килеп тыуа.

Эйе, кешелек донъяһы бөгөнгөһөн бағып ҡына йәшәмәй: иртәгәһе уның үткер уҡ-ҡараштарының осонда, ә үткәне — уҡ төйҙәһендә. Замандаштарыбыҙҙың ил тарихы менән торған һайын нығыраҡ ҡыҙыҡһыныуы әҙиптәренең ҡәләмен дә шул ыңғайҙа тибрәлдерә, эпик жанрҙарҙа һәлмәклек, тарихсанлыҡ көсәйә. Был бер әҙәбиәттең генә түгел, ә дөйөм совет әҙәбиәтенең һуңғы ун йыллыҡ үҫешендәге тенденцияларҙың береһе. Сөнки донъялағы беренсе социалистик дәүләтебеҙ үҙенең илле йыллыҡ алтын туйын үткәрҙе, *баҫып* торған еренең ныҡлығын тойған ошо баһадирға уҙған юлына әйләнеп ҡарау форсаты тейҙе: алға ҡыйыу ҡараш ташлаған йәмғиәт кенә артынаборолоп баға ала. Бына ошо тарихсанлыҡ "Атай эҙенән" әҫәрендә тамсылағы Ҡояш күҙендәй сағыла. Әлбиттә, автор уны "Шулай итәйем әле" тип кенә эшләмәгән, ә ул алға ҡуйылған баяғы борсоулы проблеманы хәл ҡылыуҙа ваҡиғалар нисбәтен һаҡлауҙан килеп сыҡҡан. Һәм ул үҙенә тейешле ыҡсым форманы ла һайлатҡан.

Өс замандың ваҡиғаларын бер һабаҡҡа теҙеп һүрәтләү ғәҙәти автор исеменән алып барыла бында һәм ул бөтә хикәйәткә үҙенең уйсан тәьҫирен һала. Авторҙы яҡындан белгән кеше булараҡ, был тәьҫирҙе биографизм шауҡымы тип билдәләр инем мин. Эйе, повесть башынан ахырынаса әҙиптең үҙенең тормош тәжрибәһенә һуғарылған (бының асыҡ сағылышын баштан уҡ, атай ҡәберенән алынған гөл миҫалында күргәйнек), был иһә ысын документаллек менән тиңләрлек теүәллеккә, ышандырыу ҡеүәһенә ирештергән. Ундағы Рәҡип Назаровты ураҡкан төрлө кешеләр, ғға тейгән кисерештәр араһында беҙ һис ҡыйынлыҡһыҙ Рәйес Низамовтың үҙен һәм яҡындарын, күргән күрмештәрен тоҫмаллай алабыҙ. Ләкин шул уҡ ваҡытта

был авто биографик әҫәр ҙә түгел. Һәммәбеҙгә мәғлүм күренеш: яҙыусы донъяға башкөлләй үҙ аллы, мөстәҡил тормош тыуҙырған, әммә уға үҙ йөрәгенең киҫәген Һалып биргән.

Өс замандың еп остарының береһе атай йөрәгендә, икенсеһе һәм өсөнсөһө — Шул Һалдат ғәйнулланың улы Рәҡип менән ейәне Айратта. Бөгөнгө көн үҙәген һьнландырған Рәҡип шул өс епте бергә килтереп төйнәй үҙ йөрәгендә. Ҡәбергә күмелгән осто ҡабат ҡайтарыу өсөн, атаһының яуҙан сыҡҡан көндәлек дәфтәренә, яуҙаштарының иҫтәлегенә, документаль әҙәбиәткә күҙ ташлай. Һәм быларҙың барыһы өҫтөнән улының үҙенең иҫтәлектәре байҡай. Атаһының яу юлы уҙған Украина ерендәге бөгөнгө Йәнле осрашыуҙар, юл кисерештәре йомғаҡлай бөтәһен бергә. Ҡыҫҡаса итеп әйткәндә, атай көндәлеге аша үткәндәргә, бөгөнгөгә һәм киләсәккә мөрәжәғәт итеүгә ҡоролған был әҙәби форма. Һөҙөмтәлә тулы ҡанлы бөхтәлек килеп тыуған — форма менән йөкмәткенең берҙәмлеге табылған. Ошо берҙәмлек арҡаһында бөтә һүрәтләү саралары ла, тип әйтерлек, ота, әҫәр туҡымаһынан һығып ташлайһы “һыу” минимумға еткерелеп кәметелә. Ипле форма авторға өс замананы берҙәм тормош ағымы итеп урғылтырға, төп геройҙың атаһының фашистарҙан Донбасс күмер шахтаһын азат итеүен — улының ульның үҙебеҙҙең Әлшәйҙәге һоро күмер шахтаһына беренсе башлап төшөүе, ғәрәсәт йылдарының за бойын бөгөнгө за бой менән Йәнәшә ҡуйырға һәм тетрәткес тәрбиәүи көскә эйә художестволы дөйөмләштереүҙәр яһарға мөмкинлек бирә. Ысынлап та: бер туған кескәй һеңлеләренең аслыҡ шойҡаньнан ғырылдап ятып үлеүен кисергән ун бер Йәшлек малайҙың, Еңеүгә ышанысынан, фашизмға нәфрәтенән тештәрен ҡыҫып, ололарса олпатлыҡ менән тәрән за бойға эшкә төшөүен, әсе тиргә батҡан хәләл шахтер икмәген ҡуйынына ҡыҫҡан килеш, ыжғыр буран аша ауырыу әсәһе, һеңлеһе янына ашығып атлауын һоҡланыу ҡатыш тетрәнмәйенсә уҡыуы мөмкин түгел. Совет кешеһенең, замандаштарҙың Тыуған илгә фиҙакәрлеген яҡты ғорурлыҡ тойғоһо аша кисерткән шул бүлектәрҙе мәктәптәрҙең уҡыу китаптарына индерерлек — ул шундай эстетик ҡиммәткә, тәрбиәүи көскә эйә. Малай шахтаның тәрән көбәге төбөндә ятып киң күк йөҙөн, ундабалҡыр Еңеү Байрағын күрә.

Әҫәрҙең образдар галереяһы тәжрибәле оҫта ҡулы менән эшләнгән, һәр персонаж, тип әйтерлек, *ба*ҙыҡ характер кимәленә еткереп үҫтерелгән. Уҡып бөтөп һуңғы битте япҡандан һуң да улар беҙҙең күңелдә һәм күҙ алдында тулҡынландыртып Йәшәүен, үҙҙәренсә хәрәкәтен дауамлай. Тыуған илгә фиҙакәрлеген ябайлыҡҡа төрөп Йәшнәткән саф күңелле, тотанаҡлы ғәйнулла ла, уның уйнап-көлөп кенә ҡаһарманлыҡкабарған дуҫы Илбай ҙа, Яңы “әтмәләнгән” Һалдаттарҙы тырышып-тырмашып “айт-два»ғабаҫтыртыусы Хөсни ҙә, ғәрәсәтле тылдың алтын тотҡалары, ил әсәләре дәрәжәһендә көүҙәләндерелгән Гөлбаныу, Хәмдиә, *Ләбибә лә* — береһе лә онотолмай. Үҙҙәренең ҡатмарлы һәм трагик яҙмыштары менән бригадир Зәйнитдин, уның ҡатыны би биямал, тамырҙарынан кулак ҡаны китеп бөтмәгән тимерхан ҡарт иҫтә ҡала. Ә ауылда беренсе башлап ете ҡат ер аҫтындағы күмергәсә шурф ҡаҙып төшкән, һуғыш йылдарына тиклем үк аҫаба шахтер булып өлгөрөп, кешеләрҙең өйҙәрен һәм күңелдәрен

йылытҡан баһадир Ҡорбан ағай башҡорт эшсе синыфының колоритлы образы булып кәүҙәләнә. байтаҡ ҡына Һандағы был эреле-ваҡлы характерҙар үҙ-ара буталышмай, төҫтәрен алмашышмай — айырым һәм үҙ аллы рәүештә логик үҫештәрен дауамлай аҙаҡҡаса. Бының өсөн автор ҡыҙыҡлы деталдәр, шәхсәнә тел сараларын уңышлы Һайлай белгән. Повестең теле, ғөмүмән, халыҡсан ябайлығы менән, уйсан һәлмәклеге менән иғтибарҙы үҙенә тарта, тәрән йылға кеүек тыныс ағыла. Шул уҡ ваҡытта авторҙың таяҡты үтә бөгөп ебәргән ерҙәре лә бар, бигерәк тә әҫәрҙең тәүге өлөшөндә: әллә милли колорит яһайым типме, әллә шәхсәнлек һаҡлайым типме, персонаждарҙан урыҫ телен үтә ватып-емертеп һөйләтеүе ҡыра күңелде, шулай уҡ урыҫ кешеләренең һөйләшеүен шул көйөнсә, урыҫса, бирергә тырышыу ҙа повесть кеүек йыйнаҡ жанрҙа һис бер табыш килтермәй, фәҡәт сыбарлай ғына. Төрлө персонаж портретында әленән-әле бер үк штрих ҡабатлана : “ас Яңаҡтар”, “ябыҡ бармаҡтар”, “ябыҡ ҡул”, “ас бил”. Атҡа ҡарата “Ерәнсәйҙең иң оло әбейе” тип тә әйтеп булмайҙыр. Шулай уҡ уның бәләкәс бала телмәрендә “дөлдөл” аталыуы, автор тексында тәк бирҙең “әк бәр”гә әүерелеүе, һәм, Йәнә килеп, “Бына *үҙ-ара сыйылдашҡан аттар* ҙа тынды. Трибуна янына Башҡорт АССР-ы Верховный Советы Президиумы Председателе сығып баҫты” кеүек уңайһыҙ Йәнәшәлек тә яҙыҡтыр... Характерҙар үҫешендә лә, күп булмаһа ла, эшләп бөтөлмәгән урындар осрай. Мәҫәлән, байтаҡ ҡына образдарҙы еренә еткереп, яҡшы кәбәнсе кеүек ослап ҡуйған автор ҡыҙыҡлы образ Зәйнитдинде һәм би биямалды ослап бөтөрмәгән килеш ҡалдыра, әйтерһең, кәбән башына ырғытырға бер-ике һәнәк кенә бесән етмәгән. Ныҡлы нигеҙгә мөһәбәт ҡоролған әҫәр бинаһы ҡайһы берҙә үҙенә хас архитектоникаһын юйып, ситтән килеп ингән “эре блок”тарҙан имгәтелеп ҡуйылғылай. Мәҫәлән, Хәмдиә, Гөлбаныу, Рәкиптәрҙең фронтҡа китеүсе яҡындарын күрергә Дим станцияһына барыуҙары, Зәйнитдин бригадирҙың Хәмдиәгә Йәбешеүе, Ғәйнулланың ҡыҙ урлауы, финалда Рәкиптең атай рухы менән һөйләшеүе уҡыусыға таныш булған алымдарҙы ҡабатлай. Дөрөҫ, ағас — ағасҡа һөйәнеп үҫә, ти халыҡ. Әҙиптәрҙең бер-береһенә таянып үркеүе лә борондан килгән мәслихәт. Әммә оҫталыҡтың билдәле кимәленә ирешкән авторҙан беҙ аҙаҡҡаса үҙенсәлекле булыуын теләргә хаҡлы. Сөнки эре блоктар ҡулланыу алымы коммуналь төҙөлөш өсөн яйлы, ә әҙәби бинала ул күңелдәрҙе йылытмай.

Атай образын да автор, логик теүәлләнешкә килтерһә лә, Йәнле деталдәр менән тулы ҡанлыландырып бөтмәгән төҫлө — образ булыуҙан да бигерәк, ул бик төҙөк схеманы хәтерләтә. Дөрөҫ, ҡыҙ урлау эпизоды менән Йәнлелеккә ирешергә көр ынтылыш яһалған яһалыуын, ләкин... ҡыҙ урлауҙарҙы ҡағыҙ биттәре күтәрмәй башлаған саҡ шул... Ғәйнулланың тәүбашлап һуғышҡа кереү эпизоды иһә Пародияға яҡын: бында манекен кешеләр ҡатырға танкылар менән һуғышҡандай... Был, бәлки, һуғыш эпизодының тышҡы деталдәре менән мауығып, уны образдарға ярашлы психологик планда ҡормауҙандыр. Ә бит автор ошо йүнәлештә ифрат оҫта эш итеүен күрһәтте: Илбайҙың уйнап-көлөп кенә мылтыҡтан фашист

самолетын атып төшөрөүе беҙҙе һис тә шиккә һалмай, үҙенең тормошсан дөрөҫлөгө менәнбайыта ғына.

Күрер күҙгә салынған был кәмселектәр генә, әлбиттә, әҫәрҙең дөйөм баһаһын төшөрә алмай. Яҙыусы яратып эшләгән уны, тыныс ҡына ҡеүәтен биреп уҡыусылар күңеленә файҙа килтерерлек итеп эшләгән. Ә бит авторҙың үҙенең һүҙҙәрен әйткәндә, “илемде яратам, тип ҡысҡырыу ғына етмәй, Уға шапырынмай ғына хеҙмәт итергә кәрәк”. Алдыбыҙҙа утлы йылдар аша үткән быуындың матур хеҙмәте. Был матурлыҡ фашизмды ҡыйратыу көнөндә Һалдат улы Рәкип мәктәп башына менеп ҡаҙаған Еңеү Байрағынан, атайҙарҙың ҡан төҫөн һаҡлаған ал байраҡтан, бөгөнгө Йәш быуындарға — Айраттарға айбарланып нурлана: ҡаһарман атайҙар эҙе — мәңгелек.

04.09.1975.

Сабыйлыҡ Ҡояшын ҡомарлаусы

Мин күк буйлап Икар булып осмайым,
Ә һелкенәм оло юлда арбала.
Эдуардас Межелайтис.

Балалар яҙыусыһы Рәйес Ғабдрахманов...

Сабыйлыҡ нуры эркелеп торған ошо исемде ишетеү менән күҙ алдыма ауылыбыҙҙың Ҡояшлы бер олатайы килеп баҫа. Ғүмере буйы баш ҡалҡытмай күсәр сабыр ауылға — арбалар оҫтаһы ине ул. Ә яһаған арбалары һәр яҡтан йырлап тора — ат екмәйенсә үк тәгәрмәстәре тәгәрләп китер төҫлө. Оҫтаның был мөғжизәлегендә ғүмер баҡый бер генә рыя була — ни өсөндөр күсәрҙәрҙе бер саманан оҙонораҡ килтерә лә сығара ул. Бер һүҙ менән әйткәндә, имән күсәр мәсьәләһендә олатайыбыҙ бай һәм йомарт ҡылана — илдекенән ике иле мул ҡырҡырға ярата. Шуға ла ауыл халҡы оҫтаны үҙенең күҙе артында, әллә яратып, әллә шелтәләп, Күсәрбай тип ләкәпләп йөрөтә ине. Ә беҙ, сабыйҙар, бер ауыҙҙан Ҡояш олатай тип кенә һалдырабыҙ.

Ҡояш олатай... Башҡортостандың Күсәрбай ауылы “олатай”ы Йәшендәге Рәйес Ғабдрахмановтың да әҫәрҙәренән меңәрләгән сабыйҙарҙың күңелендә балҡыуырланған уның көләс образын портрет итеп яҙырға тура килһә, мин торор ҙа Ҡояштың үҙен ҡыя һыҙыҡлы дәфтәр битенә “ултыртыр” ҙа ҡуйыр инем, моғайын. Сабыйҙарса ихлас та, йомарт та сығыр ине. Әммә Ҡояштың да йөҙөндә ҡараңғыраҡ таптарбарын, һәм кеше лә ғүмере буйы Ҡояш булып балҡып ҡына Йәшәмәүен беләбеҙ. Ә беҙ иһә хөрмәт иткән кешебеҙҙең ҡасан да булһа яҙыласаҡ портретына штрихтарҙы алсаҡ арбасыға тиңләп һалабашлайбыҙ икән, тикмәгә түгел был да. Сөнки оҫта арбаһының игелеген бик күп кешеләр күрә, ләкин аҙҙары ғына уға рәхмәт күндереп өлгөрә... Бер һүҙ

менән әйткәндә, ярата инек беҙ оҙон күсәрле Ҡояш олатайыбыҙҙы. Унның арба күсәренә өлкәндәрҙең һағайыбыраҡ ҡарауҙарын, көллө ҡапҡабағаналарын эләктереп ауҙарасаҡ, Йә үҙе шартлап һынасаҡ был бай күсәр, тип мыңғырҙауҙарын һис күтәрә алмайбыҙ. Яңы арбаның ҡайын тәртәләре араһына иң яндырай атты егеп ала ла, арбаның ныҡлығын баҡтыртып күрһәтеү өсөн, дил бегәһен ҡаға-ҡаға иһаһайлап, һәр осраған бағанаға һәм ситәндәргә күсәрҙәрен бәрелдертеп, ауыл урамдары буйлап дөбөр-шатор елдереп сығып китә. Осраған һәр сабыйҙы ҡупшы арбаһына тейәп ала — был арбаға гөрләүектәрҙәй ағылабала-саға. Күсәр тигәнең, ысынлап та, тап булған һәр ҡаршылыҡты һанап үтә, беҙҙең сикһеҙ ҡыуанысҡа, шартлаһа ла, һынмай ҡала. Шытырҙап өҙөлгән йүкә тәзеһен ҡайыш бил бау ялғап нығыта ла олатай, һынып ҡалған сәкүшкә урынына сыбыртҡы һабын тыға, әммә тәгәрмәстәр туҡтауһыҙ әйләнә лә әйләнә. Сабыйҙарса кинәнеп көлгән олатайҙың ҡыуаныслы күкрәгенән сабыйҙар тулы ҡыуанyслы арбаға, әйтерһең, йылы Ҡояш нурҙары бөркөлөп бара...

Яҙыусыны арба яһаусыға оҡшатыу бында, бәлки, бер ни тиклем сәйерерәк тә Яңғырайҙыр, әммә әҙип тә бит ғүмере буйынса үҙ ижади арбаһына ололарҙың да, кеселәрҙең дә күңелдәрен тейәп алып, нурға мансып бара бит. Айырма шунда ғына: Пегас-толпарҙы үҙ ҡулында тотоп та, нәфис һүҙҙәрҙән үҙе ҡорған арбаһына ул ат урынына үҙе егелеп тарта...

Йәмле Сәрмәсән һәм Ҡармасан һыуҙарын эсеп сағыу ҡусҡылланған благовар районының Иҫке Күсәрбай исемле боронғо аҫаба башҡорт ауылында 1918 йылдың 3 Октябрендә урта хәлле ерекмән ғаиләһендә донъяға тыуған Рәйес Бикмөхәммәт улы Ғабдрахмановҡа ла донъяның күп әсе-сөсөләрен иртә Йәшләй татырға, *баягыса* әйтһәк, тормош арбаһын үҙ ҡулы менән яһарға һәм тартырға тура килә. Урта хәлле тиһәк тә, Бикмөхәммәт ағай үҙе лә урталыҡта саҡ-саҡ тора, ғүмере буйы күҙгә күренеп Йәлсемәй. Ауыл халҡы әйтмешләй, кемдең һыйыры батып, Йәки аты Йәшен атып ҡазаланһа, ул мотлаҡ бикмәйҙеке була ла ҡуя. Шуға күрә лә Яңғыҙ атлы был игенсе тыуа-тыуғандан ҡара икмәкте туя ашарға тип ҡырҡыша, шул хыялын улына ла күсерә. Әммә Рәйес-уланды, атай бураҙнаһынан да бигерәк, Өфө тарафындағы офоҡ артын айбарлаған мәғрифәт нурҙары тарта. Үҙенең баяғылай оҙон күсәрле ижади арбаһында дөбөр-шатор йылдар һәм юлдар буйлап елдертеп сығып киткән Күсәрбай егетенә ғүмере юлында байтаҡ ҡына текә һәм һикәлтәләр, тәзе өҙөп сәкүшкәләр һындырырлыҡ ҡаршылыҡтар аша үтергә тура килә, әммә уның арбаһының күсәрҙәре шартлаһа ла биртенмәй — үҙәге баҙыҡ була, тәгәрмәстәре бер туҡтауһыҙ әйләнә. Бөгөн халыҡҡа киң билдәле Рәйес Ғабдрахманов тигән яҙыусы исеменә лә ул, бәйгеләрҙә Йән-фарман сапҡандай, үҙенең тормош арбаһының ныҡлығын баҡтыртып күрһәтеп, илде тетрәткән һынауҙарҙың һәммәһен тик беренселәр ҡоронда үтеп килә. Быуындаштарының алғы тулҡынында ул крәҫтиән Йәштәре мәктәбен тамамлай, Өфө рабфагына уҡырға керә. Шунан сыҡҡан яҡшы әҙерлекле беренсе тулҡын уҡытыусылар сафында тыуған районында Йәш быуынды уҡыта. Башҡорт әҙәбитәтенә халыҡ шағиры Мостай Кәрим, уның ҡорҙаштары Назар Нәжми, Ғәли Ибраһимов, Мәлих Харис, Сынғыҙ Ханов

кеүек әҙиптәрҙе биргән ҡотло тулҡын ҡосағында ҡулына ҡәләм алып, 1934 йылда тәү тапҡыр шиғырын ташҡабаҫтыра. Шунан алып ғүмере буйына тынғы белмәй район һәм өлкә гәзит-журналдарында яҙыша, журналислыҡ вазифалары башҡара. Ә Бөйөк Ватан һуғышы осоронда, ҡорос ҡәләмен ҡорос станокка алмаштырып, Уралдың ҙур оборона заводында фронтҡа ҡорос сарлай...

Уның һуғыштан һуңғы тормошо, тынғы белмәҫ эшмәкәрлеге тураһында уйлағанда, оло әҙип Сәғит ағай Агиштың бербеҙгә юмор бизмәнендә тослатып әйткәне иҫкә төшә. Һуғыш һәм һуғыштан һуңғы йылдарҙың күллә халыҡ өсөн дә Еңел булмағанлығы билдәле. Шул осорҙо хәтерләп: “Беҙ фәҡир, беҙгә ҡарағанда Рәйес Ғабдрахманов мең тапҡыр фәҡир — фатирында, ҡулға түгел, аяҡҡа эләгер ҙә нәмә юҡ, фәҡәт ыштанһыҙ балалары ғына үрмәләп йөрөй иҙәндә, — тип мәрәкәләр ине С. Агиш. — Ләкин бер йыл уҙҙымы-юҡмы, үҙем ҡотайып китеп, аяҡтарға төк ҡунып, берәй ярҙам-фәлән кәрәкмәйме икән был бахырға тип, донъяла иң фәҡир Һаналған Рәйестең өйөнә барып инһәм, ни күҙем менән күрәйем, сал бар кейгән балалары, тәпәй тороп, хуш килдегеҙ, тип ҡаршы ала, бүлмәләре тулы ҡиммәтле ме бель дә келәм, өҫтәле һый-ниғмәт менән һығылған, әйләнеп сығыр ҙа әмәл юҡ. Йыл эсендә фоҡаранан иң бай Рәйес Ғабдрахманов булған да ҡуйған!” Шаярып ҡына әйтелгән был әңгәмәлә, әлбиттә, бер нәмә лә елдән килмәй, бигерәк тә ижад гәүһәрҙәре; бының өсөн һәммәбеҙгә егелеп эшләргә кәрәк, тигән аныҡ тел төбө ята ине. Әгәр һүҙ Уға китһә, ысынлап та, ул йылдарҙа Рәйес Ғабдрахманов бер юлы бер нисә ҡамыт кейеп тартҡан арбаны: Башҡортостан китап нәшриәтенең ауыл хужалығы әҙәбиәте редакцияһында өлкән редактор һәм бер ыңғайҙан “Ленинсы” гәзитендә тәржемәсе; етмәһә, эштән һуң нәшриәт өсөн дә китаптар тәржемәләй, төндә ултырып хикәйә һәм мәҡәләләрен яҙа... Ул, баяғыса, донъя малына шулай сереп байып киткән икән, тип, мәрәкә һүҙҙе лә Яңылыш аңламаҫ өсөн, ҡәләмдәштең портретына шул йылдарға ҡағылышлы тағы ла бер штрих өҫтәп китәйек: икмәкте туйғансы ашарға хыялланып Йәшәгән ерекмән улы, хәҙер инде яҙыусы, үҙенең үк һүҙҙәре менән әйткәндә, утыҙ Йәшендә генә (1948 й.) икмәккә туя һәм икмәктең һәр телемен ошо көнгәсә тәрән эске бәхет менән ҡалтырап ала ҡулына. Эйе, икмәк барыбыҙҙан да оло, тигән халыҡ аҡылының мәғәнәһен ул, оло әҙип, бөтә ил менән бергә кисереп, бөтә тән күҙәнәктәре менән тоя...

Бөгөн беҙ башҡорт әҙәбиәтендә көн үҙәгенә баҫҡан, ерҙәге икмәктең тоҙо булған эшсе синыф темаһын үҫтереүҙе, шул темаға эшләүселәрҙе хуплайбыҙ һәр Йәһәттән, уларға ыңғай эш шарттары тыуҙырырға тырышабыҙ. Был бик дөрөҫ һәм кәрәкле. Ә игенсе улы Рәйес Ғабдрахманов иһә, шул кәрәкте, икмәк менән тоҙҙоң ерҙә бер туғанлығын бынан күп заман элек тә яҡшы тойоп, 1951 йылда үҙенең “Яңы билдәләр” тигән иң тәүге китабында уҡ, ошо мөһим йүнәлештең күсәр-үҙәгенән тороп бөркөлдөрҙө һулышын. Йыйынтыҡҡа ингән әҫәрҙәр күлләһе лә эшселәр тормошонан ине...

Ҙур һәм ҡатмарлы тормош һынауын үткән, оло тәжрибә туплаған элекке уҡытыусы, Йәш быуынды тәрбиәләү шикелле бөгөн һәммәбеҙҙе лә

борсоған мөһим проблеманы ла әллә күпме алдан һиҙенеп-күреп, үҙенең ҡәләмен башкөллəй балалар әҙәбиәтенә арнаны. Сөнки уның тәбиғәте-булмышы балаларҙыҡы, тартып барған ҡотло арбаһы ла ихлас сабыйлыҡ арбаһы, күкрәгенән балҡып көлгән Ҡояшы ла сабыйлыҡ Ҡояшы ине. Бер-бер артлы сығып торған хикәйәләр китаптарынан һуң, яҙыусының "Мажаралы юл" исемле тәүге повесе (1958) донъя күрҙе һәм ул Мәскәүҙә урыҫсаға ла Йәһәт тәржемә ителеп, мөлдөрәмә ҡыуаныслы ижад арбаһына бөтә Союз сабыйҙарын Йәлеп итте. Шунан һуң йыл Һайын балалар өсөн Яңы повесть, хикәйә Йәки әкиәт йыйынтыҡтары ғаиләләрҙең ишектәрен ҡаҡмайынса, күңелдәргә кереп балҡымайынса ҡалманы. Ҡырҡ бер йыл буйы дауам иткән шул балҡыштың, әлбиттә, һүрәнерәк саҡҡылары лабар ине. Әҙәби тәнҡит авторға ҡайбер әҫәрҙәренең етлекмәйерәк тыуыуын, тел һәм образдар арсеналының тейешһеҙерәк ҡулланылыуын да иҫкәртте. Ләкин былар бөтәһе лә, баяғы Ҡояш олатайҙың елдерек арбалары кеүек, асылда үҙәге баҙыҡ "күсәр"ҙең артыҡлыҡ һәм кәмселектәре ине, уларҙы төҙәтеү һәм шымартыу өҫтөндә автор иренмәйенсә эшләне. Һәм бөгөн, ихлас күңелле әҙип үҙенең янып Йәшәгән алтмыш Йәшен һәм емешле ижадының ҡырҡ йыллығын билдәләгән көндәрҙә, Йәш быуынға тылсым орлоҡтары сәскән китаптарының Һаны ике тиҫтәнән ашып китте. Шуныһы ифрат ҡыҙыҡлы һәм фәһемле: әгәр Рәйес Ғабдрахманов әҫәрҙәрендә һүрәтләнгән иң мөһим хәл-ваҡиғаларҙы бер епкә теҙеп ҡараһаҡ, Тыуған илдең Бөйөк Октябрь революцияһынан алып ошо көндәргәсә уҙған данлы юлының сағыу этаптары бер-бер артлы тоташ күҙ Алланыр ине. Әйтәйек, "Ҡыҙыл разведчик" — граждандар һуғышы, "Ҡыңғырау тауышы" — илдә дөйөм ете йыллыҡ белемгә күсеү осоро, "Көрәнкәй" — ауыл хужалығын коллетивлаштырыу, "Төш алдынан" — утыҙынсы йылдар аҙағы (репрессиялар) ваҡиғалары, "Ҡышҡы Һалҡын елдәрҙә" — Бөйөк Ватан һуғышы, "Өс аҙымдан Камчатка" — һуғыштан һуңғы йылдар... Хронологик тәртиптә был әҫәрҙәрҙән томдар тәшкил итеү үҙе үк һорала кеүек: Йәш уҡыусы өсөн ул ниндәй фәһемле йылъяҙма-сығанаҡ — тиңһеҙ көрәшле тормошобоҙҙоң художестволы дәреслеге һымағыраҡ булыр ине. Тимәк, яҙыусы ил күргәндәрҙе бергә күргән, үҙенең ҙур йөрәге үтә кисереп, иле менән ҡуша һулыш алып Йәшәгән; шул кисереш, һулыштарын баҙыҡ образдар телендә Йәш быуынға еткереүгә лә өлгәшкән.

Йылыһын йомарт таратыусы был әҙиптең "арба"һына тәү тапҡыр миңә 1965 йылда "ултырырға" Насип итте. Шул Йәйҙә мин "Һәнәк" журналы редакцияһына эшкә саҡырылдым һәм сатира-юмор өлкәһендә үҙенең йор хикәйәләре, фельетондары менән танылған үткер ҡәләм эйәһененңбайтаҡ ҡына шатлыҡтарын һәм хәсрәттәрен, башҡалар менән ҡуша, бергәләшеп кисерергә тура килде. Беҙ, һуңыраҡ шыҡҡан быуын, Йәш айырмаһы булһа ла, ниңәлер уның менән иркен һөйләштек, сетерекле хәлдәрҙә лә һис тартыныу тойманыҡ. Тынғыһыҙ һәм дыуамал тәбиғәте өсөн йыш ҡына уны, үҙебеҙсә шаяртып, Күсәрбайҙың оҙон күсәрле башҡорто, тип атаныҡ. Ул көлөһөн күтәрә, беҙҙең менән дә башҡаларҙай бер баш дәүмәле юғарынан ҡарап түгел, ә типә-тиң тороп һөйләшә килде. Киң күңеллелегенең сере, моғайын, кеше булараҡ

эскерһеҙ ихласлығында, һәр нәмәнән сабыйҙарса үҙәгенә үткәнсә ҡыуана һәм ҡайғыра алыуындалыр. "Эсендәге — тышында" тигән халыҡ билдәләмәһе ифрат тап килә Уға. Бындай шәхес үҙ сиратында сикһеҙ-иркен донъяны ла үҙенә үткәрә, йөрәгенә һыйҙыра. АНа шунда ята ла инде, минеңсә, был яҙыусы ижадының һоҡланғыс мул емешле булыуының сере.

Тормошобоҙҙоң яҡты Ҡояшы менән ихлас һоҡланған, ғүмере буйына шуны раҫлап йырлаған коммунист әҙип шул ҡәҙерле яҡтылыҡтың йөҙөнә төшкән ҡара таптар менән дә бер үк кимәлдә янып-көйөп көрәшә. Уның китап булып сыҡҡан һәм, гәзит-журналдарҙабаҫылып, китапҡа тупланыуҙы көткән бик күп хикәйәләре һәм фельетондары шаһит Шуға. Миңә уның ошондай яугир әҫәрҙәренең ҡайберҙәренең ни рәүешле туранан-тура тормоштоң күсәр-үҙәгенән, көрәш Һандальнан сәсрәп тыуыуын да күҙәтергә, байтаҡ һабаҡ алырға тура килгәне бар. Бер саҡ "Һәнәк"тән икебеҙҙе ауыр командировкаға — халыҡ елкәһен кимереүҙән шашынып аҙған бер бәндәнең, совхоз директорының, ҡылыҡтарын энәһенән-е бенәсә тикшереп, фельетон яҙырға ебәрҙеләр. Беҙ яҡларға тейеш әҙәм — совхоздың бер ябай эшсеһе ине. Бурыс ифрат та хәтәр, бәндә мәкерле булып сыҡты. Үҙе күренмәһә *лә, барып* төшөүебеҙ менән беҙҙе ярандары ҡыпҫыуырға алырға, ә улай килеп сыҡмаған, "ауыҙ-морондо майлап" ҡотолорға тырыштылар. Һөмһөҙ бәндә үҙе лә пәйҙә булып, асыҡ һөжүмгә күсте, миңә, тәжрибәһе аҙыраҡ журналисҡа, ҡаршы ҡоролған Йәтмәләре йырып сыҡҡыһыҙ тойолдо. Сетерекле ошо мәлдәрҙә ғәҙеллекте нисек яҡларға, үҙең дә бысраҡҡабатмаҫҡа, һыуҙан да ҡоро сығырға кәрәклеген өлкән ҡәләмдәш миңә үҙенең хаталыҡһыҙ теүәл алымдары менән иҫбатлап күрһәтте. Ул ғына ла етмәһә, үҙебеҙ үк ҡыйыу һөжүмгә күстек, тамам Намыҫын юйған Йәнде алҡымынан алдыҡ. Һөҙөмтәлә "Күҫәк" тигән фельетон сыҡты журналда. Хаҡлыҡ юлында ҡара йыландың ҡойроғонабаҫыу ғына аҙ, ә ул, уңлы-һуллы һуғылып, тирә-яғындағыларҙы сағып Йәрәхәтләмәһен өсөн, ағыулы тешен һурып ырғытырға тейешлекте иҫкәртте был Йәнле Һабаҡ...

Ҡәләмдәштең портретына Йәнә лә бер штрих: донъяның һөмһөҙ-ҡараларына ҡағылып ытырғанында ла яҡты Ҡояштың нурҙарына һоҡланыуҙан төңөлмәү. Теге совхозданбайтаҡ араны Йәйәүләп тәпәйләргә һәм ниндәйҙер бер үҙәндә күк таллыҡ араһынан уҙырға тура килдебеҙгә. Яҙғы күкрәү мәл ине. Юлдашым шунда яңғыҙы ғына үҫкән, күм-күк бөрөләре тирткән һомғол Йәш тал тәңгәлендә туҡталды ла шул гүзәллек ҡаршыһында теҙләнеп үпте уны. "Ҡарасы тал бөрөләрен, Ҡояшҡа һоҡланып баҫып торған ҙур күк күҙле үҫмер ҡыҙҙы хәтерләтә бит был тал!" — тип ҡысҡырып ебәрҙе ул. Һәм көндәрҙең береһендә "Тал бөрөһө" тигән повестең алсаҡ образы тыуҙы...

Ошо һоҡланғыс кеше, яҙыусы, бөгөн дә үҙенең тынғы белмәҫ эш өҫтәле, яҙыу машинкаһы янында, яңынан-яңы әҫәрҙәрен ижад итеү өҫтөндә. Миңә уның тылсым тулы ижад арбаһы ябай юлдан ғына түгел, ә шау йондоҙло Ҡош Юлынан елдертеп бара кеүек. Тылсымсының күкрәгенән тирә-яҡҡа бер туҡтауһыҙ Ҡояш йылыһы бөркөлә — өлкәндәргә лә, Сабыйҙарға ла берҙәй уртаҡ ҡыуаныс. Зыр-әйләнгән арба

тәгәрмәстәре яньнан бар донъя, ғаләм ағыла шашынып. Күсәр башы эләккән һәр тәңгәлдән ергә яҡты йондоҙ төшә кәйелеп. Йондоҙҙарҙың араһында, әлбиттә, ҡабынып етмәгәнерәктәре лә, һүнә башлағанырактары ла юҡ түгел. Әммә һәммәһенән нур сатҡылана, шау яҡтылыҡ һи беүселәре күберәк. Уның йондоҙло арбаһы оҙаҡ барасаҡ шулай.

09.09.1978.

Мөхәммәтша Буранғоловтоң “Зәңгәр шәл”е

Бөйөк сәсән һәм драматургтың Башҡортостан Яҙыусылар берлеге идараһында, шулай уҡ Башҡортостан Фәндәр академияһы ғилми архивында Һаҡланған ҡағыҙҙарын уҡып күреүселәргә яңылыҡ түгелдер был: тамашасыларға яҡшы таныш “Зәңгәр шәл” тигән музыкаль драма (мелодрама) авторы ла ул икән. Шулай ҙа был сәйер хәлде күпселектән ҡурсалап, ғилми даирәләрҙә рәсми ҡуҙғалтыу, матбуғатҡа сығарыуға туба (та бу) Һальнғандай ине... Тәүбашлап ошо хилафлыҡты, Һағайып ҡына булһа ла, *башҡорт* драматургияһының белгесе, филология фәндәре кандидаты Илдүс Бүләков үҙҙө: “М. Буранғоловтың Башҡортостан Яҙыусылар берлеге идараһында Һаҡланған шәхси делоһындағы бер ҡағыҙҙа ул үҙ ҡулы менән яҙған: “1918 йылда Ҡазан театры директоры Ғ. Ҡарыевҡа “Ашҡаҙар”, *“Зәңгәр шәл”* пьесаларының ҡулъяҙмаларын тапшырҙым”, — тигән юлдарбар. “Ашҡаҙар” пьесаһын татар театры шул уҡ йылда сәхнәгә ҡуя. Ул Өфөлә лә, Ырымбурҙа ла сәхнәләштерелә” (“Ағиҙел журналының 1988 йылғы 11-енсе Һаны, 107-нсе бит). Күрәһегеҙ, мәшһүр “Зәңгәр шәл”дең артабанғы яҙмышы хаҡында һүҙ бармай — автор телен тешләгән. Ғалим баяғы мәғлүмәттәрҙе 1992 йыл Өфөлә нәшер ителгән “Мөхәммәтша Буранғоловтың сәсәнлек һәм әҙәби эшмәкәрлеге” тигән ғилми йыйынтыҡҡа ла индергән (55-енсе бит).

Иншалла, туба томаны таралабашлай һымаҡ. Әммә киң ҡатлам уҡыусыға, “Зәңгәр шәл” музыкаль драмаһына ғашиҡ тамашасыларға томан артындағы хаҡлыҡ асылып етмәй Һаман: Мөхәммәтша Буранғоловтыҡо була тороп та, ниңә башҡа бер авторлыҡта йөрөп ята шәп әҫәр?.. Бына шуға асыҡтан-асыҡ яуап биреүҙән тайшанғандай ғалимдар. Эш шунда, ауыҙ асып “а”-һы әйтелһә лә, “б”-һы йомолоп ҡалып, мәғлүмәттәр тулыһынса иғлан ҡылынмай Һаман. Томан таралһын өсөн, Буранғоловтың үҙ һүҙҙәрен, мөнтәмәй, нисек бар — Шул килеш еткерергә кәрәк, сетерекле булһа ла. Бына ул архив ҡағыҙҙарынан мәсьәләне асыҡлаусы өҙөктәр:

“В Союз советских писателей Башкирии от сотрудника Института языка и литературы М. Бурангулова заявление.

Я работаю в обласи литературы с 1912 года... Мои произведения, призНанные годными к печатанию, не выпускались в свет по разным

"объективным" причинам, объясняя все это сокращением сметы или уменьшением плана и т.д.

Пьесы, которые я ставил к постановке в театрах или к выпуску в печати издательством, *присваивались и выпускались отдельными проходимцами.* Например, в 1918 году я сдал директору Казанского театра А. Карееву рукописи пьесы "Ашкадар" и *"Зангар шаль".*

Пьесу "Зангар шаль" присвоил Карим Тинчурин, который тогда работал вместе с Кареевым...

М. Бурангулов".

Бөйөк сәсән төрмәлә (Гулагта) һуңғы тапҡыр ултырып ҡайтҡандан һуң, ул саҡтағы КПСС Үҙәк Комитетының беренсе секретаре, СССР Министрҙар Советы рәйесе Н.С. Хрущевҡа ебәргән ғаризаһында үҙен, яла яғып, "халыҡ дошманы" рәүешендә ун йылға төрмәгә ултырттырған, әммә аҡланып ҡайтҡандан һуң да әле булһа эҙәрлекләүҙәрен туҡтатмаған бер төркөм әҙип һәм ғалимдарҙың, яҙыусылар ойошмаһы етәкселәренең исемдәрен аныҡ атап, үҙе яҙып алған мәшһүр "Урал батыр", "Аҡбуҙат" кеүек халыҡ эпостарын һәм шулай уҡ үҙенең пьесаларын "бөгөнгө көн талаптары өсөн иҫкергән" тип матбуғаттабаҫтыртмауҙарынан йөрәге әрней-әрней, ошо һүҙҙәрен яҙа:

"...Написанные мною произведения, которые освещают бесправие, безвыходные положения башкирского прошлого, в осо бенности женщин, так же по-ихнеиу не может служить современности, а пьеса *"Голубая шаль" ("Зәңгәр шәл"), которая показывает жизнь муллы с тремя женами,* выходит соответствует"... (Сөнки уның "Зәңгәр шәл"е, әммә К. Тинчуриндың авторлыҡ исеме аҫтында, сәхнәләрҙән төшмәй бара ул саҡтарҙа ла).

Беҙҙе ҡыҙыҡһындырған был әҫәргә ҡаратабаяғы архив ҡағыҙҙары араһындағы "Перечень произведений" тигән исемлектең "Не изданные произведения" тигән бүлегендә лә мөһим мәғлүмәттәр бар:

"...Наименование произведения — "Зангар шаль", число страниц — 90, жанр — музыкальная драма, заключен договор для издания — г. Оренбург, книжный магазин "Янги юл", 1924 г., 18/1, N62... **М. Бурангулов".**

Тимәк, М. Буранғоловтың "Зәңгәр шәл"е 1918 йылда уҡ Ҡазан театрына тапшырылған, ә 1924 йылда уҡ "Зәңгәр шәл"де Ырымбурҙа китап итеп баҫтырып сығарырға ҡабул ҡылып алғандар — рәсми килешеү төҙөлгән. Ә Ҡазан театры сәхнәһендә ул, "Зәңгәр шәл", авторы К. Тинчурин итеп күрһәтелеп, тәүбашлап тик 1926 йылдың 20 декабрендә ҡуйыла (уның "Елкәнһеҙҙәр" премьераһынан һуң ай ярым үтер-үтмәҫтән). М. Буранғолов әҫәренең күләме, жанры ла (90 бит, музыкаль драма) ифрат ҡиммәтле мәғлүмәт был тәңгәлдә, сөнки ул ошо көндәргәсә Ҡазан һәм Өфө сәхнәләренән төшмәй ҡуйылып килгән, әммә К. Тинчуриндыҡы тип

йөрөтөлгән “Зәңгәр шәл”деке менән бер иш. Сәйерлектәр, авторҙарының үҙҙәре лә абайламаҫтан, Ҡазан мат баҕаларында ла сағылды. “Әҫәр башынан ахырынаса йыр менән барыу өҫтөнә, күмәк йыр һәм бейеүҙәр буласаҡ”, — тип иҫкәртелә “Ҡызыл Татарстан” гәзитенең шул уҡ 1926 йылғы 18 декабрь һанында. Бынысы иһә, һис тә Кәрим Тинчуриндың түгел, ә Мөхәммәтша Буранғоловтың күпселек сәхнә әҫәрҙәренең төп йөкмәтке-сифаты булып, шуға тиклем К. Тинчурин ижадына бигүк хас булмаған күренеш. Был хәлде татар әҙәбиәтселәре К. Тинчуриндың көтөлмәгән етешһеҙлеге һымағыраҡ та билдәләй: “Зәңгәр шәл” йыр, бейеү номерҙарынан торған айырым киҫәктәргә бүленеп ҡала. Был татар тормошоноң үткәнен, *этнографияһын* (мин һыҙыҡ өҫтөнә алдым. — *Й.С.*) күҙаллау өсөн әһәмиәтле булһа ла, әҫәрҙең төп сюжетын үҫтереүгә артыҡ ярҙам итмәй. Шуныһы характерлы: ғәҙәттәге репликаларында политик аң яғынан ул ҡәҙәр Юғары тормаған крәҫтиән Йәштәре, йырға күскәс, шаҡтай ҡыйыу һүҙҙәр әйтә башлайҙар (был да М. Буранғоловса! — *Й.С.*)” — тип яҙабаян ғиззәт (Кәрим Тинчурин. Сайланма әсәрләр. Таткнигоиздат, Ҡазан, 1956 йыл, 8-енсе бит). Асылында М. Буранғолов ижадының был, әйтелеүенсә, елек-үҙәген тәшкил иткән, ғалимдарыбыҙ тарафынан уның ыңғай сифаты итеп баһаланған: “М. Буранғолов бындай типтағы *тарихи-этнографик* (мин һыҙыҡ өҫтөнә алдым. — *Й.С.*) пьесаларҙы артабан да күп яҙған. Уларбашҡорт совет драматургияһы формалашыуының тәүге йылдарында тоташ бер тематик-стиль йүнәлешен барлыҡҡа килтерә. Ул яҙған *“Зәңгәр шәл”* (1918), “Буранбай” (1920), “Тәфтиләү” (1921), “Алпамыша” (1922), “Сәлим кантон” (1923), “Ялан Йәркәй” (1923 — 1926), “Ҡара юрға” (1924), “Шәүрәкәй” (1925, 1948), “Мөфти ҡыҙы Фатима” (1926), “Башҡорт туйы” (1926 — 1943), “Гөлсәсәк” (1939), “Таштуғай” (1938 — 1959) пьесалары шундайҙарҙан. Был әҫәрҙәрҙең һәр ҡайһыһы үҙ дәүерендә төрлө яҙмышҡа юлыҡҡан, күбеһе, ҡульяҙмала йөрөп, юғалып ҡалған... Яҙыусының шул әҫәрҙәре араһынан *“Зәңгәр шәл”* (авторҙың ул пьеса ҡульяҙмаһын 1918 йылда Ҡазан театры директоры Ғ. Ҡарыевҡа биргәндән һуң юғалып ҡалыуы тураһында яҙылған юлдары бар), “Буранбай”, “Тәфтиләү”, “ башҡорт туйы” (һәм “Гөлсәсәк”) тигәндәрен үҙ ҡулы менән музыкаль драма жанрына айырып ҡуйыуы ла иғтибарға лайыҡ”... (Мөхәммәтша Буранғоловтың сәсәнлек һәм әҙәби эшмәкәрлеге. Өфө, 1992 йыл, 55-енсе бит).

Бөйөк сәсән һәм драматург *“Зәңгәр шәл”ен* донъяға сығарыу өсөн шул 1924 йылда (авторы К. Тинчурин тип күрһәтелгән спектаклдән ике йыл элгәре) һуңғы тапкыр нықышмалы ынтылыш яһағанлығы билдәле. Сөнки, китап итеп баҫтыртыуға Ырымбурҙағы нәшерсе менән баяғы килешеү төҙөлөүҙән тыш, Башҡортостан театр сәхнәләрендә ҡуйҙыртыу өсөн башглавлиттан рәсми рөхсәт алыуға ла өлгәшкән, бына ул рәсми дәүләт органы теркәп ҡалдырған мәғлүмәт:

“Отчетность декабря месяца 1924 г. о разрешенных к публичному исполнению и демонстрированию произведений.

Автор пьесы — Бурангулов, наименование произведения — *“Зангар шаль”*, форма и характер произведения — в двух действиях. Завглавлит: (подпись неразборчива)”.

Бьныһы инде *“Зәңгәр шәл”дең* ысьн авторы ысынлап та Мөхәммәтша Буранғолов икәнлеген рәсми дөрөҫләүсе кире ҡаҡҡыһыҙ документ булып тора, минеңсә. Шулай ҙа был мәсьәләлә хөкөмдар була алмауымды белдереп, һуңғы һүҙҙе ғалимдарыбыҙға ҡалдырам.

31.10.1993.

Тарих ялынан ялмап...
1

Мәңгелекле йыһан-әсә ҡосағында, мең тылсымлы Ҡояш-апа муйьнсағьнда бер туҡтауһыҙ алға табан сабып барған ҡара юрғабыҙ Ер шары — беҙҙең тыуған йортобоҙ — бьна тағы нәүбәттәге Яңы йыльн көн һәм төндәренә бүлә башланы. Ер шарьның аҫыл тере мөғжизәһе — мәңге сал һәм мәңге сабый кешелек донъяһы, Йәғни миллиардлаған ҡатьн-ҡыҙ һәм ир-аттар — беҙ үҙебеҙ, һәр беребеҙ, тормошобоҙҙағы хәл иткес һәм айнытҡыс сик-рубежға еттек, буғай: алдыбыҙҙа асылырға тора серле лә, тылсымлы ла егерме беренсе быуат ҡапҡаһы! Һәм ундабарып етеү өсөн ни бары “ун биш аҙым” — ун биш йыл ғьна ҡалды. Кем булып һәм нимә илтеп уҙырбыҙ ул ҡапҡанан? Миллиардлаған йылдар буйы тәбиғәт үҙе хасил иткән берҙән-бер изге төйәгебеҙ Ер шарьн, уның ырыҫ менән тулы уңдырышлы тупрағьн, гидросфераһьн, атмосфераһьн, биосфераһьн... рухосфераһьн һ.б., һ.б. сфераларьн һәләк итмәй һәм иттертмәй ана шул тупһа аша үткәреп еткерә алырбыҙмы? Ошо “ун биш аҙым» ғьна арауыҡта, ниһайәт, булған бөтәһе менән ҡуша бөтәһен дә — хатта кешелек тоҡомон да — юҡ иттертеп ҡуймаҫ быҙмы?!.

Эйе, еңел түгел Егерме беренсе быуат буҫағаһы алдьнда тороусыларға. Ғәмле Гамлеттың “Йәшәү, әллә үлем?!” тигән йөрәкһеп өҙгөләнеүҙәре тап ана шул буҫаға төбөндә Планетаның һәр бер йөрәк сәхнәһенән, пәрҙәләрен йыртып сығып, үҙәккә үткес тетрәндертеп ишетелә. Һәм ул ошо йыл башьнда донъяның иң бейек трибунаһьнан Генеральный секретаребеҙ Михаил Сергеевич Горбачев иптәштең белдереүендә бөтә кешелек донъяһьның Гамлет һорауы рәүешендә глобаль күләмдә һиҫкәндертеп яңғыраны, Йәшен тиҙлегендә Ер шарьн урап-уятып уҙҙы, кешеләрҙе яҡты киләсәк өсөн — Йәҙрә ҡоралһыҙ һәм һуғышһыҙ XXI быуат өсөн изге көрәшкә торғоҙҙо. Үҙенең тарихи 27-нсе йыйьньна олпат эштәр һәм бурыстар йөкмәп килгән туған Партиябыҙ, Тыуған илебеҙ бөтә донъяға ишетелерлек итеп, өмөт, ышаныс ҡабыҙырлыҡ итеп был һорауға: “Йәшәү! Бөтөн Ер шарьна Йәшәү!” — тип асыҡ яуап бирҙе. Шекспирҙың шул һорауҙа сағылған даһилығы, миңә ҡалһа, әҙәбиәттең кешелек донъяһы тормошондағы иң яуаплы урьнын да,

яҙыусының Йәмғиәт алдындағы иң мөҡәддәс бурысы да ҡалтайтыбыраҡ тойҙортто һәммәбеҙгә, һәммәбеҙҙе кешесән уйландырҙы. Ысынлап та: ни өсөн был беҙҙең яҡ тормош икһә, теге яҡ әжәл һи бә? Йәшәү менән үлем алыша икән, ни өсөн һуң ул көстәрҙең икеһенең тиң артында бойороп шул уҡ әҙәм балаһы, кеше тора?! Ниңә кеше кешелекте юҡ итерлек дәжжалға әүерелә? Ана шул кеше факторына ыңғай яҡтан тәьҫир итеү, һөҙөмтәлә кешеләрҙе әжәл һи беүсе лагерҙан тартып алыу — кешелектең Йәшәү ышанысын арттырыу рәүешендә төҫмөрләнә совет әҙәбиәтенең ошоғаса әүҙемлеген Һаҡлап килгән гөмансылыҡ бурысы. КПСС Программаһының яңы редакцияһында тап ана шул тәьҫир итеү тураһында иҫкәртелгән дә: “Совет кешеләрен идея-сәйәсәти, хеҙмәт һәм әхләҡи тәрбиәләү, рухи байлыҡ, әхләҡи сафлыҡ һәм физик камиллыҡ сифаттарына эйә булған гармоник үҫешкән, Йәмәғәт эшендә әүҙем ҡатнашыусы шәхес итеп тәрбиәләү буйынса ныҡышмалы эш алып барырға”, — тигән ундағы изге күрһәтмә яҙыусыларға ла туранан-тура ҡағыла, әлбиттә. “Халыҡтың мәҙәни кимәле үҫешкән Һайын, — тип әйтелә тағы, — сәнғәттең Йәмғиәт тормошона, уның әхләҡи-психологик климатына тәьҫире көсәйә. Был мәҙәниәт оҫталарының ижадтағы идея йүнәлеше, әҫәрҙәренең художестволы тәьҫир көсө өсөн яуаплылығын арттыра”.

Хаҡ һүҙҙәр! Ватаныбыҙҙың яҡты киләсәге хаҡына илебеҙҙә грандиоз һынылыш — кеше аңын үҙгәртеп ҡороуҙарбарған, һәр граждандың граждандлыҡ яуаплылығын тойҙортоу өсөн көрәш ҡайнаған был заманда яҙыусының үҙ эше алдындағы граждандлыҡ яуаплылығы бишләтә артығыраҡ. Һәм шул оло яуаплылыҡты һәр беребеҙ ысын йөрәктән тойған, Йәки тойорға тейешле булған, Партиябыҙҙың 27-нсе йыйыны ҡарарҙары менән һәр беребеҙ ҡанатланған ошо көндәрҙә коммунист, күренекле башҡорт яҙыусыһы Ғәли ағай Ибраһимов ижады был мәҡәләнең иғтибар үҙәгенә ҡуйылыуы бик урынлы һәм ҙур мәғәнәгә эйә, минеңсә. Фәһемле хәл: йыйыныбыҙ нурҙары яҡтыртҡан яңы быуат ҡапҡаһы алдынабарған юлда үҙенең ижад ғүмеренең аҙымдарын ҡайһындайыраҡ алдырҙы, нимәләре менән килде икән һуң оло әҙип?

1919 йылдың 16 ғинуарында Эстәрлетамаҡта сал юрматы башҡорттары тупрағында Ҡояшҡа ҡарап күҙен асҡан Ғәли ағай Ғизитдин улы Ибраһимов иң беренсе сиратта үҙенең мөҡәддәс маҡсатҡа ирешеү алдындағы егәрлелеген, башлаған эшен еренә еткермәй туҡтатмай торған ныҡышмалылығын, аяҡ аҫтындағы кескәй тупраҡ бөртөгөнән алып Галактикалағы йондоҙ саңлыҡтарына тиклем арауыҡтағы һәммәһе менән ихлас ҡыҙыҡһыныу һәм аҡты — ҡаранан, яҡшыны ямандан айыра белеү ҡеүәһен һәм үҙен тыуҙырып үҫтергән изге ергә, халыҡкабулған мөхәббәтен, Тыуған ил ҡаршыһындағы граждандлыҡ бурысы тойғоһон түкмәй-сәсмәй алып килеп еткерҙе ул, тип әйтһәк, һис тә хата булмаҫтыр.

Мөҡәддәс маҡсат! Мәшһүр “Кинйә” романының авторы уны үҙе нисек билдәләйҙер, әммә миңә был — үҙенең барлыҡ ғүмере, ижад талпыныштары менән арымай-талмай “Кинйә”һенә яҡынлау булып күренә.

Ҡыҫҡаса ғына күҙ алдына килтереп төҫмөрләһәк, бына ул: башҡорт мифологияһының сал төйәге Йөрәк тау, Ҡуш тау, шәке тау, Тора тау итәктәрен сорнап алған риүәйәт һәм легендалар, ҡобайыр һәм йырҙар даръяһында кесе Йәштән ҡолас Һалып йөҙөп Йәшәү;

башҡорт пединститутында белем алыу йылдарында туған телдең дә, сит телдәрҙең дә тәмен тойоу, айышына төшөнөү;

оҙаҡ йылдар гәзитсе һәм журналист булып эшләп, илде арҡыры-буйға гиҙеү, халыҡ тормошон өйрәнеү;

Бөйөк Ватан һуғышының утлы-ҡанлы кисеүҙәрен үтеү;

Һәм өҙлөкһөҙ уҡыу, уҡыу, уҡыу... Ябай ғына әйткәндә, бөйөк Ватаныбыҙҙың, совет халҡының һәм, әлбиттә, үҙенең туған башҡорт халҡының үткәндәрен — тәрән тарихын ғүмере буйына ныҡышмалы тикшеренеп өйрәнеү, илебеҙҙең халыҡтарының сал быуаттар төпкөлөнән үк килгән теләктәшлек, берҙәмлек, дуҫлыҡ тамырҙарын юллау...

Ҡыҫҡаса ғына Һаналған ошо күп ҡырлы һыҙат яҙыусының йылдар һәм юлдар маяғы булып теҙелеп ҡалған китаптары — "Йәшен ташы", "Дуҫтар сафында", "Иҙел егете Илғужа", "Дуҫтар илендә" ише повесть һәм очерктары, "Бер полк кешеләре", "Умырзая", "Ай битеп йыуғанда" исемле романдары һәм башҡа әҫәрҙәре буйынса ем-ем балҡып, бәғзе бер әҫәрҙәренең ҡайһы бер етешһеҙлектәрен дә ҡаплап, төрлө төҫтәр менән Йәйғорланып яна. Тыуған ерҙең ҡәҙерен һәм халыҡ тормошоноң тәрән төпкөл-тамырҙарын, үҙаңын һәм тормош философияһын да, халыҡтар дуҫлығының иң шифалы сығанаҡтарын һәм азатлыҡ өсөн фиҙакәрлек нигеҙҙәрен дә табырға мөмкин ул яҙған әҫәрҙәрҙә. Ә инде "Кинйә" романында ана шуларбарыһы бергә тупланып, уҡмашып, яңы сағыу сифаттарға өлгәшеп, салауат күпере булып тартылды меңәрләгән уҡыусылары йөрәгенә. Китап уҡыусылар тойҙо: дөйөм Рәсәй азатлыҡ көрәше тарихында юйылмаҫлыҡ эҙ ҡалдырған Кинйә батыр — башкөлләй халыҡ улы, туған халҡының айырылғыһыҙ өлөшө: шул уҡ ваҡытта ул нисәмә меңәр йыллыҡ халыҡ мәғрифәтенең "академия"һын үтеп сыҡҡан абыҙ-ғалим, ил тәрәге булырҙай ил ағаһы ла. Романдың беренсе китабында беҙ егет кенә килеш геройҙың ана шул баҙыҡ сифатҡа табан ауыр Һабаҡлы юлдар үтеп үҫешенең, ә иң мөһиме, хәҙергесә әйтһәк, "синфи аңы" уяныуының һәм тотороҡло төҙөклөк биреп нығыныуының шаһиттары булабыҙ: Кинйә инде ҡанэскес батша самодержавиеһы колонизаторҙарын уларҙың дошмандарынан (тимәк, иҙелеүсе башҡорттарҙың дуҫтарынан!) — замандың алдынғы ҡарашлы урыҫ кешеләренән айырырға өйрәнә: бөтә урыҫтар ҙа дошман түгел, һәм урыҫтарҙың да, башҡорттарҙың да тыштан ялтыраған һәр береһе дуҫ та түгел икән дә! Был — Кинйә менән ҡуша бөтә башҡорт халҡы үҙенең ҡаҡ елкәһендә, ҡан һәм тир түгеп туплаған асы һәм ҡиммәтле Һабаҡ, башҡорт илен 1773 — 1775 йылдарҙағы азатлыҡ һуғышынан алып Бөйөк Октябрь революцияһының ҡыҙыл фронттарына тиклем бөтә хәл иткес һынауҙарҙа ла прогресс юлынан йөрөтәсәк, ысын азатлыҡ яугирҙәре итәсәк тарихи Һабаҡ. Һәм беренсе китапта автор, ҡаһы бер белгестәр әйтмешләй, башҡорт *халҡ*ының тарихы һәм үҙаңы тарихына, көнкүрештең этнографик буяуҙарына мулыраҡ урын бирә икән — былары

ла бик урынлы, сөнки йортто нигеҙҙән башлап Һалалар һәм ул нығ булырға тейеш. Уның ҡарауы "Ил ағаһы" тип аталған икенсе китабында шул бинаның силуэты сәйәси һәм социаль планда бөтә Рәсәй киңлектәренбайҡарлыҡ, хатта Көнбайыш Европа һәм алыҫ Көнсығыш илдәрен дә сырамытырлыҡ һынланып бейегәйә. Һәм ундағы тағы ла бер үҙенсәлек: художестволы ҡоролманың баяғы «нулевой цикл"ында уҡ бәҫләп-көйләп керетелгән көллө коммуникациялар дөрөҫ эшләй, үҙ урынында: теүәлләнәсәк йорттоң күҙәмә контурҙарында ла һәр нәмә үҙ тәғәйенләнешен үтәрҙәй төҫмөрләнә. Тимәк, автор-архитектор бында бөтәһен алдан белеп, теүәл иҫәпләп эш иткән! "Кинйә" романының күрер күҙгә күренеп торған был сифатын уны уҡыған ҡәләмдәштәр бер ауыҙҙан билдәләй һәм, кинәнеп, бына был, исмаһам, ысынлап та тарихи роман, тип өҫтәкләй...

Тимәк, "ысынлап та тарихи роман" булмаған тарихи романдар ҙабармы Юғиһә? Ниндәй булырға тейешле һуң ул "ысын тарихи роман"?.. Бына ошондай һораулы фекер йөрөтөүҙәрҙе нисәмә йылдар буйына индебеҙ әҙәби тәнҡит маһирҙарыбыҙҙың матбуғат аша сығыштарынан түгел, ә кулуарҙарҙа осрашып һөйләшкәндә ишетәбеҙ, йыш ҡына. Уға яуапты ла, ғәҙәттә, төрлөсәрәк бирәбеҙ, сөнки беҙҙең әҙәбиәттәге "ысын тарихи" жанр ҙа, уны өйрәнеп теоретик нигеҙләргә тейешле ғилем өлкәһе лә әлегә балалыҡ осорон кисерә, минеңсә.

Ысынлап та: нимә һуң ул "ысын тарихи роман"? Өлкән-өлкән ҡәләмдәштәрем ауыҙынан, әллә уйнап, әллә етди, ошондайыраҡ раҫлауҙар тыңлағаным бар:

— Архимед һораған таяныу нөктәһен — бер генә тарихи факт бирегеҙ миңә, шуға таянып утыҙ табаҡлыҡ роман тыуҙыра алам.

— Тарихсылар соҡсоноп үтмәй тороп, тарихи роман тыуҙырыу мөмкин түгел.

Тарихи романдың теле тураһында ла ҡай саҡ ҡапма-ҡаршылыҡлы фараз ҡылына: "Тарихи яҡтан ваҡиғалар дөрөҫ барһа, геройҙарҙың һөйләшеүе бөгөнгө тел менән бирелһә лә ярай — хатта ул уҡыусы өсөн еңелерәк тә", — тине бер ҡәләмдәш. "Тарихи романдың телендә лә шул заман сағылырға тейеш", — ти икенсеһе... Берәүҙәре, тарихи роман яҙыр өсөн, әҙиптең тархисы булыуы мотлаҡ, тип раҫлаһа, икенселәре, барыһынан элек ул художник булырға тейеш, тип ҡырталаша (бәлки, уларҙың барыһын бергә алғанда дөрөҫтөр?)...

Бының ише һорауҙар, әлбиттә, традициялары нығынған ҙур әҙәбиәттәрҙә лә булыусан, ә башҡорт совет әҙәбиәтендәге заманса тарихи прозаға, атап әйткәндә роман жанрына, килгәндә, баяғыса, ҡасан ғына быуынға ултырҙы һуң әле ул? Октябрҙең шанлы ҡыҙыл әрмистәре үҙҙәре тыуҙырған беренсе башҡорт совет романдарын алайыҡ: Афзал Таһировтың "Һалдаттар", "Ҡыҙыл әрмистәр"е, Дауыт Юлтыйҙың "Ҡан"ы, Имай Насириҙың "Күҙәй"е, Али Карнайҙың "Беҙ ҡайтырбыҙ"ы... Хәҙербеҙгә "почти тарих" булып тойолһалар ҙа, ләкин тарихи түгел ине былар, ә ваҡиғаларҙың ҡайнар эҙенән ваҡиғаларҙа ҡатнашсыларҙың үҙҙәре тарафынан яҙылған романдар ине. Һәр хәлдә, мин шулай тип уйлайым.

Юҡҡамы ни уларҙың күбеһен “документаль” тип нарыҡларға тел тартылып ҡына тора... Бына бер саҡ шул уҡ Юлтый, Таһировтарҙан һуңғыраҡ быуын яҙыусылар өсөн ул осор, Таһиров һәм Юлтыйҙар осоро, *баягыса,* ысынлап та, “почти тарих” булып тойолабашланы ла шул уҡ осор тураһындағы романдарыбыҙ (Фәрит Исәнғолов, Яныбай Хамматов, Зәйнәб Биишева әҫәрҙәре) белгестәребеҙ тарафынан “Тарихи-революцион” тигән мөһөр ҙә алды. Күренеүенсә, тимәк, былары ла “ысын тарихи” түгелдәр икән әле, ә “революцион”... Ысынын кем тыуҙырыр һәм ул ҡайһындайыраҡ булырға тейеш?!. Ошоларҙың һәммәһен иҫәпкә алып, әлбиттә, Ғәли ағай Ибраһимовҡа үҙ өҫтөндә оҙаҡ ҡына эшләргә, бөтә Союз һәм бөтә донъя классикаһынан өйрәнергә тура килде. Шул Һабаҡка яҙыусының шәхсән үҙенең дә, туған башҡорт халҡының һәм төрлө-төрлө быуаттарҙа мәҙәниәтебеҙҙә эҙ ҡалдырған иҫке башҡорт авторҙарының да — Тажитдин Ялсығол әл- Башҡордиҙың (1768 — 1838) “Тәүәрихе болғариә”, Ҡадир Әли бәктең (XVI быуатта тыуған) 1602 йылда яҙып тамамлаған “Йылъяҙмалар йыйынтығы”, анонимдың (XVII быуат аҙағы) “Дәфтәр-и Сынғыҙнамә” һәм Йәнә лә бер анонимдың бөйөк әҫәренең фрагменты һымағыраҡ ҡабул ителгән “Һуңғы Һартай”, Мөхәммәтсәлим Өмөтбаевтың (1841 — 1907) “Ядкәр”, Ризаитдин Фәхритдиндең (1858 — 1936) “Аҫәр”, Ғәли Соҡоройҙоң (1826 — 1889) “Манзумате ғалиә”, Соҡоройҙоң улы — атаһы кеүек үк шағир, ғалим, күренекле педагог Ғарифулла Кейековтың (1861 — 1918) Йәш ғалимыбыҙ Миңлеғәли Нәҙерғолов тарафынан тикшерелгән “ башҡорт тарихы” кеүек әҫәрҙәр тураһындабара һүҙ — Шуларҙың да ынйы-гәүһәр бөртөктәре лә был Һабаҡта бермә-бер ҡуш килә ялғанып теҙелгәндер. Ә ул телгә алынған тарихтарҙа, бөгөнгө роман ҡанундарынса роман булмаһалар ҙа, бөгөнгө тарихи романға кәрәкле хәтһеҙ элементтарбар — улар ҙа бит үҙ заманының һәм мөхитенең “тарихи роман”дары!

Ысын тарихи роман тыуҙырыу өсөн Ғәли Ибраһимовҡа, күренеүенсә, бөгөнгө көн һабаҡтары менән генә сикләнмәй, быуат-быуат үткәндәргә лә бағырға тура килгән һәм ул һүрәтләү объекты итеп кәм тигәндә бынан ике быуат элекке заманға — “Крәҫтиәндәр һуғышы” тип аталмыш күтәрелешкә төбәгән күҙен. Ләкин тарихи ваҡиғаларҙан һуң күпме ваҡыт үткәндәме ни эш! Ниндәй ҙә булһа йылғыр автор бынан биш быуат элгәре үткәндәр тураһында ла үҙенсә йор ғына йүгерекле ҡәләме менән берәй «нәмә” әтмәләргә лә шул «намә”һен “тарихи” тип билдәләп ҡуйырға ла мөмкин бит әле, тик ул “тарихи” маркаһын күтәрә аламы? Шул уҡ Гамлет әйтмешләй, бына нимәлә мәсьәлә!..

Ғәли ағай Ибраһимовтың “Кинйә”һенең икенсе китабы ла, ниһайәт, донъяға килгәс, *баягы* “кулуар һорауҙары»на ла яуап алынғандай булды — оҫта үҙенең әҫәренең Йәмғе туҡымаһы менән тап шуларға яуап биргәндәй ине.

Уҡыусыларынан ишетелгән берҙәм беренсе фекер: шәп роман тыуған, беренсе китабынан да һәйбәтерәк булған!

Ә был шәплек, “театр ул кейем элгестән башлана” тигәндәй, оҫтаның ҡулы һипләп Һалған дәү бинанәң ишеген тартып асыуҙан уҡ

төҫмөрләнә бит әле — әҫәрҙең, “Кинйә”нең, хәс тә мул һыулы Ағиҙел һымаҡ талғын, буйҙарында тулышып бешкән еләк-емештәй һутлы, кәрәк урында күген ярған бөркөт саңҡыуындай зыңлы, миҙгел-миҙгел ҡурай шаңғырылай моңло, ҡыҫҡаһы, халыҡсанбай теленән үк ул шулай. Бөйөк Горькийҙың, әҫәрҙең төп төҙөлөш материалы, кирбесе — *һүҙ* тигән фекерен яҡшы беләбеҙ. Тел особоҙҙа ҡатлам-ҡатлам быуаттарҙың, дәүерҙәрҙең мәҙәниәт ҡомартҡыһы — донъялағы иң архаик (боронғо) телдәрҙең береһе булған башҡорт теленең икһеҙ-сикһеҙ һүҙ байлығы тулышып-ташып тороуы, ҡул особоҙҙа донъя мифологияһының аҫыл гәүһәр ташы — башҡорт мифтары һәм уларҙан үркеп сәскә атҡан йырҙарыбыҙ, эпостарыбыҙ, әкиәт һәм легендаларыбыҙ сыңрауыҡлы бөтмәҫ-төкәнмәҫ әҙәби байлыҡ, хазина булып көтөп ятыуы ла бик мәғлүм. Ысын художник шуларҙы эйелеп алмай, төҙөлөш-бинаһына һалмай булырмы?! Ә бит быны эшләр өсөн дә ысын оло мәҙәниәткә эйә булыу — күңел даирәһендең киңлеге, эрудиция кәрәк! Ана шул гүзәл байлыҡ “Кинйә”нең эпиграфынан һәм автор хикәйәләүенән алып персонаждар телмәренәсә бүлектән-бүлеккә, һуңғы биткә тиклем өҙөлмәй-таушалмай, кинәндертеп оҙатабара беҙҙе. Йырлап торған бөгөнгө тел стихияһы хәҙер инде онотолған, Йәки һирәк ҡулланылған хазиналар менән тығыҙ, бик тәбиғи бәйләнеп, аралашып, әҙәби телгә яңы өлөш керетеүсе күркәм синтез тыуҙыра, һөҙөмтәлә заманалар арауығын ҡыҫҡартып, яҡынайтып, һүрәтләнмеш ваҡиғаларға уҡыусыларҙа теләктәшлек, үҙ итеүсәнлек, күсәгилешлек тойғолары тәрбиәләй. Һәм шуныһы ҡиммәтле лә фәһемле: уҡыусы тел хазиналарына һоҡланып ҡына ҡалмай, ә улар аша мәҙәниәтебеҙ тарихынан үҙе өсөн күп кенә асыштар яһай. Тел стихияһы тиһәк тә, стихиялы түгел ул: автор тарафынан бында һәр ни миҡдарлап үлсәнгән, артмаҡлы-йөкләмәле. Бөтәһе төп маҡсатҡа хеҙмәт итә. Әйткәндәй, романдың көллө саралары ла — Шулай уҡ: әҫәр концепцияһына өлөш булып инмәгән бер ни ҙә юҡ. Барыһына ла туҡталыубыл мәҡәләнең бурысы булмағанлыҡтан, миҫал өсөн әйтем һәм мәҡәлдәрҙең нисек һәм ни өсөн ҡулланылышын ғына алып китәйек.

“Халыҡ кейем ҡаршыламай”, — яуҙан ҡайтыусы батырҙарҙы ҡаршы алыу тураһында.

“Ҡылыс ҡайрай Уралым”, — Батша самодержавиеһының ҡыҫымына ҡаршы халыҡ нәфрәтенең сағылышы.

“Ер йөҙөн туфан баҫҡанда ла өйрәктәрҙең һис ҡайғыһы булмай шул”, — Батша колонизаторҙары менән бергә халыҡ ҡанын эсеүсе башҡортбайҙары тураһында.

“Атаһы болан атмағандың улы ҡолан аламы”, — БайғУралар лагерына ыҡҡан ялсы тураһында.

“Ил эше ир муйынында булыр”, — Кинйәнең уйланыуы.

“Ат толпары арҡанға төшһә, ҡыҙ матуры тарханға төшкән”, — башҡорт ҡатын-ҡыҙ яҙмышы.

Йәки тағы:

“Йоҙроғоңдо бүре өңөнә тыҡма — ҡулһыҙ ҡалырһың”.

“Себен тулап эш ҡыра аламы?”.

“Яңғыҙҙың яны ла юғалыр, күмәктең уғы ла табылыр”.

“ Баш ҡайҙабара — ҡойроҡ шунда”.

“Бүре, асҡа түҙһә лә, ҡоллоҡҡа түҙмәй”.

“Ҡойроҡло йондоҙ көн дә күренмәй”.

Бына шуларҙан ғына ла романдың төп идеяһы, концепцияһы тойола бирреп ҡала, буғай. Күп планлы был эпостың геройҙарының һәм персонаждарының яҙмыштары ла ил яҙмышы, халыҡ яҙмышы, бөтә Рәсәй яҙмышы менән ҡуша туҡылып, бер-береһе аша тоташтырылып, ҡырҡ армытлы ҡамсылай, бер-береһенә тығыҙ итеп үрелгән һәм үҙәгендә бөйөк урыҫ халҡы беркетеп торған берҙәм Ватан күрһәткесенә килтерелгән. Бындай мәҡәләлә һанап та бөтөп булмаған художество саралары, художниктың сағыубуяуҙар Палитраһы ана шул изге маҡсатҡа хеҙмәт иткән. Һәм Кинйәнең абыҙлығының, ил ағаһы булып өлгөрөүенең асылы ла, хәҙергесә әйткәндә, ана шул изге “берҙәм ғаилә тойғоһо”на ныҡ инанып өлгәшеүендәлер әле, моғайын. Сөнки шундай булмай тороп, оҙаҡламай Рәсәй империяһының нигеҙҙәрен дер һелкетер “Крәҫтиән һуғышы” етәксеһенең ышаныслы уң ҡулы рәүешле олпатланып ҡалҡынасаҡ Кинйә Арыҫланов булып китеү ҙә уға һис мөмкин түгел. Кинйә Арыҫланов үткән мең ғазаплы ошо юлда беҙ һәр төрлө һәм дәүмәлле фронт баталияларының да, төрлө милләт халыҡ тормошоноң күп ҡатламлы ҡырҡымының (срезының) да шаһиттары булабыҙ, Кинйә менән ҡуша аң-тоң баҫҡыстары буйлап күтәреләбеҙ. Ата-бабалар үткән юлдың ғәрәсәттәрен күреп, йөрәк менән кисереп, үҙебеҙҙең ошо көндәге “берҙәм ғаилә тойғоһо”ноң ғәзиздәрҙән ғәзизлеген, бер нимәгә лә алмаштырғыһыҙ бәхет, изге аманат икәнлеген тоябыҙ. Тимәк, тарихи жанр үткәндәрҙе — бөгөнгөгә тығыҙ ялғаһа, шуның аша илде киләсәктең яҡты бинаһын Һалыуға хеҙмәт иттертә. Ә Шул миссияны баҙыҡ башҡарыусы ғ. Ибраһимов ижады, тарихи жанрҙы лайыҡлы үҙ урынына ултыртып, зарури бөгөнгөбөҙгә хеҙмәт итә.

2

Эйе, ауыр ғазаплы тормошта сикһеҙ интегеп йәшәй шул ябай халыҡ XVIII быуатта, яуыз батшалыҡ шарттарында. башҡорт ярлыһы ла, урыҫ ярлыһы ла. Ошо хәлде автор ҡырыҫ реализм ҡанундары ҡушыуынса һүрәтләй. Әммә шул уҡ реализм иң мөһим бер нәмәне лә ҡанлы күҙйәш даръяһында күмелдертеп ҡалдыртмай — халыҡтың һынмаҫ рухы, азатлыҡ даулау ҡеүәһе, бойондороҡһоҙлоҡ ялҡыны! Был тәңгәлдә, әйтер инем, “Кинйә” авторы тарихсы булараҡ юл яра. Юғиһә, бәғзе бер авторҙың тарихи, Йәки тарихи-революцион тип тамғаланған әҫәрҙәрен уҡыһаң, үткәндәге башҡорт халҡы шундайын да имәнес бахыр, Наҙан, күҙһеҙ-телһеҙ ярым ҡырағай меҫкен булып күҙ алдынабаҫа ла, бының ише әтрәгәләм ни рәүешле бер ҡор булып уҡмашҡан да Һуңғы ике йөҙ йыл дауамында һәр егерме биш йыл Һайын Урал буйҙарын дер-һелкетеп

азатлыҡ ихтилалдары күтәрҙе икән, тип аптырап ҡалаһың. Уйлап ҡарағыҙ: Пугачев — Салауат етәкселегендәге яуҙарҙа ҡанһыратылып ҡырылған, тар-мар ителгәндән һуң да, шул афәттән һуң утыҙ ете йыл үтер-үтмәҫтән, шул уҡ башҡорт халҡы бөтәбеҙгә уртаҡ Рәсәй-әсәй өсөн Наполеонға ҡаршы күтәрелгән дә тулыһынса үҙ иҫәбенән утыҙ полк кавалерия төҙөп ебәрә алған фронтҡа һәм ул полктар данлы урыҫ армияһы сафында бородиноны ла, бөтә Европаны ла уҙып, Парижғаса етеп әйләнеп ҡайтҡан. Йә булмаһа граждандар һуғышы осорон, ундағы яугир ҡыҙыл башҡорт частәрен алайыҡ иҫкә!.. Ил баш ҡалҡытып даулашыр *азатлыҡ* тигән нәмә ул шундай: үҙен байраҡ-тыу итеп юғары сөйҙөртөү хаҡына халыҡтың һынмаҫ рухлы, алмастай таҙа үҙәкле булыуын шарт итеп ҡуя. Бына шуны аныҡ тойоп эш итә Ибраһимов. Халыҡ зарын, күҙ йәштәрен дә самаһын самаға килтереп бирә белеү кәрәктер, күрәһең. Юғиһә беҙ, үҙебеҙ ҙә һиҙмәйенсә, башҡорт халҡы тураһында яуыз батша сатраптары уйлап сығарған һәм тараткан уйҙырмаларҙы ҡабатлап ҡуйыуыбыҙ бар. Ни өсөн тигәндә, бөтә төр баҫҡынсыларҙың, колонизаторҙарҙың да ҡанлы ҡарсыға тырнағы борондан билдәле: тәүҙә халыҡты эшлекһеҙ тип иғлан ҡылып миңрәүләтеү, шунан уның ер-һыуҙарын тартып алыу. Батша сатраптары ла, әлбиттә, ошо дөйөм алымдан арынмаған: " башҡорт — ялҡау, томана-наҙан, иген дә игә белмәй — ерҙәре әрәм ята", — тигән яла-һылтау менән башҡорт ерҙәрен талау сәйәсәтен үткәргән, мәҫәлән. Ә элек-электән килгән игенселек мәҙәниәтенең шул уҡ батша сатраптары тарафынан башҡорт баш күтәреүҙәрен баҫтырғанда ҡабат аяҡҡабаҫҡыһыҙ итеп бөлдөрөлөүен уйлап та ҡарамайҙар. Ләкин уны һис тә булмаһа ошо көндәрҙә ҡабилиәтле быуын һаналмыш беҙ уйларға, дөрөҫ аңларға һәм аңлатырға тейештер!.. — Ошондай уйҙар борсой романды уҡығас. Сөнки дөйөм һүнеү һәм деградациялар арҡаһындабашҡорт үҙе үк этнос булараҡ бөтә барған, тигән ҡараштың һәм шунан сығып яһалған ҡайбер ҡара һөрөмлө һөҙөмтәләрҙең төптө дөрөҫ түгеллеген дә (Р.Ғ. Кузеев. Историческая этнография башкирского народа. Өфө, 1978 йыл, 260-ынсы бит), башҡорт ҡара наҙан булған, тигән бәғзе ҡараштың ялған икәнлеген дә (Б.Х. Юлдашбаев. История формирования башкирской нации. Өфө, 1972 йыл, 244 — 245-енсе биттәр), башҡорт элек-электән илһеҙ-ерһеҙ ҡырағай булған — ҡамғаҡ кеүек тәгәрләп кенә йөрөгән, игенселек менән дә шөғөлләнмәгән тип һөйләргә һәм яҙырға яратыусыларҙың ялғый хата ҡараштa тороуҙарын да совет фәне күптән инде раҫланы. 1772 йылдабашҡортостанға сәйәхәтендә (әйткәндәй, "Кинйә" романында был ваҡиға мауыҡтырғыс тасуирлана) атаҡлы академик П.С. ПАллас ул тУрала, хәлдәрҙе үҙ күҙҙәре менән күреп, бына нимә тип яҙа: " Башкиры здесь, как и татары и мещеряки уфимские, имеют *великое земледелие...* довольно скота... *постоянные деревни, в коих они как летом, так и зимою живут*". Һәм башҡорттар Йәшәгән ер буйлап төньяҡҡараҡ уҙғас та ул, академик Паллас, тағы ла хайран ҡала: "*...богатые здешние башкирцы столь изрядные землепашцы,* что множество ржи на камские винокурни отвозят" (Б.Х. Юлдашбаевтың әйтелгән китабынан, 87-нсе бит). Ә Шул Паллас

килеүҙән 32 йыл ғына элек Ҡараһаҡал етәкселегендәге баш күтәреш баҫтырылып, бөтә Башҡортостан ҡанғабатырылыуьн, йөҙәр-йөҙәр башҡорт ауылдарьның яндырылып юҡ ителеүен, халыҡ хужалығы тулы бөлгөнлөккә төшөрөлөүен хәтерләйек тә, ә ул ваҡыттарҙабашҡорт иген сәскәнмә һуң, тигән шикле һорауға лабатша ҡырғьн әтрәттәренең “шанлы эш”тәре тураһьндағы хисап биреү документтары теле менән аныҡ яуап бирәйек. Шуны ла ныҡ иҫтә тотайыҡ: батша хөкүмәте азатлыҡ яулап күтәрелгән урыҫты ла, башҡортто ла, башҡа халыҡтарҙы ла берҙәй аямаған, ҡанғабатырып ҡырған, әммә башҡорттарға ҡарата яуызлығы самаларға һыймаған.

Билдәле булыуьнса, батша самодержавиеһьна ҡаршы 1739 — 1740 йылдарҙағы Ҡараһаҡалды хан итеп таныған баш күтәреүҙең дә төп нигеҙен, үҙәк көсөн башҡорт аҫабалары тәшкил итә, ә татар һәм мишәрҙәрҙе батша хөкүмәте, халыҡтарҙы “бер-береһенән айыр ҙа хакимлыҡ ҡыл” принци бьн оҫта ҡулланып, баш күтәреүселәргә ҡаршы аяҡландыртыуға өлгәшә (И.Г. Акманов. Башкирские восстания XVII — первой трети XVIII в. Өфө, 1978 йыл, 73-өнсө бит). Һөҙөмтәлә батшаның ҡырғьн әтрәттәре лә татар, мишәр ауылдарьн урап үтеп, баш күтәреүсе башҡорт ауылдарьн ғына ҡыйрата. Шуға күрә түбәндә һүҙ юҡ ителгән Аҫабабашҡорт ауылдары һәм иген баҫыуҙары тураһьнда ғьнабарасаҡ. Шулай итеп, иген сәскәнме башҡорт, тигән һорауға, роман геройы Кинйә-абыҙ һүҙҙәрен уғата ҡеүәтләп, документтар теле менән яуап бирәйек.

Уса юлы, Ғәйнә башҡорттары ерендә ҡырғьнсылар

Позжено: деревень 343, дворов 3220, кошей 88, хле ба разного сжатого загона 400, копен 658, несжатого загона 52, телег с хле бом 59, всего 1169; сена стогов 4743, в которых по примерубыла не меньше, как по 60 копен, всего 284580, да копнами 20948, всего 305528; с Сибирской стороны позжено стогов 134.

Себер юлы Урал тауҙары араһьнда ҡырғьнсылар

31 августа. Вниз по белой реке позжено 25 деревень, в них 144 двора, клетей 44, хле ба ярицы 30 загонов, ячменя 36 загонов...

...14 сентя бря вверх по белой реке по правую сторону сожжено башкирских деревень 16, в них дворов 136, ан баров 122, потолочено хле ба ячменю — 89, ярицы — 27, овса — 11, пол бы — 9, конопель 7 загонов...

...17 сентя бря. ...следуючи с командою трактом до Табьнска... сожжено деревень 102, в них строения изб 735, клетей 391, лачюг 191, шалашей лубяных 198, ан баров 550; вытолочено хле ба ржи — 78, пшеницы — 7, пол бы — 24, ячменю — 212, овса — 7, конопли 6 загонов; вызжено... ячменю 4 загона в копнах, сожжено пшеницы — 2, ячменю 13 загонов...

Ә инде роман геройы Кинйәнең үҙенең Бошман-Ҡыпсаҡ ылыҫьндағы (волосьндағы) хәлдәр:

...Командою старшины бердагулова тархана Тлевкеева... позжено деревень 537, в них дворов 3899; изб, клетей, ан баров, сараев и лачуг 3207, кошей 8, мечеть 1, мельница 1; потолочено хле ба загонов и в копнах позжено всякого хле ба — 549, ярицы — 183, ячменю — 513, пшеницы — 7, овса — 32, пол бы — 42, конопли 20 загонов; роздано регулярным и нерегулярным людям (карателям. — *Й.С.*) оставшего после воров башкирцев посеянного хле ба — 48, итого 1394 загона, да позжено копен 15... (Материалы по истории башкирской АССР, часть 1, М., Л., 1936 г., 434, 472, 474, 475 — 476-нсы биттәр).

Бьна һеҙгә, кәрәк булһа, “иген сәсмәүсе, ултыраҡ тормош көтмәүсе башҡорттар”...

Тарихи документтар ҡырыҫлығы менән бәйән ителгән ошо факттарға ғьна ҡарап та, роман биттәрендә абыҙ Кинйә Арыҫлановтың академик Палласҡа ла, үҙенең ҡан ҡәрҙәштәренә лә, башҡаларға ла: “ башҡорт ата-бабалары борон-борондан иген сәскән, игенсе булған”, — тигән һүҙҙәрен бөгөн килеп кире ҡағып маташыу мөмкинме һуң?! Әгәр иген икмәһә, бесән сапмаһа, ауылдар ҡороп ултырмаһа, шул тиклем дә иген баҫыуҙарьн, кәбәндәрҙе һәм күбәләрҙе, ауылдарьн, иген келәттәрен, тирмәндәрҙе яндырып юҡ итеп булыр инеме һуң? Шуныһы ғәжәп: ошо утлы ҡойондарҙан, ҡанлы афәттәрҙән һуң да 32 йыл эсендә халыҡ хужалығы ҡабат тергеҙелеп, башҡорт ерендә немец Паллас хайран ҡалырлыҡ үҫешкән игенселек, малсылыҡ булһьн әле! Һәм башҡорттоң үҙенең ер аҫты хазиналарьн танып табыусылары ла, рудопромышленниктары ла, бутал (металл) иретеп ҡойоусы һәм сүкеүсе оҫталары ла, нефть ятҡылыҡтарьн асып кәрәсин заводы һалырға ашҡьнып йөрөүселәре лә, замананың үҙенә күрә химиктары — дары яһаусылары лабарлығьн һөйләп ғорурланыуы менән хаҡлылыр абыҙ Кинйә. Хәҙерге Башҡортостан территорияһьнда бьнан биш мең йылдар элгәре үк әле кешеләр бутал иретеп, малсылыҡ менән бергә игенселек менән дә шөғөлләнеүҙәре билдәле. Былар бөтәһе лә ҡомартҡылар һөйләгән, иҫке документтарға яҙылып ҡалған, романсы йәтеш файҙаланған факттар. Һәм хәҙер ҙә беҙ ана шул тарихи факттарға оҫта таянып, бөгөнгө башҡорт игенсеһен, Йәки эшсеһен, “ Башҡорттоң бер ние лә булмаған” тип уйҙырмалау урьньна, һинең һөнәреңдең тәрән тамыры бар — ата-бабаларың эшен, аманатьн дауам иттереүсе һин; Бөйөк Октябрь революцияһы, совет хакимиәте һиңә туған халҡыңдың шул тарихи тапҡырлығьн, егәрлелеген йөҙ мәртәбә, мең мәртәбә арттырырға мөмкинлек бирҙе, барлыҡ шарттарҙы тыуҙырҙы, тип тәрбиәләһәк (ә романсы Ғәли Ибраһимов тап шуны үтәгән дә!), тарихи яҡтан дөрөҫ тә, илгә файҙалы ла булыр, минеңсә. “Правда” гәзите үҙенең бер баш мәҡәләһен Йәш быуьнды “Тарих менән тәрбиәләргә” тип юҡҡа ғьна атаманы. Ғәли ағай Ибраһимов тап ана шул ихтыяжды әҙип күңеле менән тәрән аңлап, Ватан мәнфәғәттәрен ныҡ күҙәтеп бөтмөрләгән романьн.

Әйткәндәй, халыҡ тарихьның ауыр дәүерҙәрен дөйөм илау-һыҡтау ғьна рәүешендә һүрәтләргә һәүәҫлек сире бербеҙҙә генә түгел, хатта

тарихы нык эшләнгән халыктарҙа ла күренгеләй икән ул. Мәҫәлән, Батый хан яулап алыуынан һуң Урҙа иҙеүе аҫтындағы урыҫ кенәзлектәрен шулай ҡара тонда ғына төҫмөрләп яҙыу ғәҙәте тураһында әсене берәк әйткәне бар үҙенең бер интервьюһында тарих фәндәре докторы, профессор, яҙыусы Вадим Викторович Каргалов (“Советская Россия” гәзитенең 29 декабрь 1985 йылғы һаны). Тимәк, “Кинйә” романы миҫалында ундай сирҙең беҙҙә инде үтелә барыуын да күреп була икән.

Тарихи романдың төп сифаты — һүрәтләнгән ваҡиғаларҙың тап тарихи икәнлегенә ышандырыу көсөндә ул, минеңсә. Әйтәйек, атаҡлы Дюма ла романдарын баяғы бер ҡәләмдәш талап иткән “Архимед таяныу нөктәһе”нә — тарихи факттарға һылтанып яҙған. Ләкин уларҙы “ысын тарихи роман” итеп ҡабул ҡылабыҙмы? Юҡ, әлбиттә. Әммә Йәштәр йығылып ятып уҡығас, ундай беллетристика ла, моғайын, Йәшәргә хаҡлы — идея үҙәге генә төҙөк була күрһен. Шул уҡ ваҡытта Алексей Толстойҙың, беҙҙең замандың бестселлерҙар авторы Валентин Пикулдең дә романдары бар бит әле. Улар бикның уҡымлы ла, тарихи ҙа. Сөнки уларҙа художник хыялы менән тарихи документ көсө икеһе бер-береһен хасил ҡылған, тултырышҡан. Уға китһә, “Кинйә” романы ла ана шулай ҡабул ителә миңә. Ижтимағи пландағы хәл иткес төп ваҡиғалар документтарға нигеҙләнеп үҫеп сығыу арҡаһында ундағы шәхси яҙмыш уйҙырмалары ла (мәҫәлән, Хлопушаның ағас аяҡ мажараһы) Шул шифалы документаллек монарына сорналып, “ысынлап та булған хәл” ҡеүәһен ала, тулайым ышандыра...

Оҙаҡ йылдар буйы нығышып архив саңдарын йота-йота ювелир һымаҡ ентекләп туплаған был сифат, документаллек, художниктың талант тигелендә алтындай иретелеп, бөтә ваҡиғаларға ла йән өрөүсе тылсым итеп ҡойолған. Ул тымсым беҙҙе заманының ете йыллыҡ һуғышы аша Европа һәм Азия киңлектәре, Петер бург һәм Берлин, жунғар һәм ҡытай хакимдарҙары менән дә күҙләштерә, меңәр-меңәр йылдар үтәләй Геродот һәм Гомер Йәшәгән дәүерҙәргә елдертеп алып китә, автор һүҙенә олпатлыҡ, абруй һәм ихтирам өҫтәй. Ундағы ғилми эҙләнеүҙәр һәм табыштар, әйтәйек, төрлө ырыуҙар һәм нәҫелдәр шәжәрәһе, “ Башҡорт” этимологияһы һәм башҡорт ырыуҙарының иҫке тарихы, шул иҫәптән башҡорт тоҡомоноң Уралда ҡасан төйәкләнеү проблемаһының үҙенсә ҡуйылышы киң масса китап уҡыусылар өсөн генә түгел, хатта ғалимдарыңа ла кинәнесле асыш тойғоһо бирерлек. Романдағы колоритлы бер геройға — тарпан толпарын эйәрләп менгән алпар егеткә оҡшатамын да мин авторҙы, тарпан затлы тарих ялынан ялмап алған егет итеп күҙ алдыма килтерәм.

Ғәли ағай Ибраһимов тарихи проза ерлегендә үҙенең бинаһын ҡорҙо, инде түбәһен я баһы ғына ҡалды. Яҙыусының тыуған ерендә күккә олғашырға осланаһы ҡалған игелекле шәке тау һыны кеүек, алыҫтарҙан күренеп ултыра ул. Шуныһы ҡыуаныслы, ул яңғыҙ үҙе түгел, тирәһендә уға оҡшаш түбәләр һәм үркәстәр монарлана — Кирәй Мәргән, Әхиәр Хәкимов, Яныбай Хамматов романдары...

Ун биш йыл — ун биш аҙым... XXI быуаттың тылсымлы ҡапҡаһы... Уға кемдәребеҙ нимәһе менән барып керә алыр?..

Алда торған егәрле йылдарҙа Ғәли Ибраһимовтың роман бинаһының башы ябылып бөтөр ҙә ул мөһәбәт Йөрәк тау, Ҡуш тау, Тора тау, йәки Ирәмәл тау шикелле офоҡтоң дүрт яғынан да күренерлек ҡалҡыныр. Яңы быуатта ла был бина иленә хеҙмәт итер, кешеләрҙең күңелдәрен йылытыр.

24.01.1986.

Йәш ҡәләмдәшемә әйтер һүҙ

(Найыл Ғәйетбаеввтың "Әлфиә" повесенә ҡарата)

1

Авторы тарафынан 18 йәштәгеләргә арналған был әҫәр үҙенең йыйнаҡ һәм шағирәнә исеменән уҡыусыла беҙҙең иң гүзәл донъябыҙ — нәзәкәтле ҡатын-ҡыҙ образы менән яҡындан танышыуға йылы өмөт уята. Уҡыусы шул өмөт менән ҡулъяҙманың тәүгә биттәрен аса, ҡыҙыҡһынып уҡырға ла керешә. Тимәк, автор-һунарсы тарафынан эҙәрлекләнгән беренсе ҡуян атылды — әҫәрҙең исеме ижади маҡсатҡа хеҙмәт итте. Бер һүҙ менән әйткәндә, повестең автор Һайлаған исеме берәгәйле булып сыҡты.

Инде, хәлдән килгәнсә, шул маҡсаттың хәл ителешен берәмтекләп барлап ҡарайыҡ, быны өсөн тәүҙә автор һынландырған "Әлфиә" тигән поэтик һәйкәлдең уны йыйнап тотоп торған эске тупаҫ һөлдәһенә — сюжет каркасына ҡараш ташлайыҡ.

Әгәр ҙә төп ваҡиғаларҙы бүлектәрҙең номерацияһы тәртибендә теҙеп сыҡһаҡ, түбәндәге күренеш хасил була.

1. Морат ауылының 17 йәшлек һылыу ҡыҙы Әлфиә Магнитогорск ҡалаһындағы пединститутҡа уҡырға китә, вокзалда уны ата-әсәһе һәм һөйгән егете Рафиҡ оҙатып ҡала.

2. Әлфиә вагонда Һаҡалтай егет (һуңынан уның Ғәли исемле икәне асыҡлана) менән ресторан-вагонға "үҙәк ялғарға" китә.

3. Ресторанда Әлфиә менән Һаҡалтайҙың интим мөнәсәбәттәре башлана.

4. Әлфиә менән Һаҡалтай егет ресторандан үҙҙәренең вагондарына ҡайта, икеһенең дә бер күреүҙән бер-береһенә ғашиҡ булыуҙары асыҡлана.

5. Әлфиә, студентка, совхозға бәрәңге ҡаҙышырға ебәрелә, унда, матайына атланып, Һаҡалтай егет — Ғәли килеп етә, ике йәш йөрәк һары япраҡтар ҡойолған урманда берегә.

6. Әлфиә Магнитогорскиҙа — Рәсимә әхирәте менән бергә Ғәлиҙәрҙең танышы ҡарсыҡта фатирҙа тора, Ғәлиҙең әсәһе Гөлсөм апай

Әлфиәне килен итеп алырға ниәтләнә. Әлфиә йомош менән Ғәлиҙәргә бара, сәй табынында егеттең әсәһе менән дә яҡынлаша.

7. Әлфиәне Ғәли үҙҙәренең командаһының баскет бол уйынын ҡарарға саҡыра, стадионға китеп барышлай, көҙгө баҡса ҡосағында туҡтала улар. Ғәли ҡыҙға Тәбиғәт батыр тураһындағы хикәйәтте һөйләп ишеттерә.

8. Әлфиә баскет бол ҡарай, Ғәлиҙәр командаһының, Ғәлиҙең еңеүе өсөн йөрәкһеп яна.

9. Ҡыш килә. Әлфиәнең әхирәте Рәсимә лә ғашиҡ була Ғәлигә, Әлфиә менән Ғәли араһы боҙолошоуҙан файҙалана.

10. Әлфиә ауылға ҡайтып килергә йыйына, Ғәлиҙәргә барып, унда Ғәли менән Рәсимәне күрә, Әлфиәнең күҙ алдында үбешә улар.

11. Әлфиәне станцияла атаһы һәм Рафиҡ ҡаршы ала. Әлфиә Рафиҡҡа иғтибарһыҙ, Ғәли унын күңелендә.

12. Рафиҡ урамда Әлфиәне “тота”, бөгөн егеттең тыуған көнө — ҡыҙҙы, ҡыҫтап, ҡунаҡҡа саҡыра. Әлфиә мәжлескә барырға мәжбүр була, ләкин Рафиҡ менән араны өҙөргә ғәйрәтлек таба, донъяла ул Ғәлиҙе генә һөйөүенә инана.

Күреп тораһығыҙ: әҫәрҙең схемаһы үтә ябай ҙа, яңылыҡһыҙ ҙа. Һәм шуға ла иғтибар иткәнһегеҙҙер: автор бында ваҡиғаларҙы тормоштағы һымаҡ эҙмә-эҙлекле ағышында, бер урында ла өҙөлмәгән, өлөштәре буталышмаған төҙөк сыл быр быуындары рәүешендә төҙөп бирә. Йәғни әҫәр фабулаһы унын сюжет һыҙығы менән тап килә. Тупаҫыраҡ әйткәндә, автор бында сюжет төҙөү өсөн баш ватып тормай — фа булаһын сюжет итә лә ала. Һайлап алынған ваҡиғалар, бер-береһенә ҡуша теҙеп Тағылған һәм геройҙары ултырып барған вагондар кеүек, фа була-сюжет рельстәре буйынса йүгерә, юлда булған телеграф бағаналары, разъездар һәм станциялар логик тәртип буйынса сиратлаша. Бында бер нәмә лә үҙенең урынынан ҡубырға, әйтәйек, 1-енсе Һанлы станция ҡапыл, көтмәгәндә, 5-енсе йә 6-нсы урынында булып ҡуйыуы мөмкин түгел. Был “тимер юл логикаһы” беренсе бүлектән үк, Әлфиә үҙенең һөйгән егетен — Рафиҡты хушбуллашыу станцияһы рәүешендә тормош юлының артында торғоҙоп ҡалдырып сығып киткәнендә үк һиҙелә биреп ҡуя ла уҡыусыһы күңелендә фа буланың ялҡытҡыс тимер юлы буйлап һуңғы станцияғаса таныш ландшафт кисереп барыу ихтималлығы Һағайтыу уята. Ысынлап та, сюжет төҙөй беләме һуң әле был автор, ниңә һүҙҙе героиня ташлап киткән “станция»нан башларға? Әгәр ҙә бик кәрәк булһа, Әлфиәнең күңел дауылын билдәләүсе иҫтәлек-маяҡ рәүешендә, ниңә уны юлдың берәй урталығына, сатнараҡ илтеп ҡуймаҫҡа, шунын менән фа буланы өҙмәҫкә лә йәнле сюжет төҙөргә керешмәҫкә, тип ҡысытып ҡуя ҡул. Ләкин әлеге йылғыр һунарсы атҡан беренсе ҡуян — тәүге ҡыҙыҡһыныу — уҡыуыңды дауам итергә ҡуша ла әҫәр һине үҙенең ихлас төҙөклөгө менән ылыҡтырып алып инеп китә, ошо тойғо иң аҙаҡҡы биткәсә дауам итә. Нәҙберек күңел, бара-тора, әҫәргә эйәләшеп, автор Һайлап алып беҙгә “таҡҡан” ваҡиға-вагондарҙың күбеһенең камиллығы, үҙ урынында икәнлеге менән ризалаша һәм баштағы сюжетһыҙлыҡ тураһындағы ҡәнәғәтһеҙлеген дә “рельстәр”ҙән алып ташларға мәжбүр була. Тимәк,

был тәғәйен әҫәрҙең тәғәйен авторы тарафынан фа буланың сюжет итеп ҡулланылыуы аҡлана. Әҙәбиәт тәжрибәһендәге йыш күҙәтелгән осраҡтарҙан айырмалы рәүештә, фа булалылыҡ был юлы авторға уңышһыҙлыҡ килтермәгән, ә унып ижади маҡсатына хеҙмәт иткән булып сыға. Быпың сере нимәлә?

Әгәр Әлфиә образын ҡалтай һынландырыуҙы, математика теле менәнерәк әйткәндә, өс үлсәмдә генә (в трех измерениях) бойомға ашырһа, был ғәҙәти каркасҡа гипс ҡойоу, әлеге Йәнле Әлфиә урынына сериялы гипс һын эшләп сығарыуҙан ары китмәҫ ине автор, минеңсә. Эйе, гипстан ҡойолған был һындың Әлфиә тигән матур исеме лә, арауыҡта билгәгән елле майҙаны, бейеклеге — өс үлсәме лә булыр, ләкин беҙҙең йөрәккә үтеп инеп тулҡынландырғыс йылыһы, йәне генә булмаҫ ине, моғайын. Быпың өсөн Әлфиә һынына иң мөһим бер мөғжизә — үле тәнгә йән өрөүсе үлсәм етешмәҫ ине. Ябайлыҡтан мөғжизә яһаған, сыбар тормош ваҡиғаларынан сәнғәт әҫәре тыуҙырған беҙ әйткән был дүртенсе үлсәм — кешенең эске донъяһы, образдың тәрәнлеге. Йәш ҡәләмдәш Найыл Ғәйетбаевв ошо тәрәнлек үлсәме арҡаһында Әлфиәнең — бөгөнгө йәш замандашыбыҙҙың — тере йәнле образын тыуҙыра алған. Быға ул төп оҫталыҡ — композиция теүәллеге арҡаһында өлгәшкән.

2

Нимә һуң ул композиция теүәллеге?

Минең аңлауымса һәм ҡыҫҡа ғына әйткәндә, ул бөтә һүрәтләү сараларының берҙәмлеге, маҡсатҡа ярашлығы. Авторҙың әҫәрҙә ҡуйған идея-маҡсатына ана шул һүрәтләү саралары аша ирешелә. Ә һүрәтләү саралары иһә бөтә булған художество элементтарын — идеяны, теманы, фабуланы, сюжетты, әҙәби телде, образды, характерҙы, портретты, детальде, пейзажды, типиклыҡты, фонды, полифонияны, йөкмәткене, форманы һ.б., һ.б. иҫәпһеҙ күп Палитрабайлығын үҙ эсенә ала. Автор ошо сараларҙың һәммәһен белеп ҡулланырға, кәрәкле ваҡытта уларҙы кәрәкле самала алып, иң кәрәкле урындарға һыларға тейеш. Әгәр шуларҙы баштан-аяҡ башҡарып сыҡҡандан һуң үле ҡағыҙ-ҡулъяҙма кинәт күҙ алдында хәрәкәтләнеп, ҙур оркестр уйнаған моңло музыка булып яңғырап китһә, әҫәр тыуҙы, тигән һүҙ. Был моңда һәр ауаз тейешле миҡдарҙа, үҙенең урынында — теүәл композицияла. Был — моң, сөнки унда бер нәмә лә кәм йәки артыҡ түгел, бер нота ла ялған яңғырамай. Уны оркестрҙың бөтә төр ҡорал ауаздары бергә ҡушылып хасил ҡыла һәм был сихри бөтөнлөктө — композиция теүәллеген булдырыусы маһир (юҡҡа ғына түгел!) — Композитор тип атала. Яҙыусы ла үҙ хеҙмәтенең маһиры, композиторы булырға тейеш. Шунда ғына образлы һындың баяғы беҙ әйткән дүртенсе үлсәменә ирешелә. Йәш ҡәләмдәш Найыл Ғәйетбаев быға ни рәүешле өлгәшкән һуң?

3

Беренсенән, автор үҙе һүрәтләгән тормошто, геройҙарын, уларҙы борсолдорған ғәмдәрҙе яҡшы белеп эш итә. Уның геройҙары йәштәр һәм әҫәрҙән йәшлек үҙе аңҡый. Бөтә донъя йәшлек күҙенән йәшлек йөрәге аша кисереп үткәрелә. Шуға ла әҫәр туҡымаһы йәшлек таңдарылай үтә саф һәм ябай. Кисерештәр һәм маҡсаттар ҙа ихлас, мәкерлекһеҙ. Үҫмерлектән ҡалҡҡан Яңы быуын донъяға бер аҙ аптыра бираҡ, күҙҙәрен ҙур асып баға. Шунлыҡтан да улар өсөн ғәҙәти буяуҙар ҙа сағыу, яҫы әйберҙәр ҙә йоморо күренә. Уларҙы һәр нәмә шиғри һынланышта арбап ала. Моғайын, тип уйлайым мин, беҙҙең повесть авторыбыҙ ҙа үҙенең геройҙарын эске һоҡланыу менән яҙа, арттарынан ҡыҙығып эйәреп бара. Йәш кешеләр күҙе үтә ул беҙҙән йәш донъяны, йәш елдәрҙе таныта. Әҫәрҙең иң мөһим уңышы, минеңсә, тап ошонда.

Бына көҙгө һалҡын ысыҡлы таңда кескәй станцияла яҡындары Әлфиәне ҡалаға уҡырға оҙата.

“Ҡояш яңы ғына алыҫтағы түбәләр артынан ағастарҙың өҫтөн алһыу төҫкә буяп килеп сыҡҡайны, — ти автор, — үләндәге ысыҡтар ер өҫтөнә аңғартмаҫтан түгелгән ынйылар кеүек уйнарға тотондо... Һыйырҙар, һарыҡ-кәзәләр таңғы оҙон-оҙон күләгәләрен эйәртеп әкрен генә урам буйлап ҡуҙғалдылар. Бөтә йән эйәһе артынан үлән өҫтөндә ҡара-йәшел эҙҙәр һуҙылды”.

Был өҙөктә һәм алдағыларында ла, моғайын, ҡайбер стилистик ҡытыршылыҡтар, һүҙҙең үҙ урынын таба белмәү кеүек кәмселектәр үҙен һиҙҙертер, әммә авторҙың образлы тел менән эш итә белеүе бәхәсһеҙ. Уҡылған ҡыҫҡа абзацтан һуң көҙгө ауыл иртәһен башҡаса тәфсилле һүрәтләп тороуҙың кәрәге юҡ!

Йәнә бер битте асайыҡ та бер нисә минуттан һөйгәне менән айырылышырға торған йәш ҡыҙҙың эске кисерештәрен тыңлайыҡ.

“Рафиҡ... Башын Әлфиәнең күкрәгенә һалды. Егет кешенең бындай нескәлеге Әлфиәне лә йомшартып ебәрҙе, күҙҙәре Йәшкәҙене. Ул Рафиҡты ярата ла, Йәлләй ҙә ине. Үҙенең ошо моңһоу, китер алдынан һуңғы кистә бар уйҙарын, хыялдарын, икеләнеүҙәрен кемгә булһа ла һөйләгеһе килһә лә, Рафиҡты бала кеүек итеп күкрәгенә ҡыҫты Әлфиә... Рафиҡтың ҡарашында шул уҡ “Китмә!” тигән ял барыулы һүҙҙәрҙе күргәс түҙмәне, әсәһенең яурынына һырылды. Танау буйы әсетеп китте, ирендәре әкрен генә дерелдәне... Эргәһендә бөтә кеше уны үтәнән-үтә күрә кеүек ине уға”.

“Танау буйы әсетеп китте, ирендәре әкрен генә дерелдәне”, — тигәс, һөйләмдең һуңғы өлөшөн ҡыҫҡартып, күп нөктәне мин ҡуйҙым — физиологик яҡтан дөрөҫ, психологик йәһәттән тәрән күҙәтеүҙән һуң “күҙенән Йәш бәреп сыҡты” тип туҡталып тороуҙың уҡыусыға нимәгә кәрәге ҡала!

Әлфиә инде вагонда, уны тыуған яҡтан алып китеүсе поезд ҡуҙғала. “Вокзал һәм уның яныңдағы өйҙәр, — тип Тағы ла образлы тел менән эш итә автор, — еп менән бәйләп тарттырылған шырпы ҡа бы кеүек артҡа урғылды”. Был урында, әлбиттә, “урғылды” урынһыҙ (сөнки шыйыҡлыҡ ҡына урғыла!), авторға, бәлки, “ҡуҙғалды”, “шыуышты” кеүегерәк һүҙ ҡулланыу уңышлыраҡ булыр ине. Ләкин “еп менән бәйләп тарттырылған шырпы ҡа бы” иҫтә ҡала.

Бына шул образлы эш итеүҙең Тағы ла бер нисә үрнәге:

«ноябрҙең биш көнө буйы бер туҡтауһыҙ иҫкән ел ҡырҡып өҙгән кеүек туҡтаны”. “Сатнап торған ҡышҡы һыуыҡта бейек өйҙәрҙең Боҙ баҫҡан тәҙрәләре Йән биргән Йәнлектәрҙең күҙҙәренә оҡшап, ағарып ҡатып ҡалды”. “Поезд станцияға килеп туҡталғас, Әлфиә үҙҙәренең Ерәнен, арҡаһына ҡар һырып бөтөүенә ҡарамай, тәҙрә үтә үк таныны... Ел. Бына буран пәрҙәһен йыртып уларҙың ҡаршыһына ҡар һырылған, тоҙлап туңдырылған балыҡ кеүек ағарған, тик күҙҙәре генә ҡыбырҙап торған ат килеп сыҡты”. Ә “ишек алдында ҡараңғы күккә утлы телен болғап самауыр ҡайнай” тигән һөйләмде ҡайһы шағир шиғырға Һалмаҫ ине икән!..

Инде елеп-юртып барған уҡтай осҡор поезды күҙ алдығыҙға килтерегеҙ. “Ҡапыл тирә-яҡ аҫҡа ынтылғандай булды. Әлфиә тәҙрәнең быялаһына Һарылды. Алда йылға, киң, тыныс йылға, күренде”. Ғөмүмән, автор хәрәкәттең үткер шиғриәтен тоя, уның йәшлек тәбиғәтенә иш килеүен яҡшы белеп эш итә. Һәм хәрәкәт тураһында матур ғына лирик сигенеш яһай, уҡыусыһының күңел көҙгөһөн биҙәй. Тәҙрәнән бер туҡтауһыҙ алмашынып торған күренештәр, тимер юл буйының йор пейзажы ашҡынып сабыу тойғоһон Уғата көсәйтә төшә, уҡыусыны ла поезд тыуҙырған хәрәкәткә ылыҡтыра. Шуның менән бергә героиняның күңел хәрәкәте, әҫәрҙең сюжет хәрәкәте лә үҫә, туҡтауһыҙ алғабара. Әммә ошо урында үтә мауығып китеп, буғай, автор сама тигән нәмәне онотобораҡ ебәрә — бер туҡтауһыҙ елпелдәп үтеп торған пейзаж ялҡытабашлай. Самаһыҙлыҡҡа стилистик камилһыҙлыҡ, тел сатаҡлыҡтары ла килеп ҡушылғас, түбәндәгесә йырып сыҡҡыһыҙ шырлыҡ-буталсыҡ һәм ялған Пафослы юлдар ҙа тыуып ҡуя.

“Күҙҙе иртәнге Ҡояштың нурҙары менән иркәләп, ниндәйҙер ләззәт һибеп, баҫыу яландары күренде. Уның уртаһынаборма-борма булып ярҙары ерек-талдар менән бөҙрәләнгән йылға килеп төшә”. (Ҡайҙан, һауанан килеп төшәме?). “Бындай саҡта һиңә ваҡыттың һанаулы бирелгәнен беләһең, һин ҡабаланып осо менән алыҫ тауҙарға бәйләнеп сәғәт теле кеүек әйләнеүсе йылғаны һөҙәһең, уның һыуын эсеп бөтөрөргә теләгән аждаһа кеүек күҙеңде уйнатаһың, ярында үҫеп ултырған ағастарҙы йолҡоп алырҙай булып урғылаһың, баҫыу өҫтөндә тәбиғәттең ҙур өлөшө кеүек үҙҙәренә хас бер ритм менән йөҙөүсе комбайндарға ҡарап республика буйынса ярыштарҙа еңеп сыҡҡан комбайнер кеүек ғорурланаһың, ҡыуанаһың, күңелеңдә айырылышыу ваҡытында була торған ләззәтле моңһоулыҡ тыуа, күңелеңде әсетә-әсетә лә зем берҙәп бөтә тәнең буйлап йүгерә”.

Бындай ҡарурман шырлығынан йырып сығыуҙары, әлбиттә, Еңел түгел уҡыусыға. Ул һәләтле ҡәләмдең шундай һәләтһеҙлеге алдында ҡаушап ҡала. Ә бит беҙҙең автор ундай өмөтһөҙҙәрҙән түгел, уның теле, барыһынан элек, төҙөклөккә, образлылыҡҡа тартым. Повесть ағышында беҙҙе түбәндәге ише матур туҡымалар йыш ҡыуандыра.

“Көҙ. Һәр бер миҙгелдең үҙенә күрә бер тойғо тыуҙыра торған һәләтлеге бар. Ҡыштың тәүге Һалҡын көндәре кешене күңелләндерә, дәртләндерә, ә ҡыш, ғөмүмән, үҙе ап-аҡ әскелт-һыуыҡ төтөн кеүек күҙ алдына килә. Яҙҙа һәм йәйҙә Яңы ҡалҡыусы һәм күтәрелеүсе йәшеллек һәм йәшлек еҫе бар.

Ләкин бер миҙгел дә кеше күңелендә тыуҙырған ләззәтле хистәр Һаны буйынса көҙ менән тиңләшә алмайҙыр. Көҙ кешелә иң нәфис, моңло һәм уйландырыусы тойғолар уята. Көҙгө өҙөлөп төшөүсе япраҡтарҙы күҙәтеп кеше уйғабата, үҙенең тормошон ошо япраҡ менән сағыштыра, үткән эштәренә һығымта яһай, тәҙрәгә һуғыусы һыуыҡ ямғыр тамсыларына ҡарап, үҙенең йылы мөйөшө барлығына ҡыуана; ҡайғыра, бойоға, ниндәйҙер бер асышҡа тағы бер йыл-аҙым яһағаны өсөн шатлана, Йәки яманһыулана һәм:

— Тағы бер йыл артта ҡалды, — тип уфтана”.

Телдең ҡәҙерен белеп ҡулланыу 7-нсе бүлектә килтерелгән тәбиғәт батыр тураһындағы хикәйәттә лә асыҡ сағыла, бында халыҡсан йомартлыҡ, эпик ҡолас киңлегенә ынтылыуубар. Шулай уҡ автор тел төбө менән тумбытыу ләззәтен дә белә, быны ул диалогтарҙа уңышлы ҡуллана. Шундай бер йор һөйләшеүҙе иштетреп китәйек, бында һүҙ Ғәли менән Әлфиә араһында, улар әле генә танышабашлағандабара.

“— Дөрөҫөн әйткәндә, мин тартмайым. — Егет Әлфиәгә тура ҡараны. — Ләкин һылыу ҡыҙҙарҙы күрһәм, тартмайса булдыра алмайым.

— Ҡыҙыҡ хәл.

— Да. Ҡатмарлы физиологик процесс. Берәүгә ғашиҡ булһам, йөрәгемде тәмәке төтөнө менән тынысландырам.

— Шундай иркен тартыуығыҙға ҡарағанда, һылыу ҡыҙҙарҙы йыш күрәһегеҙҙер...” — ти ҡыҙ.

Ә “телеграф теле»нең көслө динамикаһын һигеҙенсе бүлектә — Баскетбол уйынының йәнле барышын тыуҙырыуҙа күрәбеҙ. Автор уйындың ҡыҙыулығын Әлфиә йөрәге аша үткәрә алған, Әлфиәнең мөхәббәтле үткер сәмен бер йомарлаҡ ут итеп уҡыусыһы йөрәгенә Һалған. Был бүлек хатта уйын ҡанундарын белмәгән кешене лә йөрәкһетеп яндырып дәртләндерерлек.

Шулай уҡ Һаҡалтай Ғәлиҙең дә, нәҙек даға мыйыҡлы Рафиҡтың да, Әлфиәнең үҙенең дә, башҡа персонаждарҙың да тышҡы һәм эске портреттары, характеры оҙаҡҡа хәтерҙә ҡала, күҙ алдында Һынлана.

Авторбайтаҡ ҡына һүрәтләү сараларын уңышлы ҡулланды, тимәк.

Ләкин баяғы фа була-сюжетты терелтеү өсөн, монотонлыҡтан ҡотҡарыу өсөн юғарыла килтерелгән саралар ғына етәме һуң әле? Юҡ, етмәй. Ул саралар барыһы бергә ҡушылып, һылыу ҡыҙ Әлфиә һьньн өс үлсәмдә ҡалтайтып һүрәтләргә мөмкин, әлбиттә, әммә беҙ ҡыҙҙың бик килешле тышҡы ҡиәфәтен, фигураһьн күреүҙән ары уҙмаҫ инек. Ул, бик күп гипс фигУралар кеүек үк, Ћалҡьн матурлыҡ булып ҡьна ҡалыр ине, фа буланы сюжет хәленә килтереүҙә өс үлсәмдең генә хәленән килмәҫ ине. Ә "Әлфиә" әҫәрендә беҙ бьның ыңғай яғьн күрәбеҙ — фа буланың сюжет булып әүерелеүенә шаһит быҙ. Был әүерелеште хасил ҡылыусы тылсым көсө нимәлә?

Әлеге лә баяғы, Әлфиәне һәм башҡа геройҙарҙы сюжет е бенә бәйләп тотҡан эске донъя тәрәнлегендә ул. Тып-тьн ятҡан боҙ аҫтьнда шарлап аҡҡан йылғалай, ваҡиғалар аҫтьнда икенсе ваҡиғаларҙың йәшеренеп барыуьнда. Кешеләрҙең эске донъяһы тышҡы донъя менән ҡуша хәрәкәт итеүендә. Әгәр ҙә ошо бик нескә еп өҙөлһә, сюжет һыҙығы ла шартлап тарҡалып китер, ялҡытҡыс бер фа була ғына һөйрәлеп барыр ине. Тылсым ята баяғы *дүртенсе үлсәмдә.*

Был тУрала теоретик планда сафсата Ћатыу, әлбиттә, Еңел, ә Найыл Ғәйетбаевв тигән тәғәйен иптәштең "Әлфиә" исемле тәғәйен әҫәрендәге тәғәйен миҫалға төртөп күрһәтеп ҡара, тиерһегеҙ. Һеҙ хаҡлы, был нескә еп осон тотоп алыу еңел түгел. Йыш ҡьна шулай була: икмәктең уңып бешкәнлеген ашаған саҡтабеләһең. Ә ул уңыуҙың тәғәйен сәбәбен эҙләп табырға ҡушҺалар, *баш* ватаһың. Бәлки, ондандыр ул. Бәлки, сүпрәнәндер. Бәлки, һыуҙандыр. Бәлки, тоҙҙандыр. Бәлки, мейес ҡыҙыулығьнан һәм ятыуы етеүҙәндер. Йә булмаһабарыһьның бергә ҡушылып тура килеүенәндер. Ә Шулай ҙа тәғәйен осраҡтағы тәғәйен уңышты тәшкил иткән төп сәбәпте табып була. Был юлы беҙ уны шартлы рәүештә икмәктең тоҙо итеп алайыҡ.

"Әлфиә" повесендә был тоҙ нимәлә?

Беҙҙеңсә, ул беҙҙең һүҙ башьнда уҡ әҫәрҙең сюжеты хаҡьнда борсолоп уй йөрөткәндә дасатланып телгә альнған, ҡорос рельсле тормош юльна сәфәр сыҡҡан төп героинябыҙҙың беренсе Ћанлы станция рәүешендә юл артьнда торғоҙоп ҡалдырған тере маяғьнда. Иҫегеҙҙәлер, беҙ ул маяҡты, фа буланы өҙөп сюжет яһар өсөн, ҡорос юлдың уртараҡ бер өлөшөнә йәғни 5-енсе йәки 6-нсы станция урьньна күсереп ҡуйырға теләк белдергәйнек. Әммә әҫәрҙе уҡый торғас, беҙҙең был дасат һүрелде, маяҡтың 1-енсе станция рәүешендә артта торғоҙоп ҡалдырылыуьна булған ҡаршылыҡ һьнды. Ни өсөн тигәндә, был маяҡтың арауыҡҡа таралған радиотулҡьндары героинябыҙ йөрәген юл ахырьнаса үҙенең тәьҫир зонаһьнда тота булып сыҡты. Эйе, ташлап кителгән тәүге мөхәббәт — Рафиҡ образы әҫәрҙең һуңғы нөктәһенәсә тьнғылыҡ бирмәне Әлфиәгә.

Бер Әлфиә генәме һуң әле? Уйла быраҡ ҡараһаҡ, алыҫтағы был маяҡтың радиотулҡьндары Әлфиә ашабашҡаларға — ҡыҙҙы ураҡҡан яңы кешеләргә лә таралды, уларҙың төп героиня менән булған мөнәсәбәттәренә, шуға бәйле хәл-әхүәлдәренә үҙенең мөһөрөн Ћалды.

Дөрөҫ, Әлфиә бер күреүҙән үк Ғәлигә ғашиҡ булды. Ғәли матурыраҡ, Ғәли үткерерәк, Ғәли мәғлүмәтлерәк, Ғәли мәҙәниәтлерәк һәм, аҙаҡ килеп, Ғәли йәшерәк тә. Иғтибар итәһегеҙме, тәү күреүҙән үк Ғәлигә ғашиҡ булһа ла, Әлфиә уны бер туҡтауһыҙ башҡа кемдер берәү менән сағыштыра, үҙенә күрә бер эталон менән үлсәүен дауам итә. Ул эталон — Әлфиәнең ауылда ҡалдырып киткән тәүге егете, Рафиғы. Ғәлиҙең барлыҡ сифаттары ҡыҙ күҙендә күпкә тосораҡ тарта, ләкин ул өҫтөнлөк, үҙенән-үҙе түгел, ә баяғы эталон менән үлсәп ҡарау арҡаһында сығарыла. Шулай итеп, ҡыҙҙың күңел бизмәне Ғәли яғына ныҡ ауышҡанда ла Рафиҡ үҙенең эталонлығын үтәүҙе дауам итә. Был хәл ҡыҙҙың һәм башҡаларҙың бөтә эске донъяһына үҙенең эҙемтәләрен һала, хистәр өйөрмәһен ҡуйырта һәм әҫәрҙең кульминация нөктәһенә — Әлфиә — Ғәли — Рәсимә өсмөйөшөнөң бергә килеп бәрелешенә еткерә. Дөрөҫөрәк әйткәндә, дүрмөйөштөң бәрелеше була был — алыҫта ҡалған тере маяҡ Рафиҡ табында күҙгә күренмәй бәрелешә. Һөҙөмтәлә мөйөштәрҙең яһалма парлашыуы: Әлфиә ауылға ҡайтып Рафиҡ менән осраша, ә Ғәли, демонстратив рәүештә, Рәсимәгә яҡынлаша. Ләкин ике парҙа ла ныҡлы йөрәк бәйләнеше юҡ — Ғәли Рәсимәне, Әлфиә Рафиҡты яратмай, ғәмәлдә һаман йөрәктәрҙең дүртмөйөшө бәрелешеп Йәшәүен дауам итә. Ә артабан былай барыу мөмкин түгел, йәшлек көтә үҙенекен. Ысын мөхәббәт тантана итһен өсөн, мөйөшлөлөк емерелергә тейеш. Бының өсөн беренсе булып Әлфиә ғәйрәтлелек таба — ул үҙенә тынғы бирмәгән тере маяҡтың радиотулҡындарын кире ҡаға йөрәк юлынан, Рафиҡ менән араны өҙә. Инде һәр нәмә үҙенең тәбиғи хәленә ҡайтырға тейеш, Әлфиәнең үҙ ғүмерендәге тәүге ысын мөхәббәте сәскә атырға тейеш. Был тУрала уйланыуҙы уҡыусыларына ҡалдыра автор.

5

Инде ҡайбер күҙҙе киҫкән етешһеҙлектәргә ҡараш ташлайыҡ, Йәш авторға хәлдән килгән кәңәштәрҙе бирәйек.

Төп геройҙарҙың береһе булған Һаҡалтайҙың исеме күп ваҡытҡаса уҡыусыға билдәһеҙ ҡала, һуңынан ғына уның Ғәли тигән егет икәне аңлашыла.

Әлфиәнең вагондағы Ғәли менән яҡынлығы үтә тиҙ интимлаша, хатта саманан сығып китеп, натУрализмғасабарып етә (там бурҙа тел һурышып үбешеүҙәре). Был иһә ике ыңғай геройға ҡарата насар хис тыуҙыра. Ресторан-вагондабарған әңгәмә йор диалогка ҡоролһа ла, "һыра" тигән һөрөмлө зат тирәһендә Уралыуы (хатта "һыра" һүҙенең йыш ҡабатланыуы) ла саф күңелле йәш кешеләрҙе биҙәмәй. Йәнә килеп был тәңгәлдә ҡыҙ характерының аҡланмаған тотанаҡһыҙлығы ("Һаҡалтай" менән ҡабалан-ашығыс ғишыҡ), мөхәббәтте һүрәтләгәндә автор тарафынан уның эстетик асылына ҡарағанда ла физиологияһына артыҡ иғтибар биреү, шул йәһәттән шыр-яланғас натУрализм уҡыусыны кәмһетә.

Стилистик ҡытыршылыҡтар хаҡында әйткәйнек инде.

Йәнгә тейгән тағы ла бер нәмә — авторыбыҙҙың фекерҙәрен тәүҙә башҡа телдә уйлап, башҡортса яҙыуы. Был рыялыҡ әҫәрҙең башынан алып аҙағынасабара, ундағы сатаҡ-ботаҡ һөйләмдәр һәйбәт иген баҫыуын боҙған ҡый үләндәрен хәтерләтә. Ысынлап та, бынауындай билсәндәргә һуғылыуҙан нисек кителмәһен күңел:

“Кешеләр, әйтерһең, үҙ-үҙҙәрен *ныҡлыҡҡа тикшерәләр”.*

“Уға был егеттең *йәмгиәте* оҡшай”.

“...һәм улар (повесть геройҙары. — Й.С.) *кәүҙә менән ҡолап* аҫҡа төшөргә теләмәй, май һәм ноябрь байрамдарындағы шарҙар кеүек *төрлө төҫтәргә буялып* өҫкә ынтылалар, осалар”.

“*Ләкин* Әлфиә һиҙә: *уның йөрәгенән ошо егеткә ҡарата вайымһыҙ булмаған осҡондар айырылып сыҡтылар...* Бына хәҙер үк Рафиҡҡа ҡарата мөхәббәт Әлфиәнән таяныс булмаһа һүнер кеүек тойолһа, *был егеткә ҡарата хистәр яҡлауға мохтаж түгелдәр* ине инде”.

“Егеттең а*ҙаҡҡы һүҙҙәре* бөтөнләй *әкренләп, тынып ҡалдылар”.* (Егет үҙе тынып ҡалырға мөмкин, ә һүҙҙәре түгел).

“Егет тә үҙен бик тиҙ ҡулға алды, тиҙерәк бер аҙ ҡырҡыулаша төшкән араны еңеләйтергә һәм *уға ошоға тиклемге иректе ҡуйыртырға* теләне”.

“Күҙҙәр бер-берећенә текәлеп мөхәббәттә аңлаштылар, ә *һыуған яратыу һәм һөйөү менән тулы ирендәр...* ҡушылдылар... Егеттең ҡалын ирендәре Әлфиәнең *күпереп ярым асылған ирендәре аша телен тотто* һәм *һурып алырға теләне.* Ҡыҙ күҙен йомдо, хәле бөттө, *күкрәге менән егеттең түшенә терәлде”.* (НатУрализмға тартым стилистик тупаҫлыҡ).

“Кәүҙәһенең өҫ яғы бөтөнләй яланғас”.

“Дәрес әҙерләп ултырған Рәсимәнең ҡапыл *иғтибары йәйелеүен...* һиҙмәне”.

“...сисенергә һораһа...”

“...уларҙың *береһендә Ғәлиҙе* таныны ҡыҙ”.

“Рәсимә *үҙенең иңБаштарында ятҡан егеттең* көслө ҡулдарын тойоу *менән* бөтә кәүҙәһе *менән* ҡалтырана төштө”.

“— Мин *уға алдауҙы* ғәфү итмәйәсәкмен, — тине”.

Былардан тыш, ярып таралған сәсте автор “пробор һалып таралған”, ашағанда ҡулланмалы сәнскене — “һәнәк”, кешенең буйын — “бейеклек”, ҡыу ағасты — “кибеп ятҡан ағас” тип ыҙалай. Уға, моғайын, фабула һәм сюжет хаҡында ижади уйланыу менән бергә (сөнки былар һәр саҡ бер һыҙыҡта тап килешмәҫкә лә мөмкин) башҡорт әҙәби телен тулы үҙләштереү йүнәлешендә лә артабан ныҡ ең һыҙғанып эшләй башларға кәрәктер.

Йәш ҡәләмдәш әҫәренең тағы ла бер күҙгә күренеп торған уңышлы яғы итеп шуны ла әйтке килә. Ул үҙенең геройҙарына бер ниндәй ҙә ҡара буяу һыламаған, конфликт ҡуйыртыу өсөн ҡара дегетле мәкерҙәр уйлап сығармаған. Хатта аҡтыҡ персонажына тиклем ыңғай тәбиғәтле, яҡты күңелле кеше. Ә шулай ҙа әҫәрҙе тотоп торған конфликт һиҙелә. Был — яҡты хистәр, мөхәббәт конфликты. Тимәк, мөхәббәттә, бөтә тормоштағы кеүек үк, мәкерһеҙ ҙә бәрелештәр, ҡытыршылыҡтар була ала икән. Сөнки шунһыҙ яҡты хистәргә үҫеш юҡ барыбер, был — тормош диалектикаһы. Арабыҙҙа, тимәк, шуны яҡшы тойоп эш итерҙәй өлгөр ҡәләмдәш килә.

Авторҙың, тәүге аҙымынан уҡ, көҙгөләгеләй, уңышлы яҡтары ла, уңышһыҙлыҡтары ла сағылып күренде. Уның уңыштарының күбеһе төптә, ергә күмелгән орлоҡ төҫлө шытыуҙы көтөп ята. Эйе, уның уңыш орлоҡтарының күбеһе әле төптә. Ләкин беҙ булыр шытымдарҙы ҡалын тупраҡ ҡатламы үтә күрергә, киләсәк йәшел ҡыяҡтарын төҫмөрләргә тырыштыҡ. Йәш яҙыусы ҡаршыһында шул берәгәй орлоҡтарын шыттырыу, үҫтереү бурысы тора. Ә быны өсөн тынғы белмәй көнө-төнө эшләргә, ужымдарына көн күрһәтеп мәңге тынмай әйләнеүсе Ер-әсә кеүек хәрәкәт итергә кәрәк.

Ауыр юлда арыма, биртенмә, йәш ҡәләмдәш Найыл Ғәйетбаев!

05.01.1975.

Шағирәнең “Балалар баҡсаһы”нда

Айһылыу Йәғәфәрованың (девизмы, әллә авторҙың үҙ исем-фамилияһымы?!) ябыҡ конкурсҡа тапшырылған “ Балаларбаҡсаһында” тигән шиғри шәлкеме ысынлап та баҡса йәшендәге сабыйҙарға төбәп һәм уларҙың нескә зауығын, психологияһын яҡшы тойоп яҙылған. Кескәйҙәрҙең уйындары ла, эштәре лә, *башҡа* мәшәҡәттәре лә улар күңелендә үҙҙәренә күрә граждандлыҡ, кешелеклелек сифаттары тәрбиәләүгә йүнәлтелгән төрлө хеҙмәт ҡаҙандарында ҡайнашыу, Йәки шунда ҡатнашам тип фараз итеүҙәре аша бик Йәнле, “аҫтыртын» ғына алып барылыуы менән ҡыҙыҡлы. Был — шәлкемде уҡылмалы яһай, кескәйҙәрҙең фантазияһын үҫтерә. Ә баҡсаға барыуҙарының көн дә һөйөклө Ильич бабай менән “осрашып” күрешеүҙән башланыуы, һәм шәлкемдең аҙағы иһә сағыу сабыйлыҡ бәхете өсөн тыуған илгә рәхмәт һүҙе әйтеү менән тамамланыуы ла нур өҫтәй биҙәктәргә. Шул уҡ ваҡытта редактор ҡулын һораған ҡайбер етешһеҙлектәр ҙә юҡ түгел: күп осраҡта тел тәмен тойоп эш иткән автор “бубен” (шөңгөр), “ку-ка-ре-ку!” (кикрикүк!) кеүек туған телдән яҙлығыуҙар, балаларға ауыр аңлашылған төшөнсәләр ҙә ебәргеләй. Һәм бына бындай килешмәгән рифмалар ҙабайтаҡ ҡына: янап — көләп, бесәйҙән — бәләнән, икән — микән, оялма — Оляға, ултыра — ҡарға; ижек һандары артып китеп шиғри үлсәм боҙолған урындар ҙа бар. Әммә шуныһы мөһим: “Балалар баҡсаһында” шәлкеме, яҡшы ғына редактор менән эшләп, матур һүрәттәр менән биҙәп, кескәйҙәргә китап итеп

сығарыуға ла хаҡлы. Авторға был йүнәлештә эҙлекле ярҙам ҡулы һуҙылһын ине.

20.05.1976.

Айһылыу Йәғәфәрованың “Килендәр”е

БАССР Яҙыусылар берлеге идараһына. Айһылыу Йәғәфәрованың “Килендәр” романы. (Машинкала баҫылған текст күләме 985 бит — 40 табаҡ)

Баштан уҡ әйтергә кәрәк: был авторҙың ҙур күләмле әҫәр яҙыуы тураһында ҡолаҡ осом менән генә ишеткеләһәм дә, уны уҡығаным да, ҡулъяҙмаһы проза секцияһында тикшерелгәнендә ҡатнашҡаным да юҡ ине. Шулай итеп, автор үҙе миңә бер хатында яҙыуынса, ошоғаса уҡып фекер әйтеүселәрҙең исемлегендә мин иң аҙаҡҡыһы булып торам, буғай. Ҙур күләмле материалды нәүбәттәге тағы ла бер кешенең аҡтарып сығыуы талап ителгән икән, әҫәр яҙмышын билдәләүҙә йәнә лә бер *объектив фекер* кәрәк булғандыр, тимәк.

Шуныһы ҡыуанысլы: “Килендәр” романы үҙенең тәүге бүлегенән үк фразаларының мәғәнәүи баҙыҡлығы, картиналар олпатлығы, теленең йырлап торған халыҡсанлығы, характерҙар тыуҙырыусы психологик мөхиттең миллилеге, дөйөм фекер айышының философик талғынлығы — ғөмүмән, хикәйәләү масштабының киң ҡоласлылығы менән арбап алды мине. Әҫәр, әйтерһең, мул һыулы тәрән йылға һымаҡ, Йәйрәп китеп ағыла. Шул сифаттар бөтәһе бергә эпик проза өлкәһендә Һәҙиә Дәүләтшинанан һуң эшләүсе әҙибәләр араһында Айһылыу Йәғәфәрованы иң етди яҙыусыларыбыҙҙың береһе булмаҡсы тип һанарға мөмкинлек бирә, әгәр ҙә ул оҫталығын арттырыуҙа артабан да арымай-талмай эшләргә, шул изге юлда ауырлыҡтар кисерергә әҙер булһа...

Ҡулъяҙма уҡылып бөттө, унан һуң байтаҡ ваҡыт үтте, әммә автор кәүҙәләндергән тулы ҡанлы төп образдар әле булһа онотолмай, күҙ алдында тора: Зәлифә, уның атаһы Шакир, әсәһе Әсмә, һөйгән егете (һуңынан ире) Ғәлим; Зәлифәнең яҡын әхирәттәре шәүрә, Сәлимә, Вәлимә, Фәүҡинур, кесерәк быуын Ямал һ.б.; тормош юлында ҡаңғырып аҙашҡан ҡыҙ бала Мөнирә һәм уны өҙөлөп һөйөүсе телһеҙ егет Хөсәйен; зәңгәр күҙле етем ҡыҙ Наташа һәм уның үгәй әсәһе Мәҙинә; битлек кейгән мәкерле синфи дошман Хәмзә һәм уның ҡол ителгән, кешелек хистәре тапап рәнйетелгән өнһөҙ-тынһыҙ буйһоноусан ҡатыны Йәмилә; Хәмзәнең атаһы ҡара груһ Хәмит мулла һәм уның тоғро ярҙамсыһы, һөйәркәһе — и блес затлы Мөршиҙә ҡарсыҡ; эпизодик персонаждар Хәсән ҡарт, Яңылбикә, һал ҡыуыусы Гөлбикә һ.б... Яҙыусы уларҙың һәр береһенең характерын, яҙмыш тарихын тапҡан, роман туҡымаһына таһыллы үргән. Халыҡ телен, халыҡ тормошон, психологияһын яҡшы тойоп белеү Уға халыҡ риүәйәттәрен, мәҡәлдәрен, әйтемдәрен иркен ҡулланып эш итергә, образлы фекер йөрөтөргә, ваҡиғаларҙы һәм кешеләрҙе күп урында ифрат

тормошсан деталдәр аша һүрәтләргә мөмкинлек биргән. Бына, мәҫәлән, Айытбай (бай кейәүе) менән Сәрмәндең (ярлы тимерсе) бәйгеләге алыш-көрәшенән бер деталь: “Мәрүс күҙен асҡанда, Айытбай итегенең еҙ дағалары, бына һиңә кәрәк булһа, ер ҡайҙа һуң, тигән төҫлө Ҡояшҡа ялтырай ине... Сеүәтәһенә яңылыш таянған Әхмәҙибайҙың еңенән иҫәңгерәп ятҡан Айытбай өҫтөнә ҡымыҙ тама ине”. Йәнә бына төнгө усаҡ янында ҡырҙа “Ялтыр баш, хужаһына ялағайланған көсөк кеүек, ҡулдарын ергә таянған килеш артҡа сигенде лә ауыҙын тултырып һауа уртланы, көл борҡотоп, торон башҡа өрҙө” (225-енсе бит). Арбала болоҡһоп барыусы “Мөршиҙә ҡарсыҡ үҙенең уйҙарын тәгәрмәс аҫтында ҡалған оҙон юл кеүек бермә-бер күҙ алдынан һүтеп, ашыҡмай ғына берсә рәхәтләнеп, берсә ҡанһырап артта ҡалдырабарҙы” (226-нсы бит). Мөршиҙә әбей “...һөйләнә-һөйләнә атын туғарып, ҡапҡа эсенә ебәрҙе, сәсүрмесенә бергә ҡушып үрелгән аҫҡыстарының береһе менән ишеген асты” (237 б.). Бригадир Хәмзә “...урамда — бесәй, өйҙә — бәрей” (297 б.). Ауыҙлыҡлы “тай... ауыҙ күперектәрен елгә осороп, ялын туҙҙырып, башын бер уңға, бер һулға ташланы” (293 б.). «нәзир ҡарттың кескәй кәүҙәһе турайып ҡалҡынғандай булды. Тешһеҙ ауыҙын әҙәпле итеп йылмайҙы” (338 б.). “Һинең алтының — Баҡыр, уның баҡыры алтын булып күренә башлай” (396 б.). “Алтмыш мөрйәнән ҡырҡ биш кеше сығып китте бит...” фронтҡа (566 б.).

Иркен һулыштан яҙылған, мауығып уҡырлыҡ бүлектәрбайтаҡ романда. Әйтәйек, Зәлифәнең ата-әсәһенең фажиғәле яҙмышы тасуирланған “Донъяла ике кеше” бүлеге, ҡыуанyслы тантана менән тулы “Һабантуй”, Мөршиҙа ҡарсыҡтың ысын ен-бәрейгә оҡшатып кәүҙәләндерелгән (ышандыра!) ҡурҡыныс образын асҡан “Мөршиҙә ҡарсыҡ” бүлектәре. “Фермала” тигәнендә һауынсы булып эшкә барған Зәлифәнең һыйырҙарын тәүбашлап һауыуы эпизодтары ифрат һәйбәт тормошсан һәм ҡыҙыҡлы итеп яратып яҙылған: малҡайҙарҙың һәр береһенең үҙ характеры бар. Ә тана һыйыр “Муйылҡай”ҙың быҙаулауын тасуирлаған биттәрҙе мин үҙе бер моңло йыр — тыуған тәбиғәткә мәдхиә тип ҡабул иттем. Шәүрәнең Хәлилгә (иренә) биргән мөхәббәт антына ул үлгәс тә тоғро ҡалып Йәшәүе — артынан йөрөгән Фәтихте ератһа ла, әйләнеп тә ҡарай алмауы тәрән күңел хисе менән кисерелеп уҡыла. Был бүлек, бер түгел, 64 бит тәшкил итһә лә, уҡыусыһын ялҡытмай — тос һәм тығыҙ яҙылған. “Туйҙар, туйҙар...” бүлегендә Фәткинурҙың (иң күркәм ҡыҙ образдарының береһе был) кейәүгә сығыу — туй мәшәҡәттәре, ҡыҙҙар күмәкләшеп буҙа яһау эше тормошсан һәм ентекле, күңелле итеп бирелә, ундағы һәр бер деталь — көнкүрештең матур бер биҙәге ул. Туй йолаһы, ғөмүмән, бик теүәл һәм мауыҡтырғыс тасуирлана. “Йәмилә”, “Мин һеҙгә ышанам”, “Ҡуш ҡарағай” бүлектәрендә яһил-яуыз ире Хәмзә тарафынан рухы тамам һындырылып, телһеҙ мал рәүешенә төшөрөлгән түҙмер ҡатын Йәмиләнең аҡрынлап рухи турайыуы — тиранлыҡҡа ҡаршы баш күтәреүе, томра ғаилә төрмәһенән яҡтылыҡҡа — Йәмғәтселек араһына сығыуы һәм дөйөм хеҙмәткә ылығыуының ғибрәтле диалектикаһы бирелә. “Үрмәксе ауы”, “Тайғанында таян дуҫтарға” бүлектәрендәге Мөнирә — Хәмзә мөнәсәбәттәренең, Мөнирәнең әхләҡи яҡтан түбән тәгәрәүенең һәм

кире ҡабат аяҡкабаҫыуының фәһемле картинаһы психологик яҡтан теүәл, ышандырғыс яҙылыуын да автор оҫталығын, мөмкинлектәрен дәлилләүсе факт итеп ҡарарға кәрәктер. "Ҡыҙыл ҡар" бүлегендә иһә психологик анализ, минеңсә, иң юғары нөктәһенә күтәрелә — үгәй әсә (Мәҙинә) яуызлығы, бисара үгәй ҡыҙ (Наташа) баланың аянысла асы яҙмышы халыҡ эпостары кимәлендә йөрәк өшөткөс тормошсан тасуирланған. Зәлифәнең бүрәнә күтәреп имгәнеүе, Һал ағыҙыусы Гөлбикәнең һәләк булыуы, эпизодик ҡына һүрәтләнһә лә, йөрәкте ҡанһыратып, һуғыш ғәрәсәте Һалған фажиғә кимәлендә ҡабул ҡылына, иҫтә ярылып ҡала. Ә ата-әсәһе аянысла һәләк булып, кесе йәштән япа-яңғыҙы ҡалған һәм тормошта үҙ урынын табыу өсөн ныҡышмалы көрәш башлаған үҫмер ҡыҙ бала Зәлифәнең яҙмышы иһә уҡыусыны баштан уҡ арбап алып, артабан да әҫәрҙең төп геройы сифатында ҡыҙыҡһынып юллауҙы тәьмин итә.

Бына күпме ыңғай яҡтарын Һанап сыҡтыҡ ҡулъяҙманың. Шул уҡ ваҡытта шул уҡ ыңғай сифаттар менән бер ҡатарҙан роман түбәһе аҫтында өйҙәш булып һәүетемсә генә йәшәп ятҡан *етешһеҙлектәр, сатаҡлыҡтар* ҙат байтаҡ һәм уларҙың барлығын, байтаҡлығын роман яҙмышының байтаҡ йылдар буйынса ла ыңғай яҡҡа боролош ала алмай йөрөүе лә дәлилләйҙер, моғайын. Шуға күрә өлгөрөп килгән был әҫәрҙе донъяға сығарыуҙа авторға беренсе ярҙам — Шуларҙы (кире яҡтарҙы) хәлдән килгәнсә танып, аныҡ итеп күрһәтеүҙәлер, минеңсә.

Юғарыла әйтелгәнсә, романдың тел-стиле һәйбәт, тәбиғи, шыма һәм һығылмалы. Ләкин шул уҡ ваҡытта автор төрлө сатаҡлыҡтарға, тел-стиль буталсыҡтарына ла юл ҡуя. Әйтәйек, асып уҡый башлағас та тупаҫ хәлгә юлығаһың: тәүге һөйләмдә үк автор аҫауҙы (айғырҙы) аҙау тип яҙа, ә 2-нсе һөйләм сырмалсыҡтай борма-бормалы һәм йырып сыҡҡыһыҙ оҙон — бормаларҙа фекер юғалып ҡала, уҡыусыны ялҡыта: "Түҙеп торғоһоҙ әсе һыуыҡҡа ҡатырға өлгөргән ҡоро көрт кәртә-кУраларҙы, аласыҡ, өй ишектәрен күмеп, күңелгә ниндәйҙер әрнеүле шом Һала: мәңгелеккә ошо ерҙә ятып ҡалыр төҫлө маһайып, Хәсән ҡарттың ғүмер буйы ҡар күҙе төшмәгән ыҫ бай, утын ярыр өсөн айырым, мал кәртәһенә терәп эшләнгән ышыҡ лапаҫ аҫтына тиклем күмеп киткән". Йәки: "Икеһенең береһе: бөтә ауылды, хәлһеҙ атҡа көлкө өсөн тағылған ауыҙлыҡ йүгәнен ҡыҫҡа тотҡан, дер һелкетеп маһайған хужа үҙ һүҙле, ныҡ Хәсән ҡарт та, олоно оло итеп, ихтирам итергә тейешле булған урта йәштәрҙәге ир ҙә Һаулыҡ бирмәне. Тауыштарҙың береһе буйһонорға теләмәгәндәй аҙ һүҙле, икенсеһе кәрәкле ваҡыт көтөп, тотҡан урынында уртаға һындырырға теләп, аҫтыртын көлөүгә майланып сыҡты" (2 — 3 б.). Авторҙың һөйләм төҙөгәндәге Һаҡһыҙлығы буталдыра фекерҙе: "күгәреп торған бейәләйһеҙ ҡулдарын (1 б.), ә кәрәк: бейәләйһеҙ, күгәреп торған ҡулдарын; "ҡоштабаҡтағы һүрән утта ҡыҙҙырылған" ҡурмас (7 б.), ә бит ҡоштабаҡ эсенә ут яғылмай; "ботлап инһә лә, семетеп сыға бит ул ауырыу" (7 б.), ә кәрәк: мыҫҡаллап сыға; туғанлыҡ терминологияһындағы буталсыҡ: шәмсиәне автор Зәлифәнең еңгәһе, апһыны, килендәше тип тә атай (7,9 б.), тағы, етмәһә, шәмсиә лә Зәлифәне "килен" ти... (10 б.); күп урында бер-бер артлы бер үк һүҙҙәр ҡабатланып, стиль ҡытыршылана, мәҫәлән, 91-енсе бер үк биттә

генә лә 9 “ултырыу” ҡылымы — юл һайьн, тип әйтерлек... Автор ҡульяҙманы тәртипкә килтереү өҫтөндә лә әрпешләнгән кеүек: ҡайһы бер бүлектәр уларҙың бит һандары (нумерация) күрһәтелмәйенсә башлана, ҡайһы саҡта хатта бүлеккә исем ҡуйыу ҙа онотола (“Әхмәр килендәре”нең тәүге бүлеге)...

Былары, әлбиттә, әҫәр тексьн редакторлау барышьнда ла хәл ителерҙәй мәсьәләләр. Ләкин әҙибәнең юғарыла маҡтап үтелгән сифаттарьның береһе, тел байлығы, тип алайыҡмы, хикәйәләү туҡымаһьнда әленән-әле саманан тыш мауығыуға әүерелеп, ауыҙлыҡһыҙ стихияны хәтерләткеләй: хикәйәләү өсөн генә хикәйәләнгән һымаҡ тәьҫир ҡалдырабайтаҡ урьндар. Шуның арҡаһьнда автор үҙенең төп маҡсатьн һәм бурысьн (төп конфликт нигеҙендә үҫтерелгән сюжет буйьнса интригалар е бе менән сырмалышҡан образ-характерҙарҙы төп юҫыҡтан йүнәлдереү) ситтә ҡалдыра. Һөҙөмтәлә автор тигән сәйәхәтсе ҡайһы саҡта үҙенең ҡайҙа йүнәлгәнлеген дә онотоп, алдьндағы юлы өҙәремләнеп, донъяны баҫкан һыу стихияһы уртаһьнда албырғанып ҡалғандай. Ошо “һыубаҫыу” арҡаһьнда романдың тос, төйөрөм яҙылған бүлектәре лә үҙ-ара тарҡалышып, окендағы архипелаг утрауҙарьн хәтерләтә — береһенән береһенә көскә барып етәһең, ә ҡайһы бер утрауҙарҙың был архипелагка ҡаратылмаҫҡа тейешлеген дә төшөнәһең. Ана шулай динамика һүлпәнәйә, аҡланмаған *оҙонлоҡтар* күбәйә, һәм *әҫәр тулайым саманан тыш оҙон,* ялҡытҡыс оҙон, тигән дөйөм һөҙөмтәгә киленә.

Шулай итеп, романдың төп етешһеҙлегенә туҡталдыҡ — оҙонлоҡ. Хәҙер инде мөһим бурыс — уның ниңә шулай икәнен табып, шунан нисек ҡотолоу әмәлен ҡарау.

Тәүҙә бьна нимәне асыҡлайыҡ.

Был әҫәрҙең сюжет һыҙығьн йүнәлткән *төп конфликт,* минеңсә, Яңы һәм Иҫкенең Йәғни Яҡшылыҡ һәм Яманлыҡтың үҙ-ара алышы ул (шулар тирәһендә башҡа конфликттар уҡмаша). Ошо алыш Әхмәр ауылы кешеләрен ике ярға айыра бит. Береһендә — йәндәрен аямай яңы тормош ҡороусылар: шакир менән Әсмә, уларҙың ҡыҙы Зәлифә, Ғәлим, Лоҡман, Сәлимә һ.б. Ҡаршы ярҙа — яңылыҡҡа аяҡ салыусы иҫке тормош ҡалдыҡтары: Хәмзә, уның атаһы Хәмит мулла, Мөршиҙа ҡарсыҡ һ.б. Күк йөҙөн үтәнән-үтә телгән көслө Йәшен саҡҡылары Һауаны озонға һуғарғандай, әҫәрҙең бөтә атмосфераһы, тьн алышы ана шул *төп конфликт* заңы менән баштан-аяҡ тулышырға, ҡалған көллө саралар ҙа шуны *сисеү өсөн генә* хеҙмәт итергә тейештер. Эйе, *генә!* Был — романсьның йоҡлағанда ла онотмаҫҡа тейешле төп бурысы. Әммә беҙҙең авторыбыҙ, хәбәр һөйләү стихияһьна бирелеп, үҙенең шул төп бурысьн йыш ҡьна онотоп ебәрә лә һөҙөмтәлә сюжет юлағьнан ситкә сығып китә — сюжетты фабула (ваҡиғаларҙы, художество ҡанундарьна буйһондормай, тормошта нисек булғаньнса теҙеп-ағылдырып һөйләү) алмаштыра. Шуның арҡаһьнда әҫәрҙе һис бер кәрәге булмаған — төп маҡсатҡа хеҙмәт итмәгән ваҡиғалар, эпизодтар, диалогтар стихияһы күмә, уҡыусьны ялҡытҡыс ҡыҙыҡһыҙ урьндар (сөнки айырым алғанда бик ҡыҙыҡлы эпизод та, әҫәрҙең төп конфликтьна хеҙмәт итмәһә, ҡыҙыҡлығьн юғалта!),

оҙонлоҡтарбарлыҡҡа килә, ике-өс бөртөк кенә ярманан ҡаҙан тултырып бешергән “бутҡа»ны һәмәргәндәй булаһың. Был романдың “ярма”лары, әлбиттә, ике-өс бөртөк кенә түгел, шаҡтай күберәк, әммә уларҙы ысьн өйрәме, бутҡамы хәленә еткереп ҡуйыртаһы бар әле.

Алайыҡ диалогтарҙы. Әйтеп үтелде инде, саманан тыш оҙон улар. Мәҫәлән, “Киҫкен хәл” тигән бүлектә Зәлифәнең Йәслелә балалар менән һөйләшеүе, кәзә һәм уның бәрәстәре тураһындағы әкиәте, балаларҙың уны нисек тыңлауы, фекер алышыуҙары бик тәфсилләп теҙелә, әҫәр туҡымаһында киң майҙан ала — ни өсөн? Артында ниндәйҙер оло ваҡиға, драматизм аҡтарылып сыҡһа ғына, был самаһыҙлыҡ аҡланыр, самаға керер ине. Ә был хәлендә хәбәр өсөн хәбәр һөйләү булып ҡала.

Ошо уҡ бүлектә Таңһылыу әбей, Мөршиҙә ҡарсыҡ хөсөтөнә бирелеп, Мөнир ейәнен йәсленән алып ҡайтып китә. Аҡ инәй тигән берәү килеп, был эштең сәбәбен протокол ентеклеге менән аңлата Зәлифәгә — Мөршиҙә әбей ғәйбәтенең баяғы йомғағы инде кире ҡабат тағатылып юлланабашлай — Тағы 5 биткә һуҙыла. Ә ниңә? Бер нәмә лә сурытмай, Таңһылыу әбейҙең елләнеп килеп инеүе, Зәлифәгә ярһып әйткән бер-ике репликаһы менән үк (бер нисә һөйләм) теүәлләп булыр ине бит был ғәләмәтте. Әйтәйек, ошонда уҡ Зәлифәнең, битлекле дошман Хәмзә ҡаршылығьн емереп, салғы тотоп үҙе бесән өмәһенә сығыуы диалогтарҙа ярты бит кенә тәшкил итә бит, әммә бөтә бүлеккә йән өргәндәй — социаль әһәмиәтле! (Тимәк, автор йыйнаҡ яҙырға ла һәләтле). Икенсе урында (440 — 444 б.) Сәлимәнең “доктор булып китергә” (бер айлыҡ курсҡа) колхоздан ҡайһылай рөхсәт юллауы дүрт бит буйьна Йәйелеп китеп һөйләнелә, а ведь вопрос выеденного яйца не стоит, урыҫтар әйтмешләй. Ике һөйләмлек реплика менән дә хәл итеп булыр ине бьны. “Иҫке Йәйләүҙә” бүлегендә Йәйләүҙе яңыртыу тураһында һүҙ күп ҡуйыртыла (12 бит буйьна!..), әммә эш бармай һаман. Ялҡыта, әҫәрҙең төп аһәңе һүлпәнәйә. Ә бит быға ла, *баягылай*, 1-2 репликала етә. Ғәмәлдә иһә автор, ярҙарьн йыуған йылғалай, төрлө яҡҡа йәйелеп китеп тарҡала: төп бурысьн онотоп, итеге өсөн айыуҙан ашалған бисара ҡыҙ тураһында, торна тураһында һ.б. тураһында риүәйәттәр һөйләй ҙә һөйләй... “Иҫке Йәйләүҙә” темаһы йәнә “Өмә” бүлегендә лә бер түгел 33 биткә һуҙылып-йәйрәгән — ике бүлекте берләштереп “һығырға” ла булыр ине. “Йыйылыш” тигән бүлектә лә диалогтар стихияһы миктәтә: тормошта ниндәй булһа, шундай темпта күсереп алып бара һымаҡ яҙыусы. Ләкин роман тормоштоң стенография яҙмалы протоколы түгел, ә яҙыусы тарафьнан сәнғәтсә итеп ойошторолған ҡуйҡымы — квитэссенцияһы бит! Бүлектәрҙең һәр береһен, тимәк, диалогтарҙы һығып ыҡсымлау иҫәбенә лә ныҡ ҡьна ҡыҫҡартып булыр ине. Юҡһа, бер самауырҙы йыҡҡансы, бисә-сәсә иҙерәп китеп күпме һәм ни һөйләһә, автор, Йәйелеп китеп, шуларҙың барыһьн ҡағыҙға теҙә кеүек. Һәм шуныһы хәүефле: ошо юл менән барғанда, был “протокол-диалог”, мең битлек романға ла һыймайьнса, йөҙ тапҡыр сәй эсһәләр, йөҙ тапҡыр уҡ ҡабатланыу ҡурҡьнысыбар — бишәр биттән дә ошо үҙе 500 бит тәшкил итер ине бит!.. Ә әҙиптең бурысы — Шул 100 самауыр йыҡҡандағьны бер тапҡырға

ҡалдырып ҡуйыртыуҙыр; әйтәйек, 100 бит тәшкил итерлекте бер биткә һыйҙырыуҙыр...

Автор хикәйәләүендә лә оҙонлоҡ ныҡ һиҙелә. "Ҡыңғырау сәскәләре" бүлегендә, бер генә түгел, тулы 27 бит (238 — 265 б.) фәҡәт Зәлифә менән Ғәлимдең бер-береһенә "һөйәм" тип әйтә алмауын һөйләүгә генә арналған. Күләмде бушҡа сарыф итеү, экономияһыҙлыҡ! Зәлифә Вәлимәнән көнләшеп өҙәләнә — Ғәлим ауырып китә — Вәлимәнән хат киле Ғәлимгә, шуны күреп, Зәлифә Йәнә өҙәләнә — Зәлифә килтереп киткән ҡыңғырау сәскәләргә бағып, Ғәлим Зәлифәне һөйөүен аңлай — ике йөрәк төшөнә бер-береһен. Бьны махсус бүлек асмай, юл ыңғайьндабашҡа бүлектәрҙә лә биреп бөтөп булыр ине...

Бьна шундай аҡланмаған Йәйелеүҙәргә юл ҡуя автор. Әҫәрҙе, ғөмүмән, шул Йәһәттән дә ҡарап сыҡҡанда, *байтаҡ*ка һығылып ҡыҫҡара, тосланып йыйнаҡлаша төшәсәк. Автор, моғайьн, роман туҡымаһьна өр-Яңьнан күҙ Ћалып, иң мөһим сюжет төйөндәрен айырым-асыҡ билдәләргә һәм шуларға хеҙмәт итмәгән, Йәки аҙ хеҙмәт иткән өлөштәрҙән арьнырға тейештер (тунап ташлап, Йәки бер нисәһен бер дөйөм күрһәткескә килтереп). Мәҫәлән, әҫәрҙең асылы тәүҙән үк шуны һорап тора: романды Зәлифәнең шәмсиәгә барып, урманға эшкә тәғәйенләнеүҙәре, бригадир Хәмзәнең Боҙоҡлоғо хаҡьндағы урьндан башлап алып китергә кәрәктер — һөҙөмтәлә һөҙгәк "үгеҙ мөгөҙөнән альнасаҡ" һәм текст та ун биткә ҡыҫҡарасаҡ. "Ҡыңғырау сәскәләре", "Ямал", "Киҫкен хәл" тигән бүлектәрҙе лә өсөһөн берәүгә ҡалдырып "һығыу" мөмкинлеге күренеп тора. "Шәмсиә" бүлегендә лә — Шәмсиәнең эске донъяһы ғьна, ә хәл-ваҡиғалар юҡ. Уны лабашҡа бер бүлеккә ҡушып берләштереп булыр ине. "Йыйылыш", "Ћуңғы кубометрҙар" тигән бүлектәрҙә лә эш-хәрәкәттәр аҙ, образдар юҡ — ҡоро һүҙҙән ҡоролған. Тәүгеһен тығыҙлап яҙырға, икенсеһен алып ташларға мөмкиндер. Тәү ҡарауҙан уҡ күҙгә сальнып торған мөмкинлектәр былар.

Төп конфликттың ҡара-ҡаршы ярҙарьн анығ билдәләп, бөтә нәмәне шулар тирәһендә уйнатырға, шуларға буйһондорорға тейеш автор, тип әйткәйнек инде. Әгәр шулай иткәндә, иң мөһиме, әҫәрҙең социаль Яңғырашы, әһәмиәте артасаҡ, өҫтәүенә, артыҡ йөк булып инеп ултырған кәрәкмәгән өлөштәр үҙҙәренән-үҙҙәре төшөп ҡалып, хикәйәләү туҡымаһьның тығыҙлығьна, йыйнаҡлыҡҡа килтерәсәк. Ошо йәһәттән ҡарағанда, романдағы синфи көстәр нисбәтен асыҡлауҙа, бәрелеш һәм интригаларьн көсәйтеүҙә автор эшләп еткермәгән урьндарбар. Әйтәйек, йәшерен дошман Хәмзәнең шәхси тормошондағы, ғаиләһендәге ҡылыҡтарьн ышандырғыс ҡалтайтып күрһәтә автор, әммә уның Йәмғиәт тормошонда ла булырға тейешле *йәшерен әүҙемлеге*, күпме генә көтөлһә лә, роман биттәрендә асылмай ҡала, Йә бик һүлпән — дошман мәкерен асыҡлауҙа әһәмиәте әллә ни ҙур булмаған хәл-ваҡиғалар аша ғьна һыҙатлана. "Ямал" бүлегендә, мәҫәлән, ауылда йәсле ойоштороу ваҡиғаһы оҙон итеп сурытыла, әммә әҫәрҙең буйьнан-буйьна шаңғыртып үтерҙәй социаль йөкмәткеһе (нагрузка) юҡ шул унда ла — баяғылай, хәбәр өсөн генә хәбәр ителгәндәй. Ә бит ваҡиға эсендә уның зыңғырҙап торған үҙәге

— баяғы *социаль йөкмәтке бул*ырға тейеш. Йәшерен синфи дошман Хәмзә бында ла ситләп ҡалмаҫ — ауыл өсөн ыңғай Яңы күренеш булған йәсле эшендә лә үҙенең этлеген, зәһәр һулышын һиҙҙертер бит?! Автор ана шул *заңлы үҙәкте,* утлы сымдай, әҫәрҙең буйынан-буйына иң юғары вольтлы электр сымы һымаҡ тартып үткәрһә, күп "һыу"ҙан ҡотоласаҡ һәм көсөргәнешле динамикаға ла өлгәшәсәк. Дөрөҫ, яҙыусы Хәмзәнең ҡара эслелеген фашларға тырыша-тырышыуын — Хәмзә Ямалдың (үҙенең ҡыҙының) йәслелә эшләүенә ҡаршы төшә, шунан һуң рәнйегән Ямал, нәфрәт белдереп, өйҙәренән сығып китә. Ләкин мәсьәлә туранан-тура ярып ("Лобовой") хәл ҡылынған, минеңсә. (Был тәңгәлдә Мөршиҙә ҡарсыҡтың ни рәүешле ҡаршы эш алып барыуы, хөсөтләшеүе урынлы, ә Хәмзәгә бындай ғына алым йоҡмай — был дошмандың масштабы ҙурыраҡ бит!). Тәжрибәле ҡарт бүре Хәмзә, моғайын, бик нескәлекле эш итер: Йәслене хатта ҡуш ҡуллап күтәреп алғандай ҡыланып, ҡыҙын шунда эшкә лә ҡушыр (күҙ буярға), ә ғәмәлдә аҫтыртын ҡоротҡослоҡ итер. (Мәшһүр "Күтәрелгән сиҙәм"дәге Яков Лукич образын хәтерләйек!). Мәкерлелеге ҡыҙы алдында көтмәгәндә фашланыр, шуға тетрәнгәс кенә, Ямал атай тупһаһын ташлап китер... Бындай осраҡта хикәйәләү драматизмы ла көсәйәсәк. Йәсле мәсьәләһендә, шулай ҙа, Мөршиҙә ҡарсыҡҡа тағылған Нагрузка ла бәләкәсерәк әле ("Киҫкен хәл" бүлеге). Уның бөтә этлектәре бер Йәслегә генә ҡайтып ҡалғандай. Йәсле бында Яңы тормошҡа ҡаршы синфи көрәштең *төп объекты түгел, ә өлөшө генә* бит. Автор иһә уны төп объект дәрәжәһенә күтәрә, буғай (теләһә-теләмәһә лә, шул тәңгәлдә саманан тыш йәйелгәс, был шулай аңлашыла).

Зәлифәнең үҙе теләп бесән өмәһенә сығырға тырышыуы ("Киҫкен хәл") һәйбәт яҙылған, тигәйнек. Ләкин автор ошо табышын синфи-социаль яҫылыҡта көсөргәнешле файҙаланмай — Тағы Хәмзә, үҙе үк килеп, Зәлифәне өмәгә сығара лабаяғы эффект һүрелә. Бында Зәлифә Хәмзәнең тыйыуын емереп ташлап үҙ йөрәге ҡушыуынса эш итһә, ә мәкерле Хәмзә быны, Зәлифә балаларҙы үҙ белдегендә ташлап китә лә шуның арҡаһында кескәҙәрҙең, теләһә нәмә ашап, эсе үтте, тип ғәйепләү өсөн файҙаланһа (ә тап шунан алда ғына бәләкәс Мөнирҙең эсе үтеүендә үҙ әсәһе ғәйепле икәне асыҡланғайны!), интрига арта, конфликт ҡуйыра төшөр, әҫәр үҙәне уғата тәрәнерәк билдәләнер ине... Бесәндә Хәмзә Зәлифәне көсләргә итә — синфи ҡаршылыҡтың сиселеү төйөнө булырға оҡшай һәм ул мөһим эпизодты романдың ҡайһыраҡ өлөшөнә урынлаштырыу кәрәклеген автор тағы ла уйлап ҡарарға тейештер, моғайын. Был тәңгәлдә Йәнә лә бер киҫәтергә тура килә: әҫәрҙән күренеүенсә, Хәмзә Зәлифәне үҙенең элекке шәхси дошманы *Шакир ҡыҙы бул*ғаны өсөн генә күрә алмай кеүек. Был аҙ: шәхси антипатияға ғына әйләнеп, бәрелештең йөкмәткеһен, мәғәнәһен кесерәйтә. Ә бит Хәмзә Зәлифәне *Яңы тормош төҙөүсе, әүҙем синфи дошманы* булғаны өсөн күрә алмаҫҡа тейеш! "Өмә" бүлегендә йәнә бер мөһим мәл бар: үҙенең эске монологы аша Хәмзәнең синфи ҡара йөҙө асыла — фашистарҙы көтә имеш ул. (Ә бер һорауға яуап тапмай ҡалабыҙ: ни өсөн ул һуғышҡа алынмаған?). Был — образдың социаль асылы, нигеҙе, ана шуны бөтә әҫәр буйынса ла онотмаһын ине автор. Файҙаланып

еткерелмәгән мөмкинлектәргә түбәндәгене *лә* индерер инем. 438-енсе биттә Сәлимәнең ҡыҙы Ғәлиәне ҡырҙа йылан саға, ул үлә. Шул фажиғә ябай хәбәр һөйләгәндәй һүлпән генә бирелә: ҡәйнәһе ҡушмаһас, Сәлимә (үҙе теләп фронтҡа китәсәк тәүәккәл Йән!) ҡыҙының яраһынан йылан ағыуын һурып ташлауҙан да тыйыла хатта... Ә бит ул, әсә кеше, ирендәре ярыҡ булһа *ла*, аҡылын юйып һурыр ине һәм был эпизод тетрәндергес тасуирланырға тейеш ине... Сәлимәнең шул йөрәк өҙгөс ҡайғыһы тураһында *ла* һаман авторҙың *хәбәр итеүе аш*а ғына беләбеҙ, ә картина күрмәй беҙ. Психологик анализлап эш итһен һәм *тасуир* итһенсе автор!.. Шул уҡ бүлектә Сәлимәнең фронттағы ире ғәленең "ҡара ҡағыҙ"ы килеүен, шунан һуң йәш ҡатындың үҙе теләп фронтҡа китеүен дә автор, хәбәр ҡалыбына һалып, һүлпән генә хәбәрләй. Ә бит һуғыш осороноң трагедияһын һәм героикаһын бер юлы тасуирлап-һүрәтләрлек, образлы һынландырырлыҡ отошло осраҡ ине был! Шуны ҡулдан ысҡындыра... *Хәбәр гәпермә, тасуирла!*

Бына ферманан иң яҡшы таналарҙың Юғалып тороуына иғтибар итә Зәлифә ("Иҫке Йәйләүҙә"). Мөһим мәл — социалистик милекте һаҡлау мәсьәләһе бөтә киҫкенлегендә һәм фажиғәлелегендә күтәрелеп, ваҡиғалар ике яҡлап та (Зәлифә һәм енәйәтсе Хәмзә) ҡуйыртылырға, интрига көсәйергә, аҙаҡ килеп, сиселергә тейеш ине. *Ләкин* әле был ябай ғына *хәбәр итеү бул*ып ҡалды — автор әҫәрҙең төп заңын, динамикаһын ысҡындырҙы ҡулынан... Автор сюжет һыҙығын да ныҡлап уйларға тейеш, сөнки ул әле, әйткәнебеҙсә, саҡ ҡына төҫмөрләнә: теләгән бер бүлекте алып ырғытһаң йә урынын алмаштырһаң да, бер нәмә *лә* һиҙелмәҫ ине кеүек... Ә бит, киреһенсә, әҫәр туҡымаһынан бер генә һүрентене *лә* һурып алып булмаҫҡа — алһаң, әҫәр емерелергә, һис Юғында имгәнергә тейешле!.. Романда ауыл Советы, партия ойошмаһының (яҡшымы, яманмы) етәкселек эше күренмәй, шуға *ла* төптө таянысһыҙ тормош көткән кешеләрҙең зарлы хәле һымағыраҡ яңғырай башлай әҫәр. Совет һәм партия ойошмаһының етәкселек ролен күрһәтеү әҫәрҙең социаль яңғырашын көсәйтеп, конфликт киҫкенлеген ҡырҡыуландырыр, кемдең ҡайһы ярҙа тороуын ап-асыҡ билдәләр ине. Һәм был хәл, әлбиттә, хикәйәләү туҡымаһын тығыҙлап, романды ыҡсымлатыр, "һыу"ҙан да арындырыр.

Күрһәтелгән етешһеҙлектәр комплексы үҙенән-үҙебеҙҙе әҫәрҙең *композиция* мәсьәләһенә килтерә, сөнки улар бер үк ваҡытта *композиция камилһыҙлығының* да күрһәткесе булып тора. Атап ҡына әйткәндә, романдың шаҡтай бай материалы ҡойоп ҡуйған композицияға көйләнмәгән — алдан уйланмаған тәртипһеҙ төҙөлөш ("самострой") хәлендә ҡалған. Был йәһәттән күҙгә төртөлөп торған ике етешһеҙлек бар: хикәйәләүҙең *төп формаһының табылмауы* һәм хикәйәләү *ваҡытының (хронология) буталыуы.*

Әҫәр Сталинград һуғышы осоро (тимәк, хикәйәләүсе күҙенән ҡарағанда хәҙерге заман), шул көндәрҙә бригадир Хәмзә килеп, Зәлифәне урман эшенә тәғәйенләүе менән башланғайны ("Яңы хәбәр"). Шул замандың заңы менән дауам итеү урынына, көтмәгәндә, икенсе бүлектән үк

автор үткән заманға — Зәлифәнең бала сағына төшә лә китә һәм шул хәл бөтә беренсе киҫәк осланғансы — 150 бит буйына дауам итә, һөҙөмтәлә “хәҙерге заман” онотолоп, шул оло киҫәк тулыһынса *иҫтәлеккә* әүерелә. Ҡайҙа китте автор һүрәтләй башлаған “хәҙерге заман”?..

Икенсе киҫәктә (“Аяҙ таңдар”) ни бары ике биттә генә баяғы сталинград һуғышы осоро — колхозсыларҙың ҡышҡы юлда урман ҡырҡырға китеп барыуы тасуирлана ла... был ваҡытта Сталинград һуғышында йөрөгән Сәлимәбеҙ... һуғыштан алдағы тыныс йылдарҙа яҙғы Һаҡмар ташҡынына һоҡланып ҡарап тора булып сыға. Һәм ошо хәл — һуғышҡа тиклемге тыныс йылдарҙы тасуирлау — шул икенсе киҫәк бөткәнсе йәғни 394-енсе биткә тиклем һуҙыла. Шул рәүешле, һуғыш осоро итеп башланған романдың ҡап-яртыһының (394 бит) ни бары 10-15 бите генә һуғыш осоронабағышланып, төп өлөшө һуғышҡа тиклемге заманаға арналған — автор бирергә тырышҡан *форма* килбәтһеҙ килеп сыҡҡан, автор *форманы тапмаған...*

Икенсе китапта ғына (“Әхмәр килендәре”), ниһайәт, биш былтырҙан һуң, Зәлифә һәм ауылдаштары урман ҡырҡырға тотонған имеш, замандың дабаяғы сталинград һуғышы осоро икәне әшкәртелә: Сәлимә — Сталинград һуғышында. Һәм шул тәүге бүлектә үк, көтмәгәндә... “хәҙерге заман” тағы ғәйеп була ла ҡуя, юғала — Зәлифәнең нәүбәттәге *хәтерләүҙәре* (һуғышҡа тиклемге Сәлимә һ.б. тураһында) хикәйәләнә башлай... Был урында, етмәһә, һандыҡ эсендә һандыҡ — хәтерләү эсендә хәтерләү (иғтибар итегеҙ!): автор инде һуғыштағы Сәлимәнең һуғышҡа тиклемге хәлен хәтерләүсе Зәлифәнән Сәлимәнең һуғыш башланыу көнөн ҡайҙа ҡаршылауын, Ғәлеһен һуғышҡа оҙатыуын хәтерләгәнен хәтерләттертә... Осона сығып ҡарағыҙ!.. Бындай хәл әҫәрҙе уҡыусыны күп йүнкетә (миктәтә). Әйтәйек, Йәмилә бала табыу алдында (“Мин һеҙгә ышанам”) үҙенең *үткән* ғүмерен *иҫкә төшөрә.* Бик оҙон. *Бөгөнгө* көнө, *бөгөнгө* хәле онотолоп ҡала. Әгәр ҙә шул ваҡиғалар үткән заман иҫтәлеге итеп түгел, ә тейешле урынына — үҙ заманына ҡуйылып, әҫәрҙәге бөгөнгө хәл рәүешле тасуирланһа, Йәғни төҙөк хронология һаҡланһа, композиция төҙөкләнеп камиллашыр, динамика ла көсәйер, талғынлыҡ бөтөр ине. “Өмә” бүлегендә автор аноним хатты тикшереү ваҡиғаһын Хәлимәнән *хәтерләттертә.* “Ҡуш ҡарағай” бүлегендә Мөнирәнең ауылға килеп китеүен дә *үткән* заманға ҡайтарып, Йәмиләнең *иҫтәлеге* итеп һөйләй. “Үрмәксе ауы” бүлегендә Мөнирә үҙенең Зәлифә менән һөйләшеүен *кисәге хәл* итеп *хәтерләй.* Ә ниңә уларҙы бөгөнгө итеп, ваҡиғаларҙың үҙ ваҡытына ҡуйып — хронологик тәртиптә хикәйәләмәҫкә?! Үткән заман түгел, ә был заман булыр ине. Иҫтәлек түгел, әҫәр тыуыр ине!.. “Бер-береһен ҡыуа көндәр” бүлегендә 877 менән 878-енсе биттәр араһында нумерацияһыҙ бит килеп инеп, шунда бер абзацта ғына, көтмәгәндә, иҫке ауыҙҙан Яңы һүҙ, тигәндәй, хәбәрләй һала автор: Ғәлим, имеш, яраланып, Магнит ҡала госпиталенә ҡайтып киткән, Зәлифә уны барып күргән... Әле генә фронттағы Ғәлименән хат алып уҡып ултыра ине ләһә?.. Ниңә шундай оло ваҡиға тураһында уҡыусы бығаса белмәй, ә, көтмәгәндә, был ваҡытта больницала ятҡан Зәлифә *иҫтәлегенән* генә мәғлүм була?!. Дүртенсе киҫәкте башлаған

(705 б.) исемһеҙ бүлектә Зәлифә һ.б. урман ҡырҡыусылар Яңы йыл (тимәк, ҡыш көнө!) ҡаршылай. Ә бынан алда ғына улар *йәйге эштә* — йәйләүҙә һыйыр һауҙы, шунда көҙ ҙә булды. Инде шуларҙың дауамы — ҡышҡы эштәр тураһындабара һымаҡ ине һүҙ... Әммә улай тиер инең, ошо уҡ урман эштәренең башы — әҫәрҙең өсөнсө киҫәгендә (унда ла ҡыш!) һүрәтләнгәндәй ине бит? Тимәк, быйылғы түгел, ә *былтырғы, үткән*, ҡыш тураһында барғанмы һүҙ унда? Тик улай тиһәң, әле хикәйәләнгән "быйылғы" ҡыш бында шул баяғы "былтырғы" ҡыштың дауамы, тап үҙе һымаҡ ҡабул ҡылына... Әгәр ҙә шулай икән, ниңә *бер ҡыш араһына баягы йәйге эштәр, көҙгө гәмдәр* килеп ҡыҫылған? Әллә автор бүлектәрҙең урынын бутағанмы?.. Ошо рәүешле хронология буталышы гелән осрап тора бында. Хронология юғалһа, хроника рәүешле уйланылған был әҫәрҙең композицияһын ойоштороусы *төп юҫыҡ* та юғала... Йәнә килеп, романда ваҡыт ағылышын билдәләүсе ориентир-ваҡиғалар юҡ: уларҙың ҡайһы йылдарҙабарыуын билдәләү ҡыйын. Шуға күрә автор үҙе хикәйәләгән йылдарҙың (мәҫәлән, тәүге колхоз төҙөлөү, Сталинград һуғышы осорҙары) гәзит төпләмәләрен аҡтарып, әҫәрҙәге ваҡиғаларҙы шул осорҙоң тәғәйен хәлдәренә бәйләп нығытып китһен — документаллек менән көсәйтһен ине.

Ошо тәңгәлдә әйтелгәндәрҙән сығып, шундай ябай һөҙөмтә яһарға була: А. Йәғәфәрованың был әҫәр туҡымаһының буйлығы — хронология; һәм ул баштан уҡ шулай уйланып яҙылғанға, һуңынан ғына ҡайһы бер үҙгәреш индерелгәнгә оҡшай. Тимәк, әҫәр тәбиғәте классик *роман-хроникаға* тартым, һәм ул шулай *роман-хроника* булырға, ундағы төп хәл-ваҡиғалар емертелмәгән ваҡыт е бе буйлап теҙелергә тейеш, сөнки был әҫәр туҡымаһының *бөгөнгөһө*, әле күҙәтелгәндәй, үҙенән дә ҙур *ретроспектив* хикәйәт туҡымаһын күтәрә алмай, ул үҙе шунда күмелеп ҡала. Быларҙы иҫәпкә алыу, минеңсә, романды әҙәм уҡыр хәлгә килтереп йыйнаҡлаштырыуҙағы төп саралаҙың береһе булыр. Шуның өсөн Айһылыуға белорус яҙыусыһы Иван Мележдың "Полесская хроника" трилогияһының тәүге ике китабын (өсөнсөһө йомшаҡ) ҡабат ентекле уҡып сығып, *һәр яҡлап та ныҡышмалы һабаҡ алырға* кәңәш итәм (Мележ да тап шул йылдарҙы һынландыра — һәм нисек һынландыра!).

Хәҙер үк ике китап тәшкил иткән был ҙур әҫәр ("Килендәр") һөҙөмтәлә ҡап-яртығаса "һығылып" — һуғышҡа тиклемге осорҙо, ә ошо көндә яҙылып ятҡан дауамы (Йәғәфәрова уны яҙғанын беләбеҙ) һуғыш осорон иңләр ҙә йәмғеһе ике китап — дилогия булып сығыр, моғайын (трилогия тип көсәнергә ярамай!). Былары — автор ихтыярында, әлбиттә.

Йәнә лә бер иҫкәртеү: киң ҡоласлы булмаҡсы әҫәрҙе тар ҡоласлы исеме ("Килендәр") кесерәйтә түгелме?

Йәш авторҙың баш ҡалала ҡайнап торған әҙәбиәт ҡаҙанынан ситтәрәк (ауылда) Йәшәүен иҫәпкә алып, Яҙыусылар берлеге идараһы уны берәй наставник-остазға беркетеп ҡуйһа, хәйерле булыр ине. Прозабыҙҙа йыл аралаш романдарҙы бер-бер артлы ҡоймаҡ һымаҡ ҡоя белгән маһирҙар бар — уларға һауап, йәш яҙыусыға ҙур ярҙам килтерер ине был.

Яҙыусылыҡтың ауыр юлында Айһылыу Йәғәфәроваға түҙемлек һәм уңыш теләп, был әҫәрҙе ташҡа баҫылған хәлендә күрергә өмөт итәм.

12.12.1985.

Рәмилә Ибраһимова шиғырҙары

Йәш шағирә Рәмилә Ибраһимованың бер шәлкем шиғырҙарын ҡулъяҙманан уҡығас, авторҙарҙың ике төрлө төркөмө килде күҙ алдыма.

Уларҙың бер килкеләре икһеҙ-сикһеҙ шиғриәт даръяһының тулҡындары һыртында йөҙә ҡолас ташлап, йә булмаһа, замананың тын өрөп тултырған матрасы өҫтөндә ҡырын төшөп ятып ҡына, тирә-яғын хозурланып күҙәтә. Уларҙың хис-тойғолары һәм шул хис-тойғолар һалынған йырҙары ла, әлбиттә, даръяның әлеге үҙҙәре тирбәлгән иң өҫкө ҡатламдары — ял быр яллы тулҡындар, аҡсарлаҡтар, алһыу офоҡ, зәңгәр күк, алтын Ҡояш, таңғы ел һәм, әлбиттә, толомдарын ярға әүештереп үҫкән бөҙрә талдар тураһындараҡ була...

Икенсе тиҫтер авторҙар, үҙенән-үҙе күҙ алдындабалҡып асылған һәм шиғыр-йыр юлдарына өҙөлөп төшөргә генә торған баяғы сағыу киңлек менән генә ниңәлер мөрәхәтһенмәй, хатта ҡулдарына килтереп тотторолған әлеге йомшаҡ ҡына матрастарҙы ла ташлап ҡалдырып, ҡырҡ бәләләр аша тәрән даръя төбөнә сума, күҙ күрмәгән тәрәнлектән беҙ белмәгән нимәләрҙелер эҙләнә... Даръя өҫтөнөң еңел генә бирелеп йырланған гүзәллектәрен улар ҙа бит күрмәй түгел — күрә, әлбиттә. Ләкин улар уны бөтөләй башҡаса — хәтәр тәрәнлектәрҙе айҡап-сумып сыҡҡан һәм ниндәйҙер тылсымлы табышҡа эйә булып сыҡҡан тынғыһыҙ йән күҙе менән күрә, *баһаны* ла шул тәрәнлектән ҡарап бирә. Ындайҙарҙы мин ынйы эҙләп сумыусыларға тиңләйем һәм Йәш шағирә Рәмилә Ибраһимованы ла, һис икеләнеүһеҙ, ана шул ынйы эҙләүселәр тиҫтеренә теркәр инем.

Юғалттым мин һине, юғалттым...
Юғалтыуҙар әле аҙ булмаç.
Шулар өсөн әрнеп-әсенеп,
Йөрәгем дә әле аҙ һыҙмаç.
Юғалттым мин һине, юғалттым...
Тынғы бирмәй тик бер һорауым:
Шул булдымы әллә ҡолауым,
Үткән саҡта тормош һынауын.
Юғалттым мин һине, юғалттым...
Күкрәгемдә — һағыш юшҡыны.
Һаман һин тип тибә йөрәгем,
Яҡын итә алмай башҡаны.

“Юғалттым шул һине, юғалттым”... — ти шағирә һәм уҡыусыһын донъялағы иң тәрән тәрәнлеккә — кеше күңеленең ғәзиздәрҙән ғәзиз тәрәнлегенә алып инеп китә.

Уттан көслө, гөлдән нескә —
Бер ни юҡтыр һөйөү ише, —

ти ул “Һөйөү” шиғырында. Һәм шул нескә хис уны уттай яндыра, уның менән ҡуша уҡыусыларын да болоҡһондора был хис.

Яратамын, тиеп, үҙе башлап
Әйтә алмай ҡыҙҙар — ояла.
Бар өмөтөн өҙөп, аҙаҡ күбе
Яҙмышына күнә шуға ла.
Ҡыйыу күрһәләр ҙә, әйтә алманым
“Һөйәм” һүҙен, булғас ҡыҙ бала.
Ә шулай ҙабарыбер һәйбәт икән
Һөйгән кешең булыу донъяла!

Ынйы эҙләүселәр, ғәҙәттә, ҡыйыу йәнле булалар, күҙ йомоп, ҡурҡыныстар менән тулы төпкөлдәргә сумалар. Шул уҡ ваҡытта улар бик тиҙ яраланыусан да шул. Яралы хис менән тулышып моңһоуланған мөхәббәт лирикаһыбайтаҡ ҡына Рәмиләлә: “Юлдарыма һис үпкәм юҡ...”, “Күңелемдән һине юйһам...”, “Уй-хыялда — тик хыялда ғына!..”, “Һөйөү яҙым, тиеп, үткәндәргә...”, “Мин оноттом, тием кешеләргә...”, “Иңдәремдә һағыш көйәнтәһе...” тип башланған исемһеҙ шиғырҙар, “Иҫкә төшә”, “Хыял ҡалды” һ.б. ана шундайҙар. Улар беҙҙе моңландырып ҡына ҡалмай, ә тәрән уйландыра ла. Әммә шаяртып-йылмайырға ла белә икән шағирә (мәҫәлән, “Егет зары”), шулай ҙа мин уҡыған шәлкемдә моңһоулыҡ өҫтөнлөк итә һәм, аралаш ҡына булһа ла, йылмайып-көлөп алыу ҙа хайран биҙәр ине уны, тигән теләк ярала. Тап шуны аңлағандай:

Тиктомалға йылмая, тип,
Битәрләмәгеҙ мине.
Янып һөйгән сағығыҙҙы
Хәтерләһәгеҙ ине.
Уны күрҙем — барлыҡ донъя
Сағыу нурға күмелде.
Һуң, ғәйепләп буламы ни
Ғашиҡ булған күңелде?! —

тип әйттереп тә һала шағирә үҙе лә. Бирһен Хоҙай!

Был да һәйбәт шиғыр. Тик аҙаҡҡы строфаның тәүге ике юллығын ике юл аша аҫҡа күсереп ҡуйғанда, уңышлыраҡ булмаҫмы? Сөнки төп фекер йөгө строфаның шул тәүге ике юлына һалынған бит, һәм шиғыр тап шуның менән тамамланырға тейеш тә, минеңсә:

Һуң, ғәйепләп буламы ни
Ғашиҡ булған күңелде?! —
Уны күрҙем — барлыҡ донъя
Сағыу нурға күмелде.

Юғиһә, алтын тейәлгән йөктө үткәреп ебәреп, ылауҙы арттан ҡарап һоҡланырға утын арбаһы ҡалдырылған һымаҡ була, был иһә фекерҙе һүлпәнәйтеп, шиғырҙы бушағайта.

Рәмиләнең шағирә булараҡ миңә иң оҡшаған сифаттарының береһе — бөгөнгө көн менән бергә үткәндәр һәм киләсәк тураһында ла уйланыу, үткәндәрҙең бөгөнгөгә һәм киләсәккә туранан-тура бәйлелеген төҫмөрләргә тырышыу. “Тынғы бирмәй миңә үткәндәр”, — ти ул үҙенең “Уйланыу” шиғырында. “Атайым ауырығанда”, “Атайыма”, “Һинһеҙ киләбеҙгә өсөнсө Йәй...”, «ғүмер тураһында уйланыу”, “Аллаһыҙмын”, “Рәнйемәһен миңә ололар”, “Кешеме мин...” тигән, май сүлмәге тышынан билдәле, тигәндәй, исемдәренән үк күренеп торған тәрән йөкмәткеле шиғырҙар ана шундай.

Аллаһыҙ, тип көйә миңә инәй
Йома көндө иҙән йыуғанға.
Аллаһыҙмын, ул йәшәгән ергә
Яңы заманала тыуғанға.
Мулла, дин дәүерен уның кеүек
Зар-интизар булып һағынмам.
Аллаһыҙмын... Бары һөйгәнемә
Изге бер йән күреп табынам! —

ти шағирә. Ләкин был һис тә өлкәндәрҙе һәм үткәндәрҙе ихтирам итмәүҙән, Һанға һуҡмауҙан түгел, ә, үткәндәр өсөн ысын йөрәктән янып, ололарҙы ихлас ололап, үҙенең яңы заман ҡыҙы икәнлеген яҡшы тойоп яҙылған шиғыр. Быны тап шулай икәнлеген “Рәнйемәһен миңә ололар” исемле шиғырында шағирә үҙе лә йөрәккә яғышлы ябайлыҡ менән әйтеп бирә:

Зыяратҡа инмә — гонаһы ҙур,
Тиһәләр ҙә миңә ололар,
Һинең янға тағы килдем, атай,
Иҫкерә бит ундай йолалар?
Дөрөҫ булырмы һуң, беҙ барында
Ҡәберҙе баҫһа дегәнәк?
Рәшәткәһен ялтыратып аҡҡа
Буяп ҡуйҙыҡ, ана, бергәләп.
Хәҙерге мәл кәртә булыры юҡ
Аралыҡта ятҡан саҡрымдың.
Онотмайса барып торорғоҙ, тип,

Һин үҙең бит беҙҙе саҡырҙың.
Зыяратҡа аяҡ баҫкан өсөн
Рәнйемәһен миңә ололар:
Илдә аталарҙың ҡәберҙәрен
Ҡәҙер итә торған йола бар!

Йәш шағирәнең тыуған тәбиғәт тураһындағы шиғри юлдары ла уға ҡарата хәстәрлек, тәрән йөрәк ғәмдәре менән тулы.

— Буран, танышайыҡ, — тип ҡул һуҙҙым,
Ғинуарҙың иркә ҡыҙы буламын! —

Шулай алсаҡ өндәшә ул "Буранда" тигән бер шиғырында. "Ҡыш шыҡһыҙмы?", "Ямғыр", "Кешеме мин..." тигәндәре лә был йәһәттән һәйбәт тәьҫир ҡалдыра. Әйтергә кәрәк, ямғыр тураһында яҙылған мең-мең шиғырҙар араһында Рәмилә хас үҙ ямғырын үҙ йәшендәрен балҡытып та күкрәтеп яҙа алған. Тәбиғәтте, тыуған ер күркен күҙ ҡараһылай Һаҡлау проблемаһын үҙенсәлекле сисеү, үҙ йөрәк һүҙен әйтеү итеп күрәм мин уның баяғы "Кешеме мин..." исемле ҡыҫҡа ғына шиғырын да:

Һаҡмар килеп баҫа алға,
Бала саҡты иҫләһәм.
Кешеме мин, шунда үҫеп,
Рәхмәт һүҙе әйтмәһәм?!
Күҙгә күренеп Һайыға —
Аптырарһың, иңләһәң.
Кешеме мин, һыуын эсеп,
Яҡлау һүҙе әйтмәһәм?!.

Рәмилә сабыйҙар тураһында, әсә һөйөүе хаҡында ла ихлас шиғырҙар яҙа, бөтәһен дә тәрән белеп, эстән кисереп яҙа. "Теле сыға Гөлдәрҙең", "Әсә бәхете — Бала", "Миңнур ултырырлыҡ булған...", "Ағаһы ҡайтып ингәнгә...", "Кескәй артист" тигән шиғырҙарҙан ысын әсә һөйөүе бөркөлөп тора, ул яҡты хис уҡыусыһы күңеленә лә эркелә. Тик был шиғырҙарҙың өлкән уҡыусығамы, әллә кескәйҙәргәме — кемгә төбәлгәнен генә юҫыҡлап бөтә алмаған, буғай, автор. Ә был иһә уларҙы китапҡа туплағанда өҫтәлмә ауырлыҡ тыуҙырыуы ихтимал.

Билдәле булыуынса, ынйы йыйыусының эше еңел түгел: сумғаны һайын ғына ҡулына ынйы эләгеп сыҡмай — ҡа бырсаҡтар эсенә ҡом тулғандары, хатта буштары ла була ла була ғына икән. Шуның кеүек, Рәмиләнең шиғырҙары араһында ла бушаҡтары, йәки эшләнеп бөтмәгәндәре осрай. Мәҫәлән, "Ҡыш", "Яҙ", "Август төнө" кеүектәрендә авторға хас күркәм сифат — философик көсөргәнеш юғала. "Елкала" тигәнендә лә Йәш шағирә үҙ һүҙен әйтә алмағандай: ғәҙҙәттә балалар елкала нимә күрә — шуны шиғри ҡалыпҡа Һалып, теҙеп ала ла китә. Ә бит шағир уҡыусыһына ул күрә алмағанды, шағир күҙе һәм күңеле генә

күргәнде балҡытып биргәне ҡулай. Хәйер, автор үҙе лә бьны аңлай булһа кәрәк:

Бөтөнөһөн теҙә-теҙә,
Ҡәләм шиғри юл һала, —

тип тә ысҡьндыра бит... “Әсәйемә”, “Ҡайьндар”, “Тыуған яғым” тигәндәре лә шулай уҡ үҙенсәлекһеҙ, ғәҙәти, шағирәнең йөрәк саткыһьн йөрөтмәй. Һүҙҙәр менән һаҡһыҙыраҡ эш ҡылыу ҙа матур ғьна строфаларҙа ла һиҙелә ара-тирә, көтмәгәндә шырау кеүек тырпайып сығып тора. “Атайыма” тигән мәрҫиәлә иң аҙаҡкы юлда үлсәм боҙолоп, эште боҙған — музыкаллек юғала шул арҡала, шиғыр юлы урта биленән шартлап “һьна” ла ҡуя:

Магнитофон нәҡ һин булып һөйләй,
Һьның-йөҙөң ҡалған фотола.
Күңелдәргә яҡын, ғәзиз кеше
Буламы һуң онотола!

Һуңғы юлдың, ике ижек үлсәме етешмәү өҫтөнә, һөйләм төҙөлөшө лә сатаҡ: “онотола” һүҙе рифма өсөн артҡа шыуҙырылып, телмәр тәбиғилеге боҙолған (онотола буламы һуң, кәрәк). Шунан алдағы “яҡьн” һүҙе лә «ғәзиз” һүҙе менән Йәнәшә тороуы менән битәбиғи, хатта яһалма һымағыраҡ. Сөнки атай, бигерәк тә вафат булғас, “яҡьн» ғьна түгел, ә ғәзиздәрҙән ғәзиз була бит... “Йәйге төн” исемле этюд характерьндағы өс строфалы ғьна матур шиғыр ямғырҙы “душ”ҡа оҡшатыуы менән ҡолаҡты яра, гүзәл әсә телле Рәмиләгә бьнда үҙебеҙсә берәй һүҙ табып булыр ине, моғайьн. “Буранда” шиғырьндағы тәүге строфа-һөйләмдә “шулай” тигән бер һүҙ булғас, ошондай уҡ йөкмәткеле “шул саҡ”ты ниңә ҡабатларға? Буш урьнды тултырыу өсөн генәме?..

Тәрән социаль йөкмәткеле итеп уйланылған “Ике яҙмыш” шиғырьнда ике кеше яҙмышы аша ике заман образы һьнландырыла. Әммә яңы заман ҡыҙы Зөһрә образьна сағыубуяуҙарьн йәлләй һымаҡ автор:

Яҙмышы уның башҡаса,
Заманаһьна күрә, —

тип кенә сонтор ҡуян ҡойроғон тоттора автор...

Борон ҡыҙҙар ат атланып
Яуҙарға сапкан —
Ҡорал тотоп азатлыҡты
Яуларға сыҡҡан, —

тип халыҡтың көрәшсән изге тарихына мөрәжәғәт итә “Килә еләһем” тигән һәйбәт кенә әҫәрендә. Әммә ныҡлап уйлап еткерелмәгән бер юл менән генә ошо ифрат яҡшы башланғысының башына етә лә ҡуя:

Шулар төҫлө, Еленалай
Килә еләһем...

Бында: “Салауат Әминәһе төҫлө”, йә булмаһа: “Йәнтүрә йәнейе төҫлө килә еләһем...” тип әйтеүҙе шиғыр үҙе ҡысҡырып һорап тора — башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының 1812 — 1814 йылдарҙағы Ватан һуғышында ирҙәре менән бергә атлы ғәскәр сафтарында Парижға барып етеүҙәре тураһындағы “Йәнтүрә хикәйәте»н генә иҫкә төшөрәйек! Бының менән, әлбиттә, спорт мастеры Елена Петушкованың дәрәжәһен төшөрөргә теләмәйбеҙ, әммә һәр нәмәнең дә үҙ айышы, йырҙың да үҙ көйө бар бит. Әлеге шиғыр иһә, тарихыбыҙға мөрәжәғәт иткәс, тарихи сағыштырыуҙарҙы ла һорай...

Рәмилә Ибраһимова кеүек тәрән хисле, юғары зауыҡлы шағирәнән беҙ ынйыларҙы — күберәк, ынйыһыҙҙарын аҙыраҡ көтөргә хаҡлы. Ышанып әйтеп була: башҡорт шиғриәтенә был һылыубығаса беҙ иңләмәгән тәрәнлектәрҙән беҙ тапмаған аҫыл ынйыларҙы алып киләсәк. Үҫер көндәре алда булған йәш шағирәгә ысын күңелдән бәхетле ижад теләйек.

10.03.1980.

Риф Әхмәҙиев ижады

Йәш шағир Риф Әхмәҙиев шиғырҙары тураһындағы был һүҙемде дөйөмөрәк мәсьәләнән — *шағирҙың йөрәк осҡоно* тигән нәмәнән башларға теләйем. Әгәр ҙә шул осҡон һалынһа ғына, беҙҙең яҙған шиғырҙарыбыҙ башҡаларҙың йөрәгендә лә ялҡын ләүкетеп ҡабына — шиғыр үҙенең изге вазифаһын үтәй. Үкенескә ҡаршы, ҡапҡан һайын ҡалъя булмай, тигәндәй, беҙҙең бөтә шиғырҙарыбыҙ ҙа шул сифатҡа эйә түгелдәр әле — осҡонһоҙҙары ла тыуа һәм донъяға сығып ҡуя... Былары, әлбиттә һәр эштә лә була торған “етештереү етешһеҙлектәре”лер.

Ә иң мөһиме, минеңсә, шағирҙың үҙенең эсе тулы осҡон булһын, филтәгә ут биреүсе саҡматаш кеүек, тормошҡа ул өҙлөкһөҙ сағылып торһон...

Ә инде Риф Әхмәҙиевтың шиғырҙарында ана шул *изге йөрәк осҡоно* бармы һуң, тигән һорауға мин ысын күңелдән яуап бирәм: эйе, йәш шағир Риф Әхмәҙиевтабар, етерлек бар ундай осҡон!

Ҡоро ҡалаҡ ауыҙ йыртмаһын өсөн, миҫал итеп бер шиғырын тулыһынса бирге килә:

Бала сағым үткән. Инде иңдә
Ирмен тигән исем йөкмәйем.
Ҡыйыулығым етеп тәү ҡат әйтәм:

Һөйәм һине, Тыуған илкәйем!
Ниндәй күркәм: сәскәләнһә яҙын
Үҙең сәскән гөлөң-гөлкәйең.
Тәүге мөхәббәтем дәрте менән
Һөйәм һине, Тыуған илкәйем!
Донъя миңә яҡтынан да яҡты,
Аҙыраҡ һөйләй йомарт телкәйем.
Шыбырҙап та әйтһәм ишетерһең:
Һөйәм һине, Тыуған илкәйем!
Ауырлыҡтар иңдә ҡарҙай ирер,
Талһа талыр ҡай саҡ билкәйем.
Ҡеүәт биргән тере шишмәкәйем —
Һөйәм һине, Тыуған илкәйем!

Йәш совет гражданының, патриоттың ил-әсәгә әйткән изге йөрәк һүҙе, ялҡыны түгелме ни был! Ирҙәрсә баҫалҡы ғына яҙылған юлдарҙа, минеңсә, барыбыҙҙың да "йөрәк филтәһе"н баҙырҙатып тоҡандырғыс осҡондар иләүе бар — Шуның менән дә ут бар, шиғыр бар. Йәш шағир ижадындағы бының ише граждандыҡ тойғоларына һуғарылған публицистик шиғырҙарҙан хәрби хеҙмәткә китеүсе һалдат һүҙе — "Ил һағына" шиғырын, "Юлдар" һәм, риторикаға һуҡтырылғаныраҡ булһа ла, үҙ формаһын табып яҙылған һәм дөйөм заңы менән ыңғай тәьҫир ҡалдырған "Беҙҙең быуын", Йәнә "Бер иҫәһе ине ел булып", ҡобайырға тартым алымда ижад ителгән " башҡорт иле" кеүектәрҙе айырып күрһәтер инем. Граждан әүҙемлегенә, ялҡынлы публицистикаға тартымлыҡ уның ижадының бәҫен арттыра, көрәшсән рухлы яһай.

Тәбиғәт күренештәрен, йыл миҙгелдәрен автор буяуҙары аша тамаша ҡылырға форсат биргән төрлө-төрлө кимәлдәге лирик парсалар араһында "Әбейҙәр сыуағы" ыңғай айырылып тора: сағыу миләш нурҙары, Ҡояш сыуағы балҡый унда, авторҙың күҙ йәштәре лә ҡыуаныслы. Ошо урында "Ҡолонсаҡ" исемле, яндырғыс йәшен сатҡыһы менән һулҡылдатҡыс йөрәк моңо ҡуша үрелгән шиғырҙы ла тулыһынса теркәп үтмәй түҙә алмайым:

Һүнеп барған ҡуҙҙай йәшен
Һирәк-һаяҡ ҡуя йәшнәп.
Йәйге иртә.
Ауыл урамында
Бер ҡолонсаҡ йөрөй кешнәп.
Урам буйлап сабып уҙа ла ул,
Башын һоноп-һоноп кешнәй.
Эй ҡолонсаҡ!
Әйтәлмайһың бит һин кешеләй.
Йән-фарманға күккә уҡтала ла
Унан уҡтай алға ынтыла.
Әйтерһең дә,

Алыҫ киткән һайын,
Нимәнәндер ҡасып ҡотола...
Бөгөн таңда уның әсәкәйен
Йәшен уты киткән ҡамсылап.
Илай белмәһә лә,
Күҙҙәренән
Тәңкә йәштәр торҙо тамсылап.
Ә унан һуң, ямғыр болотолай,
Офоҡтарға инеп йәшенде.
Ул әсәһе өсөн
Үс алырға
Ҡыуып китте гүйә йәшенде...
Һәм әле лә бөтә донъя буйлап,
Ямғыр үтһә күк(е)рәп-йәшнәп,
Йөрөй төҫлө һаман,
Әсәкәйен эҙләп,
Бер ҡолонсаҡ илап-кешнәп...

Йәш авторҙың дөйөм кешелек темаһы — йәшлек, мөхәббәт тойғоларын айбарлаусы бер шәлкем лирикаһы шулай уҡ ғәмәлдә ыңғай тәьҫир ҡалдыра. “Әллә Ҡояш — Ҡояш булып...”, “Ярата, яратмай...”, “Ҡала урамынан ямғыр уҙҙы...”, “Алыҫ бер ҡалала таң мәлендә...” тип башланған исемһеҙ шиғырҙар улар. “Мин дә һиңә шулай ғашиҡ инем...” тип башланып киткәненең аҙағы, миңә ҡалһа, бик моңло тамамлана.

Ләкин, башта уҡ әйтеүемсә, беҙҙең эштә лә ҡапҡан һайын ҡалъя булмай һәм был Йәш авторҙың шиғри саҡмаһы ла саҡҡан һайын осҡон сәсрәтеп бармай. Мин маҡтап киткән шиғри шәлкемдәр араһында бөтөнләй осҡонһоҙҙары, хатта һалҡын ғыналары ла юҡ түгел. Ундайҙарын мин уҡыусының йөрәк-филтәһенә ут төртмәй торған «гәҙәти” шиғырҙар тип кенә төркөмләр инем. Шундай “гәҙәти”ҙәр төркөмөнә тәбиғәт, йыл миҙгелдәренә арналғандарҙан “Яҙҙағыса ҡабат ҡайындарым...”, “Илай икән хатта ҡайын да...” тип башланған исемһеҙ шиғырҙарҙы, йәшлек, мөхәббәткә бағышланғандарынан “Алһыу сәскәләрҙе өҙөп алдым...”, “Был күңелем ярһыу тулҡын һымаҡ...”, “Был донъяға мин хайранмын инде...” тип башланғандарын, “Шаңдау”, “Ҡыҙҙар моңо” тигән исемле шиғырҙарҙы индерергә тура килә. Уларҙың хатта исемдәренән һәм башланып китештәренән үк шиғыр ҡурының күп йөрөүҙән шымарып, һыуынып бөткән икәнлектәре күренә, уларҙан ни йылы ла, ни һыуыҡ та түгелдер... Сәбәбе быны ниҙән? Шағир, тимәк, осҡонһоҙ саҡма саҡҡан, башҡаларҙың саҡҡан утына йылытырға уйлаған. Ләкин кеше осҡоно менән кешене йылытып булмай — шиғыр шағирҙың үҙенең утын һорай!

Былары, әлбиттә, — ауыр булһа ла ҡабатлап танырға кәрәк, — тыумыштан уҡ осҡонһоҙ шиғырҙарҙыр. Ләкин мин бында һәләтле йәш шағирҙың ижадына ҡарата борсолоу тыуҙырған икенсе бер кәмселеккә — уның ҡай саҡ баҙрап торған утлы шиғырҙарында ла һүҙҙәр менән һаҡһыҙыраҡ эш итеүенә, логик фекер теҙгенен ҡулдан ысҡындырыбыраҡ

ебәреүенә, шуның арҡаһында, боҙҙан да ут сығарам, тип, шашынып, саҡмаһын яңылышыраҡ сағып ебәргән саҡтары ла булыуына йүнәлтергә теләйем иғтибарҙы.

Йырламаған күңел йырлап бара,
Сабый булып көлә, ҡыуана.
Нисәнсе яҙ шулай һөйөүемдән
Иҫерекмен, мин — бер диуана, —

ти шағир һәм уның был саф тойғоло ихласлығы бик һәйбәт. Әммә нәүбәттәге ике юл...

Иҫерекмен... Әммә иҫермәнем
Һөйкәлгәндә һинән башҡаға, —

тигәнендә авторҙың тәүҙә тоҫмалланған саф тойғоһо ла, ихласлығы ла әллә ҡайҙан килеп кергән суйырташтай һөмһөҙ бер һүҙҙән селпәрәмә килә лә ҡуя... Нисек инде, берәүҙе ихлас һөйгәс, *башҡаға* һөйкәлергә?!. Башҡаға һөйкәлер булғас, һөйөүең дә ихлас түгел! — Шулай тип әйтке килә лирик геройға. Бында, бәлки: *һөйкәлмәнем* һинән башҡаға, — тип алыу дөрөҫөрәк булыр ине. Шунһыҙ юҡҡа сыға шиғыр. Бына ҡайҙа һүҙ менән һаҡ эш итмәүҙең бәләһе!..

"Күк йөҙө" тигән икенсе бер шиғырҙа:

Бала сағым, хәтереңдәме,
Күпме буяуҙарҙы *тәмләп* ҡарап,
Күпмеһенән һүрәт яһаным, —

ти автор. Буяуҙарҙы ауыҙға ҡабып, *тәмләп* ҡарайҙармы ни? Күбеһе уларҙың ағыулы химик матдәле лә, етмәһә... "Тәмләп" һүҙе әллә автор лексиконында, урыҫ кешеһе "пробовать" тигәндәй, "Һайлап"ты алмаштырамы? Әгәр шулай икән, уның шулай икәнен уҡыусы ҡайҙан белһен?..

Артабан:

Ҡәнәғәтмен, ғәҙеллеген белеп,
Үҙ эшемә биргән баһамдың.

Авторҙың үҙенә үҙе биргән баһаның ни ҡыҫылышы бар бында? Әгәр ҙә бар икән, ниңә ул шуны беҙгә лә аңлашылырлыҡ итеп бирмәй? Етмәһә, нәүбәттәге строфала һәм башҡа строфаларҙа ла был баһа хаҡында һүҙ бармай бит.

Йәнә:

Хыялландым:
Кескәй аҡ ҡағыҙға

Һыйҙыраһы ине күк йөҙөн.
Өйкөм-өйкөм болоттары менән,
Йондоҙҙары — төн уттары менән,
Торналыһын, сабыр көҙ еткәс.
Һәм *уҫалын,*
Боҙло тәҙрәне
Тыным менән өрөп иреткәс...

Ни өсөн “уҫалын”? “Ҡышты “уҫал” тип кенә тамғалап буламы? Үҙенә күрә ул да иҫ киткес күркәм бит?

Тағы шул шиғырҙа уҡ:

Тамаҡ кибеп, ус ҡәҙәре генә
Бер шишмәгә килеп уҡталғас,
Уҡталғас һәм...
Зәңгәр күкте күреп,
Эсер һыуым эсмәй туҡталғас. —

быныһы иһә бөтөнләй “башҡа операнан ария” килеп китте, буғай: “боҙло тәҙрәне тыны менән өрөп иреткәс”, тап эҫе йәй селләһендәгеләй (ә шиғырҙа ул тУрала бер һүҙ ҙә, ишара ла юҡ) “тамаҡ кибеп, ус ҡәҙәре генә бер шишмәгә килеп уҡтала» алырмы икән һуң автор (хәл-ваҡиға ҡыш көнөндә бара бит!)?.. Шиғыр тигәнең барыһын да күтәрә алыр ине, әлбиттә, әгәр уны күтәрә алырлыҡ итһәң.

Һәм бына:

Мин аңланым:
Кескәй йөрәккә лә
Һыя икән *һауа киңлеге.*

Бәй, “һауа киңлеге”, нығлап уйлап ҡарағанда, һауа биләгән бушлыҡ була түгелме һуң? Йөрәгенә бушлыҡ “һыйғаны” өсөн ҡыуанамы автор?.. “Донъя киңлеге” булһа, беҙ әле аңлар инек.

Бының өсөн бары йөрәгеңдең
Шишмәләргә кәрәк тиңлеге, —

тип бөтә шиғыр. “Һауа киңлеге” менән “шишмәләргә тиңлек”тең бында ни уртаҡлығы бар? Был осраҡта икеһе ике яҫылыҡта ятҡан мәғәнә айышына ҡарайҙар түгелме улар?.. Һәр хәлдә, тоташтырыусы күпер юҡ араларында.

Күренеүенсә, был шиғырҙа автор һүҙ уйнатыу менән мауығып киткән дә толпарын дөрөҫ юлдан елдертеүсе фекер теҙгенен ысҡындырып ебәргән...

Матур ғына уйланған һәм айырым-айырым строфалары ярайһы шыма ғына яҙылған “Йәшлек бит ул” шиғыры ла юлыға шул теҙгенһеҙлек бәләһенә. Фекер теҙгенен буш ебәреү арҡаһында Пегас-толпары бында

һөрлөгөп, йәки тәкмәс атҡылап ҡына түгел, хатта, дүрт тояғы барлығын да онотоп, һыңар тояҡ менән дә елеп киткеләй.

Артта ҡалған уҙышсылай
Арып-талып инмәне, —

шиғырҙың башланып китеше үк сетерекле: Йәшлек нисек "артта ҡалған уҙышсылай арып-талып инһен" инде?!.

Йәшлек бит ул
Егетлектең
Йыһан буйлап гиҙгәне, —

Йәшлек үҙе шул уҡ егетлек түгелме ни? Әгәр башҡаса икән, ниңә башҡаса әйтмәҫкә?..

Киткән ҡоштар менән бергә,
Һағыш менән килмәне.
Йәшлек бит ул
Һөйөүҙең дә
Һиҙҙермәҫтән килгәне.

Тәүге ике юл, миңә ҡалһа, тормоштан түгел, бармаҡтан һурып сығарылған һымаҡ: кемдең булһа ла йәшлеге, ғөмүмән, "*киткән* ҡоштар менән бергә, һағыш менән *килеүе*" мөмкинме һуң? Ҡоштар китте бит инде, тимәк, һағыш та китте улар менән бергә! Фәҡәт икенсе яҙҙа ғына килерҙәр ине бергә... Минеңсә, булмай торған хәлдер ул.

Ул ваҡыттар — хыялдарҙың
Алтын сатыр ҡорғаны.

Ярай, быныһы бик тәбиғи, хатта образлы, матур ҙа. Әммә:

Йәшлек бит ул —
Миҙгелдәрҙең
Һорап килмәй торғаны, —

тип ослап ҡуя автор. Ниндәй миҙгелдәрҙең? Йыл миҙгелдәренеңме? — тип һорағы килә. Әгәр ғүмер миҙгелдәре тип алһаҡ, ҡартлыҡ миҙгеле лә һәм башҡалары ла беҙҙән һорап килмәй бит... Ғөмүмән, йыл миҙгелдәре лә беҙҙән һорап киләме һуң әле?

Бына шул уҡ "мәңгелек тема»ға яҙылған "Айырылабыҙ" шиғыры:

Айырылабыҙ...
Инде теләһәк тә
Ҡайтып булмай тәүге көндәргә.

Көндәренән элек, көтөп алған,
Көтөп алған айлы төндәргә.

Әлеге лә баяғы шул әйтер һүҙеңдең артын уйлап һаҡ эш итмәү бәләһе... Ниңә бында *көндө төнгә ҡаршы* ҡуйырға? Һағынғанда көнө лә, төнө лә бер түгелме ни? *Төндәрҙе* генә һағынғас, тимәк, һағыныуың да шул сама — лирик герой һөйгән йәрен ысынлап һағынмаған...

Артабан:

Ҡағылмасы,
Ҡойолормон төҫлө —
Йыуатам, тип, йылы һүҙ әйтмә.
Онотмасы мине, онотма, тип,
Төшөмә лә инеп *йөҙәтмә,* —

тип ҡырт өҙә автор һәм урынһыҙ ҡулланған был тик бер һүҙ — "йөҙәтмә" һүҙе — үҙе ҡорған йылтыр быяла тирмәһен суҡмар менән һуҡҡандай итеп селпәрәмә килтерә лә ҡуя. Ҡотосорғос "эстән емерек" лирик герой!.. — тип сәстәр үрә тора беҙҙең. Ә бит авторҙың маҡсаты ундай түгел ине!.. Мөхәббәтең ысын булһа (ә әҫәрҙең дөйөм рухы тап шулай уйланылған), аҫыл йәрең төшкә инеп "йөҙәтә" буламы һуң инде, киреһенсә бит!..

Айырылыуҙар...
Берсә тетрәтә лә
Берсә инә ялҡын төҫөнә.
Айырылыуҙар...
Һеҙһеҙ инанмайым
Мөхәббәттең ысын көсөнә.

Фекер толпары аҡһай кеүек бында ла. Мөхәббәтеңдең ысын көсөнә инаныу өсөн айырылыуҙар һис тә мотлаҡ түгелдер. Егет икәнһең, айырылышмаҫлыҡ та ҡаҡшамаҫлыҡ мөхәббәткә эйә булып ҡара!

Һәләтле йәш шағир Риф Әхмәҙиев ижадына ҡатыраҡ ҡағылдым, буғай. Ләкин был — уның ҡом-балсыҡ ҡаплаған талант гәүһәрен, шул сүп-сарҙан арсалап, балҡытып ебәреү теләге менән ышҡылыу. Шул йәһәттән оҙонғараҡ һуҙылған һүҙемде уғата оҙайтмаҫ өсөн, уның ҡыҫҡа ғына, ләкин тәрән мәғәнәле һәм моңло шиғыры менән ослап ҡуямын:

Ҡарашыңда моңһоулыҡ бар,
Һағыштан мәллә, тимә.
Көсһөҙлөк билдәһе түгел —
Нимәлер етмәй миңә.
Ҡайсағында сәскәләр ҙә
Һабаҡтан ғына шиңә.
Донъяға ғәмһеҙ түгелмен —
Нимәлер етмәй миңә.

....
Нимәлер етмәй миңә —
Донъя байлығы, тимә.
....
Кәңәшкә киләм һиңә —
Нимәлер етмәй миңә.

Маладис егет, үҙенә нимәлер етмәгәнен дә белә! Белгәс, эҙләнә. Ә эҙләнгән йән һис шикһеҙ табасаҡ, уңышҡа юлығасаҡ. Йәш шағир Риф Әхмәҙиевтың да шиғриәттә үҙенең йөрәк ялҡынын дөрләтеп ебәрәсәгенә һис шигем юҡ. Аҡ юл теләйем уға.
10.03.1980.

Күңелдәрҙең алтын тауҙары

Был әҫәр (Мөкәрәмә Садиҡова. Алтынтауҙағы ант. Башҡортостан китап нәшриәте, Өфө, 1975) — мөхәббәтле йәш күңелдең асыштары хаҡында.

Татыу ғаилә ҡороп балалар үҫтергән, егерме йыллыҡ ижад ғүмерен кисергән шағирә Таңһылыуҙың, көтмәгәндә йөрәкһеп китеп, йәшлек таңдарына әйләнеп ҡайтыуын иҫке көндәлек биттәренән астыртып уҡыта автор. Шуның менән беҙҙе лә йөрәкһеү донъяға — Алтынтауҙа аунап үҫкән, татлы Рә һыуын эскән, балалар йортонда тәрбиәләнеп буй еткергән, аҙаҡ килеп Мәскәүҙәге Әҙәбиәт институтына уҡырға инеп, алтын хыялына ирешкән таңһылыуҙың саф тойғолар, утлы кисерештәр иленә алып керә, уның менән ҡуша ихлас шатланырға ла, ҡайғырырға ла мәжбүр итә. Повесть шул яғы менән ифрат тәьҫирле — уҡыусыһын ун һигеҙ йәшлек ҡыҙҙың донъяға ғәжәпһенеп, ҙур асылып баҡҡан күҙҙәре менән баҡтырта, “иҫкереп бөткән” хистәребеҙҙе романтика ҡанаттарында осорта.

Дөрөҫ, Таңһылыуҙың романтик тәбиғәтен аңлатыу өсөн ауыҙ асып бер һүҙ ҙә әйтмәй автор. Бындай тылҡып тороуҙың кәрәге лә юҡ, сөнки ҡыҙҙы ҡанатландырған дәртле тойғо — уның тын алышында, ҡылыҡ-хәрәкәттәрендә, яҡты маҡсатлы тәрән эске донъяһында. Таңһылыуҙың һәр аҙымы — хыялсан артылыш, һикереш, донъяның ниндәй ҙә булһа яңы серен асыш. Шул таныш-белеүҙәр өйөрмәһе аша ул үҙенең иң дауыллы асышына — мөхәббәтенә ҡарай бара атлығып. Шул алҡыныу тойғоһо үтә баға тирә-яғына. Үҙен уратып алған, ҡанатландырып талпындыртҡан кешеләр араһында уҡытыусылары Вадим Николаевич Нагорный, Николай Алексеевич Рожкин, студент Андрей Холодцов, ашнаҡсы Надя апай ише игелекле йәндәр ҙә, тормошҡа үтә практик күҙлектән ҡараусы әхирәте Валя Синицина, Семен Дергач кеүек хәйләкәр курсташтары лабар. Алтынтауҙың итәгендәге тыуған ауылы Йәремдә иһә Таңһылыуҙы алсаҡ күңелле Хөмәйрә апаһы, уның ире Хәмәтдин, улдары Камил да күңел тауҙарын туғарылдырып көтөп тора. Ошо төрлө характерҙар Йәмғеһе дөйөм маҡсатҡа — героиняның образын һәр яҡлап асыҡ һырландырырға,

төрлө төҫ һәм контрастарҙабалҡытырға ярҙамлаша. Әйтәйек, Валяның ергә һылашыбыраҡ ятҡан ябай мәнфәғәттәре эргәһендә Таңһылыуҙың юғары хыялдары, Семендың мутлығы ҡаршыһында — ысыҡ тамсыһылай сафлығы уғата тосораҡ, төйөрөмлөрәк һыҙатлана. Ә егет менән ҡыҙ уртаҡ кисергән ҡайнар хистәр икеһен дә эске яҡтан нурландыра, уларҙы илгә, халыҡка Йәндәрен фиҙа итерҙәй дауыл ҡарлУғастары итеп күтәрә. "Әлбиттә, хәҙергә әле даны шундай киң таралған милләтемә лайыҡ бер хеҙмәт тә күрһәткәнем юҡ, — тип уйлана Йәш героиня. — Ләкин халыҡта, ояһында ни булһа, осҡанда ла шул, тигән бер әйтем дә бар. Ана шул һәйбәт ояға лайыҡ ҙур эштәр эшләйһе ине!"

Бына үҙенең Һабаҡташы, корей егете Ким Һон менән йәнәшә баҫып тора Таңһылыу үҙенең тыуған ауылында, алтынтау түбәһендә. Улар бында ғүмерҙәренең иң яуаплы мәлендә, яҙмыштарын хәл ҡылыу сәғәтендә килеп менгән, икеһе тиң керһеҙ ҡараштарын донъяға текләп төбәгән. Таңһылыуҙың күҙ алдында "Йәшеллек эсендә ултырған Йәрем генә түгел, күрше ауылдар, бормаланып ағылған йылға, ундағы электр станцияһы, уң яҡтағы ҡупшы урман, арғы яҡтағы фермалар, МТС, иген келәттәре, алыҫ-алыҫка йәйелгән һары диңгеҙҙәй иген баҫыуҙары ла ялт итеп күренә. Ауылдан төрлө яҡка нурҙар һымаҡ юлдар китә, телефон, электр сымдары һуҙылған бағаналар теҙелгән". Бына ошолар тап үҙҙәре булалыр ҙа инде ул беҙ белгән һәм һөйгән, күҙ ҡараһы итеп ҡарарға саҡырған тыуған ил тигән изге төшөнсә, тәғәйен төшөнсә!.. "Шулар аша Йәрем бөтә ил, бөтә донъя менән тоташа", — тип йомғаҡлап ҡуя автор. Йәнә килеп: "Аһ, Ер шарындағы ошо кескәй генә бер бейеклектең уға ни тиклем ҡәҙерле, изге урын булыуын аңлаһа ине Ким Һон! Ҡыҙыҡай иғтибар менән дуҫына ҡараны", ләкин... "ҡунаҡтың ҡиәфәтендә турист һымаҡ күҙәтеүсәнлектән башҡа һыҙаттар күренмәне". Был минутта корей егете, моғайын, үҙенең алыҫ "Таңғы сафлыҡ иле" менән тилерә, Таңһылыуҙы мәңгелеккә шунда алып ҡайтып китеү менән һаташа. Тимәк, ике бизмән табағына ҡыҙҙың мөҡәддәс тойғолары — ватансылыҡ хисе һәм ғишыҡ уты Һальна, көсөргәнештән бизмәне сайҡалып ҡуя. Сайҡалышты туҡтатырлыҡ, тотоп ҡалырлыҡ йылы тупраҡ хисенән тыш тосораҡ көс бармы һуң?..

Бар икән — кешеләр. Алтынтауҙың алсаҡлығы йөҙөнә сыҡҡан Хөмәйрә апаһы ул. Ҡыҙға туған халҡына изге әсәй итеп әйләнеп бағырға, уның тарихын, ижадын һөйөргә сәм уятҡан профессоры Николай Алексеевич Рожкин. Шул уҡ Валя әхирәттәре, Надя апайҙары. Уның кеүек үк ун һигеҙ Йәшлек Зоя Космодемьянскаяның илгә тоғролоҡ мәртәбәһе. Һәм, аҙаҡ килеп, Ясная Поляна утарындағы таңһылыу күргән изге йорттоң стенаһына бөйөк кеше ҡулы менән дуҫлыҡ билдәһе итеп элеп ҡалдырылған ҡәҙерле ҡомартҡы — Башҡорттоң ҡымыҙ ижауы... Бер-береһенә өҫтәлә, көсәйтелә уйҙары. Һәм бына: "Таңһылыу Ҡорокүл буйындағы зыяратка әсәһе ерләнгән төпкөл ҡойма яғына күҙ ташлап алды.

Әгәр шулай ете ят ерҙән ҡыҙы өсөн йән атып килгән егетте күрһә, әсәһе ни эшләр ине икән? Билдәле, уның да, Хөмәйрә апай кеүек үк, ҡыҙын ер ситенә ебәргеһе килмәҫ ине"... Хатта ерҙең һәр үләне, тупраҡ бөртөгө тере ҡулын һоноп йөрәктән тотоп тора, үҙенә тарта икән. Һәм был бөтә

тартылыуҙарҙан көслөрәк. Шуны аңламаған Ким Һон, гүзәл егет Ким Һон, Таңһылыуҙың табандарьн алтьнтауьнан айырылдырмаҡ булып ихлас тартыша...

Күренеүенсә, замананың иң оло проблемаларьның береһе бизмән табағына һальнды һәм ул әҙибә тарафынан тослап һалынды. Бөгөнгө халыҡ-ара бәйләнештәр, аралашыуҙар үҫешкән егерменсе быуатта үҙенән-үҙе көн үҙәгенә килеп баҫҡан, әхләҡи яҡтан үҙенең дөрөҫ сиселешен талап иткән мәсьәлә был. Һәм был йәһәттән даими шуны ла күҙ уңьнда тоторға кәрәк: Бөйөк Ватан һуғышы миҫалы, 20 милиондан ашыу совет гражданьның, шул иҫәптән таңһылыуҙың атаһьның да, Тыуған ил өсөн йөрәк ҡағышьн үлсәп бизмәндәр сайҡалғанда ла мөхәбәттәрен генә түгел, ә иң ғәзиз ғүмерҙәрен дә фиҙа итеү өлгөһө. Әммә ошо тормош үҙе алға ҡуйған проблеманы ҡыйыулыҡлы йөкмәгән повесть авторы уны аҙаҡҡаса хәл ҡылыуҙан бер аҙ тайшана кеүек: геройҙарьнан идеаль мөхәббәт хаҡьна ант иттертеп, шул уҡ ваҡытта замана һөргән баяғы тәғәйен һорауҙы төптө томалап ҡалдырырға тырыша. Кем белә, яҙыусы, бәлки, тура һорауға тура яуап эҙләп табыуҙы уҡыусыларьның үҙҙәренә ҡалдырып, хаҡлылыр ҙа. Әммә ҡырҡа аҙым яһап та, Таңһылыу үҙенең Ким Һонға булған саф мөхәббәтенә тоғро ҡалыр, һәм шул сүрәттә уны юғалтыу хәсрәте уғата нығыраҡ аҡланыр ине һымаҡ. Һәр хәлдә, әҫәр үҙенең уҡыусыһьн ҡыйыу фекер йөрөтөүгә тартыуы, янып-сәмләнеп йәшәй белергә өйрәтеүе менән ота.

Повесть яғымлы тулҡьнланыу хисе менән яҙылған, тел саралары күбеһенсә оҫта һәм кәрәкле ҡулланылған. Шул уҡ ваҡыттабыл Йәһәттән айырым кәмселектәре лә бар әле: күҙҙән осҡондар сәсеү, ут сәсеү кеүек штампылар, “таба” (дөрөҫө “табан”), “ер пары” (дөрөҫө “ер боҫо”), “урамдағы машиналар гөрһөлдәүе” (дөрөҫө “гөрөлдәүе”) кеүек ңылыш һүҙҙәр. Йәнә килеп “Тверской бульварҙағы *эскәмйәгә инеп* ултырҙым”, “әле бер, әле икенсе яҡҡараҡ шыуышкан ирендәрен”, “бормаланып а*гыусы* йылға”, “*күләме ягьнан* ҙур түгел ул” (өй) ише ҡолаҡҡа яғышһыҙ урьндар ҙа төртөлөп ҡуя күҙгә. Алтьнтауҙағы көсөргәнешле кульминациянан һуң ант итешеүгә тиклем арала өйләнешеү тураһьндағы диалог оҙонға һуҙыла; Ишбаев, Хәмитов, альберт Ғәлимов, Ислам Хәйруллин һымаҡ кәүек персонаждарҙың исем-фамилияларьн атау ҙа тик артыҡ йөк. Әммә дөйөм алғанда повесть мауыҡтырғыс эшләнгән, Башҡортостан китап нәшриәте уны айырым китап итеп баҫтырып сығарып уңған. Йәш уҡыусы унда үҙенеңбайтаҡ ҡьна йөрәк ярһыуҙарьна аҙыҡ табыр, ысьн эстетик ләззәт кисереп уҡыр. Авторьның өлгөрөп етеүен күрһәткән был яңы китап йәш быуьнда пролетар интернационализм тойғоһо тәрбиәләү менән бергә әҙәбиәтебеҙ геройҙарьның да географик һәм проблематик даирәһен киңәйтә, замандаштар күңеленең гүзәл алтьнтауҙарьн асырға хеҙмәт итә.

1975.

Кешелекле кешеләр

Яңы баҫылып сыҡҡан китаптың (Рәсих Ханнанов. Ҡыр ҡаҙҙары киткәндә. Хикәйәләр, парсалар. Башҡортостан китап нәшриәте, Өфө, 1975.) аҙаҡҡы битен яптым, уйға ҡалдым: үҙебеҙ кисергән тормоштоң бер киҫәге ята алдымда.

Төрлө жанрға (хикәйә, парса) ҡоролған һәм шиғри хис менән һуғарылған был йыйынтыҡты күпмелер самала автор күңеленең йәйғор күпере итеп ҡарай алабыҙ. Йәйғор төҫтәре, билдәле, берәү генә түгел һәм уларҙың һәр береһе үҙенсә яңы, сағыу. Әммә шулар араһында күрер күҙгә айырыуса сағыубер төп нур була, күңел күҙе шул тәңгәлгә уҡтала. Яңы китап йәйғороноң шундай уҡ бер саҡҡыһы ла нығыраҡ тартты үҙенә — кешелеклелек нуры ул.

Эйе, Рәсих Ханнанов китабының геройҙары (улар менән ҡуша уҡыусы ла!) шифалы мөхит тыуҙырған кешелеклелек мәктәбе аша уҙа, шуның рәхимһеҙ туры, ләкин ғәҙел һынауҙарында үҙенең выждан кристалының таҙалығын барлап белә.

Бына машинала илле туғыҙ йәшлек райком секретаре Солтан тыуған ауылындағы колхоздың "ғүмерлек" рәйесе, ҡорҙашы шәфиҡ менән ҡаты бәрелешеүҙән һуң елләнеп ҡайтып бара ("Иҫке дуҫтар"). Йөрәк тәңгәлен ҡыҫып тотоп ҡалған иҫке дуҫы китмәй һаман Солтандың күҙ алдынан һәм ул үҙен-үҙе битәрләп уйлай: ул, ҡыҙып китеп, таяҡты ҡырт һындырып ҡуйманымы? Ғәҙеллекте аша атламанымы?...

Шәфиҡтең бөтә көрәшсән тормошо баҫа күҙ алдына, ирҙең нескә күңел тәҙрәләрен сиртә. Һөҙөмтәлә Солтан район ҡасабаһына ҡайтып еткән ерҙән кире боролорға, йөрәгәнең кешелеклелек тойғоһо бойороуынса, иҫке дуҫынан ихлас ғәфү үтенергә мәжбүр була. Ғәҙеллек һәм кешелеклелек яҡшы кешенең тәбиғи ҡалыбы булараҡ тантана итә.

"Күңел күҙе" хикәйәһендә был проблема айырыуса сағыуыраҡ һынлана: ул ҡарт эшсе Нурыйҙың кешелек намыҫы менән уның ваҡ шәхси мәнфәғәте, мещанлыҡ шауҡымының асыҡтан-асыҡ бәрелеше төҫөн ала. Һөҙөмтәлә мещанлыҡ шауҡымы еңә, ваҡсыл Нурый тантана итә кеүек: ауыр ғаилә хәлендәге Йәш эшсене "таҡмаясаҡтар" уның иркен фатирына, нисәмә йылдар хәләл көс түгеп юлланған өс бүлмәһе, яртылаш буш торһа ла, үҙҙәренеке генә булып ҡаласаҡ. Әммә иртән эшкә килеүгә яңылыҡ ишетә Нурый (бер бүлмәлә биш кеше Йәшәгән бригадир Сөләймән теге йәш эшсе ғаиләһен өйҙәшлеккә индергән) һәм бөгөлөп үк төшә: "Йөрәгенән нимәлер өҙөлөп төшкәндәй булды", — ти автор. Бында аяныс һөҙөмтә бер: намыҫын аша атлаған әҙәм эстән өҙөлөп бурһый. Һәм киреһенсә: әгәр таҙа намыҫ кристалы булһа, күңел ҡайтарғыс тышҡы көбө аша ла кешенең яҡты күңел нурҙары балҡып сыға, үҙен уратып алғандарҙы йылыта ("Бер осрашыу"). Ә кешелек намыҫын үҙе аяҡ аҫтына һалып тапаған бәндә ҡара гүргә кергәнсе лә ҡотолмай ил ләғнәтенән, ул хатта үҙен тапҡан әсәһе тарафынан да мәңге ғәфү ителмәй («ғәфү ителмәй").

"Шишмә йыры" хикәйәһе ун ете йәшлек һылыу ҡыҙҙың, утлы-ялҡынлы утыҙынсы йылдарҙа тыуған ауылында ең һыҙғанып колхоз

төҙөшөп, кулактарға ҡаршы ҡыйыу алышын, уның ҡыуанысль һәм фажиғәле мөхәббәтен, синфи дошмандарҙы көйҙөрткөс әсе нәфрәтен, ҡорбандар биреп тантана иттергән көрәшебеҙҙең хаҡлығына тәрән ышанысын күрһәтә.

Хикәйәләр һәр береһе "төп нөсхә"гә — тормошҡа яҡынлығы, очеркка хас документаллектән кендеге өҙөлөп етмәүе менән тарта үҙенә иғтибарҙы. Был бер яҡтан яҙыусының табанын ныҡка терәп тороуын күрһәтһә, икенсенән уның ысын художестволы дөйөмләштереүҙәр йүнәлешендә яңы үрҙәр яуларға ла тейешлеген билдәләй.

Йыйынтыҡтың икенсе яртыһын тәшкил иткән парсаларҙа Ватан хисе, баяғы оло йәйғор һыҙаттарылай, төрлө төҫтә сағыла. Беҙ уны лирик герой ҡәҙерләп Һаҡлаған бер семтем тыуған ер тупрағында ла ("Изге аманат"), Нөгөш диңгеҙе ярындағы сал ҡаяға соҡоп яҙылған даһи силуэтында ла ("Батырлыҡ"), Ленин мавзолейы алдында сираҡкабаҫкан ғәрәп феллахы улының өмөтлө күҙ йылтырауында ла ("Мин Ленинды күрҙем"), билдәһеҙ Һалдаттың йөрәгенән ләүкегән мәңгелек утта ла ("Мәңгелек ут") һәм башҡа күп парсаларҙа ла күрәбеҙ.

Яҙыусы йөрәк моңо аша бөйөк Ватан һуғышы һалдаттарының һынмаҫ рух сорғолошон ("Толомдар", "Ағас булып ағас та...", "Йәшәү мәғәнәһе"), үҙ быуындаштарының ғәрәсәт йылдарындағы тормошҡа фиҙакәрлеген ("Кесерткән") Парсалы аҡ шиғырға Һалып кисерә, уның "Толомдар" ише ысын мәғәнәһендәге шиғри юлдары күңелде таңғы ысыҡ һымаҡ мөлдөрәп тулыштыра. парсаларҙың шаҡтай өлөшө ("Япраҡтар", "Сәскәләргә ғашиҡмын", "Ҡышҡы биҙәктәр", "Яҙ хәбәрселәре", "Яҙмыш уйыны", "Бүре балаһы" һ.б.) мәңге иҫкермәҫ әсәбеҙ тәбиғәт темаһына, уны ысын әсәй итеп таныуҙың бөйөк һөйөнөсөн йөрәктәргә асып биреү маҡсатына арналған — индустриаль шауға мансылған фәнни-техник революция осоронда был да күңелдәргә ифрат танһыҡлы. Сөнки, авторҙың үҙ һүҙҙәре менән әйткәндә: "Кеше күңеле — асылмаған сәскә. Йылы, саф нурҙар ҡағылдымы, бөтә күркәмлеге менән балҡырға тотона".

Ошолай күңелгә яғышлы китаптың төймәләй кәмселектәре лә дөйәләй төҫмөрләнә, аяныс тойғоһо уята. Мәҫәлән, әҫәрҙәрҙең байтағында күҙгә төшкән дегәнәктәй ҡырып торған, мәғәнәһеҙлеккә тартым стилистик ҡытыршылыҡтарбар: "эйәк осондағы, һуғыштан ҡалған бармаҡ баҫымындай яраһы" (3-өнсө бит), "ул, бөгөлгән башы менән беләгенә эләктерелгән ҡалын тимер таяғын алып, көс менән иҙәнгә ҡаҙаны" (63-өнсө бит), "ҡошсоҡ ҡанаттарын ҡыйынлыҡ менән бергә йыйырға тырыша" (87-нсе бит). Ысынлап та, әгәр автор: "Ҡайҙа ғынабарҺам да, үҙемде бер ваҡытта ла еремдән айырылған тип хис итмәнем. Бер семтем тупраҡ күкрәгем өҫтөндә Ҡояш булып янды, уйҙарымды нурланы, ғорурлығымды үҫтерҙе" (68-енсе бит), — ти икән, беҙ уның ниндәй хәлдә барыуын, ғорурланыуын юрап аймылыш ҡалабыҙ, сөнки предмет үҙ аяғы менән ҡыбырҙаған тере кешенең күкрәк *өҫтөнә* һалып йөрөтөлмәй (тәңгәлендә, кәрәк)... Шулай уҡ тау башына, үргә ҡарата ла "үҙе менән бергә өҫкә алып менеп китте" (93-өнсө бит) тип һуҡтырыу ҙа яҙыҡтыр. "Алыш" (схватка) һүҙе лә йыш ҡына автор телмәрендә "алмаш"ты (замена) алмаштырып

(авторса әйткәндә, “алыштырып”) килгән. Ә “Йәшәү мәғәнәһе” парсаһында ваҡиғалар драматизмына һуғарылған көсөргәнешле минутта ла лирик геройға ни өсөндөр “ҡыҙыҡ булып китә” — һәлмәк йырға һәләк иткес фальш (ялған) нота килеп кергәндәй (88-енсе бит). “Ғәфү ителмәй хикәйәһе иһә фрагментарлыҡ бәләһенән миктәгән, быға сәхә шап-шаҡтай һулышлы автор унда әллә сарсап йығылған, әллә ауыҙ тултырып хикәйәләүҙән, ҡыйыу дөйөмләштереүҙән янтая. Шул арҡала төп герой Һаҙый психологик тип булараҡ асылып бөтмәгән, тулы ҡанлы образ дәрәжәһенә еткерелмәгән: беҙ уның үҙен түгел, ә Ғарифйән телмәрендәге тоноҡ сағылышын — шәүләһен генә күрәбеҙ. Һөҙөмтәлә фәһемле әҫәр бирерҙәй тормош материалы яҙыусы ишеткән меңдән бер ябай ваҡиға рәүешендә — асылып етмәй ҡалған, йәйғорланып балҡымаған.

Былары, әлбиттә, яҡшы китапты уғата яҡшыраҡ итеп күрергә теләүебеҙҙең сәбәбе.

Ә хәҙергә Р. Ханнанов әҫәрҙәренең кешелекле геройҙары ерҙәге яҡшылыҡ өсөн көрәштә уҡыусылары менән бер сафтабара. Йыйынтыҡ рәссам А. Фадеев тарафынан яратып биҙәлгән, әҫәрҙәрҙең йөкмәткеһен асырға ярҙамлаша.

20.09.1975.

Моңло юл

Тойғондоң тағы ла бер китабы (Күңел һағына. Өфө, Башҡортостан китап нәшриәте, 1992.) донъя күрҙе, ниһайәт. Ниһайәт тигәнем шунан: Риф Тойғоновтың кес кенә, әммә үҙенә күрә нәжәғәйле тәүге мәжмүғәһенән һуң хәҙер инде Тойғондоң шаҡтай һәлмәк кенә эстәлекле һәм йәйғорло ошо йыйынтығынаса ара шөйлә оҙонға һуҙылды, оҙағыраҡ көттөрҙө... Шиғриәтебеҙҙең суғыртмаҡла юлында, билдәле булыуынса, ауаздары бигүк шаңдауланмаған Тойғон менән Хәсән Назар бар, ығы-зығылы шиғри шау-шоу араһынан ихлас йөрәк аһәңдәрен һағындыртып ҡына сыңлата улар. Бының үҙ сәбәптәре, сөнки әҙәби яҙмыштар үтә ҡатмарлы, һуҡмаҡтарыбыҙ Дәү Хоҙайҙың ғәмәл дәфтәрендә юҫыҡлап яҙыулы — бәйге ҡырынан һәр кем үҙенең юртағында үҙ һуҡмағын ярып уҙа, шуға күрә тиҙлектәр ҙә үҙенсәлекле була. Шул уҡ ваҡытта һөрлөктөргөс бәғзе кәртәләр ҡороп, бәйгене тотҡарларға, хатта бәйгесенең йөрәген шартлатырға ла мөмкин, ундай хәлдәр ҙә йыш булғылап тора шул... Китабында Тойғон үҙе әйтмешләй:

Шундай мәлдәр була...
Ауыр мәлдәр...
Ерҙә йәшәү тормай бер тингә.
Һағыштарым шул саҡ әйләнәләр
Алҡымдарҙа торор төйөнгә...

Бьна ошо алҡымдарҙа торор төйөндәргә лә ҡарамай, Ҡояш һәм ай юлдарьн шәйләй алған, бүрәнә үтә бүре күрерҙәй уҙаман булып ҡалырҙайҙарҙы ғьна үҙ юламаны яһай икән дә шиғриәтле-моңло юл — ҡалғандары ҡалъялы түрҙә табьндаш, ваҡытлы юлдаш ҡьна. Әммә, юлаусьның усағьнда күҙләнгән тере ҡуҙҙарҙай, юлдаштарҙың уңғандарьның бәғер ярып әйтер мөҡәддәс һүҙҙәре, йөрәк моңдары ҡала юл буйьнда, юламандың йөрәгенә аманатланып туплана шуларҙың барыһы. Шуға күрә лә ошолай әйтергә хаҡлылыр ихлас шағир:

Һаман да мин бер хыялый инде! —
Шиғыр яҙып,
Ләззәт аламьн.
Бала саҡта бергә шиғыр яҙған
Дуҫтар хисен уға һаламьн...

Бала сағьн булмаһа ла, ирене өҫтөнә себеш йөнө лә сыҡмаған алтмышьнсы йылдарҙағы эскерһеҙ йән — талип заманьн хәтерләнем был "хыялый" шиғыры юлдарынан унын, Тойғондоң. Мин, өлкәнерәк быуьн, университетта ситтән тороп уҡығанлыҡтан, сираттағы бер хисап бирешкә килгәйнем, Киров урамьндағы барак ятаҡта беренсе курс талиптары менән бергә тура килде урьным. Юрғаныңа ҡарап аяҡ һуҙ, тигәндәй, наҡыҫ ҡына туҡландыҡ, әммә шиғри табьныбыҙ ифрат мул: янып шиғыр яҙмаған да һөйләмәгән йән эйәһе юҡ ине, буғай. Бер-береһенең шиғри табыштарьна алтьн тапҡандай ҡыуанып, һәләт отоп та алырҙар, үҙенеке һымаҡ ихлас тәкрарлап та йөрөрҙәр ине. Ошонда мин һоҡланып иғтибарлағаным — йәштәрҙең бер-береһенә итәғәт, дуҫлыҡ хисе менән тулышып балҡышы. "Дуҫһыҙ булыу өсөн, бер минутка/Йәшәү кәрәк ерҙә йөрәкһеҙ", — тип әйтә икән был шағир, ысьн йөрәктән сыҡҡан тәрән хисе, Йәшәү мәғәнәһе был. Мөхәббәт менән дуҫлыҡ — Тойғон шиғриәтенең ҡуш ҡанаты, тиһәм дә хата булмаҫ... Шуға күрәлер инде, баяғы йәштәр барагында шиғриәт хөкөм һөрҙө, шиғри табьндар кәйефлк табьнға әйләнер осраҡтар ҙа булды. Шундайҙарҙың береһендә йор һүҙле оло әҙип Сәғит Агиш та ҡатнашып, егеттәрҙең береһенә бағышлап, ни өсөндөр татарсалап-шаяртып әйткән туҫтаҡ тәбрикләүе иҫемдә һаман:

Ишми Шарап — эчми шарап,
Аҡыл ала алға ҡарап.
Шиғырлары аның исертми,
Чөнки дессертный...

Сәғит Агиш ағайыбыҙ, күҙе күремһеҙ көйө, күрәҙә булған икән: Ишмөхәммәт Шарапов тигән шул Усалы егетебеҙ, йоморо баш, шағирлыҡ ене ҡағылған зат көйөнсә лә, ысьн аҡыл эйәһе — телсе ғалим булып китте, мәктәптәрҙә әсә телен уҡытыуҙы яйға һалыуҙа үҙ өлөшөн индереп тә өлгөрҙө. Ул саҡтағы ғәжәп шиғри хикәйәләр яҙыусы, Тойғондоң яҡташы

Рафаэль Аҙнағолов та шулай уҡ күренекле ғалим бөгөн. Баяғылай, һәр кемдең үҙ юртағы ла һуҡмағы.

Эй дуҫтарым!
Һеҙ яҙаһы шиғыр
(Килгән тиклем хәләл көсөмдән)
Яҙыла ул миндә,
Яҙам шуға
Үҙемдең һәм һеҙҙең исемдән! —

тип белдерә икән шағир, был ҡоро һүҙ генә түгелдер, тимәк. Тоташ быуын аманатын йөкмәп барыу тойғоһо уйын түгел, Тойғон тигән тойғоло исемең булһа ла — утҡа-һыуға һалып һынап ҡомарлата ул йәнде:

Атлар саҡа еләм,
Ҡанат итеп
Күңелемдә ташҡан тойғоно.
Көләү әле шатлыҡ булмағандай,
Аңлатамы илау ҡайғыны?
...Ҡайғыларым көлөп килде миңә,
Бәхеттәрем килде илатып...

Ана шулай күҙйәш үтә бағып көлә, көлгәндә лә илай икән дә шағир... Әммә: “— Мин ғашиҡмын! — тигән һүҙгә һыйҙырғанмын яҙмышымды”. Сөнки “Мөхәбәтте ерҙә ҙурлап йәшәр” өсөн тыуған заттандыр, шуға күрә лә ҡульна йырлы-моңло ҡәләм алғандыр. Шәхси бәхетеңдә алйып иҫергәнеңдә лә башҡаларҙың ҡайғыларын ҡуша кисереп, ә шәхси ҡайғыларыңдан иңрәгәндә лә башҡаларҙың бәхетенән тилереп ғүмер итә алыуҙан да киләләр ул халыҡ күңелен арбағыс бәрәкәт — ауырлыҡты еңдертеүсе, ҡанат ҡуйып елдертеүсе шағирәнә илаһилыҡ тойғоһо. Күрмәйһегеҙме ни, шағирҙы тәпәй баҫтырҡан Ырымбур өлкәһенең Ҡыуандыҡ районындағы баҫалҡы ғына Ҡатыралы йылғаһы ла баш бирмәйенсә “Аға туҙынып” үҙен урғылтҡан бәрәкәт тылсымынан, ә ауылы янындағы йәнһеҙ һымаҡ ҡайҡайып торған ҡырлас ҡая ла тап елкенсәк шағир күңелендәй мәңге тил бер ҙә мәғрур:

Күҙ ташлаһаң — кәпәс төшөр:
Тауҙар беҙҙә күккә ашҡан.
Алдарымда ҡырлас ҡая
Толпар һымаҡ үрә баҫҡан.
Һырып алған аҡ томандар —
Ялдар кеүек елбер-елбер...
Ысыҡтарҙы һөртөп иҫкән
Елдәр һөйләй кеүек бер сер...

Бьның сере, күрәһегеҙ, Һалҡьн ҡаяны ла йәнләндерткес тылсым тулы күңелдә, ә уны иһә ошо Ҡатыралыһы менән көнө-төнө селтер-селтер йырлаған, ҡырлас ҡаяларьн ҡанатлы толпар яһап талпьндыртҡан ғәзиздәрҙән ғәзиз тыуған ер тойғоһо игелдермеш икән үҙенең шағир ульна; был тылсымдан тар офоҡтар киңәйә, сикһеҙ диңгеҙҙәрҙең сиген самалау сәме арта:

...Диңгеҙҙәргә илтер елкән кеүек
Ауылымдың ап-аҡ өйҙәре... —

ҡайһьндай ҙа йәнләндереп терелтеү, самалар теүәллеге! Сәңгелдәгендә тирбәлткән дә тәпәй баҫтыртҡан берҙән-беребеҙ тыуған өй шул күңелдәрҙең мәңге кирелеп илтер ап-аҡ елкәне. Аслан ошо аҡ елкәндәр илткәндә имен донъялар, дәүләт тигән оло йорттоң ырыҫы ла булып тора ул ата-баба нигеҙендәге өнһөҙ йорт: күҙ ҡараһылай күреп ҡурсалау урьньна уны урьндан ҡуптарыу — күрәләтә бәғерҙең ҡанһырауы:

Был йорттоң да үҙ тарихы барҙыр —
Быуаттарға хатта торошло.
Бөтәһе шат бөгөн һүткән йортҡа,
Тик мин генә моңһоу ҡарашлы!
...Был йортта ла кемдер ҡыуанғандыр,
Илауьна тыуған баланың.
Яраһьнан кемдер һыҙланғандыр,
Иҫкә алып һуғыш яланьн.
...Был йортта ла кемдер оялғандыр
Алып ҡайтҡан саҡта кәләшен.
Башьн эйеп кемдер оҙатҡандыр
Һуңғы юлға йөрәк өләшөн... —

ана ҡайҙарға тамырлана маңҡортлоҡтан тутланмаған хәтерҙең оҙонлоғо, күсәгилекле тарих тойғоһо: Баяғы аҡ елкән илткән сикһеҙ диңгеҙ — бөйөк туған халҡың ул. Шағир үҙе әйтмешләй, уттай егет сағында ла, утыҙҙан алып һикһәнгәсә ғүмер миҙгелдәрендә лә берҙәй елкәнләндертәсәк тойғо был; кешемен тигән кеше генә шул тойғоһон намыҫьна бәрәбәр ҡуя ала:

Халҡьның ул хаҡ яҙмышьн данлар,
Ихтирамы булһа теленә...
...Намыҫ һатмаҫ ҡьна йөрөтәлер
Иң ҙур һөйөү ерҙә — иленә...

Тамаҡ ярып һөрәнләүҙе яратмаған, хатта үҙең дә һиҙмәйенсә һулыш алып йәшәү һымаҡ тәбиғи ҙә, ябай ҙа булған йәшәйеш ғилләһе был; шундай йәшәйеште шағир ваҡлыҡтарға бирелмәүсән боронғо эпос батырьның баҙыҡ һьньнда күрә:

— Сәләм, *батыр*!
Бармайһыңмы,
Дуҫыңда бит бөгөн байрам?
— Ваҡытым юҡ. Күрмәйһеңме,
Ҡылысымды ҡайрап торам.
— Сәләм, *батыр*!
Бармайһыңмы,
Дуҫың тапҡан тауҙай алтын?
— Ваҡытым юҡ. Дағаларға
Сығарылған толпар атым.
— Сәләм, *батыр*!
Бармайһыңмы,
Дуҫың әле ҡыҙ йәрәшкән?
— Ваҡытым юҡ. Уҡ-янымдың
Тарттыраһым бар керешен.
— Сәләм, *батыр*!
Бармайһыңмы,
Дуҫыңа бит дошман килгән?
Йортон талап, ҡол итергә,
Үҙен алып китәм тигән.
—Алыҫ ерҙе осоп үтер
Толпар атым дағаланған,
Уҡ-ян, ҡылыс ялтлап тора —
Өҙәңгегә тарта табан...
Киттем — ваҡыт бик аҙ ҡалған...

Ошо эпик батыр образы аша, миңә ҡалһа, тылсымлы йомғаҡтай шағир күңеле үҙе тағатылалыр; әммә батырға ла бик тә тәбиғи бит күңелдең нескәреүе, иңрәүе. Тап ошо хаҡта һөйләй, буғай, китап сәхифәләренең алҡымдан алырлыҡ моңло, нескә хисле кисерештәр шәлкеме:

Йәше үтеп барған ҡыҙ һағышын
Аңлатайым ниндәй һүҙ менән?
Телһеҙ итер,
Әгәр уфтанып ул
Бер ҡараһа, ҡырын күҙ менән.
Әйтеүҙәре, ай-һай, еңел дә бит,
Уйға һалыуы ни ҡыйыны?
Ҡатын-ҡыҙҙың булһын үҙ имәне,
Ир-егеттең булһын ҡайыны...

Тик шуны ла иҫтән сығармай автор: моң ул Йәйғор төҫтәреләй күп ҡырлы сағыу сифат. Шаярыу ҡатыш уҡландыртылған мәргән осло шиғырҙар ҙа

күңеллелек өҫтәй ыҡсым китапҡа; сатира һәм юмор тигән баш бирмәүсән тай-тулаҡты ла юрғалатҡан үҙ ҡороғонда нуҡталап. Ә илебеҙ тарихының ытырғаныс шәхес культенә бәйле ҡанлы биттәрен тасуирлаған “Баҡсала” тигән ыҡсым сюжетлы поэмаһы иһә шул темаға арналған башҡаларҙыҡынан һәр яҡлап йыйнаҡлығы, үҙенсәлеге менән нык айырылып, бер юлы дүрт быуын кешеләренең фажиғәһе булып ҡала хәтерҙә. Әйткәндәй, шуны ла өҫтәү урынлы булыр бында: тиҫтә йыл элек ҡулъяҙманан был авторҙың үҙенсәлекле сәхнә әҫәрен дә уҡығайным мин — моңло драма ине, биләүҙәге килеш быуылды шикелле... Шағирҙы төплө баһалаусылар булыр, баҙығыраҡ ғилми һүҙ ҙә әйтелер, сөнки уның тотҡан юлы үтемле, ниәттәре игелекле:

Хәтерләнем: саналарға
Еккән саҡты арғымаҡ,
Аҡ ҡарҙарҙа сана эҙе
Һуҙылғанын йыр һымаҡ...
Булһын ине шиғырҙарым
(Үкенмәм йәшәгәнгә!)
Сарсағанға — йотом һыуҙай,
Йылы нур — өшөгәнгә.

Амин, юрағаның юш килһен, моңло юл уҙаманы!

05.01.1993.

Йөрәк тибеше

“Ағиҙел” журналының былтырғы ике (5-енсе һәм 12-нсе) һанында ҡәләмдәшем Барый Ноғомановтың “Мырлаҡ” тигән хикәйәһе менән “Яңғыҙ түгелмен ерҙә” повесен уҡығандан кәйен (элегерәк тә яҡшы повесть баҫтырткайны!), йөрәкһенеүемдән арына алмай йөрөйөм әле һаман. Матбуғатыбыҙҙа йыльна тиҫтәләгән, хатта йөҙәрләгән сәсмә әҫәрҙәр ташҡабаҫыла торһа ла, таш бәғергә әүерелә барыуҙанмылыр әллә, күңел ҡылымды ҡыбырлатмай инесе береһе лә. Бына килеп, ҡыуаныстан ҡанатланғанмын һымаҡ. Ошо хәлемдең сәбәбе, моғайын, туған әҙәбиәтебеҙҙәге ялған-ялтырауыҡтарҙың күплегенә, тантана ҡылыуына күнегелгән был заманда ысын затлы ошо буйтым прозаға юлығып, өс көнлөк “әҙәби табыш”тарҙан биле һығылмыш журналыбыҙҙың кинәнеп бил турайтыуын, көр һулышын тойоуҙандыр, тип уйлайым. Эйе, түрәнең йә ҡалъя тураусының ымы буйынса ҙурлай ҙа хурлай торған меҫкен әҙәби тәнҡитебеҙҙең тел-тешенә кермәгән, әммә кәбәк көшөлөндәге һирәк бойҙай бөртөгөндәй тос баҙрайған ысын оҫта, проза маһиры өнһөҙ-тынһыҙ эшләп йөрөй икән дә арабыҙҙа, миңә ҡалһа. Тормоштоң әсе-сөсөләрен баштан ашырҙай татыған, туған тел һәм милли эске тойом тигән нескә

затҡа туған халҡы тәбиғилегендә ереккән, әҙәби оҫталыҡ тигән баш бирмәҫ арғымаҡты ла бейетерлек оһолло теҙгенләгән, ә уҡыусы ихтирамын теле менән телеп алырҙай, йөрәгенә һарымай булып яғылырҙай уҙаман. Сөнки ҡәләменең осо менән түгел, йөрәк тибеше менән үтә йөрәккә.

...Һалҡын таш ҡаланың күп ҡатлы бер йортоноң подъезын, өҫкө ҡаттан иң аҫҡаса, бысаҡ менән телеп аҫҡандай (срез) итеп килтерегеҙ күҙ алдына. Кемдәр генә мыжғымай ул фатирҙарҙа! Һәр ғаилә — үҙе бер дәүләт тә донъя. Көндәлек ғәмдәренә мәшғүл һәр береһе, үҙенсә тибә йөрәге. Яҡшыһы ла, яманы ла, намыҫлыһы ла, намыҫһыҙы ла, изгеһе лә, иблесйәне лә бар бында, подъезд халҡы араһында. Ғаиләләрҙең һәр ҡайһынаһы, гөбөргәйел-таш баҡалай, үҙенең таш көбөнә йомолған, үҙҙәренсә көйләнгән, бер-береһен күрмәй ҙә белмәй кеүек. Әммә баяғы "срез"дан көллөһө бер юлы күренеп, фашланып тора беҙгә — бер яғы быяла стеналы умартала әллә бал ҡорттарымы, әллә һары һағыҙаҡтармы, гөжләп ҡайнашҡан һымаҡ. Эйе, кешелек йәмғиәте ҡатламдарының, күрер күҙгә күргәҙмәләтеп, өҫтән аҫҡаса хәтәр теленеше был. Ошо ҡурҡынысла ла, ҡыуанысла ла ҡатламдарҙа йомарлаҡкай йән эйәһе талпына — бесәй балаһы Мырлаҡ. Иң өҫкө ҡаттан алып, подвалғаса тәкмәстерә уны тормош, аҙаҡ килеп ҡылдай нәҙек йән генәһен дә өҙә. Ташландыҡ йән хәлендә балалыҡтан үҫеп етеп, үҙ балаларына әсәй булмыш ошо бесәй күҙе менән баға уҡыусы донъяға, тора-бара ул үҙе үк шул ташландыҡ бесәйгә... әй, юҡ! — бесәй икән дә! — "әҙәм"гә әүерелә: кил бәте менән түгел, эске һәләте менән. Кәүҙәһе менән бесәй була тороп та, барыһын да "әҙәмсә" күрә, кисерә, уйлана торған Мырлаҡ. Уның уйҙарынан хатта сәстәр үрә торорлоҡ. Тик бына ошо тәңгәлдә яҙыусыбыҙ, кемдәндер (ытырғаныс цензорҙан?..) инәлеп ғәфү үтенгәндәй, шундайын тәбиғи әҙәмсә ағылған Мырлаҡ кисерештәренә тупаҫ шырау ҡаҙағандай: "Әйҙәгеҙ, әкиәттәгесә, суртан әмере буйынса, Мырлаҡ та кеше һөйләшкәндәрен аңлай, уйлай белә, тип фараз ҡылайыҡ", — ти ул... Толстойҙар, Буниндар, Лондондар фараз ҡылмағандар ҙаһа, кешесә ҡыландырғандар! — тип киҫәтәһе килә, ләкин... Тере тәнгә кергән оторо шырау — шырау көйөнсә ҡала. Әммә авторҙы ла яҡшы аңлайым — классиканы бар тип тә белмәгән, маңҡортлоҡ кимәлендә ҡалған мөхәррирҙәр ҙә етерлек! Бынан егерме йыл элек бер гәзитебеҙҙең мөхтәрәм етәксеһе мине лә нәҡ шундайыраҡ бер кимәлгә кәйлегергә мәжбүр ҡыла яҙғайны: "Беҙҙең гәзиттең төп уҡыусылары бит, ҡустым, дүрт класс ҡына белемле тракторсылар, Һауынсылар, көтөүселәр... Һин шулар аңларлыҡ ҡына яҙ, үрмәләмә юғарыға", — тигәйне ул ихласйән. Инде килеп, моғайын, Мырлаҡҡа ла ҡаҙала... И Илаһым, барыбыҙ ҙа шул талапҡа ҡулайланып, *баҫ*кыстың аҫҡы аратаһына Йәбешеп ятһаҡ әгәр, өҫкө араталарға кем артылыр?! Мөхәриррҙеңме, уҡыусыныңмы торған баҫҡыс аратаһының түбәнлеге өсөн, тим, Йәғни донъя әҙәбиәтендәге (Л. Толстой, И. Бунин, Д. Лондон һ.б.) тас ошолай әҙәмиләштерелгән йәнлек образдарынан ғафил ҡалғандары өсөн, тим, Мырлаҡ ғәйепләме ни?.. Һәр хәлдә, ана шулар кимәлендәге образ был, Барый Ноғомановтың ташландыҡ бесәйе Мырлаҡ... Ә хикәйә үҙе, яҡшы ҡағыҙға затлы һүрәттәр менән биҙәп, балалар өсөн айырым китап

итеп сығармалы; бер юлы ул йәнһүрәт фильм (мультипликация) яһауҙы ла һорап тора кино әһелдәренән... Һәм ул ғына ла түгел. Әгәр ҙә, тим, кинорежиссер булһам, "Яңғыҙ түгелмен ерҙә" тигән повесен дә тулы метражлы киноға төшөрөр инем — ҡайһындай ҙа төҙөк сюжет, тормош һулышының көсөргәнешле ағылышы, тетрәткес ваҡиғалар, яҙмыштар һәм образдар — тап кино өсөн тәғәйенләп яҙылғандай. Тик ошбу ки киносанлыҡ һис тә автор үҙмаҡсатынан түгел, сөнки талантлы проза һәр саҡ кинонымың таянысы — бар яҡтары менән килешкән композиция төҙөклөгө ҡауыштыра уларҙы, ике төрлө сәнғәтте. Әле әйтелгәндәрҙән тыш, Барыйға хас йор фекер, тапҡыр тел, милли хис, тормош-көнкүреш һүрәтләнешенең халыҡсанлығы тәүге һөләмдәрҙән үк йәнгә үтеп, әҫәрҙе бер ултырыуҙа бер һулыштан уҡып сығырлыҡ арбай. Хатта һөйләмдәр ҙә унда ҡанатлы: кереш кеүек тартылған һәр абзацы, әйтерһең дә, теҙелешеп осҡан аҡҡош йә торналар сыл бырын сорғолдора: хыял-шатлыҡ, йә моң-Һағыш дөрөп керә күңелгә. Ошо һүҙҙәремде бәғзе берәүҙәр, моғайын, үтә шаштырып маҡтау, сиктән сығыу һымаҡ ҡабул ҡылырҙар, әммә тәүге тойғома тоғро ҡалам. Ҡәҙимге тәбиғилек, телмәренең ябай (ә ябайлыҡ — таланттың асылы, тиҙәр!) халыҡсанлығы һәр кемеңде тылсымлар: һөйләм сорғолошо Һайын, тип әйтерлек, һоҡландырғыс мәргәнлек, ә фекер бөгөлөшө Һайын мәҡәлгә торош әйтем. Миҫал өсөн ҡайһы берҙәрен килтерәм: кәләш алғанда кем уңа ла кем туңа; ир — беләк, ҡатын — терәк, тигәндәр; иркенлектә иреккәнсе, тарҙан тарһынмауың яҡшы; тымыҡ күлде тир бәтергә кескәй генә таш та еткән кеүек, яҙа әйтелгән һүҙ ҙә бәғер ҡылдарын өҙә; һикенең һәр таҡтаһына бер кеше бит; һүҙ елгә осһа, эш ерҙә ҡала; кешелекле булыу — закондан өҫтөнөрәк; балалы йортта ырыҫ бар; ҡойроғонабаҫҡас, йылан да еҙнәкәйем, тип әйтә икән шул; ҡара тупраҡ аҡ күңелде үҙ эсенә алды... Нимә һуң былар — илдән тиреп алып теҙелгән улъямы, әллә автор телмәренең үҙенең тәбиғилегеме?

Ошоға яуапларҙан алда, ҡасандыр Сәғит Агиш һөйләгән әкәмәт хәл төшә иҫкә. Дәүерҙең аҡылы, намыҫы һәм выжданы тип тамғаланған "һөйөклө" Партиябыҙ (КПСС) етәкселегендә күренекле яҙыусыларыбыҙ, шул иҫәптән беренсе роман авторҙарыбыҙ бер юлы юҡ ителеп, башҡорт әҙәбиәте тамам көрсөккә таяндыртылғас, шул уҡ һөйөклө Партиябыҙ тарафынан " башҡорт совет романистикаһына беренсе нигеҙ ташы һалырға" оран һөрәнләнелә лә иҫән ҡалған бер нисә әҙип (шул иҫәптән С. Агиш үҙе лә), изге оранды йәһәт бойомға ашырып, "беренсе башҡорт совет романы»н һәләт әүмәләп биргәс, шуларҙы Мәскәүҙең үҙендә урыҫ теленә ауҙарып сығарыу сараһы күрелә башлай ("элек телһеҙ" булған милли әҙәбиәттәрҙең бөйөк совет дәүерендә "телләнеп" тә "түлләнеп" сәскә атышын бар донъяғабаҡтыртыу өсөн, әлбиттә). Мәркәз ҡунаҡханаларының береһендә ятып эшләйҙәр, тәржемәселәре менән бергә. Бына шул "тәүге романсы" ҡорҙаштарының береһе оҙаҡ ҡына күҙгә- Башҡа салынмағас, тип мәрәкәләй торғайны Сәғит ағай, хәлен белергә тип бүлмәһенә барып инһәк, ғәжәп хәлгә тап булдыҡ: романының өс йөҙ битлек ҡулъяҙмаһын бөтә бүлмәгә битле-битле теҙеп-таратып һалған да икән теге, тирләп-бешеп, бер ҡулында — " башҡорт халыҡ мәҡәлдәре"

китабьн, икенсеһендә ҡәләмен услап тотҡан килеш, ҡулъяҙмаһының һәр бите һайьн йүгереп йөрөп мәш килә. «ни эшләйһең былай, уҙаман?" — тип белешкәс: "Романымабашҡорт милли колориты етешмәй, тип әйттеләр, бьна. Шуны аңҡытамьн", — тип яуаплай, имеш, сәйерһенеп торған ҡәләмдәштәренә. Баҡтиһәң, оторо йән булып сыҡҡан баш ҡала тәржемәсеһе: әҫәреңдән милли колорит аңҡымай, геройҙарың нәҡ урыҫса уйлап һөйләшә — өс йөҙ биттә бер бөртөк башҡорт мәҡәле лә осратманым, исмаһам, тип тейә икән теңкәһенә... Бьна шуға яуап итеп, тип йомғаҡлар ине йор мәрәкәсе, ҡорҙашҡайым тамсылатҡыс (пипетка) осонан күҙгә дарыу тамыҙғандай, романьның бите Һайьн берәр-икешәр башҡорт халыҡ мәҡәлен тамыҙып сыҡты — тамсыларҙың баяғы мәҡәлдәр китабьның ҡайһы биттәренән һурҙыртылғаньн үҙегеҙ танырһығыҙ...

Тел төбөм ни тумбытҡаньн шәйләгәндер уҡыусы: әлегәсә етерлек бит ундай йылғыр колоритсылар. Әммә "Яңғыҙ түгелмен ерҙә" повесенең колориты тамсылатҡыстан йыраҡ — Б. Ноғоманов туҡыған был туҡыманың буйлығы ла, арҡауы ла милли тормошобоҙҙоң тап үҙенән.

Иғтибар иткәнһегеҙҙер: ябай башҡорт ауыльның ябай башҡорт ҡатьны би бинур өйөнөң көндәлек тормошо һәм би бинурҙың яҙмышы — Башҡортостандың тормошо лабашҡорт халҡьның яҙмышы бит ул... Әл дә түҙә Башҡортостан, әл дә сыҙай башҡорт халҡы — барыһьн да күтәрә, тип уфтанып ҡуяһың. Тик күпмегә һуҙылыр был са бырлыҡ? Һыйырһыҙ ҡалған Ғәлимәнең күҙ терәп көткән башмағьн да күҙ алдьнда ҡарпып йоторҙай һөмһөҙ рәйес-түрәләр; хәләл күкрәк тиренә һуғарып үҫтергән бер ус бойҙай өсөн игенсе-ерекмәнде, еренән рәхимһеҙ йолҡоп, ун йылға хөкөм ҡылыусы прокурорҙар; халыҡ өсөн йән атып йәшәгән Закирйән һәм ғариф кеүек ил ағаларьның рухьн торғоһоҙ итеп тапап ташлаусы беренсе секретарҙәр әлегәсә атланып ултыра түгелме һуң сыҙамлы ил муйьньнда, икенсе төрлө битлек кейеп булһа ла. Ҡарағыҙ әле: шул уҡ мыйыҡлы даһи заманьндағылай бит ҡылыҡтары — юғарылағы "өлкән ағай" ни ҡушһа, яҡшымы-яманмы икәнлеген дә уйламай, шуны дәррәү күтәреп ала, этлеген илгә һала. Үҙҙәре абайламаһа ла, ил тамырьн ҡоротоу, олонон ҡырҡып ауҙарыу — бьна уларҙың ялағайлыҡ шөғөлө, суҡайып ултырған бүкәндәренән тәкмәсләмәү хаҡьна әжерҙәре...

Ана шундай асырғаныуҙар менән тулы әҫәрҙәге ябай халыҡтың яҙмышы, тормошо. Әммә са быр кешеләрҙең күркәм гөмансанлығы (гуманизмы), ихлас ярҙамсыллығы, кешене кеше итеп (ниндәй милләттән булһа ла!) күрә белеү һәләте, ғөмүмән, кешелеклелек, әҙәплелек, изге күңеллелек сифаттары ҡоромайҙыр әле лә, урғылыпмы-урғыла икән был туҡталғыһыҙ Йәншишмә. Әҫәрҙәге Галя-Ғәлимәнең аянысль ла, ҡыуаныслы ла яҙмышы — ана шуның билдәһе. Һәр береһе бер донъялай үҙенсәлекле лә, терегөмөштәй йылғыр ҙа төҫмөрләнмеш бөтә образдар ҡатарьндағы иң баҙыҡ та, төҙөк тә, нәфис тә образдыр был. Башҡаларҙың йөрәк тибеше араһьнда уныҡы — иң көсләһө, әммә тимер һәм пластмассанан яһалған йөрәк түгел, тәбиғи тере йөрәк (юғиһә бит яҙыусы исемен йөрөткәнбайтаҡтарыбыҙ, әҫәр геройҙарыбыҙға Һалҡьн механик йөрәк ҡуйып ебәреп, уҡыусьның йөрәгенә юлыға алмай ҡала). Үҙебеҙ

кеүек үк теп-тере һәм тулы ҡанлы һынланған ошо Ғәлимәнең һулҡылдап йөрәк тибеше, баштан алып ахырғаса, оҙата бара беҙҙе; бик йыш ҡына, күҙҙән йәштәр бытлыҡтыртып, күңелдәрҙе өҙөлөрҙәй нескәртә. Ҡыуаныс та, һағыш та, рәхмәт тә йәштәре был — шуның менән теребеҙ, кешебеҙ. Автор үҙе әйтмешләй, яңғыҙ түгел беҙ ерҙә. Йөрәгебеҙ ул тыуҙырған онотолмаҫ образдар — ғәзиз дуҫтарыбыҙҙың тере йөрәк тибеше менән бер ыңғай тибә һулҡылдап.

15.02.1993.

Гәүһәр һылыуҙың гәүһәре

Иншалла, ҡараңғыны ярып балҡыр мәғрифәт нурҙары һүнмәгән, янар йәндәр төңмәгән әле һаман. Бөрйәндәге француз теле уҡытыусыһының башҡорт халҡы тамырҙарын ентекле айҡап сыҡҡан, тарихсы һәм телсе ғалимдарыбыҙҙың байтағының тикшеренеү даирәһенән ситтә ҡалған (йәки теше үтмәгән) сал тарихыбыҙ ҡатламдарын бер-бер артлы алдыбыҙға асып һалыусы гәүһәрҙәй сағыу һәм егәрле хеҙмәтенән кинәнеп әйтеүем был. Һәр кемгә баш биреп бармаҫ бәрәкәтле ысул менән — төрлө телдәге боронғо сығанаҡтар, бөгөнгө археология, антропология, сит ил (роман, герман) телдәре һәм ҡарыһүҙе (мифология) үрнәктәрен үҙебеҙҙең иҫ киткес бай мәғлүмәтле, әммә ҡәҙерен белеп еткерелмәгән башҡорт теле, башҡорт ҡарыһүҙе, матди-мәҙәни ҡомартҡылары менән тығыҙ үрелештә үҙләштереү күренә. Иң мөһиме, Евразия, Америка, Африка ҡитғаларын төйәкләгән төрлө исемле боронғо этностарҙың бөгөнгө башҡорт ырыуҙарына тығыҙ бәйлелеген йәғни уларҙың бабалары икәнлектәрен төрлө миҫалдар ярҙамында ҡыҙыҡлы итеп баҡтыртып биргән автор һәм фәһемле һөҙөмтә лә яһаған: "Беҙҙең башҡорт халҡы үҙе, уның исеме, уның ауыҙ-тел ижады ғына түгел, уның теле лә үҙенең грамматик категориялары менән боронғолоҡҡа дәғүә итә". Шуға бәйле, башҡорт халҡының (һәм ғөмүмән бөтә кешелек донъяһының тип алайыҡ) Тәүтөйәген асыҡлау кеүек ҡатмарлы һәм сетерекле мәсьәләне сисеүгә лә индерә үҙ өлөшөн. Билдәле булыуынса, кешелек тоҡомоноң яралыу һәм таралыу урыны итеп электән фәндә йылы климатлы ике төйәк (Африка, Кесе Азия) атала килде. Һуңғы ун йыллыҡта иһә Яҡутстан-Саханың Лена йылғаһына ҡойған Тәрән-Ярыҡ һыуы буйында (Башҡортостан менән бер үк географик киңлектә!) баяғыларҙан да боронғораҡ әҙәми зат һөйәктәре, эш ҡоралдары, торлағы табылып, Тәүтөйәк, тимәк, беҙҙең һалҡын тип һаналған климатта булыу ихтималы асыҡланды. Был иһә (Тәүтөйәктең хәҙерге Башҡортостан тупрағында булыуы) археологтарҙың әлеге Тәрән-Ярыҡ асышынан элгәре үк, һәм башҡорттоң ғына түгел, ә бөтә донъя халыҡтарының ҡарыһүҙе (мифология) арҡылы раҫланғайны инде. Шулай ҙа был проблема рәсми фәндә һаман бәхәсле ҡала килә, һәм башҡорттарҙың ошо сал Урал тупрағында пәйҙә булыуы тураһында ҡапма-ҡаршы ике ҡараш атҡарыла: 1. башҡорттар (һәм ғөмүмән кешелек) донъя

яратылғандан уҡ тап Уралда яралған да дүрт тарафҡа таралған. 2. Уралға башҡорт ҡәбиләләренең бер килкеһе — Памирҙан, бер килкеһе Алтайҙан күсенеп килгән. Күренеүенсә, беренселәре башҡорттарҙы Уралдың төп (ерле) халҡы тип раҫлаһа, икенселәре башҡорттарҙы Уралға ситтән килгән (килмешәк) халыҡ иҫәпләй. Рәсми фәндең урыҫ ғалимдары менән бергә башҡорт ғалимдары ла (Р.Ғ. Кузеев, М.А. Мәжитов һ.б.) алға һөргән ошо ҡәҙимге икенсе ҡараште тора икән хөрмәтле Гәүһәр һылыу Ямалова ла. Әммә уның һөҙөмтәһе үҙенсәлеккә эйә: тикшеренеүселәр араһынан беренсе булып ул Тәүтөйәгебеҙ итеп боронғо Урарту дәүләте ҡоролған ерҙе — “Ван күленең төньяғынан Каспий диңгеҙенә тиклем” арауыҡты иҫәпләй. Һәр хәлдә, минеңсә, Тәүтөйәгебеҙ Уралда булғанда ла, ғәзиз бабаларыбыҙҙың эҙҙәре баяғы “сит” ерҙәрҙә лә ярылып ҡалғанлығына шик юҡ. Хеҙмәттең баяғылай башҡорт тамырын ситкә ашлау урындары, миңә ҡалһа, мәсьәләне баштүбән ҡуйғанға оҡшай. Әгәр киренән ҡәҙимгесә аяғынабаҫтырһаҡ, бөтә булған мәғлүмәттәр башҡорттарҙы Уралдың төп халҡы итеп иҫбатлаған беренсе ҡараш дөрөҫләнә лә ҡуя.

Әлбиттә, үҙ фекеремде һуңғы хаҡиҡәт тип һанауҙан йыраҡ торам, бында Гәүһәр һылыу ҙа үҙ фекерендә ҡалырға хаҡлы. Ә кешелек шәжәрәһенең ике фратриянан (игеҙәклектән) башланыуын белеп тә, икеһен дә Айға ғына табындыртыу, Көндөң (Ҡояштың) да һәм Уға табыныусыларҙың да булғанлығын онотоу иһә “хоҙайҙар мәсьәләһе”нең һылыуыбыҙ тарафтан тикшерелеп етмәүенә ишара (хәйер, бында бөтә ғалимдар ҙа бутала). Ә бит, ҡыҫҡаса һәм ябайса ғына әйткәндә, игеҙәклектең бер яғы — Әсә-Бүре-Көн (Үҫәргән), икенсе яғы Үгеҙ-Ай (Бәжәнәк) тоҡомдары булып, беренселәре — Көнгә, икенселәре Айға ҡарап ялбарған һәм табынған. Шул тәүге игеҙәк һыңарҙарының беренсеһе (Үҫәргән) үҙенең ырыу-ҡәбилә ҡоролошо йәһәтенән *Әсә-Бүре*/***Үҫәргән*** — *Бүре-Атас*/***Буртас*** *(йәки Ата-Бүре/**Тавр**)* ҡанаттарынан торһа, ә икенсеһенең бер ҡанаты *Көбәш-Инәк* (Говяжь-Һыйыр) — ***Бәжәнәк*** *(Бәшнәк, Печенег)* һәм ***Инәк*** *(Инк-Инд)* булып, икенсе бер ҡанаты *Көбәш-Үгеҙ* (Ҡобаш-Оҡ-Уз) — ***Ҡыпсаҡ-Уз*** икәнлеге төҫмөрләнә; уларынан да һаман-һаман яңы ҡанаттар ҡурпыған һәм уларҙы ҡурпытҡан баяғы игеҙәк тәү ырыуыбыҙ икеһе бергә *башҡорт* тип йөрөтөлгән... Авторыбыҙҙан быларҙың бөтәһен тәфсирләүҙе талап итеп тә булмай, сөнки кешелек шәжәрәһенең мәғлүмәттәр океанын тамсылап һанау йәки ҡуйы ҡарурманды сыраҡ яғып ҡына үтәнән-үтә яҡтыртыу мөмкин түгел. Әммә тамсы артынан тамсы тиҫбеләнер, бер сыраҡтан икенсеһе тоҡаныр. Ҡуйы Бөрйән урмандары араһында ла сыраҡ балҡып яныуы ҡыуаныслы.

10.09.1994.

Ҡәләмдәштең романы

Тәңрегә бәйле ҡулъяҙманы (Рәшит Низамов. Тәңре Ульның шишмәһе. Роман.) сәмләнеп ҡулға алғас та, уның биттәренең иҫәбе лә тылсымлы һан (333) тәшкил итеүен абайлап, үҙенә күрә бер Һағайыулы уҡырға тотонғайным; ысынлап та талант тылсымы ҡағылған булып сыҡты.

Бөтә билдәләренән төҫмөрләнеүенсә, ваҡиғалар автоҙың тыуған төбәгендә — илгә мәғлүм шифалы шишмәләр урғылмыш ифрат та бай тәбиғәт ҡосағында бара. Ошо гүзәл ерлеклелек яҙыусының һәлмәк тасуирлауында кешеләрҙең эш-ҡылыҡтарына, көнкүрешенә, рухи донъяһына, ғөмүмән, илдең тын алышынабаҙыҡлыҡ биреп, автор ҡәләмен, фәстереүҙәргә юл ҡуймай, ысынбарлыҡ иләндә тибрәндертә. Эйе, халҡыбыҙҙың туҙға яҙылып та ыуалып бөткән бик боронғо тормошо тасуирланһа ла, шуның хаҡына зиһен ҡөҙрәтен егеп, ҡомартҡы “энә»нән — һыйыр, балсыҡ убанан — ҡала, борсаҡташтан тау тергеҙергә тура килһә лә (бик боронғо осорҙо яҙғанда шунһыҙ мөмкин дә түгел), алдыбыҙҙа ныҡ нигеҙле реализм әҫәре, был иһә, минеңсә, әҙәбиәттең иң ҡиммәтле сифаты.

Сюжет һөлдәһе ябай: ата-бабаларҙан аманатҡа ҡалып та, һуҡмағы юйылған шифалы сығанаҡты юллау, уны табыу һәм шуны яһил-яуыз илбаҫарҙарҙан йәнатып ҡурсалау. Шаҡ ҡатырғыс, таныш түгел бер нәмә лә юҡ кеүек, шулай ябай булыуы тәбиғи ҙә. Сөнки тормош ҡануны бар: кәүҙәләнешенән арындыртып ҡараһаң, һөлдәләрҙең барыһы ла бер иш, әммә һөлдә эйәләре (тере кешеләр) төрлө-төрлө — һәр береһе ҡабатланмаҫ көр донъя. Дәү Хоҙайҙың ҡөҙрәте, тиҙәр быны. Яҙыусы ла үҙ мөҡәддәс әҫәренең һөлдәһен, ит ҡундырып йән өргәндә, Дәү Хоҙайҙың ҡөҙрәтен Һалырға тейеш. Был романдың авторы, минеңсә, өлгәшә алған быға. Ошо өлгәшеү юлындағы “Тәңре Ульның шишмәһе”н аңлатҡан ҡарыһүҙ — әҫәрҙең ана шул тығыҙ һум итле кәүҙәләнешенең йәне, сюжет үҫешен аҙағынаса талпындыртҡыс сара тип әйтер инем. Бер ыңғай билдәләйек: был риүәйәт халыҡсан әҫәр итеп ҡабул ҡылына, сөнки ул ҡарыһүҙ (мифология) ҡанундарына ла, уны өйрәнеүсе фән ҡалыптарына ла тап килә. ШУға күрә персонаждарҙың Тәңрегә һәм ер-һыу эйәләренә бәйле хөрәфәт-ҡылыҡтары — әҙәм аңындағы тәүдин саҡылары ла ышандыра, гәрсә саҡылар сығанағы тәүдин үҙе күҙалларлыҡ ҡалтайтып бирелмәһә лә.

Уҡый башлау менән арбап алғаны — авторҙың тел маһирлығылыр. Башҡорт теленең һоҡланғыс һығылмалылығы, байлығы, һутлы тәме ағыла ҡәләменән. Бының ише сос толпарҙы егә белеү — уңыштың бисмиллаһы. Һәр хәлдә, хикәйәләүҙең башынан ахырынаса, бүтән табыштар менән бергә, нәфис һүҙ сәнғәтенең әҫәрләндерткес тел бәҫен тояҫаҡ уҡыусы. башҡорт ырыуының эске тормошо, ундағы үҙ-ара мөнәсәбәттәр, түрәлек вә ялпылыҡ бурыстары, йорт-йыһаз, кейем-ҡаралты, мал-тыуар, аш-һыу, ҡорал-ҡорамал, ил Һаҡлау һәм яу са быу һ.б. менән тығыҙ үрелеп бирелгән һәр бүлек ҙур зауыҡлы уҡыла, күңел күген күтәрә. Бәрәкәтле ҡорола ваҡиғалар, көсөргәнеш даими үҫә бара, бүлектән-бүлеккә арта. Илбаҫарҙарға ҡаршы һуғыш хәрәкәттәре, алымдары — ентекле һәм оҫта

итеп тасуирланған йәлеп иткес биттәрҙер; сюжеттың артылыш нөктәһе лә тап ошонда төйнәлеп, яҙыусының маһирлығына дәлил.

Роман геройҙары — ерҙәге үҙҙәрен ураткан һәр тере йән, йәшел ҡыяҡ, һыу-һауа, тау-таш, хатта иҫкән елдәр менән ҡуша тын алып, һәр береһе үҙ-ара уртаҡ тел табып, һәммәһе бер бөтөн булып көн итеүсе тәбиғәт балалары. Шуға күрә күңелдәре лә ысыҡ тамсыһылай саф, эскерһеҙ. Үҙҙәре һантый (изге) булғас, башҡаларҙан да шуны көтә, ышана. Әммә көндөң төнө бар, яҡшы менән яман бар, тәбиғәт тә ҡаршылыҡтарҙан тулы. Романдың төп геройҙары Йәш һунарсы егет Нурбулат менән йәш тол бисә Сәмиҙәнең бер-береһен саф күңелдән яратышыуы һәм уларҙың, тәбиғәт ҡайһылай ҡушһа, шулай аткарылған мөхәббәт, енси яҡынлыҡ мажаралары тап шул тәбиғәт ҡанундары буйынсабара ла инде. Хәҙерге заман сит ил мәҙәниәтендә самаһыҙ киң таралып, Рәсәй империяһына ла дөрөп кергән, ғәмәлдә боронғо башҡорт термины менән "секс" тип аталған һәр кемгә мәғлүм ғәләмәттең тәүтормош-ырыу кешеләре өсөн һис тә шаҡ ҡатырғыс хәл түгел, ә йәшәйеш тоткаһы булған тәүдин ҡанунына һыйышлы, хатта уның үҙәген тәшкил итеүсе тәбиғи һәм изге нәмә булыуын яҡшы беләбеҙ. Таһыллы автор үҙе яратып тасуирлаған заман кешеләрен уларҙың һәр ҡылығында тәғәйен шул замана аң-тоңона, рухыятына ярашлы һынландырып, *баягы с*екс мәсьәләһендә лә шулайыраҡ юҫыҡланыуы (иркенерәк эш ҡылыуы) Яңылыш түгел, минеҫсә. Өҫтәүенә, дәрт-дарманы ташып торған, бәндә өсөн һис ҡасан да иҫкермәүсән хис-ялҡынлы геройҙарының шул "тәүтормош романдары" матур ғына биҙәкләнеп, үҙенсә яңылыҡ тиртә, уҡыусыны билдәле бер ҡыҙыҡһанлыҡта тота — бынһы ла кәрәкле. Нурбулат менән Сәмиҙәнең әҫәр дауамында тәүге өс тапҡыр сиратлашкан сексуаль аулаҡ уйыны һәйбәт кенә уҡыла, самаһы самаға килә. Сөнки башҡорт әкиәттәрендәге ҡанунға Һалынған улар: егет менән ҡыҙ көрәшеп таныша, ҡыҙ еңелһә генә егеттеке була. Бына ошоборонғо алыш барышын хозур һүрәтләп, шунда автор хикәйәләүенә боронғо сексты ла һыйҙырған. Әммә шулай ҙа өсөнсө уйын барышында күңел Һағая төшә: тоҡ эсенән оторо беҙ төртә бит матурлыҡ урынына — күргәндә лә күҙ йоморға тейешле ҡайһы бер тән мөлкәттәре бөтә ентеклелегендә ажырайтыла түгелме?.. Яҙыусы, геройҙары донъяһында берәгәйле йәшәүе менән артығыраҡ мауығып, заманалар сиген юя, үҙенең һәм уҡыусыһының ҡайһы заман кешеләре икәнен дә онотоп ебәрә, буғай. Теге заман өсөн ҡануни булһа ла, был заманда әҙәп була алырмы? Заманабашҡа — заң башҡа, тип әйтеп ҡалдырған даһабабаларыбыҙға әйләнмеш шул уҡ Нурбулат, Сәмиҙәләр...

Әҫәрҙе уҡыубарышында был Һағайыу дөрөҫләнеп, баяғы бәғзе бер самаһыҙлыҡтар баштан ашып киткеләй. Мәҫәлән, Вәжтаба хан ҡатынының... "өҫтөнә менеп тә ятты" кеүек йыш ҡабатланған менеп һәм ҡатланып ятыуҙарҙы тылҡып тороу кәрәкме? Йәки ситтә хан хеҙмәтендә оҙағыраҡ йөрөп ҡайтҡан Мөштәкир (ике бисәле), йәш ҡатынын эргәһенә баҫтырып ҡуйып, "— Һеҙгә ҡул теймәй, — тип һөйләнә-һөйләнә бер ҡулы менән уның билен, йоморайып сығып торған тығыҙ күтен һыйпай, икенсе ҡулындағы ҡашығы менән аш ашай... Ашын ҡалдырып торҙо ла ҡатынын

һикегә күтәреп Һалды, ашыҡмайынса ғына сисендереп, өҫтөнә менеп ятты. Бер аҙҙан өлкән ҡатыны... һикелә ятҡандарҙың таҫҡылдашыуҙарын күргәс, тынып ҡалды, иренең ҡыланышынан күҙен алманы, аҫта ятҡанының да ҡулдары тик тормай бит әле, иренең ботон һыйпаштырып, арҡаһын яратып ала... хатта ки билен күтәрә биреп, күтәрә биреп ҡуя; шулай ауыҙ һыуын ағыҙып ҡарап тора торғас, шым ғына тышҡа сыҡты ла: "Тәүге өлөшкә керҙе! Дөмөккөрө бисә! Харап икән, берәү күтен һикертергә өйрәнгән. Һинең хәтле генә мин дә беләм инде, кипкән күтән", — тине... Иренең бик кинәнеп, оҙаҡ итеп... Таҫҡылдатыуын белһә лә, тиҙерәк ебәрһен ине был дөмөккөрөгө, тип теләне" (161-енсе бит). Йәки шифалы сығанаҡта дауаланыусы шыр-яланғас әсәле-ҡыҙлыға аласыҡ тишегенән тексәйеп: "Тәндәрен йөн баҫмаған. Ҡайһылай шыма, таҙа, — тип уйланы бей, уларҙың бот араһынан күҙен алмай, — икеһенеке лә өҫтә яралған"... Ул ҡыҙҙың ҡабарып торған, тән ауырлығы төшөп иҙелмәгән оҙонса телсегенән күҙен алмай. Ҡыҙҙың да арты Һалпы буласағын, ирҙең бөтә йәнен убып аласағын күҙ алдына баҫтырған бей"... (226-нсы бит). "Һәммә ҡатын-ҡыҙ заты үҙ баһаһын ир-егеттәр менән яратышып ҡауышҡанда, шул мәлдә һегелдеген ебәрә алыу-алмауына ҡарап та самалаған, белгән кеүек..." (247-нсе бит). «ни эшләп һегелдегеңде гел ебәрәһең түгелме? — тип һораны ул, Өммөгөлдөң йомартлығына хайран ҡалып... Бей сүгеп ултырғас, ҡатын уның йыуан ҡатҡанын иркәләп кенә йыуҙы"... (323-өнсө бит).

Сексты бөтөнләй һыҙып ташларға, тимәйем, тик самаһын самаға килтереү фарыз. Һәр урында бер үк балыҡ башы сәйнәлә бит — ниңә бәҫен ебәрергә, *ба*ҙарын төшөрөргә? Үҙемә ҡалһа, авторҙың сексуаль арсеналындағы ҡоралдарҙың Йәмғеһен бергә туплап, секс ифрат ҡуйыртылған биш-алты урынға тигеҙ бүлеп таратыр, ҡайһы берҙәрен алып уҡ ташлар инем. Сөнки уны самаһына еткереп кенә ҡулланыу — матурлыҡҡа килтерһә, сама мәйелен ыҫҡындырыу — порнографияға быраҡтыра. Һәйбәт әҫәрҙең һәйбәт бизмәнен табыуы ҡыйын түгел.

Бәҫле телде кинәнеп уҡығанда, Абайламай ебәрелгән "еләҫ ел", "үткән тарих", "алама хыянат", "һул аяғының бото" кеүек "майлы май"ҙар ныҡ болғата күңелде, гәрсә күп булмаһалар ҙа (ҡулъяҙма биттәрендә билдәләнде). Кәзә тарандығы ике төрлө исемләнә (7, 8-енсе биттәр): "кәзә мамығы", "кәзә йөнө" (кәзәлә мамыҡ та, йөн дә булмай — дебет менән ҡыл була). "Ҡәҙербәк ағай" (ағай) тип ололауын белдергәс, "һеҙ" тип түгел, "һин" тип әйтер башҡорт, сөнки бит беҙ кешегә ихтирамды урыҫ йәки немец кеүек "һеҙ" күплек алмашы аша түгел, ә инәй, олатай, ҡартәсәй, ҡартатай, ағай, апай, һеңлем, һылыуым, энем, ҡустым, мыртый кеүек яҡынлыҡ һүҙҙәре аша белдерәбеҙ. Ишбикә итле ашҡа "тары" һала, "тары ярмаһы" кәрәк (33-өнсө бит). "Бей тирмәһе башҡаларҙыҡынан эскәрәк ҡоролған" (69-ынсы бит), — тас үҙәктә, уртала, булырға тейеш, сөнки яңы урынға төпләнгәндә тәүҙә бей тирмәһе ҡорола, башҡалар шуның әйләнәһендә урынлаша. Ишбикә инәй ит ҡаҡлай, ейәндәренә: "ҡыш итле аш ашарһығыҙ", ти (211-енсе бит). Ҡышҡыһын бит яңы һуғым итен

(туңдырылған) ашайҙар, ә ҡаҡлаған ит — йәйгелек, бигерәк тә юл-сәфәр, яу са быу ризығы.

Күҙгә төрткән Йәнә лә бер хилафлыҡты бөтөрткө килә. Тәңре шишмәһен эҙләп һыбай оҙон юл үткән Нурбулат, ҡунырға туҡталғас, булған бөтә эштәрен дабашҡара, тик ниңәлер атын ғына ашатмай. Үҙеңдән алда — атыңды, шунан этеңде һыйла, тигән аҡылды онотоп ебәргәндер. Өҫтәүенә, толпары ла төнө буйына һыйыр кеүек ларҡайып ята бит әле (35-енсе бит). Икенсе урында ла ҡабатлана был ятыу (45-енсе бит). Йылҡы малы бит һыйыр түгел, ғәҙҙәттә ул аяғөҫтө тороп ял итә, һирәк кенә ятҡылап ала. Шуға күрә күҙгә лә салынмай ҡала уның ятыуы. Бының ише кәмселектәрҙе редактор ҡулы ла төҙәтерлек, әлбиттә.

Әммә әҫәрҙе яҡшыртыубуйынса етди теләгем дә бар.

Иң мөһиме — заман мәсьәләһе. Тарихта ҡалған башҡорт тормошоноң тулы ҡанлы, Йәнле бер киҫәге матур итеп, ышандырырлыҡ итеп бирелгән, ләкин уның тәғәйен ҡайһы тарихи осорға ҡарағанлығы билдәле түгел. Дөрөҫөрәге, төрлө тарихи дәүерҙәр буталған һымаҡ. Ырыу эсендәге матди көнкүрешкә, үҙ-ара мөнәсәбәттәргә ҡарап, тәүтормош йәмғиәт ҡоролошо — кәм тигәндә таш быуат дәүеренең аҙағы (неолит) тип тоҫмаллайһың. Ҡорал-ҡорамалдары ла тура килә: ҡаты йәшмә ташынан яһалған ҡасау, һөйәк башаҡлы уҡтар, имән көрәк... Шул уҡ ваҡыттабыл кешеләрҙең һәр берендә тимер ҡылыс, хәнйәр, балта; яу ҡамсыһының (нагайка) осондағы тупалсаҡҡа хәтлем тимерҙән; араларында хатта тимерсе лә бар (тимер быуат дәүере, тимәк). Был ғына ла етмәһә, Вәжтаба хан йомошсоһон алтын тәңкәләр (ҡул аҡсаһы!) менән бүләкләй (тимер быуат дәүеренең дә алға киткән осоро). Иң тәүге тәңкәләр, билдәле булыуынса, Кесе Азиялағы Һарт дәүләтендә б.э. тиклем һигеҙенсе быуатта һуғылған да йөрөшкә ебәрелгән, был үҫешкән дәүләтселлек һөҙөмтәһе булып тора. Алтын тәңкәләр ҡайҙандыр килеп еткән икән, уны еткереүселәр — дәүләттәр, халыҡ-ара бәйләнештәр тураһында ла күпмелер кимәлдә мәғлүмәт булырға тейеш, ә ул юҡ. Барул ырыуы — үҙ ҡабығына йомолған йоморҡкалай, шул ҡа быҡты суҡыусы яһил-яуыз бер-ике күрше ырыуҙы иҫәпкә алмаһаҡ. Шуларҙың Вәжтаба хан тип аталғаны ла бей кимәленән уҙмаған — ханлыҡтың төхөрө лә юҡ (сөнки хан — дәүләт башлығы, тигән һүҙ, ә дәүләт, дәүләтселлек төшөнсәһе Вәжтабаның да, башҡаларҙың да хаттабашына ла килмәй). Ә бит дәүләтселлек тап беҙҙең Тәүтөйәктә яралған, нухзамандан уҡ ырыуҙар дөйөм үҙәккә буйһоноп Йәшәгән. Һәләкәтле заманаларҙа дәүләтселлек емерелгән хәлдә генә, ул ҡасанмы ҡабат тергеҙелгәнсе, ырыуҙарҙың бер килкеһе баш-баштаҡлана алған (мәҫәлән, Ҡазан ханлығы һәм Себер ханлығы ҡыйратылғандан алып Рәсәй кереп ныҡынғанға тиклем осор). Күме генә күҙ йомһаҡ та, бабаларыбыҙҙың Ер Терәге һәм Кендегендә тирә-яҡҡабилдәле булып йәшәүҙәрен танырға тура килә: неолит осоронда уҡ бит Тәүтөйәгебеҙҙә (Уралда) яһалған таш ҡоралдар Көн-Өфө юлы һәм Ҡуңыр буға юлы буйлап Иҙел аръяҡтарына, Иртыш аръяҡтарына, Каспий диңгеҙе буйҙарынаса тарала. Бутал (металл) дәүерендә лә шулай уҡ: Урал буталы байыта бөтә тирә-яҡты. Донъя диндәренең нигеҙе булған тәүдин ошонан таралған.

Неолит дәүерендә (бынан ун мең йылдар элек) үк Шүлгәнташ мәмерйәһендә башҡорт эпостарының геройҙары булған яныуарҙар һүрәтләнгән. Бынан дүрт-биш мең йыл элек үк башҡорт эпосы үрнәктәре Месопотамиялағы шумер бабаларыбыҙҙың балсыҡ китаптарына яҙып ҡалдырыла — башҡорттоң донъяны танып-белеү моделе, тәүдин идеологияһы донъя күләмендә үҙләштерелә. Роман ваҡиғаларын, автор әгәр йөрьәтләнеп, ҡайһы ғына тәғәйен дәүергә ашлап ултыртҡанда ла әле генә әйтелгән төп мөҙҙәттәрҙән тайпылыу мөмкин түгелдер, әгәр ҙә үҙ кендегебеҙҙән юғарыраҡ ырғылыубурысын алмаһаҡ. Әммә бындай бурыс ҡуйырға хаҡым юҡлығын беләм, сөнки ул беҙҙең тарихи проза кимәленән бер башҡа юғарыраҡ уҙып китеү булыр ине. Үкенескә ҡаршы, прозаиктарыбыҙҙың береһе лә был кимәлде уҙа алғаны юҡ әле. Бөтәбеҙҙең ауырлыҡты бер Низамов күтәрергә, сорғолорға тейешме ни? Шуны талап итергә ни хаҡыбыҙ бар?.. Уның романы ошо көйөнсә лә шул баҫыуҙы һуҡалаған ҡәләмдәштәренекенән өҫтөнөрәк тора бит. Һәр хәлдә, ни эшләргә кәрәген үҙе хәл ҡылыр. Мин иһә романды, һуңлатмайынса, китап итеп донъяға сығарыу яғындамын.

02.03.1994.

Изге юлда барыусылар

Был романды (Р. Низамов. Изге фарман. — Ҡулъяҙмала принтерҙан 301 бит) бер генә һөйләм менән дә баһаларға мөмкин булыр ине: *талант эйәһе тыуҙырған талантлы әҫәр.*

Ҡаҙанышы нимәнән ғибәрәт һуң, тигән ҡануни һорауға: тәүге һөйләменән башлап, иң аҙаҡҡыһынаса бөтә элементтарының да урынлы һәм тейешле булыуында, тип кенә яуаплар инем. Эйе, ғәжәпкә ҡаршы, был әҫәр миңә тормоштоң тап үҙе кеүек үк тәбиғи ҙә, килешле лә тойолдо. Сөнки күп кенә ҡәләмдәштәрҙең ижад емештәрен (хатта ташҡабаҫылып сыҡҡас та!) татыған саҡтағы теге Йәки был ҡәнәғәтһеҙлектәр онотолоп торҙо бында: абзацын ғына түгел, хатта бер генә һөйләмен дә (ысын!) һыҙып ташларға ҡул ҡысытманы, образдарҙа, деталдәрҙә, кешеләрҙең психикаһында, улар тотҡан йолаларҙа, ғәҙәттәрҙә, кисерештәрҙә ниндәй ҙә булһа яһалмалыҡ, Йәки әрпешлектәр шырауланып ҡырманы күңелде. Ваҡиғалар шауҡымы, Урал күкрәгенән сыҡҡан оҙон һәм көр йылғалай, автор ярған киң һәм тәрән үҙән буйлап талғын ғына ағыла ла ағыла, уҡыусы зиһенен һүреп үҙенә ылыҡтыра, зауҡына сихәт һала. Сюжет тигәнең Ағиҙелдән Арал диңгеҙе тарафына йүнәлеүсе каруан сәйәхәтенә һәм шул сәйәхәт ғәмдәрендә көн артынан көн үтеүгә сыл бырлатып ҡоролһа ла, монотонлыҡ һиҙелмәне, бер төрлөлөк ялҡытманы; оҙон юл күренештәре, ваҡиғалар, кисерештәр теҙмәһе, даими үҙгәреп һәм яңырып барғанлыҡтан, зиһенде арытманы, сөнки бындағы һәр һөйләм — нәүбәттәге серҙең асҡысы һымаҡ. Шуларҙың барыһын ғәмәли йөкмәп килеүсеһе, бойомға ашырыусыһы — йөрәккә майҙай яғылыусы ысын

башҡорт тел байлығы, әлбиттә. Әммә автор үҙенең һиммәтле һүҙ ҡаҙнаһын ерле-юҡҡа тотонмай, тейешле һәм таҫыллы ҡуллана — һәр бере үҙ урынында, артыҡ та, кәм дә түгел. Шуға күрә быға хатта иғтибар ҙа итмәйһең, ә фәҡәт тартылаһың. Диңгеҙҙәге тамсыларҙы бар тип тә белмәгәндәй, бында ла шул уҡ хәләт — ысын халыҡсан гүзәл тел стихияһынабаштан-аяҡ сумаһың да һуңғы битте япмайынса сыҡмайһың. Һөйләм Һайын, тип әйтерлек, халыҡ ижады ынйылары күҙеңә йым-йым сағыла, күңелде албырғата. Халҡыбыҙҙың борон-борондан һаҡланып килгән дәүләтселлек, патроитизм тойғоһо көслө рухланып кәүҙәләнгән, бөтә әҫәр туҡымаһына һеңешкән. Әҙип ҡайһы бер авторҙарыбыҙ һымаҡ китаптан китап яһамай, әҙәби теориялар һәм модалар менән дә мауыҡмай, аҡыллы яҙайым тип, йәки халыҡсан яһайым тип үтескә алып та көсәнмәй; шуға күрә был романды башҡа романдарыбыҙ ҡатарына ҡуйып та, улар менән сағыштырып та булмай кеүек — торғаны менән үҙенеке, үҙенсәлекле. Башҡаларҙыҡында ғәҙәттә барлыҡ сифаттарынан да өҫтөнөрәк Һалҡын *аҡыл* мөгөҙө тырпайып торһа, бында айырым һәрмәп алырҙай нәмә юҡ — бөтәһе лә дөйөм, берәгәй һәм шул бөтөнлөктөң һулҡ-һулҡ типкән тере йөрәге, *йәне бар*. Ә ул йәндең күңелдәргә йылылыҡ өләшкән асылы — башҡорт халҡының ғәжәп гөмансылыҡлы (гуманизмлы) тәбиғәте, хәҙерге модалы һүҙ менән белдергәндә, менталитеты булыр. Был төп сифат романдың төп геройҙарынан Алман хандың игелекле һәм изгелекле дәүләт тотоу эшмәкәрлегенән алып, йөҙ башы Алсынбайҙың хан фарманын бойомға ашырыуҙағы бөтә ҡылыҡтарында, шулай уҡ ябай яугирҙәрҙең, ил инәһе ҡатын-ҡыҙҙарҙың, хаттабала-сағаларҙың көндәлек күрмештәрендә, уларҙың һәр береһенең донъяға, ер-һыуҙарға, кешеләргә, мал-тыуар һәм кейек-яныуарҙарға, үҫемлектәргә Һаҡсыл мөнәсәбәттәрендә баҙыҡ сағыла, былар йәмғеһе үҙенә күрә бер ҡабатланмаҫ аҫыл кешелек сифатын — ысын башҡорт тәбиғәтен таныта уҡыусыға. Тәбиғәт тигәндән, дөрөҫөн әйткәндә йәшәүебеҙҙең нигеҙе булған *сексҡа* ла тейешенсә миҡдарҙарҙа шаҡтай урын бирелгән һәм ул уҡыусыһын гүзәл, нәфис хистәр донъяһына алып кереп тәрбиәләү менән бергә әҫәрҙең уҡымышлылығын да бермә-бер арттырған. Былар бөтәһе һис кенә лә көсәнмәй, шаштырмай, бытовизм һәм этнографизмға ла һуҡлыҡмай, тормоштоң тап үҙе кеүек үк, үҙенән-үҙе асылған, автор халыҡ характерын, уның рухи донъяһы тәбиғәтен башҡа халыҡтар ҙа ҡыҙығып уҡырлыҡ, асыш яһарлыҡ биргән. Әйтелгән сифаттары менән, миңә ҡалһа, ул башҡа романдарыбыҙҙан (һәм хатта "Ырғыҙ"ҙан да!) бер башҡа өҫтөн тора, уны тик Мохтар Әүәзовтың ҡаҙаҡ халҡының тәбиғәтен бөтә донъяға таныҡкан "Абай юлы" романы менән генә тиңләргә була. Шуға күрә лә Р. Низамов әҫәрен дә урыҫ теленә тәржемәләп сығарыуҙы бик кәрәкле Һанайым.

Инде ошо үҙемде әҫәрләндерткән шәп әҫәрҙең сифатын Уғата камиллаштырыу Йәһәтенән ҡайһы бер иҫкәртмәләрем, кәңәштәрем дә бар.

Бер үк һөйләм ҡылымдарҙың бер тирәлә ҡабатланыуҙары (тавтология) сыбарлай — аҫтарына һыҙып күрһәтә барҙым. Автор ҡәләме уларҙы бер ултырыуҙа шымартып сыға ала.

Бикташ менән Нәзифәнең тәүге таптыр наҙлашыуында (15-енсе бит) саманан сығыуҙарбар: егет ҡыҙҙың "түшен һыҡҡылап тотоп тора", егет "ҡыҙ күлдәгенең иҙеүен ысҡындырҙы, уның һул имсәген сығарҙы ла имергә тотондо", тигән урындар үтә лә йәмһеҙ һәм яланғас натУрализмға тартым, Бикташ үҙе өҙөп биргән аҡсәскәләй саф ҡыҙ менән егет образдарын ныҡ боҙа. Өҫтәүенә, был ҡылыҡ Нәзифә ҡурай тартҡан сағында башҡарыла — ҡыҙҙың шуға юл ҡуйыуы, шул саҡта ҡурай тартыуы бик икеле. Ә инде 23-өнсө биттәге ошо уҡ картина урынлы — айырылышыу алдынан булырҙай хәл. Тимәк, тәүгеһен һыҙып ташлап, ошо икенсеһен ҡалдырыу фарыз.

Кешеләрҙең һөйөшөүе кеүек үк, йылҡы малы Ҡола бейә менән буҙ айғырҙыҡы ла мауыҡтырғыс тасуирланған. Әммә бер бәләкәй "техник" Яңылышлыҡ: бейә тороҡландыртҡанда Алсынбай айғырҙың ҡаҫағаһын ("ҡатҡанын" тип матурлап атай автор) уның ҡорһағы аҫтына кереп турылай. Әммә был мөмкин түгел: бейә менән айғыр ҡушарлашҡанда уларҙың артҡы тояҡтары араһында урын юҡ. Мин үҙемдең Ғилаз бабайымдың ошо уҡ "деликатный" вазифаны малдарҙың һул яғында тороп башҡарғанын күргәнмен... 66-нсы биттә: "үлән дә күтәреп алғандар: төнгөлөккә лә аттар *көйшәнеп* торһон тип инде", ти автор. Ә бит һыйыр ғына көйшәй, йылҡы малы иһә *юшай* (артабан был тап шулай дөрөҫ яҙылған). Сәфәрҙәге кешеләр каруан туҡталыштарында аттарына (тиҫтәләгән баш!) үләнде ниңәлер ҡул менән йолҡоп (Ә бер осраҡта көрәк менән киҫеп) әҙерләй, авторыбыҙ, күрәһең, ылау арбаларына бер-ике салғы һалдыртырға онотҡан...

Тексты компьютерға һалыусы тарафынандыр инде, әлеге көндә киң таралмыш хатаны ҡабатлап, 25-енсе биттә "яугирҙарҙы", "яугирҙар" тип ҡалын ялғаулап яҙылған, ә кәрәк бында нәҙек ("яугирҙәрҙе", "яугирҙәр"), сөнки башҡорттоң үҙ һүҙе бит был: яу-гир (яу-ир, йәғни яу ире). Артабан был хата текста ҡәләм менән төҙәтелә барылған һәм бик дөрөҫ эшләнгән.

Хан тарафынан ил сигенең, дошман яҡтың хәлдәрен белергә ебәрелмеш баҡты бай (16-нсы бит) хан "шымсыһы" тип атала, ләкин уны "темеҫкен" (разведчик") тип алыу дөрөҫтөр.

Каруанды "алыҫ көньяҡҡа" ебәрһә лә автор, тәғәйенлек етешмәй. Билдәле булыуынса, беҙҙекеләр каруан менән Бохараға йөрөгән, заманында Ибн-Фаҙлан да болғарғабашҡорттоң шул Бохара юлынан үткән. (Әйткәндәй, каруансылар ылауы ниңә дүрт арбанан ғына хасил — бигерәк аҙ түгелме? Һис юғында нисә арба икәнен әйтмәҫкә кәрәк).

Юлға "кипкән икмәк" әҙерләйҙәр, ләкин уның тәғәйен исемдәре бар: сохари, кәтермәс, шөкәрә (теләгәнеңде һайлап ал)...

"Ҡорал тотмаға — илде һатмаға" тип (27-нсе бит) автор фекере яңылыштырылған (киреһенсә аңлашыла), сөнки "тотмаға" — тотоу, "һатмаға" — һатыу бит.

"Үҫәргәндәр көнбайыштан алып ҡайтҡан ҡорал" (30-ынсы бит) — дөрөҫ һәм һәйбәт мәғлүмәт. Тик уға "сәнсәл" тип яңы исем тағып

ҡатмарлаштырмаҫҡа, ә үҫәргәнсә үҙ исеме менән атарға ине: “мөс” (урыҫҡа “мечь” булып барып кергән). Әлегәсә Үҫәргәндә үҙен яҡлай алмаған, йәки булдыкһыҙ бәндәне — “мөсһөҙ”, ә киреһен “мөслө” тиҙәр.

35 — 38-енсе биттәрҙә гүзәл текст — Алсынбай менән Ғәҙиләнең йәшерен һөйөшөүе. Миңә тиклем романды уҡыған ҡыҙыл ҡәләм эйәһе был өлөштө һыҙып ташлаған да “сократить” тип билдәләгән. Дөрөҫтән дә урыны бында түгел уның, ләкин романдан алып ташлау үтә лә йәл булыр ине. Минеңсә, был өлөштө, саҡ ҡына алғараҡ — 3-өнсө бүлек бөткән урынға шыуҙырып, 4-енсе бүлек итеп биреү, ә 4-енсе бүлекте иһә 5-енсе итеп ҡуйыу хәйерле. Әйткәндәй, бүлек нумерацияларныда буталыш күҙгә салына: 6-нсынан һуң — 8-енсе, 13-өнсөнән һуң 16-нсы киткән (ә тексты 207-нсе бите етешмәй).

6-нсы бүлеккә ҡарата: “Секс шәп! Ҡыҫҡартырға ярамай!” — тип ҡуйғанмын. Һәм, ғөмүмән, ҡабатлап әйтәм, секс тигәнең романдың һәр өлөшөндә лә урынлы һәм уңышлы.

Яңы кейем кейҙерткәс: “*Таҙа тәнегеҙҙә* туҙһын”, — ти Алсынбай, ә кәрәк: “эҫе тәнеңдә”. Унан килеп, башҡорт кешеләренең үҙ-ара “һеҙ” тип һөйләшеүе ҡолаҡты яра, сөнки башҡортта “ағай”, “апай”, “олатай” (“ҡартатай”), “оләсәй” (“ҡартәсәй”), “һеңлем”, “ҡустым”, “ханым”, “бейем” һ.б. тип ололап өндәшеүҙән һуң “һин” тип кенә һөйләшәбеҙ (хатта урыҫ та “вы”ҙы немецтан алған).

Кис ҡунғанда Алсынбай Нәзифә өҫтөнә *еләнен* яба (84-енсе бит). Тик шул уҡ биттә: «нәзифә ниндәйҙер *сепрәк* ябынғайны”...

Нургиза йоморҡаларҙы: “Әсәй, хәҙер *һөттә ҡурып* бешерәм”, — ти (95-енсе бит). Ә кәрәк: “һөттә *эретеп* алам” (“иретеп” тә түгел!).

Буш силәкте “ҡаплап ултыртты”, — ти (төбө өҫкә ҡаратылған), ә кәрәк: “түңкәреп ҡуйҙы”.

Төйгөс” (132-нсе бит), ә кәрәк ине “киле” (киле төйгөсһөҙ булмай). Артабан 231-енсе битә был дөрөҫләнә — “киле менән төйгөс” тип әйтелә.

Каруансылар Юшатыр буйынан артабан юлланғас, 5-6 көндән кире әйләнеп ҡайтырбыҙ, тиҙәр (140-ынсы бит). Тимәк, “алыҫ көньяҡтағы» баҙар ҡалаһы Юшатырҙан ни бары 2-3 көнлөк кенә юл? Өҫтәүенә, баҙар ҡалаһында ла 1-2 көн булырға тура киләсәк — самалар самаға тура килмәй түгелме? Һәм ҡайҙа һуң ул баҙар? Был үлсәмдән самалап ҡарағанда, хәҙерге Ырымбур өлкәһенең Бүртә йылғаһы буйындағы туҡтамыш хандың һуңғы баш ҡалаһындамы? Әллә унан да арыраҡ — Үҫәргән даръяһы (Сырдарья) буйындағы берәй ҡаламы? Йә булмаһа шул йылғаның аръяғындағы Бохараның үҙендәме?.. Ғөмүмән, каруаныбыҙ Юшатырҙан уҙғандан һуң уның юлын тәғәйен географик төбәктәргә, заманға һәм тарихи факттарға бәйләүес етешмәй, шуға күрә ваҡиғаларҙың тәғәйен ҡайһы осорҙа, ниндәй күрше дәүләттәр һәм халыҡтар менән һөйкәлештә барғанлығы беленмәй — ошондай һәйбәт тарихи роман өсөн был етди кәмселектер, тим.

Дөрөҫ, Иҙел буйынан пәйҙә булмыш баҫҡынсы ҡалдаҡтар (ҡалмаҡтар тип аңлайым) менән киҫкен көрәш барабашҡорт иле сигендә. Әгәр ысынлап та ҡалмаҡтар икән, билдәле булыуынса, Иҙел буйҙарында

улар 17-нсе быуат башында шыта, ә ул саҡтабашҡортостан күптән инде Рәсәйгә ҡушылғанлыҡтан, башҡорттар тормошон Рәсәй батшалығынан тыш күҙаллау мөмкин түгелдер. Ә унан да боронғораҡ Башҡортостан иһә теге йәки был рәүештә Алтын Урҙаға буйһонған (татар-монгол баҫып алыуҙарына тиклем генә ул тулыһынса үҙ аллы була).

Тимәк, минеңсә, роман авторы таянырлыҡ заман булып бер осор — Алтын Урҙа емерелгәндән һуңғы Нуғай урҙаларының да (ә улар башҡорт дәүләттәре) Рәсәй ҡыҫымы аҫтында тарҡала башлап, Себер ханлығы ла ҡыйралып, Башҡортостандың үҙе теләп Рәсәйгә ҡушылыуына тиклемге тотороҡһоҙ һәм болғансыҡ арауыҡ ҡала. Автор әгәр ошоноң менән килешһә, булған тарихи шарттарҙы иҫәпкә алып, романын шул йәһәттән көйләргә тейеш, шунда ысын тарихи ерлеккә ултырыр ине әҫәр. Минең был әйткәндәрем, әлбиттә, яҡшы әҫәрҙе уғата яҡшыртыу теләгенән бирелгән тәҡдим генә, уны автор алырға ла, алмаҫҡа ла ихтыярлы. Әҫәр ошо көйөнсә лә уҡымлы һәм ташҡа баҫып сығармалы.

Йәнә лә бер теләк-фекер: әҫәрҙе "беренсе китап" тип баҫтыртып сығарып, яйлап ҡына уның икенсе китәбен дә яҙһа ине, тим, автор; сөнки оло полотно булырҙай әҫәрҙең тамамланмағаны һиҙелеп, дауамын һәм аҙағын һорап торғандай, әгәр ҙә яңылышмаһам.

Икенсе: киң һулышлы роман өсөн әлеге исеме уңышһыҙ һымаҡ күренә, хикәйәгә генә килешер ине ул. Ваҡиғаларҙың башынан алып аҙағынасабашҡорттоң изге Ҡуңыр буға юлындабарыуын иҫәпкә алып һәм шул исемдә әҫәрҙең лейтмотивы рәүешендә үреллдереп, "Ҡуңыр буға юлы" тип тә атарға булыр ине романды.

Хәйерле юл теләйем талантлы әҫәргә.
28.11.2004.

Тылсымлы ижад

(Рәшит Низамовҡа – 70)

Бер-нисә йыл элек ифрат асыҡ кисерҙем был тойғоно. Арҙаҡлы ҡәләмдәштең "Тәңре Ульның шишмәһе" тигән тарихи романын ҡулъяҙманан уҡ сәмләнеп уҡый башлағас, күңелемә тылсым нуры бөркөлөп, әҫәр биттәренең иҫәбе лә тылсымлы һан (333) икәненә иғтибар иттем дә албырғаныбыраҡ ҡалдым: нимәгә ишара был?.. Бара торғас күңелем күтәрелеп, зиһенем яҡтырып китте – был әҫәргә, ысынлап та, *талант тылсымы* ҡағылған!

Шуныһын да шәйләнем: һүрәтләнеүсе ваҡиғалар, бөтә билдәләренән төҫмөрләнеүенсә, авторҙың тыуған төбәгендә — илгә мәғлүм шифалы шишмәләр урғылмыш ифрат табай тәбиғәт ҡосағында бара. Ошо гүзәл ерлеклелек яҙыусының һәлмәк тасуирлауында кешеләрҙең эш-ҡылыҡтарына, көнкүрешенә, рухи донъяһына, ғөмүмән, илдең тын алышына хозур баҙыҡлыҡ биреп, автор ҡәләмен, фәстереүҙәргә юл ҡуймай, ысынбарлыҡ донъяһында тибрәндертә. Эйе, халҡыбыҙҙың туҙға яҙылып та ыуалып бөткән бик боронғо тормошо тасуирланһа ла, шуның

хаҡына зиһен ҡөҙрәтен егеп, археологтар әйтмешләй, ҡомартҡы “энә»нән — һыйыр, балсыҡ убанан — ҡала, борсаҡташтан тау тергеҙергә тура килһә лә (бик боронғо осорҙо яҙғанда шунһыҙ мөмкин дә түгел), бөтәһе лә ышандырғыс, баҙыҡ итеп эшләнгән – ныҡ нигеҙле реализм әҫәре; был иһә, минеңсә, әҙәбиәттең иң ҡиммәтле сифаты.

Сюжет һөлдәһе лә бик ябай ине: ата-бабаларҙан аманатҡа ҡалып та, һуҡмағы юйылған шифалы сығанаҡты юллау, уны табыу һәм шуны яһил-яуыз илбаҫарҙарҙан йәнтәслим ҡурсалау. Шаҡ ҡатырғыс, таныш түгел бер нәмә лә юҡ кеүек, шулай ябай булыуы тәбиғи ҙә. Сөнки тормош ҡануны ла ябай бит: ябайлыҡта – гүзәллек... Әйтәйек, беҙҙе “ҡоршап” йөрөткән һөлдәләрҙең барыһы ла бер төрлө, бер иш, әммә һөлдә эйәләре (тере кешеләр) ғәжәйеп төрлө-төрлө — һәр береһе ҡабатланмаҫ көр донъя (һәр береһе хаҡында роман яҙырлыҡ!). Дәү Хоҙайҙың ҡөҙрәте, тиҙәр быны. Яҙыусы ла үҙ мөҡәддәс әҫәренең һөлдәһенә, ит ҡундырып йән өргәндә, тап ана шул Дәү Хоҙайҙың ҡөҙрәтен Һалырға тейеш. Һәм был романдың авторы, минеңсә, өлгәшә алған быға. Ә ошо өлгәшеү юлындағы “Тәңре Улының шишмәһе”нең асылын аңлатҡан халыҡ хәтере-ҡарыһүҙ — әҫәрҙең баяғы тығыҙ “һум итле” кәүҙәләнешенең йәне, сюжет үҫешен аҙағынаса талпындырғыс тылсым тип иҫәпләйем. Әйткәндәй, моғайын, автор үҙе ижад иткән был риүәйәт ысын халыҡсан әҫәр һымаҡ ҡабул ҡылына, сөнки ул ҡарыһүҙ (мифология) ҡанундарына ла, уны өйрәнеүсе фән ҡалыптарына ла тап килә (ә быны өсөн халыҡ ижады ҡанундарын яҡшы белергә кәрәк). Шуға күрә әҫәрҙәге персонаждарҙың Тәңрегә һәм ер-һыу эйәләренә бәйле хөрәфәт-ҡылыҡтары — әҙәм аңындағы тәүдин саҡтылары ла ышандыра, гәрсә саҡтылар сығанағы булған тәүдин үҙе күҙалларлыҡ ҡалтайтып бирелмәһә лә.

Уҡый башлау менән арбап алғаны — авторҙың тел маһирлығылыр. башҡорт теленең һоҡланғыс һығылмалылығы, байлығы, һутлы тәме ағыла ҡәләменән. Быны иһе сос толпарҙы егә белеү — уңыштың бисмиллаһы. Һәр хәлдә, хикәйәләүҙең башынан ахырынаса, бүтән табыштар менән бергә, нәфис һүҙ сәнғәтенең әҫәрләндерткес тел бәҫен тоя уҡыусы. башҡорт ырыуының эске тормошо, ундағы үҙ-ара мөнәсәбәттәр, түрәлек вә ялпылыҡ бурыстары, йорт-йыһаз, кейем-ҡаралты, мал-тыуар, аш-һыу, ҡорал-ҡорамал, ил һаҡлау һәм яу сабыу картиналары һ.б. менән тығыҙ үрелеп бирелгән һәр бүлек ҙур зауыҡлы уҡыла, күңел күген күтәрә. Бәрәкәтле ҡорола ваҡиғалар, көсөргәнеш даими үҫә бара, бүлектән-бүлеккә арта. Илбаҫарҙарға ҡаршы һуғыш хәрәкәттәре, алымдары — ентекле һәм оҫта итеп тасуирланған йәлеп иткес биттәрҙер; сюжеттың артылыш нөктәһе лә тап ошонда, яу яланында, төйнәлеп, яҙыусының маһирлығына дәлил.

Роман геройҙары — ерҙәге үҙҙәрен уратҡан һәр тере йән, йәшел ҡыяҡ, һыу-һауа, тау-таш, хатта иҫкән елдәр менән ҡуша тын алып, һәр береһе үҙ-ара уртаҡ тел табышып, һәммәһе бер бөтөн булып көн итеүсе тәбиғәт балалары. Шуға күрә күңелдәре лә ысыҡ тамсыһылай саф, эскерһеҙ. Үҙҙәре һантый (изге) булғас, башҡаларҙан да шуны көтә, ышана. Әммә көндөң төнө бар, яҡшы менән яман бар, тәбиғәт тә ҡаршылыҡтарҙан

тулы. Романдың төп геройҙары йәш һунарсы егет Нурбулат менән йәш тол бисә Сәмиҙәнең бер-береһен саф күңелдән яратышыуы һәм уларҙың, тәбиғәт ҡайһылай ҡушһа, шулай атҡарылған мөхәббәт, енси яҡынлыҡ мажаралары тап шул тәбиғәт ҡанундары буйынсабара ла инде. Хәҙерге заман сит ил мәҙәниәтендә самаһыҙ киң таралып, Рәсәй империяһына ла дөрөп кергән, ғәмәлдә боронғо башҡорт термины менән "секс" тип аталған һәр кемгә мәғлүм ғәләмәттең тәүтормош-ырыу кешеләре өсөн һис тә шаҡ ҡатырғыс һәм тыйыулы хәл түгел, ә йәшәйеш тотҡаһы булған тәүдин ҡанунына һыйышлы, хатта уның үҙәген тәшкил итеүсе тәбиғи һәм изге нәмә булыуын яҡшы беләбеҙ. Таһиллы автор үҙе яратып тасуирлаған заман кешеләрен уларҙың һәр ҡылығында тәғәйен шул замана аң-тоңона, рухыятына ярашлы һынландырып, баяғы секс мәсьәләһендә лә шулайыраҡ юҫыҡланыуы (иркенерәк эш ҡылыуы) яңылыш түгел, минеңсә. Өҫтәүенә, дәрт-дарманы ташып торған, бәндә өсөн һис ҡасан да иҫкермәүсән хис-ялҡынлы геройҙарының шул "тәүтормош романдары" матур ғына биҙәкләнеп, үҙенсә яңылыҡ тиртә, уҡыусыны билдәле бер ҡыҙыҡһынлыҡта тота — быныһы ла кәрәкле. Йыйнап ҡына әйткәндә, ижадының шишмә башынан уҡ тарихыбыҙға етди иғтибар иткән, бынамын тигән повестар яҙған ҡәләмдәштең был тәүге тарихи романы шул өлкәлә эшләгән башҡа әҙиптәребеҙҙекенән үҙенең тулы ҡанлылығы менән айырылып, әҙәбиәтебеҙгә яңы күркәмлек өҫтәне, аңыбыҙҙы шифалы тылсымланы һәм был уның ижадындабаштан уҡ шулай ине, тип әйтергә лә урын бар. Әйтәйек, "Ышаныс" исемле беренсе хикәйәләр йыйынтығы 1971 йылда ташҡабаҫылып сыға һәм уҡыусылар тарафынан йылы ҡабул ителә. "Ысыҡ ярыусылар" тигән икенсеһе үҫмерҙәр һәм Йәштәр өсөн иң яҡшы китап тип баһаланды, бөтә Рәсәй конкурсына тәҡдим ителде. Шул конкурс һөҙөмтәһе булараҡ, тиҙ арала Мәскәүҙең "Детгиз" нәшриәтендә урыҫсабаҫылып та сыҡты.

Р. Низамов әҫәрҙәренең тематикаһы киң һәм күп ҡырлы. "Аманат ҡылысы" повесе үҙ заманындағы башҡорт балалар әҙәбиәтендә иң мауыҡтырғыс һәм тәрән йөкмәткеле булып танылды. Уҙамандың бөтә әҫәрҙәре күңел иреткес лиризм менән һуғарылған, һәм ул үҙе лирик проза маһиры булараҡ билдәле. "Исемең – йырҙарымда" китабы – быны сағыу дәлиле. Яҙыусының күңел даирәһе иркен, кесе Йәштәгеләр ҙә, үҫмерҙәр ҙә, өлкәндәр ҙә берҙәй һыйыша унда: Был осраҡта "Һине көтә Йырлыбаш", "Вәғәҙәң ант булһын", "Күршеләр", "Танып ҡыҙы" әҫәрҙәрен тотам күҙ уңында. Етем бала тураһындағы һуңғыһын иһә төрлө йәштәге әсәләрҙең илай-илай уҡығандарын беләм.

Тынғыһыҙ ижад шишмәһен башынан уҡ, уҡыусылар ғына түгел, белгестәр ҙә лайыҡлы һәм тап минең һымаҡ уҡ баһаланы, ошо хаҡта республика матбуғатында яҙылды. 1979 йыл, Тимерғәле Килмөхәммәтов:"Быға тиклем сыҡҡан ике китабы Рәшит Низамовты эҙләнеүсән, тынғыһыҙ яҙыусы итеп күрһәткәйне. Һуңғы йылдарҙа ул тағы ла дәртләнеберәк эшләне, уңышлыраҡ әҫәрҙәр яҙҙы. Ана шуларҙың ҡайһы берҙәре авторҙың "Разведчиктар" тигән яңы йыйынтығына тупланған. Унда ике повесть бар: "Аманат ҡылысы" менән "Күршеләр"... Авторҙың форма

төрлөлөгөнә ынтылыуы күҙгә ташлана... Бүлектәрҙең бәләкәсерәк новеллаларҙы хәтерләтеүе хикәйәләүгә ритмик-интонацион төрлөлөк, стилистик һығылмалылыҡ бирә. Шул арҡала повестәрҙең уҡымлылығы арта... Образдар характерын психологик яҡтан тәрәнерәк күрһәтеп биреүҙә уның һүрәтләү сараларының үҙенсәлекле роле бар. Был әҫәрҙәрҙең телендә лә бик асыҡ сағыла"... 1998 йыл, Рәүеф Шаһиев: "Халҡыңдың тарихын, уның һабаҡтарын төшөнмәй тороп, киләсәгеңде күҙаллау мөмкин түгел. Ошо юҫыҡтан ҡарағанда, Рәшит Низамов иғтибарҙы үҙенә тартмайынса, са быр ғына тәжрибә тупланы, тарихи материал йыйыуын белде, тиҫтәләгән хикәйә китаптарының авторы ла булып өлгөрҙө. Уның быға тиклем ижад иткән әҫәрҙәренең һәлмәклеге, художестволы эшләнеше, образдарының бөтөнлөгө ошо тУрала һөйләй... Ҡыҫҡа күләмле хикәйә жанрында ла бынамын тигән тарихи әхләҡ темаһын һыйҙыра алыу әҙиптең оҫталыҡ ҡеүәһе хаҡында һөйләй. Үҙ ереңдең, ырыуыңдың тарихын белеү, ер-һыу атамаларына, ғаиләң шәжәрәһенә, ырыу ҡомарткыларына оло хөрмәт менән бағыу үҙе илаһи тәрбиә мәктәбе бит... Рәшит Низамов әҫәрҙәренең теле бай. Әҙип өсөн туған телебеҙ - оло картиналар тыуҙырышыусы, тәрән кисерештәр уятышыусы төп ҡорал. Үҙ төбәген бөтә йөрәктән ихлас яратыусы, уның тарихи ҡомартҡыларына үтә лә һаҡсыл, айырым ҡәҙер менән бағыусы был прозаик тыуып-үҫкән ерен тасуирлауҙа ысын мәғәнәһендә һүҙ маһирлығы күрһәтә алған. Бөгөнгө уҡыусы өсөн күңелгә яҡкан, йөрәк түренә һалырлыҡ һүҙ әйтә алыу һәр яҙыусыға бирелә торған һәләт түгелдер. Яҙыусының уңышы ла, оло табышы ла ошо һүҙ менән уҡыусыны арбай белеүендәлер".

Бына бит – уҡыусыны "арбай" ти! Ә арбау (һүҙлектән ҡарағыҙ) – "Сихри көс, *тылсымлы* һүҙ менән тәьҫир итеп үҙеңә буйһондороу". Тик шуны ла онотмайыҡ: Аллаһы тәғәлә тарафынан яҙыусыға бирелгән, ғүмере буйына арымай-талмай үҫтерелгән талант ҡына эйә ул тылсым көсөнә. Талантыңды егәрле ҡулланмаһаң, әрәм-шәрәм итеп бөтһәң, ҡыҫҡаһы, ең һыҙғанып өҙлөкһөҙ эшләмәһәң, тылсым көсөң юҡка сыҡты, тигән һүҙ. Ә был яҙыусы ана шулай үҙ-үҙенә талапллы, шуға күрә лә талантлы, тылсымлы.

Тылсым, тигәндән, илаһилыҡлы тылсымдың әҙип аша, әҙәбиәтебеҙгә генә түгел, ә көндәлек тормошобоҙға ла йомарт үтеп кереүен дә иҫләйек. Сөнки Рәшит Низамов, хикәйәләре, повестәре, романдары аша халҡыбыҙға танылған яҙыусы булыуы менән бергә, өндәшмәй генә замандаштарын ысын күңелдән һөйгән, уларҙың шатлығын да, һыҙланыуҙарын да ихлас кисергән ҡайнар йөрәкле, миһырбанлы инсан да. Тормоштоң әсе-сөсөһөн күп татыған зат булараҡ, һәр кемебеҙ ҙә йөрьәт итә алмаған ишектәрҙе лә асып инеүен – шаҡшы СПИД зәхмәтенән язаланыусылар интеккән шомло дауахана Палаталарында ҡуша һыҙланып йөрөүен күптәребеҙ белмәйҙер ҙә. Әммә бәндәләргә хас ябай уфтаныу, көйәләнеү менән генә сикләнмәй, көтөлмәгәнсә ҡыйыу аҙым яһаны: яуыз сирҙең илебеҙҙә артабан таралыуына юл ҡуймауҙы һорап һәм үҙенең тәғәйен тәҡдимдәрен теркәп 1986 йылдың декабрендә ул саҡтағы иң юғары инстанцияға - КПСС Үҙәк Комитетына хат яҙҙы. Һәм был аҙым иң юғары

кимәлдә ил буйынса яңы саралар күрә башлауға этәргес булды – 1987 йылдың 25 авгусында СССР Верховный Советы Президиумы “СПИД вирусы йоҡтортоУға ҡаршы профилактик саралар күреү” тураһында махсус Указ ҡабул итте. Һәм СССР Хөкүмәте шул йәһәттән яҙыусы Р.З. Низамовҡа һәм Башҡортостан Яҙыусылар берлегенә үҙенең рәхмәтен юлландырҙы. Шуныһы ла хәтерҙә: ҡәләмдәштәрҙең бер килкеһе шаңҡыбыраҡ ҡалды, буғай, был хәлдән. Сөнки яҙыусыларҙың профсоюз йыйылышында Рәшит оло тулҡынланыу менән үҙенең баяғы хат тексын уҡып ишеттергәс һәм Хөкүмәттең рәхмәт яҙыуын президиумға тапшырғас, берәүҙәребеҙ аптырашып шаҡ-ҡатҺа, икенселәребеҙ бьны көлкөгә Һа быштырырға маташты. Әммә күпселек тәбрикләп дәррәү ҡул сапты.

Яҙыусьның төп шөғөлө - яҙыу, ул яҙырға ғына тейеш һымаҡ тойолһа ла, был ҡәләмдәш шуның менән генә ҡәнәғәтләнмәне, ә баяғы һәм башҡа ауыр сирҙәр шауҡымында бөйөрҙәре эштән сыҡҡандарҙы ҡотҡарыу өсөн, яныл-көйөп, тәғәйен саралар күрҙе. Йәштән үк тәбиғәт менән серҙәш, шифалы шишмәләрҙең дә, дарыу үләндәренең дә күбеһенең тылсымьн таный ине ул. “Әжәл дарыуы»н эҙләп бер заман тажикстанға китте, шундағы тылсым эйәһе менән түбәләре күккә ашҡан Тянь-Шань тауҙарьна артылып, эҙләгәнен табып алып ҡайтты ла йәшәүҙән өмөтөн өҙгәнбайтаҡ бала-сағаны һәм өлкәндәрҙе ҡабат аяҡкабаҫтырҙы, күҙҙәренә яҡты донъя хозурлыҡтарьн ҡайтарҙы. “Әллә ҡайҙарҙағы ул үләндәр белгесе менән нисек итеп таныштың?” – тигән аптыраулы һорауыма ла әҙип тылсымлы яуапланы: “Күмәк кеше араһында ғәмләнеп торғанымда, юғарьнан ишара төштө: анауы бер әҙәм хәҙер һиңә боролоп ҡарар, үҙе эргәңә килер – шунан ырат тылсымыңды! Ысьнлап та шулай булды ла ҡуйҙы...” Эйе, талантльны тылсымлы көс ҡалдырмай, һәр форсатта ла даланьна илтеп еткерә, тимәк!

Уйлап ҡараһаң, был инсанды донъяға биргән тупраҡ үҙе даланлы. Танылған башҡорт яҙыусыһы Рәшит Зияфетдин улы Низамов 1935 йылдың 15 ноябрендә бәрәкәтле Башҡортостаныбыҙҙың Ҡырмыҫкалы районы бишауыл-Уңғар ауыльнда тыуған. Тәүҙә үҙҙәренең ауыл мәктәбендә уҡый. Атаһы фронттабатырҙарса һәләк булғас, һуғыштан һуң әсәһе лә яҡты донъяны ҡуя. Үкһеҙ ҡалған буласаҡ яҙыусыбыҙ Өфөнөң 5-енсе етем балалар йортонда тәрбиәләнә, хәҙерге Р. Ғарипов исемендәге 1-енсе башҡорт республика гимназия-интернатьнда уҡый. Аҙаҡ башҡорт дәүләт университетьның тарих-филология факультетьн тамамлап, Республикабыҙҙың “Ленинсы”, “Башҡортостан пионеры”, “Совет Башҡортостаны” гәзиттәрендә бүлек мөдире була. Ә 1991 йылдан алып ул Башҡортостан Республикаһы Яҙыусылар берлегендә өлкән әҙәби консультант булып эшләй. Уның арҡаһында ошо мөһим өлкәлә эштәр ҡырҡа үҙгәрҙе, йәнләнде – йәш таланттарҙы барлау, ижадтарьна дөрөҫ йүнәлеш биреү һәм әҙәби офоҡҡа сығарыу йәһәтенән күп көс-ҡеүәт Һальнды. Рәшит Низамов республика йәш яҙыусыларьның күп семинарҙарьның һәм ижади конференцияларьның егәрле етәксеһе булды, тап уның тырышлығы менән Яҙыусылар берлеге идараһы үҙенең ижади

семинарҙарын республикабыҙ райондарына һәм ҡалаларына йөрөп үткәрә башланы, һөҙөмтәлә йәш таланттарҙы ҡурпытты...

Тыныһыҙ йәндең ижтимағи-сәйәси эшмәкәрлеге лә бик һоҡланғыс, халҡыбыҙ яҙмышына ҡағылышлы иң яуаплы мәлдәрҙә сағыла ул. Әйтәйек, баш ҡалабыҙҙың Киров районы башҡорттары ҡоролтайында мине бөтә донъя башҡорттарының I ҡоролтайына делегат итеп һайлағайнылар. Бына шунда мин, ғөмүмән, ул ҡоролтайҙы бөтә донъя күләмендә саҡырыу идеяһының да яҙыусы Рәшит Низамов менән кинорежиссер Азат Иманаевтан башланғанын аңланым: тап был икәү ошоно республикабыҙҙың Юғары Советынан юллаған. Дәүләт сәркәтибе М.А. Әйүпов тәүҙә ыңғайға килмәгәс, икенсе тапҡыр барып ишек ҡағалар һәм “Бөтә донъя башҡорттарының ҡоролтайы 1995 йылдың апрелендә үткәрелер”, - тигән ыңғай хәбәр алалар. Ләкин быныһы ла ҡәнәғәтләндермәй уҙамандарҙы: нисек инде яҙғы ала-шапранда, юл ҡалғанда йыйыла алһын халыҡ? Ныҡышмалы юлармандар өсөнсө тапҡыр мөрәжәғәт итеп, ҡоролтайҙы Йәмле йәй башында саҡырыуҙы һорағас, тәҡдим ҡабул ителә: 1995 йылдың 5 июнендә үткәрелә...

Рәшит Низамов әлегәсә бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы башҡармаһы эштәрендә әүҙем ҡатнаша. Тырышлыҡтары күҙгә күренеп торһа ла, үҙен ғәҙәттән тыш тыйнаҡ тотоусы, күҙгә салынып бармаусы уҙаман халҡыбыҙҙың яҙмышына ҡағылышлы хәтәр мәлдәрҙә ҡарпып сыға трибунаға, шул мәлендә үк тос һүҙен әйтеп өлгөрә. 1999 йылдың 29 июлендәге “Башҡорт алфавитынан латин алфавитына күсеү тураһында»ғы ултырышта һөйләгәне күптәрҙең хәтерендә. Милләт өсөн ифрат мөһим ул телмәрҙең төп фекерҙәрен (тезистарын) нисек бар – шулай, урыҫса килеш күсерәм:

1. Башкирский язык беззащитен. В 80-е годы основательно нарушили грамматикубашкирского языка. В результате в течение двадцати лет не смогли издать “Толковый словарь башкирского языка” и “Башкиро-русский словарь”. Потому что нужно было готовые рукописи заново переписать по испорченной грамматике. Если мы сейчас перейдем на латинский алфавит, то в о бласи языка и издательского дела отстанем на пятьдесят лет, не станет подписчиков на газеты и журналы, затормозим о бучение учащихся. Этот переход потре бует сотни и сотни миллионов рублей денег. на эти деньги можно построить сотни школ.
2. Языковеды и некоторые руководители ссылаются, мол, в республиках Средней Азии переходят на латынь. Пусть переходят. У них среда другая. Мы находимся в середине России. Из Средней Азии выдворяют башкир, русских, татар и по-своему пытаются устроить свою жизнь.
3. Горбачев и Ельцин держали отчет перед сенатом США о том, как они разрушают свою страну. Видимо, и башкирские ученые-языковеды тоже собираются держать отчет перед Стамбулом и Анкарой о разрушении, ликвидации башкирского языка. Не

следует этого делать. Турки не строили нашу жизнь. Сейчас, пользуясь сла бостью нашей страны, у нас зарабатывают доллары, нагло отнимают работу наших строителей. Башкиры – тюркский народ, но не турки!

4. Состоятельные люди нашей республики отправляют своих детей на обучение в Саудовскую Аравию, Турцию. После о бучения за границей им потре буются ра бочие места. Если за границей о бучился дочь или сьн руководителя высокого ранга, то он может ввести латинский алфавит во всех школах республики, игнорируя мнение народа и осо бенно учителей, которые а бсолютно против латинского алфавита. Попытки введения ара бского языка уже были в наших школах. Например, в республиканской гимназии-интернате №1 начали преподавать ара бский язык. Родители своих детей направили в эту престижную школу для того, что бы они стали инженерами, врачами, учителями, представителями интеллигенции, а не для изучения ара бского языка. В гимназии опомнились и не стали преподавать этот предмет. В этом отношении учителям следует быть очень бдительными.
5. С получением статуса государственного языкабашкирский язык стали изучать во всех районах, городах нашей республики, в соседних о бластях. Его изучают и русские дети. В северо-западных районах преподают башкирский язык. Мне пришлось по бывать в этих уроках в Бураевском, Татышлинском, Янаульском районах. Там хорошо ведут уроки выпускники Нефтекамского педучилища. Если сейчас ввести там латинский алфавит, то это было бы предательством в отношении этих учителей и учащихся. А предательство никогда не прощается. Вся наша политика в о бласти языка полетит прахом. Дайте пока им спокойно изучить башкирский язык!
6. Изменения в башкирский язык не имеют право внести ни Администрация Президента, ни Кабинет Министров, ни Всемирный Курултай башкир. Эти вопросы должен решить только сам народ, только референдум башкирского народа.

Ошо түгелме ни беҙгә етешмәгән ысьн ватансылыҡ (гражданлыҡ) өлгөһө!

Тарихи ултырышта республикабыҙҙың Мәғариф министрлығьнан да вәкилдәр бар ине, улар, рәсми сығыш яһамаһа ла, аҙаҡ килеп телмәрсенең ҡульн ҡыҫты, һоҡланыуҙарьн белдерҙе. Һөҙөмтәлә көн тәртибендәге баяғы сетерекле 9-ьнсы пункт тауыш биреүгә ҡуйылып, бер тауыштан алып ташланды.

Ғаилә башлығы булараҡ та күптәргә өлгө алырлыҡ Рәшит уҙамандан. ғүмере буйьна йылы өй утын (уютын) күреп йәшәй ул. Хәләл ефете Алевтина – педагог, республикабыҙҙың атҡаҙанған уҡытыусыһы. Өлкән улдары Рәшит, Өфө нефть университетьн уңышлы тамамлап, “Уфанефтегазинвест” ООО НПО-һьнда директор булып

эшләй, нефть һәм газ сығарыуҙы ыратыуҙың яңы ғилми ысулдарын тырышып тормошҡа ашыра. Кесе улдары Альберт та шул уҡ юғары уҡыу йортонда алды белемен, Томск, Новороссийск нефть үткәргестәрен төҙөүҙә ҡатнашты ең һыҙғанып. Шул уҡ мөһим эштәрҙе инде Балтиҡ диңгеҙе яҡаһында – Выборг янында башҡара.

Рәшит Низамов – Башҡортостан республикаһы һәм Рәсәй Федерацияһы Яҙыусылар берлектәренең ағзаһы, төрлө быуын уҡыусылары яратып уҡыған ун китаптың авторы. Ижади уңыштары өсөн уға "Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт эшмәкәре" тигән юғары исем бирелгән, үҙ ваҡытында ВЛКСМ Үҙәк Комитетының – ике, Өлкә комитетының өс хөрмәтләү Грамоталары тапшырылған. Әммә маһирҙың кәбәне әле осланмаған, етмеш йәшлек егет-кәбәнсенең түбәһе күккә теймәгән – һаман ялҡынлы ижад, ижади хеҙмәт өҫтөндә.

Һәм бына яңы уңыш: арҙаҡлы ҡәләмдәшемдең "Изге фарман" тигән өр-яңы романын йылы ҡулдан уҡып сыҡҡас, йәнә шул уҡ бер һөҙөмтәгә килдем: *талант эйәһе тыуҙырған талантлы әҫәр!* Шаштырып маҡтамайһыңмы, ҡаҙанышы нимәнән ғибәрәт һуң, тигән ҡануни һорауға: тәүге һөйләменән башлап, иң аҙаҡҡыһынаса бөтә элементтарының да урынлы һәм тейешле булыуында, тип кенә яуаплар инем. Эйе, ғәжәпкә ҡаршы, был әҫәр миңә тормоштоң тап үҙе кеүек үк тәбиғи ҙә, килешле лә тойолдо. Сөнки күп кенә ҡәләмдәштәрҙең ижад емештәрен (хатта ташҡа баҫылып сыҡҡас та!) татыған саҡтағы теге йәки был ҡәнәғәтһеҙлектәр онотолоп торҙо бында: абзацын ғына түгел, хатта бер генә һөйләмен дә (ысын!) һыҙып ташларға ҡул ҡысытманы, образдарҙа, деталдәрҙә, кешеләрҙең психикаһында, улар тотҡан йолаларҙа, ғәҙәттәрҙә, кисерештәрҙә ниндәй ҙә булһа яһалмалыҡ, йәки әрпешлектәр шыраулаиып ҡырманы күңелде. Ваҡиғалар шауҡымы, Урал күкрәгенән сыҡҡан оҙон һәм көр йылғалай, автор ярған киң һәм тәрән үҙән буйлап талғын ғына ағыла ла ағыла, уҡыусы зиһенен һүреп үҙенә ылыҡтыра, зауҡына сихәт һала. Сюжет тигәнең Ағиҙелдән Арал диңгеҙе тарафына йүнәлеүсе каруан сәйәхәтенә һәм шул сәйәхәт ғәмдәрендә көн артынан көн үтеүгә сыл бырлатып ҡоролһа ла, монотонлыҡ һиҙелмәне, бер төрлөлөк ялҡытманы; оҙон юл күренештәре, ваҡиғалар, кисерештәр теҙмәһе, даими үҙгәреп һәм Яңырып барғанлыҡтан, зиһенде арытманы, сөнки бындағы һәр һөйләм — нәүбәттәге серҙең асҡысы һымаҡ. Шуларҙың барыһын ғәмәли йөкмәп килеүсеһе, бойомға ашырыусыһы — йөрәккә майҙай яғылыусы ысын башҡорт тел байлығы, әлбиттә. Әммә автор үҙенең һиммәтле һүҙ ҡаҙнаһын ерле-юҡҡа тотонмай, тейешле һәм таҫыллы ҡуллана — һәр бере үҙ урынында, артыҡ та, кәм дә түгел. Шуға күрә быға хатта иғтибар ҙа итмәйһең, ә фәҡәт ысын йөрәктән ылығаһың. диңгеҙҙәге тамсыларҙы бар тип тә белмәгәндәй, бында ла шул уҡ хәләт — ысын халыҡсан гүзәл тел стихияһынабаштан-аяҡ сумаһың да һуңғы битте япмайынса сыҡмайһың. Һөйләм һайын, тип әйтерлек, халыҡ ижады ынйылары күҙеңә йым-йым сағыла, күңелде албырғата. Халҡыбыҙҙың борон-борондан Һаҡланып килгән дәүләтселлек, патроитизм тойғоһо көслө

рухланып кәүҙәләнгән, бөтә әҫәр туҡымаһына һеңешкән. Әҙип ҡайһы бер авторҙарыбыҙ һымаҡ китаптан китап яһамай, әҙәби теориялар һәм модалар менән дә мауыҡмай, аҡыллы яҙайым тип, йәки халыҡсан яһайым тип үтескә алып та көсәнмәй; шуға күрә был романды башҡа романдарыбыҙ ҡатарына ҡуйып та, улар менән сағыштырып та булмай кеүек — торғаны менән үҙенеке, үҙенсәлекле. Башҡаларҙыҡында ғәҙәттә барлыҡ сифаттарынан да өҫтөнөрәк Һалҡын *аҡыл* мөгөҙө тырпайып торһа, бында айырым һәрмәп алырҙай нәмә юҡ — бөтәһе лә дөйөм, берәгәй һәм шул бөтөнлөктөң һулҡ-һулҡ типкән тере йөрәге, *йәне бар*. Ә ул Йәндең күңелдәргә йылылыҡ өләшкән асылы — башҡорт халҡының ғәжәп гөмансылыҡлы (гуманизмлы) тәбиғәте, хәҙерге модалы һүҙ менән белдергәндә, менталитеты булыр. Был төп сифат романдың төп геройҙарынан Алман хандың игелекле һәм изгелекле дәүләт тотоу эшмәкәрлегенән алып, йөҙ башы Алсынбайҙың хан фарманын бойомға ашырыуҙағы бөтә ҡылыҡтарында, шулай уҡ ябай яугирҙәрҙең, ил инәһе ҡатын-ҡыҙҙарҙың, хаттабала-сағаларҙың көндәлек күрмештәрендә, уларҙың һәр береһенең донъяға, ер-һыуҙарға, кешеләргә, мал-тыуар һәм кейек-яныуарҙарға, үҫемлектәргә Һаҡсыл мөнәсәбәттәрендә баҙыҡ сағыла, былар йәмғеһе үҙенә күрә бер ҡабатланмаҫ аҫыл кешелек сифатын — ысын башҡорт тәбиғәтен таныта уҡыусыға. Тәбиғәт тигәндән, дөрөҫөн әйткәндә йәшәүебеҙҙең нигеҙе булған *сексҡа* ла тейешенсә миҡдарҙарҙа шаҡтай урын бирелгән һәм ул уҡыусыһын гүзәл, нәфис хистәр донъяһына алып кереп тәрбиәләү менән бергә әҫәрҙең уҡымышлылығын да бермә-бер арттырған. Былар бөтәһе һис кенә лә көсәнмәй, шаштырмай, бытовизм һәм этнографизмға ла һуҡлыҡмай, тормоштоң тап үҙе кеүек үк, үҙенән-үҙе асылған, автор халыҡ характерын, уның рухи донъяһы тәбиғәтен башҡа халыҡтар ҙа ҡыҙығып уҡырлыҡ, асыш яһарлыҡ биргән. Әйтелгән сифаттары менән, минҙә ҡалһа, ул башҡа романдарыбыҙҙан (һәм хатта “Ырғыҙ”ҙан да!) бер башҡа өҫтөн тора, уны тик Мохтар Әүэзовтың ҡаҙаҡ халҡының тәбиғәтен бөтә донъяға таныҡтан “Абай юлы” романы менән генә тиңләргә була. Шуға күрә лә Р. Низамов әҫәрен дә урыҫ теленә тәржемәләп сығарыуҙы бик кәрәкле һанайым. Һәм был, моғайын, эшләнер, изге ғәмәлгә ашыр – тылсымлы ижад лайыҡлы баһа ла алыр. Амин.

03.10.2005.

Әүҙем ижадсы

Әҙәбиәттәге үҙенә күрә ижад һүлпәнлеге, торғонлоҡ кисерелгән был заманда юморист Рәшит Янбарисовтың бер юлы роман, пьеса һәм хикәйәләрҙән торған ҡыҙыҡлы йыйынтығы менән нәшриәт ишеген ҡағыуы осраҡлы түгел һис тә. Сөнки уның үҙенсәлекле ҡәләме һәм ижади әүҙемлеге әҙәбиәт һөйөүселәргә 60-ынсы йылдарҙан уҡ билдәле:

республикабыҙ ваҡытлы матбуғатында юмористик-сатирик һәм детектив хикәйәләре, повестәре әленән-әле донъя күрҙе, драматургия өлкәһендә лә ул баш баҫып байтаҡ эшләне. Ә был йыйынтыҡ — авторҙың шул оҙайлы бай тәжрибәһенең уңышлы һөҙөмтәһе, емеше булып тора.

Һуңғы йылдарҙа яҙыусыларыбыҙҙың үтә һүлпән эшләүен, Рәсәй кисергән ифрат ауыр һәм ҡатмарлы хәҙерге заман тураһында әҫәрҙәр яҙылмауын һөйләп зарланабыҙ. Бының өсөн, моғайын, тиҫтәләгән йылдар үтеүе, бөгөнгө сетерекле ваҡиғаларҙың тарих булып әүерелеүе кәрәктер, тип һөҙөмтәләп тә ҡуябыҙ. Дөйөм алғанда, ул шулайҙыр ҙа. Әммә Рәшит Янбарисовтың өлгөр ҡәләме көтөп ятмаған бьны — тап бөгөнгө ваҡиғалар үҙәгенән художестволы репортаж һымаҡ үткер ҙә, әүҙем дә яңғыраусы "Собачий рай" романын тыуҙырған. Уҡыусы был ғибрәтле "рай"ҙың тәүге биттәренән үк авторҙың киң эрудициялы хикәйәләүенең әсе иронияһы, сарказмы һәм иҫтә ҡалырлыҡ сағыу художестволы образдары аша социаль, экологик-политик, психологик-философик яҫылыҡта уйланыуҙары менән тамам арбалып, үҙен дә роман геройҙары араһында шулар менән бергә "Со бачий рай"ҙа йәшәгәндәй тоя башлай, сөнки материал ифрат хәҙерге, геройҙары көн дә үҙебеҙ күреп йөрөгән кешеләр. Әммә художник күҙе менән автор уларҙы сыбар "тормош прозаһы»нан ҡалтайтып күтәргән, колоритлы типтарға әйләндергән. Үҙәк герой бизнесмен Бағдат, уның "коллега"лары Нищий, Вәсил һәм уларҙың һөйәркәләре Тамара, Занзибар, йәнә килеп ит комбинаты директоры Тамерлан, участка милиционеры Ҡаҙмуйынов — тап ана шундайҙарҙан. Ваҡиғалар "колба балаһы» Бағдат төҙөгән "Үгеҙ күкәйе һәм тауыҡ тәпәйе" фирмаһы тирәһендә ҡуйыра ла Рәсәйҙең ошо "ҡырағай капитализм"ы шарттарында шул фирманың йәғни Бағдат бизнесының көлө күккә осоуы (банкротлығы) менән ослана. Дөрөҫ, романдың ҡайһы бер урындарында Ильф һәм Петров сатираһының еҫе аңҡый биреп ҡала, ләкин әҫәрҙәр араһында айырма ҙур һәм ул Р. Янбарисов әҫәренең үҙ аллылығы хаҡында һөйләй. Афераларын ялған фирма аша тормошҡа этәреүсебендерҙән айырмалы булараҡ, Бағдат ысын фирма төҙөй ҙә продукция етештереп маташа, тик заманса йылғырлығы, афераслығы ла ҡотҡара алмай уны банкротлыҡтан. Сөнки был — бөгөнгө "Россия переходная"ның тарихи яҙмышы.

"Акулы капитализма" тигән ике күренешле комедия ла тормошобоҙҙоң көҙгөһө һымаҡ. Баҙар мөнәсәбәттәре башҡорт ауылының аҫтын-өҫкә килтергән: әүәлгесә олоно — оло, кесене кесе итеп белеү юҡ; оятһыҙ алыш-биреш мөнәсәбәттәре меңәр йыллыҡ әхлаҡты алмаштырған. Һәләкәтле шул мөхиттә Руза кеүек камил йәндәр ғөмүми боҙоҡлоҡҡа, бөлгөнлөккә ҡаршы тороп ҡырҡыша. Әммә был урыҫса текст башҡорт һүҙҙәре менән артыҡ-күп сыбарланған — шуларҙан арындырыу кәрәк, юғиһә урыҫ уҡыусыһы аңламаҫ.

Йыйынтыҡтың өсөнсө өлөшөндә 3-4 битле ҡыҫҡа ғына һәм ҡыҙыҡлы юмористик әҫәрҙәр бирелгән, уларҙы мин этюдтар йәки "тормош ярсыҡтары" тип атар инем. Былары ла бөгөнгө ғибрәтле тормошобоҙҙо күҙаллатырлыҡ сағыу-сағыу штрихтар булып тора. Ҡулъяҙманы наборға

тапшырыр алдынан бөтөрөргә тейешле ҡайһы бер етешһеҙлектәр авторҙың үҙенә әйтелде.

Ҡыҫҡаһы, бөгөнгө уҡыусы ҡыҙыҡһынып уҡырлыҡ һәм фәһем алырлыҡ юмористик йыйынтыҡ әҙер, уны айырым китап рәүешендә ташҡа баҫып сығарырға тәҡдим итәм.

31.05.1995.

Сәхнә күрке булырлыҡ

Тыйнаҡ әҙип Рәшит Янбарисовтың урыҫ телендә яҙылып донъя күргән, сағыу сатира ҡатыш мөләйем юморғабай ифрат үҙенсәлекле, уҡымлы повестәрен, романдарын, киносценарий һәм пьесаларын, ыҡсым ғына күләмле хикәйәләрен, үкенескә ҡаршы, киң ҡатлам уҡыусыларыбыҙ, бәлки, белмәйҙер ҙә. Сөнки уның китаптары бәләкәй генә тираж менән ташҡабаҫылыр ҙа, күҙ асып йомғансы, тип әйтерлек, таралып та бөтөр ине. 2002 йылда сыҡҡан «Иҫке байҙың бөлгәне, яңы байҙың көлгәне» тигән комедиялар йыйынтығы иһә «урыҫ телле» авторыбыҙҙың башҡорт уҡыусыларына, ниһайәт, үҙ әсә — башҡорт телендә мөрәжәғәт итеүе менән дә иғтибарға лайыҡлы. Китапҡа алты әҫәр кергән һәм уларҙың алтыһы ла, алтатарҙағы алты патрондай, атылырға ғына тора — саҡмаһын сағырлыҡ режиссеры ғына кәрәк!

Баштан уҡ әйтеп үтәйек: баш ҡаланың урыҫ мөхитендә үҫеп, урыҫса белем алған, эше буйынса ла урыҫ телендә генә аралашып йәшәгән замандашҡа ҡәләмен башҡорт теленә бороп ебәреүе еңелдән булмағандыр. Был уның тел-стилендәге бер үк төрлө сатаҡлыҡтарҙа һиҙелә: урыҫса уйлап башҡортса яҙылған һүҙ бәйләнештәр, һүҙҙәр, урыҫсанан күскән афоризмдар, хаттабашҡорт һүҙҙәренең, һүҙ бәйләнештәренең дә яңылыштырып яҙылыу осраҡтары... Ләкин былар — тос бойҙай көшөлө өҫтөнә ҡунған ҡыу кәбәк кенә — редакторҙың «өф!» итеп өрөүе менән үк осоп юҡҡа сығырлыҡ. «Ә ни ҡараған редактор, ниңә осормаған өрөп?!» — тип һораусыларҙы аптыратырға ҡала: хөрмәтле ҡәләмдәштең беренсе башҡортса китабы, заманаға хас, һис бер яуаплы һәм техник редакторҙарһыҙ, хатта корректорһыҙ тыуған шул был донъяға... Шуға ла ундағы шайтан ботон һындырырлаҡ техник буталсыҡтарҙың, хәреф һәм ижек хаталарының, мөнтәлгән һәм төшөп ҡалған юлдарының да «тәбиғи» булыуы һис хайран ҡалдырмай мине. Әммә бындай рыялар китаптың дөйөм бәҫен юғалтмай: әлеге алтатар патрондары — «быуаҙ» патрондар килеш, көшөлдәге тос бойҙай — бойҙай хәлендә ҡала бирә барыбер. Һәм ғөмүмән ысын башҡорт телендә, ихлас башҡорт күңеленән яҙылған әҫәрҙәр былар. Шуларға ҡыҫҡаса ғына күҙәтеү яһап, киңерәк ҡатлам уҡыусыға, бигерәк тә театр сәнғәте әһелдәренә Яңы китап тураһында иҫкәртеп ҡуйыу урынлы.

«Айырылышыу» тигән драматик комедия менән асыла йыйынтыҡ. Әйткәндәй, яңы «баҙар экономикаһы» осоронда киң таралған, «сәхнәнән бармаҡ күрһәтеп көлдөртөү»гә тартым сәхнә әҫәрҙәренән айырмалы булараҡ, Р. Янбарисов комедияларының көллөһө лә, әйтерһең дә, бөгөнгө «киллер-миллер»лы, «Яңы урыҫ»лы һәм «Яңы башҡорт»ло хәтәр замананың үҙен ҡурҡыныс кәмит рәүешендә һөйрәп мендерә сәхнәгә; комик «соус»ҡа һалынған ваҡиғалар «ассорти»йы үҙҙәренең драматик, хатта трагик аһәңдәрендә күҙ йәштәре үтә көлдөртә-көлтөртә «йотола»...

Ваҡиғалар заманса фажиғәле: кисәге юғары белемле гүзәл зат Зөһрә ханым бөгөн йыйын йолҡҡос һәм башкиҫәрҙәр йәнәшәһендә муйынына ауыр тоҡ аҫып йөрөйкәй «челноксы»ға әүерелгән, ә яҙған романдарын китап итеп сығарыуҙан мәхрүм ҡылынған яҙыусы Ришат иһә тормоштоң уғата түбәнерәк баҫҡысына тәгәрәүен дауамлай. Замана ҡануны уны, көтмәгәндә, үҙ атаһының бажаһы яһап ҡуя, шул арҡала яҙмышының китабына һуңғы нөктәне пуля менән ҡуйҙырта... Геройҙарҙың икеһененең дә тормош юлы боролоштары тәрән психологик анализға торошло. Миңә ҡалһа, был ыҡсым ғына пьесанан тетрәткес хисле кинофильм эшләргә лә булыр ине.

«Ҡымыҙ» — авторҙың билдәләүенсә, ике бүлектә, ете күренештәге фантастик тамаша. Дөрөҫөн генә әйткәндә, асы реализм был. Һуғыш һәм хеҙмәт ветерандары 95 йәшлек Мөслимдең, 93 йәшлек Рәүелдең һәм «1917 йылда үктәбер айында тыуған» *Люцияның* шанлы совет осорона тура килеп хәмерләнгән һәм ҡәҙерһеҙләнгән ғүмере. Асы фажиғәле был яҙмыштарҙың көҙ миҙгеле алыҫ Юпитер планетаһынан осоп килеп төшкән гуманоид Онендыҡына ялғана ла ҡырҡыу коллизия тыуҙыра. Онен әфәнденең *Люцияны*, йәғни Мөслим ҡарттың бынан егерме йыл элек гүр эйәһе булған ҡарсығын, егерме йәшлек һәм шаталаҡ ханым итеп терелтеп ҡайтарыуы сетерекле мажараға әүерелеп, бюрократизм йәтмәләрен йырып сыға алмаған Мөслим ҡартты ер тормошонан биҙергә, гумоноид ярҙамында төпһөҙ космосҡа олағырға мәжбүр ҡыла. Сөнки илдәге етмеш йыллыҡ совет сәйәсәте ветерандарҙы айнымаҫлыҡ әсе хәмер Һаҙлығынабатырһа, «демократ»тар килтергән яңы шауҡым иһә һаҙлыҡ ярҙарын тотоноп сыға алмаҫлыҡ тайғаҡлаған...

«Параллель донъя» сатирик комедияһында мәйеттәрҙе йыйыштырыу акционерҙар Йәмғиәте президенты — «Яңы башҡорт» Хангәрәй һәм уның мәкерле компаньоны араһында үлемесле конкурентлыҡ алышы бара, шуға мөнәсәбәтән уларҙың ҡатындары, улдары, ресторан хужаһы, «теге донъя»ның тамуҡ киҫәүҙәре Пәри, шайтан һ.б. аҫтыртын да, йөҙгә-йөҙ килеп тә алыша. Хәмерҙән алйып хәстә түшәгендә ятҡан Хангәрәйҙең конкурентына һатылмыш Йәш ҡатыны уны тиҙерәк «теге донъя»ға оҙатыу сараһын күрә — медицина әһелдәре лә һатып алынған, үлмәҫе борон уҡ ун мең һумға «престижный» зираттан урын да юлланған... Әммә мираҫ өсөн йәшерен алышта Хангәрәйҙең наркоман улы Әхәт еңеп сыға — киллер яллап атайҙың мәкерле конкурентын тамуҡ төбөнә олаҡтыра. Ә Хангәрәй «теге донъя»ла ла һис ятып тынмай имеш: ожмахты ла, тамуҡты ла үҙ ҡулына төшөрөү, төшөмлө

акционерҙар йәмғиәте төҙөү өсөн хатта Хоҙайҙың үҙе менән әрһеҙ хитлашып йөрөй... Диалогтар тос һәм ҡыҫҡа, репликалар үткер, ваҡиғалар боролошо мауыҡтырғыс. Яңы заманға лайыҡлы сатира.

«Боролма» — ике бүлектән, ете күренештән хасил монодрама (ваҡиғалар бер герой һәм сәхнә артындағы автор ауазынан бәйән ителә). Минеңсә, киноға ла, сәхнәгә лә ҡуйырлыҡ бай материаллы, тығыҙ туҡымалы әҫәр был; көсөргәнешле детектив повесть рәүешендә лә мауығып уҡырлыҡ. Авторҙың ыҡсым сюжет ҡороу оҫталығы, тамашасыны (уҡыусыны) һуңғы нөктәгәсә ҡыҙыҡһындыртып тота белеүе ап-асыҡ.

«Ҡоролтайға сәфәр» исемле ысын башҡортса пьесаның балалар өсөн яҙылыуы бик тә әһәмиәтле. « Балалар, был тарих борон-борон заманда, башҡорттарҙың бер ырыуы Ислам динен ҡабул иткәнгә тиклем башлана. Был ырыуҙың исеме бөрйән»... — тип аса «кәрт»ен автор...

Өҫтә әйтелгәндәргә хас ҡайһы бер тел-стиль һәм техник етешһеҙлектәрен иҫәпкә алмағанда, әҫәр матур, яғымлы телдә яҙылған, балаларға донъябыҙҙың мауыҡтырғыс бер киҫәген аса ул. Ә иң мөһиме, милли үҙаңыбыҙҙың гүзәл традицияларына нигеҙләнгән был пьеса, әгәр балалар театрҙарының сәхнәләрендә һынланһа, йәш быуынды тыуған еребеҙҙең патриоттары итеп тәрбиәләүгә тос өлөш индерер ине. Хатта мин, Һаҡаллы бер сабый ҙа, тип әйтәйем, башынан алып аҙағынаса ҡыҙыҡһынып һәм сәхнәләрен күҙ алдымдан кисереп уҡыным.

«Үлеп яратыу» тип аталған музыкаль трагикомедия үҙенең был сатирик жанр өсөн сәйерерәк тойолған музыкаллеге менән иғтибарҙы йәлеп итә. Ҡыҫҡа ғынабашланышы уҡ киҫкен интригаһы менән йәнде арбап ала ла ваҡиғаларҙың тағатылыуын мауығып күҙәтә башлайһың.

Аҡса өсөн бер-береһенең боғаҙын сәйнәшеүсе ҡараҡ-миллионерҙар, үлтереүсе-киллерҙар һәм улар көбәгенән үткән үле йәндәр, экстрасенстар мыжғып йөрөгән был донъяла намыҫҡа ла, тоғролоҡҡа ла урын юҡ һымаҡ. Әммә һөйгән егете Рәйес һәләк булғандан һуң да ҡайнар мөхәббәтенә хыянат ҡылмаған Зиләнең һәм уны «үлеп яратыу»сы Рәйес йәненең (шәүләһенең) ихлас кисерештәре һис ниндәй ҙә вәхшилектәргә бирешмәйенсә саф ҡала.

Йыйынтыҡты йәнә бер тарихи комедия «Мушкет» тамамлай. Ул боронғо башҡорттар иленә Ислам дине инеү осорон юмористик-реаль планда һүрәтләүе менән ҡыҙыҡлы. Беҙҙә грек мифына, башҡорт фольклорына нигеҙләнгән сәхнә әҫәрҙәре бар. Шулар ҡатарында был, реализмға ныҡыраҡ мансылған сатирик әҫәр, сәнғәтебеҙгә асылған яңы яҡты тәҙрәләрҙең береһе булырҙай.

Дөйөм алғанда, иғтибарға лайыҡлы сәхнә әҫәрҙәре тупланған. Улар өҫтөндә буласаҡ режиссерға, әлбиттә, автор ярҙамында саҡ ҡына ҡәләм йүгертергә тура киләсәк. Әммә минең үҙемдән: «Әгәр режиссер булһаң, ни эшләр инең?» — тип һораһалар, һис икеләнеүһеҙ: «Рәшит Янбарисовтың пьесаларын рәхәтләнеп сәхнәгә ҡуйыр инем», — тип яуаплар инем. Сөнки улар, ысынлап та, сәхнә күрке булырлыҡ.

11.01. 2004.

Финә һылыуҙың уңышы

“Баштарына сәллә кеүек болоттар ураған мөһәбәт тауҙар, быуаттар серен үҙҙәренә Йәшергән меңйәшәр имәндәрҙе шаулатып, заман геүләүенә ҡолаҡ Һалғандай, уйға талған...

Иңбашына көпөһөн һалған, аяҡтарына тәрән калуш кейгән Азамат, ихатаһын ураткан рәшәткәгә таянып, иҫе китеп, ошо тауҙарға ҡарап тора. Тауҙар артынан, ауырлыҡ менән шыуышып, Ҡояш сығып килә. Уның нурҙары егеттең күҙен ҡамаштыра, ул, ҡаш өҫтөнә ҡулын ҡуйып, алһыу нурҙарҙы бармаҡтары аша үткәрә лә тирә-йүнгә күҙ ташлай. Уның ауылы үркәс-үркәсле бейек тауҙар итәгендә, бер битләстә тау ҡуйынына һыйынып ҡына ултырған. Уның көнсығыш яғын ҡайып торған тауҙар ауыл өҫтөнә ҡолай яҙып тора... Аҫта — уйпатлыкта — ҡуйы урман”...

“Шоңҡар” йәштәр журналының 2002 йыл 1-се һанында донъя күргән “Яҙмыш ҡуласаһы” исемле фантастик фовестең ошо башланышы уҡ ниндәйҙер тылсым көсө менән арбап ала йәнеңде... Бының сәбәбе, моғайын, башҡорт халыҡ ижады әҫәрҙәренә хас үҙе ябай, үҙе берәгәй, үҙе һутлы телдәлер, шағирәнә нескәлекле һүрәтләү сараларындалыр, йөмләләренең тәжрибәле һәм талантлы әҙиптәргә хас камиллыҡҡа, йыйнаҡлыҡҡа эйә булыуындалыр, тигән фекергә киләһең. Миңә ҡалһа, бәғзе авторҙарыбыҙҙың тауҙары бит ошолай “баштарына сәллә кеүек болоттар” урап ултырмаҫ, Ҡояшы ла “тауҙар артынан ауырлыҡ менән шыуышып” ҡалҡмаҫ, һәм уның алһыу нурҙары ла ҡулын ҡашы өҫтөнә ҡуйған егеттең күҙенә бармаҡтары араһынан һарҡылып үтмәҫ, ә бөтөнләй башҡасараҡ — замананың һалҡын быяла йә ҡорос йәнле электроникаһы телендәгеләй тасуирланыр, геройы ла, әрменән түгел, ә “армиянан” ҡайтыр, иинҡашына көпөһөн түгел, бәлки “шинелен” Һалыр, аяҡтарына, калуш кейәһе урынға, “галоштар” эләктерер...

Чечня һуғышынан ҡайтҡан Азаматтың, күп тә тормай, әсәһе донъя ҡуйған (атаһы ла вафат), күҙ терәр туғандары ла, күҙ Һалыр ҡыҙҙар ҙа юҡ ауылда — һуңғылары “ҡалаға ҡасып бөткәндәр”. Тыуған нигеҙен ҡоротмай, егетебеҙ яңғыҙ башы ғына Йәшәп ятыуы, ләкин яйлы түгел был — “яңғыҙ булыу бер Хоҙайға ғына килешә”, ти бит яҙыусы. Ҡарап торҺаң, яуҙа сыныҡҡан һалдатыбыҙ бөтмөр ҡатын-ҡыҙ ҡулдарын һораған өй эштәренә лә ипле, аш-һыуға ла бик оҫта, елене ташып көтөүҙән ҡайтҡан һәүкәшен дә гөбөрләтеп Һауып ала һуңлатмай. Автор былар ҙы, үтә йәйелеп китмәйенсә, йыйнаҡ һәм йәнле тасуирлай, баштан уҡ ошо Азаматтың ҡатмарлы эске донъяһының ҡатнашсыһы яһай укыусыларын. Шуға күрә яңғыҙаҡтың болоҡһоуҙары ла үҙебеҙҙеке була, хатта Һағыш Һауҙыртыусы тышҡы тәбиғәткә тиклем болоҡһой уға ҡушылып: “Болоттар дөмһәреп ҡуйыра, төнөн яуыр, ахыры”...

Төнгө сәғәт ун икене һуҡҡандан һуң (һәр төрлө тылсымдарҙың башланыр мәле!), йәне тынмаған Азамат клуб яғына йүнәлә, ял көнөнә

ҡаланан ҡайтмыш ҡыҙ-кырҡьн унда нәк ҡаласа — дөңгөр-даңғыр, шау-шоулы уйьн ҡорған. Бьны күңеле өнәмәгән Азамат кире сыға, күперек йәшел үләнгә ҡапланып ятып уйлана. Тик тышта ла тьнғы юҡ — "ситтән килгән" ниндәйҙер әтрәгәләм, егет йораттары (һуңьнан уларҙың теге донъя — "икенсе үлсәм донъяһы»нан икәнлеге асыҡлана), геройыбыҙға сәбәпһеҙҙән һөжүм ҡылып, яуызлыҡ эшләмәкселәр, ләкин көрәшкә таһыллы Азаматтан кәрәктәрен алып ҡасып китәләр. Ошо хәлдән тетрәнгән егет иртүк тороп урманға юлланырға, шунда ҡыуыш ҡороп ятып, хәл алырға, зиһенен йыйырға самалай.

Бьна ул "атаһьнан ҡалған һунарсылыҡ мираҫьн барланы, еҙ патрондарға (дөрөҫө — гилзәләргә. — *Й.С.*) кәпсел ҡаҡты, үлсәп дары һалып, уны кейеҙ менән тьҡысланы ла төбөнә пластмас ҡуйылған тупай башлы пуляһьн шуның өҫтөнә тығыҙ итеп ултыртып ҡуйҙы", — ниндәйен күҙәтеүсәнлек һәм предметыңды яҡшы белеү! Урман юльнан барышлай, егетебеҙ тыуған тәбиғәт Йәменән хозурлана, ә уның менән ҡуша беҙ кинәнәбеҙ: "Арҡан буйьндай күтәрелгән Ҡояш күгелйем болоттарҙың йыртығы аша иртәнге ысыҡ еҫенә иҫереп ятҡан томанһыу урманға Һаран ғьна нур бөркә". "Ҡапыл эргәһенән ата сел фырылдап осоп китте, егет Уға тоҫҡап атып ебәрҙе". "Ат күргәйне, аяғы талды, тигәндәй, ул ҡапыл ғьна үҙендә арығанлыҡ һиҙҙе". "Кинәт Һаралйьн ҡоштоң Һарыҡ тәкәһеләй баҡырғаны ишетелде"...

Эйе, әлегәсә мин белмәгән был Финә һылыу Латипова ысьнлап та халыҡсан уйлай ҙа, һөйләй ҙә, тоя ла белә, күрәһең. Шағирәнә-реалистик моңға мансып яҙмалы был ихлас ҡәләмдең килә-килеп сетерекле юҫыҡҡа — һалҡьн иҫәп-хисапҡа тартым фантастикаға керешеүе шулай ҙа сәмләндерҙе — апарып сығара алырмы ауыр йөктө? Сөнки бит бьның өсөн, минеңсә, әле әйтелгәндәй яҡшы беллитрист *(яҙыусы!)* булыу менән бергә, сикһеҙ хыял эйәһе *(үҙенсәлекле яҙыусы!)* һәм алдыңа алған темаң өлкәһендә ғалим да булыу мотлаҡтыр. Ошо мөһим өс сифаттың өсөһө тиң өс Тағанланып килһә генә *(өлгөрөп еткән яҙыусы!)*, тулы ҡанлы фантастик әҫәр тыуалыр, тип уйлайым.

Урман төпкөлөндә ҡыуыш ҡорған Азаматты төн уртаһьнда (баяғы тылсымлы мәл!) берәҙәк айыу маҙаһыҙлап, шуны эҙәрләп китә лә көслө йәшенле ямғыр аҫтьна эләгә һәм, йәшен атып, күкрәгеп үтәләй йәшен уғы шаңҡытып, иҫен юйып йығыла. Тап ошонда күренә лә инде өҫтә әйтелгән икенсе мотлаҡ сифат — яҙыусы хыялыйлығы: һары таңдан саҡ иҫенә килгән геройыбыҙ, баҡтиһәң, үҙебеҙҙең гөнаһлы был "беренсе үлсәм донъяһы»нан эрәүгән — бик боронғо бабаларыбыҙ йөрөп-ятмыш "икенсе үлсәм донъяһы»на күскән, имеш. Аллаһы тәғәлә бойомонсалыр инде, моғайьн, кәрәк саҡта әҙәм йәндәре ана шулай бер донъянан икенсеһенә күсеп йөрөй ала, ти... Азамат менән бергә беҙ ҙә хозурланып күҙәтәбеҙ ул донъяны: "Биш саҡрым самаһы аралыҡта дүрткел мөйөшлө бейек тауҙар теҙмәһе йәйелгән. Тауҙарҙың бөтәһе лә, гүйә, бергә килеп тоташҡан, тик болоттарға тейеп торған түбәләре генә ҺарымҺаҡ бүлкәһе һымаҡ айырылып тора... Йыраҡтан һыбайлылар саптырып үтеп китте. Өҫ-баштарьнда боронғо кейем ине".

Хызыр-Ильяска оҡшаған, әбү-Хәниф тигән аҡһаҡал ғалим уны, Азаматты, бабалар иле Урал-Туранға эйәртеп алып килә: “Егет күҙҙәренә алыҫтан күгәреп ятҡан Ирәндек итәктәре лә күренә башланы. Ахыр сиктә улар көмөштәй күле ялтырап ятҡан киң туғайлыҡкабарып сыҡтылар, ә күлдең аръяғында ҡарағай, ҡарағастар менән ҡапланған Ирәндек тауҙары башлана ине. Тау ҡаяларында ҙур-ҙур йәшмә таштар, көнгә сағылып, күл өҫтөн күҙ ҡамаштырырҙай нурҙар менән семәрләй. Күл буйында кейеҙ тирмәләр ултыра, ә туғайында көтөү-көтөү малдар эркелешеп йөрөй. Кешеләрҙе алыҫтан уҡ күреп ҡалған өйөр айғыры быларға ҡаршы сабып килде лә, сәләм биргәндәй кешнәп, кире дөндө. Яугирҙәр аттарынан төштө. Торҡалы яугир, егет менән аҡһаҡалды һырлап биҙәкләнгән бик ҙур тирмә эргәһенә алып килде лә үҙе эскә үтте.

...Тирмә затлы балаҫтарға күмелгән, улар тирә-яҡлап эленгән, аяҡ аҫтарына түшәлгән. Затлы ҡоралдар, бөтә уҡ-йәйәләр, ҡылыс-хәнйәрҙәр — алтын да көмөш ҡалъян-һаҙаҡтарҙа, ҡындарында. Тирмә эсе бик тә иркен, унда саф һауа. Егеттең күҙҙәре ҡамашты, алдына тауис ҡош килеп баҫты. Ҡойроғо салауат күперелəй йәйелгән, төрлө төҫтәре ялтылдап тора... Тирмәнең төпкөлөндә бәрхәт тәхеттә осло башлы бәрхәт башлыҡтан, өҫтөнә алтынһыу ептәр (дөрөҫө — алтын уҡа. — *Й.С.*) менән ҡаймаланған йәшел бәрхәт халат кейгән мөһәбәт ир ултыра ине. Тауис ҡош уның осло башлы ҡыҙыл сафъян итектәренә ятты”, — Шул рәүешле осраштырта яҙыусыбыҙ Тур батша бабабыҙ менән йәш егет Азаматты. Әммә бер кәңәшем бар: батшаның (легендар Фәридун улының) исем-шәрифен, былай ҡыҫҡартмайынса, тап “Үҫәргән тәүәрихе»ндә яҙылғанса, “Тураҡан Фәкфәдәр” (Тора тау ханы Фәкфәдәр) тип алыу бында ифрат килешер ине...

Хәҙерге башҡорт әҙәбиәтендә тамсылап күренгәләгән, йышырағын йыһан темаһы тирәһендә буталыусан фантастиканың ғилми нигеҙендә һуңғы осор зәңгәр экрандарҙың шауҡымы нығ ятҡанлығы билдәле. Шуға күрә ундай фантаст, яҙырҙан алда том-том фәндәрҙе төпсөнөп, сәс ағартып та ултырмай — туранан-тура эфирҙан ала ла әтмәләй, ябай ғына әйткәндә. Ә инде бына Финә һылыу Латипова бик ауыр юл һайлаған — бөгөнгө ғәмһеҙ уҡыусыны үтә боронғо һәм юғары әхләҡле башҡорт бабалар заманаһына алып барып ғәмләндертеү, данлы бабалар менән ҡуша сихри һауа һулатып, бергә донъя көттөртөп, изге рухи аманаттарына тейендертеп, үҙебеҙҙең ошо бөйөк тә, гонаһлы ла заманаға лайыҡлы ил тотҡаһы итеп ҡайтарыу... башҡорт халҡының бик боронғо тарихын яҙыу әле башлана ғына, уны хатта тарихсыларыбыҙҙың дабайтағы белеп еткермәй һәм шул белмәүен ҙур белем итеп һанай — ошондай хәлдә был авторға, һис шикһеҙ, үҙ аллы күп уҡырға, эҙләнергә, уйланырға тура килгән, үҙе (һәм әҫәре) өсөн зарур белем шишмәһен ул энә менән ҡойо ҡаҙып, тигәндәй, урғылтҡан. Беҙҙең эраға тиклем алтынсы мең йыллыҡта уҡ дәүләт ҡороп ил тотҡан самар (йәки шумер) бабаларыбыҙҙан алып сарматтарға (юрматыларға) тиклем арауыҡтағы мең-мең йыллыҡтарҙы иңләп алмыш башҡорт тәүәрихенең Тәүтөйәген ул уҡыусыға, хаҡлы рәүештә, Уралда төҫмөрләтеп, халҡыбыҙҙың, ырыуҙарын ырата-ырата,

үҙләштергән ерҙәренең киңлеген дә арыу уҡ сырамыттырта: “Сарматстандың көнсығыш сиге булып Урал тауҙары, көньяҡта — Каспий диңгеҙе һәм Кавказ тауҙары, Аҙау, Ҡара диңгеҙҙәр, көнбайышта — Карпат һәм Висла йылғаһы билдәләнгән”. Шулай уҡ мәҙәниәттә лә тәүге таш ҡоралдарҙан алып ташҡа сийып яҙыуҙарға һәм беренсе башлап бутал (металл) иретеп ҡойоу, *баҡ*ырҙан һәм тимерҙән ҡоралдар (һәм беренсе тәгәрмәсте, Һабанды, тип өҫтәйһе лә ҡалған!) яһауға тиклем булған бөйөк ҡаҙаныштарыбыҙҙың дүрт тарафҡа илтмеш дүрт юл буйьнса ҡитғаға таралыуьн, бөтә кешелек донъяһьның ҡаҙаныштарьна әйләнеүен дә бик яҡшы белә автор (был хаҡта инде сит ил ғалимдары ла яҙабашланы). Ерҙәге тәүге цивилизацияны тыуҙырыусы бабаларыбыҙҙың иң тотороҡло һәм мәңгелек ҡаҙанышы — “ башҡорт теле лә иң боронғоларҙың береһе” булыуьнда, әлбиттә. Әҙибәбеҙҙең уҡыусыһьн бьна ошо төпкөл әлмисаҡ донъябыҙға үҙе уны яҡшы белеп, ҡыйьнлыҡһыҙ, ялғанлыҡһыҙ алып кереүе һәм хисләндертеп йөрөтөүе һоҡландыра. Шул уҡ ваҡыттабыл тарихи өлкәлә, затлы гәлсәргә яңылыш батып кергән тупаҫ ҡом бөртөктәреләй, күҙҙе ҡырып торған урьндары бар — китапҡа бирмәҫ элек уларҙы шымартҡылап ҡуйыу килешер ине. Мәҫәлән, ҡасандыр Кесе Азияны яулап алмыш Үҫәргән (Саргон) батыр ғәскәренең бер ярсығы шул яҡтарҙа, *башҡортло*ғонан аҙып, иран телле бөгөнгө курдтарға әүерелеүен беләбеҙ. Авторыбыҙ шуларҙы (һәм хәҙерге башҡорттарҙы), ҡайһы бер Яңылыш концепцияға эйәреп, улар элек Уралда йәшәгән *иран телле* халыҡ тип танытмаҡсы. “Ҡорттарҙың (йәғни башҡорттарҙың һәм курдтарҙың. — *Й.С.*) килеп сығышы иһә төп өс тамырға барып тоташа — Кавказ, Иран һәм Урал-Туран”, — бьныһы ла баштүбән баҫтыртып ҡуйыу (баяғы яңылыш концепция ғәләмәте!..), ә ғәмәлдә киреһенсә — бөтәһе лә ҡитғаның бөтә яҡтарьна ла ошо Урал-Турандан һәм башҡорттарҙан таралған, һәм беҙ баштан уҡ төрки телле булғанбыҙ. Шулай итеп, “ башҡорт теле иң боронғоларҙың береһе”, тип дөрөҫ раҫлаған авторыбыҙ, үҙе лә һиҙмәйенсә, буғай, үҙенә ҡаршы килә. “Ислам диненә күскәс (уньнсы быуат башьнда. — *Й.С.*), — ти ул, — Уралға төрки телле халыҡтар күскән”. Күренеп тора: славянсы ҡайһы бер ғалимдарҙың һәм уларҙы ҡабатлаусы аҡһаҡалыбыҙ Р.Ғ. Кузеевтың һәм уның шәкерттәренең элекке һәм иҫкереп бөткән ҡарашы (Йәнәһе, ун беренсе быуатҡаса Уралда төркиҙәр булмаған). Был әгәр шулай икән, ул саҡта Асылыкүлебеҙ буйьндағы б.э. тиклем бишенсе быуатта ҡаяға ырьн хәрефтәрен сийып яҙылған һәм бөгөнгө әсә телебеҙҙә яҡшы уҡылған Сураштора (Заратуштра Йәки Зороастр) доғаһьн ҡайҙа ҡуябыҙ?!. Әйткәндәй, “Иран” тигән ил атамаһьның да повесть ваҡиғалары барған дәүерҙән күпкә һуңыраҡ — б.э. 224 йыльнда ғьнабарлыҡҡа килеүен иҫтә тотоп, шуға тиклемге ундағы илде “хәҙерге Иран ерендәге боронғо дәүләтебеҙ” тип әйтеү яйлы булыр һымаҡ. Йәнә килеп әҫәрҙәге “ҡалъян” һүҙенә иғтибар иттертмәй булмай: яугирҙең ян Һауыты ла, көнсығыш ҡәүемдәрҙең төтөн (Наркотик) тартҡыс әсбабы ла бер үк “ҡалъян» аталған. Бьныһы, әлбиттә, һүҙлектәребеҙҙе егәрле ҡулланып эш иткән авторҙың түгел, ә һүҙлектәрҙәге шул сатаҡлыҡтарға юл ҡуйған телсе ғалимдарыбыҙҙың ғәйебе. Сөнки уҡ

һауыты *ҡулсан* (урыҫ теленә ул беҙҙән “колчан” булып ереккән) — йылҡьның *ҡул* тиреһенән (Шуға күрә *лә* “ҡулсан”!), ә ян Һауыты *Һаҙаҡ — аяҡ (аҙаҡ)* тиреһенән эшләнер булған. “Һаҙаҡ” менән “аяҡ”тың берҙәйлеге күҙгә ташланып тора: *сатаҡ — Һаҙаҡ — аҙаҡ — аяҡ...* Геродот боронғо скифтарҙың (үҫәргәндәрҙең) ҡулсанды үлтерелгән дошманьның (әҙәмдең) ҡул тиреһенән яһауҙары тураһьнда ишетеүен яҙа, ләкин был яңылыш хәбәр булыуы ихтимал. Повесть туҡымаһьндағы бьндай ғына рыяларҙы, әлбиттә, Финә Латипованың йор ҡәләме бер йүгереүҙә үк ипкә килтереп үтәсәк.

“Икенсе үлсәм донъяһы»нда күҙ алдыбыҙҙа Азаматтың кем икәнлеге Һьнала — батша ойошторған бәйгеләге атса бышта ла, көрәштә лә ул шанлы еңеп сыға һәм иң затлы бүләктәрҙе ала. Ә өсөнсө ярышта мәрәйгә уҡ атышыуҙағы еңеүе иһә оһолло был егетебеҙҙе Урал-Туран иленең беренсе инсаны дәрәжәһенә күтәрә — Һылыуҙарҙан Һылыубатша ҡыҙы Иштәр (Шумер мифьндағы мөхәббәт һәм ырыҫ Хоҙай бикәһенең исеме) оялсан бөркәнсек аҫтьнан үҙенең нурлы йөҙөн Азаматҡа асып күрһәтә лә мөхәббәт алмаһьн бүләк итә, әммә... Иштәр Һылыу икенсе бер егеткә — ғәскәр башлығы Буранбайға кәләшлеккә йәрәшелгән икән дә... Икеһенең кинәт дөрләгән мөхәббәте хәтәр “өсмөйөш”кә әйләнә шулай: яуыз холоҡло Буранбай, Азаматты онотттортоу өсөн, Иштәр Һылыуҙы мәмерйәгә бикләтә, ә Азаматты юҡ итергә бойора, әммә аллаһы тәғәләнең ҡульндағы “яҙмыш ҡуласаһы” уның файҙаһьна әйләнмәй — яуызлығы үҙ башьна етеп, юҡҡа сыға Буранбай.

Уҡыусы хәүефләнә: шулай уҡ теге донъяла тороп ҡалырмы икән ни Азамат?!. *Ләкин...* Азаматтай “аҫыл егеттәр беренсе үлсәм донъяһьндағы затлы башҡорт тоҡомона бик кәрәк. Ни тиклем башҡорт илендә күберәк булһалар, шул тиклем Алланың рухы ла ул ерҙә булыр. Үҙҙәрен остаз һанап, йәшәргә өйрәтеүселәрҙең ялған дуҫлығьн аңлар өсөн, боронғо ғәйрәттәрен, батырлыҡҡа, егәрлелеккә һәүәҫлектәрен ҡайтарыу өсөн кәрәк ундай егеттәр, — тигән ҡәтғи ҡарарға килә Тур батша. — башҡорт халҡы хөрриәттә, муллыҡта, бәйһеҙлектә Йәшәргә тейеш... Иштәр менән Азамат осрашыр. — Тур ҡәнәғәт йылмайҙы, әммә уның күҙҙәрендә йәш ине... — Алла егетебеҙҙең донъяға тикмәгә килтерелмәгәнен аңланыңмы, Иштәр ҡыҙым?

— Эйе, атай. Бөйөк Ижадсыбар яҡты көстәр менән Ватанды Һаҡларға яңы быуьн, юғары аңлы кешеләр тыуыуьн теләй. Төпкөл быуьндар, ата-бабалар тарихьн, юғары аңьн, хәтерен Һаҡларға Тур батша ҡыҙьның яҙмышьн әлеге заман егете яҙмышы менән бәйләп, ошо аҫыл мәғлүмәтте яңы быуьндар шәжәрәһендә ҡалдырырға теләй ҡөҙрәт эйәһе”.

Һәм бьна яңы тылсым: теге донъялағы батша Тур тирмәһе алдьнда килеш һуштан яҙған Азаматыбыҙ ҡабат был донъяла — ауылы яньндағы йәшенле-ямғырлы урманда — ҡыуышы эргәһендә килә аңьна. “Күк күкрәп, йәшен уйнай ине. Яуған ямғыр туҡтаны. Ҡара болоттар таралып, күктә нурлы Ҡояш балҡьны”.

Өйгә ҡайтҺа... егетебеҙҙе һөйөклө Иштәре йүгереп сығып ҡосаҡлай, утлы ирендәре бергә тоташа. Әммә... Нәфисә исемле булып сыға был

донъя ҡыҙьна әйләнгән Иштәребеҙ — ут күршеһе Сәриә апайҙың ҡаланан ҡайтҡан һеңлеһе... Ҡитғабыҙҙы мең-мең йылдар буйы биҙәп ғүмер һөргән данлы бабаларыбыҙҙың иң-иң яҡшы сифаттары ошо ике йөрәк аша еребеҙҙә ырыҫланып үрсергә, халҡыбыҙҙы мәңге яҡты киләсәккә алып барырға тейеш.

Бьна шулай аҫыл геройы менән бергә таҫыл автор ҙа егетлек һьнауьн үтте: *өлгөрөп еткән яҙыусы* Финә Латипова тора күҙ алдыбыҙҙа.

25.03.2002.

Финә Латипованың «Салауат аманаты»

Был авторҙың ижадьна хас ҡыҫҡа, ләкин тос йөкмәткеле һөйләмдәр менән яҙылған повесе үҙенең бай фактик материалы, тарихи мәғлүмәттәре, көнкүреш деталдәренең теүәллеге, кешеләр психологияһьның дөрөҫ сағылышы менән баштан уҡ күңелде тарта ла әҫәрҙең буйьнан-буйьна «һөйрәп» алып бара.

Батшабикә Екатерина Икенсенең зиннәтле Һарай мөхите, уның бер үк ваҡытта дәһшәтле монархҡа ла, нәзәкәтле ҡатьн-ҡыҙ енесенә лә хас нескә ҡыланыштары тарихты ла, ҡатьн-ҡыҙ психологияһьн да яҡшы төҫмөрләй алыусы талантлы ҡәләм эйәһен күрһәтеп тора.

Ялған батша емельян Пугачев ыҫтаньндағы төрлө-төрлө ваҡиғалар һәм кешеләр, Салауат Юлаев образы һәм азатлыҡ яулау юльндағы уның бөйөк эшмәкәрлеге, атаһы Юлай Аҙналин, һөйөклө ҡатьны Гөлбәзир, Пугачевтың «Уң ҡулы» Кинйә Арыҫланов, шулай уҡ уларҙың яуҙаш-арҡадашы урыҫ Хлопуша һ.б. образдары лабаҙыҡ итеп күҙ алдьнабаҫтырыла, һүрелмәй иҫтә ҡала. Баш күтәргән халыҡ хәрәкәтен ут-ҡан менән баҫтырыусы батша генералдары, Ырымбур гөбөрнәтере Рейнсдроп һәм уларҙың үҙ һөнәрен тырышып башҡарған ҡатил-палачтары ҡатнашлығьндағы һәр төрлө эреле-ваҡлы ваҡиғалар, эпизодтар ҙа әҙибәнең йыйнаҡ һәм тос алымдарьнда ҡалтайтып һүрәтләнгән. Иң мөһиме шундалыр тип уйлайым: төрлө телле һәм динле халыҡтарҙы үҙенең артьнан эйәртеп алып барған, оло яуҙарға алып кергән Салауат батырҙың бөгөлмәҫ һәм һьнмаҫ ***рухи донъяһы был*** үҙенсәлекле әҫәрҙең төп мотивьн да, үҙәген дә тәшкил итә, Салауат рухы әҙәбиәтебеҙҙә, моғайьн, беренсе тапҡырҙыр әле, төп һүрәтләү объекты итеп альна ла уңышлы хәл ителә.

Ҡайһы бер тәнҡитселәр, бәлки, Салауаттың һуғыш эпизодтарьна һәм көнкүреш деталдәренә аҙыраҡ урьн бирелгән, тип тә хитланыр. Ләкин улар теләгәнсә итер өсөн, бөтөнләй башҡа әҫәр — мәҫәлән, Ғәли Ибраһимовтың «Кинйә»һе кеүегерәк ҙур күләмле, киң ҡоласлы эпик роман тыуҙырырға кәрәк булыр ине бит; ә хәҙерге осраҡта беҙ хатта повестең дә ҡыҫҡа-йыйнаҡ күләмле һәм ғәжәп көслө динамикалы, шул уҡ ваҡытта ул жанрға хас ижади мөмкинлектәрҙең бөтәһе лә, тип әйтерлек, тейешле үлсәмдә һәм күләмдә һыйҙырылышлы күркәм өлгөһөн күрәбеҙ.

Иң мөһиме — Салауат рухы, бөркөтләнеп, ҡанаттарын киреп күккә сорғолдо, шул рәүешле әле булһа ҡыйғырланып осошон һәм йырланыуын дауам иткән «салауатиада»ла үҙенсәлекле йыр йырланды.

Авторыбыҙ ошо ҡулъяҙмаһын ташҡабаҫырға әҙерләгәндә түбәндәгеләргә иғтибар итһен ине:

44-енсе биттә Салауат бөрө ҡалаһын алған саҡта «иң Башынан» яралана, тиелгән. Әммә Салауат өс тапҡыр: Ырымбур, Көнгөр, Уса эргәһендәге һуғыштарҙа яраланыуы мәғлүм бит. Һәм ул «иңбашынан» түгел, ә *янбашынан* яраланған.

Шул уҡ биттә Салауат, Бөрө ҡалаһын алыуын Пугачевҡа хәбәр итеү һәм яраһын йүнәлтергә тип тыуған ауылына ҡайтып китергә рөхсәт алыу өсөн, «Бердыға сапҡын ебәрҙе» тип әйтелә. Әммә-ләкин был ваҡытта Пугачев, әгәр ҙә яңылышмаһам, Бердыла түгел, ә Красноуфимскиҙа тора бит. Салауат уға, Красноуфимскиҙан Усаға үтер өсөн, Бөрөнө һуғышып алып юл аса һәм үҙе лә үҙенең башҡорт яугирҙәре менән Усаны алыу һуғышында бергә ҡатнашып, ян башынан ҡаты яралана. Һөҙөмтәлә Пугачевҡа Уса аша Ҡазан тарафына йүнәлергә юл асыла. Тимәк, Салауат ҡатнашҡан һәм яраланған Уса һуғышы Пугачевты Башҡортостандағы ҡырғынсылар ҡамауынан сығарыу өсөн хәл иткес бәрелеш була, бында Салауаттың да өлөшө ҙур. Автор алдында шул оло Салауат өлөшөн тейешенсә ҡалтайтыбыраҡ күрһәтеү — яҙмыштарҙы хәл иткес мәлдә уның батыр һәм ҡыйыу яугирлеге лә, ялҡынлы шағирлығы ла, һынмаҫ рухының иң юғары сорғолошо ла бер юлы сағыу кәүҙәләндерелгән яңы бер бүлек өҫтәп яҙыу бурысы тора, минеңсә. Һәм был бүлекте халыҡтың билдәле ҡобайыры менән тамамлау хәйерлелер:

Салауат батыр ир ине,
Менгән аты кир ине,
Яуға саҡырып сапҡанда
Тауыштары көр ине;
Ҡаршы килгән яуҙарға
Ҡаршы сығыр ир ине,
Ҡаршы сығыр ир ине.

Салауат батыр ир ине,
Менгән аты кир ине,
Дошман менән алышҡанда
Ил эсендә бер ине;
Халҡы өсөн көн ине,
Дошман өсөн төн ине,
Дошман өсөн төн ине.

Салауат батыр ир ине,
Менгән аты кир ине.
Яурынына уҡ тейһә,
Себен тешләй, тир ине;

Күкрәгенән ҡан сыҡһа,
Тирем сыға, тир ине,
Тубығьна туп тейһә,
Тубылғы был, тир ине, ау,
Тубылғы был, тир ине.

Ошо ҡобайыр үҙе генә үк күрһәтә ләһә яҙыласаҡ яңы бүлектең ҡайһылайыраҡ юғары һулышта булырға тейешлеген!

Ҡулъяҙмалағы ҡайһы бер ваҡ-төйәк тел-стиль ҡытыршылыҡтарын урыньнда күрһәтә барҙым.

Дөйөм алғанда, әҫәр бик ҡыҙыҡлы һәм мауыҡтырғыс уҡыла, һәр кем унан үҙенә һәйбәт йән аҙығы табасаҡ. Авторының уңышьнан ҡыуанып, икеләнмәйенсә, әҫәрҙе ташҡа баҫып сығарырға тәҡдим итәм.

18. 04.2003.

Быуатҡа бер булырлыҡ

Башҡорт халыҡ йырҙары, йыр-риүәйәттәре. Автор-төҙөүсеһе Ф. А. Нәҙершина. Башҡортостан "Китап" нәшриәте, Өфө, 1997, 288 бит. — Тышлығьның Көндәй сағыу төҫө менән баш ҡаланың кибет кәштәләрен нурлап- балҡытып ятҡан мөғжизәле был китаптың биттәренән уны асҡан һәр бер ихлас йәнгә халҡыбыҙҙың меңәр-меңәр йыллыҡ аҫылдарҙан аҫыл рухи хазиналары — ихлас башҡорт күкрәгенән күкрәп-иңрәп сығып ташҡабаҫылмыш илаһи йыр-моңдары бөркөлә. Эйе-эйе, йыр һүҙҙәре генә түгел, ә шөңгөр көй-моңдары менән ҡуша — текстарға янһарытып заманса сифатлы яҙылыштағы ноталары һәм һәр йырҙың сал тарих-легендаһы ла теркәлгән; хәлеңдән килһә, бер ыңғай өҙҙөртөп көйлә йәки музыка ҡоральнда шаңғырат. Бьны, башҡорт ҡьна түгел, ә урыҫ та, инглиз да һәм шул телдәрҙе һупалаған ерле башҡа инсандар ҙа берҙәй үк үтәй ала, сөнки текстар бер ыңғайҙан шул өс телдә бирелеп, башҡортсаһы хатта әүәлге үҙебеҙҙең ипле латин графикаһы нигеҙендәге яҙмаға ла күсерелгән (кириллицаны уҡый алмаған көнбайышсылар өсөн). Тимәк, китаптың автор-төҙөүсеһенең хаҡлы билдәләүенсә, теләге бар әҙәм йырҙарҙы ауыҙьнан саф башҡортса ауазлап башҡара ала. Ә концерттарбарышьнда конферансье йәки йырсы үҙе тәүҙә йырҙың тәрән кисерешле тарих-легендаһьн да залға аһәңле тирә барһа, тыңлаусыларьна тәьҫир көсө ифрат ныҡ артыр ине (Ф.А. Нәҙершина үҙе бьны телевидениенан тапшырыуҙары аша асыҡ күрһәтте). Шул уҡ ваҡыттабыл йыйьнтыҡ халыҡ рухьн урғылтмыш тәрән зауыҡлы әҙәби әҫәр рәүешендә лә ҡыҙыҡһьнып уҡыла — иң шәп романдар һәм дастандар рәтендә торорлоҡ. Ошо йәтешлектәргә юл ярып биргән автор-төҙөүсе ҡатарьнда уға ихлас ярҙамлашҡан бер төркөм зыялыларыбыҙҙың да игелектәрен билдәләп үтергә кәрәк. Араларьнда текстарҙы инглизсаға тәржемәләрҙең байтағьның ипләп шымартыусы-мөхәррире, Төньяҡ Ирландияның

Ольстер университеты профессоры доктор Артур Вильямсон дабар. Күрәһегеҙ, хеҙмәтте еренә еткерешеүҙә байтаҡ инсандар көс һалған, сөнки был шуға тороорлоҡ. Китаптың баш һүҙендә бик хаҡлы яҙылғанса, “ башҡорт халыҡ йырҙары — баһалап бөткөһөҙ рухи хазиналарҙың береһе, быуаттар төпкөлөнән хәҙерге заманғаса килтереп еткерелгән ата-бабалар аманаты, поэтикалаштырылған халыҡ тарихы. Шул уҡ ваҡыттабыл мираҫ башҡорт халҡының дөйөм кешелек мәҙәниәтенә индергән ғәжәйеп үҙенсәлекле өлөшө лә” ул. Бына шул хәләл өлөшөбөҙ ошоғаса, йә өлөшләтә лә күрелмәй, йә күрмәмешкә һалышынып, үҙ ҡабығыбыҙ эсендә бикләнеп тотола, йә булмаһа башҡалараҙың өлөшө итеп аҙаштырылып йөрөтөлә бирҙе фани һәм фәнни донъяла. Инде килеп ҡа быҡ көбө сатнаны — башҡорт рухи хазиналарының бер ни тиклеме халыҡ-ара инглиз теле аша бөтә донъяға мәғлүм булыу форсатына иреште, тип әйтә алабыҙ хәҙер. Игелекле ғалимәбеҙ Фәнүзә Айытбай ҡыҙы Нәҙершинаның элегерәк бөйөк “Урал батыр” эпосын да инглизсәгә тәржемәләп сығарырға тип ең һыҙғанып, янып-көйөп йөрөүҙәрен беләбеҙ — уныһы ла бойомға ашыр, Дәү Хоҙайыбыҙ бойорһа. Ошо урында уға, һиммәтле “ башҡорт халыҡ ижады” серияһындағы “Риүәйәттәр, легендалар” томын һипләп сығарыусыға һәм асылындабашҡорт мифологияһына ҡағылышлы “Халыҡ һүҙе”, “Халыҡ хәтере” тигән төплө монографиялар авторына, Яңы бер теләк тә белдерге килә: “риүәйәттәр һәм легендалар” ләкәбендә әле әйтелгән томға һыйған һәм һыймаған (архив фондтарында Һаҡланған), шулай уҡ “Эпостар” томына кергән (һәм кермәгән) мифтарыбыҙҙың барыһын бергә туплап, инглиз телендә “ башҡорт мифтары” тигән төплө йыйынтыҡ та, ниһәйәт, нәшер ителһә, башҡорт мифологияһы — донъя халыҡтары мифтарының ысын ата-әсәһе икәнен бар ғәләм белер ине, “ башҡорт мифологияһы юҡ” тигән ялған хәбәр бөтә энциклопедияларҙа ҡаңғырта бит юғиһә...

Инде әле алдыбыҙҙа булғанына ла шөкөрана ҡылып, һүҙебеҙ айышына ҡайтҺаҡ, халыҡ-ара майҙанға сыҡмыш был йыйынтыҡтың ҡиммәте баһалап бөткөһөҙ. Мәҫәлән, ошо китапты ҡулына алған, донъя халыҡтары мифтарынан яҡшы хәбәрҙар сит ил зыялылары (үҙебеҙҙекеләрҙе әйтә алмайым) урынына үҙемде ҡуйып ҡараһам, китаптың “Тәбиғәткә, боронғо ышаныуҙарға (мифтарға, тип аңлайыҡ! — *Й. С*.) бәйле йырҙар” тигән тәүге бүлеге, минеңсә, үтәнән-үтә түбәндәгеләй фәһемләнеп уҡыла.

1. Иҫке Урал. “Уралтауҙың тере йән эйәһе итеп һүрәтләнеүе — Ер-әсә мотивы” (Ф. А. Нәҙершина) үҙе үк бының космогоник тәүмифҡа — хөнәсә (гермафродит) тәбиғәтле Тәүбабабыҙ Имир кәүҙәһенең хәләл яртыһынан яралмыш (ярылмыш) Урал-Алтай тауы (Ер) образына нигеҙләнеүен күрһәтеп тора. “Халыҡ аңына ул бигерәк тә Тыуған ил символын йөрөтөүсе булып һеңеп ҡалған... Мәшһүр “Урал” йырының да... ошо фәлсәфә нигеҙендә яралғанлығы күренә. Йырҙың йөкмәткеһенә ингән тарихи ваҡиғалар шаңдауы шуның менән аңлатыла” (Ф. А. Нәҙершина). “Урал” йырының бына шундай мөһимлеген асыҡ әйтә торопа та, “Иҫке Урал” ҡатарынан (һәм алдараҡ!) ысын “Урал»ға ла урын бирелмәүе (ә

тарихи йыр “Каруанһарай”ҙың тарихи яҡтан әһәмиәтһеҙ варианты ла ингән бит!..) — йыйьнтыҡты айбарламауы үкенес, сөнки “Урал” китаптағы бөтә йырҙар мотивтарьн үҙендә бер юлы бөргән мөғжизә бит ул, шуға ла ул башҡорттоң милли гимны тип йөрөтөлә.

2. Сыңрау Торна. Тәүигеҙәк (Шүлгән, Урал) баш бабаларҙың береһенән — Бүре-Әсә имеҙеп үҫтермеш Шүлгәндән таралған ырыу тип Һаналыусы сал Үҫәргәндең дәдәм (тотем) ҡошо, үҫәргәндәрҙе изге яуҙарға рухландырыусы, әйҙәүсе йән эйәһе. Борон, моғайьн, яУға ташланыр алдьнан, яугирҙәребеҙ, ашҡьныулы хиссиәтләнеп, майҙан-түңәрәктә “торналар бейеүе»н башҡарған. Ошо ырым әлегәсә бүрене үҙҙәренең милли символы һанамыш чечен халҡьнда изге яУға рухландырғыс бейеү булып башҡарыла (һуңғы чечен-урыҫ һуғышьнда сағыу күренде). Сыңрау Торнаға бәйле тәүтормош Йәмғиәте осоро ҡалдығьның әлегәсә рухыбыҙҙа сәнғәти гәүһәрләнеп балҡышы башҡорт хәтеренең шундайьн да оҙонлоғон, тарихьның тәрәнлеген дәлилләй.

3. Бала-Ҡарға. Ҡарға — Үҫәргән-Шумер мифологияһьндағы бөйөк туфан һыуы ҡалҡҡандан һуң иҫән ҡалған бәндәләргә (Утнапиштим йәки Нух пәйғәмбәргә) ҡоро (ҡара) ерҙе эҙләп табып биреүсе, ярлыҡаусы изге йән. “Бала-Ҡарға” йыры ана шул бик боронғо миф аһәңенә һуғарылған.

4. Кәкүк. Башҡорт мифологияһьнда һәм аңьнда әжәл хәбәр ҡылыусы ҡош. Әҙәм баштарьна һунарсылыҡ ҡылыусы (башкиҫәр) “Азамат” һәм “Кәкүк-Кәкүк” ырыуҙары (Үҫәргән тоҡомдары) йәшәгән Яңы Гвинея утрауҙарьнда әлегәсә шул һунарсылар, кешене үлтерерҙән (башьн киҫерҙән) элек, “кәкүк-кәкүк!” тип саҡырып тауыш биреп, ҡорбаньна әжәл хәбәрен еткерә. IX быуатта Башҡортостанда ғәрәп илсеһе Ибне Фаҙлан күргән “башкиҫәр” үҫәргән-азаматтар ҙа, моғайьн, дошманьның башьн киҫерҙән әүәл шулай “кәкүк-кәкүк!” тип тылсымлап саҡырғандарҙыр...

5. Ҡара Юрға. Билдәле булыуьнса, башҡорт ҡарыһүҙендә (мифьнда) Көн (Ҡояш) — Һарысай ат, Ай — Аҡбуҙ ат (ә асыльнда үгеҙ), ә Ер — Ҡара ат ҡиәфәтендә һьнлана. Йырҙың исеме “Ҡара Юрға” үҙе үк шул “Ҡара Ер-Аға” тимәктән хасил; ә йырҙағы “Ҡара Ер-Аға”ны (асыльнда Ер-Ирҙе) менеүсе килен — Инәбеҙ Һауа (асыльнда Һыйыр-Ҡоба/ҡоба һыйыр) булалыр. Беҙҙең мифологияны сағылдырыусы боронғо Египет һүрәттәрендә лә тап шулай: аҫтағы Ер — ир-ат енесле, өҫтәге Һауа — ҡатьн-ҡыҙ енесле итеп һүрәтләнгән. Ә “Ер-Аға»нан хасил булмыш термин “Юрға” — Ер шарьның йыһандағы һәм үҙ күсәрендәге талғьн хәрәкәте һымаҡ шыма һуҙылып йүгереүсе ат сифатьн белгертә. Тимәк, башҡорт космогонияһьна бәйле мифологияға тамырлана был сал-боронғо йыр ҙа.

6. Ҡуңыр-Буға. “Көнғара-баға” (Көн ҡараһьнда — төндә — бағыусы есем) йәғни Ай тигән мәғәнәгә эйә космогония термины. Борон замандарҙа Евразия ҡитғаһьн көньяҡ-көнсығыштан — төньяҡ-көнбайышҡа табан Ер Кендеге (Арҡайым) аша киҫеп уҙған Ай юльн шулай “Ҡуңыр-Буға юлы” тип, ә төньяҡ-көнсығыштан — көньяҡ-көнбайышҡа табан шулай уҡ уҙған (Арҡайымда Ҡуңыр-Буға юлы менән

киçешкән) Көн (Ҡояш) юлын "Көн-Өфө (Ҡәнифә) юлы" тип йөрөткәндәр. Күктәге таңғы Ай артынса, ҡыуалатып, Көн (Ҡояш) килгәндәй, мифологик был йырҙа ла Ҡуңыр-Буға (Ай) артынан Көн-Өфө (Ҡәнифә) исемле Ҡояш эйәреп бара...

11. Заятүләк ("Заятүләк менән Һыуһылыу"ҙың варианты) — был да Ай (Заятүләк) менән Көн (Һыуһылыу) тураһындағы иң боронғо (Арҡайымға тиклемге үк) космогоник мифтарыбыҙҙың береһе: Көн һәм Ай үҙ юлдарында һыу төбөнә байый ҙа йәнә ҡалҡа ер йөҙөн яҡтыртырға. Был сюжет боронғо шумерҙарҙан килгән аҡкатай (аккад) эпосында ла бар. Шулай уҡ космогоник мифологияға бәйле "Саҡ-Суҡ бәйете"нең ошо рәттән йыйынтыҡҡа һыймай ҡалыуы үкенес — йәм өçтөнә сәм генә өçтәр ине.

21. Алтын Урҙа. Бик урынлы керетелгән ҡомартҡы. Алтын Урҙаның бөйөк император-ханы башҡорт Туҡтамыш-хан (Ғаязитдин) тураһындағы (бәлки, ул үҙе ижад иткән) мәшһүр әçәрҙең ярсығына оҡшай был. Бигерәк тә һуңғы строфаның һуңғы ике юлы Туҡтамыш-хан яҙмышының ҡайғы-һағышлы аҙағын хәтерләтә. Билдәле булыуынса, ул, баш ҡала Һарайҙан мәжбүри китеп, әсәһенең тыуған ере Асылыкүл янына ҡайта ла тап шундағы ***Төйлән*** йылғаһы башында донъя ҡуя (1405 йылдың 28 июнендә).

Нәүбәттәге (икенсе) бүлекте тәшкил иткән тарихи йырҙарға килһәк, уҡыусыларҙың киң даирәһе улар ашабашҡорт халҡының азатлыҡ яулап илбаçар һәм иҙеүселәргә ҡаршы күп быуатлыҡ данлы ла, ҡанлы-фажиғәле лә тарихына, аҡыл менән генә түгел, ә көйҙәрҙең моңо һауған көслө кисерештәр аша ла юлығыр, хатта ҡат-ҡат тетрәнер. Был иһә Рәсәйҙең яулап алыуҙар тарихында ла ҡанлы күҙйәштәр рәүешендә һарҡылып һәм аңлашылып торғанлыҡтан, бүлектәге бер нисә тарихи йырға булған ҡарашты ғына ҡыçҡаса белдерәмен.

22. Ямантау. Фажиғәле был тарихи йыр бабаларыбыҙ тарафынан тап бөгөн — беҙ йәшәгән XX быуат аҙағында (Рәсәй хакимдары Б.Н. Ельцин дәүерендә) тап беҙ бахырҙарға ҡарата сығарылған, беҙҙең уй һәм хистәрҙе йөкмәгән кеүек: Ямантауҙы башкөлләйгә урыç генералдарына тоттортоп, унда шуларҙың тап йырҙағыса "түңәрәге кордон-ҡарауыл" менән башҡорт аяғын баçтыртмаçлыҡ кәртәләнгән шомло ***Межгорье*** ҡәлғәһен ҡорҙортоу бит был! Тимәк, ике ҡулың менән башыңды тотоп, бабаларыңдың ошо йырын йырла ла уйлан, башҡортом:

Яман ғына тауҙы һатҡан, тиҙәр,
Ун ике мең ҡағыҙ аҡсаға.
Яман ғына тауҙы һатҡандан һуң,
Ишетелгән икән батшаға.

Ер алам тип килгән генерал,
Йыйылып-йыйылып килде күп ауыл;
Ямантауға инде барып булмай,
Түңәрәге — кордон-ҡарауыл.

Яман гына тауҙың үңәрендә
Йондоҙ кеүек ыуаҡ таштар бар,
Ямантауҙы һатып, әрәм үк иттегеҙ,
Һеҙҙән түбән гәййәр йәштәр бар...

26. Тәфтиләү. "Урал" тиңендә йөрөр йыр, үкенескә ҡаршы, самаһыҙ ҡыҫҡартылған. Минеңсә, тулы текстың һис юғында урталағы ете строфаһын "ҡазалап", ҡалған тәүге дүрт строфаны һәм аҙаҡҡы ике строфаны урындарында ҡалдырыу кәрәк ине — башҡорт рухының һындырылғыһыҙлығын дәлилләүсе бит улар. Өҫтәүенә, йыр легендаһы рәүешендә, Тәфтиләү көлөн күккә осроп кешеләре менән ҡуша бөтөрә юҡ иткән Сейәнтусы ауылының тарихын да теркәгәндә, халыҡ-ара кимәлдәге һәр кемгә лә яҡшы билдәле Лидице, Орадур, Хатынь, Сонгми фажиғәләренә тиң Сейәнтусы фажиғәһе лә тетрәндерткес фашланыр, мәғлүм булыр ине бөтә донъяға.

"Тормош-көнкүреш йырҙары, мөнәжәттәр (донъя хәлдәре, ҡатын-ҡыҙ яҙмышы, йола, байрамдар)" һәм "Мөхәббәт, дуҫлыҡ йырҙары" тигән бүлектәргә, бүлек исемдәренән үк яҡшы күренеүенсә, көнүҙәктә йыш йырланған, киң билдәле йыр-көйҙәребеҙ тупланған, шуға күрә уларҙы бында сурытып тороу ҙа кәрәкмәҫтер. Әммә сит ил кешеләренә улар аша халҡыбыҙҙың зауыҡлы һәм тәрән рухлы тормошо, таланты һәм йәшәүгә көслө ихтыяры инандырткыс асыла. Йыйынтыҡтабарлығы етмеш биш йыр-көй, барыһының да тип әйтерлек халыҡ хәтере һаҡламыш авторҙары билдәле. Ошо ыңғайҙан бер фәһем төшә иҫкә: Францияла илдең иң ҙур талант эйәләрен, рәсми рәүештә ижади мәңгелек юрап, "Үлемһеҙҙәр академияһы»на ағза итеп алалар икән. Мең-мең йылдар буйынса үҙенең мәшһүр йырсы-композиторҙарының исемдәрен, башҡа һис бер халыҡта булмағанса, күңелендә һаҡлап мәңгеләштергән, ошо көндәргәсә хәтерендә юйылдыртмай килтереп еткергән бөйөк башҡорт халҡы үҙе үлемһеҙ!

Башҡортостан Фәндәр академияһының ағзалары исемлегендә Фәнүзә Айытбай ҡыҙы Нәҙершинаның исеме күренмәһә лә, ул Дәү Хоҙайҙың хаҡ исемлегендә торалыр, тип уйлайым. Эйе, арҙаҡлы һәм ҙур ғалимә быуатҡа бер булырлыҡ, һәр башҡорттоң ғына түгел, ә төрлө милләт зыялыһының да һәр саҡ ҡул осонда торорлоҡ затлы китап сығарған. Әммә тиражы ул ҡәҙәрегә етерлек булмағанлыҡтан, уны һатып алыу өсөн үҙ ваҡытындараҡ иҫебеҙҙе йыя һалып ҡалыуыбыҙ хәйерле.
27.09.1988.

Төп сәбәптән башлайыҡ

Күренекле психолог, профессор Вадим Сафиндың сырхау йәмғиәтебеҙҙе һауыҡтырыу теләгенән, сәстәрҙе үрә торғоҙорлоҡ ғибрәтле һандар менән иҫбатлап, әрнеп яҙған мәҡәләһенең "Рух бушлығын нимә тултыра?" тип аталыуында уҡ ята оло мәғәнә — сирҙең төп сәбәбе менән эҙемтәләре бирелгән берәгәйләтеп. Намыҫлы һәр кемде борсой был

һорау: бик боронғо үҙ цивилизацияһына эйә булған, сал быуаттар дауамында сихәтле әхлаҡ һәм тәрбиә ҡанундары тотороҡло көйләнгән (Әхмәтзәки Вәлидовтың бала саҡ осоро башҡорт тормошона арналған сәхифәләрен иҫләйек "Хәтирәлар"енән!) был халыҡҡа, үҙенең рух баҙыҡлығын ян керешеләй ҡаты киреп тотабелгән башҡортҡа, ҡайҙан килеп тарыны һуң был рух бушлығы — хәмер Һаҫылы боҙоҡлоҡ ҡыуышлығы? (Профессорҙың мәҡәләһендә һүҙ, әлбиттә, күп милләтле коллектив хаҡындабара, ләкин мин үҙ милләтемде күҙ уңында тотамын). Бына беҙ, Бөйөк Ватан һуғышы йылдарының бураҙна малайҙары, — хатта беҙ ҙә белмәнек тәһә бының ише йән ыуалтҡыс муртлыҡты!.. Әйтәйек, большевиктар инҡила бына тиклем минең тыуған ауылда бер генә Йән дусар булған хәмер менән тәмәке зәхмәтенә — и блес ҡотҡоларын күрше Митрәй утарынан "контрабанда" юлы менән ҡайтарып, Һаҡмар ярлауығы аҫтына боҫоп ҡына ауыҙлаһа ла, гонаһ шомлоғоноң Һаҫыһы көллө ауылға бөркөләп, кешеләр урамға сығыр, халыҡ күсе ҡуҙғалыр, ғауға Һалыр булғандар... Беҙҙең малай саҡ "бәхетле совет осоро"на тура килеп, ауыл ки бетендә лә иркен һатылды шайтан ыуы, әммә ауыҙ итеүсене, йәки иҫереп йөрөүсене ауылдаштарым араһынан һис күргәнем булманы (медфельдшерыбыҙ Илья Дмитриевич Пудовкин ғына, тәмәке тартмаһа ла, хәмер менән дуҫ ине). Күңелемдә шул замандың шөкәтһеҙ бер мөһөрө ярылып ҡалған: йәйге селләнең тын алғыһыҙ томраһында урам осондағы "хәйерсе ҡарамаһы" төбөндә муйынына тәре сылбырлап тағылған дәү "дядя"ның, баяғы Митрәй утары быйма баҫыусыһының, эсеп ташлаған шешәһе янында үҙ шаҡшыһына батып, үткән берәүгә йоҙроҡ болғап яман ажғырып ятыуы (ә хәҙер шул ҡиәфәткә ауылдаштарым керә)...

Мөхитебеҙгә туфаны ҡалҡҡан океандай ябырылыусы и блес ҡотҡоһона ҡаршы ҡуйылған, күҙгә күренмәҫ ҡалҡаныбыҙ бар ине шул ул заманда — ғорур-сал тарихыбыҙ, телебеҙ, динебеҙ, тимәк, бабаларҙан килгән мәҙәниәтебеҙ. Үҙ тәбиғәтебеҙгә ят, һәләкәтле сит мәҙәниәттең беҙҙән тамуҡ киҫәүҙәре яһау өсөн шайтан иреткән ыҫмалаһы шул ҡалҡаныбыҙ тышында ҡала ине. Эш бында христиан дине менән ислам динендә түгел, ә мең йыл элек шул диндәрҙе үҙҙәренә ҡабул ҡылған ике төрлө цивилизация, мәҙәниәт тураһындабара һүҙ. Шул саҡта уҡ бабаларыбыҙҙың рухында бушлыҡ булмаған, ундағы гәүһәр хазиналарға күп йәһәттән иш килгәне, ауаздашлығы өсөн индергәндер улар, күңел ҡапҡаларын асып, донъя диндәренең береһе исламды. Ә икенсе мәҙәниәт тап шул саҡта, үҙенең рухи ихтыяжына йәтешләп, юҡҡамы ни донъя диндәренең икенсе береһен — христианлыҡты һайлаған: "Хәмер, — тигән кенәз Владимир, эскелекте тышаулаусы ислам дине илселәре өгөтөн кире ҡағып, — урыҫтар өсөн ҡыуаныс ул; беҙ унһыҙ йәшәй алмайбыҙ" (Н.М. Карамзин. История государства Российского, 1-енсе том, М., 1989, 148-енсе бит). Бына ҡайҙа сағыла, тамсы һыуҙа мөлдөрәгән Ҡояштай, икеһе ике төрлө рух, әхлаҡ, тәрбиә, мәҙәниәт...

Большевизм ҡарпытҡан ҡыҙыл империя ана шул ике төрлөлөктө бер төрлө ҡылырға киҙәнде, ҡалҡаныбыҙҙы ауҙарҙы, рухыбыҙҙы ыуалтты — бына ҡайҙа ул төп сәбәп — бөгөнгө йәштәребеҙҙең дә, ҡарттарыбыҙҙың

да иблесләнеп аҙыуы. Бейеүсегә таҡмаҡ һылтау булғандай, боҙоҡлоҡтарҙың башы хәмерҙән, тиһәк тә, хәмер башы булып баяғы төп сәбәп тора ошо фажиғәбеҙ артында — тап шуны еңмәйенсә, ҡалҡаныбыҙҙы ҡабат торғоҙмайынса, мөмкин булмаясаҡ сирҙән арыныу. (Бында мин бер милләтте лә хурларға ла, ҙурларға ла йыйынмайым — бөтәбеҙгә лә уртаҡ рыя ул рухтың бушаҡланыуы; әммә дөйөм дауаланыуҙы һәр милләт, үҙенең хәлен үҙе яҡшы белгәнлектән, иң элек мотлаҡ үҙенән башларға тейеш бит). "Иң мөһиме, — ти профессор, — ата-әсәләр балаларында сабый саҡтан уҡ рух ныҡлығы, әхлаҡ таҙалығы тәрбиәләһен ине. Иманһыҙлыҡҡа, йүгәнһеҙлеккә ҡаршы иммунитетты тик ғаиләлә генә нығытып була... Студенттарҙың тәртибе өсөн педагогик уҡыу йорттарының педагогика, психология кафедралары ла, Эске эштәр һәм Мәғариф министрлыҡтары ла, Йәштәр ойошмалары ла, *башҡортостан* Республикаһы Верховный Советының Йәштәр эштәре буйынса комиссияһы ла, хәлде асыҡлап, ниндәйҙер саралар күрергә бурыслы"

Хаҡ һүҙҙәр! Ихлас әйтелгән ошо изге теләк һәм бурыстарҙы тотанаҡлап, уларҙы үтәүҙе, аҡ эт бәләһе ҡара эткә, тигәндәй, ата-әсәләр һәм педагогтар елкәһенә генә өйөп ҡалдырмай, дәүләт кимәлендәге тәғәйен саралар ҡануны рәүешендә бойомға ашырайыҡ, юғиһә иң изгелекле маҡсаттар ҙа, әүәлгесә, ҡыҫыр сәскә генә булып ҡаласаҡ. Хаҡиҡәттең күҙенә ҡарап эш ҡылһаҡ, һуңғы етмеш йылда емереп ташланған, аяҡ аҫтына һалып тапалған рухи хазиналарыбыҙҙы Йәш күңелдәрҙә тергеҙергә, йәғни үҙ цивилизациябыҙ нигеҙҙәрен һәм Уға тәбиғи береккән ислам дине ҡанундарын мәктәптәрҙә һәм вуздарҙа ниндәйҙер бер формала уҡытабашларға тейешбеҙҙер (ә иҫке дини фанатизм шәүләһе инде янамай — донъяуи фәндәр ныҡ уҡытыла хәҙер). Бының өсөн, беренсенән, тамырҙарыбыҙҙы күҙаллатҡан иң боронғо тарихыбыҙ, исламғаса тәүге динебеҙ буйынса һәйбәт дәреслек булдырырға, уҡытыу программаларына керетергә кәрәктер. Икенсенән, бөйөк гөмансы (гуманист) Ғалимыбыҙ Ризаитдин Фәхритдиновтың бер ҡасан да үҙ ҡиммәтен юймаған һәм юймаясаҡ ижади мираҫының был юҫыҡлы гәүһәрҙәрен фарсы ҡатыш иҫке төрки һәм ғәрәпсәнән арындыртып, бөгөнгө башҡорт әҙәби телендә дәреслек китаптары итеп сығартырға, уҡытыу программаларына һалырға. Мәҫәлән, һис юғында ошоларын (филология фәндәре кандидаты З. Шәрипова хеҙмәтенән алынды): 1. Жәуа миғел кәлим шәрхе. — Пәйғәмбәребеҙ әйтемдәренә аңлатма. 2. Мәталиғы идараи исламия. Исламды башлап өйрәнеү буйынса ҡулланма. 3. Рәхмәте Илаһиә мәсьәләһе. 4. Нәсихәт. 5. Ғаҡидә (Инаныс). Ҡыҙым Зәйнәб өсөн яҙҙым. 6. Әдәби тәғлим. — Әҙәплелек тәғлимәте. 7. Ғаилә. 8. Әһле-ғыял (ғаилә). — Ҡыҙ балалар һәм ҡатындар өсөн. 9. Ғи бадате нисуан. — Ҡатын-ҡыҙҙы ололау. 10. Тәрбиәле бала. 11. Тәрбиәле әсә. 12. Шәкертлек әҙәбе. 13. Тәрбиәле ҡатын. 14. Тәрбиәле ата. 15. Мәшһүр ҡатындар. 16. Мәшһүр ирҙәр...

Күрәһегеҙ, күҙе яҙыу таный башлағандан алып балиғ булғанынаса әҙәм ғүмеренең теләгән бер миҙгеленә ауазлыҡлы, уҡыусы балаларға ғына түгел, ата-әсәләргә лә, уҡытыусыларға ла берҙәй рухи һәм әхлаҡи һабаҡ

бирерлек танһыҡ та, фәһемле лә затлы күңел байлығыбыҙ ятмыш күмелеп, күңелдәргә нур һи бә алмайынса. Башҡаса сараларыбыҙ менән бергә, бушаҡланған рухиятыбыҙҙы шулар ҡабат тултырһын, тәбиғәтебеҙгә әсә һөтө менән ҡуша һеңешһен. Шул тУрала уйланырға этәреүсе уҙамандың телгә алынған мәҡәләһен һәр йәһәттән өлгөрлөклө оранлау тип һанайым.

12.04.1992.

“Мин”де нисек еңергә?
(Йәш дуҫтарыма)

Кешемен тигән ысын кеше үҙенең ваҡ мәнфәғәтен коллективтың ихтыярына буйһондора белеүе, үҙ шәхесен донъя кендеге итеп түгел, ә йәмғиәт организмының дөйөм маҡсатҡа йүнәлдерелгән кескәйбер күҙәнәге, оло бөтөндөң бер өлөшө итеп ҡарауы менән айырылып тора. Ундай әҙәм бер ваҡытта ла “мин-мин”леген сапсытып алға сығармаҫ, башҡаларҙың хәлен ҡайғыртмай тороп, дөйөм табынға тығылмаҫ. Уның “мин”е һәр саҡта ла “беҙ”ҙән түбәнерәк ҡуйылыр, “беҙ”е юғарыраҡ торор. Ул “мин-мин”лек, ярһыу аҫауҙай тышҡа ашҡынып, ырғып-һикереп торғанда ла, күңелдең иң төпкөлөнә тимер кешән (тышау) менән көрмәп бикләнер. Халыҡ белмәй әйтмәгән: ир-егеттең йөрәгендә йүгәнле-эйәрле ат ятыр.

Ошо тУрала уйлағандабашҡорт халҡының бөтә донъяға билдәле булған бөйөк “Урал батыр” эпосы иҫкә төшә. Халыҡтың мәңгелек тәжрибәһен, аҡыл хазинаһын туплаған үлемһеҙ әҫәр был. Унда ла бит төп конфликт, юҡҡамы ни, донъялағы тәүге кешеләр — Йәнбирҙе ҡарт менән Йәнбикә ҡарсыҡтың улдарының баяғы беҙ әйткән шәхси мәнфәғәттәренең дөйөм мәнфәғәттән өҫтөн ҡуйып үлсәп ҡаралышынан башлана. Һунарға китерҙәре алдынан, *бала*ларын үҙҙәре юҡта хәтәр аҙым яһауҙан ҡурсалап, былай ти Йәнбирҙе ҡарт:

— Икегеҙ ҙә баламһыҙ,
Күҙебеҙҙең ҡарамһыҙ,
Тешәр сағығыҙ үтмәгән,
Быуынығыҙ ҡатмаған;
Ҡулға суҡмар тоторға,
Ҡошҡа шоңҡар сөйөргә,
Әле арыҫлан менергә
Миҙгелегеҙ етмәгән.
Мин ни бирһәм, ашағыҙ,
Мин ҡушҡанды эшләгеҙ;
Күнегергә һыбайға —
Ана, болан менегеҙ,
Сыйырсыҡтың тубына

Яғыл байҙы сөйөгөҙ;
Һыуһаһағыҙ уйында,
Ана, аҡ һыу эсегеҙ,
Ҡабырсаҡҡа тултырған
Ҡандан ауыҙ тартығыҙ, —
Тип быларға тағы ла
Йола өйрәтеп ҡуйған, ти.
Ҡан эсеүҙән балаларын
Тағы бер ҡат тыйған, ти.

Хуш, атай менән әсәй һунарға китә, ике улан өйҙә үҙҙәре — баш, үҙҙәре түш булып тороп ҡала. Бына шунда уларҙың кешелек сифаттарына һынау башлана ла инде:

Ҡан эсеүҙән атаһы
Ныҡ тыйғанын белһә лә,
Эсә күрмәң, тиһә лә,
Шүлгән, Уралды димләп,
Ошолай тип әйткән, ти:
— Йәнде ҡыйып һунарлау
Ҡомарлы эш булмаһа,
Һыуһағанда ҡан эсеү
Тәмле нәмә булмаһа,
Атамдар йоҡо ҡалдырып,
Көн дә икәү ҡаңғырып,
Аяҡ-ҡулын талдырып,
Беҙҙе өйҙә ҡалдырып
Йөрөмәҫ ине һунар тип.
Урал, әйҙә, булмаһа,
Ҡа бырсаҡты асайыҡ,
Һәр беренән, аҙ-аҙлап,
Берәр тамсы эсәйек, —
Ҡандың тәмен беләйек.

Урал:

— Атам һүҙен тотамын —
Мин ул ҡанды йотмамын.
Егет булып үҫмәйенсә,
Төп йоланы белмәйенсә,
Ил гиҙеп бер йөрөмәйенсә,
Ысынлап та донъяла
Үлем юғын күрмәйенсә,
Суҡмар алып ҡулыма,
Һис бер йәнде һуҡмамын,
Һөлөк һурған ҡанды мин

Ҡа бырсаҡтан йотмамын.

Артабанғыһы билдәле: туғаньның тыйыуьна ла ҡарамай, Шүлгән “ҡабырсаҡтан аҙ-аҙлап ҡанды һемереп эскән, ти”.

Быға ҡарап беҙ Уралдың тыумыштан уҡ аҡыллы һәм изге йәнле, гөмансы (гуманист) икәнен белһәк тә, Шүлгән иһә тыумыштан уҡ яуыз булған икән, тип әйтә алабыҙмы? Юҡ, минеңсә. Сөнки улар икеһе лә бер үк шарттарға ҡуйылған, икеһе лә изгелекле бер үк атай-әсәй улдары, бер оя балалары. Тимәк, тыумыштан уҡ икеһе лә изге эштәр өсөн яратылған булып сыға. Халыҡ аҡыльның төпһөҙ тәрәнлеге лә ошонда шул: ниндәй генә булып тыуһа ла, кеше үҙен йә үлемһеҙ Урал батыр, йә үлемесле Шүлгән яуыз итеп тәрбиәләй ала — барыһы ла кешенең үҙ ҡульнда, үҙ ихтыярьнда. Әлбиттә, бәләкәс Уралдың да тыйылған ҡа бырсаҡты асҡыһы, ауыҙ итеп ҡарағыһы килгәндер, ләкин һьнау мәлендә ул үҙ-үҙен ҡулға алған, дөйөм мәнфәғәтте шәхси мәнфәғәтенән өҫтөн ҡуйған — Шуға ла ул Урал батыр булып ҡалған. Ә Шүлгән, күңеленән осло беҙҙәй төртөп торған бәп-бәләкәй генә “мин”ен еңә алмай, үҙен донъя ҡануньнан өҫтөн Һанап, ер йөҙөнә үлем ағыуы сәсеп йөрөүсе шаҡшы Шүлгәнгә әүерелгән...

Әммә бары үҙ-үҙеңде ауыҙлыҡлап тотабелергә, күңелеңде ҡытыҡлаған Шүлгән хөсөтөн тыйып ҡалырға ғьна өндәйме был халыҡ ижады? Юҡ, һис кенә лә улай түгел! Бер үк ваҡытта ул ярһыу әүҙемлеккә, яҡты Урал батыр көсөн эстә килеш йүгәнләп ҡалдырмаҫҡа, ә, киреһенсә, тышҡа урғылтып сығарырға, үлемесле Шүлгәнгә ҡаршы ябырылырға саҡыра. Донъялағы иң-иң яҡты ниәт тә бит, әгәр ул тәғәйен эштә бойомға ашмаһа, яуызлыҡҡа ҡаршы торорлоҡ яҡшылыҡҡа әүерелмәһә, бер кемгә лә кәрәкһеҙ буш ҡыуыҡ хәлендә ҡала — бьна ҡайҙа халыҡтың зирәклеге!

Урал батыр менән Шүлгән мажараһы, әлбиттә, халыҡ аңы тарафьнан мәңгелеккә Һабаҡ булырҙай итеп типиклаштырылып, һәр беребеҙ өсөн үҙенең эске кешелек сифаттарьн миллионлаған дәрәжәлә ҙурайтып сағылтыусы, үҙеңә үҙеңде баҡтыртыусы көҙгө ул. Унда беҙҙең күңелдәге энә осондай ғьна яҡты һыҙат та, ҡомдай тут та тауҙай булып күренә. Һәм эш шуға китһә, йәшермәйек, был көҙгөгә ҡарап һәр кем үҙендә баяғы бәп-бәләкәй генә “мин”дең дә, тырышып-тырмашып, яҡшы сифаттар менән ҡуша һыйышып йәшәүен абайлар. Бер һүҙ менән әйткәндә, айныҡ аҡыл тигән атай-әсәйебеҙ ҡырға һунарға киткәндә күңел өйөбөҙҙөң аулаҡ түрендә Урал батырҙың дөйөмө лә, Шүлгәндең шәхси “мин”е лә бойороп ултыра, береһе Урал батыр булырға рухландырғаньнда икенсеһе Шүлгән итергә ҡырҡыша. Һәм уларҙың тәьҫиребеҙгә иң бәләкәс тип Һаналған эштәребеҙҙән үк башлана — ҡа бырсаҡты асып һемергән бәләкәс кенә ваҡиғалағы кеүек...

Ысьнлап та: иртәнән алып кискә тиклем һәр һулышыбыҙҙа, һәр аҙымыбыҙҙа беҙгә оло донъя үҙенең һьнауьн һалмаймы ни? Әгәр төптәнерәк уйлап ҡараһаҡ, кешемен тигән кеше өсөн донъялағы бер нәмәнең дә кәттәһе һәм вағы юҡ, кеше үҙенең һәр һулышьн, һәр аҙымьн оло итеп ҡарауы, һәр нәмәлә кеше булып ҡалыуы менән бөйөк. Барьнан да элегерәк үҙебеҙҙең намыҫыбыҙ алдьнда яуап бирәбеҙ, намыҫьн

хөкөмдар иткән шәхес Урал батырын үҫтерә, ә Шүлгәнен үлтерә, сөнки намыҫтан да юғары хөкөм юҡ. “Намыҫыңа тут төшһә, елегеңде ҡоротор” тип халыҡ тикмәгә әйтмәгән.

Әлбиттә, үҙ эсеңдә Шүлгән ултырыуын таныуы, унан да бигерәк, уға ҡаршы көрәшеүе еңел түгел. Был йәһәттән һәр аҙымда беҙҙе намыҫ туҡмағынан баяғы “мин” ҡурсалай. Һыуға батып барыусыға һалам тоттортҡан “ҡотҡарыусы”лай, ул беҙҙе выждан ғаза бынан күңел һаҙынабатырып арсаларға, ҡотҡарырға ғына тора. Унын баллы таҫма теленә ирреп китеп, төпкә төшөп барыуыңа күҙ йомоуҙан да еңелерәк нәмә юҡ. Әммә бының аянысы бөтәсәге көн кеүек асыҡ. Герҙәй аҫҡа тартҡан шул көстө — бәп-бәләкәй генә “мин”де нисек итеп еңергә?

Иң элек уны үҙеңдә күреп таный белеү мотлаҡтыр. Күңел төбөндәге йәшерен тауыштарҙың туҡһан туғыҙ проценты берәй эштә: “Һин шәп! Һин камил!” — тип алҡышлап торғанда ла, быға ҡаршы тауыш биргән бер генә процент ҡырыҫ ауазды ишетеү, үҙеңә иш итеү — егетлек.

Үҙемдең бәләкәй саҡтағы рәнйеткес, күңелгә ярылып ҡалған бер нисә хәтирә күҙ алдымда. Мәктәптәге йәшкәсә болотһоҙ мәлем ине, ауыл магазины артындағы иҫке нигеҙ таштарын ҡуптарып уйнап йөрөйөм. Күк йөҙө — зәп-зәңгәр, тирә-яҡ — йәм-йәшел үлән. Баҡыр һымаҡ тос һәм ҡыҙыл ҡомташтарҙы сорғотоп ебәрәм дә үргә, күк зәңгәрен ярып менгән ҡыҙыл юлаҡты күҙәтәм. Шулай әҫәрләнеп йөрөгәндә, өлкәндәрҙән кемдер берәү: “Ташла был үнәреңде, башыңды тишәһең бит!” — тип киҫәтте, ләкин туҡтаманым — үҙ башымды таш аҫтынан ҡасыра белә инем. Шул саҡ янымa дуҫым йүгереп килде, мауығып таш сөйгәнемде ҡарай башланы. Дуҫымдың башына таш төшөү ихтималын шәйләп, ҡапыл баяғы бер процент эске тауышым ҡысҡырҙы, йөрәк туҡталғандай булды. Тик мин ошо берҙән-бер ғәҙел тауышҡа ҡолаҡ һалманым, “мин-мин”легемдән иҫереп, сорғотоп ебәрҙем ташты (ни булыры билдәле)...

Икенсе аянысым — малай-шалайға эйәреп ҡыяр баҡсаһына төшөүем булды. Быны эшләргә ярамағанлығын белдем, аяғым тартмаған юлға киттем. Сөнки “мин-мин”легем үтә көслө ине, быны ул батырлыҡ юлы итеп өгөтләне. Йәнәһе, ниңә миңә башҡаларҙан кәм булырға?! Һөҙөмтәлә бик оҙаҡҡаса үкенеп, үҙем яратҡан аҡ һаҡаллы олатайҙың күҙенә күренергә ҡурҡып, ер тишегенә кереп китерҙәй булып оялып йөрөнөм.

Йәнә лә бер “ауыҙ бешеү”ҙе байтағыраҡ үҫеп еткәс, мәктәптә уҡып йөрөгәндә татыным. Ауылда иҫке-моҫҡо йыйыусы “Утильсырье» агенты туҡталғайны, макулатура тапшырып ҡармаҡ алыу теләге дәртләндерҙе. Йыйып килтергән ҡағыҙҙарым елле суртан ҡармағына “тартмағас”, йомолоп йүгерҙем кире, әсәйем өйҙә юҡлыҡтан файҙаланып, шүрлектәге “боронғо” китаптарға ябырылдым. Гәрсә үҙем танымаған «ғәрәпсә” яҙыуҙарҙың кистәрен һил минуттарҙа әсәйем ҡысҡырып уҡығанда ҡатнаш әсә телендәге аңлайышлы шиғырҙар булып яңғырауын белһәм дә, Шүлгән ҡотҡоһо тилерткән туҡһан туғыҙ процентлы йәшерен тауышҡа буйһондом. Һәм был еңел аҙымымдың күңелемә ниндәй ауыр тирмән ташы булып ятҡанлығын йылдар үткәс, байтаҡ нужа һурпаларын эскәс

кенә аңланым. Бәхетиһәң, беҙгә күрше ауылда ғына, ата-бабаларыбыҙ менән ҡатнашып, тарих буйынса бөгөн бөтәбеҙгә мәғлүм шағир Һибәтулла Салиховтың улы йәшәгән, ә икенсе боронғо шағирыбыҙ, Ғәбделмәнех Ҡарғалы, үҙемдең бик яҡын олатайымдың туған олатаһы булған. Бәлки, мин шуларҙың бөгөн ғалимдар бик тырышып, хәстәрләп эҙләгән, ләкин таба алмаған ҡулъяҙмаларын алмаштырғанмындыр тутыҡ суртан ҡармағына?.. "Мин"де өҫкә ҡарпытыусы бәләкәй генә бер ҡылыҡтан шиғриәтте бөлдөрөүгә илтеп еткергән был ваҡиға, уға ҡалһа, дуҫыңдың башына күрәләтә таш төшөрөүҙән ҡайһы яғы менән кәм?!. Эйе, миңә лә аҙымларҙан алда беренсе сиратта ул аҙымымдың башҡалар өсөн ниндәй игелек килтерәсәген уйлап ҡарау кәрәк булған икән шул.

"Мин-мин"лектең йәмһеҙ шауҡымы бөгөн дә бит бәғзеләребеҙҙе, ил башҡарған оло эштәребеҙ фонында ҡарпып сығып, аҙым һайын ҡыйырһытҡыс ваҡлығы менән миктәтә. Үкенескә ҡаршы, башҡаларҙың башына таш төшөрөү бәләһебеҙҙә генә ҡалмаған, бөгөнгө яҡшы малайҙарҙың һәм ҡыҙҙарҙың бәғзе бер ҡылыҡтарында ла һырлана. Ул, әйтерһең, елеп барған аҫыл бәйге арғымағының ял-ҡойроғона йәбешкән әрһеҙ тегәнәк.

Үҙем йәшәгән йорттағы бер нисә малайҙы һәм ҡыҙҙы — яҡты күңелле уҡыусыларҙы беләм. "Дүртле", "бишле" алып ҡына уҡыйҙар, тәртипле тота үҙҙәрен. Әйткән һүҙҙәреңә һәр саҡ ҡолаҡ һала, ҡушҡан йомошоңдо ла үтәүҙән баш тартмай. Бер һүҙ менән әйткәндә, һәр ҡайһыһы кемгәлер өлгө булырлыҡ. Әммә шул уҡ ваҡытта мин уларҙың да ҡайһы бер айырым мәсьәләләрҙә үҙҙәренең ыңғай һыҙат-төҫтәрен юғалтыуҙарын, тыштан — бер, эстән икенсе төрлө йәшәүҙәренә иғтибар иттем. Был, әлбиттә, аяныс, әммә шулай.

Беҙҙең тирәлә йәш кенә йүкә ағастары үҫә, йыш ҡына шул ағастарға аҫылынып-бәүелеп маташыусы ҡулсырҙарҙы күрергә тура килә. Билдәле: өлкәндәр һәр аҙым һайын күҙ-ҡолаҡ була алмай. Һөҙөмтәлә йүкәләрҙең ботаҡтары ҡайырыла, хатта билдәре һына. Ошо хаҡта һөйләшкәндә баяғы яҡшы уҡыусылар минең менән ҡуша һыҡтанып һыҙланалар, бошоноп нәфрәтләнәләр. Әммә бер нисә тапҡыр күҙгә салынды: хулигандар ағас ботағын ҡайырғанда күрмәмешкә һалышып үтеп китәләр. Мин уларҙың был минутта минең һымаҡ уҡ аяныслы нәфрәт хисе кисереүҙәренә шик тотмайым. Шулай ҙа аңлашыла: азаматтарымдың игелекле нәфрәт хисен бәләкәй генә "мин"дәре тышҡа сығармай баҫылдыра: "Ниңә мин? Ниңә мин әйтергә тейеш? Мин!.." — Хулиган менән бәйләнеүгә ҡарағанда, күҙ йомоп уҙып китеүе еңелерәк шул. Унан килеп, башҡалар шым ҡалғанда ниңә ул бер үҙе тыпырсынырға тейеш әле? Бәлки, хулиган ағасты һындырыуға тиклем үк барып етмәҫ. Бәлки, һындарһа ла, ағас кире ялғанып үҫеп китер... Намыҫын тыныслатыу өсөн, кеше бына ниндәй ахмаҡ юрауғабарып етә! Ләкин һындырылған ағас та, намыҫ та күп ваҡытта кире ялғанмай...

Йәки өлгө булырлыҡ йәш геройымдың үҙен өйҙә нисек тотоуын ҡара. Әйтәйек, эштән арып ҡайтҡан уның әсәһе, ә ул өйҙө йыйыштырып ҡуйырға ла "онотҡан". Ярай, бының да үҙ сәбәбе бар икән, ти.

Кәйефһеҙләнгән әсәһенә шуны һаҡлыҡ менән генә аңлатыу, йә ҡалдырған эшенә дәррәү тотонаһы урьнда, йәш геройыбыҙ баяғы “мин”леген иҫкә төшөрә, әсәһенең хәтерен уғата ҡалдырып, “туньның тиҫкәреһен әйләндерә” Дөрөҫ, үҙенең хаҡ түгеллеген эстән генә аңлап-белеп тора ул, ләкин бер аҙым сигенергә баҙнат итмәй. Хатта ҡыҙып китеүҙән һыуьнғас та, ҡылығьна үкенгәс тә төҙәтмәй үҙ хатаһьн, ошо хаҡта иҫенә төшөргән оләсәһен “ҡатып ҡалған иҫке заман ҡалдығы, дин ҡоло” тип битәрләй... Ә бит беренсе осраҡта ла, икенсеһендә лә йәш геройыбыҙ белә-күрә тороп ялған аҙым яһаны, ялған аҙымьнан кире әйләнеп ҡайтмай, ул ялғанды икеләтә арттырҙы. Тормошта иһә абайламай яҙабаҫыуҙар ҙа етерлек. Кешемен тигән ысьн кеше бьндай саҡта ла бит кешеләрҙең киҫәтеүенә ҡолаҡ Һала, хатаһьн төҙәтә ала. Үҙең күреп яҙабаҫҡанды үҙең белеп төҙәтеү бер егетлек булһа, кеше күрһәткән яҙығыңды танып күтәрә белеү — икеләтә егетлек.

Бәп-бәләкәй генә “мин”дең үҙен донъя кендеге тип дәғүә һалғаны ла бар. Мәктәптәге өпөр-яңы парталарға, дәреслек биттәренә, буяуҙары балҡып торған трамвай һәм вагон ултырғыстарьна, торлаҡ йорттарьның подъездарьна, тере тәнде бысаҡ менән йәрәхәтләп киҫкәндәй, үҙ исемдәрен ярып яҙған бәндәләрҙең ҡылығы шул ахмаҡ дәғүә түгелме?! Хатта бөтә донъяға билдәле Шүлгәнташ мәмерйәһендә лә шундай “донъя кендектәре»нең шаҡшы ҡултамғалары бар. Бьндай фәҡир йәнле әҙәм боронғо Грециялағы бер “мин”ле бәндәне — үҙ исемен данлау өсөн мөһәбәт Һарай Пантеонды үртәп яндырған Геростратты хәтерләтә.

Әлбиттә, һәр шәхестең үҙен донъя кендеге итеп күрергә, исемен барса ғәләмдәргә данлатырға теләүе насар ынтылыш түгел былай. Мәсьәлә фәҡәт Шунда: нисек итеп? Геростратлыҡ, йомшаҡ ҡьна әйткәндә, бер кешегә лә килешмәй. Үҙен кешелек донъяһьна, һис юғьнда яҡьндарьна, дуҫ-иштәренә күрһәткән игелеге, яҡшы кешелек сифаттары менән данлаһьн кеше. Шул арҡала исеме телдән-телгә күсеп маҡталһьн (Урал батыр кеүек). Бынан тыш, исемдәрҙе йәнә ҡағыҙ биттәренә яҙып, ташҡабаҫып сығарып маҡтау ысулдары ла бар. Яҡшы уҡыған, эштәрендә үҙен ысьн совет кешеһе итеп таныҡтанбайтаҡ ҡьна малайҙарҙың һәм ҡыҙҙарҙың күркәмлеге гәзиттәргә, журналдарғабаҫылып сыға. Шулай ҙа һәммә кешене лә яҙып бөтөп булмай унда, ташҡа баҫылмай ҡалған исемдәр менән нимә эшләргә? Парталарға һәм китап биттәренә, подъездарға һәм вагондарға ҡултамға Һалыуҙан нисек итеп тыйылырға?

Беренсенән, кешеләрҙең күңелдәренә яҡты нур булып яҙылһын һинең исемең.

Икенсенән, эсеңдәге “мин-мин”легең иҙел даръялары кеүек тулып-ташып барғанда ла ҡулыңа хужа булырға, хәрефтәреңде кешеләрсә тейешле, кәрәкле урьндарға ғьна һыҙғаларға, тип уйлайым мин. Ә инде ташҡьн иҙелеңде тыйыр әмәл ҡалмаһа, барыбер ҡулыңды кешеләргә кәрәкле эшкә егә бел. Әйтәйек, мин бер йәш дуҫымдың үҙ ҡулы менән яҙған исемен күргән һайьн һоҡланам: ул исем — “бишле” генә алып уҡылған черчение дәрестәренең таң ҡалырлыҡ итеп һыҙылған чертеж мөйөштәрендә, йә булмаһа малайҙың үҙ ҡулы менән эшләгән альбом

тышлыҡтарында. Ә үҙ исемен үткер бәке осо менән соҡоп яҙырға яратыусы бер ныҡышИән — ул да тапҡан теләгенә ирешерлек бер шәп юлды: ишек алдындағы кескәй дуҫтарына ул ағастан һырлап-семәрләп төрлө уйынсыҡтар яһай, семәр араһына биҙәкләп үҙ исемен дә айбарлай. Кем белә, үҫкәс тә ул, бәлки, кескәйҙәрҙең һөйөклө тылсым эйәһе булып ҡалыр — талантлы рәссәм, скульптор булып китер, исемен башҡа кешеләр данлап яҙыр... Эйе, исемдәрҙе кеше рәүешле яҙыу ысулдары күп. Шуныһы асыҡ: яҡшы кеше, Ҡояш шикелле, *башҡала*рҙы йылытып ҡына яҡтыра, ә Ҡояшты, йөҙөнә исеме уйып яҙылмаһа ла, бөтә донъя ғаләме Ҡояш тип белә. Халыҡ даһилығы тыуҙырған Урал батыр образы ла Ҡояш менән тиңләрлек, мәңге фәһем алырлыҡ: ауыҙына уртлап аған Йәншишмәне, үҙе үлем хәлендә лә, йотоп ебәрмәй батыр — үҙ мәнфәғәтен генә ҡайғыртмай, ә тәү баштабөтә донъяның именлеген яуыз Шүлгәндән ҡурсалап, үлемһеҙлек һыуын тирә-яғына бөркә, шуның менән үҙе үлеп бүтәндәргә ҡот бирә. “Урал батыр” эпосының төп мотивы шуны раҫлай: кеше — барыһынан да көслө, яҡшылыҡ еңелмәйәсәк. Үҙең белмәй ҡалғанда ла, башҡалар атап әйтерлек һәм бармаҡ төртөп күрһәтерлек ысын һәм ҙур “мин”еңде табырға кәрәк!

> Барығыҙға шуны әйтәм:
> Яҡшылыҡ булһын атығыҙ,
> Кеше булһын затығыҙ;
> Яманға юл ҡуймағыҙ,
> Яҡшынан баш тартмағыҙ!

Урал батырыбыҙҙың ошо ҡанатлы һүҙҙәрен аҡҡа күсереп ултырғанда, тәҙрәм алдындағы йыуан аҡ тирәктең олонона үҙ исемен бәке менән яйлап ҡына соҡоп яҙып торған ҡара танауҙы күреп, янына сығырға тура килде. Мине абайлау менән үк эшен туҡтатты малай, бәкеһен кеҫәһенә Һалды. Шунда ятҡан оло ташҡа ултырышып һүҙ башлағас, минең өгөт-нәсихәттәрҙе лә ихлас тыңланы кеүек. Ул хатта үҙ ҡылығынан оялған да кеүек ине. Тамам тулҡынланып китеп, мин уға Урал батыр һымаҡ дөйөм илең, халҡың менән айырылмаҫ йән булып Йәшәүеңде тойоуҙың ниндәй оло бәхет, Еңелмәҫ көс икәнен әйтеп һалдым. Тарихҡа инеп китеп, Бөйөк Ватан һуғышын телгә алдым, һуңғы йылдарҙа иһә үҙемдең Башҡорт кавалерия дивизияһының дошман тылында һуғышып үткән эҙҙәрен буйлап йөрөүемде, ундағы тетрәткес фиҙакәрлек, ҡаһарманлыҡ өлгөләрен белеүемде һөйләнем. Моисеев Виктор Иванович тигән ун ике йәшлек малай, әсәһенең берҙән-бер генә улы, Шайморатов дивизияһының ҡурҡыуһыҙ темеҫкене (разведчигы) була, дошмандар яғына күп тапҡыр үтеп инеп, ундағы ғәскәр, штабтар, эшелондар тураһында мәғлүмәттәр килтерә. Аҙаҡтан фронт һыҙығында фашистар ҡулына эләгеп, гестапола язалап үлтерелә. Ҡыйыу пионер һуңғы сиккәсә Ватанға, гражданлыҡ бурысына тоғро ҡала. Үҙ исемен һис ҡасан да һис бер ағасҡа ла үҙ ҡулы менән соҡоп яҙмаһа ла, йәш батырҙың исеме мәңге-мәңгелеккә совет халҡының Бөйөк Ватан һуғышы тарихына яҙыла... Витя Моисеев,

әлбиттә, үлемһеҙлегенә барғанда ла һис тә был хаҡта уйламағандыр. Халҡың өсөн өнһөҙ-тынһыҙ аттай егелеп эшләү, кәрәк саҡта исемеңде әйтмәйенсә лә унын хаҡына йәнеңде фиҙа ҡылыу — өсләтә ҙур егетлек!

Шул саҡ киске офоҡто ярып көмөш төҫлө ер юлдашы йүгерҙе. Икебеҙ тиң күккә салҡайып бағып, әҫәрләнеп, көмөш һыҙат юйылғансы тын ҡалдыҡ. Серле йыһан юлдарынан китеп барған батыр космонавтарыбыҙ малайҙы ла, мине лә, тере олоно теленгән аҡ тирәкте лә күҙәтеп үтте һымаҡ. Ошо тойғоларымды ҡеүәтләгәндәй, ҡара танаулым көтмәгәндә ағасҡа ҡарап алды.

— Их! — тип көрһөндө ул, мине тамам шаңҡытып. — Исемде яҙыуын яҙғас, Ер шарының ҡотобонан экваторынаса экскаватор менән соҡоп яҙаһы ине ул. Космонавтар күрерҙәр, белерҙәр ине ***МИНЕ,*** исмаһам!..

Урал батырҙар тыуған ерҙә тыуып-үҫеп, бәп-бәләкәй генә “мин”ен сикһеҙ күккә ашырырға тырышҡан малай ифрат аяныс тойолдо миңә. Бейектәрҙән ҡарағанда хатта Урал тауҙарының да бер бөтөн ер булып тигеҙләнеүен, фәҡәт бөтәбеҙҙе дөйөм кәүҙәләндермеш Ер шарының ғына күренеүен бер саҡ ул да һис шикһеҙ аңлаясаҡ.
18.09.1976.

Нимә ул хикәйә?

Миңә ошо көндәрҙә генә “Башҡортостан пионеры» балалар гәзите редакцияһына күпләп килгән хаттарҙың бер өлөшө менән танышырға тура килде. Әҙәбиәттең эпик төрөнөң хикәйә жанры менән ҡыҙыҡһыныусы, үҙҙәре лә хикәйә яҙырға тырышыусы уҡыусыларҙың ғәмле сәләме ине улар. Һәр береһенең туған әҙәбиәтебеҙҙе яратыуы, иджад илһамы менән янып йәшәүе ҡыуандырҙы. Шуныһы ғына үкенес: ҡайһы бер хаттарҙа граматик хаталар тулып ята. Бәғзе бер уҡыусылар, редакцияға исемләп хат яҙып та, аҙағына үҙҙәренең тулы исем-фамилияларын ҡуйырға онотҡандар. Ә был иһә, хат авторының иғтибарһыҙлығын күрһәтеү менән бергә, редакцияға улар менән элемтә тотоуҙы ҡыйынлаштыра.

Бына шундай әҙәбиәт һөйөүселәрҙең сәләменең береһе. Мәләүез районы Юлдаш урта мәктәбе V синыфының Бәшир исемле уҡыусыһы (“Йәйге көн” тигән һүрәтен дә ебәргән), үҙенең фамилияһын атамаһа ла, әҙәбиәт менән ныҡлап шөғөлләнеүсе йәштәштәрен дә ҡыҙыҡһындыртырлыҡ һорау бирә: “Ҡәҙерле редакция, һеҙ миңә хикәйә ҡанундарын ебәрә алмаҫһығыҙмы?” Ә Белорет районы баҡый 8 йыллыҡ мәктәбенең шулай уҡ V синыф уҡыусыһы баҡыева Рифә иһә юл башсыбыҙ Владимир Ильич Лениндың һүрәтен һәм уға арнап бик ихлас йыр ижад иткән:

Урал тауҡайҙары киң икән,
Урал буйы уйпат ер икән.
Илебеҙгә нур балҡытты Ленин —

Мең аҡыллы батыр ир икән.
Ҡыҙарып та сыҡҡан, ай, Ҡояштың
Нурҡайҙары төшә диңгеҙгә.
Ирекле лә рәхәт тормош бирҙең,
Юлбашсыбыҙ Ленин, һин беҙгә.

Ошолай йырҙар сығарыусы Рифәне лә борсой икән баяғы бәшир әйткән мәсьәлә. “Минең һеҙгә бер һорауым бар ине, — тип тамамлай ул хатын. — Хикәйәләрҙә тормошта булған хәлде яҙалармы, әллә булған хәлгә оҡшатып ҡынамы?”

Был уҡыусыларҙың хикәйәгә ҡарата көслө ҡыҙыҡһыныуҙары, моғайын, дәреслектәге йәки уҡытыусы биргән мәғлүмәттәр менән генә ҡәнәғәтләнмәй башлау билдәһелер. Бик тәбиғи күренеш, сөнки белем ул бары менән сикленмәҫкә, ә һаман өҫтәлергә, артабарырға тейеш. Ындай зирәк ҡыҙҙарға һәм малайҙарға беренсе осраҡта ҡулланырға әҙәбиәт белгесе Ким Әхмәтйәновтың 1971 йылдабашҡортостан китап нәшриәтендә баҫылып сыҡҡан “Әҙәбиәт теорияһы” китабын күрһәтеп китәйек. Уны улар мәктәп йәки ауыл китапханаларында табырҙар, бик күп һорауҙарына шунан дөрөҫ яуап та алырҙар.

Шулай ҙа нимә һуң ул хикәйә?

Быға яуап эҙләрҙән элек әҙәбиәттең бер төрө — “эпос” тигән һүҙҙе асыҡлап китәйек. Ғалимдар билдәләүенсә, эпос — ил һәм халыҡ тормошоноң ҡатмарлы яҡтарын киң масштабта, тәрәнлектә һәм төрлө яҡлап хикәйәләгән, ҙур тарихи осорҙо иңләгән, эҙмә-эҙлекле сюжетҡа ҡоролған әҫәр ул (мәҫәлән, халыҡ ижадындағы “Урал батыр” эпосы, хәҙерге әҙәбиәтебеҙҙәге киң ҡоласлы повесть һәм романдар). Проза менән дә, шиғыр менән дә, шиғыр һәм проза аралаш та яҙылырға мөмкин ул. Әкиәт, бәйет, хикәйә, мәҫәл, баллада, очерк, повесть, роман, эпопея тип билдәләнгән әҫәрҙәр йәмғеһе ана шул эпостың төрлө жанрҙары булып тора ла инде.

Хикәйә — шул эпик әҙәбиәттең ғәҙәттә бер һәм бер-ике ваҡиғаға нигеҙләнгән, проза менән яҙылған кескәй жанры. Күләме кескәй булыуға ҡарамаҫтан, ул үҙ эсенә башланышы, хәл ителеше һәм аҙағы булған бөтөн бер хәл-ваҡиғаны һыйҙыра. Хикәйәлә ғәҙәттә төп герой тирәһендә ике-өс персонаж Ғына ҡатнаша, уларҙың характерҙары һәм ҡылыҡтары ла әҫәрҙең төп идеяһын асырға ярҙам итерҙәй генә күләмдә һүрәтләнә. Әҫәр үҙәгендә киҫкен конфликт — ҡаршылыҡтар дауы ята. Ә бер генә ваҡиға аша ла тормоштоң иң әһәмиәтле яҡтарын асып биреү — хикәйәнең уңышы...

Бәшир һораған “хикәйә ҡанундары”, әлбиттә, был әйтелгәндәр менән генә сикләнмәй, ул — тормоштоң үҙе кеүек үк сикһеҙ. Оҫтарабарған Һайын, һәр яҙыусы уны үҙенсә аса. Шулай уҡ Рифә биргән һорау ҙа һәр хикәйәсе тарафынан һәр хикәйәне яҙғанда, ул хикәйәне яҙырға этәргән сәбәптәргә бәйле рәүештә, төрлөсә хәл ҡылынырға ихтимал. Йәғни хикәйәләрҙә “булған хәл”де лә яҙалар, “булған хәлгә оҡшатып” та яҙалар. Шулай уҡ икеһен бергә аралаштырып та ебәрәләр. Ҡыҫҡаһы, бөтә

хикәйәләр өсөн дә дөйөм алымдар һәм ҡанундар булһа ла, һәр хикәйәсе яҙырға үҙенең шәхсәнә алымы менән тотона, һәр хикәйә үҙенең махсус ҡануны менән тыуа.

Әлбиттә, һәр әҙиптең үҙенең оҫталыҡ серҙәре — ижад лабораторияһы бар, яҙыусының үҙенән башҡа уны белеүе ҡыйын. Шуға күрә, Рифәгә һәм башҡаларға бына тулыраҡ аңлатып биреү өсөн, кемдәрҙеңдер лаборатория ишегенә ҡағылмай, үҙемдең кескәй ишегемде асырғабаҙнат итәм.

1967 йылда минең “Урман бабай” исемле хикәйәм айырым китап булып баҫылып сыҡҡайны. Уның төп йөкмәткеһе шунан ғибәрәт: Урман бабай ҡола яланды баҡса итергә хыяллана, төрлө ҡаршылыҡтар кисерә. Пионерҙар Уға ярҙамға киләләр. Урман бабай шул изге юлда һәләк була, ләкин улар ултыртҡан ағастар гөрләп үҫә далала. Хикәйә бер пионер — лирик герой исеменән һөйләнә.

Ысынлап та булғанмы был Урман бабай? Булған да, булмаған да.

Минең тап шул Урман бабай һымаҡ үҙе теләп муйынына урмансы мәшәҡәттәрен йөкмәгән, тынғыһыҙ йән, элекке ҡыҙыл партизан Хисамитдин олатайым бар ине. Тик уны, Урман бабай тип түгел, ә, муйынын аҡтар ҡылысы сабып, ҡыйшайып ҡалғанлыҡтан, Ҡыйышмуйын тип йөрөтөрҙәр ине. Урман бабай образы, уның бөтә күрмештәре, хәл-ваҡиғалары менән ҡуша, шул Хисамитдин олатайҙан күсереп алынған да инде. Йылға буйындағы кескәй йәшел туғай ҙа, ҡола ялан да, тирәкһеҙ ҡалған Тирәкле ере лә — үҙебеҙҙең ауыл күренештәре. Әммә хикәйәгә драматик аһәң һалған ике хәл — лирик герой-хикәйәсенең балта сабып аҫыл тирәкте имгәтеүе һәм Урман бабайҙың фажиғәле үлеме генә ысынбарлыҡта булмаған, ә, Рифә әйткәнсә, “булған хәлгә оҡшатып” яҙылған. Әҫәргә киҫкен конфликт биреү, йәғни ҡәҙимге тормош ваҡиғаларынан художестволы әҙәби әҫәр — хикәйә тыуҙырыу өсөн ул шулай эшләнгән, бер баҫҡысҡа юғарыраҡ күтәрелгән. Шунһыҙ был тормош материалы ябай очерк, йәки мәҡәлә генә булып ҡалыр ине. (Әммә тормош материалы үҙе генә лә ҡай саҡ бынамын тигән хикәйә була ала, мәҫәлән, Алексей Толстойҙың “Рус характеры”). Ә ошо йылдарҙа “Пионер” журналында баҫылған, мәктәп дәреслегенә ингән “Урал моңо” хикәйәһендәге геройҙы һәм ваҡиғаларҙы мин халҡыбыҙҙың ике мәшһүр ҡурайсыһынан — Йомабай Иҫәнбаевтан һәм Ишбулды Дилмөхәммәтовтан алып яҙҙым, икеһенең образын бергә уҡмаштырҙым. Уларҙың беренсеһе егерменсе йылдарҙа уҡ башҡорт ҡурайын Парижға алып сыҡһа, икенсеһе уны шул уҡ Париж сәхнәһендә беҙҙең көндәрҙә данланы... Ҡайһы бер хикәйәләремдә, тормоштабулған, үҙем күреп белгән айырым кеше һәм ваҡиғаларға ғына таянмайынса, тормоштабулыу ихтималлығынан сығып, Рифә әйткәнсә, “булған хәлгә оҡшатып” ижад итергә тырыштым... Һуңғыһы өсөн, әлбиттә, шаҡтай әҙәби әҙерлек һәм оҫталыҡ, тормош тәжрибәһе кәрәк.

Тормош материалы, тигәндән, редакцияға килгән, авторҙары тарафынан “хикәйә” тип билдәләнгән ҡульяҙмалар араһында ысынлап та туранан-тура тормоштан алып яҙылғандайҙары ла бар. Бына, мәҫәлән,

Ҡырмыҫҡалы районы Шәрипкүл ауылынан Әфләтүнова Нәжибәнең “Йәйге каникулдар” тигән әҫәре. Марат менән Айрат исемле тырыш малайҙарҙың Йәйге каникул ваҡытында ең һыҙғанып колхозға бесән, япраҡ аҙыҡтар етештереүҙә ҡатнашыуҙары, ҡырҙа эшләгән сөгөлдөрсөләргә тәмле шишмә һыуы ташыуҙары, шуның менән өлкәндәрҙең ҡайнар рәхмәтен ҡаҙаныуҙары хәбәр ителә унда. Ә Ишембай районы Ҡолғона урта мәктәбенең IV синыф уҡыусылары Р. Шәрипова һәм И. Ғүмәрова (әллә улар икеһе бер кеше инде, сөнки ҡулъяҙмалары ла, әҫәрҙәре лә ике тамсы һыуҙай бер-береһенә оҡшаш!..) “Еләккә барғанда” һәм “Бәшмәккә барғанда” тигән яҙмаларында йәйҙең йәмле бер көнөндә кескәйҙәрҙе сәхрәгә алып сығыуҙарын, күңелле ял итеүҙәрен һөйләйҙәр. Матур ғына яҙылған был өс әйбер, авторҙары тарафынан “хикәйә” тип аталһа ла, баштараҡ беҙ ҡыҫҡаса аңлатып киткән хикәйә жанры ҡанундарына яуап бирмәйҙәр әле. Әгәр уларҙа телгә алынған ҡыҙҙарҙың һәм малайҙарҙың исемдәре һәм эштәре уйлап сығарылған булмаһа, хаҡ булһа, был яҙмалар, минеңсә, шул уҡыусыларҙың игелекле, яҡшы эштәрен хәбәр итеүсе мәҡәләләр рәүешендә гәзиттә баҫылырға ла лайыҡлы (Ә быны һәр осраҡта, билдәле булыуынса, гәзит редакцияһы үҙе хәл ҡыла). Миңә ҡалһа, бигерәк тә Р. Шәрипованың еләк тураһында: “Балаҫ кеүек түшәлеп ята. Турғай башы ҙурлыҡтары ла бар”, — тип, тап халыҡсан, образлы итеп тасуирлауы оҡшаны. Был уҡыусыларға улар һөйгән әҙәби ижад эшен, бәлки, үҙҙәре тирәһенән гәзиткә хәбәрҙәр яҙып тороуҙан башларғалыр?

“Оло һүҙен алмаған — оролған да бәрелгән” тигән билдәле халыҡ мәҡәленән мәҫәлгә оҡшаш кинәйәле, ғибрәтле хикәйә тыуған бына. Мәҡәлдән алып хикәйә яҙыу һис тә яңылыҡ түгел-түгеллеген һәм ул әҙәбиәткә лә әллә ни яңылыҡ өҫтәмәй. Шулай ҙа был — йәш авторыбыҙҙың һиҙелерлек уңышы. Ул, бәлки, пионер гәзитендә донъя күрергә лә хаҡлылыр. Ыҡсым ғына был әҫәрҙе Бөрйән районы Нәби ауылынан VI синыф уҡыусыһы Хисамитдинова Рәғиҙә яҙып ебәргән. Әҙәбиәттең әсәһе булған халыҡ ижадына таянып эш итеү кеүек ошондай файҙалы сифат Миәкә районы Баязит урта мәктәбе уҡыусыһы Фәтхитдинова Сәбилә, Нуриман районы Баш Шиҙе ауылы Рәхмәтуллина Лилиана, Ғафури районы Сәйетбаба ауылы Ғәзизова Зөбәржәткә лә бик хас. Тәүге ике авторҙың әҫәрендә, эпик жанр ҡануны талап итеүенсә, ваҡиғаның башланышы, хәл ителеше булһа ла, ваҡиғаны бөтәйтеүсе аҙағы дөрөҫ табылмаған да ҡуйған. Сәбиләнең был “Төлкө, бүре, айыу һәм ҡарт” тигән ҡыҙыҡлы ғына әкиәтендә яныуарҙар хәйләһенә тарыған ҡарт һүрәтләнә. Ҡартлас уларҙы, хәйләкәр яныуарҙарҙы, шундай уҡ хәйлә ҡороп еңәһе урында, тупаҫ рәүештә көс ҡулланып үлтерә, шуның менән автор әкиәт ҡанунына ла ҙур хилафлыҡ килтерә. Сөнки үҙеңдән көсһөҙҙәрҙе көс ҡулланып еңеү — егетлек түгел һис тә. Тиккәме ни әкиәттәрҙә батырҙар көрәшкә сығыр алдынан дошмандарына: “Алышмы, атышмы?” — тип һөрән һалышыр булғандар һәм килешеү буйынса эш ҡылғандар. Әгәр ҙә бер яҡ алышҡа яланғас ҡул һыҙғанып килгәндә икенсе яҡ уны уҡтан атып йыҡһа, йәки суҡмар һуғып үлтерһә, әкиәт тә тыумаҫ ине. Беҙ телгә алған әкиәт, үкенескә ҡаршы, ана шулай боҙолған. Автор,

моғайын, төҙәтеү сараһын табыр, ысын әкиәт килеп сығыр. Уңыш теләйек уға.

Лилиянаның “Һуған утағанда” тигән юморескаһының урта-үҙәге лә “эт эсәге” тигән ҡыҙыҡ исемле үлән тирәһендә ҡыҙыҡлы ғына сырмалышҡан, әммә автор шуны аҙағынаса ҡыҙыҡлы итеп илтеп еткерә алмаған. Һөҙөмтәлә осланмай ҡалған әҫәр. Ә Ғәзизова Зөбәржәттең “Батыр ҡуян” күләмәсе яҡшы тәьҫир ҡалдыра, былар араһында үҙенең тамамланғанлығы менән айырылып тора. Уны, башҡалар ҙа уҡып фәһем алырлыҡ булғанлыҡтан, ошо уҡ гәзиттә ташҡа баҫтырып сығарырға тәҡдим иттем.

Билдәле булыуынса, нәҫер жанры шиғыр менән хикәйәнең аралығында тора, уға ике жанрҙың да сағыуҙан-сағыу һыҙаттары яғыла. Шуға күрә ул тәрән хистәргә бай була, шиғыр кеүек уҡыла. Нуриман районы Яңы Күл урта мәктәбенең VIII синыф уҡыусыһы Закирова Нәжибәнең “Тәьҫир” тигән әҫәрен, гәрсә ул үҙе “уймаҡ хикәйә” тип тамғалаһа ла, мин ана шул нәҫергә яҡынырағ торғандай тоям. Исемен дә, автор әгәр үҙе риза булһа, нәҫергә ярашлы үҙгәртеп, әҫәрҙә ҡабатланыусы шиғри юлдар — рефрен буйынса “Ауыл уртаһында бер һәйкәл бар...” тип атау уңышлы булыр ине. Был нәҫер, тәжрибәһеҙ ҡулдан яҙылыуына ҡарамаҫтан, ихласлығы менән тулҡынландыра. Саҡ ҡына ҡыҫҡартып редакторлағанда, гәзит уҡыусыларына ла тәҡдим итеп булырлыҡ.

Көндәлек тормоштан алып яҙылған әҫәрҙәр араһында усалы районы Ҡунаҡбай урта мәктәбе уҡыусыһының (автор исем-фамилияһын ҡуймаған) “Рәхимәнең шатлығы” һәм Баймаҡ районы Ҡарамалы 8 йыллыҡ мәктәбенең IV синыф уҡыусыһы түле баева Миңзифаның “Дәрескә бармағас”, Благовар районы Яңы Абзан ауылының VII синыф уҡыусыһы Ғилманова Диләнең “Тимурсылар” тигән хикәйәләре лә бар. Тәүгеһе — иптәштәре ярҙамында тырышлыҡ менән алгебранан ауыр миҫалды эшләп, уңышҡа ирешеү шатлығын кисергән ҡыҙ тураһында. Әммә авторҙың ҡәләме шымарып етмәгән, дөрөҫ һөйләм төҙә белмәү һиҙелә, шуға күрә стилистик ҡытыршылыҡтар бик күп (бер бит ҡулъяҙмала ғына, мәҫәлән, ун дүрт тапҡыр “эш” һүҙе ҡабатлана — һөйләм Һайын бер нисә!). Икенсе авторҙың әҫәре иһә шул теманың киреһен — ыңғай яғынан алып хикәйәләй, фәһемле генә ҡоролған. Ләкин автор хикәйәһенең башланышын һәм аҙағын уйлап еткермәгән саҡ ҡына. Әгәр уны матбуғатҡа әҙерләп редакторларға тура килһә, әҫәр геройы Маратты мин, футбол түгел, ә, малайҙар менән көрәштереп, аяҡ салыш уйнатыр инем дә, стилистик яҡтан бер аҙ шымартып, аҙағын да шул аяҡ салышҡа бәйле тамамлап ҡуйыр, хикәйәнең исемен дә “Аяҡ салыш” тип атар инем. Хикәйәнең геройы, дәрес әҙерләү урынына аяҡ салыш уйнап йөрөп, үҙенә үҙе аяҡ саған булып сыҡһын. Темаһы яңы булмаһа ла, тормошсан, ғибрәтле.

Телгә алынған өсөнсө әҫәр ҙә үҙенең ихлас яҙылышы, ҡыҙыҡһынып уҡылыуы — темаһы менән мөһим. Һәр кемде лә тулҡынландыра һәм биҙәй торған игелек — ауылдағы яңғыҙ әбейгә йорт эштәрендә уҡыусыларҙың ярҙам итеүҙәре хаҡындабара унда һүҙ. Авторҙың да шундай

кешелекле, яҡшы малайҙар һәм ҡыҙҙар менән һоҡланыуы күренеп тора. Аҙыраҡ редакторлап ипкә килтергәндә, бындай хикәйәләрҙе, моғайын, гәзит уҡыусылар ҙа яратып ҡабул ҡылыр.

Инде һүҙ Хәйбулла районы Ғәлиәхмәт урта мәктәбенең VIII синыф уҡыусыһы Суфия Кинәлиева ижады хаҡында. "Лейтенант ҡыҙы" тигән оҙон ғына хикәйә яҙып ебәргән ул.

"— Стоп! Ҡуҙғалаһы булма! — тип *екеренгән* тауышҡа тертләп ҡуйҙы Мәрйәм. Ул *эргәһендәге бәләкәй генә ҡыуаҡ аҫтына боҫто*". — Шулай башлана әҫәр һәм баштан уҡ автор ебәргән һаҡһыҙлыҡ төртөлә күҙгә: *екеренгән* түгел, ә *екергән* булырға тейеш, сөнки бер үк һүҙҙәрҙе ҡабатлап өндәшкәндә генә "екеренә" тиҙәр бит. "Эргәһендәге бәләкәй генә ҡыуаҡ аҫтына" боҫоу ҙа ышандырып етмәй, сөнки, *эргәһендәге* тип айырып әйтелгәс, бик бәләкәй ҙә булғас, ун ике йәшлек ҡыҙға уның аҫтына боҫоп та булмаҫ кеүек. Етмәһә, Мәрйәмде эҙәрләгән дошман һалдаты, күрһә лә уны күрмәгәндәй, шул ҡыуаҡ төбөндә тапана... Ваҡиғаның ҡайһы осорҙабарыуы иһә бигерәк тә буталсыҡ: Мәрйәмдең "атаһы һуғышта, ә әсәһен *аҡтар* атып үлтерҙе. Замира апай (Мәрйәмдең әсәһе) колхозда бригадир ине. Колхоз *эшселәре* Замира апайҙы яраттылар, бай*ҙар* киреһенсә дошман күрҙеләр", — ти автор. Донъя ҡыҙылдарға һәм аҡтарға бүленгән граждандар һуғышы осоро, тир инек, колхоз һәм "колхоз эшселәре" (ә дөрөҫө "колхозсылар" кәрәк!) тураһында һүҙ бара, был иһә шаҡтай һуңыраҡ осорға ҡарай. Шул уҡ ваҡытта унда колхоздар төҙөлгәнгә тиклемге синфи дошман — "байҙар" ҙа йөрөп ята... Замира апайҙы аҡтар атып үлтерә лә Мәрйәм шуларҙан үс алырға тотона, тик ул "аҡтар" тигәнебеҙ көтмәгәндә... "немец һалдаттары" (тимәк, Бөйөк Ватан һуғышы осоро?) булып сыға... Автор һүҙҙәрҙең дөрөҫ яҙылышы менән дә бик иғтибарһыҙ ҡылана, орфографик хаталар тулып ята. Бына ошоларға хас етешһеҙлектәр ҡыҙыҡлы ғына ҡулъяҙманы сыбарлай. *Ләкин*, шуға *ла* ҡарамаҫтан, хикәйәнең авторына ҡаты хөкөм ҡарары сығарып ҡуйыу ҙа хата булыр ине. Сөнки йәш ҡәләм эйәһенең үҙе һайлаған ваҡиғаларҙы ныҡлы сюжетҡа һалырға тырышыуы, хатта шул йәһәттән һиҙелерлек уңышҡа яҡынлауы ҡыуандыра. Ә был — аҙ *түгел*. Теүәл сюжет ҡора белеү — хикәйә өсөн талап ителгән тәүшарттарҙың береһе. Тимәк, йәш ҡәләм эйәһенә, үҙ өҫтөндә бик ныҡ эшләп, белемен өҙлөкһөҙ арттырып, әҙәби оҫталыҡҡа бер туҡтауһыҙ ынтылырға ғына ҡала. Шул изге шарт үтәлһә генә донъяға матур хикәйә, ысын хикәйәсе тыуа. Хәйер, был хаҡиҡәт беҙ тикшергән башҡа авторҙарға *ла* берҙәй ҡағыла: уҡырға, уҡырға, тағы *ла* нығыраҡ уҡырға...

22.07.1978.

Һәр кемгә лә кәрәкле

Һәләтле лә, егәрле лә йәш тарихсының яңы китабын (Азат Ярмуллин. Автономиялы Башҡортостан байрағы аҫтында. Башҡорт милли-азатлыҡ

хәрәкәте эшмәкәрҙәре хаҡында ҡыҫҡаса биографик очерктар. Өфө, 2009) алып шатлыҡ кисерҙем, сөнки Рәсәйҙең совет осоро тип аталған 70 йыл дәүерендә большевиктар режимы томалаған һәм томанлаған хәтеребеҙҙең кәрәкле бер сәхифәһе балҡып асылғандай булды.

Хәтер... Кешене Кеше иткән, милләтте Милләт иткән Хәтер...

Быуын-быуын бабаларҙың үткәндәре тураһында Хәтер һаҡланғанға күрә, шул Хәтерҙе артабан килер быуындарға аманатлап ҡалдыра алғанға күрә лә барлыҡҡа килгән Кеше, билдәләнгән уның Милләте. Барыһынан бигерәк, ул башҡорттоң — башҡорт булып ҡалыу, азатлыҡ өсөн сая көрәшеү һәм шул азатлыҡты алыу, һаҡлап ҡалдырыу Хәтере. Ошо бөйөк Хәтерҙе юйғандар юғала, оноткандар онтала — тәүҙә Милләт булыуҙан, аҙаҡ Кеше булыуҙан да туҡтала. Шуға күрә лә халҡыбыҙҙың иң мәкерле дошмандары баҫҡынсыға башбирмәҫ башҡорттан хәтерһеҙ маңҡорт – умыртҡаһыҙ селәүсен яһарға ынтылды.

Дөрөҫ, 1917 йылғы революцияның тәүге көндәрендә үк большевиктар, «Рәсәй халыҡтарының хоҡуҡтары Декларацияһы»н иғлан ҡылып, «халыҡтар төрмәһе»нең (В.И. Ленин билдәләүе) емерелеүен — «Рәсәй халыҡтарының империя ҡыҫаһынан айырылып сығыуға һәм үҙ аллы дәүләт төҙөүгә тиклем ирекле үҙ билдәләнешкә хоҡуғы»н һөрәнләне, тик был фәҡәт күҙ буяу, быуаттар буйына иҙелеп йәшәгән, азатлыҡҡа һәм үҙ аллылыҡҡа сарсаған урыҫ түгел халыҡтарҙы алдап-йолдап үҙ яғына ауҙарыу, ҡыҙыл империя мәнфәғәттәрендә ҡандарын һәм йәндәрен файҙаланыу өсөн эшләнде. Сөнки «ирекле үҙ билдәләнеш» тураһындағы шапырыныу — ваҡытлыса ғына алдатҡыс сара, хәйләкәр балыҡсының ҡармаҡ осона элмеш улъяһы ине. Әммә яугир башҡорт халҡы ул улъяны, хәйләкәр балыҡсы һис кенә лә көтмәгәнсә, ҡармағынан айырым ҡарпып йотто — большевиктар теләгәнсә ҡағыҙҙа түгел, ә ғәмәлдә үҙ аллы (ерле автономиялы) дәүләтен дәррәү ҡорорға, дәүләтселлегенең төп нигеҙен — ҡоралы милли ғәскәрен төҙөргә өлгөрҙө, шул ҡоралы көсө арҡаһында совет хөкүмәте Рәсәйҙәге беренсе автономиялы Башҡорт республикаһын танырға мәжбүр булды. Ҡыҙыл режимды аҡ ғәскәрҙәр ҡаҡшатҡанда әмәлһеҙҙең көнөнән, башҡорт ғәскәрен шуларға ҡаршы файҙалпаныу өсөн генә ҡулланылған ваҡытлыса сара ине был. Фронттарҙа еңеп баш-күҙ алғас та, большевиктар партияһы Башҡорт автономияһының башына етергә яҫҡынып, автономиясы башҡорттарҙы юҡ итергә тотондо, сөнки бығаса Рәсәй тарихында булмаған, башҡа халыҡтарға ла үҙаллылыҡ өлгөһө күрһәткән Башҡортостан — ҡыҙыл империя тәнендәге һыҙлатҡыс шырау ине, нисек тә уны һурып алып ташларға кәрәк ине. Йәш республиканың биш йыл (1917-1922) ғүмере ана шул «һурып ташлау»ға ҡаршы аяныслы-ҡырҡыу көрәшеп уҙҙы. Дәүләтебеҙҙе башлап төҙөгән Әхмәтзәки Вәлидовтан алып шул дәүләтселлекте һаҡлап ҡалыу өсөн 1920 йылғы милли-азатлыҡ көрәшен етәкләгән Сөләймән Мырҙабулатовҡа тиклем, һәм шунан һуң 1937 йылғы Сталин ҡырғынына тиклем арауыҡтарҙа бик күп ҡаһармандарыбыҙ йәндәрен аямай алышып ҡорбан булды, шулар арҡаһында бөгөн сәскә атҡан Башҡортостан Республикаһының тулы хоҡуҡлы аҫабалары булып йәшәйбеҙ. Әммә тарихи хәтеребеҙ камилмы,

изге яуҙарҙа шәһит киткән батырҙарыбыҙҙың исемдәрен беләбеҙме, иҫтәлектәрен ҡәҙерләп һаҡлайбыҙмы?!. Дөрөҫөн генә әйткәндә, ошо көндә бәғзеләребеҙ тарихи ерлектән тайып, иҫәүән иҫәрғәптәргә әүерелеп бара, тиһәк тә хата булмаҫ. Сөнки бөтәбеҙ ҙә шул-баяғы 70 йыллыҡ большевистик идеология ҡорбандары: үткәндәребеҙҙең сағыу биттәрен, бөйөк инсандарыбыҙҙың исемдәрен телгә алыуҙан тыйып та, әһәмиәтен кесерәйтеп күрһәтеп тә, халыҡ өсөн баштарын һалған батырҙарыбыҙҙы «бандит», «ат ҡарағы», «дезертир», «контрреволюционер» кеүек ҡара тамғалар менән хурлап та киленгәнлектән, хәтерҙәребеҙ аҙлап-аҙлап юйылыу хәлен кисерҙе. Шул йәһәттән ҡарағанда, Азат Ярмуллиндың ошо китабы, ҡыҙыҡһынып һәм мауығып уҡылыуы менән бергә, ыуалыуға дусар ҡылынған рухыбыҙҙы яңыртыу, терелтеү көсөнә эйә тип һанайым. Күркәм шәхестәребеҙҙең ошоғаса билдәһеҙ йәки аҙ билдәле тормошо һәм яҙмышы документар нигеҙендә баҙыҡлап тасуирланған, күптәренең фотолары беренсе тапҡыр бирелгән; этап булырҙай ваҡиғаларҙы һәм уҙамандарҙың исем-фамилияларын, матбуғат баҫмаларының йәшәү осорҙарын сағылтҡан мәғлүмәттәр бар – бигерәк тә йәш быуын һәм ғөмүмән тарих менән шөғөлләнеүселәр өсөн бик файҙалы хеҙмәттер.

Йыйынтыҡта халҡыбыҙҙың ысын ҡаймағын тәшкил иткән илле өс инсандың тәржемәи хәле бәйән ҡылынған; ул яҙмыштар шуныһы менән ғибрәтле лә аяныслы: бөтәһенең аҙағында ҡыҙыл режим тарафынан язалап йәки башҡаса үлтерелеү билдәһе тора – ил ҡаймағын ил өҫтөнән һөҙөп алып түгеү ошо булалыр...

Миҫал өсөн бернисә яҙмышты барлайыҡ.

Башҡортостан автономияһының ғына түгел, Рәсәй федераллығының да атаһы Әхмәтзәки Вәлидов ил-еренән ситләтелеп, яҡындарын бер күрергә зар булып, сит илдә ятып ҡала...

Сөләймән Мырҙабулатов, бер түгел ике тапҡыр репрессияға дусар ҡылынғандан һуң үлем язаһына тарттырылып, февраль селләһендә Мәскәү төрмәһендә өҫтөнә боҙло һыу ҡойоп ҡатырыла...

Башҡорт хөкүмәтенең бернсе рәйесе Юныс Бикбов шулай уҡ ике тапҡыр төрмәгә ултыртылып, Ҡарағанда ҡатырының ҡараңғы күмер шахтаһында һәләк була...

Башҡорт хөкүмәтенең бернсе сәркәтибе бөйөк шағир ат ҡойроғона тағып һөйрәтелеп, язалап үлтерелә...

Хәрби Шура рәйесе Әхмәтзәки Вәлидовтың урынбаҫары Илдархан Мутин һәм Башҡорт Хәрби-Революцион Комитетының рәйесе, РКП(б) ЦК-аһының һәм ВЦИК-тың Башҡортостандағы вәкиле Харис Йомағолов, атаҡлы сәрғәскәр Муса Мортазин, “революция бишеге” Петроградты аҡ Юденич һөжүменән һаҡлап алып ҡалған Башҡорт дивизияһының комиссары һәм башҡорт мәктәптәре өсөн беренсе дәреслектәр авторы Нуриәғзәм Таһиров, РКП(б)-ның Башҡортостан өлкә комитетының беренсе башҡорт етәксеһе Әхмәҙулла Бейешев, таҫыллы хөкүмәт рәйесе Хафиз Ҡушаев һ.б., һ.б. барыһы ла төрмәлә атып үлтерелә...

Халҡыбыҙҙың азатлыҡ һәм үҙаллылыҡ өсөн дәһшәтле көрәше арҡаһында мөмкин булған бөгөнгө рәхәт тормошобоҙҙоң ысын ҡәҙерен белергә, яҡты киләсәгебеҙҙе фиҙакәр ҡурсаларға өндәй был китап.

15.01.2010

4. Юлдаштарым
****

ТАРИХЫБЫҘҒА ҠАРАТА ҠАЙҺЫ БЕР ФЕКЕРҘӘР

“Урал батыр” эпосы нисә йәшендә?

Эйе, эпосы, сөнки Урал батырҙың йәше менән “Урал батыр” эпосының йәше — икеһе ике нәмә. Йәғни баш бабаларыбыҙ Шүлгән матур менән Урал батырҙың тыуыуы Донъя-Ғаләм-Тереклек яралыуға уҡ барып тоташһа, был ике башбабаны ҡобайырлаған “Урал батыр” эпосы иһә һуңғыраҡ — бынан бер-нисә мең йыл элекке дәүерҙең ижад емеше. Иң мөһиме, “Урал батыр” менән бергә Авеста, Ригведа кеүек киң билдәле ҡомарткыларҙың да барлыҡҡа килеүенә бер үк сәбәп, бер үк дәүер, бер үк тарихи шәхестәр һәм ваҡиғалар сәбәпсе булғанлыҡтан, “Урал батыр” эпосының тыуыу датаһын шаҡтай теүәллекле фәнни билдәләү мөмкинлеге бар. Бының өсөн әлегәсә беҙҙең фәндә ҡуҙғатылмаған һәм хәл ителмәгән төп өс һорауға яуап бирергә кәрәк: нимә ул тәүдин? Нимә ул зороастризм? Иң боронғо эпостарыбыҙҙан (“Заятүләк менән Һыуһылыу”ҙан, “Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу”ҙан, “Гильгамеш”тан) нимәһе менән айырыла “Урал батыр” эпосы?.. Шул юҫыҡта башҡорт ҡарыһүҙен (мифологияһын) донъя халыҡтары ҡарыһүҙе менән, “Урал батыр”ҙы Авеста, Ригведа, “Гильгамеш” һәм Тора изге китабы менән сағыштырып һәм шуға фән ҡаҙаныштарын йәлеп итеп яҙған “Хәтерхитап” тигән хеҙмәтем нәшриәткә тәҡдимләнеп, ә мөһим өлөштәре 1982 йылдан уҡ ташҡа баҫыла барғанлыҡтан, баяғы өс мәсьәлә буйынса әле әйтеләсәк “дыуамалыраҡ” ҡарашымдың ентекле дәлилләү өлөшөн шул уҡ китапта ҡалдырып, мәҡәлә майҙаны ҡушҡанса, ҡыҫҡараҡ тотам теҙгенде (беренсе башлап матбуғатҡа тәүдин концепцияһы сығарыла). Республика фән офоғонда әле булһа моронлай алмаған түбәндәге төп тезистарҙы үҙләштермәй тороп, боронғо донъяны беҙҙән ҡаплаған ҡараңғы шаршауҙы асырға мөмкин түгел.

1. Донъя-Ғаләм-Тереклектең “Хаос — Мораҡ”тан уҡмашҡан яралғы йомарлағы — “йомортҡа” булған тәүҙә, уның эсендә беренсе яралғылар — *Имир* (йәки *Үмер, Әмир, Ирим)* тигән гермафродит йәғни ике енесле (ирҡыҙ-хөнәсә) Тәүбабабыҙ Дәү Хоҙай йәки “Урал батыр” эпосындағы Йәнбикә менән Йәнбирҙе (икеһе тоташ) булған элек.

2. “Йомортҡа” шул ҡара-ҡаршы игеҙәк-ике яртының ҡуш килеүенән — дуализмдан ғибәрәт: Ут һәм Һыу, Аҡ һәм Ҡара, Көн һәм Төн, Эҫе һәм Һыуыҡ, Яҡшы һәм Яман, Күк һәм Ер, Инә һәм Ир, Шүлгән һәм Урал йәки икенсе төрлө әйткәндә Әсәбеҙ Һауа һәм Атабыҙ Ер (Әҙәм), Үҫәргән (Ҡаңғы) һәм Бәжәнәк (Башҡорт), Эске Башҡорт һәм Тышҡы Башҡорт

йәки Самарау иле һәм Ҡатил иле... Күрәһегеҙ, Донъя-Ғаләм-Тереклек моделе Инә һәм Ир (Имир) мөнәсәбәттәре рәүешендә сексуаль планға ҡоролған, хатта *ун ике* илаһиҙың икеһе итеп Инә-Әсәнең (Күктең) инәлек (оят) ағзаһы Обоҡос (Бог) һәм Ирҙең (Ерҙең) аталыҡ (оят) ағзаһы Отороҡ (Тор) юғары олғаштырылған тәғлимәтсе бабалар тарафынан, сөнки улар Донъя-Ғаләм-Тереклектең ир менән ҡатын мөнәсәбәттәренән башланыуын уйлап белгәндәр ҙә ошоға табынғандар, оялмағандар һис тә. Шуға күрә артабан беҙ ҙә тәүдин илаһиҙарын атағанда был бөйөк ике илаһиҙы ла оялмайынса исемләргә тейешбеҙ, уҡыусыларыбыҙ ҙа һис оялма8ын, сөнки белем алыуҙың сиге һәм ояты юҡ.

3. Күк менән Ер аралығында тонйорап ятмыш изге Тора тау — Ерҙең Тороғо (аталығы) ҡапыл торолоп (тороп-терелеп), бәрәкәтле (бәрә ҡотло) өс хәрәкәтен яһай: Күктең Обоҡосон кәүҙәләндермеш изге Моғажар тау менән ҡара-ҡаршы бәрелештә ул Күкте Ерҙән айырып, Күк-Инәнең енси бөтәшлеген (девственную плеву) ярып, ергә-күккә тереклек бирә; һөҙөмтәлә Донъя-Ғаләмдә ғөмүми хәрәкәт башлана ла Донъя-Ғаләм Ҡуласаһы (Свастика) үҙ күсәре тирәһендә әйләнергә тотона, ҡапма-ҡаршылыҡтарҙы берәгәйтеүсе диалектика ҡануны тантана ҡыла.

4. Әсә-Аба (Аҫаба) ләҡәбе менән тамғаланып изге Машаҡ тауҙан тыуған Шүлгән башбабабыҙ, ә Әр-Ата (Арата, ир-ат) ләҡәбе менән тамғаланып изге Нары тауҙан тыуған Урал баш бабабыҙ икеһе бергә изге Тәүтөйәк Башҡортостандың хәҙерге Архангель заказнигы майҙанында пәйҙә була (унда улар һыйынған билдәле ике мәмерйә бар). Боронғо үҫәргән-башҡорттарҙан күсереп алынған һәм бөйөк Тора тау исемен йөрөткән изге Тора китабында (Тора — пятикнижие Моисеево. “Шамир”, Иерусалим 5753 — 1993 Москва) сихриәтле был төбәк — ожмах баҡсаһы тип, унан аҡкан Еҙем һыуы — Эдем тип, әсәбеҙ Шүлгән — Һауа тип, атабыҙ Урал Әҙәм тип танытыла. Игеҙәктәрҙең ата-әсәһе гермафродит-ирҡыҙ Имир (“Урал батыр” эпосындағы Йәнбикә һәм Йәнбирҙе) иһә Дәү Хоҙай тип әйтелә.

Бәндәләргә мейе (аҡыл) керетеүсе “мейеле аш” — миләш (Миләш — Шүлгән (Һауа) нәҫелле Үҫәргән ырыуының изге ағасы) емешен рөхсәтһеҙ ауыҙ иткән өсөн Һауа (Шүлгән) менән Әҙәмде (Уралды) Дәү Хоҙай ожмахтан һөргәс, был икәү шундағы Инйәр һыуы, ә боронғо әйтелештә Инжир-ыҡ йәки Инзир-ыҡ буйындағы Ин-зирыҡ — зирек йәки ерек (инжир тип тә әйтәләр) ағасы япраҡтары менән ояттарын ҡаплап, шул ожмахтан көньяҡ-көнбайышҡараҡ тарафҡа — хәҙерге Ишембай районына олаға. Тәүбабабыҙ Имирҙың Инә (Әсә) яҡ эмейен кәүҙәләндермеш изге Ҡуш тауҙың эмей убалары араһындағы урталыҡта нәҡ офоҡ әйләнәһеләй түңәрәк төплө иң беренсе ҡоролма — ҡорот (ҡорот — “город”, “йорт” һүҙҙәренең башы) ҡороп төпләнәләр, имеш. Ишеге уның көнсығыштан асылып, уның эсенә Көн юлынса көнбайышҡа табан атлап керәләр (әлегәсә төрки-монгол ҡануны), урталыҡҡа усаҡ яғалар. Кергән ыңғайға уң (төньяҡ) яртыны сексуаль мәғәнәлә Тор (ата)/Түр яҡ тип, ә һул (көньяҡ) яртыны Әм (әсә) яҡ тип билдәләйҙәр (әлегәсә башҡорт өйөнөң түр — ир яғы һәм аш/әс — әсә яғы); икеһе ҡуша Тор-Әм йәғни Тором, Терем, Төрмә, *Тирмә*

рәүешле терминлана. Тирмә төбө түңәрәктең уртаға бүленеш һыҙығы иһә бабаларыбыҙ аңында тирмә аша өҙләкһеҙ көнсығышҡа һәм көнбайышҡа бөтә ҡитға арҡылы дауамланғандай күҙалланып, ер йөҙөнөң шуға бәйле Әсә (аш) яҡ яртыһы — Эске Башҡорт (“Урал батыр” эпосындағы Самарау йәғни Самара йылғаһы аҡҡан) яҡ тип, ә Ата (Тор/Түр) яҡ яртыһы Тышҡы Башҡорт (“Урал батыр” эпосындағы Ҡатил йәғни Аҡатил — Ағиҙел йылғаһы аҡҡан) яҡ тип йөрөтөлә. Ошо бөйөк арҡылы һыҙыҡ бөтә Ер Шарын арҡаулай тип уйланылып, аҙаҡ карталарға ла географик арҡау (арҡаулыҡ — “арҡа-убалыҡ” йәғни Ҡуш тау арҡаһын арҡылыға киҫеп үткән һыҙыҡ широта) рәүешле күсерелә. Ә арҡауҙы уртаға бүлеп изге Ҡуш тау-эмейҙең ике имсәк башы (Шәке тау, Йөрәк тау) түбәләре аша көньяҡҡа һәм төньяҡҡа ҡитға буйлап үткәрелгән буй һыҙыҡ иһә карталарҙа ла географик буйлыҡ (“Бай-убалыҡ” йәғни “аҡ-һөт-май (эмей) убалыҡ”тары икеһе бергә тоташтырылған тура һыҙыҡ -- долгота) тәшкил итә.

Һауа менән Әҙәмдән тыумыш балалар башҡа сығып, евразия ҡитғаһының арҡау (широта) һыҙығы бүлгән ике (Шәке тау яғы, Йөрәк тау яғы) тарафҡа ла тигеҙ бүленеп ултыра. Самара һыу яғындағылар (аҫабалар) — шул һыу исеменән самарҙар йәки шумерҙар тип йөрөтөлә (Үҫәргән ырыуҙары). Ағиҙел (Ҡатил) һыу яғындағылар (араталар) шул һыу исеменән ҡатилдар йәки ҡатайҙар тип тә атала (Бәжәнәк ырыуҙары). Хәҙер улар монголдарҙа — “арат”, башҡорттарҙа “ир-ат” тип йөрөтөлә.

Тәүтирмәнең тышҡы әйләнәһен уратып һәм йәнә уларының да тышҡы әйләнәһен уратып тирмәләрен ҡороп урынлашҡандарҙың иң тышҡы әйләнәһен килмешәк ҡош-ҡорт (дошман) бәлә-ҡазаһынан мөслө ир-ат йәки арата (Ир-ата, Урата) яугирҙәре уратып һаҡлағанлыҡтан, улар һаҡлаған шул түңәрәк сик һыҙыҡтары ла арата — Урата тип аталып, ҡитғабыҙҙағы тәүтирмәле беренсе Урата (йәки Алтын Урта, Алтын Урҙа — ҡаған тирмәһе) һәм уның тышына ҡатланмыш икенсе Урата билдәләнгән. “Арата” терминының варианттары арат — “род” терминын, шулай уҡ Урау — “ырыу” терминын, арай (Урай) — “арей” этнонимын тыуҙырған. Боронғо яугир арейҙар (арийҙар) һәм шумерҙар, тимәк, тап бөгөнгө башҡорттарҙың туранан-тура бабалары.

Донъя-Ғаләм-Тереклек Ураталары ана шулай, бер-береһенә ҡатланып-сиратланып ете (7) Урата һәм уларҙың арҡау-һыҙыҡ менән ҡап-урталай бүленешенән ун дүрт (14) ярымурата тәшкил ҡылына (тылсымлы изге һандар); ун өсөнсөгә тиклем һәр ярымуратала уның үҙ ***Эйәһе*** һәм ***Хоҙайы*** (йыйыны ун ике) билдәләнеп, бөтәһенең өҫтөнән иң тышҡы 7-нсе Уратала (Күктең етенсе ҡатында) ***Сөйөм-Дөйөм Дәү Хоҙайыбыҙ б***өтәһе менән дә бойора. Йәғни 922 йылда Ибн-Фаҙлан күргән башҡорттарҙың ун ике ырыу *Эйә-Хоҙайҙарына* һәм шул ун ике Эйә-Хоҙайҙар өҫтөнән бойороусы Дәү Хоҙайға тап килә был...

Инде тәүдиндең ошоғаса бер ҡайҙа ла йәмәғәтселек иғтибарына еткерелмәгән структураһына (ҡоролошона) диҡҡәтләнеү бик мөһим, сөнки быйыл үҙенә күрә юбилей — ҡитғабыҙҙа боронғо дәүләттәребеҙҙең береһе (эйе, береһе, ләкин беренсеһе түгел!) булған Төрки Ҡағанаттың

төҙөлөүенә 1450 йыл тулыу билдәләнәсәк, ә дәүләтселлек иһә тәүдиндән башланған да тап шуға нигеҙләнгән.

Әлхасил, тәүдин ҡоролошонда, "алтын үҙәк" (тәүтирмә төбө) түңәрәктән башлап тышҡа ҡарай түңәрәктәрҙе цифрлап һанағанда, *бәндәүи* (әҙәм балалары йәшәй торған) өс (3) түңәрәк-Уратала (тимәк, ер йөҙөндә) бәндәләр табына торған уларҙың *Эйәләре* түбәндәгесә тәртиптә сиратлашып урынлашалар:

Үҫәргән (көн) яҡлап

1. Шүлгән-Һауа йәғни ***Әсәм*** (гермафродит Имирҙың ул үлгәндән һуң ерҙә ҡалған тәненең Әсә-Инә яҡ яртыһы — ул яҡ ерҙәге бөтә *эйәләргә баш **Эйә***); уның тылсым ҡошо Сәүкә (әсә-әбкә), ағасы Әс (әсе әрем);

2. ***Аҫаба*** (Шүлгән-Һауаның балаһы) йәғни ***һыу-һауа Эйәһе;*** уның тылсым ҡошо Сәпсек (асаба-әсәк), ағасы Йыуа-Оҫкон (асаба-асаҡан);

3. Әсә-Бүре-Көн йәғни ***Үҫәргән, Шүлгән***-бабаны имеҙеп үҫтергән ***Әсә-Бүре,*** Үҫәргән ырыуының ***Ырыҫ*** (Геродотта ***Арес***) ***Эйәһе;*** уның тылсым ҡошо Торна йәғни Сура-бала — Журавль, ағасы Миләш йәғни Машар/Мышар — изге Машаҡ тау ағасы.

Бәжәнәк (төн) яҡлап

1. Урал-Әҙәм йәғни ***Атам*** (гермафродит Имирҙың ул үлгәндән һуң ерҙә ҡалған тәненең Ир-Ата яҡ яртыһы — ул яҡ ерҙәге бөтә эйәләргә баш ***Эйә);*** уның тылсым ҡошо ата-Ҡарға (ала ҡарға), ағасы Ат (Ут) — күк әрем;

2. ***Арата*** (Урал-Әҙәмдең балаһы) йәғни ***Ер-Тау Эйәһе;*** уның тылсым ҡошо Тартай (тор-атай), ағасы Артыш (ар-атас);

3. Боҙ-Инәк (Бизон йәғни Боҙ һыйыры) — ***Бәжәнәк*** (Урал бабаны имеҙеп үҫтергән Боҙ-Инәк/Бизон), Бәжәнәк ырыуының ***Ырат*** (Гомерҙа *Эрот*) ***эйәһе;*** уның тылсым ҡошо Боҙанаҡ (бүҙәнә), ағасы Ҡарағай-Нарат — изге Нары тау ағасы.

Был ике яҡтың бер бөтөнлөгө ***Үҫәргән (Ҡаңғы) -- Бәжәнәк (Башҡорт)*** игеҙәклеген (фратрияһын) тәшкил иткән.

Үҫәргән-Бәжәнәк игеҙәклегенән (тәүге ырыуҙарҙан) бөтә кешелек донъяһы ырыҫланған-яралған.

Күренеүенсә, Бүрегә (Ҡортҡа) табыныусы Үҫәргән һәм Бизонға (Боҙға/Буҙға) табыныусы Бәжәнәк/Печенег ырыуҙары игеҙәк туғандар булып, икеһе бергә бер ***Бөтөн*** халыҡ (төрки ырын яҙыуҙарындағы *"Будун")* тәшкил итеп, уларҙың баш бабаларының имсәк әсәләре ***Боҙ*** (һыйыр) һәм ***Ҡорт*** (бүре) атамаларын икеһен берләштереп әйтеү һөҙөмтәһендә уларҙы Боҙ-Ҡорт — Башҡорт тип атап йөрөткәндәрҙер, ике яртынан хасил бер бөтөн халыҡтың атамаһы ***"Башҡорт"*** шулай барлыҡҡа килгән, имеш...

Бәндәләр йәғни беҙҙең алыҫ бабалар, ерҙең бәндәләр йәшәгән түбәнге өс Уратаһындағы ошо ***эйәләргә*** табыныуҙан тыш, өҫтәге күктең өс Урата-ҡатындағы ***хоҙайҙарға*** ла табынып доға ҡылғандар.

Әле өҫтә тасуирланған ерҙәге *бәндәүи* өс Урата өлгөһөндә һәм ул Ураталар аша ике һыҙыҡ (арҡау менән буйлыҡ) сатрашланыуын ишаратламыш түңәрәк ҡорам өлгөһөндә был изге төбәктән көнсығыштараҡ донъяға билдәле түп-түңәрәк тәгәрмәсҡалабыҙ Арҡайым да ҡоролған (сығанаҡтарҙа был ҡаланың башҡа исем-ләҡәптәре лә бар).

Әйтеп үтеүебеҙсә, тәүге бәндәүи (ерҙәге) өс Уратанан һуң, шуларҙың дауамы булып, артабан да өҫтө-өҫтөнә Ураталар һаны ырап, асмандарға ла ашып, күктәге ***илаһи*** (Хоҙайҙар йәшәй торған) Ураталар сиратлашып дауамлана, улары ла, баяғы *тәүге* арҡау-һыҙыҡ ҡырҡып бүлгән ярымшарҙар рәүешендә дуғаланып, бер-береһенә сиратлашып ҡатарлана. Өс ҡаттың һәр береһендә бойороп ултырыусы, аҫтағыраҡтары өҫтәгерәктәргә буйһоноусы ***хоҙайҙар*** — гермафродит Тәүбаба Имирҙың вафатынан һуң уның үҙенең һәм ерҙә ҡалған иң мөһим тән ағзаларының күккә ашып илаһилашҡан ***йәндәре*** тип һанала. Әйтелгән күк хоҙайҙарының иерархияһы түбәндәгесә сиратланып теҙелә:

Үҫәргән (көн) яҡлап хоҙайҙар

4. ***Әсәмән*** йәки Шаман (ҡара болот — ***Ямғыр Хоҙайы***) — Тәүбаба Имирҙың күккә ашҡан һул яҡ имсәк һөтө; уның тылсым ҡошо Сомай (сомалаҡ өйрәк) йәғни Һомай, ағасы Ҡомалаҡ (сомалаҡ — һомалаҡ);

5. ***Обоҡос*** йәғни Боҡос, Бог (*Бахус* — боронғо Римда) — Тәүбаба Имирҙың инәлек (оят) ағзаһы — ***Ырыҫ-Үрсем Хоҙайы;*** уның тылсым ҡошо Бекас (һаралйын), ағасы Абаҡас (Абаға);

6. Әсән-Күҙ йәғни ***Сыңғыҙ*** — Тәүбаба Имирҙың мәңге бағыр һул яҡ ҡуш күҙе — ***Хаҡлыҡ Хоҙайы;*** уның тылсым ҡошо Ҡаҙ, ағасы Сынағас;

7. ***Дәү Хоҙай*** Тәүбаба Имир үҙе йәғни уның Инә/Әсә яҡ яртыһы (Сөйөм-Дөйөм Рух йәғни Әсәйем-Атайым Рухы); уның тылсым ҡошо Сәмреғош (Әсә-Имир ҡош йәғни Семург), ағасы Әрмет-Ҡәҙер (эрбет-кедр).

Үҫәргән яҡтың нәҡ ошо Үҫәргән илаһиҙарына табыныуы боронғо үҫәргәндәрҙең канундар китабы Авестала (Авеста — Аба-әсә-та ("та" — күплек ялғауы) йәғни һауа-әсәләр (үҫәргәндәр) тигән һүҙ) асыҡ сағылған: уның буйынса донъяның төп таянысы ***Хаҡлыҡ*** — "Аҫа" йәғни Әсә булып тора, "Аҫаба"лар — әсәлекте дауамлаусылар. Шулай уҡ ундағы илаһи Вәрәҙрагна (Вәр-Әҙ-Ра-Гна — Үҫәргән яғының Бүре-Әсә-Ер-Көнө булып, шул уҡ исемдән Вәр-Әҙрәгән — Бүре-Үҫәргән һәм Вәрә-Ҙәргән — Бүре-Саргон йәки Бүре-Шүлгән йәғни "Бүре-Әсәне имгән Шүлгән" төшөнсәләренең дә килеп сығыуын шәйләйбеҙ) ләҡәбендә баш баба Шүлгән бабаны асыҡ күрәбеҙ.

Бәжәнәк (төн) яҡлап хоҙайҙар

4. ***Атаман*** йәки Таман йәки Томан (аҡ болот — ***Ҡар Хоҙайы)*** — Тәүбаба Имирҙың күккә ашҡан уң яҡ имсәк һөтө; уның тылсым ҡошо Һуна Өйрәк, ағасы Таман (тмин) — аҡ әнис;

5. ***Отороҡ*** йәғни Тороҡ (*Тор* — боронғо Скандинавия башҡорттарының Хоҙайы) — Тәүбаба Имирҙың аталыҡ (оят) ағзаһы; уның тылсым ҡошо Торомтай, ағасы тирәк;

6. Атан-Күр (Тәнкүр) йәғни ***Тәңре*** — Тәүбаба Имирҙың мәңге күрер уң яҡ ҡуш күҙе — ***Хаҡлыҡ Хоҙайы;*** уның тылсым ҡошо Ҡор, ағасы Ҡарағас (Ҡар-Ағас);

7. ***Дәү Хоҙай*** — Тәүбаба Имир үҙе йәғни уның Ир/Ата яҡ яртыһы (Дөйөм-Сөйөм-Рух); уның тылсым ҡошо Тамрығош (Ата-Имир ҡош йәғни Демург), ағасы Ҡәҙер-Әрмет (кедр-эрбет).

Иғтибар итегеҙ: Ибн-Фаҙлан әйткән башҡорттоң 12 эйәһе һәм улар өҫтөнән идаралыҡ ҡылыусы Дәү Хоҙай төҫмөрләнә.

Бәжәнәк яҡтың тап Бәжәнәк илаһиҙарына табыныуы боронғо бәжәнәктәрҙең ҡанун-гимндар китабы Ригведала (Ригведа йәки Ригвед — Ырыу-Боҙ (Боҙ ырыуы) йәғни "Бәжәнәк ырыуы") асыҡ сағылған: уның буйынса донъялағы төп таяныс ***Хаҡлыҡ*** — "Арта" йәғни Ир-Ата булып тора, "арата"лар — аталыҡты дауамлаусылар.

Тәүдинебеҙҙең һәм унан шытҡан зороастризм, иудеизм, индуизм, христиан, ислам диндәренең сағылыш көҙгөһө булған изге Тора китабында Дәү Хоҙайҙың ете көн эсендә Донъя-Ғаләм-Тереклекте һәм үҙен-үҙе хасил ҡылыуы, ошо бөйөк эштәренән һуң етенсе көн үҙенең етенсе Уратаһында тынысланып ял итә башлауы рәүешендә теркәлгән был. Өҫтә күрһәтелгән тәүдин структураһы — донъялағы ҡарыһүҙҙәрҙең, диндәрҙең, сәнғәттәрҙең һәм дәүләт ҡоролоштарының нигеҙе, һәм шунһыҙ уларҙы дөрөҫ аңларға ла, аңлатырға ла мөмкин түгел.

Диалектика ҡанунынса, баяғы тәүигеҙәк ике яҡтың тел һәм дин айырмаһы тәрәнәйеп, уртаҡ тәүтелдән саталанып ***урал-алтай*** һәм ***һинд-европа*** тип аталмыш тел ғаиләләре айырыла иң тәүҙә; дин өлкәһендә иһә ике яҡ та баяғы үҙ *эйәләрен* һәм *хоҙайҙарын* икенсе яҡтыҡыларҙан өҫтөнөрәк ҡуйып һәм икенсе яҡтыҡыларҙы яманлап (был ҡаршылыҡ Авеста һәм Ригведала ныҡ сағыла), Дәү Хоҙайҙы хатта иҫәпкә алмай башлағас, дөйөм Боҙ-Ҡорт (башҡорт) халҡында дөйөм рухи кризис килеп тыуа. Был иһә тәүдиндең дә һәм, әлбиттә, шуға бәйле тәүдәүләтебеҙҙең дә, тәүтелебеҙ һымаҡ уҡ, ҡабат ҡушылмаҫлыҡ булып ҡап-урталай ярылыуы — бөйөклөктөң ҡыйралыуы менән янай. Ярыҡты ямар өсөн, дөйөм тәүдинде башкөлләй үҙгәртеп ҡороу — реформа кәрәк була һәм был эште Үҫәргән ырыуының Асылыкүл буйындағы Сорас (Сураш — Боҡосорас (Боҡос-Ырыҫ) хоҙай исеменең Боҡа-Сорас (Баҡа-Сураш) рәүешле урталай быуынланыуының һуңғы быуыны Сорас/Сураш) араһы бәге ике яҡтың да эйәләрен һәм хоҙайҙарын берләштереү ("ике атаҡа (тәкә) башы бер ҡатанға (ҡаҙанға) һыймай", тигән мәҡәлебеҙ тыуа ул реформаға ҡаршылар яғынан) һәм Дәү Хоҙайҙы бүтәнгә алмаштырыу юлы менән башҡара. Мәҫәлән, Шүлгән ләҡәбе булған "Аһура"ға Урал ләҡәбе "Маҙда"ны ҡуша ла Аһура-Маҙда тигән берәгәй баш баба-хоҙай яһай һәм уға элекке Шүлгәндең дә, Уралдың да бөтә булған *яҡшылыҡ* сифаттарын ғына беркетә. Өҫтәүенә, бөтәһен дә бар ҡылыусы тәүбаба Имир (Дәү Хоҙай) ҡөҙрәтен дә йөкмәтә был яһалмыш Аһура-Маҙдаға. Йәнә шулай Урал ләҡәбе "Ана-

ҡара»ға Шүлгән *ләҡәбе* “Майан-һыу”ҙы ҡуша *ла* Ангра-Майнью исемле берәгәй дошман хоҙай яһай һәм уға элекке Уралдың да, Шүлгәндең дә бөтә булған *яманлыҡ* сифаттарын ғына беркетә. Ике башбабабыҙ инде ошо яңы исем һәм сифатта кәүҙәләнә Авестала — бәндәләргә *яҡшылыҡ* килтереүсе аҡ көс Хоҙай һәм *яманлыҡ* ҡылыусы ҡара көс Дошман...

Дин тотоусы ябай-ялпының аңында иһә былар икеһе *лә* ҡәҙимге (Урал, Шүлгән) исемдәрендә ҡалып, әммә һәр икеһе реформасы биргән яңы сифаттарҙа — *яҡшылыҡ* ҡына таратыусы иң юғары ҡөҙрәт эйәһе Урал һәм *яманлыҡ* ҡына таратыусы иң юғары ҡөҙрәт эйәһе (дошман) Шүлгән рәүешендә нығына *ла* ошо хәл һөҙөмтәлә “Урал батыр” эпосында сағыу һынлана. Был — зороастризм көҙгөһө булған ***“Урал батыр” эпосының тыуыу осоро;*** сөнки быға тиклемге сал эпостарыбыҙҙа (“Заятүләк менән Һыуһылыу”, “Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу”, “Гильгамеш”) ике батыр былдағылай бер-береһенә хас дошман итеп бирелмәй, ә, киреһенсә, бер-береһен өҙөлөп һөйөүселәр...

Реформаторыбыҙ йәнә Боҡос-Сорас илаһиҙы уның ише Тороҡ (Тор) менән бергәләштереп, әлеге яңы Хоҙай Аһура-Маҙда менән туранан-тура аралашыусы Боҡос-Сорас-Тор йәки бәк-Сорастор (грекса әйтелештә бог-Зороастр) тигән берәгәй яңы илаһи яһай ҙа үҙен шул яңы Хоҙай бәк-Сорастор (Зороастр) йәки ялпы халыҡ телендәге Сураш-Тора тип иғланлай. Ғибәҙәт ҡыла торған ҡорамы (храмы) *ла* Баҡа-Тор (бәк, бог тора торған урын) йәки Бәкәтәр (Бактр) тип атала башлай (ана шунан боронғо Бәктора, Бактрия — ҡала һәм дәүләт исемдәре барлыҡҡа килә). Кешелек тарихындағы был бөйөк ваҡиға, фәндәге һуңғы һүҙ (Мэри Бойс) буйынса, хәҙерге Урал менән Иҙел араһындағы төбәктә б.э. тиклемге XVII — XV быуаттарҙа була (Арҡайым тәгәрмәсҡаланың аҡтыҡ осоро).

Зороастризм дине әүҙем юл ярып, Зороастр-баба Асылыкүл буйындағы тәүге ҡорамынан (ул әлегәсә бар) ҡәҙимге дин үҙәгенә — тәгәрмәсҡалабыҙ Арҡайымға ереккән булырға тейеш. Әммә уға көтөлмәгәндә икенсе бер үсәргәнле даһи үҙен Дәү Хоҙайҙан фатихаланмыш Боҡос-илаһи йәғни Боҡәсәй/Моғәсәй — ***Моисей*** (Муса пәйғәмбәр) итеп иғлан ҡыла *ла*, Дәү Хоҙай менән туранан-тура аралаша. Һөҙөмтәлә реформасыны ҡаты *ләғнәтләп*, баяғыса ҡәҙимге эйәләрҙе *лә* хоҙайҙарҙы уҡмаштырып һәм яңы Хоҙай яһап рәнйетеүсе, бәндәләрҙән Дәү Хоҙайҙы оноттортоп гонаһ ҡылыусы дин-дошман Зороастрға ҡаршы, изге Тора китабында әйтелгәнсә, алты йөҙ мең яугирҙе йыһатҡа (изге һуғышҡа) әйҙәй. Муса пәйғәмбәрҙең дәһшәтле был ихтилалының датаһы, борондан уҡ яҙылып килмеш йылъяҙмалар буйынса, яҡшы уҡ аныҡ билдәле: Ғайса пәйғәмбәр тыуғанға тиклемге 1700 йылда (б.э. тиклемге XVII быуатта). Ҡырҡ йыллыҡ көрәш һөҙөмтәһендә Муса пәйғәмбәр етәкселегендәге ошо яу еңеп, “алтын быҙау»ға йәғни Аһура-Маҙдаға табыныусы “ҡаңғылар” йәшәгән тәгәрмәсҡалабыҙ Арҡайымды һәм уның тирәһендәге башҡа ҡалаларҙы халыҡтары менән ҡуша юҡ итә Муса пәйғәмбәр һәм был ҡырғынлы урынды, килер быуындарға ғибрәткә, “Ҡорма” йәғни бында ҡала ҡорма, үлек йорт булып ҡалһын, тип *ләғнәтләй* һәм был шулай була *ла*...

Баяғы йылъяҙмалар кеүек үк, археологтар ҙа, үҙ аллы тикшереү һөҙөмтәһендә, Арҡайымдың харап ҡылыныу осорон шулай уҡ б.э. тиклемге XVII быуат менән билдәләй — тап Муса пәйғәмбәр ихтилалы осоро!

Билдәле булыуынса, Зороастр хәҙрәт үҙе Арҡайымдан хәҙерге Афғанстан төньяғындағы Бәлх йылғаһы буйына ҡасып, шундағы Бәкәтәр (Бактр) изге ҡорамын нигеҙләй (артабан Бактрия дәүләте). Дәү Хоҙайҙы һанға һуҡмай, уның урынына үҙҙәренең баш бабаһы Уралды имеҙеп үҫтергән изге һыйырға — “алтын быҙау” һынына табыныусы *“каңғылар”ҙың* Һинд йылғаһы буйындағы хәҙер Хараба (*Хараппа*) исемендә билдәле ҡалаһы ла шул уҡ XVII — XVI быуаттарҙа *харап* ителә. Ошоларға таянып, “Урал батыр” эпосының тыуыу быуатын да шаҡтай теүәл белә алабыҙ.

Б.э. тиклемге үҙ-ара тығыҙ бәйле даталарҙы сағыштырып ҡарайыҡ:

XIX — XVIII быуаттар — Шумер балсыҡ китаптары яҙыла, сәскә атыусы Аратта (Арҡайым) ҡалаһы телгә алына;

XVII — XV быуаттар — Бәк-Сорастор (Зороастр) йәшәгән һәм Авеста, Ригведа доғалыҡтары тыуған осор; тимәк, шулар рухындағы “Урал батыр” эпосы ла тыуған осор;

XVII быуат — Муса пәйғәмбәр ихтилалында Арада (Арҡайым) ҡалаһының юҡ ителеүе;

XVII быуат — фән буйынса ла Арҡайым (Тора изга китабындағы Арада) ҡалаһы харап ҡылынған осор (археологтар тарафынан дәлилләнгән дата);

XVII — XVI быуаттар — Һиндостандағы боронғо Хараба (Хараппа) ҡалаһы харап ителгән осор.

Был даталар артындағы ваҡиғалар — “Урал батыр” эпосына этәргес һәм уны һуғарғыс ваҡиғалар. Бөтәһе лә б.э. тиклемге XVIII — XVII быуаттарға ҡайтып ҡала һәм Муса пәйғәмбәр ихтилалының йылъяҙма датаһы менән дә, Арҡайымдың юҡ ителеүенең һәм Зороастр бәк йәшәүенең фәнни датаһы менән дә дөрөҫләнә (б.э. тиклемге XVII быуат).

Шулай итеп, зороастризмдың көҙгөһө булған “Урал батыр” эпосының тыуыу осоро б.э. тиклемге XVII быуат менән билдәләнергә хаҡлы. Тимәк, етеп килгән ике меңенсе йылда “Урал батыр” эпосына өс мең дә ете йөҙ (3700) йыл тула.
15.12.1995.

Тарихҡа Аджи ҡарашы
1

Төп баҫмабыҙ “ Башҡортостан” гәзите, милләтебеҙгә ҡағылышлы төп көнүҙәк мәсьәләләрҙе арымай-талмай яҡтыртыуын ҡәҙимгесә бәрәкәтле дауамлап, урыҫ телендә яҙыусы мәшһүр Морат Аджиҙың нәүбәттәге икенсе бер китабынан да ҙур ғына өҙөк бирҙе (1999 й., N 217 —

218, 220 — 221) һәм киң ҡатлам уҡыусыларын, моғайын, үҙҙәренең үткәне, бөгөнгөһө һәм киләсәге тураһында тағы ла бер етди уйланырға этәрҙе. “Киң ҡатлам уҡыусыларын” тип әйтеүем тиккә түгел, сөнки шәхсән үҙем кеүек “тар ҡатлам” булған ҡайһы бер зыялылар өсөн, дөрөҫөн әйтергә кәрәк, был авторҙың хеҙмәттәре, ҡыҙыҡып уҡылһа ла, яңылыҡ өҫтәмәне — уның әйткәндәре (һәм әйтә алмағандары ла!) һуңғы егерме йыл эсендә Башҡортостандағы башҡортса төрлө баҫмаларҙа (“Ағиҙел”, “Шоңҡар”, “Йәшлек”) уғата киңерәк тә, төплөрәк тә, дөрөҫөрәк тә нәшер ителеп өлгөрҙө, шуға күрә һәммәһен уҡып барыусыға был мөхтәрәм зат, моғайын, алыҫтан елләнеп килеп, асыҡ ишектәрҙе тибеп асыусы кеүегерәк тә ҡабул ителгәндер. Әммә үҙебеҙҙәгеләрҙең ҡәҙерен белмәгән йәки бихәбәр ҡалған баяғы бәғзе “киң ҡатлам»ға Морат Аджи асыштары ысынлап та тәүләп асыш булып күренер ҙә (үҙ илеңдә пәйғәмбәр юҡ, тиҙәр бит!..) төркиҙәрҙең бөйөк тарихына йомоҡ күҙҙәрен асыр — ошбу тынсыу мөхитебеҙҙә бөтәбеҙгә шуныһы ла ҙур файҙа. Ә иң мөһиме — төркиҙәр тарихына йәне-тәне менән бирелгән фиҙакәрҙең китаптарының урыҫ телендә сығып таралыуында: бөгөн килеп көллө “ҡара кеше”ләрҙе “кавказский бандит” тип кенә ҡараусы ябай урыҫ ялпылары (бәғзе “киң ҡатлам”!..) борон-борондан уҡ беҙҙең ишеләрҙе лә мәҙәниәтһеҙ һәм ҡырағай “татарская морда” итеп һанауы сер түгел бит — шуларҙың да, тим, (әгәр уҡыһалар!..) бер өлөшөнөң генә булһа ла аңы, бәлки, һөрөмдән арына төшөр... Ошоно иҫәпкә алып, ҡайһы бер кәмселектәр — ике китабын да берҙәй аһәңләгән төптоҫмалдың (концепцияның) йүнһеҙлеге (ә ул төҙөк ниргәне көҙөк нигеҙгә һалыу кеүегерәк ҡабул ҡылына...) тураһында тел сарлап та тормаҫ инем, әгәр ҙә ки бер килкеләребеҙҙе саманан тыш әҫәрләндергән “иҫ киткес асыш һәм яңылыҡ”тары улар теләгәнсә бында түгел, ә Башҡортостандан ситтә һәм урыҫ телендә генә таралһа. *Ләкин* гәзитебеҙ иғлан итеүенсә: “Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы башҡарма комитеты, Башҡорт дәүләт университеты ғалимдары, талиптары йыйылып, китаптың презентацияһын үткәрҙе... Был аңлашыла ла: автор бит, (йәнәһе!), төркиҙәр тарихы тураһындағы *быга саклы билдәле булмаган хакикәткә* (мин айырымланым. — Й.С.) күҙҙәребеҙҙе асырға ынтыла”... -- тип ҡыуаныслы шапыртыла гәзиттә. Өҫтәүенә, ҡалын китапты “Арҡайым” роман-гәзите һәм “Ватандаш” журналы тулыһынса урыҫ телендә, “Ағиҙел” — башҡорт телендә тиҙләтеп тиражларға, ә Башҡортостан “Китап” нәшриәте китап итеп арттырырға етди ниәтләнә, имеш... Әлбиттә, насар түгел был, сөнки бының ише әҫәрҙәрҙең дә йышыраҡ донъя күреүе, ҡатып ҡалған йәмәғәт фекерен ҡуҙғатыуы хәйерле, әгәр ҙә ки уҡыусыларын күрәләтә аймылыш ҡылырҙай урындарына бер юлы лайыҡлы фәнни ҡараш (баш йәки аҙаҡ һүҙ рәүешендә) өҫтәкләп сығарылһа. *Ләкин* беҙҙең тонйораған дөйөм ижтимағи фекер кимәлендә бының теүәл үтәлеүе икеле; был кимәлде Морат Аджи үҙе үк билдәләй бит: “Татар һәм башҡорт тарихсыларының позицияһы ғәжәпкә ҡалдыра, — ти ул, — улар ҙа төркиҙәр тураһында дөрөҫ яҙмай, шулай булғас, уларҙың университеттарына һәм академияларына ниндәй баһа бирмәк кәрәк?!”

Әлхасил, автор ҡуҙғатҡан төрки мәсьәләләргә бәйле ҡайһы бер үҙгәлекле фекерҙәремде ҡыҫҡаса ғына еткерергә бурыслы һананым үҙемде (тулырағы "Ағиҙел" журналында: "Башҡорт хәтере", 1996 йыл, N 9 — 11; 1997 йыл, N 1 — 8; 1998 йыл, N 8 — 9, 11 — 12; 1999 йыл, N 12; 2000 йыл, N 1 — 4 һәм Башҡортостан "Китап" нәшриәтендә — "Хәтерхитап" I том). Шунлыһын да киҫәтеп китергә кәрәк: Морат Аджиҙың күп йыллыҡ фиҙакәр хеҙмәтенең емештәрен тәшкил иткән был ике китап төрки тарихы буйынса ысынлап та уның *шәхси* асышы, ҡаҙанышы булып тора, сөнки ул бында беҙгә лә күптән үк билдәле төп һөҙөмтәләренә шәхсән үҙ аллы килде, шуның менән Өфөлә лә, Мәскәүҙә лә хаҡлыҡҡа тоғро эҙәрмәндәргә бер үк ваҡытта бер үк хаҡиҡәт табылыуын иҫбатланы. Әммә күҙгә салынып торған һәм хеҙмәтте киңгәткән баяғы "көҙөк нигеҙ"гә күҙ йомоу хилаф булыр ине.

2

Хөрмәтле автор төркиҙәр тарихының боронғолоғон "Дәшт-и-Ҡыпсаҡ" (Ҡыпсаҡ Далаһы) "дәүләте" йәшәгән урта быуаттар менән генә сикләй, ә шуға тиклемге әлмисаҡтан һәм һаламторхандан уҡ билдәле бөйөк дәүләттәребеҙҙе беҙҙеке итеп белмәй, йәки белеп тә өндәшмәй (был иһә арпалыҡлы – йәғни хеҙмәт хаҡы алып эшләүсе ҡайһы бер башҡорт ғалимдарының, ҡәнәғәтлектән ауыҙҙарын күпертеп: "Башҡорттоң мең йыллыҡ тарихы бар", -- тип мең йыл менән генә сикләүҙәренә ифрат тап килә); ә шул уҡ ваҡытта Башҡортостан матбуғатында башҡорт рухи (һәм матди) тарихының, ябайлаштырып әйткәндә, "донъя яратылғандан уҡ" дауамланып килеүе, ә беренсе башҡорт дәүләттәре башҡорттоң *төрлө ырыуҙары* тарафынан (Аджи белгән бер Ҡыпсаҡ ҡына түгел!) төрлө төбәктәрҙә бынан дүрт мең йыл элгәре үк төҙөлөүе һәм ул мәҙкүр дәүләттәребеҙ, башҡорттоң төрлө ырыуҙарын үҙ эсенә алһа ла, дәүләт менән идара итеүсе ырыу исемен йөрөтөүе мәғлүм (мәҫәлән, Үҫәргән, Һарт, Ҡаңғы, Терҫәк/Этруск, Ҡатай, Тамъян, Ҡошан, Тиләү, Башҡорт/Бәжәнәк, Ҡыпсаҡ һ.б. дәүләттәребеҙ). Ошо дәүләт төҙөүсе һәм дәүләткә исем биреүсе башҡорт ырыуҙары араһынан хөрмәтле авторыбыҙ ниңәлер Ҡыпсаҡҡа ғына үтә ғашиҡ һәм, моғайын, шуның арҡаһындалыр, урта быуаттарҙа ғына хасил булған "Дәшт-и-Ҡыпсаҡ"ты һәм ҡыпсаҡтарҙы бөтөн төрки донъяһының төп нигеҙе лә, үҙәге лә итеп ала, был иһә уның ҡараш даирәһенең һиҙелерлек сикләнеүенә килтерә. Һөҙөмтәлә бөтөн төрки донъяһын да тар майҙанлы "Дәшт-и-Ҡыпсаҡ" һәм бөгөнгө ҡайһы бер ҡаҙаҡ зыялылары уйлап сығарған яһалма "Бөйөк Дала" ҡыҫаһына бикләп ҡуя, ә бит башҡорт тоҡомдары үҙҙәренең изге Көн-Өфө һәм Ҡуңыр-Буға юлдарының икһеҙ-сикһеҙ дүрт армыты буйлап, ҡыҫҡаса ғына әйткәндә, Уралыбыҙҙан Кореяғаса (Һары диңгеҙ) һәм Египетҡаса (Ҡыҙыл диңгеҙ); Һиндостанғаса (Күк диңгеҙ) һәм Скандинавияғаса (Ҡараңғы диңгеҙ) бөтә Евразия ҡитғаһы буйлап таралған, Америка, Австралия

ҡитғаларынаса барып еткән һәм һәр ерҙә үҙенең дәүләттәрен, ҡалаларын төҙөгән... Бәй, әгәр ҙә шулай икән, “бер ырыулы” Морат Аджиса барһаҡ, бөгөнгө бөтә төркиҙәрҙе улар ҡасандыр айырымланып бүленеп сыҡмыш “атай-әсәй”ҙәре булған башҡорттоң исеме менән, йә булмаһа башҡорттоң төп ун ике ырыуының (эйе, ете түгел, ә ун ике — Үҫәргән яғының биш ырыуы менән Бәжәнәк яғының ете ырыуы!) теләгән береһенең исеме менән атарға булыр ине. Сөнки, Рәсәй тарихсыһы В.Ф. Генинг бик хаҡлы раҫлауынса, “төрки ҡәбиләләрҙең күпселегенең исемдәре башҡорттарҙың ырыу-ара атамалары рәүешендә нәҡ XVIII быуатҡаса һаҡланып килеп еткән” — бөтә төрки халыҡтары ла бер Тәүтөйәктән, игеҙәк тәүырыулы (Үҫәргән менән Бәжәнәк) башҡорт иләүенән яралған һәм таралған икән, тигән һүҙ был.

Бабаларыбыҙҙың Донъя-Ғаләм-Тереклек тәғлимәте буйынса, ерҙәге дөйөм кешелек йәмғиәтен үҙ эсенә алмыш һәм ҡап-урталай бүленмеш (көньяҡ ярты — Үҫәргән йәки Эске Башҡорт яғы; төньяҡ ярты — Бәжәнәк йәки Тышҡы Башҡорт яғы) тәүге өс сфера-уратаның беренсе (үҙәк) сфераһы (уратаһы) эсендә уның көньяҡ яртыһы булған Эске Башҡорт яҡлап Үҫәргән-Ҡаңғы, икенсе уратаһында Ҡыпсаҡ, өсөнсөһөндә Бәжәнәк-Башҡорт ырыуҙары; ә сфера-уратаның төньяҡ яртыһы булған Тышҡы Башҡорт яҡлап шул уҡ тәртиптә беренсе — Себер (Абар), икенсе — Ҡатай, өсөнсө — Бәжәнәк-Башҡорт ырыуҙары урынлаша. Иғтибар иткәнһегеҙҙер: түңәрәктәрҙең ике яртыһының да өсөнсө (тышҡы) яғы Бәжәнәк-Башҡорт ырыуҙары менән уратыла, был иһә бөтә ырыуҙарыбыҙ дөйөм исем менән Башҡорт (башҡорт халҡы) тип аталыуғаса үҫешкәнен сағылдыра. Ырыуҙарҙың һәр береһенән ҡолаҡланып яңынан-яңы ырыуҙар бүленә лә бөгөнгө күп һанлы төрки халыҡтарының гөлләмәһен тәшкил итә. Шулай итеп, тарихыбыҙҙың боронғо был осоронда һәр сфера-уратала икешәр ырыу урынлашҡан. Ә шуға тиклемге үтә сал-боронғо дәүерҙә иһә һәр сфера-уратала (улар ике яртыға бүленмәгән) ырыуҙарыбыҙ бары берәрҙән генә: беренсе (үҙәк) уратаның бөтөн майҙанында -- Үҫәргән (Үҫәргән-Ҡаңғы); икенсеһендә -- Ҡатай-Ҡыпсаҡ; өсөнсөһөндә Бәжәнәк-Башҡорт урынлашҡан. Был ураталар урынлашыуы, имеш, үҙәк уратанан яҡтыртмыш Көн (Ҡояш) спектры төҫтәренең сиратлашыу ҡанунына бәйле (бабаларыбыҙ быны ла яҡшы белгән!), шул төҫтәрҙең исемдәре менән аталған: үҙәктәге беренсе — Аҡ (боронғо әйтелештә Сар) йәки Алтын Урата (Урҙа); уға ҡатланмыш икенсе — Ҡыҙыл Урата (Урҙа); уға ҡатланмыш өсөнсөһө Күк Урата (Урҙа) — бына шунан килә лә инде боронғо төрки дәүләттәрҙең Аҡ Урҙа (Алтын Урҙа), Ҡыҙыл Урҙа, Күк Урҙа тип аталыштары. Һуңғы әйтелгән сал-боронғо дәүерҙәге өс сфера-урата, моғайын, кешелек донъяһының төп өс расаһының башланышы ла булғандыр...

Был йәһәттән урыҫ ғалимы А.А. Зубовтың күҙәтеүҙәре фәһемле. Расалар буйынса, ти ул, “кешелек донъяһы ҡап-урталай ике яртыға — көнсығыш (Тышҡы Башҡорт. — Й.С.) һәм көнбайыш (Эске Башҡорт. — Й.С.) яртыларға бүленә. Африка негроидтары — европеоидтар менән, ә көнсығыш негроидтар — монголоидтар менән тоташа (ә европеоидтарҙы

монголоидтар менән тоташтырып ҡап-уртала “атай-әсәй башҡорт” тора. — Й.С.)... Тимәк, ике яртыға (Эске Башҡорт һәм Тышҡы Башҡортҡа. — Й.С.) бүленеш — кешелек донъяһының өс расаға бүленешенә ҡәҙәрге иң боронғо хәле ул”, — тип йомғаҡлап ҡуя ғалим. Бына ошо хаҡиҡәткә таянып, Морат Аджиға үҙенең баяғы тар ҡоласын теләгәнсә киңәйтеү — *башҡорттоң* башҡа ырыуҙарына һәм “Башҡорт” тигән төшөнсәгә күҙ йомоп, *ҡыпсаҡ* исемен бөтә кешелек донъяһына ла тағыу мөмкинлеге бар...

Ә инде ҡитғаларҙы бергә тоташтырған баяғы изге Көн-Өфө юлы менән Ҡуңыр буға юлына килгәндә, ул юлдарҙы башҡорттоң башҡа ырыуҙары менән бергә уның Ҡыпсаҡ ырыуы ла кинәнеп гиҙгән, әлбиттә. Ләкин автор, баяғыса, ошо үҙе яратҡан бер Ҡыпсаҡ ырыуын ғына барыбыҙға (йәғни бөтә төркиҙәргә) атай-әсәйлеккә димләп, шуға ҡыҙыҡтырмаҡҡа булһа кәрәк, ҡайһы бер шаянлыҡтарҙан да тартынмай һәм ҡыпсаҡтарҙың тышҡы ҡиәфәт (тән төҙөлөш) буйынса йәнәһе лә күркәм европеоид расаһына ҡарауҙарын үтә лә тәмләп тә мауығып тәкрарлай (ә европеоидтарҙың игеҙәк туғандары “күркәм” түгел негроидтар икәнлеген өндәшмәй!..). Хатта ошо йәһәттән, берҡатлыларҙы уғата ныҡ сәмләндерергә самалапмылыр инде, ҡулы аҫтына ҡытай тарихнамәһе лә йәһәт йәлеп итеүләә: ҡыпсаҡтарҙың ҡиәфәте тураһында, ти ул, “ҡытайҙар яҙып ҡалдырған. Уларҙы зәңгәр күҙле, ерән сәсле төньяҡ күршеләренең тышҡы ҡиәфәте хайран ҡалдыра торған булған... Бөгөн ҡыпсаҡтар тышҡы ҡиәфәте менән бер-береһенән айырыла — ҡара сәслеләр, һоро күҙлеләр күбәйҙе”, — тип көйөнөп тә ҡуя хөрмәтле автор. Ләкин бында сәмдең саманан сыҡҡанлығы һиҙелә: беренсенән, ҡытайҙар ул “зәңгәр күҙле, ерән сәсле күршеләренең” *үҫәргәндәр (“үсүн”)* икәнлеген аныҡ атаған (ҡыпсаҡтар түгел!); икенсенән, шәхсиәтебеҙгә ҡайтһаҡ, әйтәйек, гәрсә әлегәсә бына минең, саф үҫәргәнлемнең, туғандары араһында тап ана шундай күҙгә бәрелмеш “зәңгәр күҙле, ерән сәсле”ләре байтаҡ булһа ла, тап үҙемдең “ҡара сәсле, һоро күҙле” булыуымды һис кенә лә кәмселек һанамайым, башҡортомдоң башҡалары ла тап шулай уйлай торғандыр. Сөнки, элекке бөтә СССР күләмендәге ғалимдарҙың комплекслы тикшеренеүҙәре буйынса (1969 йылда иғлан ителде), Евразияның ҡап-урталығында урынлашҡан башҡорт халҡы кешелектең расалары йәһәтенән дә ҡап-урталыҡта: бер яғынан — европеоид, икенсе яғынан монголоид расаларҙы үҙе аша берләштереп тоташтырыусы, әйтелгән төп ике расаның да төп билдәләрен үҙендә сағыу кәүҙәләндереүсе “атай-әсәй раса” кеүек һүрәтләнә, шуға күрә лә башҡорт халҡында ерҙәге барлыҡ расаларҙың да күрһәткестәрен табыуы ҡыйын түгел. Был иһә кешелек донъяһының бишеге лә, бишегенән биш төрләнеп тәпәйләнмеш тәүге бәпесе лә Ер Терәге (Тора-тау) менән Ер Кендеге (Арҡайым) урынлашҡан ошо ерҙән, ошо халыҡтан икәнлеген дәлилләүсе факторҙарҙың береһелер. Иғтибар итегеҙ: хатта мөкиббән ҡыпсаҡсы, “Бөйөк Дала”сы һәм Алтайсы Морат Аджи үҙе лә бит беҙҙең Уралдың, *башҡорт халҡ*ының кешелек өсөн ошо ғөмүми әһәмиәтен, теләр-теләмәҫ кенә булһа ла, тумбыта бирреп ҡуя: “Ул замандағы тарих, — ти ул, — Уралдағы Һынташ һәм Арҡайым тип аталған боронғо ҡалалар

ҡаҙылмаларында яҡшы уҡыла: бында металлургия эҙҙәре, иретеү мейестәре, баҡыр әйберҙәр табылған. Былар — төрки цивилизацияһының Уралдан башланыу ихтималлығына ишаралай. — Әммә автор бәрәкәтле хаҡлыҡ осконон шунда уҡ баҫырып-һүндереп тә ҡуя. — Ләкин, — ти ул, — икенсе *дәлил дә* ысынбарлыҡҡа тап килә кеүек: Урал был цивилизацияның старт майҙансыҕы ғына булғандыр. Иң мөһимен Алтай биргәндер, тим".

"Старт майҙансығы" тип таныҕас ("ғына"һы ниңә кәрәк?), ниңә инде "бөтәһе *лә* ошонан башланған", тип әйтмәҫкә?! Ҡайһындай "иң мөһимен"? Иң мөһиме — "старт майҙансығы" Урал түгелме ни? Киң донъяға осоштағы "иң мөһиме" булһын өсөн, тәүҙә оҫкос ракетаны яһау, уның "старт майҙансығы"н төҙөү һәм, иң мөһиме, шунан тороп ракетаны гөрөлдәтеп осороп ебәреү шарт таһа!..

3

Мәсьәлә шунда, кешелек затының тәү башлап яралыу һәм таралыу тәңгәле тураһында фән донъяһында ике тоҫмал билдәле: көньяҡ ярымшарҙағы ике урындан һәм төньяҡ ярымшарҙағы бер төбәктән. Һуңғы егерме йыл һуҙымындағы комплекслы тикшеренеүҙәр һәм асыштар һөҙөмтәһендә тоҫмалдың икенсеһе — Тәүтөйәк рәүешендә башҡорт иле Уралды билдәләгәне ышаныс ҡаҙана бара, ләкин рәсми танылған һәм раҫланған көҙөк Алтай тәғлимәтен яҡлаусылар ҙа бирешергә теләмәй, уларҙың арҡа терәктәре дәүләт мәнфәғәтендәге рәсми көс — Рәсәй фәндәр академияһы һәм Рәсәй субъекттарының фәндәр академиялары (ә улар артында кем һағауыллауын әйтмәһәк тә аңлашылалыр). Арпалыҡлы ғалимдар иһә тап шул академияларҙың институттарынан арпалана, ғилми дәрәжәләр ала, шулар билдәләгән һәм раҫлаған йүнәлеш буйынса бара. Ә шул йүнәлешкә тура килмәһә, арпалыҡлыларыбыҙ арпанан мәхрүм ҡала — ғалимға тикшеренеү ҙә, матбуғатҡа юл ярыу ҙа мөмкин түгел; Морат Аджи үҙе үк быны ҡаҙаҡ академигы А.Х. Маргулан, урыҫ академигы һәм профессоры А.П. Окладников, С.И. Руденко кеүек мәшһүрҙәр миҫалдарында иҫбатлай. Арпалыҡлы тикшеренеүсе Морат Аджиҙың үҙенең дә әҫәрҙәрендә, бынамын тигән төҙөк ниргә һалып бирә белеп тә, көҙөк нигеҙгә йәбешеп ятыуы шул арҡала түгелме икән?..

Алтай төптоҫмалын (концепцияһын) *дәлилләү* өсөн ул был өлкәлә билдәле булған ҡайһы бер мөһим мәғлүмәттәрҙе килтерә:

1. "Алтайҙа, Улалин йылғаһы буйында, академик А.П. Окладников иң боронғо кеше торлағын тапҡан. Уға ике йөҙ мең йыл!"

Уға китһә, Якутияның *Лена* йылғаһы буйындағы Тәрән Ярыҡ кешеләре бынан ике миллион йыл элегерәк йәшәгән. Тәрән Ярыҡ үҙе Өфө менән бер үк географик арҡауҙа (широта) урынлашҡанлыҡтан, бер үк климатта булғас, *Башҡортостанда* ла шул уҡ замандарҙа әҙәми зат

торғандыр (ҡомартҡылары йә юғалған, йә табылмайса ҡалған), сөнки Башҡортостан Уралы тәүдинденң һәм тәүге хоҙайҙарҙың да төйәге бит.

2. "Ике мең биш йөҙ йыл элек Тәңре аллаһы бында төрки халыҡтарына "тимер быуатты" аса. Фантастик ваҡиға был!" -- ти.

Уға ҡалһа, тимер иретеп ҡойоу эше Уралыбыҙҙа иртәрәк — иң кәмендә ике мең һигеҙ йөҙ йыл элек башҡарылған.

3. "Металл күплеге төркиҙәрҙе хужалыҡта фәнни-техник революцияға алып килгән: металлургик мейес уйлап сығарыуҙы әһәмиәте буйынса тәгәрмәс уйлап табыу менән генә сағыштырып була".

Ундай сал-боронғо бутал мейестәре башҡорт ерендә хәҙерге Магнитогорск комбинатын төҙөгәндә магнитлы тимер ятҡылыҡлы Атас тауы итәгендә ифрат күпләп табылған.

Әйтелгән бөйөк асыш — күп арасалы, көпсәкле, туғынлы ысын тәгәрмәс тә иң элек башҡорт Уралында яһалған бит.

4. "Төркиҙәрҙә яңы йәшәү рәүеше — атлы йәшәү рәүеше барлыҡҡа килә".

Атты беренсе башлап ҡулға эйәләштереү, менеү, егеү, һауып эсеү әмәлдәре лә тап Уралда — башҡорт бабаларыбыҙ тарафынан атҡарылған.

5. "Ике мең биш йөҙ йыл элек Алтайҙа инаныуҙар бәрелеше була: мәжүсилек дин менән алмашына. Тәңрелек дине тарала. Ләкин барыһы ла ҡабул ҡылмай Йыһан Аллаһын: ризалашмағандар далаға китә".

Иң элек шуны асыҡлайыҡ: "мәжүсилек" (йәки яҙыҡлы/яҙыулы дин, тәүдин) — үҙе үк дин һәм бөгөнгө донъяның төп диндәренең "ата-әсәһе" бит ул (барыһы уға нигеҙләнә), шуға күрә "мәжүсилек *яңы* дин йәки диндәр менән алмашына", тип әйтеү дөрөҫөрәк булыр ине.

Яҙыҡ (яҙыу, яҙыулы тигән һүҙ; яҙыуҙың да "яҙыулы дин" -- тәүдин яралған төбәктән башланыуын күрһәтеп тора) динденң (тәүдинденң) хоҙайҙарын, уларҙың Донъя-Ғаләм сфераһындағы урынлашыу һәм бәйләнешеү тәртибен (уны мин "Хәтерхитаб"ымда асҡанмын) белмәүҙән -- бөгөнгө рәсми фәндәребеҙҙең етешһеҙлегенән (был өлкәләге дөйөм наҙанлыҡтан) хасил тупаҫ хаталарҙы бер тамсы һыуҙағылай сағылдырыусы зерә лә яуаплы тезис был 5-енсеһе. Шул уҡ дөйөм хата бөгөнгө башҡорт зыялыларының да барсаһын, тип әйтерлек, мәхлүҡ аттай бер йүгәндән йүгертеүсе ауыҙлыҡ һәм ҡолаҡсын булғанлыҡтан һәм шуның арҡаһында рухи донъябыҙҙа яңынан-яңы сей хаталар өҙлөкһөҙ үрсегәнлектән, ошо мөҡәддәс тәңгәлдә, дилбегәне мөмкин тиклем йомарлабыраҡ тотоп, уҡыусыны ысын ғәмәл айышына төшөндөрөү фарыздыр.

Автор әйтмеш "инаныуҙар бәрелеше" бынан ике мең биш йөҙ йыл элек түгел, ә бынан өс мең ете йөҙ йыл элек, һәм Алтайҙа түгел, ә Уралда, нәҡ Башҡортостан тупрағында була, сәбәбе лә икенсе, сөнки автор атаған "Йыһан Аллаһы" (Дәү Хоҙай) нәҡ тәүдинденң бит иң өҫкө Хоҙайы булған һәм һуңыраҡ шытмыш башҡа диндәр тарафынан да шул рәүешле танылған. Ә хәлденң асылы былай: Асылыкүл ҡорамының бәге үҫәргәнле Сураштора (фарсыса Заратуштра, грекса Зороастр) аҫҡы ике Хоҙайға (дуализм) — Шүлгәнгә (Көнгә) һәм Уралға (Айға) бер юлы табынмалы ҡәҙимге тәүдинебеҙгә реформа үткәрә лә, ике Хоҙайҙың да яҡшы

сифаттарын — Уралға, ә яман сифаттарын Шүлгәнгә ҡануни беркетеп, бер Хоҙайға ғына (монизм) — “яҡшы” Уралға табыныу, ә “яман” Шүлгәнде дошман ҡылып ләғнәтләү динен (зороастризм) урынлаштыра һәм, үҙенең яңы диндәштәре менән бергә Ер Кендеге Арҡайым ҡалаһына күсенеп, яңы динде ҡитғаға тарата башлай; тап шул яңы диндең ҡанундарын йөкмәгән “Урал батыр”, Авеста, Ригведа әҫәрҙәре донъяға тыуа. *Л*әкин быны менән ризалашмаған һәм тәүдин ҡанундарына тоғролоҡ һаҡлаған, шуның арҡаһында “кафыр” Арҡайымдан ҡыҫырыҡланған икенсе бер үҫәргәнле зат, Муса пәйғәмбәр, үҙенең яҡлыларын (изге Тора китабында бәйәнләнеүенсә, алты йөҙ мең кешене!) алып Синай (хәҙерге Силәбе өлкәһендәге Синташты йылғаһы) аша көнсығышҡа табан ҡуҙғала ла, байтаҡ ҡына ер-һыуҙарҙы гиҙеп үтеп, моғайын, Алтайға ла барып етеп, ҡырҡ йылдан һуң ғына Уралыбыҙға кире әйләнеп ҡайта, Сураштораға эйәргән “кафыр” зороастрсыларҙың ир-аттарын бөтөрә ҡырып ташлай, “кафыр” ҡалаһына әйләнмеш Арҡайымды, башкөлләй емереп, ер менән тигеҙләй ҙә артабан бер ваҡытта ла унда ҡала ҡормаҫҡа бәддоға ҡылып ҡалдыра (һәм был үтәлә). Дыуамал реформасы Сураштора иһә башын алып башҡорттарҙың көньяҡтағы дәүләтенә — Бәктораға (Бактрияға) ҡаса, зороастрсылар быуаттар буйына шунан тороп яңы динде Иранға, Һиндостанға һәм хатта Индонезияғаса тарата.

4

Муса пәйғәмбәребеҙ теге саҡ ни өсөн Алтайға киткән, әллә, Морат Аджи әйтмешләй, Алтай ысынлап та Ер Кендеге — донъяның үҙәге булғанмы? Юҡ, әлбиттә. Донъябыҙҙың аяҡ осо ғына булған ул Алтай, ә башы менән кәүҙәһе уның Урал. Сөнки тәүдин тәғлимәтенә ярашлы, Донъя-Ғаләм-Тереклек ул хөнәсә (гермафродит) Имир Тәүбабаның тәне менән йәненән хасил икән: Донъя-Ғаләм-Тереклеккә тормош биреп вафат булғанынан һуң ҡатып ҡалмыш кәүҙәһенең төп өлөшө (әҙәм кәүҙәһенең төп ағзалары исеме менән аталмыш Баш тау һ.б. тауҙарыбыҙ менән ҡуша) — Урал тауҙары, һул аяғы — Ҡаҙаҡ-Аҙаҡ- тауҙары, ә уң аяғы — Алтай тауҙары имеш. Был иһә шул тау исемдәренең килеп сығышында анығ сағыла: хөнәсәнең ата (төн) яҡ яртыһынан хасилдары бөтәһе бергә — ***Имир-ал-адаҡ*** (был атаманың тәүге быуыны — “Имир”, икенсеһе — “уң”, өсөнсөһө “аяҡ” мәғәнәһендә); ә инә (көн) яҡ яртыһынан хасилдары бөтәһе бергә ***Ирим-аҡ-аҙаҡ*** (тәүгеһе — шул уҡ Имир, ләкин быуын урындары алмаштырылмыш “Ирим”, икенсеһе “һул”, өсөнсөһө “аяҡ” мәғәнәһендә). Әле беренсе итеп күрһәтелгән Ир яҡ яртының беренсе быуынының икенсе ижеге (Ир) һәм икенсе (ал) быуындарынан Ирал — *Урал*, ә икенсе (ал) һәм өсөнсө (адаҡ) быуындарынан аладаҡ — Алдай — *Алтай* тауҙарының аталыштары хасил. Ә икенсе (аҡ) һәм өсөнсө (аҙаҡ) быуындарынан аҡаҙаҡ — *Ҡаҙаҡ-Аҙаҡ* тауҙарының исемдәре яһалған. Күренеүенсә, хәҙерге карталарҙағы *Ҡаҙаҡ Убалыҡтары* ла, *Алтай тауҙары* ла боронғо башҡорт

донъяһының бер ниндәй ҙә кендеген түгел, ә ни бары аяҡ остарын (алыҫ өлкәләрен) генә тәшкил иткән; Муса пәйғәмбәребеҙ, Арҡайымдан ҡыҫырыҡланыуы сәбәпле, әмәлһеҙҙең көнөнән генә ҡыҙырған ул яҡтарға. Билдәле булыуынса, Муса пәйғәмбәребеҙ Ирал (Урал) тауҙарының ике аяҡ осона сығып кире әйләнеп ҡайтҡансы ҡырҡ йыл ваҡыт үтеп киткән, пәйғәмбәрҙең алты йөҙ меңлек яҡлыларының байтағы Алтайҙа һ.б. урындарҙа ерегеп тороп ҡалған; алыҫ өлкә Алтайҙа Муса пәйғәмбәр өндәгән хаҡ дин ҡанундарын ҡурсалаусы юғары белдеклеләр аҙ ҡалғанлыҡтан йәки булмағанлыҡтан, юғары мәҙәниәтле (яҙыулы) тәүдин унда тора-бара наҙан ғына шаманлыҡҡа (шаманизм) әүерелеп, ысынында берәү генә булмыш Тәңре урынына туҡһан туғыҙ, хатта туғыҙ йөҙ туҡһан туғыҙ Тәңре уйлап сығарғандар...

Морат Аджи ҡәләмдәштең хоҙайҙар иле легендар Шам-баланы шул Алтайға еректереүе лә хаҡиҡәткә ярашһыҙ, сөнки "Шам" ("Шам" — Ҡояш, "Шан" — һыу яҡтылығы тигән һүҙ) — Уралдағы Ер Кендегенең (Арҡайымдың) "Ҡояш байый" торған һәм ҡаған бойороп ултырған үҙәген белдерһә, "бала" (дөрөҫө балаҡ йәки балыҡ) — Ер Кендеге аҫты һыу яҡтылығындағы Донъя-Ғаләм-Тереклек тотаны (титаны) Балыҡҡа ишара, шуға күрә бөтәһе бергә "Баш ҡала" тигән һүҙ ул (мәҫәлән, Пекин ҡалаһының боронғо башҡортса исеме *Хан-балыҡ),* йәғни Шам-бала тигәндәре лә нәҡ Арҡайым үҙелер. Уны шулай уҡ *Сумеру* иле (эпосыбыҙҙағы Самарау иле), аҡ-һөт йылғалары аҡҡан *Дилмун* (Ителмән — Иҙел, Ағиҙел иле) тип тә атайҙар һәм ҡитғаның дүрт тарафының да халыҡтары үҙ ҡарыһүҙҙәрендә (ҡарыһүҙ -- ҡарт (боронғо) һүҙ; бәғзе бер авторҙар шуны, мәғәнәһен боҙоп, "ҡарһүҙ" (снежное слово) тип яҙа) был "Хоҙайҙар иле"н тәүтөйәгебеҙ Уралға урынлаштыралар, ундағы "ожмах ере"н дә күрһәтәләр (белеүемсә, Башҡортостандың Еҙем һыулы хәҙерге Архангел районы). Көнбайыш Европаның герман телле халыҡтары эпостарында иһә был "гүзәл ожмахлы хоҙайҙар иле" — СӘРК (әСӘРКән — Үҫәргән) тип исемләнә, ә уның баш ҡалаһы, ап-асыҡ рәүештә, АРҠАЙЫМ тип атала... Бына шуларҙы белмәйме ни бөтә Европаның, шул иҫәптән Рәсәйҙең, белдекле ғалимдары? Белә, әлбиттә (юҡҡамы ни Гитлер үҙе "арийҙар иле» Арҡайымды табырға һәм үҙҙәренеке ҡылып тикшерергә экспедиция әҙерләгән!), әммә-ләкин белмәҫкә тырышалар. Сөнки кешелек донъяһының бишеге лә (Яғалса-тау), Терәге лә (Тора-тау), Кендеге лә (Арҡайым-тау) урынлашҡан хоҙайҙар иле Уралыбыҙҙың донъя яратылғандан уҡ ошонда яралып йәшәгән, бөтә кешелек донъяһына йәшәйеш биргән хужалары һәм ҡурсалаусылары йәғни *ирәй* йәки а*рыу* йәки а*рий* (бары бер) тоҡомдар — төрки затлы, төрки телле башҡорттар булып сыға бит, ә был иһә һис кенә лә тегеләр өсөн маҡсатҡа ярашлы түгел, сөнки башҡорт-төрки урынында һинд-европа телле европеоидтар булырға, арийҙарҙың мираҫын йоморға тейеш. Шуға күрә, *башҡорт* тамырын Уралдан йолҡоп ташларға тип, ялған Алтай тәғлимәте уйлап сығарылған, төркиҙәрҙең бишеге итеп аяғосо Алтай иғлан ҡылынған...

Йәнә килеп, хөрмәтле автор Аджи тәүдиндең хоҙайҙар иерархияһындағы иң Юғары Дәү Хоҙайҙан ҡала башҡаларынан өҫтөн

булған игеҙәк хоҙайҙарҙың береһен, Дәү Хоҙайға бойондороҡло Тәңрене, шул уҡ Дәү Хоҙай итеп һанап тупаҫ хатаға юлыға; ә бит тәүдиндә Дәү Хоҙайға буйһонған һәм береһенән береһе олораҡ булған игеҙәк хоҙайҙар байтаҡ ҡына, уларҙың исемдәрен дә, Донъя-Ғаләм сфераһында ҡайһылай урынлашыуҙарын да белеп еткермәүселәр бер Морат Аджи ғына түгел, әлбиттә. Йәш быуын — юғары уҡыу йорттары талиптары һәм талибалары ла бындай мөһим мәғлүмәткә эйә булырға тейешлеген күҙ уңында тотоп, ошондағы уҡ "Урал батыр" эпосы нисә йәшендә?" тигән беренсе бүлеккә йүнәлтәм улар иғтибарын.

Күренеүенсә, Сыңғыҙ — Үҫәргән яҡтың, ә Тәңре — башҡорт яҡтың бер үк дәрәжәләге, туранан-тура Дәү Хоҙайға буйһонмош хоҙайҙары. Шуға күрә лә бәндәләр йәшәгән ер йөҙөндәге Үҫәргән яҡ *сәрхандарын* — (царь-хандарын) Сыңғыҙ-Хоҙайҙың ерҙәге кәүҙәләнеше итеп белгәндәр, хатта уның исемен дә ерҙәге сәрханға ләҡәп итеп биргәндәр (мәҫәлән, бабабыҙ Сыңғыҙ-хан). Ә башҡорт яҡ королдәре (йәки көләрҙәре) ерҙә Тәңре-Хоҙайҙы кәүҙәләндергән. Боронғо Арҡайым ҡағаны иһә Дәү Хоҙай менән туранан-тура аралаша торған булған... Тарих яҙғанда ошоларҙы иҫәпкә алмау дөйөм рухи донъябыҙҙа хата өҫтөнә хата ғына ырата. Сөнки, хөрмәтле Морат Аджи үҙе бик хаҡлы әйтеүенсә, "халыҡ тарихы — иркекле хикәйәт түгел, фән ул. Математика һәм физика кеүек аныҡ фән". Афарин, ауыҙыңа бал да май!

21.11.1999.

"Тора тау" фильмен ҡарағас

Әле һеҙ ҡараясаҡ, Шәүрә һылыу Ғилманова эшләгән ҡыҫҡа ғына, әммә үҙенсәлекле был фильм, минеңсә, мәңгелек тураһында.

Дөрөҫ, ундағы илаһи күренештәр, бер-бер артлы, күҙ асып йомған арала — бер мәлдә генә һынлана, ләкин был мәлдәр — мәңгелектең мәлдәре. Сөнки һәр бере, донъя яратылғандан уҡ хасил булып, бөгөнгәсә килеп еткән һәм киләсәккә лабарырҙар, әгәр ҙә беҙ, кешеләр, алдыбыҙҙы-артыбыҙҙы уйларлыҡ аҡыллы булһаҡ. Асылында бит беҙ үҙебеҙ — мәл генә, ә ул тауҙарыбыҙ, ер-һыуҙарыбыҙ мәңгелек.

Хөрмәтле тамашасы, күҙеңде асыбыраҡ, уйланыбыраҡ ҡара: ниндәй изге мөғжизәләр араһында торабыҙ, ата-бабалар аманатынан нимәләрҙе мәңгегә Юғалтабыҙ?!. Алдыбыҙҙағы тәбиғәт һәм рухиәт ҡомартҡылары, тәүдин тотҡан алыҫ бабаларыбыҙ инанып йәшәүенсә һәм килер быуындарға изге аманат итеп һөйләп ҡалдырыуҙарынса, рухыбыҙҙың күҙ ҡаралары һымаҡ ғәзиз бит улар! Миҫал өсөн атайым бер-икеһен.

Алайыҡ Тора тауҙы, шул тәүдинебеҙ буйынса, Дәү Хоҙайыбыҙҙың дарманлы аталығын. Донъя яратылғандан уҡ донъялағы бөтә булған тереклеккә йән биргән, тормош биргән бәрәкәтле хәрәкәтте башлап ебәргән илаһи атайыбыҙ, Хоҙайыбыҙ бит ул изге Тора тау. Хатта бөтә Хоҙайҙарыбыҙҙың атаһы!

Әсәйебеҙҙең эмейеләй ҡабарып торған Ҡуш тау иһә, ысынлап та, Дәү Хоҙайыбыҙҙың Эмейе тип һаналған. Уның ике яғындағы Шәке тау менән Йөрәк тау — Эмейҙең имсәк баштары. Донъялағы бөтә булған тереклеккә Дәү Хоҙайҙың күкрәк һөтөн имеҙеп бағыусы изгеләрҙән изге Эмей Хоҙайыбыҙ был. Ошо аҡ-һөт арҡаһында Шүлгән батыр — Шәке тау итәгендә, Урал батыр — Йөрәк тау итәгендә тәүге кешелек ырыуҙарын үрсеткән...

Ә бөгөн беҙ, шуларҙың тоҡомдары, самаһыҙ аҡыллы баштар, ошо изге еребеҙҙең, Хоҙайҙарыбыҙҙың ҡәҙерен беләбеҙме?

Яуап итеп үтә шомло сағыштырыу килтермәй булдыра алмайым, кисерегеҙ бер юлы.

Ҡырҡынсы йылдарҙа бөйөк Ватан һуғышы осоронда Гитлер фашизмының үҙе үлтергән әҙәм кәүҙәләренән һабын ҡайнатҡанын ишетеп тетрәнгәйнек.

Хәҙер иһә изге рухи донъябыҙҙы ҡурсалап һаҡлау йәһәтендә үҙебеҙ унан да уҙҙырҙыҡ: Дәү Хоҙайыбыҙҙың изге имсәк башы булған Шәке тауҙан... Һабын содаһы яһаныҡ... Икенсерәк әйткәндә, әсәйебеҙҙең имсәк башын тешләп өҙөп, төкөрөп таштаныҡ... яһиллыҡтың сигенән уҙыуҙыр был...

Рухыбыҙҙың шәке тауҙары Шартлатылып юҡҡа сыҡҡан тәңгәлдәрҙә кешелек донъяһы өҫтөндә үлемесле “азон тишектәре» барлыҡҡа килә, шул тишектә рухы үлгән кешелек үҙе үлә. Кисекмәҫтән хәтәр “азон тишектәре”н ямарға, Шартлатылған Шәке тауын да элекке хәленә ҡайтарып өйөргә кәрәк булыр, минеңсә. Ошо хаҡта фильмдәге һәр тау-таш, саң остоғо, сәскәләрҙең гонаһһыҙ саф күҙҙәре ерҙең өнһөҙ ауазын йәнгә үткәҙеп оранлай һымаҡ. Һуңғы кадрҙағы Шәке тауының шартлау ғәрәсәте йөрәген ярылырҙай иткән һәр бер йән эйәһе ишетер был ауазды, моғайын.

Мәңгелек һәм *мәл* хаҡында уйланайыҡ, туғандар.

Йыр кеүек яңғыраны

Ошо йылдың йәмле июнь айында милли батырыбыҙ Салауат Юлаев көндәре республикабыҙҙың Балтас районында шаулап-гөрләп барғанда зәңгәр экрандан шундай уҡ шөңгөр ваҡиға – “Башҡортостан” киностудияһының Салауатҡа бағышланған “Һынмаған рух” исемле кинофильмен ҡараунасип булды. Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт эшлеклеһе, танылған кинорежисссер, драматург, артист һәм “Башҡортостан” киностудияһын нигеҙләүсе, шуның тәүге директоры Әмир Ғәбделмән улы Абдразаҡовтың нәүбәттәге мәшһүр әҫәре ине был. Нәүбәттәге, сөнки уның ошондай уҡ юғары талантлы “Башҡорт туйы”, “Халҡым һағышы”, “Әхмәтзәки Вәлиди” һ.б. фильмдәре менән бына нисәмә тиҫтә йылдар инде рухланып һәм зауыҡланып, рәхмәт хисе менән тулышып йәшәйбеҙ. Халҡыбыҙҙың үлемһеҙ йыр-моңдарын, һағышлы

тарихын, изге йолаларын беренсе башлап тулы ҡанлы, баҙыҡ итеп экранға сығарыусы, шуның менән киң ҡатламдарҙың йөрәктәрен изгелеккә, игелеккә елкендереүсе булды ул. Тоталитар режим дәүерендәнахаҡтан ситләтелгән һәм тыйылған бөйөк хореограф Фәйзи Ғәскәровтың йор булмышын һәм емешле эшмәкәрлеген тасуирлаған “Күңелем ҡанаттары”, бөйөк йыраусы “Сөләймән Абдуллин йырлай” тигән үҙҙәренә күрә берҙән-бер фильмдәрҙең дә авторы Әмир Абдразаҡов булды, быларҙы ул юғарынан рөхсәт-фәлән һәм ярҙам көтмәйенсә, үҙ белдеге, әүҙемлегендә эшләп ҡалдырҙы (әйткәндәй, “Әхмәтзәки Вәлиди” менән дә шундай уҡ хәл ҡабатланды), ә хәҙер улар сәнғәтебеҙҙең мәңге йәшәр алтын фондын тәшкил итә. Уҙамандың тыуған иле алдындағы егетлеге, саялығы түгелме ни был?! Әйтелгәндәрҙең киләсәк өсөн дә тарихи ҡиммәте ҙур: ҡабатланмаҫ һандуғас моңло халыҡ йырсылары, мәшһүр артистар һ.б. төрлө маһирҙарыбыҙ йөрәктәренең ялҡыны, килеш-килбәте менән тере итеп һынландырылды һәм уларҙы беҙҙән һуңғы быуындар ҙа яратып ҡараясаҡ, тыңлаясаҡ. Тап Әмир Абдразаҡов йәнә сәнғәтебеҙҙә беренсе башлап киң күләмле полотноларға тотондо – Ғәли Ибраһимов, Яныбай Хамматов романдарынан ҡыҙыҡлы фильмдәр яһаны, шуның менән ул хәҙерге яңы быуын режиссерҙарының тулы метражлы нәфис фильмдәренә юл ярҙы.

Һәм бына шул юғары профессионализм, оло һәм бай тормош тәжрибәһе атап үтелгән “Һынмаған рух”та автор илһамын яңы сағыу бейеклеккә күтәреп, бөйөк батырыбыҙ тураһында күңел ҡылдарын иңрәтерлек, рухыбыҙҙы ҡанатландырырлыҡ күргәҙмәле йыр тыуған.

Башланышы уҡ уңышлы: Протазановтың атаҡлы “Салауат Юлаев” фильмендәге дәһшәтле яу кадрҙары башҡорт иленең ҡаҡшамаҫ яугирлеге, Салауат рухының мәңгелеге тойғоһона көйләп алып китә тамашасы күңелен. Ожмахҡа тиң Башҡортостан тәбиғәте – батырыбыҙҙың тыуған ер күренештәре, һөргөндә ул һәләк булған һөмһөр Балтиҡ диңгеҙе ярҙары, яу ҡырында дошман ғәскәрҙәре өҫтөнә ҡыйғыр бөркөттәй ташланған батырыбыҙҙың полотноларҙа һынландырылған образдары бермә-бер сиратланып, йәмғеһе бергә Салауат тураһындағы халҡыбыҙ сығарған героик-моңло йырҙар, уның үҙенең мәшһүр шиғри юлдары менән тығыҙ үрелеп бара, шул үремдең үҙәгендә тарихи яҡтан баҙыҡ эшләнегән диктор тексы инандырғкыс яңғырай, һөҙөмтәлә бөтә ижади саралар уҡмашып, художестволы теүәллек, камиллыҡ хасил итә.

Билдәле булыуынса, Бөйөк Ватан һуғышы осоронда хакимиәт тарафынан фронттарҙа бөйөк Салауат исеме һәм образы яугирҙәребеҙҙе дошманға ҡаршы рухландырыу, яуға күтәреү өсөн киң ҡулланылһа ла, һуғыштан һуңғы йылдарҙа уның исемен онотторт оу сараһы ла күрелде, буғай. Сөнки Салауат исемен баш ҡаланың әҙәм йөрөмәҫ иң ҡыҫҡа һәм алама тыҡрығына ҡуштылар, башҡорт йәмәғәтселеге әүҙемлегендә Эстонияның Палдиски ҡалаһында торғоҙолған һәйкәлен юҡ ҡылдылар, Өфөнөң “Башҡортостан” кәйефханаһы алдындағы атлы һынын да ҡыйраттылар... Диктор тексында ошондай тарихи күңелһеҙлектәр ҙә тотанаҡлы һәм тыйнаҡ, бик урынлы телгә алына. Ғүмере буйына арымай-

талмай эшләүсе атаҡлы режиссерҙың бер килке башҡа коллегалары сәйәси шаңҡыуҙан иҫәңгерәгән йә йоҡомһораған замандарҙа ла яңғыҙ үҙе өлгөрләнеп таҫмаға төшөргән ҡиммәтле тарихи табыштары араһында Салауат Юлаевтың яндырылып юҡ ителгән Тәкәй ауылы урынын, Ағиҙел яры сағылында данлы һыбай батырыбыҙға һәйкәл асыу тантанаһын, шундағы халыҡ массаларының ҡыуанысла йөҙҙәрен, тарихи шәхестәребеҙҙе һәм Палдиски ҡалаһындағы һәйкәлде ҡабат тергеҙеү ваҡиғаларын күрәбеҙ (киләсәктә лә күрерҙәр).

Һәр хәлдә, сәнғәтебеҙҙең ифрат мөһим өлкәһендә иҙеү сисеп, еңһыҙғанып оҙаҡ йылдар күркәм эшләгәне өсөн тыйнаҡ ҡына “атҡаҙанған” Әмир Абдразаҡовтың был ҡаҙанышы ла элеккеләренең һоҡланғыс тәбиғи дауамы, сорғолошо булып тора һәм ул дөйөм ижадының берәгәйлегендә йәмәғәтселектең лайыҡлы баһаһын алырҙай.

21.06.2006.

Моряктар ҡайғылы көндәрҙә
(Йәшлек яҙмалары)

Мин был көндә Таллинда, хәрби карабыбыҙҙың йәмәғәт башланғысындағы китапханасыһы булараҡ, замполиттың каютаһында ултыра инем. Ҡулыбыҙҙа ҡәләм, алдыбыҙҙа ҡағыҙ, карап китапханаһының төп фондын тикшерәбеҙ. Түңәрәк иллюминаторҙар аша беҙгә ярты гавань күренеп тора. Тышҡы рейдта, күҙ етеменсә арауыҡта ҡара-ҡусҡыл тулҡындар һырттарын ҡабартып уйнайҙар. Ә тын гавань үҙе ҡалын боҙ аҫтында ята әле бығауланып; буксирҙар ватып үткән урындарҙа ғына тәртипһеҙ рәүештә өйөлөшкән боҙ киҫәктәре араһынан күкшелт һыу үҙенең зәғиф тулҡынсыҡтарын тәгәрләтә. Ярсыҡ-йорсоҡ Боҙҙар күктәге йыртыҡ болоттар араһынан һибелгән тоноҡ ҡына Ҡояш нурҙарына ҡаҡлығып емелдәйҙәр. Стенка (бетон яр) буйына, *бал* тәпәне ҡырыйына йыйылған себендәрҙән дә тығыҙыраҡ булып, эреле-ваҡлы хәрби караптар теҙелгән. Зәңгәр корпустары, мөрйәләренең алтын кеүек ялтырауыҡлы еҙ дүңгәләктәре һәм кормаларындағы ел берҙәүек флагтары менән аҡ ҡар яланы фонында улар уйынсыҡтарҙай зифа һәм сибәр күренәләр. Караптарҙың өҫкө палубаларында өҙлөкһөҙ хәрәкәт бара, тынғыһыҙ матростар мостиктарға ҡырмыҫҡаларҙай һибелеп, орудиеларҙы таҙарталар. Кәшкәйеп Юғары күтәрелгән сағтарында пушкаларҙың ҡара тамаҡтары донъяны йоторға әҙерләнгәндәй ҡурҡыныс өңшәйгәндәр. Рейд тынғыһыҙ, ундағы боҙҙарҙы ел ҡыуып алып китеп бөтөргән, унда күҙ етеме ерҙә, уҫал эт өйөрҙәреләй, һырттарын ҡабартып, баяғы ҡара-ҡусҡыл тулҡындар һикерешә. Улар артында, һорғолт күк буяуына ҡушылып ирегәндәй, һиҙелер-һиҙелмәҫ кенә, гавангә яҡынлашып килгән караптарҙың мачталары офоҡ һыҙығынан ҡаҙау кеүек тырпайып тора.

Гавань үҙенең көндәлек тормошо менән йәшәй һәм Ҡояш та көндәгесә яҡтырта. Бығаса ер Шары күргән бөйөк ҡайғыларҙың иң

бөйөгөнөң, ҡара болоттай ҡуйырып, бөтә ил өҫтөнә ябырылырға тороуы баштарыбыҙға инеп тә сыҡмай. Матростар көндәгесә үк уҡыйҙар, өйрәнәләр, палуба шва бралайҙар. Кубриктарҙа, трюмдарҙа, күперсектәрҙә әленән-әле шаян һүҙҙәр һәм көлөү тауыштары яңғырап китә. Замполиттың үткер итеп осланған ҡәләме кенәгә биттәренә кескәй ҡарға ҡанаттары ҡалдырып, яҡшы аттай юрғалап йөрөй. Командирымдың өҙөк-өҙөк киҫәтмәләрен мин тиҙ генә ҡуйын дәфтәремә сыймаҡлап алам һәм, ҡара күн көпләнгән йомшаҡ диванға әүшәрелә биреп, тағы ла иллюминатор тышындағы тынысһыҙ донъяны күҙәтәм. Шулай ғәмһеҙ ултырғанда, бығаса шып-шым торған радиорепродуктор ҡыштырлап йәнләнә башланы һәм беҙҙең иғтибарҙы үҙенә тартты. Карап расписаниеһы буйынса был саҡта радиотрансляция эшләргә тейеш түгел ине. Был хәлгә ғәжәпләнеп, эшебеҙҙе ташланыҡ: «Ни булған, берәй мөһим хәбәрме?» Мәскәү дикторының фразаһын урта бер еренән башлап тыңларға тура килдебеҙгә. Күңелдәребеҙҙә мәңге төҙәлмәҫлек тәрән яра булып ҡалды был ауыр һүҙҙәр: «...мейегә ҡан һауыу... иҫтән һәм телдән яҙыу менән уң аяҡ һәм уң ҡул параличы...»

Һүҙ халҡыбыҙ өсөн сикһеҙ ҡәҙерле бер кеше хаҡындабарыуы шикһеҙ ине. Түҙемһеҙлек менән дикторҙан был кешенең исемен көттөк. Һәм бына: «...4 марттың төнгө икенсе сәғәтендә Иосиф Виссарионович Сталиндың һаулығының торошо ауыр килеш ҡалыуын дауам итә...» Беҙ бер ауаздан ҡысҡырып ебәрҙек: «Сталин! Сталин ҡаты ауырый!..» Белһәгеҙ ине, ниндәй көтөлмәгән күҫәк булып бәрелде был хәбәр беҙҙең баштарға! Дикторҙың ҡайғылы тауышы үҙенең бер үк ағымында ары дауам итә бирҙе, уның һәр һүҙен беҙ, ҡулдарыбыҙ менән йолҡоп алырҙай булып, түҙемһеҙләнеп көттөк. Әйтелгән һәр һүҙ ҡурҡынысыраҡ көс алабарҙы. Айырым һүҙҙәр оло хәсрәт диңгеҙенең ваҡ тамсылары булһалар, йөмләләрҙән ҡара болот ҡабарып, һалҡын һулышы менән йөрәктәребеҙҙе туңдырабашланы. Ни әйтергә лә белмәйенсә, тауыш-тынһыҙ ултырҙыҡ. Эргәбеҙгә карап докторы килеп инде, ҡулында — йыртып алынған һәм нимәлер сыймаҡланған дәфтәр бите. «Да-а-а, — тип ауыр көрһөнөп ҡуйҙы ул. — Да-а-а... — Ҡағыҙын өҫтәлгә йәйеп һалды ла, бармағы менән төртә-төртә: — Ишеттегеҙме? Әгәр ҙә һауыҡтыра алһалар — ҙур ҡаһарманлыҡ буласаҡ был!» — тине.

Ошо минуттан алып, карапта бығаса күрелмәгән яңы тормош башланды. Шаярыуҙарҙы, уйнап-көлөүҙәрҙе ҡул менән һыпырып алғандай булды. Кешеләр, шатлыҡтың ни икәнен онотҡандай, баштарын түбән эйеп, тәрән уйға сумып йөрөнө. «Һауыҡты!» — тигән хәбәрҙең килеүен түҙемһеҙләнеп көттөк. Бөйөк даһиҙың хәл-әхүәле ни тиклем генә ауыр булмаһын, күңелдәр һис шикләнмәйенсә сирҙең бәхетле тамамланыуына ышана ине, хафаланып һыҙлаған йөрәктәрҙе ҙур өмөт уты йылыта ине. Ике-өс матрос бергә килдеме, бөтә һөйләгән һүҙҙәре шул даһиҙың ауырыуы тураһында ғынабара. «Хәҙерге ғилем менән, — тиҙәр улар, — үлгән кешене генә терелтеп булмай. Ә ҡалғанын бөтәһен дә эшләп була». Һәм, бер-береһенән уҙҙырырға тырышҡандай, ашығып, үҙҙәре ишеткән-күргән ваҡиғаларҙан миҫалдар килтерергә тотоналар.

Радио тормош сығанағына әйләнде. Кубрикта ултырабыҙмы, өҫкө палубала йөрөй бөҙмө, әллә механизмдар эргәһендә вахтала торабыҙмы — Ҡояш сығыуын көткән гөл кеүек, күҙҙәребеҙ тишелеп, Мәскәүҙең һөйләүен көттөк. Кистәрен, сәғәт ун берҙән үк тулы от бой уйналһа ла, радионан һуңғы мәғлүмәттәр бирелгәнгә тиклем простыня аҫтынан күҙҙәребеҙҙе шарландырып йоҡламай ятыр инек. Ләкин радио беҙгә шатлыҡлы хәбәр килтермәне. Көн һайын һандалға сүкеш һуҡҡандай сыңлап ишетелгән бюллетендар даһиҙың хәле сәғәт һайын ауырая ғынабарыуын һөйләнеләр. Көндәлек хеҙмәтебеҙҙең ил алдында яуаплылығы торған һайын һиҙелерлек артабарҙы. Ошо ауыр көндәрҙә миллионлаған-миллионлаған ябай кешеләр уғата ҙурыраҡ ышаныс менән ҡараштарын беҙгә — хәрби диңгеҙ һаҡсыларына төбәй кеүек хис иттек. Ҡулдар үҙҙәренән-үҙҙәре бығаса күрелмәгән тапҡырлыҡ һәм ныҡышмалылыҡ менән әйләндерҙеләр, көйләнеләр механизмдарҙы. Айырым бойороҡ-фәлән бирелмәүгә лә ҡарамаҫтан, караптағы булған бөтә еҙ деталдәр элеккегә ҡарағанда ла ялтырауыҡ итеп таҙартылдылар. Матростар ҙа һындарын турайтыбыраҡ йөрөй башланы, кейемдәре һәр саҡ шымартылған, еҙ төймәләре Ҡояштай балҡып тора.

6-һы көндө подъем ғәҙәттәгенән элек булды. Койкаларыбыҙҙан һикерешеп торҙоҡ та, был ғәҙәттән тыш хәлгә ғәжәпләне берәк, бер-беребеҙҙән һорашырға керештек: «Ниңә иртә уяттылар, бер-бер хәл бармы әллә?!» Йөрәктәр ниҙер һиҙенеп һыҡтай башланы, мейеләрҙе электр осҡоно кеүек бер фекер ярып үтте: Сталин, Сталин...

Был реаль хәбәр түгел, ә беҙҙең йөрәктәрҙе һыҙлатып тыуған һиҙенеү генә ине әле. Үҙ юрауыбыҙҙан үҙе ббеҙ тертләп, йәнебеҙ-тәнебеҙ менән янып, телдәребеҙ осондағы бер генә һүҙҙе тәкрарланыҡ: булмаҫ, булмаҫ, булмаҫ!..

Ҡыштырҙауһыҙ йомшаҡ аҙымдар менән атлап, траптан замполит килеп төштө һәм арабыҙға инеп ҡыҫылды. Күҙҙәребеҙ менән ашарҙай булып, радиорепродукторға текләнек. Кубрикта себен осоуы ишетелерлек тәрән тынлыҡ урынлашты. Кремль куранттарының һуғыуын ҙур түҙемһеҙлек менән көтөп алдыҡ. Иртә һайын беҙҙең көндәлек тормошОбоҙҙо башлап ебәреүсе дәүләт гимны бөгөн бүтән көндәргә ҡарағанда, нисектер, ҡырыҫ тантаналыҡ менән яңғыраны. Гимндан һуң эфирҙа урынлашҡан ҡыҫҡаса тынлыҡ беҙгә шундайын да оҙаҡ булып тойолдо ки, әйтерһең дә секундтар түгел, ә оҙон быуаттар үттеләр. Беҙ, тәүлек буйына алмашһыҙ ҡалдырылған часовой кеүек, сыҙамайынса, бер аяғыбыҙҙан икенсе аяғыбыҙға ауышабашланыҡ. Әйтерһең дә, был саҡ донъяла секундтар түгел, ә йылдар, быуаттар хөкөм һөрә ине. Ниһәйәт:

«От Центрального Комитета Коммунистической Партии Советского Союза, Совета Министров Союза ССР и Президиума Верховного Совета СССР.

...Ко всем членам партии, ко всем трудящимся Советского Союза.

Дорогие товарищи и друзья!..»

Көтмәгәндә һибелгән бер ушат боҙло һыубулып үҙ ғүмеребеҙҙә тәү мәртәбә ишетелгән иң ауыр, иң хәсрәтле һүҙҙәр ябырылабашланы баштарыбыҙға. Даһи үлгән... Ил Ҡояшы һүнгән... — үҙ ҡолаҡтарыбыҙға ышанаһы килмәне. Тамаҡтарыбыҙға йомғаҡланып тығылған күҙ йәштәребеҙгә быуылған хәлдә, ҡалтыранған ҡулдарыбыҙ менән бескозыркаларыбыҙҙы һалдыҡ, *башта*рыбыҙҙы түбән һәлендерҙек. Үткер әсенеү йөрәктәребеҙҙе киҫәктәргә телгеләне. Ләкин таштай ҡатып ҡалған йөҙҙәр буйынса бер тамсы ла күҙ йәше тәгәрләп төшмәне, бәлки, төшкән булһа ла, уны кешеләр бер-береһенә күрһәтергә теләмәгәндер. Ни хәл итәһең, беҙ хәрби кешеләр бит. Беҙгә, ауырлыҡтар ҡаршыһында е беп, күҙ йәштәренә буялып ултырырға түгел, ә эш итергә кәрәк, Ватан, Сталин тарафынан алдыбыҙға ҡуйылған изге бурыстарҙы аҙағынасанамыҫ менән үтәп сығыр өсөн, яңынан-яңы саралар эҙләп табырға кәрәк.

9 март Балтикала һалҡын һәм еүеш булып килде. Дегет һымаҡ ҡуйы болоттар бөтә күк йөҙөн ҡапланы. Уйсан һәм асыулы диңгеҙ, ҡо бараһын осороп, ҡурғаш тулҡындары менән сал ҡаяларҙың итәген ҡамсыланы. Төньяҡ-көнсығыштан иҫкән һыуыҡ елгә өшәнгәндәй, түбән төшөрөлгән флагтар таш бәйләнгән кеүек һалмаҡ ҡына һелкенеп торҙолар. Беҙ иртәнән алып карапҡа боеприпас ташыныҡ. Патрон тултырылған ауыр йәшниктәрҙе яурынға һалған килеш траптан күтәрелгән саҡта һис берәү ҙә элеккеләй шаян һүҙҙәр алышып маташманы. Ҡайғыбыҙҙы физик хеҙмәт менән томаларға теләгәндәй, тештәребеҙҙе ҡыҫып, тауыш-тынһыҙ эшләнек. Бер төркөм матростар стенкала (бетон ярҙа) таҡталарҙан ваҡытлыса трибуна яһап өлгөрттө. Трибуна түренә, ҡара ебәк туҡыма һәм йәшел кедр ылыҫтары бәйләме менән уратып, иптәш Сталиндың ҙур портретын ҡуйҙыҡ. Ул ғәҙәттәгесә хәрби формала, көләмһерәп ҡыҫылған яғымлы күҙҙәре, тәрән уйсанланып, йыраҡтарға төбәлгән. Һәр бер һыҙығынаса таныш, туған булған даһи йөҙөнөң бөгөн матәм тирәсе эсендә булыуына һис кенә лә ышанғы килмәй ине.

Сәғәт 11.00-дә бөтә караптарҙа борғо шаңғыртып ҙур йыйын (большой сбор) әмере уйналды. Парад формаларыбыҙҙы ашығыс кейенеп, өҫкө палубала стройға теҙелдек һәм, «смирно» баҫкан килеш, радиорепродуктор аша алыҫ Ҡыҙыл майҙанды тыңлай башланыҡ. Иптәш Хрущевтың яңғырауыҡлы ҡалын тауышы матәм митингыһының асылыуын иғлан итте. Һәм Совет Хөкүмәтенең, Партияның етәкселәре — бөйөк даһиҙың бөтә көрәш дауылдары аша ҡулға-ҡул тотоношоп бергә үткән тоғролоҡло шәкерттәре һүҙ алып, бөйөк даһиҙың табуты алдында ант булып яңғыраған телмәрҙәрен һөйләнеләр. Уларҙың әйткән һәр һүҙе, гранитҡа сүкелгән изге яҙыу кеүек, беҙҙең йөрәктәрҙә юйылмаҫ урын алды. Улар ауыҙынан беҙ даһийыбыҙ Сталиндың үлемһеҙ һүҙҙәрен ишеттек. Эйе, эйе, беҙҙең төп маҡсатыбыҙ — коммунизм. Һәм төҙөр бөҙ ҙә беҙ уны! Беҙҙең, хәрби моряктарҙың, изге бурысы — һөйөклө Ватандың оборона ҡеүәтен нығытыу.намыҫлы үтәр беҙ был изге бурысты, иптәштәр! Хәрби моряктарбар сағында бер дошман кара бы ла беҙҙең киң диңгеҙҙәребеҙҙең

тулҡындарын яра алмаҫ, совет халҡының тыныс хеҙмәтен бүлдерә алмаҫ, ышанығыҙ беҙгә, иптәштәр!

Иптәш Сталинды күмеү процессияһы башлана. Тауҙар-урмандар, йөҙәрләгән километрҙар аша беҙ күңелебеҙҙән Ҡыҙыл майҙандың манараларын күрәбеҙ һәм үҙебеҙҙе шул майҙандағы даһи менән хушлаша килгән халыҡ диңгеҙе эсендә хис итәбеҙ.

Радио һөйләй: «...Партияның һәм Совет Хөкүмәтенең етәкселәре мавзолей трибунаһынан төшәләр һәм иптәш Сталиндың табутына яҡынлашалар, уны күтәрәләр һәм яй ғына мавзолейға табан йүнәләләр. Оркестр матәм маршы уйнай...»

Эфирҙа, алыҫтағы күк күкрәүе кеүек гөрөлдәп, беренсе туп тауышы гөрһөлдәне. Ул да булмай, шул уҡ мәлдә беҙҙең ҡала гарнизонының ауыр диңгеҙ орудиелары телгә килделәр. Пачкаһы менән бер-бер артлы күккә һибелгән көслө залптар бөтә гавань буйҙарын дер-һелкетте. Унар меңләгән гудоктар һәм сиреналар һулығып-һулығып илай башланылар. Ер һәм күк, бөтә булған диңгеҙҙәр, урмандар, ҡалалар һәм ауылдар оло хәсрәтте күтәрә алмайынса илай, һыҡтай төҫлө тойолдо беҙгә. Эйелгән баштарҙан бескозыркаларыбыҙҙы алдыҡ ҡулдарыбыҙға: «Хуш бул, туған атай...» Дегет кеүек дөмһөрәгән ҡара күктән силәкләп Боҙ ҡатыш ямғыр ҡоя башланы. Завод мөрйәләренән сыҡҡан ҡуйы төтөн, күккә олғаша алмайынса, киң гавань өҫтөнә йәйелде. Сыланған ҡара һөрөм мамыҡтары ямғыр менән аралашып палуба өҫтөнә ятты. Яланғас түбәләребеҙгә ҡаты боҙ борсаҡтары «тып-тып» бәрелә, шинель яҡаһы аҫтынан үтеп арҡабыҙ буйынса һалҡын ямғыр юлаҡтары йүгерә. Ләкин быны тоймайбыҙ, тәндәребеҙ өшөү һәм ауыртыуҙың ни икәнен онотҡан. Зиһендәребеҙ, бөтә донъяны ташлап, бер генә нәмәгә төбәлгән — Мәскәү, Мәскәүҙәге Ҡыҙыл майҙан... Ҡайғылы ҡыҫылған ирендәребеҙ онотолмаҫ ошо минуттарҙа йөрәгебеҙ тәрәнлегенән ярып сыҡҡан изге һүҙҙәрҙе ҡабатлай: «Һин үҙең бөйөк Лениндың васыяттарын нисек үтәгән булһаң, беҙ ҙә һинең ҡалдырып киткән васыяттарыңды шулай уҡ керһеҙ һәмнамыҫлы итеп үтәр беҙ, һинең изге исемең ауыр көрәштәрҙә беҙгә Байраҡ булыр. Хәрби моряктарҙың ҡорос сафтары бар сағында бер дошман да, сигебеҙ һыҙығын үтеп, еребеҙгә аяҡ баҫа алмаҫ. Хуш бул, туған атай!»

Таллин, в/ч 95092, «Андриан Зосимов» кара бы.
9.04.1953.

“Мең дә бер ҡисса” китабына

Боронғо башҡорт ҡалалары

Ун икенсе быуаттың тәүге яртыһында Башҡортостанда булып киткән ғәрәп сәйәхәтсеһе Мәхмүт Иҙриси байтаҡ башҡорт ҡалаларын үҙ күҙҙәре менән күргән. Шуларҙы ул үҙенең 1154 йылда яҙылған “Донъя географияһы”нда атап китә, ҡайһыларын географик картала ла билдәләй. М. Иҙриси Башҡортостандың көньяҡ-көнбайыш өлөшөн — “Эске Башҡорт”, төньяҡ-көнсығышын “Тышҡы Башҡорт” тип атай. Тәүгеһендә *Ҡараҡая, Минжан, Ожан,* ә һуңғыһында *Мазира, Ҡазира* ҡалалары күрһәтелә. Ғәрәп географтары Иҙелдең түбәнге ағышында йәнә *Бөрйән* тигән башҡорт ҡалаһы барлығын да әйтә. Иҙриси булып киткәндән һуңғы йөҙ йыллыҡта тағы бер нисә ҡала ҡалҡынғанлығы билдәле. Ләкин ун өсөнсө быуаттағы яуыз татар-монгол яуҙарынан һуң башҡортостан ҡалалары хәтәр бөлгөнлөккә төшә. Халыҡтың бер өлөшө илдең көнбайышынараҡ сигенеп, Ағиҙелдең һәм Каманың түбәнге ағышында *Алабуга, Алатор, Балатор, Аусы т*игән ҡалаларҙы ҡора. Көньяҡ-көнсығыш Башҡортостанда иһә ул ваҡытта *Мәрмәре, Башҡорт, Саҡатин* ҡалалары була. Былар барыһы 1634 йылғы Исаак Масса картаһында сағылған. Белгестәргә шул боронғо ҡалаларыбыҙҙың бөгөнгәсә дауамланып йәшәп килгән ҡала һәм ауылдар ҙа билдәле.

Ат, арасалы тәүге тәгәрмәс

Сал Уралда төйәкләнеп донъя көткән бабаларыбыҙ, бынан һигеҙ-ун мең йылдар элек, донъяла беренсе булып, ҡырағай атты ҡулға эйәләштерәләр — менергә, егергә өйрәнәләр. Уралдан ул башҡа яҡтарға тарала.

Бынан алты мең йыл элгәре Месопотамияла (Тигр һәм Евфрат йылғалары араһында) йәшәгән бабаларыбыҙ шумерҙарҙың тәпәшәк буйлы мулға арба егеп йөрөүҙәре билдәле. Әммә ул арба тәгәрмәсе ифрат яйһыҙ — таҡтанан батмус һымаҡ итеп яһалған, етмәһә, тәгәрмәстәр күсәр менән ҡуша әйләнгән. Донъялағы тәүге ысын (көпсәкле, ун арасалы һәм туғынлы) тәгәрмәс иһә бабаларыбыҙ тарафынан ошо Урал тупрағында бынан күп мең йылдар элек үк эшләнә. Улар төҙөгән кавалерия һәм атҡа егелгән ике тәгәрмәсле һуғыш арбаһы (боевая колесница) иһә хәрби эштә донъя күләмендәге революция яһай. Бына шундай донъялағы иң боронғо (б.э. тиклем XVI быуат) ысын тәгәрмәсле биш арбаны бер юлы ҡаҙып сығара 1975 йылда археологтар Уралдағы Сынташты тигән кескәй генә башҡорт йылғаһы буйындағы убанан. Һәм ул фәндә сенсация тыуҙыра. Шуныһы ла ҡыҙыҡлы: арбалы ҡәберҙәргә, мәрхүмдәр менән ҡуша, тап

ҡәҙимге төрки-скиф бабаларыбыҙ йолаһынса, икешәрҙән алып етешәргә тиклем аттар ҙа ерләнгән икән. Ә әҙәм мәйеттәре баш һөйәктәренең төҙөлөшө иһә башҡорттарҙың раса ти бына тап килә.

“Урал батыр” эпосы

Был әҫәрҙең донъя фольклористикаһында тотҡан урынын, әһәмиәтен шунан күрергә мөмкин: 1975 йыл Мәскәүҙә сыҡҡан “Героический эпоснародов СССР” тигән ике томлыҡтың беренсе томында “Урал батыр” эпосы урыҫ халҡының былиналарынан һуң беренсе итеп урынлаштырылған, ә баш һүҙҙә ул шумерҙың атаҡлы “Һүлгәмеш” эпосы менән йәнәшә ҡуйып һәм сағыштырмалы тикшерелеп, уларҙың сюжет берҙәйлеге әйтелгән. Әммә үҙенең идея-художество концепцияһы йәһәтенән, ти А. Петросян, “Урал батыр” донъя фольклористикаһындағы дөйөм рухи-эстетик үҫештең яңы юғары этабын тәшкил итә. Әйтәйек, Һүлгәмеш фәҡәт үҙ данын, үлемһеҙлеген генә ҡайғыртһа, Урал батыр бөтә кешелектең, ер йөҙөндәге тереклек һәм үҫемлектең үлемһеҙлеге өсөн көрәшә, йәнен дә шуның хаҡына фиҙа итә...

Глобаль ҡоласлы образдар һәм мәғлүмәт менән “тынҡыслап тултырылған” “Урал батыр”ҙа донъя хасил булған мифик замандарҙан алып синфи антагонизм дәүеренәсә тарихи үҫештең кеше аңында сағылышының көллө мотивтарын табырға мөмкин. 4506 юлдан хасил шиғри тексҡа бөтә ғаләм — ерҙең Урал тауҙарына тоташҡан дүрт ҡи блаһы, күк-йыһан киңлектәре һәм ер-һыу аҫты донъяһы, бер һүҙ менән әйткәндә, донъя халыҡтары ҡарыһүҙенең “ҡаймағы” һыйҙырылған. Хайран ҡалырлыҡ: боронғоларҙың энциклопедияһы дәрәжәһендәге был оло хазинаны халҡыбыҙ сал “Һүлгәмеш” осоронан алып егермесе быуат башынаса — бөйөк Мөхәммәтша сәсән Буранғолов уны 1910 йылда Ғәбит һәм Хәмит ҡурайсыларҙан һөйләтеп яҙып алған — телдән-телгә, быуындан-быуынға аманат итеп күсереп, үҙенең хәтер китабында һаҡлап килтереп еткергән. Шуныһы ла ҡыҙыҡлы: хазинаның баһаһын яҡшы белгән Мөхәммәтша Буранғолов Ғәбит сәсәнгә үҙенең берҙән-бер байлығын — менеп килгән эйәрле атын бүләк итеп биреп китә.

Сал Урал — ҡитғаның тимерлеге

Урал боронғо замандарҙан уҡ тирә-яҡты төрлө ҡорал менән тәьмин итеп торған. Таш быуатта ошонда Урал йәшмәһенән эшләнгән бысаҡ, ураҡ һәм кәтмәндәр Кама буйҙарынан алып Каспий диңгеҙе ярҙарынаса таралған. Хәҙерге Әбйәлил районында табылған шундай таш ҡоралдарҙың береһендә башҡорттоң Үҫәргән ырыу тамғаһы лабар...

Руданан бутал (металл) иретеү эше лә был тирәлә беренсе булып, бынан һигеҙ мең йыл элгәре бабаларыбыҙ тарафынан үҙаллы юлға һалынған, ул бутал менән бабаларыбыҙ Уралды, Көнсығыш Европаны һәм

Көнбайыш Себерҙе тәьмин иткән. Бабаларыбыҙ, тибеҙ, сөнки дөйөм ҡанун хөкөм һөрә фәндә: ерле халыҡ шул ерҙәге археология ҡомартҡыларының төп мираҫсыһы булып тора. Ошо хаҡта тарихсыларҙың 1977 йылдың 17 — 22 октябрендә Дүшәмбелә үткәрелгән халыҡ-ара симпозиумында ла бик асыҡ итеп әйтелде. Тимәк, *Башҡортостан* тупрағындағы иң иҫке таш балта һәм бутал иретеү мейесенән алып *Шүлгәнташ* мәмерйәһе һүрәттәренә тиклем бөтә тарихи ҡомартҡыларбашҡорт халҡы мәҙәниәтенең айырылғыһыҙ өлөшөн тәшкил итә. Сөнки халыҡ быуаттар буйынса шул ерҙәге ырыуҙарҙы, мәҙәниәттәрҙе үҙ иҥенә "һеңдергән" дә үҫтергән — ошо көнгәсә һаҡлап килтереп еткергән.

Башҡортостаныбыҙ үҙе теләп урыҫ дәүләтенә ҡушылғас, урыҫ "ызнакум"дарына сал Уралдың ер аҫты хазиналарын тәүге күрһәтеүселәр ҙә башҡорт кешеләре булды һәм шул урындарға заводтар һалынды. Был хаҡтабайтаҡ тарихи документтарбар.

Сәк-Сәк

Тәүҙә күҙ алдына килтерәйек был һыйҙы: йомортҡа һытып иҙелгән ҡамырҙың имсәк башындай ғына киҫәктәре майға ҡайнатып бешерелгән дә, *балға* болғатып, әсә эмейе формаһында һәм ҙурлығында ҡатырылған, нәҙегәйеп бөткән осона, имсәк сәскәһен хәтерләтеп, ҡыҙыл төҫлө лампасый (карамель) тырпайтылған. Шулай итеп, әле төҫмөрләүебеҙсә, Сәк-Сәк һүҙе "Әсәк-Әсәк" ("Әсәй-Әсәй") тигән боронғо ҡушма һүҙҙән килеп сыҡҡан — ил аңында Хоҙай бикә дәрәжәһенә күтәрелмеш әсә күкрәге ҡуш эмей тап ошолай исемләнгән. Әйткәндәй, сал-боронғо тәүдин замандарында *Эмей* исемле Хоҙай бикәгә бөтә төрки-скиф донъяһы табынып, хатта гректарға тиклем Урал тауы *Эмей тауы* исемендә мәғлүм булған. Шулай уҡ әсә күкрәк һөтөн дә изге-тылсымлы һанағандар, ул башҡорт һәм башҡа төрки халыҡтар, шулай уҡ бынан алты мең йыл элек Тигр һәм Евфрат йылғалары араһында йәшәгән һәм алыҫ Урал тауҙы изге һанаған атаҡлы шумер бабалар эпостарында асыҡ сағылған. Шумерҙарҙа, мәҫәлән, хәҙерге башҡорттарҙағы кеүек үк,*Сәксәк* (әлеге башҡортта — *Сәсәк*) тигән ҡатын-ҡыҙ исеме лә киң таралған булған. *Сәксәк* исеме, ғәҙәттә, *батш*а ҡатындарына һәм ҡорам (храм) *әжерәсәләренә* (жрицаларына) Хоҙайлыҡ титулы итеп бирелгән, шул титулды алған ҡатын Хоҙай бикәгә тиңләнгән. Халыҡ уға табынған һәм ҡорбан аштары килтергән...

Хатта бөгөн дә айырыуса ҡәҙерләнеп, ергә тормош биреүсе Әсә эмейенә оҡшатып әҙерләнгән изге ашамлыҡ Сәк-Сәк, әлбиттә, борон заман Хоҙайҙарҙың, *батш*а табындарының ҡото һәм күрке булған. Ана шул "Батша ниғмәте" изге Сәк-Сәкте халҡыбыҙ әле лә ҡәҙерләп бешерә, бөгөн инде ул һәр өйҙөң дә тантаналы туйҙарында табын күрке булып тора.

Сүк, өйрә, күзә

Бик боронғо башҡорт аштары былар. Башҡорттарҙың беҙҙең эраға тиклем үк көньяҡҡараҡ — Сырдаръя буйҙарына күсеп киткән яугир төркөмдәре, үҙебеҙҙең изге Сәке (Шәке) тау исеменән,"сак", "сактар" тип атала башлаған. Хәрби сәфәр, күсмә тормош шарттарында боҙолмай оҙаҡ һаҡлана һәм теләгән бер мәлдә шул көйөнсә сәйнәп ашарға яраҡлы ризыҡ уйлап тапҡан улар: тары ярмаһын һыуҙа ҡайнатып бөтәүләтә бешергәндәр ҙә, һыуын һарҡытып ташлап, киптергәндәр — ябай ярма кеүек үк бөртөклө *"сак"* (*сүк)* ашы хасил булған. Сакты (сүкте) һалып ашай торған һауыт *саҡат, сағыт, һауыт* тип тә, *саҡата, сүгәтә, сеүәтә* тип тә йөрөтөлгән. Бөйөк Ватан һуғышына тиклем беҙҙең Үҫәргән башҡорттары *сүк* тигән был ашты әҙерләйҙәр ине әле — үҙем ашағаным бар.

Өйрә — уғыр (Табын ырыуҙары) башҡорттарының боронғо ашылыр, шуға күрә ырыу исеме менән ул "уғара" тип аталған, аҙаҡ "өйөрә"гә (өйрәгә) әйләнгән. Арпа, борай тары ярмаһынан бешерелеп, ҡорот, әсе ҡатыҡ менән ҡатып эселгән (ғәҙәттә сүгәтәнән һемерер булғандар).

Күзә — оғуз (ғуз) башҡорттары ризығы, шуға күрә исеме лә оғуза — ғуза — *күзә* рәүешле үҙгәргән. Күзәне тары ярмаһынан ул иҙелгәнсе ҡуйы өйрә рәүешендә бешереп, сүпрә һалып ике-өс көн әсеткәндәр ҙә *касанан* күтәреп эскәндәр ("каса" һүҙе ана шул "күзә" тигәндән килә). Үҙе тамаҡты туйҙырған, үҙе һыуһын ҡандырған һәм кәйефте лә күтәргән. Бөйөк Ватан һуғышына тиклем үҫәргәндәр күзәне лә бик яҡшы итеп әҙерләй ине — үҙем ауыҙ иткеләнем.

Буҙа

Был сихәтле һәм туҡлыҡлы ата-баба эсемлеге баш ҡалабыҙҙа ла күренә башланы хәҙер. Уны яһау әмәлен энтузиастар республикабыҙҙың Урал арты — Әбйәлил, Баймаҡ, Усалы, Белорет райондарында өйрәнеп ҡайтты.

Революцияға тиклем үк атаҡлы этнограф С.И. Руденкобашҡорттар араһында буҙаның киң таралыуын күрә, етештереү ысулын да яҙып ала: арыш, арпа, йәки бойҙай бөртөктәрен шыттырып, киптергәндәр ҙә ҡул тирмәнендә тартҡандар. Ошо ҡурҙы һоло онона болғатып, эҫе һыуҙа бешергәндәр, сүпрәләп, йылы урында ике-өс көн әсеткәндәр... Бигерәк тә йәй көндәрендә сарсап ҡырҙа эшләгәндә алмаштырғыһыҙ ризыҡ булған буҙа: күтәреп эсеп ебәреү менән үк бер юлы ул һыуһынды ла ҡандырған, тамаҡты ла туйҙырған, кәйефте лә күтәргән...

Күренеүенсә, буҙа өсөн иң элек иген үҫтереү, тирмән тарттырыу кәрәкле. Буҙаның тап "ояһы" булған Урал артында археологтар бынан ете — ун мең йылдар элек йәшәгән бабаларыбыҙҙың ер һөргөс таш кәтмәндәрен, ураҡтарын, тирмәндәрен, *вазага* оҡшаш көршәктәрен күп тапты. Әйткәндәй, сөм көршәк һауыттың атамаһы "ваза" — "буҙа»ға

йәнәш тора: *ваза — буҙа* һауыты... Ә “буҙа” үҙен етештереүсе боронғо Урал тау башҡорттары ырыуы “буҙанаҡ” — ***Бәжәнәк*** исеме менән аталған тип юрарға урын ҡала. *Бәжәнәк,* билдәле булыуынса, башҡорт халҡын тәшкил иткән игеҙәк тәүырыуҙың береһе ул (икенсеһе *Үҫәргән*).

Шулай итеп, буҙа — боронғо башҡорт эсемлеге — ошо көндә лә илебеҙҙең бәрәкәтле табынында. Тамаҡ һәм үҙәк буйҙарына ҡаймаҡтай яғылып төшә, кәйефте лә күтәрә һәм, минеңсә, күпме эсһәң дә ялҡытмай.

Һыра

Был эсемлек зороастризм динен тотоусыларҙың бынан өс мең йыл элгәре яҙып алынған изге Ригведа гимндарында хоҙайҙарға тәғәйенләнгән *“һүрә”* (һыра) исеме менән атала:

Әҙерләйҙәр һиңә арпа *һүрәһе, —*
Йөрәгеңде елкетер ҙә күңелеңде күтәрер...

Был эсемлекте әсетә һәм һаҡлай торған һауыт-һаба *ла “һүрә”* йәки *“сүрә”* исемләнеп, зороастризм осоронан беҙҙең көндәргәсә килеп еткәндер: сара (“сүрә”нән), көрәгә (“һүрәгә”нән)...

Эсемлеккә сәбәпсе зороастризм дине бынан 3700 йыл элек тап ошо үҙебеҙҙең ерҙә — Асылыкүл буйында тыуған, башҡорттар Ислам диненә тиклем зороастризм хоҙайҙарына табынған. Уралдан алып Һиндостанға, Индонезияғаса таралған был дин ҡорамдарында (храмдарында) хоҙайҙарҙы данлау йырҙарын (гимндарын) күмәкләп башҡарғанда ана шул *һүрә (сүрә)* эсемлеген эсеп, кәйефтәрен күтәргәндәр һәм ошо хәл туранан-тура хоҙайҙар менән аралашыу, затлы эсемлекте уларға эсереү һаналған:

Һуттарыңды күпертеп, шаулап урғыл
Бөйөк Тәңреләрҙең татлы теләнә!..

Шуға бәйле, Хоҙайға табыныу доғаларын да әлеге эсемлек исемендә “сүрә” тип йөрөткәндәр, аҙаҡ был термин яңыртылған йөкмәткелә Ислам диненә лә килеп кергән, буғай...

Тимәк, алыҫ бабаларыбыҙҙың “изге” *сүрәһе* һыра, гимндан күренеүенсә, бынан өс мең йыл элгәре лә тап бөгөнгө рецепт буйынса арпанан әҙерләп әсетелгән дә “йөрәгеңде елкетер, күңелеңде күтәрер” эсемлек булған.

Эпос и история

Ценную информацию по истории в себе может содержать все то (даже одно-единственное слово), что зафиксировано в народной памяти. Поэтому собиратель народного творчества обязан быть очень внимательным и прилежным: должен записывать не искажая и не выбрасывая ни единого слова информатора, твердо помня о том, что в этом деле не бывает мелочей, в чем можно убедиться на примере собирательской деятельности великого народного сэсэна Мухамметши Бурангулова (эпос "Урал батыр") и других. Так, например, непривычное нашему слуху "экзотическое" слово "тик-ағас"в тексте народного эпоса "Урал батыр" (строка 1720), к счастью не оброненное в небытие информаторами-кураистами Габитом и Хамитом, а также записывавшим с их уст самим М. Бурангуловым, позволил ученым возводить мост между древним Уралом и древним Ирано-Индостанским субконтинентом. Потому что "тик-ағас" — это есть тиковое дерево, широко распространенное в тропических лесах от Индии до Индонезии (но только не у нас на Урале!), т.е. в тех местах, где сохранились последние очаги зороастризма, одного из древнейших мировых религий. А это значит, что имеется явная связь между башкирским эпосом "Урал батыр", носящим идеологию зороастризма, и канонической книгой индо-иранских зороастрийцев "Авеста". Для такого утверждения имеется твердое научное основание: зороастризм ведь как новое учение жреца-бека Сураш-Тора (по-гречески Зороастр, по-ирански Заратуштра), усергенского рода башкир, зародился именно у нас на Урале[i] и распространился вокруг.

Другое реликтовое слово "таш балға" (строка 310) — каменный топор-кувалда, принадлежавщий мифическому первопредку башкир старику Янбирде, связывает нас прямиком с каменным веком.

Есть там еще не очень привычное слуху башкира редкое "некнижное» словосочетание "Һарысай ат" (строка 2480) — буквально "желтой реки конь", чудесное созидание (дочь Месяца Айхылыу хочет дарить его своему возлюбленному Урал батыру). Само это название "Һарысай ат" состоит из сложения слов *һары* (вариант *сары* — желтый), *сай* (река), ат (конь), т.е. все вместо взятое — *сарасайат.* Точно так в индийском "Махабхарате"называется прекрасная богиня красноречия и науки, олицетворяемая в "лошадийном" образе священной реки *Сарасвати* (слово, составленное из башкирских слов *сары-сув-ати* — "желтой реки лошадь") и осмысленная индийцами как "многоводная"[ii] По древним мифологическим представлениям Месяц является источником мировых вод[iii]; это значит, что и наш конь "Һарысай ат" олицетворяет собою Месяц и прямо связан с водной стихией, то есть подводным миром, а на землю выходит он, Месяц-Һарысайат, из водных пучин как ниспосланный богом чудесный дар. Подобное чудесное явление воспевается еще в другом башкирском народном эпосе "Аҡһаҡ Ҡола" ("Хромая Савраска"):

Саврасая кобыла с мышиным хребтом,
Саврвсая кобыла из породы коней (озера) Шульген,
Саврасая кобыла с круглыми копытами,

Саврасая кобыла *с ушами торчком*
Выходит из озера Шульген...(2)

Оказывается, верховное божество из индийской "Махабхараты" Вишну-Кришна-Нараяна, выступающее иногда также в образе буланого коня, тоже носит, подобно коню упомянутого башкирского эпоса, эпитет *Хари (Һары),* что является словом тюркским, но в то же время оно и для индийцев означает "светло-желто-буланая" масть коня. Как видно, эпитеты данные коням в обоих эпосах точно совпадают друг с другом: *Хари — Һары.*

С образом мифического башкирского коня связано и другое индийское выражение "уччхайшрава", что в переводе означает "Навостряющий уши", это есть имя того "лошадийного" царя, вышедшего из пучин, и имя это точно совпадает с эпитетом данным башкирскому "царю лошадей", вышедшего тоже из озера Шульген — эпитет "с ушами торчком"... Благодаря всем этим данным можно сделать вывод, что в глубокой древности народы Урала и Ирано-Индийского субконтинента были тесно связаны друг с другом и жили в едином идеологическом мире..

В эпосе "Жик-Мерген", состоящего из нескольких исторических наслоений, повествуется о борьбе западных башкир, конкретно говоря Усергенского ("серского") рода, против иноземных захватчиков, трагическая судьба их первопредка, в малолетстве выброшенного врагами на растерзание зверям, но вопреки всему вскормленного дикой волчицей. Этот главный мотив мифа о родственности первопредка с волчицей, широко зафиксированный у башкир, ярко отражен и в древнекитайской историографии со слов великого путешественника-разведчика Чжан Цаня, лично посетившего в 139 — 126 годах до н.э. страну Усунь — предков современных усергенцев. Как можно легко заметить, этноним *Үсерген* состоит из коренного слова *Сер* — это и есть укороченное, а иногда произносимое как *Сер-би*[iv] — название широко известных из древнекитайской истории усуней-усергенцев, а точнее говоря, правое (северо-восточное) крыло Усергенского рода. Под этим именем *Сер* на Западе долго подразумевали собственно Китай, так обстояло дело и с вариантным названием усергенцев *Усунь,* которым стали также именовать древнекитайское государство *Син (Сина, Чина* — от слова *Усунь).* К стати, подобное произошло и с другим родовым названием наших предков *Ҡатай,* давшим название современному Китаю.

В древноси нередко случалось так, что на китайском престоле в качестве императоров сидели башкирские наши предки и китайские экзотические товары через них проникали на Запад, в силу чего государство башкирских катайцев (севернее Китая) была воспринята как Китай в современном понимании. Но речь здесь о другом. Этноним *Сер,* уже мало понятный многим, как уже сказано, в начале века был зафиксирован в тексте упомянутого эпоса "Жик Мерген" в форме *Сур:* "Сурлы яуының башына тыуған батыр" ("богатырь, рожденный стоять во

главе сурлинского войска") говорится о богатыре Жик Мергене, что составляет сохранившийся древнейший пласт произведения. В то же время налицо и явное искажение подлинника: кормилицей родоначальника названа не традиционная волчица, а тишайшая зверь зайчиха[v] — по всей вероятности, результат "облагораживания" или со стороны собирателя фольклора Ф. Валиева, или же редактора издания. Думается, первоначально информатором был назван "Ҡаян" (что по-древнебашкирскому означает "Волчица"), но он был кем-то переправлен на "Ҡуян", что стал означать "Зайчиха"...

Досадная оплошность была также допущена в тексте ценнейшего памятника из эпохи сопротивления башкир татаро-монгольскому нашествию "Бошман-ҡыпсаҡ батыр" (запись Г.Б. Хусаинова), прямо откликающегося по содержанию с знаменитым "Сборником летописей" Рашид-ад-дина. Согласно башкирскому тексту Бошман-ҡыпсаҡ батыр, поставленный врагами перед выбором преклонить колена и стать им послушным рабом, или же умереть стоя, произносит в тексте явно искаженные переписчиком слова: "Верблюд *не сгибает колен,* сокол не умирает, склонив голову!". Мне кажется, у сказителя было иначе: "*Только верблюд сгибает колен...*", ибо в действительности только верблюд и способен на такую позу!.. Но несмотря на этот недостаток башкирское предание существенно обогащает историю: ведь у офоциального историка чингизидов отсутствуют те дерзкие слова их врага...

Опыт также показывает, что даже небольшая народная песня может преподнести нам крупную информацию.

Скажем, на исторической арене давно уже не существует самостоятельного башкирского рода Йыуасалы, не зафиксирован он и в книге известного этнографа Р.Г. Кузеева. Однако с незапамятных времен среди усергенцев существует *ара* (подразделение) *Йыуасалы* — осколок былого самостоятельного и мощного, близкородственного усергенцам (поэтому-то остаток их примкнул в род Усерген). башкирского рода под тем же названием. Признаки былой мощи йыуасалинцев выпирают почти из каждой строки башкирской народной песни "Йыуасалы"[vi]: Речь идет здесь даже не о роде или племени, а целом "йыуасалинском *народе*", не о местности, а "*стране* йыуасалинцев".Создается впечатление, что когда-то, где-то на земле существовало независимое йыуасалинское государство, потом оно, как поется в песне, врагами было разгромлено, а сам йыуасалинский народ, оставляя родных очагов и кладбищ, "как ягнята разбежался" в разные стороны, часть их расселилась по долине реки Ток современной Оренбургской области. В песне есть даже уточнение: вынужденно покинутая эта йыуасалинская страна была размещена по долине какой-то реки *Умур,* но чтоб дойти до пределов Тока "беженцам-йыуасалинцам на своем пути пришлось преодолеть, как говорится в песне, "Кавказоподобные Уральские горы". Последнее название приводит исследователей в явное смущение, ибо в современной Оренбургской области между имеющимися там реками Умур и Ток нет ни Уральских, ни других мало-мальских гор — везде холмистая степь... К тому же по

истории хорошо известно, что здесь также никогда не существовала названная в песне “страна Йыуасалы”, а была исконная “страна Башкурд”, а точнее, территория древних усергенцев “Эске Башҡурд” т.е. описанная арабскими географами *Внутренняя Башкирия* — от Урала до Волги; в то же время восточнее от Урала до реки Оби был “Тышҡы Башҡурд” — *Внешняя Башкирия.* Названная первая есть земля, испокон веков населенная преимущественно Усергенским родом башкир. Раз так, в своем пути до реки Ток йыуасалинцы могли пресечь Уральские горы лишь по направлению с востока на запад, но не наоборот. Напрашивается вопрос: каким образом они, начав путь якобы с долины современной речки Умур, протекающей северо-западнее Тока и, значит, устремившись на юго-восток до реки Ток, могли преодолеть фактически не существующие там на их пути Уральские горы... Вот это и заставляет меня воспетую в песне реку *Умур* искать в другом месте, где-то восточнее Урала.

Да, есть там такая река Амур — великая дальневосточная “тезка” оренбургской степной речки Умур. Но истории также известно, что в то время, когда юго-западное (левое) крыло Усергенского рода обитало левее Волги во Внутренней Башкирии, его же северо-восточное (правое) крыло (Усунь) через Внешнюю Башкирию продвинулось далеко на восток: в XIII веке до н.э. занимало оно территорию начиная от современных китайских провинций Шэнси, Хэнань на юге до южных границ современной Монголии на севере. Севернее находились единокровные, но враждебные им хунны-башкиры (беженеки-печенеги), в то же время территорию, простиравшуюся на северо-восток приблизительно до поймы реки великого Амура, занимало племя, записанное древнекитайскими историками под именем ***Юэчжи*** (то есть *Йыуасалы).* Археологический материал Пазырыкских курганов (V — III веков до н.э.) на Алтае, принадлежавших *юэчжи* (то есть *йыуасалы)* а также их, юэчжинцев, характерный внешний вид (бритая голова), идентичный с усуньцами, по мнению Л.Н. Гумилева подтверждает их близкое родство и совместное проживание их с усуньцами когда-то вблизи Ордоса[vii]. А по авторитетному утверждению Р. Хеннига все племена, представляющие культуру “звериного стиля” и известные под этнонимами “скиф”, “гет”, “массагет”, “гот”, “чудь” и “юэчжи”, по расе и языку были близкородственными, даже единокровными, а их территории простирались к востоку до поймы реки Амура[viii]. Если иметь в виду, что названия Умур и Амур по сути одно и то же и в переводе с башкирского языка означает “жизнь”, “жизненосная материнская грудь”, “источник жизни”, то становится ясным что и племя, давшее одинаковое название вышеупомянутым разноместным рекам, носило одно и то же имя Йыуаса (Йыуасалы), которое в транскрипции на китайский язык прозвучало как Юэчжи. Это косвенно подтверждается также наличием на том же Дальнем Востоке “тезки” другой башкирской степной речки *Зей* по имени *Зея* -- притока Амура. Это и не удивительно: ведь предки наши в процессе освоения новых земель обычно туда переносили и гидро-топонимику оставленной ими родины[ix]. Следовательно есть основание утверждать, что юэчжи были

йыуасалинцами, которые в отдаленные времена до н.э. освоили пойму реки Амур и дали ей название. Позже под нажимом хуннов-башкиров очутились они западнее своих близких сородичей усунцев у озера Кукунор (провинция Цинхай КНР), а потом под натиском тех же хуннов откатились на Алтай, где в 165 году до н.э. были разгромлены теми же башкирами-хуннами[x]. Хуннский Шаньюй (царь) Магдан (Маодунь) по скифской (древнеусергенской) традиции из черепа убитого им йыуасалинского хана делает чащу для питья, а остатки йыуасалинцев во главе с сыном своего убитого хана отступают еще дальше на запад, но там опять терпят поражение со стороны уже западного хуннского шаньюя Леушеня, убившего их и нового хана. Сын последнего (внук Магдана) *Герей батыр* сплачивает народ и уводит их, йыуасалинцев, еще дальше на запад. За йыуасалинцами следуют, также оттесненные хуннами, родственные им усуньцы-усергенцы. На южном берегу озера *Әсәк-күл*, что по-башкирски означает “Мать-озеро” (теперешнее название Иссык-куль), достигнув принадлежавшего юго-западному (левому) крылу усергенцев их столичного города-зимовья *Сигеү* (что по-башкирски означает “место отступления от зимних холодов”, а столицей их летовки являлся городище на берегу Агидели Тора-тау), йыуасалинцы поварачивают налево на юг и пересекают великую среднеазиатскую реку Аксу (Окс), навеки переименовав ее именем своей материнской реки Амур (современная Амурдаръя). Усуньцы-усергенцы по своему традиционному пути *зимовье — летовка* отошли на прародину Урал, занимая там традиционно принаджлежавший им, как правому (северо-восточному) крылу усергенцев, земли юго-восточнее от Урала до Семиречья (включительно с горами Тяншань), где они вплоть до V века н.э. китайскими историками зафиксированы под именем усуньцев. О той “Башкирской стране Семиречья (“Жиде су”), расположенной далеко от реки Урал” (“Жаиҡ”) воспевается в казахском эпосе[xi].

Йыуасалинцы в 129 году до н.э. во главе с упомянутым храбрым Герей-ханом захватывают Бактрию, когда-то отторгнутую Александрром Македонским от башкир, свергая господствующих там греков, и на развалинах Греко-Бактрийского государства начинают строить свою всемирно известную Кушанскую империю. Настоящим архитектором и первым императором этого государства является полководец из башкирского рода *Ҡошсо* Куджулла Кадфиз, который сумел объединить вокруг себя в единый “союз пяти” единокровных усергенских родов. Как основатель так и продолжатели Кушанской державы носили близкие нам тюркские имена. Чеканили они собственные монеты с изображением императоров, которые, по мнению ученых, по типажу человеческих профилей совпадают с йыуасалинскими изображениями из вышеупомянутых пазырыкских курганов Алтая[xii]. Как пишет академик Б.Г. Гафуров, “Находки кушанских монет в Прикамье и серебряного сосуда из Хорезма в Зауралье намечают ареаль северных связей”[xiii] кушанцев, ибо наша Древняя Башкирия входила тоже в состав Кушанской империи. Интересно то, что на этих кушанских монетах можно прочесть титул

императора "шәбнән шәб" ("Лучший из лучших"), что без перевода понятно любому современному башкиру, ибо написан он на чистейшем башкирском языке. По признанию некоторых специалистов это было письменностью древней Бактрии, бывшей в употреблении в областях Башкирда и Куватъяна[xiv]. Эти названия областных городов Бактрии говорят сами за себя. Из скудных и отрывочных письменных памятников кушанского периода большой интерес представляют два коротких текста, написанные характерным для того периода сплошным манером (без отделения слов друг от друга):

1. Һермаиозо базилеуззутеро;
2. Канишкикошаншананша[xv].

После смыслового отделения слов друг от друга читаются они так:

1. Һерма йозоб азил еузз утеро — т.е. "һөрмә яҙыу әзәл-яуызды үлтерә". Перевод на русский: "Выдолбленное (на надгробном камне) письмо зловредную смерть убивает". Или же: "Написанное сурьмой-чернилой письмо...";

2. Кани шки Кошан Шанан Ша — т.е. «Ғани ш(а)ки Ҡошан Ша(б)нан Ша(б)". Перевод на русский: "Гани — волчица Кушана — лучший из лучших".

Как видно, здесь тоже не требуется перевод на башкирский язык. На усергенском наречии старобашкирского языка "Шаке" есть "волчица", от этого же слова происходит современный "Шакал" — "Шаке-ул" — "волчицы сын", т.е. волк. В современном Башкортостане известна знаменитая священная гора Шаке-тау — "Волчица-гора", согласно мифу являющаяся местом пре бывания молочной матери-волчицы первопредка усергенцев по имени Шульген. Описанные еще Геродотом древние саки (т.е. Саке, Шаке — волчица), населявшие пространство от Агидели до Амурдарьи, это и есть юго-западная ветвь наших усергенских предков-"волков", к которым и относятся исследуемые здесь йыуасалинцы, ибо древние греки и индийцы йыуасалинцев тоже называли саками. Многие древнетюркские роды почитали волчицу и волка, на их знаменах была изображена золотая волчья голова, а мужчины называли себя волками[xvi]. Прародиной "сыновей волчицы" т.е. усергенцев несомненно является бассейн прекрасной южноуральской реки, несущей свои священные воды на юг — в мифическую "материнскую" ("аса") сторону вселенной и поэтому названной "Асаке-Эмер — Саке-Эмер" — т.е. *Сакмара,* что означает "волчицы молоконосная грудь" или "мать-источник жизни". Как видно, название реки Сакмары (Саке-Эмер) состоит из знакомых нам древних усергенско-йыуасалинских двух слов: Саке (Шаке) — "Волчица" и "Эмер" (Умур, Амур), последнее является активом и современного башкирского языка (имер, үмер, ғүмер). От этого возможно происходит русское слово "умер", ибо наши предки-язычники своих умерших

хоронили ("возвращали") в реку ("материнское лоно"), которая иназывалась "Умер" (или Амур)...

Слово "Шаке" ("волчица") как грозный титул императора отчеканено на древних кушанских монетах:

Гани-Шаке —на монете буквально Канешка;
Хыу-Шаке — Хувешка;
Баш-Шаке — Важушка;
Тора-Шаке — Турушка;
Ҡоҙаға-Шаке — Козгашка.

Как видно, все они носят высокий титул "Шаке" — "волчица". Однако известно и то, что люди правого (северо-восточного) крыла Усергенского рода в отличие от единокровных с ними "потомков волчицы" считали себя "сыновьями волка-кобеля" или "белого волка-отца", их иногда называли просто "белыми". Среди населения великой Кушанской империи, конечно,. были и эти "белые". Замечательно, что древние греки называли вообще кушанцев *арси* — "белые"[xvii]; в то же время и в башкирском предании "Семиродцы", записанном в 1920 году М. Бурангуловым от Габита-курайсы, среди главных башкирских родов фигурирует тоже "белый род башкир"[xviii].

Кто же они эти загадочные "белые", имеются ли их потомки среди современных башкирских родов? Что бы ответить на этот вопрос, заглянем в прошлое. Известно, что существующий и по-ныне башкирский род Тиляу (в древнекитайских хрониках "тйелев") своим родоначальником считал мальчика, родившегося от младшей дочери хуннского Шаньюя (царя), а отцом ему был старый *белый волк* ("аҡ ата" или "аҡ эт"). Вероятно поэтому и именовался мальчик этот "Аҡ-эт-ул" ("белого отца-волка сын"), и его же именем, по всей вероятности, называлась и главная река прародины тляулинцев Агидель (Аҡ-эт-ул — Аҡ-Этил). Река эта и по направлению своего русла соответствует мифическому отцовскому значению — течет с юго-востока на северо-запад — в "отцовскую" (ата) сторону вселенной (по представлению древних север и восток есть родина Адама-отца или Урала, а юг и запад — Хавы-матери или Шульгена). От укорочения слова Этил на Тил и произошло название рода *Тиляу*, от той же гидронимии Аҡ-Этил — Ағиҙел — *Ҡиҙел* образовались название известной реки Кизил ("Красная река") и вариантный этноним тляулинцев Кизил, переведенный древнекитайцами тоже как "красные". Это был очень мощный род, сумевший сплотить вокруг себя многих других родов. В 487 году н.э. тляулинцы-кизилцы в количестве ста тысячи юртов во главе с выдающимся полководцем Афзалом и его двоюродным братом *Суюнки* отложились от жужанского военного союза и, подобно древним предкам йыуасалинцам, перекочевали из Алтая на запад в отчий край, заняв территорию от Иртыша до названной зауральской реки, известной, по всей вероятности, их родовым именем Кизил ("красная") и создали здесь, на Урале, свое независимое государство, простираюшийся

на юг до Тяншаньских гор и противостоящее, с одной стороны, Китаю, с другой — жужанцам и прозванное китайцами из-за огромных размеров колес их телег *державой Гаогюй* ("Высокая Телега"). Она была фактическим продолжением конфедеративной Кушанской империи со своей столицей на Урале. Родовое название "Тиляу" в некоторых наречиях произносилось как "Селэу" или "Чилэу", поэтому, по-видимому, верховная ставка их бия (царя) именовалась "Селэу-би" или "Чилэу-би"; очевидно на месте этой ставки и стоит одноименный современный областной город Силябе или Чиляби (Челябинск). Царь Афзал, увенчанный титулом "Һауалау-бала" ("Хэулэу-була" — великий сын Неба), непосредственно правил северной (Уральской) половиной державы, являлся он одновременно и сюзереном для южной части страны. Суюнки получил титул "Һыу-бей" ("Хэу-пэй" — наследний государь) и на правах вассала правил южной половиной державы, охватившей Семиречье и горы Тяншань; в древности земли эти принадлежали Греко-Бактрийскому царству, а потом были, как уже было сказано, отвоеваны йыуасалинцами во главе с их храбрым ханом Гиреем, заложившим основы Кушанской империи, фактическим продолжением которой и явилась держава "Высокая Телега". Именно здесь, в великой Кушани, сложились "державные" понятия "йыуасалинская страна", "йыуасалинский народ", воспеваемые в песне "Йыуасалы". Поэтому судьбу рода Йыуасалы того периода невозможно проследить вне контекста истории государства "Высокая Телега".

И так, в одно время Суюнки являлся правителем "йыуасалинской страны" и "йыуасалинского народа". Нелегко было ему: вел он на южных границах ожесточенную борьбу с иранскими захватчиками и вскоре в одном из сражений был убит. На северной стороне было тоже неспокойно со стороны Китая и воинственных кочевников-жужанцев. После смерти царя Афзала престол на Урале занял Балаян (486 — 490), после Балаяна — Мивота (внук Суюнки), который в 516 году на войне с жужанцами был убит, жужанский хан из черепа его изготовил сосуд для питья. Южные тляулинцы и йыуасалинцы, подданные убитого Мивоты, отступили от жужанцев в Среднюю Азию, когда-то принадлежавшую их сородичам-йыуасалинцам и захваченную от них в 380 году сасанидским Ираном. Вот тогда и появились в греческих хрониках странные понятия вроде "белые хунны", что означает несомненно "рожденные от белого волка тюрки", т.е. тляулинцы, а также этноним "эфе-тил" (эфтил, эфтилит, эфталит), что видимо означает "царь Эфе-тляулинец". Дело в том, что этим именем столицы современной башкирии Эфе (Өфө, Уфа) титулировался младший брат Мивоты, ставший новым царем державы "Высокая Телега" со столицей, по-видимому, Эфе (Уфа). Вскоре царь Эфе сокрушил ненавистных жужанцев и в 522 году добился признания своего государства Китаем. Однако на следующей войне с вновь усилившимися жужанцами потерпел он поражение и в смуте был убит своим младшим братом Юегуем, вероломно захватившим престол. Но в 534 году Юегуй тоже проиграл войну с жужанцами и в свою очередь был убит захватившим власть Бидием, сыном вышеназванного Эфе. В 540 году Бидий тоже не смог

отразить массированный удар жужанцев и башкирская держава "Высокая Телега", созданная "сыновьями волка-кобеля" на Урале, перестала существовать[xix]. Однако южные тляулинцы-эфталиты, в союз которых входил и мощный йыуасалинский род, долго еще сохранили силу и в течение последующих двух десятилетий в ожесточенной борьбе с Ираном сумели удержать под своей властью северную Индию, Афганистан и Среднюю Азию. Но это был последний взлет Кушанской империи, а вместе с ней и исторического союза пяти родов башкир. В эпосе "Семиродцы" говорится уже о консолидации семи башкирских родов, но в то же время упоминается и о союзе пяти[xx] как о прошедшем историческом этапе правящей элиты, что явно согласуется с подлинной историей правивших пяти родов Кушана. Классические греческие и латинские источники также косвенно подтверждают усергенско-йыуасалинское происхождение народа Кушана, прозвав их "саками", "скифскими племенами", "сараукенцами (от слова усараукан — усаракан — усерген) и "асийцами"[xxi] ("асий" — это и есть мать-волчица!). Древние индийцы также считали их пришельцами с северной сакско-тюркской стороны[xxii]. Что касается современных ученых, ряд историков и лингвистов разных стран (Хальтц, Херт, Раятарангини, Кеннеди, Джойс) йыуасалинцев-кушанцев по всем данным считают тюрками[xxiii], и по археологическим материалам (А.М. Мандельштам) относят их к нашим предкам сарматам[xxiv], пришедшим в Бактрию с северной стороны. Как считает археолог О.В. Обельченко, "большая близость между курганными погребениями II века до н.э. на территории Бухарской области и синхронными погребениями Приуралья и Поволжья, заселенного в этот период сарматским племенем, позволяет считать эти захоронения принадлежавшими племенам, вторгшившимися в южные районы Средней Азии с севера. Территория Северного Казахстана между Алтаем и Уралом была той ойкуменой, откуда двигались кочевые народы на запад и юг. Поэтому есть все основания считать племена, которые оставили после себя могильники в низовьях Зеравшана, теми кочевниками, которые сокрушили во второй половине II века до н.э. Греко-Бактрийское царство и положили начало образованию государства кушан, как об этом сообщают античные источники, в частности Страбон[xxv]. Но всем этим племенам, входившим в "союз пяти" и распространившим свою власть, как уже было сказано, в Северную Индию, Афганистан и Среднюю Азию, в VI веке нашей эры пришлось выдержать напор трех фронтов: индийских, сасанидско-иранских и близкородственных тюркских правителей, от чего их государство окончательно раслабло и распало в 560 году. На смену ему на арене истории появилась такая же великая держава — Тюркский каганат во главе с тем же царствующим домом "сыновей волчицы" (Ашина), т.е. рода усерген. Таким образом тесно переплетались судьбы всех башкирских родов в единый исторический процесс.

Согласно всем данным как раз с этим роковым 560 годом — временем гибели Кушанской империи можно датировать и время рождения той песни "Йыуасалы". Йыуасалинскому роду, игравшему

огромную роль на всем протяжении существования Кушанской империи, распад ее обернулся тяжелой трагедией. Остатки разгромленных йыуасалинцев, как печально поется до сих пор в той исторической песне, вынуждены были покидать навечно отчий дом на берегах великой реки Умур (Амурдаръя) и, говоря словами той же песни, "как ягнята разбрестись" в разные стороны. Часть их, конечно, сумела укрыться на местах — в южных пределах бывшей державы. Основная масса двинулась на северо-запад — по направлению своей прародины на Урал. При этом часть их задержалась и закрепилась у берегов Сырдаръи, обосновав там крепость Йыуасалы (современный город Джусалы). Арьергардный осколок рода перевалил с восточной стороны отроги Южного Урала, вписав тем самым в народную песню упомянутую "странную" строку о их направлении передвижения, достиг западных районов Внутренней Башкирии — исконной территории родственных им усергенцев и осели там, уместившись на пойме маленькой степной речушки, впадаюшей в Кинель и дав ей дорогое их сердцу имя Умур. В Кумертауском районе Башкортостана также есть деревня Йыуасалы. А что касается сородичей, оставленных ими на старом месте, то китайские хронисты через не полных два века в 748 году отметили там же опять йыуасалинцев (юэчжи), но уже в качестве царствующего дома Ирана — вассала великого Тюркского каганата[xxvi]. Потом они, вероятно, растворились в иранской среде, утратив свой язык и этноним.

Вот какую печальную историю поведала нам башкирская народная песня "Йыуасалы". Как видно, сравнительный анализ ее содержания с привлечением скупых данных разных письменных источников позволил здесь определить достаточно точную дату, географию, международный масштаб и характер трагических событий, отраженных в малом эпическом жанре фольклора, а также воссоздать, пусть и приблизительно, двухтысячелетнюю политическую историю башкирского рода Йыуасалы, игравшего в свое время большую роль в союзе пяти родов и мировой истории.

23.11.1995.

Йөкмәткеһе:

1. Ерҙәштәрем

Тыуған илем — Башҡортостан
Торналар төйәгендә
Йырлы һәм егәрле ер
Тарих: изге өмөттәребеҙ
Дим буйҙары — алтын диңгеҙ
Илеш ере — иген иле
Сәсеүсе
Толстойҙың күңел далаһы
Л.Н. Толстой Кәрәлек буйҙарында
Ҡаяларҙы ҡырҡып уҙған ерҙә
Бесценный труд
Алмас ҡылыстар ялтлаған яҡта

2. Йырҙаштарым

Яңы Юл — оло юл
Ысын халыҡ Шағиры
Бабичса көйлө хитаб
Бабич ҡулъяҙмаһы
Тормошҡа ғашиҡ
Мәңге ғашиҡ
Метеор
Һүрелмәҫ моң
Ихласлыҡ һәм инсафлыҡ
Шакир Бикҡоловтың "Ҡыҙыл ҡар яуғас"ы
Саҡматояҡ аттарҙа елеүселәр
М. Мостафин иптәш әҫәренә ҡарата
Ҡәләме көн үҙәгендә
Талант сағылы
Кеше — бөйөк мөғжизә
Донъяны күркәм күреүсе
Факел во мраке ночи
Күп ҡырлы талант
Совет әҙәбиәтенең ғорурлығы
Балаларға шиғриәт

3. Ҡорҙаштарым

Бөйөк туғанлыҡ тураһында йыр

Эш самауырҙа шул!
Атайҙар эҙе — мәңгелек
Сабыйлыҡ Ҡояшын балҡытыусы
Мөхәммәтша Буранғоловтың “Зәңгәр шәл”е
Тарих ялынан ялмап...
Йәш ҡәләмдәшемә әйтер һүҙ
Шағирәнең “Балалар баҡсаһында”
Айһылыу Йәғәфәрованың “Килендәр”е
Рәмилә Ибраһимова шиғырҙары
Риф Әхмәҙиев шиғырҙары
Күңелдәрҙең алтын тауҙары
Кешелекле кешеләр
Моңло юл
Йөрәк тибеше
Гәүһәр һылыуҙың гәүһәре
Ҡәләмдәштең романы
Изге юлда барыусылар
Тылсымлы ижад
Әүҙем ижадсы
Сәхнә күрке булырлыҡ
Финә һылыуҙың уңышы
Финә Латипованың “Салауат аманаты”
Аманатҡа тоғролоҡ
Төп сәбәптән башлайыҡ
“Мин”де нисек еңергә?
Нимә ул хикәйә?

4. Юлдаштарым

“Урал батыр” эпосы нисә йәшендә?
“Тора тау” фильмен ҡарағас
Йыр кеүек яңғыраны
Тарихҡа Аджи ҡарашы
Көтөп алынған хеҙмәт
Моряктар ҡайғылы көндәрҙә
“Мең дә бер ҡисса” китабына
Эпос и история
Иҫкәртмәләр

[i] Мэри Бойс. Зороастрийцы. Верования и обычаи. М., 1987, стр. 3 — 4.
[ii] Бхагавадгита. Ашхабад, 1978, стр. 328.
[iii] Анугита. Ашхабад, 1977, стр. 201.
[iv] Л.Н. Гумилев. Хунны в Китае. М., 1974, стр. 6.
[v] Башкирское народное творчество. Эпос. Книга третья. Уфа, 1982, стр. 64 — 65.
[vi] Башкирское народное творчество. Песни. Книга первая. Уфа, 1974, стр. 48 — 49 и 320 — 321.

[vii] Л.Н. Гумилев. Хунну. Средняя Азия в древние времена. М., 1960, стр. 38 — 39.
[viii] Р. Хенниг. Неведомые земли, том 1. М., 1961, стр. 99, 101.
[ix] А.В. Суперанская. Что такое топонимика? М., 1985, стр. 83, 86.
[x] Л.Н. Гумилев. Хунну... М., 1960, стр. 39.
[xi] Башкирское народное творчество. Эпос. Книга третья. Уфа, 1982, стр. 311.
[xii] Л.Н. Гумилев. Хунну... М., 1960, стр. 39.
[xiii] Центральная Азия в кушанскую эпоху, том 1. М., 1974, стр. 66.
[xiv] Указ. книга, стр. 315, 320 — 321

[xv] Указ. книга, стр. 325.
[xvi] Л.Н. Гумилев. Древние тюрки. М., 1967, стр. 22 — 23.
[xvii] Центральная Азия в Кушанскую эпоху, том 1. М., 1974, стр. 188.
[xviii] Башкирское народное творчество, том 2. Предания и легенды. Уфа, 1987, стр. 107.
[xix] Н.Я. Бичурин. Собрание сведений о народах, обитавших в Средней Азии в древние времена, т. 1. М. — Л., 1950, стр. 213 — 219, 301.
[xx] Башкирское народное творчество. Эпос. Книга третья. Уфа, 1982, стр. 151, 315.
[xxi] Центральная Азия в Кушанскую эпоху, стр. 185.
[xxii] Указ. книга, стр. 185 — 186.
[xxiii] Указ. книга, стр.182 — 183.
[xxiv] Указ. книга, стр. 193 — 194.
[xxv] Указ. книга, стр. 208.
[xxvi] Н.Я. Бичурин. Собрание сведений... т. II, М. — Л., 1950, стр. 322 — 327.